# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ АКАДЕМИК ҺҮҘЛЕГЕ

---

# АКАДЕМИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

РОССИЙСКАЯ АКАДЕМИЯ НАУК
УФИМСКИЙ НАУЧНЫЙ ЦЕНТР
ИНСТИТУТ ИСТОРИИ, ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ

# АКАДЕМИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

**В десяти томах**

## ТОМ I

## А

Под редакцией
доктора филологических наук, профессора
**Ф. Г. Хисамитдиновой**

Издательство
"КИТАП"
имени
Зайнаб
Биишевой

УФА•2011

РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
ӨФӨ ҒИЛМИ ҮҘӘГЕ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ АКАДЕМИК ҺҮҘЛЕГЕ

**Ун томда**

## I ТОМ

# А

Филология фәндәре докторы, профессор
**Ф. Ғ. Хисамитдинова**
редакцияһында

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте
ӨФӨ•2011

**РЕДАКЦИОННАЯ КОЛЛЕГИЯ**

**А. В. Дыбо,** член-корреспондент Российской академии наук
**Э. Ф. Ишбердин,** доктор филологических наук, профессор
**Н. Н. Казанский,** академик Российской академии наук
**И. В. Кормушин,** доктор филологических наук, профессор
**К. М. Мусаев,** доктор филологических наук, профессор
**Д. М. Насилов,** доктор филологических наук, профессор
**М. Х. Надергулов,** доктор филологических наук
**Ф. А. Надршина,** доктор филологических наук
**Ф. Г. Хисамитдинова,** доктор филологических наук, профессор

**АВТОРЫ-СОСТАВИТЕЛИ I ТОМА**

**Ф. Г. Хисамитдинова,** доктор филологических наук, профессор
**Н. Ф. Суфьянова,** кандидат филологических наук
**Р. Н. Каримова,** младший научный сотрудник
**А. М. Ишегулова,** младший научный сотрудник

**РЕДАКТОРЫ I ТОМА**

**Ф. Г. Хисамитдинова,** доктор филологических наук, профессор
**Г. Н. Ягафарова,** кандидат филологических наук
**Н. Ф. Суфьянова,** кандидат филологических наук

**В ПОДГОТОВКЕ К ИЗДАНИЮ I ТОМА СЛОВАРЯ ПРИНИМАЛИ УЧАСТИЕ**

**Р. А. Давлетшин,** научный сотрудник (этимологические справки)

**Г. Г. Исхакова,** кандидат филологических наук (переводы на английский язык)

**Ш. В. Нафиков,** кандидат филологических наук (этимологические справки, переводы на английский язык)

**З. А. Сиразитдинов,** кандидат филологических наук (топонимы, названия организаций, предприятий, учреждений)

**Р. А. Сулейманова,** кандидат филологических наук (антропонимы)

**Р. Н. Хадыева,** кандидат филологических наук (этнолингвистические сведения)

**А. М. Хакимьянова,** младший научный сотрудник (источники и литература по башкирскому народному творчеству)

**Г. Н. Ягафарова,** кандидат филологических наук (перечень словарей, энциклопедий, переводы на турецкий язык)

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ КӘҢӘШСЕЛӘР ҠОРО

**А. В. Дыбо,** Рәсәй фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы
**Э. Ф. Ишбирҙин,** филология фәндәре докторы, профессор
**Н. Н. Казанский,** Рәсәй фәндәр академияһы академигы
**И. В. Кормушин,** филология фәндәре докторы, профессор
**К. М. Мусаев,** филология фәндәре докторы, профессор
**Д. М. Насилов,** филология фәндәре докторы, профессор
**М. Х. Нәҙерғолов,** филология фәндәре докторы
**Ф. А. Нәҙершина,** филология фәндәре докторы
**Ф. Ғ. Хисамитдинова,** филология фәндәре докторы, профессор

## I ТОМДЫҢ АВТОР-ТӨҘӨҮСЕЛӘРЕ

**Ф. Ғ. Хисамитдинова,** филология фәндәре докторы, профессор
**Н. Ф. Суфьянова,** филология фәндәре кандидаты
**Р. Н. Кәримова,** кесе ғилми хеҙмәткәр
**А. М. Ишеғолова,** кесе ғилми хеҙмәткәр

## I ТОМДЫҢ МӨХӘРРИРҘӘРЕ

**Ф. Ғ. Хисамитдинова,** филология фәндәре докторы, профессор
**Г. Н. Йәғәфәрова,** филология фәндәре кандидаты
**Н. Ф. Суфьянова,** филология фәндәре кандидаты

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ I ТОМЫН БАҪМАҒА ӘҘЕРЛӘҮҘӘ ҠАТНАШТЫЛАР

**Р. Ә. Дәүләтшин,** ғилми хеҙмәткәр (этимологик белешмәләр)

**Г. Ғ. Исхаҡова,** филология фәндәре кандидаты (инглиз теленә тәржемәләр)

**Г. Н. Йәғәфәрова,** филология фәндәре кандидаты (һүҙлектәр, энциклопедиялар исемлеге, төрөк теленә тәржемәләр)

**Ш. В. Нафиҡов,** филология фәндәре кандидаты (этимологик белешмәләр, инглиз теленә тәржемәләр)

**З. Ә. Сиразитдинов,** филология фәндәре кандидаты (ер-һыу атамалары, ойошма, учреждение, предприятие исемдәре)

**Р. Ә. Сөләймәнова,** филология фәндәре кандидаты (кеше исемдәре)

**А. М. Хәкимйәнова,** кесе ғилми хеҙмәткәр (башҡорт халыҡ ижады буйынса сығанаҡтар һәм әҙәбиәт)

**Р. Н. Һаҙыева,** филология фәндәре кандидаты (этнолингвистик белешмәләр)

УДК 821.512.141(038)
ББК 81.2 Баш-4
Б 28

**I томға
баһалама биреүселәр**

***Ғәләүетдинов И.Ғ.,*** Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы мөхбир ағзаһы
***Ҡаһарманов Ғ.Ғ.,*** филология фәндәре кандидаты
***Мудрак О.А.,*** филология фәндәре докторы, профессор
***Сөләймәнова Л.Р.,*** филология фәндәре кандидаты

*Баҫмаға Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ғилми советы тарафынан раҫланды*

Б 28 **Башҡорт теленең академик һүҙлеге:** 10 томда. Т. I: (А хәрефе) / Ф.Ғ. Хисамитдинова редакцияһында. — Өфө: Китап, 2011. — 432 б.

ISBN 978-5-295-05389-4 (т. 1)
ISBN 978-5-295-05388-7

Башҡорт теленең академик һүҙлеге — башҡорт лексикографияһы тарихында беренсе аңлатмалы-тәржемәүи һүҙлек. Һүҙлек, нигеҙҙә, хәҙерге башҡорт теленең дөйөм ҡулланылышлы лексикаһын, фразеологияһын үҙ эсенә ала. Бынан тыш, һүҙлеккә киң таралған диалектизмдар, иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр, халыҡ һәм фәнни терминология, яңғыҙлыҡ исемдәр индерелгән. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләре башҡортса аңлатыла, рус теленә тәржемә ителә һәм бай иллюстратив материал менән раҫлана. Баш һүҙҙәр рус, инглиз, төрөк телдәренә ауҙарыла.

Һүҙлек телсе ғалимдарға, уҡытыусыларға һәм студенттарға, журналистарға һәм нәшриәт хеҙмәткәрҙәренә тәҡдим ителә. Хеҙмәт башҡа өлкәлә эшләүсе белгестәр, башҡорт мәҙәниәте, тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә файҙалы булыр.

Академический словарь башкирского языка является первым в истории башкирской лексикографии толково-переводным словарем. Словарь, в основном, включает в себя общераспространённые слова и фразеологизмы современного башкирского языка. Кроме этого, в словарь включены наиболее распространённые диалектизмы, устаревшие и новые слова, народная и научная терминология, а также имена собственные, имеющие более широкое употребление. Толкование слов и фразеологических единиц даётся на башкирском языке с переводом на русский язык. Заглавные слова переводятся на русский, английский и турецкий языки.

Словарь адресуется лингвистам, журналистам, работникам издательств и средств массовой информации, учителям и студентам. Он будет полезен специалистам, работающим и в других областях, и всем, кто интересуется историей и культурой башкирского народа.

**УДК 821.512.141(038)**
**ТП — 2011** **ББК 81.2 Баш-4**

© РФА ӨҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, 2011
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2011

ISBN 978-5-295-05389-4 (т. 1)
ISBN 978-5-295-05388-7

## МӨХӘРРИРҘӘН

Башҡорт теленең күп томлы аңлатмалы академик һүҙлеген төҙөү башҡорт телселәре алдында торған бик мөһим мәсьәлә генә түгел, ә халҡыбыҙ, киләсәк быуындар алдындағы мөҡәддәс бурыс та. Башҡорт тел ғилеме бындай күләмле хеҙмәтте башҡарып сығыуға күптән әҙер. Беренсенән, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡорт теле буйынса үҙ эсенә өс миллион тирәһе һүҙҙе индергән ике ҙур картотека (аңлатмалы һәм диалектологик һүҙлектәр картотекалары) булдырылған. Икенсенән, төрлө йылдарҙа Н. К. Дмитриев, Ҡ. З. Әхмәров, Т. Ғ. Байышев, З. Ғ. Ураҡсин етәкселегендә фундаменталь ике телле русса-башҡортса (1942, 1954, 1964, 2005), башҡортса-русса (1958, 1996) һүҙлектәр нәшер ителде. Өсөнсөнән, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәренең, арҙаҡлы лексикограф Ә. Ғ. Бейешевтең ғәйәт ҙур эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә башҡорт теленең ике томлы аңлатмалы һүҙлеге донъя күрҙе. Дүртенсенән, билдәле ғалимә Н. Х. Мәксүтова етәкселегендә бер нисә быуын Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты диалектологтары тарафынан башҡорт телле территорияларҙан йыйылған һәм дөйөмләштерелгән материалдарҙы үҙ эсенә алған, Институттың хәҙерге быуын телселәре нәшергә әҙерләгән башҡорт һөйләштәренең материалдары буйынса ике фундаменталь хеҙмәт: «Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге» (2002) һәм «Башҡорт теленең диалектологик атласы» (2005) һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡты. Күләмле лексикографик хеҙмәттәрҙән тыш республика телселәре тарафынан күп һанлы тематик, терминологик һәм башҡа һүҙлектәр, башҡорт тел ғилеменең төрлө аспекттарын яҡтыртҡан дөйөмләштереүсе монографиялар әҙерләнеп нәшер ителде. Һуңғы йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡорт теленең Машина (компьютер) фондын булдырыу ҙа академик һүҙлек төҙөүгә телселәрҙең әҙер икәнлеген күрһәтә. Быларға йәнә шуны ла өҫтәргә кәрәк: һуңғы 40–50 йыл эсендә бөтә төрки лексикографияһы ҙур үҫеш кисерҙе. Айырыуса Э. В. Севортяндың күп томлы «Төрки телдәренең этимологик һүҙлеге» (М., 1974–1989), А. К. Боровков инициативаһы менән авторҙар коллективы әҙерләгән «Боронғо төрки телдәр һүҙлеге» (Л., 1969) ҙур әһәмиәткә эйә. Боронғо, урта быуат һәм хәҙерге төрки телдәре буйынса лексик материалды үҙ эсенә алған был һүҙлектәр, XX быуаттың фундаменталь лексикографик хеҙмәттәре булараҡ, башҡорт теленең күп томлы һүҙлеген төҙөүҙә сағыштырма һәм этимологик мәғлүмәттәр өсөн ышаныслы нигеҙ ролен үтәй.

## МӨХӘРРИРҘӘН

Башҡорт теленең күп томлы академик һүҙлегенең маҡсаты шунан ғибәрәт:

1) башҡорт теленең бөгөнгәсә теркәлгән лексикаһын системаға һалыу, аңлатма биреү, рус теленә, ә баш һүҙҙәрҙе рус, инглиз, төрөк телдәренә тәржемә итеү. Һүҙлектә ябай һүҙҙәрҙән тыш бер мәғәнәгә эйә булған тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙе йәки һүҙ теҙмәләрен баш һүҙ рәүешендә биреү;

2) башҡорт халҡының рухи культураһында мөһим урын тотҡан айырым лексик раритеттарҙың этномәҙәни мәғәнәһен асып биреү һәм һүрәтләү;

3) тейешле осраҡтарҙа һүҙҙәргә этимологик белешмә килтереү;

4) ғөмүмән, башҡорт теленең лексик байлығын мөмкин тиклем тулы рәүештә күҙ алдына баҫтырыу.

Тәҡдим ителгән һүҙлек башҡорт теленең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге, башҡорт халҡының мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған уҡыусыларға тәғәйенләнә. Ул төркиәтселәргә, алтаистарға, сағыштырма-тарихи тел ғилеме белгестәренә, мәктәп һәм вуз уҡытыусыларына, тәржемәселәргә, студенттарға, матбуғат, радио, телевидение һәм башҡа киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә файҙалы буласаҡ.

## ОТ РЕДАКТОРА

Создание многотомного академического толкового словаря башкирского языка не только архиважная задача, стоящая перед башкирскими языковедами, но и их долг перед любимым народом, его будущими поколениями. Башкирская лингвистическая наука давно созрела для составления подобного объёмного труда. Во-первых, в Институте истории, языка и литературы Уфимского научного центра Российской академии наук созданы две большие картотеки (картотека толкового и картотека диалектологического словарей) башкирского языка, включающие около трёх миллионов слов. Во-вторых, в разные годы подготовлены и изданы фундаментальные двуязычные русско-башкирские (1942, 1954, 1964, 2005), башкирско-русские (1958, 1996) словари под руководством Н.К. Дмитриева, К.З. Ахмерова, Т.Г. Баишева, З.Г. Ураксина. В-третьих, благодаря титаническому труду языковедов Института истории, языка и литературы УНЦ РАН во главе с известным лексикографом А.Г. Биишевым увидел свет двухтомный толковый словарь башкирского языка. В-четвёртых, в последние годы опубликовано два фундаментальных труда по башкирской диалектологии: «Диалектологический словарь башкирского языка» (2002) и «Диалектологический атлас башкирского языка» (2005), включающие в себя диалектный материал со всех башкироязычных территорий, собранный и обобщённый несколькими поколениями диалектологов Института истории, языка и литературы УНЦ РАН под руководством известного учёного Н.Х. Максютовой, подготовленный к печати нынешним поколением языковедов Института. Помимо крупных лексикографических работ языковедами республики изданы многочисленные тематические, терминологические и другие словари, обобщающие монографии по различным аспектам башкирского языкознания. Создание в последнее время Машинного (компьютерного) фонда башкирского языка в Институте истории, языка и литературы также показывает готовность языковедов к составлению академического словаря.

Следует подчеркнуть, что в последние 40–50 лет большое развитие получила вся тюркская лексикография. Особенно значительным событием стало появление многотомного «Этимологического словаря тюркских языков» Э.В. Севортяна (М., 1974–1984), «Древнетюркского словаря» (Л., 1969), подготовленного коллективом авторов по инициативе А.К. Боровкова. Указанные словари, содержащие лексический материал по древним, средневековым и современным тюркским языкам,

представляющие собой фундаментальные лексикографические работы XX в., являются надёжной базой для сравнительных и этимологических разработок при составлении многотомного словаря башкирского языка.

Целью многотомного академического словаря башкирского языка является:

1) систематизация, толкование, перевод на русский язык наиболее полного состава зафиксированной на сегодняшний день лексики башкирского языка с переводом заглавных слов на русский, английский и турецкий языки. В словарь отдельными словарными статьями включены словосочетания или словесные комплексы, имеющие одно устоявшееся значение;

2) выявление и описание этнокультурного значения отдельных лексических раритетов, играющих особую роль в духовной культуре башкирского народа;

3) при необходимости — приведение этимологического материала;

4) в целом, представление с возможной полнотой всего лексического богатства башкирского языка.

Предлагаемый словарь рассчитан на широкий круг читателей, интересующихся башкирским языком, его прошлым, настоящим и будущим, культурой башкирского народа. Он будет полезен тюркологам, алтаистам и специалистам по сравнительно-историческому языкознанию; преподавателям вузов и ссузов, учителям школ республики, переводчикам, работникам печати, радио, телевидения и прочих средств массовой информации.

## ИНЕШ

Башҡорт теле — Башҡортостан Республикаһында йәшәүсе төп халыҡтың теле, Башҡортостанда рус теле менән бер рәттән дәүләт теле булып тора, Рәсәйҙең иң ҙур төрки телдәренең береһе. Башҡорт телендә һөйләшеүселәрҙең дөйөм һаны, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса, 1 584 554 кеше тәшкил итә. Башҡорт теле Башҡортостан Республикаһында, Пермь крайының, Силәбе, Ырымбур, Свердловск, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Төмән өлкәләренең һәм Татарстан, Удмурт Республикаларының айырым райондарында таралған (халыҡтың компактлы йәшәгән урындары күҙ уңында тотола). Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан һәм Үзбәкстан кеүек БДБ илдәрендә лә башҡортса һөйләшеүселәр байтаҡ. Башҡорт теле Ханты-Манси, Ямал-Ненец автономиялы округтарында, Кемеров, Омск, Томск, Новосибирск, Чита, Ленинград (Санкт-Петербург ҡалаһы менән), Мәскәү (Мәскәү ҡалаһы менән) һ. б. өлкәләрҙә, Красноярск, Краснодар крайҙарында, Саха (Якутия), Марий Эл, Сыуашстан Республикаларында, Карелия, Коми кеүек Рәсәй Федерацияһының субъекттарында, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙә (Беларусь Республикаһы, Латвия, Тажикстан Республикаларында, Украина, Эстония, Италия, Венгрия, Германия, Польша, АҠШ, Төркиә, Израиль һ. б.) башҡорттар йәшәгән урындарҙа көндәлек аралашыу даирәһендә ҡулланыла.

Башҡорт теле оҙайлы тарихи үҫеш юлы кисергән. Иң яңы тюркологик тикшеренеүҙәр уның тарихында дүрт дәүер билдәләне: алтай (йәки урал-алтай), дөйөм төрки, ҡыпсаҡ һәм саф башҡорт. Соматик терминологияның, кешене белдергән исемдәрҙең, шул иҫәптән ҡәрҙәшлек терминдарының, йәнлектәрҙең тән өлөштәре атамалары, ландшафт, тәбиғәт күренештәре, ваҡыт, арауыҡ, ябай физиологик терминдарҙың, шулай уҡ кешенең йәшәйешенә бәйле төп ҡылымдарҙың реконструкцияһынан сығып фекер йөрөткәндә, алтай йәки урал-алтай дәүерендә боронғо башҡорт телендә иң боронғо лексик ҡатлам, агглютинативлыҡ һәм алтай телдәре өсөн дөйөм булған башҡа һыҙаттар формалашҡан.

Беҙҙең эраға тиклем IV—III бб. алтай ғаиләһе тарҡалғандан һуң, төрки телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең үҫешендә дөйөм төрки дәүере башлана. Был осорҙа бөтә төрки телдәре өсөн уртаҡ һүҙлек фонды, төп фонетик һ. б. үҙенсәлектәр формалаша.

Б. э. т. I меңйыллыҡтың аҙағында — I меңйыллыҡтың башында төрки тәүтеле көнбайыш һәм көнсығыш тармаҡтарға тарҡала. Тарихи яҡтан был хәл һундарҙың

төньяҡ һәм көньяҡ тармаҡтарға бүленеүе менән бәйле була. Шул арала боронғо тәүтелдән болғар төркөмсәһе айырымлана бара. Беҙҙең эраның IV—V бб. уғыҙ, ҡарлыҡ, ҡыпсаҡ төркөмдәре айырыла. Аңлашылыуынса, нәҡ был ваҡыттан хәҙерге ун ҡыпсаҡ төрки телен, шул иҫәптән башҡорт телен, берләштереүсе фонетик, лексик һ.б. үҙенсәлектәр барлыҡҡа килә. Алтын Урҙа дәүерендә айырым ҡыпсаҡ телдәре бүленеп сыға. Саф башҡорт теленең үҫешә башлауы ла ошо дәүергә тура килеүе ихтимал (Дыбо, 2006, 816).

Хәҙерге башҡорт теле ҡыпсаҡ телдәренә ҡарай. Шул уҡ ваҡытта башҡорт телендә, уның диалекттарында уғыҙ (төрөкмән, төрөк теленең диалекттары), болғар (сыуаш теленең диалекттары), себер (алтай, хакас, тыва, яҡут, боронғо төрки ҡомартҡылар теле) төрки телдәренең һыҙаттары ла бар. Уларға нигеҙләнеп, телселәр башҡорт теленең сығанағын билдәләүҙә бер нисә фараз тәҡдим итә. Беренсеһе буйынса, башҡорт теленең тамырҙары уғыҙ телдәренә бәйле. Мәҫәлән, билдәле төркиәтсе-ғалимә А.В. Дыбо был турала түбәндәгеләрҙе яҙып үтә: «Сығышы менән уғыҙ төркөмөнә ҡараған башҡорт теле бер нисә тапҡыр ҡыпсаҡ телдәренең йоғонтоһон кисерә: монголдарға тиклемге дәүерҙә, Алтын Урҙа осоронда, һәм, ниһайәт, сағыштырмаса һуңғы ваҡытта...» (СИГТЯ, 2002, 816). Икенсе теорияға ярашлы, болғар-башҡорт-венгр этнонимдарының дөйөм булыуы, Волга — Урал регионында оҡшаш топонимдарҙың таралыуы, башҡорт теленең апеллятив лексикаһында ротацизм һәм ламбдаизмға нигеҙләнгән һүҙҙәрҙең ҙур ғына ҡатламды тәшкил итеүе башҡорт этносының формалашыуында болғар компонентының мөһим роль уйнауы тураһында фараз итергә мөмкинлек бирә (Кузеев, 1974, 413–424; Хисамитдинова, 1989, 80–87).

Әлбиттә, башҡорт теленең айырым специфик билдәләре ҡәрҙәш булмаған иран, фин-уғыр, монгол, тунгус-манжур, ғәрәп һәм славян телдәре менән диалект-ара бәйләнеш нәтижәһендә үҫешкән. Әйтәйек, башҡорт телендә һәм уның диалекттарында специфик ***һ*** өнөнөң барлыҡҡа килеүе иран субстратына бәйле булыуы ихтимал (Максютова, 1976, 186). Фин-уғыр телдәренең йоғонтоһон кисергән төньяҡ-көнбайыш диалектында ***һ*** өнөнөң ҡулланылмауы Н.Х. Мәксүтованың фаразын раҫлай кеүек.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, сиктәш телдәрҙән ҡабул ителгән айырым лексик үҙләштереүҙәр башҡорт теленең төҙөлөшөнә хәл иткес ҙур тәьҫир итә алмаған. Башҡорттар ислам динен ҡабул иткәндән һуң башҡорт теленә бүтән телдәрҙең йоғонтоһо көсәйә. Ғәрәп һәм фарсы телдәренән күпләп һүҙҙәр алыныу башҡорт теленең лексикаһын ғына түгел, фонетик системаһының үҙгәрешенә лә килтерә. Айырым алғанда, үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә йыш ҡулланылған ***ф, х, һ, ғ*** һәм ***ҡ*** тартынҡылары башҡорт телендә әүҙемләшә. XX быуатта башҡорт-рус ике теллелеге киңәйеп, рус һәм интернациональ лексика күпләп алыныу арҡаһында башҡорт теленең фонетик ҡоролошонда тағы ла үҙгәрештәр була. Һуңғараҡ осорҙа үҙләштерелгән алынмаларға хас үҙенсәлекле фонетик кимәл хасил була. Сағ.: *агент, тренер, вагон* һәм элегерәк ҡабул ителгән *биҙрә* (*ведро* һүҙенән), *мейес* (*печь* һүҙенән), *торба* (*труба* һүҙенән) һ.б. Яңы фонетик система, әлбиттә, акцент системаһына, орфография һәм орфоэпияға йоғонто яһамай ҡалмай.

Сит телдәрҙең йоғонтоһона ҡарамаҫтан, башҡорт теле Мәхмүт Ҡашғариҙың XI быуаттың 70-се йылдарында уҡ төҙөлгән «Диуану лөғәт әт-төрк» һүҙлегендә телгә алынған барлыҡ үҙенсәлектәрен һаҡлап алып ҡала (Кашгари, 2010, 22). Башҡорт теленең специфик үҙенсәлектәре унын диалекттарында һәм һөйләштәрендә айырыуса ныҡлы һаҡланған.

Хәҙерге төркиәттә башҡорт теленең диалекттар системаһында өс диалектты айырып йөрөтәләр: көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш, көньяҡ. Көнсығыш диалект Башҡортостандың көнсығыш өлөшөн, Силәбе, Ҡурған өлкәләренең айырым райондарын һәм Свердловск өлкәһенең бер төркөм ауылдарын үҙ эсенә ала (Максютова, 1976). Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондары, Пермь крайының, Свердловск өлкәһенең ҡайһы бер райондары башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектына ҡарай (Миржанова, 1991, 5). XX быуаттың 20-се йылдарында Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәрендә (кантондарында) уҙғарылған яңы административ-территориаль бүленешкә бәйле рәүештә барлыҡҡа килгән ассимиляция процестарына ҡарамаҫтан, татар диалектологтары билдәләүенсә, башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш диалектына хас булған айырым үҙенсәлектәр Татарстандың көнсығыш өлөшөндә йәшәгән халыҡтың һөйләштәрендә тоторокло һаҡлана (Садыкова, 1985, 108–135, Баязитова, 1989, 67–82). Көньяҡ диалект иһә башлыса Башҡортостандың үҙәк һәм көньяҡ райондарында, Ырымбур, Һарытау, Һамар өлкәләренең ҡайһы бер райондарында таралыш тапҡан (Миржанова, 1979).

Башҡорт диалекттарының һәр береһе ҡабатланмаҫ лексик системаға эйә булған һөйләштәргә бүленә. Көнсығыш диалектына әй, арғаяш, ҡыҙыл, миәс, салйоғот һөйләштәре инә. Төньяҡ-көнбайыш диалект ғәйнә, ҡариҙел, түбәнге ағиҙел-ыҡ һәм танып һөйләштәрен берләштерә. Көньяҡ диалект дим, һаҡмар, урта һөйләштәрҙе үҙ эсенә ала. Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре үҙ-ара бик яҡын. Улар араһындағы айырмалыҡтар һөйләш вәкилдәренә аңлашырға һәм аралашырға бер ҙә ҡамасауламай. Башҡорт диалекттарының төп айырмалыҡтары фонетикаға ҡайтып ҡала (боронғо төрки ***с*** урынына ***һ*** тартынҡыһының киң ҡулланылышы; боронғо төрки ***д*** урынына теш араһы яңғырау ***ҙ*** тартынҡыһының ҡулланылышы; төньяҡ-көнбайыш диалектта айырым һүҙҙәрҙә һәм һүҙ формаларында боронғо төрки ***č (ч)*** урынына ***с*** йәки ***ш*** өндәренең килеүе; боронғо телдәге тар әйтелешле һуҙынҡыларҙың редукцияға бирелеүе һәм артабан киң һуҙынҡыларҙың таралыуы).

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле — Рәсәй халыҡтары телдәренең иң үҫешкәндәренең береһе. Уның формалашыуында милләткә тиклемге һәм милли дәүерҙәрҙе айырып күрһәтәләр. Милләткә тиклемге дәүерҙә башҡорттарҙың әҙәби теле функцияһын Урал — Волга буйы яҙма әҙәби төрки теле үтәгән. Урал — Волга буйы төркийе сығатай (XV — XVIII бб.), хорезм-төрки йәки Алтын Урҙа (XIII — XIV бб.), ҡараханлы-уйғыр (XI — XII бб.) әҙәби телдәренә ҡайтып ҡала, улар, үҙ сиратында, тарихи яҡтан Көнсығыш һәм Көнбайыш төрки ҡағанаттарҙың (VI — XII бб.) руник төрки әҙәби телдәре һәм боронғо уйғыр әҙәби теле (VII — XI бб.) менән бәйле (Тенишев, 1979, 85–86).

Урал — Волга буйы яҙма әҙәби төрки теле функциональ яҡтан сикләнгән булған: ул бөтә йәмғиәттең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәгән, уны башҡорттарҙың уҡымышлы өлөшө генә файҙалана алған (Галяутдинов, 2000, 25). Аралашыуҙа башҡорттар төрлө диалекттар һәм һөйләштәргә нигеҙләнгән йәнле һөйләү телен ҡулланған. Йәмғиәттә шулай уҡ сәсәндәр тарафынан эшкәртелеп шымартылған, быуаттар дауамында төрлө жанрлы уникаль башҡорт халыҡ ижадының үҫеше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән телдең диалекттарҙан өҫтөн формаһы — башҡорт фольклоры теле бик актив файҙаланылған.

Был өс тел формаһының үҙ-ара тығыҙ бәйләнеше һөҙөмтәһендә башҡорт йәнле һөйләү телмәренә һәм фольклор теленә төрки яҙма әҙәби теленең айырым элементтары үтеп инә, ә йәнле һөйләү һәм фольклор телдәре төрки яҙма әҙәби теленә йоғонто яһай. Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, яҙма традицияларҙың айырымланыуы тағы ла көсәйә. XVIII быуаттан башлап яҙма телгә башҡорт йәнле һөйләү телмәренән һәм фольклор теленән һүҙҙәр һәм һүҙ формалары, рус теленән үҙләштереүҙәр күпләп инә башлай. Был турала башҡорт шәжәрәләре, килешеүҙәр, акттар, хаттар, шул осорға ҡараған художестволы әҫәрҙәр асыҡ һөйләй (Галяутдинов, 2000, 30–31). Үрҙә күрһәтелгәндәр төрки традициялары әлегә көслө булған иҫке башҡорт яҙма әҙәби теле XVI — XVIII быуаттарҙа формалашҡан тип әйтергә нигеҙ бирә. Әҙәби телдең йәнле һөйләү телмәре һәм фольклор теле менән яҡынлашыуы бигерәк тә башҡорт әҙәбиәтендә мәғрифәтселек хәрәкәте (М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев һ. б.) үҫешеүе һөҙөмтәһендә көсәйә һәм әҙәбиәткә башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары килеүенә бәйле. Шулай итеп, башҡорт теленең үҫешендә милләткә тиклемге дәүер иҫке башҡорт әҙәби теле формалашыуы менән тамамлана.

XIX быуат аҙағынан башҡорт әҙәби теленең үҫешендә биш дәүергә бүленгән милли этап башлана: 1) XIX быуат аҙағынан XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем. Был дәүерҙә әҙәби тел функцияларын иҫке башҡорт теле йәки, И. Ғ. Ғәләүетдинов билдәләүенсә, «башҡортлашҡан Урал — Волга буйы төркийе» үтәй; 2) XX быуаттың 20-се йылдарынан алып башҡорт әҙәби теленең хәҙерге һыҙаттары формалаша; 3) 30–40-сы йылдарҙа башҡорт әҙәби теленең төп терминологияһы, функциональ стилдәре, орфография һәм орфоэпия нормалары үҫешә; 4) 50–90-сы йылдар башҡорт әҙәби теленең нормаларының артабан камиллашыуы, лексикаһы байыуы, орфография нормаларының бер ни тиклем үҙгәреүе һәм башҡорт әҙәби теленең ҡалыплашыуы менән ҡылыҡһырлана; 5) XX быуаттың 90-сы йылдарынан башлап бөгөнгәсә — башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ формалашыу дәүере. 1999 йылдың 5 февралендә Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай тарафынан «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Закон ҡабул ителә. Телдәр тураһындағы закон рус теле менән бер рәттән башҡорт теленең дәүләт теле статусын ҡанунлаштыра. Әлбиттә, телдәр тураһындағы махсус закондың ҡабул ителеүе, 2000–2005 һәм 2006–2010 йылдарға Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү дәүләт программаларының эшләнелеүе, Башҡортостан Республикаһының Конституцияһына, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законына үҙгәрештәр индерелеүе, тел

сәйәсәтенә бәйле 30-ҙан ашыу акт эшләнелеүе башҡорт теленең үҫешенә, уның ижтимағи функциялары киңәйеүенә, абруйы күтәрелеүенә яҡшы шарттар булдыра. Башҡорт теле мәғарифта, мәҙәниәттә, ваҡытлы матбуғат сараларында, ауыл-ҡала исемдәренең яҙылышында, юл күрһәткестәрендә, этикеткаларҙы, алтаҡталарҙы һ. б. яҙыуҙа киң ҡулланыла башлай. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ халыҡты тимер юл, авиация, йылға, автомобиль һәм ҡала транспорты менән хеҙмәтләндереүҙә лә мотлаҡ файҙаланыла. Компьютер технологияларында ла ыңғай үҙгәрештәр күренде. Башҡорт теле ышаныслы аҙымдар менән Интернет киңлектәрен яулай. Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Лингвистика һәм информацион технологиялар лабораторияһын булдырыу башҡорт телен компьютерлаштырыу буйынса махсус программалар барлыҡҡа килтерергә мөмкинлек бирҙе. Дәүләт теле статусын алыу, илдә һәм донъяла барған радикаль ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр башҡорт әҙәби теленең үҫешендә мөһим этәргес көс була. Айырым алғанда, һуңғы йылдарҙа ижтимағи-сәйәси терминология тулыһынса яңыртылды, фәнни терминологияла ҙур үҙгәрештәр булды. Башҡа телдәрҙән үҙгәрешһеҙ алынған (*компьютер, принтер)* йәки өлөшләтә үҙ ителгән (*<u>һаҡлыҡ кассаһы</u> — сберегательная <u>касса</u>*) байтаҡ һүҙҙәр барлыҡҡа килде.

Бер төркөм һүҙҙәрҙең актив һәм пассив ҡулланылышы йәһәтенән торошо үҙгәрҙе. Мәҫәлән, совет дәүеренең *совхоз, колхоз* кеүек неологизмдары иҫкергән һүҙҙәр рәтенә күсте. Иҫкергән һүҙҙәр рәтенән иһә *мөхәррир, сәркәтип* кеүек һүҙҙәр хәҙерге башҡорт теленең актив ҡулланылышлы ҡатламына кире ҡайтарылды. Һүҙьяһалыштың төрлө юлдары һәм ысулдары менән телдә күпләп яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килде, башҡорт теленең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнде. Әйтәйек, *боҙбармаҡ* «сосулька», *йәнһүрәт* «мультфильм», *көйәрмән* «болельщик» һүҙҙәре хәҙерге башҡорт телендә ныҡлы урын алды. Әҙәби телгә йәнле һөйләү телмәренән ҡайһы бер лексемалар һәм һүҙ формалары килеп инә, мәҫәлән, *гәзит, урыҫ* һ. б. Һис шикһеҙ, лексика өлкәһендәге үҙгәрештәр бик ҙур, сөнки ул ижтимағи тормоштағы ваҡиғаларға үтә һиҙгер ҡатлам. Тәү ҡарашҡа, тотороҡло эске закондарға эйә булған башҡорт теленең грамматикаһы стабиль булырға тейеш. Ләкин бында ла бәғзе үҙгәрештәр күҙәтелә. Рус теленең йоғонтоһонда эйәрсән һөйләмле ҡушма һөйләмдәр, һүҙьяһалышта калькалар әүҙемләшә.

Башҡорт теле оҙайлы яҙма традицияға эйә. Күпселек төрки халыҡтар кеүек, исламды ҡабул иткәнсе башҡорттар руник яҙманы файҙаланғандар (VII — XII бб.). Шуныһы ҡыҙыҡлы, башҡорт ырыуҙарының тамғалары боронғо руналарға оҡшаш. Артабан башҡорттар, күрәһең, уйғыр яҙыуын файҙаланған, сөнки Алтын Урҙа дәүерендә яҙылған хан ярлыҡтары һәм башҡа рәсми ҡағыҙҙар уйғыр йәки ғәрәп хәрефтәре менән теркәлгән. Һуңғараҡ башҡорт теле график һүрәтләнешен бер нисә тапҡыр алмаштырған: иҫке төрки теленең ғәрәп яҙмаһынан (XIII — XX быуат башында ҡулланылған) тәүҙә латин (1928 йылдан башлап), һуңынан рус теле нигеҙендәге (1939 йылда) алфавитҡа күскән.

Башҡорт телендә донъя әҙәби мираҫының алтын фондына ингән ҙур күләмле нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәре ижад ителгән һәм ителә. Урта быуаттарға ҡараған дөйөм

төрки ҡомартҡыларынан тыш башҡорт сәсәндәренең ҡобайырҙары һәм әйтештәре, Салауат Юлаевтың ирек һөйөүсән шиғырҙары һәм йырҙары, мәғрифәтсе-ғалимдар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдинов, М. Буранғолов, Ш. Бабич, Д. Юлтыйҙарҙың әҫәрҙәре, билдәле башҡорт яҙыусылары, шағирҙары, драматургтары М. Ғафури, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Һ. Дәүләтшина, С. Ҡудаш, А. Абдуллин, Н. Нәжми, З. Биишева, М. Кәрим, К. Кинйәбулатова, Р. Ғарипов, Ғ. Ибраһимов, Ғ. Хөсәйенов, Н. Мусин, Ф. Иҫәнғолов, Я. Хамматов, Ә. Хәкимов, Ф. Бүләков, Ә. Атнабаев, М. Кәримов, Т. Йосопов, Н. Асанбаев, Д. Бүләков, Р. Солтангәрәев, Б. Рафиҡов, Р. Бикбаев, Р. Назаров, Р. Байымов, Т. Сәғитов һ. б. ижади мираҫтары киң билдәле. Шулай уҡ Р. Камал, Г. Яҡупова, Ә. Әминев, Р. Шәкүр, Ш. Янбаев һ. б. әҫәрҙәрен халыҡ яратып уҡый.

Үрҙә һаналып үтелгән бөтә факторҙар башҡорт теленең, уның лексикаһының үҫешенә булышлыҡ итә.

Башҡорт теленең лексик байлығын асыҡлау, туплау, нормаға килтереү һәм стилистик үҫешен күҙәтеү эше ике йөҙ йылдан ашыу ваҡыт дауамында башҡорт телен өйрәнеү менән шөғөлләнгән ғалимдар һәм лингвист-энтузиастар тарафынан яҙылған лексикографик хеҙмәттәрҙә уңышлы атҡарылып килә.

Лингвистик йәһәттән башҡорт теленә беренселәрҙән булып немец ғалимы, этнограф, минералогия профессоры, Императорҙың Фән һәм художество Академияһы академигы Иоганн Готлиб Георги иғтибар итә. Ул XVIII быуат аҙағында үҙе йыйған материалдар нигеҙендә башҡорт теленең тәүге һүҙлеген төҙөй, ләкин, ҡыҙғаныска ҡаршы, был һүҙлек ҡулъяҙма рәүештә ҡала (Булич, 1904, 435). Башҡорт теленә ҡағылышлы тәүге лексикографик хеҙмәттәрҙән, тәү сиратта, рус тикшеренеүселәре тарафынан әҙерләнгән күп телле тәржемәүи һүҙлектәрҙе атарға кәрәк. Академик П.С. Паллас ҡатнашлығында һәм етәкселегендә төҙөлгән «Сравнительные словари всех языков и наречий, собранные десницею Всевысочайшей особы» (СПб., 1787) лексиконында ике йөҙ телдең лексик материалдары араһында ике йөҙ һикһән биш «башҡорт ҡәүеменең» һүҙе алынған (башҡорт теле буйынса материалдарҙың бер өлөшөн П. С. Палласҡа И. Г. Георги тапшырған була). XIX быуаттың 2-се яртыһында — XX быуаттың башында төҙөлгән ватан төркиәтендә киң билдәлелек яулаған ике фундаменталь лексикографик хеҙмәтте һыҙыҡ өҫтөнә алыу зарур: Л. З. Будагов тарафынан төҙөлгән «Сравнительный словарь турецко-татарских наречий, со включением употребительных слов арабских и персидских и с переводом на русский язык» (2 томда, СПб., 1869–1871 (ҡайтанан баҫылған: Т. I — II. М., 1960) һәм академик В. В. Радловтың «Опыт словаря тюркских наречий» (4 томда, СПб., 1893–1911 (ҡайтанан баҫылған: Т. I – IV. М., 1963). Уларҙа башҡорт һүҙҙәре, бигерәк тә этнографик реалиялар, айырып күрһәтелә: тәүгеһендә — ике йөҙҙән артыҡ, икенсеһендә иллегә яҡын һүҙ теркәлгән.

Башҡорт теленең беренсе һүҙлеге итеп Ырымбур губернаһы канцелярияһы коллегия асессоры Миндияр Биксурин тарафынан төҙөлгән, өс йөҙ алтмыш рус һүҙенең башҡортсаға тәржемәһен үҙ эсенә алған «Перевод слов на башкирский язык» (XVIII б. 80-се йй.) ҡулъяҙмаһы иҫәпләнә. Башҡорт лексикаһы шул уҡ

осорға ҡараған тағы бер нисә һүҙлектә урын ала. Билдәһеҙ авторҙың һүҙлегендә рус һүҙҙәре татар, башҡорт, мишәр телдәренә тәржемә ителһә (РФА учреждениеһының Санкт-Петербург филиалы архивы, фонд 94, оп. 2, һ/б. 19), Петр Учадамцев төҙөгән «Татар, башҡорт, ҡалмыҡ телдәренә тәржемәләре менән һүҙҙәр теҙмәһе»ндә 357 һүҙ тәржемәләнгән (РФА учреждениеһының Санкт-Петербург филиалы архивы, фонд 94, оп. 2, һ/б. 103а).

Ырымбур кадет корпусы уҡытыусыһы Мирсалих Биксуриндың «Начальное руководство к изучению арабского, персидского и татарского языков с наречиями бухарцев, башкир, киргизов и жителей Туркестана» (Ҡазан, 1869) дәреслегендә ике йөҙләп башҡорт һүҙенең рус, ғәрәп һәм фарсы телдәренә тәржемәһе бирелә.

1893 йылда Ырымбурҙа билдәһеҙ автор (фараз ителеүенсә, мәктәп уҡытыусыһы Мөхәмәтғәлим Ҡыуатов ярҙамында рус миссионеры, төрки телдәре белгесе В. В. Катаринский) тарафынан төҙөлгән туҡһан ике биттән торған «Ҡыҫҡаса русса-башҡортса һүҙлек» нәшер ителә. 1899 йылда В. Катаринский 2500 башҡорт һүҙенән торған «Башҡортса-русса һүҙлек» сығара. Был һүҙлек XX быуат башына тиклемге осорҙоң иң тулы баҫмаһы булып тора, ул үҙ ваҡытында башҡорт һәм рус телдәрен өйрәнеүҙә ҙур практик әһәмиәткә эйә була һәм башҡорт лексикографияһы тарихында мөһим урын биләй.

1903–1904 йылдарҙа Будапештта венгр телсеһе Вилмош Прёле тарафынан нәшер ителгән башҡорт теле дәреслегенә ҡушымта рәүешендә әҙерләнгән «Венгрса-башҡортса бәләкәй һүҙлек» һәм табип, тел белгесе М. А. Ҡулаев тарафынан Ырымбур башҡорттары теле өлгөләрендә төҙөлгән башҡортса-русса ҡулъяҙма һүҙлек шулай уҡ иғтибарға лайыҡ.

Үрҙә һанап кителгән лексикографик хеҙмәттәр башҡорт теленең һүҙ байлығы, шулай уҡ өндәр системаһы һәм һүҙ төркөмдәре үҫеше тарихын өйрәнеүҙә ышаныслы нигеҙ булып хеҙмәт итә.

XX быуаттың 20-се йылдарында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлөү менән, башҡорт телен дәүләт теле итеп иғлан иткәс, башҡорт әҙәби теленең киң ҡулланылышын тәьмин итергә тейешле төрлө терминологик һүҙлектәр төҙөү буйынса планлы һәм эҙмә-эҙлекле эш башлана. XX быуат дауамында фән, техника һәм етештереү сәнәғәтенең төрлө өлкәләренә ҡараған алтмышҡа яҡын терминологик һүҙлек баҫылып сыға*.

Үткән быуаттың 20-се йылдарында башҡорт теленең терминологияһы, алфавиты һәм орфографияһы мәсьәләләре менән 1922 йылдың сентябрендә Башнаркомпрос эргәһендә ойошторолған Академик үҙәк шөғөлләнә. 1924 йылда Ғ. Вилданов тарафынан эш йөрөтөү терминдарын үҙ эсенә алған тәүге һүҙлек нәшер ителә. 1926 йылда Н. Таһировтың «Башҡорт лөғәте» донъя күрә.

30-сы йылдарҙан башлап терминология проблемалары менән Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты (элекке исемдәре: Башҡортостан комплекслы ғилми-тикшеренеү институты, Башҡорт милли

* Һүҙлектәрҙең тулы исемлеге ҡулланылған әҙәбиәт теҙмәһендә бирелә.

мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институты, Башҡорт теле һәм әҙәбиәте ғилми-тикшеренеү институты, М. Ғафури исемендәге Башҡорт тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты) бик уңышлы эшләп килә. 30–40-сы йылдарҙа үҫемлек атамалары (1932), математика (1932), физика (1934 һәм 1935), химия (1934), медицина (1935), гистология (1935), ижтимағи-иҡтисади-фәлсәфәүи фәндәр (1935), башҡорт теле (1935) һүҙлектәре донъя күрә. Лексикография өлкәһендәге ошо күп йыллыҡ хеҙмәттәр һөҙөмтәһендә үткән быуаттың 50-се йылдарына башҡорт теленең яңы фәнни стиле барлыҡҡа килә һәм артабан нығына бара.

50–70-се йылдарҙа терминологик һүҙлектәрҙең яңы серияһы сыға башлай. Бербер артлы тәржемә һәм аңлатмалы русса-башҡортса һәм башҡортса-русса физика (1949), математика (1949), химия (1950), зоология (1952), ботаника (1952), география (1952), астрономия (1954), урман эше (1954), хоҡуҡ (1956), ауыл хужалығы (1961), әҙәбиәт ғилеме (1965) һүҙлектәре донъя күрә. Был йылдарҙағы баҫмаларҙың күбеһе Т. Ғ. Байышев авторлығында һәм уның мөхәррирлегендә нәшер ителә.

70–80-се йылдар арауығындағы тынлыҡтан һуң 80–90-сы йылдар русса-башҡортса һәм башҡортса-русса хоҡуҡ (1980), ботаника (1981), кеше анатомияһы һәм физиологияһы (1981), математика (1982), физика (1984), ижтимағи-сәйәси терминдар (1984), ҡош исемдәре (1986), ауыл хужалығы (1987) буйынса һүҙлектәр сығыу менән билдәле.

1990–2000 йылдарҙа 20-гә яҡын һүҙлек баҫылып сыға: медицина һәм гигиена (1990), лингвистика (1991), фольклор (1993, 1999), математика (1993), юриспруденция (1994), этнография (1994, 2000), хоҡуҡ (1994, 1996), этика (1996), һынлы сәнғәт (1997), музыка (1997), ботаника (1997), Башҡортостандың умыртҡалы хайуандары (1998), умартасылыҡ (1999), эквивалентһыҙ лексика (1999) һүҙлектәре.

Терминологик һүҙлектәр төҙөү эше һуңғы ун йыл эсендә айырыуса йәнләнде. Ауыл хужалығы (2001), дефектология (2001), умартасылыҡ (2001, 2008), ижтимағи-сәйәси терминдар (2001), телдәрҙе уҡытыу методикаһы (2001, 2009), ботаника (2002), лингвистика (2002), педагогика һәм психология (2002), этнолингвистика һәм этномәҙәни лексика (2002, 2003, 2006), мифология (2002, 2010, 2011), техника (2003), юриспруденция (2003), офтальмология (2004), архитектура-төҙөлөш терминдары (2004), сауҙа һәм дөйөм туҡланыу хеҙмәткәрҙәре өсөн һүҙлек (2005), халыҡ медицинаһы (2005), малсылыҡ (2006), китапхана, нәшриәт һәм мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре өсөн һүҙлек (2006), медицина (2007), урман эше (2007), иҡтисад (2007), хәрби лексика (2007), бала тыуыу йолалары лексикаһы (2008), астрономия (2008), экология (2008), эстетика (2008), һыҙма сәнғәт (2008), этика (2009), физкультура һәм спорт (2009), тәбиғәт белеме (2009), мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре өсөн һүҙлек (2009), сауҙа, эшҡыуарлыҡ һәм тышҡы иҡтисади эшмәкәрлек, дипломатия буйынса (2009) ике телле һәм белешмә һүҙлектәр донъя күрҙе. 1990–2005 йылдарға ҡараған һүҙлектәрҙең байтағы филология фәндәре докторы, профессор З. Ғ. Ураҡсин мөхәррирлегендә нәшер ителеүен һәм Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан төҙөлөүен һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Терминологик һүҙлектәрҙе әҙерләү һәм төҙөү башҡорт әҙәби теленең лексик нормаларын билдәләүҙә, уларҙы нығытыу һәм үҫтереүҙә мөһим роль уйнаны. Уларҙа сағылған тел байлығы дөйөм тәржемә һәм аңлатмалы һүҙлектәрҙә урын ала барҙы. Төрлө йылдарҙа сығарылған русса-башҡортса (1948, 1954, 1964, 1994, 2002, 2005, 2007), башҡортса-русса (1958, 1996) һәм аңлатмалы (1993, 2004) һүҙлектәр эҙмә-эҙлекле рәүештә һүҙлек составының тулыландырылыуы, материалдарҙың эшкәртелеү сифаты яҡшырыуы, һүҙҙәрҙең мәғәнәләре киңерәк һәм анығыраҡ асыҡланыуы менән айырылып тора. Әйтәйек, иң күләмле һүҙлектәрҙән Н. К. Дмитриев, Ҡ. З. Әхмәров, Т. Ғ. Байышев мөхәррирлегендә Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан әҙерләнгән 1948 йылғы «Русса-башҡортса һүҙлек»тә — 40000 һүҙ; 1964 йылғы һүҙлектә (яуаплы мөхәррире Ҡ. З. Әхмәров) — 46000 һүҙ; 2005 йылғы ике томлы тәржемәүи һүҙлектә (мөхәррире З. Ғ. Ураҡсин) 60 меңдән ашыу лексик берәмек тупланған. Был баҫмаларға киң ҡулланылышлы һүҙҙәрҙән тыш йәнле һөйләү теле лексикаһы, фразеологик берәмектәр һәм ғилми терминологияның иң күп ҡулланылған ҡатламы индерелгән. 1958 йылғы «Башҡортса-русса һүҙлек»тә — 22000 башҡорт һүҙе, 1996 йылғы «Башҡортса-русса һүҙлек»тә — 32000 һүҙ; 1993 йылғы ике томлы аңлатмалы һүҙлектә 55 меңдән ашыу һүҙ, нығынған һүҙбәйләнеш, термин, һөйләш материалдары һәм иҫкергән һүҙҙәр алынған.

Был лексикографик хеҙмәттәрҙе төҙөүҙә Ә. Ә. Юлдашев, И. М. Агишев, Ҡ. З. Әхмәров, Т. Ғ. Байышев, Ә. Ғ. Бейешев, Р. Н. Тереғолова, Ә. М. Бикмурзин, М. М. Буранғолов, Ә. И. Харисов, Б. С. Сәйәрғәлиев, У. М. Яруллина, Ғ. И. Ишбулатов, З. Ҡ. Ишмөхәмәтов, Г. Р. Кәримова, Т. Х. Кусимова, А. Ш. Ҡотошев, С. Ф. Миржанова, З. Ғ. Ураҡсин, М. Х. Әхтәмов, Ф. Ғ. Хисамитдинова, У. Ф. Нәҙерғолов, Т. Ф. Ҡарамышева, Г. Д. Зәйнуллина, Н. Ф. Суфьянова, З. Ғ. Уразбаева, Ш. В. Нафиҡов, З. Ә. Сиразитдинов, Р. Н. Һаҙыева кеүек күренекле ғалимдар һәм башҡорт теле белгестәре әүҙем ҡатнаша.

Тел байлығын, яңы атамаларҙы, әҙәби тел нигеҙҙәрен нығыраҡ таратыу һәм киң ҡулланыу зарурлығы башҡортса-русса һәм русса-башҡортса мәктәп һүҙлектәре (1942, 1986, 1998, 1999, 2001, 2006, 2009, төҙөүселәре — Г. Р. Кәримова, З. Ғ. Ураҡсин, Л. Ғ. Саяхова, З. Ғ. Сәхипова, Ф. Ғ. Хисамитдинова, Р. Т. Моратова, М. Ғ. Усманова, Ф. Ф. Әсәҙуллина һ. б.), орфография һүҙлектәре (1942, 1952, 1988, 1998, 2002, төҙөүселәре — Ҡ. З. Әхмәров, Р. Ғ. Аҙнағолов, Н. Ф. Суфьянова, З. Ҡ. Ишмөхәмәтов) әҙерләп баҫтырыу ихтыяжын тыуҙырҙы.

Һуңғы 40–50 йыл эсендә ҙур күләмле ике телле терминологик һүҙлектәр менән бергә телдең айырым семасиология һәм һүҙьяһалыш күренештәренә бағышланған лексикографик ҡулланмалар әҙерләнде һәм баҫылып сыҡты: синонимдар һүҙлеге (1966, 1985, 2000, төҙөүсеһе З. Ғ. Ураҡсин), омонимдар һүҙлеге (1966, 1986, төҙөүсеһе М. Х. Әхтәмов), антонимдар һүҙлеге (1973, 2009, төҙөүсеһе М. Х. Әхтәмов), паронимдар һүҙлеге (2001, төҙөүселәре — К. Ғ. Ишбаев, З. К. Ишкилдина), фразеологик берәмектәр (1973, 1989, 1996, 2006, төҙөүселәре — З. Ғ. Ураҡсин, Ф. А. Нәҙершина, Х. Ғ. Йосопов), морфемалар (1992, 1994, 2004, 2005, 2008,

төҙөүселәре — М.Х. Әхтәмов, З.Ғ. Уразбаева, Ф.Ғ. Хисамитдинова, А.М. Ишеғолова); ономастика материалдары: кеше исемдәре белешмә-һүҙлеге (1976, 1982, 1991, 2000, 2010, төҙөүселәре — Т.Х. Кусимова, С.А. Бикҡолова, Ф.Ғ. Хисамитдинова, Р.И. Солтанова, С.Х. Төпәйев), топонимдар (1980, 1992, 1994, 2000, 2001, 2002, 2005, 2006, 2008, 2009, төҙөүселәре — А.А. Камалов, Р.З. Шәкүров, З.Ғ. Ураҡсин, М.Ф. Хисмәтов, Ф.Ғ. Хисамитдинова, З.А. Сиразитдинов, Н.Ф. Суфьянова, Ю.Х. Юлдашбаев); яңы төр һүҙлектәрҙән: функциональ-когнитив (2000, 2002, 2003, 2007), йышлыҡ һүҙлектәре (1995, 1997, 2002, 2006, төҙөүсеһе З.Ә. Сиразитдинов), идеографик һүҙлек (2005, төҙөүсеһе М.Ғ. Усманова) баҫылып сыҡты.

Башҡорт әҙәби теленең лексикаһын байытыу һәм нормаға һалыу йәһәтенән үткән быуаттың 20-се йылдарынан алып башҡорт телсе-ғалимдарының йәнле һөйләү телмәрен — һөйләштәрҙе өйрәнеүе ҙур әһәмиәткә эйә. 50-се йылдарҙан башлап Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан диалекттарҙы, һөйләштәрҙе өйрәнеү, тикшереү планлы рәүештә алып барыла. Филология фәндәре докторҙары Н.Х. Ишбулатов, Н.Х. Мәҡсүтова етәкселегендә ойошторолған күп һанлы экспедициялар һөҙөмтәһендә йыйылған дөйөм башҡорт теленең һүҙ байлығы буйынса тупланған бай материал институттың тел бүлеге фондында һаҡлана һәм ул өс томлы башҡорт һөйләштәре һүҙлеге (1967, 1970, 1987), һуңғы йылдарҙа сыҡҡан «Башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге» (2002), «Башҡорт теленең диалектологик атласы» (2005) тигән ике фундаменталь хеҙмәткә лә нигеҙ булып тора.

Дөйөмләштереп әйткәндә, бөгөн республика телселәре тарафынан, бигерәк тә Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фәнни хеҙмәткәрҙәре тырышлығы менән, башҡорт теле буйынса ҙур лексикографик эш башҡарылған, күп һанлы тәржемә, тематик, терминологик һәм башҡа һүҙлектәр әҙерләнгән, баҫылып сыҡҡан. Шулай ҙа, хәҙерге иң үҫешкән төрки телдәренең береһе булараҡ, ҡалыплашҡан фонетик, грамматик нормаларға, ҡабатланмаҫ һүҙ байлығына эйә булараҡ, башҡорт теле бөгөн лексик хазинаһын мөмкин тиклем тулы кимәлдә сағылдырған ҙур аңлатмалы-тәржемәүи академик һүҙлеккә мохтаж.

Бындай һүҙлектең мәҙәни һәм фәнни әһәмиәтен, уны төҙөүҙең мөһимлеген тулыһынса аңлап, быға тиклем булған лексикографик әҙәбиәткә таянып, Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел ғилеме бүлеге хеҙмәткәрҙәренән торған ҙур булмаған коллектив 2006 йылда 10 томлыҡ Академик һүҙлек төҙөүгә тотона (текста артабан — Һүҙлек).

Һүҙлектең төп маҡсаты — нәфис, фәнни-популяр, уҡытыу-методик әҙәбиәттә сағылыш алған башҡорт теленең һүҙ байлығын мөмкин тиклем тулы биреү, башҡорт халҡының быуаттар төпкөлөнән үҫешеп килгән тел хазинаһын күрһәтеү.

Һүҙлектең нигеҙе итеп башҡорт нәфис әҙәбиәтенән (XIX быуат аҙағынан башлап), фәнни, ижтимағи-сәйәси әҙәбиәттән, совет осоро һәм хәҙерге публицистиканан, халыҡтың ауыҙ-тел ҡомартҡыларынан, архив ҡулъяҙмаларынан, баҫма һәм ҡулъяҙма һүҙлектәрҙән тупланған өс миллион тирәһе берәмектән торған Институттың аңлатмалы һүҙлек фонды картотекаһы базаһында Ә.Ғ. Бейешев

етәкселегендә Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре тарафынан төҙөлгән ике томлы «Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге» (М., 1996) алына. Картотеканы тулыландырыу эше бөгөн дә даими алып барыла.

Ике томлыҡ һүҙлек 55 меңдән артыҡ баш һүҙ һәм фразеологик берәмекте, шул иҫәптән ижтимағи-сәйәси, фәнни-техник терминдарҙы, иҫкергән, тарихи һүҙҙәрҙе, донъя һәм Рәсәй халыҡтары этнонимдарын үҙ эсенә алған. Баҫмала варианттары булған һүҙҙәрҙең һәм фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһе тулы асыла, мәғәнә төҫмөрҙәре күрһәтелә, грамматик, стилистик характеристика бирелә, шуның менән телдең һүҙ байлығы, һәр һүҙҙең мәғәнәләре, грамматик, стилистик мөмкинлектәре тулы күҙ алдына баҫтырыла.

Шулай ҙа сәнәғәттең, халыҡ хужалығының, бигерәк тә мәҙәниәттең, фәндең интенсив үҫеше, йәмғиәттә барған ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә һуңғы ике тиҫтә йыл арауығында башҡорт теле лексикаһы һиҙелерлек үҙгәрештәр кисерҙе: бихисап яңы һүҙ һәм мәғәнә ҡулланылышҡа индерелде, күп төшөнсәләр иҫкергән һүҙҙәр рәтенә күсте, элекке архаизмдар яңынан ҡулланыла башланы, айырым һүҙҙәрҙең лексик-семантик функцияһы киңәйҙе йәки тарайҙы, яңы үҙенсәлекле терминологик өлкәләр барлыҡҡа килде. Быларҙың бөтәһе лә башҡорт теленең лексик системаһының үҫешенә булышлыҡ итте һәм кәрәкле баҫмаларҙа уны яңыртыу зарурлығын тыуҙырҙы.

Алда нәшер ителгән башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән айырмалы рәүештә, тәү сиратта аңлатмалы-тәржемә һүҙлек булараҡ, был яңы Һүҙлектә:

1) ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларынан алып бөгөнгәсә йәшәп килгән һөйләү һәм китап телмәренә, әҙәби телгә һәм һөйләштәргә ҡараған башҡорт теленең бөтә лексикаһы мөмкин тиклем тулы күләмдә алына. Диалекттарҙағы, йәнле һөйләү телмәрендәге ябай һүҙҙәр һәм һүҙҙәрҙең варианттары Һүҙлеккә тулы хоҡуҡлы һүҙҙәр рәүешендә индерелә, сөнки улар һөйләү телмәрендә киң ҡулланыла, нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәрендә лә йыш осрай;

2) баш һүҙ рәүешендә башҡорт һүҙ байлығының айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил иткән, һүҙьяһалыштың төрлө саралары ярҙамында барлыҡҡа килгән һүҙҙәр, ҡушма һүҙҙәр, ҡушма терминдар, аналитик ҡылымдар ҙа бирелә;

3) хәҙерге лексикография талаптарына ярашлы, заманса төҙөлгән аңлатмалы һүҙлек һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә, йөкмәткеһенә һалынған халыҡтың донъяны аңлауын, тирә-яҡ ысынбарлыҡты танып белеүе буйынса мәғлүмәттәрҙе аныҡ һәм тулы сағылдырырға тейеш, улар һөйләүсе йәки уҡыусыға туған теленең ҡабатланмаҫ үҙенсәлеген, матурлығын, байлығын аңларға мөмкинлек бирә. Ошоға бәйле рәүештә, Һүҙлектә айырым һүҙлек статьяһы итеп алынған халыҡтың ырым-ышаныуҙарына бәйле лексик берәмектәрҙең этномәҙәни төшөнсәһе асыҡлана;

4) заман талабына, ике теллелек шарттарына ярашлы рәүештә һүҙҙәр һәм уларҙың мәғәнәһе рус теленә тәржемә ителә. Аңлатмалы-тәржемәүи төрки-русса һүҙлектәр төҙөү төрки телдәренең норматив һүҙлектәрен булдырыуҙа яңы йүнәлеш иҫәпләнә (атап әйткәндә, был принцип нигеҙендә күп томлы «Яҡут теленең ҙур

аңлатмалы һүҙлеге» (Новосибирск: Наука, 2004 — бөгөнгәсә) төҙөлә). Шуның менән Һүҙлек киң ҡатлам уҡыусыларының ихтыяждарын да, фәнни-филологик ихтыяждарҙы ла ҡәнәғәтләндерәсәк. Һүҙлектәр төҙөүҙә былдай юлды һайлау дидактик мәсьәләләргә лә яуап бирә: республикабыҙҙағы ике теллелек шарттарында башҡорт телендәге иҫкергән һүҙҙәр һәм нығынған һүҙбәйләнештәрҙең күбеһе руссаға ауҙарыуҙы талап итә. Был, үҙ сиратында, хәҙерге йәштәргә һәм киләсәк быуын балаларына һүҙҙәрҙең мәғәнәһен теүәл, тулыраҡ, еңелерәк аңларға ярҙам итәсәк;

5) баш һүҙҙәр рус теленән тыш инглиз һәм төрөк телдәренә тәржемәләре менән бирелә. Хәҙерге заманда һүҙлекселәрҙең бурыстары ҡатмарлана төшә, сөнки бөгөнгө фәнни һәм киң ҡатлам уҡыусыларының талаптары көндән-көн арта бара. Һүҙлек ҡулланыусының төрлө һорауҙарына яуап бирергә тейеш, шулар араһында һүҙҙәрҙе халыҡ-ара телдәргә тәржемә итеү көнүҙәк мәсьәләләр рәтендә. Был талапты үтәү маҡсатында Һүҙлектә баш һүҙҙәр рус (Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле), инглиз (халыҡ-ара телдәрҙең береһе) һәм төрөк (төрки донъяның киң таралыш алған теле) телдәренә ауҙарылып бирелә;

6) һүҙҙең телдә йәшәйешен, төрлөсә ҡулланылышын тулыһынса күрһәтеү өсөн һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, мәғәнә төҫмөрҙәре, ҡулланыу үҙенсәлектәре нәфис әҙәбиәттән, фәнни, ижтимағи-сәйәси, публицистик әҙәбиәттән, һөйләштәрҙән алынған миҫалдар менән нығытыла. Һүҙлекте төҙөгәндә генераль картотеканы, лексикографик, эксперименталь-фонетик, грамматик, диалектологик базаны, ҡулъяҙма һәм иҫке баҫма китаптар каталогын үҙ эсенә алған башҡорт теленең Машина фонды ла актив ҡулланылды (http://mfbl.ru); шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының «Башинформ» мәғлүмәт агентлығы сайтынан (http://www.bashinform.ru) һәм башҡа мәғлүмәт порталдарынан материалдар файҙаланылды;

7) һүҙгә грамматик яҡтан ҡылыҡһырлама бирелә, һүҙьяһалыш һәм һүҙҙең ҡулланылыш үҙенсәлегенә күрһәтмә бирелә;

8) һирәк ҡулланылышлы һүҙҙәр эргәһендә тейешле билдәләр ҡуйыла;

9) тел тарихына ҡағылышлы, дөйөм төрки нигеҙле һүҙҙәргә лә, үҙләштерелгән һүҙҙәргә лә килеп сығышы (этимология) яғынан аңлатма бирелә. Һүҙлеккә күберәк фәнни терминологияны тәшкил иткән рус һүҙҙәренең, интернациональ һүҙҙәрҙең йыш ҡулланылғаны ғына алына; фән һәм техника буйынса тар ҡулланылышлы махсус терминдар Һүҙлеккә индерелмәй;

10) ҡулланылған фитонимик һәм флористик терминологияны аныҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн Һүҙлектә уларҙың латин телендәге халыҡ-ара фәнни исемдәре бирелә;

11) телдең лексик хазинаһының айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил итеүсе киң таралышлы һәм ҡулланылышлы яңғыҙлыҡ исемдәр (ойошма, учреждение, предприятие исемдәре, ер-һыу атамалары, кеше исемдәре), шулай уҡ хәҙерге телдә нығынған аббревиатуралар һәм ҡыҫҡартмалар теҙмәһе бирелә.

Шулай итеп, тәҡдим ителгән Һүҙлек башҡорт теленең һүҙ байлығын һәм нығынған һүҙбәйләнештәрен мөмкин тиклем тулыраҡ күҙ алдына килтерергә, мәғәнәләрен

аныҡ аңлатырға, дөрөҫ тәржемә бирергә, һүҙҙең әҙәби-норматив ҡулланылышын аса алырлыҡ баҫма булырға тейеш.

Һүҙлек ун томдан тора. I томда Баш һүҙ, Һүҙлектең төҙөлөшө, шартлы ҡыҫҡартмалар теҙмәһе, лексикографик, фольклор һәм фәнни хеҙмәттәр исемлеге, әҫәрҙәренән Һүҙлеккә миҫалдар алынған яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, ғалимдар исемлеге, Ҡушымта өлөшөндә башҡорт телендә иң йыш ҡулланылған аббревиатуралар, ер-һыу атамалары, ойошма, учреждение исемдәре, киң таралышлы кеше исемдәре бирелә.

а) синонимдар ярҙамында әҙәби телдә дублеттары булған диалект һүҙҙәр, йәнле һөйләү телмәренән алынған һүҙҙәр аңлатылды;

б) һүҙ йәки уның мәғәнәһенең өҫтәлмә характеристикаһы булараҡ синонимдар һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлап бирә, нөктәле өтөрҙән һуң килә ала;

— *киреһе* шартлы тамғаһы менән билдәләнгән антонимдар ҙа аңлатылыусы һүҙҙең мәғәнәһен өҫтәлмә рәүештә асыҡлап килә ала, мәҫәлән:

**АҘ II** *с.* ...

**1.** Һаны, күләме бәләкәй; әҙ; *киреһе* — күп.

**§ 17.** Ҡайһы бер һүҙҙәргә (этнографик һәм башҡа терминдарға, бер төрлө генә аңлатма биреп булмаған һүҙ һәм һүҙбәйләнештәргә) энциклопедик аңлатма бирелде, мәҫәлән:

**САҠ МЕНӘН СУҠ** ...

Әсә (үгәй әсә) ҡарғышынан ҡошҡа әйләнгән бәйеттәге ике мифик ҡош (*бер-береһе менән осраша алмай зарыккан бер туған ике ир бала*). □ Мифические образы двух братьев, проклятых матерью (мачехой) и принявших облик птиц.

**ҠӘМӘР** *и*.

Йөндән биҙәкләп бәйләнгән, бәрхәт йәки ебәктән аҡыҡ, зиннәтле таштар менән семәрләнгән, көмөш ҡаптырмалы билбау. □ Бархатный, шерстяной или шелковый мужской пояс, украшенный сердоликом, другими драгоценными камнями и серебряной бляхой.

**§ 18**. Һүҙҙең күсмә мәғәнәһен билдәләү өсөн аңлатма алдынан *күсм*. тамғаһы ҡуйылды, мәҫәлән:

**АҠ I** [боронғо төрки *ак*] (Р.: белый; И.: white; Т.: beyaz) *с*.

... **9.** *күсм*. Шатлыҡ менән тулы; ҡыуаныслы, бәхетле. □ Светлый, счастливый, радостный. *Аҡ бәхет. Аҡ көндәр*. ● *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — ҡаҡ бәхет*. Әйтем.

## Фразеология

**§ 19.** Һүҙлектә хәҙерге башҡорт теленең фразеологик берәмектәре һәм ныҕынған һүҙбәйләнештәре урын алды һәм аңлатылды.

**§ 20.** Фразеологик берәмектәр һүҙҙең бөтә мәғәнәләре артынан, ҡыҙыл юлдан, ♦ тамғаһынан һуң урынлаштырылды.

**§ 21.** Фразеологик берәмектәр һәм ныҕынған һүҙбәйләнештәр һүҙлек статьяларында уларҙың беренсе компоненты буйынса урынлаштырылды.

**§ 22.** Ныҕынған һүҙбәйләнештең бер һүҙен синоним менән алыштырып булған осраҡта был синонимдар йәйәләр эсендә *йәки* теркәүесе менән бирелде, мәҫәлән:

**Аҡылы ҡыҫҡа** (*йәки* **һай**) аҡылы етешмәй, аҡылһыҙ. □ Умственно ограниченный, неумный.

**§ 23.** Өсмөйөшлө йәйәләрҙә был һүҙбәйләнештә ҡулланылышы мотлаҡ булмаған һүҙ теркәлде, мәҫәлән:

**Аҡылы алтын <икән>** *көлк*. мөмкин булғандан артығын һораған, теләгән кешегә әйтелә. □ *соотв*. Губа не дура.

**§ 24.** Һүҙгә йәки уның мәғәнәһенә ниндәй билдәләр ҡуйылыуына ҡарамаҫтан, фразеологик һүҙбәйләнештәр эргәһендә стилистик билдәләр мотлаҡ ҡуйылды.

## Күргәҙмә материал

**§ 25.** Һүҙлектә күпселек мәғәнәләргә һәм мәғәнә төҫмөрҙәренә күргәҙмә материал бирелде. Улар һүҙҙең мәғәнәһен өҫтәлмә рәүештә асыҡлай, уның ҡулланылыш сфераһын күрһәтә, тейешле билдә менән күрһәтелгән һүҙҙең стилистик характеристикаһын дәлилләй. Фразеологик берәмектәр һәм ныҕынған һүҙбәйләнештәр шулай уҡ тейешле күргәҙмә материал менән бирелде.

**§ 26.** Күргәҙмә миҫалдар ике типта бирелде: а) художестволы, публицистик йәки фәнни әҫәрҙәрҙән цитаталар һәм б) хәҙерге әҙәби телдә типик ҡулланылышлы һүҙбәйләнештәр.

**§ 27.** Айырым һүҙбәйләнештәрҙе тәшкил иткән күргәҙмә миҫалдар аңлатманан һуң, цитаталарҙан алда урын алды.

**§ 28.** Цитаталарҙағы асыҡлаусы һүҙҙәр, шулай уҡ репликаларҙың теге йәки был шәхескә ҡарауын белдергән һүҙҙәр шаҡмаҡ йәйәләр эсендә курсив менән бирелде. Мәҫәлән:

**АПСАЙЫУ ...**

Үрә баҫыу, һын турайтыу. □ Выпрямиться, вытянуться, стоять навытяжку. *Апсая баҫыу.* ■ *[Күсмәҫ хан:] Мин бер болан осратҡайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан апсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**§ 29.** Цитаталарҙағы ҡыҫҡартылған өлөштәр ике нөктә менән белдерелде. Мәҫәлән:

**АҢЫШЫУ ...**

Аңғарыу. □ Понять. ■ *Ҡараһаҡал Антондан бөтә эште аңышҡас, ҡәләм-ҡағыҙын алып, .. ҡаяла ултырып хат яҙған.* «Ҡараһаҡал».

## Стилистик билдәләр

**§ 30.** Стилистик билдә (бәләкәй хәреф, курсив менән) түбәндәгесә күрһәтелде: а) билдә бөтә мәғәнәләре менән тулайым һүҙгә ҡараһа, һүҙҙең теге йәки был һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын билдәләгәндән һуң ҡуйылды; б) билдә һүҙҙең бер мәғәнәһенә генә ҡараһа, аңлатманың алдынан, мәғәнә иҫәбен белдергән цифрҙан һуң ҡуйылды.

**КӘСЕР** *и. мат. ...*

**БЫУМА** *и. мед. ...*

**БӘНДӘ** *и. иҫк. ...*

**ҠУПЫРЫШ** *с. диал. ...*

**ӘПКИЛЕҮ (әпкил-)** *ҡ. һөйл.*

**§ 31.** Һүҙҙәрҙең түбәндәге стилистик биҙәлешле һүҙҙәр төркөмдәре айырымланды:

а) иҫкергән һүҙҙәр:

**МӨҺӨР** *и.*

**1.** *иҫк.* Мисәт;

б) диалектизмдар:

**АПА** *и. диал. ҡар.* **апай**;

в) эмоциональ лексика:

**ҠОЛОҠАЙ** *и. ирк.*

Ҡолон;

г) һөйләү телмәре һүҙе:

**АЛАҒАНАТ II** *и. һөйл.*

Еңел тормош эҙләп, төрлө ерҙә йөрөгән елғыуар кеше. □ Летун.

ғ) китап һүҙе:

**АҒЛАУ (ағла-)** *ҡ. иҫк. кит.*

Илау. □ Плакать.

**§ 32.** Һүҙҙең фән, техника, сәнәғәт, һөнәрселек һ. б. махсус тармаҡтарға ҡарағанлығын белдергән билдәләр айырым төркөмдә тәшкил итә *(шартлы ҡыҫҡартмалар теҙмәһен ҡарағыҙ).*

Һүҙ бер нисә терминологик тармаҡта ҡулланылһа, уның эргәһендә ике билдә бирелде, мәҫәлән:

**АҒАЛТЫН** *и. хим. геол.*

Химик элемент, бик еңел сүкелә һәм һыҙыла торған һорғолт аҡ төҫтәге аҫыл металл *(электр һәм радиотехникала, ювелир эшендә һ. б. ҡулланыла).* □ Платина.

**§ 33.** Махсуслашҡан һүҙ бер нисә терминологик өлкәлә ҡулланылһа, шулай уҡ һүҙҙең тар ҡулланылыш сфераһын тәғәйен генә билдәләп булмаһа (шул уҡ ваҡытта һүҙ әҙәби телдә бик киң таралыш тапмаһа), һүҙҙең янында (йәки уның мәғәнәһе эргәһендә) дөйөм мәғәнәле *махс.* (йәғни махсус һүҙ) билдәһе ҡуйылды, мәҫәлән:

**АҒЫУЛЫ** ... *с.*

**3.** *махс.* Ағыу менән эшкәртелгән. □ Протравленный *(о семенах для посева, фруктовых деревьях и т. п.).*

## Һүҙлектә һүҙҙәргә грамматик ҡылыҡһырлама

### Исемдәр

**§ 34.** Һүҙлектә исемдәрҙән килгән баш һүҙ төп килештә берлектә бирелде. Баш һүҙҙән һуң *-к, -ҡ, -п*-ға тамамланған һүҙ нигеҙҙәренең интервокаль позицияла *-г, -ғ, -б* менән сиратлашып яңғырауланыу осраҡтары күрһәтелде, мәҫәлән:

**АҘАП (аҙабы) ...**

**АКАДЕМИК (академигы) ...**

**АҠЛЫҠ (аҡлығы) ...**

**АҠ ТАП (табы) ...**

**§ 35.** Исемдәрҙең айырым мәғәнәгә эйә булған иркәләү-кесерәйтеү формалары тәүге нигеҙгә тоҫҡама менән һәм был форманың типик мәғәнәһен күрһәтеп бирелде.

**ҠОЛОҠАЙ** *и. ирк. ҡар.* **ҡолон.** *уменьш.-ласк.* от **ҡолон.** □ Жеребёночек.

**§ 36.** Йыйнау исемдәре *йыйн.* билдәһе менән бирелде.

**АТА-БАБА** *и. йыйн.*

Элекке быуындар. □ Предки.

**§ 37.** Фольклор әҫәрҙәре персонаждарына, мифологик төшөнсәләргә, шулай уҡ дини һәм этнографик терминдарға энциклопедик һүҙлектәрҙәгесә аңлатма бирелде. Мәҫәлән:

**БИСУРА** *и. миф.*

Ялбыр һары сәсле, ҡыҙыл күлдәкле ҡурҡыныс ҡатын-ҡыҙ образындағы мифик зат. □ Мифическое существо в образе страшной женщины с рыжими волосами в красном платье.

**ӨРӘК** *и. миф.*

Үлгән кешенең шәүлә булып күренә торған рухы, йәне. □ Душа покойника, не нашедшего успокоения; призрак.

## Сифаттар

**§ 38**. Сифаттар төп дәрәжә формаһында бирелде.

**СИРЛЕ** *с.*

*Ниндәйҙер* сире (ауырыуы) булған. □ Больной.

**§ 39.** Артыҡлыҡ һәм аҙһытыу дәрәжәһе сифаттары, сифаттың төп формаһына тоҫҡама яһап, айырым статьяларҙа урынлаштырылды:

**ҠАП-ҠАРА** *с. арт. дәр. ҡар.* **ҡара**. *превосх. степ. от* **ҡара**. Бик, үтә ныҡ ҡара. □ Очень чёрный, совершенно чёрный.

**АҠҺЫЛ** *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **аҡ**. *уменьш. степ. от* **аҡ**. Тоноҡ аҡ, аҡҡа тартым; ағылйым. □ Беловатый.

**§ 40.** Ҡушма сифаттар айырым баш һүҙ итеп бирелде.

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ** *с.*

Ғаиләле. □ Семейный. *Башлы-күҙле булыу.*

## Алмаштар

**§ 41.** Алмаштарҙың мәғәнәһе нимәне дөйөмләштереүҙәренән йәки алмаштырыуҙарынан сығып асылды. Шуға күрә алмаштарҙың грамматик төркөмсәләре күрһәтелде.

**§ 42.** Зат һәм күрһәтеү алмаштарының килеш формалары төп һүҙ янында йәйәләр эсендә бирелде:

**МИН (минең, миңә, мине, минән, миндә)** *зат а.*

Һөйләүсе үҙен күрһәткәндә, үҙен атағанда ҡулланыла. □ Я *(этим словом говорящий указывает на себя).*

**§ 43.** Башҡа һүҙ төркөмдәре функцияһын үтәүсе алмаштар айырым статья менән бирелде.

**ҮҘЕНЕКЕ** *и. һөйл.*

Быума. □ Эпилепсия.

## Һандар

**§ 44.** 1-ҙән 10-ға тиклемге ябай һандар, 20-нән алып 100-гә тиклемге тиҫтәләрҙең атамалары төп килештә, берлектә бирелде һәм тулыһынса аңлатылды.

**ҺИГЕҘ** *төп һ.*

Һигеҙ һанын, иҫәбен, цифрын билдәләгән һүҙ. □ Слово, обозначающее число, количество, цифру 8.

**§ 45.** Һандарҙың грамматик төркөмсәләре — рәт, сама, кәсер һандары айырым статья менән бирелде, тейешле төп һанға тоҫҡап билдәләр менән күрһәтелде.

**УН** *төп һ.*

Ун һанын, иҫәбен, цифрын билдәләгән һүҙ. □ Слово, обозначающее число, количество, цифру 10.

**УНЫНСЫ** *рәт һ. ҡар.* **ун**. *поряд. числ. от* **ун.** □ Десятый.

**УНЛАП** *сама һ. ҡар.* **ун**. *прибл. числ. от* **ун.** □ Около десяти.

**УНАР** *бүл. һ. ҡар.* **ун**. *раздел. числ. от* **ун.** □ По десять.

**ӨСӘҮ** *йый. һ. ҡар.* **өс**. *собират. числ. от* **өс.** □ Трое.

**§ 46**. Әгәр һан икенсе һүҙ төркөмөнә күсһә һәм яңы мәғәнәгә эйә булһа, ул айырым статья менән бирелде һәм, уның йөкмәткеһе тулыһынса асылды.

**ЕТЕҺЕ** *и. дини.*

Мосолман динендә: кеше үлгәндең етенсе көнөн билдәләп уҡыған аят. □ Седьмины; обряд поминания покойного на седьмой день.

### Ҡылым

**§ 47.** Һүҙлектә ҡылымдар, башҡорт грамматикаһында ҡабул ителгәнсә, исем ҡылымдың **-ыу, -еү, -оу, -өү** формаһында, ә йәйәләр эсендә ҡылымдың тамыры йәки нигеҙе бирелде: **уҡыу (уҡы-)**.

**§ 48.** Ҡылымдың йүнәлеш формаларының мәғәнәүи айырмаһы булмаһа, йөкмәткеһе асып бирелмәй, тәүге нигеҙгә тоҫҡама ғына яһалды:

**ЙЫУҘЫРЫУ (йыуҙыр-)** *к. йөкм. ҡар.* **йыуыу.** *понуд. от* **йыуыу.**

**БОРОЛОУ (борол-)** *к. төш. ҡар.* **бороу 1**. *страд. от* **бороу 1**. *Сирак боролған аркан. Һемәге боролған самауыр.*

**§ 49.** Әгәр йүнәлеш формаһы һүҙ яһаусы мәғәнәһендә ҡулланылһа, уға аңлатма ла бирелде.

**БУЛЫШЫУ (булыш-)** *к.*

Ярҙам итеү, ярҙамлашыу. □ Помогать.

**§ 50.** Ҡылымдың **-ғыла, -ыңҡыра, -штыр** (варианттары менән) формалары айырым статьяларҙа төп формаға тоҫҡама менән бирелде:

**БАРҒЫЛАУ (барғыла-)** *к.*

Һирәк-һаяҡ барыу. □ Ходить время от времени.

**КИЛЕШТЕРЕҮ (килештер-)** *к.*

Һирәк-һаяҡ килеү. □ Приходить изредка.

**§ 51.** Ҡылымдарҙың аналитик формалары алфавит тәртибе буйынса тамыр йәки нигеҙҙәре күрһәтеп бирелде:

**АЛЫП КИТЕҮ (алып кит-)** *к.*

**Рәүеш**

**§ 52.** Һүҙлектә рәүештәр төп формала бирелде.

**КҮП** *р.*

Һаны, күләме ғәҙәттәгенән артыҡ. □ Много.

**§ 53.** *-лап* ялғауы ярҙамында исем нигеҙҙәрҙән яһалған рәүештәр баш һүҙ итеп бирелде:

**АҘНАЛАП** (Р.: неделями; И.: for weeks; Т.: haftalarca) *р.*

**§ 54.** Һүҙлектә ҡушма рәүештәр баш һүҙ итеп бирелде:

**АУА-ТҮНӘ** *р.*

Бер ауып, бер тороп; ауып-ауып китер хәлдә. □ Шатаясь, пошатываясь, покачиваясь, переваливаясь.

**Ярҙамсы һәм эмоциональ-экспрессив һүҙ төркөмдәре**

**§ 55.** Ярҙамсы һүҙҙәр, ымлыҡтар, мөнәсәбәт һәм өноҡшаш һүҙҙәр Һүҙлектә баш һүҙ итеп тейешле билдәләр һәм аңлатмалар менән бирелде:

**БОРОН II** *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр йәки *-маҫ* формалы сифат ҡылымдан һуң килеп, эш, хәрәкәттең кемдән, нимәнән йәки ниндәйҙер эш, хәлдән алда булғанын белдерә; элек. □ До, до того как, прежде чем. *Башламаҫ борон. Көн борон килеү.*

**БЕР ... БЕР III** *терк.*

Аллы-артлы теҙеп биргәндә йәки ҡаршы ҡуйғанда ҡулланыла. □ Союз разд. То ..., то. *Бер алға, бер артка китеү. Бер инеп, бер сығып йөрөү. Бер мин, бер ул.*

**ҺӘМ** *терк.*

Тиң дәрәжәле һүҙ һәм һөйләмдәрҙе йыйып теркәй. □ Союз соед. И, да, также.

**БАҺА II: да baha (дә baha), ҙа baha (ҙә baha), ла baha (лә baha), та baha (тә baha)** *киҫ.*

Әйтелгән фекерҙе нығыта. □ Част. усил. *(употребляется с частицами да/дә, ҙа/ҙә, ла/лә, та/тә).* Же, ведь. *Ана тора ла baha. Аты бар ҙа baha.*

**ҠЫТ-ҠЫТАҠ** *окш.*

Тауыҡ ҡысҡырған тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание кудахтанью.

**ЫҺ** *ымл.*

**1.** Көсөргәнеп көс һалғанды белдерә. □ Выражает напряжение.

**2.** Һыҙланып ыңғырашҡанды белдерә. □ Выражает стон от боли.

**БУҒАЙ** [төрки] *мөн.*

Икеләнеүҙе, фаразды белдерә. □ Кажется, по-видимому, как будто. *Ул бөгөн ҡайта, буғай.* ■ *Йылғыр атка менгән берәү үтте, Шаһибәрәк тигән ир, буғай.* Халыҡ йырынан.

**БЕРС** *сак.*

Бесәйҙе ҡыуа торған һүҙ. □ Брысь *(возглас, которым отгоняют кошку).*

**БЕРҮК** *инш.*

*Ниҙер* үтенгәндә ҡулланыла; зинһар. □ Пожалуйста. *Берүк һуңға ҡалмағыҙ.*

## Рус телендә һүҙгә аңлатма биреү

**§ 56.** Рус телендә һүҙҙең мәғәнәһенә аңлатма биреү башҡорт телендәге һүҙҙең аңлатмаһына нигеҙләнә, ләкин ул башҡортсанан рус теленә туранан-тура тәржемә түгел. Ҡағиҙә булараҡ, ҡыҫҡа итеп төп мәғәнә йәки уның эквиваленты бирелде.

**§ 57.** Этнографик төшөнсәләрҙе белдергән һүҙҙәрҙең йөкмәткеһе рус телендә шаҡтай киң аңлатыла, уларға аңлатма биреү энциклопедик характерҙа була. Башҡорт телендә яҡшы аңлашылып торған нәмәләрҙе, төшөнсәләрҙе белдерһә, ҡыҫҡа ғына бирелергә мөмкин:

**АРҠАЛЫҠ** *и.*

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәс биҙәүе. □ Украшение для косы *(узкая и длинная полоса цветной ткани, в два ряда расшитая кораллами и серебряными монетами).*

**§ 58.** Нигеҙ һүҙгә тоҫҡама менән генә килтерелгән һүҙҙәр рус телендә эквивалентһыҙ бирелде.

**§ 59.** Стилистик, грамматик һәм норматив билдәләр рус теленә тәржемә ителмәне. Уларҙы һүҙлектә урынлаштырылған ҡыҫҡартмалар һәм ике телдә бирелгән махсус билдәләр исемлектәрендә табырға мөмкин.

**§ 60.** Әгәр башҡорт һәм рус телдәрендә тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһе һәм ҡулланылыу даирәһе үҙ-ара тап килһә, рус теленән тулы эквивалент һайлап алынды һәм *соотв.* билдәһе менән бирелде:

♦ **Ҡомдан арҡан ишеү** мәғәнәһеҙ эште эшләп юҡҡа ваҡыт әрәм итеү. □ Вить верёвку из песка. *соотв.* Переливать из пустого в порожнее.

**§ 61.** Рус телендә эквиваленты булмаған тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһе әҙәби телдә тасуирлау юлы менән асылды:

**АҠ ҠОРБАН** *и. этн. миф.*

**1.** Изге теләктәр теләп йәки нәҙер әйтеп аҡ малдан салған ҡорбан. □ Торжественное или обещанное жертвоприношение *(в жертву приносится животное белой масти). Аҡ ҡорбан салыу.*

**§ 62.** Башҡорт теленең *-ыу/-еү* ялғауына тамамланған ҡылымдары ҡылым булараҡ та, исем булараҡ та тәржемә ителде. Исем мәғәнәһе ҡылым мәғәнәһе артынан ҡуйылған // тамғаһынан һуң бирелде, мәҫәлән:

**УҠЫУ I (уҡы-)** *к.*

Хәрефтәр йәки башҡа яҙыу тамғалары менән яҙылған йәки баҫылғанды ҡабул итеү *(телдән һөйләп йәки үҙ алдыңа).* □ Читать. // Чтение.

Исем ҡылым йыш ҡулланылышлы айырым исем мәғәнәһен алғанда, ул ҡылымға омоним булараҡ урынлаштырылды, мәҫәлән:

**ҺАЙЛАУ I** *к.*

Һайлап алыу. □ Выбирать.

**ҺАЙЛАУ II** *и.*

Тауыш биреү юлы менән айырып алыу, билдәләү эше. □ Выборы.

**§ 63.** Рус телендә енес категорияһына эйә һүҙҙәрҙең тәржемәлә тик мужской род формаһы күрһәтелде. Иҫкәрмә рәүешендә мужской родта ҡулланыла алмаған (йәки ғәҙәттә ҡулланылмаған) һүҙҙәр башҡа төрлө бирелергә мөмкин, мәҫәлән:

**АУЫР АЯҠЛЫ** *с.*

Ауырлы, йөклө. □ Беременная.

## Этимологик белешмәләр

**§ 64.** Һүҙлек статьяларында этимологик белешмәләр баш һүҙҙән һуң шаҡмаҡ йәйәләр эсендә урынлаштырылды.

**§ 65.** Этимологик белешмәләр ҡыҫҡаса, сығанаҡтарына тоҫҡама яһамайса бирелде.

**§ 66.** Этимологик белешмәләрҙең түбәндәге төрҙәре алынды:

а) боронғо төрки йәки дөйөм төрки сығанаҡлы һүҙҙәргә этимологик белешмә хәҙерге башҡорт алфавиты хәрефтәре менән күрһәтелде;

б) ғәрәп, фарсы сығанаҡлы һүҙҙәргә белешмә ғәрәп графикаһы менән яҙылды;

в) башҡорт теленә рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәргә белешмә кирил йәки латин графикаларында бирелде.

**§ 67.** Этимологик белешмәләр бер нисә вариантта бирелде.

Баш һүҙ формаһы яғынан да, мәғәнәһе менән дә сығанаҡ телдәге һүҙгә тап килһә, һүҙҙең этимоны ғына бирелде, мәғәнәһе асыҡланманы, мәҫәлән, **ҠАРА** [боронғо төрки *кара*].

Сығанаҡ тел менән сағыштырғанда, сығанаҡ һүҙ башҡорт телендә яңы мәғәнә алһа йәки бүтән грамматик категорияға ҡараған һүҙҙең яһалышында нигеҙ булып торһа, белешмәлә ул түбәндәге ҡалыпта бирелде:

**АБИТУРИЕНТ** [рус. < нем. *Abiturient* < лат. *abituriens* ‘сығып китеү’]

**§ 68.** Ҡушма һүҙҙәрҙең компоненттарының этимологияһын күрһәткәндә, сығанаҡ һүҙҙәр араһында плюс (+) тамғаһы ҡуйылды, мәҫәлән:

**АВТОРЕФЕРАТ** [рус. < гр. *avto* ‘үҙе’ + лат. *refero* ‘хәбәр итеү’]

**§ 69.** Айырым осраҡтарҙа һүҙҙең этимоны бирелмәйенсә, сығанаҡ тел йәки телдәр төркөмө генә күрһәтелде, мәҫәлән:

**АЙЫЛ I** [боронғо ҡыпсаҡ телдәренән]

**§ 70.** Тамыры үҙ аллы һүҙ рәүешендә үҙләштерелеп, артабан башҡорт ялғауҙары ярҙамында яһалған *авторитетлы*, *нефтсе* кеүек яһалма һүҙҙәргә этимологик белешмә бирелмәне.

# О ПОСТРОЕНИИ СЛОВАРЯ

## Состав словаря

**§ 1.** Словарь содержит общеупотребительную лексику и фразеологию башкирского языка, используемую как в литературном, так и в разговорном языках, призванную показать с возможной полнотой современное состояние словарного состава башкирского языка. Материальной базой для Словаря послужили картотеки толкового и диалектологического словарей башкирского языка Института истории, языка и литературы Уфимского научного центра Российской академии наук, включающие около 3 млн слов, а также индивидуальные картотеки составителей опубликованных и неопубликованных терминологических и тематических словарей, содержащие выборки из произведений народного творчества и художественной литературы до наших дней.

**§ 2.** В соответствии с задачами Словаря в качестве заглавных слов в него входят:

— общеупотребительная лексика башкирского языка;

— новые слова, сложные слова, термины, возникшие с помощью словообразовательных средств самого башкирского языка, а также заимствования последних десятилетий, обозначающие новые предметы, понятия или уточняющие значения слов стилистически, вошедшие в современные тексты периодических изданий, живую речь (*көйәрмән, эшкыуар, риэлтор* и др.); узкоспециальные новые слова, относящиеся к важнейшим терминологическим подсистемам (*картридж, принтер* и др.);

— устаревшие слова, употребляющиеся редко или вышедшие из употребления в разговорном языке, но встречающиеся в художественных и других текстах (*абыз, тархан, йопар* и др.);

— народная терминология и номенклатурная лексика (термины природных явлений, термины, связанные с человеком и обществом, материальной и духовной культурой и др.);

— родо-племенная этнонимия и атрибутика (*бүләр, мең, табын; айбалға, ҡойошкан* и др.);

— диалектные слова, представляющие интерес с точки зрения истории языка и отражения языковой модели мира башкир (*ана, ҡошъярымтыҡ, тыңға барыу* и др.);

— широкоупотребительные фонетические и морфологические варианты слов, которые уже стали литературной нормой и традиционно включаются в словари (*аһылдау, әҙ* и др.).

**§ 3.** В Словаре не даются следующие категории слов:

— искусственные новообразования, не прижившиеся в языке (*утарба, ербесәр* и др.);

— неологизмы отдельных писателей;

— слова из русского языка, которые используются в разговорной речи или в печати единично и более не повторяются;

— сленговые и жаргонные слова отдельных социальных и возрастных групп;

— диалектные слова, их фонетические и лексические варианты, не получившие широкого распространения в источниках;

— многие слова грубого просторечия;

— имена нарицательные, представляющие собой названия жителей городов и местностей (*өфөләр, баймактар* и т. п.);

— узкоспециальные термины отдельных областей науки, техники, искусства, необходимые лишь специалистам;

— типовые грамматические формы, если они не имеют отдельных значений (*ҡулым, уҡытыусымын* и др.);

— группы производных слов, которые легко образуются и легко понимаются:

а) существительные с аффиксами эмоциональной оценки (*башҡай, кәзәкәй* и др.);

б) прилагательные с аффиксами *-лы/-ле, -дыҡы/-деке (-тыҡы/-теке, -ныҡы/-неке), -тағы/-дағы* и др., если они не имеют отдельных значений;

в) не даются в Словаре аббревиатуры, представляющие собой буквенные сокращения, за исключением тех, которые вошли в язык как самостоятельные лексемы.

*Примечание.* Списки широкоупотребительных аббревиатур современного башкирского языка, топонимы, антропонимы, названия организаций, учреждений, предприятий даются в приложении к каждому тому.

## Структура Словаря

**§ 4.** Слова в Словаре расположены в алфавитном порядке, без объединения в гнёзда.

**§ 5.** Словник Словаря состоит из простых, производных и составных (сложных) слов. Кроме единичных, т. е. в звуковом отношении целостных слов, в Словарь в качестве заглавных слов включены устойчивые словосочетания, являющиеся широкоупотребительными составными названиями и терминами, в слообразовательном плане представляющие собой:

— парные слова (*йөҙмә-йөҙ, ҡара-ҡаршы, урыҡ-һурыҡ* и др.);

— слова-повторы (*былҡ-былҡ, гөп-гөп, бес-бес, ҡабат-ҡабат* и др.);

— составные сложные слова (*бал ҡорто, ят бауыр* и др.), в том числе аналитические формы глаголов (*алып килеү, тартып сығарыу* и др.).

**ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ** *и.*

Ҡара башлы, һары ҡорһаҡлы, йәшкелт һыртлы турғай.

**ҠЫҢҒЫРАУ СӘСКӘ** *и.*

Ҡыңғырауға оҡшап торған аҡ, күк, зәңгәр сәскәле үлән.

**АҠЫЛ ЙЫЙЫУ (аҡыл йый-)** *к.*

**1.** Уйлау, уйлап эш итеү.

**2.** Тәжрибә, аң (фекер) туплау.

*Примечание.* Индекс к Словарю приводится в X томе.

**§ 6.** Фонетические, орфографические и лексические варианты даются на своём месте по алфавиту со ссылкой на наиболее употребительный вариант, где даётся необходимый иллюстративный материал:

**ӨКШӨҮ (өкшө-)** *к. диал. ҡар.* **мөнйөү**.

**ҺӨҘМӘС** *и. ҡар.* **һөҙмә**.

**ШУЛПА** *и. диал. ҡар.* **һурпа**.

**ӘЙБӘТ** *с. ҡар.* **һәйбәт**.

**§ 7.** Омонимы, т. е. слова, одинаковые по произношению и написанию, но разные по смыслу, указываются римскими цифрами полужирным шрифтом и разрабатываются в разных словарных статьях:

**АТ I** *и.*

Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны. □ Лошадь.

**АТ II** *и.*

Кешегә ҡушылған исем. □ Имя, прозвище.

Слова, образованные лексико-грамматическим способом словообразования, также описываются как омонимы:

**САЛТ I** *с.*

Саф, таҙа.

**САЛТ II** *р.*

Нәҡ, тап.

**АРҠЫРЫ I** *р.*

**1.** Буйға киҫә йүнәлештә.

**АРҠЫРЫ IV** *бәйл.*

**1.** *Ниҙеңдер* бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; аша.

**§ 8.** В словаре самостоятельными статьями приводятся:

а) все виды имён существительных;

б) непроизводные, производные, сложные имена прилагательные;

в) разряды местоимений;

г) все разряды числительных: количественные от 1 до 10, круглые десятки, сотня, тысяча, миллион, миллиард, триллион, ноль, порядковые, разделительные, собирательные, приблизительные:

**УН ...**

**УНАР ...**

**УНАРЛАП ...**
**УНАУ ...**
**УНЛАП ...**
**УНЫНСЫ ...**

д) все заглавные формы глаголов:

**БӘЙЛӘҮ ...**
**БӘЙЛӘТЕҮ ...**
**БӘЙЛӘШЕҮ ...**
**АБЫНЫУ-ҺӨРӨНӨҮ ...**
**ТАНЫП БЕЛЕҮ ...**

е) служебные и экспрессивно-эмоциональные части речи — частицы, послелоги, союзы, модальные слова, междометия, подражательные слова, звательные слова;

**§ 9.** Самостоятельными словарными статьями даются полностью лексикализованные грамматические формы слов:

**ШУНДУҠ** *р. ...*
**ТҮБӘНГЕ** *с. ...*
**ӘҘЕРЛӘҮСЕ** *и. ...*

**§ 10.** Регулярные образования (на *-лы, -һыҙ, -лык* и др.) даются отдельными статьями в том случае, если они приобрели новые лексические значения или являются широкоупотребительными формами:

**АҠЫЛЛЫ ...**
**БАШЛЫ ...**
**ТҮҘЕМЛЕК ...**
**ӘМӘЛҺЕҘ ...**

**§ 11.** Уменьшительно-ласкательные формы имён существительных даются отдельными статьями, если они приобрели новое значение:

**ҠОШСОҠ** *и. ирк.* **ҡош**. *уменьш.-ласк. от* **ҡош.**

**§ 12.** Формы прилагательных и наречий со значением превосходной и уменьшительной степеней сравнения даются самостоятельными статьями на своём алфавитном месте.

**§ 13.** В отдельных словарных статьях даются составные (первые и вторые) части сложных и сложносокращённых слов, если они являются продуктивными, т. е. служат для образования новых слов в башкирском языке: **авто**..., **био**... и т. д.:

**БИО-** [рус. < гр. *bios* ‘тереклек, тормош’]

Ҡушма һүҙҙәрҙең ‘тормошҡа ҡараған’, ‘биология’ мәғәнәләрен аңлатҡан беренсе өлөшө: *биофизика, биомеханика, биоритм* һ. б.

**§ 14.** На своём месте в алфавите (с отсылкой к соответствующим статьям) помещаются также устарелые орфографические варианты, имевшие широкое распространение в прошлом, например:

**АБАД** *и. ҡар.* **әбәд**.

## Структура словарной статьи

**§ 15.** Заглавное слово печатается в начале словарной статьи с абзаца полужирным прописным шрифтом.

После заглавного слова приводятся его грамматические формы, помещается этимологическая справка в квадратных скобках. Далее указывается перевод первого, т. е. основного значения заглавного слова на русский (Р.), английский (И.) и турецкий (Т.) языки. Принадлежность слова к той или иной части речи обозначается соответствующей условной пометой. Затем следуют стилистические или иные пометы. Истолкование значений даётся с абзаца, разные значения многозначного слова выделяются полужирными арабскими цифрами с точкой, к каждому из значений после знака □ приводится перевод на русский язык, к фитонимам и флористической лексике даются соответствующие международные научные названия на латинском языке (лат.), после чего помещаются иллюстрирующие примеры за знаком ■. Пословицы, поговорки отмечаются символом ●. После всех значений слова, отдельно, с красной строки, за знаком ♦ приводятся фразеологические обороты.

**АБАЙ I** [дөйөм төрки *аба*] (Р.: осторожный; И.: careful; Т.: ihtiyatlı) *с.*

Ҡарап, самалап эш итеүсән; һаҡ. □ Осторожный, осмотрительный. *Абай кеше.*

**АҘАП (аҙабы)** [ғәр. عذاب] (Р.: мучение; И.: torment; Т.: ıstırap) *и.*

Баштан кисерелгән эш, тормош ауырлығы; ыҙа, яфа; михнәт. □ Мучение, страдание, мука. *Аҙап күреү. Юл аҙабы.* ■ *Шулай итеп, мең бәлә менән атты кыуып алып ҡайтам. Шул тиклем аҙап менән йөрөп ҡайтҡас, .. улар тиргәй.* М. Ғафури.

**АҒАЙРЫҠ (ағайрығы)** (Р.: тростник; И.: reed; Т.: saz) *и. бот.*

Ике өлөшлөләр ғаиләһенә ингән, һаҙмат урында үҫә торған һоло башлы эре үлән. □ Тростник *(вид камышового растения)* (лат. *Saccharum*). ■ *Ағиҙел буйы ағас араһы гел ағайрыҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

## Определение значений слова

**§ 16.** В Словаре используются разные способы толкования слов:

— краткое описательное толкование значений слова;

— передача значения с помощью синонима:

а) при помощи синонимов определяются слова диалектные, из разговорной речи, если для них имеется дублетное слово в литературном языке;

б) синонимы приводятся также в качестве дополнительной характеристики слова или его значения вслед за истолкованием значения после точки с запятой;

— использование антонимов, которые приводятся с пометой *киреһе* в качестве дополнительной характеристики значения толкуемого слова, например:

**АҘ II** *с.* ...

**1.** Һаны, күләме бәләкәй; әҙ; *киреһе* — күп.

**§ 17.** К некоторым словам (этнографические и другие термины, слова, выражения, не поддающиеся однозначному определению) приводится энциклопедическое толкование, например:

**САҠ МЕНӘН СУҠ ...**

Әсә (үгәй әсә) ҡарғышынан ҡошҡа әйләнгән бәйеттәге ике мифик ҡош (*бер-береһе менән осраша алмай зарыҡҡан бер туған ике ир бала*). □ Мифические образы двух братьев, проклятых матерью (мачехой) и принявших облик птиц.

**ҠӘМӘР** *и.*

Йөндән биҙәкләп бәйләнгән, бәрхәт йәки ебәктән аҡыҡ, зиннәтле таштар менән семәрләнгән, көмөш ҡаптырмалы билбау. □ Бархатный, шерстяной или шёлковый мужской пояс, украшенный сердоликом, другими драгоценными камнями и серебряной бляхой.

**§ 18.** Переносное значение отмечается пометой *күсм.,* которая предшествует определению значения.

**АҠ I** [боронғо төрки *ак*] (Р.: белый; И.: white; Т.: beyaz) *с.*

**... 9.** *күсм.* Шатлыҡ менән тулы; ҡыуаныслы, бәхетле. □ Светлый, счастливый, радостный. *Аҡ бәхет. Аҡ көндәр.* ● *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — ҡаҡ бәхет.* Әйтем.

## Фразеология

**§ 19.** В Словаре даются и объясняются фразеологические обороты и устойчивые выражения современного башкирского языка.

**§ 20.** Фразеологические обороты помещаются после объяснения всех значений слова, с абзаца, за знаком ♦ и представляют собой самостоятельный раздел словарной статьи.

**§ 21.** Фразеологические обороты и устойчивые сочетания приводятся в словарных статьях на первое слово в устойчивом словосочетании.

**§ 22.** В тех случаях, когда одно из слов выражения допускает замену синонимами, эти синонимы приводятся в скобках с союзом *йәки*, например:

♦ **Аҡылы ҡыҫҡа** (*йәки* **һай**) аҡылы етешмәй, аҡылһыҙ. □ Умственно ограниченный, не умный.

**§ 23.** В угловых скобках помещается слово, которое не обязательно в составе данного выражения, например:

♦ **Аҡылы алтын <икән>** *көлк.* Мөмкин булғандан артығын һораған, теләгән кешегә әйтелә. □ *соотв.* Губа не дура.

**§ 24.** Стилистические пометы при фразеологических оборотах ставятся независимо от того, какими пометами сопровождаются отдельные значения слова и само слово в целом.

## Иллюстрации

**§ 25.** В Словаре к большей части значений и оттенков значений слов даются иллюстрации, которые служат дополнительным средством характеристики слова, указывают на сферу его употребления, подтверждают стилистическую характе-

ристику слова, данную при помощи соответствующей пометы. Фразеологические обороты и сочетания также получают соответствующие иллюстрации.

**§ 26.** Даются иллюстрирующие примеры двух типов: а) цитаты из художественных, публицистических или научных произведений и б) словосочетания, являющиеся типичными для употребления толкуемого слова в современном литературном языке.

**§ 27.** Иллюстрирующие примеры, представляющие собой отдельные словосочетания, помещаются вслед за определением, перед цитатами.

**§ 28.** Поясняющие слова в цитатах, а также указания на принадлежность реплик тому или иному действующему лицу даются в квадратных скобках курсивом. Например:

**АПСАЙЫУ ...**

Үрә баҫыу, һын турайтыу. □ Выпрямиться, вытянуться, стоять навытяжку. *Апсая баҫыу.* ■ *[Күсмәҫ хан:] Мин бер болан осраткайным, атмаксы булып, йәйәмде кулға алһам, болан апсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**§ 29.** Сокращения в цитатах обозначаются двумя точками. Например:

**АҢЫШЫУ** *к.*

Аңғарыу. □ Понять. ■ *Ҡараһакал Антондан бөтә эште аңышкас, кәләм-кағыҙын алып, .. каяла ултырып хат яҙған.* «Ҡараһаҡал».

## Стилистические пометы

**§ 30.** Стилистическая помета (строчными буквами, курсивом) ставится: а) после определения принадлежности слова к той или иной части речи, если помета относится к слову в целом (со всеми его значениями); б) перед определением значения (после цифры), если помета относится к данному значению.

**КӘСЕР** *и. мат. ...*

**БЫУМА** *и. мед. ...*

**БӘНДӘ** *и. иҫк. ...*

**ҠУПЫРЫШ** *с. диал. ...*

**ӘПКИЛЕҮ (әпкил-)** *к. һөйл.*

**§ 31.** Выделяются следующие стилистически окрашенные группы слов:

а) устаревшие слова:

**МӨҺӨР** *и.*

1. *иҫк.* Мисәт;

б) диалектизмы:

**АПА** *и. диал. кар.* **апай**;

в) эмоциональная лексика:

**ҠОЛОҠАЙ** *и. ирк.*

Ҡолон;

г) разговорная лексика:

**АЛАҒАНАТ II** *и. һөйл.*

Еңел тормош эҙләп, төрлө ерҙә йөрөгән елғыуар кеше. □ Летун.

д) книжная лексика:

**АҒЛАУ (ағла-)** *ҡ. иҫк. кит.*

Илау. □ Плакать.

**§ 32.** Особую группу составляют пометы, указывающие специальную область применения слова в определённой области науки, техники, искусства, ремесла и т. д. *(см. список условных сокращений)*.

Если слово имеет несколько областей терминологического применения, при нём даются две пометы, например:

**АҒАЛТЫН** *и. хим. геол.*

Химик элемент, бик еңел сүкелә һәм һыҙыла торған һорғолт аҡ төҫтәге аҫыл металл (электр һәм радиотехникала, ювелир эшендә һ. б. ҡулланыла). □ Платина.

**§ 33.** Если термин функционирует в ряде областей, и затруднительно определить узкую сферу его употребления (причём он не имеет широкого распространения в литературном языке), при нём (или при его значении) ставится помета, имеющая общее значение — *махс.* (т. е. специальное слово), например:

**АҒЫУЛЫ** ... *с.*

**3.** *махс.* Ағыу менән эшкәртелгән. □ Протравленный *(о семенах для посева, фруктовых деревьях и т. п.)*.

## Грамматическая характеристика слов в Словаре

### Имена существительные

**§ 34.** Имена существительные даются в Словаре в основном падеже единственного числа. Вслед за заглавным словом указываются случаи озвончения основ слов на *-к, -ҡ, -п,* которые в интервокальной позиции чередуются с *-г, -ғ, -б,* например:

**АҘАП (аҙабы) ...**

**АКАДЕМИК (академигы) ...**

**АҠЛЫҠ (аҡлығы) ...**

**АҠ ТАП (табы) ...**

**§ 35.** Уменьшительно-ласкательные формы существительных, имеющие отдельное значение, даются со ссылкой на исходную основу и с указанием типового значения данной формы:

**ҠОЛОҠАЙ** *и. ирк. кар.* **ҡолон.** *уменьш.-ласк.* от **ҡолон.** □ Жеребёночек.

**§ 36.** Собирательные имена даются с пометой *йыйн.*

**АТА-БАБА** *и. йыйн.*

Элекке быуындар. □ Предки.

**§ 37.** Имена персонажей фольклорных произведений, мифологии, а также религиозные и этнографические термины толкуются как в энциклопедических словарях. Например:

**БИСУРА** *и. миф.*

Ялбыр һары сәсле, ҡыҙыл күлдәкле ҡурҡыныс ҡатын-ҡыҙ образындағы мифик зат. □ Мифическое существо в образе страшной женщины с рыжими волосами в красном платье.

**ӨРӘК** *и. миф.*

Үлгән кешенең шәүлә булып күренә торған рухы, йәне. □ Душа покойника, не нашедшего успокоения; призрак.

### Имена прилагательные

**§ 38.** Имена прилагательные даются в форме т. н. «положительной степени».

**СИРЛЕ** *с.*

Ниндәйҙер сире (ауырыуы) булған. □ Больной.

**§ 39.** Прилагательные в уменьшительной и превосходной степенях даются отдельными статьями со ссылкой к основной форме прилагательного:

**ҠАП-ҠАРА** *с. арт. дәр. ҡар.* **ҡара**. *превосх. степ. от* **ҡара**. Бик, үтә ныҡ ҡара. □ Очень чёрный, совершенно чёрный.

**АҠҺЫЛ** *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **аҡ**. *уменьш. степ. от* **аҡ**. Тоноҡ аҡ, аҡка тартым; ағылйым. □ Беловатый.

**§ 40.** Сложные прилагательные даются отдельной статьей.

**БАШЛЫ-КҮҘЛЕ** *с.*

Ғаиләле. □ Семейный. *Башлы-күҙле булыу.*

### Местоимения

**§ 41.** Значение местоимений раскрывается исходя из того, что они обобщают или заменяют. Поэтому указывается грамматический разряд местоимений.

**§ 42.** Падежные формы личных и указательных местоимений даются при основном слове в скобках:

**МИН (минең, миңә, мине, минән, миндә)** *зат а.*

Һөйләүсе үҙен күрһәткәндә, үҙен атағанда ҡулланыла. □ Я *(этим словом говорящий указывает на себя).*

**§ 43.** Местоимения, выступающие в функциях других частей речи, даются отдельной статьей.

**ҮҘЕНЕКЕ** *и. һөйл.*

Быума. □ Эпилепсия.

### Числительные

**§ 44.** Числительные от 1 до 10, названия десятков от 20 до 100 даются в основном падеже единственного числа и толкуются полностью.

**ҺИГЕҘ** *төп һ.*

Һигеҙ һанын, иҫәбен, цифрын билдәләгән һүҙ. □ Слово, обозначающее число, количество, цифру 8.

**§ 45.** Грамматические разряды числительных — порядковые, приблизительные, дробные — даются отдельной статьёй, обозначаются пометками с отсылкой к соответствующему количественному числительному.

**УН** *төп һ.*

Ун һанын, иҫәбен, цифрын билдәләгән һүҙ. □ Слово, обозначающее число, количество, цифру 10.

**УНЫНСЫ** *рәт һ. ҡар.* **ун**. *поряд. числ. от* **ун.** □ Десятый.

**УНЛАП** *сама һ. ҡар.* **ун**. *прибл. числ.* от **ун.** □ Около десяти.

**УНАР** *бүл. һ. ҡар.* **ун**. *раздел. числ.* от **ун.** □ По десять.

**ӨСӘҮ** *йый. һ. ҡар.* **өс**. *собират. числ.* от **өс.** □ Трое.

**§ 46.** Если числительное перешло в другую часть речи и приобрело новое значение, то оно даётся отдельной статьёй и его содержание раскрывается полностью.

**ЕТЕҺЕ** *и. дини.*

Мосолман динендә: кеше үлгәндең етенсе көнөн билдәләп уҡыған аят. □ Седьмины; обряд поминания покойного на седьмой день.

### Глагол

**§ 47.** Глаголы в Словаре даются в принятой в башкирской грамматике форме имени действия на **-ыу, -еү, -оу, -өү**, а в скобках даются в форме корня или основы **уҡыу (уҡы-)**.

**§ 48.** Если залоговая форма глагола не содержит семантических отличий от типового значения, то содержание не раскрывается, даётся только ссылка на исходную основу.

**ЙЫУҘЫРЫУ (йыуҙыр-)** *к. йөкм. ҡар.* **йыуыу.** *понуд. от* **йыуыу.**

**БОРОЛОУ (борол-)** *к. төш. ҡар.* **бороу 1**. *страд. от* **бороу 1**. *Сираҡ боролған арҡан. Һемәге боролған самауыр.*

**§ 49.** Если залоговая форма употребляется в словообразовательном значении, то она сопровождается толкованием.

**БУЛЫШЫУ (булыш-)** *к.*

Ярҙам итеү, ярҙамлашыу. □ Помогать.

**§ 50.** Формы глагола на **-ғыла, -ынҡыра, -штыр** (с вариантами) даются отдельной статьёй с отсылкой к основной форме.

**БАРҒЫЛАУ (барғыла-)** *к.*

Һирәк-һаяҡ барыу. □ Ходить время от времени.

**КИЛЕШТЕРЕҮ (килештер-)** *к.*

Һирәк-һаяҡ килеү. □ Приходить изредка.

**§ 51.** Аналитические формы глаголов также даются на своём алфавитном месте с указанием корня или основы:

**АЛЫП КИТЕҮ (алып кит-)** *к.*

## Наречия

**§ 52.** Наречия в Словаре даются в положительной форме.

**КҮП** *р.*

Һаны, күләме ғәҙәттәгенән артыҡ. □ Много.

**§ 53.** Наречия, образованные от именных основ с помощью аффикса *-лап,* даются отдельными словарными статьями:

**АҘНАЛАП** (Р.: неделями; И.: for weeks; Т.: haftalarca) *р.*

**§ 54.** Сложные наречия в Словаре даются заглавными словами:

**АУА-ТҮНӘ** *р.*

Бер ауып, бер тороп; ауып-ауып китер хәлдә. □ Шатаясь, пошатываясь, покачиваясь, переваливаясь.

## Служебные и эмоционально-экспрессивные части речи

**§ 55.** Служебные слова, междометия, модальные и звукоподражательные слова в Словаре даются заглавными словами с соответствующими пометками и толкованиями.

**БОРОН II** *бәйл.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр йәки -*маҫ* формалы сифат ҡылымдан һуң килеп, эш, хәрәкәттең кемдән, нимәнән йәки ниндәйҙер эш, хәлдән алда булғанын белдерә; элек. □ До, до того как, прежде чем. *Башламаҫ борон. Көн борон килеү.*

**БЕР... БЕР III** *терк.*

Аллы-артлы теҙеп биргәндә йәки ҡаршы ҡуйғанда ҡулланыла. □ *Союз разд.* То.., то. *Бер алға, бер артҡа китеү. Бер инеп, бер сығып йөрөү. Бер мин, бер ул.*

**ҺӘМ** *терк.*

Тиң дәрәжәле һүҙ һәм һөйләмдәрҙе йыйып теркәй. □ *Союз соед.* И, да, также.

**БАҺА II : да baha (дә baha), ҙа baha (ҙә baha), ла baha (лә baha), та baha (тә baha)** *киҫ.*

Әйтелгән фекерҙе нығыта. □ *Част. усил. (употребляется с частицами да/дә, ҙа/ҙә, ла/лә, та/тә)* Же, ведь. *Ана тора ла baha. Аты бар ҙа baha.*

**ҠЫТ-ҠЫТАҠ** *оҡш.*

Тауыҡ ҡыҫҡырған тауышты белдергән һүҙ. □ Подражание кудахтанью.

**ЫҺ** *ымл.*

**1.** Көсөргәнеп көс һалғанды белдерә. □ Выражает напряжение.

**2.** Һыҙланып ыңғырашҡанды белдерә. □ Выражает стон от боли.

**БУҒАЙ** [төрки] *мөн.*

Икеләнеүҙе, фаразды белдерә. □ Кажется, по-видимому, как будто. *Ул бөгөн ҡайта, буғай.* ■ *Йылғыр атҡа менгән берәү үтте, Шаһибәрәк тигән ир, буғай.* Халыҡ йырынан.

**БЕРС** *сак.*
Бесәйҙе ҡыуа торған һүҙ. □ Брысь *(возглас, которым отгоняют кошку).*
**БЕРҮК** *инш.*
Ниҙер үтенгәндә ҡулланыла; зинһар. □ Пожалуйста. *Берүк һуңға ҡалмағыҙ.*

### Толкование слова на русском языке

**§ 56.** Толкование значения слова на русском языке основывается на толковании слова на башкирском языке, однако оно не является прямым переводом с башкирского на русский. Как правило, даётся краткое **основное** значение или его эквивалент.

**§ 57.** Содержание слов, обозначающих этнографические понятия, по-русски определяется достаточно широко, их толкование носит энциклопедический характер. На башкирском языке оно может быть передано вполне лаконично, если обозначает хорошо известные предметы, понятия:

**АРҠАЛЫҠ** *и.*

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәс биҙәүе. □ Украшение для косы *(узкая и длинная полоса цветной ткани, в два ряда расшитая кораллами и серебряными монетами).*

**§ 58.** Слова с типовым значением, которые приводятся лишь со ссылкой на исходную основу, даются без русского эквивалента.

**§ 59.** Стилистические нормативные пометы на русский язык не переводятся. Их можно найти в списках сокращений и особых помет.

**§ 60.** Если значение и сфера употребления устойчивых словосочетаний в башкирском и русском языках совпадают, то по-русски подбирается полный эквивалент и даётся с пометой *соотв.*

♦ **Ҡомдан арҡан ишеү** мәғәнәһеҙ эште эшләп юҡҡа ваҡыт әрәм итеү. □ Вить верёвку из песка. *соотв.* Переливать из пустого в порожнее.

**§ 61.** Значение устойчивых словосочетаний, не имеющих эквивалента в русском языке, раскрывается описательно литературным языком:

**АҠ ҠОРБАН** *и. этн. миф.*

**1.** Изге теләктәр теләп йәки нәҙер әйтеп аҡ малдан салған ҡорбан. □ Торжественное или обещанное жертвоприношение *(в жертву приносится животное белой масти). Аҡ ҡорбан салыу.*

**§ 62.** Глаголы башкирского языка на *-ыу/-еү* переводятся как глаголом, так и именем существительным. Именные значения помещаются после глагольного значения за знаком //, например:

**УҠЫУ I (уҡы-)** *к.*

**1.** Хәрефтәр йәки башҡа яҙыу тамғалары менән яҙылған йәки баҫылғанды ҡабул итеү *(телдән һөйләп йәки үҙ алдыңа).* □ Читать. // Чтение.

В случаях, когда именное значение приобрело устоявшееся отдельное понятие, оно приводится в качестве омонима к глаголу, например:

**ҺАЙЛАУ I** *к.*

Һайлап алыу. □ Выбирать.

**ҺАЙЛАУ II** *и.*

Тауыш биреү юлы менән айырып алыу, билдәләү эше. □ Выборы.

**§ 63.** В переводах слов, имеющих в русском языке родовое окончание, даются только формы мужского рода. Исключение делается для слов, которые не могут относиться (или обычно не относятся) к объектам мужского рода, например:

**АУЫР АЯҠЛЫ** *с.*

Ауырлы, йөклө. □ Беременная.

## Этимологические справки

**§ 64.** В словарных статьях этимологические указания помещаются вслед за заглавным словом в квадратных скобках.

**§ 65.** Этимологические справки приводятся кратко, без ссылок на источники.

**§ 66.** Этимологические справки даются следующего характера:

а) к словам, этимология которых восходит к древнетюркскому и общетюркскому языкам, этимология даётся кириллицей;

б) к словам, заимствованным из арабского, персидского языков, справки даются на арабской графике;

в) к словам, вошедшим в башкирский язык из русского и из других языков через посредство русского языка, этимологическая справка даётся на кириллической или латинской графике.

**§ 67.** Этимологические справки имеют несколько вариантов.

В тех случаях, когда заглавное слово и по форме, и по значению полностью соответствует слову на языке-источнике, указывается лишь этимон, но его значение не определяется, например, **ҠАРА** [боронғо төрки *кара*].

Когда слово-этимон приобрело в башкирском языке новое значение (по сравнению с языком-источником) или послужило основанием для образования слова другой грамматической категории, оно приводится в справке с переводом по следующему образцу:

**АБИТУРИЕНТ** [рус. < нем. *Abiturient* < лат. *abituriens* ‘сығып китеү’]

**§ 68.** При обозначении этимологии компонентов сложных слов этимоны указываются через знак плюс (+), например:

**АВТОРЕФЕРАТ** [рус. < гр. *avto* ‘үҙе’ + лат. *refero* ‘хәбәр итеү’]

**§ 69.** В некоторых случаях может применяться «глухая» ссылка: указание языка (или группы языков) без самой этимологии, например:

**АЙЫЛ I** [боронғо ҡыпсаҡ телдәренән]

**§ 70.** К производным словам, образованным от заимствованных слов посредством присоединения башкирских аффиксов (например, *авторитетлы, нефтсе*), этимологические справки не даются.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

*а.* — алмаш — местоимение

*аҙһ. дәр.* — аҙһытыу дәрәжәһе — уменьшительная степень

*алъялғау* — алъялғау — префикс

*аныкл.* — аныҡлаусы һүҙ — определение

*артык. дәр.* — артыҡлыҡ дәрәжәһе — превосходная степень

*а.х.* — ауыл хужалығы — сельское хозяйство

*бал.* — балалар теле — детская речь

*балк.* — балыҡсылыҡ — рыболовство, рыбоводство

*берл.* — берлек формаһында — в единственном числе

*билд.* — билдәләү алмашы — определительное местоимение

*билдһ.* — билдәһеҙлек алмашы — неопределённое местоимение

*бойр.* — бойороҡ һөйкәлеше — повелительное наклонение

*бүл.* — бүлеү теркәүесе — разделительный союз

*бәйл.* — бәйләүес — послелог

*диңг.* — диңгеҙселек — мореходство

*диал.* — диалекталь һүҙ — диалектное слово

*дини* — дини һүҙ — религиозное слово

*дәр.* — дәрәжә — степень

*зат.* — зат алмашы — личное местоимение

И. — инглиз теленә тәржемә — перевод на английский язык

*и.* — исем — имя существительное

*икел.* — икеләнеү киҫәксәһе — частица (выражает сомнение)

*икт.* — иҡтисад термины — экономический термин

*инш.* — инеш һүҙ — вводное слово

*ирк.* — иркәләү формаһы йәки мәғәнәһендә — ласкательное слово

*иҫк.* — иҫкергән — устаревшее слово, выражение

*й.* — йылға — река

*йөкм.* — йөкмәтеү йүнәлеше — понудительный залог

*йый. һ.* — йыйыу һаны — собирательное числительное

*йыйн.* — йыйнау — собирательное

*кес.* — кесерәйтеү формаһы — уменьшительная форма

*кесл.* — кеселекле һүҙ — почтительное слово

*киҫ.* — киҫәксә — частица

*кит.* — китап телендәге һүҙ — книжное слово

*клш.* — килеш — падеж

*көлк.* — көлкөгә алып әйтелгән һүҙ — шутливое

*көс.* — көсәйтеү мәғәнәһендә — в усилительном значении

*күбр.* — күберәк ниндәйҙер бер форма йәки мәғәнәлә — в большинстве

*күпл.* — күплек һаны — множественное число

*күрһ.* — күрһәтеү алмашы — указательное местоимение

*күсм.* — күсмә мәғәнәлә — в переносном значении

*кәмһ.* — кәмһетеү һүҙе — презрительное слово

*к.* — ҡылым — глагол

*ҡайт.* — ҡайтым йүнәлеше — возвратный залог

*ҡалк.* — ҡалҡыулыҡ — возвышенность

*ҡар.* — ҡара *(икенсе бер һүҙгә тоҫҡаған-да)* — смотри при ссылке на другое слово

*ҡарғ.* — ҡарғау һүҙе, формаһы — слова проклятия

*ҡыҫк. ф.* — ҡыҫҡартылған форма — сокращённая форма

*махс.* — махсус — специальное

*мөн.* — мөнәсәбәт, модаль һүҙ — модальное слово

*мыҫк.* — мыҫҡыллау һүҙе — пренебрежительное слово

*мәғ.* — мәғәнәһендә — в значении

*мәм.* — мәмерйә — пещера

*мәрәк.* — мәрәкәләү һүҙе — шутливое слово

*оҡш.* — оҡшатыу һүҙе — подражательное слово

*өнд.* — өндәү һүҙе — восклицательное слово

*өндш.* — өндәшеү һүҙе — обращение

Р. — рус теленә тәржемә — перевод на русский язык

*р.* — рәүеш — наречие

*раҫл.* — раҫлау — утверждение

*рәт.* — рәт һаны — порядковое числительное

*с.* — сифат — имя прилагательное

*сағ.* — сағыштырығыҙ — сравните

*сағышт.* — сағыштырыу формаһы йәки мәғәнәһендә — в форме сравнения

*саҡ.* — саҡырыу йәки ҡыуыу һүҙе — звательное или отгонное слово

*сама* — сама һаны — приблизительное числительное

*ситл.* — ситләтеп әйтелгән һүҙ — косвенное слово

*сығн.* — сығанаҡ килеш — исходный падеж

*сәнғ.* — сәнғәт — искусство

Т. — төрөк теленә тәржемә — перевод на турецкий язык

*тар.* — тарихи һүҙ — историзм

*тау* — тау эше термины — термин горного дела

*телк.* — теләк һүҙе — благопожелание

*терк.* — теркәүес — предлог

*т. юл* — тимер юл эше — железнодорожная работа

*төб.* — төбәү килеш — дательный падеж

*төп* — төп килеш — именительный падеж

*төш.* — төшөм йүнәлеше, килеше — страдательный залог, винительный падеж

*тук.* — туҡыу эше — текстильное дело

*тупаҫ* — тупаҫ һүҙ — грубое слово

*у.-в.* — урын-ваҡыт килеш — местновременной падеж

*умарт.* — умартасылыҡ — пчеловодство

*урм.* — урман эше — лесное дело

*урт.* — уртаҡлыҡ йүнәлеше — взаимный залог

*үс.* — үсәү һүҙе — злорадное слово

*фәлс.* — фәлсәфә термины — философский термин

*хупл.* — хуплау һүҙе — одобрительное слово

*хушл.* — хушлашыу һүҙе — слово прощания

*хәб.* — хәбәр функцияһында — в функции сказуемого

*хәрб.* — хәрби термин — военный термин

*һ.* — һан — число

*һ.б.* — һәм башҡалар — и другие

*һир.* — һирәк ҡулланыла — редкое, редкоупотребительное слово, выражение

*һор.* — һорау алмашы — вопросительное местоимение

*һөйл.* — һөйләү телендәге һүҙ — разговорное слово

*ш.* — шишмә — родник

*шарт.* — шарт һөйкәлеше — условное наклонение

*шаяр.* — шаярыу һүҙе — шутливое слово

*шелт.* — шелтәләү һүҙе — укорительное слово

*шиғр.* — шиғри һүҙ йәки мәғәнә — поэтическое слово и значение

3 – 1.0151.11

*ымл.* — ымлыҡ — междометие

*ыңғ.* — ыңғай формала йәки мәғәнәлә — в положительной форме или значении

*эйл.* — эйәлек алмашы, килеше — притяжательный (местоимение, падеж)

*эйл.ф.* — эйәлек формаһы — форма притяжательности

*эйһ.* — эйәһеҙ форма — безличная форма

*әҙ.* — әҙәби тел — литературный язык

*әҙһ.* — әҙһетеү формаһы — уменьшительная форма

*әрл.* — әрләү һүҙе — бранное слово

*юғары* — юғары стиль — высокий стиль

*юҡл.* — юҡлыҡ формаһы — отрицание, отрицательный

*яманл.* — яманлау һүҙе — ругательное слово

*ярҙ.* — ярҙамлыҡ ҡылымы рәүешендә — в функции вспомогательного глагола

## УСЛОВНЫЕ СОКРАЩЕНИЯ

*авиа.* — авиация
*анат.* — анатомия
*антроп.* — антропология
*археол.* — археология
*архит.* — архитектура
*астр.* — астрономия
*безл.* — безличное
*биол.* — биология
*биохим.* — биохимия
*бол.* — болото
*бот.* — ботаника
*бран.* — бранное
*бухг.* — бухгалтерия
*в. (вв).* — век (века)
*ввод. сл.* — вводное слово
*верш.* — вершина
*вет.* — ветеринария
*взаимн.* — взаимный (залог)
*возв.* — возвышенность
*возвр.* — возвратный (залог)
*вспом.* — вспомогательный
*г. (гг.)* — год (годы)
*геогр.* — география
*геод.* — геодезия
*геол.* — геология
*гидрол.* — гидрология
*гл.* — глагол
*грам.* — грамматика
*дат. п.* — дательный падеж
*деепр.* — деепричастие
*дип.* — дипломатия
*доп.* — дополнение
*др.* — другой
*ед. хр.* — единица хранения
*producing зват. ф.* — звательная форма
*зоол.* — зоология
*знач.* — значение
*инф.* — информатика
*ирон.* — ироническое
*иск.* — искусство
*исх. п.* — исходный падеж
*и т. п.* — и тому подобное
*косм.* — космонавтика
*кул.* — кулинария
*л.* — лицо
*-л.* — либо
*ласк.* — ласкательное
*лингв.* — лингвистика
*лог.* — логика
*мат.* — математика
*мед.* — медицина
*межд.* — междометие
*мест.* — местоимение
*местно-времен. п.* — местно-временной падеж
*метал.* — металлургия
*метеор.* — метеорология
*мин.* — минералогия
*миф.* — мифология
*мод.* — модальность
*муз.* — музыка
*-н.* — нибудь
*напр.* — например
*оз.* — озеро
*опт.* — оптика
*осн.* — основной
*отриц.* — отрицательный
*п.* — падеж
*пещ.* — пещера
*полигр.* — полиграфия

*понуд.* — понудительный (залог)
*поэт.* — поэтическое
*превосх. степ.* — превосходная степень
*пренебр.* — пренебрежительное
*прокл.* — проклятие
*прост.* — просторечное
*р.* — река
*радио.* — радиотехника, радиоэлектроника
*разд.* — разделительный
*родн.* — родник
*род. п.* — родительный падеж
*рч.* — речка
*скал.* — скала
*скл.* — склон
*см.* — смотри
*соед.* — соединительный
*соотв.* — соответствует
*сочет.* — сочетание
| Иҙелбаев М. | Иҙелбаев<br>Мирас Хәмзә улы | Идельбаев<br>Мирас Хамзович |
| Иҙелбай Н. | Иҙелбаев<br>Нәжиб Сафа улы<br>(Нәжиб Иҙелбай) | Идельбаев<br>Нажиб Сафаевич<br>(Нажиб Идельбай) |
| Ильясова Й. | Ильясова<br>Йомабикә Сәләхетдин ҡыҙы | Ильясова<br>Юмабика Саляхетдиновна |
| Иманғолов С. | Иманғолов<br>Сулпан Ғоссам улы | Имангулов<br>Сулпан Гуссамович |
| Инан Ә. | Сөләймәнов<br>Фәтхелҡадир Мостафа улы<br>(Әбделҡадир Инан) | Сулейманов<br>Фатхелькадыр Мустафиевич<br>(Абдулкадыр Инан) |
| Исламов Д. | Исламов<br>Динис Фәтхи улы | Исламов<br>Динис Фатхиевич |
| Исхаҡов В. | Исхаҡов<br>Вәзих Мөхәмәтша улы | Исхаков<br>Вазих Мухаметшинович |
| Иҫәнғолов Ф. | Иҫәнғолов<br>Фәрит Әхмәҙулла улы | Исангулов<br>Фарит Ахмадуллович |
| Ихсан Ә. | Ихсанов<br>Әхтәм Сөләймән улы<br>(Әхтәм Ихсан) | Ихсанов<br>Ахтям Сулейманович<br>(Ахтам Ихсан) |
| Ишбирҙин Э. | Ишбирҙин<br>Эрнст Фәйзрахман улы | Ишбердин<br>Эрнст Файзрахманович |

| | | |
|---|---|---|
| Ишбулатов М. | Ишбулатов<br>Мөнир Сибәғәт улы | Ишбулатов<br>Мунир Сибагатович |
| Ишемғол Б. | Ғабдрахманов<br>Ғабдрахман Закир улы<br>(Булат Ишемғол) | Габдрахманов<br>Габдрахман Закирович<br>(Булат Ишемгул) |
| Йосопов Т. | Йосопов<br>Тимер Йосоп улы | Юсупов<br>Тимер Юсупович |
| Йәнбирҙина З. | Йәнбирҙина<br>Зөбәржәт Нәби ҡыҙы | Янбердина<br>Зубаржат Набиевна |
| Йәнәби Т. | Кәлимуллин<br>Төхфәтулла Кәлимулла улы<br>(Төхфәт Йәнәби) | Калимуллин<br>Тухватулла Калимуллович<br>(Тухват Янаби) |
| Камал Р. | Камалов<br>Ринат Әлтәф улы<br>(Ринат Камал) | Камалов<br>Ринат Альтафович<br>(Ринат Камал) |
| Карнай А. | Зөлҡәрнәев<br>Имамғәли Мөхәммәтдин улы<br>(Али Карнай) | Зулькарнаев<br>Имамгали Мухамматдинович<br>(Али Карнай) |
| Кейекбаев Ж. | Кейекбаев<br>Жәлил Ғиниәт улы | Киекбаев<br>Джалиль Гиниятович |
| Кейеков Ғ. | Кейеков<br>Ғарифулла Мөхәммәтғәли улы | Киеков<br>Гарифулла Мухамматгалиевич |
| Килмөхәмәтов Т. | Килмөхәмәтов<br>Тимерғәле Абдулғәлим улы | Кильмухаметов<br>Тимергале Абдулгалимович |
| Кинйәбулатов И. | Кинйәбулатов<br>Ирек Лотфулла улы | Кинзебулатов<br>Ирек Лотфуллович |
| Кинйәбулатова К. | Кинйәбулатова<br>Кәтибә Кәрим ҡыҙы | Киньябулатова<br>Катиба Каримовна |
| Кулибай С. | Кулибаев<br>Сәләх Ғәбит улы<br>(Сәләх Кулибай) | Кулибаев<br>Салях Габитович<br>(Салях Кулибай) |
| Күзбәков Ф. | Күзбәков<br>Фәнил Тимерйән улы | Кузбеков<br>Фаниль Тимерьянович |
| Кәрим М. | Кәримов<br>Мостафа Сафа улы<br>(Мостай Кәрим) | Каримов<br>Мустафа Сафич<br>(Мустай Карим) |
| Кәримов М. | Кәримов<br>Марат Нәби улы | Каримов<br>Марат Набиевич |
| Ҡаһарманов Ғ. | Ҡаһарманов<br>Ғәлийән Ғәйнетдин улы | Кагарманов<br>Галиян Гайнетдинович |
| Ҡаһарманова Б. | Ҡаһарманова<br>Баныу Латиф ҡыҙы | Кагарманова<br>Бану Латифовна |

| | | |
|---|---|---|
| Ҡол-Дәүләт Р. | Ҡолдәүләтов<br>Рәмил Хөснөтдин улы<br>(Рәмил Ҡол-Дәүләт) | Кулдавлетов<br>Рамиль Хуснутдинович<br>(Рамиль Кул-Давлет) |
| Ҡолмой Я. | Ҡолмөхәмәтов<br>Яҡуп Хәйрулла улы<br>(Яҡуп Ҡолмой) | Кульмухаметов<br>Якуп Хайруллович<br>(Якуп Кулмый) |
| Ҡотлогилдина З. | Ҡотлогилдина<br>Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы | Кутлугильдина<br>Зухра Салимьяновна |
| Ҡотлоғәлләмов М. | Ҡотлоғәлләмов<br>Марсель Әҡсән улы | Кутлугаллямов<br>Марсель Аксанович |
| Ҡудаш С. | Ҡудашев<br>Сәйфетдин Фәттәхетдин улы<br>(Сәйфи Ҡудаш) | Кудашев<br>Сайфетдин Фаттахетдинович<br>(Сайфи Кудаш) |
| Ҡулаев М. | Ҡулаев<br>Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы | Кулаев<br>Мухаметхан Сахипкиреевич |
| Ҡунаҡбай Х. | Ҡунаҡбаев<br>Хөсәйен Әхмәтйән улы<br>(Хөсәйен Ҡунаҡбай) | Кунакбаев<br>Хусаин Ахметьянович<br>(Хусаин Кунакбай) |
| Ҡунафин Ғ. | Ҡунафин<br>Ғиниәт Сафиулла улы | Кунафин<br>Гинbackend Сафиуллович |
| Ҡунафин М. | Ҡунафин<br>Мөнир Сәхиулла улы | Кунафин<br>Мунир Сахиуллович |
| Ҡәрипов Н. | Ҡәрипов<br>Низам Ҡәрип улы | Карипов<br>Низам Карипович |
| Латипова Ф. | Латипова<br>Фәүзиә Шәғәли ҡыҙы | Латыпова<br>Фаузия Шагалеевна |
| Лоҡманов Ғ. | Лоҡманов<br>Ғаян Лоҡман улы | Лукманов<br>Гаян Лукманович |
| Мағазов А. | Мағазов<br>Азат Шәйехйән улы | Магазов<br>Азат Шаихьянович |
| Минһажетдинов М. | Минһажетдинов<br>Марат Хәләф улы | Мингазетдинов<br>Марат Халяфович |
| Мирзаһитов Ә. | Мирзаһитов<br>Әсғәт Мәсғүт улы | Мирзагитов<br>Асгат Масгутович |
| Мифтахов Р. | Мифтахов<br>Риф Фәйзрахман улы | Мифтахов<br>Риф Файзрахманович |
| Мифтахов С. | Мифтахов<br>Сәғит Мифтах улы | Мифтахов<br>Сагит Мифтахович |
| Мөбәрәков А. | Мөбәрәков<br>Арыҫлан Ҡотләхмәт улы | Мубаряков<br>Арслан Котлоахметович |
| Мохтар Х. | Мохтаров<br>Хәсән Баһауетдин улы<br>(Хәсән Мөхтәр) | Мухтаров<br>Хасан Багаутдинович<br>(Хасан Мухтар) |

| | | |
|---|---|---|
| Муллабаев С. | Муллабаев<br>Сөләймән Миңлеғужа улы | Муллабаев<br>Сулейман Минлегужович |
| Муллағолов М. | Муллағолов<br>Мирза Ғизетдин улы | Муллагулов<br>Мирза Гизетдинович |
| Мусин Н. | Мусин<br>Ноғман Сөләймән улы | Мусин<br>Нугуман Сулейманович |
| Мырҙаҡаев Ф. | Мырҙаҡаев<br>Факил Сәлих улы | Мурзакаев<br>Факиль Салихович |
| Мәжитов Н. | Мәжитов<br>Нияз Абдулхаҡ улы | Мажитов<br>Нияз Абдулхакович |
| Мәсғүт Ғ. | Ғәлиуллин<br>Мәсғүт<br>(Ғ. Мәсғүт) | Галиуллин<br>Масгут<br>(Г. Масгут) |
| Мәргән К. | Кирәев<br>Әхнәф Нурый улы<br>(Кирәй Мәргән) | Киреев<br>Ахнаф Нуреевич<br>(Кирей Мэргэн) |
| Мәһәҙиев Б. | Мәһәҙиев<br>Басыр Дәүләтбай улы | Магадеев<br>Басыр Давлетович |
| Назар Х. | Назаров<br>Хәсән Мөҙәрис улы<br>(Хәсән Назар) | Назаров<br>Хасан Мударисович<br>(Хасан Назар) |
| Назаров Р. | Назаров<br>Рәшит Сәйетбаттал улы | Назаров<br>Рашит Саитбатталович |
| Насыри И. | Насыров<br>Имаметдин Низаметдин улы<br>(Имай Насыри) | Насыров<br>Имаметдин Низаметдинович<br>(Имай Насыри) |
| Насыров Ш. | Насыров<br>Шакир Ғиниәт улы | Насыров<br>Шакир Гиниятович |
| Нафиҡов В. | Нафиҡов<br>Вәли Мөхәмәтвәли улы | Нафиков<br>Вали Мухаметвалеевич |
| Ниғмәти Р. | Ниғмәтуллин<br>Рәшит Ниғмәтулла улы<br>(Рәшит Ниғмәти) | Нигматуллин<br>Рашит Нигматуллович<br>(Рашит Нигмати) |
| Ниғмәтуллин И. | Ниғмәтуллин<br>Имел Ислам улы | Нигматуллин<br>Имиль Исламович |
| Низамов Р. | Низамов<br>Рәис Ғилметдин улы | Низамов<br>Раис Гилметдинович |
| Ноғоманов Б. | Ноғоманов<br>Барый Миңлеғәлим улы | Нугуманов<br>Барый Миннигалимович |
| Нәҙерғолов М. | Нәҙерғолов<br>Миңлеғәли Хөсәйен улы | Надергулов<br>Минлигали Хусаинович |
| Нәҙершина Ф. | Нәҙершина<br>Фәнүзә Айытбай ҡыҙы | Надршина<br>Фануза Аетбаевна |

| | | |
|---|---|---|
| Нәжми Н. | Нәжметдинов<br>Хәбибназар Нәжметдин улы<br>(Назар Нәжми) | Назмутдинов<br>Хабибназар Назмутдинович<br>(Назар Наджми) |
| Өмөтбаев М. | Өмөтбаев<br>Мөхәмәтсәлим<br>Ишмөхәмәт улы | Уметбаев<br>Мухаметсалим<br>Ишмухаметович |
| Өмөтбаев Р. | Өмөтбаев<br>Рамазан Ғимран улы | Уметбаев<br>Рамазан Гимранович |
| Поварисов С. | Поварисов<br>Суфиян Шәмсетдин улы | Поварисов<br>Суфиян Шамсутдинович |
| Рамазанов Ғ. | Рамазанов<br>Ғилемдар Йыһандар улы | Рамазанов<br>Гилемдар Зигандарович |
| Рафиҡов Б. | Рафиҡов<br>Булат Заһретдин улы | Рафиков<br>Булат Загретдинович |
| Рахманғолов С. | Рахманғолов<br>Сибәғәт Ғибәт улы | Рахмангулов<br>Сибагат Гибатович |
| Рөстәмова Р. | Рөстәмова Раҡия | Рустемова Ракия |
| Рәхимғолова Ф. | Рәхимғолова<br>Фәүзиә Абдулла ҡыҙы | Рахимгулова<br>Фаузия Абдулловна |
| Сабитов Р. | Сабитов<br>Рәшит Мәхмүт улы | Сабитов<br>Рашит Махмутович |
| Садыҡов Ғ. | Садыҡов<br>Ғәбит Ғата улы | Садыков<br>Габит Гатович |
| Садыҡова М. | Садыҡова<br>Мөкәрәмә Хафиз ҡыҙы | Садыкова<br>Мукарама Хафизовна |
| Сафин Р. | Сафин<br>Рафаэль Әхмәтсафа улы | Сафин<br>Рафаэль Ахметсафич |
| Сираева Л. | Сираева<br>Лилиә Рифат ҡыҙы | Сираева<br>Лилия Рифатовна |
| Сиражи М. | Сиражетдинов<br>Муса Шәрәфетдин улы<br>(Муса Сиражи) | Сиразетдинов<br>Муса Шарафутдинович<br>(Муса Сиражи) |
| Ситдиҡова Г. | Ситдиҡова<br>Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы | Ситдикова<br>Гузель Рамазановна |
| Солтангәрәев Р. | Солтангәрәев<br>Рәшит Ғимран улы | Султангареев<br>Рашит Гимранович |
| Солтангәрәева Р. | Солтангәрәева<br>Розалия Әсфәндиәр ҡыҙы | Султангареева<br>Розалия Асфандияровна |
| Солтанов Й. | Солтанов<br>Йыһат Әҙһәм улы | Султанов<br>Зигат Адигамович |
| Сөләймәнов Ғ. | Сөләймәнов<br>Ғата Зөлкәфил улы | Сулейманов<br>Гата Зулкафилович |

| | | |
|---|---|---|
| Сөләймәнов Ә. | Сөләймәнов<br>Әхмәт Мөхәмәтвәли улы | Сулейманов<br>Ахмет Мухаметвалеевич |
| Сөндөклө М. | Маҡсудов<br>Садиҡ Мөбин улы<br>(Мәҡсуд Сөндөклө) | Максудов<br>Садик Мубинович<br>(Максуд Сюндюкле) |
| Суфьянова Н. | Суфьянова<br>Нәсимә Фәтих ҡыҙы | Суфьянова<br>Насима Фатиховна |
| Сәғитов М. | Сәғитов<br>Мөхтәр Мофаззал улы | Сагитов<br>Мухтар Муфаззалович |
| Сәғитов Т. | Сәғитов<br>Тайфур Барый улы | Сагитов<br>Тайфур Бареевич |
| Сәләм Ғ. | Ғәлимов<br>Сәләм Ғәлим улы<br>(Ғәлимов Сәләм) | Галимов<br>Салям Галимович<br>(Галимов Салям) |
| Сәфәрғәлина М. | Сәфәрғәлина<br>Миңниса Мансур ҡыҙы | Сафаргалина<br>Минниса Мансуровна |
| Тажи М. | Тажетдинов<br>Мөхөтдин Язар улы<br>(Мөхөтдин Тажи) | Тажитдинов<br>Мухутдин Язарович<br>(Мухитдин Тажи) |
| Тапаҡов Х. | Тапаҡов<br>Хәйҙәр Ниғмәт улы | Тапаков<br>Хайдар Нигматович |
| Таһиров А. | Таһиров<br>Афзал Мөхөтдин улы | Тагиров<br>Афзал Мухитдинович |
| Таһиров Т. | Ахунйәнов<br>Таһир Исмәғил улы<br>(Таһир Таһиров) | Ахунзянов<br>Тагир Исмагилович<br>(Тагир Тагиров) |
| Таһирова Ә. | Таһирова<br>Әнисә Абдулла ҡыҙы | Тагирова<br>Аниса Абдулловна |
| Туғыҙбаева Ф. | Туғыҙбаева<br>Факиһа Һаҙый ҡыҙы | Тугузбаева<br>Факиха Хадыевна |
| Түләк Р. | Түләков<br>Рәйес Ғоссам улы<br>(Рәйес Түләк) | Туляков<br>Раис Гуссамович<br>(Раис Туляк) |
| Ураҡсин З. | Ураҡсин<br>Зиннур Ғәзиз улы | Ураксин<br>Зиннур Газизович |
| Усман Ғ. | Усманов<br>Ғәбдерәхим Усман улы | Усманов<br>Габдрахим Усманович |
| Үтәбай Ә. | Үтәбаев<br>Әхмәр Ғүмәр улы<br>(Әхмәр Үтәбай) | Утябаев<br>Ахмер Гумерович<br>(Ахмер Утябай) |
| Фәхретдинов Р. | Фәхретдинов<br>Риза Фәхретдин улы<br>(Ризаитдин) | Фахретдинов<br>Риза Фахретдинович<br>(Ризаитдин) |

4 – 1.0151.11

| | | |
|---|---|---|
| Хажиев Р. | Хажиев<br>Ризуан Закирхан улы | Хажиев<br>Ризван Закирханович |
| Хамматов Я. | Хамматов<br>Яныбай Хаммат улы | Хамматов<br>Яныбай Хамматович |
| Ханнанов Р. | Ханнанов<br>Рәсих Нурғәли улы | Ханнанов<br>Расих Нургалиевич |
| Харис М. | Харисов<br>Мәлих Харис улы<br>(Мәлих Харис) | Харисов<br>Малих Харисович<br>(Малих Харис) |
| Харисов Ә. | Харисов<br>Әхнәф Ибраһим улы<br>(Әхнәф Харис) | Харисов<br>Ахнаф Ибрагимович<br>(Ахнаф Харис) |
| Хисаметдинова Р. | Хисаметдинова<br>Рәмзилә Миңдеғәли ҡыҙы | Хисаметдинова<br>Рамзиля Миндигалиевна |
| Хисамитдинова Ф. | Хисамитдинова<br>Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы | Хисамитдинова<br>Фирдаус Гильмитдиновна |
| Хисамов Ғ. | Хисамов<br>Ғәлим Афзал улы | Хисамов<br>Галим Афзалович |
| Хисамова М. | Хисамова<br>Миңлегөл Сәлимйән ҡыҙы | Хисамова<br>Минигуль Салимьяновна |
| Хисмәтуллина М. | Хисмәтуллина<br>Миңлегөл Хәбибйән ҡыҙы | Хисматуллина<br>Минигуль Хабибьяновна |
| Хоҙайбирҙин Ш. | Хоҙайбирҙин<br>Шәһит Әхмәт улы | Худайбердин<br>Шагит Ахметович |
| Хөсәйенов Ғ. | Хөсәйенов<br>Ғайса Батыргәрәй улы | Хусаинов<br>Гайса Батыргареевич |
| Хәй М. | Мөхәмәтйәров<br>Хәй Ғабдрафиҡ улы<br>(М. Хәй) | Мухамедьяров<br>Хай Габдрафикович<br>(М. Хай) |
| Хәйҙәров М. | Хәйҙәров<br>Мөхәммәт Аллаяр улы | Хайдаров<br>Мухамет Аллаярович |
| Хәйри Ғ. | Хәйретдинов<br>Ғәйнан Бәҙретдин улы<br>(Ғәйнан Хәйри) | Хайритдинов<br>Гайнан Бадретдинович<br>(Гайнан Хайри) |
| Хәйри Р. | Хәйретдинов<br>Ринат Мәғәфүр улы | Хайретдинов<br>Ринат Магафурович |
| Хәкимов Ә. | Хәкимов Әхиәр Хәсән улы | Хакимов Ахияр Хасанович |
| Һаҙыева Р. | Һаҙыева<br>Рәйсә Нуриман ҡыҙы | Хадыева<br>Райса Нуримановна |
| Һибәт М. | Уразаев<br>Мәхмүт Һибәт улы<br>(Мәхмүт Һибәт) | Уразаев<br>Махмут Хибатович<br>(Махмут Хибат) |

| | | |
|---|---|---|
| Чаныш Ә. | Чанышев<br>Әмир Иҙрис улы<br>(Әмир Чаныш) | Чанышев<br>Амир Идрисович<br>(Амир Чаныш) |
| Чанышева Ф. | Чанышева<br>Фәниә Ғафар ҡыҙы | Чанышева<br>Фания Гафаровна |
| Шафиҡов Ғ. | Шафиҡов<br>Ғәзим Ғәзиз улы | Шафиков<br>Газим Газизович |
| Шафиҡова К. | Шафиҡова<br>Кәүсәриә Фидаил ҡыҙы | Шафикова<br>Каусария Фидаилевна |
| Шәғәлиев Р. | Шәғәлиев<br>Рамаҙан Нурғәли улы | Шагалиев<br>Рамазан Нургалеевич |
| Шәкүр Р. | Шәкүров<br>Рәшит Закир улы<br>(Рәшит Шәкүр) | Шакуров<br>Рашит Закирович<br>(Рашит Шакур) |
| Шәрипов С. | Шәрипов<br>Сабир Нәғим улы | Шарипов<br>Сабир Нагимович |
| Шәрипова З. | Шәрипова<br>Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы | Шарипова<br>Зайтуна Яхиевна |
| Шәрәфетдинов Д. | Шәрәфетдинов<br>Дамир Мөлкаман улы | Шарафутдинов<br>Дамир Мулкаманович |
| Шәһәр Ш. | Шәһәретдинов<br>Шиһабетдин Шәһәретдин улы<br>(Ш. Шәһәр) | Шагаретдинов<br>Шигабетдин Шагаритдинович<br>(Ш. Шагар) |
| Әбүзәров С. | Әбүзәров<br>Салауат Нәзир улы | Абузаров<br>Салават Назирович |
| Әлибай С. | Әлибаев<br>Сафуан Әфтәх улы<br>(Сафуан Әлибай) | Алибаев<br>Сафуан Афтахович<br>(Сафуан Алибай) |
| Әминев Ә. | Әминев<br>Әмир Мөхәммәт улы | Аминев<br>Амир Мухаметович |
| Әмири Ғ. | Әмиров<br>Ғәйнан Ғимазетдин улы<br>(Ғәйнан Әмири) | Амиров<br>Гайнан Гимазетдинович<br>(Гайнан Амири) |
| Әсәнов Ф. | Әсәнов<br>Фәнил Ғәбделхәй улы | Асянов<br>Фаниль Абдулхадыевич |
| Әхмәҙиев В. | Әхмәҙиев<br>Вафа Исхаҡ улы | Ахмадиев<br>Вафа Исхакович |
| Әхмәҙиев Р. | Әхмәҙиев<br>Риф Барый улы | Ахмадиев<br>Риф Бариевич |
| Әхмәҙин Ә. | Әфтәхетдинов<br>Әхмәҙин Мөхәмәтдин улы<br>(Әхмәҙин Әфтәх) | Афтахетдинов<br>Ахмадин Мухаметдинович<br>(Ахмадин Афтах) |

| | | |
|---|---|---|
| Әхмәмәтов Ш. | Әхмәмәтов<br>Шәрәф Хисам улы | Ахмаметов<br>Шараф Хисамович |
| Әхмәров Ҡ. | Әхмәров<br>Ҡасим Закир улы | Ахмеров<br>Касим Закирович |
| Әхмәтйәнов К. | Әхмәтйәнов<br>Ким Әбүзәр улы | Ахмедьянов<br>Ким Абузарович |
| Әхмәтйәнова З. | Әхмәтйәнова<br>Зарема Әхәт ҡыҙы | Ахмедьянова<br>Зарема Ахатовна |
| Әхмәтҡужина Г. | Әхмәтҡужина<br>Гөлшат Фәйзелғаяновна | Ахметкужина<br>Гульшат Файзильгаяновна |
| Әхмәт-Хужа Ә. | Әхмәтҡужин<br>Әсхәл Әбүталип улы<br>(Әсхәл Әхмәт-Хужа) | Ахметкужин<br>Асхаль Абуталипович<br>(Асхаль Ахмат-Хужа) |
| Әхмәтшин Ғ. | Әхмәтшин<br>Ғабдулла Ғабдрахман улы | Ахметшин<br>Габдулла Габдрахманович |
| Юлаев С. | Юлаев<br>Салауат Юлай улы | Юлаев<br>Салават Юлаевич |
| Юлдашева Т. | Юлдашева<br>Тамара Ишбулды ҡыҙы | Юлдашева<br>Тамара Ишбулдовна |
| Юлтый Д. | Юлтыев<br>Дауыт Исхаҡ улы<br>(Дауыт Юлтый) | Юлтыев<br>Даут Исхакович<br>(Даут Юлтый) |
| Юнысова Г. | Юнысова<br>Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы | Юнусова<br>Гульфия Азнагуловна |
| Яҡупова Г. | Яҡупова<br>Гөлнур Миҙхәт ҡыҙы | Якупова<br>Гульнур Мидхатовна |
| Яҡшыбаева Л. | Яҡшыбаева<br>Лира Әхмәт ҡыҙы | Якшыбаева<br>Лира Ахметовна |
| Яҡшығолов С. | Яҡшығолов<br>Сафуан Суфыян улы | Якшигулов<br>Сафуан Суфиянович |
| Ямалетдинов М. | Ямалетдинов<br>Мәүлитбай Байгилде улы | Ямалетдинов<br>Маулитбай Байгилдинович |
| Янбаев Ш. | Янбаев<br>Шакир Мәхийән улы | Янбаев<br>Шакир Махиянович |
| Янбулатова Р. | Янбулатова<br>Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы | Янбулатова<br>Рагида Саитгалиевна |

# ҠУЛЛАНЫЛҒАН ФӘННИ ӘҘӘБИӘТ

# ИСПОЛЬЗОВАННЫЕ НАУЧНЫЕ ТРУДЫ

*Абаев В.И.* Историко-этимологический словарь осетинского языка. Т. I — V. — М., — Л., 1958–1995.

*Антонов Н.К.* Материалы по исторической лексике якутского языка. — Якутск, 1971.

*Азнабаев А.М., Псянчин В.Ш.* Историческая грамматика тюркских языков. — Уфа, 1983.

*Аманжолов С.* Вопросы диалектологии и истории казахского языка. — Алма-Ата, 1959.

*Антонов Н.К.* Материалы по исторической лексике якутского языка. — Якутск, 1971.

*Апресян Ю.Д.* Лексическая семантика. Синонимические средства языка. — М., 1995.

*Ахатов Г.Х.* Мишарский диалект татарского языка. — Уфа, 1980.

*Ахметов М.Х.* Глагол в языке орхоно-енисейских памятников (в сравнительном плане с современным башкирским языком). — Саратов, 1978.

*Ахметьянов Р.Г.* Общая лексика духовной культуры народов Среднего Поволжья. — М., 1981.

*Ахметьянов Р.Г.* Общая лексика материальной культуры народов Среднего Поволжья. — М., 1989.

*Ашмарин Н.И.* Словарь чувашского языка. Вып. 1–17. — Казань — Чебоксары, 1928–1950.

Алтайская этимология. — Л., 1984.

*Баишев Т.Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. 2 изд. — Уфа, 2006. — 132 с.

*Баскаков Н.А., Инкижекова-Грекул А.И.* Хакасско-русский словарь. — М., 1953.

Башҡорт әҙәби теленең тарихы / Э. Ф. Ишбирҙин, И. Ғ. Ғәләүетдинов, Р. Х. Халиҡова. — Өфө, 1993. — 318 б.

Башҡорттарҙың им-том китабы / Ф. Ғ. Хисамитдинова. — Өфө, 2006.

*Баязитова Ф.С.* Урта Урал (Свердловск өлкәсе) татарлары. — Казан, 2002.

*Баязитова Ф.С.* Мензелинский говор татарского языка // Материалы по татарской диалектологии. Вып. 7. — Казань, 1989. — С. 67–82.

*Биишев А.Г.* «Первичные» долгие гласные в тюркских языках. — Уфа, 1963.

*Бикбулатов Н.В.* Башкирская система родства. — М., 1981.

*Благова Г.Ф.* «Бабур-наме»: Язык, прагматика текста, стиль. К истории чагатайского литературного языка. — М., 1994.

*Булич С.К.* Очерк истории языкознания в России. Т. 1. — СПб., 1904.

*Бутанаев В.Я.* Хакасско-русский историко-этнографический словарь. — Абакан, 1999.

*Вербицкий В.* Словарь алтайского и аладагского наречий тюркского языка. — Казань, 1984.

Вопросы башкирского языкознания / А.Г. Биишев и др. — Уфа, 1973.

*Галяутдинов И.Г.* Два века башкирского литературного языка. — Уфа, 2000.

*Ганиев Ф.А.* Способы действия глаголов в татарском языке. — Казань, 2003.

*Гарипов Т.М.* Башкирское именное словообразование. — Уфа, 1959.

*Гарипов Т.М.* Кыпчакские языки Урало-Поволжья: Опыт синхронической и диохронической характеристики. — М., 1973.

Грамматика алтайского языка / Сост. членами алтайской миссии. — Казань, 1869.

Грамматика современного башкирского литературного языка / А.А. Юлдашев и др. — М., 1981.

*Грунина Э.А.* Историческая грамматика турецкого языка. — М., 1991.

90 лет Н.А. Баскакову / Э.Р. Тенишев и др. — М., 1997.

Диалектологический атлас башкирского языка / Ф.Г. Хисамитдинова и др. — Уфа, 2005.

*Дильмухаметов М.И.* Говор среднеуральских башкир. — Уфа, 2006.

*Дмитриев Н.К.* Башҡорт теленең грамматикаһы. — Өфө, 1950.

*Дмитриев Н.К.* Говоры дер. Аисова, Худайберды, Махмудово, Гадильшино, Субхангулово, Зуяково // Башкирский диалектологический сборник. — Уфа, 1959.

*Дмитриев Н.К.* Грамматика башкирского языка / Ф.Г. Хисамитдинова. — М., 2008.

*Дмитриева Л.В.* Некоторые тюркские этимологии // Языки народов Сибири. Вып. 3. — Кемерово, 1979.

*Дмитриева Ю.* Чувашские народные названия дикорастущих растений. — Debrecen, 2001.

*Дыбо А.В.* Семантическая реконструкция в алтайской этимологии. Соматические термины (плечевой пояс). — М., 1996.

*Дыбо А.В.* Лингвистические контакты ранних тюрков. Лексический фонд. Пратюркский период. — М., 2007.

*Дыбо А.В.* Хронология тюркских языков и лингвистические контакты ранних тюрков // Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык — основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка. — М., 2006.

*Дыренкова Н.П.* Грамматика хакасского языка: фонетика и морфология. — Абакан, 1948.

*Егоров В.Г.* Этимологический словарь чувашского языка. — Чебоксары, 1964.

*Егоров Н.И.* Избранные труды. Этимология. Этноглоттогенез. Этнокультурология. В 2 т. — Чебоксары, 2009.

*Закирова Р.Г.* Структура и функции слов-повторов башкирского языка. — Уфа, 2006.

Изысканный дар тюркскому языку: Грамматический трактат XIV в. на арабском языке. — Ташкент, 1978.

*Иллич-Свитыч В.М.* Материалы к сравнительному словарю ностратических языков // Этимология 1965. — М., 1967.

*Иллич-Свитыч В.М.* Опыт сравнения ностратических языков. Т. I. — М., 1971; Т. II. — М., 1976.

Историческое развитие лексики тюркских языков. — М., 1961.

*Ишбердин Э.Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. — М., 1986.

*Ишбулатов Н.Х.* Башҡорт диалектологияһы. — Өфө, 1979.

*Кайдаров Ә.* Қазақтар ана тілі әлеминде. I том. Адам. — Алматы, 2009.

*Камалов А.А.* Башкирские географические термины и топонимия. — Уфа, 1997.

*Киекбаев Ж.Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. — Өфө, 2002.

*Кляшторный С.Г.* Мифологические сюжеты в древнетюркских памятниках (Тюркологический сборник, 1997). — М., 1981.

*Козин С.А.* Сокровенное сказание. — М., Л., 1941.

*Кононов А.Н.* Грамматика языка тюркских рунических памятников VII — IX вв. — М., Л., 1980.

*Кононов А.Н.* Родословная туркмен. — М., Л., 1958.

*Котвич В.* Исследования по алтайским языкам. — М., 1962.

*Кормушин И.В.* Тюркские енисейские эпитафии: Тексты и исследования. — М., 1977.

*Кузеев Р.Г.* Происхождение башкирского народа. — М., 1974.

*Кусимова Т.Х.* Башҡорт исемдәре. — Өфө, 1982.

*Ҡаһарманов Ғ.Ғ.* Башҡорт терминологияһы. Тарихи-лингвистик тасуирлау тәжрибәһе. — Өфө, 2002.

*Левитская Л.С.* Историческая морфология чувашского языка. — М., 1976.

*Малов С.Е.* Памятники древнетюркской письменности. Тексты и исследования. — М., Л., 1951.

*Максютова Н.Х.* Восточный диалект башкирского языка. В сравнительно-историческом освещении. — М., 1976.

*Максютова Н.Х.* Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. — Уфа, 1996.

*Махмуд ал-Кашгари.* Дивану лугат ат-турк (Свод тюркских слов): в 3 т. / Пер. с араб. А. Р. Рустамова под ред. И. В. Кормушина. Т. 1. — М., 2010. — С. 22.

*Мелиоранский П.М.* Араб-филолог о турецком языке. — СПб., 1900.

*Миржанова С.Ф.* Южный диалект башкирского языка. — М., 1979.

*Миржанова С.Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). — Уфа, 1991.

Мифологический словарь / Е. М. Мелетинский. — М., 1991.

*Молчанова О.Т.* Топонимический словарь Горного Алтая. — Горно-Алтайск, 1979.

*Мудрак О.А.* Классификация тюркских языков и диалектов с помощью методов глоттохронологии на основе вопросов морфологии и исторической фонетики (Серия «Orientalia et Classica»). Вып. 23. — М., 2004.

*Мурзаев Э.М.* Словарь народных географических терминов. — М., 1984.

*Мусаев К.М.* Лексика тюркских языков в сравнительном освещении. — М., 1975.

*Наджип Э.Н.* Хорезми. Мухаббатнаме. — М., 1961.

*Насилов Д.М.* К проблеме тождества аффиксов в алтайских языках // Тюркологический сборник — 1975. — М., 1978.

*Нафиков Ш.В.* Бореальные элементы в башкирском языке. — Уфа, 2003.

*Никонов В.А.* Краткий топонимический словарь. — М., 1966.

*Өмөтбаев М.И.* Йәдкәр. — Өфө, 1984.

*Пекарский Э.К.* Словарь якутского языка. В 3-х т. — 3-е изд., испр. и доп. I — III. — СПб, 2008.

*Покровская Л.А.* Термины родства в тюркских языках // ИРЛТЯ. — М., 1961.

*Поливанов Е.Д.* Статьи по общему языкознанию. — М., 1968.

*Поппе Н.Н.* — *Poppe N.* Bashkir manual. — Bloomington, 1964.

*Потапов Л.П.* Алтайский шаманизм. — Л., 1991.

*Поцелуевский А.П.* Избранные труды / Б. Ч. Чарыяров и др. — Ашхабад, 1975.

*Пюрбеев Г.Ц.* Эпос «Джангар»: культура и язык. — Элиста, 1993.

*Пюрбеев Г.Ц.* Толковый словарь традиционного быта калмыков. — Элиста, 1996.

*Радлов В.В.* Опыт словаря тюркских наречий. В 4-х томах. — СПб., 1899–1911.

*Рамстедт Г.И.* Введение в алтайское языкознание. Морфология. — М., 1957.

*Рассадин В.И.* Монголо-бурятские заимствования в сибирских тюркских языках. — М., 1980.

*Расторгуева В.С., Эдельман Д.И.* Этимологический словарь иранских языков. Т. I. — М., 2000, Т. II. — М., 2003.

*Руденко С.И.* Башкиры. Историко-этнографические очерки. — Уфа, 2006.

*Расянин М.* Материалы по исторической фонетике тюркских языков. — М., 1955.

*Садыкова З.Р.* Говоры Оренбургских татар. — Казань, 1985.

*Серебренников Б.А., Гаджиева Н.З.* Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. — Баку, 1979.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Фонетика / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1984.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Морфология / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1988.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Лексика / Э. Р. Тенишев и др. — М., 1997.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Лексика. — 2-е изд., доп. / Э. Р. Тенишев и др. — М., 2001.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Региональные реконструкции / Э. Р. Тенишев и др. — М., 2002.

Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. Пратюркский язык-основа. Картина мира пратюркского этноса по данным языка / Э. Р. Тенишев, А. В. Дыбо и др. — М., 2006.

*Суфьянова Н. Ф.* Проблемы многозначности в башкирском языке и её лексикрафическая разработка. — Уфа, 1998.

*Татаринцев Б.И.* Этимологический словарь тувинского языка. Т. 1: А — Б. — Новосибирск, 2000.

*Тенишев Э.Р.* Избранные труды. В 3 книгах. 1–2-я кн. — Уфа, 2006; 3-я кн. — Уфа, 2011.

*Тенишев Э.Р.* Языки древне- и среднетюркских памятников в функциональном аспекте // Вопросы языкознания. — 1979. № 2. С. 85–86.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. Пространство и время. Вещный мир / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1988.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. Человек. Общество / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1989.

Традиционное мировоззрение тюрков Южной Сибири. Знак и ритуал / И. Н. Гемуев и др. — Новосибирск, 1990.

*Уразбаева З.Г.* Вариативность слова в башкирском языке. — Уфа, 1998.

*Ураксин З.Г.* Фразеология башкирского языка. — М., 1975.

*Фазылов Э.* Староузбекский язык. Хорезмийские памятники XIV в. Т. I — II. — Ташкент, 1966–1971.

*Хабичев М.А.* Карачаево-балкарское именное словообразование: Опыт сравнительно-исторического изучения. — Черкесск, 1971.

*Хадыева Р.Н.* Башкирская этнокультура и язык: Опыт воссоздания языковой картины мира. — М., 2005.

*Халикова Р.Х.* Язык башкирских шежере и актовых документов XVIII — XIX вв. — М., 1990.

*Хисамитдинова Ф.Г.* История башкирского языка: Материалы по исторической фонетике. — Уфа, 1989.

*Хисамитдинова Ф.Г.* Башкирская ойконимия XVI — XIX вв. — Уфа, 1991.

*Хисамитдинова Ф.Г.* Названия башкирских населённых пунктов XVI — XIX вв. — Уфа, 2005.

*Хисамитдинова Ф.Г.* К ареальной характеристике названий с булгарскими чертами в топонимии Башкирии // Имя — Этнос — История. — М., 1989.

*Цинциус В.И.* К этимологии алтайских терминов родства // Очерки сравнительной лексикологии алтайских языков. — Л., 1972.

*Шайхулов А.Г.* Мотивирующие основы в названиях растений татарского и башкирского языков // Татарская лексика в семантико-грамматическом аспекте. — Казань, 1988.

*Шакуров Г.З.* По следам географических названий: Топонимия бассейна реки Дёмы. — Уфа, 1986.

*Шәкүров Р.З.* Исемдәрҙә — ил тарихы: Тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр. — Өфө, 1993.

*Щербак А.М.* Названия домашних и диких животных в тюркских языках // Историческое развитие лексики тюркских языков. — М., 1961.

*Щербак А.М.* Огуз-наме. Мухаббат-наме: Памятники древнеуйгурской и староузбекской письменности. — М., 1959.

*Әхмәров Ҡ.З.* Башҡорт яҙыуы тарихынан (Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы тарихы). — Өфө, 1972.

*Әхмәтьянов Р.Г.* Татар теленең кыскача тарихи-этимологик сүзлеге. — Казан, 2001.

*Юлдашев А.А.* Аналитические формы глагола в тюркских языках. — М., 1965.

*Юсупов Х.Г.* Асинский говор башкирского языка. Канд. дисс. (рукопись). — М., 1955.

*Ягафарова Г.Н.* Исследование тематических групп башкирской лексики (ономасиологический подход). — Уфа, 2008.

Языки мира: Тюркские языки. — М., 1997.

*Яруллина У.М.* Лексика дёмских башкир. — Уфа, 2009.

## ҠУЛЛАНЫЛҒАН МАТБУҒАТ БАҪМАЛАРЫ ИСЕМЛЕГЕ

## СПИСОК ИСПОЛЬЗОВАННЫХ ПЕРИОДИЧЕСКИХ ИЗДАНИЙ

| | |
|---|---|
| «Ағиҙел» (әҙәби-нәфис һәм ижтимағи-сәйәси журнал) | «Агидель» (литературно-художественный и общественно-политический журнал ) |
| «Аҡбуҙат» (мәктәпкәсә йәштәге һәм кесе мәктәп йәшендәге балалар өсөн республика айлыҡ журналы) | «Акбузат» (республиканский ежемесячный литературно-художественный журнал для детей дошкольного и младшего школьного возраста) |
| «Атайсал» (Сибай ҡалаһы гәзите) | «Атайсал» (газета г. Сибай) |
| «Ашҡаҙар» (Стәрлетамаҡ ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Ашкадар» (общественно-политическая газета г. Стерлитамак) |
| «Башҡортостан» (республика ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Башҡортостан» (республиканская общественно-политическая газета) |
| «Башҡортостан ҡыҙы» (ҡатын-ҡыҙҙар һәм ғаилә өсөн журнал) | «Башкортостан кызы» (журнал для женщин и семьи) |
| «Башҡортостан уҡытыусыһы» (республика фәнни-педагогик методика журналы) | «Башкортостан укытыусыхы» («Учитель Башкортостана») (республиканский научно-педагогический и методический журнал) |
| «Даирә» (Ҡырмыҫҡалы районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Даира» (общественно-политическая газета Кармаскалинского района) |
| «Ватандаш» (ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм художестволы журнал) | «Ватандаш» (общественно-политический, научно-популярный и художественный журнал) |
| «Инйәр» (Архангел районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Инзер» (общественно-политическая газета Архангельского района) |
| «Йүрүҙән» (Салауат районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Юрюзань» (общественно-политическая газета Салаватского района) |

| | |
|---|---|
| «Йәйғор» (Благовещен районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Панорама» (общественно-политическая газета Благовещенского района |
| «Йәншишмә» (республика балалар һәм үҫмерҙәр гәзите) | «Йэншишма» (республиканская газета для детей и подростков) |
| «Йәшлек» (республика йәштәре гәзите) | «Йэшлек» (республиканская молодёжная газета) |
| «Киске Өфө» (ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит) | «Киске Офо» (общественно-политическая и культурная газета) |
| «Көнгәк» (Мәләүез ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Конгэк» (общественно-политическая газета Мелеузовского района) |
| «Башҡортостан панорамаһы» (ижтимағи-сәйәси журнал) | «Панорама Башкортостана» (общественно-политический журнал) |
| «Салауат» (Салауат ҡалаһы гәзите) | «Салауат» (газета г. Салават) |
| «Табын» (Ғафури районы гәзите) | «Табын» (газета Гафурийского района) |
| «Тамаша» (нәфис-публицистик журнал) | «Тамаша» (художественно-публицистический журнал) |
| «Таң» (Бөрйән районы муниципаль районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Тан» (общественно-политическая газета муниципального района Бурзянский район) |
| «Торатау» (Ишембай ҡалаһы һәм Ишембай районы гәзите) | «Торатау» (общественно-политическая газета г. Ишимбай и Ишимбайского района) |
| «Урал» (Белорет районы һәм Белорет ҡалаһының гәзите) | «Урал» (газета Белорецкого района и г. Белорецк) |
| «Шоңҡар» (башҡорт йәштәренең ижтимағи-сәйәси журналы) | «Шонкар» (общественно-политический молодёжный журнал) |
| «Юшатыр» (Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районының ижтимағи-сәйәси гәзите) | «Юшатыр» (общественно-политическая газета г. Кумертау и Куюргазинского района) |

## ШАРТЛЫ БИЛДӘЛӘР

## УСЛОВНЫЕ ЗНАКИ

■ миҫал итеп алынған цитаталар алдынан ҡуйылған билдә — знак предшествует цитате, иллюстрирующей употребление толкуемого слова

□ рус теленә тәржемә алдынан ҡуйылған билдә — знак перед переводом на русский язык

.. һөйләмдәге ҡыҫҡартмалар — сокращения в предложении

♦ фразеологик берәмек — фразеологический оборот

● мәҡәл һәм әйтемдәр — пословицы, поговорки

// ҡылымдарҙың исем формаһындағы тәржемәһе — перевод глаголов в именной форме

/ исемдең сифат формаһындағы тәржемәһе — перевод имён существительных в форме имён прилагательных

## БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

## БАШКИРСКИЙ АЛФАВИТ

| | | |
|---|---|---|
| Аа | Ҡҡ | Фф |
| Бб | Лл | Хх |
| Вв | Мм | Һһ |
| Гг | Нн | Цц |
| Ғғ | ң | Чч |
| Дд | Оо | Шш |
| Ҙҙ | Өө | Щщ |
| Ее | Пп | ъ (ҡалын айырыу билдәһе) |
| Ёё | Рр | Ыы |
| Жж | Сс | ь (нәҙек айырыу билдәһе) |
| Зз | ҫ | Ээ |
| Ии | Тт | Әә |
| Йй | Уу | Юю |
| Кк | Үү | Яя |

# А

**А I** (Р.: первая буква башкирского алфавита; И.: the first letter of the alphabet of the Bashkir language; T.: Başkurt alfabesinin ilk harfi)

Башҡорт алфавитының беренсе хәрефе, түбәнге күтәрелеш, артҡы рәт һуҙынҡы [а] өнөн билдәләй. Ҙур (баш) хәреф — А, бәләкәй — а формаһында яҙыла. Хәрефтең исеме «а» исем һүҙ төркөмөнә ҡарай: *а-ны дөрөҫ итеп яҙыу.* Нумерацияла ҡулланыла. □ Первая буква башкирского алфавита. *А өлөшө. а) пункты.* ■ *Башланып китте уҡыуҙар «А» тигән хәреф менән. Атайҙарыбыҙ ҙа беҙҙең башлаған ана шунан.* Р. Ниғмәти.

♦ **А-нан Я-ға тиклем** тулыһынса, тотошлайы менән. □ Полностью, целиком, от А до Я. ■ *[Ҡыҙҙар] Өфө ҡалаһында төрлө уҡыу йорттары студенттары араһында «Урал еңел сәнәғәте» ойоштороған «А-нан Я-ға саҡлы мода» тип аталған мода күргәҙмәһендә «Себер һулышы» коллекцияһы менән өсөнсө урынға лайыҡ булалар.* «Шоңҡар», № 1, 2011.

**А II а-а-а** (Р.: а; И.: oh; ouch; T.: ha!; hah!; eh!) *ымл.*

**1.** Ҡыуанысты, ҙур шатлыҡты белдергәндә әйтелә. □ Выражает чувство радости, восторга при виде *кого-чего-л.* ■ *«А-а-а», — тип ҡысҡырып ебәрҙе Хәмит, — һеҙ ул «а-а-а» тигәндең мәғәнәһен беләһегеҙме? Ул бит: «Иҫәнме, һаумы, Вәгиз? Был бит һин. Мин һине күреүгә ниндәй шат! Ниндәй ҡыуанам!» — тигән һүҙ.* С. Агиш.

**2.** Ауыртҡанды, ҡурҡҡанды белдергәндә әйтелә. □ Выражает чувство боли, испуга. ■ *Ир тағы ла нығыраҡ ыңғыраша: «А-а-а...»* Х. Назаров. *Кемдәндер ярҙам, ҡыҙғаныу һорап ялбарған һүҙе урынына ҡанға туҙған ауыҙынан «а-а-а!» тигән имәнес үкереү килеп сыҡты ла, тауышын ҡот оскос шартлау күмеп китте...* Ә. Хәкимов.

**3.** *диал.* Аптырауҙы, ғәжәпләнеүҙе, һоҡланыуҙы белдереүсе ымлыҡ. □ Выражает удивление, изумление, восхищение.

**А III а-а-а** (Р.: а; И.: onomatopoeic word; T.: ha!; hah!; eh!) *окш.*

Шаулашҡанды белдергән һүҙ. □ Выражает шум. ■ *Осоп һаҙға ҡунғанда, әйтерһең дә, абына: «А-а-а», — тип ғауғалана ап-аҡ ҡына ағуна.* С. Кулибай.

**А IV** (Р.: аффикс, который указывает на отсутствие *какого-л.* признака; И.: negative prefix; T.: olumsuz önek) *алъялғау*

Инҡар итеүҙе йәки берәй билдәнең, сифаттың юҡлығын белдереүсе алъялғау. □ Аффикс, который указывает на отсутствие *какого-л.* признака. *Авитаминоз. Амораль.* ■ *Хәҙер, яҙ етеү менән, йәшел тәмләткестәрҙе күп урында һаталар. Алыусылар ҙа күп — ни тиһәң дә, яҙғы авитаминоз үҙенекен итә, күңел тәмле лә, витаминлы ла аҙыҡ һорай.* «Йәшлек», 18 апрель 2009.

**АБА I** *и. диал. кар.* **ағай**.

**АБА II** [боронғо төрки *аба*] (Р.: вот так да; ну и ну; надо же; И.: oh; T.: ha(y)di!) *ымл.*

Аптырауҙы, ғәжәпләнеүҙе белдергәндә әйтелә. □ Выражает удивление, восхищение: вот так да; ну и ну; надо же. ■ *[Ихсан:]*

*Ҡоҙа һаман ҡайтманымы? Аба, ҡайһылай оҙаҡланы.* М. Хәйҙәров. *[Хәлиулла:] Аба, ямғыр бик яман яуа, күк тә көлтөрәп китә.* С. Агиш.

**АБАҒА** [боронғо төрки] (Р.: папоротник; И.: fern; Т.: eğrelti otu) *и. бот.*

Ҡаҙаяҡтар төркөмөнә ингән эре ҡауырһын япраҡлы күп йыллыҡ үҫемлек *(ағаслыкта, дымлы урында үҫә)*; ҡаҙаяҡ. □ Папоротник, щитовник *(мужской)*; кочедыжник *(женский)*; орляк (лат. *Pteridium aquilinum*). *Һыу абағалары. Абаға һабағы. Абаға япрағы. Ағас һымаҡ абаға.* ■ *Бөгөн байрам. Ҡояш байрамы. Иң оҙон юл үтә бөгөн ҡояш, иң бейек юл. Төн уртаһы еткәс, абаға сәскә ата. Уны күргән кеше бик бәхетле була.* М. Кәрим. *Был үҫемлектең [яҙ йондоҙоноң] күп йыллыҡ һәм бер йыллыҡтары осрай. Япраҡтары абаға япрағына оҡшаған, икегә-өскә бөкләнгән.* А. Фёдоров. *Абағалар сәскә атҡан саҡта, мин осраттым һине тағы ла.* Йырҙан.

**АБАҒАЙ I** (Р.: неосторожный, суетливый; И.: fussy; Т.: telaşlı) *с. диал.*

Уйламайынса эшләгән, ҡабалан. □ Неосторожный, суетливый. ■ *Абышкаһы аның бер төрлө абағай, ҡыҙыу кеше ине.* Экспедиция материалдарынан.

**АБАҒАЙ II** *с. диал. ҡар.* **сос.**

**АБАҒА СӘСКӘҺЕ** (Р.: цветок папоротника; И.: fern flower; Т.: eğrelti otu) *и. миф.*

Башҡорт халҡының ышаныуҙары буйынса, йәйге Ҡояш торошонда (21–22 июндә) төн уртаһында ғына атҡан, уны күргән кешене бәхетле иткән мифик ҡып-ҡыҙыл сәскә. □ Цветок папоротника; мифический огненно-красный цветок, делающий счастливым того, кто его видел. ■ *Абаға сәскәһен күргән кеше бәхетле була.* Халыҡ ижадынан.

**АБАҒАЛАР** *и. бот. ҡар.* **абаға һымаҡтар**.

**АБАҒАЛЫ** (Р.: поросший папоротником; И.: fern grown; Т.: eğrelti otlu) *с.*

**1.** Абаға үҫкән *(ялан, урман юлы, йылға буйы).* □ Поросший *(заросший, покрытый)* папоротником *(поляна, лесная тропа, берег реки).*

**2.** Абаға аралаш *(бесән).* □ Смешанный с папоротником *(сено).*

**АБАҒА ҺЫМАҠТАР** (Р.: папоротниковидные; И.: ferns; Т.: eğrelti otları) *и. бот.*

Саң, һеркә ярҙамында үрсей торған үҫемлектәр төрөнөң атамаһы; ҡаҙаяҡ һымаҡтар. □ Папоротниковидные, папоротникообразные (лат. *Polypodiophyta*).

**АБАД** [фарс. اباد ‘төҙөк’] *и. ҡар.* **әбәд.**

**АБАД ҠЫЛЫУ (абад ҡыл-)** (Р.: наполниться живностью; И.: filled with wildlife; Т.: canlılarla dolmak) *ҡ.*

Йән эйәһе менән тулыу. □ Наполниться живностью.

**АБАЗИН** (Р.: абазинец; И.: Abazin; Т.: Abaz) *и.*

Кавказда йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Абазинец.

**АБАЙ I** [дөйөм төрки *аба*] (Р.: осторожный; И.: careful; Т.: ihtiyatlı) *с.*

Ҡарап, самалап эш итеүсән; һаҡ. □ Осторожный, осмотрительный. *Абай кеше.*

**АБАЙ II** (Р.: осторожно; И.: carefully; Т.: ihtiyatla) *р.*

Һаҡ, ҡарап, самалап. □ Осторожно, осмотрительно. *Абай йөрөү. Абай ҡыланыу. Абай булыу.* ■ *Әгәр ҙә беҙҙән ризалыкһыҙ алып ҡасып китә торған булһалар, үҙҙәре абай булһындар, ун доғалы ҡоҙа менән баҫып барып ҡалым алырбыҙ, тип әйтә тиген.* Һ. Дәүләтшина. *Тор тыныс һаҡта, һөйөүеңде лә, абай бул, берүк юғалтма!* Р. Назаров. *Абай булығыҙ... Арағыҙҙа икеләнеүселәр, зарарлы бышылдаусылар була торған булһа, шәфҡәт булмаҫ.* М. Буранғолов.

**АБАЙЛАМАЙ** (Р.: неосторожно; И.: incautiously; Т.: tesadüfen) *р.*

Алдын-артын уйламайынса; һаҡһыҙ. □ Неосторожно, неосмотрительно, нечаянно. *Абайламай асыу.* ■ *Һинең абайламай әйткән һүҙеңде башҡалар үткәреп ебәрһә лә, дуҫыңдың күңеленә төйөн булып урынлашыуы, уның сәменә, намыҫына тейеүе, уйға*

*һалыуы ихтимал.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 10, 2011. *Тормошта иһә абайламай яҙа баҫыуҙар ҙа етерлек. Кешемен тигән ысын кеше былдай сакта ла бит кешеләрҙең киҫәтеүенә ҡолаҡ һала, хатаһын төҙәтә ала.* Й. Солтанов. ● *Абайламай һөйләгән — ауырымай үлгән.* Әйтем.

**АБАЙЛАМАЙ ҠАЛЫУ (абайламай ҡал-)** (Р.: не заметить; И.: lose sight of; Т.: ihmal etmek) *к.*

Ваҡытында күрмәү, иғтибар бирмәү. □ Не заметить, упускать, упустить из виду *кого-что*, не успеть заметить *кого-чего*. *Муйылға әүрәп йөрөп, ямғыр сыҡҡанын абайламай ҡалғанбыҙ.* ■ *Батыр, уң ҡашы булмаған, һыбай елгәндә күҙенә ләпәк инеп, дошманының һөңгөһөн абайламай ҡала.* Д. Бүләков. *Аҫылғужа атлы ир Гөлбикә апай йөҙөндәге үҙгәреште абайламай ҙа ҡалды.* Т. Ғарипова. *Сос Фәхриҙең фермаға һуғылмай, башта тура өйөнә кереп сығыуын хатта һиҙгер Яҡуп күрше лә абайламай ҡалды.* Б. Бикбай.

**АБАЙЛАМАҪТАН** (Р.: неосторожно; И.: incautiously; Т.: istemeden) *р.*

**1.** Һис көтмәгәндә; аңғармаҫтан. □ Неосторожно, неосмотрительно, нечаянно, невзначай. ■ *Абайламаҫтан ерҙә ятҡан кирбес киҫәгенә баҫтым.* Ә. Байрамов. *[Кейәү кеше] ҡайтҡас, ғәҙәтенсә, сисенеп тормай, шәм дә тоҡандырмай, кәштәнән сәй алып эсәм тигәндә генә, ҡараңғыла абайламаҫтан, бер һауытты түшенә төшөргән дә ҡуйған.* Легенданан. *Яу яланын әсенеү ҡатыш ҡыҙыҡһынып күҙәтә-күҙәтә, ашығып атлаған ыңғайҙа, ҡасаҡ абайламаҫтан ниндәйҙер соҡорға йығылып төштө.* Ә. Хәким.

**2.** Һиҙмәҫтән, ирекһеҙҙән. □ Непреднамеренно, невзначай, невольно. ■ *[Әсәйем] баланың тауышынан айнып киткәндәй булып, үҙе лә абайламаҫтан: «Булат, балаҡайым, атайың ҡайтманымы, тәҙрәнән ҡарап ал әле», — тип әйтеп һалды.* М. Тажи.

**АБАЙЛАТЫУ (абайлат-)** (Р.: дать возможность осознать; И.: let know; Т.: bildirmek) *к.*

Кешегә аңғарырға, төшөнөргә мөмкинлек биреү, һиҙҙереү. □ Дать возможность осознать, понять. ■ *[Әсәһе] ҡыҙының тыштан тыныс күренгән йөҙөнә абайлатмай ғына ҡарап йәлләй ҙә ҡайтып китә.* Һ. Дәүләтшина. *Шул уҡ ваҡытта бригадир ашығып артын ныҡытырға тотондо: абайлатмай елкәнән алмаһындар, иҫәүән ҡорбан балығылай, айғолаҡтан ҡаты матҡып, ҡыҙған табаға һалмаһындар!..* Й. Солтанов.

**АБАЙЛАУ (абайла-)** (Р.: внимательно рассматривать; И.: scrutinize; Т.: denetlemek) *к.*

**1.** Ентекләп ҡарау, иғтибар менән байҡау. □ Внимательно рассматривать, проверять. // Рассматривание, проверка. ■ *Әйе, күктең сикһеҙлеген асыҡ яланда йәки диңгеҙ ярында ғына абайларға мөмкин.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 5, 2011. *Бына һин минең буйкиәфәтемә абайлап ҡына баҡ та, иңемдәге бөтә ҡорал-ҡорамалдарымды иҫеңә алып ҡуй, ҡасан да булһа бер күрерһең әле уларҙы.* «Зөһрә менән Алдар».

**2.** Уйлап, бик һаҡ эш итеү. □ Действовать осторожно, осмотрительно; осторожничать. ■ *Ибрай шулай уҡ мәкерле хас дошман. Ул бик абайлап эш итә.* Ғ. Хөсәйенов. *Ҡара-ҡара, беҙҙең Зөфәр ниндәй ғәйрәтләнеп бара! Абайла, кикрегең өҙөлмәһен, көҙгө этәс! — тине Исмәғил.* Яр. Вәлиев.

**3.** Берәй эште, хәлде һиҙеп алыу; төшөнөү, аңғарыу, иғтибарлау. □ Понять, догадываться, обратить внимание, заметить. ■ *Закирҙың юҡлығын Иштуған иртәнсәк, үҙенең пулемётсылар взводын барлаған сакта ғына абайланы.* З. Биишева. *Ҡараңғылыҡ бөтәһен дә йәшерә, бер ни абайларлыҡ түгел.* Т. Ғиниәтуллин.

**4.** Ситтән күреп, һиҙеп ҡалыу. □ Замечать. ■ *Ғазраилдың шашка һабына тотонғанын, Ҡәнзәфәрҙең тегенең ҡулына йәбешкәнен күрҙе лә бер үк ваҡытта тиерлек һалдаттарҙың яурындарынан мылтыҡтарын ала башлағанын абайланы.* Б. Рафиҡов.

**АБАЙ-ТОБАЙ** (Р.: суть; И.: essence; Т.: öz) *и. диал.*

Айыш. □ Суть, сущность. *Абай-тобайын белмәй тотоноу.*

**АБАЙҺЫҘ** (Р.: невнимательный; И.: inattentive; Т.: dikkatsiz) *с.*

**1.** Иғтибарһыҙ, сос булмаған; аңыш. □ Невнимательный. *Абайһыҙ булыу.* ■ *Бикмырҙа, һоғаланып ашаған ыңғайҙа, әлдән-әле уға һирпелеп ҡуя, берәй абайһыҙ хәрәкәт яһаманыммы тигән һымаҡ, тартынып ҡына рәхмәт әйтә лә шым баҫып сығып китә торғайны.* Ә. Хәкимов.

**2.** Алдын-артын уйламай торған; һаҡһыҙ. □ Неосторожный, неосмотрительный; беспечный, беззаботный. *Абайһыҙ тотоноу.*

**АБАЙҺЫҘҘАН** (Р.: неожиданно; И.: suddenly; Т.: ansızın) *р.*

**1.** Бер ҙә көтмәгәндә, уйламағанда; ҡапыл. □ Неожиданно, вдруг. *Абайһыҙҙан килеп баҫыу. Абайһыҙҙан килеп сығыу.*

**2.** Һиҙмәҫтән, абайламаҫтан, аңғармаҫтан. □ Нечаянно, невзначай. *Абайһыҙҙан һүҙ ыскындырыу.* ■ *Килендең дә ата-әсәһе ҡайҙалыр күсеп киткәнме, ҡазаға тарығанмы, — тип абайһыҙҙан иң кәрәкле ептең осон сығара бирҙе.* Ә. Хәкимов.

**АБАЙҺЫҘЛЫҠ (абайһыҙлығы)** (Р.: неосторожность; И.: carelessness; Т.: ihtiyatsızlık) *и.*

Абай, һаҡ булмаған хәл. □ Неосторожность. ■ *Абайһыҙлыҡ эшләргә минең хаҡым юҡ: полкта һәр бер машина иҫәптә.* М. Гәрәев.

**АБАЛАНЫУ (абалан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **абалау**. *страд. от* **абалау**.

**АБАЛАТЫУ (абалат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **абалау**. *понуд. от* **абалау**.

**АБАЛАП АЛЫУ (абалап ал-)** (Р.: наброситься; И.: bark; Т.: havlamak) *ҡ.*

Ташланыу *(эттәр тураһында).* □ Наброситься с лаем. *Кешене абалап алыу. Эттәр үтеп барыусыға абалап алдылар.*

**АБАЛАУ (абала-)** (Р.: бросаться, набрасываться с лаем; И.: bark; Т.: havlamak) *ҡ.*

**1.** Ташланып, ярһып өрөү *(эттәр тураһында).* □ Бросаться, набрасываться с лаем на *кого-л.*, облаивать *кого-л.* ■ *Ҡарамаҫ ғилем кәҙерен ҡара наҙан — ҡара эт тә пәйғәмбәргә абалаған.* М. Аҡмулла. *Төн. Ҡараңғы. Йыракта абалап бер эт өрә.* Ш. Бикҡол. *Уларҙы йыуан ҡарағай бүрәнәләре ҡояшка яныуҙан ҡараһыу ҡыҙғылт төҫкә инеп сөгөндәй ҡатҡан алты мөйөшлө өйҙән яланға табан сығарып эшләнгән ҡапҡа алдында ялбыр йөнлө ҡара эт абалап ҡаршыланы.* Н. Мусин. *Олатайым уның төндә бик нык абалап өрөүен, сама буйынса Сусаҡ яғына ыңғайлауын аңғара.* М. Ямалетдинов. ● *Ҡурҡҡанды эт абалай.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Ярһып әрләү. □ Накинуться с бранью; облаять. ■ *Күп ине дошман мине абалаған, төрлө ошаҡ, яла һәм яман сығарған.* М. Аҡмулла.

**3.** *диал.* Күп булыу. □ Много, довольно много. ■ *Элек күлдә балыҡ абалап ята ине.* Экспедиция материалдарынан.

**АБАН** (Р.: родовое подразделение башкир-кыпчаков; И.: Bashkir tribal subdivision; Т.: bir Başkurt soyunun adı) *и.*

Ҡыпсаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков.

**АБАТА** *с. диал. ҡар.* **ығыш.** *Абата кеше.*

**АБАУ I** (Р.: ой, ох, ой-ой; И.: ouch; Т.: ay) *ымл.*

**1.** Ҡурҡып, һиҫкәнеп киткәндә әйтелә. □ Выражает испуг, страх: ой, ох, ой-ой. *Абау, аяҡ аҫтына һыу сыҡҡан. Абау, ҡайһылай ҡурҡыттың!* ■ *Абау, нисек ҡайтырмын инде, — тине Дилара.* Ғ. Ибраһимов. *Абау! Был атты беләм бит мин! Ҡоралдары ла тап үҙенеке. Ошо атҡа атланып, ул сихырсы минең көтөүҙәремә килеп, бик йыш ҡурҡытып китә торғайны.* «Зөһрә менән Алдар».

**2.** Мыҫҡыл итеүҙе белдергәндә әйтелә. □ Выражает иронию: ой. *Абау, берәү кеше булған икән.* ■ *Абау, эшем кешеһе Йәнтимер, йыуан менән ҡыҫҡа араһында әллә кем булып ултыра.* С. Агиш. *Абау! Берәүҙең әнкәйе терелеп ҡайтҡан тиерһең!* Т. Ғарипова.

**3.** Аяп, иркәләгәнде белдергәндә, һоҡланғанда әйтелә. □ Выражает чувство восхищения, одобрения: ой, ой ты. *Абау, бигерәк матур ҡыҙың бар икән.* ■ *[Миңлекәй:] Абау, ҡыҙым, һағындыңмы? Әйҙә, мин һиңә әллә ниҙәр алып ҡайттым.* Һ. Дәүләтшина.

**АБАУ II** (Р.: морщинистый; И.: wrinkly; Т.: kırışık) *с.*

Ҡартлыҡтан кеше йөҙөнөң, сырайының боҙолоуы, ныҡ йәмһеҙләнеүе; йыйырсыҡлы; сырышҡан. □ Морщинистый. ■ *Был яуапты ишеткәс, Иҙеүкәйҙең Һабрау арҡаһынан һөйгән, ти; абау йөҙөн биҙәрләп, үҙ шайҡанын әйткән, ти.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**АБАУЛАТЫУ (абаулат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **абаулау**. *понуд. от* **абаулау**.

**АБАУЛАУ (абаула-)** (Р.: кричать «ой-ой»; И.: ooh; Т.: haykırmak) *ҡ.*

Абау (1) тип ҡысҡырыу. □ Кричать «ой-ой»; ойкать. *Абаулап илау.*

**АБА ҺАЛЫУ (аба һал-)** (Р.: взывать о помощи; И.: call for help; Т.: imdat istemek) *ҡ. диал.*

Ярҙам һорап ҡысҡырыу, бәлә һалып ҡысҡырыу. □ Взывать о помощи.

**АББАТ** [рус. < лат. *abbas* ‘атай’] (Р.: аббат; И.: abbe; Т.: başrahip) *и. дини*

**1.** Католик монастыры етәксеһе. □ Аббат *(настоятель католического монастыря).*

**2.** Францияла католиктарҙың руханийы. □ Аббат *(во Франции — католический священник).*

**АББАТЛЫҠ** (Р.: аббатство; И.: abbey; Т.: manastır kilisesi) *и. дини*

Аббат етәкселек иткән, епископҡа, ҡайһы бер осраҡтарҙа Рим папаһының үҙенә буйһонған һәм уға ҡараған ер. □ Аббатство.

**АББРЕВИАТУРА** [рус. < ит. *abbreviatura* < лат. *brevis* ‘ҡыҫҡа’] (Р.: аббревиатура; И.: abbreviation; Т.: kısaltma) *и. лингв.*

**1.** Ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙ йәки ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙең баш хәрефтәре. Мәҫәлән, *РФ — Рәсәй Федерацияһы, АҠШ — Америка Ҡушма Штаттары.* □ Аббревиатура.

**2.** Яҙыуҙа шартлы рәүештә ҡыҫҡартылған һүҙҙәр. Мәҫәлән, *һ.б. — һәм башҡалар, а.х. — ауыл хужалығы, б.э.т. — беҙҙең эраға тиклем.* □ Аббревиатура.

**АББРЕВИАЦИЯ** [рус. < ит. *abbreviatura* < лат. *brevis* ‘ҡыҫҡа’] (Р.: аббревиация; И.: abbreviation; Т.: kısaltma) *и. лингв.*

Һүҙьяһалыштың һүҙбәйләнештәге һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән яңы һүҙҙәр яһау ысулы. □ Аббревиация.

**АБДАН** [ғәр. ابدا ‘мәңгелек’] (Р.: совсем; И.: entirely; Т.: büsbütün) *р. диал.*

Бөтөнләй, тамам. □ Совсем, окончательно. *Абдан арып йығылыу.*

**АБҘАР** *и.*

**1.** *диал. ҡар.* **аҙбар**.

**2.** *диал. ҡар.* **лапаҫ**.

**3.** *диал. ҡар.* **ялан кәртә**.

**АБЕЛХӘЯТ** [фарс. < ғәр. اب الحياة] *и. иҫк. ҡар.* **әбелхәйәт**. ■ *Ҡәҙерле ҙур бер нәмә ул абелхәят, нур үҙе ул, һыу үҙе, ялҡын үҙе.* Ш. Бабич.

**АБЗАҢ** *и. диал. мәрәк. ҡар.* **ағаң 1**. ■ *Яңы йорттан яңы бәхет көткән бер уңай менән ҡотланылар абзағыҙҙы тағы бер малай менән.* Р. Сафин.

**АБЗАР** (Р.: надворные постройки; И.: outdoor constructions; Т.: dış binalar) *и. диал.*

Кәртә-ҡура, ҡаралты. □ Надворные постройки.

**АБЗАР АЛДЫ** *и. диал. ҡар.* **кәртә**.

**АБЗАР ИНӘСЕ** *и. диал. ҡар.* **аҙбар эйәһе**.

**АБЗАР КЕРЕҮ (абзар кер-)** (Р.: переход осенью на стойловое содержание; И.: transition to stalled keeping of cattle; Т.: ahıra almak) *ҡ. диал.*

Көҙөн көтөү туҡтағас, малды аҙбарҙа ҡарай башлау. □ Переход осенью на стойловое содержание.

**АБЗАЦ** [рус. < нем. *Absatz, absetzen*] (Р.: абзац; И.: indentation; Т.: satırbaşı) *и.*

**1.** Текста эскәрәк индереп яҙылған юл башы; ҡыҙыл юл. □ Абзац, красная строка. *Абзацтан башлап яҙыу.* ■ *Яңы фекерҙе аб-*

*зацтан, икенсе төрлө әйткәндә, ҡыҙыл юлдан башлап яҙыу мотлак.* Х. Ҡадиров.

**2.** Текстың бер ҡыҙыл юлдан икенсе ҡыҙыл юлға тиклем булған өлөшө. □ Текст между двумя новыми строками. *Өсөнсө абзац менән танышыу. Һуңғы абзацты ятларға.* ■ *Ошо абзацтан «йөрәк берҙәмлекте таный» тигәнендә бер тибештәге йөрәктәрҙе, йәғни бер максаттағы кәүемде, халыкты күҙалларға була.* «Киске Өфө», 17 июнь 2011.

**АБЗЫЙ** (Р.: родной брат; И.: elder brother; Т.: öz kardeş) *и.*

**1.** *диал.* Ағай. □ Родной брат. ■ *Был тиклем дә абзыйыма оҡшар икән [Илмырҙа], — тине Ғилметдин.* М. Хисмәтуллина. *Бала, тинең... Ул бала юғары белем алған, минең бухгалтериямда баш экономист булып ултыра! Минең туғаным тип, Әхмәтхан абзыйымдың ҡыҙы тип ултырттым уны!* Р. Камал.

**2.** *диал.* Ҡайнаға. □ Старший брат мужа.

**3.** Уҡымышлы, белемле кеше, күберәк муллаларға ҡарата әйтелә. □ Просвещённый, грамотный человек *(чаще относится к муллам).* ■ *Рәхим генә итегеҙ, мулла абзый, — тип якшатланып тәтелдәне мөғәллимә. — Рәхим итегеҙ, үтенәбеҙ...* З. Биишева. *[Абдулла Таһиров] 1937 йылдың декабренә тиклем ауыл балаларын ғына түгел, бәлки, «ликбез» ойоштороп, кистәрен ололарға ла белем шишмәһенә юл аса, халык араһында оло абруй, ихтирам яулай. Аҡһакалдар ҙа, бала-саға ла уны, хөрмәтләп, «мөғәллим абзый» тип кенә йөрөтә.* Р. Хажиев.

**4.** *һөйл.* Ағай *(үҙеңдән өлкәнерәк ир-атҡа өндәшеү һүҙе).* □ Дядя, дяденька. ■ *Ярар, бай абзый, хафаланма, ишекте нык һаклармын, — тигән ялсыһы.* Көләмәстән.

**5.** *мәрәк.* Вазифалы кешегә ҡарата ҡулланылған һүҙ. □ «Дядя» *(должностное лицо). Юғарылағы «абзыйҙар».* ■ *«Ҡотоң осҡан икән шул, урыҫ абзый. Әйтәм буш итмәм, тип һөйләнгән булаһың», — тип уйлап, Төлкөсура теҙгенен тартты.* Н. Мусин. *Эшһеҙлек тигән нәмә тамам бәкәлгә һуға бит. Алтмыш йәшең тулыр-тулмаҫтан түрә абзыйҙар лайыклы ялға китергә көсләп димләй башлай.* Ф. Хажиев.

**АБЗЫҠАЙ** (Р.: похожий на брата; И.: like a brother; Т.: kardeşine benzer) *с. диал.*

Хас ағаһы, ағаһына оҡшаш. □ Похожий на брата.

**АБИТУРИЕНТ** [рус. < нем. *Abiturient* < лат. *abituriens* ‘сығып китергә торған’] (Р.: абитуриент; И.: school-leaver; Т.: aday öğrenci) *и.*

Урта мәктәпте тамамлап, юғары йәки махсус урта уҡыу йортона уҡырға инер өсөн имтихандар биреп йөрөгән кеше. □ Абитуриент. *Абитуриенттар ҡабул итеү.* ■ *Университеттың ун факультетында әллә күпме һөнәргә эйә булыу мөмкинлеге абитуриенттарҙы йәлеп итә лә инде был уҡыу йортона.* Р. Мәхийәнова. *Мәғфирә Ғәлиева менән Николай Головтарҙың да, Фәүзәнә менән Рифҡәт Аҡмановтарҙың да фатирҙары абитуриенттар төйәгенә әйләнә.* М. Бураҡаева.

**АБОНЕМЕНТ** [рус. < фр. *abonnement*] (Р.: абонемент; И.: subscription; Т.: abonman) *и.*

**1.** *кар.* **абуна 1**. *Абонемент хаҡы. Абонемент алыу. Театрға абонемент һатып алыу.* ■ *Теләгән кеше, үҙәк почтаға килеп, үҙенә айырым абонемент йәшник астыра ала.* «Даирә», № 98, 2010.

**2.** Китапхананың китаптарҙы өйгә биреү менән шөғөлләнгән бер бүлеге. □ Абонемент *(отдел библиотеки). Абонементтан китап алыу.*

**АБОНЕНТ I** [рус. < фр. *abonner* ‘яҙылыу’] (Р.: абонент; И.: subscriber; Т.: abone) *и. кар.* **абунасы 1.** *Телефон селтәре абоненты. Абоненттар бүлеге. Абонент бурысы.* ■ *«Мегафон» компанияһы абоненттар базаһы һәм база станциялар төҙөлөшө буйынса республикала алдынғылыкты биләй.* «Йәшлек», 25 март 2008.

**АБОНЕНТ II** (Р.: абонентный; И.: subscription; Т.: abone) *с.*

Почтаның абонент бүлеге. □ Абонентный, абонентский.

**АБОНЕНТ ТҮЛӘҮЕ** (Р.: абонентская плата; И.: license fee; Т.: ruhsat ücreti) *и.*

Күп тапҡыр, оҙайлы күрһәтелгән хеҙмәт өсөн ойошмалар, предприятиелар, айырым граждандар тарафынан индерелгән түләү. □ Абонентская плата. ■ *Шулай итеп, урындағы телефон элемтәһенә тарифтар, абонент түләүҙәр менән бер рәттән, йыл эсендә — 6, 2009 йылда — 7,5, 2010–2011 йылдарҙа иһә 6 процентка артасаҡ.* «Йәшлек», 8 май 2008.

**АБОРТ** [рус. < лат. *abortus*] *и. ҡар.* **бала алдырыу.** *Аборт яһатыу. Ҡалдыҡлы аборт. Аборт яһау.* ■ *Үҫмерҙәр араһында енси юл менән таралыусы йоғошло ауырыуҙар, гинекологик сирҙәр, аборттар һәм бәлиғ булмағандар араһында ауырға ҡалыу осраҡтары кәмене.* «Башҡортостан», 26 март 2011. *Рәсми статистика буйынса, Рәсәйҙә 100 тыуыумға 66,7 аборт тура килә. 2009 йылда 1 миллион 161 мең 690 ҡатын-ҡыҙ балаһының ғүмерен аборт эшләтеү юлы менән өҙгән.* «Торатау», № 97, 2010.

**АБРАЗИВ** [рус. < фр. *abrasif* < лат. *abrasio* ‘ҡырып алыу’] (Р.: абразивный; И.: abrasive; Т.: aşındırıcı) *с.*

Металл, быяла һ.б. йөҙләгән шымартыу, үткерләү өсөн ҡулланылған, үтә ҡаты материал йәки шул материалдан эшләнгән инструмент. □ Абразивный. *Абразив материал. Абразив ҡорал.*

**АБРИКОС** [рус. < фр. *abricot* < гол. *abrikoos*] (Р.: абрикос; И.: apricot; Т.: kayısı) *и. бот.*

**1.** Гөлйемештәр ғаиләһенә ҡараған һары итләс емеш биргән алһыу сәскәле, муйыл япраҡлы көньяҡ ағасы; өрөк. □ Абрикос (лат. *Prunus armeniaca*). *Абрикос үҫтереү. Абрикос ағасы.*

**2.** Шул ағастың емеше. □ Абрикос. *Абрикос ҡайнатмаһы. Абрикос һуты.* ■ *Ҡыҙғылт һары төҫтәге йәшелсә-емештәрҙең ҡояшта ҡыҙынғанда тәндең янған төҫөн көсәйтеүгә булышлыҡ итеүен боронғо римляндар электән үк белгән. Шуға күрә ҡояшта ҡыҙыныуға яратыусылар кишер йәиһә абрикос һуты эскән.* «Йәшлек», 3 июль 2010.

**АБРУЙ** [фарс. ابرو ‘йөҙ һыуы’] (Р.: авторитет; И.: authority; Т.: itibar) *и.*

**1.** Халыҡ алдында ҡаҙанған ихтирам; шөһрәт. □ Авторитет. *Абруйҙы күтәреү. Абруйҙы төшөрөү.* ■ *Ул [Һатыбал] ауылда ғына түгел, бөтә был яҡта үҙен беренсе егет итеп иҫәпләргә күнеккән. Уға мөхәббәттә лә шул абруйҙы һаҡлап ҡалырға кәрәк.* З. Биишева. *Ғилман ағаһының район күләмендә абруйы иҫ киткес ҙур. Ҡайҙа ғына бармаһындар, уларҙы колас йәйеп ҡаршы алалар.* Д. Бүләков. *Сихырсы исеме сыҡҡаны юк: имләй, дауалай, үләндәрҙән дарыу яһап бирә, имгәнгән кешеләргә ярҙам итә — ҡыҫҡаһы, уның [Барсынбикәнең] халыҡ араһында абруйы артҡандан-арта.* Т. Ғарипова. ● *Алдашһаң, абруйың китер, әрләшһәң, ҡәҙерең китер.* Мәҡәл.

**2.** Вазифалы урындың дәрәжәһе. □ Авторитет. *Түрәлек абруйын һаҡлау.* ● *Абруй — ирҙең ҡеүәте.* Мәҡәл.

**АБРУЙЛЫ** (Р.: авторитетный; И.: authoritative; Т.: itibarlı) *с.*

**1.** Яҡшы яғы менән танылған; авторитетлы, хөрмәтле. □ Авторитетный. ■ *Староста Фатиманы келәткә ябып торорға ла уйлағайны, ләкин Әхмәди яҡын тирәлә абруйлы ғына кеше булғас, һәм өҫтәүенә үҙенең ҡатыны Фаҡиһаны яҡшы белгәс, еткән ҡыҙҙы мәсхәрә итеп, атаһын кеше араһында оятлы иткеһе килмәне, Фатиманы өйҙә генә торорға ҡушты.* Ж. Кейекбаев. *Ғөмүмән, ул йыл минең өсөн гел ҡыуаныстарҙан туҡылғандай ине: Дауыт Юлтыйҙың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналарҙа ҡатнашыусы абруйлы делегация составында Ырымбур өлкәһенә барыу, Алматылағы II Халыҡ-ара төрки поэзияһы фестивалендә лауреат исемен яулау.* М. Ямалетдинов.

**2.** Ҙур вазифалы, дәрәжәле. □ Авторитетный, должностной. ■ *Тирмә хужаһы янына урынлашкан һеңрән иленең абруйлы һаналған уҙамандары, аҡһаҡалдары, был телдәр мулла ҡасан туктай инде тигән һымаҡ, алан-йолан ҡаранып алдылар.* К. Мәргән. *Бында бит һеҙ төп хужа, һеҙҙең халыҡ менән аңлашып, килешеп йәшәүегеҙ, уны үҙ ҡулығыҙҙа тота алыуығыҙ хаҡында килеп етмәҫ элек үк бик абруйлы ил ағаларынан ишеткәйнек.* Н. Мусин. *Оло абруйлы дин әһеленән үҙ ижадына ҡарата беренсе тапҡыр маҡтау һүҙҙәрен ишетеүгә нескә күңелле Аҡмулланың күҙҙәре дымланды.* Я. Хамматов.

**АБРУЙҺЫҘ** (Р.: неавторитетный; И.: without authority; Т.: itibarsız) *с.*

Насар яғы менән танылған, кешеләр араһында хөрмәт ҡаҙанмаған, абруйы булмаған. □ Неавторитетный. ■ *Абруйһыҙ ҡалғаны юҡ оҙон морон, һис ҡасан хур булмаҫ ҡоро морон. Ат та булыр, тун да булыр — беҙ булмабыҙ, имен булһа, кире ҡайтыр туры айғырың.* М. Аҡмулла.

**АБРУЙҺЫҘЛЫҠ (абруйһыҙлығы)** (Р.: неавторитетность; И.: loss of authority; Т.: itibarsızlık) *и.*

Хөрмәт ителмәү, халыҡ алдында үҙ ихтирамыңды юғалтыу. □ Неавторитетность. ■ *Был юлы Вәзиргә лә һары сатин күлдәкте кейергә тура килде. Әллә ҡайҙа сит ергә барып күлдәкһеҙ йөрөү абруйһыҙлыҡ булыр ине.* М. Кәрим.

**АБСАЯ БАҪЫУ (абсая баҫ-)** (Р.: стать вытянувшись; И.: straighten; Т.: doğrulmak) *ҡ.*

Тура тороу. □ Стать вытянувшись, выпрямившись; выпрямиться.

**АБСОЛЮТ I** [рус. < лат. *absolutus* 'сикләнмәгән, тулы'] (Р.: абсолют; И.: the absolute; Т.: mutlak) *и. фәлс.*

**1.** Идеалистик фәлсәфәлә: бөтә ғаләмдең мәңге үҙгәрмәй торған төп нигеҙе, рух, идея; диндә — Алла. □ Абсолют.

**2.** Һис *нигә*, һис бер шартҡа бәйләнмәгән үҙ аллы нәмә. □ Абсолют. *Абсолютҡа әйләндереү.*

**АБСОЛЮТ II** [рус.] (Р.: абсолютный; И.: absolute; Т.: salt) *с.*

**1.** Бер нисек тә сикләнмәгән, һис нигә бәйләнмәгән. □ Абсолютный. *Халыҡ һанының абсолют үҫеше.*

**2.** Иң юғары, иң тулы, иң күп *(дәүмәл, күләмгә һ.б. ҡарата).* □ Абсолютный. *Абсолют ауырлыҡ. Абсолют ишетеү. Абсолют күпселек. Абсолют өҫтәмә ҡиммәт. Абсолют хаҡ. Абсолют беренселек. Абсолют хәҡиҡәт.*

**АБСОЛЮТ ДӘҮМӘЛ** (Р.: абсолютная величина; И.: absolute value; Т.: mutlak değer) *и. мат.*

Плюс йәки минус тамғаһы ҡуймай алынған һан. □ Абсолютная величина. ■ *Төп ҡулланыусыларҙа, билдәләнгән көүәте 50 мВт-тан юғарыраҡ булған эре компанияларҙа .. хаҡтар быйылғы кимәлгә ҡарағанда 132–134,7 процентҡа артҡан, шул уҡ ваҡытта бөтә ҡулланыусылар өсөн хаҡтарыбыҙҙың абсолют дәүмәле күрше төбәктәрҙәге хаҡтар менән сағыштырғанда түбәнерәк.* БР Хөкүмәтенең рәсми порталынан, 18 апрель 2011.

**АБСОЛЮТИЗМ** [рус. < лат. *absolutos* 'сикләнмәгән, һис шикһеҙ'] (Р.: абсолютизм; И.: absolutism; Т.: mutlakiyet) *и.*

Юғары власть тулыһынса бер кеше ҡулында булған феодализм осоронда дәүләт менән идара итеү формаһы. □ Абсолютизм, неограниченная монархия.

**АБСОЛЮТИСТ** [рус] (Р.: абсолютист; И.: absolutist; Т.: mutlâkiyetçi) *и.*

Абсолютизм яҡлы. □ Абсолютист *(сторонник абсолютизма).*

**АБСОЛЮТ КҮПСЕЛЕК (күпселеге)** (Р.: абсолютное большинство; И.: absolute majority; Т.: salt çoğunluk) *и.*

Бик ҙур күпселек, төркөмдөң яртыһынан күберәк булған өлөшө. □ Абсолютное большинство.

**АБСОЛЮТЛАШТЫРЫУ (абсолютлаштыр-)** (Р.: абсолютизировать; И.: absolutize; Т.: mutlaklaştırmak) *ҡ.*

**1.** Абсолют (I) тип һанау. □ Абсолютизировать.

**2.** Абсолют (II), иң юғары тип таныу. □ Абсолютизировать.

**АБСОЛЮТ МОНАРХИЯ** (Р.: абсолютная монархия; И.: Absolute monarchy; Т.: Mutlak Monarşi) *и.*

Дәүләттең тулы *(закон сығарыу, башҡарыу, суд, айырым осраҡта дини)* власы бер кеше ҡулында булған монархик идара итеү формаһы. □ Абсолютная монархия. *Берләшкән Ғәрәп Әмирлеге — 7 абсолют монархиянан торған федератив дәүләт.*

**АБСОЛЮТ НУЛЬ** (Р.: абсолютный нуль; И.: absolute zero; Т.: mutlâk sıfır) *и. физ.*

Мөмкин булған иң түбән температура (–273,16 °C). □ Абсолютный нуль.

**АБСОЛЮТ ХӘҠИҠӘТ** (Р.: абсолютная истина; И.: absolute truth; Т.: mutlak gerçeği) *и. фәлс.*

Объектив булмыш хаҡында тулы мәғлүмәт биргән хәҡиҡәт. □ Абсолютная истина.

**АБСОРБЦИЯ** [рус. < лат. *absorptio, absorbere* 'йотоу'] (Р.: абсорбция; И.: absorption; Т.: emme) *и. физ. хим.*

Нәмәнең һурҙырып, һеңдереп алыныуы, йотолоуы. □ Абсорбция. *Газ абсорбцияһы. Яктылык абсорбцияһы. Абсорбция күренеше. Абсорбция процесы. Абсорбция яһау.*

**АБСТРАКТ I** [рус. < лат. *abstractum*] (Р.: абстрактный; И.: abstract; Т.: soyut) *с.*

Абстракция юлы менән алынған; ситләштерелгән. □ Абстрактный, отвлечённый. *Абстракт төшөнсә. Абстракт фекер. Абстракт сәнғәт. Абстракт исем.* ■ *Мәкәлдең халыҡ ижадының бер тармағы булып формалашыуы, ихтимал, тәүтормош община ҡоролошоноң һуңғырак баҫҡыстарында, кешеләрҙең абстракт фекерләү һәләте шаҡтай юғары кимәлгә күтәрелгән дәүеренә тура килә.* Ф. Нәҙершина. *Әллә ниндәй абстракт уйҙар маҙалағанда, Мөхәббәттең үҙе менән түгел, ә уның хаҡындағы тәғлимәттәр менән мауыҡҡанда, ысынбарлыҡтан нисек тә ҡасып ҡотолорға, алдаҡ офоҡтарға булһа ла әүрәргә, күҙеңде бәйләргә, аңыңды аҙаштырырға маташҡанда, хөрмәтле замандашым, Флүзәнең «Мөғжизәле донъям»ына ин.* «Башҡортостан», 30 сентябрь 2010.

**АБСТРАКТ II** (Р.: абстрактно; И.: in the abstract way; Т.: soyut bir biçimde) *р.*

Ситләтеп; реаль факттарға нигеҙләнмәйенсә. □ Абстрактно. *Абстракт фекерләү.*

**АБСТРАКТЛАШТЫРЫУ (абстрактлаштыр-)** (Р.: абстрагировать; И.: abstract; Т.: soyutlamak) *к.*

Берәй нәмәне йәки күренеште айырым сифат һәм бәйләнештәренән ситләштереү. □ Абстрагировать. // Абстрагирование, абстракция.

**АБСТРАКТЛАШЫУ (абстрактлаш-)** (Р.: абстрагироваться; И.: abstracting; Т.: soyutlaşmak) *к.*

Берәй нәмәнең йәки күренештең айырым сифат һәм бәйләнештәренән ситләшеүе. □ Абстрагироваться. // Абстрагирование.

**АБСТРАКТ ТӨШӨНСӘ** (Р.: абстрактное понятие; И.: abstract concepts; Т.: soyut kavramlar) *и. фәлс.*

Абстракцияның иң юғары формаһы. □ Абстрактное понятие.

**АБСТРАКЦИОНИЗМ** [рус. < лат. *abstractio*] (Р.: абстракционизм; И.: abstractionizm; Т.: soyutçuluk) *и.*

XX быуатта һынлы сәнғәттә барлыҡҡа килеп, ысын донъяны тик абстракт рәүештә һүрәтләгән үтә формалистик ағым. □ Абстракционизм *(направление в живописи, скульптуре, графике XX в., последователи которого воспроизводят реальный мир в виде отвлечённых форм, цветовых пятен, линий и т. п.). Абстракционизм ағымы.*

**АБСТРАКЦИОНИСТ** [рус.] (Р.: абстракционист; И.: abstractionist; Т.: soyutlamacı) *и.*

Абстракционизм юлынан барыусы. □ Последователь абстракционизма. *Абстракционист рәссам.*

**АБСТРАКЦИОНИСТИК** (Р.: абстракционистский; И.: abstract; Т.: soyut) *с.*

Абстракционизмға нигеҙләнгән. □ Абстракционистский. *Абстракционистик картина.*

**АБСТРАКЦИЯ I** [рус. < лат. *abstractio*] (Р.: абстракция; И.: abstraction; Т.: soyutlama) *и. фәлс.*

**1.** Танып белеү эшмәкәрлегендә предмет йәки күренештең мөһим, тәбиғи билдәләрен асыҡлау маҡсатында мөһим булмаған билдәләренән, үҙенсәлектәренән, бәйләнештәренән ситләшеп уйлау; абстрактлаштырыу. □ Абстракция.

**2.** Предметты уның үҙенсәлектәренән йәки бәйләнештәренән айырып һүрәтләү. □ Абстракция. ■ *Рәссам үҙ фантазияларында көндәлек ығы-зығыһынан юғары күтәрелеп ысынбарлыкты кире ҡаға, реаль формаларҙы биргәндә үтә лә ябай һүрәттәргә йәиһә бөтөнләй абстракцияға бирелә ала.* «Салауат», № 76, 2011.

**3.** Көндәлек тормошта, ғәмәлдә булмаған, хыялда ғына йәшәгән төшөнсә. □ Абстракция. *Ғилми абстракция.*

**АБСТРАКЦИЯ II** [рус. < лат. *abstractio*] (Р.: абстракция; И.: abstraction; Т.: soyutlama) *и. һөйл.*

Абстракционизмға, абстракт сәнғәткә ҡараған әҫәр. □ Абстракция.

**АБСУРД I** [рус. < фр. *absurde* < лат. *absurdus* ‘аңлашылмай торған, мәғәнәһеҙ’] (Р.: абсурд; И.: absurdity; Т.: saçma) *и.*

Аҡылға һыймаҫлыҡ мәғәнәһеҙ нәмә; мәғәнәһеҙлек. □ Абсурд. ■ *Әгәр империя минең реформаларымды ҡабул итһә, ул үҙүҙен ҡарай, йәғни дүрт ярым быуат автоном йәшәй аласаҡ һәм 20 йыл һайын халҡы ике тапҡырға артасаҡ, тигән. Күптәр быны абсурд, ти.* «Киске Өфө», 11 май 2011.

**АБСУРД II** (Р.: абсурдный; И.: absurd; Т.: saçma) *с.*

Мәғәнәһеҙ. □ Абсурдный. *Абсурд һүҙ һөйләү. Абсурд һығымта яһау.* ■ *Әлбиттә, был йәһәттән яйлы хәрәкәтте тура мәғәнәлә аңлап, ҡуҙғалып китеүҙе һәм туҡталыуҙы абсурд хәленә төшөрөү ҙә кәрәкмәй, ҡайһы сакта яйлылыҡ зарарлы ла, хатта хәүефле лә булыуы ихтимал.* «Йәшлек», 30 июль 2009.

**АБСУРДЛЫҠ (абсурдлығы)** (Р.: абсурдность; И.: absurdity; Т.: saçmalık) *и.*

Аҡылға һыймаҫлыҡ нәмә, мәғәнәһеҙлек. □ Абсурдность. *Фекер абсурдлығы. Абсурдлыҡ менән таң ҡалдырыу.*

**АБСУРД ТЕАТРЫ** (Р.: театр абсурда; И.: Theatre of the Absurd; Т.: Uyumsuz Tiyatro) *и.*

Көнбайыш Европа драматургияһында һәм театрҙа XX быуаттың икенсе яртыһында барлыҡҡа килгән, донъяны хаос рәүешендә, ә кешеләрҙең эштәрен мәғәнәһеҙ итеп һүрәтләгән йүнәлеш. □ Театр абсурда.

**АБСЦЕСС** [рус. < лат. *abscessus*] (Р.: гнойная опухоль; И.: abscess; Т.: abse) *и. мед. ҡар.* **эренле шеш.** *Баш мейеһе абсцесы. Һөйәк абсцесы. Үпкә абсцесы.*

**АБУ** [ғәр. آبو] (Р.: отец; И.: abu; Т.: abu) *и.*

Атаһы *(урта быуаттарҙа теге йәки был шәхестең улы исеме алдында ҡушымта булып килгән).* □ Отец *(в средние века добавлялся к именам людей, отчество). Абуталип. Абулкасим Фирҙәуси.*

**АБУНА** [фарс. ابونه] (Р.: абонемент; И.: subscription; Т.: abonman) *и. иҫк.*

**1.** Берәй нәмәнән *(театрҙан, бассейндан, китапхананан һ.б.)* ваҡытлыса файҙаланыу өсөн алдан алынған хоҡуҡ һәм шул хоҡуҡты раҫлаған документ. □ Абонемент.

**2.** Газета, журнал, китап алдырыу өсөн алдан яһалған килешеү; яҙылыу. □ Подписка.

**АБУНАСЫ** (Р.: абонент; И.: subscriber; Т.: abone) *и. иҫк.*

**1.** Абонементҡа (1) эйә булған кеше. □ Абонент.

**2.** Газета, журнал, китапты алдан яҙылып алдырыусы кеше. □ Подписчик. *Абуна ҡабул итеү.* ■ *«Һабан» журналы*

*«Башкортостан» газетаһының йыллык абунасыларына бушлай ебәрелеп торҙо.* Т. Йәнәби.

**АБУРКА** [рус. *оборка*] (Р.: оборка; И.: frill; Т.: farbala) *и. диал.*

**1.** Бала итәк; ҡатмар. □ Оборка. *Күлдәкте абурка ҡуйып тегеү.* ■ *Фәрхиә абурҡаһын артҡа ҡыҫтырып, кирбес биреп торҙо.* Х. Ғиләжев.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡатлансыҡ II.** *Һыйыр абурҡаһы. Һарыҡ абурҡаһы.*

**АБУ ХӘЙАТ** [фарс. < ғәр. اب حيات] *и. ҡар.* **әбелхәйәт**.

**АБХАЗ** (Р.: абхазец; И.: Abkhazian; Т.: Abhaz) *и.*

Абхазияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе *(иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Абхазец. *Абхаз халҡы.* ■ *Статистик бюллетендән күренеүенсә, беҙҙең районда бөтәһе 6 абхаз, 7 авар, 78 әзербайжан йәшәй.* «Урал», 28 ғинуар 2010.

**АБХАЗСА** (Р.: по-абхазски; И.: in Abkhazian; Т.: Abhazca) *р.*

**1.** Абхаз телендә. □ По-абхазски. *Абхазса белеү. Абхазса уҡыу. Абхазса һөйләү. Абхазса яҙыу.* ■ *Көньяҡ Осетия менән Абхазстандағы (абхазса ул ил Апш тип йөрөтөлә) операциянан аҙаҡ армияның абруйы бермә-бер күтәрелеп китте.* «Йәшлек», 23 сентябрь 2008.

**2.** Абхаздарға хас. □ Свойственный абхазам.

**АБЫҘБАБАЙ** *и. диал. ҡар.* **абыз-бабай**.

**АБЫҘИНӘЙ** (Р.: тётя; И.: aunt; Т.: teyze) *и. диал.*

**1.** Атайҙың йәки әсәйҙең оло апаһы. □ Старшая сестра отца или матери.

**2.** Атайҙың бер туған ағаһының ҡатыны. □ Жена старшего брата отца.

**АБЫҘӘНЕЙ** (Р.: повитуха; И.: midwife; Т.: ebe) *и. диал.*

**1.** Баланы ҡабул итеп, кендеген ҡырҡҡан ҡатын-ҡыҙ. □ Повитуха. ■ *Улан артын абыҙәней ергә күмеп ҡуя.* Ф. Хисамитдинова.

**2.** Атайҙың йәки әсәйҙең оло апаһы. □ Старшая сестра отца или матери.

**3.** Атайҙың бер туған ағаһының ҡатыны. □ Жена старшего брата отца.

**АБЫҘӘНКӘЙ** (Р.: тётушка; И.: aunt; Т.: teyze) *и. диал.*

Атайҙан йәки әсәйҙән оло ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. □ Тётушка *(обращение к женщине, которая по возрасту старше родителей).*

**АБЫҘӘТӘЙ** (Р.: дядя; И.: word used to address elder brothers; Т.: amca) *и. диал.*

**1.** Атайҙың йәки әсәйҙең оло ағаһы. □ Старший брат отца или матери.

**2.** Уҡымышлы оло ир кешегә өндәшеү һүҙе. □ Почтительное обращение к пожилому просвещённому мужчине.

**АБЫЗ** (Р.: просвещённый человек; И.: Moslem scholar; Т.: aydın kişi) *и. иҫк.*

**1.** Уҡымышлы, белемле кеше. □ Просвещённый и почитаемый человек. *Абыз кеше.* ■ *Килмәк абыз башҡа ваҡыттарҙа ла мәҙрәсәгә бик һирәк керә торған ине.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал. ҡар.* **абызбабай**.

**3.** *диал. ҡар.* **им-томсо.**

**АБЫЗБАБАЙ** (Р.: дядя; И.: word used to address elder brothers; Т.: amca) *и. диал.*

Атайҙың йәки әсәйҙең оло ир туғанына өндәшеү һүҙе. □ Обращение к старшему брату отца или матери.

**АБЫЗЫЙ** *и. диал. ҡар.* **ағай.**

**АБЫЗӘБЕЙ** (Р.: обращение к пожилым женщинам; И.: word to address elderly women; Т.: nine) *и. диал.*

**1.** Өлкән ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. □ Форма обращения к пожилым женщинам.

**2.** Атайҙың бер туған ағаһының ҡатыны. □ Жена старшего брата отца.

**3.** Уҡымышлы оло ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. □ Почтительное обращение к пожилой просвещённой женщине.

**АБЫЗӘБЕКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **инәй.**

**АБЫЗӘБКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **өләсәй**. ■ *Абызәбкәй, абызәткәй — өләсәй, олатай тигәнде аңлата.* Экспедиция материалдарынан.

**АБЫЗӘТКӘЙ** *и. диал. ҡар.* **олатай.**

**АБЫЙ** [дөйөм төрки] (Р.: дядя; И.: brother; Т.: ağabey) *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **ағай.**

**2.** Атайҙың йәки әсәйҙең ағаһы. □ Дядя *(старший брат отца или матери).*

**3.** Ир уҡытыусыларға өндәшеү һүҙе. □ Обращение к учителям-мужчинам.

**АБЫНА-ҺӨРЛӨГӘ** *р. ҡар.* **абына-һөрөнә.** ■ *Ул да булманы, Пётр машинанан һикереп төштө лә, һаҡсы һалдаттарҙы ситкә этеп, шул тауышҡа ташланды, «Клара, мин бында!» — тип ҡысҡырып, абына-һөрлөгә йүгергән ҡатынын ҡосаҡлап алды.* Ә. Хәкимов.

**АБЫНА-ҺӨРӨНӘ** (Р.: спотыкаясь; И.: stumbling; Т.: tökezleyerek) *р.*

Йығыла яҙып; әләгә-төртөлә. □ Спотыкаясь. ■ *Кәҙеретдинов, бөтә олпатлығын онотоп, абына-һөрөнә ҡустыһы янына йүгерҙе.* Ф. Исәнғолов. *Оло ҡатын, ауыҙын ҙур итеп асып, абына-һөрөнә тышҡа йүгереп сыҡты, ти.* Әкиәттән. *Ярайһы уҡ таҡыр ат юлы ла әллә ни тигеҙ түгел икән, абына-һөрөнә атлата.* Д. Шәрәфетдинов. *Әсәләренә эйәреп, куртҡалары тышынан кейеп алған «фирма» футболкаларының итәгенә абына-һөрөнә йүгергән сабыйҙарға, тертәңләп кенә юртаҡлап барған инәйҙәргә ҡарап, спорттың, ысынлап та, халыҡсан булыуына инаныу ауыр түгел ине.* «Йәшлек», 23 сентябрь 2008.

**АБЫНДЫРЫУ (абындыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **абыныу**. *понуд. от* **абыныу**.

**АБЫНЫУ-ҺӨРЛӨГӨҮ (абын-һөрлөк-)** (Р.: спотыкаться; И.: stumble; Т.: tökezlemek) *ҡ.*

Атлағанда ҡолай яҙып, әләгеп төртөлөү. □ Спотыкаться, оступаться. ■ *Күк толпар абынып-һөрлөгөп китте лә, Маянһылыу осоп төшөп ҡалды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**АБЫНЫУ-ҺӨРӨНӨҮ (абын-һөрөн-)** (Р.: постоянно спотыкаться; И.: stumbling constantly; Т.: tökezlemek) *ҡ.*

Атлағанда әләгеп-төртөлөп йығыла яҙыу. □ Постоянно спотыкаться. ■ *Абынып-һөрөнөп, коридор буйлап ҡолап, тиккә генә йөрөмәгәнһең икән.* Н. Ҡәрип.

**АБЫНЫУ (абын-)** (Р.: спотыкаться; И.: stumble; Т.: tökezlemek) *ҡ.*

**1.** Күрмәй килеп, ерҙәге нәмәгә аяҡ менән төртөлөү; әләгеү, һөрлөгөү. □ Спотыкаться. ■ *Собханалла, машалла! Хоҙайҙың асы кәһәре һуҡҡыры! — тине ул [карсыҡ], буҫағаға абынып.* М. Кәрим. *Бай егет был хәбәрҙе ишетә лә тағы китә. Эй бара был, эй бара. Килә торғас, ташҡа абынып йығыла.* Әкиәттән. *Күпме генә серәшеп алға ынтылмаһын, быуындары йомшап, тигеҙ ерҙә абына ла китә Ирназар.* Ә. Хәкимов. ● *Берәү бар — абынғанға аяҡ сала, берәү бар — йығылғанда тотоп ала.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Хата эш эшләү, хаталаныу, яңылышыу. □ Ошибаться, спотыкаться. ■ *Имгәк кенә түгел, яман ғибрәт, ике аҙымдың берећен абынды. Бар тормошо уның хата булды, ялған пәйғәмбәргә табынды.* М. Кәрим. ● *Бер абынған соҡорға ике абынмайҙар.* Мәҡәл.

**АБЫРАЗА** [рус. *образа*] (Р.: икона; И.: icon; Т.: ikon) *и. диал.*

Тәре, икона. □ Икона, образ. ■ *Нимә абыраза шикелле ҡаттығыҙ? Исмаһам, ҡапҡаны аса тороғоҙ!* Я. Хамматов.

**АБЫРАТ** [рус.] (Р.: обрат; И.: skim milk; Т.: yağsız süt) *и. диал.*

Сепараттан сыҡҡан һөт. □ Обрат. ■ *Абыратты ҡайнатып ҡатыҡ эшләйҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**АБЫСТАЙ** [ғәр. حافظ ‘Ҡөрьәнде яттан белеүсе’] (Р.: религиозно грамотная женщина; И.: literate woman; Т.: okuma-yazma bilen kadın) *и.*

**1.** Дини белемле ҡатын. □ Религиозно грамотная женщина. ■ *Камила абыс-*

*тай, сынаяғын түңкәреп амин тотто ла, ойоған аяктарын көскә һөйрәп, ғәҙәттәгенән нығырак аҡһаклап, йоко булмәһенә инеп бикләнде.* Т. Ғарипова.

**2.** Дин әһеленең ҡатыны. □ Супруга служителя культа, обычно муллы. ■ *Таиба әбей башка йылдарҙа корбан ашына иң тәүҙә Ғаббас мулланы, абыстайҙары менән мәзинде саҡырып ала торғайны.* З. Биишева.

**3.** *диал.* Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙға өндәшеү һүҙе. □ Форма обращения к пожилой женщине.

**4.** *диал.* Атайҙың йәки әсәйҙең оло апаһы. □ Старшая сестра родителей.

**5.** *диал. ҡар.* **апай 1.**

**АБЫСТАЙ АШЫ** (Р.: изысканное блюдо; И.: regale; Т.: mükellef ziyafet) *и. диал.*

Тәмле, нәзәкәтле ашамлыҡ. □ Изысканное блюдо.

**АБЫСТАЙ БУРАНЫ** (Р.: буран; И.: snowstorm; T.: kar fırtınası) *и. диал.*

Иҫкесә апрель башындағы буран. □ Буран в начале апреля *(по старому стилю). Абыстай бураны көслө була.*

**АБЫШҠА** [боронғо төрки *абучка*] (Р.: вдовец; И.: widower; T.: dul erkek) *и.*

**1.** Тол ир. □ Вдовец. ■ *Аҡ куяндың балаһы кереп китте камышка. Атайымдың биргән ире — кейәү тиһәм, абышка.* Сеңләүҙән.

**2.** Оло йәштәге ир *(үҙ катынына карата).* □ Старый муж *(муж, который намного старше жены).* ■ *[Бисәләр:] Үҙенең абышкаһының башына етте бит. Кешенекен һалдырып алырға уйлайҙыр инде.* Я. Хамматов. *[Йәнбикә:] Үҙең ғәйепле. Абышкаңды ҡатырак тотмайһың.* С. Кулибай. ● *Аптыраған катын абышкаһын атай тигән.* Әйтем.

**3.** *кәмһ.* Ирекәй. □ Мужичок, мужчинка. ■ *Килмәй хатта Сурағоло, хатта теге абышка, сөнки улар кул һелтәгән демографик торошка.* М. Ямалетдинов.

**4.** *диал.* Ҡатын айырған ир. □ Разведённый мужчина.

**АВАНГАРД I** [рус. < фр. *avant — garde*] (Р.: авангард; И.: advance guard; T.: öncü) *и.*

**1.** *хәрб. ҡар.* **алғаҫҡы**. ■ *Ҡыҙыл ракетаның һауаға күтәрелеүе булды, дивизияның авангарды — 275-се полктың һалдаттары һәм командирҙары ауыл янына барып та сыктылар.* Ә. Ихсан.

**2.** *күсм.* Йәмғиәттең алдынғы, етәксе өлөшө. □ Авангард. ■ *Уны күреү менән ниңәлер үҙенең шиғыр юлдары ҡылт итеп иҫкә төштө: «Рядовой Кәримов, өс аҙым алға сык, авангардта барасаҡһың юл асып!» Ысынлап та, биш тиҫтә йыл буйына шағир Мостай Кәрим башҡорт әҙәбиәтендә авангардта юл асып барҙы.* «Йәшлек», 23 октябрь 2008. *Авангардта барһаң әгәр юл асып, артка кара — калғандарың бөтмәгәндәрме ҡасып?* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**АВАНГАРД II** [рус. < фр. *avant — garde*] *с. ҡар.* **алдынғы II, 1, 2**. *Авангард отряд. Авангард роль.*

**АВАНГАРД III** (Р.: авангард; И.: avant-gard; T.: öncü akımı) *и.*

XIX, XX быуаттарҙа Европа сәнғәтендә барлыҡҡа килгән йүнәлештәрҙең дөйөмләштерелгән атамаһы. □ Авангард *(обобщающее название течений в европейском искусстве, возникших на рубеже XIX и XX веков).*

**АВАНГАРДИЗМ** [рус. < фр. *avant gardisme*] (Р.: авангардизм; И.: avant-gardism; T.: öncü akımı) *и.*

**1.** *Ниндәйҙер* ижтимағи төркөмдөң өҫтөнлөк алырға ынтылышы. □ Авангардизм.

**2.** XX быуат сәнғәтендә ысынбарлыҡтан ситләшеп, яңы һүрәтләү сараларын һәм формаларын эҙләү хас булған ҡайһы бер йүнәлештәрҙең дөйөм атамаһы. □ Авангардизм.

**АВАНГАРДИСТ** [рус.] *и. ҡар.* **авангардсы.**

**АВАНГАРДЛЫҠ (авангардлығы)** (Р.: авангардизм; И.: avant-gardism; T.: öncü akımı) *и.*

Алдынғы отряд, яңыртылған сәнғәт йүнәлешенең шартлы атамаһы *(XIX, XX бб.*

*ҡайһы бер рәссамдарҙың сәнғәттәге тоторокло принциптар һәм традицияларҙы, шулай уҡ реализмды ҡабул итмәй, йөкмәткеһе буйынса яңы формалар эҙләү, яңы саралар ҡулланып, художестволы образдарҙы символизм йүнәлешендә биреү).* □ Авангардизм. *Авангардизм йүнәлеше.*

**АВАНГАРДСЫ** (Р.: авангардист; И.: avant-gardist; Т.: öncü) *и.*

Авангард йүнәлешендә ижад итеүсе. □ Авангардист. ■ *Бөгөн башҡорт профессиональ музыкаһының йүнәлештәре байтаҡ, шуларҙың бер осонда авангардсылар, икенсеһендә — традиция яҡлылар.* «Йәшлек», 9 февраль 2010.

**АВАНПОСТ** [рус. < фр. *avant poste* ‘алғы урындар’] (Р.: аванпост; И.: outpost; Т.: ileri karakol) *и.*

Дошмандың һиҙҙермәҫтән һөжүм итеүен булдырмаҫ өсөн алға ҡуйылған һаҡ. □ Аванпост. *Аванпост ҡуйыу.*

**АВАНС** [рус. < фр. *avance, avancer* ‘алдан аҡса биреп ҡуйыу’] (Р.: аванс; И.: advance payment; Т.: avans) *и.*

**1.** Эш хаҡының алдан түләнгән өлөшө. □ Аванс. *Аванс түләү. Аванс биреү. Аванс рәүешендә. Максатлы аванс.* ■ *Ризыҡ барҙа килеп шәп иттегеҙ. Ҡартым кисә генә утыҙ тин аванс алып ҡайтты.* Я. Хамматов. *Ғүмер буйы шулай, эш-эш, тиеп, теше төштө беҙҙең быуындың. Аванстан авансҡа тиклем билдәребеҙ биштән быуылған.* Р. Шәкүр.

**2.** Киләсәктә аҡланылырға тейешле *кемгәлер* күрһәтелгән ышаныс. □ Аванс *(доверие, оказанное кому-л. заранее, которое необходимо оправдать в будущем).*

**АВАНСЛАУ (авансла-)** (Р.: авансировать; И.: advance money; Т.: avans vermek) *ҡ.*

Эш хаҡының бер өлөшөн алдан түләү. □ Авансировать. // Авансирование. *Эште авансла*у.

**АВАНС ТҮЛӘҮЕ** (Р.: авансовый платёж; И.: down payment; Т.: peşinat) *и.*

Тауарҙы, хеҙмәтте алғанға йәки башҡарғанға тиклем алдан түләү. □ Авансовый платёж. ■ *Фиксацияланған аванс түләүен сит ил гражданы йәшәгән (килгән) урыны буйынса түләй.* «Йүрүҙән», 5 апрель 2011.

**АВАНСЦЕНА** [рус. < фр. *avant scene*] *и. ҡар.* **сәхнә алды.** *Авансценаға сығыу.*

**АВАНТИТУЛ** [рус. < фр. *avant* ‘алда’ + лат. *titulus* ‘яҙыу, башлыҡ’] (Р.: авантитул; И.: foretitle; Т.: kitabın başındaki sayfa) *и. полигр.*

Титул бите алдынан нәшриәт, китап исеме яҙылған бит. Китаптың тәүге бите. □ Авантитул. *Авантитулда яҙыу.*

**АВАНТЮРА** [рус. < фр. *aventure* < польск. *awantura* < лат. *advenire, adventura* ‘килеп сығыу’] (Р.: авантюра; И.: adventure; Т.: macera) *и.*

Барып сығыуы шикле булған, тәүәккәллеккә генә ҡоролған, еңел уңышҡа иҫәп тотоп башланған ышаныслыҙ эш. □ Авантюра. *Хәрби авантюра. Сәйәси авантюра.* ■ *Атаһы ла авантюраға әүәҫ ине, бер мәлде, 102 йәшлек олатаһының инерлесығырлы аҡылына ышанып, шул тирәләге ҡалҡыулыҡтарҙы ҡаҙып-аҡтарып бөттө шул Зәхмәт, ҡушаматы мас ҡына үҙенә.* Г. Яҡупова.

**АВАНТЮРАЛЫ** (Р.: авантюрный; И.: adventurous; Т.: maceracı) *с.*

Ҡотҡоға ҡоролған, еңел уңышҡа иҫәп тотоп башланған эш. □ Авантюрный. *Авантюралы план.*

**АВАНТЮРАСЫ** (Р.: авантюрист; И.: adventurer; Т.: maceracı) *и.*

Авантюра менән шөғөлләнгән кеше. □ Авантюрист.

**АВАНТЮРИЗМ** [рус. < фр. *aventure*] (Р.: авантюризм; И.: adventurism; Т.: maceraperestlik) *и.*

Авантюраға әүәҫлек. □ Авантюризм.

**АВАНТЮРИН** [рус. < фр. *aventurine*] (Р.: авантюрин; И.: aventurine; Т.: yıldız taşı) *и. мин.*

Эсендә яҡтылыҡ аҫтында ялтыраған һары слюда бөртөктәре булған ҡыҙыл төҫтәге кварц төрө. □ Авантюрин.

**АВАНТЮРИСТ** [рус.] (Р.: авантюрист; И.: adventurer; Т.: maceraperest) *и.*

Авантюра менән шөғөлләнеүсе принципһыҙ кеше. □ Авантюрист.

**АВАНТЮРИСТИК** (Р.: авантюристический; И.: adventurist; Т.: maceracı) *с.*

Авантюраға ҡоролған. □ Авантюристический, авантюристский. *Авантюристик лозунг.*

**АВАР I** (Р.: аварец; И.: Avar; Т.: Avar) *и.*

Дағстанда йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың кешеһе *(иберий-кавказ телдәренең береһендә һөйләшә).* □ Аварцы, аварец, аварка. *Авар халкы. Авар ҡатыны. Авар теле.* ■ *Ә бына йылы яҡтарҙа, Кавказда чечендәр, ингуштар, аварҙар, осетиндар ҡаҡлап киптерелгән итте күптән үҙ иткән.* «Торатау», № 97, 2010.

**АВАР II** (Р.: авары; И.: the Avars, Avar; Т.: Avar) *и. тар.*

VI быуатта Дунай буйҙарына килеп, VIII быуат аҙағына тиклем шунда дәүләт булып йәшәгән төрки ҡәбиләләр вәкиле. □ Авар, авары. *Авар ҡағанаты.*

**АВАРИЯ** [рус. < фр. *avarie* ‘ватылыу’] (Р.: авария; И.: accident; Т.: kaza) *и.*

Хәрәкәттәге машинаның, механизмдың һ.б. боҙолоуы, һәләкәткә осрауы; һәләкәт. □ Авария. *Аварияға осрау. Авария сертификаты. Сәнәғәт аварияһы.* ■ *Авария урынына ГАИ хеҙмәткәрҙәре килеп еткәнсе, Әбүбәкерҙе шаһит буларак ебәрмәнеләр.* Т. Ғарипова. *Дәүләт автоинспекцияһы тарафынан күрелгән иҫкәртеү саралары юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырыуға, аварияларҙың ауыр эҙемтәләрен кәметеүгә булышлыҡ итә.* «Башҡортостан», 30 ноябрь 2010.

**АВАРИЯ БРИГАДАҺЫ** (Р.: аварийная бригада; И.: crash team; Т.: acil durum ekibi) *и.*

Авария ваҡытында ярҙамға килгән, аварияны бөтөрөү эшен башҡарған бригада. □ Аварийная бригада. ■ *Юл ремонт-төҙөлөш участкаһы быйылғы ташҡынға тейешенсә әҙерләнгән. Ике авария бригадаһы ойошторолоп, уларға кеүәтле техника беркетелгән.* «Ейәнсура таңдары», № 100, 2011.

**АВАРИЯ МАШИНАҺЫ** (Р.: аварийная машина; И.: crash vehicule; Т.: acil tamir arabası) *и.*

Аварияның һөҙөмтәһен бөтөрөү өсөн тәғәйенләнгән махсус машина. □ Аварийная машина.

**АВАРИЯ ХЕҘМӘТЕ** *и. ҡар.* **авария бригадаһы.**

**АВАТАР** [рус. < ингл. *avatar*] (Р.: аватар; И.: avatar; Т.: avatar) *и. инф.*

Интернет селтәрендә виртуаль аралашыуҙа ҡулланыусының график һүрәте йәки фоторәсеме. □ Аватар, аватара.

**АВГУСТ** [рус. < лат. *augustus* ‘изге’] (Р.: август; И.: August; Т.: Ağustos) *и.*

Календарь йылдың һигеҙенсе айы; урағай. □ Август. *Август кәңәшмәләре.* ■ *Август айы — сәскәле ай, емешкә бай мәл.* Я. Ҡолмой. *Август ҡырҙа ең һыҙғанып, урак башлай торған ай.* М. Ишбулатов. *Был ваҡиғанан һуң аҙна-ун көн үттеме-юкмы, ҡараңғы август кистәренең береһендә Мөхәмәтша аҙбар артына сыккайны, кемдеңдер үҙенә бышылдап ҡына өндәшеүен ишетеп ҡалды.* М. Хужин. ● *Августа урак ҡыҙа, һыу һыуына.* Һынамыш. *Август — көҙ бағыр.* Әйтем. *Августа көндәр аяҙ булһа, көҙ ямғырлы һәм бысрак булыр.* Һынамыш.

**АВЕСТА** (Р.: Авеста; И.: Avesta; Т.: Avesta) *и.*

Иран, Афғанстан халыҡтарының изге китаптары. □ Авеста. ■ *«Урал батыр» менән бергә Авеста, Ригведа кеүек киң билдәле комарткыларҙың да барлыкка килеүенә бер үк сәбәп, бер үк дәүер, бер үк тарихи шәхестәр һәм ваҡиғалар сәбәпсе булған.* «Йәшлек», 17 ноябрь 2009.

**АВИА...** [рус. < фр. *aviation* < лат. *avis* ‘ҡош’] (Р.: авиа; И.: air...; Т.: hava...)

‘Авиацион’, ‘авиацияға бәйле’ мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением ‘авиаци-

онный’, ‘относящийся к авиации’. *Авиабаза. Авиабензин. Авиабәйләнеш.*

**АВИАБАЗА** [рус. *авиационная база*] (Р.: авиабаза; И.: airbase; Т.: hava üssü) *и. авиа.*

Складтары, оҫтаханалары һәм башҡа кәрәк-яраҡтары булған аэродром. □ Авиабаза. *Авиабаза төҙөү.*

**АВИАБЕНЗИН** [рус. *авиационный бензин*] (Р.: авиабензин; И.: aviation benzine; Т.: uçak benzini) *и. авиа.*

Самолёттарға тәғәйенләнгән бензин. □ Авиабензин.

**АВИАБИЛЕТ** [рус. *авиационный билет*] (Р.: авиабилет; И.: air ticket; Т.: uçak bileti) *и. авиа.*

Самолёт йәки вертолётҡа билет. □ Авиабилет. ■ *Халыҡ-ара «Өфө» аэропорты 5 июндән электрон авиабилеттар системаһын индерҙе.* «Йәшлек», 12 июнь 2008.

**АВИАБОМБА** [рус. *авиационная бомба*] (Р.: авиабомба; И.: aerial bomb; Т.: bomba) *и. авиа.*

Самолёттарҙан ташлана торған бомба. □ Авиабомба.

**АВИАБӘЙЛӘНЕШ** (Р.: авиасвязь; И.: air communication; Т.: hava iletişimi) *и.*

Билдәле бер аралыҡта авиация ярҙамында бәйләнеш. □ Авиасвязь. *Даими авиабәйләнеш булдырыу.*

**АВИАДЕСАНТ** [рус. *авиационный десант*] (Р.: авиадесант; И.: airborne troops; Т.: hava indirme birlikleri) *и.*

Һауа десанты. □ Авиадесант. *Авиадесант төшөрөү.*

**АВИАКЛУБ** [рус. *клуб авиации*] (Р.: авиаклуб; И.: airclub; Т.: uçak kulübü) *и. авиа.*

Авиация эше менән шөғөлләнеүселәрҙе, ҡыҙыҡһыныусыларҙы берләштергән ойошма һәм шул ойошма урынлашҡан бина. □ Авиаклуб. *Авиаклуб ағзаһы. Авиаклубҡа йөрөү.*

**АВИАКОМПАНИЯ** [рус. *авиационная компания*] (Р.: авиакомпания; И.: airline; Т.: havayolları şirketi) *и. авиа.*

Пассажирҙарҙы йәки йөктәрҙе һауа юлы менән ташыу хеҙмәтен үтәгән ойошма. □ Авиакомпания. *«Арҡайым» авиакомпанияһы.* ■ *«Урал авиалиниялары» авиакомпанияһы «Өфө — Ташкент — Өфө» маршруты буйынса тура рейс аса, осоуҙар юғары уңайлыҡлы Airbus (A320) самолёттарында тормошҡа ашырыласаҡ.* «Башҡортостан», 3 декабрь 2010. *«Трансаэро» авиакомпанияһы пассажирҙарға Яңы йыл бүләге әшләне: Өфө — Мәскәү һәм Мәскәү — Өфө рейстарына 31 ғинуарға тиклем билет алыусыларға икенсе билет бер евро тарифынан сығып тәҡдим ителә.* «Йәшлек», 18 ғинуар 2011.

**АВИАКОНСТРУКТОР** [рус. *конструктор авиации*] (Р.: авиаконструктор; И.: aircraft designer; Т.: uçak tasarımcısı) *и. авиа.*

Самолёттар, вертолёттар һәм авиация двигателдәрен төҙөүсе конструктор. □ Авиаконструктор. *Авиаконструкторҙар әҙерләү.*

**АВИАЛИНИЯ** [рус. *авиационная линия*] (Р.: авиалиния; И.: airline; Т.: hava yolu) *и. авиа.*

Транспорт самолёттарының, вертолёттарының ике араға осҡан даими юлы. □ Авиалиния. ■ *«Аэрофлот — Рәсәй авиалиниялары» үҙенең пассажирҙарына йыл дауамында бушлай осоу өсөн сертификаттар тәҡдим итмәксе.* «Йәшлек», 15 ғинуар 2011.

**АВИАМОДЕЛСЕ** (Р.: авиамоделист; И.: aircraft modellist; Т.: model uçak yapan insan) *и. авиа.*

**1.** Оса торған аппарат моделдәрен уйлап табыу, яһау, осороп ҡарау менән шөғөлләнгән кеше. □ Авиамоделист.

**2.** Авиамоделдәр төҙөү спорты менән шөғөлләнгән кеше. □ Авиамоделист. ■ *Авиамоделселәр Бөтөн Союз ярыштарында ҙур уңыштарға өлгәшә, 8 тапҡыр донъя, Европа һәм бер нисә Бөтөн Союз рекорды ҡуя.* «Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия»нан.

**АВИАМОДЕЛЬ** [рус. *авиационная модель*] (Р.: авиамодель; И.: aircraft model; Т.: uçak modeli) *и. авиа.*

Оса торған аппарат моделе. □ Авиамодель. *Яңы авиамодель.*

**АВИАМӘКТӘП (авиамәктәбе)** (Р.: авиашкола; И.: aviation school; Т.: uçuş okulu) *и. авиа.*

Авиация менән шөғөлләнеүселәр мәктәбе. □ Авиашкола. *Авиамәктәп курсанты.*

**АВИАПОЧТА** [рус. *авиационная почта*] (Р.: авиапочта; И.: airmail; Т.: havayolu) *и. авиа.*

Һауа транспорты менән йөрөтөлгән почта. □ Авиапочта. *Авиапочта менән килгән хат.*

**АВИАРЕЙС** [рус. *авиационный рейс*] (Р.: авиарейс; И.: flight; Т.: uçak seferi) *и. авиа.*

Самолёттың күтәрелгән урынынан тәғәйен урынына тиклемге осошо. □ Авиарейс. *Белорет — Инйәр — Өфө авиарейсы.* ■ *3 февралдә Башҡортостан Президенты Өфө аэропортында Мысырҙан махсус авиарейс менән ҡайтҡан Башҡортостан студенттары менән осрашты.* «Башҡортостан», 4 февраль 2011.

**АВИАСӘНӘҒӘТ** (Р.: авиапромышленность; И.: aviation industry; Т.: uçak endüstrisi) *и. авиа.*

Халыҡ хужалығының авиация ҡорамалдары, самолёттар етештереү менән шөғөлләнгән тармағы. □ Авиапромышленность. *Авиасәнәғәт өлкәһендә эшләү.*

**АВИАТОР** [рус. < фр. *aviateur*] (Р.: авиатор; И.: aviator; Т.: pilot) *и. авиа.*

Осоу менән шөғөлләнгән кеше; осоусы, лётчик. □ Авиатор. ■ *Элек ҡалаға күмерселәр дан килтерһә, бөгөн уның данын авиаторҙар күтәрә.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**АВИАҺӘЛӘКӘТ** (Р.: авиакатастрофа; И.: air crash; Т.: uçak kazası) *и. авиа.*

Самолёт йәки вертолёт осҡанда булған фажиғә. □ Авиакатастрофа. *Авиаһәләкәт ҡорбаны. Донъя масштабындағы авиаһәләкәт.* ■ *Эксперттар фаразлауынса, авиаһәләкәттең сәбәбе — оҙаҡ файҙаланыуҙан самолёттың эшлектән сығыуы йәиһә двигателенең янғын һүндереү системаһында етешһеҙлектәр булыуы.* «Йәшлек», 16 сентябрь 2008.

**АВИАЦИОН** [рус. < фр. *aviation* < лат. *avis* ‘ҡош’ + *tion*] (Р.: авиационный; И.: aviation; Т.: hava) *с.*

**1.** Авиацияға бәйле. □ Авиационный. ■ *Хәҙерге ваҡытта «Өфө» Халыҡ-ара аэропорты республика халҡының һәм иҡтисадының авиацион ташыуҙарға ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә.* «Башинформ» агентлығы сайтынан, 30 сентябрь 2009.

**2.** Авиацияға хас. □ Авиационный.

**АВИАЦИЯ** [рус. < фр. *aviation* < лат. *avis* ‘ҡош’ + *tion*] (Р.: авиация; И.: aviation; Т.: havacılık) *и. авиа.*

**1.** Оса торған аппараттарҙың һауала хәрәкәтләнеү теорияһы һәм практикаһы. □ Авиация. *Авиация мәктәбе. Авиация институты. Авиация страховкалауы. Өфө дәүләт авиация техник университеты. Авиация сәнәғәте.*

**2.** Осоу аппараттары йыйылмаһы; һауа флоты. □ Авиация. *Ауыл хужалығы авиацияһы. Санитария авиацияһы. Хәрби авиация.*

**АВИЗО** [рус. < итал. *avviso*] (Р.: авизо; И.: remittance advice; Т.: tavsiye) *и.*

**1.** *фин.* Билдәле бер операцияларҙың башҡарылыуы, түләүҙәрҙең килеүе, үҙ-ара иҫәп-хисаптың үҙгәреүе тураһында килешеүҙә ҡатнашыусыларҙың контрагентҡа ебәргән официаль почта, телеграф хәбәре, белдереү ҡағыҙы. □ Авизо.

**2.** Бәләкәй карап. □ Авизо.

**АВИТАМИНОЗ** [рус. < фр. *avitaminose* < ингл. *avitaminosis* < гр. *a* + *vitamin*] (Р.: авитаминоз; И.: avitaminosis; Т.: avitaminoz) *и. мед.*

Аҙыҡта витамин етешмәгәндән барлыҡҡа килгән ауырыу. □ Авитаминоз. *Авитаминоз менән ауырыу.*

**АВРАЛ** [рус. < ингл. *over all* ‘бөтәһе лә өҫкә’] (Р.: аврал; И.: rush work; Т.: acele iş) *и.*

**1.** Карапта бөтә команда ҡатнашҡан эш. □ Аврал.

**2.** *күсм.* Бөтә коллектив менән тиҙ генә башҡарыуҙы талап иткән эш. □ Аврал. *Аврал режимында эшләү.*

**АВСТРАЛИЙ** (Р.: австралиец; И.: Australian; Т.: Avustralya) *и.*

Австралияла йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Австралиец, австралийцы. *Австралий ҡатын-ҡыҙы.*

**АВСТРИЙ** (Р.: австриец; И.: Austrian; Т.: Avusturya) *и.*

Австрияның төп халҡын тәшкил иткән милләт һәм шул милләт кешеһе. □ Австриец. *Австрий халҡы. Австрий ҡатыны.*

**АВТО... I** [рус. < фр. *automobile* 'автомобиль'] (Р.: авто...; И.: auto...; Т.: oto...)

**1.** 'Автомобиль', 'автомобилгә бәйле' мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением 'относящийся к автомобилю', 'автомобильный'. *Автобензин. Автобензовоз. Автобизнес. Автодеталь. Автокосметика. Автопокрышка. Автоприцеп. Авторалли. Автосервис.*

**2.** Берәй үҙенсәлеккә йәки тәғәйенләнешкә эйә булған автомобиль. □ Обозначает автомобиль *какого-л.* свойства или назначения. *Автофургон. Автоцистерна.*

**АВТО... II** [рус. < гр. *automatos* 'үҙенән-үҙе хәрәкәт иткән'] (Р.: авто...; И.: auto...; Т.: oto...)

**1.** 'Автомат' (1), 'автоматик' мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением 'относящийся к автомату' (1), 'автоматический'. *Автодиспетчер. Автолиния. Автопилот. Авторучка. Автотормоз.*

**2.** Үҙйөрөшлө. □ Самодвижущийся, самоходный.

**АВТО... III** [рус. < гр. *autos* 'үҙе'] (Р.: авто...; И.: auto...; Т.: oto...)

'Үҙ', 'үҙенең' мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов, обозначающих направленность *чего-л.* на самого себя; свой, собственный. *Автобиография. Автогол. Автокарикатура. Автопортрет. Автореферат.*

**АВТОБАЗА** [рус. *автомобильная база*] (Р.: автобаза; И.: motor pool; Т.: oto nakliyat ve tamir işletmesi) *и.*

Автомобилдәрҙең эшен ойошторған предприятие, шулай уҡ уларҙың тора һәм ремонтлана торған урыны. □ Автобаза. *Автобазала эшләү. Үҙәк автобаза. Автобаза диспетчеры.*

**АВТОБАН** [рус.< нем. *Autobahn* 'машина юлы'] (Р.: автобан; И.: superhighway; Т.: otoban) *и.*

Машиналар юғары тиҙлектә хәрәкәт итә торған киң юл. □ Автобан *(широкая автомагистраль для скоростного движения автомобилей). Автобан төҙөү. Автобан буйлап хәрәкәт итеү.* ■ *Австрия менән Швейцариялағы автобандарҙа тиҙлек сәғәтенә 130 км һәм 120 км-ға сикләнгән.* «Википедия» ирекле энциклопедия сайтынан.

**АВТОБИОГРАФИК** (Р.: автобиографический; И.: autobiographic(al); Т.: otobiyografik) *с.*

**1.** Автобиографияға мөнәсәбәтле. □ Автобиографический. *Автобиографик мәғлүмәт.*

**2.** Автобиография характерындағы. □ Автобиографичный. *Автобиографик һүрәтләмә. Автобиографик повесть.* ■ *Автобиографик әҫәрҙәрҙә яҙыусы үҙенең тормош юлын, индивидуаль яҙмышын тасуирлау аша билдәле бер эпоха кешеләре өсөн хас булған һыҙаттарҙы аса.* М. Ғималова.

**АВТОБИОГРАФИЯ** [рус. < гр. *autos* 'үҙе' + *bios* 'йәшәү' + *grapho* 'яҙам'] (Р.: автобиография; И.: autobiography; Т.: özgeçmiş) *и.*

Кешенең үҙ тормош юлын тасуирлаған яҙыу. □ Автобиография. *Яҙыусының автобиографияһы. Автобиография яҙыу.* ■ *Ауыл советына автобиографияма мисәт баҫтырырға бар[ҙым].* Ә. Вахитов.

**АВТОБУС** [рус. < нем. *Aubtobus* < фр. *auto* < лат. *omnibus*] (Р.: автобус; И.: bus; Т.: otobüs) *и.*

Кешеләрҙе йөрөтә торған күп урынлы автомобиль. □ Автобус. *Автобус хәрәкәте. Автобуска ултырыу. Ҡала-ара автобус. Автобус туҡталышы.* ■ *Һәм бына бер көндө элекке ауылдаштар, хәҙер ярты йылға яҡын инде ҡала кешеләре, автобуска тейәлешеп тыуған яҡтарына ҡарай юл тотто.* Ә. Әминев. *Бер көн шулай, аҙыҡ-түлек магазины янынан үтеп барғанда, ҡаланан килеүсе рейс автобусының туҡталыуын күрҙе [Сәмиғ].* Т. Ғиниәтуллин. *Автобустар булмау сәбәпле, яҡындағы ауылдарҙан, ваҡытлыса ҡоролған палаткаларҙан эшселәргә йәйәү йөрөп эшләргә тура килә.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**АВТОВОКЗАЛ** [рус. *автомобильный вокзал*] (Р.: автовокзал; И.: bus depot; Т.: otogar) *и.*

Автобустарҙағы юлсыларҙы хеҙмәтләндереүгә тәғәйенләнгән бина. □ Автовокзал. *Автовокзал кассаһы. Автовокзал перроны.* ■ *Автовокзал ығы-зығыһына өйрәнә алмайынса, Зәһүрә бер талай ширлектә ултырҙы.* Ф. Аҡбулатова.

**АВТОГЕН** [рус. < фр. *autogene*] (Р.: автоген; И.: gas welder; Т.: kaynak) *и. тех.*

Газ менән ҡырҡыу, иретеп йәбештереү ҡорамалы. □ Автоген. *Автоген менән ҡырҡыу. Автоген менән иретеп йәбештереү.*

**АВТОГОЛ** [рус. < гр. *autos* 'үҙе' + ингл. *goal* 'маҡсат, гол'] (Р.: автогол; И.: own goal; Т.: kendi kalesine gol) *и. спорт.*

Хоккей йәки футбол уйынында үҙ ҡапҡаңа индерелгән гол. □ Автогол.

**АВТОГРАФ** [рус. < фр. *autographe* < гр. *autos* 'үҙе', *grapho* 'яҙам'] (Р.: автограф; И.: autograph; Т.: imza) *и.*

**1.** Иҫтәлекле яҙыу. □ Автограф. *Яҙыусының автографы.* ■ *Лилиә менән Мария уңыштары, шәхси тормоштары тураһында һөйләне, киләсәккә пландары менән уртаҡлашты, журналистар, ҡунаҡтар һорауҙарына яуап бирҙе, автограф таратты.* «Урал», 23 октябрь 2009.

**2.** Авторҙың ҡултамғаһы. □ Автограф. *Автограф алыу. Автограф биреү.* ■ *Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте «Башҡорт китабы йорто»нда «Автографтар көнө» уҙғарҙы.* «Ағиҙел», № 4, 2010.

**3.** Авторҙың үҙ ҡулы менән яҙылған ҡулъяҙмаһы. □ Автограф. ■ *Беҙҙең ҡульяҙмалар фондында Ғ. Сокоройҙоң, М. Аҡмулланың, Ғ. Кейековтың автографтары һаҡлана.* М. Нәҙерғолов.

**АВТОГРАФЛЫ** (Р.: подписанный; И.: with an autograph; Т.: imzalı) *с.*

Автографы булған. □ Подписанный, с автографом. ■ *Әле Мәжит Ғафуриҙың беҙҙең ҡулға килеп эләккән бер хатын һәм «Күңел», ике исемһеҙ автографлы шиғырын журнал уҡыусыларына тәҡдим итәм.* Ғ. Хөсәйенов.

**АВТОДРОМ** [рус. < гр. *autos* + *dromos* 'йүгереү урыны'] (Р.: автодром; И.: motordrome; Т.: otodrom) *и.*

Автомобилдәрҙе һынау, ярыштар үткәреү өсөн йыһазландырылған урын. □ Автодром.

**АВТОИНСПЕКЦИЯ** [рус. < гр. *autos* + лат. *inspector* 'тикшереү'] (Р.: автоинспекция; И.: car inspection; Т.: trafik müfettişliği) *и.*

Автомобилдәр хәрәкәтенең дөрөҫлөгөн күҙәтеү эше һәм шуны башҡарған дәүләт органы. □ Автоинспекция. *Автоинспекция хеҙмәткәре.*

**АВТОЙЫУЫУ** (Р.: автомойка; И.: car wash; Т.: araba yıkama tesisi) *и.*

Машиналарҙы йыуыу урыны. □ Автомойка. ■ *Һыу яткылығынан алыҫ булмаған ерҙә тәүлек әйләнәһенә автойыуыу эшләй.* «Йәшлек», 10 май 2011.

**АВТОКИТАПХАНА** (Р.: автобиблиотека; И.: auto library; Т.: otokütüphane) *и.*

Автомобиль транспорты менән күсереп йөрөтөлә торған китапхана. □ Автобиблиотека.

**АВТОҠУРСАЛАУ** (Р: автоблокировка; И.: automatic blocking system; Т.: otomatik blok sistemi) *и.*

Автомобилдәрҙе ҡурсалау өсөн тәғәйенләнгән махсус автоматик система. □ Автоблокировка.

**АВТОҠУРСАЛАУ СИГНАЛЫ** (Р.: автосигнализация; И.: car alarm systems; Т.: araba alarmı) *и.*

Автомобилдәрҙе ҡурсалау өсөн тәғәйенләнгән махсус автоматик системалағы сигналдар. □ Автосигнализация.

**АВТОЛ** [рус. < ингл. *automobile oil* 'автомобиль майы'] (Р.: автол; И.: motor oil; Т.: avtol) *и.*

Нефттән алынған шыйыҡ ҡара май. □ Автол.

**АВТОМАГИСТРАЛЬ** [рус. < гр. *auto* + лат. *magistralis* 'төп'] (Р.: автомагистраль; И.: highway; Т.: otoyol) *и.*

Башҡа юлдар менән киҫешмәгән һәм ҡаршы транспорттарҙы айырыу өсөн бүлеү һыҙыҡтары үткәрелгән тиҙ йөрөшлө автомобиль юлы. □ Автомагистраль. *Ағастар ауыу сәбәпле, тимер юлда, автомагистралдә өҙөклөктәр барлыҡҡа килгән.*

**АВТОМАТ** [рус. < гр. *automatos* 'үҙе хәрәкәт итеүсән'] (Р.: автомат; И.: automatic machine; Т.: otomat) *и.*

**1.** Кеше ҡатнашлығынан тыш үҙ алдына эшләй торған аппарат, машина, прибор. □ Автомат. *Синхронлаштырыу автоматы. Тулы автомат. Юғары дәрәжәле автомат.* ■ *Ниһайәт, ул ниҙер ҡылыр хәлгә килде лә, иң тәүҙә газетаға шылтыратырға ниәтләп, автомат эҙләп китте.* Ә. Хәкимов. *Технология процестарын автоматтар башҡара.* Ғ. Сәйфетдинов.

**2.** Тиҙ ата торған еңел һуғыш ҡоралы *(автоматик винтовка).* □ Автомат. ■ *Аяҡ аҫтындағы ҡомло тупраҡ һаман артҡа тарта, ә ул уның һайын серәшеп-ныҡышып күҙ күреме ерҙә автоматын тотоп ҡуҡҡә тексәйгән улына — йөрәк майҡайына ҡан һауҙырып сит-ят ерҙә хеҙмәт иткән Дауытына талпына.* Т. Ғарипова.

**АВТОМАТИК** (Р.: автоматический; И.: automatic; Т.: otomatik) *с.*

**1.** Кеше ҡатнашлығынан тыш, үҙ алдына эшләгән. □ Автоматический. *Автоматик телефон станцияһы. Автоматик винтовка. Автоматик стабилизатор. Автоматик контроль. Автоматик станция. Автоматик үлсәү.*

**2.** Кеше ихтыярынан тыш, үҙенән-үҙе башҡарылған. □ Автоматичный, непроизвольный, машинальный. *Автоматик хәрәкәт.*

**АВТОМАТИКА** [рус.] (Р.: автоматика; И.: automatics; Т.: otomatik) *и.*

**1.** Фән һәм техниканың эш процестарын автоматлаштырыу буйынса эш алып барған тармағы. □ Автоматика. *Автоматика өлкәһендәге тикшеренеүҙәр.*

**2.** Автоматик рәүештә эшләй торған ҡорамалдар. □ Автоматика. *Автоматика ҡулланыу.*

**АВТОМАТИК ПЛАНЕТА-АРА СТАНЦИЯ** (Р.: автоматическая межпланетная станция; И.: automatic interplanetary station; Т.: otomatik gezegenlerarası istasyon) *и.*

Космос бушлығын, Айҙы, планеталарҙы тикшереү өсөн ғилми аппаратура менән йыһазландырылған пилотһыҙ осоу аппараты. □ Автоматическая межпланетная станция.

**АВТОМАТЛАШТЫРЫУ (автоматлаштыр-)** (Р.: автоматизирование; И.: automation technology; Т.: otomasyon teknolojisi) *к.*

Автоматик ысулға күсереү. □ Автоматизирование. // Автоматизация. *Етештереү процестарын автоматлаштырыу. Производствоны автоматлаштырыу.*

**АВТОМАТЛАШЫУ (автоматлаш-)** (Р.: автоматизация; И.: otomasyon; Т.: otomasyon) *к.*

Автоматик ысулға күсеү. □ Автоматизация.

**АВТОМАТИК НОМЕР АСЫҠЛАҒЫС** (Р.: автоматический определитель номера; И.: automatic number identification; Т.: otomatik numara tanımlama) *и.*

Телефон номерын автоматик рәүештә билдәләүсе система. □ Автоматический определитель номера.

**АВТОМАТИК ҺҮНДЕРГЕС** (Р.: автоматический выключатель; И.: circuit breaker; Т.: şalter) *и.*

Энергосистемаға тоташтырылған электр менән эшләүсе ҡоралмалдарҙы автоматик рәүештә һүндереү өсөн тәғәйенләнгән ҡорамал. □ Автоматический выключатель.

**АВТОМАТИК ЭҘЛӘҮ** (Р.: автоматический поиск; И: auto search; Т.: otomatik arama) *и. инф.*

Компьютерҙың автоматик рәүештә теге йәки был мәғлүмәтте, программаны эҙләүе. □ Автоматический поиск.

**АВТОМАТИК ЯУАП БИРГЕС** (Р.: автоответчик; И.: telephone answering device; Т.: telefon cevaplama aygıtı) *и.*

Телефон, телеграф линияһы буйынса абонент өсөн яуап биреүсе система. □ Автоответчик.

**АВТОМАТЛАШТЫРЫЛҒАН ИДАРА СИСТЕМАҺЫ** (Р.: автоматизированная система управления; И.: automatic control system; Т.: otomatik kontrol sistemi) *и.*

Производствола, предприятиеларҙа төрлө процестар менән идара итеү маҡсатында ҡулланылған аппараттар һәм программалар. □ Автоматизированная система управления.

**АВТОМАТСЫ** (Р.: автоматчик; И.: automated machine operator; submachine gunner; Т.: otomatikte çalışan biri) *и.*

**1.** Автомат станокта һ. б. эшләгән кеше. □ Автоматчик. *Автоматсылар бригадаһы.*

**2.** *хәрб.* Автомат менән ҡоралланған һуғышсы. □ Автоматчик. *Автоматсылар ротаһы.*

**АВТОМАТ ТЕЛЕФОН** (Р: телефон-автомат; И.: payphone; Т.: ankesörlü telefon) *и.*

Аҡса, жетон, махсус дебет йәки кредит карталары менән түләп һөйләшә торған дөйөм ҡулланылышлы телефон. □ Телефон-автомат.

**АВТОМЕХАНИК (автомеханигы)** [рус.] (Р.: автомеханик; И.: car mechanic; Т.: makineci) *и.*

Автомобилдәрҙе, машиналарҙы ҡарап йүнәтеүсе, эшләтеүсе. □ Автомеханик. *Автомеханик булып эшләү.*

**АВТОМОБИЛЬ** [рус. < фр. *automobile, auto* ‘үҙе’ + *mobilis* ‘хәрәкәтләнеүсе’] (Р.: автомобиль; И.: automobile; Т.: otomobil) *и.*

Рельсһыҙ юлдарҙа йөк һәм кеше ташый торған эске яныуға ҡоролған двигателле үҙе йөрөмәле машина. □ Автомобиль. *Бронялы автомобиль. Еңел автомобиль. Йөк автомобиле. Автомобиль сәнәғәте. Автомобиль һалымы.* ■ *«Волга». Ҡыҙ еңел һулап ҡуйҙы. Ул ошо маркалы автомобиль барлығын хәтерләне.* Н. Ғәйетбаев.

**АВТОНОМИЯ** [рус. < пол. *avtonomia* < гр. *autos* ‘үҙе’, *nomos* ‘закон’] (Р.: автономия; И.: autonomy; Т.: otonomi) *и.*

Дәүләттең эске закондар сығарыу һәм идара итеү эштәрен үҙ алдына хәл итеү хоҡуғы. □ Автономия. *Дәүләт автономияһы. Автономия алыу. Автономия биреү. Милли автономия. Сикләнгән автономия.* ■ *Ниһайәт, Совет хөкүмәте Башкорт автономияһын танырға әҙерлеген һәм Ҡыҙыл Армия составында үҙ аллы башкорт хәрби частарын булдырыуға ризалығын белдергәс, 1919 йылдың 18 февралендә Башкорт хөкүмәте һәм Башкорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыға.* Р. Насиров. *Автономиялы республикалар министрҙарының Бөтә Союз кәңәшмәһе уҙғарылды.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**АВТОНОМИЯЛЫ** (Р.: автономный; И.: autonomous; Т.: özerk) *с.*

Үҙ алдына идара итеү хоҡуғы булған. □ Автономный. *Автономиялы өлкә. Автономиялы республика.* ■ *83-сө Федераль законға ярашлы, хәҙер ҡайһы бер уҡыу йорттарын, балалар баҡсаларын автономиялы учреждение статусына күсерәләр. Тимәк, улар үҙ аллы аҡса табырға өйрәнергә тейеш.* «Башҡортостан», 12 август 2011.

**АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕ** (Р.: автономное учреждение, И.: autonomous institution; Т.: özerk bir kurum) *и.*

Үҙ аллы хужалыҡ итеүсе учреждение. □ Автономное учреждение.

**АВТОПИЛОТ** [рус. < гр. *auto* + фр. *pilote* ‘етәксе’] (Р.: автопилот; И.: autopilot; Т.: otomatik pilot) *и.*

Осоу аппараты менән автоматик рәүештә идара итә торған ҡулайлама. □ Автопилот.

**АВТОПОРТРЕТ** [рус.] *и. ҡар.* **үҙһын**. *Автопортрет төшөрөү.* ■ *Ә теге ағасты көйҙөрөп эшләгән автопортрет һуң? Тимербай ағайҙың тап үҙе түгелме ни?!* З. Биишева.

**АВТОР I** [рус. < лат. *au(c)tor* ‘яҙыусы’] (Р.: автор; И.: author; Т.: müellif) *и.*

Әҙәбиәт, сәнғәт әҫәрен, ғилми эш һ.б. ижад итеүсе кеше. □ Автор. *Авторҙар коллективы. Автор фекере. Китап авторы. Көй авторы. Опера авторы. Проект авторы. Роман авторы.* ■ *Ижадыма төрлө яклап тәрән анализ яһаған мәҡәләләр авторҙары Назар Нәжми, Әхиәр Хәким, Әмир Әминев, Юрий Андрианов, Факиһа Туғыҙбаева, Берйән Байым, Әхмәҙин Әфтәхтәргә айырата рәхмәтлемен.* М. Ямалетдинов.

**АВТОР II** (Р.: авторский; И.: author; Т.: yazar) *с. мәғ.*

**1.** Авторға бәйле. □ Авторский. *Автор кисәләре.*

**2.** Авторға хас. □ Свойственный автору.

**3.** Авторға ҡараған, авторҙыҡы. □ Принадлежащий автору.

**АВТОРАЛЛИ** [рус. < гр. *auto* + ингл. *rally* ‘йыйылыш’] (Р.: авторалли; И.: rally; Т.: ralli) *и. спорт.*

Билдәле маршрут һәм графикта авто йәки мото спорт машиналарының ярышы. □ Авторалли. *Автораллиҙа ҡатнашыу. Автораллиҙың еңеүсеһе.*

**АВТОРҘАШ** (Р.: соавтор; И.: co-author; Т.: ortak yazar) *и.*

Кем менәндер берлектә бер эштең авторы булған кеше. □ Соавтор. *Китаптың авторҙашы. Мәҡәләнең авторҙашы.* ■ *Мин Салауат Юлаевты аспирант саҡтан өйрәнә башланым. Уның тураһындағы дүрт китап авторымын, энциклопедияла авторҙаш булып торам, йөҙҙән артыҡ мәҡәләм бар.* М. Иҙелбаев. *Яҙмыш итте беҙҙе авторҙаш, яҙыу өсөн һуңғы моң-роман.* Й. Солтанов.

**АВТОРЕФЕРАТ** [рус. < гр. *autos* ‘үҙе’ + лат. *refero* ‘хәбәр итеү’] (Р.: автореферат; И.: author’s abstract; Т.: yapıtın yazarınca yazılan özeti) *и.*

Ғилми хеҙмәттең автор тарафынан яҙылған рефераты. □ Автореферат. *Диссертацияның автореферат. Авторефераттар залы. Автореферат сығарыу.*

**АВТОРИТАР** [рус. < фр. *autoritaire* ‘властлы’ < лат. *autoritas* ‘власть, йоғонто’] (Р.: авторитарный, И.: authoritarian; Т.: otoriter) *с.*

**1.** Властҡа бер һүҙһеҙ буйһоноуға нигеҙләнгән, диктатор. □ Авторитарный.

**2.** Үҙенең власын йәки авторитетын урынлаштырырға тырышҡан. □ Авторитарный.

**АВТОРИТАРЛЫҠ** (Р.: авторитаризм; И.: authoritarianism; Т.: otoriterlik) *и.*

Әхлаҡлылыҡ талаптарын бер генә абруйлы кеше күрһәтмәһе буйынса аңлауға ҡайтып ҡала. □ Авторитаризм. *Етәксенең авторитарлығы.*

**АВТОРИТЕТ** [рус. < пол. *autorytet* < нем. *Autorität* < лат. *auctoritas* ‘хоҡуҡ, йоғонто’] *и. ҡар.* **абруй**. *Авторитет яулау. Авторитетты күтәреү. Авторитетын төшөрөү. Авторитетты юғалтыу.* ■ *Сөнки уның өйәҙҙәге кабинет өҫтәле эсендәге Һамарҙан килгән «Самойлов кейәүе нәҫеле» тигән ҙур авторитет һүҙҙәрҙе эсенә алған күк конвертлы ҡыҫҡа хат уның күҙ алдынан китмәне.* Һ. Дәүләтшина. *Новиков, үҙенең шул авторитетынан файҙаланып, һуғышҡа ҡаршы булған фекерен һалдаттар араһында таратырға тотондо.* Д. Юлтый. *Басариевтың авторитеты, танышлығы булмаһа, үткән айҙа ҡаҡ таҡтаға ултырып ҡалалар ине.* Р. Солтангәрәев.

**АВТОРИТЕТЛЫ** (Р.: авторитетный; И.: authoritative; Т.: itibar sahibi) *с.*

**1.** Аҡылы, яҡшылығы менән танылған, ихтирам ителгән; абруйлы, дәрәжәле. □ Авторитетный. *Авторитетлы кеше. Авторитетлы етәксе.* ■ *Укытыусы халык алдында авторитетлы булырға тейеш.* М. Тажи. *Ниндәйҙер ижади бәхәстең осона сыға алманылар ҙа, бер-берeһенә карашкандан һуң, Мостайға төбәлделәр: «Һинең авторитетлы яуабыңды көтәбеҙ...»* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Ышаныслы, танылған. □ Авторитетный. *Авторитетлы баҫма. Авторитетлы журнал. Авторитетлы фекер.*

**АВТОРЛАШТЫРЫЛҒАН** (Р.: авторизованный; И.: authorised; Т.: yetkili) *с.*

Автор раҫлаған йәки рөхсәт иткән. □ Авторизованный. *Картинаның авторлаштырылған күсермәһе. Авторлаштырылған тәржемә.*

**АВТОРЛАШТЫРЫЛЫУ (авторлаштырыл-)** (Р.: авторизироваться; И.: authorization; Т.: yetki vermek) *к.*

**1.** Билдәле бер кешегә *ниндәйҙер* эште, процесты эшләү өсөн уның хоҡуғын тикшереү процесы. □ Авторизироваться. // Авторизация.

**2.** *инф.* Логин, пароль, электрон ҡултамға индереү менән хәүефһеҙлекте тәьмин итеү. □ Авторизироваться. // Авторизация.

**АВТОРЛЫҠ I (авторлығы)** (Р.: авторство; И.: authorship; Т.: müelliflik) *и.*

Автор сифатында хеҙмәткә, әҫәргә эйә булған хәл. □ Авторство. *Авторлыкка дәғүә итеүсе.* ■ *Өфөлә йәшәүсе рәссам һәм оҫта Вәкил Шөғәйепов, ағас курай эшләп, уйлап табыусы буларак авторлык танытмаһы алды.* «Башҡортостан», 25 август 2011. *Әлмира Талха кызы фәнни хеҙмәткә 55 йылдан артык ғүмерен арнаған. Ошо йылдарҙа 160-тан ашыу фәнни, педагогик, философик хеҙмәттәре, 5 монографияһы баҫылып сыккан. 30-ҙан ашыу фәнни асыштары производствоға индерелеүе тураһындағы авторлык танытмалары тапшырылған уға.* «Юшатыр», 22 октябрь 2009.

**АВТОРЛЫҠ II** (Р.: авторский; И.: author; Т.: yazar) *с. мәғ.*

Авторға бәйле, авторға ҡараған. □ Авторский, принадлежащий автору.

**АВТОРЛЫҠ АУҘАРМА** *и. кар.* **автор тәржемәһе.**

**АВТОРЛЫҠ ДАНА** (Р.: авторский экземпляр; И.: author's copy; Т.: yazarın kopyası) *и.*

Ике яҡтың килешеүе буйынса баҫманың авторға бушлай бирелә торған данаһы. □ Авторский экземпляр.

**АВТОРЛЫҠ КИЛЕШЕҮЕ** (Р.: авторский договор; И.: publishing agreement; Т.: yayın sözleşmesi) *и.*

Әҙәбиәт, фән, сәнғәт әҫәре буйынса авторҙың (йәки уның вариҫтарының) театр, нәшриәт, киностудия һ.б. менән төҙөгән килешеүе. □ Авторский договор.

**АВТОРЛЫҠ ХОҠУҒЫ** (Р.: авторское право; И.: copyright; Т.: telif hakkı) *и. юр.*

*Ниндәй ҙә* булһа бер фән, әҙәбиәт йәки сәнғәт әҫәрен барлыҡҡа килтереү һәм файҙаланыу *(баҫтырыу, башкарыу, күрһәтеү һ.б.)* менән бәйле мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыусы граждандар хоҡуғының бер өлкәһе; теге йәки был әҫәрҙең күсермәһен яһауға йәки ҡулланыуға рөхсәт бирмәү хоҡуғы. □ Авторское право. *Авторлык хокуғын даулау.* ■ *[23 апрель] донъяның күп илдәрендә Бөтә донъя китаптар һәм авторлык хокуғы көнө билдәләнә.* «Башинформ» агентлығы сайтынан, 23 апрель 2010. *Сайтта урынлаштырылған бөтә мәғлүмәт һәм мәкәләләр авторлык хокуғы тураһында халык-ара һәм Рәсәй закондары менән яклана.* «Шоңкар» журналы сайтынан.

**АВТОР ТАБАҒЫ** (Р.: авторский лист; И.: author's list; Т.: yazar listesi) *и.*

Автор тарафынан яҙылған йәки тәржемәсе, мөхәррир, корректор эшкәрткән материалды үлсәү берәмеге. Автор табағы 40 000 баҫма тамғаға, йәки 700 шиғыр юлына,

йәки 3000 см иллюстратив материалға *(графика, һүрәт, таблица)* тиң. Ҡағыҙә булараҡ, 1 автор табағы компьютерҙа йыйылған 10–12 биттән (12 кегль, бер интервал аша, яҡынса бер биттә 3500 тамға) тора. □ Авторский лист. *Бер автор табағы.*

**АВТОР ТӘРЖЕМӘҺЕ** (Р.: авторизованный перевод; И.: authorized translation; Т.: resmi çeviri) *и.*

Автор килешеүе буйынса йәки автор үҙе ҡарап сыҡҡан һәм хуплаған тәржемә. □ Авторизованный перевод.

**АВТОРУЧКА** [рус. *автоматическая ручка*] (Р.: авторучка; И.: pen; Т.: dolma kalem) *и.*

Эсенә ҡара тултырып яҙа торған ручка. □ Авторучка. *Перолы авторучка. Шариклы авторучка.* ■ *Егет ҡулында затлы авторучка ялт итте.* Й. Солтанов.

**АВТОСТАНЦИЯ** [рус. *автомобильная станция*] (Р.: автостанция; И.: autostation; Т.: araba istasyonu) *и.*

Ҡала, ҡала яны, ҡала-ара автобустарын, линиялағы персоналдарҙы, хәрәкәт итеүсе составты хеҙмәтләндереү, йөктәрҙе һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән биналар һәм ҡоролмалар комплексы. □ Автостанция. *Автостанцияла туҡтау. Автостанция расписаниеһы.*

**АВТОСТРАДА** [рус. < итал. *autostrada*] *и. ҡар.* **автомагистраль**. *Автострадала елдереү.*

**АВТОТОРАҠ** (Р.: автостоянка; И.: parking; Т.: otopark) *и.*

Автомобилдәрҙе ҡуйып тороу, һаҡлау өсөн махсус йыһазландырылған майҙан. □ Автостоянка. *Автотораҡ майҙансығы.* ■ *Бында [«Канаттар» торлаҡ комплексында] физкультура үҙәге, врач бүлмәһе, автотораҡ, балалар майҙансығы ла бар.* «Йәшлек», 28 февраль 2008.

**АВТОТЕЙӘГЕС** (Р.: автопогрузчик; И.: autoloader; Т.: otomatik yükleyici) *и.*

Станцияларҙа, складтарҙа, цехтарҙа йөктәрҙе тейәү, бушатыу өсөн ҡулланыла торған үҙйөрөшлө тейәү машинаһы. □ Автопогрузчик. *Автотейәгес водителе.*

**АВТОТРАНСПОРТ** [рус. *автомобильный транспорт*] (Р.: автотранспорт; И.: motor transport; Т.: motorlu taşıtlar) *и.*

Рельсһыҙ юлдарҙан автомобиль менән кешеләрҙе һәм йөктө ташыған мобиль, универсал транспорт төрө. □ Автотранспорт. *Автотранспорттың транзит хәрәкәте.* ■ *Төп иғтибар мәктәптәрҙең техник яҡтан һаҡланыуына бирелә. Беренсенән, биләмә тотош ҡойма менән уратылырға, ишек һәм ҡапҡа йоҙаҡҡа бикләнергә, ихатаға автотранспорттың инеүе сикләнергә тейеш.* «Башҡортостан», 23 август 2011. *Ниһайәт, был юлдан автотранспорттың йөрөй башлауы «Михайловка» аша үткән тимер юлындағы, Хоҙайбирҙин урамы менән Вокзал урамы киҫешкән урындағы транспорт тығындарынан арындырасаҡ.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010.

**АВТОУҘЫШ** (Р.: автопробег; И.: motor rally; Т.: ralli) *и.*

Билдәле бер маршрут буйынса спорт, тикшеренеү һ.б. маҡсат менән автоуҙыш. □ Автопробег. *Автоуҙыш үткәреү.* ■ *Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ойоштоторолоуҙың 70 йыллығына арналған «Өфө — Берлин» халыҡ-ара автоуҙышын үткәреү башланғысы менән сығыш яһаны.* «Башҡортостан», 30 март 2011.

**АВТОҮЛСӘҮ** (Р.: автовесы; И.: truck scales; Т.: kamyon terzisi) *и.*

Автомобилде йөгө менән үлсәй торған үлсәгестәр. □ Автовесы.

**АВТОХТОН** [рус. < гр. *autochthon* ‘ерле’] (Р.: автохтон; И.: indigene; Т.: yerli) *и.*

**1.** *ҡар.* **аҫаба.**

**2.** Тау тоҡомдары комплексы. □ Автохтон.

**АВТОХУЖАЛЫҠ** (Р.: автохозяйство; И.: car fleet; Т.: motor sanayı) *и.*

Автомобиль паркы һәм уларҙы эксплуатациялау менән идара итеүсе предприятие. □ Автохозяйство. *Автохужалыҡ етәксеһе.* ■ *Махсус автохужалыҡ, торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәткәрҙәре .. ҡаланың матур-*

*лығы, күркәмлеге өсөн тырышҡанда, шәхси йорттарҙа йәшәүселәрҙең ҡайһы берҙәре, уйлап та тормайынса, урамдарҙың тороһон, йөҙөн боҙа.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010.

**АВТОҺҮРӘТ** *и. ҡар.* **үҙһын.** *Автоһүрәт төшөрөү.*

**АВТОҺӘЛӘКӘТ** (Р.: автокатастрофа; И.: traffic accident; Т.: araba kazası) *и.*

Хәрәкәттәге машиналар бәрелешенән барлыҡҡа килгән фажиғә. □ Автокатастрофа. ■ *[Илһөйәр] әсәһен ерләп, етеһен уҡытыуға, Ғаяз автоһәләкәткә осраны.* Х. Тапаҡов. *Башҡортостан Республикаһында 2009 йылдың башынан ике меңгә яҡын автоһәләкәт теркәлгән, уларҙа 200-ҙән ашыу кеше һәләк булған, 2000-дән ашыуы төрлө тән йәрәхәттәре алған.* «Йәшлек», 4 июль 2009.

**АВТОҺӘҮӘҪКӘР** (Р.: автолюбитель; И.: motorist; Т.: amatör şoför) *и.*

Машина йөрөтөүсе йәки машина йөрөтөргә яратҡан кеше. □ Автолюбитель. ■ *Хөрмәтле автоһәүәҫкәр! Ошо көндән алып юлда иплерәк һәм иғтибарлыраҡ йөрөүеңде һорайбыҙ.* «Башҡортостан», 31 август 2010.

**АВТОЮЛ** (Р.: автодорога; И.: highway; Т.: otoyol) *и.*

Транспорт хәрәкәте өсөн юл бәйләнеше, юл инфраструктураһының бер өлөшө. □ Автодорога. ■ *Салауат Юлаев проспекты, Калинин районындағы Өфө — Шакша автоюлы, Киров районындағы Өфө — аэропорт автоюлын реконструкциялау һәм башҡа эштәр автомашиналарҙың каланан ситтәрәк йөрөүенә килтерҙе.* «Йәшлек», 5 июнь 2008.

**АГАҺ** [фарс. آگاه] (Р.: осведомлённый; И.: knowledgeable; Т.: bilgili) *с.*

Алдан белгән, хәбәрҙар. □ Осведомлённый. *Агаһ етәксе.*

**АГАҺЛАНДЫРЫУ (агаһландыр-)** (Р.: давать знать; И.: let know; Т.: bildirmek) *ҡ.*

Алдан белдереп, һиҙҙертеп ҡуйыу. □ Давать знать.

**АГГЛЮТИНАТИВ** (Р.: агглютинативный; И.: agglutinative; Т.: bitişimli) *с. лингв.*

Һәр бер грамматик мәғәнәнең үҙенә башҡа ялғауы булып, шуларҙы һүҙ артынан бер-бер артлы теҙеп бирә торған. □ Агглютинативный. *Агглютинатив телдәр. Башҡорт теле морфологик тибы буйынса агглютинатив телдәр иҫәбенә инә.*

**АГГЛЮТИНАЦИЯ** [рус. < лат. *agglutinare* ‘йәбештереү’] (Р.: агглютинация; И.: agglutination; Т.: yapıştırma) *и.*

**1.** *лингв.* Бер-бер артлы теҙелгән үҙ аллы ялғауҙар ярҙамында һүҙ һәм грамматик форма яһауҙан ғибәрәт күренеш *(төрки, фин-уғыр һ.б. ҡайһы бер телдәргә хас).* □ Агглютинация.

**2.** *биол.* Бактерияларҙың, эритроциттарҙың һ.б. антиген ташыусы күҙәнәктәрҙең бергә уҡмашып йәбешеүе һәм ултырма биреүе, ҡан төркөмөн билдәләүҙә ҡулланыла. □ Агглютинация.

**АГЕНТ** [рус. < нем. *Agent* < фр. *agent* < лат. *agens (agentis)* ‘хәрәкәт итеүсе’] (Р.: агент; И.: agent; Т.: ajan) *и.*

**1.** Берәй ойошманың, учреждениеның һ.б. эш башҡарыусы вәкиле. □ Агент. *Страховка агенты. Тәьминәт агенты. Һалым агенты. Экспорт агенты.* ■ *Шуға күрә Өфөнән килеүсе баш агенттарҙы Ташбатҡан ауылдары «һалабаш байҙары» тип йөрөтәләр, ә уларҙың агенты Әхмәдиҙе «бүҙрәтчик Әхмәди», тиҙәр.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *Кем* йәки *нимәнеңдер* мәнфәғәтенә хеҙмәт иткән кеше. □ Агент. *Агент операциялары.*

**3.** Сит илдә йәшерен эш алып барған кеше; шымсы. □ Агент. *Контрразведка агенты. Гестапо агенты.*

**4.** Тәбиғәттәге, организмдағы үҙгәреште булдырыусы сәбәп. □ Причина, вызывающая те или иные явления в природе, организме.

**АГЕНТЛЫҠ (агентлығы)** (Р.: агентство; И.: agency; Т.: ajans) *и.*

**1.** Берәй үҙәк ойошманың, учреждениенең урындағы аралашлыҡ йәки мәғлүмәт бүлеге. □ Агентство.

**2.** Ойошмаларҙың, шәхси кешеләрҙең йомошон үтәгән ойошма. □ Организация, выполняющая определённые поручения частных лиц, учреждений. *Туристик агентлыҡ.*

**3.** Мәғлүмәт йыйыу, эшкәртеү, тикшереү, киң мәғлүмәт сараларына, дәүләт учреждениеларына еткереү менән шөғөлләнгән ойошма. □ Агентство. *«Башинформ» мәғлүмәт агентлығы.*

**АГЕНТУРА** [рус.] (Р.: агентура; И.: agents; Т.: ajanlar) *и.*

**1.** Агент эшмәкәрлеге йәки вазифаһы. □ Агентура.

**2.** *йыйн.* Шул эштә йөрөгән кешеләр; агенттар. □ Агенты.

**АГИОГРАФИЯ** [рус. < гр. *agios* ‘изге’ + *graphein* ‘яҙыу’] (Р.: агиография; И.: hagiography; Т.: azizlerin hayat öyküsü) *и.*

«Изгеләр»ҙең тормошо тураһындағы дини әҙәбиәт. □ Агиография.

**АГИТАТОР I** [рус. < нем. *Agitator* < лат. *agere* ‘хәрәкәткә килтереү, ҡыҙыҡһындырыу, теләк тыуҙырыу, сәбәп булыу’] (Р.: агитатор; И.: agitator; Т.: propagandacı) *и.*

Өгөт алып барған кеше. □ Агитатор. *Агитаторҙар семинары. Агитатор эше.* ■ *Агитаторҙар халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып баралар.* Ғ. Үзбәков. *Агитаторҙар һайлаусыларҙы ишек төбөндә үк ҡаршы алып, һәр ҡайһыһы үҙ кандидаты тураһында мәғлүмәт таратты, программалары менән таныштырҙы, уның өсөн тауыш бирергә саҡырҙы.* «Башҡортостан», 19 август 2011.

**АГИТАТОР II** [рус. < нем. *Agitator* < лат. *agere* ‘хәрәкәткә килтереү, ҡыҙыҡһындырыу, теләк тыуҙырыу, сәбәп булыу’] (Р.: агитаторский; И.: agitator; Т.: propaganda) *с.*

Өгөт алып барыуға бәйле. □ Агитаторский.

**АГИТАЦИЯ** [рус. < лат. *agitatio* ‘хәрәкәткә килтереү’] (Р.: агитация; И.: agitation; Т.: çalkalama) *и.*

**1.** *ҡар.* **өгөтләү**.

**2.** Аңға тәьҫир итеү. □ Агитация *(воздействие на сознание).*

**АГЛОМЕРАЦИЯ** [рус. < лат. *agglomero* ‘ҡушам’] (Р.: агломерация; И.: agglomeration; Т.: toplanma) *и.*

Үҫешкән етештереү сәнәғәте, рекреацион, мәҙәни бәйләнеше булған компакт урынлашҡан ҡалалар. □ Агломерация. *Ҡала агломерацияһы.*

**АГОНИЯ** [рус. < гр. *agonia* ‘көрәш’] *и.* *ҡар.* **йәнталаш.**

**АГРАР** [рус. < лат. *agrarius* ‘баҫыуға мөнәсәбәтле’] (Р.: аграрный; И.: agrarian; Т.: tarımsal) *с.*

**1.** Ергә, ауыл хужалығына бәйле. □ Аграрный. *Аграр мәсьәлә. Аграр сәйәсәт. Аграр реформа. Аграр капитал. Аграр статистика.* ■ *Башҡортостан халҡы үҙенең ҡаһарман хеҙмәте менән башлыса аграр булған төбәкте ҡеүәтле индустриялы республикаға әйләндерҙе.* «Ағиҙел», № 7, 2010.

**2.** Игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнгән. □ Аграрный. *Аграр район.*

**АГРАР-СӘНӘҒӘТ КОМПЛЕКСЫ** (Р.: аграрно-промышленный комплекс; И.: agro-industrial complex; Т.: tarımsal-sanayi kompleksi) *и.*

Ауыл хужалығы һәм сәнәғәт тармағын үҙ эсенә алған, ауыл хужалығы тауарҙарын етештереү, уларҙы һаҡлау, эшкәртеү, ауыл хужалығын техника, ашлама менән тәьмин итеүсе комплекс. □ Аграрно-промышленный комплекс. ■ *[Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә] аграр-сәнәғәт комплексы мәсьәләләре буйынса 149 (3,4%) мөрәжәғәт ҡаралған.* «Башҡортостан», 12 июль 2011.

**АГРАТ** [рус. *ограда*] (Р.: двор; И.: courtyard; Т.: avlu) *и. диал.*

Ишек алды, кәртә алды. □ Двор. *Агратты таҙалау.*

**АГРЕГАТ** [рус. < лат. *aggregatus* ‘тоташтырылған, йыйылған’] (Р.: агрегат; И.: unit; Т.: ünite) *и.*

**1.** Дөйөм бер эш башҡарыу өсөн үҙ-ара бәйле бер нисә төрлө машинанан төҙөлгән

ҡатмарлы ҡоролма. □ Агрегат. *Сәсеү агрегаты.* ■ *Комбайн агрегаты баҫыу буйлап килә. Бункерға гәрәбә кеүек саф иген аға.* Ә. Вәли.

**2.** *Ниндәй ҙә* булһа машинаның билдәле бер эш үтәй торған ҡатмарлы өлөшө. □ Агрегат. *Конструкцияһы ҡатмарлы булған машиналар .. агрегаттарға буленә.*

**АГРЕССИВ** (Р.: агрессивный; И.: aggressive; Т.: agresif) *с.*

**1.** Агрессияға ҡоролған, нигеҙләнгән. □ Агрессивный. *Агрессив сәйәсәт. Агрессив кеше. Агрессив ағымдар.* ■ *Барыбер наркоманлыҡ, алкоголь, интернеттағы, ТВ-лағы кире күренештәр, компьютер уйындары кеүек агрессив йүнәлештәр балаларҙың психологияһына йоғонто яһай.* «Киске Өфө», 20 август 2011.

**2.** Актив, ныҡышмалы, баҫым яһап атҡарылған. □ Агрессивный. ■ *Бер кемде лә бөгөн «агрессив маркетинг сәйәсәте», «һөйләшеүҙәр алып барыуҙың агрессив стиле» тигән һүҙбәйләнештәр аптырашта ҡалдырмай.* «Башҡортостан», 11 март 2011.

**АГРЕССИЯ** [лат. *aggressio*] (Р.: агрессия; И.: aggression; Т.: saldırganlık) *и.*

**1.** Законһыҙ рәүештә көс ҡулланып, бер илдең икенсеһенә һөжүм итеүе. □ Агрессия.

**2.** Ҡурҡытыу, шантаж ярҙамында *кемгәләр* баҫым яһарға тырышыу. □ Давление, нажим с использованием шантажа, угроз.

**АГРЕССОР** [рус. < лат. *aggressor*] (Р.: агрессор; И.: aggressor; Т.: saldırgan) *и. ҡар.* **баҫҡынсы.**

**АГРО** [рус. < гр. *agros* ‘баҫыу’] (Р.: агро; И.: agro; Т.: tarımsal)

«Агрономик», «агрономия» мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов, обозначающих «агрономический», «агрономия». *Агросәнәғәт, Агрокомплекс.*

**АГРОБИЗНЕС** [рус.] (Р.: агробизнес; И.: agrobusiness; Т.: tarım ticareti) *и.*

Баҙар иҡтисадының ауыл хужалығы менән бәйле секторы. □ Агробизнес.

**АГРОБИОЛОГИК** (Р.: агробиологический; И.: agrobiological; Т.: agrobiologic) *с.*

Агробиологияға мөнәсәбәтле. □ Агробиологический. *Агробиологик фән.*

**АГРОБИОЛОГИЯ** [рус. *агро* + *биология*] (Р.: агробиология; И.: agrobiology; Т.: agrobiology) *и.*

Игенселек, үҫемлек үҫтереү һәм малсылыҡ өлкәһендәге фән тармағы. □ Агробиология.

**АГРОҒИЛЕМ** (Р.: агронаука; И.: agronomics; Т.: tarımbilim) *и.*

Ауыл хужалығы өлкәһендәге фән тармағы. □ Агронаука. *Рәсәй агроғилеме. Агроғилем тикшеренеүҙәре.*

**АГРОНОМ** [рус. < фр. *agronome* < гр. *agronomos*] (Р.: агроном; И.: agronomist; Т.: tarım uzmanı) *и. а. х.*

Агрономия өлкәһендә эшләгән белгес. □ Агроном. *Баш агроном. Агроном булып эшләү.* ■ *Шулай ҙа колхоз башлығы Император Вафин үрләтмәне — белемле кешене фермала мөдир итеп тота, ә баш агроном урынында — техникум бөткән Хөснуллин.* Р. Камал. *Районға шылтырата һалғандар, унан килгән баш агроном алтын тапҡандай һөйөнгән, Өфөгә, селекционер ғалимдарға, ебәрәм, тигән.* Г. Яҡупова.

**АГРОНОМИК** (Р.: агрономический; И.: agronomic; Т.: tarımbilimiyle ilgili) *с. а. х.*

Агрономияға мөнәсәбәтле, агрономияға бәйле. □ Агрономический. *Агрономик фән.*

**АГРОНОМИЯ I** [рус. < гр. *agros* ‘баҫыу’ + *nomos* ‘ҡанун’] (Р.: агрономия; И.: agronomics; Т.: tarımbilimi) *и. а. х.*

**1.** Ауыл хужалығы культураларын эшкәртеү тураһындағы фәндәр комплексы. □ Агрономия. *Агрономия лабораторияһы.*

**2.** Ауыл хужалығының төрлө өлкәләре буйынса белемдәр йыйылмаһы. □ Агрономия.

**АГРОНОМИЯ II** [рус. < гр. *agros* ‘баҫыу’ + *nomos* ‘ҡанун’] (Р.: агрономический; И.: agronomics; Т.: tarımbilimi) *с. а. х.*

**1.** Агрономияға бәйле. □ Агрономический. *Агрономия факультеты.*

**2.** Агрономияға хас. □ Агрономический.

**АГРОПРОМ** [рус. *агрономическая промышленность*] *и. ҡар.* **агросәнәғәт.**

**АГРОСӘНӘҒӘТ** (Р.: агропромышленность; И.: agroindustry; Т.: tarım sanayi) *и.*

Ауыл хужалығы менән сәнәғәттең продукция етештереү, әҙерләү, эшкәртеү һ.б. буйынса үҙ-ара бәйле тармаҡтарының йыйылмаһы. □ Агропромышленность. *Агросәнәғәт комплексы. Агросәнәғәт банкыһы.* ■ *Былтыр капитал һалыуҙарһыҙ агросәнәғәт комплексына дәүләт ярҙамы 8 миллиард һум самаһы тәшкил итте, был элгәрге йыл менән сағыштырғанда 1,5 тапҡырға күберәк.* «Башҡортостан панорамаһы», № 2, 2009. *Атап әйткәндә, республиканың ауыл биләмәләрендә урынлашкан агросәнәғәт комплексы ойошмаларында эшләүсе .. йәш белгестәргә — 7 мең һум, урта һөнәри учреждениеларҙы тамамлаусыларға 4 мең һум күләмендә айлыҡ түләүҙәр билдәләнде.* «Йәшлек», 4 июль 2009.

**АГРОТЕХНИК I** [рус.] (Р.: агротехник; И.: agrotechnics; Т.: Ziraat mühendisliği uzmanı) *и.*

Агротехника буйынса белгес. □ Агротехник.

**АГРОТЕХНИК II** (Р.: агротехнический; И.: agrotechnics; Т.: Ziraat mühendisliğine bağlı) *с.*

Агротехникаға мөнәсәбәтле, агротехникаға бәйле. □ Агротехнический. *Агротехник алым. Агротехник саралар. Агротехник белем.*

**АГРОТЕХНИКА** [рус. < гр. *agros* ‘баҫыу’ + техника] (Р.: агротехника; И.: agrotechnics; Т.: Ziraat mühendisliği) *и.*

Ауыл хужалығы культураларын үҫтереүҙә ҡулланылған ысулдар системаһы. □ Агротехника.

**АҒА** [дөйөм төрки *ака* ‘оло кеше’] (Р.: уважаемый мужчина; И.: respected male person; elder brother; Т.: ağabey) *и.*

**1.** *ҡар.* **ағай 1**. ■ *Ағам китте һыл яҡҡа, мин тайпылып уң яҡҡа, айырылып киткәйнек.* «Урал батыр».

**2.** Оло, дәрәжәле ир кеше. □ Почтенный, уважаемый мужчина. ■ *Унда йәйләүгә сыҡкан кешеләр араһындағы иң ҡарт ағаның тирмәһен күтәргәндәр.* Ғ. Дәүләтшин. *[Салауат:] Әгәр илде яклаһаң, илгә аға булырһың.* М. Буранғолов.

**3.** Оло, дәрәжәле кешегә мөрәжәғәт һүҙе. □ Дядя (*почтительное обращение, добавляется к собственному имени*). *Абдулла аға.* ■ *«Исмәғил аға сәйәхәтнамәһе»нең үҙәгендә Ҡарғалы ауылының биш кешеһе (Исмәғил аға, Надир мулла, Якуп мулла, Ғәбдеррахман һәм Надир мулланың хеҙмәтсеһе) сауҙа эштәре менән Бохараға барыуын һәм, көтмәгәндә батша фарманы килеп төшөп, илсе булып Һиндостанға юлланыуын, унан ҡайтышлай Мәккә, Мәҙинә һәм Истамбул ҡалаларына һуғылыуын хикәйәләү ята.* «Башҡорт әҙәбиәте антологияһы».

**АҒАЗ ҠЫЛЫУ (ағаз ҡыл-)** (Р.: начинать; И.: start; Т.: başlamak) *к.*

Башлап ебәреү. □ Начинать.

**АҒАЙ** [дөйөм төрки *аға*] (Р.: старший брат; И.: elder brother; Т.: ağabey) *и.*

**1.** Йәшкә үҙеңдән оло булған бер туған ир-ат. □ Старший брат. *Оло ағай. Кесе ағай. Бер туған ағай.* ■ *Кисә сельсовет Ташбулат яман асыулы ине, — тип этенә-төртөнә хәбәр һалды кесе ағайым Сәлих, һүҙ һөйләй башлаһа, ул әллә нисек ҡаушап төшә.* М. Кәрим. *Төлкөсура ағайымды күрмәнегеҙме? Ҡайҙа икән? — тип һораны [Миңлегөл], һүҙенә ышанмаҫтар һымаҡ күреп, өҫтәне. — Бик кәрәк ине.* Н. Мусин. *Камалетдинов — минең бер туған ағайым булған.* Т. Ғарипова. ● *Яңғыҙ булһаң, бер якшыны ағай ит.* Мәкәл. *Йәйләүгә туғай якшы, кәңәшкә ағай якшы.* Мәкәл. *Ағаһы барҙың ырыҫы бар, энеһе барҙың тынысы бар.* Мәкәл.

**2.** Йәш яғынан үҙеңдән оло, атай, әсәйеңдән кесе ир кеше. Шул кешегә өндәшеү һүҙе. □ Дядя (*старший по возрасту родственник или любой мужчина по отношению к младшим, а также почтительное обраще-*

*ние к нему).* ■ *Ҡолтаба ағай, Ҡолтаба ағай, Ҡолйерәнде бирсе, ағай, бирсе, ағай, туғай тулы туры йылҡы, ялан тулы ҡола йылҡы һиңә бирәм, ағай, бирәм, ағай.* «Алпамыша». *[Ҡәнзәфәр:] «Юлай ағай, әллә һин әйткән дөрөҫкә сыға инде?» — тип мәрәкәләргә иткәс, түҙ, күрерһең, тип бүлдерҙе.* Б. Рафиҡов.

**3.** Үгәй атай. □ Отчим.

♦ **Ағай оло, мин ҙур** оло кешенән алға сығып берәй нәмә эшләгәндә әйтелә. □ Брат старше, но я — важнее (*употребляется при проявлении неуважения к старшему по возрасту*). **Ағай алғансы, еңгә килгәнсе** ағайҙың, кәләш алғас, туғандарына һыуыныуы, еңгә һүҙе менән генә йөрөүе тураһында әйтелә. □ Говорится о брате, который охладел по отношению к родственникам после женитьбы.

**АҒАЙ-ЕҢГӘ** (Р.: братья и невестки; И.: brothers and sisters-in-law; Т.: kardeşler) *и. йыйн.*

Үҙеңдән оло, атай, әсәйеңдән кесе булған ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ. □ Братья и невестки (*мужчины и женщины старше тебя, но моложе родителей).* ■ *Ә Хаят ата-әсәһе, ағай-еңгәһенең ҡайтыуҙары, бүләктәре, тәмле күстәнәстәр шатлығы менән, Диләне әллә ҡасан онотоп, аҡ тирмәләр араһында иркәләнеп йүгерә, әле атаһы, әле әсәһе янына барып һырлыға, төрлө хәбәрҙәр һөйләй, күлдәктәре, яңы уйынсыҡтары менән маҡтана.* Һ. Дәүләтшина. *Беҙ бәләкәй саҡта ағастар ҙа бейегерәк ине, тигән шикелле, элек беҙҙең урамда әбей-бабайҙар бихисап ине, ағай-еңгә, апай-еҙнә тейеш кешеләр ике-өс өйҙә генә йәшәне.* «Йәшлек», 20 июль 2010.

**АҒАЙРЫҠ (ағайрығы)** (Р.: тростник; И.: reed; Т.: saz) *и. бот.*

Ике өлөшлөләр ғаиләһенә ингән, һаҙмат урында үҫә торған һоло башлы эре үлән. □ Тростник (*вид камышевого растения)* (лат. *Saccharum*). ■ *Ағиҙел буйы ағас араһы гел ағайрыҡ.* Ғ. Хөсәйенов.

**АҒАЙ-ЭНЕ** (Р.: родственники; И.: brethren; Т.: akraba) *и. йыйн.*

**1.** Бер ата-бабанан таралған ир туғандар; туған-ырыу. □ Родственники, родня (*мужчины). Ағай-эне менән аралашыу.* ■ *[Айбулат] биш-алты быуын айырылған булһа ла, бер ырыуҙан булғанлыҡтан, Ныязғолға ағай-эне һанала ине.* Һ. Дәүләтшина. ● *Ағай-эне талаша, атҡа менһә, яраша. Әйтем. Ярлы булыр егет бейәһен атҡа һатыр, яңғыҙ булыр егет ағай-энеһен ятҡа һатыр.* Мәҡәл.

**2.** Йыйылған халыҡ, йәмәғәт (*өндәшкәндә әйтелә).* □ Друзья, товарищи (*при обращении).* ■ *Ағай-энеләр, ишетегеҙ хуш әҙәптән, нисек хасил булыр ыңйылар сәдәфтән.* М. Өмөтбаев. *Ағай-эне, ваҡытты бушҡа үткәрмәйек. Бөгөн урмандағы аҙаҡҡы бүрәнәләрҙе ташып бөтөргә кәрәк.* Н. Мусин. *Бына, ағай-эне, әйтегеҙ әле, элек бит әгәр көндәр ямғырға инеп китеп, иген эшләп булмай башлаһа, тота ла урман сығарырға китә инек.* И. Насыри.

**АҒАЙ-ЭНЕЛЕ** (Р.: имеющий много родственников; И.: having many relations; Т.: akrabası çok olan) *с.*

**1.** Туған-ырыуы күп, нәҫел-нәсәпле. □ Имеющий много родственников. *Ағай-энеле кеше.*

**2.** *ҡар.* **ағалы-энеле**. ■ *Ағай-энеле бер туғандар Ҡоросйән, Булаттимер, Сынтимер Шаһибәрәковтар башлап бара.* Й. Солтанов.

**АҒАЙ-ЭНЕЛЕК (ағай-энелеге)** (Р.: родство; И.: relationship; Т.: akrabalık) *и.*

**1.** Туғандарса мөнәсәбәт. □ Родство. *Ағай-энелек тойғоһо.*

**2.** *күсм.* Әшнәлек, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ. □ Семейственность, кумовство.

**АҒАЙ-ЭНЕЛӘРСӘ** (Р.: по-родственному; И.: like brothers, brother like; Т.: kardeşçe) *р.*

Ағай-энеләргә, туғандарға хас. □ По-родственному, по-братски, по-свойски, как родные. *Ағай-энеләрсә ҡарау. Ағай-энеләрсә ярҙам итеү.*

**АҒАЛА I** (Р.: лиственничная губка; И.: laricis fungus; Т.: beyaz kav) *и. бот.*

Ҡарағаста үҫә торған ҡаты ағыулы аҡ бәшмәк. □ Лиственничная губка. ■ *Ағаланы борон дарыу итеп ҡулланғандар.* Т. Байышев.

**АҒАЛА II** (Р.: утка; И.: duck species; T.: ördek) *и. зоол. диал.*

Өйрәктең бер төрө. □ Один из видов утки.

**АҒАЛАҠАҘ** *и. кар.* **аласабыр.**

**АҒАЛАУ (ağала-)** (Р.: считать близким; И.: regard as close, near; T.: yakın görmek) *ҡ.*

Ағай итеп күреү, яҡын күреү. □ Считать близким. ● *Үҙ ағаһын ағаламаған, кеше ағаһын һағалай.* Мәҡәл.

**АҒАЛАШ** (Р.: родные братья; И.: siblings; T.: kardeşler) *и.*

Бер туған ир балалар. □ Родные братья.

**АҒАЛТЫН** (Р.: платина; И.: platinum; T.: platin) *и. хим. геол.*

Химик элемент, бик еңел сүкелә һәм һыҙыла торған һорғолт аҡ төҫтәге аҫыл металл *(электр һәм радиотехникала, ювелир эшендә һ.б. ҡулланыла).* □ Платина. *Ағалтын мәғдәне. Ағалтын һауыт-һаба. Ағалтын балдаҡ.* ■ *Гөлләмәһен үрелеп алғаны ыңғайында һуҡ бармағындағы ағалтын балдаҡтың гәүһәр ҡашы (бәлки һалма таштыр — кем белһен!), бысаҡтай саткыланып, ҡыҙҙы сытырлатып күҙҙәрен йоморға мәжбүр ҡылды.* Й. Солтанов.

**АҒАЛТЫН ЙҮГЕРТЕҮ (ағалтын йүгерт-)** (Р.: платинировать; И.: coat with platinum; T.: platin sürmek) *ҡ.*

Берәй нәмәнең өҫтөн йоҡа ғына итеп ағалтын менән буяу, ҡаплау. □ Платинировать. *Ағалтын йүгертелгән беләҙек.*

**АҒАЛЫ-ҠОТОҠЛО** *р. диал. кар.* **ағалы-энеле.** ■ *Ағалы-ҡотоҡло барып ҡайттылар ҡалаға.* Экспедиция материалдарынан.

**АҒАЛЫ-ҠУСТЫЛЫ** *р. кар.* **ағалы-энеле**. *Ике бөйөк бас — ағалы-ҡустылы Абдразаҡовтар. Ағалы-ҡустылы Радуловтар.* ■ *Олуғ ғалимыбыҙ .. Басир Мәһҙиев ағайҙың раҫлауынса, Ҡаҙмаш ауылында алтын приискылары хужалары, ағалы-ҡустылы Мөхәмәтзакир (шағир Дәрдмәнд) менән Мөхәмәтшакир Рәмиевтәрҙең йәйге резиденцияларының береһе булған икән.* М. Ҡотлоғәлләмов.

**АҒАЛЫ-ҺЕҢЛЕЛЕ** (Р.: старший брат с младшей сестрой; И.: elder brother and younger sister together; T.: kardeşçe) *р.*

Ағай менән һеңле бергә. □ Старший брат с младшей сестрой. *Ағалы-һеңлеле бик татыуҙар.* ■ *Консерватория профессоры А. Борханов, гитарасылар ассоциацияһы президенты В. Шувалов, Израилдәге халыҡ-ара гитара конкурсының художество етәксеһе А. Белоусовтар ағалы-һеңлеле Курочкиндарҙың һәләт-тырышлығын айырым баһаланы, йылы һүҙҙәр әйтте.* «Башҡортостан», 16 август 2011.

**АҒАЛЫ-ЭНЕЛЕ** (Р.: старший брат с младшим; И.: elder and younger brothers together; T.: kardeş kardeş) *р.*

Ағай менән эне бергә. □ Старший брат с младшим. *Ағалы-энеле бергә уҡыйҙар.* ■ *Аҡсалата эш хаҡы ла алғас, кейенеп, йөҙҙәренә нур ҡунып ҡалған ағалы-энеле Ғайса менән Мөхәмәтшәрифте ауылдаштарының береһе осратып, көнсөллөк утында яна.* «Даирә», № 98, 2010. *Ағалы-энеле биш Ҡорбанғәлиев һуғышта ятып ҡалһа, дүрт Ҡорбанғәлиев Еңеү менән ҡайта.* «Башҡортостан», 26 февраль 2011. *Шағирә һәм яҙыусы Гөлнур Якупова, ғалим Әүбәкер Ишмырҙин, атҡаҙанған медицина хәҙмәткәре Таһир Латипов, эшҡыуарҙар ағалы-энеле Закир һәм Хәннән Ишмырҙиндар һәм башҡа бик күптәр ҡатнашты байрамда.* «Йәшлек», 20 июль 2010.

**АҒАҢ** (Р.: вот я; И.: here I am; T.: abin) *и.*

**1.** *шаяр.* Маһайған булып һөйләшкәндә, «мин» тигәнде аңлата. □ Вот я *(употребляется при самовосхвалении). Ағаң менән иплә һөйләш.*

**2.** «Ағайың» мәғәнәһендә. □ В значении «твой брат». ■ *Ҡотлояр ағаң да япондарҙы туҡмарға китергә ең һыҙғанып ултыра инде...* Һ. Дәүләтшина. *Атаң ҡасып ҡотол-*

*до, ағаң ҡалһа — тотолдо, Иҙеүкәй килер, ҡуймаҫ ул, ҡан ҡойҙормай туймаҫ ул.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым». *[Атаһы:] «Көнкояш, Ай, ун бер йондоҙ шикелле, ун бер ағаң һиңә баш эйер, ун бере лә һиңә хеҙмәт ҡылыр», — тип юраған.* «Йософ менән Зөләйха». ● *Айыуға ағаң менән бар.* Әйтем. *Дошман күрһә лә үҙ ағаң эттән талатмаҫ.* Мәҡәл.

**АҒАР** (Р.: проточный; И.: flowing; Т.: akar) *с.*

Туҡтауһыҙ ағып ятҡан, аға торған. □ Сточный, проточный, текучий. *Ағар күл. Ағар һыу.* ■ *Төрлө ерҙәр, ағар һыуҙар — барыһын күрһен, сәхрәләрҙә төрлө гөлдән сәскә тирһен...* «Йософ менән Зөләйха». ● *Ағар һыуҙың ҡәҙере юҡ.* Әйтем.

**АҒАРПА** *и. диал. ҡар.* **ҡырлы арпа.**

**АҒАРСАҠ** *и. диал. ҡар.* **ағасаҡ**.

**АҒАРТТЫРЫУ (ағарттыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағартыу 1, 5**. *понуд. от* **ағартыу 1, 5**. ■ *Ағарттырып сығарҙы, иҙәнен буятты, келәм түшәне, телевизор ҡуйып, телефон да үткәрттерҙе.* Р. Солтангәрәев.

**АҒАРТЫЛЫУ (ағартыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ағартыу 1, 5**. *страд. от* **ағартыу 1, 5**. *Ағартылған мейес.*

**АҒАРТЫУ I (ағарт-)** (Р.: белить; И.: whitewash; Т.: kireçlemek) *ҡ.*

**1.** Аҡҡа буяу; аҡлау. □ Белить. // Побелка. *Мейес ағартыу. Өй ағартыу.* ■ *Таңһылыу иҙәндәрен балауыҙҙай асыҡ һарыға буяткан, стеналарын ағартҡан, аҡлаған, тәҙрәләрен йыуған.* Р. Камал. *Элегерәк бөтә ауылдарҙың өйҙәре эстән дә, тыштан да, шул ҡаянан барып алынған аҡбалсыҡ менән ағартылған.* Д. Буләков.

**2.** Төҫөн алыу, төҫһеҙләндереү; аҡ төҫкә индереү, аҡҡа әйләндереү. □ Отбеливать, обесцвечивать. // Отбеливание, обесцвечивание. *Ағарта торған крем. Киндерҙе ағартыу.*

**3.** Кейемдең керен бөтөрөү; таҙартыу. □ Отстирывать, отбеливать бельё. // Отстирывание, отбеливание. *Керҙе ағартыу.*

**4.** Берәй нәмәне йышып таҙартыу, ялтыратыу. □ Чистить; придать блеск; наводить лоск. // Чистка. *Самауыр ағартыу.* ■ *Шул Диләне булһа ла ҡушығыҙ, исмаһам, анау ике еҙ самауырҙы ағартһын.* Һ. Дәүләтшина. *Яурынына сигелгән һөлгө һалып, йышып ағартылған еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп Байрас әсе һыу менән ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырып сыҡты.* З. Биишева. *Польша ҡышы, Башҡортостандағы кеүек, ҡоро сатлама һыуыҡ түгел: бында таңға табан туңдыра, иртә менән ҡубәләкләп ҡар яуа, ерҙең өҫтөн ағартып ташлай, төш ауғас, ул ҡар ҡатышлы ямғырға әйләнә.* Д. Юлтый. ● *Баҡырҙы күпме ағартһаң да көмөш булмаҫ. Мәҡәл.*

**5.** Сал төҫкә индереү; салландырыу. □ Делать седым, убелять. *Сәсте ағартыу. Ҡайғы сәсте ағартты.* ■ *Шул Уралда күп йөрөнөм, ары-бире артылып. Инде килдем ошбу йәшкә, сәс ағартып, ҡарт булып.* Башҡорт халыҡ йырынан. ● *Мәшәҡәт һаҡал ағарта, ҡайғы сәс ағарта.* Мәҡәл.

**6.** *күсм.* Таҙа, ғәйепһеҙ итеп күрһәтеү. □ Показать невинным, чистым. ■ *Яман әҙәм шул булыр — ауыҙында ике тел булыр: алдыңда һине ағартыр, артыңда һине ҡаралтыр.* Ҡобайырҙан. ● *Хаҡлыҡ — ағарта, ахмаҡлыҡ — ҡарайта.* Әйтем.

**7.** *күсм.* Аң-белем таратыу; аңлы-белемле итеү. □ Просвещать, просветить *кого-л.* // Просвещение. ■ *[Ғафури] бөтә бәлә, ғазап халыҡтың ҡараңғылығынан килә, тип уйланы. Был ҡәһәр тормоштан ҡотолоу өсөн, милләтте ағартырға кәрәк тигән фекергә килде.* З. Шәрҡи. *Аҡ рух тантана итһен! Әҙәбиәт — милләт йөҙөн ағарта торған илаһиәт ул.* «Киске Өфө», 8 апрель 2011.

**АҒАРТЫУ II** (Р.: просветительный; И.: educative; Т.: eğitim) *с.*

**1.** Мәғрифәткә бәйле. □ Просветительный, просветительский. *Ағартыу эше.* ■ *1997 йылдан экологик ағартыу эшмәкәрлегенең яңы формаһы буларак, курсаулыҡ*

*сиге буйлап экологик экспедициялар ойоштороla.* «Таң», 26 сентябрь 2011.

**2.** Мәғрифәткә хас. □ Просветительный.

**АҒАРТЫУСЫ** (Р.: маляр; И.: painter; Т.: boyacı) *и.*

Аҡлап йөрөүсе. □ Маляр, белильщик.

**АҒАРТЫШЫУ (ағартыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **ағартыу 1, 3, 4.** *взаимн. от* **ағартыу 1, 3, 4**. *Өй ағартышыу. Самауыр ағартышыу.*

**АҒАРЫНЫУ (ағарын-)** (Р.: побледнеть; И.: grow pale; Т.: benzi atmak) *ҡ.*

Аҡ төҫкә инеү *(йөҙгә, биткә ҡарата)*; төҫ ҡасыу, ҡобара осоу. □ Побледнеть, побледнеть, побелеть *(о человеке, его лице и т.п.).* ■ *Ағарынып һүҙһеҙ ултырған Хәйретдин унһыҙ ҙа һирәк һаҡалдарын бөртөкләп йолҡто.* Я. Хамматов. *Усман, үҙ яҙмышынан ҡурҡып, дер-дер ҡалтыранды, сырайы ағарынды.* Ғ. Ибраһимов. *Ҡарабай ни үле түгел, ни тере түгел, ағарынып китеп, ҡатҡан да ҡалған, ти.* Әкиәттән.

**АҒАРЫУ (ағар-)** (Р.: белеть; И.: grow white; Т.: ağarmak) *ҡ.*

**1.** Аҡ төҫкә инеү. □ Белеть, становиться белым. ■ *Арыштан ҡалмай, бойҙай менән һоло ла ағарып етеп килә.* М. Кәрим.

**2.** Аҡ булып күренеү. □ Белеть *(виднеться). Ағарып ятыу.* ■ *Алыҫтарҙан ағарып күренгән Ирәндеккәй тауҙың аҡ ташы.* Халыҡ йырынан. *Ул баҡса уртаһындағы бейек үлән араһынан ағарып ултырған йыуан бер умартаға күрһәтте.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Төҫтө юғалтыу, төҫһөҙләнеү. □ Бледнеть, линять, терять цвет. ■ *Кешеләр араһынан башына йәмшәйеп бөткән фуражка, өҫтөнә көнгә уҙып ағара башлаған һоро буҫтау гимнастёрка кейгән сандыр буйлы бер йәш кеше күренде.* М. Тажи.

**4.** Төҫ ҡасыу, ҡобара осоу, ағарыныу. □ Белеть, побледнеть. ■ *Һылыу ҡортҡа бер ағарып, бер ҡыҙарып ултырҙы ла, өйҙә сит кеше лә булғас, ҡаршылыҡ күрһәтергә батырсылыҡ итмәне.* Т. Йәнәби. *Урмансылар йүгерешеп, ҡурҡыуҙарынан төҫтәре ағарып, ул боҫҡан ҡарағай төбөнә килеп етте.* Н. Мусин. *Әсирҙең ҡулындағы ирәк төшөп китте, йөҙө бер ағарҙы, бер ҡыҙарҙы, күҙенән ҡайнар йәштәре атылып сыҡты.* Ә. Хәкимов.

**5.** Керҙән, бысраҡтан таҙарыу *(тәнгә, кейемгә ҡарата).* □ Стать чистым. *Кер ағарҙы.* ■ *Аҡлы ситса күлдәктәрҙе ағарғансы йыуғандар.* Бәйеттән. ● *Ҡанат сыҡмай осоп булмай, ҡара кейеҙ ағармай.* Әйтем. *Ҡара һарыҡ тиреһен күпме йыуһаң да ағармаҫ.* Әйтем.

**6.** Йышылып ялтырау *(металға ҡарата).* □ Блестеть *(о металле).* ■ *Диләнең бик оҙаҡ маташҡанын күргәс, Гөлйөҙөм ваҡыт таба һалып, үҙе самауырҙарҙың ағармай ҡалған ерҙәрен тиҙ генә ағартты.* Һ. Дәүләтшина.

**7.** Сал төҫкә инеү; салланыу. □ Седеть, поседеть. *Сәстәр ағарҙы.* ■ *Был инде ун һигеҙгә етә, егермегә етә, ә Зөләйха быға ҡайғырып, һарғайып, сәстәре ағарып, тештәре төшөп бөтә.* «Йософ менән Зөләйха». *Хәрби генерал-губернатор, фекер туплап, минут самаһы өндәшмәй уйланып ултырҙы. Шунан, һуңғы йылдарҙа нык ағарған ҡуйы бөҙрә сәсен бармаҡтарын тырпайтып артҡа тараны ла Григорьевка ымланы.* Я. Хамматов. *Барсынбикә ҡапыл яулығын һыпырҙы, Диңгеҙхан уның бөртөгө ҡалмай ағарған сәсенә шаҡ ҡатырға ла өлгөрмәне, ҡатыны уҡтан осло ҡарашы менән бәғерен көйҙөрҙө.* Т. Ғарипова.

**8.** *күсм.* Яҡшырыу, һәйбәтләнеү *(тормошҡа ҡарата).* □ Улучшаться *(о жизни).* ■ *Заманға заман уралған, бераү бәхетен бере алған. Алғандың көнө ағарған, алмағандың — ҡаралған.* Ҡобайырҙан.

**9.** *күсм.* Аҡланыу, аҡланып сығыу. □ Оправдаться. *Халыҡ алдында йөҙө ағарҙы.* ● *Кем менән ҡарайғанһың — шуның менән ағар.* Мәҡәл.

**АҒАРЫП КИТЕҮ (ағарып кит-)** (Р.: побелеть; И.: become white; Т.: ağarmak) *ҡ.*

**1.** Аҡ төҫкә инеү. □ Побелеть.

**2.** Төҫ ҡасыу, ҡобара осоу. □ Побледнеть. ■ *Кейеҙбай күҙгөгә ҡарау менән ағарып китә, йөрәген ҡурҡыу ала.* Әкиәттән. *Шул ваҡыт*

*өйҙәренең ҡапҡаһынан ҡыҙыл «Газел»дең инеп килгәнен күреп, Кәшфи ҡарттың йөҙө ағарып китте.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010.

**АҒАС I** [дөйөм төрки *агач, йыгач*] (Р.: дерево; И.: tree; Т.: ağaç) *и.*

**1.** Ҡаты олонло, ботаҡлы күп йыллыҡ үҫемлек. □ Дерево. *Ылыҫлы ағас. Япраҡлы ағас. Беше ағас. Йомшаҡ ағас. Емеш ағасы. Ағас ботағы. Ағас ҡырҡыу. Ағас сатыры. Ағас ултыртыу.* ■ *Ямғыр теләп теләк әйткәндә, ағас ботаҡтарына сүс бәйләйҙәр, ҡиблаға ҡаршы ағып сыҡҡан йылғаға тәңкә һалалар.* Халыҡ ижадынан. *Ҡарағай ҙа ағас бейек ағас, менеп булмай кирәм булмаған.* Халыҡ йырынан. *Ағас башына менгәс, Баһау моҙғаны тейәгенән бер ботаҡҡа элде лә күсте шуның эсенә һыпырып төшөрә башланы.* Ж. Кейекбаев. ● *Ағас ағасҡа таяна, әҙәм әҙәмгә таяна.* Мәҡәл. *Бер ағастан унау үҫкән, ун ағастан урман үҫкән.* Мәҡәл. *Йығылған ағасҡа балта менән сабыусы күп була.* Әйтем.

**2.** Шул үҫемлектең төрлө маҡсатта ҡулланыу өсөн ҡырҡып алынған өлөшө. □ Лес, древесина. *Утын ағасы. Ағас ағыҙыу. Төҙөлөш ағасы.* ■ *Шәһиҙә әбей соҡалаҡтағы самауырға ағас һалып маташҡан Диләгә: «Бешеп ҡуйма, балам», — тип кәңәш бирә лә Мәғфүрәне әүрәтә.* Һ. Дәүләтшина. *Юл төҙөүселәр кисә үк, боҙ ҡалын, өҫтөнә ағас түшәнек, йөк менән үтерлек, тип хәбәр тараттҡандар.* Р. Солтангәрәев. *Колхоз эше тип йөрөп, ғаиләһен бер ағас утынға кинәндермәгән атаһынан йонсоп үҫкән Дилбәргә оҡшай ине иренең был холҡо.* Г. Ғиззәтуллина.

**3.** *тар.* Ырыуҙың бер билдәһе. □ Условный знак, атрибут рода. ■ *Мерәҫ ауылынан Аҡбулат бабай беҙгә үҙҙәренең ағасы — имән, ҡошо — торна, тамғаһы — йәйә, orандары — муйнаҡ булғанын әйтте.* К. Мәргән. *Сапай ауылы халҡының этник составы хаҡында һөйләгәндә, риүәйәтсе ул ауылда йәшәгән табын һәм ҡаңны ырыуҙарының ағасы, ҡошо, ораны тураһында әйтә: «килгән табындарҙың ырыу ағасы — ҡарағас, ҡошо — ҡарағош, ораны — тәңре булған. Ә ерле халыҡ ҡаңныларҙың ағасы — ерек, ҡошо — ҡарға, ораны — тәңре.* Ф. Нәҙершина.

**АҒАС II** (Р.: деревянный; И.: wooden; Т.: ağaç) *с. мәғ.*

**1.** Ағастан эшләнгән. □ Деревянный, древесный. *Ағас көрәк. Ағас өй. Ағас күмере. Ағас спирты.* ■ *Шунан һуң, ҙур ағас табаҡҡа һалып тыштан индергән башмаҡтан ҡалған үпкә-бауыр, эсәк-ҡарыны эргәһенә теҙләнеп, [күрәҙәсе] ниҙер уҡып өшкөрҙө.* Я. Хамматов. *Гөлйөҙөм уға ҡыуыш төбөндәге бәләкәй ағас һандыҡтан ҡатып күгәреп бөткән икмәк һыныҡтары алып бирҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Кешеләр һуңғы арала ғына тимер рәшәткә йүнәтә башланы, элек таш йә ағас бура ултырта ла ҡуя торғайнылар.* Р. Камал. ● *Балта ағасты киҫмәҫ ине, ағас һабы булмаһа.* Мәҡәл.

**2.** *күсм. мыҫҡ.* Үҙ эшен белмәгән, насар *(һөнәр эйәһенә ҡарата).* □ Неквалифицированный, незнающий своё дело. ■ *Уны яҡындан белеүселәр, айырыуса йәштәр: «Шәүәли ҙә булған икән кеше! Ағас адвокат бит ул»,— тип кенә ебәрәләр.* Б. Бикбай.

♦ **Ағас атҡа атландырыу** бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. □ Обвести вокруг пальца; оставить в дураках. *соотв.* Посадить в галошу.

**АҒАС III** *и. диал. ҡар.* **талҡыш.**

**АҒАСАҠ (ағасағы)** (Р.: жерех; И.: asp; Т.: koca ağız balığı) *и. зоол.*

Һаҙандар төркөмөнә ингән, сөсө һыуҙа йәшәй торған аҡһыл төҫтәге эре йыртҡыс балыҡ; ағасъяңаҡ. □ Жерех (лат. *Aspius aspius*). ■ *Өй шарттарында тоҙлау өсөн ағасаҡ, ҡарабалыҡ, һаҙан, сабаҡ, шүкә ярай.* «Башҡортостан ҡыҙы», № 7, 1980. *Унда [Шәмсетдин күлендә] 19 төр балыҡ йәшәй. Бөтәһенән күберәк алабуға, ағасаҡ, ҡорман балығы, суртан, сабаҡ, ҡыҙылғанат осрай.* «Башҡортостан уҡытыусыһы», № 5, 1969.

**АҒАСАТ** *и. диал. ҡар.* **салпы.** ● *Ағасатҡа менмә, сабыйға теймә, күккә сөймә.* Әйтем.

**АҒАС АТ** (Р.: козёл *(спортивный снаряд)*; И.: pommel horse; Т.: atlama beygiri) *и.*

Гимнастикала ҡулланылған спорт ҡулланмаһы. □ Козёл *(спортивный снаряд)*.

**АҒАС АУЫҘ** (Р.: невоспитанный; И.: ill-bred; Т.: kaba) *с. диал.*

Тәрбиәһеҙ, тупаҫ. □ Невоспитанный, грубый. ● *Ағас ауыҙ, балта тел.* Әйтем.

**АҒАС АШЛАУ** *и. диал. кар.* **ашлау 1.**

**АҒАСАЯҠ (ағасаяғы)** (Р.: посуда из дерева; И.: ware of wood; Т.: ahşap eşyaları) *и.*

Ағастан эшләнгән һауыт-һаба. □ Посуда из дерева. *Ағасаяктар тип ағас табак, ағас күнәктәрҙе әйтәбеҙ.*

**АҒАС АЯҠ (аяғы)** (Р.: деревянный протез; И.: wooden prosthesis; Т.: protez) *и.*

**1.** Зәғиф аяҡҡа ялғанған терәк. □ Деревянный протез. ■ *Сатанмын тип торманы ул, ағас аяк яһатып кейҙе лә колхоз эшенән калманы.* Г. Яҡупова. *Бер йәш, арык йөҙлө кеше арбаһына ултырып бара, .. ул — сатан, ағас аяклы кеше.* Д. Юлтый.

**2.** Солоҡҡа менгәс, баҫып тора торған ике баулы яҫы ағас. □ Подвесная ступенька, используемая при осмотре борти.

**3.** *миф. кар.* **бапаҡ**.

**АҒАС БАҒАНА** (Р.: коновязь; И.: tethering post; Т.: zincir) *и. диал.*

**1.** Килгән кеше атын бәйләй торған бағана. □ Коновязь.

**2.** *миф.* Изге урын, донъя үҙәге. □ Священное место, центр мироздания.

**АҒАС ЕЛӘГЕ** *и. диал. кар.* **ҡурай еләге.** ■ *С витамины кабул итергә, ағас еләге емеше (әберсә) менән сәй һәм башка шыйыксаларҙы йыш эсергә.* «Урал», 3 февраль 2011.

**АҒАС ИГӘҮ** (Р.: ворчун; И.: grumbler; Т.: dırdırcı) *и. һөйл.*

Мыжыҡ кеше. □ Ворчун. *Ағас игәү булыу. Телкәйҙәре ағас игәү.* ■ *Ағайҙарым, дуҫиш, туғандарым, төштөм бит мин хәтәр хәлдәргә! Бисәкәйем, «ағас игәү»ләнеп, тейә генә көн дә йәндәргә.* Й. Солтанов.

**АҒАС ЙЫРҒЫС** *и. зоол. кар.* **йырғыс.**

**АҒАС КҮНӘК (күнәге)** (Р.: бадья; И.: tup; Т.: badya) *и.*

Һыу йәки башҡа нәмә ташый торған тотҡалы ағас һауыт. □ Бадья. ■ *Байбулат коҙок жураууылына тотондо, моронона ағас күнәк бауланған, шымарып ялтыраған һуйылды һалмак кына түбәнгә ыңғайлатты.* Й. Солтанов.

**АҒАС ҠАҘАУ** *и. кар.* **ағас сөй**.

**АҒАС ҠОРТО** (Р.: непоседа; И.: fidget; Т.: yerinde durmayan) *и. диал.*

Тиктормаҫ, тынғыһыҙ кеше. □ Непоседа.

**АҒАСЛАНЫУ (ағаслан-)** (Р.: деревенеть; И.: stiffen; Т.: sertleşmek) *ҡ.*

Ағас кеүек булып ҡатыу. □ Деревенеть, одеревенеть. // Одеревенение. *Йәй урталарына какы ашарлык булмай, ағасланып китә.*

**АҒАСЛЫ** (Р.: заросший деревьями; И.: woody; Т.: ağaçlı) *с.*

**1.** Ағасы булған, ағас менән ҡапланған. □ Заросший, покрытый, обсаженный деревьями, с деревьями. *Ағаслы урын.* ■ *Тауҙы ауылдан айырып торған ағаслы уйпат өйө каршыһынан ук башлана.* Б. Рафиҡов. *Ерәнсә сәсән убаһы ағаслы Үрген йылғаһының уң ягынан, Наҙый йылғаһының Үргенгә койған ерәнә якын, йылғаны уң яклап, Ҡоро Урсай уяҙына барған юлдың өҫ яғында, тәпәш кенә һырт өҫтөндә.* «Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән».

**2.** Ағастары, урманы күп булған. □ Изобилующий деревьями, лесом. *Ағаслы як.* ■ *Алтынбай олатай дегет кайнатыу менән шөғөлләнгән. Ҡоткор йылғаһы буйын был тирә кайын ағаслы булған өсөн һайлағандыр, сөнки дегет кайнатыу өсөн һыу һәм кайын туҙы кәрәк.* «Урал», 27 сентябрь 2010.

**АҒАСЛЫҠ (ағаслығы)** (Р.: густые заросли; И.: small wood; thickets; Т.: ağaçlık) *и.*

**1.** Бик күп ағас үҫкән урын. □ Густые заросли, дебри. *Ҡуйы ағаслык.* ■ *Ә бына был ағаслык беҙҙең Ағиҙел ярына бара торған*

*частарҙы йәшереп торасаҡ.* Р. Ниғмәти. *Көрәктәр менән биттәрҙе ҡаплап баҫманан сыктык та тағы яр һәм һирәк ағаслыктар араһынан уң якка киттек.* Д. Юлтый.

**2.** Ағаслы урын; урман. □ Лесистая местность; лес, роща. ■ *Беҙҙе алда Ирәмәл көтә. Ағаслыҡ һирәк, асығырак урындарҙа куҡрәген кереп яткан Ирәмәлдең ташлы түбәһе күренгеләп ҡала.* «Урал», 8 август 2011.

**3.** *йыйн.* Бер төрлө урманды барлыҡҡа килтергән ағастар өйкөмө. □ Древостой. *Тиң йәштәге ағаслыҡ. Ҡатнаш ағаслыҡ.* ■ *Уның үҙен дә шундай ук ваҡ ағаслыҡ баҫып бөткән, арҡыс-торкос эре ағастар йығылған.* Д. Шәрәфетдинов.

**АҒАС-МАҒАС** (Р.: деревья; И.: sundry trees; Т.: ağaçlar) *и. йыйн.*

Төрлө ваҡ-төйәк ағас. □ Всякие деревья. *Ағас-мағас яндырыу. Ағас-мағас йыйыу.*

**АҒАС МАТЕРИАЛ** (Р.: лесоматериал; И.: timber; Т.: kereste) *и.*

Ағастың тәбиғи физик структураһын һәм химик составын һаҡлаған урман материалдары. □ Лесоматериал. *Ағас материалы әҙерләү.* ■*Сифатлы ағас материал төҙөлөшкә ебәрелһә, ҡалдыҡтарҙан һөт эшкәртеү комбинатына кәрәкле һауыттар эшләргә була.* «Атайсал, № 78, 2011.

**АҒАС ОҪТАҺЫ** (Р.: столяр; И.: joiner; Т.: marangoz) *и.*

Ағастан төрлө әйберҙәр яһаусы оҫта; балта оҫтаһы. □ Столяр.

**АҒАС СӨЙ** (Р.: деревянный крюк; И.: wooden peg; Т.: tahta kazık) *и. миф.*

Мәрхүмдәрҙең рухы «ҡунһын» өсөн өйҙә, ғәҙәттә, ишек башына ҡағылған сөй. □ Деревянный крюк, вбитый над дверью дома, куда, по представлениям башкир, садятся души умерших. ■ *Ишек башындағы ағас сөйгә әруахтар йомала ултыра икән.* М. Ғәйнетдинова.

**АҒАС СӨРӨГӨ** *и. ҡар.* **сөрөк.**

**АҒАС СҮБЕ** *и. диал. ҡар.* **ағас сүбәге.**

**АҒАС СҮБӘГЕ** (Р.: луб; древесные волокна; И.: bast; Т.: elyaf) *и.*

Органик матдәләрҙе төрлө органдарға таратыу өсөн үҫемлектәрҙәге епсәләр. □ Луб, древесные волокна.

**АҒАСТАБАН** (Р.: деревянная подошва лаптей; И.: wood sole; Т.: ahşap taban) *и. диал.*

Сабатаға ҡағылған ағас күтәрмә. □ Деревянная подошва лаптей.

**АҒАС ТАЛҠЫ** *и. диал. ҡар.* **талҡы.**

**АҒАС ТАУАРЫ** *и. диал. ҡар.* **ағас материал.**

**АҒАС-ТАШ** (Р.: строительные материалы; И.: construction materials; Т.: inşaat malzemesi) *и. йыйн.*

Өй һ.б. нәмә төҙөү өсөн файҙаланылған һәр төрлө материал. □ Строительные материалы. *Ағас-таш әҙерләү.* ■ *Ауыл ағас-таш менән кәсеп итеп, йәйен тәгәрмәс туғыны, ҡышын сана табаны бөгөп ғүмер иткән.* Ш. Янбаев. *Кубеһенсә өмә яһап, күмәк көс менән ағас-таш килтереп, балсыҡтан саман-кирбес һуғып йорт-ҡураларҙы төҙөкләндерәләр.* «Йәншишмә», № 99, 2010.

**АҒАС ТЕЛ** (Р.: невоспитанный; И.: ill-bred, bad-mannered; Т.: nezaketsiz) *с. диал.*

Тупаҫ, әҙәпһеҙ. □ Невоспитанный, невежливый. ■ *Улыҡайым, шуны бел: кеше күңелен киткән, кеше йөрәген өткән тупаҫ тел ул — ағас тел.* Х. Сафаров. *[Осман] Ғилмибейгә түгел, хатта шарлатан кибетсегә лә, ағас телле төнгө ҡарауылсыға ла тегендәй-былдай һүҙҙе ысҡындырмай.* «Төрөк хикәйәләре».

**АҒАС ТИРМӘН** (Р.: деревянный жернов; И.: wooden millstone; Т.: ağaç değirmen taşı) *и.*

Ағастан эшләнгән ҡул тирмәне. □ Деревянный жернов. *Ағас тирмән тартыу.*

**АҒАС ТУП** (Р.: лапта; И.: bat; Т.: raket) *и. диал.*

Балалар уйыны исеме. □ Лапта.

**АҒАС ТӘҢРЕҺЕ** (Р.: божество; И.: wood deity; Т.: Ağaç Tanrısı) *и. миф.*

Мифик зат, башҡорттар табынған 12 тәңренең береһе. □ Одно из 12 мифи-

ческих божеств, которым поклонялись башкиры. ■ *Уларҙың ҡайһы берҙәре 12 тәңре тураһында һөйләне: имеш, ҡыштың, йәйҙең, ямғырҙың, елдең, ағастарҙың тәңреләре бар икән.* Ибн-Фадлан.

**АҒАСҮҘӘК (ағас үҙәге)** *и. диал. ҡар.* **боғарлаҡ.**

**АҒАСҮЛӘН** (Р.: кочедыжник; И.: athyrium; Т.: athyrium) *и. бот.*

Абағалар төркөмөнә ҡараған уртаса һәм субтропик климат бүлкәтендә үҫкән 1,5–2 м бейеклегендәге үҫемлек. □ Кочедыжник (лат. *Athyrium*). *Америка ағасүләне. Ваҡ япраҡлы ағасүлән. Ҡанатлы ағасүлән. Әнәле ағасүлән.*

**АҒАС ҮҢӘС** (Р.: трахея; И.: trachea; Т.: nefes borusu) *и. анат. диал.*

Тын юлының кимерсәк көпшә рәүешендәге өлөшө; ҡурылдай. □ Трахея.

**АҒАС ХУЖАҺЫ** *и. диал. ҡар.* **ағас эйәһе.**

**АҒАС-ҺАҒАС** *и. диал. ҡар.* **ағас-мағас.**

**АҒАС ҺАРЫҺЫ** (Р.: сок дерева; И.: tree’s spring sap; Т.: özsu) *и.*

Яҙ көнө ағастан аҡҡан һыу. □ Весенний сок дерева, пасока. ● *Ағас һарыһын түкмәйенсә яҙ булмай.* Ырым.

**АҒАС-ҺӘЛЕП (ағас-һәлебе)** *и. диал. ҡар.* **ағас-мағас.**

**АҒАСЪЯҢАҠ (ағасъяңағы)** *и. зоол. ҡар.* **ағасаҡ.** ■ *Бына бер заман ҙур ғына ағасъяңаҡ атылған пуля кеүек килеп сыҡты. Селбәрәләр төрлөһө төрлө яҡҡа һибеләләр. Ағасъяңаҡ үҙе лә тиҙ китте.* Ғ. Ибраһимов.

**АҒАС ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух дерева; И.: tree spirit; Т.: Ağaç Tanrısı) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында яңғыҙ ағаста йәшәгән мифик зат. □ Мифический персонаж, живущий, по поверьям башкир, в одиноких деревьях. ■ *Ә ағас эйәһе үҙе боронғо башҡорттарҙың Ағас тәңреһенә барып тоташа.* Ф. Хисамитдинова. *Ағастың эйәһе була. Эйәһен асыуландырһаң, кешегә зыян тейә: ул йә ауырый, йә бүтән берәй ҡыйынлыҡ кисерә.* Р. Һаҙыева.

**АҒАС ЭШКӘРТЕҮ (ағас эшкәрт-)** (Р.: деревообработка; И.: lumbering; Т.: kerestecilik) *ҡ.*

Ағасты киҫеү, ботау, әрсеү. □ Обрабатывать деревья. // Деревообработка. *Ағас эшкәртеү цехында эшләү.* ■ *Башҡортостанда ағас эшкәртеү ҙә киң йәйелдереләсәк.* «Йәшлек», 26 ғинуар 2010.

**АҒАС ӘҘЕРЛӘҮ (ағас әҙерлә-)** (Р.: лесозаготовка; И.: lumber camp; Т.: kereste yığma) *ҡ.*

Ағас йыҡыу, уны урмандан сығарыу, өлөшләтә эшкәртеү. □ Заготавливать лес. // Лесозаготовка. ■ *Район [Ишембай районы] территорияһының 67 проценты урман менән ҡапланған, шуға ағас әҙерләү эше лә яйға һалынған.* «Йәшлек», 10 июнь 2010.

**АҒАС ЯҢАҠ (яңағы)** *и. диал. ҡар.* **үҙ һүҙле.**

**АҒЗА** [ғәр. اعضا] (Р.: член; И.: member; Т.: üye) *и.*

**1.** Тәндең билдәле бер вазифа үтәгән айырым өлөшө; орган. □ Член, часть тела, орган. *Аш һеңдереү ағзалары. Телмәр ағзалары.* ■ *Донъя малы өсөн ҡайғырмайым, көллө ағзаларым һау булғас.* Халыҡ йырынан. *[Әсәйем:] Шул тиклем ҡырылыштан алты ағзаң теүәл ҡайтып ҡуҙебеҙгә күренеүең үҙе тауҙай шатлыҡ! — тип ҡыуанысынан албырғап, ни эшләргә белмәне.* Ш. Янбаев.

**2.** Берәй ойошмала, идарала торған кеше. □ Член *(коллектива)*. *Идара ағзаһы. Партия ағзаһы. Профсоюз ағзаһы. Редколлегия ағзаһы. Хөкүмәт ағзаһы.* ■ *Марсель, ике ҡулы ла йәрәхәтләнеүгә ҡарамаҫтан, спортҡа килеп, ныҡышмал рәүештә шөғөлләнеп, ҙур уңыштарға ирешкән көслө шәхес, Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының әүҙем ағзаһы ла.* «Йәшлек», 2 июль 2011.

**АҒЗАЛЫҠ (ағзалығы)** (Р.: членство; И.: membership; Т.: üyelik) *и.*

Берәй ойошмала, идарала ағза булғанлыҡ. □ Членство. *Идара ағзалығынан сығарыу. Ағзалыҡ танытмаһы.*

**АҒЗАМ** [ғәр. اعظم] (Р.: высочайший; И.: the highest; Т.: yüksek) *с. иҫк.*

Бик бөйөк, ололоҡло. □ Высочайший, величайший.

**АҒЗАМ ХӘҘРӘТТӘРЕ** (Р.: ваше высочество; И.: Your Highness; Т.: Ekselansları) *и. иҫк.*

Ололап әйтеү һүҙе. □ Ваше высочество, Ваше величество, Ваше превосходительство.

**АҒИНӘЙ** (Р.: уважаемая пожилая женщина. И.: respectable elderly woman; Т.: saygıdeğer hanımefendi) *и.*

Хөрмәткә лайыҡ, оло йәштәге инәй. □ Уважаемая пожилая женщина. ■ *Кем белә һикһәнде ҡыуған, ағинәй сүрәтенә ингән ҡарсыҡтың күңел һандығында ниҙәр барын.* Г. Яҡупова. *Ҡыҙғаныуска ҡаршы, Мәрйәм өләсәһе күптән был донъяла юҡ инде, әммә кескәй ейәнсәренең күңеленә иман нуры ҡундырған, әллә күпме доғалар өйрәткән ағинәй — Айгөлдөң йөрәгендә.* «Башҡортостан», 5 март 2011.

**АҒЛАУ (ағла-)** (Р.: плакать; И.: cry; Т.: ağlamak) *к. иҫк. кит.*

Илау. □ Плакать. // Плач. ■ *Гүзәллек баксаһын ситтән күреп, һайра булып ғашиҡ. Былай һайрау ҡауышкандан һуң ағлауҙан булыр артыҡ.* М. Ғафури.

**АҒУЙ** (Р.: открытая долина между гор; И.: valley between the mountains; Т.: dağlar arasındaki vadi) *и. диал.*

Ағарып ятҡан уй. □ Открытая долина между гор.

**АҒУЙМАҠ (ағуймағы)** *и. диал. ҡар.* **ағуй.** ■ *Ағуймаҡай күбек уйылып аға Ағиҙелкәй һыуҙың ағыны.* Йырҙан.

**АҒУНА** (Р.: белая куропатка; И.: willow ptarmigan; Т.: keklik) *и. зоол.*

Тауыҡтар төркөмөнә ҡараған, ҡышын аҡ, йәйен көңгөрт төҫтә була торған ҡырағай ҡош. □ Белая куропатка (лат. *Lagopus lagopus*). *Һоро ағуна.* ■ *Ҡанаттары ап-аҡ ҡына — быуа һеҙгә ағуна. Һиҙгер, йылғыр, бик һаҡ ҡына, ул һаҙлыҡта була.* С. Кулибай. *[Ағунаның] ояһы ерҙә. Ҡара һәм көрән таплы йомортҡаларының һаны 15-кә тиклем етә. Ите өсөн аулайҙар.* Э. Ишбирҙин.

**АҒУТА** (Р.: чиновник; И.: official; Т.: memur) *и. иҫк.*

Түрә, аҙамат. □ Чиновник. *Батша ағуталары.*

**АҒҮҘӘК (ағүҙәге)** (Р.: спинной мозг; И.: spinal marrow; Т.: omurilik) *и. диал.*

Йөлөн. □ Спинной мозг.

**АҒҮЛӘН** *и. диал. ҡар.* **йылан тарыһы.**

**АҒЫҘҒЫС** (Р.: кран; И.: crane; Т.: musluk) *и.*

Һыу менән тәьмин итеүсе ҡорамалдың мороно; һемәк. □ Кран. *Ағыҙғысты йүнәтеү. Ағыҙғыс боҙолоу.*

**АҒЫҘҘЫРТЫУ (ағыҙҙырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағыҙыу**. *понуд. от* **ағыҙыу**.

**АҒЫҘҘЫРЫУ (ағыҙҙыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағыҙыу**. *понуд. от* **ағыҙыу**.

**АҒЫҘЫЛЫУ (ағыҙыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ағыҙыу**. *страд. от* **ағыҙыу**.

**АҒЫҘЫУ (ағыҙ-)** (Р.: пускать воду; И.: let flow; Т.: akıtmak) *ҡ.*

**1.** Быуылып, бикләнеп торған шыйыҡлыҡҡа ағырға мөмкинлек биреү. □ Пускать воду, лить, наливать, слить жидкость. // Сливание, слив. *Быуаны йырып ағыҙыу. Мискәнән кәрәсин ағыҙыу. Самауырҙан һыу ағыҙыу.* ■ *[Әнүәр:] Бер ағастан сайырҙы 15—20 йыл буйы ағыҙырға мөмкин, быуның өсөн һыҙыуҙы бик дөрөҫ яһарға кәрәк.* З. Ураҡсин.

**2.** Шыйыҡса менән тултырыу. □ Наполнить жидкостью, лить, напустить. // Наполнение. *Ваннаға һыу ағыҙыу.*

**3.** Торба, канал буйлатып шыйыҡсаны ҡыуыу. □ Пропустить жидкость через трубу. *Нефть ағыҙыу.*

**4.** Йылға ағышы ыңғайына берәй *нәмәне* ебәреү. □ Пускать по воде, по течению; сплавлять, сплавить *что-л. (по воде).* // Сплав *(по реке). Ағас ағыҙыу. Бүрәнә ағыҙыу.* ■ *Үҙәште йылғаһынан яҙғы ташҡында ҡыуғын ҡыуалар, һал ағыҙалар.* Ж. Кейек-

баев. *Ауырыу, бәлә-каза китһен тип, ғәйнә башкорттары боҙ киткәндә курсак ағыҙа.* Ф. Хисамитдинова.

**5.** Ағым ыңғайына алып китеү *(һыуға ҡарата).* □ Сносить, снести, уносить, унести, относить, отнести *(о реке, течении).* *Ағыҙып алып китеү.*

**6.** Ҡан, йәш һ.б. түгеү, ҡойолтоу. □ Лить, пролить *(слёзы, кровь и т.д.).* // Проливание. *Йәш ағыҙыу. Тир ағыҙыу.* ■ *[Сәғиҙә] ҡайнар күҙ йәштәрен уның [ҡыҙының] һыуынған йөҙөнә ағыҙҙы.* Һ. Дәүләтшина. *Дегәнәк алмаларҙы өйкәй-өйкәй ҡанлы һуттарын ағыҙа, ти.* Әкиәттән. *Байрам көнөндә хәле еткән кешеләргә Аллаһы Тәғәлә ҡорбан салырға бойорған. Кешенең ҡанын түгел, хайуандың ҡанын ағыҙыу — ғибәҙәт ул.* «Йәншишмә», 12 ноябрь 2010.

**7.** Һурҙырыу, ҡыуыу, айыртыу *(кәрәҙле балды).* □ Гнать, качать *(мёд).* // Перегонка *(мёда). Бал ағыҙыу.*

♦ **Ауыҙ һыуын** (*йәки* **һеләгәйҙе) ағыҙыу** тәмле нәмәгә ымһыныу; тәм итеү. □ Смотреть с вожделением. *соотв.* Текут слюнки.

**АҒЫҘЫШЫУ (ағыҙыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **ағыҙыу 1, 2, 3, 5.** *взаимн. от* **ағыҙыу 1, 2, 3, 5.**

**АҒЫ-КҮГЕ** (Р.: разные; И.: different; Т.: farklı) *с. диал.*

Төрлөһө. □ Разные.

**АҒЫЛА** *и. бот. диал. ҡар.* **ағала.**

**АҒЫЛЙЫМ** *с. ҡар.* **аҡһыл.**

**АҒЫЛЫЙҒА ТАҒЫЛЫЙ** (Р.: навязчивый человек; И.: importunate person; Т.: sırnaşık) *и. һөйл.*

**1.** Эйәреп, арттан ҡалмай йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Надоедливый, докучливый, неотвязный человек.

**2.** Бер-береһенән ҡалмай йөрөгән ике кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Водой не разольёшь (разлить), не разлей вода *(двое друзей).*

**АҒЫЛЫУ (ағыл-)** (Р.: течь; И.: pour; Т.: dökülmek) *ҡ.*

**1.** Туҡтауһыҙ ҡойолоу. □ Течь, сыпаться потоком. *Иген ағыла.*

**2.** Өйкөм-өйкөм булып эркелеп, өҙлөкһөҙ күсеү *(болот, томан, төтөн һ.б. нәмәгә ҡарата).* □ Плыть, двигаться, надвигаться, мчаться *(о клубах дыма, облаках, тучах и т.д.).* ■ *Ағыла ла ағыла болот, ямғыр һибеп тирмәләргә.* Р. Бикбаев. ● *Ҡояш байығанда артынан болот ағылһа, кеүәтле ел булыр.* Һынамыш.

**3.** Бер яҡҡа табан туҡтауһыҙ үтеп тороу *(кешеләргә ҡарата).* □ Течь в одном направлении *(о толпе, людской массе). Халыҡ ағыла.*

**4.** Туҡтауһыҙ ағымда хәрәкәт итеү, үтеп тороу. □ Идти, двигаться, проходить потоком. *Машиналар ағыла.*

**5.** Туҡтауһыҙ килеп тороу *(хат, хәбәр, телеграмма һ.б. ҡарата).* □ Течь, идти потоком *(о письмах, сообщениях, телеграммах и т.п.).*

**6.** Күпләп түгелеү, ҡойолоу *(ҡан, тиргә ҡарата).* □ Литься, проливаться *(о крови, поте).* ■ *Тирҙәр ағыла, ҡандар һауыла, малдар шулай табыла.* Халыҡ йырынан.

**7.** *күсм.* Бер ыңғай менән генә тулҡынып сығыу *(көйгә ҡарата).* □ Литься *(о плавных звуках). Яғымлы музыка ағыла.* ■ *Тыуған ҡырҙар гүзәллеге булып, йөрәктән йыр күпме ағыла.* Н. Нәжми.

**АҒЫМ** (Р.: течение; И.: flow; Т.: akıntı) *и.*

**1.** Һыу, һауаның бер йүнәлештәге хәрәкәте. □ Течение, поток. *Түбәнге ағым. Үрге ағым. Һауа ағымы.* ■ *Ағиҙелдең ағымын күргәндә һеҙҙе һағынып йырҙар яҙырмын.* Д. Юлтый. *Ҡомһоҙ, көслө һыу ағымы уларҙы шунда уҡ әләктереп ала ла аҫҡа ағыҙып алып китә.* Я. Хамматов.

**2.** Күмәк төркөмдөң бер йүнәлештәге хәрәкәте. □ Поток, масса. *Халыҡ ағымы.* ■ *Кешеләр ағымы шаулап аҡҡан сакта, һин урамдан үттең бик уйсан.* Ғ. Амантай. *Юлдаш та, ошо ағымға ҡушылып, уныңсы мәктәп яғына атланы.* З. Биишева.

**3.** Туҡтауһыҙ килеп торған нәмәләрҙең йәки кешеләрҙең хәрәкәте. □ Поток. *Телеграммалар ағымы. Абитуриенттар ағымы.* ■ *Диңгеҙгә ашығыусы йылғаларға оҡшап,*

*төрлө яктан Торатауға юл тоткан ошондай шау-шыулы халыҡ ағымдарында Ағиҙел арьяғынан — Һуҡайлы, Ашҡаҙар буйҙарынан килеүселәрҙе лә осратырға мөмкин.* Б. Рафиҡов.

**4.** Уҡыу-уҡытыу маҡсаттарында бүленгән уҡыусыларҙың төркөмө. □ Поток *(учебный). Ике ағымда булған имтихандар.*

**5.** *күсм.* Ижтимағи-сәйәси, сәнғәт йәки әҙәби йүнәлеш. □ Течение, направление. *Сәнғәттәге реалистик ағым. Сәйәси ағым. Әҙәби ағым.*

**АҒЫМДАҒЫ** (Р.: текущий; И.: current; Т.: günlük) *с.*

**1.** Ошо көндә дауам иткән, ғәмәлдә булған; хәҙерге, әлеге. □ Текущий. *Ағымдағы мәсьәләләр. Ағымдағы сәйәсәт. Ағымдағы ваҡиғалар.*

**2.** Һәр көн башҡарылған, сираттағы, көндәлек. □ Очередной, повседневный. *Ағымдағы эштәр.* ■ *Ағымдағы эш: ул иртәгә лә, иртәнән һуң да, унан ары ла шулай ҡабатланасаҡ, бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк.* Х. Тапаҡов.

**АҒЫМДАҒЫ ИҪӘП** (Р.: текущий счет; И.: current calculation; Т.: cari hesap) *и. икт.*

Банк вкладсылары иҫәбе. □ Текущий счёт, текущий учёт. *Тышҡы сауҙа операцияларының ағымдағы иҫәбе. Сит ил валютаһындағы ағымдағы иҫәптәр.*

**АҒЫМСЫЛАУ (ағымсыла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ваҡһыу.**

**АҒЫН** (Р.: быстротечный; И.: fleeting; Т.: akar) *с.*

Ағып ятҡан, шәп аҡҡан *(һыуға ҡарата).* □ Проточный, быстротечный, текучий, стремительный. *Ағын йылға. Ағын һыу.* ■ *Иртә генә томан, кис тә томан, Әй һыуы — ағын һыу ҙа, был томандар ниңә лә асылмай, Әй һыуы — ағын һыу ҙа.* Халыҡ йырынан. *Ағиҙелкәй һыуы, ай, тын икән, яр ситтәре бигерәк комло икән, ағын һыу, Ағиҙел буйҙары.* Халыҡ йырынан. ● *Балыҡ ағынды, тәлмәрйен тонокто ярата.* Мәҡәл.

**АҒЫНДЫ** *с. диал. ҡар.* **ағар**. *Ағынды һыу.*

**АҒЫН-ТҮГЕН** *с. диал. ҡар.* **бөтмәҫ-төкәнмәҫ.** *Шул тиклем ағын-түген байлыкты ҡайҙа ҡуйып бөтмәк кәрәк.*

**АҒЫП ТУҢҒАН** *с. диал. ҡар.* **булдыҡһыҙ.** *Ағып туңған әҙәм.*

**АҒЫРАЙТЫУ (ағырайт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аҡ V.**

**АҒЫТТЫРЫУ (ағыттыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағытыу**. *понуд. от* **ағытыу**.

**АҒЫТЫЛЫУ (ағытыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ағытыу**. *страд. от* **ағытыу**.

**АҒЫТЫУ (ағыт-)** (Р.: пускать на волю жеребят с кобылицами; И.: let colts (foals) at large; Т.: tayları kısraklarla serbest bırakmak) *ҡ.*

**1.** Ҡымыҙға бәйләгән һауын бейәләрҙе ҡолондары менән иркенгә ебәреү *(төнгөлөккә ашатыр өсөн йәки көҙөн ҡымыҙ яһауҙы туҡтатҡас).* □ Пускать на волю жеребят с кобылицами *(после дойки). Ҡолон ағытыу.* ■ *[Гөлйөҙөм:] Бейәләрҙе кисен ҡолондарына ҡушып ҡырға ҡыуалар. Ҡолондар шунда рәхәтләнеп төн буйына әсәләрен имеп йөрөйҙәр. Бына шуны «бейә ағытыу» тиҙәр беҙҙә.* З. Биишева.

**2.** Оҙон итеп һөйләү. □ Долго говорить, рассказывать. *Хәбәрҙе ағыта белә ул Хәмит бабай.*

**АҒЫТЫШЫУ (ағытыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **ағытыу**. *взаимн. от* **ағытыу**.

**АҒЫУ I (аҡ-)** [дөйөм төрки *ак-*] (Р.: течь; И.: flow; Т.: akmak) *ҡ.*

**1.** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү *(шыйыҡлыҡҡа ҡарата).* □ Течь, литься *(о жидкости).* // Течение. ■ *Сылтырап аҡҡан шишмәләрҙән һыуҙар эсер инем туйғансы.* Ә. Мирзаһитов. *Көньяҡ Уралдың урман баҫҡан ҡаялы тауҙары араһынан кескәй генә йылға аға. Ул — Һәләүек йылғаһы.* Я. Ҡолмой. ● *Тәрән йылға тауышһыҙ аға.* Мәҡәл.

**2.** Һыу менән ҡуша хәрәкәт итеү. □ Двигаться, плыть по течению. ■ *Шулай итеп, был байғош япа-яңғыҙ тора ла ҡала. Кейемдәре лә ағып китә.* Әкиәттән.

**3.** Бер-бер артлы талғын хәрәкәт итеү *(болоттарға ҡарата).* □ Плыть *(об обла-*

*ках).* ■ *Күк йөҙөн каплаған болоттар ҡояш байышы яғынан өргән ел менән ҡайҙалыр ашығып-ашығып ағалар ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**4.** *күсм.* Бер-бер артлы күңел аша үтеү; ағылыу *(уй, хискә ҡарата).* □ Течь *(о мыслях, чувствах и т.п.).* // Течение. ■ *Йырым күңелдәргә ятһын, йырым минең тынмай аҡһын.* Р. Ғарипов.

**5.** *күсм.* Күпләп ҡулға инеү; яуыу *(аҡсаға, байлыҡҡа ҡарата).* □ Течь, плыть *(о деньгах, доходах и т.п.). Аҡсаның күҙе юҡ, аға ғына.*

**6.** Бер ыңғайға оҙаҡ яңғырап ишетелеү; ағылыу *(көйгә ҡарата).* □ Литься, звучать, распространяться *(о звуках мелодии).* // Звучание, распространение. ■ *[Йырҙың] һүҙҙәре асыҡ ишетелмәй. Ә моң, ҡараңғылыҡ пәрҙәһен тишеп, аға ла аға.* Н. Мусин.

**7.** Өҙлөкһөҙ үтеү *(ваҡытҡа ҡарата).* □ Протекать, проходить *(о времени).* ■ *Шаулы-даулы заман диңгеҙендә ағыр йылдар, ағыр ишелеп.* И. Кинйәбулатов.

♦ **Аҡмаһа ла тама** әҙ-мәҙ булһа ла эләгә, ҡулға төшә (*мал, аҡсаға ҡарата*). □ Нет-нет да перепадает. ■ *[Рыҫҡол — Әлмәтҡә:] Һеҙ тук шул. Түрәләр алдында яҡшатлана беләһегеҙ, аҡмаһа ла тамып тора һеҙгә.* Б. Бикбай.

**АҒЫУ II** [боронғо төрки *ааг* ‘асы, ағыулы’] (Р.: яд; И.: poison; Т.: zehir) *и.*

**1.** Тереклек өсөн зәһәрле матдә; ыу. □ Яд, отрава. *Йылан ағыуы. Үрмәксе ағыуы.* ■ *Хәҙерге ваҡытта ҡорт ағыуынан бик күп шифалы дарыу яһайҙар.* В. Ғүмәров. *Берәү булһа, ағыу бирер ине, һин бит миңә дарыу эсерҙең.* Ә. Атнабаев. ● *Йыландың ағыуы телендә, ямандың ағыуы күңелендә.* Мәҡәл.

**2.** *а.х.* Орлоҡто ағыулау өсөн тәғәйен химик матдә. □ Протравитель. *Химик ағыу.*

**3.** *күсм.* Кешенең тормошона, күңеленә насар йоғонто яһай торған нәмә. □ Отрава, яд, зельё. ■ *Һуғыш!.. Был ҡәһәрле бер генә һүҙ бөтә кешеләрҙең мейеһенә ҡурҡыныс ағыу йүгертте.* Һ. Дәүләтшина. ● *Асыу — ағыу, үткәрһәң — дарыу.* Әйтем.

**АҒЫУ III** *и. диал. ҡар.* **йылға.** ■ *Ырғыҙға бөтә ағыуҙар ҙа ҡоя.* Экспедиция материалдарынан.

**АҒЫУ БИҘЕ** (Р.: ядовитая железа; И.: poisonous gland; Т.: zehir bezi) *и.*

Ҡайһы бер йән эйәләренең ағыу яһала торған биҙе *(мәҫәлән, йыланда).* □ Ядовитая железа *(например, у змеи).*

**АҒЫУ БӘШМӘК (бәшмәге)** (Р.: бледная поганка; И.: death cap; Т.: ağılı mantar) *и. бот.*

Ашарға ярамаған зарарлы бәшмәк. □ Бледная поганка (лат. *Amanita phalloides*).

**АҒЫУ ЕМЕШЕ** *и. диал. ҡар.* **эт муйылы**.

**АҒЫУЛАҒЫС** (Р.: протравитель; И.: protectant machine; Т.: koruyucu makine) *и. а.х.*

Орлоҡ ағыулай торған машина. □ Протравитель.

**АҒЫУЛАНЫУ (ағыулан-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **ағыулау**. *страд. от* **ағыулау**.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **ағыулау**. *возвр. от* **ағыулау**. *Ағыуланып үлеү.*

**АҒЫУЛАТЫУ (ағыулат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ағыулау**. *понуд. от* **ағыулау**.

**АҒЫУЛАУ (ағыула-)** (Р.: отравлять; И.: poison; Т.: zehirlemek) *ҡ.*

**1.** Ағыу биреү, ағыу менән зарарлау. □ Отравлять, отравить. // Отравление. *Ағыулап үлтереү. Газ менән ағыулау. Һауаны ағыулау.*

**2.** *а.х.* Сәсеүлектәрҙе, игенде, орлоҡто ағыулы химикаттар менән эшкәртеү. □ Протравливать, протравить. // Протрава. *Орлоҡ ағыулау.*

**3.** *күсм.* Насар эш-ҡылыҡ менән кешенең тормошона, күңеленә зарар итеү. □ Дурманить, одурманивать, одурманить. // Дурман, одурманивание. ■ *Ник һыҙлайһың, күңелем, ник юҡ өсөн ағыулайһың минең аңымды.* Ш. Бабич.

**АҒЫУЛЫ** (Р.: ядовитый; И.: poisonous, venomous; Т.: zehirli) *с.*

**1.** Ағыуы булған. □ Ядовитый, ядоносный, токсичный, токсический. *Ағыулы бәшмәктәр. Ағыулы йылан. Ағыулы мат-*

*дә.* ■ *Ағыулы химикаттарҙы дөрөҫ файҙаланырға кәрәк.* В. Ғүмәров.

**2.** Ағыу менән зарарланған, бысранған. □ Отравленный, заражённый. *Ағыулы аҙыҡ. Ағыулы һауа.* ■ *Барғас та аш ултыртырҙар, һин күгәрсенеңде ҡуйыныңдан сығарырһың. Әгәр күгәрсен яурыныңа ҡунһа, ашарһың, әгәр әйләнеп йөрөһә, ашамаҫһың: аш ағыулы булыр.* Әкиәттән.

**3.** *махс.* Ағыу менән эшкәртелгән. □ Протравленный *(о семенах для посева, фруктовых деревьях и т.п.). Ағыулы орлоҡ.*

**4.** *күсм.* Яуыз уйлы; зәһәрле. □ Язвительный, ядовитый. *Ағыулы тел. Ағыулы һүҙҙәр.* ■ *Кеше йөҙө бешкән алма кеүек, ә йөрәге шундай ағыулы.* Ғ. Хәйри.

**АҒЫУЛЫ КЕҪӘРТКЕ** (Р.: ядозуб; И.: heloderma; Т.: gila canavarı) *и. зоол.*

Американа йәшәгән ағыулы кеҫәртке. □ Ядозуб (лат. *Helodermatidae*).

**АҒЫУЛЫ КӨПШӘ** (Р.: вёх ядовитый; И.: cowbane; Т.: su baldıranı) *и. бот.*

Шыма ҡабыҡлы, тамыры ныҡ ағыулы көпшә *(дымлы ерҙәрҙә, ҡанау буйҙарында үҫә).* □ Вёх ядовитый (лат. *Cucuta virosa*).

**АҒЫУЛЫЛЫҠ (ағыулылығы)** (Р.: ядовитость; И.: toxicity; Т.: zehirlilik) *и. күсм.*

Яуыз уйлылыҡ; зәһәрлек. □ Ядовитость.

**АҒЫУЛЫ СОДА** (Р.: каустическая сода; И.: caustic soda; Т.: kostik soda) *и. хим.*

Һыуҙа яҡшы ирей торған төҫһөҙ кристаллик матдә; зәһәр натр. □ Каустическая сода.

**АҒЫУ СӘСЕҮ (ағыу сәс-)** (Р.: злословить; И.: talk scandal; Т.: yerip çekiştirmek) *ҡ.*

Уҫал ниәт менән зәһәрле һүҙ һөйләү, яман телләнеү. □ Злословить, язвить. // Злословие.

**АҒЫУТЕШ** *и. ҡар.* **ағыулы кеҫәртке**.

**АҒЫУ ТЕШЕ** (Р.: ядовитый зуб змеи; И.: poison tooth; Т.: yılanın zehirli dişi) *и.*

Йыландың ағыу ебәрә торған теше. □ Ядовитый зуб змеи, ядоносный зуб.

**АҒЫУ УТЫ** *и. бот. ҡар.* **монар көпшәһе.**

**АҒЫУҺЫҘ** (Р.: неядовитый; И.: non-toxic; Т.: zehirsiz) *с.*

Ағыуы булмаған; ағыуһыҙландырылған. □ Неядовитый, без яда. *Ағыуһыҙ орлоҡ.*

**АҒЫУҺЫҘЛАНДЫРЫУ (ағыуһыҙландыр-)** (Р.: обезвреживать; И.: render harmless; Т.: nötrleştirmek) *ҡ.*

Ағыуын бөтөрөү, зарарлы тәьҫирен юҡҡа сығарыу. □ Обезвреживать, обезвредить *(нейтрализовать яд).* // Обезвреживание.

**АҒЫШ** (Р.: течение; И.: flow; Т.: akış) *и.*

**1.** Һыу, һауаның һиҙелгән хәрәкәте. □ Течение, поток. *Һауа ағышы. Һыу ағышы.* ■ *Үҙгәргән йылға ағышы, ишелеп төшкән тауҙар.* А. Игебаев. *Тәүҙә ул [Таһир] зәңгәр күктә аҡ болоттар ағышын күҙәтте.* К. Мәргән. ● *Йылғаның үренә барма, ағышына бар.* Мәҡәл.

**2.** Берәй эш-хәлдең барышы; ағым. □ Течение, ход. *Ваҡиғалар ағышы. Эштең ағышы.* ■ *Тигеҙ түгел тормош ағышы; бар шатлығы, ҡайғы, һағышы.* Ҡ. Даян. *Әйтмәксе, һиңә йомош та бар ине, тип ваҡиғаның алҡымынан алмаҡ булды. Әммә өй хужаһы ваҡыт ағышын ҡабаландырмау яғында ине.* М. Ямалетдинов.

**3.** *күсм.* Уй, фекер, һүҙ барышы. □ Течение, ход. *Фекер ағышы. Һүҙ ағышына ҡолаҡ һалыу.* ■ *Күрәһең, ул һағышлы, кисерешле хат. Ана шул хат хәтирәһе иҫтәлекле, һағышлы уй-тойғолар ағышын һәм йомғағын хасил итә.* «Ағиҙел», № 2, 2010.

**4.** *ҡар.* **ағым 5**.

♦ **[Эште] үҙ ағышына ҡуйыу** (*йәки* **ебәреү**) берәй эшкә хәстәрһеҙ ҡарау. □ Пускать дело на самотёк.

**АҒӘБЕЙ** (Р.: тётушка; И.: aunt; Т.: teyze) *и. диал.*

**1.** Атайҙың йәки әсәйҙең апаһы. □ Старшая сестра отца или матери.

**2.** Атайҙың йәки әсәйҙең ағаларының ҡатындары. □ Жёны старших братьев отца или матери.

**АҒӘПӘЙ** *и. диал. ҡар.* **бойҙай икмәге.**

**АДАПТАЦИЯ** [рус. < лат. *adaptatio* ‘яраҡлашыу’] (Р.: адаптация; И.: adaptation; Т.: adaptasyon) *и.*

**1.** *ҡар.* **яраҡлашыу.** *Социаль адаптация. Адаптация үтеү.*

**2.** Сит телдә яҙылған тексттың ябайлаштырылыуы *(өйрәнеүгә еңел булһын өсөн).* □ Адаптация.

**АДАПТАЦИЯЛАУ (адаптацияла-)** (Р.: адаптировать; И.: adapt; Т.: adapte etmek) *ҡ. ҡар.* **яраҡлаштырыу.** ■ *Акция балалар йорттарына ярҙам һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балалар өсөн «Балалыҡты ҡайтарыу» социаль адаптациялау проекты сиктәрендә ойошторолған.* «Башинформ» агентлығы сайтынан, 7 май 2010.

**АДВЕРБИАЛИЗАЦИЯ** [рус. < лат. *adverbium* ‘рәүеш’] *и. лингв. ҡар.* **рәүешләшеү.**

**АДВОКАТ** [рус. < нем. *Advokat* < лат. *advocatus* < *advocare* ‘ярҙамға саҡырыу’] (Р.: адвокат; И.: barrister; Т.: avukat) *и. юр.*

**1.** Ғәйепләнгән кешене судта яҡлаусы йәки хоҡуҡтар буйынса кәңәш биреүсе юрист. □ Адвокат. ■ *Хәҙер [Шәүәли] райондағы адвокаттар коллегияһында штаттан тыш юрист булып эшләй.* Б. Бикбай. *[Ә. Вәлиди] Өфөлә сәйәси мәсьәләләргә нығырак ылыға, уның 1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда көнсығыш халыҡтарының территориаль автономияға хоҡуғын яҡлап сығыш яһаусы атаҡлы башҡорт адвокаты Ғәлиәскәр Сыртланов, ҡаҙаҡ хандарының ейәне Сәлимгәрәй Йәнтүрин кеүек билдәле кешеләр менән аралашыуы ла эҙһеҙ үтмәй.* Р. Шәкүр.

**2.** Кешене яҡлаусы. □ Защитник. *Ауыл адвокаттары.*

**АДВОКАТЛЫҠ (адвокатлығы)** (Р.: адвокатура; И.: the legal profession; Т.: avukatlık) *и. юр.*

Адвокаттың эшмәкәрлеге. □ Адвокатура. *Адвокатлыҡ менән шөғөлләнеү.* ■ *1924 йылдың йәйендә Н. Таһиров Башглавсуд эргәһендәге хоҡуҡ һаҡлаусылар коллегияһы ағзаһы итеп һайлана. 1926 йылда Ҡазанда, 1927—1928 йылдарҙа Урта Азияла адвокатлыҡ эше менән шөғөлләнә.* Р. Шәкүр.

**АДЕКВАТ** (Р.: адекватный; И.: adequate; Т.: uygun) *с.*

Тура килеү, дөрөҫ. □ Адекватный. *Адекват кеше. Адекват һорауҙар.*

**АДМИНИСТРАТИВ** (Р.: административный; И.: administrative; Т.: idari) *с.*

Администрацияға, идараға мөнәсәбәтле. □ Административный. *Административ саралар. Административ бүленеш. Административ үҙәк. Административ яуаплылыҡ. Административ штраф. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар.* ■ *Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың «Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Рәсәй Федерацияһы кодексына үҙгәрештәр индереү хаҡында» федераль закон проектын Дәүләт Думаһына индереү буйынса закон сығарыу инициативаһы Татарстан парламентында хуплау тапты.* «Башҡортостан», 2 ноябрь 2010.

**АДМИНИСТРАТИВ-ТЕРРИТОРИАЛЬ** (Р.: административно-территориальный; И.: administrative-territorial; Т.: idari yerel) *с.*

Администрация территорияларына мөнәсәбәтле. □ Административно-территориальный. *Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль бүленеше.*

**АДМИНИСТРАТИВ ХОҠУҠ БОҘОУ** (Р.: административное правонарушение; И.: summary offence; Т.: ihlal) *и. юр.*

Хоҡуҡ талаптарына ҡаршы эшләнелгән эш-хәрәкәт. □ Административное правонарушение. ■ *Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаттары үҙҙәре каникулға китер алдынан өсөнсө уҡыуҙа административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында яңы кодекс ҡабул итеп китте.* «Башҡортостан», 9 июль 2011.

**АДМИНИСТРАТИВ ЯЗА** (Р.: административное наказание; И.: penalty under administrative law; Т.: idari ceza) *и. юр.*

Административ хоҡуҡ боҙоу өсөн ҡаралған яуаплылыҡ сараһы. □ Административное наказание. *Административ язаға тарттырыу.* ■ *Эске эштәр органдары изоляторҙарында ултырған кешеләрҙән, сит ил граждандарынан, депортацияланырға тейешле кешеләрҙән, даими теркәлеү урыны булмағандарҙан, административ язаға тарттырылғандарҙан һорау алыуға айырым иғтибар бирелә.* «Башинформ» агентлығы сайтынан, 15 октябрь 2010.

**АДМИНИСТРАТОР** [рус. < лат. *administer* 'хеҙмәткәр, хеҙмәтсе, ярҙамсы'] (Р.: администратор; И.: administrator; Т.: yönetmen) *и.*

*Нимә* менәндер идара итеүсе кеше. □ Администратор. *Администратор вазифаһы. Администратор эше. Сайт администраторы.* ■ *Өсөнсө йыл тигәндә, беҙҙе Киров урамындағы Башҡортостан халыҡтары этнографияһы музейына ике ҡатлы ҡыҙыл йортҡа — администраторҙар ултырған бинаға күсерҙеләр.* «Тамаша», № 6, 2008.

**АДМИНИСТРАЦИЯ** [рус. < лат. *administratio, administrare* 'етәкселек итеү'] (Р.: администрация; И.: administration; Т.: yönetim) *и.*

**1.** Берәй предприятиеның, ойошманың етәксе органы. □ Администрация. *Администрация бойороғо. Администрация күрһәтмәһе. Администрация бүлеге.* ■ *Хисмәтулла, администрацияның киҫәтеүенә ҡарамаҫтан, уны [Михаилды] ниңәлер яҡын кешеһе һымаҡ күрҙе.* Я. Хамматов.

**2.** Ойошмала, предприятиела идара итеү эшен алып барыусы вазифалы кешеләр. □ Администрация. *Завод администрацияһы. Институт администрацияһы.*

**3.** Хакимиәт. □ Администрация. *Ҡала администрацияһы. Район администрацияһы.*

**АДМИРАЛ** [рус. < гол. *admiraal* < швед. *amiral* < ғәр. امير البحر 'диңгеҙҙә хакимлыҡ итеүсе, диңгеҙ хужаһы'] (Р.: адмирал; И.: admiral; Т.: amiral) *и.*

Хәрби диңгеҙ флотындағы иң юғары дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше. □ Адмирал. / Адмиральский. *Флот адмиралы. Адмирал дәрәжәһе. Адмирал флагы.* ■ *Рәсәйҙең кадет корпустары ил өсөн физик яҡтан сыныҡҡан, әҙерлекле йәш үсмерҙәрҙе тәрбиәләп сығара. Адмиралдар Ушаков, Нахимов, фельдмаршалдар Пётр Румянцев, Михаил Кутузов һәм башҡаларҙың кадетсы булғанын тарихтан беләбеҙ.* «Йәшлек», 10 май 2008.

**АДМИРАЛТЕЙСТВО** [рус.] (Р.: адмиралтейство; И.: the Admiralty; Т.: amiral) *и.*

**1.** *иҫк.* Хәрби караптар төҙөү, йүнәтеү һәм кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү урыны. □ Адмиралтейство.

**2**. Рәсәйҙә һәм Англияла флот менән идара итеү органы. □ Адмиралтейство.

**3.** Санкт-Петербургта элекке хәрби флоттың баш идара йорто. □ Адмиралтейство. *Адмиралтейство йорто.*

**АДРЕНАЛИН** [рус. < лат. *ad* 'янында' + *renalis* 'бөйөр'] (Р.: адреналин; И.: adrenaline; Т.: adrenalin) *и. анат.*

**1.** Бөйөр өҫтө биҙҙәрендә эшләнеп сыға торған гормон; йөрәктең ҡыҫҡарыуҙарын йомшарта һәм көсәйтә. □ Адреналин.

**2.** Ҡан баҫымы төшкәндә, ҡан юғалтҡанда, бронхиаль астмала һ.б. ҡулланылған дарыу препараты. □ Адреналин. *Адреналин һалыу.*

**3.** *ҡар.* **медиатор 2**.

**АДРЕС** [рус. < пол. *adres* < фр. *adresse*] (Р.: адрес; И.: address; Т.: adres) *и.*

**1.** Кешенең йәшәгән ере, учреждениеның урыны. □ Адрес. *Минең адресым. Институт адресы.*

**2.** Почта аша ебәрелгән нәмәләрҙең тәғәйенләнгән урынын һәм кешеһен күрһәткән яҙыу. □ Адрес. *Йорт адресы. Адрес биреү. Адрес яҙыу. Хаттың адресы.* ■ *[Әхмәҙигә] хат яҙғанда минән сәләм яҙығыҙ. Адресымды яҙығыҙ.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡәҙерлеләрем, атай, әсәй! Быға са төплө генә адресым булмағанлыҡтан, хат яҙа алманым. Шулай*

*тура килде: гел күсеп йөрөйөм, гел юлдамын.* Т. Ғирфанов.

**3.** Мөһим ваҡиға уңайы менән берәй кешене ҡотлаған яҙыу. □ Адресное поздравление. *Юбилярға адрес әҙерләү.* ■ *Уларҙың мәртәбәле юбилейы нәҡ Ғашиҡтар көнөнә тап килеүе менән икеләтә байрам төҫө алды. Ә Башҡортостан Президентының ҡотлау адресы матур тантанаға рәсмилек өҫтәне.* «Йәшлек», 15 февраль 2011.

**4.** *инф.* Мәғлүмәттең компьютер хәтерендә торған урынын күрһәткән символ, билдә. □ Адрес *(символ, определяющий место хранения или назначения информации в памяти компьютера).*

**5.** *инф.* Компьютерҙың компьютерҙар сылбырында торған урынын билдәләүсе символдар, билдәләр. □ Адрес *(символы, однозначно определяющие местонахождение компьютера в компьютерной сети).*

**6.** *инф.* Электрон почтаның адресы. □ Адрес электронной почты. ■ *Һорауыңды inzer_arh@mail.ru электрон адресына яҙып ебәрә алаһың.* «Инйәр», № 99, 2011.

**АДРЕСАНТ** [рус.] (Р.: адресант; И.: addresser; Т.: gönderilen) *и.*

Почта, телеграф аша адреслап хат йә башҡа нәмә ебәргән кеше йәки ойошма. □ Адресант.

**АДРЕСАТ** [рус.] (Р.: адресат; И.: addressee; Т.: göndaren) *и.*

Хат йә башҡа нәмәлә адресы күрһәтелгән кеше йәки ойошма. □ Адресат. *Хаттың адресаты.* ■ *Адресатҡа хат ебәрәһең дә, яуапты бер нисә минуттан алаһың. Элемтәнең былдай тиҙлеге һоҡландыра, илһамландыра.* «Йәшлек», 9 декабрь 2007.

**АДРЕСЛАНЫУ (адреслан-)** *ҡ. ҡар.* **адреслау.**

**АДРЕСЛАУ (адресла-)** (Р.: адресовать; И.: address; Т.: adamak) *ҡ.*

Хат йә башҡа нәмәне берәй адресҡа тәғәйенләү. □ Адресовать. *Хатты адреслау. Миңә адресланған хаттар.*

**АДРЕСЛЫ** (Р.: адресный; И.: addres; Т.: adres) *с.*

**1.** Адресы булған. □ Имеющий адрес, с адресом. *Адреслы хат.*

**2.** *Кемгәлер, ниндәйҙер* төркөмгә тәғәйенләнгән ярҙам, программа. □ Адресный, адресованный. *Адреслы ярҙам. Адреслы программа.* ■ *Тәү сиратта был дәүләттең социаль сәйәсәтендәге дөйөм Рәсәй үҙгәрештәре менән бәйле. Халыҡтың аҙ тәьмин ителгән ҡатламдарына адреслы ярҙам — уның төп йүнәлештәренең береһе.* «Башҡортостан», 7 декабрь 2010.

**АДРЕСТАР ӨҪТӘЛЕ** (Р.: адресный стол; И.: address bureau; Т.: adresler bürosu) *и.*

*Ниндәйҙер* урында йәшәүселәрҙең адресы тураһында белешмә биреүсе учреждение. □ Адресный стол.

**АДСОРБЦИЯ** [рус. < лат. *ad* + *sorbeo*] (Р.: адсорбция; И.: adsorption; Т.: emme) *и. хим. физ.*

Күмерҙең һәм башҡа ҡаты есемдәрҙең үҙҙәренең өҫкө йөҙөндә газдарҙың, парҙарҙың һәм ирегән матдәләр өлөшсәләрен йотоу үҙенсәлеге. □ Адсорбция. *Газдар адсорбцияһы.*

**АДСОРБЦИЯЛАНЫУ (адсорбциялан-)** (Р.: адсорбироваться; И.: be adsorbed; Т.: emilmek) *ҡ. хим. физ.*

Газ, пар һәм ирегән матдәләр өлөшсәләренең ҡаты есем йөҙлөгөндә (мәҫәлән, күмерҙең) йотолоуы. □ Адсорбироваться. // Адсорбирование.

**АДСОРБЦИЯЛАУ (адсорбцияла-)** (Р.: адсорбировать; И.: adsorb; Т.: adsorbe etmek) *ҡ. хим. физ.*

Ҡаты есемдәрҙең үҙҙәренең өҫкө йөҙөндә газ, пар һәм ирегән матдәләр өлөшсәләрен йотоуы. □ Адсорбировать. // Адсорбция.

**АДСТРАД** [рус. < лат. *ad* ‘эргәһендә’ + *stratum* ‘ҡатлам’] (Р.: адстрад; И.: adstrat; Т.: adstrat) *и. лингв.*

Оҙаҡ аралашыу сәбәпле күрше телдең йоғонтоһонан барлыҡҡа килгән лексик ҡатлам. □ Адстрад. *Сыуаш телендәге татар адстрады. Үзбәк телендәге иран адстрады.*

**АДЪЕКТИВАЦИЯ** [рус. < лат. *adjectivum* ‘сифат’] *и. лингв. кар.* **сифатлашыу**.

**АДЫГЕЙ** (Р.: адыгей; И.: Adygea; Т.: Adıgey) *и.*

Адыгей Республикаһының төп халҡы һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Адыгей, адыгейцы. / Адыгейский. *Адыгей теле. Адыгей ҡатыны. Адыгей Республикаһы.*

**АҘ I** (Р.: мало; И.: little, few; Т.: az) *р.*

**1.** Һаны, күләме ғәҙәттәгенән кәм; әҙ. □ Мало, немного, незначительно. *Аҙ күреү. Аҙ һөйләү.* ■ *Мин башты аҙ ғына күтәреп ҡараным һәм бөтөнләй аптырап киттем.* С. Агиш. *Ул [Мөхтәр ҡарт] бик аҙ һүҙле ине, шуға күрә ҡушкуллап күрешер алдынан: — Һаумыһың! — тиеү менән сикләнде.* М. Ямалетдинов. ● *Ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар.* Әйтем.

**2.** Кәм һанда, етерлек булмаған күләмдә. □ Недостаточно. *Аҙ белеү.*

**3.** «Кәм һанда», «етерлек булмаған күләмдә» мәғәнәһендәге һүҙбәйләнештәрҙең беренсе өлөшө. □ Первая часть словосочетаний со значением «немного», «недостаточно». *Аҙ грамоталы. Аҙ ҡанлы. Аҙ тиражлы. Аҙ һүҙле.* ■ *Ҡара һин уны, үҫә бит редактор, ҡайһылай аҙ һүҙле, эшлекле булып бара.* Б. Бикбай.

♦ **Аҙ тигәндә** кәм тигәндә, кәмендә. □ Как минимум, по меньшей мере, самое малое.

**АҘ II** (Р.: мало; И.: little, few; Т.: az) *с.*

**1.** Һаны, күләме бәләкәй; әҙ; *киреһе — күп.* □ Малый по количеству и объему. *Аҙ аҡса. Газетаның тиражы аҙ. Аҙ һүҙ.* ● *Аҙ кешене күп кеше бер яйға килтерер.* Мәҡәл. *Күпте өмөт итеп, аҙҙан ҡоро ҡалма.* Әйтем.

**2.** Оҙаҡ дауам итмәгән, тиҙ үткән. □ Короткий, недолгий, непродолжительный. *Аҙ ғүмер. Аҙ ваҡыт эсендә.* ■ *Ҡояштың урман артына йәшеренеүенә бик аҙ ваҡыт ҡалғайны.* Д. Юлтый.

**АҘАҒЫ-БАШЫ** (Р.: суть; И.: that is all; Т.: öz) *и.*

Бар булғаны, бөтәһе, булмышы. □ Суть, сущность. *Аҙағы-башы шул.*

**АҘАҒЫНАСА** (Р.: до конца; И.: to the end; Т.: sonuna kadar) *р.*

Тамам булғанса, һуңына тиклем, бөткәнсе. □ До конца, до завершения. ■ *Нефтте аҙағынаса яндырһаң, 0,002—0,015 процент көл ҡала.* Д. Бураҡаев. *Ошо бик ҡатмарлы музыкаль әҙәбиәт фәненән беҙҙе баштан аҙағынаса Людмила Александровна уҡытты. Сәнғәткә иҫ киткес бирелгәнлеге һәм түҙемлеге өсөн уға ысын йөрәктән оло рәхмәт!* М. Ямалетдинов.

**АҘ-АҘЛАП** (Р.: понемногу; И.: a little; Т.: azar) *р.*

**1.** Аҙ-аҙ ғына итеп, аҙ күләмдә. □ Понемногу, помалу. *Аҙ-аҙлап ашау. Аҙ-аҙлап өйрәнеү. Аҙ-аҙлап биреү.* ■ *Урал, әйҙә, булмаһа, ҡабырсаҡты асайыҡ, һәр беренән аҙ-аҙлап, берәр тамсы эсәйек, — ҡандың тәмен беләйек.* «Урал батыр».

**2.** Әкренләп, яйлап. □ Постепенно, не сразу. *Бала аҙ-аҙлап шәбәйә башланы.*

**АҘАЙТЫЛЫУ (аҙайтыл-)** *к. төш. кар.* **аҙайтыу**. *страд. от* **аҙайтыу**.

**АҘАЙТЫУ (аҙайт-)** (Р.: уменьшать; И.: diminish; Т.: azaltmak) *к.*

Күләмен йәки һанын кәметеү. □ Уменьшать; убавлять. // Уменьшение; убавление. *Ғәскәрҙе аҙайтыу. Малды аҙайтыу. Сығымдарҙы аҙайтыу.*

**АҘАЙЫУ (аҙай-; аҙая)** (Р.: уменьшаться; И.: diminish; Т.: azalmak) *к.*

Күләм йәки һан яғынан кәмеү. □ Уменьшаться, убавляться. // Уменьшение, убавление. *Аҙыҡ аҙая башланы. Йылғаның һыуы аҙайған.*

**АҘАҠ I (аҙағы)** (Р.: конец; И.: end; Т.: son) *и.*

**1.** Билдәле бер ваҡыттың, миҙгелдең, эш-хәлдең бөтөп барған өлөшө, һуң. □ Конец. *Йыл аҙағы. Ай аҙағында. Йәй аҙағы. Аҙна аҙағы. Эш аҙағы.*

**2.** Эш-хәлдең һөҙөмтәһе, һуңынан килеп сыҡҡан шауҡымы; эҙемтә. □ Исход, последствия. ■ *Хупъямал, ҡара, арҡыры төшә торған булһаң, аҙағы насар булыр.*

Һ. Дәүләтшина. ● *Һүҙҙең башынан элек аҙағын уйла.* Әйтем.

**АҘАҠ II** (Р.: потом; И.: afterwards; Т.: sonra) *р.*

**1.** Бер ни тиклем ваҡыт үткәс; һуңыраҡ. □ Потом. ■ *Аҙаҡ күҙ күрер, һин бит, ҡәртсәй, беләһең, «себеште көҙ һанайҙар» тигән мәҡәл дә бар шикелле?!* З. Биишева.

**2.** Берәй эш-хәлдән һуң, берәйһенең артынан. □ После. *Минән аҙаҡ. Һинән аҙаҡ.* ■ *Аҙаҡ хужаһының ҡулын тотоп алды ла, уҫал ыҫылдап, бармағын уның йөҙөк ҡашына төрттө.* Ә. Хәкимов. *Шунан аҙаҡ [Өйрәнсек], Һөнәрсе үлгәс, уның ҡултамғаһы өҫтөнә үҙ тамғаһын баҫҡан да, данлы һөнәрсе булып та алған.* З. Биишева. *Аҙаҡ Айытҡолов ҡаршыһына, ысынлап та, ғәйебен танып барасаҡ, ғәфү үтенәсәк.* Д. Бүләков. ● *Яуҙан аҙаҡ йоҙроҡ күтәргән.* Әйтем.

**АҘАҠ КИЛЕП** (Р.: наконец; И.: lastly; Т.: nihayet) *инш.*

**1.** Ниһайәт. □ Наконец, в конце концов. ■ *Аҙаҡ килеп, ул ғүмер буйы изге һанап йөрөгән байҙарҙың аламалыҡтарына шаһит булыуы, уларҙың, бер-береһен күрә алмай, үҙ-ара низағлашып, боҙоҡлоҡ ҡылып йәшәүҙәрен, ярлыларҙы, шул иҫәптән Үмәрҙе лә, түбәнһетеү, кәмһетеү-мәсхәрәләүҙәренең хеҙмәт кешеһенә ҡаршы йүнәлтелгәнлеген аңлай алыуы уның намыҫына айырыуса ныҡ һуға, бар ышаныстарын юҡҡа сығара.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ахыр сиктә, тора-бара, аҙаҡтан. □ Под конец. ■ *Ғәжәп-Сәйет эт булып оҙаҡ йөрөгән, күп ерҙәрҙе гиҙгән. Аҙаҡ килеп, батша һарайындағы байлыҡты һаҡлап тора башлаған.* Әкиәттән.

**АҘАҠҠАСА** *р. ҡар.* **аҙағынаса.**

**АҘАҠҠЫ** (Р.: последний; И.: last; Т.: son) *с.*

**1.** Билдәле бер ваҡыт тамамланыуға яҡынлаған мәлдәге. □ Последний. *Аҙаҡҡы ай. Аҙаҡҡы минут.* ■ *Бахыр аҙаҡҡы һулышынаса йәмәғәтен, балаларын хәтерләп иланы, йәйгелектә ут бөркөп ятҡан Фирғәнәһе менән һаташты.* Ә. Хәкимов.

**2.** Төрлө эш-хәл йәки нәмәнең рәттәртибендәге иң һуңғыһы. □ Конечный, крайний, последний. *Аҙаҡҡы өмөт. Аҙаҡҡы һүҙ.* ■ *[Янһары] аҙаҡҡы тоҙағына ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, быныһына бик һылыу бер ҡыҙ эләккән.* Әкиәттән.

**АҘАҠ СИКТӘ** (Р.: под конец; И.: in the end; Т.: sonunda) *р.*

*Нимәлер* тамамланыр алдынан, ахыр сиктә. □ Под конец, напоследок. ■ *Аҙаҡ сиктә түҙәлмәй, йыланға ҡаршы торалмай, сәсәп, йығылған болан.* «Урал батыр».

**АҘАҠТАН** (Р.: потом; И.: afterwards; Т.: sonra) *р.*

*Ни ҙә* булһа тамамланғас, *нимәнәндер* һуң йәки билдәле бер ваҡыт үткәс; һуңынан. □ Потом, после, попозже. ■ *Фәһимә башта йүгерҙе, аҙаҡтан атлап китте.* С. Агиш. *Иң аҙаҡтан Аҡъял батыр арҡанға үҙе тағылып менеп киткән, ти.* Әкиәттән.

**АҘА ҠУБЫУ (аҙа ҡуп-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ҡотороноу.**

**АҘАЛАНДЫРЫУ (аҙаландыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **аҙаланыу**. *понуд. от* **аҙаланыу**.

**АҘАЛАНЫУ (аҙалан-)** (Р.: стремиться; И.: long for; strive (for); Т.: hevesinde olmak) *ҡ.*

**1.** *Ниндәйҙер* теләк менән яныу, ашҡыныу; шашыныу. □ Стремиться, рваться. // Стремление, рвение. ■ *[Хәмдиә иренә:] Үҙ башыңа аҙаланып йөрөйһөңмө! Ни булды һиңә?* С. Агиш.

**2.** Бер ерҙә тора алмай йөрәкһеү. □ Порываться, рваться, стремиться, устремиться. // Порыв, рвение, стремление. ■ *[Таңдыса:] Аҙаштырмаҫ ерҙән аҙаштырҙы аҙаланған өс баш малғынам.* «Ҡуңыр буға».

**3.** *диал.* Яраттырыу, үҙенә ҡаратыу. □ Увлечь, заставить полюбить.

**4.** *диал.* Шаяртыу, тик тормау. □ Шалить, озорничать. // Шалость, озорство.

**5.** *диал. ҡар.* **аҙыу 2.** *Олоғайғас аҙаланып йөрөп алды, көнө еткәнсе.*

**АҘАМАН** *с. диал. ҡар.* **аҙғын 5.**

**АҘАМАТ** [ғәр. عظمة ‘бөйөклөк’] (Р.: почтенный; И.: respected person; Т.: saygıdeğer adam) *и.*

**1.** Халыҡ алдында танылған оло, хөрмәтле кеше; ил ағаһы. □ Почтенный, уважаемый человек. *Ил аҙаматы.* ■ *Яҡшы аҙамат йорт көтһә, йорто имен көтөләр.* Ҡобайырҙан. *Илгә аҙамат булырһың, ҡан илаған етемгә ата һымаҡ булырһың!* «Аҡбуҙат».

**2.** Көскә ултырған, ныҡлы батыр ир. □ Крепкий, здоровый, смелый мужчина. *Аҙамат ир.* ■ *Ҡораллы аҙаматтар дейеү батшалығына ер һелкетеп, донъя шаулатып килеп еткән, ти, бер заман.* Әкиәттән. ● *Кешегә шәфҡәт итеп юл бир, аҙаматҡа хөрмәт итеп ҡул бир.* Әйтем. *Аҙамат ирҙең билдәһе — аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар.* Әйтем.

**3.** Билдәле бер дәүләттә даими рәүештә йәшәп, шул дәүләттең законлары нигеҙендә бөтә хоҡуҡ менән файҙаланған һәм законлағы бөтә бурысты үтәгән кеше; граждан. □ Гражданин.

**АҘАМАТЛЫ** (Р.: почтенный; И.: respected; Т.: saygın) *с.*

**1.** Бөйөк. □ Почтенный, великий. *Аҙаматлы аҡһаҡал.*

**2.** Ғорур. □ Гордый, сильный. *Аҙаматлы кеше.*

**АҘАМАТТАЙ** (Р.: крупнотелый; И.: big; Т.: iri gövdeli) *с. диал.*

Эре кәүҙәле. □ Крупнотелый. *Ике аҙаматтай эт бүрегә ташланды.*

**АҘАМАУ (аҙама-)** *ҡ. диал. ҡар.* **арымау.** *Көнө буйы килһәм дә аҙаманым әле.*

**АҘАН** [ғәр. اذان] (Р.: азан; И.: Moslem call for prayer; Т.: ezan) *и. дини.*

**1.** Намаҙға саҡырғанда әйтелә торған ҡыҫҡа доға; тәкбир. □ Азан *(призыв к обязательной молитве у мусульман, возвещаемый с минарета муэдзином).* *Иртәнге аҙан. Киске аҙан.* ■ *Манаранан яңғыраған изге аҙан тауышы шул тиклем сихри көскә эйә, хатта бала-саға ла уға ылыға.* «Йүрүҙән», 12 ноябрь 2010.

**2.** Балаға исем ҡушҡанда әйтелә торған ҡыҫҡа доға. □ Азан *(молитва у мусульман при наречении именем).* ■ *Олатайымдың вафатынан һуң Аһылай ауылынан йәйләп-йәйләп ҡот китә башланы — исем ҡушҡанда аҙан әйтерлек, әжәл килгәндә ясин сығырлыҡ та кеше ҡалманы.* М. Ямалетдинов.

**3.** Төрлө ауырыу, бәләләрҙән һаҡланыу өсөн уҡылған доға. □ Молитва *(«оградительная» молитва, совершающаяся для «отгона» болезней, бед и т.п., а также в напутствие).*

**АҘАН ҠЫСҠЫРЫУ (аҙан ҡысҡыр-)** (Р.: призывать к молитве *(у мусульман)*; И.: call for prayer; Т.: ezan okumak) *ҡ. дини.*

**1.** Намаҙға саҡырып аҙан доғаһын уҡыу. □ Призывать к обязательной молитве *(у мусульман)*, возвещаемой с минарета муэдзином. // Призыв к молитве. *Иртәнге аҙан. Киске аҙан.* ■ *Иман йортона урта йәштәрҙәге мулла көнөнә биш тапҡыр килеп, аҙан ҡысҡыра, иманлы ауыл халҡы намаҙға йөрөй ине.* «Йәшлек», 17 июнь 2008.

**2.** Балаға исем ҡушҡанда доға әйтеү. □ Читать молитву при наречении именем *(у мусульман).* // Чтение молитвы. ■ *Аҙан ҡысҡырылмаһа, кеше теге донъяла исемен таба алмай, ти.* Ф. Хисамитдинова.

**АҘАНСЫ** (Р.: муэдзин; И.: muezzin; Т.: müezzin) *и. диал.*

Аҙан әйтеүсе, мәзин. □ Муэдзин *(служитель мечети, призывающий с минарета к молитве).* *Аҙансы аҙан әйтә.*

**АҘАНЫУ (аҙан-)** (Р.: растеряться; И.: become (get) lost; Т.: şaşırmak) *ҡ. диал.*

Ни эшләргә лә белмәй, аптырашҡа ҡалыу; ҡаушау. □ Растеряться. // Растерянность. *Аҙаныып тороу.* ■ *Шлыков, ҡапыл ғына ни әйтергә белмәй, аҙаныып ҡалды.* Ш. Бикҡол.

**АҘАН ӘЙТЕҮ (аҙан әйт-)** *ҡ. дини. ҡар.* **аҙан ҡысҡырыу 1.** ■ *Мәзин ҡарт аҙан әйтергә тип ике ҡулы менән ҡолаҡтарын ғына тотҡайны, ауыл яғынан председатель менән бер нисә кеше килеп сыҡты.* А. Карнай. *Ҡотлоғужа ҡунаҡтарҙы оҙата сыҡҡанда мәзиндең мәсет манараһынан көйләп-көйләп аҙан әйткәне ишетелә ине.* Н. Мусин.

**АҘАҢЛАУ (аҙаңла-)** (Р.: стоять беспокойно; И.: stand uneasily; Т.: huzursuz olmak) *ҡ.*

Тик тормау, тыпырсыныу, ялт-йолт ҡараныу. □ Стоять беспокойно, озираясь. ■ *Һыйырым һауырға бирмәй аҙаңлап тик тора.* Ғ. Хөсәйенов.

**АҘАП (аҙабы)** [ғәр. عذاب] (Р.: мучение; И.: torment; Т.: ıstırap) *и.*

Баштан кисерелгән эш, тормош ауырлығы; ыҙа, яфа; михнәт. □ Мучение, страдание, мука. *Аҙап күреү. Юл аҙабы.* ■ *Шулай итеп, мең бәлә менән атты ҡыуып алып ҡайтам. Шул тиклем аҙап менән йөрөп ҡайтҡас, .. улар тиргәй.* М. Ғафури. *Юл аҙабы — гүр ғазабы тигәндәй, юлда аҙаштыҡ, етмәһә, машинабыҙ боҙолдо.* «Башҡортостан», 10 ноябрь 2010. ● *Юл аҙабы — гүр ғазабы.* Әйтем.

**АҘАП КҮРЕҮ (аҙап күр-)** (Р.: мучиться; И.: suffer (from); Т.: azap çekmek) *ҡ.*

Ыҙаланыу, яфа сигеү. □ Мучиться, страдать. // Мучение, страдание. ■ *Билал бер нисә көн ял итмәй, юл аҙабы күреп, арыу, талыу, талсығыуына ҡарамаҫтан, тыныс бара алманы.* А. Таһиров.

**АҘАП ҠАЛЫУ (аҙап ҡал-)** (Р.: растеряться; И.: get lost; Т.: apışıp kalmak) *ҡ.*

Аптырап, ҡаушап, ни эшләргә белмәй юғалып ҡалыу. □ Растеряться. ■ *Әгәр инде ул [Емеш] үҙе хаҡында уйлана башлаһа, төптө аҙап ҡала: кем ул? Ни өсөн тыуған, ниңә йәшәй?* З. Биишева. *Беҙ һинең менән бер ҡыйынлыҡтан да ҡурҡып, аҙап ҡалмайбыҙ шул, олатай, — тип оло кешенең һүҙен йөпләп ҡуйҙы кесеһе — балалыҡ йәшенән сыҡмаған ейәне.* «Йәшлек», 8 апрель 2010.

**АҘАПЛАНДЫРЫУ (аҙапландыр-)** (Р.: мучить; И.: torment; Т.: azap çektirmek) *ҡ.*

**1.** Ауыр хәлгә ҡуйып яфалау; этләндереү. □ Мучить. *Аҙапландырып йәшәтеү.*

**2.** Арлы-бирле һупалап эшләү; маташтырыу. □ Делать *что-л.* наспех, кое-как. ■ *[Гүзәл:] Бына ниндәй йүнһеҙ кешеләр була донъяла, эште эш итеп эшләмәйҙәр, ә күҙ буяу өсөн генә аҙапландыралар.* И. Ғиззәтуллин.

**АҘАПЛАНЫУ (аҙаплан-)** (Р.: мучиться; И.: suffer (from); languish; Т.: ıstırap) *ҡ.*

**1.** Ауырлыҡ кисереү, яфаланыу, ыҙаланыу. □ Мучиться, маяться. // Мучение, маета. ■ *Гөлйөҙөм төнө буйы аҙапланды. Күҙгә ут күренерлек итеп алған әсе тулғаҡтан һуң маңлайынан шыбыр тирҙәр акты.* Һ. Дәүләтшина .

**2.** Берәй эште башҡарып маташыу. □ Пытаться, силиться *что-л.* сделать. ■ *[Яруллин] калушының уңын һулға, һулын уңға кейеп аҙапланды.* С. Агиш. *Ҡамыш араһында [һыңар] ҡанаты менән генә талпынып, бер ҡыр ҡаҙы осорға аҙаплана.* М. Ғафури. *Сабыйҙың әрнеүле һағышы кескәй бармаҡтарына аңлатып биреп булмаҫтай ҡеүәт биргәйне, уны [әсә] үҙенән айырып ала алмай аҙапланды.* Г. Ғиззәтуллина.

**3.** *Нимә менәндер* шөғөлләнеү, мәшәҡәтләнеү, булышыу. □ Возиться *с чем-либо*, заниматься *чем-либо.* ■ *Әсәйем усаҡ тирәһендә аҙаплана.* Т. Килмөхәмәтов.

**АҘАПЛАУ (аҙапла-)** (Р.: мучить; И.: torment, torture; Т.: eziyet etmek) *ҡ.*

**1.** Ауырлыҡ күрһәтеү; ыҙалау, яфалау, йәберләү. □ Мучить, причинять страдания, боль. *Бил аҙаплай. Малды аҙаплау.*

**2.** Килешмәгән эш менән булышыу, урынһыҙ ҡыланыу. □ Вытворять, выделывать, вести себя неподобающе. *Әллә нимә аҙаплай, балаларҙа ла эше юк, сығып китә лә юғала.*

**АҘАПЛЫ I** (Р.: мучительный; И.: poignant; Т.: ıstırap verici) *с.*

**1.** Ауырлығы күп булған; яфалы, ыҙалы. □ Мучительный, тяжёлый, тягостный. ■ *Ҡурайсы әлегә донъяла тиңе етмәгән ҡыр ҡурайының йөрәктәрҙе иретерлек моңо арҡылы башҡорттарҙың .. ике мең йыллыҡ аҙаплы тарихын асып бирә.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Мәшәҡәтле, ығы-зығылы. □ Хлопотливый, беспокойный. *Аҙаплы эш.*

**АҘАПЛЫ II** (Р.: как обычно; И.: usually, as usual; Т.: genellikle) *инш.*

Әлеге лә баяғы, ғәҙәттәгесә, һәр ваҡыттағыса. □ Как обычно, как известно, как водится. ■ *Ниндәй ауыр эш булмаһын, аҙаплы, миңә әйтәһегеҙ.* Т. Морат.

**АҘАП СИГЕҮ (аҙап сик-)** *ҡ. ҡар.* **аҙап күреү.**

**АҘАР** (Р.: неудобство; И.: inconvenience; Т.: sıkılma) *и.*

Уңайһыҙлыҡ, борсоу, хафа. □ Неудобство, беспокойство, тревога, волнение. ● *Баланың аҙары булһа ла, биҙәре юҡ.* Әйтем.

**АҘАР-БИҘӘР БУЛЫУ (аҙар-биҙәр бул-)** (Р.: испортить взаимоотношения; И.: spoil relationships; Т.: ilişkileri bozmak) *ҡ. диал.*

Үҙ-ара мөнәсәбәт боҙолоу. □ Испортить взаимоотношения. *Аҙар-биҙәр булып бөттөләр.*

**АҘАРЫНА-АҘАРЫНА** (Р.: умоляя; И.: entreating; Т.: yalvararak) *р.*

Бик ныҡ үтенеп; ялынып, ялбарып. □ Умоляя. ■ *Әсәһе лә, аҙарына-аҙарына: «Эй, Раббым, ҡыҙҙарыма ир бәхеткенәһе насип ит инде, ҡалғанына улар үҙҙәре лә шәп, бирешмәҫтәр», — тип теләй ине бит.* Т.Шәрәфетдинова.

**АҘАРЫНА-БИҘӘРЕНӘ** *р. ҡар.* **аҙарынып-биҙәренеп.**

**АҘАРЫНЫП-БИҘӘРЕНЕП** (Р.: умоляя; И.: entreating; Т.: yalvararak) *р.*

**1.** Бик ныҡ үтенеп; ялынып, ялбарып. □ Умоляя. ■ *Егет кеҫәрткене үлтерергә бер ҙә генә риза булмаған. Кеҫәртке уға төрлөсә әйтеп ҡараған, аҙарынып-биҙәренеп инәлгән.* Әкиәттән.

**2.** Ағарып-буҙарып, төҫө ҡасып *(һөйләү).* □ Побледнев *(говорить, разговаривать).* ■ *[Ғариф] сәй эскәндә атының ауырыуы хаҡында аҙарынып-биҙәренеп һөйләп ултырҙы.* Н. Мусин.

**АҘАРЫНЫУ (аҙарын-)** (Р.: умолять; И.: entreat; Т.: yalvarmak) *ҡ.*

**1.** Үтенеп һорау; ялыныу, инәлеү. □ Умолять, упрашивать, просить. // Мольба, просьба. ■ *Бер һин генә ҡотҡара алаһың, түрә. Беҙҙең бүтән барыр еребеҙ, батыр ҡулебеҙ юҡ. Аллам алдында ант итеп, һиңә баш орамын, — тип аҙарынды Мәрзиә.* Ғ. Ибраһимов. *Йәй бик эҫе, ҡоро булды. Кешеләр һәр көн зарығып, аҙарынып ямғыр көттө.* З. Биишева.

**2.** Борсолоу, көйәләнеү, өҙгөләнеү. □ Переживать, беспокоиться, тревожиться. // Переживание, беспокойство, тревога. ■ *Ишек тауышына улар [ике малай] ҡутәрелеп ҡараны. Йөҙҙәрендә .. борсоулы ҡайғыртыу, кем өсөндөр аҙарыныу ярылып ята ине.* Ә. Вахитов. *Алтынбай аҙарынып үҙенең сәсенә йәбеште.* З. Ураҡсин.

**3.** Үҙ хәлеңде зарланып һөйләү, аһ-зарҙы кешегә белдереү. □ Роптать, сетовать. // Ропот, сетование. ■ *Салиха аҙарынды, иренең китеүенә ҡайғырҙы.* Ж. Кейекбаев.

**4.** *дини.* Аллаға зарынды һөйләп уҡыныу. □ Прибегнуть к молитве, молиться. *Аллаға аҙарыныу.*

**5.** *диал.* Таныу, кире ҡағыу. □ Отказываться, отрицать *что-л.*, отпираться. // Отказ, отрицание. *Алманым да алманым тип аҙарына.*

**6.** Ҡыҙып китеп ағарыныу. □ Побледнеть от злости. *Аҙарынып, киҙәнеп, енен сәсеп килә.*

7. *диал. ҡар.* **зарланыу.** *Йортом булһа, тип аҙарынып йөрөгән саҡтар бар ине лә бит.*

**АҘАТ ИТЕҮ (аҙат ит-)** *ҡ. диал. ҡар.* **юғалтыу**. *Әллә ҡайҙа йөрөтөп ул балдағыңды аҙат иттең.*

**АҘАУ I (аҙа-)** (Р.: растеряться; И.: get lost; Т.: şaşırmak) *ҡ.*

**1.** Ни эшләргә белмәй, аптырау; ҡаушау. □ Растеряться, теряться. ■ *[Айһылыу:] Егет, мин бик аҙаным, күҙ ышанмай күргәнгә.* «Урал батыр».

**2.** *диал. ҡар.* **арыу 1.**

**АҘАУ II (аҙа-)** (Р.: прокисать; И.: turn sour; Т.: ekşimek) *ҡ.*

Оҙаҡ һаҡланыу, оҙаҡ һаҡланып иҫкереү. □ Прокисать, бродить. *Ҡымыҙ аҙаған, ғызлап тора.*

**АҘАУ III** (Р.: пролежавший зиму; И.: wintered; Т.: kışlayan) *с.*

**1.** Оҙаҡ һаҡланған, ҡышлаған *(ашлыҡ, бесән тураһында).* □ Пролежавший зиму, перезимовавший *(о хлебе, сене).* ■ *Аҡланда лыпашып бөткән ҡап-ҡара аҙау кәбән ултыра: был аҡландарҙы үткән йылдарҙа сапҡан булырға тейештәр.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *диал.* Сәселмәйенсә, ҡойолоп үҫкән иген. □ Хлеба, выросшие из осыпавшегося зерна. *Аҙау һоло. Аҙау бойҙай.*

**3.** Оҙаҡ һаҡланған, оҙаҡ һаҡланып шәкәрләнгән *(бал тураһында).* □ Застоявшийся, засахарившийся *(о мёде). Аҙау бал.*

**4.** Элекке, оҙаҡ һаҡланған, иҫкергән, яңы түгел. □ Старый, несвежий; прошлогодний. *Аҙау ҡар. Аҙау таҡта. Аҙау утын.*

**5.** *диал. ҡар.* **уҫал 2.** *Ул бик аҙау, хәтәр кеше.*

**6.** Бик ҡарт. □ Престарелый. *Аҙау ни, сабый ни, барыбер инде. Аҙау ир.*

**АҘАУ IV** *с. диал. ҡар.* **аҫау**. *Аҙау айғыр.* ■ *Сума аҙау сөмгөл упҡынға, менә аҙау, ярһып, ярҙарға. Ғәрлек ҡатыш ғәйрәт төйнәлгән, ҡуш уҫланып, шәлкем ялдарға!* Й. Солтанов.

**АҘАУ V** *и. диал. ҡар.* **нәҫел айғыры.**

**АҘАУ АҒАС** (Р.: сухое строительное дерево; И.: construction timber; Т.: kereste) *и. диал.*

Ҡабығынан таҙартылған, киптерелгән ағас. □ Сухое строительное дерево.

**АҘАУАНДАЙ** *с. диал. ҡар.* **әҙмәүерҙәй**. *Бынау аҙауандай булып тороп эшләмәй йөрөй.*

**АҘАУ ЕР** *и. диал. ҡар.* **сиҙәм.**

**АҘАУ ҠЫҘ** (Р.: старая дева; И.: old maid; Т.: evde kalmış kız) *и. диал.*

Оҙаҡ кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ. □ Старая дева.

**АҘАУЛАНЫУ I (аҙаулан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **кибеү**. ■ *Аҙауланып кибеп ҡала имәнтабан, сылтылдап ҡына тора.* Экспедиция материалдарынан.

**АҘАУЛАНЫУ II (аҙаулан-)** (Р.: долго не жениться; И.: long time to get married; Т.: uzun zamandır evlenmemek) *ҡ. диал.*

Оҙаҡ өйләнмәй йөрөү, йәше үтеү. □ Долго не жениться, в своё время не обзавестись семьёй. *Аҙауланған иргә ней кем барһын?*

**АҘАУЛАНЫУ III (аҙаулан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аҙыу I, 3.**

**АҘАУ МАЛ** (Р.: старое животное; И.: old animal; Т.: yaşlı hayvan) *и. диал.*

Оҙаҡ йәшәгән ҡарт мал. □ Старое животное.

**АҘАУ ТЕШ** (Р.: коренной зуб; И.: molar; Т.: azıdişi) *и.*

**1.** Яңаҡтың төп яғындағы яҫы теш; яңаҡ теше. □ Коренной зуб. *Ауыҙ ҡыуышлығы төпкөлөндә аҙау тештәр була.* ■ *Ҡуш аҙаулы һоҫа теш, осло эйәк, ас яңаҡ — шул буҙ атты бирәйем.* М. Буранғолов. *Бурыл — ҡыҙыҡһынып һөйләй, рәхәтләнеп тыңлай торған бер әкиәткә әйләнде. — Бурыл шулай икән... — Ҡайыш бауҙарҙы ла өҙә икән... — Аҙау тештәре алтау икән...* С. Агиш.

**2.** *диал.* Ҡаҙыҡ теш. □ Клык.

**АҘАШ** [дөйөм төрки *адаш*] (Р.: тёзка; И.: namesake; Т.: adaş) *и.*

Бер исем йөрөткән ике йәки бер нисә кеше *(бер-береһенә ҡарата).* □ Тёзка. ■ *Ана мәктәп директоры ла Зыя ағай — минең аҙаш. Уның исемен онотмаһағыҙ, иҫкә төшөрһәгеҙ, минекен дә онотмаҫһығыҙ.* М. Тажи.

**АҘАШТЫРЫУ (аҙаштыр-)** (Р.: заводить в незнакомое место *кого-л.*; И.: take (bring) to an unfamiliar place; Т.: bilinmeyen yere götürmek) *ҡ.*

**1.** Юлдан яҙҙырыу, яңылыш юлға төшөрөү. □ Заводить в незнакомое место *кого-л. (с целью избавиться от него).* ■ *Аҙаштырған болан балаһындай, яңғыҙ башым ситтә интегәм.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Яңылыш юлға баҫтырыу; хаталандырыу. □ Вводить в заблуждение. ■ *Ҡараңғы ла төндә йөрөгәндә, аҙаштырмай ерҙең мижаһы. Аҙаштырмай ерҙең ай мижаһы, аҙаштыра донъя нужаһы.* Халыҡ йырынан.

**АҘАШ ҺҮҘ** (Р.: омоним; И.: homonym; Т.: adaş) *и. лингв.*

Әйтелештәре һәм яҙылыштары бер, мәғәнәләре төрлө булған һүҙҙәр. □ Омоним. ■ *Аҙаш һүҙҙәр кулланыуҙың классик үрнәген 18 йәшлек Рәшит Назаров үҙенең «Йәшен» тигән шиғырында бирә.* Ғ. Ҡаһарманов.

**АҘАШЫУ (аҙаш-)** [дөйөм төрки *адаш-, азаш-*] (Р.: заблудиться; И.: lose one's way; Т.: yolunu kaybetmek) *к.*

**1.** Юлды юғалтыу, юлдан яҙыу. □ Заблудиться, плутать, блуждать, сбиться с пути. ■ *Юлдан яҙлығып, аҙашып йөрөнөм, — тине Иштуған, иҫе китмәй генә.* З. Биишева. *Ул ауыр йылдарҙа юл йөрөү ифрат ҡыйын ине, .. күҙ асҡыһыҙ һалҡын бурандарҙа аҙашып ҡалған саҡтар ҙа булғыланы.* Р. Янбулатова. ● *Айлы төн аҙашмаҫҡа яҡшы.* Әйтем.

**2.** Башҡаларҙан айырылып, яҙлығып ҡалыу. □ Отстать от других, заблудиться. ■ *Баш осонан яңғыҙ ҡыр өйрәге быжҡылдап осоп китте. Бала өйрәк. Күрәһең, өйөрөнән аҙашҡандыр инде.* Б. Бикбай. ● *Ҡайтып килеп өйөрөн тапһа, аҙашҡан малды әрләмә.* Әйтем.

**3.** *күсм.* Яңылыш юлға баҫыу; хаталаныу. □ Заблуждаться, сбиться с пути. ■ *Кешеләрҙең шат, өмөтлө моңһоу күҙҙәренә ҡарап барамын: юлдарымда аҙашмаҫ өсөн, йырҙарымда алдашмаҫ өсөн.* М. Кәрим. ● *Яңғыҙ йөрөп һуҡмаҡ ярғансы, күп менән бергә аҙаш.* Әйтем. *Аҙашһаң, ил менән аҙаш.* Мәҡәл.

**АҘБАР** [ғәр. عنبر] (Р.: хлев; И.: cattleshed; Т.: ahır) *и.*

Мал бикләй торған ябыулы кәртә; һарай. □ Хлев, сарай, амбар. *Ат аҙбары. Һыйыр аҙбары. Аҙбар арты.* ■ *Иртәгеһен иртәнсәк Сөйәлбайҙың атаһы Толпарҙы аҙбарҙан сығарған.* Әкиәттән.

**АҘБАР-ҠУРА** *и. диал. ҡар.* **аҙбар.** *Аҙбар-ҡура мал менән тулды.*

**АҘБАР ХУЖА** *и. диал. ҡар.* **аҙбар эйәһе.**

**АҘБАР ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух скотного двора; И.: spirit of a farmyard; Т.: sığır ahırının perisi) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында аҙбарҙа, мал һарайында йәшәгән эйә. Ышаныуҙар буйынса, ул кешегә ярҙам итеүсе яҡшы зат, кәртә-ҡураны, мал-тыуарҙы төрлө яман заттарҙан һаҡлай; мал эйәһе. □ Дух скотного двора. ■ *Аҙбар эйәһенең яратҡан һәм яратмаған малдары була. Яратҡан малын эйә ашата, иркәләй, һаҡлай. Яратмаған малды ул интектерә, арыта, хәлһеҙләндерә.* Ф. Хисамитдинова.

**АҘБАР ӘБЕЙ** *и. диал. ҡар.* **аҙбар эйәһе.**

**АҘҒЫМ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Балаҡатай ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-балакатайцев.

**АҘҒЫН** (Р.: бродячий; И.: vagrant; Т.: serseri) *с.*

**1.** Ситтә йөрөргә әүәҫ; йөрөмтәл *(мал-тыуар тураһында).* □ Бродячий, любящий рыскать *(о скотине).* ■ *[Фәйзулла:] Аҙғын ат икән был ҡолан. Алдында әллә ни саҡлы бесәне була тороп, ем эҙләп киткән, булдыҡһыҙ.* Ғ. Ғүмәр. ● *Ат аҙғыны тайға эйәрер.* Әйтем.

**2.** Әхлаҡ-тәртипкә күнмәгән; тыйнаҡһыҙ. □ Безнравственный, несдержанный, нескромный, развязный. ■ *Мин Исмәғилдең төҙәлмәҫлек бер аҙғын бала булыуына ышанмайым.* Яр. Вәлиев.

**3.** Енси яҡтан тотанаҡһыҙ; йөрөмтәл. □ Развратный, распутный, распущенный, похотливый. *Аҙғын кеше. Аҙғын күңел.* ■ *[Үмәр:] Ике донъяла изгелек күрмәгер, аҙғын ҡыҙ! Уф алла!* Һ. Дәүләтшина. ● *Аҡыллының ҡулы уйнар, аҙғындың күҙе уйнар.* Әйтем.

**4.** Төрлө тоҡом ҡатнашып, үҙ тоҡомон юғалтҡан *(үҫемлектәр, хайуандар тураһында).* □ Перерождённый, смешанный, гибридный *(о породе животных, о сорте растений). Аҙғын арыш. Аҙғын эт.* ● *Эт аҙғыны буранда ҡоторор.* Әйтем.

**5.** Тиҙ боҙолоусан, бәләкәй генә яранан да боҙолоп китеүсән *(тәнгә ҡарата).* □ Усу-

губляющийся, распространяющийся *(о ранах). Тәнең аҙғын икән, шырау ингәнгә генә ҡалай боҙолоп киткән.*

**6.** *диал.* Сәселмәйсә ҡойолоп үҫкән үҫемлек. □ Выросший из осыпавшегося зерна. *Аҙғын кишер. Аҙғын мәк.*

**АҘҒЫНЛАНЫУ (аҙғынлан-)** (Р.: любить рыскать; И.: be fond of prowling; Т.: serseri olmak) *к.*

**1.** Ситтә йөрөргә әүәҫләнеү, йөрөмтәлгә әйләнеү *(малға ҡарата).* □ Рыскать, не кормиться на одном месте *(о скотине). Көҙгә ҡарай мал аҙғынланды.*

**2.** Тәртипһеҙгә, әхлаҡһыҙға әйләнеү; тыйнаҡһыҙланыу. □ Стать невыдержанным, недисциплинированным, вести себя развязно, безнравственно. *Бала аҙғынланған.*

**3.** Енси яҡтан тотанаҡһыҙланыу; боҙолоу, аҙыу. □ Развратничать, распутничать. *Ҡыҙҙарҙың аҙғынланыуы, тәмәке тартыуы борсой.*

**АҘҒЫНЛАУ (аҙғынла-)** *к. диал. ҡар.* **аҙыу I, 4, 5.**

**АҘҒЫНЛЫҠ (аҙғынлығы-)** (Р.: развратность; И.: depravity; Т.: disiplinsizlik) *и.*

Әхлаҡи боҙоҡлоҡ, күңел боҙоҡлоғо. □ Развратность, распутство; распущенность, блудливость, похотливость. *Аҙғынлыҡҡа бирелеү.* ■ *Аҙғынлыҡ тәрбиә етмәүҙән килә.* Ғ. Шәрипов.

**АҘҒЫНТЫҠ** *с. диал. ҡар.* **аҙғын 1.**

**АҘҒЫН ШЕШ** (Р.: рак; И.: cancer; Т.: kanser) *и.*

Йылдам үрсеүле күҙәнәктәрҙән торған яман сир; яман шеш. □ Рак, злокачественная опухоль.

**АҘҒЫР** *с. диал. ҡар.* **аҙман II.**

**АҘҘЫРЫУ (аҙҙыр-)** (Р.: баловать; И.: pamper; Т.: şımartmak) *к.*

**1.** Артыҡ иркәләп тәртипһеҙгә, тыйнаҡһыҙға әйләндереү, боҙоу. □ Баловать, изнежить. *Баланы аҙҙырыу.*

**2.** Аҙғынлыҡ юлына, әхлаҡһыҙлыҡҡа төшөрөү; боҙоу. □ Развращать, соблазнять, совращать. ■ *Борон заманда аҙмағанды аҙҙырып, туҙмағанды туҙҙырып йөрөгән бер Мәскәй булған, ти.* Әкиәттән. ● *Яман юлдаш аҙҙырыр, яҡшы юлдан яҙҙырыр.* Әйтем.

**3.** Ауырыуҙы, яраны ваҡытында дауаламай шаштырыу. □ Запускать *(болезнь).* ■ *Элек ни, бер ер ҡырҡылһа, көл һалып, яра ташы ҡырып, аҙҙырып йөрөгәнбеҙ икән.* С. Агиш.

♦ **Башын** (*йәки* **күңелен) аҙҙырыу** боҙоҡлоҡҡа төшөрөү, аҙғынлыҡ юлына баҫтырыу. □ Соблазнять, развращать. ■ *[Гөлмәрфуға:] Әлеге шул сибәрлеге, аҫыл теле менән күңелемде аҙҙырҙы.* Д. Исламов.

**АҘ ҠАНЛЫЛЫҠ (ҡанлылығы)** (Р.: малокровие; И.: anemia; Т.: kansızlık) *и.*

Ҡанды күп юғалтҡанлыҡтан йә ҡанда ҡыҙыл тәнсәләр етешмәгәнлектән ауырыу. □ Малокровие. *Талҡан — аҙ ҡанлылыҡ, тиҙ арыусанлыҡ, башҡа ауырыуҙарға кәртә.* ■ *Был ифрат файҙалы аҙыҡ [карбуҙ] шәкәр диабеты, аҙ ҡанлылыҡ, атеросклероз, һимереү менән яфаланған кешеләргә, онкологик ауырыуҙарҙы профилактикалау өсөн тәҡдим ителә.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010. *Элек, хужалыҡтар күпләп мал тотҡан иркен ваҡытта, бөтә ашамлыҡ тәбиғи, таҙа булғанлыҡтан, хәҙерге ваҡыттағы кеүек ҡан баҫымы, аҙ ҡанлылыҡ, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары кеүек сирҙәрҙе кешеләр белмәгән дә.* «Башҡортостан», 21 июль 2011.

**АҘЛАП** (Р.: понемногу; И.: little by little; Т.: az az) *р.*

Бәләкәй-бәләкәй өлөштәр менән; *киреһе* — күпләп. □ Понемногу, мало-помалу. *Аҙлап өйрәнә башлау.* ■ *Сәлимә тәүге иренән ҡалған барлы-юҡлы малын аҙлап үрсетеп, тырышып балаларын тәрбиәләне.* Һ. Дәүләтшина. *Шулай һүҙгә һүҙ ялғанып, усаҡҡа аҙлап утын өҫтәй-өҫтәй һөйләште лә һөйләште улар.* Н. Мусин.

**АҘЛАП-АҘЛАП** *р. ҡар.* **аҙ-аҙлап.** *Аҙлап-аҙлап өҫтәү.* ■ *Усаҡтарға аҙлап-аҙлап бер туҡтауһыҙ [утын] өҫтәнек — килеп кенә ҡараһындар!* Й. Солтанов. *Хәҙергә майға бераҙ ҙә теймәһен. Ҡыш еткәс, аҙлап-*

*аҙлап ҡына алырбыҙ ҙа, картуф ҡурырбыҙ.* Әкиәттән.

**АҘ-МАҘ** (Р.: понемногу; И.: a little; Т.: azar azar) *р.*

Аҙ ғына, саҡ ҡына; бер аҙ, әҙ-мәҙ. □ Понемногу, немного. *Аҙ-маҙ белеү. Аҙ-маҙ таныу.* ■ *Европа халыҡтарының бөгөнгө көнитмеше менән хатта аҙ-маҙ таныш кеше лә уларҙың үҙ теленә нисек һаҡсыл, һөйөү менән ҡарағандарын белә.* «Башҡортостан», 26 июль 2010. *«Аяғына баш орһам, аҙ-маҙ яза алырмын, үҙем иҫән ҡалырмын», — тигән уйҙы уйлаған...* «Урал батыр». *Өмөтбай иң тәүҙә туҙҙырылған донъяһын аҙ-маҙ төҙәтеп, ат, һыйыр алып, крәҫтиән эше менән шөғөлләнмәксе ине.* Ғ. Дәүләтшин. *Иртәнсәк кәләше, Янһарының билен быуып, битенә аҙ-маҙ тупраҡ һөртә лә, әлеге этте эйәртеп, батшаға ебәрә.* Әкиәттән.

**АҘМАН I** *и. диал. ҡар.* **тыраж.**

**АҘМАН II** (Р.: бродячий; И.: fond of roaming; Т.: gezenti) *с.*

**1.** Өйҙә тормай, аҙып-туҙып йөрөүсән. □ Непоседливый, бродячий. ■ *[Ҡунаҡбикә:] Йә, аҙман, ҡайҙа йөрөнөң? Көнө буйы өйҙә тормайһың, мөхәббәтһеҙ.* Д. Юлтый.

**2.** Ситтә йөрөргә яратҡан, йөрөмтәл *(малға ҡарата).* □ Бродячий *(о скотине). Аҙман мал.* ■ *[Таңдыса — малдарына:] Аҡрынлағыҙ, аҙмандар, арыттығыҙ һеҙ мине.* «Ҡуңыр буға».

**3.** Тыуған иленән аҙып-туҙып сығып киткән. □ Скитальческий, странствующий. *Аҙман кеше.*

**4.** Тәртипһеҙ, тыйнаҡһыҙ. □ Невоспитанный, несдержанный. ■ *Әсәйгә шундай тупаҫ һүҙ әйтергә нисек баҙнат итә был [Ғилмияр] кәҙерһеҙ... Атай бар саҡта былай тәүфикһыҙ ҡылана алмаҫ ине, аҙман.* Яр. Вәлиев.

**5.** Төрлө тоҡом ҡатнашҡандан килеп сыҡҡан *(малға ҡарата);* ҡатнаш тоҡом. □ Смешанный, перерождённый гибрид *(сорт или порода),* помесь. *Аҙман эт.* ■ *Тоҡом-ара ҡауыштырыу юлы менән алынған нәҫел аҙман тип атала.* Ғ. Байбурин.

**6.** *диал. ҡар.* **аҙғын 5.**

**7.** *диал. ҡар.* **силсә.** *Аҙман булыу. Аҙман йоғоу.*

**АҘМЫ-КҮПМЕ** (Р.: сколько-то; И.: to some measure; Т.: az çok) *р.*

Бер ни тиклем, бер аҙ. □ Сколько-то, немного, более или менее. ■ *Гөлйөҙөм йәйләүгә килгәс, Мәғфүрә үҙен аҙмы-күпме иркендә хис итеп, иркен тын алып ҡалғандай бул[ды].* Һ. Дәүләтшина. *[Котло ата] бер нисә көндән хәле аҙмы-күпме арыуланғандай булып, аяҡҡа баҫты.* Ғ. Ибраһимов.

**АҘНА** [фарс. آدينه ‘йома’] (Р.: неделя; И.: week; Т.: hafta) *и.*

**1.** Дүшәмбенән алып йәкшәмбегә тиклемге ете көндө эсенә алған ваҡыт. □ Неделя. *Аҙна буйы. Аҙна һайын. Аҙна аҙағы. Аҙна башы.* ■ *Киләһе аҙнала әле көндәр йылы торасаҡ, эште тиҙләтергә кәрәк.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ете көндән торған ваҡыт берәмеге. □ Неделя. *Бер нисә аҙнанан.* ■ *Ҡайтып аҙна араһы ваҡыт үткәс, Әхмәди йорт тирәһендәге хужалыҡ эштәре менән булды.* Ж. Кейекбаев. *Шулай бер нисә аҙна үткәс, Аҡназар ҡапыл аҙ-аҙлап ауыҙына аш ала башлай.* Әкиәттән. *Көн артынан көн, аҙна артынан аҙна үтеп кенә тора.* Р. Сыртланов.

♦ **Йылан аҙнаһы** *һөйл.* 16 август менән 21 август араһы. □ Змеиная неделя *(период с 16 по 21 августа).* **Урыҫ аҙнаһы** *һөйл.* йәкшәмбе. □ Воскресенье.

**АҘНАБАЙҘАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Табын ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-табынцев.

**АҘНАГИС** *и. диал. ҡар.* **кесаҙна.**

**АҘНАГӨН** *и. диал. ҡар.* **йәкшәмбе.**

**АҘНАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. ◻ Название родового подразделения башкир-юрматинцев.

**АҘНАЛАП** (Р.: неделями; И.: for weeks; Т.: haftalarca) *р.*

**1.** Аҙналар буйы. ◻ Неделями. *Аҙналап ҡунаҡ булыу. Аҙналап юғалып тороу.* ■ *Беҙҙең Ғилман Сәмерханович ҡайһы ваҡыт аҙналап күренмәй, яландан, фермаларҙан ҡайтып инмәй.* Д. Бүләков.

**2.** Аҙнаға яҡын. ◻ Около недели, приблизительно неделя. *Аҙналап ваҡыт үтте.*

**3.** Аҙна-аҙнаһы менән. ◻ Понедельно. *Аҙналап эшләү.*

**АҘНАЛЫҠ I** (Р.: недельный; И.: weekly; Т.: haftalık) *с.*

**1.** Аҙна буйына дауам иткән. ◻ Недельный, на неделю. *Аҙналыҡ аҙыҡ. Аҙналыҡ эш. Аҙналыҡ эш хаҡы.* ■ *Шул ваҡыт мин ҡырҙа инем, ҡырҙа ине бар халыҡ. Аҙналыҡ эштән бушағас, ята инек хәл алып.* Ғ. Ғүмәр. ● *Бер көнлөк юлға сыҡһаң, аҙналыҡ аҙыҡ ал.* Әйтем.

**2.** Аҙнаһына бер була торған, аҙна һайын ҡабатланып торған. ◻ Еженедельный. *Аҙналыҡ газета. Аҙналыҡ журнал.* ■ *1925 йылдың 27 мартынан башлап башҡорт телендә аҙналыҡ «Башҡортостан йәштәре» газетаһы сыға башланы.* Т. Йәнәби.

**АҘНАЛЫҠ II (аҙналығы)** (Р.: неделя; И.: week; Т.: hafta) *и.*

Берәй ваҡиғаға, эшкә бағышлап үткәрелгән аҙна. ◻ Неделя. *Китап аҙналығы. Музыка аҙналығы. Әҙәбиәт аҙналығы. Йәштәр матбуғаты аҙналығы.* ■ *Яланға сығасаҡ машиналарға һынау, тикшереү аҙналығы үткәрелде.* Ф. Исҫәнғолов.

**АҘНАУ (аҙна-)** *к. диал. ҡар.* **айғылдау 1**. ● *Аҙнаған айғырҙы өйөрҙә һына.* Мәҡәл.

**АҘРА I** [ғәр. جذر 'юҡҡа сығарыу'] (Р.: вымирающий; И.: becoming extinct; Т.: soyu tükenen) *с. иҫк.*

Юҡҡа сыҡҡан, ҡороған. ◻ Вымирающий, исчезающий, засохший. ■ *Күгәреп ятҡан күк арҡа, мал төйәге туғайың — аҙра ҡалыр малдан һуң.* Ҡобайырҙан.

**АҘРА II** *и. диал. ҡар.* **ҡаулан.**

**АҘРА ИТЕҮ (аҙра ит-)** (Р.: уничтожать; И.: destroy; Т.: yok etmek) *к.*

Юҡ итеү; юҡҡа сығарыу. ◻ Уничтожать, ликвидировать, засохнуть. ■ *Ҡараһаҡал батыр ҙа артҡа сикмәй нишләһен? Таркауланғас батырҙар, ил ҡалдырып дошманға аҙра итмәй нишләһен?* «Ҡараһаҡал».

**АҘРА ҠАЛЫУ (аҙра ҡал-)** (Р.: остаться ни с чем; И.: go on the rocks; Т.: bir şeysiz kalmak) *к.*

Бер әйберһеҙ ҡалыу. ◻ Остаться ни с чем. *Аҙра ҡалһаҡ та эшләп түләп бөтөрбөҙ.*

**АҘРАЙ** (Р.: навыкат; И.: bulging; Т.: fırlak (gözler) *с. диал.*

Тупайып торған, ҙур *(күҙгә ҡарата);* аҡыш. ◻ Навыкат, навыкате *(о глазах). Аҙрай күҙ.*

**АҘРАЙЫУ (аҙрай-, аҙрая)** (Р.: широко раскрываться; И.: bulge; Т.: gözleri fal taşı gibi açılmak) *к. диал.*

Түңәрәкләнеп, ҙур булып асылыу *(күҙгә ҡарата);* аҡшайыу. ◻ Широко раскрываться, таращиться *(о глазах). Аҙрайған күҙ.*

**АҘРАСМАН** (Р.: гармала; И.: peganum; Т.: üzerlik otu) *и. диал.*

Япраҡтары оҙонса ярылған күп йыллыҡ сәскә үлән, им-томда ҡулланыла. ◻ Гармала, трава (лат. *Peganum*).

**АҘРАТ** (Р.: скала; И.: rock; Т.: kaya) *и. иҫк.*

Ҡая тау, ҡатланып ятҡан таш. ◻ Скала; слоёный камень. *Аҙрат ташы.*

**АҘСЫЛЫҠ I (аҙсылығы)** (Р.: меньшинство; И.: minority; Т.: azınlık) *и.*

Берәй төркөмдөң һан яғынан кәм булған өлөшө. ◻ Меньшинство. *Аҙсылыҡты тәшкил итеү.*

**АҘСЫЛЫҠ II** (Р.: меньший; И.: lesser; Т.: sayıca az) *с.*

Аҙ һанлы. ◻ Меньший, малый, малочисленный. *Аҙсылыҡ милләт. Аҙсылыҡ халыҡ. Рәсәйҙең аҙсылыҡ телдәре.*

**АҘҺЫНЫУ (аҙһын-)** (Р.: считать *что-л.* малым; И.: deem insufficient; Т.: az bulmak) *к.*

Берәй *нәмәнең* күләмен, һанын аҙ күреү; аҙға һанау. □ Считать *что-л.* малым, недостаточным для себя, не удовлетворяться количеством *чего-л.* ■ *Әллә бирелгән аҡсаға аҙһыналар, әллә мәҙәк итәләр — иҫәптәре туҡтарҙан түгел.* Ғ. Ибраһимов. *Етмәй бесән, етмәй емеш уға [Ғәззәгә], етмәй һаҙлыҡтарҙың мүктәре. Аҙһына ул, көн дә утыҙ литр һөт бирһә лә ҡыҙыл мүкләге.* Т. Арслан.

**АҘЫҠ (аҙығы)** (Р.: пища; И.: food; Т.: gıda) *и.*

**1.** Туҡланыуға файҙаланылған нәмә; ашамлыҡ, ризыҡ. □ Пища, еда; продовольствие, провизия. *Аҙыҡ комбинаты. Аҙыҡ магазины. Аҙыҡ фонды. Аҙыҡ туплау.* ■ *Рәхмәт ағайығыҙҙы онотмағыҙ. Ул беҙҙе ас тотмаясаҡ, аҙыҡ килтереп торасаҡ.* Ж. Кейекбаев. *Улар [Ирек менән әсәһе] бер кәрзинде әллә ниндәй тәмле аҙыҡтар менән тултырҙылар: ит, һөт, күкәй, май — береһе лә ҡалманы.* З. Биишева. *Ҡәмән менән Сәмән шыр бешәлек араһына инеп, төйөнсөктәге аҙыҡты ашап бөтөргән.* Әкиәттән. ● *Аҙыҡлының аты арымаҫ.* Әйтем.

**2.** Хайуандар туҡлана торған бөтә нәмә. □ Корм, фураж. *Аҙыҡ сөгөлдөрө. Ҡатнаш аҙыҡ. Йәшел аҙыҡ. Минераль аҙыҡ. Тамыр аҙыҡ. Аҙыҡ рационы. Мал аҙығы.* ■ *Аҡ уҫаҡҡайҙарҙың ай ҡабығы — аҡ ҡуянҡайҙарҙың аҙығы.* Халыҡ йырынан.

**3.** *күсм.* Күңелде ҡәнәғәтләндерерлек нәмә. □ Пища. *Рухи аҙыҡ. Күңел аҙығы.* ● *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — баш ҡаҙығы.* Мәҡәл.

♦ **Ҡара аҙыҡ** һөт-ҡатыҡһыҙ, бер төрләрәк аҙыҡ. □ Пища без молочных продуктов.

**АҘЫҠЛАНДЫРЫЛЫУ (аҙыҡландырыл-)** *к. төш. кар.* **аҙыҡландырыу**. *страд. от* **аҙыҡландырыу.**

**АҘЫҠЛАНДЫРЫУ (аҙыҡландыр-)** (Р.: питать; И.: nourish; Т.: beslemek) *к.*

**1.** Организмға туҡлыҡлы матдә биреү. □ Питать, подкармливать. *Яһалма юл менән аҙыҡландырыу.*

**2.** Тупраҡҡа ашлама индереү; ашлау. □ Подкармливать. *Ужымды аҙыҡландырыу. Үҫемлектәрҙе аҙыҡландырыу. Өҫтәп аҙыҡландырыу өсөн төрлө минераль һәм органик ашлама файҙаланыла.*

**3.** Күңелде ҡәнәғәтләндереү. □ Питать душу. *Рухи аҙыҡландырыу.*

**АҘЫҠЛАНЫУ (аҙыҡлан-)** (Р.: питаться; И.: feed (on); Т.: beslenmek) *к.*

**1.** Аҙыҡ ҡабул итеү; ашау. □ Питаться, кормиться. // Питание, корм. *Йәшелсә менән аҙыҡланыу.* ■ *Егет шунда сәй ҡайнатып, ит бешереп аҙыҡланған булған, һыйланған.* Б. Вәлид.

**2.** Тереклек итеү өсөн кәрәкле матдәләрҙе үҙләштереү; туҡланыу. □ Питаться, подкармливаться. // Питание, подкормка. *Үҫемлек тамыры, һабағы һәм япрағы ярҙамында аҙыҡлана.*

**АҘЫҠ-ТҮЛЕК** (Р.: продукты; И.: food, victuals; Т.: gıda) *и. йыйн.*

Кешегә ашарға яраған бөтә ашамлыҡ; ризыҡ. □ Продукты, продовольствие. *Аҙыҡ-түлек магазины. Аҙыҡ-түлек ташыу.* ■ *Мал йыйыуҙа, аҙыҡ-түлек әҙерләүҙә күрһәткән өлгөрлөгө өсөн Суминовты өлкән полицай итеп үрләттеләр.* Ә. Хәкимов. *Йыл әйләнәһенә уның ите, майы һәм башҡа аҙыҡ-түлеге өҙөлмәй.* Б. Бикбай. *[Әбей — улына:] Илгә сығып, өҫ-башыңды аҙыраҡ бөтәйтеп, әҙ булһа ла аҙыҡ-түлек алып ҡайтыу яғын ҡарар инең.* Әкиәттән.

**АҘЫЛМА** (Р.: возвышенность; И.: elevation; Т.: yükseklik) *и. диал.*

Ҡалҡыулыҡ, түбәлек *(ергә ҡарата).* □ Возвышенность.

**АҘЫМ** [боронғо төрки *ат* ‘атлау, йөрөү’] (Р.: шаг; И.: step; Т.: adım) *и.*

**1.** Атлағанда аяҡ менән эшләнгән хәрәкәт. □ Шаг, поступь. *Алымлы аҙым. Ваҡ аҙым. Эре аҙым. Аҙымды йышайтыу.* ■ *Төлкөсура, шуға асыу иткәндәй, ялбыр бүркен көс менән маңлайына баҫыбыраҡ кейҙе, берике аҙым атланы ла туҡтаны.* Н. Мусин. *[Әбей] бер нисә аҙым атланы ла Сәғиҙәгә боролдо.* М. Тажи.

**2.** Атлағандағы ике аяҡ араһына тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. □ Мера длины, измеряемая шагами. *Бер аҙым. Ике аҙым ер.* ■ *Сәсһә, Ваһап шул ауыл тирәһендәге баҫыуға «бутҡалыҡ» тигән булып кеше ыңғайына бер сирек йә утыҙ аҙым тары, шул тиклем үк ҡарабойҙай сәсер ине.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Атлап барыш, йөрөш. □ Поступь, походка. *Ҡыҙыу аҙым. Һалмаҡ аҙым.* ■ *Кире боролорға ауыл йыраҡ. Туҡал аҙымы менән тағы бер төн ҡайтырға кәрәк.* Х. Ғиләжев. *Ярцевтың йөрөшө бик мөһабәт .. Үҙенә нык ышанған кешеләрҙә генә була торған эре, һәлмәк аҙым менән атлай.* К. Мәргән.

**4.** *күсм.* Берәй эшкә йүнәлтелгән ынтылыш; хәрәкәт. □ Шаг, поступок. *Ҡыйыу аҙым. Тәүге аҙым.* ■ *Әгәр бер хата аҙым яһап, Хәбир батыр үҙе барып ҡапмаһа, кем белә...* З. Биишева.

**5.** *тех.* Тештәр, һыҙаттар араһы. □ Шаг. *Винт аҙымы. Сылбыр аҙымы. Тешле тәгәрмәс аҙымы.*

♦ **Аҙым һайын** әленән-әле, гел генә. □ На каждом шагу. ■ *Аҙым һайын ғәйебең асылыуын көтөп, ҡурҡып йәшәгәнсе, арығансы эшләп, барыһын да онотоп, тыныс йоҡлауыңа ни етә.* Б. Бикбай. **Бер аҙым да** саҡ ҡына ла, бер ҙә. □ Ни на шаг. ■ *Эт арттан бер аҙым да ҡалмай.* М. Тажи.

**АҘЫМЛАУ (аҙымла-)** (Р.: измерять шагами; И.: measure by steps; Т.: adımlamak) *ҡ.*

**1.** Аҙым менән билдәләү, аҙымға һалыу. □ Измерять шагами. ■ *[Ныязғол] тағы йәһәт атлап, залды мөйөштән мөйөшкә аҙымлап үлсәй башланы.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Киң баҫып атлау, атлап үтеү. □ Прошагать, шагать. ■ *Ҡайһы бер урам сатында өс-дүрт кешелек патруль ҡыҙыл армеецтар осрай. Улар ашыҡмай, һалмаҡ ҡына аҙымлай.* А. Таһиров.

**АҘЫМЛЫ** (Р.: ходкий *(о лошади)*; И.: fast; Т.: geniş adımlı) *с.*

Аҙымы эре, ырамлы, шәп атлай торған; йөрөшлө *(атҡа ҡарата).* □ Ходкий *(о лошади). Аҙымлы ат.*

**АҘЫМЛЫҠ** (Р.: в ... шагов; И.: in ... steps; Т.: adımlık) *с.*

Бер нисә аҙымдағы аралыҡта. □ В ... шагов, в ... шагах.

**АҘЫМСЫ АТ** (Р.: лошадь с широким шагом; И.: horse with long strides; Т.: yürüyüşlü at) *и. диал.*

Эре аҙымлы ат. □ Лошадь с широким шагом.

**АҘЫМТЫҠ (аҙымтығы)** *с.*

**1.** *диал. ҡар.* **аҙғын.**

**2.** *диал. ҡар.* **ялҡау.**

**АҘЫМ ҮЛСӘГЕС** (Р.: шагомер; И.: passometer; Т.: adımsayar) *и. тех.*

Йәйәү үткән араны үлсәү приборы. □ Шагомер.

**АҘЫУ-ТУҘЫУ (аҙ-туҙ-)** (Р.: бродяжничать; И.: wander; Т.: memleket memleket gezmek) *ҡ.*

**1.** Бер ерҙә ныҡлап тормай, ерекмәй, күсенеп йөрөү. □ Бродяжничать, скитаться. // Бродяжничество, скитание. *Аҙып-туҙып ситтә йөрөү.*

**2.** Аҙғынлыҡ юлына баҫыу. □ Развращаться, становиться развратным. ■ *Үҙеңә бәхетле юл теләйем, — тине председатель, — тик ҡара уны, аҙып-туҙып китмә, тыуған ауылыңа тап төшөрмә.* Д. Исламов.

**АҘЫРАЙЫУ (аҙырай-, аҙырая)** *ҡ. ҡар.* **ажрайыу.**

**АҘЫРАҠ** (Р.: немного; И.: a little; Т.: az) *р.*

**1.** Бер аҙ, бер ни тиклем. □ Немного, чуть-чуть, чуточку; малость. *Аҙыраҡ көтөп тор. Аҙыраҡ һуңлау.* ■ *Мин саҡырҙым, һин килмәнең, аҙыраҡ йәне көйһөн, тип.* Халыҡ йырынан.

**2.** *сағышт. дәр. ҡар.* **аҙ.** *сравн. степ. от* **аҙ.**

**АҘЫРТЫУ (аҙырт-)** (Р.: воспаляться *(о ране)*; И.: become inflamed; Т.: yangılanmak) *ҡ.*

Аҙып, боҙолоп китеү *(тәнгә ҡарата).* □ Воспаляться *(о ране).* ■ *Енсек тиреһе аҙыртып ҡыҙарып тора.* М. Ҡулаев.

**АҘЫУ I (аҙ-)** (Р.: блуждать; И.: wander; Т.: dolaşmak) *к.*

**1.** Өйҙә тормай, ауыл араһында, ситтә йөрөү *(кешегә, малға ҡарата).* □ Блуждать, бродить, скитаться. ■ *[Батша:] Минең ун һыйырым бар ине. Шулар, бына йыл тула инде, ҡураға ҡайтмай, мөстәнләнеп аҙып йөрөй.* Әкиәттән.

**2.** Әхлаҡ-тәртип ҡағиҙәләрен тотмау, тәртипһеҙгә әйләнеү; боҙолоу. □ Избаловаться, вести себя плохо. ■ *Эй ғүмеркәйҙәр, ахыры заман яҡындыр инде. Шулай булмаһа, халыҡ был тиклем аҙмаҫ ине,— тип зарланырға тотондо [ҡортка].* Т. Йәнәби. ● *Кәңәшле ил аҙмаҫ.* Әйтем.

**3.** Енси яҡтан тәртипһеҙләнеү; боҙолоу. □ Развратничать, распутничать, развращаться. ● *Айырылған ир аҙыр, ҡушылған ир уҙыр.* Мәҡәл.

**4.** Ҡатнашып, тоҡом яғынан боҙолоу *(малға һәм үҫемлектәргә ҡарата).* □ Смешавшись, перерождаться, испортиться *(о сорте растений и породах животных). Арыш аҙған.*

**5.** Көсәйеп, шашып китеү *(ауырыуға ҡарата).* □ Усугубляться *(о болезни). Ауырыуы өҙлөк булып аҙып китте. Грипп менән ауырығанда йөрөһәң, ул аҙа.*

**6.** Боҙолоп шешеп китеү *(тәнгә ҡарата).* □ Воспаляться, растравляться *(о ране). Бынау бала тубығын ташҡа һыҙырғайны, аҙған да киткән.*

♦ **Баш аҙыу** дөрөҫ йәшәү ҡағиҙәләрен тотмау, ҡылығы насарға әйләнеү, тәртипһеҙләнеү. □ Вести себя плохо, быть невоспитанным. **Бәйел аҙыу** ныҡ тыйнаҡһыҙланыу, холоҡһоҙланыу. □ Стать распущенным, распускаться. ● *Бәйелең аҙмай башҡа бәлә килмәй.* Мәҡәл.

**АҘЫУ II** *и. диал. ҡар.* **аҙау V.** ● *Боҙ өҫтөндә яҙыу тормаҫ, ҡарт кешелә аҙыу тормаҫ.* Әйтем.

**АЖАР I** (Р.: сила; И.: bravery; Т.: atılganlık) *и.*

**1.** Ташып барған көс, ғәйрәт; алҡынып торған дәрт; айбар. □ Сила, мощь, отвага, удаль. ■ *Әле уйлайым, әгәр йөрәктә шундай ажар, сәм булмаһа, тәүге йылдағы ауыр шарттарға мин сыҙай алмаған, кире сигенгән булыр инем, моғайын.* З. Биишева.

**2.** Кешенең ҡотон алып, ярһып торған асыу; айбар. □ Угроза, опасность, гнев. *Ажар күрһәтеү.* ■ *[Хәбибә инәй:] Күп ваҡыттар үткәс, яу ажарҙары һил булғас, халыҡ ошо Ослоташ тауы моронона йорт һалып тора башлаған.* Б. Бикбай.

**АЖАР II** *с.*

**1.** *диал. ҡар.* **өтөк I.**

**2.** *диал. ҡар.* **күркәм.** *Бер аҙ ябыҡҡан, элекке ажар мыйыҡ урынына бармаҡ баҫымы тиклем генә итеп мыйыҡ ҡалдырған.*

**АЖАР ҠАЙТЫУ (ажар ҡайт-)** (Р.: терять силу; И.: lose stamina; Т.: kuvvetten düşmek) *к.*

Дәрт һүнеү, көс кәмеү. □ Терять силу, мощь. ■ *[Ирҙәрҙең] ажарҙары ҡайтҡан. Әйтер булһа хаҡ һүҙ һәм асыуҙы байҙарға, һаҡта әҙер торған бәләсәйҙәр ҡылыс, ҡамсы менән яйларға.* С. Кулибай.

**АЖАРЛАНЫУ (ажарлан-)** (Р.: проявлять удальство; И.: show courage; Т.: yiğitlik etmek) *к.*

**1.** Ғәйрәт сәсеп ярһыу; айбарланыу. □ Проявлять удальство, отвагу, мощь. ■ *Урталағы ажарланып елгән ҡара күк айғыр әллә ҡайҙан уҡ бының Ныязғол повозкаһы икәнен күрһәтә ине.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ярһып, ҡотто алып ажғырыу. □ Разъяриться, бушевать, неистовствовать. ■ *Ҡоро дала. Уны зыр ҡыҙырып, ажарланып елдәр һыҙғыра.* А. Игебаев. *Әле генә эттәй ажарланып, асыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәй торған бай, кеше ишетеүенән шикләнеп, әүрәтеү ниәте менән: — Йә, тыныслан. Һине бераү ҙә ҡыумай .. , — тине.* Я. Хамматов.

**АЖАРЛЫ** (Р.: смелый; И.: manly; Т.: atılgan) *с.*

**1.** Көсө, дәрте урғылып торған; ярһыу. □ Смелый, отважный, бесстрашный. *Ажарлы яугир. Ажарлы кеше.* ■ *Күргәнем бар*

*минең аякһыҙҙар бейегәнен .. Еңеү көнөндә. Эй ул бейеү! Ул ажарлы бейеү күҙ алдымдан китмәй бөгөн дә.* Р. Сафин.

**2.** Ажғырып торған ҡурҡыныс ҡиәфәтле. □ Разъярённый. *Ажарлы йылан. Ажарлы эт.*

**АЖАРЛЫҠ (ажарлығы)** (Р.: мужество; И.: bravery; Т.: atılganlık) *и.*

Ташып барған көс, ярһыулыҡ. □ Мужество, отвага, сила, страсть. *Ажарлыҡ менән. Ажарлыҡ күрһәтеү.* ■ *Күк болонда күк арғымаҡ йөрөй утлап, бәкәлендә ҡорос бығау бөткән тутлап. Ауыр, ауыр ул бығауҙы һөйрәтеүе, ажарлыҡта гел түҙергә өйрәтеүе.* Ә. Әхмәтҡужин.

**АЖАР СӘСЕҮ (ажар сәс-)** (Р.: вспылить; И.: fly into a fury; Т.: azmak) *ҡ.*

Ғәйрәт сәсеп ярһыу, асыуҙан ҡысҡырыу, ярһыу. □ Вспылить в гневе, разъяриться.

**АЖАРЫН АЛЫУ (ажарын ал-)** *ҡ. ҡар.* **ажарын ҡайтарыу.**

**АЖАРЫН ҠАЙТАРЫУ (ажарын ҡайтар-)** (Р.: отнять силу; И.: lose one's strength; Т.: halsiz düşürmek) *ҡ.*

Дәртен баҫыу, көсөн алыу. □ Отнять силу, мощь, обессилеть.

**АЖАУ** (Р.: голавль; И.: chub; Т.: tatlı su kefali) *и. зоол.*

Һаҙандар төркөмөнә ингән, яҫы моронло, итләс эре балыҡ; ҡушбаш. □ Голавль (лат. *Leuciscus cephalus*). ■ *Ул [Зөбәйҙә] ҡармағын яр башына ырғытып өлгөргән. Унда ярты аршындай ажау тыпырсынып ята.* Н. Мусин.

**АЖАУ ТЕШ** *и. диал. ҡар.* **аҙау теш 2.**

**АЖҒАЛӘ** *и. диал. ҡар.* **ялағай.**

**АЖҒЫР** *с. диал. ҡар.* **ыҙғыр.**

**АЖҒЫРЫНЫУ (ажғырын-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ажғырыу.** *страд. от* **ажғырыу**.

**АЖҒЫРЫУ (ажғыр-)** (Р.: разъяряться; И.: get furious; Т.: kudurmak) *ҡ.*

**1.** Зәһәр сәсеп, ярһып екереү, ҡурҡыныс итеп ҡысҡырыу. □ Разъяряться, устрашающе реветь. ■ *Ебәр!.. Мин һеҙҙе өйрәтермен әле! — тип ажғырҙы хулиган.* Р. Солтангәрәев. *Айыу ажғырып ситкә ырғыған.* Н. Мусин. *Аждаһа ажғырып Килтәй-Мәргәнгә ташланған.* Әкиәттән.

**2.** *күсм.* Яман тауыш сығарып, ҡотороноп шаулау. □ Бушевать, неистовствовать, реветь. ■ *Атылған туптың снаряды ажғырып килә лә, урмандамы, ауыл ситендәме ярыла, ерҙе тетрәтә.* А. Таһиров. *Ҡапыл көслө ел сыға, тулҡындар үрә тора, ажғырып ярға ынтыла.* Ә. Вахитов. *Ажғырып ятыусы һыуға төшөп еткәнсе, әллә күпме уй уйлап өлгөргәндер Миңлеғол.* Я. Хамматов.

**АЖҒЫУ** *и. диал. ҡар.* **әсеү**. *Ҡымыҙ ажғып килеп сыға.*

**АЖДА** *и. диал. ҡар.* **аждаһа.**

**АЖДАҺА** [авест. *Ажи Дахака* 'ҡырыусы йылан'] (Р.: дракон; И.: dragon; Т.: ejderha) *и. миф.*

**1.** Бер нисә башлы ҙур йылан ҡиәфәтендәге йөҙйәшәр яман мифик зат. □ Дракон. ■ *Башҡорт мифологияһында һөйләнеүенсә, йөҙ йыл буйына кеше күҙенә күренмәй йәшәгән йылан аждаһаға әүерелә.* Ә. Харисов. *Күлдә бер аждаһа бар икән. Етегә уралып ята, ти, был аждаһа.* Әкиәттән.

**2.** *күсм.* Уҫал, йыртҡыс кешегә ҡарата әйтелә. □ Изверг, злодей. ■ *Ер шарын урап, һырып алған аждаһалар, палач-ғазраилдар.* Ғ. Хәйри.

**АЖДАҺА ЙЫЛЫ** (Р.: год дракона; И.: year of the dragon; Т.: ejderha yılı) *и.*

Ун ике йыллыҡ мөсәлдең бишенсе йылы. □ Год дракона *(пятый год двенадцатилетнего животного цикла у восточных народов).*

**АЖДАҺА КҮТӘРЕЛЕҮ** (Р.: смерч; И.: whirlwind; Т.: hortum) *и. миф.*

Көслө ҡойонға ҡарата әйтелә. Ышаныуҙар буйынса, аждаһа аҙғынланып ҡиәфәтен үҙгәртһә, уны болот күтәреп алып китә. Көслө ҡойондан күл, йылғаның һыуы өйрөлөп күккә ауалай. □ Смерч, вихрь на озере, над водой, лесом. Перемещение дракона *(по поверью, небесные силы уносят дракона за мифическую гору Кафтау).* ■ *Алайғыр ташы ауылыбыҙҙың тирәһендәге иң бейек*

*ҡая. Уның аҫтындағы ятыуҙың төбөнән ҡасандыр аждаһа күтәрелгән, тип һөйләйҙәр.* Д. Бураҡаев. *Аждаһа күтәрелгәндә елдауыл ҡуба, ғәрәсәт була. Аждаһа күтәрелеү тураһында ышаныуҙар әле лә йәшәй.* Ф. Хисамитдинова.

**АЖДАҺА-ЙЫЛАН** (Р.: драконы; И.: dragons; Т.: ejderha) *и. миф. йыйн.*

Аждаһалар һәм шуның кеүек мифик заттар. □ Драконы. ■ *Урал тураҡлаған дейеү-пәрейҙәр, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡалды, ти.* Әкиәттән.

**АЖДАҺА ҺӨЙӘГЕ** (Р.: магическое средство лечения от болезней глаз; И.: dragon's bone; Т.: göz hastalıklarının büyüleyici tedavisi) *и. миф.*

Күҙ ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланылған магик сара. □ Магическое средство лечения от болезней глаз. ■ *Йыланғарак булһа, уға әүәле аждаһа һөйәге баҫҡандар.* Экспедиция материалдарынан.

**АЖИОТАЖ** [рус. < фр. *agiotage*] (Р.: ажиотаж; И.: flurry; Т.: bum) *и.*

**1.** Биржа ҡағыҙы йәки тауар хаҡы курсының яһалма рәүештә күтәрелеүе йәки төшөүе. □ Ажиотаж. *Биржа ажиотажы.*

**2.** *күсм.* Ығы-зығы ҡубыу. □ Ажиотаж. *Ажиотаж ҡуптарыу.*

**АЖРАЙ** (Р.: выпуклый; И.: bulging; Т.: fırlak (gözler) *с.*

**1.** Ҙур булып, ағы күренеп, тупайып торған *(күҙгә ҡарата);* аҡыш. □ Выпуклый, выпученный *(о глазах). Ажрай күҙ.*

**2.** *күсм.* Эре, тәкәббер, маһайыусан, маҡтансыҡ. □ Высокомерный, заносчивый, кичливый. ■ *Көмрө аркалы, тиҫкәрерәк ҡылыҡлы был ажрай бисәнең быңдай һүҙҙәрен күп ишеткәне бар Көнһылыуҙың.* Ғ. Ибраһимов.

**АЖРАЙЫУ (ажрай-, ажрая)** (Р.: таращиться; И.: stare (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açılmak) *к.*

**1.** Асыуланып, күҙҙе аҡайтып ҡарау. □ Таращиться, пучиться *(о глазах). Ажрайып ҡарау.* ● *Аҡылы юҡ кешенең ажрайған күҙе бар.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Эреләнеү, ҡупырайыу. □ Важничать, чваниться, кичиться. ■ *Батый хан да уҙған юл, олатайың Шәғәле ажрайып йөрөгән юл!* «Юлай менән Салауат».

**АЖУР** [рус. < фр. *à jour*] (Р.: ажур; И.: openwork; Т.: ajur) *и.*

**1.** Селтәр. □ Ажур. *Ажур менән сигеү.*

**2.** Бухгалтерияла иҫәп төрө. □ Ажур.

**3.** Бик яҡшы. □ Полный порядок.

**АЖУРЛЫ** (Р.: ажурный; И.: openwork; Т.: ajurlu) *с.*

Селтәрләп эшләнгән. □ Ажурный. *Ажурлы пәрҙәләр.*

**АЖЫҒЫЙ** *и. диал. ҡар.* **һаҙағай.**

**АЖЫР-БОЖОР** *р. диал. ҡар.* **суғырмаҡлы**. *Сыйҙым ажыр-божор туңһа, уңыш була.*

**АЖЫРТЫУ (ажырт-)** *к. диал. ҡар.* **сәбертеү.** *Бөтә тәнем ажыртып китте.*

**АЖЫРЫЙ** *с. диал. ҡар.* **ажрай 1.**

**АЗАЛИЯ** [рус. < лат. *azalea*] (Р.: азалия; И.: azalea; Т.: açelya) *и. бот.*

Төрлө төҫтәге эре сәскә атҡан көньяҡ сәскәһе. □ Азалия (лат. *Azalea*). *Ҡыҙыл азалия. Һары азалия.* ■ *Микробтарҙан цитрус үҫемлектәре, розмарин, эвкалипт, азалия гөлдәре лә һаҡлай.* «Табын», № 107, 2011.

**АЗАМАТ** *и. ҡар.* **аҙамат.**

**АЗАМАТЛЫҠ** (Р.: гражданство; И.: citizenship; Т.: vatandaşlık) *и.*

Шәхестең билдәле бер дәүләткә сәйәси һәм хоҡуҡи ҡарағанлығы; граждանлыҡ. □ Гражданство.

**АЗАРЛАШЫУ (азарлаш-)** *к. диал. ҡар.* **талашыу 2.** *Азарлашып алып киттеләр баламды.*

**АЗАРТ** [рус. < фр. *hasard* 'осраҡ'] *и. ҡар.* **сәм.**

**АЗАТ** [фарс. ازاد] (Р.: свободный; И.: free; Т.: özgür) *с.*

Үҙ ихтыярлы, ирекле; бойондороҡһоҙ. □ Свободный, вольный, независимый. *Азат ил. Азат халыҡ.* ■ *Ә мин инде һеҙҙең менән йөрөргә булдым бергә. Шатлығын азат хеҙмәттең һөйләп йөрөрмөн һеҙгә.* Р. Ниғмәти.

**АЗАТ БУЛЫУ (азат бул-)** (Р.: быть свободным; И.: be free; Т.: özgürlüğüne kavuşmak) *к.*

Тотҡондан, бойондороҡтан ҡотолоу, иреккә сығыу. □ Быть, стать свободным, освобождаться.

**АЗАТ ИТЕҮ (азат ит-)** (Р.: освободить; И.: set free; Т.: kurtarmak) *к.*

Тотҡондан, бойондороҡтан ҡотҡарыу; ирекле итеү. □ Освободить. // Освобождение. *Дошмандан азат итеү. Төрмәнән азат итеү.* ■ *Мин, аҙамат, һине азат ҡылам, — тине [Күсәк батыр]. — Ҡайҙа барһаң, бынан тыш бәхетең артыр.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АЗАТ ИТЕҮСЕ** (Р.: освободитель; И.: liberator; Т.: kurtarıcı) *и.*

Тотҡондан, бойондороҡтан ҡотҡарыусы; ирекле итеүсе. □ Освободитель. *Ҡаланы азат итеүселәр.*

**АЗАТ ҠЫЛЫУ (азат ҡыл-)** *к. ҡар.* **азат итеү.**

**АЗАТЛЫҠ (азатлығы)** (Р.: свобода; И.: liberty; Т.: özgürlük) *и.*

Ирек, бойондороҡһоҙлоҡ. □ Свобода, воля, независимость. *Азатлыҡ хәрәкәте. Милли азатлыҡ. Азатлыҡ өсөн көрәш.* ■ *Миндә лә бит кешелек намыҫы бар, мин азатлыҡ теләйем, әсәм.* Ғ. Амантай.

**АЗБУКА** [рус.] *и. ҡар.* **алфавит.**

**АЗДА** *и. диал. ҡар.* **аждаһа.**

**АЗДАЙЫЛАН** *и. диал. ҡар.* **аждаһа.**

**АЗИМУТ** [ғәр. السمت ‘йүнәлеш’] (Р.: азимут; И.: azimuth; Т.: azimut) *и.*

**1.** *астр.* Меридиан яҫылығы менән берәй күк есеме йәки күҙәтелгән нәмә аша үткән вертикаль яҫылыҡ араһындағы мөйөш. □ Азимут. *Азимутты асыҡлау. Азимут менән барыу.*

**2.** Кәрәкле йүнәлеш менән төньяҡ йүнәлеш араһындағы мөйөш. □ Азимут.

**АЗОТ** [рус. < фр. *azote* < гр. *a* ‘-һыҙ’, *zoos* ‘йәнле, тере’] (Р.: азот; И.: nitrogen; Т.: azot) *и. хим.*

Химик элемент, янмай торған төҫһөҙ, еҫһеҙ газ. □ Азот. *Азот — аҡһым матдәһенең төп элементы. Аҡһым — тере организм, шул иҫәптән үҫемлектәрҙең дә йәшәү, продукт биреү нигеҙе. Азот бына ошо яғы менән ҡиммәтле элемент, үҫемлек аҙығы ул.*

**АЗОТ БАКТЕРИНЫ** (Р.: азотобактерин; И.: azotobacter; Т.: azotobacter) *и. биол.*

Азотлы бактериялар ярҙамында яһалған ашлама препараты. □ Азотобактерин.

**АЗОТ ЙОТОУСЫЛАР** (Р.: азотопоглотители; И.: absorber of nitrogen; Т.: azot yutucu) *и. а.х.*

Тупраҡтан азотты күп алыусы үҫемлектәр, иген культуралары, шәкәр сөгөлдөрө, етен, картуф һ.б. □ Азотопоглотители.

**АЗОТ КИСЛОТАҺЫ** (Р.: азотная кислота; И.: nitric acid; Т.: nitrik asit) *и. хим.*

Тәнде яндыра, ағыулай торған еҫһеҙ, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ. □ Азотная кислота.

**АЗОТЛАУ (азотла-)** (Р.: азотировать; И.: nitrate; Т.: nitrik aside batırmak) *к.*

Азотҡа байытыу. □ Азотировать. // Азотирование. *Тупраҡты азотлау.*

**АЗОТЛЫ** (Р.: азотистый; И.: azotic; Т.: azotlu) *с.*

Азоттың кислород менән төрлө химик ҡатнашмаһы. □ Азотистый. *Азотлы ашлама.*

**АЗОТОРЕЯ** [рус. < лат. *azotorrnhoea*] (Р.: азоторея; И.: azotorrhea; Т.: azotorrhea) *и. мед.*

Тиҙәк һәм һейҙек менән азотлы матдәләрҙең артыҡ бүленеп сығыуы. □ Азоторея.

**АЗОТ ТУПЛАУСЫЛАР** (Р.: азотопоглотители; И.: absorber of nitrogen; Т.: azot yutucu) *и. а.х.*

Тамырҙарында азотты үҙләштерә торған бактериялар тупланған үҫемлектәр: борсаҡ, клевер, люцерна кеүек ҡуҙаҡлы үҫемлектәр. □ Азотопоглотители.

**АЗЫ-БОЗО** *р. диал. ҡар.* **алан-йолан.**

**АЗЫҒАН** *и. диал. ҡар.* **ялағай.** ■ *Азыған уйнай ашлыҡ бешер алдынан.* Экспедиция материалдарынан.

**АЙ I** (Р.: луна; И.: moon; Т.: ay) *и.*

**1.** Ер тирәһендә әйләнгән иң яҡын күк есеме, Ерҙең эйәрсене, юлдашы. □ Луна,

месяц. *Иҫке ай. Тулған ай. Яңы ай. Ярты ай. Ай нуры. Ай яҡтыһы.* ■ *Күктә йөҙгән ҡап-ҡара болоттар араһында буталған тулы йөҙлө ай юғалғас, донъя бөтөнләйгә ҡараңғыланды.* Я. Хамматов. *Хисапһыҙ күп йондоҙҙар араһынан шул саҡ ҡапыл ай шәкеле күренгәндәй булды.* К. Мәргән. ● *Ай күрҙем аман менән, ауыҙым тулы иман менән.* Теләк.

**2.** Шул есемдең ураҡ рәүешендә ҡабул ителгән билдәһе. □ Лунный серп, диск. *Мәсет айы.* ■ *Боронғолар һөйләүенсә, манараны төшөргәндә иман йортоноң айы шул тиклем ғәйрәтле көс менән ауған да ергә һеңгән, имеш.* «Йәшлек», 17 июнь 2008. *Имәндәр тик ташҡа әүерелә, тупраҡ була беҙҙең ишеләр... Һәм үҙебеҙ менән ҡуша китә мәсет айы, сиркәү тәреһе.* Й. Солтанов.

**3.** Йылды ун ике өлөшкә бүлгән, һәр береһе үҙ аллы исемгә эйә ваҡыт бөрәмеге *(28–31 көндән тора).* □ Месяц. *Ай аҙағы. Ай араһы. Йәй айҙары. Ҡыш айҙары. Өс айға иҫәпләнгән.* ■ *Шул йылы уҡ Әптерәй, Иҫәнғол байға бесән ташыуҡанда һыуыҡ тейҙереп, ауырып ҡайтты ла, шул ауырыуынан тора алмай бер ай ятҡас, үлеп китте.* Һ. Дәүләтшина. *Сафия апайҙың ире Ғәзиз ағай, ҡырҡ бишенсе йылда икенсегә яраланып, өс ай госпиталдә ятҡандан һуң, ауылға ҡайтып төштө.* Т. Ғиниәтуллин.

**4.** *Ниндәйҙер* көндән иҫәпләнгән 30 көнлөк ваҡыт бөрәмеге. □ Месяц *(период времени в 30 дней, отсчитываемых от какого-л. дня). Биш айҙан килеү. Балаға бер ай ҙа юҡ әле.*

**5.** *миф.* Мифологик ҡараштар буйынса, тәңре, юғары көс. □ Высшая сила, бог.

♦ **Ай битен йыуа** яңы ай тыуғас яуған ямғырға ҡарата әйтелә. □ Дождь в новолуние. *букв.* Месяц умывается. **Ай ҙа ҡояш булыу** һәр саҡ көләп, йылмайып ҡына тороу. □ Постоянно улыбаться. *Бөтә кешегә ай ҙа ҡояш булып булмай.* **Айҙы күккә сығарыу** файҙаһыҙға тырышҡан кешегә ҡарата әйтелә. □ Напрасно стараться. ■ *Йығылһам, йығылдым, айҙы күккә сығарҙым тигәндәй, Ныязғолдоң ауыртҡан еренән тотоп ҡысҡырттым әле.* Һ. Дәүләтшина. **Ай күрҙе, ҡояш алды** *кемдер* йәки *ниҙер* күҙ алдынан ҡапыл юҡ булғанда әйтелә. □ Показаться и тут же исчезнуть, потеряться из вида. *соотв.* Только его и видели; и был таков.

**АЙ II** (Р.: ай, ой; И.: ouch; Т.: ay!, vay!) *ымл.*

**1.** Ҡапыл ҡурҡҡанда, тертләгәндә әйтелә. □ Выражает испуг: ай, ой. ■ *«Ай!» — Сәғиҙә баланы күтәреп торғоҙҙо, ә Хафиз ҡарт: «Ҡурҡма, ҡурҡма, ҡыҙым, бер ни ҙә булмаҫ», — тине.* М. Тажи.

**2.** Әсенеү, һыҙланыу-һыҡраныуҙы белдергәндә әйтелә. □ Выражает сожаление, огорчение, боль, страдание: ай, ой. ■ *Ай, ҡанһыҙ түрә булды шул, — тине сапҡын.* Ғ. Ибраһимов. *Ай, ғүмер, аҡҡан һыуҙар кеүек, үткән дә киткән.* Д. Бүләков. *Ай, ауыр буласаҡ Барсынбикәгә!* Т. Ғарипова. *Ай, бер генә йотом һыу булһасы.* М. Тажи.

**3.** Асыуланып, ризаһыҙлыҡты белдергәндә әйтелә. □ Выражает возмущение, недовольство: ай, ой. ■ *Ай, аптыраттың да баһа!* И. Насыри. *Ай, өләсәй, ул тиклем ҡыҙма әле!* Һ.Дәүләтшина.

**4.** Ҡыуаныу, һоҡланыу һ.б. тойғоларҙы белдергәндә әйтелә. □ Выражает радость, восхищение, изумление. ■ *Ай, шәп булыр ине!* Ғ. Әмири. *Ай, минең бәләкәсем!* Һ. Дәүләтшина. *Ай, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары ла, яныр тора күҙҙәре.* Халыҡ йырынан. *Ай, һәйбәт кеше һеҙ, Ҡотлоғужа әфәнде!* Н. Мусин. *Ай, Уралым, Уралым, ил һаҡлаған ҡоралым!* Р. Ғарипов.

**5.** Йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа тойғоно көсәйтеү һәм шиғыр үлсәмен тейәлләү өсөн ҡулланыла. □ Ой *(в народных песнях, кубаирах употребляется для усиления эмоциональности и дополнения размера стиха).* ■ *Ағиҙелкәй ҡайҙа, ай туғайҙа, Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа. Ағиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.* Халыҡ йырынан.

**АЙ АҘАҒЫ** (Р.: конец месяца; И.: end of month; Т.: ayın sonu) *и.*

**1.** Айҙың һуңғы көндәре. □ Конец месяца.

**2.** *миф.* Башҡорт мифологияһында хәүефле осор. Яңы эштәр эшләү тыйыла. □ Конец месяца *(по поверьям, опасное время для начинания новых дел). Ай аҙағында ҡыҙ бирмәйҙәр.*

**АЙ-АЙ** (Р.: ай, ой; И.: oh; ouch; Т.: ay!) *ымл.*

**1.** Аптырағанда әйтелә. □ Выражает удивление: ай-ай. ■ *[Петр:] Ай-ай, нишләп был яҡҡа килеп сыҡтығыҙ һуң?* М. Тажи.

**2.** Ауыртҡанда әйтелә. □ Выражает боль: ай-ай. ■ *[Ғатаулла:] Ай-ай, билем, билем.. Ҡартлыҡ баҫты, ахыры.* Ғ. Әмири.

**3.** Киҫәткәндә, тыйғанда әйтелә. □ Выражает предупреждение, запрет. *Ай-ай! Сынаяҡҡа теймә, төшөрөп ебәрерһең.*

**АЙАҠЛАНЫУ (айаҡлан-)** *к. диал. ҡар.* **аяҡланыу.**

**АЙ АРАҺЫ** (Р.: конец старого и начало нового лунного месяца; И.: end of previos and start of a new moon; Т.: ay arası) *и.*

**1.** Иҫке ай бөтөп, яңы ай тыуған осор. □ Конец старого и начало нового лунного месяца, безлуние.

**2.** *миф.* Башҡорт мифологияһында хәүефле осор. □ Период между двумя месяцами *(в башкирской мифологии считается опасным временем). Ай араһында ғәҙәттә борсаҡ яуа.*

**АЙ АУЫРЫУ (ай ауыр-)** *к. диал. ҡар.* **ай тотолоу.**

**АЙБАҒАР** (Р.: подсолнечник; И.: sunflower; Т.: ayçiçeği) *и. диал.*

Көнбағыш. □ Подсолнечник (лат. *Helianthus*). *Айбағар ултырталар ине.*

**АЙ-БАЙ** (Р.: ну и ...; И.: well; Т.: ay!) *ымл.*

Берәй эш-хәлгә ғәжәпләнгәндә әйтелә. □ Выражает удивление, изумление: ну и ...; ну и ну. ■ *[Нужа:] Ай-бай, Сәлимйән ҡусты, һинең эштәр көйлө икән.* Әкиәттән.

**АЙ-БАЙ-БАЙ** *ымл. ҡар.* **ай-бай.**

**АЙБАЙЛАУ (айбайла-)** (Р.: громко кричать; И.: call for help; Т.: imdat istemek) *к.*

Ярҙамға саҡырып, һөрән һалыу. □ Громко кричать *(взывая о помощи). Айбайлап ҡысҡырыу.*

**АЙ-БАЙ ҺАЛЫУ (ай-бай һал-)** (Р.: реветь; И.: roar; Т.: yüksek sesle ağlamak) *к.*

**1.** Үкһеп, ҡысҡырып илау. □ Реветь. // Рев. ■ *Батыры яуға китергә ат әйәрләп торғанда, ай-бай һалып илаған һылыу һомғол булмаҫ ул.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**2.** Ҡурҡыу. □ Испугаться. // Испуг.

**АЙБАЛҒА** (Р.: название тамги; И.: tamgha; Т.: tamga ismi) *и.*

Бер башҡорт ырыуының тамға исеме. □ Название тамги одного из башкирских родов.

**АЙБАЛТА** (Р.: секира; И.: pole axe; Т.: keser) *и.*

Ҙур түңәрәк йөҙлө, оҙон һаплы боронғо һуғыш ҡоралы. □ Секира; бердыш *(старинное боевое оружие в виде топора с небольшим полукруглым лезвием на длинной рукоятке).* ■ *Ике ишекте ҡулдарына айбалта тотҡан икешәр егет һаҡлап тора.* Х. Ғәбитов. *Дәрәжәле хан ҡапҡаһын һаҡлаусылар ҡулында айбалта була.* К. Мәргән.

**АЙБАЛЫҠ (айбалығы)** (Р.: луна-рыба; И.: moon-fish; Т.: ay balığı) *и. зоол.*

Кәүҙәһе ян-яҡтан ныҡ ялпаҡ, ҡойроҡһоҙ эре диңгеҙ балығы. □ Луна-рыба.

**АЙБАНЫУ (айбан-)** (Р.: заранее пугаться; И.: be afraid in advance; Т.: korkmak) *к.*

**1.** Алдан ҡурҡып, хәүефләнеп тороу. □ Заранее пугаться, опасаться *чего-л.* // Испуг, опасение. ■ *Айбанһа дошман яуынан, Уралға ул булырмы?* «Ҡараһаҡал».

**2.** *диал.* Ҡурҡып һиҫкәнеү. □ Вздрогнуть, пугаться. ■ *Ас бүреләр кеүек килгән әҙәмдәрҙе шәйләп, айбанып киткән Михайланың һикереп торғаны күренде.* Ғ. Ибраһимов.

**АЙБАР** (Р.: удаль; И.: bravery; Т.: kabadayılık) *и.*

**1.** Ташып торған көс; ғәйрәт, ажар. □ Удаль, отвага, бесстрашие. ■ *Бөтәһе лә*

*шау килеп Салауатка эйәргәс, халыктың айбарын күргәс, Юлай ҡарыулашмаған.* «Юлай менән Салауат».

**2.** Ҡотто алып, ярһып торған асыу; ажар. ◻ Гнев, злоба. *Айбар менән.*

**АЙБАРАҠЛЫ** *с. диал. ҡар.* **айбарлы.** *Айбараҡлы кеше.*

**АЙБАРЛАНЫУ (айбарлан-)** (Р.: проявить удаль; И.: display bravery; Т.: cesaret göstermek) *ҡ.*

**1.** Ярһып, көс, ғәйрәт сәсеү. ◻ Проявить удаль, силу, мощь. ■ *Эй, ҡаһарман егет, батыр егет, ҡыуа-ҡыуа дошман яуҙарын, тап арыҫлан һымаҡ айбарланып, йырып сыктың Урал тауҙарын.* М. Ғафури.

**2.** Ҡурҡытырға тырышып екереү. ◻ Устрашать, запугивать криком; угрожать. ■ *Офицер ҡабатлата унан һалдат антын һәм айбарлана аяк тибеп.* М. Тажи.

**АЙБАРЛАУ (айбарла-)** *ҡ. ҡар.* **айбарланыу 1.**

**АЙБАРЛЫ** (Р.: отважный; И.: brave; Т.: kabadayı) *с.*

Көсө, дәрте алҡынып торған; ғәйрәтле, ажарлы. ◻ Отважный, храбрый, отчаянный, бесстрашный. *Айбарлы егеттәр. Айбарлы һуғышсы.* ■ *Айбарлы ла ирҙәр бар сағында, баҙына алмаҫ дошман илемә.* Халыҡ йырынан.

**АЙБАШ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы, күбәләк ырыуҙарының аймаҡтары. ◻ Родовые подразделения башкир-юрматинцев, кубалякцев.

**АЙ БАШЫ** (Р.: новолуние; И.: new moon; Т.: yeniay) *и.*

**1.** Яңы ай тыуған осор. ◻ Новолуние.

**2.** *миф.* Башҡорт мифологияһында ҡотло, ырыҫлы, яҡшы осор. ◻ В башкирской мифологии благоприятное время. ■ *Баланың тәүге сәсен алыу, тырнағын ҡыркыу, килен алыу, өй һалыу ай башында башҡарылған.* Ф. Хисамитдинова.

**АЙ БИТЕ** (Р.: лик луны; И.: face of the moon; Т.: ayın yüzü) *и.*

Тулы айҙың түңәрәге. ◻ Лик луны. ■ *Ай битендә көйәнтәле ҡыҙ баҫып тора, ти.* М. Солтанова.

**АЙ-БУЙ** (Р.: ох; И.: ooh; Т.: vay) *ымл.*

Берәй эш-хәлгә аптырағанда әйтелә. ◻ Выражает удивление: ох, о-о. ■ *[Ҡарт:] Ай-буй, бүстәк булып сыкты ла баһа был нәмә.* Б. Бикбай.

**АЙБЫНЫУ (айбын-)** *ҡ. диал. ҡар.* **шикләнеү.** *Ҡурҡып, айбынып торалар Зәбихулланан.*

**АЙВА** (Р.: айва; И.: quince; Т.: ayva) *и. бот.*

**1.** Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, емеше алмаға оҡшап торған көньяҡ ағасы. ◻ Айва *(дерево)* (лат. *Cydonia*). *Айва ағасы. Айва сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. ◻ Айва *(плоды). Айва ҡайнатмаһы.*

**АЙ-ВАЙ** (Р.: ах; ох; ах и ох; И.: ooh; Т.: vay) *ымл.*

Ҡайғы-хәсрәттән әрнеп йәки *нимәнәндер* риза булмай өҙгөләнгәндә әйтелә. ◻ Выражает возмущение, негодование: ах; ох; ах и ох. *Ай-вай итеү. Ай-вай килеү.*

**АЙ-ВАЙҒА ҠУЙМАУ (ай-вайға ҡуйма-)** (Р.: принуждать; И.: compel; Т.: zorlamak) *ҡ.*

Бер-берәүҙең ризаһыҙлығын иҫәпкә алмау. ◻ Принуждать, неволить. ■ *Халыҡ батшаны ай-вайына ҡуймай атка мендереп ултырта.* Әкиәттән.

**АЙВАЙЛАУ (айвайла-)** (Р.: терзаться; И.: torment oneself; Т.: azap çekmek) *ҡ.*

Ҡайғы-хәсрәт йәки һыҙланыу белдереп өҙгөләнеү; ай-вай итеү. ◻ Терзаться, мучиться, убиваться. *Айвайлап илау.*

**АЙГИЛДЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бер башҡорт аймағының исеме. ◻ Название одного из родовых подразделений башкир.

**АЙҒАҘАТЫУ (айғаҙат-)** (Р.: глушить; И.: stun; Т.: sersemletmek) *ҡ.*

**1.** Иҫәнгерәтеү, һеңгәҙәтеү, шаңғытыу. ◻ Глушить, оглушить. *Айғаҙата һуғыу.*

**2.** *күсм.* Томалау, томан ҡаплаған һымаҡ итеү. □ Затуманивать сознание. *Айғаҙатып тора.*

**АЙҒАҘАУ (айғаҙа-)** (Р.: медлить; И.: tarry; Т.: ağır davranmak) *ҡ.*

**1.** Яйлап, иркенләп йөрөү. □ Медлить; мешкать, замешкаться. ■ *Уны йомошҡа ебәрһәң дә айғаҙай ҙа йөрөй, һис бер ашыға белмәй.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Ҡул-аяҡты ян-яҡҡа ташлап, иркенләп ятыу. □ Растянуться с наслаждением. ■ *Эт ҡояш йылыһына айғаҙап ята.* Т. Морат.

**АЙҒАЛАҠЛАУ (айғалаҡла-)** (Р.: припирать; И.: press; Т.: sıkıştırmak) *ҡ.*

Кейек ҡыуғанда, бер был яғынан, бер теге яғынан сығып, ҡыҫырыҡлау. □ Припирать, зажимать, притеснять *кого-л. Эт ҡуянды айғалаҡлай.*

**АЙҒАШҠА** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-бурзянцев.

**АЙҒОЛАҠ (айғолағы)** (Р.: жабры; И.: gills; Т.: solungaçlar) *и.*

**1.** *зоол.* Балыҡтың тын алыу ағзаһы. □ Жабры. *Айғолаҡ дуғалары. Айғолаҡ япраҡтары.*

**2.** *этн.* Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-бурзянцев.

**АЙҒОЛАҠЛЫ** (Р.: имеющий жабры; И.: having gills; Т.: solungaçlı) *с. зоол.*

Айғолағы булған. □ Имеющий жабры, с жабрами, жаберный. *Айғолаҡлы хайуандар.*

**АЙҒОЛАҠ ТАМҒАҺЫ** (Р.: знак охраны авторского права; И.: copyright sign; Т.: telif hakkı uyarısı) *и.*

Автор хоҡуҡтарын һаҡлау тамғаһы ©. □ Знак охраны авторского права ©.

**АЙҒУРЫ** *и. диал. кар.* **шаңдаҡ.**

**АЙҒЫЛДАУ (айғылда-)** (Р.: громкое ржание; И.: loud neighing; Т.: kişneme) *ҡ.*

**1.** Ярһып, көслө тауыш биреү. □ Громко ржать. // Громкое ржание. ■ *Айғыр айғылдап кешнәп ебәрҙе.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *күсм.* Көслө, көр тауыш һалыу. □ Издавать громкий крик, хохот. *Айғылдап көлөү.*

**АЙҒЫР** (Р.: жеребец; И.: colt; Т.: aygır) *и. зоол.*

**1.** Беселмәгән йылҡы малы. □ Жеребец. *Өйөр айғыры. Тоҡом айғыры. Аҫау айғыр. Айғыр ҡолон.* ■ *Ерҙән ерән айғыр бир, күктән күк айғыр бир, Ҡорайт! Ҡорайт! Ҡорайт!* Арбауҙан. *Имеш, Йөҙшишмәлә генә түгел, бөтә Таулыҡай районында дан тотҡан бер нәҫел айғыры, һабантуй юлында сығынсылап китеп, шунда барып батҡан тип тә һөйләйҙәр.* Д. Бүләков. *Шул мәлдә болоттар араһынан иҫ китҡес матур ала айғыр килеп сыҡҡан. Тап бына ошо урында айғырҙың аяғы ергә тейгән дә, ер убылып төшкән дә киткән. Ала айғыр ер аҫтына китеп юҡ булған.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *күсм.* Ҡатын-ҡыҙға бәйләнергә яратҡан ир. □ Любитель женщин. ■ *Һин нимә... минең... түҙемде һынайһың... Үҙеңдең... ҡарт айғырыңды яҡлайһыңмы?!* Т. Ғарипова.

**АЙҒЫРҒА ЯТЫУ (айғырға ят-)** (Р.: случаться *(о кобыле)*; И.: couple; Т.: aştırmak) *ҡ.*

Айғыр менән ҡауышыу; торобоу *(бейәгә ҡарата).* □ Случаться *(о кобыле).*

**АЙҒЫР КӨЙҘӨРӨҮ (айғыр көйҙөр-)** (Р.: кастрация жеребца; И.: castration (about colts); Т.: hadımlaştırma) *ҡ. вет.*

Аталыҡ енесе биҙҙәрен алып ташлау; бестереү. □ Кастрация жеребца.

**АЙҒЫРЛАНЫУ (айғырлан-)** (Р.: наброситься на *кого-л.*; И.: attack; Т.: saldırmak) *ҡ.*

**1.** Айғыр һымаҡ ҡыланыу. □ Наброситься на *кого-л.*, демонстрируя силу.

**2.** *күсм. һөйл.* Шашынып, ҡатын-ҡыҙға бәйләнеү. □ Открыто и грубо приставать к женщине.

**АЙҒЫРСАҠ (айғырсағы)** (Р.: жеребёнок-самец; И.: stallion; Т.: tay) *с. диал.*

Айғыр ҡолон. □ Жеребёнок-самец. *Айғырсаҡ ҡолон.*

**АЙҒЫРТАШ** (Р.: название игры; И.: game; Т.: oyun) *и.*

**1.** Уйын исеме. □ Название игры.

**2.** Таш ырғытып уйнағанда иң ҙур таш. □ Самый большой камушек при игре в камушки.

**АЙҒЫР ҮГЕҘ** (Р.: некастрированный; И.: stock ox; Т.: damızlık boğa) *и. зоол.*

Тоҡомға ҡалдырылған көйҙөрөлмәгән үгеҙ. □ Некастрированный племенной бык.

**АЙҒЫР ҺӨРӨҮЕ** (Р.: угон косяка кобылиц жеребцом; И.: driving away mares by stallions; Т.: kısrakları kaçırma) *и.*

Айғырҙың бейәләрҙе ҡыуып йөрөтөүе. □ Угон косяка кобылиц жеребцом.

**АЙҒЫР ҺЫЛЫУЛАУ (айғыр һылыула-)** *к. ҡар.* **айғыр көйҙөрөү.**

**АЙҘА** (Р.: секира; И.: pole axe; Т.: balta) *и. иҫк.*

Айбалта. □ Секира, бердыш. ■ *Миңлегөл дә ир һымаҡ, һаҙаҡ алып ҡулына, айҙа тағып биленә, .. төштө улар юлына.* «Ҡараһаҡал».

**АЙҘАҠАЙ** (Р.: непостоянный; И.: unstable; Т.: kararsız) *с. диал.*

Аумаҡай. □ Непостоянный, изменчивый, неустойчивый. *Айҙаҡай кеше.*

**АЙҘАР I** (Р.: пучок волос; И.: tuft of hair; Т.: saç demeti) *и.*

Түбәлә ҡырҡмай ҡалдырылған бер шәлкем сәс *(ғәҙәттә, малайҙарҙа).* □ Пучок волос, оставленный на макушке с обережной целью.

**АЙҘАР II** (Р.: знак почётного звания; И.: token of eminence; Т.: unvan) *и.*

Маҡтаулы исем, юғары дәрәжә билдәһе. □ Знак почётного звания, высокой должности.

**АЙҘАРЛЫ** (Р.: почётный; И.: esteemed; Т.: saygıdeğer) *с.*

Хөрмәтле, ихтирамлы. □ Почётный, уважаемый, почтительный. *Айҙарлы мырҙа.* ■ *Ҡуш айҙарлы мырҙалар ялсылай тороп малдан һуң.* Ҡобайырҙан.

**АЙҘАҪ** (Р.: завинчивающийся; И.: screwed; Т.: vidalanmış) *с. диал.*

Боролмалы. □ Завинчивающийся.

**АЙҘАҺАР** (Р.: круг полной луны; И.: full phase of the moon; Т.: dolunay halkası) *и.*

Тулы айҙың түңәрәге. □ Круг полной луны. *Айҙаһар кеүек икмәк.*

**АЙҘАШ** (Р.: люди, родившиеся в одном и том же месяце; И.: born in the same month; Т.: aynı ayda doğmuş insanlar) *и. диал.*

Бер айҙа тыуғандар. □ Люди, родившиеся в одном и том же месяце.

**АЙҘЫНЛЫ** (Р.: светлый; И.: light; Т.: aydın) *с.*

Яҡты, матур. □ Светлый, лучезарный. *Айҙынлы хыялдар.* ■ *Башкорт йортоноң айҙынлы теләктәр менән янған йәш батырҙары яңы тәртип урынлаштырмаҡсылар.* Ш. Шәһәр.

**АЙҘЫР** (Р.: сноповозка; И.: vehicle for sheaves; Т.: demet arabası) *и.*

**1.** Көлтә арбаһы. □ Сноповозка. *Айҙыр арба.*

**2.** *диал.* Оҙон арба. □ Дрога.

**АЙЙОЛДОЗ** *и. диал. ҡар.* **таң йондоҙо**.

**АЙ ЙОНДОҘО** *и. диал. ҡар.* **таң йондоҙо.** ■ *Эңерҙә ай менән бергә ҡалҡҡан йондоҙҙо айҙың иптәше, ай йондоҙо тиҙәр ине.* Ф. Хисамитдинова.

**АЙ ЙЫЛЫ** (Р.: лунный год; И.: lunar year; Т.: kamer yılı) *и.*

Ай календары менән иҫәпләнгән йыл оҙонлоғо, ҡояш йылынан 11 көнгә кәм. □ Лунный год.

**АЙ КАЛЕНДАРЫ** (Р.: лунный календарь; И.: lunar calendar; Т.: kamerî takvim) *и.*

Ай һәм йыл оҙонлоғон Ай хәрәкәтенән сығып иҫәпләгән календарь *(иҫәп Мөхәмәттең Мәккәнән Мәҙинәгә күскән көнөнән башланып, ун ике айға бүленеп йөрөтөлә, исемдәре: мөхәррәм, сәфәр, рабиғеләүүәл, рабиғелахыр, йомадиәләүүәл, йомадиәлахыр,*

*рәжәп, шәғбән, рамаҙан, шәүүәл, зөлкағиҙә, зөлхизә).* □ Лунный календарь.

**АЙКИДО** [рус. < япон. *aikido*] (Р.: айкидо; И.: aikido; Т.: aykido) *и.*

Көнсығыш көрәш төрө. □ Айкидо. *Айкидо алымдары.*

**АЙ-КЬЮ** [рус. < ингл. *intelligence quotient*] (Р.: коэффициент интеллекта; И.: intelligence quotient; Т.: Zeka Katsayısı) *и.*

Тестар ярҙамында билдәләнгән кешенең фекер йөрөтөү кимәле коэффициенты, интеллект коэффициенты. □ Коэффициент интеллекта *(IQ количественная оценка уровня интеллекта человека: уровень интеллекта относительно уровня интеллекта среднестатистического человека такого же возраста).*

**АЙКӘ** (Р.: ой; И.: oh; Т.: ay) *ымл. диал.*

Аптырау, һоҡланыуҙы белдерә. □ Выражает удивление, чувство восхищения: ой. ■ *Айкә генә! Ҡара әле, калай мәрәкә.* Т. Морат.

**АЙ КӘРТӘЛӘНЕҮ (ай кәртәлән-)** (Р.: появление ореола вокруг луны; И.: halo; Т.: halelenmek) *к.*

Ай тирәһендә нурлы ҡулса барлыҡҡа килеү. □ Появление ореола вокруг луны. ● *Ай кәртәләнһә, көн йонсоу була.* Һынамыш.

**АЙ КӘРТӘҺЕ** *и. кар.* **ай ҡоро.**

**АЙҠАЙ-САЙҠАЙ** (Р.: размахивая; И.: swaying; Т.: sallayarak) *р.*

Һелтәнеп, һелтәй-һелтәй; бәүелә-бәүелә. □ Размахивая; покачивая. *Киркәне айкай-сайкай таш ватыу.*

**АЙ ҠАЙТАРЫУ** (Р.: свадебные гостинцы; И.: Wedding gifts; Т.: düğün hediyeleri) *и. диал.*

**1.** Ҡыҙ яғы егет яғына туйға алып барған күстәнәс, йыуаса. □ Свадебные гостинцы со стороны невесты.

**2.** Туй күстәнәстәренә саҡырылған ауылдаштарҙың кейәү-кәләшкә теләктәре. □ Благопожелания новобрачным односельчан, приглашённых на свадебное угощение.

**АЙҠАЛАНЫУ** *и. диал. кар.* **буталыу.**

**АЙҠАЛА-САЙҠАЛА** (Р.: поднимая волны; И.: raising waves; Т.: dalgalanarak) *р.*

**1.** Тулҡынланып. □ Поднимая волны. *Айкала-сайкала сылтырап ағып яткан йылға.*

**2.** Бәүелә-бәүелә. □ Ходить качаясь, шатаясь. *Айкала-сайкала атлау.*

**АЙҠАЛАУ I (айҡала-)** (Р.: теребить; И.: pull (at); Т.: çekip durmak) *к.*

Тартҡылау, йолҡҡолау, төрткөләү. □ Теребить, тормошить, дёргать. *Баланы айкалау.*

**АЙҠАЛАУ II (айҡала-)** (Р.: озираться; И.: gaze round; Т.: etrafına bakınmak) *к.*

Ҡарап сығыу, байҡау. □ Озираться, обозревать, просматривать. *Тирә-якты айкалау.*

**АЙҠАЛАУ III (айҡала-)** *к. диал. кар.* **бутау, болғау.**

**АЙҠАЛАШЫУ (айҡалаш-)** (Р.: схватываться *с кем-л.*; И.: grapple (with); Т.: kapışmak) *к.*

**1.** Бирешмәҫкә тырышып, тартҡылашыу; көрмәкләшеү. □ Схватываться *с кем-л.*; бороться *с кем-л.* ■ *Ҡыҙҙар менән килгән бер егет һалам эшләпәле ҡыҙҙы капыл күтәреп алды. Теге ҡыҙ айкалаша, ҡыскыра башланы.* С. Кулибай.

**2.** Ҡорал менән һуғышыу; алышыу. □ Схватываться, сражаться. ■ *Фашист был заводты йәнен-тәнен аямай һакларға булған, күрәһең. Төш ауғансы, шул завод тирәһендә айкалаштык.* Р. Ҡотошов.

**3.** *диал.* Ҡосаҡлашыу. □ Обниматься. *Айкалашып ултырыу.*

**АЙҠАЛДЫРЫУ (айҡалдыр-)** (Р.: качать; И.: swing; Т.: sallandırmak) *к.*

**1.** Көс менән ян-яҡҡа бәүелдереү; тирбәлтеү. □ Качать, раскачивать. *Тулкын кәмәне айкалдыра. Ел өйәңкене айкалдыра.*

**2.** Яңғырау. □ Громко звучать, распространяться *(о звуках).* ■ *Йыр йырлана көслө, көр тауыштан айкалдырып бөтә донъяны.* Х. Ҡунаҡбай.

**АЙҠАЛЫП-САЙҠАЛЫП** (Р.: качаясь; И.: swinging; Т.: sallanarak) *р.*

Бәүелә-бәүелә, аушанлап. □ Качаясь, раскачиваясь, шатаясь. *Айкалып-сайкалып атлау.* ■ *[Хисмәтулла] айкалып-сайкалып ултырҙы ла, башын өҫтәлгә һалып нисек йоклап киткәнен һиҙмәй ҙә калды.* Я. Хамматов.

**АЙҠАЛЫУ (айҡал-)** (Р.: качаться; И.: rock; Т.: sallanmak) *к.*

**1.** Көс тәьҫирендә ян-яҡҡа бәүелеү; тирбәлеү. □ Качаться, раскачиваться. // Качание, раскачивание. ■ *Айкалһын әйҙә тулкындар, сайкалһын әйҙә кәмә.* М. Кәрим. *Айкала диңгеҙ, сайкала, ни етмәй икән уға?* Ә. Вәли.

**2.** Ҡуҙғалыу, күсеү, буталыу. □ Переместиться, двигаться, толкаться. // Перемещение, движение, толкучка. *Болоттар айкала.*

**3.** *күсм.* Тулҡыныу, ҡуҙғалыу *(күмәк кешегә карата).* □ Волноваться, подниматься. // Волнение, подъём. ■ *Зал айкала, залды шатлык баҫа, кул сабыуҙар яңғырап китәләр.* Х. Ҡунаҡбай.

**4.** *күсм.* Тулҡынланыу *(уй-кисерешкә карата).* □ Волноваться, путаться *(о мыслях).* ■ *Уйна, гармун! Уйҙар айкалһын, арыған тәндә кандар сайкалһын.* Ғ. Амантай.

**АЙҠАЛЫШЫУ (айкалыш-)** *к. кар.* **айкалыу 2.**

**АЙҠАН I** (Р.: причина; И.: cause; Т.: neden) *и.*

Берәй эш-хәлде ғәмәлгә килтергән сәбәп. □ Причина, повод, предлог. *Асыуыңдың айканы нимәлә?*

**АЙҠАН II** *бәйл. кар.* **айканлы**. *Юл айкан инеп сығыу.*

**АЙҠАНЛЫ** (Р.: по причине; И.: because of; Т.: nedeniyle) *бәйл.*

Төп килештәге исем йәки исем ҡылымдарҙан һуң килеп эш-хәлдең, ваҡиғаның ниндәй сәбәптән булғанын белдерә; бер нәмә уңайы менән. □ По причине, по поводу, по случаю, ввиду, из-за (*послелог с осн.п.*). *Байрам айканлы.* ■ *1935 йылда Башкорт дәүләт театры үҙенең 15 йыллык юбилейын билдәләй. Ошо айканлы ла, коллективтың ҙур ижади хеҙмәте өсөн дә театрға Башкорт дәүләт академия театры исеме бирелә.* А. Сирбаев.

**АЙҠАНЫУ (айҡан-)** (Р.: размахиваться; И.: threaten; Т.: keskenmek) *к.*

Һелтәнеү. □ Размахиваться, замахиваться. ■ *Кеше көсөн курҙең һин, хәлһеҙлегең белдең һин, кешегә мөгөҙ сайкама, еңермен тип айканма!* «Урал батыр».

**АЙҠАТЫУ (айҡат-)** (Р.: раскачивать; И.: swing; Т.: sallandırmak) *к.*

**1.** *йөкм. кар.* **айҡау.** *понуд. от* **айҡау.**

**2.** Ян-яҡҡа сайҡалдырыу. □ Раскачивать, качать. ■ *Күмегеҙ шау-шыуҙарға бар донъяһын, айкатығыҙ тормош диңгеҙен!* Х. Ҡунаҡбай.

**АЙҠАУ (айҡа-)** (Р.: размахивать; И.: swing; Т.: sallamak) *к.*

**1.** Төрлө яҡҡа болғау, ян-яҡҡа һелтәү. □ Размахивать, махать. ■ *[Апсатый:] Ат өҫтөндә һөңгө айкап, дошмандарға каршы барырмын.* Б. Бикбай. *Һыйыр .. мөгөҙө менән Актырнакты айкап ебәрҙе.* М. Ғафури.

**2.** Арҡыры-буй йөрөү, ҡыҙырыу, гиҙеү. □ Странствовать, бродить, скитаться. ■ *Бик күп ерҙәрҙе айкап йөрөгән ул.* К. Мәргән. *Замандашым йыһан киңлектәрен айкаймы ни бөгөн тикмәгә.* Ш. Бикҡолов.

**3.** *Ниҙең дә* булһа араһын болартыу, һиллекте, тыныслыҡты боҙоу. □ Будоражить. ■ *Хажи байҙың коба һыйыры уҫал да инде, бөтә көтөүҙе айкап йөрөй.* Ғ. Ғүмәр.

**4.** Иғтибар менән ҡарау, күҙәтеү. □ Внимательно наблюдать, смотреть. ■ *Һәр йәмеңә ғашик малайың, урманыңды туймай айкайым.* Ә. Әхмәткужин.

**5.** *Ниҙелер* табырға тырышып төрлө ерҙе ҡарау, эҙләү. □ Искать. ■ *[Ләлә] карауат, диван аҫтын пыр туҙҙырып айканы, бар өйҙө ҡыҙырып сыкты, әммә тубын тапманы.* А. Игебаев.

**6.** Алыш-һуғышта күмәк халыҡты туҡмау, ҡырыу. □ Крушить, разбить всё живое перед собой. ■ *Йәшнәтеп ялман ҡылысты айҡаныҡ дошман яуын.* Ғ. Әмири.

**АЙҠАШЫУ (айҡаш-)** (Р.: схватываться; И.: wrestle; Т.: kapışmak) *ҡ.*

**1.** Тотоношоп, үҙ-ара тартҡылашыу; айпалашыу, көрмәкләшеү. □ Схватываться, бороться, сцепиться. ■ *Тиктомалға көрмәкләшеп, айҡаша Алтынғужа, көрмәкләшеү, сәкәләшеү йәнәһе ҡыҙыҡ уға.* А. Игебаев.

**2.** Яуҙа көрәшеү, алышыу. □ Сражаться, биться. ■ *Төн артынан ҡалҡып көн килерен онотманы халҡым, айҡашты. Үлемесле яуҙар ялҡынынан алһыуланып көткән таң атты.* С. Ғәбиҙуллин.

**3.** *диал.* Бәйләнеш тотоу, аралашыу. □ Общаться, поддерживать знакомство. *Апалары менән ихлас айҡаша.*

**4.** *диал.* Һырығыу, ҡосаҡлау. □ Прижаться, обниматься. *Балалар бер-береһенә айҡашып йоҡлап китте.*

**АЙ ҠОЛАҠЛАНЫУ (ай ҡолаҡлан-)** (Р.: появление ореола с двух сторон луны; И.: halo; Т.: ay halesi) *ҡ.*

Айҙың ике яғынан оҙон ҡолаҡ кеүек нур барлыҡҡа килеү. □ Появление ореола с двух сторон луны. ● *Ай ҡолаҡланһа, аяғыңды нығыт, көн ҡолаҡланһа — ҡолаҡсыныңды нығыт.* Әйтем.

**АЙ ҠОРО** (Р.: светлый ореол вокруг луны; И.: halo; Т.: hale) *и.*

Айҙы уратып торған яҡтылыҡ. □ Светлый ореол вокруг луны.

**АЙ ҠЫҘЫ** (Р.: пятно на луне; И.: spot on the moon; Т.: ay kızı) *и. миф.*

Айҙың табы. Ышаныуҙар буйынса, айҙа йәшәгән ҡыҙ. □ Пятно на луне. *Ай ҡыҙы айҙа көйәнтә менән баҫып тора.* ■ *Беҙ барыбер, караштарыбыҙҙы ниҙер арбағандай, ҡүтәрелдәбеҙ ҙә күккә бағабыҙ. Ай ҡыҙының да хыял ғына булыуына ышанғы килмәй.* М.Ҡотлоғәлләмов.

**АЙҠЫЛДАУ (айҡылда-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аянлау**.

**АЙҠЫРЫ** *р. диал. ҡар.* **арҡыры**.

**АЙҠЫРЫЛЫҠ (айҡырылығы)** *и. диал. ҡар.* **урҙа I**.

**АЙЛАП** (Р.: месяцами; И.: for months; Т.: aylarca) *р.*

**1.** Айы-айы менән. □ Месяцами. ■ *Айыуғолаҡ айлап ҡына түгел, көнләп, сәғәтләп үҫкән, ти.* Әкиәттән.

**2.** Ай буйы. □ Около месяца, месяц. *Урман эшендә көнләп түгел, айлап йөрөйбөҙ.*

**АЙЛЫ** (Р.: лунный; И.: moonlit; Т.: aylı) *с.*

**1.** Ай яҡтыртып торған. □ Лунный. *Айлы кис. Айлы төн.* ● *Айлы төн аҙашмаҫҡа яҡшы.* Мәҡәл.

**2.** Ай билдәһе ҡуйылған. □ С изображением месяца. *Айлы манара.*

**АЙЛЫҠ I (айлығы)** (Р.: месячник; И.: month's campaign; Т.: aylık) *и.*

Берәй эш-ваҡиғаға бағышланған ай. □ Месячник. *Урман айлығы. Юл төҙөү айлығы.* ■ *Йыл да юл төҙөү айлығы ваҡытында шуны [юлды] рәтләйҙәр.* Н. Мусин.

**АЙЛЫҠ II** (Р.: месячный; И.: monthly; Т.: aylık) *с.*

**1.** Айға етерлек. □ Месячный. ■ *Ә ул иген һеҙгә барлығы бер айлыҡ аҙыҡ ҡына бит, ә артабан?* Һ. Дәүләтшина. ● *Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта, айлыҡ аҙыҡ арҡала.* Әйтем.

**2.** Ай менән иҫәпләнгән. □ Месячный. *Алты айлыҡ курс.*

**3.** Нисәлер айы тулған. □ Месячный. ■ *Инәйемдән бары туғыҙ айлыҡ ҡына ҡалған Тәғзимә ҡәрендәшем дә минең менән ине.* С. Әлибаев.

**4.** Бер айға тейешле. □ Месячный. *Айлыҡ эш хаҡы.*

**5.** Айға бер була торған. □ Ежемесячный. *Айлыҡ журнал.*

**6.** *диал. ҡар.* **күрем**.

**АЙЛЫҠЛАУ (айлыҡла-)** (Р.: рассчитать на месяц; И.: give for a month; Т.: aylığa hesaplamak) *ҡ.*

Айына етерлек итеп иҫәпләү йәки биреү. □ Рассчитать или дать на месяц. *Айлыҡлап түләү. Аҙыҡты айлыҡлау.*

**АЙМАҒАС** *р. диал. ҡар.* **бөтәһе.**

**АЙМАҒЫС** *р. диал. ҡар.* **бөтәһе.**

**АЙМАҠ I (аймағы)** [монг.] (Р.: родовое подразделение; И.: tribal unit; Т.: soy) *и. тар.*

**1.** Ырыу эсенә ингән бәләкәйерәк туғандаш төркөм. □ Родовое подразделение. ■ *Башҡорт халҡы борон ырыуҙарға, ә ырыу — аймаҡ йәки түбәләргә бүленгән.* Ә. Бейешев.

**2.** *һөйл.* Билдәле бер урын; төбәк. □ Место, местность. ■ *[Ирйегет:] Был урмандың һәр мөйөшө, һәр аймағы .. миңә таныш.* С. Мифтахов.

**3.** *диал.* Асыҡ урын, аҡлан. □ Поляна.

**АЙМАҠ II** (Р.: многочисленный; И.: numerous; Т.: kalabalık) *с. диал.*

Күп, күмәк; ишле. □ Многочисленный.

**АЙМАҠ БАЛА** (Р.: ребёнок из многодетной семьи; И.: child from a large family; Т.: büyük bir ailenin çocuğu) *и. диал.*

Күп балалы ғаилә балаһы. □ Ребёнок из многодетной семьи. *Балаһыҙ ҡатын аймаҡ баланы алдына алып, тәңренән бала һорай.*

**АЙМАҠЛАП** *р. диал. ҡар.* **бергә-бергә.**

**АЙМАҠЛАШЫУ** *р. диал. ҡар.* **күмәкләшеү.**

**АЙМАУ (айма-)** (Р.: обхватывать; И.: embrace; Т.: yakalamak) *ҡ.*

**1.** Киң, мул итеп ҡулға эләктереү. □ Обхватывать, охватывать, захватывать *(одним движением)*. // Обхват, охват, захват. *Аймап алыу. Аймап тотоу. Ураҡ менән аймап урыу.*

**2.** Ян-яҡты киң әйләндереп биләү. □ Раскинуться, простираться. ■ *Баяр имениеһы аймап яткан бар йылғаны, туғай, урманды.* Б. Бикбай.

**АЙМЫЛ** (Р.: ошибочный; И.: erroneous; Т.: yanlış) *с.*

Дөрөҫ булмаған, хата, яңылыш, яҙыҡ. □ Ошибочный, неправильный, неверный. *Аймыл фекер. Аймыл хәбәр.*

**АЙМЫЛ БУЛЫУ (аймыл бул-)** (Р.: ошибаться; И.: be mistaken; Т.: yanılmak) *ҡ.*

**1.** Яңылышыу, хаталаныу. □ Ошибаться, допускать ошибку.

**2.** Яҙа юлдан китеү, аймылышыу. □ Сбиваться с пути, разминуться.

**АЙМЫЛ ИТЕҮ (аймыл ит-)** (Р.: обмануть; И.: cheat; Т.: aldatmak) *ҡ.*

Алдау, хаталандырыу. □ Обмануть, привести к ошибке.

**АЙМЫЛЫУ (аймыл-)** (Р.: ошибаться; И.: be mistaken; Т.: yanılmak) *ҡ.*

**1.** Дөрөҫтән ситләшеү, хата эш ҡылыу; яңылышыу, хаталаныу, яҙлығыу. □ Ошибаться. *Аймылып, харап булды.*

**2.** *ҡусм.* Тайпылыу, ситләшеү. □ Отступаться, расходиться, разойтись в пути. ■ *Ағай-эне һүҙенән мин аймылдым, еттем буғай ғәзиз башыма.* Халыҡ йырынан.

**АЙМЫЛЫШ I** (Р.: ошибочный; И.: erroneous; Т.: hatalı) *с.*

Дөрөҫкә тап килмәгән, дөрөҫтән ситкә сыҡҡан; хата, яңылыш, яҙыҡ. □ Ошибочный, неверный. *Аймылыш эш.*

**АЙМЫЛЫШ II** (Р.: легкомысленный; И.: silly; Т.: düşüncesiz) *с.*

Аҡылы камиллашмаған, аҡылы теүәлләнеп етмәгән. □ Легкомысленный, недалёкий, глупый. ■ *Аҡ — аймылыш сабыйҙарҙы арыҫлан иткән аш-аҙыҡ.* Ы. Юлбаева.

**АЙМЫЛЫШ III** (Р.: ошибка; И.: erroneous; Т.: hata) *и.*

Яңылышлыҡ, яҙыҡлыҡ. □ Ошибка. ■ *Оҙон юлдан атлағанда аймылыштар ҙа булғылаңы, ләкин беҙ аҙашманыҡ.* Р. Солтангәрәев.

**АЙМЫЛЫШ БУЛЫУ (аймылыш бул-)** (Р.: ошибаться; И.: make mistakes; Т.: yanılmak) *ҡ.*

**1.** Хата эш ҡылыу; яңылышыу, хаталаныу. □ Ошибаться, допускать ошибку. *Һин килә тип аймылыш булдым, юғиһә үҙем генә бара инем.*

**2.** Яҙа йөрөп, ситкә китеү; үҙ-ара тап булмай, яҙлығыу. □ Сбиться с пути; разминуться.

**АЙМЫЛЫШ ИТЕҮ (аймылыш ит-)** (Р.: привести к ошибке; И.: lead to mistakes; Т.: yanıldırmak) *к.*

**1.** Дөрөҫтән ситкә тайпылдырыу; яңылыштырыу, хаталандырыу. □ Привести к ошибке.

**2.** Кем менәндер юлды яҙлыҡтырыу; яҙа йөрөтөү. □ Сбивать с пути.

**АЙМЫЛЫШТЫРЫУ (аймылыштыр-)** (Р.: путать; И.: confuse; Т.: karıştırmak) *к.*

**1.** Бутау, яңылыштырыу. □ Путать. *Аймылыштырып ебәреү.*

**2.** Кем менәндер юлды яҙлыҡтырыу, яҙа йөрөтөү. □ Сбить с пути. *Юл аймылыштырыу.*

**АЙМЫЛЫШЫУ (аймылыш-)** (Р.: разминуться; И.: miss each other; Т.: yolda raslaşmamak) *к.*

**1.** Үҙ-ара тап булмай яҙа йөрөү. □ Разминуться. ■ *Әллә минән, әллә һинән булды, — аймылышты ҡуйҙы юлыбыҙ...* Ғ. Дәүләтов.

**2.** Үҙ-ара юл бирешеү. □ Разойтись, уступить дорогу. *Аймылышып уҙыу.*

**3.** *диал. ҡар.* **алйыу.**

**АЙМЫТ** (Р.: развилина; И.: fork; Т.: çatal) *и. диал.*

Сата, айырса. □ Развилина. ■ *Беҙҙең кәлсер-табын ырыуының ҡапҡа тамғаһында өҫтән бер аймыты бар.* Ғ. Хөсәйенов.

**АЙНАҠ (айнағы)** (Р.: окно; И.: window; Т.: pencere) *и. иҫк.*

Тәҙрә. □ Окно.

**АЙНАЛАЙЫМ I** (Р.: слово с магической силой; И.: magic word; Т.: büyü sözü) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, магик көскә эйә булған һәм һаҡлау, ҡурсалау функцияһын үтәгән һүҙ. □ Слово с магической силой, выполняет функцию защиты. ■ *Кәмәлек буйы башҡорттарында, әгәр бала тертләп уянһа, оло ҡатындар өрөлөп китеп: «Айналайым», — тип өшкөргәндәр. Был һүҙ «Йә Хоҙайым, ҡурсала, һаҡла!» мәғәнәһендә ҡабул ителгән.* Ф. Хисамитдинова.

**АЙНАЛАЙЫМ II** (Р.: душечка моя; И.: darling; Т.: canım) *и. диал. ирк.*

Йәнкәйем, иркәм, һөйөклөм. □ Душечка моя, милый, любимый мой. ■ *[Мәғфүрә] Айбулатты улы кеүек ҡосаҡлап күреште лә илап ебәрҙе: «Эй, айналайым, ҡайһылай олоғайып, ҡарт һалдат булып киткән! Йә, һау ҡайттыңмы?»* Һ. Дәүләтшина.

**АЙНАЛЫУ (айнал-)** (Р.: кружиться; И.: spin; Т.: dönmek) *к. диал.*

Әйләнеү, өйрөлөү. □ Кружиться. *Айналып китеү.*

**АЙНОСТАЙ** (Р.: полоумный; И.: half-witted; Т.: deli) *с. диал.*

Иҫәр. □ Полоумный, глуповатый.

**АЙНЫҒЫУ (айныҡ-)** (Р.: трезветь; И.: become sober ; Т.: ayılmak) *к.*

**1.** Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу; айныу. □ Трезветь, протрезвляться.

**2.** *диал.* Һауыға биреү, шәбәйә башлау. □ Оправиться, прийти в себя.

**АЙНЫҠ** (Р.: трезвый; И.: sober; Т.: ayık) *с.*

Иҫерек түгел, айыҡ. □ Трезвый. *Айныҡ баш. Айныҡ аҡыл.* ● *Аҡыллы иҫерек иҫәр айныҡтан яҡшыраҡ.* Әйтем.

**АЙНЫҠТЫРЫУ (айныҡтыр-)** (Р.: отрезвлять; И.: sober (up); Т.: ayıltmak) *к.*

Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтарыу; айныҡ итеү. □ Отрезвлять, протрезвлять, вытрезвлять. *Тәнкит уны айнытты.*

**АЙНЫТҠЫС I** (Р.: отрезвляющий; И.: sobering; Т.: ayıltıcı) *с.*

Иҫереклекте бөтөрә торған, айныта торған. □ Отрезвляющий, отрезвительный. *Айнытҡыс дарыу. Айнытҡыс сара.*

**АЙНЫТҠЫС II** (Р.: вытрезвитель; И.: sobering-up centre; Т.: ayıltıcı yer) *и.*

Иҫерек кешеләрҙе айныҡтырып сығара торған урын йәки йорт. □ Вытрезвитель. *Айнытҡыска ябыу. Айнытҡыста ултырыу. Айнытҡыска эләгеү.* ■ *Ул [Заман] уянып китте айнытҡыста. Төн уртаһы. Күңел болғана.* М. Ямалетдинов.

**АЙНЫТЫЛЫУ (айнытыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **айнытыу.** *страд. от* **айнытыу.**

**АЙНЫТЫУ I (айныт-)** (Р.: вытрезвить; И.: make sober; Т.: ayıltmak) *ҡ.*

**1.** Иҫерек хәлдән арындырыу, айныҡ итеү. □ Вытрезвить, отрезвить, трезвить, протрезвить. *Иҫеректе айнытыу.*

**2.** Эсемлектең тәьҫир көсөн кәметеү. □ Потерять силу, крепость *(о напитке). Ҡымыҙҙы айнытыу. Балды айнытыу.*

**3.** *күсм. Ниҙеңдер* көслө тәьҫиренән арындырыу; аңға килтереү. □ Выводить из *какого-л.* состояния. ■ *Был тауыш Айбулатты һеңгәҙәгән хәленән айнытты.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм. Ниндәйҙер* бер хәлдән арындырыу. □ Освобождать, избавлять. *Йоҡонан айнытыу. Ауыр уйҙарҙан айнытыу.*

**5.** *күсм.* Ауырыуҙан арындырыу, арыуландырыу, һауыҡтырыу. □ Исцелять, избавлять, спасать. *Эҫе сәй тәндәрҙе иретеп, айнытып ебәрҙе.*

**АЙНЫТЫУ II (айныт-)** (Р.: провести; И.: cheat; Т.: kandırmak) *ҡ. диал.*

Алдау, ултыртыу. □ Провести, обмануть. *Ул мине айнытты.*

**АЙНЫУ (айны-)** (Р.: трезветь; И.: get sober; Т.: ayılmak) *ҡ.*

**1.** Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу. □ Трезветь, протрезвляться. // Отрезвление.

**2.** Көс-ҡеүәте кәмеү *(төрлө әсе шыйыҡлыҡҡа ҡарата).* □ Выдыхаться *(о жидкостях). Бал айныған. Һеркә айныған.*

**3.** *күсм. Ниҙең дә* булһа көслө тәьҫиренән арынып, ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу. □ Выйти из *какого-л.* состояния. ■ *Күҙ алдым томаланып китте. Бер аҙҙан һуң ғына айнып, уны [Һибәт ағайҙы] ҡосаҡлап алдым да илай башланым.* Д. Юлтый. *Төштән айнып, ҡайттым өндәремә.* М. Ямалетдинов.

**4.** Аңды биләгән *ниндәй ҙә* булһа бер ҡараш-фекерҙең хаталығын төшөнөп, аҡылға килеү. □ Избавляться от ошибочных взглядов.

**5.** *күсм. Ниндәй ҙә* булһа бер хәлдән, уй-тойғонан арыныу. □ Освобождаться, избавляться от *какого-л.* состояния, мыслей или чувств. *Йоҡонан айныу.* ■ *Миңә рәхәт, миңә еңел, бөтәһе лә шундай асыҡ. Айныным буш хыялдарҙан, буш өмөттәр китте ҡасып.* М. Кәрим. ● *Аҡыл айнымаҫ, алтын серемәҫ.* Әйтем.

**6.** *күсм.* Тынғыһыҙ бер хәлдән йәки берәй нәмәнән ҡотолоп, тыныслыҡ табыу; бушаныу. □ Освобождаться от беспокойства, становиться свободным, спокойным. *Эштән айныу. Кешенән айныу.* ■ *[Альгис] мендәргә йөҙтүбән ҡапланып та ҡараны, уйҙарынан айный алманы.* Ҡ. Ибәтуллин.

**7.** *күсм.* Ауырыуҙан, арыуҙан арыныу, арыуланыу, һауығыу. □ Поправляться, исцеляться, избавляться. ■ *Ҡайнар өйрә эскә йылылыҡ бирҙе, тәндәрҙе еңеләйтте. Бөтөнләй айнып, кеше булып киттек.* Д. Юлтый. *Таң атыуға ул [Емеш] манма һыуға төшөп тирләп, айнып китте.* З. Биишева.

**АЙПАЛАУ (айпала-)** (Р.: дёргать; И.: pull (at); Т.: çekivermek) *ҡ.*

Тартҡылау, йолҡҡолау. □ Дёргать, подёргивать; трясти. ■ *[Ғәйзулла] дүрт аяҡлы дуҫының муйынынан айпаланы ла, байтаҡ икеләнеп торғандан һуң, бүленгән юлын дауам итте.* Я. Хамматов.

**АЙПАЛАШЫУ (айпалаш-)** (Р.: схватываться; И.: wrestle (with); Т.: kapışmak) *ҡ.*

**1.** Бирешмәҫкә тырышып, үҙ-ара тартҡылашыу *(шаярғанда, көрәшкәндә йәки һуғышҡанда).* □ Схватываться, бороться. ■ *Янғолдоң энеһе [һуктырмаҫҡа] тырышып, стражник менән айпалашҡанда, маңлайын ҡамсы менән ярып ебәргәндәр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Һүҙ көрәштереү, еңелсә бәхәсләшеү. □ Спорить с *кем-л.*

**АЙПАШЫУ (айпаш-)** *ҡ. ҡар.* **айпалашыу.**

**АЙРА I** (Р.: иной; И.: especially; Т.: ayrıca) *р.*

**1.** *ҡар.* **айырата**.

**2.** *диал.* Үҙенә бер төрлө, айырым. □ Иной, другой, своеобразный.

**АЙРА II** *с. диал. кар.* **армытлы**. ■ *Неплюевтар эстеләр, арҡабыҙҙан ит телеп, айра ҡамсы иштеләр, үҙебеҙҙе киҫтеләр.* Ғ. Сәләм.

**АЙРАҒАС** (Р.: кол с развилинами; И.: kind of stake; Т.: çatallı kazık) *и.*

Саталы ҡаҙыҡ, һауыт-һаба киптереү өсөн ҡулланыла. □ Кол с развилинами *(для сушки посуды).*

**АЙРАН** [төрки] (Р.: айран; И.: ayran; Т.: ayran) *и.*

**1.** Ҡатыҡ йәки ҡоротто һалҡын һыуға шыйыҡлап яһаған эсемлек. □ Айран *(напиток из разбавленного водой кислого молока или курута). Айран һыулау. Айран яҙыу.* ■ *[Улы — әсәһенә:] Ҡымыҙ быуында ала бит ул, һыуһынға айран яҡшыраҡ. Әсе ҡатығың юҡмы?* Г. Ғиззәтуллина-Ғайсарова. ● *Айран эскән ҡотолған, ҡунәк ялаған тотолған.* Мәҡәл.

**2.** Май бешкәндә айырылып сыҡҡан әскелтем шыйыҡлыҡ. □ Пахта. *Май айраны.*

**АЙРАН-ҠЫМЫҘ** (Р.: кисломолочные продукты; И.: dairy products; Т.: süt ürünleri) *и. йыйн.*

Әсетелгән һөт аҙыҡтары. □ Кисломолочные продукты. *Айран-ҡымыҙ менән һыйлау. Айран-ҡымыҙ әҙерләү.*

**АЙРАН МАЙ** *и. диал. кар.* **аҡ май.**

**АЙРАН ҺЫУ** *и. диал. кар.* **айран 2.**

**АЙРАУЫҠ (айрауығы)** (Р.: вейник наземный; И.: wood small-reed; Т.: buğdaygillerden bir bitki) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған йөнтәҫ һепертке башлы, ҡыяҡ япраҡлы, оҙон һәм ҡалын тамырлы күп йыллыҡ үҫемлек. □ Вейник наземный (лат. *Calamagrostis epigejos*). *Урман айрауығы, суҫка айрауығы була. Айрауыҡ — ҡыяҡлы аҙыҡ үләне.*

**АЙРЫ I** (Р.: раздвоенный; И.: befurcated; Т.: çatal) *с.*

Икегә айырылып торған; айырсалы. □ Раздвоенный. *Айры тояҡ. Айры һаҡал.* ■ *Айры һаҡал үҫтергән һары Мырҡас хан иле, һинең менән булайым, атайҙан да биҙәйем, барынан да биҙәйем, һыуға төшөп үләйем.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**АЙРЫ II** (Р.: особенно; И.: especially; Т.: ayrıca) *р. диал.*

Айырыуса. □ Особенно, особо.

**АЙРЫ III** (Р.: деревянные вилы; И.: kind of wooden pitchfork; Т.: üç çatalı dirgen) *и. диал.*

Өс асалы оҙон ағас һәнәк. □ Деревянные вилы с тремя развилинами.

**АЙРЫҒАНАТ** (Р.: ласточка; И.: swallow; Т.: kırlangıç) *и. зоол. диал.*

Ҡарлуғас. □ Ласточка (лат. *Hirundo*). *Ҡара ҡарлуғасты беҙҙең бөрйәндәр айрығанат, ти.*

**АЙРЫҒОЙРОҠ (айрығойроғо)** (Р.: уховёртка; И.: earwig; Т.: kulağa kaçanlar) *и. зоол. диал.*

**1.** Асағойроҡ. □ Уховёртка (лат. *Forficula auricularia*). *Айрығойроҡтар ғаиләһе.*

**2.** Ҡарлуғас. □ Ласточка. ■ *Айрығойроҡ өй башына, яр башына оя эшләй йәбештереп.* Экспедиция материалдарынан.

**АЙ РӘНЙЕҮ (ай рәнйе-)** *ҡ. диал. кар.* **ай тотолоу.**

**АЙСА** (Р.: костра; И.: boon; Т.: internodun bir kısmı) *и. диал.*

Талҡыш. □ Костра.

**АЙСБЕРГ** [рус. *айсберг* < нем. *Eisberg, Eis* ‘боҙ’, *Berg* ‘тау’ < ингл. *iceberg* < швед. *isberg* ‘боҙ тауы’] *и. кар.* **боҙ тауы**. ■ *Айсбергтар .. бик ҙур була. Һыуҙың өҫтөнә күтәрелгән өлөшө генә лә 300–400 метр бейеклеккә етә.* Ф. Мәҡсүтов.

**АЙСЫҠ I (айсығы)** (Р.: узор; И.: kind of pattern; Т.: hilal (bezek) *и.*

**1.** Ярым ай формаһындағы биҙәк. □ Название узора в виде полумесяца. *Айсыҡ биҙәге.*

**2.** Ай биҙәкле ҡаптырма. □ Пряжка в виде полумесяца, украшенная драгоценным камнем.

**АЙСЫҠ II** *и. диал. кар.* **айыссыҡ**.

**АЙСЫҠЛАУ (айсыҡла-)** (Р.: вывести на ткани узор; И.: make a crescent pattern; Т.: hilal bezeği yapmak) *ҡ.*

Айсыҡ биҙәген төшөрөү. □ Вывести на ткани узор в виде полумесяца. *Айсыклап һуғыу.*

**АЙСЫУАҠ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир племени бурзян.

**АЙТ** [боронғо төрки *айыт* 'әйттер'] (Р.: айт; И.: hey; Т.: hey) *ымл.*

Ҡасҡан-боҫҡан кешене ҡапыл күреп ҡалғанда ҡысҡырып әйтелә. □ Произносится при внезапном обнаружении притаившегося человека. *Айт, бына һин ҡайҙа икән!*

♦ **Айт тигәнгә тайт итеү** берәйһенең һүҙен тыңларға, теләген үтәргә әҙер генә тороу. □ Быть готовым исполнить *чьё-л.* желание, повеление.

**АЙТАЙ I** (Р.: впервые становиться на ножки; И.: start walking; Т.: yürümeye başlamak) *р.*

Аяҡ өҫтө, аяҡ үрә *(яңы баҫа башлаған сабыйға ҡарата);* ләл-ләл. □ Впервые становиться на ножки *(о ребёнке).* ■ *[Бәҙерниса балаһы тураһында:] Алты айҙа айтай баҫты, йәше тулыуға теле асылып, һөйләшә башланы.* Р. Ғабдрахманов.

**АЙТАЙ II** (Р.: ну-ну, давай-давай; И.: come on!; Т.: haydi) *өнд.*

Баланы аяҡҡа баҫтырғанда йөпләү, өндәү һүҙе. □ Возглас, которым подбадривают ребёнка вставать на ножки. Ну-ну, давай-давай.

**АЙ-ТАМҒА** (Р.: название тамги; И.: tamgha; Т.: bir Başkurt soyunun tamgası) *и.*

Бер башҡорт ырыуының ай рәүешендәге тамға исеме. □ Название тамги одного из башкирских родов.

**АЙТАШ** (Р.: лунный камень.; И.: moonstone; Т.: ay taşı) *и. мин.*

Зәңгәрһыу күк төҫтәге затлы таш. □ Лунный камень. ■ *[Цейлон] кимммәтле аҫыл таштары: топаздары, сапфирҙары, ҡыҙыл яҡуттары, аметистары һәм айташтары менән дан алған.* Р. Рөстәмова.

**АЙТИРӘК (айтирәге)** (Р.: священное родовое дерево; И.: sacred tribal tree; Т.: kutsal ağaç) *и. диал.*

Изге тип иҫәпләнгән ырыу ағасы, табыныу ағасы. □ Священное родовое дерево. *Ҡыҙҙар йыл да айтирәккә төрлө төҫтә суктар элделәр.*

**АЙ ТОТОЛОУ (ай тотол-)** (Р.: лунное затмение; И.: lunar eclipse; Т.: Ay tutulması) *к.*

**1.** Айҙың ер күләгәһенә инеп ҡараңғыланыуынан торған астрономик күренеш. □ Лунное затмение.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, айҙың яман заттар тарафынан урланыуы. □ По поверьям, лунное затмение — это похищение луны злым демоном.

**АЙ ТЫУЫУ (ай тыу-)** (Р.: восход луны; И.: rise; Т.: ayın doğuşu) *к.*

Айҙың күк йөҙөнә күтәрелеүе, ҡалҡыуы. □ Восход луны. ■ *Ай тыуа әҙе менән, йылмайған йөҙө менән, алтын таяғы менән, алтын табаны менән.* Халыҡ ижадынан.

**АЙ ТӘҢРЕ** (Р.: небесное божество; И.: moon deity; Т.: Ay Tanrısı) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында күктәге тәңреләрҙең береһе. □ В башкирской мифологии одно из небесных божеств. ■ *Ай тәңренең һаклауына, яклауына ышанып, башкорттар балаларына Айбулат, Айтуған, Айһылыу һ.б. «ай» элементлы исемдәр ҡушкандар.* Ф. Хисамитдинова.

**АЙҮРМӘСТӘР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-бурзянцев.

**АЙҺАЙ I** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙарының аймаҡтары. □ Родовые подразделения башкир-бурзянцев, кыпчаков.

**АЙҺАЙ II** *р. кар.* **ләл-ләл 1.** *Айһай тороу.*

**АЙ-ҺАЙ I** (Р.: ого; И.: oho!, wow!; Т.: oh!) *ымл.*

**1.** Аптырағанда, һоҡланғанда һәм башҡа төрлө тойғо белдергәндә әйтелә. □ Выражает чувство удивления, восхищения: ого. ■ *[Фатима:] Ай-һай, һиңә һукты ла күпте икән.* Б. Бикбай. *Ай-һай, бик ҙур бәләгә тарығанһың икән, — тип әйтте, ти, карт.* Әкиәттән. ● *Ай-һай, телең, тел осонда беҙең.* Әйтем.

**2.** Берәй эш-хәлгә шик белдергәндә, икеләнгәндә әйтелә. □ Выражает недоверие, сомнение: ой ли. ■ *[Мәғфүрә:] Ай-һай, уның юхаланыуына ышанма, улым, ул — йылан аяғын киҫкән.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Халыҡ йырҙарында тойғоно көсәйтеү һәм шиғыр үлсәмен тултырыу өсөн ҡулланыла. □ Ой да *(употребляется в народных песнях, усиливая эмоциональность и дополняя размер).* ■ *Ай-һай ғына бесән сабыуы, ауыр икән салғы яныуы.* Халыҡ йырынан. *Был түрәлек, ай-һай, бирелде микән, тимен, акылдары камилға күрә.* Халыҡ йырынан.

**АЙ-ҺАЙ II** *и. диал.*

**1.** *кар.* **иҫ.** *Ул ай-һайыма кереп тә сыкмай.*

**2.** *кар.* **мәшәҡәт**. *Утынды бер киҫтереп алһаң, ай-һайы юк.*

**АЙҺАЙЛАУ (айһайла-)** (Р.: резко вскрикивать; И.: cry out; Т.: çığlıklar koparmak) *ҡ.*

Һөрән һалып ҡысҡырыу; һөрәнләү. □ Резко, отрывисто вскрикивать. *Айһайлап сабыу.* ■ *Төн юшауын абайлап, кара төндә айһайлап, игәрҙәрен өҫкөтөп, бер арыҫланды тоткан, ти.* Әйтештән. *Атлы казактарҙың .. тағы бер төркөмө айһайлап аткылай башланы.* А. Таһиров.

**АЙҺЫН** (Р.: красавица; И.: beauty; Т.: güzel) *с.*

Ай йөҙлө, һылыу *(кыҙҙарға карата).* □ Красавица. ■ *Әммә һуңғы вакыт Ҡыҙрас түгел, карттың ҡыйғас кашлы айһын кыҙы күберәк булды Акъюл уйында.* Р. Бикбаев. ● *Айһынды айһын күрә алмай.* Әйтем.

**АЙҺЫНДЫ** (Р.: довольно взрослый; И.: fairly grown up; Т.: yetişkin) *с. диал.*

**1.** Арыу уҡ ҙур, ҙур ғына *(бала-сағаға карата).* □ Довольно взрослый *(о детях). Айһынды кыҙ.* ■ *Ҡартайың Герман һуғышына киткәндә, атайың айһынды ғына бала ине.* Д. Вәлиев.

**2.** Байтаҡ, күп кенә *(вакытка карата).* □ Достаточно долго *(о времени). Уның киткәненә айһынды ғына вакыт үтеп китте инде.*

**АЙЫҒЫУ (айыҡ-)** (Р.: трезветь; И.: sober up; Т.: ayılmak) *ҡ.*

**1.** Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтыу; айныу. □ Трезветь, протрезвляться, прийти в себя. ■ *Шул сак батша үҙе иҫереп китә. Бер вакыт айығып, уянып китһә, таяулы өйҙә ята, ти.* Әкиәттән.

**2.** Һауығыу. □ Выздороветь.

**АЙЫ-КӨНӨ** (Р.: нужное время; И.: propitious moment; Т.: tam zamanı) *и.*

Үҙ ваҡыты, тейешле мәле. □ Нужное, должное время, подходящий момент. *Айы-көнө килеп еткән.* ■ *[Мәғфүрә:] Эй аллам, иплән кенә йөрө инде. Айың-көнөң тулһа, оят тип әллә нишләп булмай ул.* Һ. Дәүләтшина. *Айы-көнө тулып, катындан кыҙ бала тыуа.* Әкиәттән. *Ике йылдан һуң хәбәре килде: кыҙ йөклө имеш. Айы-көнө тулды.* Й. Солтанов.

♦ **Айы-көнө менән** үҙ ваҡытында. □ Своевременно.

**АЙЫҠ I** [дөйөм төрки *айык, айыг* ‘асыҡ; айыҡ’] (Р.: трезвый; И.: sober; Т.: ayık) *с.*

**1.** Иҫерек түгел, эсмәгән; айныҡ. □ Трезвый; не пьяный. *Айык кеше. Айык сак. Айык булыу.* ■ *Борон башкорттарҙа эске мәжлесе, тәмәке тартыу булманы. Ҡунаҡ-туй мәжлестәре якшы аш менән айык үткәрелде.* Ғ. Бейешев.

**2.** Әскеһеҙ, араҡыһыҙ, хәмерһеҙ. □ Без спиртного, трезвый. *Айыҡ туй.* ■ *Айыҡ туйҙар, әскеһеҙ мәжлес ҡороу 90-сы йылдарҙа уҡ башланған.* «Көнгәк», № 99, 2010.

**3.** *күсм.* Ысын хәлде дөрөҫ аңлаған, дөрөҫ аңлауға нигеҙләнгән. □ Трезвый. *Айыҡ фекер. Айыҡ ҡараш.* ■ *Өмөтһеҙлөк миңә хас түгел, киләсәккә айыҡ ҡарайым.* А. Игебаев.

**АЙЫҠ II** *и. диал. ҡар.* **асыл**. *Айығын ғына әйтеп бир.*

**АЙЫҠЛЫҠ (айыҡлығы)** (Р.: трезвость; И.: sobriety; Т.: ayıklık) *и.*

**1.** Айыҡ хәл, эсерек түгеллек. □ Трезвость. *Айыҡлыҡ өсөн көрәш. Айыҡлыҡ йәмғиәте.*

**2.** *күсм.* Уйлап, аҡыл менән эш итә белгәнлек. □ Трезвость, способность трезво соображать. *Фекер айыҡлығы.* ■ *Һөйкөмһөҙ өйҙән тиҙерәк китеү теләге менән [Гөльямал] ҡапҡаға ҡарай атланы. Ләкин ниндәйҙер көс, тулыһынса асыҡланып етмәгән башҡа нәмә айыҡлығы уны туҡтатты.* Я. Хамматов.

**АЙЫҠТЫРЫУ (айыҡтыр-)** (Р.: отрезвлять; И.: make sober; Т.: ayıltmak) *ҡ.*

Иҫереклектән ғәҙәттәге хәлгә ҡайтарыу; айныҡтырыу. □ Отрезвлять, протрезвлять, вытрезвлять.

**АЙЫЛ I** [боронғо ҡыпсаҡ телдәренән] (Р.: подпруга; И.: (saddle) girth; Т.: kolan) *и.*

**1.** Ыңғырсаҡты бауыр аҫтынан тарттырып нығыта торған яҫы бау. □ Подпруга. *Алғы айыл. Артҡы айыл. Айыл тарттырыу.* ■ *Алтмыш йылҡы араһында атлығып торған алты ат юҡ, айыл етмәҫ ала ат юҡ, ҡойошҡан етмәҫ ҡола ат юҡ.* «Аҡһаҡ ҡола».

**2.** Эйәрҙең сандырҙан алып тартыла торған ҡайышы. □ Ремень седла. ■ *Эйәрҙең айылы һәм көмөлдөрөгө лә хәҙерге биш тинлек аҡса ҙурлығындағы көмөш-алтын тәңкәләр менән биҙәлгәйне.* Н. Мәжитов. *[Айһылыу:] Текләберәк ҡараһам, баяғы егет үҙе ине, .. алтын-көмөш эйәрле, болғар тартҡы, айыллы.* «Аҡбуҙат».

**3.** *диал.* Билғау. □ Пояс, кушак.

**АЙЫЛ II** (Р.: пряжка; И.: buckle; Т.: toka) *и.*

Ҡайыш осондағы ҡаптырғыс тимер; ҡайыш тимере, таралғы. □ Пряжка, бляха. *Айыл башы. Еҙ айыл. Айылды ҡаптырыу.* ■ *[Егет] айылына якорь һүрәте төшөрөлгән киң ҡайышын ҡыҫып быуған.* Ф. Иҫәнғолов.

**АЙЫЛБАШ** *и. диал. ҡар.* **айыссыҡ.**

**АЙЫЛ ТАҒЫУ (айыл таҡ-)** (Р.: магический способ лечения искривления ног; И.: magic way to treat stoop; Т.: büyü ile tedavi etmek) *ҡ. диал.*

Ҡамыт аяҡ ауырыуын имләү ысулы. □ Магический способ лечения искривления ног с помощью подпруги. *Ҡамыт аяҡлы баланы ҡолон аяҡтарынан уратып алып, уға айыл таҡҡандар.*

**АЙЫЛСА** *и. диал. ҡар.* **айыл II.**

**АЙЫЛ-ТӨРМӘН** (Р.: принадлежности седла; И.: parts of an equestrian saddle; Т.: eyer parçaları) *и. йыйн.*

Эйәрҙең әйберҙәре, йыһаздары. □ Принадлежности седла. *Айыл-төрмән алыу.*

**АЙЫМ** (Р.: изящная; И.: refined; Т.: zarif) *с. иҫк.*

Зиннәтле, дәрәжәле, матур *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* □ Изящная, нарядная *(о женщине, девушке).* ● *Айым ҡыҙҙан ай биҙер.* Әйтем.

**АЙЫНДЫРЫУ (айындыр-)** (Р.: избавлять; И.: save; Т.: kurtarmak) *ҡ.*

*Ниндәй* ҙә булһа хәл-тойғонан ҡотолдороу; арындырыу. □ Избавлять, спасать. *Бәләнән айындырыу. Хәсрәттән айындырыу.* ■ *[Ислам:] Соня?! — Таныш тауыш иҫтәлектәрҙән айындырып ебәрҙе.* Т. Ғарипова.

**АЙЫНСАҠЛАНЫУ (айынсаҡлан-)** (Р.: смягчаться; И.: soften up; Т.: yumuşamak) *ҡ.*

Ҡыҙғаныу, йәлләү хисе уяныу, күңел йомшарыу. □ Смягчаться, стать более мягким *(о характере и т.д.). Холоҡ айынсаҡланыу.*

**АЙЫНСАҠЛАТЫУ (айынсаҡлат-)** (Р.: смягчать; И.: soften; Т.: yumuşatmak) *к.*

Ҡыҙғаныу, йәлләү хисе уятып, күңелен йомшартыу. □ Смягчать, делать более мягким *(характер и т.п.) Күңелде айынсаклатыу.* ■ *Әсе, ҡыҙғаныс тауыш менән илау, ялбарыу, һалдат итеге башын үбеп ялыныуҙар — береһе лә «мәҙәни халыҡтың» күңелен йомшарта, бәғерен айынсаклата алманы.* А. Таһиров.

**АЙЫНЫУ (айын-)** (Р.: избавиться; И.: get rid (of); Т.: kurtulmak) *к.*

**1.** *Ниндәй* ҙә булһа хәл-тойғонан ҡотолоу; арыныу. □ Избавиться. ■ *Закир һаман аптырауҙан айына алмай һүҙһеҙ текләп тора ине.* З. Биишева.

**2.** Тәүге фекер, вәғәҙә йәки һүҙҙән кире ҡайтыу; дүнеү, кире уйлау. □ Отказываться от своего решения, намерения. *Өй һатыуҙан айынды.*

**3.** *диал.* Һауыға биреү, ауырыуҙан ҡотолоу. □ Выздороветь, избавиться от болезни. *Өс көндән һуң ғына айынды.*

**АЙЫР I** (Р.: развилина; И.: bifurcation; Т.: çatal) *и.*

Ике йәки бер нисә нәмә тоташҡан урын; сат. □ Развилина. *Юл айыры.*

**АЙЫР II** (Р.: сдвоенный; И.: duplex; Т.: çifte) *с.*

Үҙ-ара береккән ике берәмектән торған. □ Сдвоенный. ■ *[Заятүләк — Һыуһылыуға:] Айыр имсәктән һөт биргән анамдан да биҙәйем, .. һинең менән булайым.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**АЙЫРА** (Р.: ясно; И.: clearly; Т.: açıkça) *р.*

Асыҡ итеп, айырып. □ Ясно, чётко, понятно. *Айыра әйтеү. Айыра белеү.*

**АЙЫРАТА** (Р.: особенно; И.: especially; Т.: özellikle) *р.*

**1.** Айырым бер дәрәжәлә; бигерәк тә, айырыуса. □ Особенно, необычно, исключительно, чрезвычайно. *Айырата ауыр хәл. Айырата матур. Айырата мөһим. Айырата күп.* ■ *Ҡуҙыйкүрпәс айырата бер таһыллык менән уның ҡылысын ҡайырып алды ла урталай һындырып ташланы.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**2.** Үҙенә башҡа. □ Особо, несколько иначе, по-иному. ■ *Буре аулауҙың айырата бер әкәмәте була.* С. Кулибай.

**АЙЫРҒЫС** (Р.: разветвитель; И.: splitter; Т.: ayırıcı) *и.*

Аралаш, ҡатнаш, эргәләш нәмәләрҙе айыра, бүлә торған һәр төрлө ҡулайлама. □ Разветвитель. *Айырғыс ҡуйыу. Һыу айырғыс. Айырғыс менән бүлеү.*

**АЙЫРЛЫ** (Р.: развилистый; И.: forked; Т.: çatallı) *с.*

Ике йәки бер нисә нәмә тоташҡан, икегә йәки бер нисәгә айырылып киткән. □ Развилистый. ■ *Дүрт батыр .. бер айҙай бергә йөрөп, дүрт айырлы юл башына етте инде.* «Күсәк бей».

**АЙЫРМА I** (Р.: разница; И.: difference; Т.: fark) *и.*

Бер нәмәне икенселәренән айырып күрһәткән сифат; үҙенсәлек. □ Разница, различие, отличие. *Ҡала менән ауыл араһындағы айырма.* ■ *[Айбулат:] Шулай инде ул, һыу менән һыуҙың да, кеше менән кешенең дә айырмаһы күп була.* Һ. Дәүләтшина.

**АЙЫРМА II** (Р.: исключение; И.: exception; Т.: istisna) *и.*

Дөйөм тәртип ҡағиҙәләренән тайпылыш. □ Исключение. *Айырма яһау.*

**АЙЫРМА III** (Р.: отрог; И.: spur; Т.: kol) *и.*

**1.** Икегә айырылған урын; айырса. □ Отрог. ■ *Урал таукайҙары борма-борма, бормалары һайын айырма.* Халыҡ йырынан.

**2.** Юл саты, сатлыҡ. □ Развилина, развилка, перекрёсток. *Юл айырмаһына туҡталыш, кафе эшләп ҡуйҙылар.*

**АЙЫРМА IV** (Р.: разность; И.: difference; Т.: fark) *и. мат.*

Алыу ғәмәле һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан һан. □ Разность. *Ике һандың айырмаһы. Квадраттар айырмаһы. Кубтар айырмаһы. Айырманы ҡушыу. Айырманың кубы.*

**АЙЫРМАЛЫ** (Р.: имеющий разницу; И.: having difference; Т.: farklı) *с.*

Үҙенә башҡа сифатлы; үҙенсәлекле. □ Имеющий разницу, различие, отличие. *Айырмалы үҙенсәлек. Айырмалы хәл.* ■ *Сорғояҙ ауылының тик үҙенә генә хас тәбиғәте бар: бында башка ерҙәгенән айырмалы рәүештә һалкын ҡыҫыҡ еле иҫә.* А. Игебаев.

**АЙЫРМАЛЫҠ (айырмалығы)** (Р.: отличие; И.: distinction; Т.: farklılık) *и.*

Бер нәмәне икенселәренән айырып күрһәткән үҙенсәлек. □ Отличие. *Милли айырмалыҡ. Фекер айырмалығы. Мәҙәни айырмалыҡ.*

**АЙЫРМАҺЫҘ I** (Р.: не имеющий различия; И.: with no difference; Т.: farksız) *с.*

Үҙенә башҡа сифаты булмаған; үҙенсәлекһеҙ. □ Не имеющий различия, отличия, разницы. *Айырмаһыҙ эш.*

**АЙЫРМАҺЫҘ II** (Р.: без исключения; И.: without exception; Т.: istisnasız) *р.*

Дөйөм тәртип, ҡағиҙәнән тайпылышһыҙ. □ Без исключения, одинаково. *Айырмаһыҙ ҡарау.*

**АЙЫРСА** (Р.: развилина; И.: crossroads; Т.: çatal) *и.*

**1.** Икегә йәки бер нисәгә айырылып киткән ер, юл саты. □ Развилина, развилка, перекрёсток. ■ *Азамат теге бабай әйткән йылға буйындағы юл айырсаһына ҡараңғы төшкәс кенә барып етте.* Ҡ. Даян.

**2.** *миф.* Тыйыуҙар буйынса, ултырырға, ял итергә ярамаған ҡурҡыныс урын. □ Развилина, развилка, опасное место, куда выбрасывают заговорённые вещи. *Айырсаға осоҡ ташлайҙар.*

**3.** *диал. кар.* **йырҙа**.

**4.** Айырым торған ҡуш нәмәнең береһе; сата. □ Развилина. *Һәнәк айырсаһы. Таяк айырсаһы.* ■ *Ике айырсалы был ҡарағастың бер айырсаһында борон-борондан таҙғара оялай торғайны. Ул йыл да бер бала сығара ине.* С. Кулибай.

**5.** *диал. кар.* **айыссыҡ**.

**6.** Электр приборҙарын электр селтәренә тоташтырыу өсөн ҡулланылған айырылы деталь. □ Штепсельная вилка.

**АЙЫРСА КҮПЕРЕ** (Р.: путепровод; И.: viaduct; Т.: kemerli köprü) *и.*

Юлдар киҫешкән ерҙә бер юл өҫтөнән һалынған күпер. □ Путепровод.

**АЙЫРСАЛАНЫУ (айырсалан-)** (Р.: стать развилистым; И.: become forked; Т.: çatallanmak) *к.*

Икегә йәки бер нисәгә айырылыу, айырсалы, саталы булыу. □ Стать развилистым. *Юл айырсаланды.*

**АЙЫРСАЛЫ** (Р.: развилистый; И.: bifurcated; Т.: çatallı) *с.*

**1.** Икегә йәки бер нисәгә айырылып киткән. □ Развилистый. ■ *Әллә уйҙарыбыҙ айырыламы, айырсалы юлдар шикелле.* А. Игебаев.

**2.** Айырсаланып торған; саталы, сатлы. □ Развилистый. ■ *Һылтан үҙәгендәге ике айырсалы ҡарағас та Ирәндек итәгендәге ҡарағастар менән йәштәш булған.* С. Кулибай.

**АЙЫРТА** (Р.: чётко; И.: clearly; Т.: açıkça) *р. диал.*

Айыра, асыҡ. □ Чётко, ясно. *Айырта һөйләү. Айыртаһын әйт.*

**АЙЫРТЫЛЫУ (айыртыл-)** *к. төш. кар.* **айыртыу**. *страд. от* **айыртыу**.

**АЙЫРТЫУ (айырт-)** *к.*

**1.** *йөкм. кар.* **айырыу.** *понуд. от* **айырыу**.

**2.** Сепаратор аша үткәреү *(һөттө).* □ Пропустить через сепаратор. ■ *Һыйырҙы һауып көтөүгә ҡыуғас, Иркә .. һөттө айыртырға ла үҙе барып ҡайтты.* Ә. Вәли.

**3.** Кәрәҙле балды һурҙырыу, ҡыуыу, ағыҙыу. □ Откачивать мёд. *Бал айыртыу.*

**АЙЫРЫ I** (Р.: развилистый; И.: forked; Т.: çatal) *с.*

Икегә айырылып йәки сатаcланып торған. □ Развилистый, раздвоенный. *Айыры ҡойроҡ. Айыры һаҡал. Айыры таяҡ. Айыры тел. Айыры имсәк.*

**АЙЫРЫ II** (Р.: развилина; И.: forked; T.: çatal) *и.*

**1.** Сат. □ Развилина. *Юл айырыһы.*

**2.** *диал.* Урай. □ Вихор *(на макушке).* ● *Түбә өҫтөнән ике айыры булһа, ике ҡатын ала, тиҙәр.* Һынамыш.

**АЙЫРЫ ТОЯҠЛЫЛАР** (Р.: парнокопытные; И.: cloven-hoofed; T.: çatal tırnaklı) *и. зоол.*

Ҡуш тояҡлылар *(кәзә, һарыҡ, һыйыр һ.б.).* □ Парнокопытные (лат. *Artiodactyla*).

**АЙЫРЫЛҒЫҺЫҘ** (Р.: неразрывный; И.: indissoluble; T.: ayrılmaz) *с.*

Айырылмаҫлыҡ булып береккән, үҙ-ара ныҡ бәйләнгән. □ Неразрывный, неразлучный. *Айырылғыһыҙ дуҫтар. Айырылғыһыҙ булыу.* ■ *Әммә уның [Фәкиһә Туғыҙбаеваның] үҙе өсөн дә, шиғриәте өсөн дә тормош — ҡайғы-шатлыҡтар, һөйөү-нәфрәттәр, яҡшы-яманлыҡтар айырылғыһыҙ булып аралашҡан фани донъя ул.* Ғ. Хөсәйенов.

**АЙЫРЫЛЫ** (Р.: развилистый; И.: forked; T.: çatallı) *с.*

Икегә йәки бер нисәгә айырылып торған. □ Развилистый. *Айырылы юл.*

**АЙЫРЫЛЫУ (айырыл-)** (Р.: разделиться; И.: get divided; T.: ayrılmak) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **айырыу** *страд. от* **айырыу**.

**2.** Бер урындан бер нисә тармаҡҡа бүленеү; тармаҡланыу. □ Разделиться, разветвляться. // Разделение, разветвление. ■ *Бара торғас, быларҙың [хан менән Ҡуҙыйкүрпәстең] юлы ике яҡҡа айырылды, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу». *Ул [Айбулат] биш-алты быуын айырылған булһа ла, бер ырыуҙан булғанлыҡтан, Ныязғолға ағай-эне һанала ине.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Башҡа-башҡа төркөмгә бүленеү. □ Разделиться на разные группы. // Разделение. *Үҙ-ара килешмәй, икегә айырылыу.*

**4.** Төркөмдән йәки бергә булған иш-иптәштән бүленеү. □ Обособляться, разлучаться. // Обособление, разлука. *Ағай-эненән айырылыу. Айырылып ҡалыу.* ■ *Айырылғанда тиҙ үк осрашырға, ташламаҫҡа һүҙ төйнәнеләр, аталарын туҡмап үлтергән йыртҡыс әҙәмдәрҙән үс алырға ант иттеләр.* Ә. Хәкимов. *Уның күңеленең тынысүгеллеген, тыуған ауылынан айырылғыһы килмәгәнлеген бөтәһе лә аңлай ине.* Д. Бүләков. *Айырылыуға күпме ваҡыт үткән, .. техникумдың тәүге йылдарында улар икәү бергә уҡыны.* Ғ. Сәләм. ● *Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар.* Мәҡәл.

**5.** Араны өҙөп, ситтә йөрөү. □ Разлучаться, расставаться. // Разлука, расставание. ■ *Еренән айырылған, иленән ситләтелгән кеше тупраҡтан һурылған сәскә, ярынан сыҡҡан йылға һыуы ул. Ә тупраҡһыҙ сәскә ҡыуара, ярһыҙ йылғаның һыуы ҡорой.* Ә. Вахитов. *Күнегелгән мөхитенән, ғаиләһенән айырылғас, өмөтөн юғалтҡан байғош ине Нурислам.* Ә. Хәкимов.

**6.** Бер эш йәки нәмәнән ситләшеү; араланыу. □ Оторваться, отходить. // Отрыв, отход. *Китаптан айырыла алмау. Хужалыҡ эшенән айырылыу.* ■ *[Мамлиев] күҙлеген һалып ырғытты, ҡағыҙҙан айырылды, халыҡ күҙенә ҡарап һөйләргә тотондо.* Р. Низамов.

**7.** Хужалыҡтан йәки ғаиләнән бүленеп сығыу; башҡа сығыу. □ Отделиться. // Отделение. *Ҙур етештереү предприятиеларынан айырылып сыҡҡан бәләкәй бүлендек предприятиелар күбәйҙе.*

**8.** Ғаилә мөнәсәбәтен өҙөп, башҡа сығыу *(иргә, ҡатынға ҡарата).* □ Разводиться *с кем-л.,* уходить *от кого-л. Ирҙән айырылыу.* ■ *[Фәриҙә] Орондолағы иренән айырылып ҡайтты. Хәҙер әсәһе менән төп йортта донъя көтә.* Р. Камал. *Ата-әсә айырылышҡас, Рәшит үҙен бөтөнләй етем, эйәһеҙ тороп ҡалған көсөк һымаҡ итеп һиҙҙе.* З. Ғәлимов.

**9.** Мал-мөлкәтте йәки башҡа нәмәне ҡулдан ысҡындырыу; мәхрүм ҡалыу. □ Лишаться, остаться *без чего-л.* // Лишение. *Байлыҡтан айырылыу. Мал-мөлкәттән айырылыу.*

**10.** Ҡайырылып, һынып йәки йыртылып сығыу. □ Оторваться, ломаться. ■ *Ҡоштоң*

*ҡанаты айырылып, Алпамыша янына килеп төшкән, ти.* «Алпамыша».

**11.** *Ниндәйҙер* тәьҫир һөҙөмтәһендә тарҡалыу. □ Распадаться. // Распад. ■ *Стабилизация блогында ҡоро газ, водород, метан һәм этан айырыла.* Х. Вафин.

**12.** Үҙенсәлекле булып үҙенә башҡа урын тотоу. □ Отличаться, выделяться. // Отличие, выделение. *Башҡаларҙан айырылып тороу.* ■ *Тыңлаушыларҙың арһында ул [Ғәлиә] нескәлеге, мөйылдай күҙҙәренең серле ҡарашы менән айырылып тора.* Т. Ғарипова.

**13**. Тура килмәү. □ Расходиться, отличаться. *Ҡараштар айырылды. Фекерҙәр айырылды.*

**АЙЫРЫЛЫШЫУ (айырылыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **айырылыу 4, 7, 12.** *взаимн. от* **айырылыу 4, 7, 12.**

**АЙЫРЫМ** (Р.: отдельный; И.: separate; Т.: ayrı) *с.*

**1.** Бүтән нәмәләр менән бергә ҡушылмаған; үҙенә бер башҡа. □ Отдельный, раздельный, изолированный. *Айырым бүлмә. Айырым өй. Айырым фатир.* ■ *Ошо һөйләшеүҙән һуң батша Өйрәнсекте үҙ янында ҡалдырған. Уға айырым һарай һалдырып биргән.* З. Биишева.

**2.** Үҙенә башҡа бер сифатҡа эйә булған; үҙенә бер төрлө. □ Особый, особенный. ■ *«Теләһә ҡайһы ҡыҙыңа бөгөндән кейәү булырлыҡ», — тип билдәләне үҙе һәм айырым бер ләззәт менән ҡиммәтле хушбуйын һөрттө.* Д. Бүләков. *Тыштан тыныс күренһә лә, ҡара бөҙрә сәстәре аҫтында йылтыраған йәшкелт күҙҙәре айырым бер дәрт менән янғандай.* Т. Ғарипова. *Уға [Новиковка] айырым бер яҡынлыҡ, хөрмәт менән ҡарайҙар.* Д. Юлтый.

**3.** Үҙенә башҡа; ҡайһы бер. □ Единичный, отдельный. *Айырым етешһеҙлектәр. Айырым ҡаршылыҡтар.* ■ *Ныязғол, ғәҙәттә, айырым серьёз мәсьәләләрҙе тыныс хәл итергә булһа, залдағы йомшаҡ диванға, ерҙән түбәгә тиклем теҙелгән оло көҙгө ҡаршыһында йәйелеп ултырып уйлай торғайны.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Үҙенә генә тәғәйен, шәхси. □ Индивидуальный. *Айырым хаҡ. Айырым үҙләштереү.*

**АЙЫРЫМ АЛҒАНДА** (Р.: в частности; И.: in particular; Т.: aymca) *инш.*

Берәй эш-хәлде йәки нәмәне үҙенә башҡа алып, үҙен генә ҡарағанда. □ В частности, в отдельности.

**АЙЫРЫМ-АСЫҠ I** (Р.: ясный; И.: presize; Т.: ayrıca) *с.*

Еңел айырырлыҡ; асыҡ, аныҡ. □ Ясный, чёткий, отчётливый. *Айырым-асыҡ һүҙ. Айырым-асыҡ төҫ.*

**АЙЫРЫМ-АСЫҠ II** (Р.: ясно; И.: clearly; Т.: açık seçik) *р.*

Асыҡ, аныҡ. □ Ясно, чётко, отчётливо. *Айырым-асыҡ ишетелеү. Айырым-асыҡ күренеү.* ■ *Саң араһынан һыбайлылар күренеп ҡалалар, тик айырым-асыҡ берәүһенең дә төҫө, йөҙө күренмәй ине.* Һ. Дәүләтшина. *Болоттар ҡайҙалыр таралған. Күк йөҙө таҙарған. Йондоҙҙар айырым-асыҡ күренә.* А. Таһиров. *Машиналар уҙып бөтөүгә, атыш тауышы айырым-асыҡ ишетелә башланы.* Ә. Хәкимов.

**АЙЫРЫМ ЕНЕСЛЕ СӘСКӘ** (Р.: цветок раздельнополый; И.: dioecious flower; Т.: ikievcikli çiçek) *и. бот.*

Төрлө енесле сәскәләр. □ Цветок раздельнополый.

**АЙЫРЫМЛАНҒАН ЭЙӘРСӘН КИҪӘКТӘР** (Р.: обособленные члены предложения; И.: detached; Т.: cümlenin ayrı parçaları) *и. лингв.*

Үҙенә башҡа бер маҡсат менән мәғәнә яғынан айырып әйтелә торған һөйләм киҫәктәре. □ Обособленные члены предложения.

**АЙЫРЫМЛАНҒАН ЭЙӘРСӘН ҺӨЙЛӘМДӘР** (Р.: обособленные придаточные предложения; И.: detached subodinate clauses; Т.: ayrı cümleler) *и. лингв.*

Һөйләм составында мәғәнә яғынан үҙенә башҡа бер маҡсатта айырым интонация менән әйтелә торған эйәрсән һөйләмдәр. □ Обособленные придаточные предложения.

**АЙЫРЫМЛАНЫУ (айырымлан-)** (Р.: отделяться; И.: separate; Т.: ayrılmak) *ҡ.*

Айырым бүленеп сығыу; башҡаланыу. □ Отделяться, обособляться. // Отделение, обособление. *Айырымланып сығыу. Айырымланып йәшәү. Улдары ата-әсәһенән айырымланып сыҡты.*

**АЙЫРЫМЛАУ (айырымла-)** (Р.: отделять; И.: separate; Т.: ayırmak) *ҡ.*

Төрлө-төрлөгә айырыу; айырма ҡуйыу. □ Отделять. // Отделение. ■ *Малайҙарҙың һәр береһен башҡа айырымлап сығарғандар, ти.* Әкиәттән.

**АЙЫРЫМЛЫҠ (айырымлығы)** (Р.: различие; И.: difference; Т.: fark) *и.*

*Нискәҙер* араһындағы ҙур айырманы күрһәткән сифат; айырмалыҡ. □ Различие, разница. *Ҡараштар айырымлығы. Фекер айырымлыҡтары.*

**АЙЫРЫМ-ӨҘӨК** (Р.: отрывочный; И.: scrappy; Т.: bölük pörçük) *с.*

Тейәл булмаған; ярты-йорто. □ Отрывочный, неполный. *Айырым-өҙөк хәбәр. Айырым-өҙөк мәғлүмәт.*

**АЙЫРЫМ ТАЖ ЯПРАҠЛЫЛАР** (Р.: растения свободнолепестные; И.: plants with free petals; Т.: serbest taç yapraklılar) *и. бот.*

Ирекле, төрлө таж япраҡлы үҫемлектәр. □ Растения свободнолепестные, раздельнолепестные (лат. *Choripetalae*).

**АЙЫРЫМ ЯПРАҠЛЫ ТАЖ** (Р.: венчик свободнолепестный; И.: corolla with free petals; Т.: serbest yapraklı taç) *и. бот.*

Япраҡтары төрлө ирекле булған таж. □ Венчик свободнолепестный.

**АЙЫРЫНҠЫ** *р. диал. ҡар.* **айырым 2.**

**АЙЫРЫП АШАУ (айырып аша-)** (Р.: отдельно питаться; И.: do (smb) out of *his/her* share; Т.: ayrı yemek) *ҡ.*

Бүтәндәрҙән айырым әҙерләп, яҡшыраҡ итеп ашау. □ Питаться отдельно от других; обделять *кого.*

**АЙЫРЫУ (айыр-)** [боронғо төрки *айы* ‘айырым’] (Р.: разделять на части; И.: divide; Т.: ayırmak) *ҡ.*

**1.** Башҡа-башҡа өлөш йәки төркөм итеү; бүлеү. □ Разделять на части. // Разделение. ■ *[Алпамыша] халыҡты ике ҡулы менән икегә айыра ла, ағасҡа күҙәп атып ебәрә.* «Алпамыша». *Һыу ҡыҙы ҡырҡ ҡоласлы сәсен икегә айырып артҡа ташлай.* «Заятүләк менән Һыуһылыу».

**2.** Сифатына, үҙенсәлегенә ҡарап бүлеү. □ Отделять, разделять, сортировать. // Отделение, разделение, сортировка. *Төрҙәргә айырыу. Сорттарға айырыу.*

**3.** Һөттө сепаратор аша үткәреү. □ Сепарировать, пропускать через сепаратор. // Сепарирование. *Унда Мөғлифә өс бисә һауып килтереп ҡуйған һөттө бер үҙе гөжләтеп, өлкән сепаратта айырып тора.*

**4.** Бүлеп алыу, башҡаландырыу. □ Отделять, выделить. // Отделение, выделение. *Улды ата өйөнән айырып сығарыу.*

**5.** Араны өҙөп, ситләшергә мәжбүр итеү. □ Оторвать. // Отрыв. *Тыуған илдән айырыу. Туғандарҙан айырыу.* ■ *Ул [рус ҡыҙы] сығыу менән Айбулатты таларға йәбешкән эткә йүгереп етеп .. көйәнтәһе менән һелтәп ебәрҙе лә Айбулатты унан айырып алды.* Һ. Дәүләтшина.

**6.** Ҡатыны менән никахты боҙоу. □ Разводиться, расторгать брак. // Развод, расторжение брака. *Ҡатынды айырыу.*

**7.** Күстән бүлеп, башҡа сығарыу *(бал ҡортона ҡарата).* □ Роить. // Роение. ■ *Ҡояш түбәнләй башлағас, Байгилде, ҡорт айырмаҫ инде хәҙер, кис булды, тип ҡайтып китте.* Ж. Кейекбаев. *Ҡырмыҫҡа иләүендә йәй буйы бер туҡтауһыҙ дауам иткән яуаплы эш — тоҡом арттырыу. Әгәр ҡанатлы ҡырмыҫҡалар күрһәгеҙ, был иләүҙә ҡорт айырыу барғанлығына ишара.* «Йәшлек», 10 июнь 2008.

**8.** *Нимәнәндер* мәхрүм итеү. □ Лишать *чего*. // Лишение. *Байлыктан айырыу. Мал-мөлкәттән айырыу.* ■ *[Рәхимә — Ныязғолға:] Ҡайҙа барһаң, һүҙең үтә, Аллаһы Тәғәлә шул байлығыбыҙҙан айырмаһын.* Һ. Дәүләтшина.

**9.** Имеүҙән туҡтатыу; ташлатыу. □ Отнимать *(от груди)*. // Отнятие. *Баланы имсәктән айырыу. Быҙауҙы инәһенән айырыу.*

**10.** Эш-шөғөлдән бүлдереү. □ Прервать, оторвать. // Прерывание, отрыв. *Эштән айырыу. Уҡыуҙан айырыу.* ■ *Баҫыу эштәренең барышы өсөн нык борсолған кеше агрономды бер кеше бишкә ярылырҙай мәлдә эштән айырмай.* Т. Ғарипова

**11.** Ҡайырып, һындырып, йыртып, умырып сығарыу. □ Разорвать, отломить. // Разрыв. *Айыра йыртыу. Айырып, һындырып төшөрөү.* ■ *Һаҡмар ғына буйы һары тал, башҡынайын айырып һыуға һал.* Халыҡ йырынан.

**12.** Мөнәсәбәт айырымлығы күрһәтеү; тигеҙ ҡарамау. □ Выделить, выделять *кого*. // Выделение. ■ *Эйе, эйе! Әҙәбиәт-сәнғәтте сәйәсәттән айырып ҡарағанмын.* Ә. Хәкимов.

**13.** Ике аралағы айырманы билдәләү. □ Отличать, различать. // Различение. ■ *[Ишбулды:] Эҙ айырыу кәрәк һунарсыға, ҡош айырыу кәрәк аусыға.* Х. Ғәбитов. *[Банат Гөлсирә тураһында:] Күп илауҙан уның күҙҙәре зәғифләнде. Кеше айырмай ул хәҙер.* М. Кәрим.

**АЙЫРЫУСА** (Р.: особенно; И.: particularly; Т.: ayrıca) *р.*

Айырым бер дәрәжәлә; бигерәк тә. □ Особенно, особо; в особенности. *Бында айырыуса күңелле. Айырыуса тырышып эшләй. Айырыуса яҡшы күренә.* ■ *Өйҙө ул айырыуса дәртләнеп нағышланы, әйтерһең дә, нағыш һырымай, ә уның һәр кирбесен үҙ ҡулдары менән һала...* Т. Ғарипова. *Был быуын йәшенә ҡарағанда иртәрәк өлгөрҙө. Быны Ҡәҙим Аралбай поэзияһы айырыуса асыҡ сағылдыра.* Ғ. Хөсәйенов. *Тап анау Үзбәкстанда экспедицияла йөрөгән саҡтарында хатты айырыуса йыш яҙа торғайны Нурислам.* Ә. Хәкимов.

**АЙЫРЫШ** *и. диал. ҡар.* **айырыу.**

**АЙЫССЫҠ (айыссығы)** (Р.: мундштук; И.: curb; Т.: ağızlık) *и.*

Йүгәндең ауыҙлыҡ дүңгәләгендәге тейәге. □ Мундштук *(в удилах)*.

**АЙЫТ** *и. диал. ҡар.* **ғәйет.**

**АЙЫТҠОЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы, һыҙғы ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Название родовых подразделений башкир-юрматинцев и сызгинцев.

**АЙЫУ I** [боронғо төрки *адығ*] (Р.: медведь; И.: bear; Т.: ayı) *и.*

**1.** *зоол.* Ауыр кәүҙәле, йыуан ҡыҫҡа аяҡлы имеҙеүсе йыртҡыс йәнлек. □ Медведь. / Медвежий. *Аҡ айыу. Көрән айыу. Ата айыу. Инә айыу. Бала айыу. Тайлаҡ айыу. Оло айыу. Айыу алыу. Айыу һуғыу.* ■ *Алпан-толпан атлаған айыуы күп Уралтау.* Ҡобайырҙан. *Урман, тау-таш араһында үҫеп, заманында бүре түгел, айыу менән нисәмә рәт осрашҡан кеше бит инде [Рамазан].* Ә. Хәкимов. *Ауылда әүәл-әүәлдән килгән шундай ғәҙәт бар: айыу кемдең малын йыға, бүреләр ниндәй көтөүҙе баҫа — бындай саҡта төпсөнөп һорашып, барайыммы-юҡмы тип икеләнеп тороу юҡ.* Н. Мусин. ● *Айыуҙың үҙ майы үҙенә.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Килбәтһеҙ ҙур кәүҙәле, һалмаҡ хәрәкәтле, көслө кешегә ҡарата әйтелә. □ О неуклюжем, медлительном, сильном человеке.

**3.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, изге зат, урман эйәһе, әҙәм нәҫеленән тип һаналған януар, тотем. □ Медведь, мифологизированное почитаемое животное, дух леса. По поверьям, имеет человеческое происхождение. ■ *Айыуҙы асыуландырмаҫ өсөн ихтирам менән әйтелгән исемдәр: айыу апа, олатай, урман хужаһы.* Р. Һаҙыева. *Айыу кеше затынан, шуға уның итен ашарға ярамай.*

*Айыуҙың тырнактарын, тешен, майын бала, өй һаклау магияһында ҡулланғандар.* Ф. Хисамитдинова.

♦ **Айыу башы ашарҙай булыу** ныҡ асығыу. □ Изголодаться, сильно проголодаться. **Айыуҙан ҡасҡан бүрегә** бер хәлдән ҡотолоп, икенсе бер ауырыраҡ хәлгә ҡалған кешегә ҡарата әйтелә. □ О человеке, который избавился от *какой-то* беды, но попал в более трудное положение. **Айыу майы һөртөү** *нимәнелер* шым ғына һорауһыҙ алып киткәндә әйтелә; урлау, сәлдереү. □ Воровать, красть, похищать. ■ *[Йәмил:] Бер кем дә һиҙмәне, бер кем дә күрмәне, был ҡайышка айыу майы һөртһәм, йомшаҡ ҡына һеңеп ҡуймаҫмы икән?* И. Ниғмәтуллин.

**АЙЫУ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы, бөрйән, үҫәргән, ҡоҙғон-ҡатай, һеңрән ырыуҙары аймаҡтары. □ Родовые подразделения башкир-юрматинцев, бурзян, усерган, кузгун-катайцев, сенгрян.

**АЙЫУ III** (Р.: медвежий; И.: bear; Т.: ayı) *с. мәғ.*

**1.** Айыуға (I, 1) бәйле, хас; айыуға ҡараған. □ Связанный с медведем, принадлежащий медведю. *Айыу тырнағы. Айыу өңө. Айыу тиреһе.* ■ *Уклытауҙы айыу ояһы тиҙәр.* Н. Мусин. *Судья Әхмәдигә лә, Ваһапка ла һорауҙар бирҙе, һорауҙар һуңында Әхмәдиҙең айыу тиреһен, үҙенең әйтеүе буйынса, ун һумға һатканы беленде.* Ж. Кейекбаев. *Әҙемтәләренән нык ҡына шөрләһә лә, «һунарсыларҙан һатып алып ҡалған айыу ите» ваҡиғаһы шыма үтеп китте.* Т. Ғарипова.

**2.** Айыуҙың тиреһенән тегелгән. □ Медвежий. *Айыу тун.*

**АЙЫУАРБА** (Р.: двуколка; И.: two wheeled cart; Т.: araba) *и. диал.*

Ике тәгәрмәсле арба. □ Двуколка.

**АЙЫУ БАЙРАМЫ** (Р.: медвежий праздник; И.: bear rite; Т.: ayı bayramı) *и. миф.*

Айыу культы менән бәйле йола байрамы. □ Медвежий праздник *(ритуальный праздник, обычно проводился до или после охоты на медведя).* ■ *Борондан килгән ғәҙәт буйынса, атаҡлы һунарсылар айыу байрамында айыу тиреһе бөркәнеп, айыу булып бейегәндәр.* Р. Һаҙыева.

**АЙЫУ БАЛАНЫ** (Р.: жимолость обыкновенная; И.: honeysuckle; Т.: hanımeli) *и. бот.*

**1.** Ҡыҙыл сәскәле, ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ. □ Жимолость обыкновенная (лат. *Lonicera*).

**2.** *миф.* Мифлаштырылған ағас. □ Мифологизированное дерево. *Айыу баланына ендәр оялай, тиҙәр.*

**АЙЫУ БАЛАҺЫ** (Р.: медвежонок; И.: bear cub; Т.: küçük ayı) *и.*

**1.** Айыуҙың балаһы. □ Медвежонок.

**2.** *миф.* Йәш баланы мунсала сапҡанда әйтелә торған ҡурсалау һүҙе. □ Медвежонок. ■ *Һап, һап, һап: айыу балаһы, бүре балаһы. Айыуҙай ағай бул, бүреләй бабай бул!* Экспедиция материалдарынан.

**АЙЫУБАШ** *и. диал. ҡар.* **борғоса**.

**АЙЫУ БЕЙЕҮЕ** (Р.: ритуальный танец в медвежьей шкуре; И.: ritual dance in bear skin; Т.: ayı derisinden giyselerde ritüel dans) *и. миф.*

Айыу байрамында айыу тиреһе кейеп бейегән бейеү. □ Ритуальный танец в медвежьей шкуре.

**АЙЫУ БУРАНЫ** (Р.: медвежий буран; И.: blizzard in January; Т.: ayı fırtınası) *и.*

Ғинуар айында, йәнәһе, айыу әйләнгән саҡта булған көслө буран. □ Сильный буран в январе. *досл.* Медвежий буран *(по представлениям башкир, этот буран бывает перед пробуждением медведя от зимней спячки).*

**АЙЫУҒА ҠУЙЫУ (айыуға ҡуй-)** (Р.: суслон, накрытый сверху тремя снопами; И.: sheaf; Т.: bağlam) *к. диал.*

Өҫтән өс көлтә менән ябылған һоҫлан. □ Суслон, накрытый сверху тремя снопами.

**АЙЫУҒОЛАҠ (айыуғолағы)** (Р.: ребёнок, рождённый от медведя; И.: person born from a bear; Т.: ayı ile insandan doğmuş olan) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, айыу менән кешенән тыуған бала. □ По поверьям, ребёнок, рождённый от медведя.

**АЙЫУҒОРТ** (Р.: медведка; И.: mole cricket; Т.: danaburnu) *и. зоол.*

Картуф баҡсаларында йыш осраған, тупраҡ эсендә йәшәй торған киң таралған ҡоротҡос бөжәк. □ Медведка (лат. *Gryllotalpa*).

**АЙЫУ ЕЛӘГЕ** *и. диал.* **ҡурай еләге**.

**АЙЫУ ЕМЕШЕ** (Р.: купена лекарственная; И.: King Solomon's-seal; Т.: Mührüsüleyman) *и. бот.*

Урманда үҫкән итләс йыуан тамырлы, ҡыҙыл йәки ҡара емешле күп йыллыҡ ағыулы дарыу үләне. □ Купена лекарственная (лат. *Polygonatum odoratum*). *Айыу емешен ашамайҙар, теш һыҙлағанда ғына ҡулланалар.*

**АЙЫУ ЙЫУАҺЫ** (Р.: лук победный; И.: Alpine Leek; Т.: Alpine pırasa) *и. бот. диал.*

Киң япраҡлы, аҡһыл йәшел сәскәле, тәме менән һарымһаҡты хәтерләткән күп йыллыҡ үлән. □ Лук победный (лат. *Allium victorialis*).

**АЙЫУ КӨПШӘҺЕ** (Р.: дягиль лекарственный; И.: Garden Angelica; Т.: melekotu) *и. бот. диал.*

Дымлы йылға буйҙарында һәм һаҙлыҡлы урындарҙа үҫкән, һарғылт йәшел сәскәле ике йәки күп йыллыҡ үҫемлек. □ Дягиль лекарственный, дудник обыкновенный (лат. *Archangelica officinalis*).

**АЙЫУ-КҮБӘЛӘКТӘР** (Р.: медведицы; И.: arctiidae; Т.: yünlü ayılar kelebeği) *и. зоол.*

Бөтә ер йөҙөндә осрай торған, ҡарышлауыҡтары бик йөнлө булған күбәләктәр. □ Медведицы (лат. *Artiidae*).

**АЙЫУ КҮҘ** (Р.: заговор от сглаза; И.: spell against an evil eye; Т.: kem gözlere karşı büyü) *и. диал.*

Күҙ тейгән баланы имләгәндә әйткән арбау һүҙе. □ Заговор от сглаза. ■ *Айыу күҙе, бүре күҙе булһын, күк күҙле булһын, йәшел күҙле булһын, күк булып күкрәһен, йәшен булып йәшнәһен.* Ф. Хисамитдинова.

**АЙЫУ ҠАМЫРЫ** *и. диал. ҡар.* **энәлек.**

**АЙЫУ ҠОЛАҒЫ** (Р.: коровяк обыкновенный; И.: mullein; Т.: sığırkuyruğu) *и. бот. диал.*

Ҡомло ерҙә, тау биттәрендә, торлаҡ, юл эргәләрендә үҫкән һарғылт сәскәле ике йыллыҡ үлән үҫемлек. □ Коровяк обыкновенный, медвежье ухо (лат. *Verbascum thapsus*).

**АЙЫУ ҠУҘҒАЛАҒЫ** *и. бот. диал. ҡар.* **ат ҡуҙғалағы.**

**АЙЫУ ҠУРАЙЫ** (Р.: дягиль; И.: wild angelica; Т.: melekotu) *и. бот.*

Шыма ҡабыҡлы, ашауға яраҡлы, сәскәһе баллы көпшә *(күберәк урман туғайҙарында, дымлы ерҙәрҙә үҫә);* шыма көпшә, келән көпшә. □ Дягиль, дудник лесной (лат. *Angelica sylvestris*).

**АЙЫУ ҠЫРМЫҪҠАҺЫ** (Р.: чёрный муравей-древоточец; И.: camponotus vagus; Т.: karınca) *и. зоол.*

Бик эре ҡара ҡырмыҫҡа. □ Чёрный муравей-древоточец (лат. *Camponotus vagus*).

**АЙЫУ СИҢЕРТКӘҺЕ** (Р.: дыбка; И.: predatory bush cricket; Т.: saga pedo) *и. зоол.*

Сиңерткәләрҙең бер төрө, ҙур йәшел сиңерткә. □ Дыбка (лат. *Saga pedo*).

**АЙЫУСЫ** (Р.: медвежатник; И.: bear hunter; Т.: ayı avcısı) *и.*

**1.** Айыуға һунар иткән, айыу ала торған кеше. □ Медвежатник. ■ *Айыуҙы нисек үлтергәнемде һорашмаған кеше ҡалмағандыр. Даным бөтә тирә-як ауылға таралды. Мине «Аҡназар батыр» йәки «Айыусы Аҡназар» тип йөрөтә башланылар.* Ҡ. Даян.

**2.** *этн.* Юрматы, ҡатай ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Название родовых подразделений башкир-юрматинцев, катайцев.

**АЙЫУТАБАН** (Р.: аконит высокий; И.: aconite; Т.: kurtboğan) *и. бот.*

Уҡ япраҡлы, төрлө төҫтәге ойҡаш сәскәле, ағыулы, күп йыллыҡ бейек үҫемлек. □ Аконит высокий, борец (лат. *Aconítum*). *Күк айыутабан. Һары айыутабан.*

**АЙЫУ ТАБАН** *и. диал. ҡар.* **яҫы табан.**

**АЙЫУ ТЕЛЕ** (Р.: заговор медведя; И.: bear exorcism; Т.: ayıya karşı büyü) *и. миф.*

Һунарсылар айыу менән осрашҡанда ҡулланылған арбау. □ Заговор медведя *(применяется охотниками при встрече с медведем).*

**АЙЫУ ТӨҪӨ** *и. миф. ҡар.* **бетеү.**

**АЙЫУТУБЫҠ** *и. бот. диал. ҡар.* **ҡуянтубыҡ.**

**АЙЫУ ТУЙЫ** *и. миф. ҡар.* **айыу байрамы.**

**АЙЫУ ҺЕҢРӘНЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Һеңрән ырыуы аймағы. □ Родовое подразделение сенгрянцев.

**АЙЫУ ЫҪЛАУ (айыу ыҫла-)** (Р.: окуривание медвежьей берлоги; И.: fumigation of bear's den; Т.: ayı inini tütsülemek) *ҡ.*

Ҡышҡылыҡҡа ятҡан айыуҙы алыу өсөн төтәтеп өңөнән сығарыу. □ Окуривание медвежьей берлоги.

**АЙЫУ ЯТҠЫРЫУ (айыу ятҡыр-)** (Р.: ставить метку; И.: tag (bear's den); Т.: ayı inini işaretlemek) *ҡ.*

Айыуҙың ҡышҡылыҡҡа ятҡан өңөн билдәләү. □ Ставить метку о местонахождении берлоги. ■ *Ҡырпаҡ ҡар яуҙымы, беҙҙең яҡта һунарсылар айыу ятҡырып ҡалыуҙы кәсеп итә.* Н. Мусин.

**АЙЫУ ЯҺАҒЫ** (Р.: жакан; И.: charge for large game; Т.: kurşun) *и.*

Эре йәнлеккә ата торған ҡурғаш йәҙрә. □ Жакан *(свинцовая пуля на крупного зверя).*

**АЙЫШ** [боронғо төрки *ай* ‘айырымланыу’] (Р.: суть; И.: essence; Т.: öz) *и.*

*Ниҙең* дә булһа асылын сискән төп мәғәнә; асыл. □ Суть, сущность. *Һүҙҙең айышы. Эштең айышы. Айышына төшөнөү.* ■ *Кирилл Петровичты нисек етте шулай тынысландырып, айышын һорашырға керештеләр.* Ф. Иҫәнғолов. *[Башҡорт хан:] Хәбәрҙең айышына төшөндөгөҙ микән? Илгә бығаса булмаған аҫтыртын хәүеф килә: беҙҙе ата-баба рухынан биҙҙерергә уйлайҙар.* Р. Байымов.

**АЙЫШЛЫ** (Р.: ясно; И.: clear; Т.: açıkça) *р.*

Аңлайышлы, асыҡ. □ Ясно, понятно. *Айышлы һөйләү.* ■ *[Айҙар:] Айышлыраҡ итеп һөйлә әле, ни булды?* Б. Бикбай.

**АЙЫШТА** *р. ҡар.* **асылда**.

**АЙЫШ-ТОЙОШ** (Р.: суть; И.: gist; Т.: öz) *и.*

*Ниҙең* дә булһа асылы, рәте-сираты. □ Суть, сущность. *Мәсьәләнең айыш-тойошона төшөнөү. Был эштең айыш-тойошона һис тә сыға алмайым.*

**АЙЫШҺЫҘ** (Р.: непонятный; И.: unclear; Т.: anlaşılmaz) *с.*

Аңлайышһыҙ, аңлауы ҡыйын булған. □ Неясный, непонятный. *Айышһыҙ һүҙ.*

**АЙЫШЫУ (айыш-)** *ҡ. ҡар.* **аңлау.**

**АЙ ӘБЕЙ** *и. диал. ҡар.* **имсе.**

**АЙӘТ** [ғәр. اية] *и. ҡар.* **аят.**

**АЙ ӘТТӘГЕНӘҺЕ** (Р.: эх; И.: oh my; Т.: keşke) *ымл.*

Үкенеүҙе белдерә. □ Междометие сожаления, раскаяния: эх. *Ай әттәгенәһе, ҡайһылай һыуыҡ.*

**АКАДЕМИК I (академигы)** [рус.] (Р.: академик; И.: academician; Т.: akademisyen) *и.*

Фәндәр академияһының тулы хоҡуҡлы ағзаһы. □ Академик. *Академик булып һайланыу.* ■ *Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы Зиннур Ғәзиз улы Ураксин башҡорт тел ғилеменең лексикография өлкәһенә баһалап бөтөргөһөҙ өлөш индерҙе.* Н. Суфьянова.

**АКАДЕМИК II** (Р.: академический; И.: academician; Т.: akademik) *с.*

**1.** Академияға, уның эшенә мөнәсәбәтле, бәйләнешле. □ Академический *(связанный с академией). Академик баҫма.*

**2.** Классик үрнәктәргә ярашлы. □ Академический *(соответствующий строгим классическим образцам). Академик һүрәт төшөрөү сәнғәте. Академик вокал.* ■ *М. Ғафури, Ш. Бабич менән бер рәттән уның [М. Акмулланың] да әҫәрҙәренең академик йыйынтығы әҙерләнеүе билдәле.* Ә. Вилданов.

**3.** Уҡыу *(юғары уҡыу йорттарына бәйле).* □ Академический, учебный. *Академик йыл. Академик сәғәт. Академик ял.*

**4.** Фәҡәт теоретик йүнәлешле, практик ҡулланылышы булмаған. □ Академический *(имеющий сугубо теоретическую направленность). Академик тикшеренеүҙәр.*

**АКАДЕМИЯ I** [рус.< пол. *akademia* < лат. *academia* < гр. *akademia*] (Р.: академия; И.: academy; Т.: akademi) *и.*

**1.** Фән йәки сәнғәтте үҫтереү бурысын үтәгән юғары дәүләт ойошмаһы. □ Академия. *Рәсәй фәндәр академияһы. Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы. Медицина фәндәре академияһы.*

**2.** Ҡайһы бер юғары уҡыу йорттарының атамаһы. □ Академия. *Ауыл хужалығы академияһы. Хәрби академия.* ■ *Исмәғил Тасимов Петербургта Тау академияһына нигеҙ һалыусы була.* Д. Бураҡаев.

**АКАДЕМИЯ II** (Р.: академический; И.: academic (theatre, etc.); Т.: akademik) *с. сәнғ.*

Өлгөлө дәүләт театрҙарына, хор коллективтарына һ.б. бирелә торған маҡтаулы исем. □ Академический *(употребляется как почётное звание, присваиваемое государственным театрам, хоровым коллективам и т.п.). М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры.* ■ *Бөгөн Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле репертуарында 150-нән ашыу бейеү — Рәсәй һәм донъя халыҡтары бейеүҙәренең иң яҡшы өлгөләре бар.* БР Мәҙәниәт министрлығы сайтынан.

**АКВАЛАНГ** [рус. < лат. *aqua* ‘һыу’ + ингл. *lung* ‘үпкә’] (Р.: акваланг; И.: aqualung; Т.: oksijen tüplü dalma aracı) *и.*

Һыу аҫтында тын алыу өсөн файҙаланыла торған махсус аппарат. □ Акваланг. *Акваланг менән һыу аҫтында йөҙөү.*

**АКВАЛАНГИСТ** [рус.] (Р.: аквалангист; И.: skin diver; Т.: balıkadam) *и.*

Акваланг кейеп, һыу төбөнә төшөп йөрөй торған кеше. □ Аквалангист. ■ *Аквалангистар күлдең [Мүклекүлдең] төпһөҙ икәнлеген асыҡланы.* «Йәшлек», 3 ноябрь 2009.

**АКВАМАРИН** [рус. < лат. *aquatarina* ‘диңгеҙ һыуы’] (Р.: аквамарин; И.: aquamarine; Т.: akuamarin) *и.*

Зәңгәрһыу йәшел йәки зәңгәр төҫтәге аҫыл таш. □ Аквамарин. *Аквамарин ҡашлы алҡа. Аквамарин төҫө.*

**АКВАПАРК** [рус. < лат. *aqua* ‘һыу’ + парк] (Р.: аквапарк; И.: water park; Т.: su parkı) *и.*

Һыу аттракциондары булған бассейн. □ Аквапарк. *Аквапаркка барыу.*

**АКВАРЕЛЬ** [рус. < фр. *aquarelle* < итал. *acquerello* < лат. *aqua* ‘һыу’] (Р.: акварель; И.: watercolor; Т.: suluboya) *и.*

**1.** Һыуҙа иҙелә торған буяу һәм шул буяу менән һүрәт төшөрөү алымы. □ Акварель. ■ *Ул [Рәмил Мәүлиев] литография, офорт, ҡоро энә, монотипия кеүек баҫма графиканың төрлө техникаларында һәм һүрәт, акварель кеүек уникаль графикала эшләй.* «Башҡортостан», 2 февраль 2011.

**2.** Шул буяу менән төшөрөлгән һүрәт. □ Акварель. *Акварель күргәҙмәһе.*

**АКВАРИУМ** [рус. < лат. *aqua* ‘һыу’] (Р.: аквариум; И.: aquarium; Т.: akvaryum) *и.*

**1.** Һыу тереклектәрен, үҫемлектәрен аҫрау һәм үрсетеү өсөн файҙаланылған махсус быяла һауыт йәки быуа. □ Аквариум. *Аквариум балығы.*

**2.** Һыу тереклектәрен күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән учреждение. □ Аквариум.

**АКВАТОРИАЛЬ** [рус. < лат. *aqua* ‘һыу’ + терри(тори)я] (Р.: акваториальный; И.: akvateriya; Т.: su alanına bağlı) *с.*

*Ниндәйҙер* акваторияға мөнәсәбәтле. □ Акваториальный. *Акваториаль һыуҙар.*

**АКВАТОРИЯ** [рус. < лат. *aqua* 'һыу' + терри(тори)я] (Р.: акватория; И.: area of water; Т.: su alanı) *и.*

Билдәле сик эсенә ингән һыу майҙаны. □ Акватория. *Порт акваторияһы.*

**АКВИЗИТОР** [рус. < лат. *acquisitor* 'һатып алыусы'] (Р.: аквизитор; И.: acquirer; Т.: devralıcı) *и. икт.*

Йөк ебәреү йәки страховкалау эше менән шөғөлләнгән хеҙмәткәр. □ Аквизитор.

**АККЛИМАТИЗАЦИЯ** [рус. < фр. *acclimatisation* < лат. *ad* 'таба, өсөн' + гр. *klima* 'климат'] (Р.: акклиматизация; И.: acclimatization; Т.: iklime alıştırma) *и. мед.*

Климатҡа яраҡлашыу. □ Акклиматизация.

**АККОМОДАЦИЯ** [рус. < лат. *accomodatio* 'ҡулайлашыу'] (Р.: аккомодация; И.: accommodation; Т.: uyum) *и. лингв.*

Һүҙҙәге йәнәш торған өндәрҙең үҙ-ара ярашып килеү күренеше. □ Аккомодация.

**АККОМПАНЕМЕНТ** [рус. < фр. *accompagnement*] (Р.: аккомпанемент; И.: accompaniment; Т.: eşlik) *и. муз.*

Йырсыға йәки айырым музыка ҡоралында көй башҡарыусыға ҡушылып уйнау. □ Аккомпанемент. *Аккомпанемент менән йырлау.*

**АККОМПАНИАТОР** [рус. < фр. *accompagnateur*] (Р.: аккомпаниатор; И.: akkompanist; Т.: eşlik eden kimse) *и. муз.*

Аккомпанемент музыкаһын башҡарған кеше; ҡушылып уйнаусы. □ Аккомпаниатор. ■ *Талантлы студентты [Кәрим Дияровты] Ғәзиз Әлмөхәмәтов аккомпаниатор итеп Башҡортостан райондарына, илебеҙҙең төрлө ҡалаларына йәйге гастролдәргә алып йөрөй.* «Шоңҡар», № 6, 2010.

**АККОРД** [рус. < фр. *accord*] (Р.: аккорд; И.: chord; Т.: akort) *и.*

**1.** Бер тауыш һымаҡ ҡабул ителгән төрлө юғарылыҡтағы музыкаль тауыштарҙың бергә яңғырауы. □ Аккорд. *Аккорд биреү.* ■ *Икенән артыҡ булған төрлө тауыштарҙың бер үк ваҡытта яңғырауҙарына аккорд тиҙәр.* Ғ. Сөләймәнов.

**2.** Музыкаль инструменттың ҡылдары. □ Аккорд.

**АККОРДЕОН** [рус. < фр. *accordéon*] (Р.: аккордеон; И.: accordion; Т.: akordeon) *и. муз.*

Уң яҡ клавиатураһы фортепьяно-орган, ә һулы — баҫмаҡ тибындағы хроматик гармун. □ Аккордеон. *Аккордеонда уйнау.* ■ *Тимеркәй ҙә уның эргәһенә килеп ултырҙы һәм моңло тауышы менән аккордеонға ҡушылды.* Ғ. Ғүмәр.

**АККОРДЛЫ ТҮЛӘҮ** (Р.: аккордная оплата; И.: lump payment; Т.: toplu emeklilik ödemesi) *и. икт.*

Эшкә ҡарап *(сәғәтләп йәки даналап)* эш хаҡын түләү формаһы. □ Аккордная оплата.

**АККРЕДИТИВ** [рус. < нем. *Akkreditiv* < лат.] (Р.: аккредитив; И.: letter of credit; Т.: akreditif) *и. фин.*

**1.** Бер кредит ойошмаһының — банкының, һаҡлыҡ кассаһының — икенсеһенә билдәле күләмдәге аҡсаны *кемгәлер* түләргә бойорған документы. □ Аккредитив. *Аккредитив ҡағыҙы. Аккредитив биреү.*

**2.** Банкының иҫәп төрҙәренең береһе. □ Аккредитив.

**АККРЕДИТИВЛЫ** (Р.: аккредитивный; И.: pertaining to letters of credit; Т.: akreditifli) *с.*

Аккредитив ярҙамында эшләнгән. □ Аккредитивный. *Иҫәпләшеүҙең аккредитивлы төрө.*

**АККРЕДИТАЦИЯ** [рус. < лат. *accredo* 'ышаныу'] (Р.: аккредитация; И.: accreditation; Т.: akreditasyon) *и.*

**1.** Күрһәтелгән хеҙмәттәрҙең сифаты билдәле бер стандартҡа яраҡлы булыуын раҫлаған рәсми дәлил алыу процесы. □ Аккредитация.

**2.** Теге йәки был сараны журналисҡа яҡтыртырға хоҡуҡ биреүсе документ. □ Аккредитация.

**3.** *дип.* Халыҡ-ара хоҡуҡта: дипломатик вәкилде халыҡ-ара ойошмаға тәғәйенләү процедураһы. □ Аккредитация.

**4.** *фин.* *Кемгә* лә булһа аҡса түләү хаҡында кредит ойошмаһы биргән рәсми ҡағыҙ. □ Аккредитация.

**АККУЛЬТУРАЦИЯ** [рус. < ингл. *acculturation*] (Р.: аккультурация; И.: acculturation; Т.: kültürleşme) *и.*

Ҙур халыҡ мәҙәниәтенең аҙ һанлы халыҡ тарафынан тулыһынса ҡабул ителеүе. □ Аккультурация.

**АККУМУЛЯТОР** [рус. < лат. *accumulator* ‘йыйыусы’] (Р.: аккумулятор; И.: accumulator; Т.: akümülatör) *и. тех.*

Электр энергияһын йәки йылылыҡты туплай торған ҡулайлама. □ Аккумулятор. *Автомобиль аккумуляторы. Кислоталы аккумулятор. Стартер аккумуляторы. Һелтеле аккумулятор. Электр аккумуляторы.*

**АКР** [рус. < ингл. *acre*] (Р.: акр; И.: acre; Т.: hektarlık) *и.*

Инглиз үлсәм системаһы йөрөгән илдәрҙә ҡулланылған ер үлсәү берәмеге (4047 $м^2$). □ Акр.

**АКРОБАТ** [рус. < гр. *akrobatēs* ‘өҫкә күтәрелеүсе’] (Р.: акробат; И.: acrobat; Т.: akrobat) *и. спорт.*

Акробатика менән шөғөлләнгән кеше. □ Акробат. *Рәсәй акробаттары.*

**АКРОБАТИК** (Р.: акробатический; И.: acrobatic; Т.: akrobatik) *с.*

Акробатикаға мөнәсәбәтле. □ Акробатический. *Акробатик күнекмәләр.*

**АКРОБАТИКА** [рус. < гр. *akrobateo* ‘аяҡ осонда йөрөйөм’] (Р.: акробатика; И.: acrobatics; Т.: akrobasi) *и.*

Гимнастиканың һәм цирк сәнғәтенең бер төрө. □ Акробатика. *Ҡыҙҙар акробатика менән шөғөлләнә.*

**АКРОГИДРОЗ** [рус. < лат. *acrohidrosis*] (Р.: акрогидроз; И.: acrohidrosis; Т.: akrogidroz) *и. мед.*

Устарҙың йәки табандарҙың тирләүсәнлеге. □ Акрогидроз.

**АКРОСТИХ** [рус. < гр. *akrostichos*] *и. әҙ.* *кар.* **акрошиғыр.**

**АКРОФОБИЯ** [рус. < лат. *acrophobia*] (Р.: акрофобия; И.: acrophobia; Т.: yükseklik korkusu) *и. мед.*

Бейеклектән, юғарылыҡтан ҡурҡыу. □ Акрофобия.

**АКРОШИҒЫР** (Р.: акростих; И.: acrostic; Т.: acrostiş) *и. әҙ.*

Һәр юлдың баш хәрефенән йәки бер нисә хәрефенән берәй һүҙ йәки фраза килтереп сығарып яҙылған шиғыр. □ Акростих. ■ *Уны [акрошиғырҙы] күпселектә берәйһенә бағышлау рәүешендә яҙалар.* Д. Шәрәфетдинов.

**АКСЕЛЕРАЦИЯ** [рус. < лат. *acceleration* ‘тиҙләнеш’] (Р.: акселерация; И.: acceleration; Т.: hızlanma) *и.*

Балаларҙың, үҫмерҙәрҙең физик үҫешендә, физиологик яҡтан өлгөрөүендә күҙәтелгән тиҙләнеш. □ Акселерация.

**АКСЕССУАР** [рус. < фр. *accessoire*] (Р.: аксессуар; И.: accessory; Т.: aksesuar) *и.*

**1.** *Нимәнеңдер* өҫтәлмә деталдәре. □ Аксессуар.

**2.** *кар.* **биҙәүес.**

**АКСИОМА** [рус. < лат. *axioma* < гр. *axiōma*] (Р.: аксиома; И.: axiom; Т.: belit) *и.*

**1.** Дөрөҫлөгө дәлилләүгә мохтаж булмаған хәҡиҡәт. □ Аксиома.

**2.** *күсм.* Бәхәсһеҙ хәҡиҡәт. □ Аксиома. *Һәр милли театрҙың репертуары милли пьесаға нигеҙләнә. Был аксиома.*

**АКТ I** [рус. < лат. *actus* ‘эш-хәрәкәт’] (Р.: акт; И.: act; Т.: işlem) *и.*

**1.** Дәүләт органдары тарафынан *ниндәй ҙә* булһа конкрет хәл-ваҡиға буйынса ҡабул ителә торған рәсми документ. □ Акт. *Административ акт. Дипломатик акт.* ■ *[Тамғалар һәм уларҙың исемдәре] Өфө, Мәскәү, Силәбе, Ырымбур һәм башҡа ҡалаларҙағы архивтарҙа һаҡланған XVIII — XIX быуаттарҙағы акттар материалдарынан алынған.* «Башҡортостан», 7 март 1995.

**2.** Юридик әһәмиәтле булған берәй эш-хәлде раҫлай торған документ. □ Акт.

*Акт төҙөү. Акт яҙыу. Банкротлыҡ акты. Баһалау акты. Ҡабул итеү-тапшырыу акты. Ғәйепләү акты. Санитария тикшереү акты. Суд-медицина экспертизаһы акты.*

**3.** Никах теркәү һарайында, ғилми ойошмаларҙа үткәрелгән тантаналы йыйылыш. □ Акт. *Никах теркәү акты.*

**4.** *ҡар.* **хәрәкәт.**

**АКТ II** [рус. < лат. *actus* 'эш-хәрәкәт'] (Р.: акт; И.: act; Т.: hareket) *и. театр.*

Сәхнә әҫәрҙәренең тамамланған бер бүлеге; бүлек, шаршау. □ Акт. *Беренсе акт. Өс актлы пьеса.*

**АКТЁР** [рус. < фр. *acteur* < лат. *actor*] (Р.: актёр; И.: player; Т.: aktör) *и. сәнғ.*

Спектаклдә, кинола ролде профессиональ башҡарыусы артист. □ Актёр. *Актёр һәләте. Актёрҙар йорто. Актёр булыу.*

**АКТИВ I** [рус. < фр. *actif* 'эшлекле' < лат. *activus* 'тәьҫирле'] (Р.: актив; И.: active; Т.: aktif) *с.*

**1.** *ҡар.* **әүҙем.**

**2.** Тиҙ барған, бик шәп үҫешкән; ғәмәлдәге. □ Активный; действующий. *Актив процесс. Актив матдәләр.*

**3.** *лингв.* Лексика тураһында: киң ҡулланылышлы, телмәрҙә йыш ҡулланылған. □ Активный. *Актив һүҙлек. Актив һүҙҙәр.*

**4.** Көсөргәнешле, ныҡышмалы, интенсив. □ Интенсивный. *Актив ял.*

**АКТИВ II** [рус. < лат. *activus*] (Р.: актив; И.: activists; Т.: eylemci) *и.*

Коллективтың, ойошманың иң алдынғы эшмәкәр өлөшө. □ Актив. *Класс активы.*

**АКТИВ III** [рус. < лат. *activus*] (Р.: активы; И.: assets; Т.: aktif) *и. бухг.*

Бухгалтер балансының бер яғы. □ Активы. *Табышлы активтар.*

**АКТИВ IV** [рус. < лат. *activus*] (Р.: активный; И.: active; Т.: aktif) *и. бухг.*

**1.** Предприятиеның бөтә булған мөлкәтенә ҡараған. □ Активный. *Актив балансы.*

**2.** Төшөмлө, килемле; түләү мөмкинлеге булған. □ Активный. *Актив сауҙа балансы.*

**АКТИВЛЫҠ (активлығы)** *и. ҡар.* **әүҙемлек.**

**АКТРИСА** [рус. < фр. *actrice*] (Р.: актриса; И.: actress; Т.: aktris) *и. сәнғ.*

Актёр ҡатын-ҡыҙ; артист ҡатын-ҡыҙ. □ Актриса. *Актриса ролде бик ихлас башҡарҙы.*

**АКТУАЛЛЕК (актуаллеге)** (Р.: актуальность; И.: topicality; Т.: güncellik) *и.*

Хәҙерге көн өсөн кәрәклек, мөһимлек. □ Актуальность. *Теманың актуаллеге.*

**АКТУАЛЬ** [рус. < лат. *actualis* 'эшлекле'] (Р.: актуальный; И.: topical; Т.: güncel) *с. ҡар.* **көнүҙәк**. *Актуаль мәсьәлә. Актуаль проблема.*

**АКУЛА** [рус. < лат. *aquilla*] (Р.: акула; И.: shark; Т.: köpekbalığı) *и. зоол.*

Оҙон йомро кәүҙәле, осло моронло эре йыртҡыс диңгеҙ балығы. □ Акула (лат. *Selachimorpha*). *Аҡ акула.*

**АКУПУНКТУРА** [рус. < лат. *acipunctura* 'энә менән дауалау'] (Р.: акупунктура; И.: acupuncture; Т.: akupunkture) *и.*

Энә менән дауалау ысулы. □ Акупунктура *(метод лечения с иглами).*

**АКУСТИК** [рус.] (Р.: акустический; И.: acoustic; Т.: akustik) *с.*

Акустикаға бәйле, акустика менән шөғөлләнгән. □ Акустический.

**АКУСТИКА** [рус. < лат. *acustika* < гр. *akystikos*] (Р.: акустика; И.: acoustics; Т.: akustik) *и.*

**1.** Физиканың тауыш тәбиғәтен өйрәнә торған бүлеге. □ Акустика.

**2.** Бүлмәлә тауыштың яңғыраш шарты. □ Акустика. *Залдың акустикаһы һәйбәт.*

**АКУШЕР** [рус. < фр. *accoucheur*] (Р.: акушер; И.: obstetrician; Т.: doğum hekimi) *и. мед.*

Акушерлыҡ менән шөғөлләнгән медицина белгесе. □ Акушер. *Акушер тикшереүе. Акушер ярҙамы.*

**АКУШЕР-ГИНЕКОЛОГ** (Р.: акушер-гинеколог; И.: obstetrician-gynaecologist; Т.: doğum hekimi) *и. мед.*

Акушерлыҡ һәм гинекология белгесе, табип, врач. □ Акушер-гинеколог. *Акушер-гинеколог кәңәше.*

**АКУШЕРКА** [рус.] (Р.: акушерка; И.: midwife; Т.: ebe) *и. мед.*

Махсус белемле акушер ҡатын-ҡыҙ. □ Акушерка. *Акушерка булып эшләү.*

**АКУШЕРЛЫҠ (акушерлығы)** (Р.: акушерство; И.: obstetrics; Т.: ebelik) *и. мед.*

**1.** Медицинаның ҡатындарға ауырлы саҡта һәм бала тапҡанда ярҙам күрһәтеү мәсьәләләрен өйрәнгән бүлеге. □ Акушерство. *Акушерлык практикаһы.*

**2.** Акушер хеҙмәте. □ Акушерство. *Акушерлыҡ менән шөғөлләнеү. Оператив акушерлыҡ.*

**АКЦЕНТ** [рус. < фр. *accent* < лат. *accentus*] (Р.: акцент; И.: accent; Т.: vurgu) *и.*

**1.** Махсус айырып яһалған баҫым, баҫым билдәһе. □ Акцент. ■ *Укыған сакта акцент яһаған һүҙҙәр күтәренке тауыш, юғары интонация менән әйтелә, уларҙан һуң бәләкәй генә пауза яһала.* М. Ғималова.

**2.** Сит телдә һөйләгән саҡта өндәрҙең ихтыярһыҙҙан боҙоп әйтелеше. □ Акцент. ■ *Укыусыларҙың акценттары булһа ла .. күнегеү һөйләмдәрен татылдап укыныылар.* Р. Низамов. *Мин уның [Дмитрий Ивановичтың] теленә иғтибар итәм — һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә акцент бар.* Ғ. Шәрипов.

**3.** *Ниндәйҙер* телгә хас үҙенә бер төрлө һөйләү характеры. □ Акцент. ■ *Телдәгәнегеҙҙе һайлағыҙ, уландар, — ти ул ихлас күңелдән ниндәйҙер беҙгә ят акцент менән.* Р. Ханнанов.

**4.** Баҫым. □ Акцент.

**5.** Музыкала ритмик баҫым. □ Акцент. ■ *Акцент тип музыкала айырым тауыштың көслө булыуы менән айырылыуына әйтелә.* Ғ. Сөләймәнов.

**АКЦЕНТЛЫ** (Р.: акцентный; И.: accentual; Т.: aksanlı) *с.*

Акценты булған. □ Акцентный. *Акцентлы һөйләм.*

**АКЦЕНТОЛОГИЯ** [рус. < лат. *accentus* ‘баҫым’ + *logos* ‘фән’] (Р.: акцентология; И.: stress; Т.: vurgu) *и.*

Тел ғилемендә баҫым системаһын өйрәнә торған бүлек. □ Акцентология.

**АКЦЕНТ ЯҺАУ (акцент яһа-)** (Р.: акцентировать; И.: accent; Т.: vurgulamak) *ҡ.*

**1.** *Ниндәйҙер* фекергә баҫым яһау, айырым иғтибар биреү. □ Акцентировать. ■ *Яҙыусы халыҡ күңелендәге .. бәхетле донъяға ынтылыуҙы тасуирлауға акцент яһай.* М. Минһажетдинов.

**2.** Музыкала *ниндәйҙер* аккордты айырыу, көслө башҡарыу. □ Акцентировать.

**АКЦЕПТ** [рус. < лат. *acceptus* ‘ҡабул ителгән’] (Р.: акцепт; И.: acceptance; Т.: kabul) *и.*

**1.** *юр.* Тәҡдим ителгән шартта килешеү төҙөүгә ризалыҡ. □ Акцепт.

**2.** *фин.* Хужалыҡ ойошмалары арҡаһындағы ҡул аҡсаһыҙ иҫәп формаһы, шулай уҡ аҡса документтарын — счёттарҙы, векселдәрҙе һ.б. түләүгә ризалыҡ. □ Акцепт.

**АКЦЕПТӘЛГӘН ТАПШЫРМА** (Р.: акцептированное поручение; И.: payment order; Т.: ödeme emri) *и.*

Түләү өсөн төҙөлгән килешеү. □ Акцептированное поручение.

**АКЦИЗ** [рус. < лат. *accisum* ‘киҫелгән’] (Р.: акциз; И.: excise; Т.: tüketim vergisi) *и.*

**1.** *фин.* Киң ҡулланыу тауарҙарына ситләтелгән һалым. □ Акциз. *Бюджеттың ҙур өлөшөн акциздар тәшкил итә.*

**2.** *иҫк.* Революцияға тиклемге Рәсәйҙә шул һалымды йыйған идаралыҡ. □ Акциз.

**АКЦИОНЕР** [рус. < фр. *actionnaire*] (Р.: акционер; И.: shareholder; Т.: hissedar) *и.*

Ҡиммәтле ҡағыҙҙарға эйә физик йәки юридик шәхес, акция менән эш итеүсе. □ Акционер.

**АКЦИЯ I** [рус. < фр. *action*] (Р.: ценная бумага; И.: share; Т.: hisse) *и. фин.*

Ҡиммәтле ҡағыҙ *(дивидент (килем) алырға хоҡуҡ биргән)*. □ Ценная бумага.

**АКЦИЯ II** [рус. < лат. *actio*] (Р.: акция; И.: action; Т.: aksiyon) *и.*

*Ниндәйҙер* маҡсатҡа ирешеү өсөн үткәрелгән хәрәкәт. □ Акция. *Мәрхәмәтлек акцияһы.*

**АҠ I** [боронғо төрки *ак*] (Р.: белый; И.: white; Т.: beyaz) *с.*

**1.** Ҡар, һөт төҫөндәге; *киреһе* — ҡара. □ Белый. *Аҡ төҫ. Аҡ кейем. Аҡ ҡағыҙ.* ■ *Ҡыш та килер, болондағы эҙебеҙҙе аҡ япмалар менән күмер.* Ғ. Рамазанов. *Ҡояш ҡына сыға ай әйләнеп, аҡ болотҡайҙарға бәйләнеп.* Халыҡ йырынан. *Ҡар сафлығы — күңелдәргә дауа, аҡ нур һибелгәндәй ян-яҡҡа.* Ә. Таһирова.

**2.** Үҫемлек, йәнлек атамаларының бер өлөшө булып килә. □ Белый *(составная часть некоторых зоологических и ботанических названий). Аҡ төлкө. Аҡ уҫаҡ. Аҡ айыу. Аҡ бәшмәк. Аҡ ҡайын. Аҡ томбойоҡ. Аҡ үлән.* ■ *Аҡ үләнде эс ауыртыуынан эскәндәр.* Халыҡ ижадынан.

**3.** Ғәҙәттәгенән асығыраҡ төҫлө. Ҡатмарлы төҫ исемдәренең бер өлөшө булып килә. □ Составная часть сложных цветовых обозначений, светлый. *Аҡ күк. Аҡ һары.*

**4.** Асыҡ төҫлө. □ Светлый. *Аҡ тән. Аҡ тәнле раса.* ● *Ҡара кешенең тире сыкҡансы, аҡ кешенең йәне сығыр.* Мәҡәл.

**5.** Үҙ төҫөн юғалтҡан; сал. □ Седой. *Аҡ мыйыҡ. Аҡ сәс.*

**6.** Эшләнеше, сифаты яғынан таҙа булып, асыҡ төҫ алып торған. □ Чистый, светлый, белый. *Аҡ тимер. Аҡ ҡалай. Аҡ мамыҡ.*

**7.** Ҡәҙерлегә тотола торған *(бүлмә, торлаҡ хаҡында).* □ Гостевая, горница. *Аҡ өй. Аҡ келәт. Аҡ тирмә.*

**8.** *күсм.* Насарлығы, уҫаллығы булмаған; саф, изге. □ Благой, добрый. *Аҡ ниәт. Аҡ уй. Аҡ өмөт.* ■ *Аҡ күңелле Аҡмулланың һыны балҡый йырҙарҙан.* М. Ямалетдинов. ● *Аҡҡа ҡара тиҙ йоға.* Әйтем.

**9.** *күсм.* Шатлыҡ менән тулы; ҡыуаныслы, бәхетле. □ Светлый, счастливый, радостный. *Аҡ бәхет. Аҡ көндәр.* ● *Уңған бисә — аҡ бәхет, уңмаған бисә — ҡаҡ бәхет.* Әйтем.

**10.** *күсм.* Совет власының тәүге йылдарында: совет власына ҡаршы булған; контрреволюцион. □ Белый. *Аҡ армия. Аҡ офицер. Аҡтар отряды. Аҡтар терроры.* ■ *Рәшәткә буйлап аҡ бандиттарҙың аттар янында маташҡандары күренә.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Аҡ алтын** мамыҡ. □ Белое золото (хлопок, вата). **Аҡ күбеккә батыу** бик ныҡ тирләү *(атҡа ҡарата).* □ Взмылиться *(о лошади).* **Аҡты ҡара итеп күреү** *нимәнеңдер* тик насар яғын күреү. □ Принимать белое за чёрное. **Аҡты ҡара итеп күрһәтеү** үҙ файҙаңдан сығып, дөрөҫтө ялған итеп аңлатыу. □ Выдавать за чёрное. **Аҡты ҡаранан айырыу** асылын аңлау, төшөнөү. □ Понимать суть. **Аҡты ҡара тиеү** *ҡар.* **аҡты ҡара итеп күреү. Аҡ эттең бәләһе ҡара эткә** үҙ ғәйебен башҡа кешегә ауҙарыу. □ Валить с больной головы на здоровую. **Аҡ юл <һеҙгә>!** киткән кешегә уңышлы юл теләп әйтелә. □ Счастливого пути!

**АҠ II (ағы)** (Р.: белок; И.: albumen; Т.: ak) *и.*

Төрлө нәмәнең аҡ төҫ менән айырылып торған бер өлөшө. □ Белок. *Йомортҡаның ағы. Күҙ ағы.*

**АҠ III (ағы)** (Р.: молочное; И.: dairy produce; Т.: süt) *и.*

Һөттән әҙерләнгән төрлө ашамлыҡ; һөтҡатыҡ. □ Молочное, молочный продукт. *Аҡтан өҙлөгөү. Аҡһыҙ ҡалыу. Аҡты көн байығас кешегә бирмә, һыйырыңа зыян килер.* ● *Ағы барҙың туғы бар.* Әйтем.

**АҠ IV (ағы)** (Р.: бумага; И.: paper; Т.: kağıt) *и.*

**1.** Ҡағыҙ, яҙыулы ҡағыҙ. □ Бумага, книга. ■ *Әсәһе ҡайһы саҡтарҙа ҡыҙының былай гел уҡып ултырыуына эсе бошоп, орошоп та ала: «Ҡуйһаңсы шул аҡҡа текләп, күҙ нуры бөтөрөп ултырыуыңды!»* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Таҙа итеп күсереп яҙылған ҡульяҙма. □ Беловик. ■ *Планды аҡҡа күсереп яҙҙым.* Ж. Кейекбаев. ● *Аҡҡа төшкәнсе, ҡаҡҡа төш.* Әйтем.

**АҠ V (ағы)** (Р.: бельмо; И.: walleye; Т.: akçıl gözbebeği) *и. мед.*

**1.** Күҙ мөгөҙсәһенә төшкән тап. □ Бельмо. *Күҙгә ак һалыу.*

**2.** Тырнаҡҡа төшкән тап. □ Белое пятнышко *(на ногтях).*

**3.** Ҡайһы бер гинекологик ауырыу ваҡытында килгән эренле бүлендек. □ Бели. *Балаяткынан ак килеү.*

**АҠ VI (ағы)** (Р.: символ добра; И.: symbol of purity; Т.: iyilik simgesi) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында изгелек, сафлыҡ, яҡтылыҡ символы. □ В башкирской мифологии символ добра, чистоты, светлого. ■ *Мифологияла, ғәҙәттә, ак һүҙе булған заттар изге, кешегә бәхет килтереүсе, уны ҡурсалаусы итеп һүрәтләнә.* Ф. Хисамитдинова.

♦ **Ак күңелле** яҡшы уйлы, саф тәбиғәтле. □ С чистой душой, добрый, благожелательный.

**АҠАЙ I** (Р.: пучеглазый; И.: goggle-eyed; Т.: patlak gözlü) *с. диал.*

Аҡыш. □ Пучеглазый.

**АҠАЙ II** *и.*

**1.** *диал. кар.* **ағай.**

**2.** *этн.* Ҡошсо ырыуының аймағы. □ Подразделение рода кошсы.

**АҠАЙТЫУ (аҡайт-)** (Р.: выпучить; И.: goggle (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

**1.** Күҙҙе ҙур асыу. □ Выпучить (вытаращить) глаза. ■ *Ҡара айғыр күҙҙәрен акайтты, уға ҡаршы борола биреп, ҡолаҡтарын тырпайтып, тыныҫһыҙланып тапанды.* З. Ураҡсин.

**2.** Асыу менән ҡарау. □ Смотреть со злобой, сердито. ■ *Мәүли яуап биреү урынына кустыһына күҙен акайтып ҡараны, Һаҙый шөрләп ҡуйҙы.* Р. Ғабдрахманов.

**АҠАЙЫУ (аҡай-, аҡая)** (Р.: таращиться; И.: stare (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

**1.** Түңәрәкләнеп, ҙур булып асылыу *(күҙгә ҡарата)*; аҡшайыу. □ Таращиться, пучиться *(о глазах).* ■ *Бирешкән, ти, Арыҫлан: быуындары тартышкан, ике күҙе акайған, .. тамам хәленән тайған.* Ш. Бикҡол.

**2.** Асыу менән ҡарау; аҡшайыу. □ Смотреть со злобой, сердито. ■ *Әмирханов менән Хәйруллин өс көн рәттән акайып миңә өндәшмәй йөрөнө.* С. Агиш. *Гәрәйҙе, ярға ҡыҫылған бүре һымаҡ, аҫтан һөҙөп, акайып ҡарағас, бөтәһе таныны.* Б. Бикбай. ● *Акайған күҙҙә акыл юк.* Әйтем.

♦ **Күҙе аҡайҙы** кешенең бик ҡурҡҡанын йәки аптырағанын белдергәндә әйтелә. □ Выражает состояние крайнего удивления, недоумения или сильной боли. ■ *[Ерәнсә сәсән:] Ҡулымдағы һәнәкте күргәс, дейеүҙең күҙе акайҙы.* Әкиәттән. **Күҙе аҡайған** *нимәгәлер* иҫе китеп, бик мауығып, бүтән нәмәне күрмәҫ-белмәҫ булып торған кешегә әйтелә. □ Ничего не видя, не замечая, всецело отдаваться *чему-л.*

**АҠ АЙЫУ** (Р.: белый медведь; И.: polar bear; Т.: kutup ayısı) *и. зоол.*

Төньяҡ ҡотоп райондарында ҡар һәм боҙҙар өҫтөндә йәшәгән айыуҙар ғаиләһенә ҡараған йыртҡыс һөтимәр йәнлек. □ Белый медведь *(полярный медведь, северный медведь, морской медведь, ошкуй)* (лат. *Ursus maritimus*). ■ *Арктикала инде ак айыу минус 35-тә лә өшөмәй. Уның да, пингвиндыкы кеүек, май ҡатламы ҡалын. Йөнө һауаны, һыуҙы үткәрмәй.* «Йәншишмә», № 99, 2010.

**АҠ АҠЫҠ** (Р.: опал; И.: opal; Т.: opal) *и. мин.*

**1.** Аҡһыл төҫтәге минерал таш. Ҡайһы бер төрҙәре аҫыл таш тип иҫәпләнә. □ Опал. *Ак акык ҡашлы йөҙөк.*

**2.** *миф.* Күҙгә аҡ төшкәндә дауалауҙа ҡулланылған таш. □ Мифологизированный камень, используемый при избавлении от бельма.

**АҠ АЛАБУТА** (Р.: марь белая; И.: chenopodium album; Т.: sirken) *и. бот.*

Бер йыллыҡ, 20–150 см буйында, тура, ябай һабаҡлы, ваҡ сәскәле үлән. □ Марь белая (лат. *Chenopodium album*).

**АҠАН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-кубалякцев.

**АҠАНА** (Р.: осока просяная; И.: sedge; T.: papirusgiller bitki cinsidir) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған һепертке башлы бейек үлән. □ Осока просяная (лат. *Carex panicea*).

**АҠАНЛАУ (аҡанла-)** *к. кар.* **алаҡанлау.**

**АҠБАБАЙ I** (Р.: дядя; И.: uncle; T.: amca) *и. диал.*

**1.** Бабай, атайҙың ағаһы. □ Дядя, старший брат отца.

**2.** Туғандар араһында иң оло хөрмәтле ир кеше. □ Уважаемый среди родственников пожилой мужчина.

**3.** Атайҙан оло ир кешегә хөрмәтләп әйткән һүҙ; олатай. □ Вежливая форма обращения к пожилым мужчинам.

**4.** Уҡымышлы оло йәштәге бабай. □ Просвещённый пожилой человек.

**5.** *миф.* Кәртә-ҡура эйәһе. □ Дух-хозяин двора.

**АҠБАБАЙ II** *и. диал. кар.* **бәпембә**.

**АҠБАЛСЫҠ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир.

**АҠ БАЛСЫҠ** (Р.: белая глина; И.: white loam; T.: beyaz kil) *и.*

Һыуға иҙелеп, һылашып торған йомшаҡ аҡ төҫтәге тау тоҡомо. □ Белая глина.

**АҠБАЛСЫҠЛАУ (аҡбалсыкла-)** (Р.: белить.; И.: whitewash; T.: kireçlemek) *к.*

Аҡ балсыҡ менән буяу; ағартыу. □ Белить. // Побелка. *Өйҙө аҡбалсыҡлау.* ■ *Мейес .. ап-аҡ итеп аҡбалсыҡланған да йәшелле, күкле, ҡыҙыллы буяуҙар менән биҙәкләнгән.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҠБАЛЫҠ (аҡбалығы)** (Р.: белорыбица; И.: white salmon; T.: somon balığı) *и.*

**1.** *зоол.* Һөмбаштар ғаиләһенә ингән йылтыр аҡ тәңкәле эре яҫы балыҡ. □ Белорыбица (лат. *Stenodus leucichthys*). ■ *Аҡбалыҡ Ағиҙел йылғаһына ыуылдырыҡ сәсергә йыл һайын күтәрелә ине.* Р. Чанышев.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, балыҡтарҙы һаҡлаусы, яҡлаусы изге балыҡ; балыҡтар батшаһы. □ Царь-рыба. ■ *Аҡ балыҡтай йөҙөп кил.* Арбауҙан.

**АҠ БАТА** (Р.: доброе пожелание; И.: blessing; T.: iyi dilek) *и.*

Изге теләктәр. □ Доброе пожелание, благословение. ■ *Аҡ баталар алдым ҡыҙ сағымда, ник бәхеткәйҙәрем булманы.* Йырҙан.

**АҠ БАТША** (Р.: белый царь; И.: white Tsar; T.: beyaz kral) *и. тар.*

Рәсәй дәүләтенең башындағы юғары хаким. □ Белый царь *(о русском царе)*.

**АҠБАШ I** (Р.: лабазник шестилепестный; И.: dropwort; T.: erkeç sakalı) *и. бот.*

Роза сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, ҡоро тупраҡлы туғайҙарҙа, далаларҙа, аҡландарҙа, урман ситендә үҫкән, аҡ йәки ал төҫтәге ойҡаш сәскәле, ҡауырһын япраҡлы күп йыллыҡ үлән үҫемлек; тау клеверы, ураз уты. □ Лабазник шестилепестный, белоголовка (лат. *Filipendula vulgaris*). ■ *Тән һыҙлауҙан аҡбаш үләнен ҡайнатып эсәләр.* Экспедиция материалдарынан.

**АҠБАШ II** (Р.: копытница; И.: footrot; T.: piyeten) *и.*

**1.** *вет.* Еүешлектән барлыҡҡа килгән тояҡ ауырыуы. □ Копытница, копытянка.

**2.** *вет.* Йылҡының бәкәлен боҙа торған ҡорт. □ Вид червей, который поражает суставы ног лошадей.

**3.** *мед.* Яман шешек, сиҡан. □ Чирей. *Аҡбаш сығыу. Аҡбаш һытылыу.*

**АҠБАШ III** (Р.: водка; И.: bottle of vodka; T.: bir şişe votka) *и. һөйл.*

Шешәле аҡ араҡы. □ Водка, бутылка водки. ■ *[Ҡотлояр — Әхмәҙигә:] Ҡоҙа, ниңә*

*берәр шешә аҡбаш алмайһың, әллә ҡоҙағыйҙан ҡурҡаһыңмы?* Һ. Дәүләтшина.

**АҠБАШ-ҠАРШЫН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаршын ырыуының бер бүлеме. ◻ Родовое подразделение башкир-каршинцев.

**АҠ БЕЙЕМ** (Р.: сестра мужа; И.: aunt; Т.: teyze) *и. диал.*

Ирҙең апаһы. ◻ Сестра мужа.

**АҠ БИҘГӘК** (Р.: белая горячка; И.: delirium tremens; Т.: titreme hezeyanı) *и. мед.*

Эскеселәрҙә була торған психик ауырыу. ◻ Белая горячка.

**АҠ БИҘӘҮ** (Р.: женщина, не рожавшая после первого ребёнка; И.: female having but one birth; Т.: tek çocuklu kadın) *и.*

Бер бала табып туҡтаған ҡатынға ҡарата әйтелә. ◻ Женщина, не рожавшая после первого ребёнка.

**АҠ БИЛЕТ** (Р.: белый билет; И.: white chit; Т.: askerlik cüzdanı) *и. һөйл.*

**1.** Сәләмәтлеге насар булыу сәбәпле, хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡты белдергән таныҡлыҡ. ◻ Белый билет. ■ *Хисбулланың уң күҙе күрәғарау булғанға аҡ билет булып, һуғышҡа китмәй ҡалды.* З. Биишева.

**2.** *һөйл.* Шул таныҡлыҡтың эйәһе. ◻ Обладатель белого билета.

**АҠ БИЛӘҮ** (Р.: обережная пелёнка; И.: amulet nappy; Т.: koruyucu kundak) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, һаҡлаусы, яҡлаусы изге йүргәк. ◻ Обережная пелёнка. ■ *Аҡ биләүгә биләү: яңы тыуған баланы аҡ йүргәккә биләп, аҡ бәхеттәр теләп, әсә янына һалалар.* Г. Батыршина.

**АҠБИРҘЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыбау-мең ырыуының аймаҡ исеме. ◻ Название родового подразделения башкир-кубоу-минцев.

**АҠ БОЛАН** (Р.: белый олень; И.: sacred white totem deer; Т.: kutsal beyaz geyik) *и. миф.*

Изге болан, йәнлек, тотем. ◻ Священный белый олень, тотем. ■ *Сәрмәсәнем ана шундай улан ине, ишәк эргәһендә ул аҡ болан ине.* Халыҡ ижадынан.

**АҠБУҘ** (Р.: сизый; И.: warm grey; Т.: boz) *с.*

Күкһел *(ат төҫөнә ҡарата)*. ◻ Сизый, серый *(о масти лошади)*. *Аҡбуҙ ат.*

**АҠБУҘАТ** (Р.: крылатый конь; И.: winged horse; Т.: kanatlı at) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында кешегә ярҙам итеүсе, уны ҡурсалаусы ҡанатлы илаһи толпар, аттар батшаһы, мал ҡото. ◻ Крылатый конь. ■ *Ышаныуҙар буйынса, Аҡбуҙат — мал ҡото. Уралдағы йылҡыларҙы ла күл төбөнән алып сыҡҡан ат ул.* Ф. Хисамитдинова.

**АҠБУЛАТ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. ◻ Название родового подразделения башкир-кубалякцев.

**АҠБҮЛӘК** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Унлар ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. ◻ Название родового подразделения башкир-унларцев.

**АҠБУР** (Р.: мел; И.: chalk; Т.: tebeşir) *и.*

Аҡ төҫтәге йомшаҡ таш. ◻ Мел. *Аҡбур ташы.*

**АҠБУРАН** (Р.: пурга; И.: blizzard; Т.: kar fırtınası) *и.*

Ҡышҡы буран. ◻ Пурга.

**АҠБУРЛАУ (аҡбурла-)** *к. кар.* **ағартыу**.

**АҠ БҮРЕ** (Р.: белый волк; И.: totem grey wolf; Т.: boz kurt) *и.*

**1.** *миф.* Изге мифик бүре, бүреләр батшаһы. ◻ Белый (голубой) волк *(тотем, первопредок башкир)*.

**2.** *этн.* Уран ҡәбиләһенең аймағы. ◻ Родовое подразделение уранцев.

**АҠ БҮҪЕР** (Р.: дух болезни; И.: spirit of a malady; Т.: hastalığın ruhu) *и. миф.*

Ауырыу эйәһе. □ Дух болезни. ■ *Аҡ бүҫер, ҡара бүҫер, һары бүҫер, ҡарт бүҫер. Урыныңда ҡат, бүҫер.* Арбауҙан.

**АҠ БӘЙЕЛ(ЛЕ)** (Р.: добрый нрав; И.: good nature; Т.: iyi huylu) *с.*

Саф күңел(ле). □ Добрый нрав. *Аҡ бәйелле кеше.*

**АҠБӘРӘННӘР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Йәнәй ырыуы аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-енейцев.

**АҠ БӘШМӘК** (Р.: белый гриб; И.: penny bun; Т.: çörek mantarı) *и. бот.*

Итле, ҙур эшләпәле, ашарға яраҡлы булған бәшмәк төрө. □ Белый гриб, боровик (лат. *Boletus edulis*). ■ *Аҡ бәшмәкте уйлап тормай «Башҡортостан бәшмәктәренең батшаһы» тип атарға мөмкин. Сөнки уның аҙыҡ сифаты юғары, кулинарияла киң ҡулланыла. Ҡиммәтле бәшмәк.* «Йәшлек», 20 август 2011.

**АҠ ДОНЪЯ** (Р.: рай; И.: paradise; Т.: cennet) *и. миф.*

Ожмах. □ Рай, тот свет. *Ваҡыты еткәс, һәр кеше аҡ донъяға күсә.*

**АҠ ЕРЕК** (Р.: белая ольха; И.: grey alder; Т.: gri çam) *и. бот.*

Ерек ағасының төрө. □ Белая ольха (лат. *Alnus incana*).

**АҠИР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бишул-табын ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир рода бишул-табын.

**АҠ ИТ** (Р.: белое мясо; И.: white meat; Т.: beyaz et) *и.*

Тауыҡ, күркә, быҙау һ.б. иттәргә бирелгән дөйөм исем. □ Белое мясо.

**АҠ ЙӨРӘК** *с. ҡар.* **изге күңелле.**

**АҠ ЙЫЛАН** (Р.: царь змей, белая змея; И.: king of serpents; Т.: beyaz yılan) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында аҡ төҫтәге мифик йылан, йыландар батшаһы, оҙонлоғо бер ҡарыштай ғына булған был йылан кешегә һирәк осрай, үлтерергә ярамай. □ Белая змея, царь змей. ■ *Аҡ йыланды күргән кеше уның алдына аҡ яулыҡ һалырға тейеш. Сөнки аҡ йылан аҡ әйбергә мөгөҙөн һала икән. Йылан мөгөҙөн тапҡан кеше бик бәхетле була, тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова. *Бигерәк тә барлыҡ йыландарҙың батшаһы булып иҫәпләнгән аҡ йылан хаҡындағы һәр төрлө юрау, легендалар ҙур иғтибарға лайыҡ.* Ф. Нәҙершина.

**АҠ КЕЙЕҘ** (Р.: белый войлок; И.: white thick felt; Т.: beyaz keçe) *и.*

**1.** Аҡ төҫтәге баҫылған кейеҙ. □ Белая кошма, белый войлок. *Аҡ кейеҙ түшәү.* ■ *Бына бөгөн дә улар Ҡыҙырас менән икәүләп, аҫҡа аҡ кейеҙ, баш аҫтына эре биҙәкле ҡыҙыл сатин тыш кейҙерелгән ҙур яҫтыҡ һалып, икеһе бер юрған ябынып яттылар.* З. Биишева.

**2.** Оҙатып килтерелгән киленде аҡ бәхеттәр теләп төшөрә торған кейеҙ, мендәр, бәләкәй юрған. □ Белая кошма. ■ *Оҙатып алған киленде ҡәйнә аҡ кейеҙгә баҫтыра.* Экспедиция материалдарынан.

**АҠ КЕЙЕҘҘӘ КҮТӘРЕҮ (аҡ кейеҙҙә күтәр-)** (Р.: провозгласить ханом; И.: to make a Khan; Т.: Han ilan etmek) *к. тар.*

Хан тип иғлан итеү ритуалы *(ҡалҡыулыҡҡа аҡ кейеҙ йәйелә. Ике хөрмәтле кеше ханды аҡ кейеҙгә Мәккәгә ҡаратып ултырта. Артабан дүрт бай һәм батыр ханды кейеҙҙә өс тапҡыр баш өҫтөнә күтәрә. Хан рәсми рәүештә һайланған тип иҫәпләнә).* □ Провозгласить ханом. ■ *1740 йылда Нуғай даруғаһы Юрматы улусынан аҡыллы, ҡаты характерлы, ойоштороуға һәләтле, хәрби эште, ғәрәп грамотаһын, Ҡөрьәнде яҡшы белгән, Мәккәгә барып ҡайтҡан шәхес, халыҡ араһында Ҡараһаҡал атамаһын алған Миңлеғол Юлаев хәҙерге Ҡыйғы районының*

*Иҫке Мөхәммәт ауылы территорияһында жунгар тәхетенең варисы Солтангәрәй хан тип аҡ кейеҙҙә күтәрелә.* «Йәшлек», 10 июнь 2008.

**АҠ КЕЙЕМЛЕ КЕШЕ** (Р.: дворовой, человек в белом; И.: spirit of the court-yard; Т.: avlunun ervahı) *и. миф. диал.*

Ишек алдын, аҙбарҙы һаҡлаусы изге зат, үлгән кешенең рухы. □ Дух двора, дворовой. *досл.* Человек в белом. ■ *Аҡ кейемле кеше шым ғына кәртәлә мал тирәһендә йөрөй.* Ф. Хисамитдинова.

**АҠКӨБӘК** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-юрматинцев.

**АҠ КӨЛӘПӘ** (Р.: шампиньон; И.: champignon; Т.: kuzugöbeği) *и. бот.*

Ашауға яраҡлы аҡ төҫтәге бәшмәк. □ Шампиньон (лат. *Agaricus*). *Маринадланған аҡ көләпә.*

**АҠКӨСӨК** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-кубалякцев.

**АҠ КҮБӘЛӘК** (Р.: зорька; И.: Orange Tip; Т.: Turuncu Süslü Kelebek) *и.*

**1.** *зоол.* Аҡ төҫлө көндөҙгө күбәләк. □ Зорька, аврора (лат. *Anthocharis cardamines*). ■ *Аҡ, һары күбәләктәр, бал ҡорттары, иңкештәр, тағы әллә нисә төрлө бөжәктәр сәскәләрҙән сәскәләргә ҡунып байрам итә, сәскә елпеүестәр иренеп кенә ергә яуа.* «Башҡортостан», 14 июль 2011.

**2.** *зоол.* Ҡанаттары башлыса аҡ төҫлө, һары, ҡыҙғылт, ҡара биҙәкле көндөҙгө күбәләктәр ғаиләһе. □ Белянки (лат. *Pieridae*).

**3.** *күсм. шиғр.* Ҡар бөртөгө. □ Снежинка. ■ *Ябалаҡлап ҡар яуа башлаһа, шыршы ылыҫтарына төшөп ҡунған аҡ күбәләктәр ҡыш уртаһында сәскә атҡан аҡ гөлдәргә оҡшай. Селләле йәйҙең моңло торналары, ыҙғыр ҡыштың аҡ күбәләктәре...* М. Ҡотлоғәлләмов.

**4.** *миф.* Үлеләр йәне. □ Души мёртвых.

**АҠ КҮГӘРСЕНДӘР** (Р.: души умерших детей и хороших людей; И.: pidgeon-like spirit; Т.: iyi insanların ve çocukların ervahları) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, балалар, яҡшы кешеләр үлгәс, уларҙың аҡ күгәрсен булып осоп йөрөгән йәне. □ Души умерших детей и хороших людей, летающие в виде белых голубей. ■ *Аҡ күгәрсендәрҙе үлтерергә, бешереп ашарға ярамай. Был тыйыуҙарҙы боҙһаң, ҡайғы, ауырыу килә тиҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

**АҠ КҮГӘҮЕНДӘР** (Р.: души умерших; И.: cemetery specters; Т.: ervahlar) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, зыяратта йәшәгән, зыярат тирәһендә осоп йөрөгән үлеләр йәне. □ Обитающие на кладбище души умерших. ■ *Зыярат тирәһенән үткәндә ҡысҡырып һөйләшергә, көлөшөргә, тештәрҙе күрһәтергә, бармаҡ менән төртөп күрһәтергә ярамай икән. Ошо тыйыуҙарҙы үтәмәһәң, аҡ күгәүендәр һинең артыңдан эйәреп ауылға килә. Был осраҡта һинең ғаиләңдә йәки туған-тыумасаңда мәйет була икән.* Ф. Хисамитдинова.

**АҠКҮҘ** (Р.: чайка; И.: gull; Т.: martı) *и.*

**1.** *зоол. диал.* Аҡсарлаҡ. □ Чайка (лат. *Larus ridibundus*).

**2.** *этн.* Кәлсер-табын, йомран-табын, ҡыпсаҡ, үҫәргән ырыуҙарының аймаҡтары. □ Родовые подразделения башкир-кальчир-табынцев, юмран-табынцев, кыпчаков, усерган.

**АҠКҮЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков.

**АҠ КҮМЕҮ (аҡ күм-)** (Р.: закапывание молочного продукта; И.: ritual burial; Т.: bir töre) *к. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, төҙөлөп ятҡан өйҙөң нигеҙенә бәхет, ырыҫ теләп, һөт аҙығын

күмеү. □ Ритуальное закапывание молочного продукта в фундамент строящегося дома с пожеланиями счастья, благополучия.

**АҠҠАЙЫН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡалмаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-калмаков.

**АҠҠАНАТ** (Р.: белокрыльник болотный; И.: bog arum; Т.: yılanotu) *и. бот.*

Һаҙмат урында үҫкән ағыулы үлән. □ Белокрыльник болотный (лат. *Calla palustris*).

**АҠҠАНАТ БУҘ ТУРҒАЙ** *и. зоол. диал. кар.* **аҡ ҡанатлы һабан турғайы.**

**АҠ ҠАНАТЛЫ ҺАБАН ТУРҒАЙЫ** (Р.: белокрылый жаворонок; И.: white-winged lark; Т.: ak kanatlı toygar) *и. зоол.*

Турғайҙар ғаиләһенә ҡараған бер ҡош төрө. □ Белокрылый жаворонок (лат. *Melanocorypha leucoptera*). ■ *Башҡортостандың Урал аръяғында ҡара өйрәк, ағуна, шоңҡар, аҡ ҡанатлы һабан турғайы, Урал алдында һарыҡас турғай, кесерткән турғайы теркәлгән; башҡа ҡоштар киң таралған.* «Башинформ» агентлығы сайтынан.

**АҠ ҠАНДАЛА ҮЛӘНЕ** (Р.: донник белый; И.: bokhara clover; Т.: beyaz yonca) *и. бот.*

Бер йәки ике йыллыҡ баллы сәскә. □ Донник белый (лат. *Melilotus albus*).

**АҠ ҠАНЛЫЛЫҠ** (Р.: белокровие; И.: leukemia; Т.: lösemi) *и. мед.*

Ҡан күҙәнәктәрен барлыҡҡа килтереүсе туҡыманы һ. б. ағзаларҙы зарарлаусы етди ауырыу. □ Белокровие, лейкоз, лейкемия.

**АҠҠАН-ТАМҒАН** (Р.: отовсюду понемногу; И.: a little bit from elsewhere; Т.: her yerden azar azar) *к.*

Төрлө ерҙән әҙләп килгән *(аҡса йәки башҡа нәмәгә ҡарата)*. □ Отовсюду понемногу.

**АҠ-ҠАРА** (Р.: ничего; И.: nothing; Т.: hiçbir şey) *и.*

Бер нимә лә, бер ни ҙә *(тирә-йүнде абайламай бик ашығып китеп барғанды йәки онотолоп берәй нәмә эшләгәнде белдергәндә әйтелә)*. □ Ничего *(не видеть, о сильно возбуждённом или увлёкшемся человеке)*. *Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй. Аҡ-ҡараны күрмәй.* ■ *Малайҙар ашыҡты. Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәне.* Р. Камал.

**АҠҠОЙРОҠ (аҡҡойроғо)** (Р.: белохвост; И.: kind of plant; Т.: bitki türü) *и. бот.*

Дымлы ерҙә үҫә торған ялбыр башлы оҙон үлән. □ Белохвост. ■ *Тал араһында .. аҡҡойроҡ үләненең һирәк кенә һабаҡтары күренә ине.* Й. Солтанов.

**АҠ ҠОНДОРАҠ (ҡондорағы)** (Р.: полевица белая; И.: bentgrass; Т.: çimen) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған бер йәки күп йыллыҡ киң таралыш алған ҡый йәки мал аҙығы үләне. □ Полевица белая (лат. *Agrostis*).

**АҠ ҠОРБАН** (Р.: жертвоприношение; И.: solemn sacrifice; Т.: kurban sunma) *и.*

**1.** *этн.* Изге теләктәр теләп йәки нәҙер әйтеп аҡ малдан салған ҡорбан. □ Торжественное или обещанное жертвоприношение *(в жертву приносится животное белой масти)*. *Аҡ ҡорбан салыу.*

**2.** *миф.* Аяҙ теләп тау башында салынған ҡорбан. □ Жертвоприношение для вызывания солнца.

**АҠҠОШ** (Р.: лебедь; И.: swan; Т.: kuğu) *и.*

**1.** *зоол.* Өйрәктәр ғаиләһенә ҡараған аҡ төҫлө, һомғол оҙон муйынлы иң эре һыу ҡошо. □ Лебедь (лат. *Cygnus*). *Аҡҡош тауышы.* ■ *Мин ҡайтам да, тик аҡҡоштар ҡайтмай, тик аҡҡоштар ҡайтмай ҡулдәргә.* Н. Нәжми. ● *Аҡҡош иртә килһә, яҙ оҙон була.* Һынамыш.

**2.** *миф.* Башҡорт мифологияһындағы изге, тотем ҡоштарҙың береһе һанала. □ Лебедь *(в башкирской мифологии лебедь считается священной, тотемной птицей)*. ■ *Урал батыр үлгәс, Һомай мәңгегә аҡҡош булып ҡала, кешеләр янынан китә. Шулай ҙа йыл да Уралын һағынып, балаларын, аҡҡоштарын эйәртеп Уралға килә. Кешеләр шул замандарҙан аҡҡоштарҙы кәрҙәш, туған итеп ҡабул итә. Шуға, ышаныуҙар бу-*

*йынса, аҡҡошто атырға, итен ашарға ярамай.* Ф. Хисамитдинова.

**3.** *этн.* Әйле, ҡырғыҙ ырыуҙарының аймаҡтары. □ Название родовых подразделений башкир племён айле, киргиз.

**АҠҠОШ ЙЫРЫ** (Р.: лебединая песня; И.: swansong; Т.: son eser) *и. күсм.*

Таланттың һуңғы сағылышы. □ Лебединая песня *(о последнем проявлении таланта).* ■ *Һәҙиә Дәүләтшина үҙенең аҡҡош йыры — һуңғы әҫәре булған «Ырғыҙ» романы менән .. башҡорт әҙәбиәтенең абруйын күтәрҙе.* Ғ. Әмири.

**АҠҠОШОМ** (Р.: лебёдушка моя; И.: my darling; Т.: canım) *и. эйл.к.*

Яратып, иркәләп өндәшеү һүҙе, йәнем. □ *в притяж.ф.* Лебёдушка моя. ■ *Мөхәббәттең сафын, ынйыларға хасын алып кил, аҡҡошкайым.* Р. Янбулатова.

**АҠ ҠУРҒАШ** (Р.: олово; И.: tin; Т.: kalay) *и. мин.*

**1.** Еңел сүкелә торған көмөш һымаҡ аҡһыл төҫтәге металл. □ Олово.

**2.** *миф.* Ҡот ҡойоу йолаһында ҡулланылған мифлаштырылған металл. □ Мифологизированный металл, применяемый при магическом обряде *ҡот ҡойоу.* ■ *Эттән ҡурҡҡан икән, ҡурғашында ялбыр эт һүрәте төшә, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠҠЫРМАН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков.

**АҠЛАН** (Р.: поляна; И.: glade; Т.: alan) *и.*

Урман, ағаслыҡ араһындағы асыҡ ер. □ Поляна, полянка, лужайка. ■ *Уралымды байҡа бөйҙән-бөйгә: һәр аҡланы уның шау сәскә.* М. Уразаев. *Алп батыр баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.* Әкиәттән.

**АҠЛАНЫУ (аҡлан-)** *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **аҡлау I, 1.** *страд. от* **аҡлау I, 1**.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **аҡлау I, 2.** *возвр. от* **аҡлау I, 2**.

**3.** *күсм.* Ғәмәлгә ашыу, дөрөҫләнеү. □ Оправдывать. *Ышаныс аҡланды. Аҡланған ышаныс. Өмөт аҡланыу.*

**4.** *диал. ҡар.* **йәрәшеү.**

**АҠЛАУ I (аҡла-)** (Р.: белить; И.: whitewash; Т.: badana etmek) *ҡ.*

**1.** Аҡҡа буяу, аҡ төҫ биреү; ағартыу. □ Белить. // Побелка. *Мейес аҡлау. Өй аҡлау.* ■ *[Гөлйөҙөм] аҡ балсыҡ, бер күнәк эркет һыуы алып килеп, өйөнөң эсен аҡларға тотондо.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *күсм.* Ғәйепһеҙгә сығарыу, ғәйепһеҙ тип табыу. □ Оправдывать, реабилитировать. // Оправдание, реабилитация. *Аҡлап ҡалдырыу. Ғәйеплене аҡлау.* ■ *Әсәһенең тормош фәлсәфәһе, ирҙәргә мөнәсәбәте уға [Раушанияға] иҫкелек ҡалдығы булып тойолдо. Был — ғәфү итеү, хаслыҡты аҡлау, хыянатты өнһөҙ кисереү.* Р. Камал.

**3.** *күсм.* Файҙалы, дөрөҫ итеп танытыу. □ Оправдывать. // Оправдание. *Аҡсалата түләү үҙен тулыһынса аҡлай.*

**4.** *күсм.* Эш менән раҫлау, дөрөҫкә сығарыу. □ Показать, оправдать. // Оправдание. *Ышанысты аҡлау. Өмөттө аҡлау.* ■ *[Алтынбай:] Берүк ҡыумағыҙ. Мин аҡлармын ғәйебемде.* З. Ураҡсин. ● *Ил өмөтөн ир аҡлай.* Әйтем.

**АҠЛАУ II (аҡла-)** (Р.: появиться *(о бельме)*; И.: appear (of walleye); Т.: göz lekesi çıkmak) *ҡ.*

Аҡ төшөү, аҡ һалыу *(күҙгә ҡарата).* □ Появиться *(о бельме в глазу). Һыңар күҙе аҡлаған.* ■ *[Ғиниәтуллаға:] Айғыр бесеү, .. аҡлаған күҙҙең шекәрәһен ҡырҡыу кеүек ата-бабанан ҡалған им-том һөнәрҙәрен өйрәттем.* Й. Солтанов.

**АҠЛЫ** (Р.: с белыми пятнами; И.: white patterned; Т.: beyaz benekli) *с.*

Аҡ төҫө булған *(яулыҡ, тауарға ҡарата).* □ С белыми пятнами, горошинами *(о материале). Аҡлы яулыҡ.* ■ *Аҡлы ситса*

*күлдәгемдең еңе тар беләгемә.* Халыҡ йырынан.

**АҠЛЫҒЫУ (аҡлығ-)** *к. диал. кар.* **ағыу**. *Күҙҙәремдән йәштәрем аклыкты.*

**АҠЛЫҠ (аҡлығы)** (Р.: белизна; И.: whiteness; Т.: beyazlık) *и.*

**1.** Аҡ төҫ. □ Белизна. *Ҡарҙың аҡлығы. Тештең аҡлығы.* ■ *Әллә томан тауҙар араһында, әллә ҡайындарҙың аҡлығы.* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Сафлыҡ, таҙалыҡ. □ Чистота. *Күңел аклығы.* ■ *Тынмай ағыр шишмә, сафлык ташыр Аҡмулланан алған аклыктан.* Ҡ. Аралбай.

**АҠЛЫ-ҠАРАЛЫ** (Р.: белые и чёрные тона; И.: black and white; Т.: beyaz ve siyahlı) *с.*

Аҡ һәм ҡара төҫтәр булған. □ Имеющий белые и чёрные тона. *Аҡлы-ҡаралы күлдәк.*

**АҠМА** (Р.: стремнина; И.: stream; Т.: ivinti yeri) *и.*

**1.** Көслө ташҡын булып аҡҡан ямғыр йәки ҡар һыуы. □ Стремнина, поток. *Йылғаның аҡмаһы. Аҡмаға эләгеү.*

**2.** *диал.* Ике күл йәки диңгеҙҙе бер-береһенә тоташтырып торған тар һыу; боғаҙ. □ Пролив.

**3.** *мед. диал.* Тамаҡ, ҡолаҡ аҫты, муйын биҙҙәрендәге ағып торған шешек; ҡылауыр. □ Туберкулёз желез.

**АҠ МАЙ** (Р.: сливочное масло; И.: butter; Т.: tereyağı) *и.*

**1.** Ҡаймаҡты туҡып айранынан айырып алынған туҡлыҡлы аҙыҡ. □ Сливочное масло. ■ *[Өмәселәргә] Муйылбикәнең һурпалы ит ҡурҙағы ла, тары буткаһы ла, йомғаҡлы аҡ майҙары ла бик тәмле тойолдо.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *диал.* Ҡаймаҡҡа ҡатыҡ ҡушып, көбөлә бешеп яһалған май; күбек май. □ Взбитое масло особого приготовления *(в кадушке взбивается сметана с катыком).*

**АҠ МАЛ** (Р.: кони, лошади; И.: holy cattle; Т.: kutsal hayvan) *и. миф.*

Таҙа, изге мал, йылҡы малы. □ Кони, лошади *(реликт тотемизма). Атайымдар аҡ мал тотто күп итеп.*

**АҠМАН-ТОҠМАН** (Р.: поздний весенний буран; И.: late spring blizzard; Т.: sayılı fırtına) *и.*

Март уртаһынан һуң була торған көслө буран. □ Поздний весенний буран с мокрым снегом. ■ *Көн ныклап боҙолорға уйлай, ахыры. Бынан бер йыл элек тә аҡман-тоҡман тип йөрөтөлгән буран шулай башланып киткәйне.* Я. Хамматов.

**АҠМАР** *и. диал. кар.* **аҡма 1.**

**АҠ МУНСА** (Р.: белая баня; И.: bathhouse with a chimney; Т.: hamam) *и.*

Мөрйәле мейес ултыртылған мунса. □ Белая баня. *Аҡ мунса төҙөү.*

**АҠМЫЙЫҠ (аҡмыйығы)** (Р.: белоус; И.: matgrass; Т.: nard otu) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған тар, ҡаты ҡыяҡлы, нәҙек кенә һирәк башаҡлы күп йыллыҡ үҫемлек *(урман яғындағы болондарҙа үҫә).* □ Белоус (лат. *Nardus stricta*).

**АҠ ӨЙРӘК (өйрәге)** (Р.: луток; И.: species of wild duck; Т.: sütlabi) *и. зоол.*

Нәҙек оҙон моронло, яҡшы сума торған супайлы өйрәк *(башы, арҡаһы, ҡойроғо ҡара, бүтән ере аҡ)*; аҡсабан. □ Луток *(вид дикой утки)* (лат. *Mergellus albellus*). ■ *Аҡ өйрәктең башында ҙур ғына аҡ бүрке бар.* Э. Ишбирҙин.

**АҠРАЙ** *с. диал. кар.* **аҡыш**.

**АҠРАЙ КҮҘ** (Р.: глаза навыкате; И.: goggle-eyed; Т.: patlak göz) *и.*

Аҡыш күҙ; аҡайып торған күҙ. □ Глаза навыкате.

**АҠРАЙТЫУ (аҡрайт-)** (Р.: таращить; И.: goggle (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

Ҙур итеп, ағын әйләндереп асыу *(күҙҙе)*; аҡайтыу, аҡшайтыу. □ Таращить, пучить. *Күҙҙе аҡрайтыу.*

**АҠРАЙЫУ (аҡрай-, аҡрая)** (Р.: таращиться; И.: stare (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

**1.** Ҙур булып, түңәрәкләнеп асылыу *(күҙгә ҡарата);* аҡайыу, аҡшайыу. □ Таращиться, пучиться *(о глазах). Аҡрайып ҡарау.*

**2.** Асыу менән ҡарау. □ Смотреть с гневом, злобно. ■ *Төңөлдөк әбей акрайып бер караны ла, арты менән әйләнеп, үзенең тәсбихын шылтыратырга тотонды.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Ап-асыҡ булып айырылып, күренеп тороу. □ Чётко виднеться, вырисовываться. *Ҡара ерлектә аҡрайып күренгән тап.*

**АҠРАП I (аҡрабы)** [ғәр. عقرب ‘саян’] (Р.: акраб; И.: ancient name of November; Т.: Gakrab) *и.*

Ҡояш календары буйынса, һигеҙенсе айҙың ғәрәпсә исеме (22 октябрь — 21 ноябрь); ғәҡрәп. □ Акраб (восьмой месяц солнечного года; 22 октября — 21 ноября). ● *Аҡрап башында ҡар яуһа, 40 көндән ҡар ятыр.* Һынамыш.

**АҠРАП II (аҡрабы)** *и. диал. ҡар.* **нәсел-нәсәп**.

**АҠ РИЗЫҠ (ризығы)** *и. ҡар.* **аҡ III.**

**АҠРЫЙ** (Р.: пучеглазый; И.: big-eyed; Т.: patlak gözlü) *с.*

Ағы әйләнеп ҙур булып асылып торған; аҡыш. □ Пучеглазый. *Аҡрый күҙ.*

**АҠРЫМ** (Р.: сколько; И.: some; Т.: kadar) *бәйл. диал.*

Саҡлы, тиклем, ҡәҙәр. □ Сколько, несколько. *Ни аҡрым ер киттек.*

**АҠРЫН I** (Р.: медленно; И.: slowly; Т.: yavaş) *р.*

**1.** Бәләкәй генә тиҙлектә, яй; әкрен. □ Медленно.

**2.** Талғын ғына иҫкән, еңелсә *(ел тураһында).* □ Умеренный. ■ *Аҡрын иҫкән көньяк еле күҙ күреме йәйелеп ятҡан йәшеллек диңгеҙен яй ғына .. тулҡынландыра ине.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Ишетелер-ишетелмәҫ итеп; тын ғына. □ Тихо. ■ *Арбаға салҡан төшөп яттым да аҡрын ғына бик таныш булған ауыл көйҙәренән берәүһен көйләйем.* С. Агиш.

**4.** Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә, һаҡ. □ Осторожно, тихо. ■ *[Бабсаҡ] ысын батыр арыҫландан ҡурҡырмы тип, аҡрын ғына был йыртҡысҡа яҡынлашты.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**5.** Оҙаҡҡа һуҙылып, бик яй. □ Медленно. ■ *Ташлы тупраҡ нисектер туң һымаҡ ине. Етмәһә, дөгө ярмаһындай ваҡ ҡына борсаҡ яуа. Ул да бик аҡрын ирей.* Ә. Вахитов.

**АҠРЫН II** (Р.: тише; И.: slowly; Т.: yavaş) *ымл.*

*Ниндәйҙер* эште тыйғанда, һаҡ булырға өндәгәндә әйтелә. □ Тише *(выражает призыв к осторожности или прекратить шум). Аҡрын, йығылаһың бит.* ■ *[Һаҡсы — Хәсәнгә:] Аҡрын, малай, шауламa.* Ә. Фәткуллин.

**АҠРЫНАЙТЫУ (аҡрынайт-)** (Р.: замедлять; И.: slow down; Т.: yavaşlatmak) *ҡ.*

**1.** Аҡрынға әйләндереү, аҡрын итеү. □ Замедлять, замедлить, убавлять, убавить *(например, скорость).*

**2.** Тауыш кимәлен кәметеү. □ Приглушать, делать более тихим. *Тауышты аҡрынайтыу.*

**АҠРЫНАЙЫУ (аҡрынай-, аҡрыная)** (Р.: замедляться; И.: become slow; Т.: yavaşlamak) *ҡ.*

**1.** Аҡрынға әйләнеү, аҡрын булыу. □ Замедляться, убавляться. *Аҙым аҡрынайыу.*

**2.** Тауыш кимәле кәмеү. □ Затихать, утихать. *Музыка тауышы аҡрынайҙы.*

**АҠРЫНЛАП** (Р.: не торопясь; И.: slowly; Т.: yavaş) *р.*

**1.** Аҡрын ғына, ашыҡмай, яй ғына. □ Не торопясь, медленно. ■ *Аҡрынлап баҫылған дауыл кеүек, Үмәр ҡарттың да асыуы аҡрынлап кәмене.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Һиҙҙермәй, ипләп кенә. □ Потихоньку, незаметно. ■ *Эштең бөтөнләй башҡаса төҫ алып китәсәген күргәс, секретары менән икәүләп, аҡрынлап ҡына ситләшә башланылар.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** *күсм.* Бер сама менән, һәүетемсә. □ Тихо, мирно, без суеты. *Аҡрынлап эшләп йөрөйөм әле.*

**АҠРЫНЛАУ (аҡрынла-)** (Р.: замедляться; И.: become slower; Т.: yavaşlamak) *ҡ.*

Аҡрын ғына йөрөү, яй ғына хәрәкәт итеү. □ Замедляться.

**АҠСА** (Р.: деньги; И.: money; Т.: para) *и.*

Алыш-бирештә хаҡ бирәмеге булып хеҙмәт иткән ҡиммәтле ҡағыҙ йәки металл. □ Деньги. *Алтын аҡса. Көмөш аҡса. Баҡыр аҡса. Ҡағыҙ аҡса. Яңы аҡса. Ялған аҡса. Аҡса берәмеге. Аҡса сығымдары.* ■ *[Вил] китап йыйҙы. Ашарына йәлләһә лә, китап алыуға аҡса йәлләмәне.* Ә. Әминев. ● *Төшөңдә алтын, баҡыр аҡса күрһәң, оло кешегә хәйер бирмәк кәрәк, юғиһә насар була.* Ырым. *Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.* Мәҡәл.

♦ **Аҡса ашау** хөкүмәт иҫәбенән даими түләнгән пособиены, пенсияны һ.б. алып тороу. □ Получать пособие, пенсию от государства. **Аҡсаны көрәп алыу** күп аҡса алып эшләү. □ Получать много денег. **Аҡса тоғо** аҡса йыйып ятҡан кешегә ҡарата. □ Толстосум, денежный мешок. **Аҡса түгеү** бушҡа күпләп аҡса тотоноу. □ Тратить, расходовать много денег. **Аҡса һуғыу** аҡсаны күпләп табыу. □ Зарабатывать много денег. **Еңел (оҙон) аҡса** көс түкмәйенсә ҡулға килеп ингән ҙур аҡса. □ Длинный рубль *(о лёгком и большом заработке).*

**АҠСАЙ** (Р.: белая сова; И.: polar owl; Т.: kar baykuşu) *и. зоол. диал.*

Аҡ ябалаҡ. □ Белая сова (лат. *Bubo scandiacus*).

**АҠ-САЛ** (Р.: белёсый; И.: whitish; Т.: ak) *с.*

Аҡ *(күберәк сәс, төк йәки йөнгә ҡарата).* □ Белёсый, седой. ■ *Аҡ-сал ғына яурын, ала ҡанат Урал ғына тауҙың бөркөтө.* Халыҡ йырынан.

**АҠСАЛАТА** (Р.: наличными деньгами; И.: in cash; Т.: peşin para ile) *р.*

**1.** Ҡулаҡса көйө, ҡулаҡса менән. □ Наличными деньгами. *Аҡсалата премия. Дәүләттең аҡсалата табышы. Халыҡтың аҡсалата табышы. Аҡсалата һаҡламдар. Аҡсалата аванс. Аҡсалата биреү. Аҡсалата иҫәпләшеү.*

**2.** Аҡса иҫәбенә, аҡсаға бәйләү. □ В денежном выражении. *Аҡсалата баһа. Хаҡтың аҡсалата формаһы. Етештерелгән әйберҙең аҡсалата күрһәткесе. Килемдең аҡсалата күрһәткестәре. Аҡсалата иҫәпләп сығарыу.*

**АҠСАЛЛАНЫУ (аҡсаллан-)** (Р.: бледнеть; И.: become pallid; Т.: soluklaşmak) *к.*

Аҡ төҫкә инеү; ағарыу. □ Бледнеть, становиться белым. ■ *Береһенән-береһе уҙҙырырҙай булып емелдәгән йондоҙҙар аҡсаллана барып бер-бер артлы һүнделәр.* Т. Килмөхәмәтов.

**АҠ САЛМАЛЫ ҠАРТ** (Р.: дух двора, дворовой; И.: spirit of court-yard's master; Т.: avlunun ruhu) *и. миф.*

Ишек алдын, аҙбарҙы һаҡлаусы изге зат. □ Дух-хозяин двора. *досл.* Старик в белой чалме.

**АҠСАЛЫ I** (Р.: с деньгами; И.: moneyed; Т.: paralı) *с.*

**1.** Аҡсаһы булған, аҡсаға бай. □ Имеющий много денег, с деньгами, денежный. *Аҡсалы кеше. Аҡсалы эшҡыуарҙар.*

**2.** Түләүле, аҡсалата түләнгән. □ Связанный с деньгами, оплачиваемый. *Аҡсалы уйын. Аҡсалы эш.*

**АҠСАЛЫ II** (Р.: богач; И.: rich man; Т.: zengin) *и.*

Бай кеше, аҡсаһы булған кеше. □ Богач, богатый человек. ■ *Ғөмүмән, бер нәмәне аңланым — эш кешеләре, үҙен хөрмәт иткәндәр, аҡсалылар «гаишник»тар менән һүҙ көрәштереп ваҡытын әрәм итмәй.* «Йәшлек», 28 февраль 2008. ● *Аҡсалының эше күп, баҡсалының ашы күп.* Әйтем.

**АҠСА-МАЛ** (Р.: богатство; И.: wealth; Т.: mal-mülk) *и. йыйн.*

Байлыҡ, дәүләт. □ Богатство, состояние. *Аҡса-мал туплау.*

**АҠСАРЛАҠ (аҡсарлағы)** (Р.: чайка; И.: mew; Т.: martı) *и. зоол.*

**1.** Уртаса ҙурлыҡтағы, оҙон суҡышлы, ҡыйғас ҡанатлы, балыҡ менән туҡланған һыу ҡошо. □ Чайка (лат. *Larus ridibundus*). *Диңгеҙ аҡсарлағы.* ■ *Аҡсарлаҡ һыу буйҙарында йәшәй. Бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөүсе ҡош.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *миф.* Тотем ҡош. □ Чайка, тотемная птица. ■ *Торнаның, аҡсарлаҡтың ите хәрәм, уны ашамайҙар. Был изге ҡоштар.* Башҡорт мифологияһынан.

**АҠСА СӘСЕҮ (аҡса сәс-)** *ҡ. этн. диал. ҡар.* **аҡса һибеү.**

**АҠСА ҺИБЕҮ (аҡса һип-)** (Р.: обряд бросания монет; И.: ethnographic rite; T.: düğün âdeti) *ҡ. этн.*

Ҡыҙҙы оҙатып алып киткәндә, кейәүҙең тинлек аҡсалар һибеү йолаһы. □ Обряд бросания монет женихом во время проводов невесты.

**АҠСАҺЫҘ** (Р.: безденежный; И.: empty pockets; T.: parasız) *с.*

Аҡсаһы булмаған. □ Безденежный. *Аҡсаһыҙ кеше. Аҡсаһыҙ эш.*

**АҠСАҺЫҘЛЫҠ** (Р.: безденежье; И.: penniless; T.: parasızlık) *и.*

Аҡса бөтөү, аҡса юҡлыҡ. □ Безденежье.

**АҠ СЕЛӘН** *и. ҡар.* **селән.**

**АҠСОҒА** *и. диал. ҡар.* **йөлөн.**

**АҠСУҒА** (Р.: молоки; И.: soft roe; T.: süt) *и.*

Балыҡтың аталыҡ һөтө. □ Молоки.

**АҠСҮП** (Р.: бельмо; И.: walleye; T.: akçıl gözbebeği) *и. диал.*

Күҙҙең ҡараһын ҡаплаған аҡ шекәрә; **аҡ V, 1**. □ Бельмо.

**АҠСЫУАШ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мырҙалар ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир рода мурзалар.

**АҠ СӘЛЛӘЛЕ ҠАРТ** *и. миф. ҡар.* **аҡ салмалы ҡарт.**

**АҠ СӘПСЕК** (Р.: белая трясогузка; И.: wagtail; T.: ak kuyruksallayan) *и. зоол.*

Арҡаһы аҡһыл буҙ, түше, түбәһе ҡара, ҡорһағы менән бите аҡ төҫтәге сәпсек. □ Белая трясогузка (лат. *Motacilla alba*). ■ *Өс көн элек кенә һыу турғайҙары — аҡ сәпсектәр ҡойроҡтары менән боҙ ярырҙай булып сәпсенәләр ине.* Г. Яҡупова. ● *Аҡ сәпсек ҡойроғо менән боҙға һуҡһа, оҙаҡламай боҙ китә.* Һынамыш.

**АҠ СӘСКӘ** (Р.: ромашка; И.: camomile; T.: papatya) *и. бот.*

**1.** Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, сәскәһенең уртаһы һары, тар-тар ғына таждары аҡ булған тетмәкәй япраҡлы үҫемлек; ромашка. □ Ромашка (лат. *Matricaria*). ■ *[Мәүлиҙә өҫтәп ҡуйҙы:] Аҡ сәскәләр килтерегеҙ, ромашкалар.* Г. Яҡупова.

**2.** *ҡар.* **елбәгәй II.**

**АҠ СӘТЛӘҮЕК** (Р.: диморфант; И.: prickly castor oil tree; T.: kalopanax) *и. бот.*

Аҡһыл һары ваҡ сәскә атҡан, һутлы емеш биргән йылы яҡ ағасы. □ Диморфант (лат. *Kalopanax*).

**АҠТА** *и. диал. ҡар.* **ҡаптал 1.**

**АҠТАБАН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-тамьянцев.

**АҠТАЙ** (Р.: тётя; И.: aunt; T.: hala) *и.*

**1.** *диал.* Атайҙың иң өлкән ҡыҙ туғаны. □ Тётя.

**2.** *этн.* Үҫәргән, дыуан ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Название родовых подразделений башкир-усерган и дуванцев.

**АҠТАЙЛАҠ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер, үҫәргән, юрматы ырыуҙарына ҡараған башҡорт аймаҡтарының исеме. □ Название родовых подразделений башкир-тангаурцев, башкир-усерган, юрматинцев.

**АҠТАМЫР** (Р.: пырей ползучий; И.: couch grass; T.: ayrık otu) *и. бот.*

Ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған, болонъяландарҙа, урман ситендә, баҡсаларҙа таралып үҫкән оҙон аҡ тамырлы күп йыллыҡ үҫемлек; зәлеш. □ Пырей ползучий (лат. *Elytrigia repens*). *Дала аҡтамыры. Ҡылсыҡлы аҡтамыр. Йөнтәҫ аҡтамыр. Үрмә аҡтамыр. Баҫыу аҡтамыр менән ҡапланған.* ■ *Беҙҙең халҡыбыҙ аҡтамыр кеүек. Уны бөтөрөргә*

*тип ҡыркалар, киҫәләр, йолкҡослап ташлайҙар. Әммә бер бәләкәй генә киҫәге ҡалһа ла, уңайлы мәле еткәс, ул яңынан бар баҡсаны баҫа.* Ә. Вәлиди. ● *Аҡтамыр атҡа булған үсен һабандан алыр.* Әйтем.

**АҠ ТАП (табы)** (Р.: белое пятно; И.: white spots; Т.: bilinmeyen meseleler) *и.*

Бер ҙә тикшерелмәгән йәки аҙ тикшерелгән мәсьәлә. □ Неизвестное, белое пятно. *Тарихтың аҡ таптары.*

**АҠТАР I** (Р.: белые; И.: the Whites; Т.: beyazlar) *и.*

Шахмат, шашка уйынында асыҡ төҫтәге фигуралар. □ Белые *(шашки, шахматные фигуры светлого цвета в отличие от чёрных). Аҡтар менән уйнау.*

**АҠТАР II** (Р.: белые; И.: White (guard); Т.: beyazlar) *и. тар.*

Рәсәйҙә Граждандар һуғышы һәм 1918–1920 йылдарҙағы интервенция ваҡытында Совет власына ҡаршы сығыш яһаған ижтимағи-сәйәси көстәр исеме. □ Белые *(название общественно-политических сил и движений, выступавших против советской власти в Российском государстве во время Гражданской войны и военной интервенции 1918–1920 гг.).*

**АҠТАРТЫУ (аҡтарт-)** *к. йөкм. ҡар.* **аҡтарыу**. *понуд. от* **аҡтарыу**.

**АҠТАРЫЛЫУ (аҡтарыл-)** (Р.: вырываться; И.: make havoc; Т.: koparılmak) *к.*

**1.** *төш. ҡар.* **аҡтарыу 1.** *страд. от* **аҡтарыу 1**.

**2.** Төбөнән әйләнеп ҡубыу; ҡуптарылыу. □ Разворачиваться, вырываться. ■ *Көслө ел-дауыл ҡутәрелеп китә. Ул арала булмай был тирәк, тамырынан аҡтарылып, диңгеҙгә ауа.* Әкиәттән.

**3.** Аҫты-өҫкә килеп ҡыйрау йәки болары; ҡутарылыу. □ Переворачиваться, выворачиваться. *Аҡтарылып ятыу.*

**АҠТАРЫНЫУ (аҡтарын-)** (Р.: рыться; И.: rummage; Т.: karıştırmak) *к.*

Ҡаҙынып, соҡсоноп *нимәлер* эҙләү; ҡутарыныу. □ Рыться, шарить, копаться. *Журналдарҙа аҡтарыныу. Һандыҡта аҡтарыныу.* ■ *Ул [Тимербулат] йүгереклэп, аҡтарынып, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠТАРЫУ (аҡтар-)** (Р.: шарить; И.: ransack; Т.: karıştırmak) *к.*

**1.** Аҫтын-өҫкә килтереп ҡутарыу. □ Шарить, обшаривать, переворошить. *Сумканы аҡтарыу.* ■ *[Байғужа менән Буранбай] сумкаларын тағы ла аҡтарып, .. нәмәләрен барлап рәткә килтерҙеләр.* Д. Юлтый.

**2.** Аҫтын-өҫкә әйләндереп ҡыйратыу. □ Разворотить, разрушить. ■ *Блиндажды снаряд аҡтарып ырғытты.* Д. Юлтый.

**3.** Төбө-тамыры менән йолҡоу. □ Выворотить, вырывать. *Дауыл ағастарҙы аҡтарып ташлаған.* ■ *Тотош тамырынан аҡтарып ташламаһаң, аҡтамыр бөтә ерҙе баҫа, игенде үҫтермәй.* Б. Бикбай.

**4.** Береккән нәмәне тартып айырыу, ҡуптарыу. □ Отдирать. *Иҙән таҡтаһын аҡтарыу.*

**5.** Ҡатлы-ҡатлы *нимәнелер* аралап, төрлө ерҙән ҡарау. □ Рыться *в чём. Китап аҡтарыу. Ҡағыҙ аҡтарыу.*

**АҠТАТЫР** (Р.: солончак; И.: alkali soil; Т.: alkali toprak) *и.*

Һыуҙа иреүсе тоҙҙары булған тупраҡ; татырлы ер. □ Солончак. *Аҡтатыр үҫемлектәре.* ■ *Ялан еркәйҙәре аҡтатыр, аҡтатырҡайҙарҙа мал ятыр.* Халыҡ йырынан.

**АҠТАУ ҠАҢЛЫ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡаңлы ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение канлинцев.

**АҠТАШ** *и. диал. ҡар.* **аҡбур**.

**АҠ ТЕЛӘК** (Р.: благопожелание; И.: rite to make the sun appear; Т.: iyi dilek) *и. миф.*

**1.** Изге теләк. □ Благопожелание.

**2.** Ышаныуҙар буйынса, оҙаҡҡа һуҙылған ямғырлы көндәрҙә ҡояш теләү йолаһы. □ Обряд вызывания солнца при затяж-

ных дождях. ■ *Көн оҙаҡ яуынлап китһә, аҡ теләккә сығалар.* Ә.Шәмиғолова.

**АҠ ТИРМӘ** (Р.: белая юрта; И.: white jurt; Т.: beyaz çadır) *и.*

Ҡәҙерле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән тирмә. □ Юрта для почётных гостей. *досл.* Белая юрта. ■ *Туры атты егет, күҙ тейеүҙән ҡурҡып, ошо аҡ тирмәлә йәшергән булған.* Әкиәттән.

**АҠ ТИРӘК** (Р.: белый тополь; И.: White Poplar; Т.: ak kavak) *и.*

**1.** *бот.* Тирәктәр төрөнә ҡараған япраҡлы ағас. □ Тополь белый, тополь серебристый (лат. *Populus alba*).

**2.** *миф.* Изге табыныу ағасы. □ Белый тополь *(священное дерево)*.

**3.** *этн.* Ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының ырыу ағасы. □ Родовое дерево отдельных башкирских родов. ■ *Түкәндәр менән ҡунаҡтар ауыл урынындағы ырыу ағасы — аҡ тирәк янында ырыу атрибуттары, ауылды нигеҙләүсенең исем-аты яҙылған иҫтәлекле тақтаны, «Шәғәле Шаһман ырыуы» тигән һүҙҙәр яҙылған таҡтаташты тантаналы рәүештә асты.* «Юшатыр», 27 июль 2010.

**АҠ ТИРӘК, КҮК ТИРӘК** (Р.: название детской национальной игры; И.: kind of children's game; Т.: çocuk oyunu) *и. этн.*

Балалар уйыны исеме. □ Название детской национальной игры. ■ *Командаларға бүленеп етеҙлектә лә ярыштылар, «Аҡ тирәк, күк тирәк», «Йәшерәм яулыҡ», «Аҡтар-ҡыҙылдар», «Йөҙөк һалыш» кеүек балалар уйындарын да кемуҙарҙан уйнаnылар.* «Даирә», № 98, 2010.

**АҠТОРМА** (Р.: хрен; И.: horseradish; Т.: yabanturpu) *и. бот. диал.*

Керән. □ Хрен.

**АҠ ТӨЛКӨ** (Р.: песец; И.: polar fox; Т.: kutup tilkisi) *и. зоол.*

Тиреһе аҡ төҫтә булған йәнлек. □ Песец (лат. *Alopex lagopus*). ■ *Оҙон йөнлө йәнлектәр — аҡ төлкө, урман эте, төлкө, бүре, һеләүһен, бурһыҡ, һыуһар һәм башкалар.* «Башҡортостан», 15 март 2011.

**АҠ ТӨНДӘР** (Р.: белые ночи; И.: white nights; Т.: beyaz geceler) *и.*

Ҡараңғы төшөп тормай, киске эңер туранан-тура таңға күскән төньяҡтағы йәйге төндәр. □ Белые ночи.

**АҠ ТӨШӨҮ (аҡ төш-)** *к. кар.* **аҡ V.**

**АҠ ТУҠРАНБАШ** (Р.: клевер белый; И.: white clover; Т.: yonca) *и. бот.*

Күп йыллыҡ йомро башлы сәскәле үҫемлек. □ Клевер белый (лат. *Trifolium repens*). ■ *Ер йөҙөндә меңдән ашыу баллы үҫемлек төрө бар, әммә бал ҡорттары уларҙың ҡырк-иллеһенән генә тат йыя; баллы үҫемлектәргә ҡарабойҙай, көнбағыш, люцерна, аҡ туқранбаш, рапс, ҡандала үләне, аҡ акация, ҡурай еләге, ҡара көртмәле, эт муйылы, йүкә һ.б. инә.* «Таң», 17 август 2011.

**АҠ ТУРҒАЙ** (Р.: белая лазоревка; И.: willowbiter; Т.: gök mavisi baştankara) *и. зоол.*

Ҡарабаш турғайҙар ғаиләһенә ҡараған, ҡанат-ҡойроғо зәңгәрһыу, башҡа ере аҡ төҫтәге ваҡ урман турғайы; буран турғайы. □ Белая лазоревка (лат. *Cyanistes cyanus*). ■ *Аҡ турғай — өҙлөкһөҙ һикергеләп йөрөүсе ҡошсоҡ.* Э. Ишбирҙин.

**АҠТҮБӘТӘЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Гәрә ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир рода гэрэ.

**АҠТҮШ** (Р.: оляпка; И.: white throated dipper; Т.: dere kuşu) *и. зоол.*

Шишмә һәм йылға буйҙарында йәшәгән, байтаҡ ваҡыт һыу эсендә тора алған, йылы яҡҡа күсмәй торған турғай; һыу турғайы. □ Оляпка, воробей водяной (лат. *Cinclus cinclus*). ■ *Аҡтүштең ҙурлығы сыйырсыҡтай. Ояһын мүктән эшләй, һыу өҫтөндәге ботаҡтарға, тамырҙарға, өңөлгән яр йәки гөрләүектәр аҫтына ҡора.* Э. Ишбирҙин.

**АҠТЫҠ I** (Р.: последний; И.: final; Т.: son) *с.*

Иң һуңғы, иң аҙаҡҡы. □ Последний, конечный. *Аҡтыҡ таяныс. Аҡтыҡ һыныҡты бүлеп биреү.* ■ *Аҡтыҡ малдан яҙыуы бигерәк*

*тә ҡыйын шул.* Я. Хамматов. *[Тәлғәт:] Минең түҙемем һынды бөгөн, актыҡ сыҙамым ҡалманы: мин айырылам!* Р. Камал.

**АҠТЫҠ II (аҡтығы)** (Р.: остаток; И.: final; Т.: son) *и.*

*Ниҙең* дә булһа һуңғы өлөшө, иң һуңы, иң аҙағы. □ Остаток, последний кусок, последняя часть, остатки; конец. *Икмәктең аҡтығы.* ■ *Ул үлем ҡоралдарын .. беҙ алып ҡулға, яһарбыҙ һәр һуғыштың аҡтығын.* Т. Йәнәби.

♦ **Аҡтығын ашағыры** ҡарғағанда әйтелә. □ *прокл.* Чтоб ему подавиться!

**АҠТЫҠҠЫ** (Р.: последний; И.: final; Т.: en son) *с.*

Бөтөү кимәленә еткән; иң һуңғы, аҡтыҡ. □ Последний, конечный. ■ *Ғүмеренең аҡтыҡҡы көндәренең береһендә ул, серем итеп алайым тип кенә ятҡан еренән ҡапыл йоҡлап, мәңгелеккә китә.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010.

**АҠТЫУ** (Р.: эрозия кожи у животных; И.: skin erosion; Т.: hayvan derisinin aşınması) *и. вет.*

Хайуандарҙың тире ауырыуы. □ Эрозия кожи у животных.

**АҠ ТӘТӘЙ** *и. бот. диал. ҡар.* **аҡ сәскә.**

**АҠҺАЙ-ТУҠҺАЙ** (Р.: хромая; И.: limping; Т.: topallayarak) *р.*

Сатанлай-сатанлай; һылтыҡлап. □ Хромая, ковыляя. *Аҡһай-туҡһай йөрөү.* ■ *Ғәрифә [әбей] бөтә сабырлығын юғалтып, аҡһай-туҡһай Шакир ағай янына килде.* Ш. Шәһәр. *Хәким ағай, һыңар ҡулы менән арҡаһына тоҡ йөкмәп, һыңарын кәкре таяғына таянып, аҡһай-туҡһай сәскескә илтте, тоҡто бушатып килде.* Й. Солтанов.

**АҠҺАҠ I** (Р.: хромой; И.: lame; Т.: topal) *с.*

Аяғы зәғиф булып, тигеҙ баҫа алмаған; сатан, һылтыҡ. □ Хромой, хромоногий. *Аҡһаҡ бабай.* ● *Көтөү боролғанда, аҡһаҡ һарыҡ алға сыға.* Әйтем.

**АҠҺАҠ II (аҡһағы)** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-усерган.

**АҠҺАҠАЛ** (Р.: аксакал; И.: wise man; Т.: aksakal) *и.*

**1.** Күпте күргән, күпте белгән оло кеше. □ Аксакал, мудрец. ■ *Туйға саҡырылған ҡунаҡтар килә башланы. Аҡһаҡалдар түргә уҙҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** Ырыу башында торған хөрмәтле оло ир. □ Аксакал, старейшина рода. *Аҡһаҡалдар йыйыны.* ■ *Аҡһаҡал илде афәттән ҡотҡарыу тураһында көнө-төнө уйланып, ырыуҙағы ир-егеттәрҙе йыя.* Ә. Вахитов. *Аҡһаҡалдар кеүек олпатһығыҙ, ә үҙегеҙ ниндәй ябайҙар.* Р. Хәйри.

**АҠҺАҠЛАУ (аҡһаҡла-)** (Р.: хромать; И.: limp; Т.: topallamak) *ҡ.*

Аҡһай-аҡһай атлау, аҡһай-аҡһай баҫыу; сатанлау, һылтыҡлау. □ Хромать, прихрамывать, ковылять. *Аҡһаҡлай башлау. Аҡһаҡлап атлау.* ■ *Рәхимә көймәнән көскә шыуып төштө, аҡһаҡлай-аҡһаҡлай .. ҡуҙғалып, китә алмай туҡтаны.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠҺАҠЛЫҠ (аҡһаҡлығы)** (Р.: хромота; И.: lameness; Т.: topallık) *и.*

Аҡһаҡ булғанлыҡ, сатанлыҡ. □ Хромота.

**АҠҺАҠ-ТУҠҺАҠ** (Р.: хромоногие; И.: the lame; Т.: topallar) *с. йыйн.*

Аҡһаҡтар, йыйын аҡһаҡ. □ Хромоногие, хромые. *Аҡһаҡ-туҡһаҡ аттар ҡалған.*

**АҠ ҺАЛЫУ (аҡ һал-)** *ҡ. ҡар.* **аҡ V, 1**.

**АҠҺАҢЛАУ (аҡһаңла-)** *ҡ. ҡар.* **аҡһаҡлау**.

**АҠҺАП-ТУҠҺАП (аҡһа-туҡһа-)** (Р.: хромая; И.: limping; Т.: topallayarak) *р.*

Аҡһай-аҡһай саҡ баҫыу; һылтыҡлау. □ Хромая. ■ *Әле аяҡ бик ныҡ төҙәлеп етмәгән. Аҡһап-туҡһап һыу буйына төшәм дә, тағы ҡайтып ятам.* Д. Юлтый.

**АҠҺАТЫУ (аҡһат-)** (Р.: делать хромым *кого*; И.: render lame; Т.: topallatmak) *ҡ.*

Имгәтеп, аҡһаҡ итеү; сатанлатыу. □ Делать хромым *кого*; калечить ногу *кому*. ■ *Сәҙе генә буйы ай актатыр, ат аяккайҙарын акһатыр.* Халыҡ йырынан.

**АҠҺАУ (аҡһа-)** (Р.: хромать; И.: limp; Т.: topallamak) *ҡ.*

**1.** Аяҡ ауыртып тигеҙ баҫа алмау; сатанлау. □ Хромать, прихрамывать. *Ат акһай. Акһап йөрөү. Акһай башлау. Аяғы һынып акһау.*

**2.** *күсм.* Тейешле кимәлдә бармау *(эшхәлгә ҡарата)*. □ Отставать, хромать *(о деле, дисциплине, качестве продукции)*. *Тәртип акһай. Эш акһай.* ■ *Быға карап хеҙмәт ритмы акһаманы.* Ә. Байрамов.

**АҠҺЕРКӘ** *и. диал. ҡар.* **аш һеркәһе.**

**АҠ ҺИБЕҮ (аҡ һип-)** (Р.: ритуальное тушение пожара молочными продуктами; И.: ritual extinguishing of fire with dairy products; Т.: töre: ateşi sütle söndürmek) *ҡ.*

**1.** *миф.* Ышаныуҙарға ярашлы, янғынды һөт аҙыҡтары һибеп һүндереү. □ Ритуальное тушение пожара молочными продуктами.

**2.** *этн.* Өй бәхетле, ырыҫлы, ҡотло булһын тип, нигеҙгә аҡ һибеү. □ Поливать молочными продуктами фундамент дома с пожеланиями счастья, благополучия.

**АҠҺӨЙӘК (аҡһөйәге)** (Р.: голубая кровь; И.: the noble; Т.: asilzade) *и.*

**1.** Йәмғиәттә юғары ҡатлам, хаким синыфтың өҫтөнлөклө ҡатламы, ырыу башлыҡтары; аристократия. □ Аристократия, белая кость, голубая кровь. ■ *[Әхмәҙулла:] Унда урыҫтың акһөйәктәрен генә алалар, ти.* З. Ураҡсин.

**2.** *күсм.* Ҡара эш эшләргә яратмаған кеше, артыҡ наҙлы кеше. □ Белоручка. ■ *[Гөлбикә:] Ул [Гөлнур] ниткән акһөйәк? Өй йыйыштырмай, аш-һыу әҙерләмәй, гел кыйшанлауын белә.* Р. Ниғмәти.

**3.** *этн.* Уйын исеме. □ Название игры.

**АҠ ҺӨТЛӨКӘЙ** (Р.: белый молочай; И.: euphorbia; Т.: sütleğen) *и. бот.*

Ике өлөшлөләр ғаиләһенә ҡараған тар ғына ваҡ япраҡлы, йәшел һары суҡ сәскәле, һөтлө үлән. Бүлеп сығарған һутын медицинала һәм сәнәғәттә ҡулланалар. □ Белый молочай (лат. *Euphorbia*). *Аш үтмәһә, ак һөтлөкәй, күк һөтлөкәй, әлморон, андыҙ үләндәрен бергә йыйып бал кушып эсәләр.*

**АҠҺУЙЫЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Күбәләк ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-кубалякцев.

**АҠҺУЙЫР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-тамьянцев.

**АҠҺЫЛ** (Р.: беловатый; И.: whitish; Т.: solgun) *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **аҡ.** *уменьш. степ. от* **аҡ.**

**1.** Тоноҡ аҡ, аҡҡа тартым; ағылйым. □ Беловатый, белёсый. *Акһыл тауар. Акһыл томан. Акһыл төҫ.* ■ *[Шәүәли] акһыл көл менән капланып, һүрелә башлаған күҙҙарға текәлде.* Б. Бикбай. *Яҙ еткәс, талдар үҙҙәренең тәмле еҫле, мамык төҫлө йомшак, акһыл кейемдәренә төрөнәләр.* «Йәйғор», № 5, 2010.

**2.** Ҡатмарлы төҫ атамаларының тәүге өлөшө булып килә. □ Светло-, светлый. *Акһыл күк. Акһыл кара. Акһыл һары.* ■ *Поезд күперҙән сығыу менән акһыл зәңгәр төтөндәрен һауаға бөрктө.* С. Агиш. *Тышы акһыл һары төҫкә буялған ике катлы йорттар тулы бер урам булып һуҙылған.* Н. Мусин.

**АҠҺЫЛЛАНЫУ (аҡһыллан-)** (Р.: становиться беловатым; И.: get white a bit; Т.: solgunlaşmak) *ҡ.*

**1.** Аҡһыл төҫкә инеү. □ Становиться беловатым, белёсым. ■ *Пристангә килеп төшкәндә, вакыт иртә ине әле. Күк йөҙө яңы акһыллана башлағайны.* Д. Бүләков.

**2.** Аҡһыл булып күренеү. □ Показаться, видneться светлым. *Аҡһылланып күренеү. Алыҫта арыш баҫыуы аҡһыллана.*

**АҠҺЫЛЛАТЫУ (аҡһыллат-)** (Р.: делать беловатым; И.: make whitish; Т.: solgunlaştırmak) *к.*

Аҡһыл төҫкә индереү; аҡһыл итеү. □ Делать беловатым, белёсым, светлым. ■ *Һалмаҡ-һалмаҡ кына аҡлыҡ йәйеп, аҡһыллатты ерҙе таң алды.* Б. Вәлид.

**АҠҺЫМ** (Р.: белок; И.: albumen; protein; Т.: ak) *и. биол. хим.*

Тере матдәнең даими һәм иң мөһим өлөшө булып, төҙөлөш һәм функция нигеҙен тәшкил иткән ҡатмарлы органик матдә. □ Белок. *Үҫемлек аҡһымы. Ҡатмарлы аҡһымдар. Үҙләштерелеүсән аҡһымдар.*

**АҠҺЫМЛЫ** (Р.: содержащий белок; И.: albuminous; Т.: proteinli) *с.*

Аҡһымға бай, аҡһымы күп. □ Содержащий белок; белковый. *Аҡһымлы аҙыҡтар.*

**АҠҺЫРҒАҠ (аҡһырғағы)** (Р.: лобеля; И.: false helleborine; Т.: Papaz külahı) *и. бот.*

Ләлә һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, йыуан тамырлы, эре ҡабырсаҡ япраҡлы, йәшкелт һары йәки ҡара ҡыҙыл төҫтәге һепертке сәскәле, дымлы ерҙә үҫә торған күп йыллыҡ ағыулы үлән. □ Чемерица, лобеля (лат. *Veratrum Lobelianum*). *Аҡ аҡһырғаҡ. Ҡара аҡһырғаҡ. Аҡһырғаҡ тамыры.* ■ *Ҡаҡланғанда дауа миңә ҡаҡы, шишмә һыуы, ыулы аҡһырғаҡ.* Ф. Туғыҙбаева.

**АҠҺЫУ** *с. ҡар.* **аҡһыл 1.**

**АҠШАЙТЫУ (аҡшайт-)** (Р.: таращить; И.: goggle (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

Ҙур итеп, ағын әйләндереп асыу *(күҙҙе);* аҡайтыу, аҡрайтыу. □ Таращить, выпучивать, выкатывать *(глаза). Күҙҙе аҡшайтыу.*

**АҠШАЙЫУ (аҡшай-, аҡшая)** (Р.: таращиться; И.: stare (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

Түңәрәкләнеп, ҙур булып асылыу; аҡайыу. □ Таращиться, пучиться *(о глазах). Күҙе аҡшайған.* ■ *Ҡана, майлыҡ бир! — тине ул [Гәрәй], бисәһенә аҡшайып.* Б. Бикбай.

**АҠШАЙЫП ҠАРАУ (аҡшайып ҡара-)** (Р.: вытаращить глаза; И.: goggle (at); Т.: gözleri fal taşı gibi açmak) *к.*

**1.** Күҙҙе ҙур асып, текләп ҡарау. □ Вытаращить глаза.

**2.** Асыу менән йәки ғәжәпләнеп ҡарау. □ Смотреть с гневом, злобно или с удивлением.

**АҠШАМ** (Р.: сумерки; И.: twilight; Т.: akşam) *и.*

**1.** Ҡояш байығандан ҡараңғы төшкәнгә тиклемге ваҡыт; эңер. □ Сумерки, вечер. *Аҡшам мәле.* ■ *Теге [Зөфәр] аҡшам мәлендә килеп, өс мәртәбә атҡан мылтыҡтан.* Халыҡ ижадынан.

**2.** *дини.* Ҡояш байығандан күктән ҡыҙыллыҡ бөткәнгә тиклемге арала уҡыла торған намаҙ. □ Вечерний намаз. ■ *Аҙан әйтә мәзин аҡшамға.* Ғ. Әмири.

**3.** *миф. Ниндәйҙер* эш башҡарыу өсөн ҡурҡыныс, әммә ауырыуҙарҙы магик имләү өсөн һәйбәт ваҡыт. □ Вечерние сумерки *(опасное время суток для выполнения каких-либо дел, но считается благоприятным для заговаривания болезней нашёптыванием).*

**АҠШАМ ГӨЛӨ** *и. бот. диал. ҡар.* **бүлмә гөлө**.

**АҠШАМҺЫУ** *и. диал. ҡар.* **таң һыуы.**

**АҠШАНЛАУ (аҡшанла-)** (Р.: озираться; И.: gaze round; Т.: etrafına bakınmak) *к.*

Тегеләй-былай башты борғолап, ян-яҡҡа күҙ ташлау. □ Озираться, оглядываться по сторонам. ■ *[Мулла — бисәһенә:] Урамдан егет-улаҡ уҙыр хәл юҡ, күҙең-ҡашың аҡшанлап, ауыҙың күтәреп, һүҙ ҡуша башлайһың.* Т. Хәйбуллин.

**АҠШАР I** (Р.: мел; И.: chalk; Т.: tebeşir) *и. диал.*

Аҡбур. □ Мел; белая глина.

**АҠШАР II** (Р.: светловолосый; И.: light-haired; Т.: sarı saçlı) *с. диал.*

Аҡһыл һары сәсле, аҡ сәсле. □ Светловолосый. *Аҡшар малай.*

**АҠ ШИҒЫР** (Р.: белый стих; И.: blank verse; Т.: kafiyesiz şiir) *и. әҙ.*

Рифмаһыҙ яҙылған шиғыр. □ Белый стих. ■ *Аҡ шиғырға нигеҙләнеп яҙылған әҫәргә башҡорт әҙәбиәтенән Ҡ. Даяндың «Таң-сулпан» драмаһын күрһәтеп була.* К. Әхмәтйәнов.

**АҠЪЮЛАЙ** (Р.: декабрь; И.: December; Т.: Aralık) *и.*

Йылдың ун икенсе айының исеме, декабрь. □ Декабрь. ■ *Тышта инде аҡъюлай башы, ә ҡар һаман яумай ҙа яумай.* «Йәшлек», 29 октябрь 2009.

**АҠЫЙ** (Р.: лупоглазый; И.: pop-eyed; Т.: lokma gözlü) *с. диал.*

Аҡыш. □ Лупоглазый.

**АҠЫЙ ЗАМАН** (Р.: давным-давно; И.: ages ago; Т.: çok zaman önce) *р.*

Әллә ҡасан. □ Давным-давно.

**АҠЫҠ (аҡығы)** [ғәр. عقيق] (Р.: сердолик; И.: cornelian; Т.: akik) *и. мин.*

**1.** Ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтәге аҫыл таш. □ Сердолик. *Аҡыҡ ҡаш. Аҡыҡ төймә.* ■ *Унар ғына һумлыҡ ай ун аҡыҡ, һалдыр, егет, әйәр ҡашыңа.* Халыҡ йырынан.

**2.** *диал.* Йөҙөк ҡашы. □ Камень, вставляемый в перстень.

**3.** *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, күҙ тейеүҙән, йыландан, үлемдән һаҡлаусы таш. □ Мифологизированный камень, выполняет функцию оберега, амулета от сглаза, ранений, смерти.

**АҠЫЛ** [ғәр. عقل] (Р.: ум; И.: intelligence; Т.: akıl) *и.*

**1.** Кешенең фекер йөрөтөү, уйлау һәләте. □ Ум, разум, рассудок, интеллект. *Аҡыл һәләте. Аҡылға бай. Аҡылы теүәл. Аҡыл ҡушҡанса. Аҡылы камил. Тәбиғи аҡыл. Сәләмәт аҡыл. Аҡылды эшкә ҡушыу.* ■ *Аҡылдан да ҙур һәм аҫыл байлыҡ юҡ ул донъяла!* А. Игебаев. *Тәрән күлдәй тыныс аҡылығыҙ серҙәш булыр.* М. Кәрим. ● *Аҡыл — йәштә түгел, башта.* Әйтем. *Матурлыҡ туйҙа кәрәк, аҡыл көн дә кәрәк.* Әйтем. *Аҡыл айныраҫ, алтын серемәҫ.* Әйтем. *Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит.* Мәҡәл. *Дөйәләй алтының булғансы, төймәләй аҡылың булһын.* Мәҡәл.

**2.** *Нимәгәлер, нииндәйҙер* эш-хәлгә ҡарата булған уй, фекер, кәңәш. □ Совет, наставление. *Аҡыл һорау. Аҡыл биреү.* ● *Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын.* Мәҡәл. *Иртәнге аҡыл кискә ярамай.* Әйтем.

♦ **Аҡылға зәғиф** аҡылы теүәл түгел. □ Придурковатый. **Аҡыл өләшкәндә мейес артында ҡалған** *шул уҡ ҡар.* **аҡыл өләшкәндә өйҙә булмаған. Аҡыл өләшкәндә өйҙә булмаған** *мыҫҡ.* аҡылһыҙ, аҡылы камил түгел тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Умом обделён. **Аҡылы алтын <икән>** *көлк.* мөмкин булғандан артығын һораған, теләгән кешегә әйтелә. □ *соотв.* Губа не дура. *Ай-һай, аҡылың алтын икән, һинән элек үҙем алыр инем әле ул аҡсаны.* **Бала аҡылы** фекерләүҙә балаларға хас еңеллек. □ Детские рассуждения. **Бала аҡылы инеү** балаларса ҡылана башлау. □ Впадать в детство. **Еңел аҡыл** төптән уйлап еткерелмәгән, ҡыҙыулыҡ һөҙөмтәһе. □ Легкомысленно, не подумав. **Ҡара аҡыл** белемдән түгел, тормош тәжрибәһенән килгән фекер. □ Непросвещённый ум. **Ярты аҡыл** уйлау һәләте камил булмаған кеше; иҫәр. □ Полоумный. **Ятыр аҡыл** оҙаҡ, ныҡ уйлап, шунан һуң ғына бер фекергә килә алыу һәләте. □ Рассудительный человек. **Аҡылы ҡыҫҡа** (*йәки* **һай**) аҡылы етешмәй, аҡылһыҙ. □ Умственно ограниченный, не умный. ■ *Булмаһа әгәр һиндә аҡыл ҡыҫҡа, ышанма асылы нәжес залим дуҫҡа.* М. Ғафури.

**АҠЫЛ АЛЫУ (аҡыл ал-)** *к. ҡар.* **аҡылға ултырыу.**

**АҠЫЛ БУЛЫУ (аҡыл бул-)** (Р.: послужить уроком; И.: serve as a lesson to; Т.: ders olmak) *к.*

Һабаҡ булыу, бүтәнсә ҡабатламаҫтай өлгө булыу. □ Послужить уроком. ■ *Тимер уға [Булатка] ҡатыраҡ бәрелде, буғай. Ярар, аҡыл булыр.* Б. Бикбай.

**АҠЫЛҒА БЕР ТӨРЛӨ** (Р.: придурковатый; И.: daft; Т.: bön) *с.*

Ахмағыраҡ, уйлау һәләте түбән. □ Придурковатый, недалёкий. ■ *[Рәхимә:] Әллә һин, оло ул, акылға бер төрлө булып бараһың инде.* К. Кинйәбулатова.

**АҠЫЛҒА ЕҢЕЛ** *с. ҡар.* **аҡылға бер төрлө.**

**АҠЫЛҒА КИЛЕҮ (аҡылға кил-)** (Р.: прийти в себя; И.: come to oneself; Т.: aklını başına almak) *ҡ.*

**1.** Иҫкә килеү, иҫте йыйыу. □ Прийти в себя, опомниться. ■ *Һибәт ағайҙы күреүгә шашып, аңымдан ҡалдым. Сәй янында ғына акылыма килдем.* Д. Юлтый.

**2.** Дөрөҫ юлға баҫыу, тәртиплегә әйләнеү. □ Образумиться, поумнеть. *Бер бәләгә осрамайынса, акылға килмәҫ инде ул.*

**АҠЫЛҒА УЛТЫРТЫУ (аҡылға ултырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **аҡылға ултырыу.** *понуд. от* **аҡылға ултырыу.**

**АҠЫЛҒА УЛТЫРЫУ (аҡылға ултыр-)** (Р.: поумнеть; И.: learn a lesson; Т.: akıllanmak) *ҡ.*

**1.** Берәй эш-хәлде ҡабатламаҫлыҡ булыу. □ Поумнеть, получить горький урок.

**2.** Аҡылһыҙлыҡты ташлау, аҡыллыға әйләнеү. □ Поумнеть, образумиться. ■ *[Сынбулатов:] Һа, егет, аҙырак акылға ултырған икән. Күптән шулай кәрәк ине.* М. Тажи.

**АҠЫЛҒА ҺЫЙМАУ (аҡылға һый-)** (Р.: не укладываться в голове; И.: seem impossible; Т.: aklına sığmamak) *ҡ.*

**1.** Аңлай алмау, күҙ алдына килтерә алмау. □ Казаться, показаться невозможным *(невероятным, противоестественным)*, не укладываться в голове *(сознании)*; быть непонятным. ■ *Был — шундай тупаҫ, акылға һыймаған бер приказ.* Д. Юлтый.

**2.** *Нимәнеңдер* булырына ышанмау. □ Не верить *чему-л.*

**АҠЫЛДАН ШАШЫУ (аҡылдан шаш-)** (Р.: сойти с ума; И.: go mad; Т.: çıldırmak) *ҡ.*

**1.** Дөрөҫ фекер итә алмаҫлыҡ хәлдә ҡалыу, уйлау һәләтен юғалтыу. □ Сойти с ума, обезуметь, лишиться ума. ■ *Раушания ни ҡылыр, нисек хәл итер? Акылынан ғына яҙып ҡуймаһа, алйотланып ҡына бөтмәһә ине...* Р. Камал.

**2.** Хис-тойғоларҙың саманан тыш булыуы. □ Неистовствовать, переходить меру *(в проявлении каких-н. чувств). Акылдан шашып бейеү.*

**АҠЫЛДАН ЯҘЫУ (аҡылдан яҙ-)** *ҡ. ҡар.* **аҡылдан шашыу**. *Акылдан яҙып яратыу.*

**АҠЫЛДАШ** (Р.: советчик; И.: adviser; Т.: danışman) *и.*

Кәңәш биреүсе кеше. □ Советчик.

**АҠЫЛ ЕТЕҮ (аҡыл ет-)** (Р.: догадаться; И.: guess; Т.: anlamak) *ҡ.*

Берәй эш-хәлде уйлап еткереү; баш етеү. □ Догадаться, додуматься, сообразить. ■ *Тал сыбыктай һомғол буй-һыныңды, күҙҙәреңдең зәңгәр ялкынын нисек күрмәҫкә һуң, күҙем булып? Әйтсе, һылыу, етмәй акылым!* Р. Ғарипов.

**АҠЫЛ ЙӨРӨТӨҮ (аҡыл йөрөт-)** (Р.: размышлять; И.: ponder; Т.: düşünmek) *ҡ.*

Уйлау, фекер йөрөтөү. □ Размышлять, думать, мыслить. ■ *Дейеү үҙенең ун ике башындағы барлы-юклы акылын йөрөтөп уйлағанса, көн үтеп кис булған, ти.* Әкиәттән.

**АҠЫЛ ЙЫЙЫУ (аҡыл йый-)** (Р.: набираться ума; И.: learn sense; Т.: düşünmek) *ҡ.*

**1.** Уйлау, уйлап эш итеү. □ Обдумать.

**2.** Тәжрибә, аң, фекер туплау. □ Набираться ума-разума. ■ *Әгәр ҙә акылыңды йыймай эшләй торған булһаң, беҙ быны һиңә буш ебәрмәбеҙ!* Ғ. Дәүләтшин.

**АҠЫЛ-КӘҢӘШ** (Р.: советы; И.: various opinions; Т.: akıl) *и. йыйн.*

Төрлө фекер, төрлө уй. □ Разные мнения, суждения, советы. *Акыл-кәңәш бирешеү. Акыл-кәңәш короу.* ■ *Акыл-кәңәш һорап һиңә килдек, йәнгә ауыр булған сактарҙа.* Ф. Чанышева.

**АҠЫЛЛАНЫУ (аҡыллан-)** (Р.: набраться ума; И.: learn sense; Т.: akıllanmak) *ҡ.*

**1.** Аҡыллыға әйләнеү. □ Набраться ума, стать умным. *Ҙурая килә бала акыллана ул.*

**2.** *күсм.* Ҡаты һабаҡ алып насар ҡылыҡтан тыйылыу. □ Образумиться.

**АҠЫЛЛАШЫУ (аҡыллаш-)** (Р.: обмениваться мнениями; И.: exchange opinions; Т.: akıl danışmak) *ҡ.*

Фекер алышыу, кәңәшләшеү, аҡыл-кәңәш бирешеү. □ Обмениваться мнениями, соображениями, советоваться. ■ *Был дүрт батыр бер-беренә якынлашты, йыртҡыска китмәк булып акыллашты.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Аҙаматтар килгән туй күрергә, акыллашып, кәңәш итергә.* М. Буранғол.

**АҠЫЛЛЫ** (Р.: умный; И.: intelligent; Т.: akıllı) *с.*

**1.** Уйлап эш итә белеүсән; фекере камил, аңлы. □ Умный, рассудительный, мудрый. *Акыллы кеше.* ■ *Акыллы ла егет ай шул булыр, һөйләмәҫ ул кеше ғәйбәтен.* Халыҡ йырынан. *[Әхиәр Хәким] бала сағынан уҡ бик зирәк акыллы, төртмә әсе телле, һәр нәмәне тиҙ отоп алыусан булып үҫә.* Т. Юлдашева. ● *Мең алтын ташың булғансы, бер акыллы башың булһын.* Мәҡәл. *Акыллы ир — ил ағаһы, акылһыҙ ир — ил бәләһе.* Мәҡәл. *Иҫәр дуҫтан акыллы дошман якшырак.* Мәҡәл.

**2.** Дөрөҫ фекер йөрөтөүҙең һөҙөмтәһе булған, дөрөҫ уйланған. □ Умный, разумный. *Акыллы кәңәш. Акыллы тәкдим. Акыллы һүҙ.* ■ *Йомабикәгә бәхет донъяға акыллы ҡараш, тулы күңел, мәғәнәле йәшәү төшөнсәһе лә ул.* Ғ. Хөсәйенов.

**3.** Тәртибе, ҡылығы матур; тыйнаҡлы, тәртипле. □ Воспитанный, умный. *Акыллы бала. Акыллы кыҙ.* ■ *Дуҫының тәнкит һүҙҙәре — акыллы кешегә оло һабак.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**4.** *әйл.ф.* Аҡыллым *(яратып өндәшеү һүҙе).* □ Умница моя.

♦ **Аҡыллы баш** *көлк.* Мөмкин булмаған нәмә һораған йәки теләгән кешегә әйтелә. □ *соотв.* Губа не дура. ■ *[Хәҙрәттең һүҙен] ишеткәс, һалдаттар геү килеп .. көлөшә башлай: «Ай-һай, хәҙрәт, акыллы баш икәнһең!»* В. Исхаҡов.

**АҠЫЛЛЫЛЫҠ (аҡыллылығы)** (Р.: рассудительность; И.: wisdom; Т.: makullük) *и.*

Уй-фекер камиллығы, аңлылыҡ. □ Рассудительность, благоразумие, рассудочность. *Акыллылығы йөҙөнә сыккан.*

**АҠЫЛ ТЕШЕ** (Р.: зуб мудрости; И.: wisdom tooth; Т.: akıl dişi) *и.*

Егерме йәштән үткәс сыға торған иң төпкө теш. □ Зуб мудрости.

**АҠЫЛ ТӨШӨҮ (аҡыл төш-)** (Р.: прийти в голову; И.: come to mind; Т.: akla gelmek) *ҡ.*

Берәй уй, фекер килеү. □ Прийти в голову.

**АҠЫЛ УЛТЫРЫУ (аҡыл ултыр-)** (Р.: поумнеть; И.: grow wiser; Т.: akıllanmak) *ҡ.*

Аҡылланыу, аҡыллыраҡ булыу. □ Поумнеть. ■ *Беҙгә, бәлки, акыл ултыралыр ғүмер үткән һайын.* М. Кәрим.

**АҠЫЛ ҺАТЫУ (аҡыл һат-)** (Р.: умничать; И.: show off one's intelligence; Т.: ukalalık etmek) *ҡ.*

**1.** Аҡыллы һүҙ һөйләп маташыу. □ Умничать, мудрствовать. ■ *Студент Сөләй байтаҡ кына акыл һаткан иҫерек баш менән.* Б. Вәлид.

**2.** Берәйһен өйрәтеү. □ Поучать *кого.*

**АҠЫЛҺЫҘ** (Р.: глупый; И.: dumb; Т.: budala) *с.*

**1.** Уйлап эш итә белмәгән; алйот. □ Глупый, неумный, умственно ограниченный. *Акылһыҙ кеше.* ■ *Иллелә иҫәр ҙә ипкә килә тигәндәр, ә ул акылһыҙ кеше түгел.* Б. Бикбай. ● *Акылһыҙ кешегә акыл бирһәң, кыскырып көлөр.* Әйтем.

**2.** Дөрөҫ фекер йөрөтмәүҙең һөҙөмтәһе булған, дөрөҫ уйланмаған. □ Неуместный, глупый. *Акылһыҙ һүҙ. Акылһыҙ эш.*

**3.** Тәртибе, ҡылығы насар; тыйнаҡһыҙ, тәртипһеҙ. □ Невоспитанный, дурной. *Акылһыҙ бала. Акылһыҙ кылык.*

**АҠЫЛҺЫҘЛАНЫУ (аҡылһыҙлан-)** (Р.: глупеть; И.: grow stupid; Т.: aptallaşmak) *к.*

**1.** Аҡыл йөрөтөү, фекерләү һәләтен юғалтыу; алйотланыу. □ Глупеть, становиться глупым, дуреть. *Аҡылһыҙлана барыу.*

**2.** Ныҡлап уйламай, еңел генә уйлап эш ҡылыу. □ Дурить, шалить, озорничать.

**АҠЫЛ ЭЙӘҺЕ** (Р.: мудрый человек; И.: wise person; Т.: bilge) *и.*

**1.** Аҡыллы, аҡылға бай кеше. □ Мудрый, рассудительный человек. ■ *[Перовский В.И. Даль тураһында:] Иҫ киткес аҡыл эйәһе һәм ғәжәп мәғлүмәтле кеше, үҙем махсус һоратып алдырҙым.* З. Ураҡсин.

**2.** *көлк.* Хәйләкәр. □ Хитрый.

**АҠЫЛ ЮЙЫУ (аҡыл юй-)** (Р.: лишиться ума; И.: lose mind; Т.: akılı kaybetmek) *к.*

Уйлау һәләтен юғалтыу, аҡылһыҙланыу. □ Лишиться ума, разума. ■ *Македонский бер ваҡытта ла аҡылын юйғансы хәмер эсмәй.* Р. Камал.

**АҠЫМ** *и. диал. кар.* **һағым.**

**АҠЫМБӘТ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Һарт-әйҙе ырыуының аймағы. □ Название родового подразделения башкир-сарт-айлинцев.

**АҠЫН** (Р.: акын; И.: akyn; Т.: saz şairi) *и.*

Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һәм ҡарағалпаҡтарҙағы халыҡ сәсәне; өлөң әйтеүсе. □ Акын *(поэт-импровизатор, певец).* ■ *Мәскәүҙе маҡтай шағирҙар, йырсылар йырлай уны, аҡындар, ашуҡ, сәсәндәр хөрмәтләп ҙурлай уны.* Р. Ниғмәти.

**АҠЫНСЫҠ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Барын-табын ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Родовое подразделение башкир-барын-табынцев.

**АҠЫР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бишауыл-уңғар ырыуының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-бишаул-унгарцев.

**АҠЫРАЙТЫУ (аҡырайт-)** *к. кар.* **аҡрайыу.**

**АҠЫРАЙЫУ (аҡырай-)** *к. диал. кар.* **аҡрайыу**. ■ *Ултырам аҡырайып, ни эшләргә белмәй.* Экспедиция материалдарынан.

**АҠЫРТЫН** (Р.: медленно; И.: slowly; Т.: yavaş) *р. диал.*

Аҡрын. □ Медленно.

**АҠЫРТЫУ (аҡырт-)** (Р.: принуждать кричать; И.: make cry; Т.: bağırtmak) *к.*

Яман итеп ҡысҡыртыу; баҡыртыу. □ Принуждать кричать. ■ *Әфисәр кәзәне мунсаға килтерергә ҡушкан. Ярай, килтергәндәр. Шунан ул кәзәне аҡыртып туҡмай башлаған.* Әкиәттән.

**АҠЫРЫНЫУ (аҡырын-)** (Р.: накричать; И.: shout (at); Т.: birinin yüzüne bağırmak) *к.*

Асыу менән кешегә ҡысҡырыу; екеренеү. □ Накричать, наорать. ■ *[Ҡотлобай] револьверын әле тәҙрәгә, әле часовойҙарға һелкеп һүгенә, аҡырына.* Һ. Дәүләтшина.

**АҠЫРЫП-БАҠЫРЫП** (Р.: крича; И.: shouting; Т.: bağırarak) *р. ҡусм.*

Бик яман ҡысҡырып. □ Крича. ■ *Ҡәмәр әбей аҡырып-баҡырып Ғәләүҙе ҡыуа башланы.* Т. Йәнәби.

**АҠЫРЫУ (аҡыр-)** (Р.: кричать; И.: yell; Т.: bağırmak) *к.*

**1.** Яман тауыш менән ҡысҡырыу. □ Кричать, орать. ■ *[Прапорщик:] Ул ниндәй тауыш?! Кемдәр ул аҡыра?* Д. Юлтый. ● *Аҡырған башлыҡ түгел, аҡылы бар башлыҡ.* Әйтем.

**2.** Асыуланып яман ҡысҡырыу; екереү. □ Наорать, накричать *на кого. Балаға аҡырырға ярамай.*

**3.** Яман ҡысҡырып илау. □ Выть, реветь. *Аҡырып илау.* ■ *Ул [Сания] тағы ла аҡырырға тотондо. Иланы-иланы ла, бүлмәнән сығып китте.* М. Тажи.

**АҠЫРЫШЫУ (аҡырыш-)** *ҡ. урт. кар.* **аҡырыу**. *взаимн. от* **аҡырыу**.

**АҠЫШ** (Р.: навыкат; И.: pop-eyed; Т.: fırlak) *с.*

Ҙур булып, ағы күренеп торған *(күҙгә ҡарата);* аҡрый. □ Навыкат, навыкате *(о глазах).* ■ *Сөнәғәттәрҙең дә бер акыш күҙле конандары бар ине.* Ҡ. Ибәтуллин. *Матур ғына ҡыҙ булып үҫеп килгәнемдә, күҙемә аҡ һалды. Бына, күр акыш күҙ инәйеңде.* Г. Яҡупова.

**АҠЫЯ** (Р.: снегирь; И.: bullfinch; Т.: şakrak kuşu) *и. зоол.*

Алаҡас турғайҙар ғаиләһенә ҡараған, турғайҙан ҙурыраҡ ҡош. Ата ҡоштоң башы, ҡанаттары һәм ҡойроғо йымылдаҡ ҡара, арҡаһы күкһел һоро, ҡорһағы, ҡойроҡ төбө өҫтән дә, аҫтан да аҡ, түше ҡыҙыл. Инә ҡоштоң түше көрәнһыу һоро; ҡыҙылтүш, ҡантүш. □ Снегирь (лат. *Pyrrhula pyrrhula*). ■ *Акыя ылыҫлы һәм аралаш урмандарҙа, кышкыһын төрлө урында, кеше торлағына якын йәшәй. Уның кыҙғылт көрән тәнле акһыл зәңгәр 4–6 бөртөк йоморткаһы була.* Э. Ишбирҙин.

**АҠ ЭСЕРЕҮ (аҡ эсер-)** (Р.: обычай; И.: custom to treat smb with dairy produce; Т.: âdet) *ҡ. этн.*

Һуғышҡа, алыҫ юлға сыҡҡан кешегә аҡ *(һөт, ҡымыҙ һ.б.)* эсереп, иҫән-һау ҡайтыуын теләү. □ Обычай поить молочными продуктами человека, уходящего на войну, в дальнюю дорогу.

**АҠ ӘБЕЙ** (Р.: пожилая женщина; И.: elderly woman; Т.: yaşlı kadın) *и. диал.*

Атай менән әсәйҙең апаһы йәки уларҙан оло хөрмәтле ҡатын кеше. □ Уважаемая среди родственников пожилая женщина.

**АҠ ӘНИС** (Р.: тмин обыкновенный; И.: caraway; Т.: kimyon) *и. бот.*

Туғайҙарҙа, йылға-күл буйҙарында, урман аҡландарында, юл эргәһендә үҫкән аҡ йәки алһыу сәскәле ике йыллыҡ үлән. □ Тмин обыкновенный (лат. *Carum*).

**АҠ ЯБАЛАҠ** (Р.: белая сова; И.: snowy owl; Т.: kar baykuşu) *и. зоол.*

Ҡаҙ ҙурлығындағы иң ҙур ябалаҡ, дөйөм төҫө аҡ, ҡара таптар, төртөктәр менән сыбарланған; көндөҙ ҙә оса. Күҙ ҡабаҡтары ҡыҙыл, аяҡтары һары була; ҡуян ябалағы, аҡ сая. □ Белая сова (лат. *Bubo scandiacus*). ■ *Ак ябалактың ояһы ерҙә, кая таш һәм текә яр һикәлтәләрендә була. 2–3 бөртөк ак йоморткa һала. Зарарлы кимереүселәрҙе кырып ҙур файҙа килтерә.* Э. Ишбирҙин.

**АҠ ЯУЛЫҠ I (яулығы)** (Р.: амнион; И.: amnion; Т.: amniyon) *и. диал.*

Ҡарындағы баланы уратып алған яры, йөҙлөк. □ Амнион.

**АҠ ЯУЛЫҠ II (яулығы)** *и. диал. кар.* **аҡ кейеҙ.**

**АҠ ЯУРЫН(ЛЫ) САЛ БӨРКӨТ** (Р.: белоплечий орлан; И.: steller’s sea eagle; Т.: stellers deniz kartalı) *и. зоол.*

Ҡая таштарҙа, яланға яҡын бейек тауҙарҙың, яңғыҙ-ярым үҫеп ултырған бейек ҡарағас, ҡайын ағастарының баштарында оялаған иң көслө бөркөттәрҙең бер төрө. □ Белоплечий орлан (лат. *Haliaeetus pelagicus*). ■ *Әүәл башкорт һунарсылары ак яурынлы сал бөркөттөң яңы ғына сыккан балаларын ояларынан алып, үҫтереп, кулға өйрәткәндәр. Һыбай килеш эйәр кашына ултыртып, һунарға сыккандар. Бөркөт менән төлкө, бүре һәм башка йәнлектәрҙе тоткандар.* К. Дияров.

**АҠ ЯУЫН I** (Р.: мелкий дождь; И.: drizzling rain; Т.: ahmakıslatan) *и. диал.*

Оҙаҡҡа һуҙылған быҫҡаҡ ямғыр. □ Долгий мелкий дождь.

**АҠ ЯУЫН II** (Р.: священный дождь; И.: rain with no thunder; Т.: yağmur) *и. миф.*

Йәшенһеҙ ямғыр *(башкорттарҙың ышаныуы буйынса, муллык, уңыш килтереүсе изге ямғыр).* □ Дождь без грома *(по верованиям башкир, священный дождь, притягивающий изобилие, плодородие).*

**АЛ I** [дөйөм төрки] (Р.: перед; И.: in front of; Т.: ön) *и.*

**1.** *Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған тараф; киреһе* — арт. □ Перед. *Ал менән барыу. Ал менән боролоу. Ал менән тороу.* ■ *Биленә таҡҡан ҡылысың — Урал батыр ҡылысы; алдыңда урман торғанда, юлың йылға булғанда, урманын да, һыуын да айыра ярған ҡылыс ул.* «Аҡбуҙат». ● *Алдыңа бер ҡара, артыңа биш ҡара.* Мәҡәл. *Ата-әсәңә ни ҡылһаң, алдыңа шул килер.* Мәҡәл. *Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын.* Әйтем.

**2.** *Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған тарафҡа яҡын ер.* □ Передняя сторона; фасад *(здания). Ҡапҡа алды.* ■ *Өй алдында күксин. Күкһел тулҡын ише сәскә лә.* М. Ямалетдинов.

**3.** *Ниҙең дә булһа йөҙө ҡараған яҡтағы өлөшө.* □ Передняя часть. *Арбаның алды. Күлдәктең алды.*

**4.** Берәй эш-хәл башланыуға тиклемге ваҡыт. □ Канун. *Байрам алды. Туй алды. Ураҡ алды.* ■ *Ул бәндә таң алдынан килде. Тәлғәттең иң тәмле йоҡоһонда баҫып инде өйгә!* Р. Камал.

**5.** 3-сө зат эйл. һәм төб., у.-в., сығн. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла *(ҡар.* **алдына, алдынан, алдында**). □ В функции служебного имени.

♦ **Алдан ҡалғанса ашау** туйғанса ашау. □ Наесться до отвала, есть досыта. ■ *Байҙар, кәйеф-сафа ҡороп, алдарынан ҡалғанса тәмле-татлы ғына ашап йәшәй бирә.* Ж. Кейекбаев. **Алдынан арты яҡшы** (*йәки* **хәйерле**) киткәне яҡшы, әйҙә китһен, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Лучше, если его не будет. *соотв.* Скатертью дорога. ■ *[Нурый:] Алдығыҙҙан артығыҙ яҡшы, һеҙҙән башҡа ла тора белербеҙ әле.* А. Таһиров. **Алды-артты уйламай** аҙаҡ нисек булырын ҡарап, уйлап тормай. □ Не подумав, не думая, *к чему* приведёт *(содеянное).* **Бер алдына, биш артына төшөү** (*йәки* **сығыу**) юхаланып, кешенең күңелен ауларға тырышыу. □ Заискивать, лебезить. *соотв.* Рассыпаться мелким бесом *перед кем.* ■ *[Әхсән:] Прилавка өҫтөн тауар менән тултырып ташла, берен оҡшатмаһалар, икенсеһен .. маҡта, һыла-һыйпа, алыусының бер алдына, биш артына төш.* Х. Ибраһимов.

**АЛ II** [дөйөм төрки] (Р.: захват; И.: capture; Т.: aralık) *и.*

Бесән, иген эше башҡарғанда бер кеше иңләп барған аралыҡ. □ Захват *(при жатве или косьбе вручную).* ■ *Гөлкәй ураҡсыларға ал бүлеп йөрөй.* Ғ. Аллаяров.

**АЛ III** [дөйөм төрки] (Р.: алый; И.: rosy; Т.: al) *с.*

Аҡһыл ҡыҙыл, асыҡ ҡыҙыл. □ Алый, розовый, румяный, малиновый. *Ал байраҡ. Ал яулыҡ. Ал таң. Ал сәскә. Ал шәфәҡ.* ■ *Фәриҙәгә бигерәк тә Ғәзимәләрҙең селтәрләп эшләнгән ал төҫтәге тәҙрә баштары оҡшай.* Ф. Рәхимғолова. *Ал таңдарҙың тәүге нурҙары — улары ла һиңә.* Ф. Күзбәков.

**АЛ IV** [дөйөм төрки] (Р.: передний; И.: in front of; Т.: ön) *с.*

Алғы яҡтағы. □ Передний. ● *Ал тәгәрмәс ҡайҙан тәгәрләһә, артҡыһы ла шунан тәгәрләй.* Әйтем.

**АЛ V** (Р.: восток; И.: the Orient; Т.: Doğu) *и. миф.*

Көнсығыш, изге, яҡшы яҡ. □ Восток, имеет положительную семантику.

**АЛА I** (Р.: пёстрый; И.: spotty; Т.: alaca) *с.*

**1.** Аҡ менән ҡара йәки башҡа төҫ аралашҡан. □ Пёстрый, пятнистый, пегий *(о масти животных). Ала ҡаҙ. Ала һыйыр. Ала эт. Ерән ала. Күк ала. Ҡара ала. Ҡола ала. Ҡыҙыл ала.* ■ *Йылҡының да алаһы бар, ҡолаһы бар.* М. Ямалетдинов.

**2.** Күл төбөнән сыҡҡан мифик аттар төҫө. Юл эйәһенең атының төҫө. □ Пегая масть, мифологизированный цвет. ■ *Ала атлы Юл тәңре мин.* Арбауҙан.

**АЛА II** (Р.: по, вплоть, до; с; И.: till; Т.: kadar) *бәйл.*

Сығн. клш. исемдәр менән килеп, «тәңгәл», «тотош» тигән мәғәнәне бирә. □ По, вплоть, до; с *(послелог с исх. п.). Баштан ала ябыныу. Билдән ала батыу.*

**АЛА III** (Р.: витилиго; И.: vitiligo; Т.: vitiligo) *и. мед.*

Тәнде аҡһыл таптар ҡаплаған ауырыу исеме. □ Витилиго.

**АЛАБАЙ I** (Р.: кличка собаки; И.: dog's name; Т.: köpek adı) *и.*

**1.** Эт ҡушаматы. □ Кличка собаки. ■ *Минең менән бер төптән булғанығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә, актырнактар, алабайҙар.* Ш. Бикҡол.

**2.** *күсм.* Эт. □ Собака. ■ *Тик йоҡоһо ҡаскан алабайҙар абалайҙар алыҫ-алыҫта.* Р. Ғарипов.

**3.** *күсм.* Бер ҡатлы, хәйләһеҙ, ябай кеше. □ Простодушный человек. ■ *[Раушания:] Был әрһеҙ алабайҙы хәҙер үк ҡыуалап сығарырға ла ҡапҡаны бикләп ҡуйырға.* Р. Камал.

**4.** *бот.* Ябай һабаҡлы бер йәки күп йыллыҡ үлән үҫемлек. □ Пупавка (лат. *Anthemis*).

**АЛАБАЙ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ, бөрйән, үҫәргән ырыуҙарының аймаҡтары. □ Родовые подразделения башкир-кыпчаков, бурзян, усерган.

**АЛАБАЙ III** (Р.: простодушный; И.: kind; Т.: iyi kalpli) *с. һөйл.*

Ябай, асыҡ күңелле, бер ҡатлы, хәйләһеҙ. □ Простодушный, добрый, отзывчивый. *Алабай кеше.*

**АЛАБАЛЫҠ (алабалығы)** (Р.: сиг; И.: whitefish; Т.: alabalık) *и. зоол.*

Һөмбаштар төркөмөнә ингән йылтыр аҡ тәңкәле, ҡара һыртлы, затлы, төньяҡ сөсө һыу балығы. □ Сиг (лат. *Coregonus*). ■ *Алабалыҡ бик аҡрын үҫә. Уны тота башлау өсөн иң кәмендә биш-алты йыл үҫеүен көтөргә кәрәк.* И. Ниғмәтуллин.

**АЛАБАРМАН** (Р.: неосмотрительный; И.: thoughtless; Т.: ihtiyatsız) *с.*

Эш-ҡылыҡта иғтибарһыҙ, һаҡһыҙ, ҡабалан. □ Неосмотрительный, неосторожный, опрометчивый. ■ *Минең картым алабарман бит ул, күҙен алған күгәүен кеүек, — тине Кәримә еңгәй.* С. Кулибай.

**АЛАБАРМАНЛАНЫУ (алабарманлан-)** (Р.: поступать опрометчиво; И.: act thoughtless; Т.: düşüncesizce davranmak) *ҡ.*

Иғтибарһыҙ, һаҡһыҙ ҡыланыу, алабарман булыу. □ Поступать опрометчиво, быть неосмотрительным, неосторожным. ■ *[Әклимә:] Атаҡ-атаҡ!.. Былай алабарманланып, аҡты-ҡараны күрмәй, ҡайҙа атылаһың?* Н. Иҙелбай.

**АЛАБАРМАНЛЫҠ (алабарманлығы)** (Р.: опрометчивость; И.: hastiness; Т.: düşüncesizce olma) *и.*

Алабарман кешегә хас сифат. □ Опрометчивость, неосмотрительность, неосторожность. *Алабарманлыҡ күрһәтеү.* ■ *Алабарманлыҡ кешенең ғәҙәте лә булып китә.* Т. Морат.

**АЛАБАШ ҠУРҘАЙ** (Р.: вертлявая камышевка; И.: marsh warble; Т.: sarı kamışçın) *и. зоол.*

Ҡамыш, япраҡ араларында осоп йөрөй торған турғайҙан бәләкәйерәк теремек ҡош. Һырты ҡара һәм ерән таплы һарғылт һоро, кәүҙәһенең аҫ яғы көрәнһыу аҡ, түбәһе уртаһынан һары һыҙыҡ үтә, уның ике яғында киң генә ҡара таптар бар, ҡаштары аҡ була. □ Вертлявая камышевка (лат. *Acrocephalus paludicola*). ■ *Алабаш ҡурҙай бик һирәк осрай. Ҡамыш йәки үлән һабаҡтарында оя яһай. Ҡыҙғылт һәм һоро таптар менән сыбарланған 5–6 бөртөк аҡ йомортҡаһы була.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАБУҒА** (Р.: окунь; И.: perch; Т.: tatlısu levreği) *и.*

**1.** *зоол.* Сәнске ҡанатлылар төркөмөнә ингән йәшкелт ала тәнле, ҡыҙыл ҡанатлы, һырты сәнскеле йыртҡыс балыҡ. □ Окунь (лат. *Perca fluviatilis*). *Диңгеҙ алабуғаһы. Йылға алабуғаһы.* ■ *Алабуға ҡояшлы ваҡытта селәүсенде еҫкәп тә ҡарамай.* Ф. Әсәнов.

**2.** *миф.* Изге, тотем балыҡ. □ Священная рыба.

**3.** *этн.* Табын ырыуының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-табынцев.

**АЛАБУҒА ҺЫМАҠТАР** (Р.: окуневые; И.: moronidae; Т.: levrek) *и. зоол.*

Диңгеҙҙәрҙә һәм сөсө һыуҙарҙа йәшәй торған мөһим промысла балыҡтары. □ Окуневые (лат. *Percidae*).

**АЛАБУТА** (Р.: лебеда; И.: orach; Т.: karapazı) *и. бот.*

**1.** Баҫыуҙарҙа, баҡсала һ.б. эшкәртелгән ерҙә үҫкән ваҡ ҡына йылтыр орлоҡло, сыбар, тарбаҡ һабаҡлы бер йыллыҡ сүп үләне. □ Лебеда (лат. *Atriplex*). *Аҡ алабута. Күк алабута. Ҡара алабута. Ҡыҙыл алабута.* ■ *Бейек алабуталар, әремдәр араһынан саҡ ҡына күренеп ултырған бәләкәй бер өй генә йоҡламай.* З. Биишева. ● *Алабута аш имеш, алтын-көмөш таш имеш.* Әйтем.

**2.** *диал.* Мысай. □ Лисохвост.

**АЛАҒАЙЫМ** (Р.: ненужный; И.: unnecessary; Т.: gereksiz) *с.*

Кәрәкһеҙ, файҙаһыҙ, буш. □ Ненужный, бесполезный. ■ *Көн дә яныр инем, яҙыр инем — алағайым уйын оҡшамай.* Б. Бикбай.

**АЛАҒАЙЫМҒА** (Р.: напрасно; И.: unnecessary; Т.: boşuna) *р.*

Һис кәрәкһеҙгә, бушҡа; сәбәпһеҙгә. □ Напрасно, понапрасну, попусту, бесполезно, зря. *Алағайымға борсолоу. Алағайымға йөрөү.* ■ *Әлегә тынлыҡ, ара-тирә немец һаҡсыларының алағайымға автомат тырылдатып алғаны ғына ишетелә.* Ә. Хәкимов.

**АЛАҒАНАТ I** (Р.: чернолобый сорокопут; И.: shrike; Т.: kara alınlı örümcek kuşu) *и.*

**1.** *зоол.* Һырты һоро, маңлайы, күҙҙәре аша үткән һыҙыҡ, ҡанаттары һәм ҡойроғо ҡара, ҡанаттарында аҡ таптар һәм ҡойроғоноң ике яғында аҡ һыҙығы булған сыйырсыҡ ҙурлыҡ ҡош. □ Чернолобый сорокопут (лат. *Lanius minor*). ■ *Алағанат бөжәктәр, сиңерткә, сыскан, ҡош йомортҡалары менән туйына .. Ағаста йәки ҡыуаҡта оялай. Көрән таплы 4–6 бөртөк һорғолт йәшел йомортҡаһы була.* Э. Ишбирҙин.

**2.** *этн.* Ҡыпсаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков.

**АЛАҒАНАТ II** (Р.: летун; И.: job-hopper; Т.: bir dalda durmaz) *и. һөйл.*

Еңел тормош эҙләп, төрлө ерҙә йөрөгән елғыуар кеше. □ Летун. ■ *Һин бит алағанат, летун, бисәңдең елкәһен кимереп ятаһың.* М. Тажи.

**АЛАҒАНАТ СӘПСӘҮ** (Р.: авдотка; И.: stone curlew; Т.: bayağı kocagöz) *и. зоол.*

Һырты буй һыҙатлы һарғылт көрән, ҡорһаҡ яғы аҡһыл һары, түшендә буй-буй ваҡ таптары булған күгәрсен ҙурлығындағы ҡош. Ҡыҫҡа һары суҡышының ос яғы ҡара, күҙҙәре ҙур һары төҫтә була; төн сәпсәүе, гәрәбәгүҙ. □ Авдотка (лат. *Burhinus oedicnemus*). ■ *Алағанат сәпсәү эре бөжәктәр, кеҫәртке, һыу йәнлектәре менән туҡлана. Ояһын һыуға яҡыныраҡ урынға эшләй.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАҒАНАТ ТУРҒАЙ** (Р.: зяблик; И.: chaffinch; Т.: bayağı ispinoz) *и. зоол.*

Ата ҡоштоң түбәһе күкһел һоро, маңлайы ҡара, сикәләре, тамағы һәм түше ҡыҙғылт көрән, арҡаһы ҡуйы көрән, ҡойроҡ төбө өҫ яҡтан йәшел, ҡойроғо һәм ҡанаттары ҡара көрән төҫтә булып, ҡанаттарында ике оҙонса арҡыры аҡ тап бар, ҡойроғоноң ике яҡ ситенән аҡ һыҙаттар үтә. Инә ҡоштоң дөйөм төҫө көрәнһыу булған турғай ҙурлыҡ ҡош. □ Зяблик (лат. *Fringilla coelebs*). ■ *Алағанат турғай матур итеп һыҙғыра һәм сутылдап һайрай. Бөжәктәр, үлән һәм ағас орлоҡтары менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАҒАРАЙ** (Р.: апрель; И.: April; Т.: Nisan) *и.*

Календарь йылының дүртенсе айы. □ Апрель. ■ *Халыҡ тапҡыр, һәр нәмәгә мәғәнә һалып ҡарай. Апрель ала-сола яткас, һәуер йә алағарай.* М.Ишбулатов.

**АЛАҒОРТ** (Р.: алакурт; И.: gadfly species; Т.: atsineği türü) *и.*

**1.** *зоол.* Йорт хайуандарының тиреһе аҫтына инеп паразитлыҡ итә торған 6 мм ҙурлыҡтағы ваҡ бөжәк. □ Алакурт, вид овода.

**2.** *этн.* Ҡатай ырыуының аймағы. □ Название одного из родовых подразделений башкир племени катай.

**АЛАҒОШ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-бурзянцев.

**АЛАДОРМАН** (Р.: горячий; И.: hot-tempered; Т.: kızgın) *с. диал.*

Ярһыу. □ Горячий. *Аладорман ат.*

**АЛАДЫУА** *и. зоол. ҡар.* **алатуба**.

**АЛА ИРЛӘН** (Р.: хомяк; И.: hamster; Т.: hamster) *и. зоол. диал.*

Ирлән. □ Хомяк (лат. *Cricetinae*).

**АЛАЙ I** (Р.: полк; И.: regiment; Т.: alay) *и. иҫк.*

Боронғо башҡорт ғәскәренең бер бүлеме. □ Полк. ■ *Йөрәктау янына ебәрелгән Хохловтың полкын пыран-заран килтергәс, улар [башҡорттар] үҙҙәренең алайҙары менән Өфөгә йүнәлде.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛАЙ II** (Р.: так; И.: so; Т.: öyle) *р. һөйл.*

Улай. □ Так.

**АЛА ҠАҘ** (Р.: серый гусь ; И.: grey goose; Т.: kaz) *и. зоол.*

Йорт ҡаҙына оҡшаған, шул ҙурлыҡтағы, дөйөм төҫө көрәнһыу һоро булған күсмә ҡош; ҡыр ҡаҙы. □ Серый гусь (лат. *Anser anser*). ■ *Ала ҡаҙ сыбар ҡаҙҙан сағыуырак төҫө, ҙурыраҡ булыуы һәм алһыу суҡышы менән айырыла.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАҠАЙ I** *с. аҙһ. дәр. ҡар.* **ала I.** *уменьш. степ. от* **ала I.**

**АЛАҠАЙ II** (Р.: тряпичный половик; И.: doormat; Т.: paspas) *и. диал.*

Сепрәк балаҫ. □ Тряпичный половик.

**АЛАҠАЙ III** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Барын-табын ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение барын-табынцев.

**АЛАҠАН** (Р.: пригоршня; И.: handful; Т.: avuç) *и.*

**1.** Ус эсе. □ Пригоршня.

**2.** Ус төбө, ус аяһы. □ Ладонь. ■ *Ҡаҙаҡ ҡуйының оса майы ус алаҡанындай итеп ҡырҡылған да ҡулламаның өҫтөнә өймәләмә итеп һалынған.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛАҠАНЛАҠ** (Р.: непоседливый; И.: restless; Т.: yerinde durmaz) *с.*

**1.** Алан-йолан итеп, суҡанлап торған. □ Непоседливый, вертлявый. *Алаҡанлаҡ бала.*

**2.** Теләһә кемгә күҙ йүгертеп барған *(күберәк ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* □ Вертлявый.

**АЛАҠАНЛАУ (алаҡанла-)** (Р.: озираться; И.: gaze round; Т.: etrafına bakınmak) *ҡ.*

Тирә-яҡҡа алан-йолан ҡарау. □ Озираться, оглядываться по сторонам. ■ *[Үгеҙ] шундай яман итеп үкереп ебәрҙе, хатта ҡулағәлә тыныс ҡына көйшәп ятҡан һыйырҙар ҙа урындарынан тороп, алаҡанлай башланы.* Н. Ғәлимов.

**АЛА ҠАР** (Р.: весенняя распутица; И.: bad roads in spring; Т.: yolların çamurdan geçilmez olduğu zaman) *и.*

Ҡар иреп, урыны-урыны менән ер асыла башлаған яҙғы мәл. □ Весенняя распутица, когда земля пестрит проталинами. ■ *Яҙ һайын, ырҙын артлап, ала ҡарлы юлдан йүгереп килгәндә ҡып-ҡыҙыл булған ялан аяҡтар бында, .. парлы ҡара тупраҡта кинәнеп йылынып китә.* З. Биишева. ● *Ала ҡарҙа аласағың булһын.* Мәҡәл.

**АЛА ҠАРҒА** (Р.: серая ворона; И.: crow; Т.: karga) *и. зоол.*

**1.** Суҡышы, башы, түше, ҡойроғо һәм ҡанаттары ҡара, ҡәүҙәһенең ҡалған өлөшө ҡуйы һоро төҫтәге, парлашып йәки күмәкләшеп йәшәгән ҡош. □ Серая ворона (лат. *Corvus cornix*). ■ *Ала ҡарғаның бер өлөшө ҡыш ҡөньяҡҡараҡ күсә, икенсе өлөшө ҡалалар тирәһендә үткәрә. Кешенән ҡалған төрлө*

*ташландык аҙыктар, үләкһә, ҡош себештәре, балыҡ менән туклана.* Э. Ишбирҙин. ● *Ала ҡарға килһә, ҡар оҙаҡ ятмай.* Һынамыш.

**2.** *миф.* Изге ҡош, тотем. □ Священная птица, тотем. *Ала ҡарғаны үлтерергә ярамай, изге ҡош ул.*

**3.** *күсм.* Башҡаларҙан берәй яғы менән айырылып торған кешегә ҡарата әйтелә. □ Белая ворона. ■ *Уй-теләктәрҙең сикле булыуы сәбәпле, тиңдәштәр араһында «ала ҡарға» булып йөрөүем өсөн эстән генә атай-әсәйемә, өләсәйемә үпкәләп, күҙ йәштәре түккән саҡтарым аҙ булманы.* «Башҡортостан», 30 август 2011.

**АЛАҠАС КҮБӘЛӘКТӘР** (Р.: пестрянки; И.: Zygaenidae; Т.: kelebekler türü) *и. зоол.*

Сағыу төҫтәге ҡанатлы көндөҙгө күбәләктәр төрө. □ Пестрянки (лат. *Zygaenidae*).

**АЛАҠАСТАР** *и. ҡар. зоол.* **алаҡас күбәләктәр.**

**АЛАҠАС ТУРҒАЙ** (Р.: вьюрок; И.: mountain finch; Т.: dağ ispinozu) *и. зоол.*

Ата турғайҙарының төҫө йылтыр ҡара, аҡ һәм ҡыҙыл көрән аралаш булған турғай; аҡбауыр. □ Вьюрок (лат. *Fringilla montifringilla*).

**АЛАҠ-ЙОЛАҠ** (Р.: полосатый; И.: striped; Т.: çizgili) *с.*

Буйлы-буйлы булған. □ Полосатый. *Алаҡ-йолаҡ сапан.*

**АЛАҠЛАУ (алаҡла-)** (Р.: делать пёстрым; И.: make spotty; Т.: alacalı etmek) *ҡ.*

Ала итеү, ала-сола итеү. □ Делать пёстрым.

**АЛА-ҠОЛА** (Р.: пятнистый; И.: motley; Т.: benekli) *с.*

Төрлө төҫ аралашҡан, сыбар. □ Пятнистый, пёстрый, разношёрстный. *Ала-ҡола кейенгән кешеләр.* ■ *[Ҡолой:] Ул ерҙәр бер ҙә генә урған ергә оҡшамаған, ҡаҙ ашаған шикелле, ала-ҡола булып ята.* С. Мифтахов. ● *Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа.* Әйтем.

**АЛАҠСЫН** (Р.: белое пятно; И.: white spot; Т.: beyaz leke) *и. диал.*

Башҡа төҫ өҫтөндәге аҡ тап. □ Белое пятно, белый цвет на фоне другого. *Алаҡсын болоттар.*

**АЛАҠ-ҺУЛАҠ** (Р.: аляповатый; И.: gaudy; Т.: alaca) *с. диал.*

Ала-сола. □ Аляповатый. ■ *Алаҡ-һулаҡ яҡтыла уның [әбейҙең] сырышып бөткән сырайы ғәжәп ҡырыҫ .. һымаҡ күренде миңә.* Н. Мусин.

**АЛАҠ-ШАҠАЛАЙ** (Р.: чехарда; И.: leapfrog; Т.: birdirbir) *и.*

Малайҙар, егеттәр уйнай торған уйын *(уйнаусылар икегә бүленә; бер төркөмө, билдән бөгөлөп, тотоношоп, бер-бер артлы баҫа; икенсе төркөмдәгеләр уларҙың өҫтөнә һикереп ултыра; аҫтағылар йығылмаһа, һикергәндәре улар урынына баҫа)*; шап-шаҡыр. □ Чехарда. *Алаҡ-шаҡалай уйнау.*

**АЛАЛАНЫУ (алалан-)** (Р.: становиться пёстрым; И.: become spotty; Т.: alacalanmak) *ҡ.*

**1.** Ала төҫкә инеү, алаға әйләнеү. □ Становиться пёстрым, покрываться крапинами. *Туҡыма алаланды.*

**2.** Ала булыу. □ Быть пёстрым, разноцветным. ■ *Нарыш-тау итәгендә .. алаланып ҡар ята.* Ә. Вәли.

**АЛАЛАУ (алала-)** (Р.: делать пёстрым; И.: render spotty; Т.: alacalamak) *ҡ.*

Ала итеү, алаға әйләндереү. □ Делать пёстрым, покрывать пятнами. *Туҡыманы алалап һуғыу.*

**АЛАЛЫ-ҠОЛАЛЫ** *с. ҡар.* **ала-ҡола.**

**АЛАМА I** (Р.: рваный; И.: torn; Т.: eskimiş) *с.*

**1.** Иҫкереп туҙған, тишек-тошоҡ, йыртыҡ. □ Рваный, дырявый, изношенный. *Алама бүрек. Алама күлдәк.* ■ *Ғәлимә еңгә, үҙе менән бергә ғүмер иткән алама юрғанын асып, аҡрын ғына торҙо ла, мейес эсенән быймаһын алып кейҙе.* Б. Ишемғол.

**2.** Иҫкергән, емерелергә торған. □ Обветшалый, ветхий. *Алама һарай.* ■ *Әсәй картая, алама булһа ла өй бар. Ҡайтырға, ..*

*хужалыкты рәткә һалырға, әсәйҙе карарға кәрәк.* Б. Бикбай

**3.** Насар, яман. □ Плохой, скверный, дурной. *Алама ғәҙәт. Алама холоҡ. Алама кеше. Алама көн. Алама хәбәр.* ■ *Буран котора, күҙ асырлык әмәл юк. Яҙғы буран бигерәк тә алама була бит ул.* Р. Солтангәрәев. *Үҙ фиғелең булһа алама, ситте тәнкитләмә, талама.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**АЛАМА II** (Р.: тряпьё; И.: rag; Т.: paçavra) *и.*

Иҫкергән, туҙған кейем-һалым, тотонолған сепрәк-сапраҡ; алам-һалам. □ Тряпьё, ветошь. *Алама йыйыу.*

**АЛАМА III** (Р.: шерсть весенней линьки; И.: molt; Т.: ilkbahar tüyü) *и. диал.*

Баҡта. □ Шерсть весенней линьки.

**АЛАМА IV** (Р.: послед; И.: placenta; Т.: plasenta) *и. диал.*

Сыуын. □ Послед.

**АЛАМА V** *и. диал. ҡар.* **ҡый.**

**АЛАМАҒОЛОШ** (Р.: оборванец; И.: ragamuffin; Т.: hırpani) *и. кәмһ.*

Насар кейенеп йөрөгән ярлы кеше. □ Оборванец. ■ *[Заһит:] Ғәйзулла өйҙәме икән? Өйҙә булып та өйөнә индермәһә, ҡайҙа барырға! Уның бәлки һөйләшкеһе лә килмәҫ әле. Аламағолоштоң кемгә кәрәге бар.* Я. Хамматов.

**АЛАМАЛАНЫУ (аламалан-)** (Р.: изнашиваться; И.: wear (out); Т.: eskimek) *к.*

**1.** Аламаға әйләнеү; иҫкереү, туҙыу. □ Изнашиваться, рваться. *Кейем иҫкерҙе, аламаланды.*

**2.** Насарайыу, яманға әйләнеү. □ Портиться, ухудшаться. *Баланың холко аламаланды. Хәлем аламаланды. Көн аламаланды.*

**АЛАМАЛЫҠ (аламалығы)** (Р.: изношенность; И.: ragged state; Т.: köhnelik) *и.*

**1.** Иҫкергәнлек, туҙғанлыҡ. □ Изношенность, обветшалость. *Кейемдең аламалығы.*

**2.** Насарлыҡ, яманға әйләнгәнлек, боҙолғанлыҡ. □ Подлость, мерзость, пакость. *Аламалыкка барыу. Аламалык эшләү.*

**АЛАМАН I** (Р.: трофей; И.: trophy; Т.: ganimet) *и. иҫк.*

Һуғышта алынған йәки талап алынған мал-мөлкәт. □ Трофей. *Аламан алыу.*

**АЛАМАН II** (Р.: толпа; И.: crowd; Т.: kalabalık) *и. иҫк.*

Кешеләр төркөмө, ҡара халыҡ. □ Толпа.

**АЛАМАНСЫ** (Р.: грабитель; И.: robber; Т.: soyguncu) *и. иҫк.*

Кеше талаусы. □ Грабитель. ■ *Аламансы Тәфтиләү яман ҡыҫа икән.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛАМА ТАЙ** (Р.: жеребёнок; И.: colt of certain age; Т.: tay) *и. зоол.*

Яҙ тыуған ҡолондоң көҙҙән алып йәше тулғанға тиклемге осоро. □ Жеребёнок до одного года, родившийся в период весенней линьки.

**АЛА МИЛӘҮШӘ** (Р.: фиалка трёхцветная; И.: Heartsease; Т.: hercai menekşe) *и. бот.*

Миләүшә төҫлө сәскәле, туғайҙарҙа, урман аҡландарында, йылға буйҙарында үҫкән бер йәки ике йыллыҡ дарыу үләне. □ Фиалка трёхцветная, анютины глазки (лат. *Viola tricolor*). ■ *Ала миләүшәләр — мөхәббәт өсмөйөшө билдәһе. Яҙ башында бүләк ителгән быңдай гөлләмәнең ике төрлө мәғәнәгә эйә булыуы бар.* «Йәшлек», 8 апрель 2008.

**АЛАМ-ҺОЛАМ** (Р.: тряпьё; И.: rags; Т.: paçavralar) *и. йыйн.*

Иҫкергән, туҙған кейем-һалым; тотонолған сепрәк-сапраҡ. □ Тряпьё, старьё. *Аламһолам кейеү.* ■ *[Закир:] Беҙҙең яктар калаға килһә, карбуз-кауын ашар өсөн элек йәшел баҙарға йәки алам-һолам һатып алырға тип, толчок баҙарына бара торған.* З. Биишева.

**АЛАН** (Р.: поляна; И.: glade; Т.: alan) *и. диал.*

Аҡлан. □ Поляна.

**АЛАНҒЫ** (Р.: подмаренник; И.: bedstraw; Т.: yoğurtotu) *и. бот.*

Нәҙек оҙон һабаҡлы, быуын-быуын булып, уратып сыҡҡан оҙонса ваҡ япраҡлы,

ваҡ суҡ сәскәле болон үҫемлеге; бөрмәкәй. □ Подмаренник (лат. *Galium*).

**АЛАН-ЙОЛАН** (Р.: с опаской; И.: cautiously; Т.: özenle) *р*.

Бер тегеләй, бер былай; ялт-йолт. □ С опаской, осторожно. *Алан-йолан ҡарау. Алан-йолан ҡараныу.* ■ *Сәхи йоҡоһонан ҡурҡып уянды. Нишләргә лә белмәй, алан-йолан ҡаранды.* И. Ғиззәтуллин. *Юлаусы хужаны ситкә алып сығып, алан-йолан ҡаранып, һүҙ башланы.* Ғ. Хисамов.

**АЛАН-ҠОЛАН** (Р.: быстро; И.: rapidly; Т.: çabuk) *р*.

Унда-бында, ялп-йолп, ялт та йолт. □ Быстро, мигом. *Алан-ҡолан итеү. Алан-ҡолан күренеү.* ■ *Ут өҫтөнән алан-ҡолан үтеп китә ярғанат.* С. Кулибай.

**АЛАНЛАТЫУ (аланлат-)** (Р.: играть глазами; И.: flirt with one's eyes; Т.: etrafına bakınmak) *ҡ*.

Алан-йолан иттереү *(күҙҙе)*. □ Играть глазами, бросать беспокойный взгляд. ■ *[Мәскәй әбей] ҡот осҡос күҙҙәрен аланлатып, тирә-яғына ни тиклем ҡараһа ла, күрмәгән.* Әкиәттән.

**АЛАНЛАУ (аланла-)** (Р.: озираться; И.: look back; Т.: etrafına bakınmak) *ҡ*.

Ян-яҡҡа алан-йолан, ялт-йолт күҙ ташлау. □ Озираться. *Күҙе аланлап тора.*

**АЛАНЛЫҠ (аланлығы)** (Р.: поляна; И.: glade; Т.: alan) *и. диал.*

Аҡлан, асыҡ ер. □ Поляна. ■ *Аланлыҡтар, муйыл, болонлоҡтар нурға ғына, ахыры, төрөнгән.* М. Шаһманова.

**АЛАҢҒЫРТ** (Р.: редкий; И.: thin; Т.: seyrek) *с*.

**1.** Һирәгерәк, урыны-урыны менән *(үләндәр, урмандар тураһында)*. □ Редкий *(о растениях, лесах)*, выросший кое-где, местами. ■ *Бына алаңғырт ҡайынлыҡ артта ҡалды.* Н. Мусин.

**2.** Аяҙлы-болотло *(көнгә ҡарата)*. □ Малооблачный. *Алаңғырт көн.* ■ *Асыҡлыҡҡа сыҡҡайны, әлеге алаңғырт өҫтән дә, аҫтан да ҡыҫып-уратып торған томан арауығында йәш бер боландың үҙенә табан сабыуын шәйләне Ғәбит.* Ә. Әминев.

**3.** *ҡар.* **ала-сола.**

**АЛАҢҒЫРТЛАУ (алаңғыртла-)** (Р.: покрываться редкими облаками; И.: become covered with sparse clouds; Т.: hava kapanmak) *ҡ*.

Аяҙлы-болотло булыу *(көнгә ҡарата)*. □ Покрываться редкими облаками. *Көн алаңғыртлап тора.*

**АЛА ӨЙРӘК** (Р.: хохлатая чернеть; И.: tufted duck; Т.: tepeli ördek) *и. зоол.*

Ата өйрәктең башы, муйыны, түше, һырты, ҡанаттары һәм ҡойроғо күкһел ҡара, ҡабырғалары, ҡорһағы аҡ, инә ҡоштар һорғолт көрән төҫтә була. Башҡа өйрәктәрҙән ҡара һәм аҡ төҫө, башындағы бүректәре менән айырыла; аласабан. □ Хохлатая чернеть (лат. *Aythya fuligula*). ■ *Ала өйрәк урмандарҙағы күлдәрҙә йәки ярҙары урманлы ятыуҙарҙа йәшәй.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАП (алабы)** (Р.: короб; И.: box; Т.: sepet) *и*.

**1.** Иген йәки башҡа нәмә һалыу өсөн талдан үреп йәки ҡабыҡтан тегеп эшләнгән оҙонса ҙур һауыт. □ Короб *(большой лубочный для хранения зерна)*. ■ *Солан эсендә, бер мөйөштә, бер ҙур ҡабыҡ алап менән көл тора.* М. Ғафури.

**2.** *күсм.* Ҙур, килбәтһеҙ нәмәгә әйтелә. □ Слишком большой, неуклюжий. ● *Ҡыш ҡорһағы — киң алап.* Әйтем.

**3.** *миф.* Алпамыша. □ Великан.

**АЛАПАЙ** (Р.: очень большой; И.: very large; Т.: çok büyük) *с*.

**1.** Килешһеҙ ҙур, йыйнаҡһыҙ. □ Очень большой. *Алапай мейес.*

**2.** *күсм.* Эш рәте белмәгән, йүнһеҙ; эшлекһеҙ. □ Неспособный к работе, ленивый, неряшливый. *Алапай кеше.* ● *Аяҙ-аяҙ көндәрҙә — мейес башында алапай, буран-буран көндәрҙә — һунар сыҡҡан алапай.* Әйтем.

♦ **Алапай менән шалапай** гел бергә йөрөгән ике эшлекһеҙҙән көлөп әйтелә. □ Два

сапога пара *(о двух неразлучных бездельниках).*

**АЛАПТАЙ** (Р.: огромный; И.: huge; Т.: muazzam) *с.*

Үтә ҙур, килбәтһеҙ. □ Огромный, нескладный. *Алаптай кәүҙә.* ■ *Әнфәл алаптай ауыҙын ҡолағына еткәнсе йырғайны.* Н. Игеҙйәнова. *«Ултырып ҡалған ҡыҙ»ға ла тәбиғәт бөтәһен дә бирмәгән: бер яҡтан, юғары белем алған тырыш, баҫалҡы, аҡыллы, эшһөйәр, абруйлы кеше булһа, икенсе яҡтан, ирҙәрҙеке кеүек алаптай ҡуллы, хатта ҡолаҡ япраҡтарына тиклем үрмәләгән үтә лә һипкелле, торғаны бер быжырлы зат кеүек ул.* Ғ. Хөсәйенов.

**АЛАП ҺАЛЫУ (алап һал-)** (Р.: бросать клич; И.: throw cry; Т.: nara atmak) *к.*

Оран һалыу. □ Бросать клич. *Халыҡты алап һалып йыйыу.* ■ *Әҙрәкә эште аңлаған, алап һалып, Ҡот тауға бар дейеүҙе йыйнаған.* «Урал батыр».

**АЛАРТЫУ (аларт-)** (Р.: вытаращить *(глаза)*; И.: stare (at); Т.: gözleri fal gibi açmak) *к.*

Күҙҙең ағын әйләндереп, ҙур итеп асыу. □ Вытаращить *(глаза).* ■ *Ғәзимә: «Алла, баламды нишләттегеҙ?» — тип, күҙҙәрен алартып баҡырып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина. *Ҡулаҡ асыу ҡабартты, ҡанлы күҙен алартты.* Х. Ғәбитов.

**АЛАРЫУ I (алар-)** (Р.: становиться пёстрым; И.: become motley; Т.: alaca olmak) *к.*

Алаға әйләнеү, ала төҫкә инеү; алаланыу. □ Становиться пёстрым, пестрить. // Пестрение. ■ *Ҡояш нурын бөрктө, ҡар аларҙы, нурҙар менән уйнап ел иҫте.* Ш. Галин.

**АЛАРЫУ II (алар-)** (Р.: пучиться; И.: turn bulging; Т.: gözleri fırlamak) *к.*

Ағы әйләнеп, ҙур булып асылыу *(күҙгә ҡарата).* □ Пучиться. ■ *Наиләнең күҙҙәре аларҙы, йөҙө бүртенде, әйтерһең дә уның ауыртҡан урынынан тотоп алдылар.* Ғ. Ибраһимов. *Асыуҙан Ришаттың күҙҙәре аларҙы, аңы томаланды.* «Йәшлек», 1 май 2008.

**АЛАС I** *с. диал. ҡар.* **аласа I.**

**АЛАС II** (Р.: клич минцев; И.: call of the Min tribe; Т.: Min soyunun narası) *и.*

Мең ырыуы ораны. □ Клич минцев.

**АЛАСА I** (Р.: несколько пятнистый; И.: somewhat spotty; Т.: alaca) *с.*

Һирәк-мирәк ала. □ Несколько пятнистый, с мелкими, редкими пятнами. *Аласа һыйыр. Аласа тауар.* ■ *Күк аласа минең ҡулдәккәйем, ҡутәрә лә алмай беләккәйем.* Халыҡ йырынан.

**АЛАСА II** (Р.: пестрядь, пестрядина; И.: lined linen; Т.: alaca) *и.*

**1.** Төрлө төҫтән буй-буй итеп һуҡҡан киндер. □ Пестрядь, пестрядина, полосатая холстина. *Буй-буй аласа.* ■ *Мөһабәт ҡиәфәтле, уҫал ҡарап ултырған граф алдында сәсе, мыйығы етек, өҫ-башы өтөк, аласа төрмә кейемле бығаулы ҡарт енәйәтсенең мөштөм баҫып тороуы арыҫлан менән бесәй торошон хәтерләтә ине.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Төрлө төҫтәге йөндән буй-буй итеп һуҡҡан балаҫ; буй балаҫ. □ Полосатая дорожка. ■ *Айбикә аҫтындағы аласаһын мендәр өҫтөнә ҡайырып ҡапланы ла, .. һыйыр һауырға сығып китте.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛАСАБАН** *и. зоол. ҡар.* **ала өйрәк.**

**АЛАСАБЫР** (Р.: поганка; И.: common chelduck; Т.: batağan) *и. зоол.*

Башы һәм муйыны ҡара йәшел, яурындары ҡара, түше ерән, ҡорһаҡ йөнө, ҡанат ҡауырһындары ҡара-һоро, ә күкрәк аҫты, арҡаһының урта өлөшө, ҡанат төптәре, ҡабырғалары, ҡойроғо аҡ булған өйрәктән ҙурыраҡ ҡош. Ата өйрәктең ҡыҙыл суҡышы өҫтөндә ҙур ғына ҡыҙыл һөйәле була; аласыбар, ағалаҡаҙ. □ Поганка (лат. *Podicipedidae*). ■ *Аласабыр үҫемлектәргә бай ҡулдәрҙә, йылғаларҙа йәшәй, балыҡ, һыу үҫемлектәре һәм бөжәктәре менән туҡлана.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАСАҠ (аласағы)** (Р.: причитающаяся сумма; И.: debt; Т.: borç) *и.*

Бурысҡа бирелгән аҡса йәки бүтән нәмә; *кирәһе* — бирәсәк. □ Причитающаяся сумма, долг. *Аласаҡты алыу. Аласаҡты һорау.*

**АЛАСАҠ-БИРӘСӘК (аласаҡ-бирәсәге)** (Р.: долги; И.: debts; Т.: borç) *и. йыйн.*

Ала торған һәм бирә торған аҡса йәки бүтән нәмә. □ Долги. *Аласаҡ-бирәсәкте иҫәпләп сығарыу. Аласаҡ-бирәсәгем юҡ.*

**АЛАС АРБА** (Р.: дроги; И.: hearse; Т.: uzun at arabası) *и. диал.*

Оҙон арба. □ Дроги.

**АЛА СИР** *и. диал. ҡар.* **ала III.**

**АЛАС-ЙОЛАС** (Р.: неровный; И.: spotty; Т.: benekli) *с.*

Төрлө төҫтә; ала-сола. □ Неровный, пятнистый *(о цвете).* ■ *Бөтә ер сүлгә оҡшап ҡала, йылға үҙәндәре менән туғайлыҡтар ғына алас-йолас йәшел булып ята.* Ә. Вахитов. *Стеналар ялҡын һуғып, ҡарайып, алас-йолас булып бөткән.* Ж. Кейекбаев.

**АЛАСЛАУ (аласла-)** *к. ҡар.* **алаҫлау.**

**АЛА-СОЛА** (Р.: аляпистый; И.: tawdry; Т.: alaca) *с.*

Тимгел-тимгел төрлө төҫтә. □ Аляпистый, аляповатый. ■ *Урман ситтәрендә, уйһыулыҡтарҙа ала-сола ҡар өйөмдәренең эргәһендә умырзая сәскәләре баш ҡалҡыта башланы.* Д. Исламов.

**АЛА-СОЛАЛАНЫУ (ала-солалан-)** (Р.: стать аляпистым; И.: become tawdry; Т.: renk renk olmak) *к.*

Ала-солаға әйләнеү, төрлө төҫлө булыу. □ Стать аляпистым, разноцветным. ■ *Ҡояш юғары күтәрелгән һайын, тау итәктәре, ҡалҡыу урындар ҡарҙан иртәрәк әрселде. Тирә-яҡ ала-солаланды, ҡарайҙы.* Я. Хамматов.

**АЛАССЫ** (Р.: знахарь-окуриватель; И.: quack; Р.: falcı) *и.*

Кейеҙ йәки алама сепрәк яндырып төтәҫләп имләүсе. □ Знахарь-окуриватель.

**АЛАСУҠ (аласуғы)** (Р.: копеечник; И.: sweetvetch; Т.: hedysarum) *и. бот.*

Ҡуҙаҡлылар төркөмөнә ҡараған суҡ сәскәле, яҫмаҡ орлоҡло күп йыллыҡ үҫемлек. □ Копеечник (лат. *Hedysarum*). *Альп аласуғы.* ■ *Быйыл Гуров тауында тәү башлап аласуҡ һәм ҡәнәферҙәр сәскә атты.* «Башҡортостан панорамаһы», № 6, 2008.

**АЛАСЫБАР** *и. зоол. ҡар.* **аласабыр**. ■ *Аласыбар тигән, ай, ала өйрәк бәпкә уйната тыңәрәк күлдәрҙә. Ышанмағыҙ, дуҫтар, был донъяға — ҡан илата бәғзе көндәрҙә.* Халыҡ йырынан.

**АЛА-СЫБАР** (Р.: пятнистый; И.: spotty; Т.: benekli) *с.*

Ала менән сыбар ҡатнашҡан. □ Пятнистый, пёстрый. *Ала-сыбар күлдәк.* ■ *Жираф төҫлө ала-сыбар сепрәккә уранып йөрөй ошо ташкурсаҡ ҡыҙ, йәмен боҙоп урамдың.* М. Тажи.

**АЛАСЫҠ (аласығы)** (Р.: лубяная или плетнёвая постройка на летовке; И.: kind of light summer dwelling; Т.: kulübe) *и.*

**1.** Йәйләүҙә көн итеү өсөн ҡабыҡ йәки ситәндән эшләнгән ҡаралты. □ Лубяная или плетнёвая постройка на летовке. ■ *Күк килгәндә ҡороҡ менән ергә һуға-һуға, өй, тирмә, аласыҡтарҙы уратып сығаһың.* Халыҡ ижадынан.

**2.** Ишек алдындағы йәйге аш өйө. □ Летняя кухня *(во дворе). Аш аласығы. Ут аласығы.* ■ *Ҡоҙағыйының аласыҡтан йүгерә һалып сығып, ҡәҙерләп сәйгә саҡырыуы хас та әсәһенең өлтөрәп тороуын хәтерләтте.* Г. Ғиззәтуллина. *Аласыҡтары ла иркен, йыйнаҡ. Һикеһендә самауыр боҫрап ултыра.* Н. Мусин.

**3.** Төрлө маҡсат өсөн эшләнгән еңел ҡоролма. □ Небольшая постройка для различных целей. ■ *Йәмле Ағиҙел буйында аласыҡ тора. Мейес алдында тимерселәр ҡорос ҡыҙҙыра.* М. Сөндөклө. *Мүкһеҙ аласыҡтың тыранса ҡыйығындағы йомро ботаҡ тишектәренән аласыҡ буйлап буй-буй яҡты юлаҡтар һуҙылған.* Д. Шәрәфетдинов.

**АЛАҪЛАУ (алаҫла-)** (Р.: окуривать; И.: fumigate; Т.: tütsülemek) *к. диал.*

Кейеҙ йәки алама сепрәк яндырып төтәҫләү *(им өсөн).* □ Окуривать дымом,

сжигая войлок или ветошь *(по народному поверью, лечит от сглаза и т.п.)*. // Окуривание. *Ауырыу атты алаҫлау.*

**АЛА ТАҢ** (Р.: предрассветное время; И.: time preceding dawn; Т.: gün ağarmadan önce) *и.*

Ҡараңғылы-яҡтылы булып, таң беленә башлаған саҡ. □ Предрассветное время. *Ала таңдан эш башлау.*

**АЛАТОБА** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуына ҡараған аймаҡтың исеме. □ Название родового подразделения башкир-юрматинцев.

**АЛАТОЯҠ** (Р.: пройдоха; И.: rapscallion; Т.: haylaz) *и. диал.*

Әрһеҙ. □ Пройдоха.

**АЛАТУБА** (Р.: вяхирь; И.: common wood pigeon; Т.: boynu kalkalı güvercin) *и. зоол.*

Дөйөм төҫө күкһел һоро, түше һәм ҡорһағы ҡыҙғылт һоро, ҡанат ситтәре, ҡойроғоноң ике яғы, муйынында аҡ һыҙыҡтары булған йорт күгәрсененән байтаҡ ҙур ҡош; алатүбә, аладыуа, ҙур күгәрсен, урман күгәрсене. □ Вяхирь (лат. *Columba palumbus*). ■ *Алатубаның ҡойроҡ осо ҡара, күҙҙәре һары, аяҡтары күкһел ҡыҙыл, суҡышының осо һары, түбә ҡыҙыл була.* Э. Ишбирҙин.

**АЛАТҮБӘ** *и. зоол. ҡар.* **алатоба.**

**АЛАТЫҠ** *бәйл. диал. ҡар.* **алып**. ■ *Билдән алатыҡ яланғас көйө Ҡыҙылға төшөп барыусы егет уларға [ҡыҙҙарға] ҡыҙыҡ күренде, ахырыһы.* Т. Килмөхәмәтов.

**АЛАТЫР** (Р.: алатырец; И.: person from the town of Alatyr; Т.: Alatırlı) *и. һөйл.*

Ҡаты итеп «ц» менән һөйләшкән мишәрҙәрҙең атамаһы *(Алатыр ҡалаһы яғынан күсеп килгәндәр)*. □ Алатырец.

**АЛАТЫРЛАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Гәрә башҡорттары аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-гэрэ.

**АЛАҺЫ** *и. ҡар.* **аласаҡ**.

**АЛАША** (Р.: мерин; И.: gelding; Т.: iğdiş at) *и. зоол.*

**1.** Бестерелгән айғыр. □ Мерин. ■ *Сәрмәсән күперен үткәс, һөҙәк кенә үр китте, ләкин алаша юрғалауҙан туҡтаманы, билдәһеҙ бер музыкаға бейегәндәй, бара бирҙе.* Х. Ғиләжев.

**2.** Ҡорбанға тәғәйенләнгән ат. □ Жертвенное животное (лошадь). ■ *Яуым һарҡаштаһа, ҡорбанға алаша һуйырҙар ине әүәле.* Экспедиция материалдарынан.

**3.** Йонсоу, ябыҡ ат. □ Изнурённая лошадь. ■ *[Аҡтар:] Әйҙә бесәндәрен ылауға тейә. Алашаһын ек. Арыҡ булһа ла, арбаны тартып бара алыр әле.* Ш. Шәһәр. *Поезд станция һайын оҙаҡ-оҙаҡ туҡтап, йонсоған ҡарт алаша шикелле, ухылдай-ухылдай, көнө-төнө барҙы.* Ғ. Лоҡманов.

**4.** *күсм. мыҫҡ.* Ҡатын-ҡыҙға ымһынып маташҡан оло ир. □ Неравнодушный к женщинам старый мужчина. ■ *[Сәхипгәрәй:] Ҡара һин уны, ҡарт алашаны, өсөнсө бисә тип хыяллана.* И. Ғиззәтуллин.

**АЛАШАПРАН** (Р.: осенне-весеннее бездорожье; И.: lack of (good) roads in autumn; Т.: sonbaharda yolların kötüleştiği vakit) *и. диал.*

Юл өҙөгө, һыу-һүл ваҡыт. □ Осенне-весеннее бездорожье. ■ *Әгәр ҙә бынауы алашапран ваҡыт булмаһа, ыстансаға сығып, аталарын үҙ күҙҙәре менән оҙатып ҡалырҙар ине.* Й. Солтанов.

**АЛАШАР** (Р.: кастрат; И.: castrate; Т.: hadım) *и.*

Енси биҙҙәре алынған ир. □ Кастрат, евнух. ■ *Алашарҙан балаң нисәү тип һорамайҙар. Әйе, алашар баланан, Садрислам намыҫтан мәхрүм кеше.* Ш. Бикҡол.

**АЛБАҒАНА** (Р.: передняя стойка ткацкого станка; И.: detail of a loom; Т.: dokuma tezgahının detayı) *и. диал.*

Киндер станының борғоса ҡуйыла торған алғы бағанаһы. □ Передняя стойка ткацкого станка *(на которую вставляется валёк для наматывания вытканного материала).*

**АЛБАЛАУ (албала-)** (Р.: запрячь цугом; И.: harness in a tandem; Т.: ardışık koşum) *к.*

Аттарҙы аллы-артлы егеү; сыбаталау. □ Запрячь цугом. ■ *Буран булып юлды көрт баҫҡанда, берәр ат ҡына түгел, албалап икешәр-өсәр ат ектеләр.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛБАРЫ I** (Р.: обычно; И.: usually; Т.: adeta) *р. диал.*

Ғәҙәттә, ҡағиҙә буларак. □ Обычно, как правило. *Албары беҙҙән сыкмай торғайны, кәрәккәндә килмәй.*

**АЛБАРЫ II** (Р.: помимо; И.: besides; Т.: başka) *бәйл.*

Башҡа, башҡаса, бүтән. □ Помимо. *Һин булмай, албары кем булһын.*

**АЛБАҪТЫ** (Р.: албасты; И.: evil spirit; Т.: cadı) *и.*

**1.** *миф.* Башҡорт мифологияһында ялбыр һары сәсле, оҙон имсәкле ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә һүрәтләнгән ен-пәрей заты. □ Албасты *(в мифологии башкир демонический персонаж в образе женщины с длинными распущенными светлыми волосами и длинными грудями, которые она закидывает за спину; она вредит роженицам, новорождённым, может сожительствовать с одинокими людьми).* ■ *Кешегә албаҫты ҙәңгәр күҙле, һары сәсле ҡыҙ булып килә.* Экспедиция материалдарынан. *[Ғәзелбанат:] Иргә эйәләшкән албаҫтыны ҡыуыуы тәндәге зәхмәтте сығарыуҙан да ауырырак ул.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** *күсм.* Сәсе туҙған, әрпеш, уҫал ҡатын-ҡыҙға әрләп әйтелә. □ Растрёпанная, неопрятная, безобразная, злая женщина. ■ *[Шаһнияз:] Кит янымдан, албаҫты! Күҙемә күренмә!* Ә. Мирзаһитов.

**АЛБАҪТЫ БАҪЫУ (албаҫты баҫ-)** (Р.: видеть кошмарные сновидения; И.: nightmare; Т.: kötü rüya görmek) *к. миф.*

Ен-пәрей заттары ярҙамында ҡурҡыныс төштәр күреү, баҫлығыу. □ Видеть кошмарные сновидения, вызываемые демоном Албасты.

**АЛБАҪТЫ ҠЫУЫУ (албаҫты ҡыу-)** (Р.: изгнание албасты; И.: magical way to treat illnesses; Т.: hastalığı gideren büyüleyici usül) *к.*

Им-том менән ен-пәрейҙән ҡотолоу. □ Магический способ избавления от албасты.

**АЛБАҪТЫ ОЯЛАУ (албаҫты ояла-)** *к. ҡар.* **албаҫты эйәләү.**

**АЛБАҪТЫ ЭЙӘЛӘҮ (албаҫты эйәлә-)** (Р.: помешаться; И.: become ill from an evil spirit; Т.: delirmek) *к. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, яман заттарҙың кешене алмашаландырыуы. □ Помешаться, заболеть от вселения нечистой силы. *Албаҫты, ғәҙәттә, яңғыҙ иргә, яңғыҙ ҡатынға эйәләй икән.*

**АЛБАҪТЫ ӘМӘЛЕ** (Р.: козни албасты; И.: machinations of evil spirits; Т.: cadı entrikaları) *и. миф.*

Албаҫтының кешегә ҡырҡ төрлө әмәл менән зыян килтереүе. □ Козни албасты.

**АЛ БИРЕҮ (ал бир-)** (Р.: уступить первенство; И.: let surpass oneself; Т.: yenilmek) *к.*

Ярышта, көрәштә еңелеү, башҡаларҙы үҙеңдән уҙҙырыу. □ Уступить первенство, дать опередить себя. ■ *Ал бирмә күмәк эштә ярышканда, ат менеп, дошман менән алышканда.* Ғ. Әмири.

**АЛБИРМӘҪ** (Р.: лидер; И.: leader; Т.: galip) *с.*

Башҡаларҙы алдына сығармай торған; бик етеҙ. □ Не уступающий первенства, лидер. ■ *Вәғәҙә иткән төн уртаһы етте. Сөләй байҙың албирмәҫ кола йүгереге эйәрле.* С. Кулибай. *Данлы юл үтте Таңатар ауылы үҙенең албирмәҫ тырыш уландары-ҡыҙҙары менән.* Ҡ. Аралбаев.

**АЛБҮРЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Уран ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение племени уран.

**АЛБЫРАТЫУ I (албырат-)** (Р.: докучать; И.: pester; Т.: rahatsız etmek) *к.*

**1.** Тәҡәтен алыу, ҡаңғыртыу. □ Докучать, морочить голову *кому.* ■ *[Аҡсулпанов:] Барый, һин Бикәне һөйәһең икән, ҡыҙҙы албыратып йөрөтмә! Өйлән.* Ғ. Ғүмәр.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **албырау I.**

**АЛБЫРАТЫУ II (албырат-)** (Р.: занимать; И.: amuse; Т.: oyalamak) *к. диал.*

Албырғатыу. □ Занимать, забавлять *кого.*

**АЛБЫРАУ I (албыра-)** (Р.: изнуряться; И.: become weary; Т.: yorulmak) *к.*

Иҫ-тәҡәтһеҙ булыу; ҡаңғырыу. □ Изнуряться, утомляться. *Бына ятҡан ауылға барып етә алмай албырап бөткән. Бесәне ваҡ икән. Ун күбәне һалғанса, тамам албыратты.*

**АЛБЫРАУ II (албыра-)** (Р.: забываться; И.: be carried away; Т.: kendini unutmak) *к. диал.*

Албырғау. □ Забываться, увлекаться. ■ *[Татлы:] Эй-й... һүҙгә албырап тик ултырам. Ҡымыҙға яңы һөт өҫтәргә ваҡыт таһа.* Ш. Насыров.

**АЛБЫРҒАНЫУ (албырған-)** (Р.: теряться; И.: get lost; Т.: şaşırmak) *к.*

Ни эшләргә белмәй юғалыу; ҡаушау. □ Теряться, растеряться, смущаться. ■ *Улар перронға сыҡтылар. Ығы-зығы ҡупты. Мөслимә албырғанып һөрлөгөп тә алды. Ҡыҙы вагон баҫҡысына күтәрелгәс кенә, ул үҙенең япа-яңғыҙ ҡаласағын һиҙҙе.* Р. Низамов.

**АЛБЫРҒАТЫУ (албырғат-)** (Р.: занимать; И.: amuse; Т.: oyalamak) *к.*

**1.** Кешенең ни менәндер күңелен тартыу; әүрәтеү. □ Занимать, забавлять *кого.* ■ *Оҙаҡ ваҡыт һуғыш тураһында һорашмаҫҡа, яуҙа ятып ҡалған дуҫтарын хәтергә төшөрмәҫкә тырышҡандар; тыныс тормош йәшәйешенә тиҙерәк күсереү, икенсе хәл-ваҡиғалар менән албырғатыу сараһын күргәндәр.* М. Бураҡаева.

**2.** Кешенең иғтибарын *ниҙәндер* ситкә тартыу. □ Отвлекать *кого*, мешать *кому.* ■ *Һөжүм башлыҡтары ҡарауылсыны албырғатырға ике-өс малай ебәрәләр. Улар баҡсаның ҡапма-ҡаршы яғына баралар ҙа шаулашып ҡоймаға менә башлайҙар.* Х. Мохтар.

**АЛБЫРҒАУ (албырға-)** (Р.: забываться; И.: be keen (on); Т.: kendini unutmak) *к.*

**1.** *Ни менәндер* мәшғүл булып, онотолоу; әүрәү. □ Забываться, увлекаться. ■ *Көн уҙғарһаң эшкә албырғап, бәхет бар ул, бар ул, валлаһи.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Иғтибарҙы икенсе бер нәмәгә йүнәлтеү. □ Отвлекаться. ■ *Ирешелгән уңыштар менән албырғап, ҡайһы бер кәмселектәрҙе әйтмәй яҡшы булмаҫ ине.* М. Кәримов.

**3.** Ни эшләргә белмәй юғалыу; ҡаушау; албырғаныу. □ Теряться, растеряться. ■ *«Ғәмбәров үҙе килә» тигәнде ишеткәс, Сөйөмбикә .. ҡайҙа барып тотонорға, ни эшләргә белмәй албырғаны ла ҡалды.* Ш. Янбаев. *Мин — кәлгә. Минең эсемдә һаклана бауыр итем. Миңә ҡурсалау, яклау хас, ҡурҡыу, албырғау — ситен.* Л. Абдуллина.

**АЛГЕБРА** [рус. < нем. < ғәр. الجبر] (Р.: алгебра; И.: algebra; Т.: cebir) *и.*

Дәүмәлдәрҙең һан күрһәткесен иҫәпкә алмай, дөйөм ғәмәл ысулдарын өйрәнә торған математика бүлеге. □ Алгебра. ■ *Беҙ 60–70-се йылдарҙа Мәйсәрә Әхтәмова тәржемә иткән алгебра һәм геометрия дәреслектәре буйынса уҡыныҡ.* Ә. Аҡбутина.

**АЛГЕБРАИК** (Р.: алгебраический; И.: algebraic; Т.: cebirsel) *с.*

Алгебрала ҡулланылған тамғалар (хәрефтәр, хәреф ҡушылмалары, цифрҙар һ.б.) менән сағылдырылған, яҙылған. □ Алгебраический. *Алгебраик аңлатма.*

**АЛГОРИТМ** [рус. < ғәр. الخوارزمى ‘әл-Хәрәзми’] (Р.: алгоритм; И.: algorithm; Т.: algoritma) *и.*

**1.** *мат.* Бирелгән типҡа ҡараған мәсьәләне сисеү өсөн элементар ғәмәлдәрҙең системаһын билдәле бер тәртиптә үтәү тураһындағы теүәл ҡағиҙәләр. □ Алгоритм. *Һандан тамыр алыу алгоритмы.*

**2.** Ҡуйылған маҡсатка ирешеү өсөн билдәле бер тәртиптә, ҡағиҙә буйынса үтәй, башҡара торған эш-хәрәкәт. □ Алгоритм. *Йәшәү алгоритмы.*

**3.** *мед. Ниндәйҙер* мәсьәләне хәл иткәндә операцияның йөкмәткеһен һәм эҙмә-эҙлелеген билдәләгән ҡағиҙәләр системаһы. □ Алгоритм. ■ *Медицинала тикшереү материалдарын эшкәртеүҙә, диагноз ҡуйыуҙа стандартлаштырылған алгоритм булдырыла.* М. Аҙнабаев.

**АЛГОРИТМЛАШТЫРЫУ (алгоритмлаштыр-)** (Р.: алгоритмизация; И.: algorithmization; Т.: programlama) *ҡ.*

Билдәле типҡа ҡараған мәсьәләне сисеү өсөн элементар ғәмәлдәрҙең системаһын бер тәртиптә үтәү буйынса теүәл ҡағиҙәләр төҙөү. □ Алгоритмизация.

**АЛҒА I** (Р.: вперёд; И.: forward; Т.: öne) *р.*

Ал яҡҡа табан. □ Вперёд. *Алға барыу. Алға сабыу. Алға ынтылыу.* ■ *Кешеләр ҡуҙғалалар, түш менән алға шыуалар.* Д. Юлтый. *Кабинаға инеп ултырып, алға ҡуҙғалдым.* Н. Мусин. ● *Артҡа ҡарап ғибрәт ал, алға ҡарап шөһрәт ал.* Мәҡәл.

**АЛҒА II** (Р.: вперёд; И.: let’s go; Т.: haydi) *ымл.*

Эш-көрәшкә өндәгәндә әйтелә. □ Вперёд *(выражает приказ, призыв к действию).* ■ *Алға, иптәштәр, алға, бөйөк идеалға.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛҒА АЛЫУ (алға ал-)** (Р.: ставить *что-либо* целью; И.: set as goal; Т.: bir hedef belirlemek) *ҡ.*

*Нимәнелер* маҡсат итеп ҡуйыу. □ Ставить *что-либо* целью. ■ *[Өмөт] бер эште алдына алһа, осона сыкмай тороп туктамай, көн саба, төн саба, аҙап сигеп йөрөй торғас, бер нәмәһен килтереп сығара торған кеше.* Д. Юлтый. *Ил граждандары һаулығын дәүләт кимәлендә һаклау мәсьәләһен алға ҡуйыу — иң изге эштәрҙең береһе.* М. Сәфәрғәлина.

**АЛҒАҘАУ (алғаҙа-)** (Р.: вдохновляться; И.: feel inspired; Т.: esinlenmek) *ҡ. диал.*

**1.** Алғыһау, дәртләнеү, ярһыу. □ Вдохновляться, возбуждаться.

**2.** Юҡһыныу, һағыныу. □ Тосковать, скучать.

**АЛҒАҘЫУ (алғаҙы-)** *ҡ. диал. ҡар.* **албырғау 1, 2**.

**АЛҒА КИЛЕҮ (алға кил-)** (Р.: исполняться; И.: be realized; Т.: gerçekleşmek) *ҡ.*

Ғәмәлгә ашыу, күрәһенә булыу. □ Исполняться, претворяться в жизнь. ■ *[Ҡарлуғас:] Белмәйем инде, быға тиклем бер генә көткәнем дә алдыма килгәне юк шул.* Б. Бикбай.

**АЛҒА ҠУЙЫУ (алға ҡуй-)** *ҡ. ҡар.* **алға алыу.**

**АЛҒАСҠЫ** (Р.: авангард; И.: vanguard; Т.: öncü) *и. хәрб.*

Ғәскәрҙең йәки флоттың төп көстәрҙән алдан барған сафы йәки төркөмө. □ Авангард. *Алғасҡы ҡуйыу. Алғасҡы ғәскәр. Алғасҡы төркөмө.* ■ *Ҡаһым түрә утлы Париждарға алғаскыла бәреп кергәндә, Салауаттың һынын олатайҙар еңеү тыуы итеп күргәндәр.* Р. Ғарипов.

**АЛҒАСТЫ** (Р.: перспектива; И.: perspective; Т.: perspektif) *и. иҫк. кит.*

Алдағы хәл йәки күренеш. □ Перспектива. / Перспективный. *Алғасты күренеш.*

**АЛҒА ҺӨРӨҮ (алға һөр-)** (Р.: двигать вперёд; И.: translate into reality; Т.: ilerletmek) *ҡ.*

Ғәмәлгә ашырырға тырышыу. □ Двигать вперёд.

**АЛҒАШТЫРЫУ (алғаштыр-)** (Р.: выдвинуть вперёд; И.: move (forward); Т.: önermek) *ҡ. диал.*

Алға этеү, алға сығарыу. □ Выдвинуть вперёд.

**АЛҒЫ** (Р.: передний; И.: front; Т.: ön) *с.*

**1.** Ал яҡтағы, алда торған; *киреһе* — артҡы. □ Передний. *Алғы теш. Алғы тәгәрмәс.*

■ *Әбей сәңгелдәкте һаҡлыҡ менән генә .. алғы булмәгә алып сығып китте.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** Иң алда барған, алда торған. □ Передовой, авангардный. *Алғы отряд. Алғы һыҙыҡ.*

**3.** Алда буласаҡ; киләсәк. □ Будущий. *Алғы тормош. Алғы яҙмыш.* ■ *Ысын ирекле алғы көн өсөн көрәшеп уткәр ҡыҫҡа ғумереңде.* Ш. Бабич.

**АЛҒЫЛАУ (алғыла-)** (Р.: брать, получать; И.: take from time to time; Т.: almak) *к.*

Ҡат-ҡат, бер нисә тапҡыр алыу. □ Брать, получать несколько раз. *Хат алғылау.* ■ *Эй музыкам-скрипкам, мандолинам, әленән-әле һеҙҙе ҡулға алғылайым.* Ш. Шәрифуллин.

**АЛҒЫР I** (Р.: ловкий; И.: dexterous; Т.: açıkgözlü) *с.*

**1.** Етеҙ, тиҙ хәрәкәтле, сапсан. □ Ловкий, хваткий, цепкий. *Алғыр бөркөт. Алғыр бүре. Алғыр эт.* ■ *Аҡбай алғыр, бик сос, .. ул булһа, мин һунарҙан буш ҡул менән ҡайтмайым.* К. Ильясов. *Алғыр арғымаҡ алымынан билдәле.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Эшкә, хәрәкәткә сос, өлгөр, уңған *(кешегә ҡарата).* □ Проворный, ловкий, расторопный *(о человеке).* ■ *Йә еләйем һыбай, йә егәйем, үтеп бара алғыр, йылғыр саҡ.* Р. Ғарипов. *[Бикмырҙа:] Ҡарасы, ниндәй алғыр, һол да бар икән үҙеңдә.* Ғ. Ибраһимов. ● *Алғыр кеше алымынан, йылғыр кеше аҙымынан билдәле.* Әйтем.

**АЛҒЫР II** (Р.: лишний зуб; И.: extra tooth; Т.: fazladan diş) *и.*

Эстән икенсе рәт булып сыҡҡан артыҡ теш. □ Лишний зуб, появившийся за зубным рядом.

**АЛҒЫРЛАНЫУ (алғырлан-)** (Р.: действовать энергично; И.: act energetically; Т.: cesaret göstermek) *к.*

Көс-ҡеүәткә тулышып ярһыу; айбарланыу. □ Действовать энергично, возбуждённо. ■ *Арыҫландай алғырланып, йөрәкһеп килә егеттәр.* С. Әлибаев.

**АЛҒЫРЛЫҠ (алғырлығы)** (Р.: проворство; И.: promptness; Т.: çeviklik) *и.*

Етеҙлек, йылғырлыҡ, сослоҡ. □ Проворство, цепкость, хваткость. ■ *[Зөһрә:] Һуңынан ирем миңә Муйнаҡтың да, башҡаларҙың да аҡбуҙ толпарҙың алғырлығына иҫтәре китеп торғанын үҙе һөйләп бирҙе.* Халыҡ ижадынан.

**АЛҒЫРТЕШ** *и. диал. ҡар.* **алғыр II**.

**АЛҒЫС** (Р.: приёмник; И.: receiver; Т.: alıcı) *и.*

Электромагнит тулҡындарын ҡабул итә ала торған аппарат. □ Приёмник. / Приёмный. *Алғыс антенна. Алғыс радиостанция. Радиоалғыс.*

**АЛҒЫҺАТЫУ (алғыһат-)** (Р.: возбуждать; И.: excite; Т.: heyecanlandırmak) *к.*

**1.** Берәй уй-теләк, ниәт менән ашҡындырыу; йөрәкһетеү. □ Возбуждать, волновать.

**2.** Һағындырыу, юҡһындырыу. □ Наводить тоску, скуку, вынуждать, скучать, тосковать. ■ *Ерем — алтын бишек, алғыһатыр инде ҡайтырға.* Халыҡ йырынан.

**3.** *эйһ. ф. ҡар.* **алғыһау**.

**АЛҒЫҺАУ (алғыһа-)** (Р.: стремиться *к кому-чему*; И.: strive to; Т.: istemek) *к.*

**1.** Берәй уй-теләк, ниәт менән ашҡыныу; йөрәкһеү. □ Стремиться к *кому-чему*, томиться в ожидании *кого-чего.* ■ *Яҙғы йылға кеүек үҫә барҙы алғыһаған йөрәк ташҡыны.* Ҡ. Даян. *Алғыһап торған буҙ толпар Алпамышаныҡы булһасы.* «Алпамыша».

**2.** Һағыныу, юҡһыныу, яманһыулау, ерһәү. □ Тосковать, скучать. *Алғыһап бөтөү.*

**АЛҒЫШ I** (Р.: друг; И.: friend; Т.: arkadaş) *и. иҫк.*

Дуҫ. □ Друг, подруга. ● *Тапҡан — табыш, таныған — алғыш.* Әйтем.

**АЛҒЫШ II** (Р.: благопожелание; И.: good wish; Т.: iyi dilek) *и.*

**1.** Яҡшы теләк. □ Благопожелание. *Алғыш алыу.* ■ *Алғыш (кот теләү) — халыҡ ижадының бер төрө.* К. Мәргән.

**2.** *диал.* Рәхмәт, ихтирам. □ Благодарность, уважение. ● *Ата-әсә алғышы уткаһыуға батырмаҫ.* Әйтем. *Ҡарғыш алма,*

*алғыш ал.* Әйтем. *Алғыш та төшә, ҡарғыш та төшә.* Әйтем.

**АЛҒЫШАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-кыпчаков.

**АЛҒЫШЛАНЫУ (алғышлан-)** (Р.: радоваться; И.: be glad; Т.: sevinmek) *к. диал.*

**1.** Шатланыу, шатланып рәхмәт белдереү. □ Радоваться, быть благодарным. *Бала шул тиклем алғышланды.*

**2.** Ымһындырыу, ышандырыу. □ Обнадёжить, соблазнять *кого. Алғышландырҙы ла сәй эсермәне.*

**АЛҒЫШЛАУ (алғышла-)** (Р.: одобрять; И.: approve; Т.: onaylamak) *к. диал.*

Хуплау. □ Одобрять. // Одобрение.

**АЛДА I** (Р.: впереди; И.: in front; Т.: ileride) *р.*

**1.** Йөҙ, күҙ ҡараған яҡта. □ Впереди. ■ *Алда команда тауышы ишетелде.* Д. Юлтый.

**2.** Буласаҡ тормошта, киләсәктә. □ Впереди, в будущем. ■ *Беҙҙең тормош алда әле, үҫтерербеҙ роза гөлдәрен.* Ғ. Сәләм. *Тормош тотош әкиәткә оҡшаш: алда — бәхет, алда — өмөттәр.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**3.** Бүтәндәрҙән элек; беренсе. □ Быть первым, передовым. *Ул башкаларҙан алда килде. Ярышта алда барыу.* ● *Алда буласаҡ туй өсөн бөгөн бейей башлама.* Мәҡәл. *Алда килһәң, ит бешә; һуңға ҡалһаң, бит бешә.* Мәҡәл. *Алда килгән — урын өсөн, аҙаҡ килгән — тамаҡ өсөн.* Әйтем.

**АЛДА II** (Р.: перед; И.: before; Т.: önünde) *бәйл.*

**1.** Сығн. клш. исемдәр менән эш-хәлдең үтәлеш ваҡытын, тәртибен белдерә; элек. □ Перед *(послелог с исх.п.)* ■ *[Айбулат менән Зөфәр] уларҙан алда киткән йөктәрҙең дә ҡайҙа икәнен төшөнмәйенсә, аптырап-ҡырап һөйләштеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Сифат ҡылымдың **-р** формаһы менән килеп, эш-хәлдең үтәлеш ваҡытын белдерә. □ Послелог с причастием на **-р**. Перед, до. *Китер алда. Ҡайтыр алда.* ■ *Улар ҡараңғы төшөр алда килделәр.* Д. Юлтый.

**АЛ ДА ГӨЛ** (Р.: прекрасно; И.: tiptop; Т.: çok güzel) *р.*

Бөтәһе лә яҡшы, шәп, бик һәйбәт. □ Прекрасно, замечательно; очень хорошо. ■ *Беҙҙең эштәр шунда ук ал да гөл булып китте.* Д. Исламов. *Ерем, тип янған, ауылдарҙы күтәрергә, йәшәтергә тырышкан ошондай етәкселәр бар. Уларҙа ла бөтәһе лә ал да гөл түгел, мәгәр ҡул ҡаушырып, төшөнкөлөккә бирелеп ултырмайҙар.* «Йәшлек», 27 август 2011.

**АЛДАҒЫ** (Р.: находящийся впереди; И.: front; Т.: ön) *с.*

**1.** Алғы яҡтағы; алғы. □ Расположенный, находящийся впереди; передний. *Алдағы ауыл. Алдағы рәт.*

**2.** Алда буласаҡ; киләһе. □ Предстоящий, будущий. *Алдағы баҙар. Алдағы йыл. Алдағы көн. Алдағы эш.*

**АЛДАҠ (алдағы)** (Р.: ложь; И.: falsehood; Т.: yalan) *и.*

Дөрөҫ булмаған һүҙ, ялған хәбәр; алдыҡ. □ Ложь, враньё. / Лживый. ■ *Кенәздең күҙен дә йоммай һөйләгән сеп-сей алдаҡтарына көлмәй саҡ-саҡ ҡына түҙеп торған барон, .. йөҙөн күрһәтмәҫ өсөн, ситкә боролдо.* И. Насыри. *Алдаҡ бергә тупланып, үҙеңә кире ҡайта: әгәр уның алдағы кемгәлер матди зыян килтерһә, кешенең матди проблемалары башлана, кемдеңдер сәләмәтлегенә зыян килһә, үҙе лә сәләмәтлеген юғалтыуы мөмкин.* «Киске Өфө», 27 август 2011.

**АЛДАҠСЫ** (Р.: обманщик; И.: liar; Т.: yalancı) *и.*

Алдай торған кеше. □ Обманщик, лжец, лгун. / Лживый. *Алдаҡсыға юлығыу.* ● *Дөрөҫлөк алдаҡсының күҙен тишә.* Мәҡәл. *Алдаҡсы дуҫың булғансы, ысын дошманың булһын.* Мәҡәл. *Алдаҡсының теле мең ҡолас.*

Әйтем. *Мактансыҡ иренен ялар, алдаксы артына ҡарар*. Мәҡәл.

**АЛДАҠСЫЛЫҠ (алдаҡсылығы)** (Р.: плутовство; И.: trickery; Т.: yalancılık) *и.*

Дөрөҫ булмағанды һөйләгәнлек, ялғанлыҡ. □ Плутовство, притворство. ■ *Алдаксылығы асылған Әлмөхәмәтов халыҡ алдында көлкөгә ҡала*. Ғ. Әбсәләмова.

**АЛДАЛАУ (алдала-)** (Р.: обманывать; И.: lie; Т.: yalan söylemek) *к. диал.*

Алдау. □ Обманывать, врать. ■ *Инсан улын алдалау анһат, еңел, сөнки ул бер ҡатлы һәм йомшаҡ күңелле*. Ш. Бабич.

**АЛДАН** (Р.: впереди; И.: in front; Т.: önde) *р.*

**1.** Башлап, беренсе булып. □ Впереди, спереди. *Алдан барыу. Алдан атлау.* ■ *Улар үҙҙәрен ауылдың иң олоһо, иң өлкән ярҙамсыһы, халыҡ араһында алдан йөрөгән, бөтә халыҡ кәрәген ҡайғырткан кеше урынына ҡуя*. Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Ваҡытынан элек, көн элгәре. □ Заранее, заблаговременно. *Алдан белеү. Алдан белдереү. Алдан билдәләү. Алдан иғлан итеү. Алдан әҙерләнеү.* ■ *Бәрейҙәр алдан танышкан ҡыҙ-ҡыркынды урлар булған*. Халыҡ ижадынан.

**АЛДАН-АЛА** (Р.: раньше времени; И.: prematurely; Т.: erken) *р.*

Ваҡыты етмәҫ борон, көн элгәре. □ Раньше времени, раньше срока; преждевременно. ■ *Ҡуй, улым, улай тимә, үҙеңде алдан-ала ерләп ни*. З. Ураҡсин.

**АЛДАН АЛЫУ (алдан ал-)** (Р.: заблаговременно предупреждать; И.: forewarn; Т.: erken haber vermek) *к.*

**1.** Берәй эш-хәл тураһында башҡаларҙан алда әйтеп тороу. □ Заблаговременно предупреждать.

**2.** Кеше әйтер һүҙҙе унан элек әйтеү. □ Опережать *кого*, сказать *о чём* раньше *кого*.

**2.** *диал. ҡар.* **яҡлау**.

**АЛДАН КҮРЕҮ (алдан күр-)** (Р.: предвидеть; И.: foresee; Т.: tahmin etmek) *к.*

Ни булырын ваҡытынан элек белеп тороу. □ Предвидеть, предугадать, предусмотреть. ■ *[Байғужа] ҡарап торғанда, йыуаш, һалмаҡ кеше кеүек күренһә лә, тапҡыр, етеҙ, алдан күрә торған кеше*. Д. Юлтый.

**АЛДАНЫУ (алдан-)** *к.*

**1.** *төш. ҡар.* **алдау**. *страд. от* **алдау**.

**2.** *ҡайт. ҡар.* **алдау**. *возвр. от* **алдау**.

**АЛДАП-ЙОЛДАП** (Р.: обманом; И.: dishonestly; Т.: hile ile) *р.*

Төрлөсә алдап; алдаштырыу юлы менән. □ Обманом, хитростью; нечестно. *Алдап-йолдап мал табыу*.

**АЛДАР** (Р.: обманщик; И.: deceiver; Т.: yalancı) *и.*

**1.** Алдай торған кеше; алдаҡсы. □ Обманщик, обманщица. ■ *Берҙән-бер баламдың зәғиф булып ҡалыуына шул ырымсы алдарҙар сәбәпсе булды бит*. С. Агиш.

**2.** *этн.* Миң ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение минцев.

**АЛДАТҠЫС I** (Р.: приманка; И.: bait; Т.: yem) *и.*

Йәнлек, ҡош-ҡорт эләктереү өсөн ҡапҡанға ҡуйылған ем. □ Приманка, прикорм. ■ *Бүрегә ҡапҡанды һалғанда алдатҡыс менән һалырға кәрәк*. К. Фәхретдинов.

**АЛДАТҠЫС II** (Р.: обманчивый; И.: deceptive; Т.: aldatıcı) *с.*

Алдай торған, ышанысһыҙ. □ Обманчивый. ■ *Яҙғы көн алдатҡыс була*. Ә. Вәли.

**АЛДА ТОТОУ (алда тот-)** (Р.: ставить целью; И.: set as goal; Т.: hedeflemek) *к.*

Күҙҙә тотоу, маҡсат итеп ҡуйыу. □ Ставить целью.

**АЛДАТЫУ (алдат-)** *к. ҡар.* **алдау.**

**АЛДАУ (алда-)** (Р.: обманывать; И.: lie; Т.: yalan söylemek) *к.*

**1.** Дөрөҫ булмағанды ысын итеп һөйләү; ялғанлау. □ Обманывать, врать, обставлять. *Алдап китеү.* ■ *[Һыуһылыу — Һәүбәнгә:] Шүлгән батша ҡыҙымын, һине алдап тормамын.* «Аҡбуҙат». *Исламда кеше тураһында насар һүҙҙәр һөйләү, кешене кәмһетеү, алдау,*

*ғәйбәт һатыу тыйыла.* «Йәшлек», 9 сентябрь 2008.

**2.** Биргән һүҙҙе, вәғәҙәне боҙоу. □ Не сдержать слово, не выполнить обещание. ■ *Кешене бер алдаһаң, икенсе ышанмаç, ике алдаһаң, ишеген асмаç, өс алдаһаң, тупһаңа баçмаç.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Әүрәтеү, алдаштырыу, албырғатыу. □ Обманывать, отвлекать, утешить. *Үҙеңдеүҙең алдау. Тамакты алдау.* ■ *[Сабира апай] тағы аш-һыу әҙерләне. Өçтәлгә ҡуйҙы ла, бик тә йоҡо баçып барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым, тип урынға барып ятты.* Ә. Вахитов.

**4.** Йәшерен уй менән ҡыҙҙы әүрәтеү. □ Соблазнять девушку.

**АЛДАШТЫРЫУ (алдаштыр-)** (Р.: отвлекать; И.: distract; Т.: oyalamak) *к.*

Күңелен аулап, албырғатыу; әүрәтеү, йыуатыу. □ Отвлекать, успокаивать. *Һүҙ менән алдаштырыу. Баланы алдаштырыу.* ■ *Шакир атын туғарып, малайҙарҙы алдаштырып ебәрҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛДАШЫУ (алдаш-)** (Р.: обманывать; И.: tell lies; Т.: yalan söylemek) *к.*

**1.** Алдаҡ һүҙ һөйләү; ялғанлау. □ Обманывать, врать. // Обман, враньё. ■ *Алдашмағыҙ, алдашкандың, кеше һөйләгәндәрҙең телдәре эйәктән аçка аçылынып тора, ти, теге донъяла.* Экспедиция материалдарынан.

**2.** Төрлөсә алдашып, мал табыу. □ Мошенничать, жульничать. // Мошенничество, жульничание.

**АЛДЫ-АРТТЫ ҠАРАУ (алды-артты ҡара-)** (Р.: взвешивать; И.: estimate; Т.: düşünmek) *к.*

Бөтәһен тикшереп, самалап, иçәпләп эшләү. □ Взвешивать, прикидывать *(прежде чем делать что-л.).* ■ *[Байрамбикә] әле йәш, алдын-артын, уңын-һулын ҡарап, уйлап йәшәргә өйрәнмәгән.* Ш. Шәһәр.

**АЛДЫ-АРТТЫ УЙЛАУ (алды-артты уйла-)** *к. кар.* **алды-артты ҡарау.** *Алдын-артын уйламай эшләү.*

**АЛДЫ-АРТЫ** (Р.: перед и зад *чего*; И.: front and rear; Т.: ön ve arka) *и. йыйн.*

**1.** *Нимәнеңдер* ал һәм арт яғы. □ Перед и зад *чего. Майканың алды-арты.*

**2.** *күсм.* Эш-хәлдең һөҙөмтәһе. □ Результат, последствие *чего-то. Алды-артты уйламай һөйләү.*

**АЛДЫҠ (алдығы)** [боронғо төрки *алдаг* ‘ялған; хәйлә’] (Р.: ложь; И.: falsehood; Т.: yalan) *и.*

Дөрөç булмаған хәбәр, ялған һүҙ; алдаҡ. □ Ложь, враньё, выдумка. *Алдык таратыу. Алдыкка ышаныу.* ● *Алдыктың аяғы ҡыçка.* Мәҡәл.

**АЛДЫҠ ТОҠСАЙЫ** (Р.: лгун; И.: liar; Т.: yalancı) *и.*

Алдап йөрөй торған кешегә ҡарата әйтелә. □ Лгун, выдумщик.

**АЛДЫМ-БИРҘЕМ** (Р.: обоюдное согласие на брак; И.: mutual consent in wedlock; Т.: evliliğe karşılıklı razı olmak) *и.*

**1.** Кәләш әйттергәндә ике яҡтың да ризалығын белдергәндә, килешкәндә әйтелә торған һүҙ. □ Обоюдное согласие на брак *(до совершения обряда бракосочетания). Алдым-бирҙем яһау.*

**2.** *Нимәнелер* һатырға-алырға килешкәнлек. □ Сделка *(обычно коммерческая). Алдым-бирҙем ҡағыҙы.*

**АЛДЫН I** (Р.: передовой; И.: leading; Т.: ilerici) *с.*

**1.** Эш-тормошта бүтәндәрҙән алда; өçтөн. □ Передовой, первый. *Алдын кеше.*

**2.** Уй-фекере менән бүтәндәрҙән алда; өçтөн. □ Выше, передовой, прогрессивный. *Алдын фекерле.* ■ *Хөкүмәт мөәссәһендә эшләп йөрөгән күп кенә алдын башкорт егеттәре бар.* Ш. Хоҙайбирҙин.

**АЛДЫН II** (Р.: быть первым; И.: be the first; Т.: birinci) *р.*

Эш-хәлдең өçтөнлөгөн белдерә. □ Быть первым, передовым. *Алдын барыу. Алдын йөрөү.* ■ *Алдын булмаһаң эшеңдә, барып сыкмаç иçәбең.* Халык йырынан.

**АЛДЫНА** (Р.: перед; И.: before; Т.: önüne) *бәйл.*

Эш-хәлдең предметтың йәки кешенең ҡаршыһына йүнәлгән булыуын белдергәндә ҡулланыла. □ Перед, к, на. ■ *Ҡамыр батыр алдына кот оскос дейеү килеп тә баҫҡан.* Әкиәттән.

**АЛДЫНА-АРТЫНА СЫҒЫУ (алдына-артына сыҡ-)** (Р.: лебезить; И.: fawn (upon); Т.: pohpohlamak) *ҡ.*

Юхаланып, кешенең күңелен күрергә тырышыу. □ Лебезить.

**АЛДЫНАН** (Р.: перед; И.: in front of; Т.: önünden) *бәйл.*

**1.** Эш-хәрәкәттең *ниҙең* дә булһа алғы яғынан башланыуын белдергәндә ҡулланыла. □ Перед, мимо. *Өй алдынан китеү. Клуб алдынан үтеү.*

**2.** Эш-хәлдең, ваҡиғаның икенсе бер эш-хәлдән элек булғанын белдергәндә ҡулланыла. □ Перед, накануне. *Йыйылыш алдынан килеү. Урак алдынан һөйләшеү үткәреү.* ■ *Яҙмыш оло донъяға — ижад киңлегенә сығарыр алдынан буласаҡ халыҡ яҙыусыһын күп һынауҙарға дусар итә.* Ф. Аҡбулатова.

**АЛДЫНҒЫ(ЛАР) I** (Р.: передовик; И.: foremost people; Т.: öncü işçi) *и. ғәҙәттә күпл.*

Хеҙмәт һөҙөмтәһе менән башҡаларҙан өҫтөн кеше. □ Передовик. *Алдынғылар кәңәшмәһе. Ауыл хужалығы алдынғылары.*

**АЛДЫНҒЫ II** (Р.: передний; И.: front; Т.: öncü) *с.*

**1.** Алда торған; алдағы; авангард. □ Передний, находящийся впереди. ■ *Һөйләшә-һөйләшә улар яңынан алдынғы бүлмәгә сыҡтылар.* Ә. Чаныш.

**2.** Хеҙмәт һөҙөмтәһе менән башҡаларҙан өҫтөн. □ Передовой, первый. *Алдынғы бригада. Алдынғы уҡыусы.* ■ *Уны [Фатиманы] алдынғы уҡыусыларҙан һанап, сигелгән күлдәк менән бүләкләнеләр.* Б. Бикбай.

**3.** Үҫеш кимәле юғарыраҡ. □ Прогрессивный. *Алдынғы йәмғиәт. Алдынғы караш. Алдынғы тәжрибә.* ■ *Төплө аҡылы, әҙәплелеге, эшмәкәрлеге уны [Диләне] шулай алдынғы кешеләр араһына ҡуйған.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛДЫНҒЫЛЫҠ (алдынғылығы)** (Р.: первенство; И.: leadership; Т.: önderlik) *и.*

Берәй нәмәләге беренсе урын. □ Первенство, лидерство. *Эштә алдынғылыкты бирмәү. Ярышта алдынғылык яулау.* ■ *Кусимов полкы фронтка килгәс тә алдынғылыкты бирмәне.* К. Мәргән.

**АЛДЫНДА** (Р.: перед *кем*; И.: in front of; Т.: önünde) *бәйл.*

**1.** Эш-хәлдең *кемдер* бар ваҡытта, уның ҡаршыһында башҡарылыуын белдергәндә ҡулланыла. □ Перед *кем*, при *ком*, в присутствии *кого*. *Кеше алдында. Халыҡ алдында. Дуҫтар алдында.* ■ *Ул [Гөлзифа] ил карттары алдында һүҙ бирҙе.* М. Буранғолов.

**2.** Эш-хәлдең *кемгә* йәки *нимәгәлер* бәйләнешле булыуын белдереү өсөн ҡулланыла. □ Перед *чем*. *Ауырлыктар алдында юғалып калмау.*

**3.** Берәй эш-хәл башланғансы булған ваҡыт аралығын белдереү өсөн ҡулланыла. □ Перед *чем-л. (по времени)*. *Таң алдында. Төш алдында. Сәй алдында. Үлем алдында.*

**АЛДЫНДА ЙӨРӨҮ (алдында йөрө-)** (Р.: прислуживать; И.: serve; Т.: hizmet etmek) *ҡ. диал.*

Йомош-юлға йөрөү. □ Прислуживать. *Кем уның алдында йөрөй икән?*

**АЛДЫР** (Р.: чаша; И.: bowl; Т.: kâse) *и.*

**1.** Туҫтаҡтан ҙурыраҡ йәйенке һауыт. □ Чаша, миска. ■ *Оһолло еңгәнең һыйлы итеп әсеткән, баллап һыуыткан якшы кымыҙын бер-ике алдыр эсеү менән үк башыңа сыға.* Ғ. Дәүләтшин. *Тултырғанса һалып киң алдырҙы, аяксы карт кымыҙ тоттора.* Б. Вәлид.

**2.** *миф.* Муллыҡ, ырыҫ символы. □ Символ изобилия, благополучия. *Иҫке алдырҙы ташлаһаң, өйҙән бәрәкәт китә.*

**АЛДЫРА** (Р.: сначала; И.: at first; Т.: önce) *р. диал.*

Тәүҙә. □ Сначала, сперва. *Ҡыҙ биргәндә бауырһаҡ бешерәһең, алдыра үҙең ашайһың.*

**АЛДЫР АЯҠ** *и. ҡар.* **алдыр 1.**

**АЛДЫРТЫУ (алдырт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **алдырыу**. *понуд. от* **алдырыу**.

**АЛДЫРЫМ** *и. ҡар.* **ал II.**

**АЛДЫРЫУ (алдыр-)** *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **алыу**. *понуд. от* **алыу**.

**2.** *Ниҙеңдер* бер нәмәһен, сифатын юҡ итеү. □ Удалять. // Удаление. *Теш алдырыу. Тамаҡ биҙен алдырыу.*

**3.** Сәсте киҫтереү. □ Стричь, остричь волосы. // Стрижка.

**4.** Урларға юл ҡуйыу. □ Допускать кражу, позволять украсть. *Кеҫәнән аҡса алдырыу.*

**5.** Эш-тормошта *ниндәйҙер* маҡсатҡа ирешеү, теләкте ғәмәлгә ашырыу. □ Добиваться успехов, достигать нужного уровня. *Эш менән алдырыу.* ■ *[Аҙнай:] Аҙаҡ мин тоҡ кейеп йүгерештем. Эш сыҡманы, һис алдырып булмай.* Ҡ. Даян.

**6.** Үҙ исеменә яҙҙырып алыу. □ Выписывать, получать *(периодические издания)*. // Выписка, получение. *Гәзит алдырыу.*

**7.** Ялан эшендә күпмелер ерҙе иңләп барыу. □ При жатве или косьбе вручную возможность захвата. *Киң алдырыу. Тар алдырыу.* ■ *«Биленә көс төшөр, улым! Бик яҫы алдырма!» — ти торғайны атаһы [Әхтәрйәнгә].* Р. Низамов. ● *Егет кеше яуҙа көсө менән алдырһа, яланда эше менән алдыра.* Әйтем.

♦ **Алдырыр көн яҙҙырыр** берәй күңелһеҙ эштең башланыуына уйламаҫтан үҙең сәбәпсе булғанды белдергәндә әйтелә. □ Поневоле стать виновником *какого-л.* неблаговидного дела.

**АЛ(ДЫ)-ЯЛ(ДЫ) БЕЛМӘҮ (ал-ял белмә-)** (Р.: не знать усталости; И.: work endlessly; Т.: sürekli olarak) *ҡ.*

Һис туҡтамау, өҙмәү. □ Не знать усталости, работать без отдыха. ■ *Салауатсылар ике көн буйы алды-ялды белмәй күпер һала.* Ә. Вахитов.

**АЛЕБАСТР** [рус. < гр. *alabastros*] (Р.: алебастр; И.: alabaster; Т.: kaymaktaşı) *и. мин.*

Аҡ төҫтәге ваҡ бөртөклө гипс. □ Алебастр. *Алебастр заводы.*

**АЛЕКСАНДРИТ** [рус. яңғыҙлыҡ исеме *Александр* + суфф. *-ит*] (Р.: александрит; И.: alexandrite; Т.: aleksandrit) *и. мин.*

Йәшел төҫтәге, яһалма яҡтылыҡта ҡара ҡыҙыл төҫкә ингән ҡиммәтле таш. □ Александрит. *Александрит ҡашлы биҙәүес.*

**АЛЕНДИ** [рус. < ингл. *alendi*] (Р.: alendi; И.: alendi; Т.: vadesiz) *с. икт.*

Ваҡыты күрһәтелмәгән *(килешеүгә ҡарата)*. □ Аленди, бессрочный *(о договоре)*.

**АЛЕУТ** (Р.: алеут; И.: Aleut; Т.: Aleut) *и.*

Алеут (АҠШ) һәм Командор (Рәсәй) утрауҙарының төп халҡы һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Алеуты. *Алеут теле.*

**АЛЕУТСА** (Р.: по-алеутски; И.: in Aleutian; Т.: Aleutça) *р.*

Алеуттарға хас, алеуттар кеүек. □ По-алеутски. *Алеутса һөйләшеү.*

**АЛЖИР** (Р.: алжирец; И.: Algerian; Т.: Cezairli) *и.*

Алжирҙа йәшәгән милләт һәм шул милләт кешеһе. □ Алжирец, алжирцы. *Алжир халҡы.*

**АЛЖИРСА** (Р.: по-алжирски; И.: in the Algerian; Т.: Cezair) *р.*

Алжир халҡына хас. □ По-алжирски. *Алжирса бейеү.*

**АЛИБИ** [рус. < лат. *alibi* ‘башҡа бер ерҙә’] (Р.: алиби; И.: alibi; Т.: mazeret) *и. юр.*

Ғәйепләнеүсенең енәйәт ваҡытында енәйәт урынында була алмауын дәлилләүсе шарттарҙың булыуы, уның ғәйепһеҙлек дәлиле. □ Алиби. *Үҙеңде аҡлап алиби килтереү.*

**АЛИМЕНТ** [рус. < лат. *aliventum* ‘аҙыҡ’] (Р.: алименты; И.: aliment; Т.: nafaka) *и. юр.*

Закон буйынса, бер кешенең икенсе кешегә — балиғ булмағандарға, хеҙмәткә яраҡһыҙҙарға, мохтаждарға — мәжбүри

рәүештә бирергә тейеш булған аҡсаһы. □ Алименты. *Алимент юллау.*

**АЛИРЛӘН** (Р.: хомяк; И.: hamster; Т.: hamster) *и. зоол. диал.*

Ирлән. □ Хомяк (лат. *Cricetinae*).

**АЛИҺӘ** [ғәр. الهة] (Р.: богиня; И.: goddess; Т.: tanrıça) *и. иҫк.*

Ҡатын затынан булған юғары көс. □ Богиня. ■ *Әҙләгән ғишки алиһәмде күңелдә гизләнем.* Х. Ғәбитов.

**АЛЙОРОШ** (Р.: ошибочный; И.: fallacious; Т.: yalnış) *с.*

**1.** Хата йүнәлешле; яҙа. □ Ошибочный. *Алйорош хәрәкәт. Алйорош аҙым.*

**2.** *күсм.* Дөрөҫтән тайпылышлы; хата. □ Неправильный, неверный. *Алйорош һүҙ. Алйорош яуап.*

**3.** *күсм.* Аҡыл теүәллегенән мәхрүм; алйыған. □ Придурковатый, умственно ограниченный. ■ *[Вакиға ханым:] Судья улым, быны һеҙ алйорош бабай икән тип уйлай күрмәгеҙ. Уның акылы теүәл.* С. Кулибай.

**АЛЙОҪОҠҠА** (Р.: понапрасну; И.: in vain; Т.: boşuna) *р. диал.*

Һис сәбәпһеҙгә, буштан-бушҡа, бушҡа; алъюҫыҡҡа. □ Понапрасну, зря, напрасно. *Алйоҫокка дүрт йыл укытманылар бит.*

**АЛЙОТ** [дөйөм төрки *ал-чы* ‘сыуалыу, яңылышыу’] (Р.: глупый; И.: silly; Т.: ahmak) *с.*

**1.** Аҡылы камил түгел; ахмаҡ, иҫәр. □ Глупый, бестолковый. *Алйот кеше. Алйот булыу.* ■ *[Кәмәр әбей — Ғәләүгә:] Күҙемә күренмә, алйот!* Т. Йәнәби.

**2.** Уйлап, аҡыл менән эшләй белмәгән. □ Неумный, неблагоразумный. ■ *[Сәлимә:] Мин, алйот ни, шул көндәштең һүҙен тыңлаған булдым шул.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Алйотмо ни** *кемдеңдер* берәй эште хупламағанын белдергәндә әйтелә. □ Дурак что ли. ■ *[Өйрәнсек:] Юк өсөн баш ватып, ғүмер кыҫкартырға мин алйотмо ни?!* З. Биишева. **Башты алйотҡа һалыу** аңламаған, белмәгән булып ҡыланыу. □ Прикидываться дураком. ■ *[Юнир — Мирхәткә:] Инде, туғанкай, етте, башыңды алйотка һалып маташма. Якшы сакта әйт тә бир: һин төштөңмө баксаға?* Ш. Бикҡол.

**АЛЙОТЛАНЫУ (алйотлан-)** (Р.: глупить; И.: act in a silly way; Т.: saçmalamak) *к.*

**1.** Аҡылдан яҙыу, алйотҡа әйләнеү. □ Глупить, дурить.

**2.** Берәй эште уйламай эшләү, алйоттарса ҡыланыу; иҫәрләнеү. □ Одуреть, стать неразумным. *Алйотланып, ни һөйләгәнен белмәй.*

**АЛЙОТЛОҠ (алйотлоғо)** (Р.: глупость; И.: folly; Т.: ahmaklık) *и.*

**1.** Аҡыл, фекерләү һәләте булмағанлыҡ. □ Глупость, дурачество. ■ *Килешә шул, .. кайһы баштарға алйотлок та хатта килешә.* Р. Сафин.

**2.** Ныҡлап уйламай, еңел генә уйлап хәл итеүсәнлек. □ Глупость, дурачество, легкомыслие. *Алйотлок эшләү. Алйотлок менән.*

**АЛЙОҺОҠҠА** (Р.: понапрасну; И.: in vain; Т.: boşuna) *р. диал.*

Һис сәбәпһеҙгә, буштан-бушҡа, бушҡа; алъюҫыҡҡа. □ Понапрасну, зря, напрасно. ■ *Әхмәҙи ҡаскан ҡамаға ҡарап уйлап торҙо-торҙо ла һауаға тоҫкап, алйоһокка атып ебәрҙе.* Ж. Кейекбаев.

**АЛЙЫ-БОЛЙО** (Р.: сам не свой; И.: beside oneself; Т.: aklı başında değil) *р. диал.*

Аңҡы-тиңҡе. □ Сам не свой, не в себе, обалдевший. ■ *Ҡыҙ, оҙак ауырып яңы ғына яҙыла башлаған кеше кеүек, алйы-болйо килеп торҙо.* А. Таһиров.

**АЛЙЫРҘАН** *и.*

**1.** *зоол. кар.* **ирлән.**

**2.** *этн.* Тамъян ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение тамьянцев.

**АЛЙЫТЫУ (алйыт-)** (Р.: изнурять; И.: drain; Т.: yormak) *к.*

Мәшәҡәтле, ауыр хәлгә ҡалдырып интектереү; ыҙалатыу. □ Изнурять, утомлять, выматывать. // Изнурение, утомление, выматывание. ■ *Вак бәхәстәр һеҙҙе албыра-*

*та, вак ҡыйынлыктар һеҙҙе алйыта.* Р. Сафин.

**АЛЙЫУ (алйы-)** [дөйөм төрки *ал-чы* ‘юлдан яҙыу, сыуалыу’] (Р.: потерять рассудок; И.: lose one’s mind; Т.: aklını kaybetmek) *к.*

**1.** Аҡыл теүәллеген юғалтыу. □ Потерять рассудок. ■ *Минең, кеше ҡартайһа — алйый, тигәндәрен ишеткәнем бар-барын, ләкин был тиклем булалыр тип уйлағаным юк ине.* С. Агиш.

**2.** Хәтер тарҡалыу; аптырау, ҡаңғырыу. □ Отупеть, одуреть. // Отупение, одурение. ■ *Бер заманды донъяһын типкән халыҡ, инде алйып тик йөрөйҙәр, һыҙғырып, айһалып.* Ш. Бабич.

**3.** Мәшәҡәтле йәки ауыр бер хәлдән интегеү; ыҙаланыу. □ Мучиться, маяться, страдать. // Мучение, страдание. ■ *Мәскәүҙең Курский вокзалы. Мин билет ала алмай аптырап, алйып бөттөм.* И. Насыри.

**АЛКАЛОИД** [рус. < ғәр. ‘һелте’ + гр. ‘төр’] (Р.: алкалоиды; И.: alkaloid; Т.: alkaloit) *и. хим.*

Үҫемлектәрҙән алынып, дауалау өсөн ҡулланылған, тере организмға бик көслө тәьҫир итә торған азотлы органик ҡушылма. □ Алкалоиды. *Алкалоид иретмә.*

**АЛКОГОЛДӘР** (Р.: алкоголяты; И.: alkoxides; Т.: alkoksit) *и. хим.*

Молекулаһы составына кислород һәм водород ингән органик ҡатнашмалар. □ Алкоголяты.

**АЛКОГОЛИЗМ** [рус.] *и. ҡар.* **эскеселек**.

**АЛКОГОЛИК** [рус.] *и. ҡар.* **эскесе**.

**АЛКОГОЛЛЕ** (Р.: алкогольный; И.: alcoholic; Т.: alkollü) *с.*

Спиртлы, иҫерткес. □ Алкогольный. *Алкоголле эсемлектәр. Алкоголь сәнәғәте.*

**АЛКОГОЛҺЕҘ** (Р.: безалкогольный; И.: non-alcoholic; Т.: alkolsüz) *с.*

Спирты булмаған, иҫерткес түгел. □ Безалкогольный. *Алкоголһеҙ һыра.*

**АЛКОГОЛЬ** [рус. < нем. < ғәр. الكحول ‘спирт’] (Р.: алкоголь; И.: alcohol; Т.: alkol) *и.*

**1.** Шәкәрле, крахмаллы нәмәләрҙе ҡыуыу юлы менән алынған еҫле, осоусан, яныусан, төҫһөҙ шыйыҡлыҡ. □ Спирт.

**2.** *һөйл.* Араҡы һәм башҡа иҫерткес эсемлектәр. □ Алкоголь. *Алкоголдән ағыуланыу.*

**АЛҠА** [ғәр. حلقة ‘түңәрәк’] (Р.: серьги; И.: earring; Т.: küpe) *и.*

**1.** Ҡолаҡҡа таға торған биҙәүес. □ Серьги. *Алка һабағы. Көмөш алка. Ҡашлы алка.* ■ *Алтын алка ҡолакта, ҡуш беләҙек беләктә.* Халыҡ йырынан. *Түшөңдә алка күрһәң, һөйгән кешең менән осрашаһың.* Ырым. *Ҡолаҡтарың аҫыл алка көтһә, айҙы алка итеп тағырмын. Тик көтмә һин минән ер буләге, бөтәһен дә күктән табырмын.* Р. Ғарипов.

**2.** *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, күҙ тейеүҙән, яман заттарҙан, ауырыуҙарҙан һаҡлаусы биҙәүес. □ Мифологизированный предмет, охраняет от злых сил, духов, болезней, дурного глаза. ■ *Балдаҡ-беләҙек — ҡулға пәрҙә, алка — биткә пәрҙә.* Экспедиция материалдарынан.

**3.** *күсм.* Ҡайһы бер ағастың һалынып торған сәскә бөрөһө, емеше. □ Серёжки деревьев. *Ҡайын алкаһы.* ■ *Муйыл ағасы ла июлдәге тәлгәш алкаларын һағына.* Й. Гәрәй. *Ҡайындарҙың алка суктарын бүләк итәм һиңә.* Ф. Күзбәков.

**4.** *күсм.* Формаһы менән алҡаға оҡшаш булған күренеш. □ Кольцо, круг *(явление, похожее на серьги).* ■ *Ҡул йылытып дуҫлыҡ усағында, күҙәттек беҙ айҙың алкаһын.* Х. Ғиләжев. *Ике йәш ҡыҙҙы дошман алкаһын йырып сығыу кеүек куркыныслы эшкә ебәреүе ярап етмәй ҙә, башка сара юк.* Ә. Чаныш.

**АЛҠА[ЛЫ] ГӨЛ** (Р.: фуксия; И.: fuchsia;Т.: küpe çiçeği) *и. бот.*

Сәскәһе тамсы һымаҡ аҫылынып торған ал сәскәле бүлмә гөлө. □ Фуксия (лат. *Fuchcia*). ■ *Еңел елгә асыҡ тәҙрәмдә алкалы гөл уйнай һирпелеп.* Ғ. Мәсғүт.

**АЛҠАЛАНЫУ (алҡалан-)** (Р.: отвисать; И.: sag; Т.: kıvrılmak) *ҡ.*

Алҡа кеүек булып һалыныу, түңәрәкләнеү. □ Отвисать, свернуться, кольцеваться. ■ *Ямғырҙар [сағандың] муйынын биҙәкләп, тамсынан һырға тағып. Алҡаланып тунған боҙҙар алмастай өҙөлөп тамып.* С. Ҡудаш.

**АЛҠАЛАУ (алҡала-)** (Р.: окружать; И.: encircle; Т.: kuşatmak) *ҡ.*

Түңәрәтеү, түңәрәкләү, уратыу. □ Окружать, делать круг. // Окружение. ■ *Йәштәр усаҡты алҡалап алғандар ҙа китап уҡығанды тыңлайҙар.* Ә. Чаныш.

**АЛҠАЛЫҠ (алҡалығы)** *и. диал. ҡар.* **йәрпесәк.**

**АЛ-ҠАПЫЛДАН** (Р.: тотчас; И.: at once; Т.: hemen) *р.*

Көтмәгәндә; ҡапыл-ғара. □ Тотчас, вдруг, внезапно, сразу. *Ал-ҡапылдан әйтеү.*

**АЛҠЫМ** (Р.: горло; И.: throat; Т.: boğaz) *и.*

**1.** Үңәстең өҫкө өлөшө; тамаҡ төбө, йотҡолоҡ. □ Горло. ■ *Фатима ҡапыл [Мәғүзәнең] алҡымынан һығып алып ергә йыҡты.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Сиктән тыш көслө, төрлө тойғоға ҡарата. □ Глотка. *Асыуы алҡымына тығылды. Алҡымдан алыу.*

**3.** Аяҡ һәм аяҡ кейеменең йөҙөнән юғары бөгөлгән өлөшө. □ Подъём *(ноги и обуви). Итектең алҡымы.* ■ *Итексе .. аяҡтың алҡымын, балтыр йыуанлығын, табандың оҙонлоғон .. теүәл итеп үлсәп килтерергә ҡушты.* Ғ. Ибраһимов.

**4.** *этн.* Тамъян ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение тамьянцев.

♦ **Алҡымдан килгәнсә** бик ныҡ туйғанса. □ Досыта, до отвала *(есть, пить).* **Йән алҡымға килеү** ауыр хәл-кисерештең һуңғы сигенә етеү; үлә яҙыу. □ Быть в тяжёлом состоянии.

**АЛҠЫМҒА ТЫҒЫЛЫУ (алҡымға тығыл-)** (Р.: застрять в горле; И.: stick in one's throat; Т.: boğazında kalmak) *ҡ.*

Төйөр һымаҡ булып, ауырттырып тамаҡҡа ултырыу. □ Застрять в горле.

**АЛҠЫМДАН АЛЫУ (алҡымдан ал-)** (Р.: схватить за горло; И.: take by the throat; Т.: boğazından almak) *ҡ.*

**1.** Кешенең үңәсенә йәбешеү. □ Взять, схватить за горло.

**2.** *күсм.* Ныҡ ирекһеҙләү; көсләү. □ Неволить, принуждать. *Бөгөн үк түлә, тип алҡымдан ала.* ■ *Алҡымынан золом алғанда ла китаплы йорт ҡотло юл табыр.* Р. Бикбаев.

**АЛҠЫМЫН СӘЙНӘҮ (алҡымын сәйнә-)** (Р.: перегрызть горло; И.: bite to death; Т.: boğazını kesmek) *ҡ.*

**1.** Юҡ итеү, бөтөрөү ниәте менән ажарланып үңәскә йәбешеү. □ Перегрызть горло.

**2.** Ажарланып һөжүм итеү, ташланыу. □ Яростно нападать.

**АЛҠЫН** [боронғо төрки *алыҡ* ‘ярһыныу, киҫкенләшеү’] (Р.: полноводный; И.: full-flowing; Т.: dolu sulu) *с.*

**1.** Тулы һыулы, алға етеҙ ынтылышлы. □ Полноводный, стремительный. ■ *Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын, тулҡындары тулы, яры киң.* Р. Ниғмәти. *[Раушания:] Ал, ал мине, алҡын һыу, ҡосағыңа йом, хәсрәтемде тарат! Һин, йор йылға, игелекле бит, ҡосағың йомшаҡ, наҙың татлы.* Р. Камал.

**2.** Алға етеҙ ынтылышлы. □ Проворный.

**АЛҠЫНҒАНСА** (Р.: досыта; И.: to one's heart's content; Т.: doyana kadar) *р.*

Бик ныҡ туйғанса, алдан ҡалғанса *(ашауэсеү).* □ Досыта, до отвала *(есть, пить). Алҡынғанса ашау.* ■ *Кухняла йәмшек танаулы һалдатты алҡынғанса һыйлағандар.* Д. Юлтый.

**АЛҠЫНДЫРЫУ (алҡындыр-)** (Р.: переполнять *что*; И.: overfill; Т.: taştırmak) *ҡ.*

**1.** Өҫтөнә сыҡҡанса тултырыу, ныҡ тулғанса һалыу. □ Переполнять *что,* переливать через *что,* лить через край. *Алҡындыра ҡойоу.* ■ *Балды алҡындыра ҡойған сәмәйле көрәгәләр ултыртылды.* Т. Хәйбуллин.

**2.** Бик ныҡ туйғанса, алдан ҡалғанса ашатыу. □ Кормить, поить досыта, до отвала. ■ *[Һомай] бөтә илде йыйнаған, алкындырып һыйлаған.* «Урал батыр».

**3.** *күсм.* Ярһытыу, елкендереү. □ Волновать, возбуждать. *Йөрәкте алкындырыу.*

**АЛҠЫНЫУ (алкын-)** (Р.: разливаться; И.: overflow; Т.: taşmak) *ҡ.*

**1.** Йылғаның һыуы ташып, ярынан сығып, етеҙерәк ағыуы. □ Разливаться, выходить из берегов. ■ *Ағиҙел кеүәтле була, алкынып ташкан һайын.* А. Игебаев. *Нисә быуат Ырғыҙ шулай алыҫтарға алкынған.* Р. Ғарипов.

**2.** *күсм.* Күп булып, сиктән ашыу. □ Переходить меру, границы. ■ *[Айбулаттың] алкынып яткан байлығы булмаһа ла, көн күрерҙәй яйы бар.* Һ. Дәүләтшина.

**3.** Күп итеп, ҡомһоҙланып ашау, эсеү. □ Проявлять неумеренность, жадность в еде и питье. *Алкынып эсеү.*

**4.** Бер ыңғай менән етеҙ итеп алға ынтылыу. □ Устремляться, порываться вперёд. // Стремление, порыв. *Алкынып сабыу.*

**5.** *күсм.* Елкенеү, ярһыу, ашҡыныу. □ Волноваться, возбуждаться. // Волнение, возбуждение. *Йөрәк алкына. Күңелем алкынып китте.*

**АЛҠЫТЫУ (алкыт-)** *ҡ. ҡар.* **алкындырыу.**

**АЛҠЫШ I** [алтай телдәренән] (Р.: аплодисменты; И.: applause; Т.: alkış) *и.*

**1.** *Кемделер* ҡаршы алғанда ҡул сабып күрһәтелгән оло хөрмәт; хуплау, күтәрмәләү һүҙе. □ Аплодисменты. *Алкыш менән ҡаршы алыу.*

**2.** *Кемде* йәки *ниҙелер* хуплау, күтәрмәләүҙе аңлатҡан көслө ҡул сабыш. □ Овация, аплодисменты, рукоплескания. ■ *[Зөмәрәнең] һәр йырынан һуң көслө алкыштар клубты геүләтеп торҙо. Мин дә ихлас күңелдән ҡул саптым.* Х. Зарипов.

**АЛҠЫШ II** (Р.: благословение; И.: benediction; Т.: iyi dilek) *и.*

Хуплау, ризалыҡ биреү, яҡшы теләк, алғыш. □ Благословение, благопожелание, одобрение. ● *Ата-әсәнең алкышы уткаһыуға батырмаҫ.* Мәҡәл.

**АЛҠЫШЛАУ (алкышла-)** (Р.: благословлять; И.: approve; Т.: onaylamak) *ҡ.*

**1.** *Кемдеңдер* эш-ҡылығына ризалыҡ, рәхмәт белдереү; хуплау. □ Благословлять, одобрять. // Благословение, одобрение. ■ *Бөгөн, әсәй, артылаһың алтмыштан. Уралға ҡоштар төшәләр тыуған көнөң алкышлап.* Р. Бикбаев.

**2.** Тәбрик итеп, хуплап ҡул сабыу. □ Аплодировать, рукоплескать. // Аплодисменты, рукоплескания. *Алкышлап оҙатыу. Йырсыны алкышлау.*

**АЛЛА I** [ғәр. الله] (Р.: Бог; И.: Allah; Т.: Allah) *и.*

**1.** *дини.* Донъяны яралтҡан, уның менән идара иткән юғары зат; Хоҙай, Тәңре. □ Бог, Господь, Всевышний. *Аллаға табыныу. Аллаға ышаныу. Аллаға ялбарыу.* ■ *Донъяла яуызлыҡ, бысраклыҡ күбәйеп китһә, Алла ер тетрәүҙәр, һыу баҫыуҙар кеүек ғәрәсәттәр ебәрә икән.* Ф. Хисамитдинова. *Халыктарҙың дине башка, Аллаһы бер.* М. Ямалетдинов. *Хеҙмәт, кәсеп йолаларының тамамланышы рәүешендә әйтелә торған һамаҡтарҙа ла Тәңре, Алла ише иң юғары илаһтарға һығыныу бар («Аллаға тапшырҙыҡ», «Аллаһы Тәғәлә, калғанын Үҙең белеп, Үҙең ҡуй» һ.б.).* Ә.Сөләймәнов.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, берәй нәмәнең башы, хужаһы, рухы; эйә. □ Божество. *Тау аллаһы. Ҡул аллаһы. Мәжүси аллалар.*

**3.** *күсм.* Һоҡланыу, табыныу, яратыу предметы булараҡ берәй кеше йәки нәмә. □ Кумир, божок. *Һинең аллаң шул бит.*

**4.** *күсм.* Ҙур ҡөҙрәт, ҡеүәт, власҡа эйә булған кеше. □ Тот, *кто* обладает большой властью, могуществом. *Был тирәнең аллаһы.*

♦ **Алла белһен** мәғлүм түгеллекте белдерә. □ Бог знает что... **Алла бирһә** (*йәки* **бойорһа, теләһә**) берәй эшкә ниәтләнгәндә

йәки өмөт белдергәндә әйтелә. □ Бог даст. ■ *[Ҡатын:] Алла теләһә, иҫән булырбыҙ.* Д. Юлтый. **Аллаға тапшырыу** бер эште башлағанда, аҙағы уңышлы булһын, тәүәк-кәлләйек, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Решиться на *что-л.* ■ *[Мулла:] Мин олорак кеше, Аллаға тапшырып, алдағы арбаға ултырырмын инде.* М. Тажи. **Аллаға** (*йәки* **Алланың биргәненә) шөкөр** тормоштан риза булғанды белдереү өсөн әйтелә. □ Слава Богу, благодарение Богу. ■ *Беҙгә, Аллаға шөкөр, ошо байлығыбыҙ ҙа еткән, артығы кәрәкмәй.* Б. Бикбай. **Алланан йәйәү ҡасҡан** тәүфиҡһыҙ, тәртипһеҙ кешегә әйтелә. □ Употребляется по отношению к беспутному, непорядочному человеку. **Алланың ҡашҡа тәкәһе** (*йәки* **тәкәһеме әллә**) *кемделер* айырып ҡарауҙы йәки *кемдеңдер* үҙ-үҙен өҫтөн ҡуйыуын оҡшатмағанда әйтелә. □ *ирон.* Меченый *(о незаслуженно выделяемом или высокомерном человеке).* ■ *Мулла малайы тигәс тә, ул кем — алланың ҡашҡа тәкәһе түгелдер бит.* В. Исхаҡов. **Алланың <ҡаты> кәһәре һуҡҡыр** (*йәки* **төшкөр**) ҡарғағанда әйтелә. □ Слово проклятия: Будь проклят! **Алланың рәхмәте киң** дини кешеләр яҡшы эшкә ҡыуанғанда йәки өмөт тотҡанда әйтелә. □ Бог милостив *(говорится, чтобы успокоить кого-л.).* ■ *[Рәхимә:] Ярар, борсолмайыҡ. Алланың рәхмәте киң.* Һ. Дәүләтшина. **Алланың хөкөмө** Аллаһы тәғәлә ҡушҡан эш. □ Божье повеление, Божья воля. ● *Алла һаҡланғанды һаҡлар.* Әйтем. **Алла рәхмәтенә китеү** үлеү. □ Умереть, отправиться на тот свет. **Алланың рәхмәте төшһөн** (*йәки* **рәхмәтендә булһын**) яҡшылыҡ теләп әйтелә. □ Говорится при пожелании благополучия, добра. ■ *Алланың рәхмәтендә булғыры, һәйбәт әҙәм ине. Эшмәкәр ине. Әҙәмгә зыяны булманы.* Һ. Дәүләтшина. **Алла хаҡы өсөн** (*йәки* **Алла хаҡына**) ялынып, ялбарып һорағанда әйтелә. □ Ради Бога, пожалуйста. **Алла һаҡлаһын** хәүеф-хәтәр белдергәндә әйтелә. □ Боже упаси! Упаси Бог! ■ *Бынауы кеүек ҡаҡ юлда арбанан ҡолап башыңды ярырһың, Алла һаҡлаһын!* Ғ. Дәүләтшин. **Аллаһы Тәғәлә** алланы ололау һүҙе. □ Всевышний, Бог. **Аллаһы әкбәр** 1) доға ҡылғандан һуң әйтелә торған һүҙ. □ Аминь. *Аллаһы әкбәр итеү*; 2) «бөттө», «тамам» мәғәнәһендә ҡулланыла. □ Конец. ■ *Ауылдың ярлыларында юк нәмәне булдырыу тигән нәмә юк, бары менән* «аллаһы әкбәр». Ғ. Хәйри. **Аллаһы әкбәргә (эшләү)** бушҡа эшләү. □ Даром, работать безвозмездно. ■ *[Кәрим:] Приказчик әйтә, бирәүгә лә түләнмәй, ти. Ә Сафый ағай әйтә, беҙ бында аллаһы әкбәргә эшләргә килмәгән, .. ти.* **Алла юлында йөрөгән кеше** динсе. □ Святой, священнослужитель. **Алла яҙмаһын** (*йәки* **ҡушмаһын, күрһәтмәһен)** *ниндәйҙер* хәүеф-хәтәрҙән ҡурҡыуҙы белдерә. □ Не дай Бог! Не приведи Господь! **Алла ярҙам** (*йәки* **кеүәт) бирһен** 1) бер эшкә уңыш теләп әйтелә. □ Дай Бог! *(доброе пожелание)*; 2) ҡыйын хәлдә, ауыр эштә булған кешене ҡыҙғанып әйтелә. □ Говорится при сочувствии человеку в его трудном, тяжёлом положении. **Ни аллаға, ни муллаға** эшкә ашмаған, насар, йүне юҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ Никчёмный человек. *соотв.* Ни рыба, ни мясо. ■ *[Ямал:] Уйлағаным да юҡ, уйлаясаҡ та түгелмен. Ирме ни ул — ни аллаға, ни муллаға.* М. Тажи. **Собханалла** берәй нәмәне хуплағанда йәки һоҡланғанда әйтелә. □ Слава Господу! *(выражает одобрение или восхищение).* **Әй** (*йәки* **уй) алла** әсенгәндә, ҡайғырғанда, хафаланғанда йәки башҡа берәй көслө хис белдергәндә әйтелә. □ Боже! О боже! Боже мой! ■ *Әй алла, бөтмәҫ бәлә булды ла баһа.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛЛА II** (Р.: Боже, о боже; И.: ouch, oh my; Т.: Allam) *ымл.*

**1.** Ҡапыл ҡурҡыуҙы, һиҫкәнеүҙе, ауыртыныуҙы, кешенең хафаһына мыҫҡыл итеүҙе һ.б. тойғоларҙы белдергәндә әйтелә. □ Выражает внезапный испуг, чувство боли и т.д.: Боже, о боже. *Абау алла! Ай алла! Алла, харап итте баламды.* ■ *[Ҡотлояр:] Алла, харап булған икәнһең!* Һ. Дәүләтшина.

*Алла, ҡулым, сыкты йәнем, ебәр, энем, ебәр, энем.* «Алпамыша».

**2.** Ауыртынғанда, һыҙланғанда әйтелә. □ Говорится при болях. ■ *«Алла-алла, ойоп та киткән, ҡәһәрең!» — тип [Мәғүзә] билен тотто.* Т. Килмөхәмәтов.

**АЛЛА БАБАЙ** (Р.: Бог; И.: Lord; Т.: Allah) *и. һөйл.*

Донъяны яралтҡан, уның менән идара иткән юғары зат; Хоҙай, Тәңре. □ Бог, Господь, Всевышний.

**АЛЛА БАБАЙ ТАРАҠАНЫ** (Р.: красноклоп бескрылый; И.: firebug; Т.: alev tahtakurusu) *и. зоол. диал.*

Көн йылытҡыс; еңгәсәй. □ Солдатик, красноклоп бескрылый (лат. *Pyrrhocoris apterus*).

**АЛЛА БАБАЙ ҺЫЙЫРЫ** (Р.: божья коровка; И.: ladybird; Т.: uğur böceği) *и. диал. зоол.*

Ҡамҡа; ҡояшапай. □ Божья коровка (лат. *Coccinellidae*).

**АЛЛА БӘНДӘҺЕ** (Р.: Божий человек; И.: God's fool; Т.: Allahın kulu) *и.*

Бик йыуаш кешегә ҡарата әйтелә. □ Божий человек, божья душа *(о тихом, скромном человеке).*

**АЛЛАҒА ШӨКӨР** (Р.: Слава Аллаху!; И.: thank God; Т.: Allah'a şükür) *инш.*

Тормоштан риза булыуҙы күрһәтеү өсөн әйтелә. □ Слава Богу! ■ *Ауыҙыңа бал да май, туйынмаһаң, һары май! Аллаға шөкөр, аллаға шөкөр!* Арбауҙан.

**АЛЛА ҠОЛО** (Р.: раб божий; И.: God's servant; Т.: Allahın kulu) *и. дини.*

Ислам дине буйынса, кеше Алла тарафынан барлыҡҡа килтерелгән һәм тулыһынса уның хөкөмөндә. □ Слуга Аллаха, раб божий. ■ *[Аҡйегет — Шәфәккә:] Алла ҡоло булыу, еңгәм, әле бер хәл. Үҙ-үҙебеҙгә әле беҙ ҡол булып йәшәйбеҙ.* М. Кәрим.

**АЛЛА ҠУНАҒЫ** (Р.: Божий гость; И.: stranger; Т.: davetsiz misafir) *и. этн.*

Саҡырылмай килеп ингән кеше *(йола буйынса, иң ҡәҙерле ҡунаҡ).* □ Божий гость, незваный гость *(по обычаю, считается почётным).*

**АЛЛАЛАШТЫРЫУ (аллалаштыр-)** (Р.: обожествлять; И.: idolize; Т.: tanrılaştırmak) *ҡ.*

Алла кимәленә күтәреү, Аллаға табынғандай табыныу. □ Обожествлять, боготворить. ■ *Һинд халҡы ла, үҙе аяҡ баҫа алмағас, Һималайҙы аллалаштырып ҡараған.* К. Әхмәтйәнов.

**АЛЛАНДЫРЫУ (аллhistorical-)** (Р.: делать алым *что*; И.: make rosy; Т.: allandırmak) *ҡ.*

Ал төҫкә индереү. □ Делать алым *что.* *Күкте алландырып ҡояш ҡалҡты.* ■ *Ниңә миңә йөҙгә кершән һөртөп алландырырға?* Й. Солтанов.

**АЛЛАНЫҢ ҠАШҠА ТӘКӘҺЕ** (Р.: избранник божий; И.: God's chosen person; Т.: Allahın adamı) *и.*

Алла тарафынан яратылған кеше. □ Избранник божий.

**АЛЛАНЫУ (аллан-)** [дөйөм төрки *ал* < фарсы *лал*] (Р.: розоветь; И.: turn pink; Т.: pembeleşmek) *ҡ.*

Ал төҫкә инеү. □ Розоветь. *Бите алланып тора.* ■ *Сәскәләргә таң ысығын бөркөп Сулпан ҡалҡа, офоҡ аллана.* Р. Ғарипов. *Алма бешһә — аллана, ҡауын бешһә — баллана.* Халыҡ йырынан.

**АЛЛА СИСӘГЕ** (Р.: щербина; И.: indentation; Т.: çiçek bozuğu) *и. диал.*

Шаҙра. □ Щербина.

**АЛЛАУ (алла-)** (Р.: румянить; И.: rouge; Т.: pembeleştirmek) *ҡ.*

Ал төҫкә буяу. □ Красить в алый цвет; румянить. ■ *Ике битең алһыу-алһыу, алһыу битте аллама.* Халыҡ йырынан.

**АЛЛАҺ** *и. ҡар.* **Аллаһы Тәғәлә.**

**АЛЛАҺҮЛӘ** (Р.: название молитвы у мусульман; И.: name of Moslem prayer; Т.: dua) *и. дини.*

Доға исеме. □ Название молитвы у мусульман. ■ *Ирәндеккәй тауҙың ай башына аллаһүлә яҙҙым ташына.* Халыҡ йырынан.

**АЛЛАҺЫҘ** (Р.: атеист; И.: atheist; Т.: ateist) *с.*

Аллаға ышанмаған; динһеҙ, дәһри. □ Безбожник, атеист. *Аллаһыҙҙар түңәрәге.*

**АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘ** [ғәр. الله تعالى] (Р.: Бог; И.: the Almighty; Т.: Allah) *и.*

Алланы ололау, ҙурлау һүҙе. □ Всевышний бог. ■ *Эй, Аллаһы Тәғәләм, Һиңә карап һығынам: ярҙамыңдан ташлама, казаларҙан һаклай күр. Ҡош-корт, бәндәләреңде, үҫер үҫемлегеңде ырыҫыңдан калдырма, бөтәһен дә туған кыл, бәндәләрҙе аҙҙырма!* Халыҡ ижадынан.

**АЛЛАҺЫУ** (Р.: обращение к Аллаху с почтением; И.: appeal to Allah with esteem; Т.: Allahım) *өнд.*

**1.** Мөриттәр зекер менән шашып, Алла исемен бик йөрәктән сығарғанда әйтелә. □ Обращение к Аллаху с почтением, уважением.

**2.** Баланы бәүеткәндә әйтелә. □ Монотонное обращение к Аллаху при усыплении ребёнка укачиванием в колыбели.

**АЛЛЕГОРИК** (Р.: аллегорический; И.: allegory; Т.: allegori) *с. әҙ.*

Аллегорияға мөнәсәбәтле. □ Аллегорический. *Аллегорик алым. Аллегорик образ.*

**АЛЛЕГОРИЯ** [рус. < гр. *allegoria*] (Р.: аллегория; И.: allegory; Т.: allegori) *и. әҙ.*

*Ниндәйҙер* фекер йәки төшөнсәне ситләтелгән образ аша биреү ысулы. □ Аллегория. *Аллегория — йәнһеҙ әйберҙәр йәки хайуандар образы аша кеше тормошондағы ҡатмарлы ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыу.* К. Әхмәтйәнов.

**АЛЛЕГРО I** [рус. < ит. *allegro* ‘шат’] (Р.: аллегория; И.: allegory; Т.: allegro) *р. муз.*

Бик етеҙ, тиҙ *(музыкаль әҫәрҙең башҡарылыш темпына ҡарата).* □ Аллегро.

**АЛЛЕГРО II** [рус. < ит. *allegro* ‘шат’] (Р.: аллегро; И.: allegro; Т.: allegro) *и. муз.*

Бик етеҙ башҡарыла торған музыкаль әҫәр йәки уның өлөшө. □ Аллегро.

**АЛЛЕРГЕН** [рус. < лат. *allergenum*] (Р.: аллерген; И.: allergen; Т.: allerjen) *и. мед.*

**1.** Аллергия тыуҙырыусы матдә. □ Аллерген. *Көнкүреш аллергены. Туҙан аллергены.* ■ *Хлор һәм унан эшләнгән матдәләр үҙҙәре көслө аллергендар һанала.* «Ашҡаҙар», № 99, 2010.

**2.** Аллергик ауырыуҙарҙы билдәләү өсөн ҡулланыла торған препарат. □ Аллерген.

**АЛЛЕРГЕНЛЫҠ (аллергенлығы)** (Р.: аллергенность; И.: allergenicity; Т.: allerjenite) *и. мед.*

Төрлө физик, химик, биологик факторҙарҙың аллергия тыуҙырыу һәләте. □ Аллергенность.

**АЛЛЕРГИЯ** [рус. < гр. *allergia*] (Р.: аллергия; И.: allergy; Т.: alerji) *и. мед.*

Организмдың ауырыу тыуҙырған матдә тәьҫиренә ныҡ һиҙгерлеге, яуабы, әҫпе. □ Аллергия. *Ашҡаҙан-эсәк аллергияһы. Профессиональ аллергия. Һыуыкҡа аллергия. Аллергия ауырыуы. Аллергия диагностикаһы.*

**АЛЛЕРГОЛОГ** [рус. < гр.] (Р.: аллерголог; И.: allergist; Т.: alerji uzmanı) *и. мед.*

Аллергология белгесе, табип. □ Аллерголог.

**АЛЛЕРГОЛОГИЯ** [рус. < гр. *allos* ‘икенсе’ + *ergon* ‘хәрәкәт’ + *logos* ‘фән’] (Р.: аллергология; И.: allergology; Т.: Allergoloji) *и. мед.*

Медицинаның аллергендарҙы, аллергия ауырыуҙарын өйрәнә торған бүлеге. □ Аллергология. *Башкортостандың Республика балалар клиник дауаханаһында аллергология бүлеге бар.*

**АЛЛЕЯ** [рус. < фр. *allée*] (Р.: аллея; И.: avenue; Т.: geçit) *и.*

Ике яғына ағас-ҡыуаҡтар ултыртылған парктағы йәки баҡсалағы юл. □ Аллея. *Йүкә аллеяһы.*

**АЛЛИГАТОР** [рус. < ингл. *alligator* < исп. *el lagarto* ‘кеҫәртке’] (Р.: аллигатор; И.: alligator; Т.: aligator) *и. зоол.*

Крокодил төрө. □ Аллигатор (лат. *Alligator*).

**АЛЛИТЕРАЦИЯ** [рус. < лат. *alliteratio*] (Р.: аллитерация; И.: alliteration; Т.: aliterasyon) *и. әҙ.*

Шиғыр йәки телмәрҙең яңғырашын көсәйтеп, үҙенә бер төрлө көй биреп, тәьҫирен арттырыу өсөн бер үк тартынҡы өнлө һүҙҙәрҙе бер тирәгә туплау. □ Аллитерация. *Аллитерация күренеше. Аллитерация ҡулланыу.*

**АЛЛО** [рус. < фр. *allô*] (Р.: алло; И.: alo; Т.: alo) *ымл.*

Телефондан һөйләшә башлағанда ҡулланылған өндәшеү һүҙе. □ Алло.

**АЛЛОПЛАНТ** [рус. < гр. *allos+plantare*] (Р.: аллоплант; И.: alloplant; Т.: alloplant) *и. мед.*

Аллопластикала ҡулланылыусы яһалма юл менән үҫтерелгән биоматериал. □ Аллоплант. ■ *Эрнст Мулдашев — «аллоплант» хирургия биоматериалын уйлап табып, уңышлы операциялар яһауы менән Башҡортостаныбыҙҙың исемен тотош донъя кимәлендә танытыусы шәхес.* Т. Сәғитов.

**АЛЛОПЛАСТИКА** [рус. < гр. *allos* + *plastike*] (Р.: аллопластика; И.: alloplasty; Т.: alloplastik) *и. мед.*

Йәрәхәтләнгән ағзаларҙы алмаштырыу өсөн яһалма юл менән үҫтерелгән биоматериалдар ярҙамында эшләнелгән хирургик операция. □ Аллопластика.

**АЛЛОТРОПИК** (Р.: аллотропический; И.: allotropy; Т.: allotropi) *с. хим.*

Аллотропияға мөнәсәбәтле. □ Аллотропический. *Аллотропик үҙгәрештәр.*

**АЛЛОТРОПИЯ** [рус. < гр. *allos* ‘икенсе’ + *trepein* ‘бороу’] (Р.: аллотропия; И.: allotropy; Т.: allotropi) *и. хим.*

Бер үк элементтың төрлө ябай матдәләр барлыҡҡа килтерә алыу үҙенсәлеге. □ Аллотропия.

**АЛЛОФОН** [рус. < *allos* ‘икенсе’ + *phone* ‘өн’] (Р.: аллофон; И.: allophone; Т.: allofon) *и. лингв.*

*Ниндәй ҙә* булһа бер фонеманың икенсе бер варианты. □ Аллофон. *А фонемаһының аллофондары.*

**АЛЛОФРАЗА** [рус. < ингл. *allophrase*] (Р.: аллофраза; И.: allofraza; Т.: allofraza) *и. лингв.*

Һүҙбәйләнештең йәки фразеологик әйтемдең икенсе бер варианты. Мәҫәлән, башҡорт телендә *теңкәгә тейеү — маҙаға тейеү.* □ Аллофраза.

**АЛЛЫ-АРТЛЫ** (Р.: друг за другом; И.: one after another; Т.: arka arkaya) *р.*

Береһе артынан береһе. □ Друг за другом, один за другим, гуськом, цепочкой, вереницей. *Аллы-артлы барыу.* ■ *[Тимербулат менән ҡыҙҙар] аллы-артлы теҙелешеп тирмәгә ҡайттылар.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ** (Р.: разноцветный; И.: motley; Т.: rengârenk) *с.*

Төрлө төҫтәге. □ Разноцветный. ■ *Аллы-гөллө сәскә бирһәм, ҡаҙарһыңмы түшеңә.* Халыҡ йырынан. *Аллы-гөллө бүләк йыям, һабантуйға килегеҙ! Көрәшсегә — тыу һарыҡ, йүгергәнгә лә бүләк. Һабантуйҙай оло байрам була бит ул бик һирәк...* «Йәшлек», 8 июнь 2010.

**АЛЛЫҠ (аллығы)** *и. диал. ҡар.* **күмелдерек.**

**АЛЛЮВИАЛЬ** [рус. < лат. *alluvialis*] (Р.: аллювиальный; И.: alluvial; Т.: alüvyonlu) *с.*

Ташҡындан һуң ҡалған. □ Аллювиальный. *Аллювиаль тупраҡ. Аллювиаль ҡатлам.*

**АЛЛЮВИЙ** [рус. < лат. *alluvialis*] (Р.: аллювий; И.: alluvium; Т.: alüvyon) *и. геол.*

Ташҡындан һуң ҡалған ҡом, ләм, суйыр-таштар, балсыҡ һ. б. □ Аллювий.

**АЛЛЮР** [рус. < фр. *allure*] (Р.: аллюр; И.: gait; Т.: at yürüyüşü) *и.*

Аттың төрлө йөрөш-юртыш алымы. □ Аллюр.

**АЛМА I** [дөйөм төрки *алма*] (Р.: яблоня; И.: apple tree; apple; Т.: elma) *и.*

**1.** Алһыу йәки аҡ сәскәле, мурт итләс емешле ағас. □ Яблоня. / Яблоневый. *Алма ағасы. Алма баҡсаһы. Алма сәскәһе. Ҡырағай алма. Урман алмаһы.* ■ *[Баҡсала] ер еләге, сейә, алма һәм төрлө-төрлө сәскәләр .. тулып ултыра.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** Шул ағастың емеше. □ Яблоко. / Яблочный. *Эре алма. Вак алма. Әсе алма. Ҡаты алма.* ● *Алма ағасынан алыҫ төшмәҫ.* Мәҡәл. *Алманың аҫылын ҡорт ашар.* Мәҡәл.

**3.** *күсм.* Алма кеүек түңәрәкләнеп, тупайып торған тумалаҡ. □ Выпуклость, круглая, как яблоко. *Картуф алмаһы.*

**4.** *миф.* Ҡыҙ бала менән бәйле символ. □ Символ, связанный с девочкой, девушкой. *Төшөңдә алма күрһәң, ҡыҙ табаһың.*

♦ **Алма беш, ауыҙыма төш** ҡул ҡаушырып, әҙер булғанды көтөп ултырған кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Разжуй да в рот положи. **Алма кеүек** матур, таҙа *(бала-сағаға, йәштәргә ҡарата).* □ Красив и здоров *(о детях, молодых).* **Бит алмаһы** биттең тупайып торған өлөшө. □ Скулы. ■ *Көлә Йыһания. Ҡаштары осона, эйәктәре осона, бит алмалары осона нур ҡунған.* Р. Камал. **Күҙ алмаһы** күҙҙең бөтә тумалағы. □ Глазное яблоко.

**АЛМА II** (Р.: рычаг; И.: lever; Т.: kaldıraç) *и.*

Ауыр нәмәне һалмауырлап күтәрә торған оҙон нәҙек бүрәнә. □ Рычаг *(в виде длинного тонкого бревна). Нигеҙ бүрәнәләрен алма менән күтәрҙек.*

**АЛМА III** *и. диал. кар.* **картуф**.

**АЛМА БИҘӘК (биҙәге)** (Р.: рисунок в крупную горошинку; И.: kind of pattern; Т.: benekli) *и.*

Түңәрәк-түңәрәк биҙәк. □ Набивной рисунок в крупную горошинку. ■ *Алма биҙәк төшкән күк төҫөндәге зәңгәр күлдәге менән башындағы аҡ яулығы талғын елгә әкрен генә елберләп тора.* Ф. Рәхимғолова.

**АЛМА ГӨЛӨ** *и. диал. кар.* **баҙыян сәскәһе.**

**АЛМАҒАС** (Р.: яблоня; И.: apple tree; Т.: elma) *и.*

Алма ағасы. □ Яблоня. *Ҡырағай алмағас. Йөнтәҫ алмағас. Себер алмағасы. Урман алмағасы.* ■ *[Баҡсаға] ингәс тә, бынан ике йыл элек кенә ултыртылған йәш алмағастар үҫә.* Р. Мөхәмәтйәнов.

**АЛМА КҮК** (Р.: сивый в яблоках; И.: grey; Т.: benekli) *с.*

Күк атҡа алма ҙурлыҡ түңәрәктәр төшкән. □ Сивый в яблоках *(о масти лошади). Алма күк бейә.*

**АЛМА ҠУҢЫҘЫ** (Р.: щитовка запятовидная яблонная; И.: apple mussel scale; Т.: virgül kabuklu biti) *и. зоол.*

Күп ағастарҙы зарарлаусы ҡороҡҡос бөжәк. □ Щитовка запятовидная яблонная (лат. *Lepidosaphes ulmi*).

**АЛМАҠ-ҺАЛМАҠ** (Р.: посменно; И.: in turn; Т.: nöbetleşe) *р. диал.*

Алмаш-тилмәш. □ Посменно, попеременно.

**АЛМАЛАНЫУ (алмалан-)** (Р.: завязываться; И.: set; Т.: elma oluşmak) *ҡ.*

**1.** Алмаға тумалыу; алмалы булыу. □ Завязываться, образоваться *(о плодах яблони).* // Завязка, образование. ■ *Алмағастар инде алмалана, баҡылдаша һыуҙа өйрәктәр.* Х. Ғиләжев.

**2.** *күсм.* Алмаға оҡшау, алһыуланыу. □ Розоветь. ■ *Һынылҡланыбырак торған ҡап-ҡара ҡыйғас ҡашлы, ҡара күҙле, бит уртаһы алмаланып торған Санияны хәтерләнем.* Н. Мусин.

**АЛМАЛАУ I (алмала-)** (Р.: шитьё узором «алма»; И.: needlework; Т.: dikiş türü) *ҡ.*

Алма биҙәге һалыу, төшөрөү. □ Шить узором «алма» в аппликации. // Шитьё. *Алмалап тегеү.*

**АЛМАЛАУ II (алмала-)** (Р.: поднять рычагом; И.: lever; Т.: kaldıraç ile kaldırmak) *ҡ.*

Алма (II) менән һалмауырлап күтәреү. □ Поднять рычагом. ■ *Өй ыҡты әле ул, алмалап күтәрмәй булмаҫ.* Экспедиция материалдарынан.

**АЛМАЛЫ I** (Р.: с яблоками; И.: apple pie; Т.: elmalı) *с.*

**1.** Алма эслекле. □ С яблоками, яблочный.

**2**. Алма һүрәте төшөрөлгән. □ С узорами в яблоко.

**АЛМАЛЫ II** (Р.: съёмный; И.: detachable; Т.: kaldırılabilir) *с.*

Алып, ҡабат ҡуймалы; алынмалы. □ Съёмный. *Алмалы ҡапҡас.*

**АЛМАЛЫҠ (алмалығы)** (Р.: место, изобилующее яблонями; И.: place rich in apple-trees; Т.: elmalık) *и.*

Күп алмағастар үҫкән урын, алма баҡсаһы. □ Место, изобилующее яблонями. ■ *Ҡара, Зәйнәп, баҡсалағы алмалыҡтар япраҡ яралар.* Ғ. Сәләм.

**АЛМАН** [ғәр. المان] (Р.: немец; И.: German; Т.: Alman) *и.*

Германияла йәшәгән халыҡ һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Немец. ■ *Мин бына шул ерҙә тыуып үҫкән Ырымбурҙың башҡорт алманы.* Р. Шәкүр.

**АЛМАС** (Р.: алмаз; И.: diamond; Т.: elmas) *и.*

**1.** Саф углеродтың үҙгәреүенән барлыҡҡа килеп, башҡа минерал һәм аҫыл таштарҙан ҡатылығы, йылтырлылығы менән күпкә өҫтөн торған үтә күренмәле аҫыл таш. □ Алмаз. *Алмас ятҡылығы. Алмас ҡашлы йөҙөк. Алмас ташы.* ■ *Алмас йөҙөк ҡашындай .. нурҙа уйнап ятҡан ер.* Р. Шәкүров.

**2.** (*йәки* **алмас тимер**) Иң юғары сифатлы үткер ҡорос. □ Алмаз. *Алмас хәнйәр. Алмас башлы уҡ.* ■ *Күк тимер ҡайрау менән алмас булмаҫ.* М. Аҡмулла. *Алмас тимер менән яҙалар икән көмөш йөҙөктәрҙең ҡаштарын.* Халыҡ йырынан. *Алпамыша ебәк арҡанға йәбешеп зиндандан сығып, алмас ҡылысын тағып, Ҡолйерәненә менеп, туп-тура хан һарайына юл тота.* Әкиәттән.

**3.** Быяла ҡырҡҡыс. □ Стеклорез.

**АЛМА СЫБАР** (Р.: в яблоках; И.: dappled; Т.: alaca) *с.*

Ике янбашы алма эрелек сыбар. □ В яблоках *(о масти лошади). Алма сыбар ат.*

**АЛМАТУТАЙ** *и. диал. ҡар.* **ҡамҡа.**

**АЛМАУ** (Р.: догма; И.: dogma; Т.: kanun) *и. иҫк.*

Ҡанун, ҡағиҙә. □ Закон, догма. *Дин алмауҙары.*

**АЛМАУТ** (Р.: кирказон обыкновенный; И.: birthwort; Т.: loğusa otu) *и. бот.*

Туғайҙарҙа, болондарҙа, урманда үҫкән, алма кеүегерәк емеш биргән, үрмәле күп йыллыҡ ағыулы урман үләне, алма үләне. □ Кирказон обыкновенный (лат. *Aristolochia clematitis*).

**АЛМА ҮЛӘНЕ** *и. ҡар.* **алмаут**.

**АЛМАШ I** (Р.: смена; И.: shift; Т.: posta) *и.*

**1.** Тейешле ваҡытта *кемдеңдер* урынына баҫып, эшен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө. □ Смена, сменщик. ■ *Ул [Аҡбулат] үҙ алмашы эш башламаҫ борон уҡ барып, эште барлай.* Ғ. Дәүләтшин.

**2.** *күсм.* Оло быуындың эшен дауам итерлек йәш быуын. □ Смена. *Алмаш әҙерләү. Йәштәр — беҙҙең алмашыбыҙ.*

**АЛМАШ II** (Р.: сменный; И.: changeable; Т.: vardiya) *с. мәғ.*

Кәрәк саҡта *кемдең* йәки *нимәнеңдер* урынына ҡуйыу, файҙаланыу өсөн тотолған. □ Сменный. *Алмаш кейем. Алмаш тәгәрмәс.* ■ *Юл кәрәк-яраҡтарын, ҡәҙерләберәк кейә торған костюмымды, алмаш күлдәктәремде ҡул сумаҙанына тултырҙым.* Ф. Иҫәнғолов.

**АЛМАШ III** (Р.: местоимение; И.: pronoun; Т.: zamir) *и. грам.*

Телмәр эсендә исем, сифат йәки һан урынына ҡулланыла торған һүҙ. □ Местоимение. *Зат алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Һорау алмаштары.*

**АЛМАША** (Р.: помешанный; И.: insane; Т.: çılgın) *с.*

Аҡыл дөрөҫлөгөнән мәхрүм, аҡылы кәм; алйот, иҫәр. □ Помешанный, сумасшедший. *Алмаша кеше. Алмаша булыу.* ■ *Ҡарттың өлкән ҡыҙы: «Кәрәк ине! Йәш ғүмеремде әрәм итеп йыланға барырға әллә мин алмашамы?» — тип йүгереп инә лә китә.* Әкиәттән.

**АЛМАШАЛАНЫУ (алмашалан-)** (Р.: помешаться; И.: become insane; Т.: çıldırmak) *ҡ.*

Алмаша булыу, аҡыл алмашыныу. □ Помешаться, сойти с ума.

**АЛМАШЛАТЫУ (алмашлат-)** (Р.: чередовать; И.: alternate; Т.: değiştirmek) *ҡ.*

Әле береһен, әле икенсеһен алмаштырыу; сиратлатыу. □ Чередовать. *Ҡулды алмашлатып болғау.*

**АЛМАШЛАУ (алмашла-)** (Р.: чередовать; И.: alternate; Т.: değiştirmek) *к.*

**1.** Береһен-береһе алмаштырыу, алмаш-тилмәш итеү; сиратлау. □ Чередовать, сменять, меняться, сменяться. ■ *[Айбулат менән Истебай] алмашлап ял иттеләр.* Һ. Дәүләтшина.

**АЛМАШЛАП** (Р.: поочерёдно; И.: in turn; Т.: sırayla) *р.*

Береһенән һуң икенсеһе, сиратлап. □ Поочерёдно, посменно, попеременно. *Алмашлап йоклау. Алмашлап укыу. Алмашлап һаклау.* ■ *[Зыяның] салбар балактарынан соборлап һыу ағып тора, аяктарын алмашлап баҫкан һайын сабаталары лас-лос килә ине.* М. Тажи.

**АЛМАШЛАШЫУ (алмашлаш-)** (Р.: сменяться; И.: take turns; Т.: değişmek) *к.*

Береһен-береһе алмаштырыу. □ Сменяться, чередоваться, меняться. *Алмашлашып карауыллау. Алмашлашып эшләү.*

**АЛМАШСЫ** (Р.: смена; И.: shift; Т.: posta) *и.*

**1.** *Кемдеңдер* урынына килеп, эшен, хеҙмәтен дауам иткән кеше йәки кешеләр төркөмө. □ Смена, сменщик. ■ *Концертта йәш кенә Ғата Сөләймәновты ла сәхнәгә сығаралар. Халык уға ла гөрләтеп кул саба. Сәхнә артында инде Йомабай Иҫәнбаев Ғатаны косаклап ала, тәрән тулкынланып: — Бына, алмашсы булды, — ти.* Р. Шәкүр.

**2.** Алмашлап эшләүселәр йәки *кемделәр* алмаштырыусы. *Алмашсы килеп эш башланы.*

**АЛМАШ-ТИЛМӘШ** (Р.: поочерёдно; И.: in turn; Т.: sırayla) *р.*

Береһен-береһе алмаштырып; бер-бер артлы, алмашлап. □ Поочерёдно, посменно, попеременно. ■ *[Ғәйнекәй] ауыл осона тиклем етәкләп барған кыҙын һығып косаклап, биттәренән алмаш-тилмәш үпте лә .. шәпшәп атлап китеп барҙы.* З. Йәнбирҙина. *Ғимран бабай кеткелдәп көлә, төпкә баткан сағыр күҙҙәрен алмаш-тилмәш беҙгә йөрөтөп сыға: — Ай, сәбәке малайҙар, татыу ғына уйнаһағыҙ, ни була?* Н. Мусин.

**АЛМАШТЫРҒЫЛАУ (алмаштырғыла-)** (Р.: изредка менять; И.: change from time to time; Т.: bazen değiştirmek) *к.*

Бер нисә тапҡыр алмаштырыу, һирәкләп булһа ла алмаштырыу. □ Менять *(время от времени, изредка).* ■ *[Йәнтүрә:] Нурулла туған, һинән һуң йүнле председателгә әләгә алманык. Әйе, алмаштырғылап та караныҡ.. береһенән-береһе йүнһеҙерәк булып сыктылар.* А. Мөбәрәков.

**АЛМАШТЫРЫЛҒАН БАЛА** (Р.: подменыш; И.: baby changed by deuce; Т.: perilerin değiştirdiği çocuk) *и. миф.*

Башҡорт мифологияһында ен алмаштырған бала. □ Подмёныш, обменыш.

**АЛМАШТЫРҒЫҺЫҘ** (Р.: незаменимый; И.: irreplaceable; Т.: eşsiz) *с.*

Яҡшы, һәйбәт, алыштырып булмай торған. □ Незаменимый. *Алмаштырғыһыҙ етәксе.*

**АЛМАШТЫРЫЛЫУ (алмаштырыл-)** *к. төш. кар.* **алмаштырыу**. *страд. от* **алмаштырыу**.

**АЛМАШТЫРЫУ (алмаштыр-)** (Р.: менять; И.: change; alter; Т.: değiştirmek) *к.*

**1.** Бер нәмә урынына икенсеһен ҡуйыу. □ Менять. // Смена, изменение. *Урын алмаштырыу.* ■ *[Кыҙ:] Уның ике мискә һыуы бар. Береһе көс бирә, икенсеһе бөтөрә. Беҙ шул мискәләрҙе алмаштырып ҡуяйык.* Әкиәттән. *Ышаныуҙар буйынса, сабыйҙы кырк көнгә тиклем яңғыҙын калдырһаң, уны ен алмаштыра, йәғни ен кеше балаһы урынына үҙенекен һалып китә.* Ф. Хисамитдинова.

**2.** Бер нәмә урынына икенсеһен файҙаланыу. □ Сменять. // Смена. *Аяк кейемен алмаштырыу. Йүргәкте алмаштырыу.* ■ *Атайым бөгөн иртә торҙо, алмаштырып кейҙе кулдәген.* С. Агиш.

**3.** Бер нәмә биреп икенсеһен алыу. □ Обменять. // Обмен. *Акциялар алмаштырыу. Китап алмаштырыу. Картуфты онға ал-*

*маштырыу. Тауар алмаштырыу. Алмаштырыу пункты.*

**4.** Береһенән һуң икенсеһе барлыҡҡа килеү, үҙгәреү. □ Сменять. // Смена. ■ *Кеш йылына ике тапҡыр: яҙ һәм көҙ көнөндә йөнөн алмаштыра.* К. Фәхретдинов. *Яҙҙы йәйҙәр алмаштырыр, йәй артынан көҙ килер.* М. Ямалетдинов.

**5.** Берәүҙең хеҙмәт урынына икенсе кешене ҡуйыу, берәү урынына эшләп тороу. □ Замещать, заменять, заступать вместо *кого*, сменять. // Замещение, замена, смена. *Ҡарауылды алмаштырыу. Мөдирҙе алмаштырыу.*

**6.** Берәй нәмәнән баш тартып, икенсеһенә күсеү. □ Сменить. // Смена. *Ҡарашты алмаштырыу. Эште алмаштырыу.*

**7.** Яңыртыу. □ Обновлять. // Обновление. *Театрҙың репертуарын алмаштырыу. Өй йыһаздарын алмаштырыу. Кешенең миңе боҙолоп ауырыһа, уның исемен алмаштырыу йолаһы булған.*

**8.** *фин.* Аҡсаны бер ҡиммәттән икенсе ҡиммәткә күсереү. □ Обменять, конвертировать. // Обмен, конвертирование. *Валюта алмаштырыу. Алмаштырыу пункты. Алмаштырыу фонды.*

**АЛМАШЫНЫУ (алмашын-)** (Р.: сменяться; И.: exchange; Т.: değişmek) *к.*

**1.** Берәүҙең урынына икенсеһен ҡуйыу. □ Меняться, переменяться, сменяться. // Изменение, перемена, смена. *Балалар баҡсаһында тәрбиәселәр алмашынып тора.*

**2.** Берәүҙән һуң икенсеһе ҡуйылыу; үҙгәреү. □ Меняться, сменяться; смениться, переменяться; перемениться, измениться. // Смена, перемена, изменение. *Урам исемдәре алмашынған.*

**3.** *кар.* **алмашаланыу**. ■ *Шулай алмашынып ҡалғайны, тәки рәтләнә алманы.* Ә. Атнабаев.

**4.** Телдең үҫеше процесында һүҙҙәге морфемаларҙың һаны, килеү тәртибе, фонематик төҙөлөшө үҙгәрмәйенсә, функцияларының үҙгәреше. □ Декорреляция.

**АЛМАШЫНЫУСАН** (Р.: переменный; И.: exchange; Т.: değiştirilen) *с.*

Үҙгәреүсән. □ Переменный, переменчивый. *Кәйефе тиҙ алмашыныусан. Һауа торошо тиҙ алмашыныусан.*

**АЛМАШЫУ (алмаш-)** (Р.: менять; И.: exchange; Т.: değiştirmek) *к.*

**1.** Бер үк төрлө нәмәне үҙ-ара бирешеү. □ Менять, обменивать, поменять. // Смена, обмен. *Активтар менән алмашыу. Урын алмашыу. Бүлмәләрҙе алмашыу. Туфлиҙарҙы алмашыу.* ■ *Зөлхизә менән Арыҫлан һырға һабағы алмаштылар. Йола буйынса, минең кейәүем Арыҫлан булырға тейеш.* Ә. Харисов.

**2.** Бер-берең менән уртаҡлашыу. □ Обмениваться. // Обмен. *Фекер алмашыу. Тәжрибә алмашыу.* ■ *[Сәлмән] Мәндемгә килә лә текә ярҙан аяҡтарын һалындырып ултыра. Минең менән өҙөк-йыртыҡ ҡына һүҙ алмаша.* Ә. Вахитов.

**АЛМАШЫУ ҠИММӘТЕ** (Р.: меновая стоимость; И.: value; Т.: değişim değeri) *и. икт.*

Тауар алмашҡанда ҡуйылған хаҡ, баһа. □ Меновая стоимость.

**АЛМАШЫУ МӨНӘСӘБӘТЕ** (Р.: меновое отношение; И.: exchange relation; Т.: değişim ilişkisi) *и. икт.*

Үҙ-ара тауар алмашҡанда барлыҡҡа килгән бәйләнеш. □ Меновое отношение.

**АЛМИҘЕҮ** (Р.: нагрудное украшение; И.: kind of female decoration; Т.: süsleme) *и. этн.*

Ҡатын-ҡыҙҙар күлдәгенең уҡа-тәңкәләр менән биҙәлгән алынмалы киң иҙеүе. □ Нагрудное украшение с монетами и позументами. ■ *Алтын ғына тәңкә ай бирәйем, алмиҙеүкәйеңә баҫырһың.* Халыҡ йырынан. *Унда милли елән генә түгел, ә биҙәүестәр, баш кейемдәре, ҡашмау, селтәр, дәүәт, түшелдерек, һарауыс, алъяпҡыс, таҡыя, сәсмау, сәсүрмес, башкейем, алмиҙеү ҙә бар! Өҫтәүенә һәммәһенең үҙ ерлеге, үҙенсәлеге, тегеү ҡағиҙәһе һәм йолаһы бар!* Р. Солтангәрәева.

**АЛОГИЗМ** [рус. < гр. *a+logos*] (Р.: алогизм; И.: illogik; Т.: mantıksız) *и.*

Логик әҙмә-эҙлелеге булмаған, ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер һәм телмәр. □ Алогизм.

**АЛОЙ** [рус. *алоэ* < гр. *aloe*] (Р.: алоэ; И.: aloe; Т.: sarısabır) *и. бот.*

Ләлә сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған итләс ҡыяҡ япраҡлы көньяҡ үҫемлеге (лат. *Aloe*). □ Алоэ.

**АЛОЭ** [рус. < гр. *aloe*] *и. бот. ҡар.* **алой.** *Алоэ япрағы.* ■ *Күҙҙәрҙең арыуын бөтөрәм, һыуыҡ тейҙермәйем тиһәгеҙ, күҙ ҡабаҡтарына составында гиалурон кислотаһы, алоэ һуты, Е витаминыбулған махсус гель һөртөгөҙ.* «Йәшлек», 22 ғинуар 2011.

**АЛП** (Р.: великан; И.: giant; Т.: alp) *и.*

**1.** Бик ҙур кәүҙәле. □ Великан. ■ *Алптың бармаҡтары беләктәй, беләктәре бүрәнәләй икән.* Әкиәттән.

**2.** Көслө батыр. □ Богатырь. ■ *Әкиәттәрҙә Алп менән Алпамыша көсһөҙҙәргә, йәберләнгәндәргә ярҙам итә.* Ф. Хисамитдинова. ● *Алп ананан тыуыр, арғымаҡ бейәнән тыуыр.* Әйтем.

**АЛПА** *и. диал. ҡар.* **алп.**

**АЛПАМЫША** [дөйөм көнсығыш төрки *Алып Манаш*] (Р.: Алпамыш; И.: name of fairy-tale giant; Т.: Alpamış) *и.*

**1.** *(баш хәреф менән)* Эпос һәм әкиәт батырының исеме. □ Алпамыш *(имя эпического богатыря-великана).* ■ *Аҡкүбәк был хәлгә ғәжәп ҡылып, үҙенең атаҡлы һынсыһын саҡырта, һынсы: «Баланың былай үҫеүенә аптырамағыҙ. Ул бик көслө, мөһабәтле алып булыр. Уға исемде Алпамыша тип ҡушайыҡ!» — ти.* «Алпамыша менән Барсынһылыу». *Алпамыша Ҡарабатырға ҡаршы сыға.* Әкиәттән. ● *Аты-туны бар кешелә Алпамыша көсө бар.* Мәҡәл.

**2.** *күсм.* Ҙур кәүҙәле көслө кеше. □ Великан, сильный человек. ■ *Яңы эра башланғанға тиклем ғәҙәттәге ҙурлыҡтағы кешеләр менән бергә буйҙары өс метрҙан ашҡан алпамышалар ҙа йәшәгән тигән фараз йөрөй.* «Йәшлек», 14 август 2010. *Алпамышалар бейек-бейек ҡарағайҙарҙы ла аша баҫып, урманды үлән урынына тапап йөрөй, ер һөрөп йөрөгән кәҙимге кешене һукаһы, аты-ниһе менән бергә усына һыйҙыра ала... Гигант кеше киәфәтендәге алпамышалар хаҡындағы топонимик легендалар башҡорттар йәшәгән күп тарафтарҙа билдәле.* Ә. Сөләймәнов.

**АЛПАМЫШАЛАЙ** (Р.: как Алпамыш; И.: as Alpamish; Т.: Alpamış gibi) *р.*

Алпамыша кеүек көслө, ҙур кәүҙәле. □ Подобно Алпамышу *(великан, сильный).* ■ *Эх, алпамышалай батыр, сәмле, ҡурҡыу белмәҫ булһам ине.* «Аҡбуҙат», № 8, 2011. *Мотаһарҙың уйсан ҡарашы танауы аҫтында бәпкә йөндәре өтөрәйеп торған, йәшенә күрә түгел мыҡты Вәлитдингә туҡтала, алпамышалай эре һөйәкле булһа ла, яңы ғына ҡалҡып килгән тал сыбығы әле был — ҡайһы яҡҡа баҫһаң, шунда бөгөлә.* Й. Солтанов.

**АЛПАНИСА** *и. диал. ҡар.* **алп.**

**АЛПАНЛАУ (алпанла-)** (Р.: двигаться вразвалку; И.: waddle; Т.: badi badi yürümek) *ҡ.*

Ян-яҡҡа аушанлау, һалп-һолп итеү *(атлағанда).* □ Двигаться вразвалку, вперевалку, переваливаться. ■ *Бүре балаларының береһе генә алпанлап ағас артына йәшенгән булды.* Р. Солтангәрәев.

**АЛПАН-ТИЛПӘН** *р. ҡар.* **алпан-толпан II.**

**АЛПАН-ТОЛПАН I** (Р.: медведь; И.: swinging from one side to the other; Т.: ayı) *и.*

Айыуҙың табулаштырылған (тыйылған) исеме. □ Табуированное название медведя.

**АЛПАН-ТОЛПАН II** (Р.: вразвалку; И.: swinging from one side to the other; Т.: paytakça) *р.*

Ауыр баҫып, ян-яҡҡа аушанлап *(атлау)*; һалп-һолп. □ Вразвалку, вперевалку, переваливаясь. ■ *Ҡарттар Аллаяр мулланы оҙаҡ көтәләр. Бына бер саҡ, һәлмәк кенә баҫып, алпан-толпан атлап мулла килә.* Әкиәттән. *Шәрифулла алпан-толпан атлап,*

*Ниғмәтулланың артынан эйәрҙе.* Я. Хамматов. *Алпан-толпан атлаған айыуы күп Уралтау.* Ҡобайырҙан.

**АЛПАР** (Р.: богатырь; И.: brave warrior; Т.: alp) *и.*

Батыр, көслө яугир. □ Богатырь, смелый воин. *Алпарына күрә толпары.*

**АЛПАУЫТ** [боронғо төрки *алпагут* ‘кенәз’] (Р.: помещик; И.: landowner; Т.: toprak ağası) *и.*

**1.** *тар.* Эре ер биләүсе. □ Помещик. *Алпауыт биләмәһе. Алпауыт ере. Алпауытҡа эшләү.* ■ *[Базы буйына] иң матур урынды һайлап, .. Готлунд тигән бер алпауыт килеп ултыра.* В. Исхаҡов.

**2.** *этн.* Ирәкте ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение иряктинцев.

**АЛПЫ-ТОЛПО** *р. диал. кар.* **алпан-толпан**. ■ *Зилский менән секретарь сананан аяа-түнә тороп, алпы-толпо баҫып советҡа килеп инделәр.* Ғ. Дәүләтшин.

**АЛПЫ-ҺАЛПЫ** (Р.: нерадиво; И.: negligently; Т.: savsak) *р.*

Көс түкмәй, иренеп кенә, арлы-бирле. □ Нерадиво, лениво. *Алпы-һалпы эшләү.* ■ *Ат ашыкмайынса, һыйыр ыңғайына алпы-һалпы ғына атлай.* Д. Исламов.

**АЛСА** (Р.: алыча; И.: cherry plum; Т.: kiraz eriği) *и. бот.*

**1.** Гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, емеше сейәнекенә оҡшаған көньяҡ ағасы. □ Алыча, ткемали. *Алса үҫтереү.*

**2.** Шул ағастың емеше. □ Алыча. *Алса ҡайнатмаһы.* ■ *Тау битләүендә алса күп. Сейә кеүегерәк ҡыҙыл емеш ул. Тик әсе, сәй менән эсергә бик шәп. Телеңде йоторһоң.* Яр. Вәлиев.

**АЛСАБЫР** (Р.: ведущий; И.: host; Т.: yönetmen) *и.*

Ҡарға бутҡаһы байрамын алып барыусы. □ Ведущий в обрядовом празднике Каргатуй ‘Воронья каша’. ■ *Алсабыр итеп ауылда абруйлы, һүҙе үтемсәк әбейҙәрҙе һайлайҙар. Улар ауыл буйлап йомортка, май, ярма йыя.* Ф. Хисамитдинова.

**АЛСАЙЫУ (алсай-, алсая)** (Р.: становиться на задние ноги; И.: rear; Т.: şahlanmak) *к.*

Башты юғары күтәреп, аяҡтарҙы кирә баҫып тороу *(эре йәнлектәр тураһында)*; үрә баҫыу (тороу). □ Становиться на задние ноги (лапы), встать на дыбы. *Алсайып тороу.* ■ *[Күсәрхан:] Бер болан күрҙем: атырға булып яныма алғайным, алсая баҫты ла торҙо.* Әкиәттән.

**АЛСАҠ** [дөйөм төрки *алчак* ‘шаян, илгәҙәк’] (Р.: приветливый; И.: affable; Т.: güleryüzlü) *с.*

Асыҡ сырайлы, илгәҙәк, көләс. □ Приветливый, радушный. ■ *Ғәләү эскерле түгел. Ул алсаҡ, ҡояш кеүек йылмайып тора.* Б. Бикбай. *Был Ҡыҙырас — бигерәк алсаҡ малай. Көнгә нисә күрһә, шунса иҫәнләшә, берәй ярамаған эш эшләһә, шунда уҡ ғәфү үтенә.* З. Биишева.

**АЛСАҠЛАНЫУ (алсаҡлан-)** (Р.: проявлять приветливость; И.: display affability; Т.: birine güleryüz göstermek) *к.*

Алсаҡҡа әйләнеү, алсаҡ булыу. □ Проявлять приветливость, радушие; становиться приветливым, радушным. ■ *Маһайыбыраҡ һөйләшә торған бер ҡырыҫ ҡатын ине был [Маһиҙәр]. Хәҙер нык үҙгәргән, алсаҡланған төҫлө.* Ҡ. Ибәтуллин.

**АЛСАҠЛЫҠ (алсаҡлығы)** (Р.: приветливость; И.: affability; Т.: güleryüzlülük) *и.*

Асыҡ сырайлы, көләс булған хәл, илгәҙәклек. □ Приветливость, радушие. *Алсаҡлыҡ күрһәтеү.* ■ *Бигерәк тә кешеләрҙең холоҡ-ҡылыҡтарындағы ҡабатланмаҫ, ауылса ябай матурлыҡ, алсаҡлыҡ, илгәҙәклек, бөтә рухыңды яулап алырлыҡ иҫ киткес моң байлығы .. бөтә булмышыңа йән өрөп тора.* Х. Назаров.

**АЛСАҠРЫҠ (алсаҡрығы)** (Р.: допризывник; И.: young man below the conscription; Т.: asker adayı) *и. иҫк.*

Һалдатҡа саҡырылырға йәше еткән егет. □ Допризывник.

**АЛСЫ** (Р.: вогнутая боковая сторона альчика; И.: detail of a dice; Т.: zarın içbükey yanı) *и.*

Ашыҡтың уйымлы ҡабырға яғы. □ Вогнутая боковая сторона альчика. *Ятышына ҡарап, алсыны алсы менән, бөгәһен бөгә менән аталар.*

**АЛСӘХНӘ** (Р.: авансцена; И.: proscenium; Т.: önsahne) *и. театр.*

Сәхнәнең шаршау менән рампа араһындағы алғы өлөшө. □ Авансцена.

**АЛТАЙ** (Р.: алтаец; И.: the Altay people; Т.: Altaylı) *и.*

Алтай Республикаһының төп халҡы һәм шул халыҡтың кешеһе. □ Алтаец, алтайцы. ■ *Алтай Республикаһынан килгән «Алтам» ансамбленең йылҡы өйөрөн һүрәтләүсе хореографик композицияһы беҙҙең Аҡбуҙат эпосын хәтерләтте...* «Башҡортостан», 18 июнь 2011.

**АЛТАЙ МИЛӘҮШӘҺЕ** (Р.: фиалка алтайская; И.: violet species; Т.: Altay menekşesi) *и. бот.*

Ҡыҫҡа һабаҡлы, ялтыр яҫы япраҡлы, шәмәхә төҫтәге сәскәле үҫемлек. □ Фиалка алтайская (лат. *Viola altaica Ker-Gawl*).

**АЛТАЙСА** (Р.: по-алтайски; И.: in Altaic; Т.: Altayca) *р.*

**1.** Алтай телендә. □ По-алтайски. *Алтайса һөйләшеү.*

**2.** Алтайҙарға хас рәүештә. □ По-алтайски. *Алтайса кейенеү. Алтайса бейеү.*

**АЛТАЙ ТЕЛДӘРЕ** (Р.: алтайские языки; И.: Altaic languages; Т.: Altay dilleri) *и.*

Тел ғилемендә төрки, монгол, тунгус-маньчжур, япон, корея телдәрен үҙ эсенә алған телдәр ғаиләһе. □ Алтайские языки. *Алтай телдәре менән оҡшаш. Алтай телдәре үҫеше.*

**АЛТАҠТА** (Р.: вывеска; И.: signboard; Т.: levha) *и.*

Учреждение, ойошманың атамаһы яҙылған яҙыу. □ Вывеска. ■ *Республикабыҙҙа урамдағы барлыҡ яҙыуҙарҙың, алтаҡталарҙың, урам, сауҙа һ.б. йәмәғәт урындары атамаларының ике дәүләт телендә яҙылырға тейешлеге барыбыҙға ла мәғлүм. Урамдарыбыҙ таҙа булған кеүек, алтаҡталар ҙа хатаһыҙ булырға тейеш!* «Йәшлек», 18 август 2009.

**АЛТАТАР** (Р.: револьвер; И.: revolver; Т.: altıpatlar) *и. иҫк.*

Әйләнеп торған барабанлы, күп яһаҡлы бәләкәй атыу ҡоралы. □ Револьвер. *Алтатар барабаны. Алтатарҙан атыу.* ■ *[Баяр] халыҡты ҡурҡытыу өсөн баш осонан алтатары менән атып ебәргән.* «Батыршаның хаты». *Аттың шәбен ектек, беребеҙ — мылтыҡ, икенсебеҙ алтатар менән ҡоралландыҡ.* Й. Солтанов.

**АЛТАУ** [дөйөм төрки *алты*] (Р.: шестеро; И.: six; Т.: altı) *йыйн. һ.*

Алты кеше йәки нәмә. □ Шестеро. ■ *Киттек әйҙә, бишәүҙән алтау яҡшы.* Әкиәттән.

**АЛТАУЛАП** (Р.: вшестером; И.: six (together); Т.: altı kişi) *р.*

Алты кеше бергә. □ Вшестером. ■ *Былар: егет, ҡыҙ, ҡарт, уның әбейе, батша менән йәш ҡатыны алтаулап һәйбәт итеп йәшәй башлайҙар.* Әкиәттән.

**АЛТАУЛАШЫП** (Р.: вшестером; И.: six (together); Т.: altı kişi) *р.*

Алты кеше бергәләшеп. □ Вшестером. *Алтаулашып эшләү.* ■ *Алтаулашып тәбәнәк кенә өҫтәл кеүек бер ташҡа теҙелешеп ултырабыҙ.* Д. Шәрәфетдинов.

**АЛТАУЫҘ** (Р.: большеротый; И.: large mouthed; Т.: büyük ağızlı) *с. диал.*

**1.** Ҙур ауыҙлы *(кешегә ҡарата).* □ Большеротый.

**2.** Ғәйбәтсе. □ Сплетник.

**АЛТМЫШ** [боронғо төрки *алтымыш*] (Р.: шестьдесят; И.: sixty; Т.: altmış) *төп һ.*

**1.** Алты тиҫтә, 60-ҡа тиң иҫәп. □ Шестьдесят. *Алтмыш саҡрым.* ● *Аҡылһыҙ кеше алтмышта ла йәш була, аҡыллы алтыла ла баш була.* Мәҡәл. *Арпа алтмыш көндә өлгөрә.* Әйтем.

**2.** Күплек символы. □ Символ множества. ■ *Эй Хоҙай, ошо кешенең ҡыҙын миңә ғашиҡ ҡыл, өс йөҙ алтмыш өс таҫыл менән әүрәт, йөҙ ҡырҡ рәт әүрәт...* Халыҡ ижа-

дынан. ● *Алтмыш ҡолон ат булмаç.* Мәҡәл. *Дошман алтмыш булһа, дуçтар етмеш.* Мәҡәл.

**АЛТМЫШАР** (Р.: по шестидесяти; И.: sixty each; Т.: altmışar) *бүл. һ.*

Һәр бере алтмышҡа тиң. □ По шестидесяти. *Алтмышар һум акса. Алтмышарҙан бүлеү.*

**АЛТМЫШ АЯҠЛАУ** (Р.: бежать вприпрыжку; И.: run hopping; Т.: zıplaya zıplaya koşmak) *ҡ. диал.*

Һикереп-һикереп йүгереү. □ Бежать вприпрыжку.

**АЛТМЫШҠОЛАҠ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-айлинцев.

**АЛТМЫШЛАП** (Р.: около шестидесяти; И.: about sixty; Т.: altmış civarında) *сама һ.*

Алтмыш тирәһе, алтмышҡа яҡын. □ Около шестидесяти, приблизительно шестьдесят. *Алтмышлап кеше.*

**АЛТМЫШЫНСЫ** (Р.: шестидесятый; И.: the sixtieth; Т.: altmışıncı) *рәт һ.*

Урын тәртибе 60 менән билдәләнгән. □ Шестидесятый. *Алтмышынсы бүлмә. Алтмышынсы йыл.*

**АЛТӨРӘН** (Р.: предплужник; И.: co(u)lter; Т.: saban bıçağı) *и.*

Һабандың ҙур төрәне алдына ҡуйыла торған бәләкәй төрән *(кәçтең ҡыртышын һыҙырып бара).* □ Предплужник. ■ *Алтөрән ҡуйып, 30 сантиметрға еткереп һөрөлә ер.* Яр. Вәлиев.

**АЛТЫ** [дөйөм төрки *алты*] (Р.: шесть; И.: six; Т.: altı) *төп һ.*

**1.** Биштән һуң килгән һандың, 6, VI цифрҙарының һаны. □ Шесть.

**2.** 6-ға тиң иçәп. □ Шесть. *Алты ай. Алты йөҙ. Алты кило.* ■ *Бүҙәнә ҡысҡырһа, атай: «Биш ҡысҡырһа, әүендән биш бот, алты ҡысҡырһа, әүендән алты бот, ете ҡысҡырһа — ете бот», — ти торғайны.* Халыҡ ижадынан. *Ғаиләлә нур өçтөнә нур өçтәп алты бала донъяға килә.* Г. Ситдиҡова. ● *Алты йәшәр илдән килһә, алтмыш йәшәр ҡаршы сығыр.* Мәҡәл. *Алтмыш аҙым алға атла, алты тапҡыр артыңа ҡара.* Мәҡәл.

**АЛТЫЛАП** (Р.: около шести; И.: about six; Т.: altı civarında) *сама һ.*

Алты тирәһе, алтыға яҡын. □ Около шести, приблизительно шесть. *Алтылап баш һарыҡ. Алтылап кеше.*

**АЛТЫМӨЙӨШ** (Р.: шестиугольник; И.: hexagon; Т.: altıgen) *и. мат.*

Алты мөйөшлө геометрик фигура. □ Шестиугольник.

**АЛТЫН I** [дөйөм төрки *алтын, алтун*] (Р.: золото; И.: gold; Т.: altın) *и.*

**1.** Химик элемент, һары төçтәге йомшаҡ затлы металл *(киммәт берәмеге булып хеҙмәт итә).* □ Золото. / Золотой. *Алтын йыуыу. Алтын яткылығы. Алтын ялатыу.* ■ *Бөтә кеше талаша-һуғыша үҙәк буйына ябырылды. Унда бөртөклө алтын сыккан ояларҙы күреү менән барыһы ла онотолдо.* Я. Хамматов. ● *Алтын юлдан яҙҙырыр.* Мәҡәл. *Алтынды эҙлә таштан, акылды эҙлә баштан.* Әйтем. *Алтынды тут алмаç, һыуҙы ут алмаç.* Әйтем.

**2.** *иçк.* Өс тингә торошло боронғо аҡса берәмеге. □ Монетка достоинством в три копейки. *Бер алтын. Биш алтын.*

**3.** Алтындан ҡойолған өс һумлыҡ, һуңғараҡ — биш, ун һумлыҡ аҡса. □ Трёх, пяти, десятирублёвые золотые монеты. *Алтын менән түләү.* ■ *[Ныязғол:] Ер банкыһындағы йөҙ егерме алты мең алтын минең ҡулда буласаҡ, Алла бирһә.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** *күсм.* Байлыҡ, дәүләт. □ Богатство, состояние. *Алтын валюта. Алтын фонды.* ■ *Тупрағы ла алтын тыуған ерҙең.* Р. Ғарипов. *Алтын матур, алтын ҡиммәт, тик алтын була һалкын, һин дә алтындай бул, ләкин эсеңдә булһын ялкын!* Р. Назаров. ● *Ир акылы — бер алтын, ил акылы — мең алтын.* Мәҡәл. *Сабыр төбө — һары алтын.* Мәҡәл. *Һүҙең көмөш булһа, тик тороуың алтын.* Мәҡәл.

**АЛТЫН II** (Р.: золотой; И.: gold; Т.: altın) *с. мәғ.*

**1.** Алтындан, металдан эшләнгән. □ Золотой. *Алтын акса.* ■ *Бер ҡыҙ шишмәгә һыуға килә. Һыуға эйелһә, ялтырап алтын балдаҡ ята.* Әкиәттән.

**2.** Бик яҡшы сифаттары менән айырылып торған, ҡиммәтле. □ Ценный. *Алтын хәрефтәр менән яҙылыу. Алтын фондҡа ингән әҫәр.* ■ *Фәриҙә Ҡудашева үҙенең йырҙары менән Башҡортостан ғына түгел, ә Рәсәй йыр сәнғәтенең алтын фондына ингән шәхес.* «Башҡортостан», 21 декабрь 2010.

**3.** *күсм.* Яҡшы, һәйбәт, затлы, аҡыллы. □ Хороший, мудрый. *Алтын һүҙҙәр.* ■ *Аҡһаҡалдар бирҙе алтын аҡыл, сая атымма тип тағанда.* М. Басыров. *Һынды илдең хәсрәт көмбәҙҙәрен терәп торған алтын бағанаһы.* М. Ямалетдинов.

**4.** *күсм.* Һары төҫтәге. □ Золотой, золотистый. *Алтын балыҡ. Алтын бөрмәкәй. Алтын кәрешкә. Алтын ҡырҙар. Алтын нурҙар. Алтын сәс.* ■ *Алтын күҙҙө һағынғайным, килде бит алтын күҙөм.* Р. Бикбаев. *Дала иңдәрендә — иген ҡыры, тыуған ерҙең алтын диңгеҙе.* Р. Шәкүр.

**5.** *миф.* Яҡтылыҡ, ҡояш, көс, байлыҡ, матурлыҡ, хакимлыҡ, өҫтөнлөк символы; яман көстәрҙән һаҡлай, көс, ҡеүәт бирә, ауырыуҙарҙан дауалай торған мифлаштырылған металл. □ Мифологизированный металл, символ света, солнца, постоянства, величия, силы, власти, богатства, красоты; охраняет от злых сил, даёт силу, могущество, излечивает от болезней. ■ *Йөрәге ауырткандар алтын имәләр ине.* М. Ғиззәтуллина.

**6.** *эйл. ф.* Алтыным. Яратып өндәшеү һүҙе. □ Золотко моё. ■ *Егет булһаң, бул алтыны, ҡыҙҙар алтыным тиһен.* М. Хәй. *Ашыҡма, килсе әле, алтынкайым, тамағыңды йылытып ал! — Мөхлисәнең тауышы ҡабат йомшарып, шыма ебәктәй үҙәк буйынан сыҡты, Моталды албырғатты.* Й. Солтанов.

**АЛТЫН АҒАС** (Р.: аукуба; И.: aucuba; Т.: aküba) *и. бот.*

Декоратив ҡыуаҡлыҡ. □ Золотое дерево, аукуба (лат. *Aucuba*).

**АЛТЫН БАҒАН** (Р.: золотко моё; И.: darling; Т.: canım) *и.*

Яратып өндәшеү һүҙе. □ Золотко моё. ■ *Арыҫлан һынлы бул, алтын баған бул, алты быуыныңһау булһын!* Алғыш. *Мирза инең яҡшы һүҙен һындырмаған, өйөндә туғаны кемдең алтын баған.* М. Аҡмулла. *Ҡәйнәм — алтын бағаным, мин уға таянам.* «Йәшлек», 7 март 2009.

**АЛТЫН БАЛЫҠ** (Р.: золотая рыбка; И.: goldfish; Т.: Japon balığı) *и.*

**1.** *зоол.* Балыҡ төрө. □ Золотая рыбка (лат. *Carssius auratus auratus*).

**2.** *миф.* Мифик балыҡ. □ Золотая рыбка *(мифическая рыба).* ■ *Ул алтын балыҡ кеше тауышы менән: — Мине үлтермә, егет! Бер көнөңдә ярармын, — тигән.* Әкиәттән.

**АЛТЫНБАШ** (Р.: золотарник обыкновенный; И.: golden rod; Т.: altınbaşak) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән. Сәскәһе һары төҫтә. 100-гә яҡын төрө бар. □ Золотарник обыкновенный, золотая розга (лат. *Solidago virgaurea*). ■ *Их, ошо ялан беҙҙең ауыл янында булһа, кис һайын килеп, алтынбаштарҙың таждарын ябып йоҡоға китеүҙәрен, иртәнсәк уяныр, ысыҡлы керпектәрен асыуын күҙәтер инем.* Д. Шәрәфетдинов.

**АЛТЫНГҮҘ** (Р.: златоглазка; И.: green lacewing; Т.: bit arslanı) *и. зоол.*

Үлән беттәрен ашаусы файҙалы бөжәк. □ Златоглазка (лат. *Chrysoperla carnea*).

**АЛТЫНҒОШ** (Р.: розовый скворец; И.: Rosy Starling; Т.: ala sığırcık) *и. зоол.*

Башы, ҡанаттары, ҡойроғо ҡара, кәүҙәһенең ҡалған өлөшө матур алһыу төҫтә булған сыйырсыҡ ҙурлығындағы ҡош; ялан сыйырсығы, алһыу ҡош. □ Розовый скворец (лат. *Sturnus roseus*). ■ *Ата алтынғоштоң башында йәшкелт ялтырауыҡлы ҡара бүрке бар.* Э. Ишбирҙин.

**АЛТЫН-КӨМӨШ** (Р.: драгоценности; И.: jewels; Т.: altın ve gümüş) *и. йыйн.*

Затлы металдар һәм уларҙан эшләнгән ҡиммәтле нәмәләр. □ Драгоценные металлы, драгоценности. ■ *Алтын-көмөш яуып торғанда ла, бүтән ерҙәр тыуған ил булмай.* Халыҡ йырынан. *Алтын-көмөшкә лә суммаһым, затлы тиреләргә лә төрөнмәнем — шулай ҙа үҙемде кешенән кәм тоймайымсы.* Т. Ғарипова. ● *Алтын-көмөш сыҡкан ерендә ҡәҙерле.* Әйтем.

**АЛТЫН ҠАҘЫҠ ЙОНДОҘО** *и. ҡар.* **Тимерҡаҙыҡ йондоҙо**.

**АЛТЫН ҠУЛЛЫ** (Р.: золотые руки; И.: clever fingers; Т.: elinden hiç bir şey kurtulmaz) *с. күсм.*

Һәр эште еренә еткереп, матур, сифатлы итеп эшләгән, эшкә булдыҡлы, һөнәрле. □ Золотые руки. ■ *[Әбей:] Доктор ҡыҙыбыҙҙың ҡулдары алтын икән, балаларыбыҙ алма кеүектәр.* Ф. Әсәнов.

**АЛТЫН ҠУҢЫҘ** (Р.: златка; И.: jewel beetle; Т.: altın böcek) *и. зоол.*

Ҡорттары урмандарға, баҡсаларға зарар килтерә торған, металл төҫлө ялтырауыҡ ваҡ ҡуңыҙҙар. □ Златка (лат. *Buprestidai*). *Ҡарама алтын ҡуңыҙы. Ҡарағас алтын ҡуңыҙы. Ерек алтын ҡуңыҙы. Ҡарағай алтын ҡуңыҙы. Йүкә алтын ҡуңыҙы. Үҙағас алтын ҡуңыҙы.*

**АЛТЫН ҠУЯН** (Р.: заяц золотой; И.: common agouti; Т.: aguti) *и. зоол.*

Американың үҙәгендә һәм көньяғында йәшәгән, ите ашарға яраҡлы кимереүсе йәнлек. □ Заяц золотой, агути (лат. *Dasyprocta aguti*).

**АЛТЫНЛАНЫУ (алтынлан-)** (Р.: золотиться; И.: become golden; Т.: altın kaplamak) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **алтынлау**. *страд. от* **алтынлау**. ■ *Иҙел буйкайҙары, ай, каялыҡ — Полковник Тәфтиләү яу урыны. Башҡорт илкәйҙәрен утка тоткас, алтынланды уның яурыны.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Алтын төҫөнә инеү; һарғайыу. □ Золотиться. ■ *Ағас япрактары алтынланып, көҙ йырҙарын йырлай урманда.* Ғ. Мәсғүт.

**АЛТЫНЛАТЫУ (алтынлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **алтынлау**. *понуд. от* **алтынлау**.

**АЛТЫНЛАУ (алтынла-)** (Р.: золотить; И.: gild; Т.: altın kaplama) *ҡ.*

**1.** Алтын ялатыу, алтынға маныу. □ Золотить, позолотить, вызолотить *что.* ■ *Алты мыҫҡал алтын алдым беләҙек алтынларға.* Халыҡ йырынан.

**2.** Алтын менән йәки алтын ҡатыштырып биҙәү. □ Украсить золотом.

**3.** *күсм.* Алтын төҫкә индереү, һарғайтыу. □ Окрашивать в золотистый цвет. *Сентябрь урмандарҙы, ҡырҙарҙы алтынлаған.*

**АЛТЫНЛЫ** (Р.: золотоносный; И.: goldbearing; Т.: altınlı) *с.*

Алтыны булған. □ Золотоносный. *Алтынлы мәғдән.* ■ *Ҡумырыктан өҫкә һәм аҫка киткән һайын, алтынлы пласт юғалды.* Я. Хамматов. *Әммә беҙҙең төбәктә, Мулдаш, Көсөк, Һөйөндөк, Һөләймән, Мулдакай ерҙәрендә, Ирәмәл йылғаһы буйында Ташҡутарған тигән ерҙән башланған Рәсәйҙең алтын биҙгәге — алтын йыуыусҙар бик күп ҡурғандарҙы юкка сығара, сөнки улар бөтәһе лә тиерлек алтынлы йылға буйҙарында була.* С. Ильясов.

**АЛТЫНСЫ I** (Р.: ювелир; И.: jeweller; Т.: kuyumcu) *и.*

Алтын менән эш иткән кеше; алтын оҫтаһы; зәргәр. □ Ювелир, золотых и серебряных дел мастер, золотарь.

**АЛТЫНСЫ II** (Р.: шестой; И.: the sixth; Т.: altıncı) *рәт һ.*

Урын тәртибе 6 менән билдәләнгән. □ Шестой. *Алтынсы класс. Алтынсы урын.* ■ *Алтынсы ҡиммәт нәмә — сабыр, тигән, сабыр кеше моратын табыр, тигән.* М. Аҡмулла.

**АЛТЫН СӘСКӘ** (Р.: крестовник обыкновенный; И.: senecio; Т.: kanarya otu) *и. бот.*

Таж япраҡтары ҡара-ҡаршы урынлашҡан ҡыҙғылт һары өйкөм сәскәле ҡый үләне; әүернә сәскә. □ Крестовник обыкновенный

(лат. *Senecio vulgaris*). *Урман алтын сәскәһе. Болон алтын сәскәһе.*

**АЛТЫН ТАМЫР** (Р.: золотистый корень; И.: rhodeola; Т.: altın kök) *и. бот.*

Күп йыллыҡ үҫемлек, дарыу үләне. □ Золотистый корень, родиола (лат. *Rhodiola rosea*). *Ирәмәл алтын тамыры.*

**АЛТЫН ТӨҪ** *и. миф. ҡар.* **бетеү.**

**АЛТЫН ТУЙ** (Р.: золотая свадьба; И.: golden wedding; Т.: 50. evlilik yıldönümü) *и.*

Ир менән ҡатындың илле йыл бергә ғүмер итеүенә арналған ғаилә байрамы. □ Золотая свадьба *(пятидесятилетие совместной супружеской жизни). Алтын туйҙы байрам итеү. Алтын туй менән ҡотлау.*

**АЛТЫН ШӨҢГӨР** (Р.: купальница; И.: double buttercup; Т.: altıntop) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған һары сәскәле эре ҡый үләне. □ Купальница (лат. *Trollius*).

**АЛТЫН ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух золота; И.: spirit of gold; Т.: altının ruhu) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, алтын ятҡылығын һаҡлаусы хужа. □ Дух золота *(по поверьям башкир, живёт в рудниках).* ■ *Иҫке ғөрөф-ғәҙәткә нык ышанған Хәйретдин аҡсаны аҙ биргән өсөн түгел, ә, аҡсаны алһа, алтын эйәһе үлем алдында ятҡан улын үлтереүҙән ҡурҡты.* Я. Хамматов.

**АЛТЫШАР** (Р.: по шесть; И.: six each; Т.: altışar) *бүл. һ.*

Һәр береһе алтыға тиң. □ По шесть. *Алтышар бот иген. Алтышар кило.* ■ *Алтышар башлы дүрт йылан аскыс һөйрәй икән, ти.* «Урал батыр».

**АЛТЫШАРЛАУ (алтышарла-)** (Р.: делить по шесть; И.: divide into six; Т.: altıya bölmek) *ҡ.*

Алтышар-алтышар итеү, алтышар-алтышар булыу. □ Делить по шесть, на шесть частей. *Алтышарлап бүлеү.*

**АЛТӘКМӘК (алтәкмәге)** (Р.: передок телеги; И.: detachable front; Т.: arabanın cephesi) *и. диал.*

Арбаның кендектән һурыла торған алғы өлөшө. □ Передок телеги.

**АЛФАВИТ** [рус. < гр. α+β] (Р.: алфавит; И.: alphabet; Т.: alfabe) *и.*

Теге йәки был телдең өндәрен билдәләү өсөн ҡабул ителгән һәм билдәле бер тәртиптә урынлаштырылған тамғалар системаһы; азбука. □ Алфавит. *Башҡорт алфавиты.* ■ *Беҙҙең алфавит хәрефтәрҙең график һүрәтләнеше яғынан — уңышлы алфавит.* Ә. Харисов.

**АЛХИМИК** [рус.] (Р.: алхимик; И.: alchemist; Т.: simyager) *и.*

Алхимия менән шөғөлләнеүсе. □ Алхимик. ■ *Тора-бара ялған алтын күбәйеп киткән. Шул сәбәпле алхимиктарҙы ғәйепләп язалай башлағандар.* М. Моталов.

**АЛХИМИЯ** [рус. < ғәр. *al-kĭmĭa* < гр. *chēmeia* < *cheō*] (Р.: алхимия; И.: alchemy; Т.: simya) *и.*

Урта быуаттарҙа затһыҙ металдарҙы аҫыл таштарға әйләндереү маҡсатында башҡарылған эҙләнеүҙәр. □ Алхимия.

**АЛХӘБӘР** (Р.: анонс; И.: announcement; Т.: duyuru) *и.*

Буласаҡ гастроль, спектакль, концерт, яңы сығасаҡ тауарҙар, хеҙмәттәр тураһында яһалған белдереү. □ Анонс.

**АЛҺАЙЛАУ** (Р.: праймериз; И.: primaries; Т.: ön seçim) *и.*

Алдан үткәрелгән һайлау. □ Праймериз.

**АЛ ҺАН** (Р.: передняя часть туши; И.: front of the animal carcasses; Т.: hayvanın vücudunun ön kısmı) *и.*

Хайуандар кәүҙәһенең алғы өлөшө. □ Передняя часть туши.

**АЛҺЫҘ-ЯЛҺЫҘ** (Р.: не переставая; И.: incessantly; Т.: durmadan) *р.*

Һис туҡтауһыҙ. □ Не переставая, беспрестанно, непрестанно; беспрерывно, непрерывно; без отдыха. *Алһыҙ-ялһыҙ эшләү.* ■ *Ауыл хеҙмәтсәндәре ваҡыты менән иҫәпләшмәй, алһыҙ-ялһыҙ, ҡара таңдан ҡара төнгә тиклем әсе тир түгеп эшләй, улар*

*шуға өйрәнеп тә бөткән, эштән ҡурҡмайҙар.* «Башҡортостан», 6 май 2011.

**АЛҺЫУ** (Р.: розоватый; И.: rosy; Т.: pembe) *с.*

**1.** Аҡһыл ал. □ Розоватый, алый. *Алһыу таҫма.* ■ *Ҡояш офоҡ ситендәге аҡһыл болоттарҙы алһыуға манып Ирәндек артына инеп бара ине.* Ф. Әсәнов.

**2.** Ҡыҙарып торған. □ Румяный. *Алһыу ирендәр.*

**АЛҺЫУЛАНДЫРЫУ (алһыуландыр-)** (Р.: делать розоватым; И.: make rosy; Т.: pembeleştirmek) *ҡ.*

Алһыу төҫкә индереү, алһыу итеү. □ Делать розоватым, алым; делать румяным, румянить. *Күк йөҙөн алһыуландырып таң атты.* ■ *Был тарафтарҙа ҡояш офоҡтоң ситенә яҡынлашҡас, бурыҫын үтәй алмағаны өсөн ояլғандай, нурҙарын алһыуландырып, оҙаҡ ҡып-ҡыҙыл булып, байый алмай тик тораҫы.* «Йәшлек», 15 июнь 2010.

**АЛҺЫУЛАНЫУ (алһыулан-)** (Р.: становиться розоватым; И.: get rosy; Т.: pembeleşmek) *ҡ.*

Алһыу төҫкә инеү, алһыуға әйләнеү; алланыу. □ Становиться розоватым, алым; румяниться, розоветь. *Алһыуланып таң ата. Офоҡ алһыулана.* ■ *Маянһылыу нескә билле, зифа буйлы, ап-аҡ түңәрәк йөҙлө булып, ике бите алһыуланып, күҙҙәре янып, күкрәге ҡалҡып тора, тауышы ла йөрәкте елкендергес булып яңғырай.* Әкиәттән. *Таңым тыуҙы ихлас нурҙай алһыуланып, Уралҡайым иңен хозурлыҡҡа манып. Төнгө сағыу йондоҙ баҡты тылсымланып, шишмә аҡты ер-күк биргән көстө алып.* М. Һибәт.

**АЛҺЫУЛАТЫУ (алһыулат-)** *ҡ. ҡар.* **алһыуландырыу.**

**АЛҺЫУЛАУ (алһыула-)** (Р.: придавать розоватый алый оттенок; И.: add a rosy hue; Т.: pembeleştirmek) *ҡ.*

Алһыу төҫкә индереү, алһыу итеү; алһыуландырыу. □ Придавать розоватый алый оттенок. *Таң ҡыҙыллығы ерҙе алһыулай.*

**АЛҺЫУЛЫҠ (алһыулығы)** (Р.: розоватость; И.: rosyness; Т.: pembelik) *и.*

**1.** Алһыу төҫ. □ Розоватость.

**2.** Йөҙҙөң алһыу төҫкә инеүе. □ Румянец. *Биттең алһыулығы.* ■ *Ҡыҙҙар йөҙөнә алһыулыҡ йүгерҙе, шул уҡ ваҡыт тәндәре сымырлап та ҡуйҙы.* Ә. Чаныш. *Ҡайныһы хәбәр һөйләгән арала, бит остарына эсе алһыулыҡ йүгергән Дарья командирҙың үҙенә төбәлгән үткер ҡарашын тоя.* «Йәшлек», 9 февраль 2008.

**АЛШАРТ** (Р.: исходный пункт *какого-н.* рассуждения; И.: initial point; Т.: ön şart) *и.*

**1.** Берәй фекерҙең сығанағы. □ Исходный пункт *какого-н.* рассуждения.

**2.** Алдан ҡуйылған шарт. □ Предпосылка. ■ *[Башҡорт прозаһы хаҡында] .. һүҙ сыҡҡанда, бик күп алшарттарҙы иҫәпкә алыу һәм анализлау ихтыяжы тыуа.* Ә. Вахитов. *Ыңғай һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн алшарттар бар. Уларҙы файҙаланырға ғына кәрәк.* «Ағиҙел», № 9, 2009.

**АЛЪЮҪЫҠҠА** (Р.: напрасно; И.: in vain; Т.: boşuna) *р.*

**1.** Һис бер эш-шөғөлһөҙ; буштан-буш, бушҡа. □ Напрасно, попусту, без дела, зря. ■ *Былай өндәшмәй-нитмәй алъюҫыҡҡа йөрөү бик уңайһыҙ бит инде.* Т. Йәнәби.

**2.** Һис сәбәпһеҙгә; бер ҙә юҡҡа, ерле юҡҡа. □ Зря, напрасно, понапрасну, без причины. *Алъюҫыҡҡа килмәгәндер, йомошо барҙыр.* ■ *Ирҙең алъюҫыҡҡа тиреһенә һыйыша алмайынса шулай ҡыланыуы бер кемгә лә оҡшаманы.* Ғ. Вәлиев. *[Зилә — Раянға:] Алъюҫыҡҡа борсолма. Берәй рәте табылыр әле.* Ш. Бикҡол.

**АЛЪЯБЫУ** (Р.: передник; И.: apron; Т.: önlük) *и. диал.*

Алъяпҡыс. □ Передник, фартук. ■ *Әсәкәйем биргән алъябыу ун ике лә төрлө ҡайыулы.* Бәйеттән.

**АЛЪЯЛҒАУ** (Р.: префикс; И.: prefix; Т.: ön ek) *и. лингв.*

Һүҙҙең алдына ҡушыла торған ялғау. □ Префикс.

**АЛЪЯПҠЫС** (Р.: передник; И.: apron; Т.: önlük) *и.*

Өҫ кейеме бысрамаһын өсөн, алға бәйләй торған япма. □ Передник, фартук. *Сигеүле алъяпкыс. Алъяпкыс кеҫәһе.* ■ *Кукрәксәле ак алъяпкыс уның билен өҙөп тора.* Р. Ғабдрахманов. *Малайҙарҙың бөтәһе лә ҡара салбар, ак күлдәк кейеп, ҡыҙҙар күрән күлдәк өҫтөнә ак алъяпкыс бәйләп, байрамса кейенеп килгән.* З. Биишева.

**АЛЫМ I** (Р.: обхват; И.: coverage; Т.: çevre) *и.*

**1.** *Ниҙер* эшләгәндә бер иңләп үтерлек ара; ал, алдырым. □ Обхват, охват, захват (*при жатве, прополке, пахоте*); размах *(при косьбе). Алым киңлеге.* ■ *[Ҡорбандың атаһы:] Әйҙә, тиҙерәк китәйек, юк нәмәне күтәп, бер алым урырлык вакытты әрәмгә уткәрҙек.* С. Ҡудаш.

**2.** *Ниҙеңдер* иңе, киңлеге *(аҙымдың, күҙҙең).* □ Ширина *(ход)*, обозримое пространство *(взгляда).* ■ *Айғырҙың алымынан билдәле, тигәнде ишеткәне бар ине Кәбирҙең.* Яр. Вәлиев. *Күҙ алымы ерҙән күренеп ята Урал тауҙарының күк ташы.* М. Тажи.

**АЛЫМ II** (Р.: метод; И.: method; Т.: metod) *и.*

*Ниҙелер* башҡарыу, үтәү юлы; ысул. □ Приём, способ, метод; манера. *Бейеү алымы. Методик алым. Әҙәби алым. Эш алымы. Яҙыу алымы.* ■ *Яҙыусының төп әҙәби алымдары тормоштағы ыңғай герой образын күрһәтеүгә йүнәлдерелгән.* М. Ғәйнуллин.

**АЛЫМ III** (Р.: взятка; И.: bribe; Т.: rüşvet) *и.*

Йомошо төшкән кешенән тейешһеҙгә алынған йәшерен хаҡ; ришүәт. □ Взятка. *Алым алыу. Алым биреү.*

**АЛЫМ АЙЫ** *и. ҡар.* **яҙ**.

**АЛЫМЛАУ (алымла-)** (Р.: работать, обрабатывать захватом; И.: capturing; Т.: çalışmak) *ҡ.*

**1.** Алым-алымға бүлеү *(берәй нәмә эшләгәндә).* □ Работать, обрабатывать захватом. *Алымлап урыу. Алымлап утау.*

**2.** Киң итеп иңләү. □ Охватить широким захватом, широким шагом. *Алымлап атлау.*

**АЛЫМЛЫ** (Р.: широкий; И.: far-reaching; Т.: geniş) *с.*

**1.** Киң иңләп ала торған. □ С хорошим (большим, широким) захватом, широкозахватный, широкий. *Алымлы аҙым. Алымлы салғы.*

**2.** Йөрөшлө, йөрөмлө, атламлы. □ Ходкий. *Алымлы ат.*

**АЛЫМСАҠ (алымсағы)** (Р.: помолвленная девушка; И.: bride since girlhood; Т.: nişanlı) *и.*

Балалар бәләкәй саҡта уҡ ата-әсәһе тарафынан һөйләшеп, улыбыҙға кәләшлеккә аласаҡбыҙ, тип килешеп, йәрәшеп ҡуйылған ҡыҙ. □ Девушка помолвленная в детстве. ■ *Борондан ҡалған йола буйынса, уның да [Кинйәнең] ағаларыныҡы һымаҡ, бәләкәй сағында уҡ Тәлтем-юрматылары ерендә ата-әсәһе тарафынан һөйләшеп һуҙ ҡуйышкан Төҙөнбикә исемле алымсағы бар.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛЫМСЫ** (Р.: взяточник; И.: bribetaker; Т.: rüşvetçi) *и.*

Алым (III) ала торған кеше; ришүәтсе. □ Взяточник.

**АЛЫН** *и. диал. ҡар.* **ал II.**

**АЛЫНАРБА** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **алтәкмәк.**

**2.** Балаларҙы йөрөтә торған ике тәгәрмәсле арба. □ Двухколёсная детская коляска.

**АЛЫНЛАУ (алынла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **алымлау.**

**АЛЫНМА** *с. ҡар.* **алынмалы.**

**АЛЫНМАЛЫ** (Р.: съёмный; И.: insert; Т.: eklenti) *с.*

Алына торған; алып кире ҡуймалы; алмалы (II), алынма. □ Съёмный, вставной. ■ *Умартаның төбө .. алынмалы була.* З. Байбурин.

**АЛЫНЫУ (алын-)** *ҡ. төш. ҡар.* **алыу**. *страд. от* **алыу**. ■ *[Ғәбит] унды ауылда тамамлап, армияға алынды.* Ә. Әминев.

**АЛЫП I** [дөйөм төрки *алып, алп*] *и. ҡар.* **алп.**

**АЛЫП II** (Р.: с; от; И.: since; Т.: itibaren) *бәйл.*

Сығн. клш. һүҙҙәр менән ваҡыт йәки урындың башланғыс сиген белдерә. □ С; от *(послелог с исх.п.) Бөгөндән алып.* ■ *[Күл батшаһы:] Заятүләк, һин бөгөндән алып үҙеңә баш.* «Заятүләк менән Һыуһылыу». *Инә айыуҙың эшелер. Үткән яҙҙан алып күпме һыйырҙың башына етте, нисәмә ҡолондо имгәтте.* Г. Әхмәҙишина.

**АЛЫП БАРЫУ (алып бар-)** (Р.: брать; И.: give; Т.: almak) *ҡ.*

**1.** Үҙең менән бергә алыу. □ Брать, взять с собой. *Театрға алып барыу.*

**2.** Транспортта илтеп ҡуйыу. □ Довозить, доставлять *кого-что. Машинала алып барҙым.*

**3.** Берәр хәлгә килтереп еткереү, дусар итеү. □ Доводить *до какого-то* состояния. *Ялҡаулыҡ ошо хәлгә алып барып еткерҙе.*

**4.** Юл күрһәтеп артынан эйәртеү; әйҙәү. □ Вести, отвести, довести *кого (до какого-то места). Таныш булмаған урамдан алып барҙы.*

**5.** Берәр эште башҡарыу, етәкселек итеү. □ Управлять, заведовать *чем*, вести *что. Хужалыҡ эшен ул алып бара. Концертты алып барыу.*

**АЛЫП БАРЫУСЫ** (Р.: ведущий торжества; И.: master of ceremonies; Т.: yönetici) *и.*

Тантаналы йыйылыш, концерт, тамаша һ.б. сараларҙы алып барған кеше. □ Ведущий торжества, праздника. ■ *Һабантуйҙың юғары кимәлдә ойошторолоуы: матур һәм зауыҡлы итеп биҙәлгән сәхнә, алып барыусыларҙың оҫталығы, артистарҙың һүнмәҫ дәрт, илһам менән тамашасыларҙы тоҡандырыуы бик шатландырҙы.* «Йүрүҙән», 10 август 2011.

**АЛЫП БИРЕҮ (алып бир-)** (Р.: подать; И.: pass; Т.: vermek) *ҡ.*

**1.** *Нимәнелер* урынынан ҡуҙғатып ҡул менән тапшырыу. □ Подать, передать. // Подача, передача. ■ *Унан Емеш ҙур ағас табаҡҡа алып биргән иттәрҙе өлөшләп бүлергә, һалма өсөн турарға керешә.* З. Биишева.

**2.** Аҡса биреп һатып алыу. □ Купить. // Покупка. ■ *[Рәмзил] атаһы алып биргән резина кәмәһен күтәргән дә килгән.* Д. Бүләков. *Кинйәнең дә әҙернә яңы, атаһы алып биргән һуғыш яраҡтары, эйәр-өпсөндәре бар.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛЫП ИНЕҮ (алып ин-)** (Р.: занести; И.: to place; Т.: getirmek) *ҡ.*

**1.** Үҙең менән бергә берәй ерҙең эсенә алыу, индереү. □ Занести, ввести. ■ *Бер көндө Ғәбдессәләм дәресҡә ҡара тышлы ҙур ғына бер китап алып инде.* Ғ. Ибраһимов. *Табаҡ менән аш алып ингән Азат олатаһындағы үҙгәрешкә аптыраны: түшәккә һуҙылып ятып алған, ауыр итеп йыш-йыш тын ала, күҙҙәре сәйер яҡтылыҡ менән яна.* Т. Ғарипова.

**2.** Ситкә тайпылдырыу, таныш булмаған ергә килтереү. □ Завести. ■ *Юл Сөнәғәтте урманға алып инде.* Ж. Кейекбаев.

**АЛЫП КИЛЕҮ (алып кил-)** (Р.: принести; И.: bring; Т.: getirmek) *ҡ.*

**1.** Үҙең менән бергә килтереү. □ Принести, привезти. *Яңылыҡ алып килеү.* ■ *Әсәйем .. ҡыпсаҡ далаһынан алып килгән ғөрөф-йолаһын, ыласын саңҡыуын хәтерләтеүсе, хикмәтле-нағышлы телен ташламаны.* Ә. Хәкимов. *Таңда етеп туҡтар каруан Арҡайымға алып килә ята уланының ҡыҙын.* Т. Ғәниева. *Кискелеккә беҙгә барырбыҙ. Тарпан, һин дә киленде алып кил, Дәүләтбайҙарға ла тауыш итербеҙ.* Н. Мусин.

**2.** Ағым, ел көсө менән берәй ергә еткереү. □ Доставлять куда-либо силою течения, ветра.

**3.** Сәбәп булыу, һөҙөмтә биреү. □ Быть причиной, давать результат. *Яңы заман яңы талаптар алып килде.*

**АЛЫП КИТЕҮ (алып кит-)** (Р.: унести; И.: take away; Т.: alıp götürmek) *ҡ.*

**1.** Киткәндә үҙең менән бергә алыу. □ Унести, увести. ■ *Сөнәғәт иртән ҡояш*

*менән бергә ҡуҙғалып малдарҙы яланға алып китә, кис, ҡояш байыр алдынан алып ҡайта.* Ж. Кейекбаев. *Баш каланан килгән ҡунаҡты Хәким менән хужалыҡ рәйесе «Алға» биләмәләре буйлап алып китте.* Ә. Әминев.

**2.** Берәйһен йәки берәй нәмәне ҡалдырғанда тәьҫораттар, хәтирәләр, тойғолар һаҡлау. □ Унести. *Мин бынан тик яҡшы хәтирәләр алып киттем.*

**3.** Һиҙҙермәйенсә алыу, урлау. □ Взять тайком; украсть. ■ *Никахтан һуң эштең былай килеп сығыуына, [Гөлйөҙөмдө] Айбулат алып китеүенә Әхмәҙи ҡаты ғәрләнде.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Башлау. □ Начинать. ■ *Янарал .. балаларын өйрәтеүсе атайҙай йыуаш тауыш менән һөйләп алып китте.* Б.Рафиҡов.

**5.** Хәрәкәт йәки ағым көсө менән урынынан күсереү. □ Унести. *Йылға бысраҡтарҙы алып китә.*

**АЛЫП ҠАЛЫУ (алып ҡал-)** (Р.: оставить *(у себя)*; И.: give up; Т.: bırakmak) *ҡ.*

**1.** *Нимәнелер* үҙеңә алып ҡалыу, тотоу. □ Оставлять у себя, не отдавать *чего.* ■ *Һеҙ [бәндәләр] үҙ ваҡытында, хатта ваҡытынан да мөлкәт, маҡтау, бүләк алып ҡалырға тырышаһығыҙ.* М. Кәрим. *Айырата яҙ ныҡ ҡотора, әйтерһең, ошо мәл үҙенә тейешле йыллыҡ көстө, ғәйрәтте алып ҡалырға тырыша.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Берәй насар хәл-әхүәлдән аралау, һаҡлау. □ Выгораживать, выгородить *кого.* ■ *Ул сағында сәсәнде һөргөнгә ебәреүҙән [Арыҫлан батыр] үҙ ҡарамағына ышандырып алып ҡалды.* Ғ. Ибраһимов.

**АЛЫП ҠАСЫУ (алып ҡас-)** (Р.: похитить; И.: kidnap; Т.: kaçırmak) *ҡ.*

**1.** Урлап, ирекһеҙләп алып китеү. □ Похитить, увести. ■ *Иҫәпле ваҡыт үтеп, өйҙәгеләр Әлебайҙы көтөп кенә ултырғанда, уйламаған ерҙән быларҙы ҡаҙаҡтың бынамын тигән ете батыры килеп баҫҡан да, ҡарттарҙы сыр-сыу килтереп, Һырбикәне алып ҡасҡан.* Әкиәттән.

**2.** Баш бирмәй, сабып сығып китеү *(еккән йәки менгән малға ҡарата).* □ Понести *кого*, ускакав *(о лошади).* ■ *Аҡ күбеккә төштө атым, ауыҙлығын сәйнәп, сөнки китте ҡотороноп, ярһып алып ҡасты.* Р. Назаров.

**АЛЫП СЫҒЫУ (алып сыҡ-)** (Р.: вынести; И.: take out; Т.: çıkarmak) *ҡ.*

**1.** Ҡайҙан да булһа *нимәнелер* тышҡа үҙең менән алып сығыу йәки берәй нәмә аша сығарыу. □ Выносить, вынести *кого-что.* *Өҫтәлде бүлмәнән алып сығыу.* ■ *Азамат шофёрҙы ҡултыҡлап ярға алып сыҡты ла, имен-аман икәнлегенә ышанғас, тегеләр яғына ҡараны.* Р. Солтангәрәев. *Сеңләүҙе башҡарған еңгәләр уны [Миңлебикәне] ике яғынан ҡултыҡлап алып сыҡтылар.* К. Мәргән.

**2.** Берәй йүнәлеш биреү, илтеү. □ Выводить, вывести *кого.* ■ *Алдарҙы ауыр, үлемесле яу юлдарына алып сыҡҡан, оло мөхәббәте менән дә ҡауыштырған, уны ысын ир иткән йыл да артта ҡалды.* Н. Мусин.

**АЛЫП ТОРОУ (алып тор-)** (Р.: брать, взять на себя временно; И.: take; Т.: almak) *ҡ.*

**1.** Ваҡытлыса файҙаланырға алып тороу. □ Брать, взять на себя временно. *Иртәгә тиклем аҡса алып тороу.* ■ *Оло инәйем дә инде. Иртәгә саҡлы күршенән генә бирәр ҡап үтескә алып тороп булмайҙыр шул!* М. Кәрим.

**2.** *Нимәнелер* үҙ эсенә алыу, биләү. □ Владеть, обладать; включать в себя.

**АЛЫПҺАТАР** (Р.: перекупщик; И.: dealer; Т.: madrabaz) *и.*

Арзанға алып, ҡиммәткә һатып йөрөгән кеше; сауҙагәр. □ Перекупщик, спекулянт. ■ *Алыпһатар, талпан булып, ҡаҙала ил тәненә.* М. Ямалетдинов.

**АЛЫРЫМҒОШ** (Р.: мифическая птица; И.: mythical bird; Т.: mitolojik bir kuş) *и. миф.*

Балаларҙы һаҡлаусы, яҡлаусы мифик ҡош. □ Мифическая птица, покровительница детей. ■ *Алырымғош, бирмәмғош.* Балалар уйынынан.

**АЛЫҪ** [алтай ғаиләһе телдәренән] (Р.: далёкий; И.: far-off; Т.: uzak) *с.*

**1.** Оҙон ара менән айырылған; йыраҡ; *киреһе* — яҡын. □ Далёкий, дальний. *Алыҫ юл. Алыҫ илдәр.* ■ *Йондоҙҙарға күпме һоҡланһам да, улар алыҫ, бик-бик алыҫта.* К. Кинйәбулатова. ● *Алыҫ ҡунаҡ килеп еткән, ауылдағы йоҡоға киткән.* Әйтем. *Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер.* Мәҡәл.

**2.** Күп ваҡыт араһы менән айырылған. □ Давний, далёкий. *Алыҫ киләсәк. Алыҫ үткәндәр.* ■ *Алыҫ бала саҡ илендә ғашиҡ булып, күҙ атып йөрөгән Гөлйемешенең аяныслы тарихын Айрат ағаһына һөйләүе Миләүшәгә икеләтә ауыр булды.* «Йәшлек», 15 август 2009.

**3.** Бер нисә быуын айырылған. □ Дальний *(о родственниках). Алыҫ туған.* ■ *[Мәғфүрә:] Сәлимә еңгәм, бахыр, алыҫ булһа ла, Ныязғол ҡайнағаға еңгә тейеш тә баһа.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Алыҫ ерҙе яҡын итеп** [**килеү**] ара алыҫлығына ҡарамай, бик теләп килгәндә әйтелә. □ Прийти, приехать, несмотря на дальность. **Алыҫ йөрөйһө юҡ** табыуы еңел, әллә ҡайҙан эҙләйһе юҡ тигән мәғәнәлә әйтелә. □ *соотв.* Рукой подать. **Алыҫ китмәгән** *кәмһ.* ныҡ айырылмаған, оҡшаған. □ *соотв.* Одного поля ягода. **Алыҫ китмәҫ** *(йәки* **ҡасмаҫ**) кеше хәленән көлөргә, мыҫҡылларға ярамай, тигәнде белдергәндә әйтелә. □ Не избежать и тебе *чего-либо.* ■ *Көлмә, ҡустым, ул рәнйеү һинән дә алыҫ китмәҫ, — тине Мөстәҡим ҡарт.* С. Кулибай.

**АЛЫҪАЙТЫУ (алыҫайт-)** (Р.: отдалять *кого-что*; И.: hold away; Т.: mesafe kurmak) *ҡ.*

Алыҫ итеү, йыраҡайтыу. □ Удалять, отдалять *кого-что.* ■ *Алыҫайта төҫлө ҡауышыу көнөн бөгөн эшләмәйсә ҡалған эш.* Х. Ғиләжев.

**АЛЫҪАЙЫУ (алыҫай-, алыҫая)** (Р.: отдаляться; И.: move away; Т.: uzaklaşmak) *ҡ.*

**1.** Алыҫ ара алыу; йыраҡайыу, алыҫлашыу. □ Отдаляться. // Отдаление. ■ *Хәҡиҡәт шул: һәр көн алыҫая Зәйнәп менән Сәйҙел араһы.* Ғ. Сәләм. *Тәүге таныш офоктарҙан алыҫая һаман арам... Мин бит, һөйөү йырын йырлап, ил халҡының күңелен нурлап, мәңгелеккә китеп барам!* А. Игебаев.

**2.** Ҙур ваҡыт араһы менән айырылыу. □ Отдаляться, удаляться.

**АЛЫҪЛАНЫУ (алыҫлан-)** *ҡ. ҡар.* **алыҫайыу.**

**АЛЫҪЛАТЫУ (алыҫлат-)** *ҡ. ҡар.* **алыҫайтыу.**

**АЛЫҪЛАШТЫРЫУ (алыҫлаштыр-)** (Р.: отдалять; И.: hold away; Т.: uzaklaştırmak) *ҡ.*

Алыҫҡа, ситкә табан күсереү; алыҫайтыу. □ Отдалять. *Араны алыҫлаштырыу.*

**АЛЫҪЛАШЫУ (алыҫлаш-)** (Р.: отдаляться; И.: move off; Т.: uzaklaşmak) *ҡ.*

**1.** Алыҫҡа, ситкә табан китеү; алыҫайыу. □ Отдаляться, удаляться. ■ *Ҡыуыштарҙан алыҫлашҡан һайын, күңелгә әллә ниндәй шик йүгерә.* Н. Мусин. *Йәй буйы аяуһыҙ ҡояш ҡыҙҙырыуынан ваҡытынан алда көйгәнгә, һары, артабан һорғолт-көрән төҫтәге, ә алыҫлашҡан һайын күкһелләнгән артылыштар, ҡатлау-ҡатлау тауҙар артында, тыуған Башҡортостаным көтә мине.* С. Рахманғолов.

**2.** *күсм.* Ике аралағы мөнәсәбәттә берҙәмлек хисен юғалтыу; һыуыныу. □ Охладевать, остывать. ■ *Күңелдең теләге был ҡыҙҙан алыҫлашыу ине.* Т. Йәнәби.

**АЛЫҪЛЫҠ (алыҫлығы)** (Р.: расстояние; И.: distance; Т.: mesafe) *и.*

**1.** Ике нәмәне айырған ара. □ Расстояние. *Алыҫлыҡ бирәмеге.* ■ *Ара алыҫлығы, бәлки, беҙҙе һағындыртыр ине ныҡыраҡ.* Н. Нәжми.

**2.** Күҙ күреме ергә һуҙылған аралыҡ. □ Дальность, отдалённость, даль. ■ *Һыбайлылар юл алдылар ялан алыҫлығына.* М. Сөндөклө.

**АЛЫУ (ал-)** [дөйөм төрки *ал-, аал-*] (Р.: брать; И.: take, taking; Т.: almak) *ҡ.*

**1.** Ҡул (*йәки* сәнске һ.б. нәмә) менән тотоп үҙеңә ҡабул итеү. □ Брать, поднять, достать, набрать; взять. *Ҡулға алыу. Сәнске*

*менән алыу. Китапты алыу.* ■ *[Ҡарағаш] ҡурайҙы ҡулына алды ла бейеү көйөн тарта башланы.* Әкиәттән. *Сыртланов ағай, .. телефон трубкаһын алып, Әмирханов менән минең турала һөйләште.* С. Агиш. ● *Алыуҙың биреүе бар.* Әйтем. *Бай тапһа — ҡотло булһын, ярлы тапһа — ҡайҙан алдың.* Әйтем. *Алғанға алты ла аҙ, биргәнгә биш тә күп.* Мәҡәл.

**2.** Ҡул менән тотоу; эләктереү. □ Хватать, взять, принимать. *Билдән алыу. Боғаҙҙан алыу. Яғанан алыу.* ■ *Әйҙүк, түрә, әйҙүк! — тип Ғариф ҡарт [Тимерҙең] ат башынан алды.* Б. Бикбай.

**3.** Аулап ҡош, йәнлек тотоу. □ Брать, взять. *Айыу алыу. Өйрәк алыу.* ■ *[Хәкимйәндең] алған айыуҙарының, һуҡҡан бүреләренең, атҡан һеләүһендәренең һанына ла сыға алмағандар.* З. Ураҡсин. ● *Ҡуян алмаҫ, артынан ҡалмаҫ.* Мәҡәл.

**4.** Үҙеңә тәғәйенләнгән, ебәрелгән нәмәне, *ҡайҙалыр* барып, *нимәнелер* үҙеңә ҡабул итеү. □ Получать, забирать; снимать, снять; выписывать. // Снятие, выписка. *Бүләк алыу. Хаҡ алыу. Һалым алыу. Телеграмма алыу. Ҡульяҙманы рецензиянан алыу. Хат алыу. Хәбәр алыу. Отпуск алыу.* ■ *Көҙ еткәс, эш хаҡы алырға тип, [көтөүсе] байға килә.* Әкиәттән.

**5.** Алмашына аҡса биреп, *нимәлер* үҙеңдеке итеү. □ Брать, покупать, приобретать. *Магазиндан икмәк алыу. Тауар һатып алыу. Театрға билет алыу.* ● *Өйрәк бирһәң, ҡаҙ алырһың.* Мәҡәл.

**6.** Алмашына аҡса биреп, торлаҡты ваҡытлыса үҙеңдеке итеү. □ Снимать, нанимать. *Бүлмә алыу. Фатир алыу.*

**7.** Билдәле бер мәғәнәлә уй-күңелгә ҡабул итеү. □ Принимать, воспринимать. *Ғәйепкә алыу. Насарға алыу. Уйынға алыу. Ысынға алыу.*

**8.** Үтәү, башҡарыу өсөн тапшырылғанды ҡабул итеү. □ Получать, принимать. *Бойороҡ алыу. Күрһәтмә алыу. Кәңәш алыу.*

**9.** Үҙ ҡарамағыңа, хәстәреңә ҡабул итеү. □ Принимать, содержать, взять под свою ответственность. *Тәрбиәгә алыу. Ҡарарға алыу. Ғаиләгә алыу. Бала алыу.*

**10.** Көс-хәл түгеп, *ниндәйҙер* килемгә ирешеү. □ Получать. *Килем алыу. Уңыш алыу. Файҙа алыу.* ■ *Аҡназар быйыл сәскән еренән йөҙ егерме бот арыш алды.* Ғ. Дәүләтшин.

**11.** *Нимәнелер* йыйыу *(йәшелсә-емеш һ.б.).* □ Убирать, копать. *Бәрәңге алыу. Сөгөлдөр алыу. Кәбеҫтә алыу машинаһы.*

**12.** *Нимәнелер ниҙеңдер* эсенә туплау, йыйыу. □ Втягивать, вбирать, вдохнуть, подбирать. *Үпкәгә һауа алыу. Аяҡ кейемен эскә алыу. Эсеңде ал. Трапты вертолётка алыу.*

**13.** *Нимәнелер* үҙ эсенә һурыу, туплау. □ Вбирать, всасывать, впитывать. *Тоҙ дымды ала. Үҫемлектәр тамырҙарынан һыу ала.*

**14.** Тиҙләнеү. □ Набирать *(темп, скорость). Темп алыу.*

**15.** *Нимәнелер* үҙ янына, *нимәнеңдер* эсенә урынлаштырыу, урын биреү. □ Брать, взять, охватывать, обнять. *Алға алыу. Ҡосаҡҡа алыу. Ҡуйынға алыу. Уртаға алыу. Эргәгә алыу.* ■ *[Буранша] Ирйегетте үҙ кәмәһенә алған.* З. Биишева. *Килсе, иркәм, үҙеңде ҡосағыма алайым.* Ш. Бабич.

**16.** *Нимәнеңдер* эсенә индереү, урынлаштырыу. □ Включать. *Йыйынтыҡҡа мәҡәлә алыу. Һүҙлеккә һүҙҙәр алыу.*

**17.** Киткәндә яныңдан ҡалдырмау. □ Взять с собой, уводить. *Алып китеү. Бергә алыу. Алып сығыу. Үҙең менән алыу.* ■ *Ҡотлояр ауылға инә, ҡыҙы Диләне лә үҙе менән ала.* Һ. Дәүләтшина. *Әхмәт был осрашыуҙа үҙе менән алып китмәк булған Гөлнурҙы.* Ғ. Сәләм. ● *Бер көнлөк юлға сыҡһаң, аҙналыҡ аҙыҡ ал.* Әйтем.

**18.** Ҡабул итеү, саҡырыу. □ Принимать, приглашать. *Ашҡа алыу. Ҡунаҡҡа алыу. Сәйгә алыу.* ■ *[Йәннәтбикә инәй Фәриҙәгә:] Әсәйеңдәр сәйгә алғайны, шунда ҡуна ҡалдым.* Ф. Иҫәнғолов.

**19.** *Нимәнелер* тотош таралып биләү, тотош ҡаплау. □ Покрывать. *Күҙен ҡан алған. Тимерҙе тут алған. Бар ерҙе һыу алған. Йортто ут алған.* ● *Донъяны һыу алғандан өйрәккә ни ҡайғы.* Мәҡәл.

**20.** *күсм.* Бөтә тәнде йәки күңелде биләү, солғау. □ Охватывать, овладеть. *Тәнде һыуыҡ алған. Ҡайғы алған. Һағыш алды. Шом алды. Уй алды. Ләззәт алыу.*

**21.** Көс етеү. □ Осиливать, осилить *что. Бәке насар ала. Көрәк ала алмаҫлыҡ ҡаты ер.* ● *Иртә сыҡҡан юл алыр.* Әйтем.

**22.** Ҡорал-ҡорамалдың *нимәгәлер* тейеү, тейҙереү мөмкинлеге. □ Брать, поражать (*об оружии и т.п.*). *Бүрене ваҡ йәҙрә алмай. Күҙ күреме ерҙән ала торған мылтыҡ.*

**23.** Дарыу, төрлө матдәләрҙең тәьҫир итеүе. □ Действовать, подействовать *(о лекарствах, различных средствах и т.п.). Был тапты кислота алмай.*

**24.** Эшләй йәки уҡый торған урынға ҡабул итеү. □ Принимать. *Университетҡа алыу. Фабрикаға алыу. Заводҡа эшкә алыу. Һатыусы итеп алыу.*

**25.** Өйләнеү. □ Жениться, брать в жёны. *Бисә алыу. Кәләш алыу. Ҡатын алыу.* ■ *[Һылыубикә:] Бына, бер аҙ хәл йый, аяғың арыулана төшһөн, унан һуң кәләш ал да ебәр.* З. Ғәлимов. *Иптәшеңдең үксәһенә, эҙенә баҫырға ярамай — уның ҡатынын алаһың, тиҙәр.* Экспедиция материалдарынан.

**26.** Хәрби хеҙмәткә ҡабул итеү. □ Брать, призывать, привлекать. *Армияға алыу. Хәрби хеҙмәткә алыу. Һалдатҡа алыу.*

**27.** Берәй ойошма йәки төркөмгә ағза итеп ҡабул итеү. □ Принимать. *«Берҙәм Рәсәй» партияһына ағза итеп алдылар.*

**28.** Ҡайҙалыр теркәү. □ Включить, зачислить. *Исемлеккә алыу. Штатҡа алыу. Иҫәпкә алыу.*

**29.** Яулау. □ Брать, взять, захватывать, завладевать. *Ҡаланы һөжүм менән алыу. Әсирҙәр алыу. Аманат алыу. Һаҡ аҫтына алыу. Яулап алыу. Үрҙе алыу.*

**30.** Тәғәйенләнгән урынды биләү. □ Занимать *(место, должность). Сират алыу. Түрҙән урын алыу. Директор вазифаһын алыу.*

**31.** Ярышта, көрәштә ниндәйҙер урын яулау. □ Занимать. *Өсөнсө урын алыу. Беренселекте алыу. Өҫтөнлөк алыу.*

**32.** *Берәйһенең* урынын, әйберен һалдырып эйә булыу. □ Отнимать, отбирать. ● *Төймә алһаң да — бурлыҡ, дөйә алһаң да — бурлыҡ.* Мәҡәл.

**33.** Эләктереү, тотоу *(китеп, осоп барғанда, юлда).* □ Захватывать, перехватывать. ■ *Төлкө тауыҡты эләктереп алып та китә.* Әкиәттән.

**34.** *Нимәнелер* һайлау. □ Принимать, выбрать; выбор. *Псевдоним алыу. Девиз алыу.*

**35.** Эшкәртеп, айырып сығарыу. □ Получать, добывать. *Диңгеҙҙән тоҙ алыу. Нефттән бензин алыу.*

**36.** *Нимәгәлер* тоташҡан, береккән йәки тейеп торған нәмәне айырыу. □ Снимать, выставлять. *Арбаның тәгәрмәсен алыу. Стенанан картинаны алыу. Тәҙрәне алыу.*

**37.** *Ниҙәндер* йәки *ниҙеңдер* эсенән бер нәмәһен йәки бер өлөшөн сығарыу. □ Вынимать, вытаскивать, доставать, черпать. *Ҡумтанан ҡурай алыу. Сумканан китап алыу. Ҡындан хәнйәр алыу. Һыу алыу.*

**38.** *Нимәнелер* киҫеү, ҡырҡыу. □ Вырезать, удалять, стричь. *Бер бөйөрөн алыу. Теште алыу. Сәс алыу.*

**39.** Көс, ваҡыт сарыф итеү. □ Отнимать, занимать. *Күп энергияны ала торған мәшәҡәт. Ваҡытты күп ала торған эш.*

**40.** *Ниндәйҙер* сифатты, хәл-торошто юғалтыу. □ Отнимать, лишать *чего (какого-л. душевного состояния, качества). Тыныслығын алыу. Ҡурҡыу уның ҡыйыулығын алды.*

**41.** *Нимәнелер* кире ҡағыу. □ Отменять, снимать, аннулировать. Сикләүҙәрҙе алыу. *Көн тәртибенән һорауҙы алыу.*

**42.** Урынынан ситкә ҡуҙғатыу, төркөм эсенән сығарыу, ситкә ҡуйыу. □ Сдви-

гать, перемещать, убирать; уводить, отводить. *Артка алыу. Аранан алыу. Ситкә алыу. Уңғарак алыу. Аяғыңды ал әле.* ■ *Ҡарт һалдаттарҙы стройҙан алдылар.* Д. Юлтый.

**43.** Биләгән урынынан, эшенән төшөрөү. □ Снимать *(например, с должности)*, отстранять, освобождать. *Эштән алыу. Директорлыктан алыу.* ■ *[Йыһаншин:] Солтанов иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ныклы һынылыш яһамай икән, эшенән алып, судка бирергә кәрәк булыр.* Б. Бикбай.

**44.** Мәжбүри түләтеү. □ Брать, взимать, взыскивать. *Ҡиммәт алыу. Һалым алыу. Штраф алыу. Яһаҡ алыу.*

**45.** Башҡа берәүҙең файҙаһына мөлкәтте күсереү. □ Изъять, конфисковать, отбирать. *Шәхси заводтарҙы дәүләткә алыу. Ҡоралдарҙы алыу.*

**46.** Бер һанды *ниндәйҙер* икенсе һан дәүмәленә кәметеү. □ Вычитать, отнимать. *Биштән икене алыу. Ундан биште алыу. Алыу билдәһе.*

**47.** Билдәле бер нотанан йырлай башлау. □ Запевать с определённой ноты. *Юғарынан алыу.*

**48.** *Ниндәйҙер* бер сифатты ҡабул итеү, ҡиәфәткә инеү. □ Обретать, принимать, приобретать. *Мәғәнә алыу. Борсоулы төҫ алыу. Азатлык алыу. Халык-ара әһәмиәт алыу.*

**49.** *миф.* Әйбер менән өлөш, ҡайғы, ауырыу алыу. □ Передача через вещь блага, доли, беды, болезни. *Ете юл сатында яткан әйберҙе алырға ярамай, ауырыу һуғылыр.*

**50.** Ҡайһы бер исемдәр менән килеп, шул исем аңлатҡан эш-хәрәкәтте белдерә. □ В сочет. с сущ. выражает действие по значению сущ. *Дан алыу. Илһам алыу. Имтихан алыу. Көс алыу. Ҡушамат алыу. Тәжрибә алыу. Рәхмәт алыу. Шелтә алыу. Яманат алыу. Рөхсәт алыу. Ризалык алыу. Хокук алыу. Ял алыу.*

**51.** Хәл ҡылымдың *-п* формаһында башҡа ҡылымдар менән ҡушма ҡылым яһай. □ В сочет. с деепр. на *-п* участвует в образовании слож. гл. *Алып ҡарау. Алып ҡуйыу. Алып уҡыу. Алып барыу. Алып биреү. Алып инеү. Алып ҡалыу. Алып менеү. Алып сығыу.*

**52.** *ярҙ.* Хәл ҡылымдың *-п* формаһындағы һүҙ менән ҡушма ҡылым яһай һәм эш-хәрәкәткә 1) сикләнгәнлек, дауамһыҙлыҡ, 2) бер тапҡыр башҡарылған эш-хәл мәғәнәһе бирә. □ В сочет. с деепр. на *-п* осн. гл. выступает в роли вспом. гл. и выражает 1) завершённость, результат действия; 2) однократность, кратковременность действия. *Ашап алыу. Йоклап алыу. Төшөнөп алыу. Һиҙеп алыу. Уратып алыу.*

**53.** «Булыу» ярҙамсы ҡылымының *-п* формаһы менән бәйләнештә һөҙөмтәлелекте белдерә. □ В сочет. с деепр. на *-п* вспом. гл. «булыу» выражает результат действия. *Министр булып алыу. Бизнесмен булып алыу.*

**54.** *ярҙ.* Хәл ҡылымдың *-а(й)/-ә(й)* формаһындағы һүҙ менән килеп, мөмкинлек, мөмкин түгеллек формаһы яһай. □ В сочет. с деепр. на *-а(й)/-ә(й)* осн. гл. выступает в роли вспом. гл. и выражает возможность или невозможность действия. *Күтәрә ала. Укый алманы. Һөйләй алманы. Эшләй ала.* ■ *Кеше ерҙә япа-яңғыҙ йәшәй алмай, бөртөк тамсы ҡағыҙҙы ла тишә алмай.* М. Ямалетдинов.

**АЛЫУСЫ** (Р.: получатель; И.: recipient; Т.: alıcı) *и.*

*Нимәнелер* ҡулына тотоп, үҙенә ҡабул итеүсе. □ Тот, кто берёт *что-то*, получатель. ■ *Әгәр ҙә кешегә аксаны кис бирер булһаң, алыусының ҡулына бирмәҫкә. Шулай эшләмәһәң, ырыҫ китә.* Экспедиция материалдарынан.

**АЛЫУЫС** (Р.: черпалка; И.: scoop; Т.: kerçe) *и. иҫк.*

Ҡаҙан төбөнән һыу-фәләнде ҡалдырмай алыу өсөн туҙҙан эшләнгән оҙонса сүмес. □ Черпалка. ■ *Алыуыстар яһағанда тәүҙә тар киҫәгенең урта төшөндәге остарын бер аҙ теләләр. Артабан теленгән өлөштәрҙе бер-береһенә һалып .. тегәләр.* М. Муллағолов.

**АЛЫШ I** (Р.: схватка; И.: skirmish; Т.: savaş) *и.*

**1.** Ике аралағы бәрелеш, һуғыш. □ Схватка, сражение. *Дошман менән алыш.* ■ *Бик ҡыҫҡа һәм ҡаты алыш барҙы. Беҙҙекеләр һуңғы патронға тиклем һуғышты.* З. Рафиҡов. *Бөтә табын йорто ҡатайҙарға ярҙамға ташланған. Алыш ҡаты булған.* Ә. Вахитов.

**2.** Көс һынаш, ярыш, көрәш. □ Соревнование, состязание. *Алыш майҙаны. Һүҙ алышы.* ■ *Мәргәндәрҙең хәле беленә атыштарҙа, көрәшсенең көсө күренә алыштарҙа.* С. Ҡудаш.

♦ **Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме** икәүара һуғышырға саҡырғанда әйтелә. □ Вызов к схватке, сражению. ■ *Аҡмырҙа, ҡылысын һуҙып, күпер аҫтынан сыҡҡан. «Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме?» — тигән дейеү уға.* Әкиәттән.

**АЛЫШ II** (Р.: друг; И.: pal; Т.: birader) *и. иҫк.*

Дуҫ *(ирҙәр бер-береһенә өндәшкәндә ҡулланыла).* □ Друг *(употребляется в обращении мужчин друг к другу).* ● *Тапҡан — табыш, таныған — алыш.* Мәҡәл.

**АЛЫШ-БИРЕШ** (Р.: обмен; И.: exchange; Т.: alışveriş) *и.*

**1.** *Ниҙелер* ике арала алмашып биреш. □ Обмен, сделка. *Үҙ-ара алыш-бирешкә инеү.* ■ *Йәмғиәтебеҙҙә алыш-биреш мөнәсәбәттәре моронлай башланы бит инде.* Х. Тапаҡов.

**2.** Һатыу-алыу эше; сауҙа. □ Купля-продажа, торговля. *Алыш-биреш итеү.* ■ *Ауылға ҡайтҡан саҡта Гәрәй, сауҙа, алыш-биреш өлкәһендә тамам шымарып, ҡылйыуғыҫҡа әйләнеп өлгөргән ине инде.* Б. Бикбай.

**3.** Үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәт. □ Связь, общение. *Был көндәрҙә минең донъя менән алыш-бирешем, дөрөҫө, һис бер бәйләнешем ҡалмаған ине.* М. Ғафури.

**АЛЫШ МАЙҘАНЫ** (Р.: поле битвы; И.: battleground; Т.: savaş alanı) *и.*

Ярыш, көрәш урыны. □ Поле битвы, место состязания. ■ *Көс һынашты алыш майҙанында саярағы иһә ир-аттың.* М. Кәрим.

**АЛЫШТЫРҒЫҺЫҘ** *с. ҡар.* **алмаштырғыһыҙ.**

**АЛЫШТЫРЫЛЫУ (алыштырыл-)** *ҡ. ҡар.* **алмаштырыу.**

**АЛЫШТЫРЫУ (алыштыр-)** *ҡ. ҡар.* **алмаштырыу.**

**АЛЫШЫНЫУ (алышын-)** *ҡ. ҡар.* **алмашыныу.**

**АЛЫШЫУ I (алыш-)** (Р.: брать; И.: exchange; Т.: almak) *ҡ.*

**1.** *урт. ҡар.* **алыу.** *взаимн. от* **алыу**. *Һатып алышыу.* ■ *Ауыл өҫтөнә тағы ла моң таралды. Ҡыҙҙар, бер-береһенең билдәренән алышып, тәҙрә янына баҫҡан килеш, оҙаҡ тыңлап торҙолар.* С. Поварисов.

**2.** Бер-береңә бирешеү; уртаҡлашыу. □ Обмениваться. *Хәбәр алышыу. Бүләк алышыу. Һүҙ алышыу. Хат алышыу. Сер алышып сәй эсеү.*

**АЛЫШЫУ II (алыш-)** (Р.: схватываться; И.: fight; Т.: alışmak) *ҡ.*

**1.** Бәрелешеү, һуғышыу. □ Схватываться, сражаться. *Дошман менән алышыу. Ҡылыс менән алышыу.* ■ *Юлбарыҫ менән алышҡан ике кеше тиҙ генә аяғына баҫа алманы.* Ғ. Хисамов.

**2.** Ярышта көс һынашыу. □ Соревноваться, состязаться. ■ *Ишбулды, бер аҙ алышҡандан һуң, Ниғмәтте лә тас салҡан күтәреп һалды.* Ф. Рәхимғолова.

**АЛЫШЫУ III (алыш-)** *ҡ. ҡар.* **алмашыу.**

**АЛЬБАТРОС** [рус. < фр. *albatros*] (Р.: альбатрос; И.: albatross; Т.: albatros) *и.*

Оҙонса суҡышлы, оҙон тар ҡанатлы ҙур диңгеҙ ҡошо. □ Альбатрос. *Аҡ һыртлы альбатрос. Ҡуңыр һыртлы альбатрос.*

**АЛЬБИНИЗМ** [рус. < фр. *allbinisme*] (Р.: альбинизм; И.: albinism; Т.: albinizm) *и.*

Тәнгә төҫ биргән пигменттың тыумыштан уҡ өлөшләтә йәки бөтөнләй булмауы. □ Альбинизм. *Хайуандарҙағы альбинизм.*

**АЛЬБИНОС** [рус. < лат. *albus*] (Р.: альбинос; И.: albino; Т.: akşın) *и.*

Пигментацияһы булмаған организм. □ Альбинос.

**АЛЬБОМ** [рус. < фр. *album*] (Р.: альбом; И.: album; Т.: albüm) *и.*

**1.** Төрлө һүрәт, марка, фото, шиғыр өсөн эшләнгән ҡалын дәфтәр. □ Альбом. *Фотолар альбомы. Маркалар альбомы.* ■ *Фәнүзә альбомына төрлө һүрәттәр төшөрҙө. Альбом [Алманың] әсәһенең фоторәсемдәре менән асыла.* Ҡ. Ибәтуллин.

**2.** Бер тема буйынса тупланған һүрәттәр, чертёждар һ.б. йыйылмаһы. □ Альбом. *Халыҡ сәнғәте альбомы.*

**3.** *Берәй* йырсының йәки музыкаль төркөмдөң аудиотаҫмаға, компактдискыға һ.б. яҙылған музыкаль (вокаль, инструменталь) әҫәрҙәре. □ Альбом. *Ф. Килдейәрова альбомы.*

**АЛЬБУМИН** [рус. < лат. *albumen*] (Р.: альбумин; И.: albumin; Т.: albumin) *и. биохим.*

Ябай тәбиғи аҡһымдарҙың дөйөм атамаһы. □ Альбумин.

**АЛЬМА-МАТЕР** [рус. < лат. *alma mater* ‘яҡшы күңелле әсә’] (Р.: альма-матер; И.: Alma Mater; Т.: gidilen okul) *и.*

Студенттарҙың уҡып йөрөгән вуздарын атап йөрөткән һүҙе. □ Альма-матер *(студенческое название вуза).*

**АЛЬМАНАХ** [рус. < лат. *almanachus* < ғәр. المناخ ‘астрономик календарь’ < *al mana*] (Р.: альманах; И.: literary miscellany; Т.: yıllık) *и.*

Замандаш авторҙарҙың әҫәрҙәренән төҙөлөп, ваҡыты-ваҡыты менән сыға торған йыйынтыҡ. □ Альманах. *Әҙәби альманах.*

**АЛЬПЕНШТОК** [рус. < нем. *Alpenstock* ‘Альп таяғы’] (Р.: альпеншток; И.: alpenstock; Т.: demir uçlu dağcı sopası) *и.*

Бейек тауҙарға, боҙлоҡтарға менгәндә ҡулланыла торған башы осло тимер оҙон таяҡ. □ Альпеншток.

**АЛЬПИНИЗМ** [рус. < кельт. *alp*] (Р.: альпинизм; И.: alpinism; Т.: dağcılık) *и.*

Бейек тауҙарға менеү спорты. □ Альпинизм. *Альпинизм менән шөғөлләнеү.*

**АЛЬПИНИСТ** [рус.] (Р.: альпинист; И.: Alpinist; Т.: dağcı) *и.*

Альпинизм менән шөғөлләнеүсе кеше. □ Альпинист. *Болот яллы ҡаяларға үрләй альпинистар — алып батырҙар.* Т. Юлдашева.

**АЛЬТ** [рус. < ит. *alto* < лат. *altus* ‘юғары’] (Р.: альт; И.: viola; Т.: viyola) *и. муз.*

**1.** Скрипканан ҙурыраҡ, түбән регистрлы ҡыллы музыка ҡоралы. □ Альт.

**2.** Ҡатын-ҡыҙ йәки балаларҙың тенорҙан юғарыраҡ һәм сопранонан түбәнерәк ҡалын тауышы, шулай уҡ хорҙа йәки вокал ансамблендә ошондай тауыш башҡарған партия. □ Альт.

**АЛЬТСЫ** (Р.: альтист; И.: viola player; Т.: viyolacı) *и.*

Альтта уйнаусы музыкант. □ Альтист(ка).

**АЛЬТЕРНАТИВ** [рус. < фр. ] (Р.: альтернативный; И.: alternative; Т.: alternatif) *с.*

Башҡа; официаль, дөйөм ҡабул ителгәндән айырылып торған. □ Другой, альтернативный. *Альтернатив хеҙмәт.*

**АЛЬТРУИЗМ** [рус. < фр. *altruisme* < *alter*] (Р.: альтруизм; И.: altruism; Т.: özgecilik) *и.*

Башҡалар тураһында эскерһеҙ хәстәрлек, үҙеңдең мәнфәғәтеңде башҡалар өсөн ҡорбан итергә әҙерлек. □ Альтруизм.

**АЛЬЯНС** [рус. < фр. *alliance*] (Р.: альянс; И.: alliance; Т.: ittifak) *и.*

Килешеү йөкләмәһе нигеҙендә барлыҡҡа килгән берекмә, союз. □ Альянс. *Хәрби альянс.*

**АЛӘТ** [ғәр. آلة ‘ҡорал’] (Р.: способ; И.: way; Т.: yol) *и. иҫк.*

**1.** Сара, әмәл. □ Способ, средство, возможность. ■ *Ғилемде сыянәткә аләт ҡылып, күберәк тәфсир, хәдиҫ ҡараһаҡ беҙ .. Муллалыҡ шунда беҙгә бирер файҙа, нәфсе-эттең ҡолағынан бора алһаҡ беҙ.* М. Аҡмулла.

**2.** Ҡорал, эш ҡоралы. □ Орудие труда, инструмент.

**АЛЮМИН I** [рус. < лат. *alumen* + *inis* ‘әсеүташ’] (Р.: алюминий; И.: aluminium; Т.: alüminyum) *и. хим.*

Химик элемент, аҡ төҫтәге йомшаҡ еңел металл. □ Алюминий. *Саф алюмин.*

**АЛЮМИН II** [рус. < лат. *alumen* + *inis* ‘әсеүташ’] (Р.: алюминиевый; И.: aluminium; Т.: alüminyum) *с.*

Алюмин металдан эшләнгән. □ Алюминиевый. *Алюмин ҡалаҡ. Алюмин һауыт.* ■ *Уның матурлығы һәм еңеллеге менән Н. Чернышевский ҙа һокланған. Тотконлокта яҙыусыға бер стакан сәй менән алюмин ҡалаҡ килтергәс, ул: «Был — киләсәк металы!» — тип баһа биргән.* «Йәшлек», 5 сентябрь 2009.

**А ЛЯ КАРТ** [рус. < фр. *a la carte* ‘карта буйынса’] (Р.: а-ля карт; И.: a la carte; Т.: a la carte) *и.*

Ресторан менюһының (ирекле һайлау хоҡуғы) төрө. □ А-ля карт.

**АЛ-ЯЛ БЕЛМӘҮ (ал-ял бел-)** *к. ҡар.* **алды-ялды белмәү.**

**А ЛЯ ФУРШЕТ** [рус. < фр. *a la fourchette* ‘тиҙ генә’] (Р.: а-ля фуршет; И.: buffets; Т.: açık büfe) *и.*

Ултырмайынса, еңелсә ашау. □ А-ля фуршет.

**АЛ ЯУЛАУ (ал яула-)** (Р.: стараться быть первым; И.: strive to be better; Т.: birinci olmaya çalışmak) *к.*

Кешенән уҙҙырырға тырышыу. □ Стараться быть первым, лучше. ■ *[Күсәрбай] ал яуланы, ләкин кеше төҫлө бер донья рәхәте күрмәне.* Т. Хәйбуллин.

**АМАЗОНКА** [рус. < гр. *amazones*] (Р.: амазонка; И.: Amazon; Т.: Amazon) *и.*

**1.** *миф.* Грек мифологияһындағы һуғышсан ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған ҡәбилә ағзаһы. □ Амазонка.

**2.** Махсус кейем кейгән һыбай ҡатын-ҡыҙ. □ Амазонка.

**3.** Һыбай йөрөү өсөн махсус өлгө менән тегелгән оҙон ҡатын-ҡыҙ күлдәге. □ Амазонка *(одежда для всадницы).*

**АМАЗОНКАЛАР** (Р.: амазонки; И.: Amazon; Т.: Amazon) *и. күпл.*

Боронғо грек мифологияһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына ойошҡан ҡәбилә. □ Амазонки.

**АМАЛЬГАМА** [рус. < лат. *amalgame*] (Р.: амальгама; И.: amalgam; Т.: malgama) *и.*

Ниндәйҙер металдың терегөмөш менән ҡушылмаһы йәки металдың терегөмөштәге иҙмәһе. □ Амальгама. *Цинклы амальгама.*

**АМАЛЬГАМАЦИЯ** [рус. < лат. *malagma*] (Р.: амальгамация; И.: amalgamation; Т.: malgama) *и.*

Ҡайһы бер металдарҙың амальгама биреү үҙенсәлегенә нигеҙләнеп, терегөмөш ярҙамында мәғдәндән саф металл алыу ысулы. □ Амальгамация.

**АМАН I** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-бурзянцев.

**АМАН II** [ғәр. امان ‘тыныслыҡ, хәүефһеҙлек’] (Р.: невредимый; И.: safe; Т.: aman) *с. һир.*

Иҫән-һау, имен. □ Невредимый, здоровый, благополучный. ■ *Һай, Ер-әсә, һаман бул аман.* С. Кулибай. *Ерҙә тик бер таяныс бар, исеме — иман. Шунһыҙ һеҙҙең тормошоғоҙ булмаç аман.* М. Ямалетдинов. ● *Ай йөрө, аман йөрө.* Әйтем.

**АМАНАТ** [ғәр. امانة ‘ышаныс, тоғролоҡ’] (Р.: то, что доверено хранить; И.: testament; Т.: emanet) *и.*

**1.** Һаҡлар өсөн тапшырылған изге нәмә. □ То, что доверено хранить как святыню. *Аманат итеп биреү. Аманат итеп һаҡлау.* ■ *[Йыһан:] Сәрүәр, балакайым, һиңә бер аманат бар ине. Шуны кеше юкта тапшырайым әле.* Х. Ибраһимов. *Борон был яҙмалар [шәжәрәләр] һәр кем өсөн изге аманат булып һаналған, уны ҡулына алған һәр берәү нык һаҡлаған, ышаныслы ҡулдарға ғына тапшырыр булған.* З. Ураҡсин.

**2.** Әйтеп ҡалдырылған һүҙ, үтәлергә тейеш булған васыят. □ Завещание предков. *Боронғолар үҙҙәренең ҡобайырында һүҙҙе бик ололаған, уны йәштәргә аманат итеп ҡалдырған.* Ә. Вахитов. ● *Аманатҡа итмә хыянат.* Әйтем.

**3.** Берәй шартты үтәтеү, вәғәҙәне боҙоуға юл ҡалдырмау маҡсаты менән ҡаршы тарафтан алынған тотҡон йәки ҡиммәтле нәмә. □ Залог, заложник. *Аманат итеп тотоу.* ■ *[Ҡараһаҡал] аманат булып ятҡан күптәрҙе ҡазаматтан ҡотҡарып, кире Уралға ҡайтҡан.* «Ҡараһаҡал». *Салауат менән Юлайҙың ҡатын һәм балаларын үҙҙәре тотолғанға тиклем үк аманат итеп Өфөгә алып киткәндәр.* Ә. Бейеш.

**АМАНГИЛДЕ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-айлинцев.

**АМАНЛАШЫУ (аманлаш-)** (Р.: здороваться; И.: greet; Т.: selamlaşmak) *ҡ.*

**1.** Иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу; иҫәнләшеү. □ Здороваться *с кем*, приветствовать *кого*. // Приветствие. ■ *[Сурағол] сәләм алышып, аманлашҡандың һуңында, бик ауыр ғына ҡуҙғалып урындыҡ ситенә ултырҙы.* Т. Хәйбуллин. *Дандан йортҡа ингәс, йорт хужаһынан иҫәнлек-аманлыҡ һорашҡандан һуң, үҙенең ҡайҙа, ни өсөн барыуын әйтеп бирә.* Әкиәттән.

**2.** Хушлашыу, һаубуллашыу. □ Проститься, прощаться. // Прощание. ■ *Ил-йорт менән хушлашып, аманлашып, Тамъян батыр Мәсем ханға китеп ҡалды.* «Бабсаҡ менән Күсәк». *Урал батыр, бабай менән хушлашып-аманлашып, Тереһыу юлы менән китеп барҙы, ти.* «Урал батыр».

**АМАН-ҺАУЛЫҠ ҺОРАШЫУ (аман-һаулыҡ һораш-)** (Р.: здороваться; И.: greet; Т.: selamlaşmak) *ҡ.*

Хәл белешеү, иҫәнләшеү. □ Здороваться *с кем*, приветствовать *кого*.

**АМАРИЛЛИС** [рус. < гр. *amarylis*] (Р.: амариллис; И.: amaryllis; Т.: nergis zambağı) *и.*

Ҡамыш гөлө. □ Амариллис.

**АМБАР** [фарс. عنبر] (Р.: амбар; И.: warehouse; Т.: ambar) *и.*

Иген, он һәм башҡа нәмәләр һаҡлай торған бина; келәт. □ Амбар. *Таш амбар.*

**АМБИЦИЯ** [рус. < лат. *ambition*] *и. ҡар.* **тәкәбберлек.**

**АМБИЦИЯЛЫ** (Р.: амбициозный; И.: ambitious; Т.: hırslı) *с.*

**1.** Үтә көслө ғорурлыҡ, тәкәбберлек, мин-минлелек тойғоһо. □ Амбициозный. *Амбициялы кеше.*

**2.** Маҡсатҡа ынтылыусан. □ Целеустремлённый.

**АМБРАЗУРА** [рус. < фр. *embraser* ‘тоҡандырыу’] *и. хәрб.*

Ышыҡланып атыу өсөн яһалған төрлө ҡоролмаларҙағы тишек. □ Амбразура. *Амбразураны ҡаплау.* ● *Ликунов амбразураның тар ғына төнлөгөнән бинокле менән ҡарай.* Ж. Кейекбаев.

**АМБРОЗИЯ** [рус. < гр. *ambrosia*] (Р.: амброзия; И.: ambrosia; Т.: tanrı yemeği) *и.*

**1.** Боронғо грек мифологияһында аллаға мәңгелек йәшлек, матурлыҡ биргән хуш еҫле аш. □ Амброзия.

**2.** Боронғо Грецияла еҫле май. □ Амброзия.

**3.** Американан башҡа континенттарға таралған зарарлы, башҡа үҫемлектәрҙе юҡҡа сығарыусы сүп үләне, аллерген. □ Амброзия.

**АМБУЛАТОР** (Р.: амбулаторный; И.: outpatients’; Т.: ayakta yapılan tedavi) *с.*

Медицина учреждениеһына килеп күренеүселәргә йәки өйҙә ауырып ятҡан кешеләргә күрһәтелгән медицина ярҙамы. □ Амбулаторный. *Амбулатор карта. Амбулатор дауалау.*

**АМБУЛАТОРИЯ** [рус. < лат. *ambulatorius* ‘хәрәкәтсән’] (Р.: амбулатория; И.: outpatients’ clinic; Т.: klinik) *и.*

Ауырыуҙарға ярҙам күрһәтә торған медицина учреждениеһы. □ Амбулатория.

**АМЁБА** [рус. < лат. *amoebiga*] (Р.: амёба; И.: amoeba; Т.: amip) *и.*

Хәрәкәт иткәндә тән төҙөлөшөн үҙгәртә ала торған иң ябай төҙөлөшлө бер күҙәнәкле зат. □ Амёба.

**АМЕРИКАН** (Р.: американцы; И.: Amerikan; Т.: Amerikan) *и.*

Америкала йәшәүсе халыҡ. □ Американцы. ■ Американдар беҙгә үҙҙәренең атын йәки йәшәү рәүешен тәҡдим итә, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй. «Киске Өфө», № 33, 2011.

**АМЕТИСТ** [рус. < гр. *amethystos*] (Р.: аметист; И.: amethyst; Т.: ametist) *и. мин.*

Ҡыҙыл күк төҫтәге аҫыл таш *(кварцтың бер төрө).* □ Аметист. ■ *Ҡайнар һыу һәм газ менән бергә магманан күп төрлө минерал һәм тау тоҡомдары сыға. Һөҙөмтәлә кварц, кальцит, топаз, аметист, зөбәржәт кристалдары яһала.* Д. Бураҡаев.

**АМИН** [гр. *amēn* < боронғо йәһүд] (Р.: аминь; И.: amen; Т.: amin) *киҫ. дини.*

**1.** Доғанан, намаҙҙан һуң әйтеп ҡуйыла торған һүҙ. □ Аминь. ■ *Муллалар: «Амин», — тип ҡул күтәрҙе.* Т. Хәйбуллин.

**2.** «Шулай булһын», «әйткәнең килһен» тигән мәғәнәлә теләк белдергәндә әйтелә. □ Аминь *(говорится при пожелании «пусть будет так, пусть сбудется»).* ■ *[Мулла:] Һуғышта вафат булғандар шәһит китеп, теге донъяла һис бер һөалһыҙ ожмахҡа инеп, мәңге рәхәт йәшәгәй, илаһи амин!* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Фәрештәнең амин тигән сағына** (*йәки* **сәғәтенә) тура килһен** *ниҙер* тормошҡа ашҡанда йәки *ниҙеңдер* тормошҡа ашыуын теләгәндә әйтелә. □ Да сбудется всё, дай Бог *(пожелание всего доброго).* ■ *[Һылыу:] Ишдәүләт суфыйҙы сәйгә саҡырып, бөгөнгө төшөмдө юратып алайымсы әле. Ул бик дөрөҫ юрай торғайны, фәрештәнең амин тигәненә тура килһен.* Т. Йәнәби.

**АМИН ТОТОУ (амин тот-)** (Р.: благодарить Бога; И.: thank Lord after meals; Т.: Allaha teşekkür etmek) *к.*

Ашағандан һуң ҡулдарҙы күтәреп доға ҡылыу; хуш итеү. □ Благодарить Бога после еды. ■ *Сәй эсеп бөттөләр, амин тоттолар. Фәрзәнә ҡашығаяк йыйыштырҙы.* Ә. Әминев.

**АМИТОЗ** [рус. < лат. *amitosis*] (Р.: амитоз; И.: amitosis; Т.: amitoz) *и. биол. анат.*

Күҙәнәктәрҙең хромосомалар яһамайынса туранан-тура бүленеп үрсеүе. □ Амитоз.

**АММИАК** [рус. < греч. *hals ammoniakos* ‘нашатырь’] (Р.: аммиак; И.: ammonia; Т.: amonyak) *и. хим.*

Азот менән водородтың берләшмәһенән торған еҫле төҫһөҙ газ. □ Аммиак. *Аммиак берләшмәләре.*

**АМНЕЗИЯ** [рус. < гр. *а* ‘юҡлыҡ киҫәксәһе’ + *mneme* ‘хәтер’] (Р.: амнезия; И.: amnesia; Т.: amnezi) *и. мед.*

Хәтер юғалыу. □ Амнезия.

**АМНИСТИЯ** [рус. < фр. *amnistie* < греч. *amnēstia*] (Р.: амнистия; И.: amnesty; Т.: genel af) *и.*

Хөкөм ителгән кешеләрҙең юғары власть органдары тарафынан язанан тулыһынса йәки өлөшләтә ҡотҡарылыуы. □ Амнистия. *Амнистия иғлан итеү. Амнистия буйынса иреккә сығыу.*

**АМОРАЛЛЕК (амораллеге)** (Р.: аморальность; И.: immorality; Т.: ahlaksızlık) *и.*

Әхлаҡ нигеҙҙәрен һәм дөйөм ҡабул ителгән тәртип нормаларын инҡар итеү; моралһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ. □ Аморальность, аморализм.

**АМОРАЛЬ** [рус. < фр. *amoral*] (Р.: аморальный; И.: immorality; Т.: ahlaksızlık) *с.*

Әхлаҡ нигеҙҙәре һәм дөйөм ҡабул ителгән тәртип нормалары инҡар ителгән; әхлаҡһыҙ, боҙоҡ. □ Аморальный. *Амораль ҡылыҡ.*

**АМОРТИЗАТОР** [рус. < фр. *amortir* ‘йомшартыу’] (Р.: амортизатор; И.: shock absorber; Т.: amortisör) *и.*

Төрлө машина һәм аппараттарҙа бәрелеү, һуғылыу, һелкенеүҙе йомшарта торған махсус ҡулайлама. □ Амортизатор. *Пружиналы амортизатор. Амортизатор ҡуйыу.*

**АМОРТИЗАЦИЯ** [рус. < лат. *amortisation* ‘түләү’] (Р.: амортизация; И.: amortization; Т.: amortisman) *и.*

**1.** Ҡулланыуҙан туҙыу арҡаһында төп фондтарҙың — машинаның, йорттоң һ.б. — хаҡы төшә барыу. □ Амортизация. *Амортизация ваҡыты.*

**2.** *фин.* Машина, йорт һ.б. ҡиммәтен эшләп сығарылған продукцияларҙың хаҡына күсерелеүе. □ Амортизация. *Амортизация капиталы.*

**3.** Бәрелеү, һуғылыуҙарҙы *(техникала)* йомшартыу. □ Амортизация.

**АМОРФ** [рус. < гр. *amorpha* ‘дөрөҫ булмаған’] (Р.: аморфный; И.: amorphous; Т.: biçimsiz) *с.*

**1.** *хим.* Кристаллашмай торған; кристаллашмаған. □ Аморфный. *Аморф матдә.*

**2.** *лингв.* Грамматик формалары булмаған, һүҙҙәр ялғанышы менән генә төҙөлгән. □ Аморфный. *Аморф телдәр.*

**АМОРФЛЫҠ (аморфлығы)** (Р.: аморфность; И.: amorphism; Т.: biçimsizlik) *и.*

Кристалл булмаған хәл; формаһыҙлыҡ. □ Аморфность.

**АМПЕР** [рус. < фр. *amperel*] (Р.: ампер; И.: ampere; Т.: amper) *и. физ.*

Электр тогының көсөн үлсәү берәмеге. □ Ампер.

**АМПИР** [рус. < фр. *empire* ‘империя’] (Р.: ампир; И.: empire; Т.: ampir) *и. сәнғ.*

XIX быуат башында Францияла антик үрнәктәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән сәнғәт стиле; һуңғы классицизм. □ Ампир.

**АМПЛИТУДА** [рус. < лат. *amplitudo*] (Р.: амплитуда; И.: amplitude; Т.: genişlik) *и.*

**1.** Тирбәлгән есемдең тигеҙлек нөктәһенән иң нык тайпылған хәле. □ Амплитуда. *Маятниктың тирбәлеү амплитудаһы.*

**2.** Тирбәлеш аралығы. □ Амплитуда. *Һауа температураһы үҙгәрешенең йыллыҡ амплитудаһы.*

**АМПЛУА** [рус. < фр. *emploi* ‘роль’] (Р.: амплуа; И.: type; Т.: tip) *и. театр.*

Артистың һәләтенә, тәбиғәтенә тап килгән ролдәр төрө. □ Амплуа. *Трагик амплуа.*

**АМПУЛА** [рус. < лат. *ampulla* ‘быяла көпшә’] (Р.: ампула; И.: ampoule; Т.: ampul) *и.*

**1.** *мед.* Дарыуҙарҙы стериль рәүештә һаҡлау өсөн ауыҙы герметик бөтәштерелгән бәләкәй махсус быяла һауыт. □ Ампула. Ампулалы дарыу.

**2.** *анат.* Эсе ҡыуыш ағзаның киңәйеп торған өлөшө. □ Ампула.

**АМПУТАЦИЯ** [рус. < лат. *amputatio*] (Р.: ампутация; И.: amputation; Т.: ampütasyon) *и.*

Тән өлөшөнөң (ғәҙәттә, аяҡ-ҡулдың) хирургик юл менән ҡырҡып алыныуы. □ Ампутация.

**АМПУТАЦИЯЛАУ (ампутацияла-)** (Р.: ампутировать; И.: amputate; Т.: kesmek) *ҡ.*

Тән өлөшөн хирургик юл менән ҡырҡып алыу. □ Ампутировать.

**АМУЛЕТ** [рус. < лат. *amuletum* < ғәр. حملة ‘йөрөтөү’] (Р.: амулет; И.: amulet; Т.: nazarlık) *и.*

Ышаныуҙар буйынса, күҙ тейеүҙән, ауырыуҙан, үлемдән һаҡлаусы әйбер. □ Амулет.

**АМФИБИЯ** [рус. < гр. *amphibion*] (Р.: амфибия; И.: amphibian; Т.: amfibi) *и.*

**1.** *зоол.* Һыуҙа ла, ҡорола ла йәшәүгә яраҡлашҡан, ер йөҙөнөң полюс түңәрәгенән башҡа бөтә урынында йәшәй торған умыртҡалы ер-һыу хайуандары. □ Амфибия, земноводные. *Тәлмәрйен, әрмәнделәр ер-һыу хайуандарына, йәғни амфибияларға инә.*

**2.** *бот.* Ер-һыу үҫемлектәре. □ Амфибия.

**3.** *тех.* Ҡоро ергә лә, һыуға ла төшә һәм күтәрелеп китә ала торған самолёт; ҡоро ерҙә лә, һыуҙа ла йөрөй ала торған танк йәки автомобиль һ.б. □ Амфибия.

**АМФИТЕАТР** [рус. < фр. *amphitheatre* < лат. *amphitheatrum* < гр. *amphitheatron*] (Р.: амфитеатр; И.: amphitheatre; Т.: amfiteatr) *и.*

**1.** Антик дәүерҙәге ярым түңәрәк тамаша ҡоролмаһы. □ Амфитеатр.

**2.** Театр, концерт залы, аудиториялар партерының артындағы баҫҡыс-баҫҡыс булып күтәрелгән урындар. □ Амфитеатр.

**АМЫРЫҠ** (Р.: неуклюжий; И.: clumsy; Т.: acemi) *с. диал.*

Һумалтыр**.** □ Неуклюжий *(о человеке).*

**АНА I** [боронғо төрки *ан* ‘ул’] (Р.: вон; И.: over there; Т.: şu) *күрһ. а.*

**1.** *Нимәгәлер* тоҫҡап күрһәткәндә әйтелә. □ Вон, вон там.

**2.** *Нимәгәлер* айырым баҫым менән тоҫҡағанда әйтелә. □ Вот. ■ *Ана Сәхипкирәйҙәр өс йәнгә бер йомала дисәтинә ярым урған, ти.* Һ. Дәүләтшина. *Әйттем бит ана, ул минең яҡлы.* С. Агиш. *Һиңә ат нимәгә, ана башмаҡ менән кит.* Әкиәттән.

**3.** Кешенең иғтибарын *нимәгәлер* йүнәлтеү өсөн әйтелә. □ Вот, вот же. ■ *Беҙ яраткан тауҙар — ана ғына! Тик әйҙәмә мине — төңөлдөм.* Т. Ғәниева. *Яҙҙар килә ана, тамсы тама, иҫкә төшә үткән ғүмерем.* Ш. Бабич.

**4.** «Шул», «теге», «шулай» кеүек алмаштар менән килеп, уларҙың мәғәнәһен көсәйтә. □ Вот это, вот так, вот тот. ■ *Ер, урман, һыу бирә икән, башҡортҡа ана шул еткән.* «Салауат». *Ҡуҙыйкүрпәстең ана шулай яманаты таралып китте, ти.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

♦ **Ана бара юлың** китәм тигән кешегә асыу итеп, кит, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Туда тебе и дорога. ■ *[Ғәзим:] Мин артабан былай йәшәй алмайым. [Ғәзизә:] Ана бара юлың!* Яр. Вәлиев. **Ана тора** теләһәң ни эшлә; үҙ иркеңдә тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Как хочешь, воля твоя.

**АНА II** [дөйөм төрки *ана*] (Р.: мама; И.: Creator; Т.: anne) *и.*

**1.** *ҡар.* **әсә**. ● *Ана күңеле балала, бала күңеле далала.* Мәҡәл.

**2.** *миф.* Тирә-яҡтағы бөтә нәмәне бар итеүсе, яҡлаусы мифик зат. □ Мифический персонаж, божество, создатель, покровитель природных объектов, растений, стихий, всего вокруг. *Һыу анаһы. Арыш анаһы. Ана ағас.*

♦ **Ана һөтө менән инеү** йәштән, бәләкәйҙән үҙләштереү. □ Впитать с молоком матери. **Ана ҡояш** хөрәфәт буйынса, ышандырырға тырышып, ант иткәндә әйтелә. □ Клянусь небом. ■ *Валлаһи, Сәғиҙә! Ышанмаһаң, ана ҡояш.* М. Тажи.

**АНА АНДЫҘ** (Р.: девясил высокий; И.: elecampane; Т.: andız otu) *и. бот. диал.*

Инә андыҙ. □ Девясил высокий *(женская особь)* (лат. *Inula helenium*). *Ана андыҙ менән ҡатындарҙы дауалайҙар.*

**АНАБАЗИН** [рус. < лат. *anabasis*] (Р.: анабазин; И.: anabasine; Т.: anabazin) *и.*

Анабазис тигән үҫемлектән әҙерләнә һәм ҡороткос бөжәктәргә ҡаршы ағыу итеп ҡулланыла торған органик матдә. □ Анабазин. *Анабазин сульфат.*

**АНАБАЗИС** [рус. < лат. *anabasis*] (Р.: анабазис; И.: anabasine; Т.: anabazin) *и. бот.*

Һыу буйҙарында, тигеҙлектә, тау итәктәрендә үҫкән, йыуан ағас тамырлы, 25–75 см бейеклегендәге ярым ҡыуаҡ. □ Анабазис (лат. *Anabasis*). *Анабазистың 30 төрө бар.*

**АНАБИОЗ** [рус. < гр. *anabiosis* ‘терелеү’] (Р.: анабиоз; И.: anabiosis; Т.: anabiyoz) *и. биол.*

Ҡайһы бер үҫемлек һәм ябай йән эйәләренең уңайһыҙ шарттарға (һыуыҡлыҡ, һыуһыҙлыҡ һ.б.) яраҡлашып, тереклек итеүҙән күпмелер туҡтап тороу һәләте. □ Анабиоз.

**АНАГРАММА** [рус. < гр. *anagramma* ‘хәреф алмаштырыу’] (Р.: анаграмма; И.: anagram; Т.: anabiosis) *и. әҙ.*

Яңы һүҙ яһау өсөн һүҙҙәге хәрефтәрҙе алмаштырыу. □ Анаграмма.

**АНА ЕП** (Р.: цепь плуга; И.: plough chain; Т.: pulluk zinciri) *и.*

**1.** Һабандың баш ебе, һабан сынйыры. □ Цепь плуга.

**2.** Һабандың эйәһе. □ Дух плуга.

**АНАКОНДА** [рус. < гр. *anaconda* ‘быуар йылан’] (Р.: анаконда; И.: anakonda; Т.: anakonda) *и.*

Көньяҡ Америкалағы иң эре ағыуһыҙ быуар йылан. □ Анаконда (лат. *Eunectes murinus*).

**АНАЛИЗ** [рус. < гр. *analysis*] (Р.: анализ; И.: analysis; Т.: analiz) *и.*

**1.** Бөтөндө өлөштәргә тарҡатып өйрәнеүгә нигеҙләнгән ғилми ысул; *киреһе* — синтез. □ Анализ. *Математик анализ. Иктисади анализ. Логик анализ. Әҙәби әҫәргә анализ.* ■ *Йыллыҡ йыйылыштарҙа байтаҡ анализ яһалды, өҫтәүенә, ваҡытлы матбуғатта ла, теле-радио сығыштарында ла прозабыҙ торошо, уның көнүҙәк проблемалары әленән-әле яҡтыртылып тора.* С. Шәрипов.

**2.** *мед.* Матдә составының, матдә үҙенсәлектәренең билдәләнеше. □ Анализ. *Диагностик анализ. Ҡан анализы. Тупраҡ анализы. Химик анализ. Һауа анализы. Һыуға санитария анализы.*

**АНАЛИЗЛАУ (анализла-)** (Р.: анализировать; И.: analyse; Т.: analizlemek) *ҡ.*

Анализ үткәреү, анализ яһау, тикшереү, өйрәнеү. □ Анализировать, проводить анализ. // Анализ. *Балансты анализлау. Бюджетты анализлау. Дәресте анализлау. Мәғлүмәттәрҙе анализлау.* ■ *Яҙыусы — беренсе сиратта аҡыл эйәһе. Ул тормошто анализлай белергә, хәл-ваҡиғаларҙы баһалай белергә тейеш.* Ә. Вахитов.

**АНАЛИТИК I** [рус. < гр. *analytikos*] (Р.: аналитик; И.: analyst; Т.: çözümleyici) *и.*

Төрлө-төрлө анализдар яһау менән шөғөлләнгән белгес. □ Аналитик. *Аналитиктар күҙаллауы.*

**АНАЛИТИК II** [рус.] (Р.: аналитический; И.: analytical; Т.: analitik) *с.*

**1.** Анализға нигеҙләнгән. □ Аналитический. *Аналитик ысул. Аналитик фекерләү. Аналитик тәнҡит.*

**2.** *лингв.* Һүҙьяһалышта үҙ аллы мәғәнәле төп компоненттарға тик грамматик функция үтәгән ярҙамсы һүҙҙәр эйәреү юлы менән яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килеү ҡалыбы, *киреһе* — синтетик. □ Аналитический. *Аналитик юл.* ■ *1966 йылда ул [Ә.Ә. Юлдашев] «Төрки телдәрендә ҡылымдың аналитик формалары» тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын яҡлай.* Ғ. Ҡаһарманов.

**АНАЛИТИК ГЕОМЕТРИЯ** (Р.: аналитическая геометрия; И.: analytic geometry; Т.: analitik geometri) *и. мат.*

Математиканың алгебра һәм анализ методтары ярҙамында геометрик тикшеренеүҙәр үткәргән бүлеге. □ Аналитическая геометрия.

**АНАЛИТИК ТЕЛДӘР** (Р.: аналитические языки; И.: analytical language; Т.: analitik diller) *и. лингв.*

Грамматик мөнәсәбәт йәки мәғәнәне тейешле аффикстар ярҙамында түгел, һүҙ тәртибе, ярҙамсы һүҙҙәр һәм интонация менән белдерә торған телдәр (инглиз, француз һ.б.), *киреһе* — синтетик. □ Аналитические языки.

**АНАЛОГ** [рус. < гр. *analogos*] *и. кит. ҡар.* **оҡшашлыҡ**. *Аналогы булмаған.*

**АНАЛОГИК** [рус.] *с. ҡар.* **оҡшаш**. *Аналогик күренеш. Аналогик хәл.*

**АНАЛОГИЯ** [рус. < гр. *analogia*] (Р.: аналогия; И.: analogy; Т.: analoji) *и.*

*Нимәләрҙеңдер* үҙ-ара тап килеше, оҡшашлығы. □ Аналогия. *Тарихи аналогия. Тулы аналогия.*

**АНАЛЫ АУ** (Р.: сеть из трёх частей; И.: net consisting of three parts; Т.: üç kısımlı ağ) *и.*

**1.** Өс ҡат ау. □ Сеть из трёх частей, режёвка.

**2.** *миф.* Эйәле ау. □ Невод с духом.

**АНАЛЫҠ (аналығы)** (Р.: матка; И.: womb; Т.: rahim) *и. анат.*

Ҡатын-ҡыҙҙың бала яралғыһы үҫә торған эске енси ағзаһы; балаяткы. □ Матка. *Аналыҡтан ҡан килеү.* ■ *Баклажан, авокадо һәм груша ҡатын-ҡыҙҙың аналыҡ һәм балаяткы муйыны тығы эшмәкәрлеген көйләй.* «Башҡортостан», 17 февраль 2011.

**АНАН** (Р.: оттуда; И.: from there; Т.: oradan) *а. һөйл.*

Унан. □ От него, оттуда.

**АНАНАС** [рус. < фр. *ananas*] (Р.: ананас; И.: pineapple; Т.: ananas) *и. бот.*

**1.** Ҡалын ҡыяҡ япраҡлы, тыштан ҡабырсаҡланып торған эре, һутлы емешле йылы яҡ үҫемлеге. □ Ананас (лат. *Ananas*). *Ананас ҡабығы.*

**2.** Шул үҫемлектең емеше. □ Ананасный, ананасовый. *Ананас консерваһы.*

**АНАР** [фарс. انار] (Р.: гранат; И.: pomegranate; Т.: nar) *и. бот.*

**1.** Ҡып-ҡыҙыл сәскәле, ҡаты ҡабыҡ эсендә уҡмашып торған һутлы ҡыҙыл емешле йылы яҡ ағасы; гранат. □ Гранат (лат. *Punica*). *Анар ағасы. Анар сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. □ Гранат. *Анар һуты.* ■ *Пәйғәмбәребеҙ гранат (анар) шайтандан һәм 40 көн буйы яуыз ниәттән һаҡлар, тигән.* «Башҡортостан», 17 февраль 2011.

**АНАРХИЗМ** [рус. < гр. *anarchia* ‘власһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек’] *и. ҡар.* **анархия.**

**АНАРХИСТ** [рус. < гр. *anarchia* ‘башлыҡһыҙ’] (Р.: анархист; И.: anarchist; Т.: anarşist) *и.*

Анархизм яҡлы кеше. □ Анархист. *Анархистар сығышы.*

**АНАРХИСТИК** (Р.: анархический; И.: anarchistic; Т.: anarşist) *с.*

Анархизм хас булған. □ Анархический, анархистский.

**АНАРХИЯ** [рус. < гр. *anarchia* ‘власһыҙлыҡ, тәртипһеҙлек’] (Р.: анархия; И.: anarchy; Т.: anarşi) *и.*

**1.** *сәйәс.* Йәмғиәттең дәүләт хакимиәте, ҡанундары, мәжбүри тәртип ҡағиҙәләре булмаған торошо. □ Анархия. ■ *Кеше һис нәмәнән дә ҡурҡмаһа, илдә демократия түгел, анархия урынлаша.* «Шоңҡар», № 4, 2010.

**2.** *икт.* Иҡтисадтың тәртипһеҙ, бер ниндәй нормаларға буйһонмаған барышы. □ Анархия. *Етештереү анархияһы.*

**АНАТОМ** [рус. < гр. *anatome*] (Р.: анатом; И.: anatomist; Т.: anatomist) *и.*

Анатомия буйынса белгес. □ Анатом.

**АНАТОМИК** (Р.: анатомический; И.: anatomical; Т.: anatomik) *с.*

Анатомияға мөнәсәбәтле. □ Анатомический. *Анатомик тикшеренеү.*

**АНАТОМИЯ** [рус. < гр. *anatome*] (Р.: анатомия; И.: anatomy; Т.: anatomi) *и.*

Организмдың төҙөлөшөн өйрәнә торған фән. □ Анатомия. *Кеше анатомияһы. Үҫемлектәр анатомияһы. Йәш анатомияһы. Сағыштырма анатомия. Анатомия музейы. Патологик анатомия.* ■ *Йорт хайуандары анатомияһы, биология, физика, химия, трактор һәм автомобилдәр, ауыл хужалығы машиналары, мал аҙығы әҙерләү, физиология һәм гистология, электр техникаһы, микробиология һәм генетика лабораториялары, ике компьютер класы, китапхана тейешенсә йыһазландырылған.* «Башҡортостан», 2 апрель 2011.

**АНАУ** (Р.: вон; И.: over there; Т.: şu) *ҡурһ. а.*

**1.** Күҙ алдында торған нәмәгә тоҫҡап, *ниҙер* һөйләгәндә әйтелә. □ *мест. указ.* Вон, тот, вон тот. ■ *[Әбйәлил:] Олатайым анау тал араһында ята, ти.* Әкиәттән. *«Балаҡайҙарым, миңә үлергә ваҡыт етте, үҙегеҙ донъя ҡороп, тырышып йәшәгеҙ. Бер нәмә әйтеп ҡалдырам: анау шкаф башында бер көҙгө ята. Ул иң егәрле, иң уңған кешенең генә теләген ҡабул итә», — тип әйткән [бабай].* Әкиәттән.

**2.** Билдәле булған эш-хәл, кеше йәки нәмә тураһында һүҙ барғанда, шуға иғтибарҙы йүнәлдереү өсөн әйтелә. □ Тот. ■ *Анау һунарсыларҙы әйтәм, нишләп кенә шуның балаларына тейәһе булдылар икән? — күрше ҡатын уфтанып ҡуйҙы.* Г. Әхмәҙишина.

**3.** Ваҡыт төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр менән килеп, үткән бер ваҡытҡа тоҫҡай. □ В тот, в том, в те. *Анау көн. Анау йылды.* ■ *Анау ваҡыт башын төрмәлә серетергә яйы ла сыҡҡайны, кәһәр һуҡҡыр Ҡарый эште боҙҙо.* «Йәшлек», 7 октябрь 2008.

**АНАУЛАЙ** (Р.: туда; И.: in that direction; Т.: oraya) *р. һөйл.*

**1.** Анау яҡҡа. □ Туда, в ту сторону, в том направлении. *Быҙау яңы ғына анаулай китте.*

**2.** Эш-хәлдең билдәле бер рәүешенә тоҫҡағанда әйтелә; ана шулай. □ Вот так. ■ *[Сәғиҙә:] Яланбикәбеҙ анаулай булып үлеп ҡалды.* Һ. Дәүләтшина.

**АНАУЛАЙТЫП** (Р.: вот так; И.: like this; Т.: böyle) *р. һөйл.*

Билдәле бер эш-хәлгә тоҫҡағанда әйтелә. □ Вот так. ■ *[Сәғиҙә:] Яланбикәһе анаулайтып йәтим ҡалып ултыра.* Һ. Дәүләтшина.

**АНАУ-МЫНАУ** (Р.: то да сё; И.: different; Т.: bu şu) *ҡуRh. а.*

Тегеһе-бынnetwork. □ То да сё.

**АНАУЫНДА** (Р.: там; И.: yonder; Т.: orada) *р. һөйл.*

**1.** Анау ерҙә. □ Там, вон там. *Салғы анауында, тал төбөндә тора.* ■ *Анауында, аҫта, — тип Шамилға һөйләгән һүҙен өҙмәй генә дауам итә Сабир, — Маныштры, Төлмәй ауылдары ята.* Д. Шәрәфетдинов.

**2.** Анау ергә. □ Туда, вон туда. *Туныңды анауында эл.*

**АНАФОРА** [рус. < гр. *anaphora* ‘ҡабатлау’] (Р.: анафора; И.: anafora; Т.: anafora) *и. әҙ.*

Йәнәш торған юлда, строфала бер үк өн, һүҙ, һөйләмде ҡабатлау алымы. □ Анафора. *Анафора алымын ҡулланыу.*

**АНАХРОНИЗМ** [рус. < гр. *ana* ‘ҡаршы’ + *chronos* ‘ваҡыт’] (Р.: анахронизм; И.: anachronism; Т.: anakronizm) *и.*

**1.** Тәбиғи хронологияны боҙоп, бер осор ваҡиғаларҙы икенсе осорға күсереп күрһәтеү. □ Анахронизм.

**2.** Замана шарттарына тап килмәгән күренеш, төшөнсә. □ Анахронизм.

**АНАХРОНИК** (Р.: анахронический; И.: anachronistic; Т.: kronolojik hatayla ilgili) *с.*

Анахронизм булған, иҫкергән. □ Анахронический, анахроничный.

**АНАЭРОБТАР** [рус. < гр. *an* + *aer* ‘һауа’ + *bios* ‘йәшәү’] (Р.: анаэробы; И.: anaerobies; Т.: anaerob) *и. күпл. биол.*

Тирә-яҡ мөхиттә ирекле кислород булмаған шарттарҙа йәшәй һәм үрсей алған организмдар. □ Анаэробы. *Анаэроб бактериялар.*

**АНГАЖЕМЕНТ** [рус. < фр. *engagement* ‘бурыс’] (Р.: ангажемент; И.: engagement; Т.: angajman) *и.*

**1.** Артисты йәки коллективты билдәле бер ваҡытҡа спектаклдә, концертта ҡатнашырға саҡырыу. □ Ангажемент. *Ангажемент алыу.*

**2.** Шул ҡатнашлыҡҡа килешеү. □ Ангажемент.

**АНГИДРИД** [рус. < гр. *an* + *hydōr* ‘һыу’] (Р.: ангидрид; И.: anhydride; Т.: anhidrid) *и. хим.*

Һыу менән ҡушылғанда кислота хасил итә торған әсемә. □ Ангидрид. Көкөрт ангидриды.

**АНГИДРИТ** [рус. < гр. *an* + *hydōr* ‘һыу’] (Р.: ангидрит; И.: anhydrite; Т.: anhidrit) *и. мин.*

Һыу менән ҡушылғанда гипс барлыҡҡа килтерә торған аҡһыл йәки зәңгәрһыу минерал. □ Ангидрит. ■ *Ҡайһы бер убалар тотош тиерлек гипс йәки ангидриттан тора.* М. Хисмәтов.

**АНГИНА** [рус. < лат. *angina* < *angere* ‘быуыу’] (Р.: ангина; И.: quinsy; Т.: anjin) *и. мед.*

Тамаҡ һәм айырыуса аңҡау биҙҙәренең шешеүе менән билдәләнгән йоғошло ауырыу. □ Ангина. *Катараль ангина. Сифилис ангинаһы. Скарлатина ангинаһы. Фолликуляр ангина.* ■ *Тамаҡ шешкәндә, ангина ваҡытында, тоҙ, прополис шыйыҡсалары менән сиратлап, тамаҡты, ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатыу файҙалы.* «Йәшлек», 30 июнь 2009.

**АНГЛОМАН** [рус. < лат. *angli* ‘инглиз’ + гр. *mania* ‘ҙур теләк’] (Р.: англоман; И.: Anglomaniac; Т.: ingiliz hayranı) *и.*

Инглизсә булған бөтә нәмә менән мауыҡҡан кеше. □ Англоман.

**АНГЛОМАНИЯ** [рус. < лат. *angli* ‘инглиз’ + гр. *mania* ‘ҙур теләк’] (Р.: англомания; И.: Anglomania; Т.: ingiliz hayranlığı) *и.*

Инглиздәргә ҡағылған бөтә нәмәне артыҡ һөйөү, мауығыу. □ Англомания.

**АНГЛОФОБ** [рус. < гр. *phobos* ‘ҡурҡыу’] (Р.: англофоб; И.: anglofobo; Т.: anglofob) *и.*

Инглиз милләтен, мәҙәниәтен яратмаған кеше. □ Англофоб.

**АНДА** *а. һөйл. ҡар.* **унда**.

**АНДА-МЫНДА** *р. ҡар.* **анда-һанда.**

**АНДА-ҺАНДА** (Р.: там и сям; И.: from time to time; Т.: orada burada) *р. һөйл.*

Унда-һанда. □ Там и сям; то там, то сям; изредка. ■ *[Гәйникамал:] Анда-һанда уң ҡулы менән күҙҙәренә эркелгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ күҙ йәштәрен һыпыра.* З. Йәнбирҙина.

**АНДЫҘ** [боронғо төрки *андыз* ‘андыҙ үләне’] (Р.: девясил; И.: elecampane; Т.: andız) *и. бот.*

**1.** Дымлы ерҙә үҫә торған эре киң япраҡлы, һары сәскәле бейек үлән. □ Девясил (лат. *Inula*). *Андыҙ тамыры. Һарыбаш андыҙ.* ■ *Ильяс та, Аҡназар ағай андыҙлыкты һәләк иткән, андыҙ барҙа ат үлмәй, тигәнде белмәй микән, тип асыулана. .. Улай ҙа андыҙҙы күпмелер төп ҡаҙып алып, Зәңгәр шишмә үҙәненә күсереп ултыртып ҡараған егет, ереген китһә... Тамыры ҡеүәтле бит уның, тарбайланып тәрәндә ята, ҡаҙғанда нык зәғифләнмәһә, мандып та ҡуйыр.* Г. Яҡупова.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, 70 төрлө ауырыуға дауа, һаулыҡ, көс, тормош символы. □ Девясил *(мифологизированное растение, способное излечить, по поверьям, от 70-и болезней; символ здоровья, силы, жизни).* ■ *Андыҙҙы ерҙән алғанда, хәйер итеп, ергә икмәк һынығы, тоҙ һалып ҡалдырырға кәрәк.* Халыҡ ижадынан. *Атай-олатайҙарыбыҙ арыған йә янған атка андыҙ ҡайнатып эсергән, һыуыткан.* «Киске Өфө», 23 июль 2011. ● *Ирәүән барҙа ир үлмәҫ, андыҙ барҙа ат үлмәҫ.* Мәҡәл.

**АНДЫҘЛЫҠ** [боронғо төрки *андыз* ‘андыҙ үләне’] (Р.: место, где растёт девясил; И.: places of growth Elecampane; Т.: andızlık) *и.*

Андыҙ үҫкән ер, ялан. □ Место, где растёт девясил. ■ *Аҡназар ҡусты алйотлоҡ эшләне ул яланға тейеп, борон-борондан андыҙлык ине унда.* Г.Яҡупова.

**АНЕКДОТ** [рус. < гр. *anekdot* < *a* ‘юҡлыҡ кисәксәһе’ + *ekdoton* ‘баҫылған’] *и. ҡар.* **көләмәс**.

**АНЕМИЯ** [рус. < гр. *an* + *haima* ‘ҡан’] *и. мед. ҡар.* **аҙ ҡанлылыҡ**. *Анемияны булдырмаҫ өсөн витаминдар ашау.*

**АНЕМОМЕТР** [рус. < гр. *anemos* ‘ел’ + *metron* ‘үлсәү’] (Р.: анемометр; И.: anemometer; Т.: rüzgar hız ölçeri) *и.*

Һауа хәрәкәте тиҙлеген үлсәү ҡоралы. □ Анемометр.

**АНЕРОИД** [рус. < гр. *aneroid* ‘барометр’] (Р.: анероид; И.: aneroid; Т.: aneroit) *и. метеор.*

Атмосфера баҫымын үлсәй торған металл барометр. □ Анероид.

**АНЕСТЕЗИОЛОГ** [рус.] (Р.: анестезиолог; И.: anaesthetist; Т.: narkozcu) *и. мед.*

Анестезиология белгесе, врач. □ Анестезиолог.

**АНЕСТЕЗИОЛОГИЯ** [рус. < лат. *an* ‘юҡлыҡ’ + *aesthesia* ‘һиҙемләү’ + боронғо гр. *logos* ‘фән’] (Р.: анестезиология; И.: anaesthesiology; Т.: anesteziyoloji) *и.*

Ауыртыуҙы баҫыу, хирургик операциялар ваҡытында һәм унан һуң организмдың мөһим функцияларын өйрәнеүсе медицина өлкәһе. □ Анестезиология.

**АНЕСТЕЗИЯ I** [рус. < лат. *anaesthesis*] (Р.: анестезия; И.: anesthesia; Т.: duyum yitimi) *и.*

Ауырыу сәбәпле ауыртыуҙы, температураны тоймау; һиҙеүсәнлек юғалтыу. □ Анестезия. *Травма анестезияһы.* ■ *Республикала ксенон анестезияһы тәү сиратта бик күп ҡатмарлы һәм оҙайлы операциялар үткәрелгән, бала табыуҙың ҡатмарлы*

*осрактары булған, нервы системаһы сирҙәре менән яфаланыусыларға операциялар эшләнгән Өфө һәм Стәрлетамаҡ кеүек эре ҡалаларҙа үҙен аҡлаясаҡ.* «Йәшлек», 21 ноябрь 2009.

**АНЕСТЕЗИЯ II** [рус. < лат. *anaesthesis*] (Р.: анестезия; И.: anesthesia; Т.: anestezi) *и.*

Ауыртыуҙы баҫа торған алым. □ Анестезия. *Дөйөм анестезия.*

**АНИМАЛИСТ** [рус. < фр. *animaliste* < лат. *animal* 'йәнлек'] (Р.: анималист; И.: animal painter; Т.: hayvan ressamı) *и.*

Хайуандар рәсемен йәки һынын яһаусы рәссам йәки скульптор. □ Анималист.

**АНИМАЦИЯ** [рус. < лат. *animation*] (Р.: анимация; И.: animation; Т.: canlandırma) *и.*

**1.** *ҡар.* **мультипликация**.

**2.** Тәбиғәттең йәки уның айырым өлөштәренең, күренештәренең йәнле булыуына ышаныу. □ Анимация.

**АНИМИЗМ** [рус. < лат. *anima* 'йән'] (Р.: анимизм; И.: animism; Т.: canlıcılık) *и.*

Матди донъялағы бөтә предметтар һәм күренештәргә идара итеүсе рухтарҙың, фантастик образдарҙың булыуына ышаныу. □ Анимизм.

**АНИМИСТИК** [рус.] (Р.: анимистический; И.: animistic; Т.: canlıcı) *с.*

Анимизм хас булған. □ Анимистический. *Анимистик ҡараш.*

**АНИҺӘ** (Р.: частица; И.: kind of particle; Т.: en iyisi) *киҫ. һөйл.*

Бер эштең икенсе бер эштән яҡшыраҡ булыуына баҫым яһағанда әйтелә. □ Частица для подчёркивания предпочтительности *какого-л.* действия. *Буш менән ваҡыт уҙғарып йөрөгәнсе, аниһә картуф ҡаҙыш.*

**АНКЕТА** [рус. < фр. *engukte* 'һорауҙар теҙмәһе'] *и.*

**1.** *ҡар.* **һораунамә**. ■ *Анкета тултырыу формаһында уҙғарылған социологик тикшереүҙәргә 7 һорау индерелеп, уларға Күмертау ҡалаһы белем биләмәһендә йәшәгән 300 кеше аноним рәүештә яуап биргән.* «Юшатыр», 11 февраль 2010.

**2.** *Кемдеңдер* биографик мәғлүмәттәре. □ Анкета. *Анкета тултырыу.* ■ *Элек эшкә урынлашҡанда, анкета тултырыу кәрәк ине. Исем-шәрифең, белемең кеүек төп мәғлүмәттәрҙән тыш, ғилми дәрәжәң, сит телде белеүең хаҡында яҙыу мотлаҡ ине.* «Йәшлек», 6 сентябрь 2011.

**АНКЕТАЛАУ (анкетала-)** (Р.: анкетировать; И.: questionary anket; Т.: sormaca) *ҡ.*

Һорауҙарға яуаптар алып, материал туплау ысулы, методы. □ Анкетировать, проводить анкетирование. // Анкетирование.

**АННЕКСИЯ** [рус. < лат. *annexio* 'яулау, ҡушыу'] (Р.: аннексия; И.: annexation; Т.: ilhak) *и.*

Берәй илдең йәки уның өлөшөнөң баҫып алыныуы йәиһә икенсе бер илгә көсләп ҡушылыуы; баҫҡынсылыҡ. □ Аннексия. *Аннексия сәйәсәте. Аннексия яһау.*

**АННЕКСИЯЛАНЫУ (аннексиялан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **аннексиялау**. *страд. от* **аннексиялау**.

**АННЕКСИЯЛАУ (аннексияла-)** (Р.: аннексировать; И.: annex; Т.: ilhak etmek) *ҡ.*

Аннексия яһау. □ Аннексировать.

**АННОТАЦИЯ** [рус. < лат. *annotatio*] *и. ҡар.* **аңлатма.**

**АННОТАЦИЯЛАУ (аннотацияла-)** (Р.: аннотировать; И.: annotate; Т.: dipnot koymak) *ҡ.*

Аннотация яһау. □ Аннотировать. *Ҡульяҙманы аннотациялау.*

**АНОМАЛЬ** [рус. < гр. *anomalos*] (Р.: аномальный; И.: anomalous; Т.: anormal) *с.*

Дөйөм ҡағиҙәнән ситкә сыҡҡан тайпылыш. □ Аномальный. *Буй-һын аномалияһы. Аномаль күренеш. Аномаль урын. Аномаль балалар.*

**АНОНИМ** [рус. < гр. *anonytos* 'исемһеҙ'] (Р.: аноним; И.: anonymous author; Т.: imzasız) *и.*

**1.** Әҫәрендә, хатында үҙенең исемен йәшергән автор. □ Аноним. ■ *Уға [хатҡа]*

*редактор артык әһәмиәт бирмәне. Сөнки уны яҙыусы бәндәнең ни адресы, ни исем-фамилияһы күрһәтелмәгәйне. Анонимдың баһаһы һукыр бер тин.* В. Исхаҡов.

**2.** Автор исеме ҡуйылмаған хат йәки әҫәр. □ Аноним. *Аноним яҙыу.* ■ *Милицияға төрлө хаттар килә. Берәүҙәр ҡул ҡуйып ебәрәләр. Икенселәре аноним хаттар яҙалар.* Ә. Бикчәнтәев.

**АНОНС** [рус. < фр. *annonce*] (Р.: анонс; И.: announcement; Т.: duyuru) *и.*

Буласаҡ гастроль, спектакль, концерт, яңы сығасаҡ тауарҙар, хеҙмәттәр һ.б. тураһында яһалған белдереү, иғлан. □ Анонс. *Анонслы афиша. «Икеа» магазины анонсы.*

**АНОНСЛАУ (анонсла-)** (Р.: анонсировать; И.: announce; Т.: anons etmek) *ҡ.*

Алдан белдереү, алдан иғлан итеү. □ Анонсировать.

**АНСАЙЫН** (Р.: отчаянный; И.: desperate; Т.: arsız) *с. диал.*

**1.** Бик усал, сая. □ Отчаянный, дерзкий, неугомонный. ● *Күршең ансайын булһа, тыныслыҡ күрмәҫһең.* Әйтем.

**2.** Көсөргәнешле, хәтәр. □ Напряжённый, безвыходный, тягостный. *Эштәр ансайын булып китте.*

**3.** *күсм.* Күп дәрәжәлә. □ Ещё более, пуще прежнего. *Ансайын күп булмаҫ.*

**АНСАМБЛЬ** [рус. < фр. *ensemble* ‘бергә’] (Р.: ансамбль; И.: ensemble; Т.: grup) *и.*

**1.** *сәнғ.* Музыкаль, драматик һ.б. әҫәрҙәрҙең башҡарылышындағы төҙөклөк, килешлек, гармониялылыҡ. □ Ансамбль.

**2.** *муз.* Бер ижади коллектив булып сығыш яһаған артистар төркөмө. □ Ансамбль. *Йыр һәм бейеү ансамбле. Ҡурайсылар ансамбле.* ■ *Моисеев ансамбле репертуары башлыса донъя халыҡтары бейеүҙәренән торһа, Ғәскәров исемендәге ансамбль башҡорт бейеүҙәренән тыш, Рәсәй халыҡтары бейеүҙәрен дә башҡарыусы Рәсәйҙәге берҙән-бер бейеү коллективы.* «Киске Өфө», 1 июль 2011.

**3.** *архит.* Төҙөк, килешле бер бәйләнешкә килгән берҙәмлек, үҙ-ара ярашҡан бер бөтөнлөк. □ Ансамбль. *Ҡыҙыл майҙан ансамбле. Урамдарҙың ансамбль ҡоролошо.* ■ *Бер бөтөн архитектур ансамбль хасил иткән ҡала ҡоролмалары араһында ҡабатланмаҫ булмағандары ла осрай.* «Ағиҙел», № 2, 2010.

**АНТ** [боронғо төрки *ант*] (Р.: клятва; И.: oath; Т.: ant) *и.*

**1.** Ҡәтғи, тантаналы һүҙ менән нығытылған вәғәҙә. □ Клятва, присяга. *Ант һүҙе. Дуҫлыҡ анты. Ант менән нығытыу.* ■ *Башҡорттар Беренсе Май көндө Ватан алдында ғәскәри ант бирҙе.* Ә. Ихсан.

**2.** Вәғәҙәне йәки хәбәрҙе нығытыу өсөн әйтелә торған тантаналы һүҙ. □ Клятва; магический набор слов *(иногда их произнесение сопровождалось в древности употреблением крови или молока).* ■ *[Хәйретдин:] Валлаһи-билләһи, ант, алтындың ҡайҙан табылғанын белмәйем.* Я. Хамматов. *[Алтынбай:] Мин аҡлармын ғәйебемде. Бына ант итеп әйтәм. Икмәк.* З. Ураҡсин.

♦ **Ант(ы) башына етеү** боҙолған анттың ҡоһорон күреү. □ Быть наказанным за клятвопреступление. ■ *Ышаныуҙар буйынса, антты боҙорға ярамай. Боҙһаң, ант башҡа етә, тиҙәр, антты боҙған кеше үлә икән.* Ф. Хисамитдинова.

**АНТАГОНИЗМ** [рус. < гр. *antahonisma* ‘бәхәс, көрәш’] (Р.: антагонизм; И.: antagonism; Т.: düşmanlık) *и.*

Килешә алмаҫлыҡ ҡапма-ҡаршылыҡ. □ Антагонизм. *Йәмғиәттәге антагонизм.*

**АНТАГОНИСТ** [рус. < гр. *antahonisma* ‘бәхәс, көрәш’] (Р.: антагонист; И.: antagonist; Т.: antagonist) *и.*

**1.** *Нимә менәндер* килешмәгән, ҡапма-ҡаршы фекерҙә торған кеше. □ Антагонист.

**2.** *биол.* Функциялары йәки тәьҫир итеүе менән ҡапма-ҡаршы булған ағзалар йәки матдәләр. □ Антагонисты.

**АНТАГОНИСТИК** (Р.: антагонистический; И.: antagonistic; Т.: antagonistik) *с.*

Ҡапма-ҡаршылыҡлы. □ Антагонистический. *Антагонистик синыф.*

**АНТ АЛЫУ (ант ал-)** (Р.: принять присягу; И.: take an oath; Т.: ant içmek) *к.*

**1.** Ил, халыҡ алдында тантаналы рәүештә вәғәҙә биреү. □ Принять присягу. *Егеттәрҙән хәрби ант алғас, төрлө яҡҡа тараталар.*

**2.** *Нимәнелер* үтәү тураһында вәғәҙә һүҙен алыу. □ Брать слово. *Тәбиғәтте һаҡларға ант алыу.*

**АНТАРКТИКА** [рус. < гр. *antarktikos*] (Р.: Антарктика; И.: the Antarctic; Т.: Antarktik) *и.*

(*баш хәреф менән*) Ер шарының көньяҡ полюсы тирәһендәге өлкә. □ Антарктика. *Антарктика материгы. Антарктика өлкәһе.*

**АНТ БИРЕҮ (ант бир-)** *к. ҡар.* **ант итеү.** ■ *[Яҡшымбәт:] Ҡаҙакса ил һаҡлау өсөн ант биргәнде белгертәм, ил азаматтарына ҡулымды бирәм.* М. Буранғолов.

**АНТЕННА** [рус. < лат. *antenna*] (Р.: антенна; И.: aerial; Т.: anten) *и.*

Электромагнит тулҡындарын тотоу һәм таратыу өсөн хеҙмәт иткән ҡулайлама. □ Антенна. *Бүлмә антеннаһы. Йүнәлешле антенна. Тышҡы антенна. Антенна ҡорамалдары.*

**АНТИ-** [рус. < гр. *anti* 'ҡаршы'] (Р.: анти; И.: anti; Т.: anti) *алъялғау*

*Нимәгәлер* ҡаршы булғанлыҡты белдергән алъялғау. □ Анти.

**АНТИБИОТИК** [рус. < лат. *antibiotica*] (Р.: антибиотики; И.: antibiotics; Т.: antibiyotik) *и. биол. мед.*

Микроорганизмдар тарафынан эшләнгән һәм ҡайһы бер бактерияларҙы, микробтарҙы үлтереүгә, шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтатыуға һәләтле матдәләр. □ Антибиотики. *Антибиотиктар ҡулланыу.*

**АНТИВИРУС** [рус. < гр. *anti* + лат. *virus* 'ағыу'] (Р.: антивирус; И.: antivirus program; Т.: antivirüs) *и. инф.*

Компьютерҙың хәтерендә вирустарҙы табыусы һәм уларҙың тәьҫиренән зарарһыҙландырыусы программа исеме. □ Антивирус.

**АНТИГЕН** [рус. < гр. *anti* + *gen* 'тыуҙырыусы'] (Р.: антиген; И.: antigen; Т.: antijen) *и.*

Организм өсөн сит матдәләр. □ Антиген.

**АНТИДЕПРЕССАНТ** [рус. < гр. *anti* + лат. *depressio* 'баҫыусы'] (Р.: антидепрессанты; И.: antidepressant; Т.: antidepresan) *и.*

Психотроп дауалау сараһы, тәү сиратта депрессияны дауалау өсөн файҙаланыла. □ Антидепрессант.

**АНТИК** [рус. < лат. *antiquus* 'боронғо'] (Р.: античный; И.: antique; Т.: antika) *с.*

**1.** Боронғо грек һәм римляндарҙың тарихына һәм мәҙәниәтенә бәйле. □ Античный. *Антик донъя. Антик фәлсәфә. Антик сәнғәт.*

**2.** Матур, һомғол *(классик дөрөҫ йөҙ, буйһын тураһында).* □ Античный. *Антик танау.*

**АНТИКВАР** [рус. < лат. *antiquarius* 'боронғолоҡ белгесе'] (Р.: антиквар; И.: antiquarian; Т.: antikacı) *и. сәнғ.*

**1.** Боронғо сәнғәт әҫәрҙәрен, иҫке ҡиммәтле нәмә һәм китаптарҙы белгән, йыйған, шуның менән мауыҡҡан кеше. □ Антиквар. *Антиквар булыу.*

**2.** Шул нәмәләрҙе һатыусы. □ Продавец древностей.

**АНТИКВАРИАТ** [рус. < лат. *antiquarius* 'боронғолоҡ белгесе'] (Р.: антиквариат; И.: antiques; Т.: antika) *и.*

Боронғо ҡиммәтле китаптар, һүрәттәр, нәмәләр менән һатыу итеү эше. □ Антиквариат.

**АНТИКЛЫҠ** (Р.: античность; И.: antiquity; Т.: antikalık) *и.*

**1.** Боронғо грек һәм рим донъяһы, уның мәҙәниәте. □ Античность.

**2.** Күркәмлек, матурлыҡ, һомғоллоҡ. □ Античность.

**АНТИЛОПА** [рус. < фр. < лат. *anthalopus*] *и. зоол. ҡар.* **йәйрән.**

**АНТИМАТДӘ** [рус. < гр. *anti* 'ҡаршы' + ғәр. *матдә*] (Р.: антитела; И.: antibody; Т.: antikor) *и. биол. физиол. хим.*

Антигендарҙың кеше йәки хайуандарҙың организмына зарарлы тәьҫирен юҡҡа сығарыусы матдәләр. □ Антитела. *Аллергияға ҡаршы антиматдәләр.*

**АНТИНОМИЯ** [рус. < гр. *antinomia* ‘ҡанундағы ҡапма-ҡаршылыҡ’] (Р.: антиномия; И.: antinomy; Т.: zıtlık) *и. фәлс. лог.*

Дөрөҫ тип ҡаралған, ләкин бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған ике төп фекер араһындағы ҡаршылыҡ. □ Антиномия.

**АНТИПАТИЯ** [рус. < гр. *antipatheia*] (Р.: антипатия; И.: antipathy; Т.: hoşlanmama) *и.*

Яратмау, күрә алмау тойғоһо; *киреһе* — симпатия. □ Антипатия. *Антипатия тойғоһо. Антипатия уятыу.*

**АНТИПОД** [рус. < гр. *anti* + *pus (podos)*] (Р.: антипод; И.: antipode; Т.: antipot) *и.*

Тәбиғәте, ҡараш-фекере һ. б. менән *кемгәлер, нимәгәлер* ҡапма-ҡаршы торған әйбер, кеше. □ *Что-н., кто-н.,* расположенное противоположно *чему-н.* или *кому-н.* другому. ■ *Шул идеаль йәмғиәтте бар ҡылыусы тирәһенә гел ыңғай һыҙатлы, изгелектән башҡаны белмәгән заттар, ә уның антиподы тирәһенә зыянлы заттар туплана. Ике көс контраст итеп ҡапма-ҡаршы кәүҙәләндерелә.* Ә. Сөләймәнов.

**АНТИСАНИТАР** (Р.: антисанитарный; И.: insanitary; Т.: sağlıksız) *с.*

Санитария талаптарына ярашһыҙ. □ Антисанитарный. *Антисанитар шарттар.*

**АНТИСЕМИТ** [рус. < гр. *anti* ‘ҡаршы’ + *Sēm* ‘Сим, Ной улы’] (Р.: антисемитизм; И.: anti-Semit; Т.: yahudi aleyhtarı) *и.*

Йәһүдтәргә ҡаршы булған. □ Антисемит, противник евреев. *Антисемиттарға хас кәйеф. Антисемиттарға хас ҡылыҡ.*

**АНТИСЕМИТИЗМ** [рус. < гр. *anti* + *Semitism* ‘йәһүдтәргә ҡаршы көрәш’] (Р.: антисемитизм; И.: anti-Semitism; Т.: yahudi aleyhtarlığı) *и.*

Йәһүдтәргә кире, дошман ҡараш. □ Антисемитизм.

**АНТИСЕПТИКА** [рус. < гр. *anti* + *septikos* ‘эренле’ (Р.: антисептика; И.: antisepsis; Т.: antisepsi) *и. мед.*

Йәрәхәттәге микробтарҙы таҙартыу, йоғошһоҙландырыусы саралар, дарыуҙар. □ Антисептика.

**АНТИТЕЗА** [рус. < гр. *anti* ‘ҡаршы’ + *thesis* ‘тезис’] (Р.: антитеза; И.: antithesis; Т.: antitez) *и.*

**1.** Ҡапма-ҡаршы төшөнсә; ҡаршылыҡ. □ Антитеза.

**2.** *әҙ.* Ҡапма-ҡаршы төшөнсәләрҙе һәм образдарҙы сағыштырыуға ҡоролған әҙәби-стилистик алым. □ Антитеза. ■ *Йылы лирик пейзажға антитеза рәүешендә шағир ҡараңғы шахтаны кәүҙәләндерә.* Ғ. Рамазанов.

**АНТ ИТЕҮ (ант ит-)** (Р.: дать клятву; И.: take an oath; Т.: andetmek) *ҡ.*

**1.** Ант һүҙе әйтеү. □ Дать клятву, обет, клясться, присягать. // Клятва, присяга.

**2.** Бурыс алыу, үҙ өҫтөңә бурыс йөкмәү. □ Обязываться, принимать на себя обязательство. // Обязательство.

**АНТИТОКСИНДАР** [рус. < гр. *anti* ‘ҡаршы’ + *oxys* ‘әсе’] (Р.: антитоксины; И.: antitoxins; Т.: antitoksin) *и. күпл. мед.*

Бактериялар ағыуына ҡаршы тороусы антиесемдәр. □ Антитоксины.

**АНТИФРИЗ** [рус. < гр. *anti* ‘ҡаршы’ + ингл. *freeze* ‘туңыу’] (Р.: антифриз; И.: antifreeze; Т.: antifiriz) *и.*

Радиатор һыуына ҡушылып, 0 градус һәм унан түбән температурала һыуҙың туңмауын тәьмин иткән химик матдә. □ Антифриз. *Антифриз ҡойоу.* ■ *Антифриз менән тосол, двигателде һыуытыуҙан тыш, ҡайһы бер двигателдәрҙе майлай ҙа.* «Йәшлек», 1 июль 2008.

**АНТИЦИКЛОН** [рус. < гр. *anti* ‘ҡаршы’ + *kyklos* ‘түңәрәк’] (Р.: антициклон; И.: anticyclone; Т.: antisiklon) *и. метеор.*

Циклондар араһында урынлашҡан атмосфера баҫымы юғары булған өлкә. □ Антициклон. *Антициклон үҙәге.*

**АНТОЛОГИЯ** [рус. < гр. *anthos* ‘сәскә’ + *lego* ‘йыямын’] (Р.: антология; И.: anthology; Т.: antoloji) *и. әҙ.*

Төрлө авторҙарҙың һайланма әҫәрҙәренән (ғәҙәттә, шиғырҙарҙан) һайлап төҙөлгән йыйынтыҡ. □ Антология. *Башҡорт поэзияһының антологияһы.*

**АНТОНИМ** [рус. < гр. *anti* + *onyma* ‘исем’] (Р.: антоним; И.: antonym; Т.: karşıt anlamlı sözcük) *и. лингв.*

Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр. □ Антоним. *Антонимдар һүҙлеге.*

**АНТОНОВКА** [рус.] (Р.: антоновка; И.: antonovka apples; Т.: antonovka elması) *и.*

**1.** Алма ағасының ҡышҡы сорты. □ Антоновка *(зимний сорт яблони).*

**2.** Шул ағастың йәшкелт һары әскелтем тәмле алмаһы. □ Яблоко сорта антоновка. *Антоновка алмаһы.*

**АНТРАКТ** [рус. < фр. *entr’acte*] (Р.: антракт; И.: intermission; Т.: perde arası) *и. театр.*

Спектакль, концерт өлөштәре араһында яһалған тәнәфес. □ Антракт. *Антракт ваҡыты. Антракт иғлан итеү.*

**АНТРАЦИТ** [рус. < гр. *anthrax* ‘күмер’] (Р.: антрацит; И.: anthracite; Т.: parlak taşkömürü) *и.*

Иң яҡшы ҡаты ташкүмер *(йылтыр ҡара төҫтә).* □ Антрацит. *Антрацит ятҡылыҡтары.* ■ *Тектоник ҡыҫымдар аҫтында балсыҡташ — сланецҡа, ҡомташ — кварцитҡа, эзбизташ — мәрмәргә, ташкүмер антрацитҡа әүерелә.* Д. Бураҡаев.

**АНТРЕСОЛЬ** [рус. < фр. *entresol*] (Р.: антресоль; И.: mezzanine; Т.: asma kat) *и.*

**1.** Өйҙөң өҫкө тәпәш ҡаты. □ Антресоль.

**2.** Бейек бүлмәләге галерея формаһындағы рәшәткәле ярым ҡат. □ Антресоли.

**3.** Шкаф, сервант өҫтөнә ҡуйылған айырымябыҡ кәштә. □ Антресоль.

**АНТРОПОГЕНЕЗ** [рус. < гр. *anthropos* ‘кеше’ + *genesis* ‘сығыш’] (Р.: антропогенез; И.: anthropogenesis; Т.: insan evrimi) *и.*

**1.** Кешенең эволюцион-тарихи формалашыу процесы. □ Антропогенез *(процесс эволюционно-исторического формирования человека).*

**2.** Антропология фәненең кешенең барлыҡҡа килеүен өйрәнеүсе бер бүлеге. □ Антропогенез *(раздел антропологии, учение о происхождении человека).*

**АНТРОПОЛОГ** [рус. < гр. *anthropolog*] (Р.: антрополог; И.: anthropologist; Т.: antropolog) *и.*

Антропология белгесе. □ Антрополог. ■ *Антропологтар, һөйәктәргә ҡарап, ҡаҙылма кешеләрҙең физик төҙөлөштәрен, уларҙың ҡатын кешеме, ирме икәнлеген, нисә йәштә үлеп ҡалыуҙарын белә алалар.* Н. Мәжитов.

**АНТРОПОЛОГИК** [рус.] (Р.: антропологический; И.: anthropological; Т.: antropolojik) *с.*

Антропологияға мөнәсәбәтле. □ Антропологический. *Антропологик мәғлүмәттәр.*

**АНТРОПОЛОГИЯ** [рус. < гр. *anthropos* ‘кеше’ + *logos* ‘төшөнсә, белем’] (Р.: антропология; И.: anthropology; Т.: antropoloji) *и.*

Кешенең килеп сығышын һәм үҫешен, кеше расаларының барлыҡҡа килешен, кешенең тән төҙөлөшө үҙгәрештәрен өйрәнә торған фән. □ Антропология. *Антропология белгесе. Антропология музейы.*

**АНТРОПОМЕТРИК** [рус.] (Р.: антропометрический; И.: anthropometric; Т.: antropometrik) *с.*

Антропометрияға мөнәсәбәтле. □ Антропометрический. *Антропометрик мәғлүмәттәр.*

**АНТРОПОМЕТРИЯ** [рус. < гр. *anthropos* ‘кеше’ + *metron* ‘сама’] (Р.: антропометрия; И.: anthropometry; Т.: antropometri) *и.*

Антропологик тикшеренеүҙәрҙең кеше тәнен, уның өлөштәрен үлсәү менән шөғөлләнгән алымы. □ Антропометрия.

**АНТРОПОМОРФИЗМ** [рус. < гр. *anthropos* ‘кеше’ + *morphe* ‘ҡиәфәт’] (Р.: антропоморфизм; И.: anthropomorphism; Т.: insanbiçimcilik) *и.*

Кешегә хас психик үҙенсәлектәрҙе тәбиғәт күренештәренә, үҫемлектәргә һәм айы-

рым нәмәләргә күсереп йәнләндереү. □ Антропоморфизм.

**АНТРОПОНИМИКА** [рус. < гр. *onyma* ‘исем’] (Р.: антропонимика; И.: anthroponyms; Т.: antroponim) *и. лингв.*

Лексикологияның кеше исемдәрен өйрәнеүсе бүлеге. □ Антропонимика.

**АНТУРАЖ** [рус. < фр. *entourage* ‘тирәяҡ’] (Р.: антураж; И.: entourage; Т.: mühit) *и.*

Тормош шарттары, тирә-яҡтағы хәл-торош, мөхит. □ Антураж.

**АНТЫ-МАНТЫ: анты-манты, ер йотһон** (Р.: употребляется при клятвенном обещании выполнить *что-л.*; И.: word used in oaths; Т.: antlarda kullanılan kelimeler) *бал.*

Берәй һүҙҙе нығытып ант иткәндә әйтелә. □ Употребляется при клятвенном обещании выполнить *что-л.*

**АНТ ЭСЕҮ (ант эс-)** *к. ҡар.* **ант итеү.**

**АНФАС** [рус. < фр. *en face* ‘йөҙ менән’] (Р.: анфас; И.: full face; Т.: karşıdan alınmış) *р.*

Алдан, йөҙ менән. □ Анфас. *Карточкаға анфас төшөрөү.*

**АНҺАТ** [иҫке фарсы *асанд* ‘тыныс’] (Р.: лёгкий; И.: easy; Т.: kolay) *с.*

Артыҡ көс, ҙур көсөргәнеш талап итмәгән; еңел; *киреһе* — ҡыйын. □ Лёгкий, нетрудный, простой. *Анһат мәсьәлә. Анһат эш.* ■ *[Вил] имтихандарҙы ла анһат һәм ваҡытында тапшыра килде.* Ә. Әминев. ● *Тауға менеүе ҡыйын, төшөүе анһат.* Әйтем.

**АНҺАТҠА ҺАЛЫШЫУ (анһатҡа һалыш-)** (Р.: облегчать себе *что-л.*; И.: facilitate; Т.: kolay yolu seçmek) *к.*

Еңел юлға баҫыу, еңелде ҡарау. □ Облегчать себе *что-л.*

**АНҺАТЛАНДЫРЫУ (анһатландыр-)** (Р.: облегчать *что*; И.: make easier; Т.: kolaylaştırmak) *к.*

Анһатҡа, еңелгә әйләндереү, анһат итеү. □ Облегчать *что*, сделать более лёгким, доступным. *Эш шарттарын анһатландырыу.*

**АНҺАТЛАНЫУ (анһатлан-)** (Р.: облегчаться; И.: become easier; Т.: kolaylaşmak) *к.*

Анһатҡа, еңелгә әйләнеү. □ Облегчаться, становиться более лёгким. *Эш көндән-көн анһатлана бара.*

**АНҺАТЛЫҠ (анһатлығы)** (Р.: лёгкость; И.: easiness; Т.: kolaylık) *и.*

Еңел булғанлыҡ, көсөргәнешһеҙлек. □ Лёгкость, доступность. *Эштең анһатлығы.*

**АНҺЫҒЫУ (анһыҡ-)** (Р.: жаждать; И.: dry up; Т.: susamak) *к. диал.*

**1.** Бик ныҡ һыуһау; сарсау. □ Пересыхать *(о горле)*, жаждать. *Анһығып бөтөү. Анһығып килеп һыуыҡ һыу эсеү.*

**2.** *күсм.* Бик ныҡ теләү, ашҡынып теләү; алғыһау. □ Сильно желать, стремиться, тосковать. *Көтә-көтә анһығыу.* ■ *Тиҙерәк яуға ташланып, дошманды илдән һөрөп, тыуған ерҙәргә тантана менән ҡайтырға анһығалар [егеттәр].* С. Әлибаев.

**АНҺЫҠТЫРЫУ (анһыҡтыр-)** (Р.: вызывать жажду; И.: cause thirst; Т.: susattırmak) *к. диал.*

**1.** Бик ныҡ һыуһатыу; сарсатыу. □ Вызывать жажду, дать пересыхать. *Тоҙло аш анһыҡтырҙы.*

**2.** *күсм.* Көслө теләк уятыу; алғыһатыу. □ Вызывать сильное желание, стремление, заставлять тосковать. ■ *Илдәр, ирҙәр күкрәгенә һалып ҡыуаныҫын, моңон, хәсрәтен, анһыҡтырып һаман киләсәккә, ваҡыт һынай көстәр нисбәтен.* Х. Назаров.

**АНҺЫЛЫУ (анһыл-)** *к. диал.* **анһығыу.**

**АНҺЫУ (анһы-)** *к. диал.* **анһығыу.**

**АНШЛАГ** [рус. < нем. *Anschlag*] (Р.: аншлаг; И.: the «sold out» notice; Т.: ful) *и.*

**1.** Театр, киноларҙа һ.б. билеттарҙың һатылып бөтөүе тураһындағы иғлан. □ Аншлаг. *Аншлаг элеү.*

**2.** Тулы зал. □ Переполненный зал.

**3.** Гәзиттә ҙур хәрефтәр менән бирелгән мәҡәлә башы. □ Аншлаг.

**АНЫҠ I** [дөйөм төрки *анык* ‘билдәләнеп ҡуйылған’] (Р.: точный; И.: concrete; Т.: tam) *с.*

**1.** Асылы билдәле; асыҡ, теүәл, конкрет. □ Точный, конкретный. *Аныҡ иҫәп. Аныҡ маҡсат.* ■ *Үҫеш нигеҙе — аныҡ эштәрҙә.* «Башҡортостан», 28 февраль 2010.

**2.** Асылы билдәле, аңлайышлы. □ Понятный, ясный, определённый. *Аныҡ һүҙ. Аныҡ фекер. Аныҡ мөнәсәбәт.*

**3.** Асыҡ, аңлайышлы телмәр, өн һ.б. □ Внятный, чёткий, разборчивый *(о речи, звуках и т.п.). Аныҡ телмәр. Аныҡ ҡултамға.* ■ *Кеше исемдәре бик борон замандарҙа тәүтормош дәүерендә аныҡ телмәр менән бер ваҡытта барлыҡҡа килгән тигән фекер йәшәй.* Т. Кусимова.

**АНЫҠ II** (Р.: истина; И.: truth; Т.: doğruluk) *и.*

Асыл, дөрөҫлөк. □ Истина, правда. *Анығын әйтеү. Анығын һөйләп биреү.*

**АНЫҠ III** (Р.: ясно; И.: clearly; Т.: açık) *р.*

Аңлайышлы, билдәле, асыҡ, конкрет рәүештә. □ Ясно, чётко, определённо, точно, конкретно. *Аныҡ күреү. Аныҡ хәтерләү. Аныҡ күҙ алдына килтереү. Аныҡ итеп һүрәтләү. Аныҡ итеп еткереү. Аныҡ әйтеп биреү. Бурыстарҙы аныҡ бүлеү.* ■ *Ауыл урынын аныҡ ҡына бер кем белмәй.* Б. Ҡаһарманова.

**АНЫҠЛАНЫУ (аныҡлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **аныҡлау**. *страд. от* **аныҡлау**.

**АНЫҠЛАНЫУСЫ** (Р.: определяемое; И.: determinant; Т.: belirtilen) *и. грам.*

Һөйләм йәки һүҙбәйләнештәге аныҡлаусы тарафынан асыҡлана, билдәләнә торған һүҙ. □ Определяемое. ■ *Аныҡлаусы тарафынан асыҡланып килгән һүҙ аныҡланыусы тип йөрөтөлә.* Ҡ. Әхмәров.

**АНЫҠЛАТЫУ (аныҡлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **аныҡлау**. *понуд. от* **аныҡлау.**

**АНЫҠЛАУ (аныҡла-)** (Р.: выяснить; И.: clarify; Т.: incelemek) *ҡ.*

**1.** *Ниҙең дә булһа* асылын тикшереп билдәләү. □ Выяснить. // Выяснение.

**2.** Асыҡлау. □ Уточнять, конкретизировать. // Уточнение, конкретизация. *Эштең күләмен аныҡлау.*

**АНЫҠЛАУСЫ** (Р.: определение; И.: attribute; Т.: belirten) *и. грам.*

Һөйләм һәм һүҙбәйләнештәге берәй һүҙҙе асыҡлап килгән эйәрсән киҫәк. □ Определение. *Һүҙбәйләнештә аныҡлаусы аныҡланыусының алдында тора.*

**АНЫҠЛАУСЫ ҺӨЙЛӘМ** (Р.: определительное предложение; И.: attributive clause; Т.: belirleyen cümle) *и. грам.*

Баш һөйләмдәге исемдә йәки аныҡлаусы вазифаһын үтәүсе «шундай», «шуның» мөнәсәбәт һүҙҙәрен асыҡлаған эйәрсән һөйләм. □ Определительное предложение.

**АНЫҠЛЫҠ (аныҡлығы)** (Р.: точность; И.: exactness; Т.: doğruluk) *и.*

**1.** Асыҡлыҡ, билдәлелек. □ Точность, определённость. *Һүҙҙең аныҡлығы.*

**2.** Асыҡлыҡ, аңлайышлылыҡ, теүәллек. □ Чёткость, ясность, отчётливость. *Фекер аныҡлығы. Аныҡлыҡ индереү.*

**АҢ I** [дөйөм төрки *аң* ‘һиҙгер, зирәк’] (Р.: сознание; И.: consciousness; Т.: bilinç) *и.*

**1.** Үҙ-үҙеңде, тирә-йүнде тойоу, ҡабул итеү һәләте; иҫ. □ Сознание. *Аңға килтереү. Аңды юғалтыу. Аңдан яҙыу. Аңында булыу.*

**2.** Кешенең ысынбарлыҡты төшөнөү, белеү, фекер итеү һәләте. □ Разум, ум. *Аң үҫеү. Аң инеү. Аң менән эш итеү. Аңды йыйыу.*

**3.** Кешеләр тарафынан йәмғиәт тормошон аңлап төшөнөү һәләте. □ Сознание, сознательность. *Аң уяныу. Аң йәшәйеш менән билдәләнә. Сәйәси аң.*

♦ **Ҡара аң** үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән, белем менән ағартылмаған аҡыл. □ Житейский ум.

**АҢ II** (Р.: зверь; И.: wild animal; Т.: canavar) *и. иҫк.*

**1.** Ҡырағай йәнлек; кейек. □ Зверь, хищник. *Аң аулау.*

**2.** Ау, һунар. □ Охота. *Аңға барыу. Аңға йөрөү.*

**АҢАНСА, аңанса булмай** *р. һөйл. ҡар.* **уғаса: уғаса булмай**.

**АҢАРСА** (Р.: до тех пор; И.: until; Т.: şu-raya dek) *р. диал.*

Уға тиклем. □ До тех пор. *Аңарса мин дә килеп етермен.*

**АҢАРСАМАЙ** (Р.: в тот момент; И.: in this time; Т.: şu an) *р. диал.*

Шул арала. □ В тот момент. *Аңарсамай ҡунаҡтары килеп тә төштө.*

**АҢ-БЕЛЕМ** (Р.: знания; И.: knowledge; Т.: bilim) *и. йыйн.*

Уҡыу-яҙыу, фән-мәғрифәт буйынса дөйөм мәғлүмәт. □ Знания, образование. ● *Аң-белем — мәңгелек ғилем.* Әйтем.

**АҢ БУЛЫУ (аң бул-)** (Р.: быть настороже; И.: be on the alert; Т.: uyanık olmak) *ҡ.*

*Нимәнәндер* йәки *кемдәндер* һаҡ булыу, уяу булыу. □ Быть настороже, начеку.

**АҢҒАНСА, аңғанса булмай** (Р.: тем временем; И.: meanwhile; Т.: bu arada) *р. һөйл.*

Уғаса, уғаса булмай. □ Тем временем. ■ *Аңғанса булмай сержант Полищук үҙенең ике һалдаты менән немец офицерын .. беҙҙең янға алып килеп еткерҙе.* С. Кулибай.

**АҢҒАРМАҪТАН** (Р.: неожиданно; И.: unexpectedly; Т.: ansızın) *р.*

**1.** Һис тә көтмәгәндә, уйламағанда; абайламаҫтан. □ Неожиданно. ■ *Башҡорт ҡапҡанына аңғармаҫтан килеп эләкмәҫ өсөн, ғәрәптәр алдарынан көслө хәрби төркөм йөрөтөр булып китте.* Р. Байымов. *[Ямғыр] аңғармаҫтан килеп сыҡҡан кеүек, ҡапыл ғына уҙып та китте. Ерҙең саңын да баҫманы.* З. Биишева.

**2.** Үҙең дә һиҙмәҫтән, яңылыш; абайламаҫтан. □ Нечаянно, невзначай. ■ *Арт ҡапҡанан сығып барышлай, [Гәрәй] аңғармаҫтан башын арҡыры ағаҫҡа бәреп алды.* Б. Бикбай.

**АҢҒАРТЫУ (аңғарт-)** (Р.: объяснить; И.: explain; Т.: anlatmak) *ҡ.*

**1.** *Кемдеңдер* аңына еткереү; төшөндөрөү. □ Объяснить, разъяснить. ■ *Артыҡ баҙнатһыҙ булдым шул, йәшерҙем серҙәремде. Тик гармун телендә уға аңғарттым һүҙҙәремде.* А. Игебаев. *Егет бик ҡайғырып илай-илай өйөнә ҡайтып китә. Ҡайтҡас, ҡатынына хәлде аңғартып бирә.* Әкиәттән.

**2.** *Берәй* эш-хәл тураһында иҫкәртеү, һиҙҙереү. □ Предупреждать. *Алдан аңғартыу.*

**АҢҒАРЫУ (аңғар-)** (Р.: понимать; И.: comprehend; Т.: anlamak) *ҡ.*

**1.** Эш-хәлдең, ваҡиғаның асылын аңлау; төшөнөү. □ Понимать. *Ни булғанын аңғарып ҡалыу.*

**2.** Абайлап алыу, һиҙеү. □ Догадываться. ■ *[Айрас] йоҡо аралаш ни булғанын да аңғарманы.* Ш. Насыров.

**АҢДЫУ (аңды-)** (Р.: следить; И.: track; Т.: izlemek) *ҡ.*

**1.** *Кемде* йәки *нимәнелер* йәшерен генә күҙәтеү; һағалау. □ Следить за *кем-чем*, выслеживать, стеречь, подстерегать *кого-что*. *Һунарҙа кейекте аңдыу. Аңдып тороу. Аңдып ултырыу.* ■ *Кис ҡорон [клубтан] ҡайтып барғанда, [Мөхлисәне] ҡулаҡтар урманда аңдып тороп үлтергән.* М. Тажи. *Һәүбән алтын өйрәкте аңдып күп йөрөгән.* «Аҡбуҙат». ● *Алыҫтағы дошмандан аңдып йөрөгән дуҫ яман.* Әйтем.

**2.** *диал.* Һаҡлау, ҡарап тороу. □ Приглядывать, охранять. *Баланы ҡырҡы тулғансы аңдыйҙар (йола буйынса).*

**АҢ-ЗИҺЕН** (Р.: ум; И.: mind; Т.: akıl) *и. йыйн.*

Кешенең аң, аҡыл һәләтлеге. □ Ум, разум. ■ *Ә кешегә аң-зиһен, тел бирелгән. Кеше, ер йөҙөндәге иң аңлы, иң аҡыллы тәбиғәт емеше булараҡ, тәбиғәт ҡанундарынан тайпылмау сараһын үҙе хәстәрләргә, үҙ зиһененә һалынған аҡылды файҙаланырға тейеш.* М. Бураҡаева.

**АҢҠАЙТЫУ (аңҡайт-)** (Р.: откинуть голову; И.: look upwards; Т.: yukarıya bakmak) *ҡ.*

**1.** Башты артҡа ташлап, ауыҙ асып өҫкә ҡарап ҡатыу. □ Откинуть голову, смотреть вверх.

**2.** Оҫта итеп алдау; һемәйтеү. □ Ловко обманывать, одурачить. ■ *Шунан, — тигән*

*һунарсы был батырға, — Шүрәлене нисек итеп аңкайтырға?* С. Кинйәкәй.

**АҢҠАЙЫУ (аңҡай-, аңҡая)** (Р.: откинуть голову; И.: open wide one's mouth; Т.: yukarıya bakmak) *к.*

**1.** Башты саңҡайтып, ауыҙ асып өҫкә ҡарау. □ Откинуть голову, смотреть вверх, разевать рот. ■ *[Балалар] бөтәһе лә аңкайып, кояшка сағылған күҙҙәрен кысып тирәк башына ҡараны.* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Ауыҙҙы асып, аңшайып шаҡ ҡатыу; аптырау. □ Удивиться, разинув рот. *Аңкайып ҡалыу. Аңкайып ҡатыу.*

**АҢҠАҠ (аңҡағы)** *и. диал. ҡар.* **аңҡау I.**

**АҢҠАУ I** [боронғо ҡыпсаҡ *аң + ҡағ*] (Р.: нёбо; И.: palate; Т.: damak) *и. анат.*

Ауыҙ эсенең өҫкө өлөшө; таңлай. □ Нёбо. *Алғы аңҡау. Артҡы аңҡау. Йомшаҡ аңҡау. Ҡаты аңҡау.*

**АҢҠАУ II** (Р.: глуповатый; И.: silly; Т.: saçma) *с.*

Әйткәнде аңламайыраҡ тора торған; аңра. □ Глуповатый, придурковатый. *Аңҡау кеше. Аңҡау булыу.*

**АҢҠАУ ГАРМОНИЯҺЫ** (Р.: нёбная гармония; И.: palatal harmony; Т.: sesli uyumu) *и. лингв.*

Тамыр һәм аффикстарҙағы һуҙынҡыларҙың рәт буйынса ярашыуы. □ Нёбная гармония.

**АҢҠАУЛАНЫУ (аңҡаулан-)** (Р.: глупеть; И.: grow stupid; Т.: salaklaşmak) *к.*

Аңрағa әйләнеү, иҫ-аҡыл томаланыу. □ Глупеть, становиться глупым. *Аңҡауланып ҡалыу.*

**АҢҠАУ ӨНДӘРЕ** (Р.: нёбный звук; И.: palatal sound; Т.: palatal sesler) *и. лингв.*

Аңҡау менән тел ҡатнашлығында яһалған өн. □ Нёбный звук.

**АҢҠЫ-МИҢКЕ** *р. диал.* **аңҡы-тиңке**.

**АҢҠЫ-ТИҢКЕ** (Р.: сам не свой; И.: be not oneself; Т.: şaşırmış) *р.*

**1.** Иҫ-аҡылды йыя алмаҫ хәлдә, аптыраған, ҡаңғырған хәлдә. □ Сам не свой, не в себе; обалдев. ■ *Аңҡы-тиңке бара бер кеше, газонға ла юлға ҡарамай.* К. Кинйәбулатова.

**2.** Болғанлап, тегеләй-былай сайҡалып. □ Качаясь, шатаясь. ■ *Аңҡы-тиңке атлаған ҡатындарҙы күрһәк, иман ҡалмағанмы, тибеҙ.* Т. Йосопов.

**АҢҠЫТЫУ (аңҡыт-)** (Р.: распространять запах; И.: be fragrant; Т.: kokmak) *к.*

Көслө итеп бөркөлдөрөү *(еҫте).* □ Издавать, распространять запах, благоухать. ■ *Иртәнсәкке иҫкән һалкынса ел сейә, муйыл сәскәләрен һөйә, уларҙың тәмле еҫен аңҡытып, морон эсен ҡытыклап үтә.* И. Көсәпҡол.

**АҢҠЫУ (аңҡы-)** (Р.: распространяться *(о запахе)*; И.: smell (of); Т.: koku gelmek) *к.*

**1.** Көслө булып бөркөлөү *(еҫкә ҡарата).* □ Распространяться *(о запахе)*, пахнуть, исходить. *Сәскәнән тәмле еҫ аңҡый. Тәмәке еҫе аңҡый.* ■ *Ағастарҙың ҡото — йәшел япраҡ, хуш еҫ аңҡый, һауа сафлана.* М. Ямалетдинов.

**2.** *күсм.* Ныҡ һиҙелеү, асыҡ күренеү. □ Сильно, ясно ощущаться, чувствоваться. ■ *Меҫкен башкорт ауылын килеп күрһәм, аңҡый хәсрәт, үлем, гүрстан.* Ш. Бабич.

**АҢҠЫШ I** *с. диал. ҡар.* **һоноҡ.**

**АҢҠЫШ II** *с. диал. ҡар.* **аңра.**

**АҢЛАЙЫШЛЫ I** (Р.: понятный; И.: understandable; Т.: açık) *с.*

**1.** Аңлашылып торған, аңлауға еңел, төшөнөрлөк. □ Понятный, ясный, простой, доступный. *Китап аңлайышлы тел менән яҙылған.*

**2.** Асыҡ, аныҡ. □ Внятный. *Аңлайышлы телмәр.*

**АҢЛАЙЫШЛЫ II** (Р.: понятно; И.: understandably; Т.: net) *р.*

Аңлауға еңел, төшөнөрлөк. □ Понятно, доступно. *Аңлайышлы итеп әйтеү.* ■ *Әңгәмәне сал сәсле фән докторы алып барҙы, ул күп илдәр гиҙгән мәғлүмәтле кеше ине, тапшырыуҙы эстәлекле, мауыктырғыс аңлайышлы итеп корҙо.* Х. Тапаҡов.

**АҢЛАЙЫШЛЫЛЫҠ** (Р.: ясность; И.: clarity; Т.: açıklık) *и.*

Хәл-тороштоң аңлашылып тороуы. □ Ясность, понятность.

**АҢЛАЙЫШҺЫҘ I** (Р.: непонятный; И.: unclear; Т.: anlayışsız) *с.*

Аңлап булмаҫлыҡ; аңлауға ауыр. □ Непонятный, неясный. *Аңлайышһыҙ телмәр. Аңлайышһыҙ һүҙ.*

**АҢЛАЙЫШҺЫҘ II** (Р.: непонятно; И.: incomprehensibly; Т.: belirsiz) *р.*

Аңлап булмаҫлыҡ; аңлауға ауыр. □ Непонятно, неясно. *Аңлайышһыҙ итеп һөйләү.*

**АҢЛАМАҪТАН** (Р.: не разобравшись; И.: without going into details; Т.: anlamadan) *р.*

Ниәт итмәгән, уйламаған ерҙән; аңғармаҫтан. □ Не разобравшись, не вникая. *Аңламаҫтан әйтеп һалыу.*

**АҢЛАТМА** (Р.: пояснение; И.: explanation; Т.: açıklama) *и.*

Эш-хәл, мәсьәлә йәки башҡа нәмәнең асылын төшөндөрөп, мәғәнәһен асып биргән һүҙ йәки яҙма. □ Пояснение, объяснение. // Объяснительное; толкование, комментарий. *Аңлатма биреү. Фәнни аңлатма. Аңлатма яҙыу.*

**АҢЛАТМАЛЫ** (Р.: пояснительный; И.: explanatory; Т.: açıklamalı) *с.*

Аңлатма бирелгән, аңлатмаһы булған. □ Пояснительный, толковый. *Аңлатмалы текст. Аңлатмалы һүҙлек.*

**АҢЛАТЫЛЫУ (аңлатыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **аңлатыу**. *страд. от* **аңлатыу**.

**АҢЛАТЫУ (аңлат-)** (Р.: объяснить; И.: interpret; Т.: anlatmak) *ҡ.*

**1.** *Ниҙең* дә булһа асылын, мәғәнәһен, сәбәбен асып биреү; төшөндөрөү. □ Объяснить, толковать. *Мәсьәләне аңлатыу. Һүҙҙе аңлатыу.* ■ *Айыуғолаҡ, ҡыҙ янына килеп, үҙенең хәлен һөйләп аңлатҡан.* Әкиәттән. ● *Аңһыҙға аңлатҡансы, аңлы эшен бөтөрөр.* Әйтем.

**2.** Уй-тойғоно, фекер-ниәтте белдереү. □ Пояснить, разъяснить, растолковать, выражать, передавать. ■ *Ҡайғыны ла, шатлыҡты ла кешеләр йыр менән аңлата.* Б. Бикбай. *Һөнәрсе, шуның менән һүҙ бөткәнен аңлатып, иҙәнгә ҡуйған көршәкте ҡулына ала.* З. Биишева.

**3.** *Ниндәйҙер* мәғәнә белдереү, төшөнсә биреү. □ Значить, означать, обозначать. *Ғәрәп телендә Хәсән — матур, Мәймүнә бәхетле тигәнде аңлата.*

**АҢЛАУ (аңла-)** (Р.: понимать; И.: understand; Т.: anlamak) *ҡ.*

**1.** *Нимәнеңдер* эстәлеген, мәғәнәһен тейешенсә ҡабул итеү; төшөнөү. □ Понимать, осмысливать, осознать, познать. *Бурысты аңлау. Дәресте аңлау. Дөрөҫ аңлау.* ■ *Бәхет бит ул — аңлап та, аңлатып та булмай торған төшөнсә. Уны тойорға ғына мөмкин.* Й. Ильясова. *[Юлия:] Ишбулды, туғанҡайым, бик дөрөҫ аңлайһың, бик дөрөҫ эшләйһең.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** *Кемдеңдер* уй-тойғоно, фекерҙе, ниәтте һиҙеүе; төшөнөүе. □ Понимать, уяснить. *Бербереңде аңлау. Кешене аңлау.* ■ *[Тимер:] Мин һеҙҙе аңлап етмәйем, Мария Николаевна.* Б. Бикбай. *Минең шул тулҡынды, йөрәгемде Мәрйәм генә аңлай, шуның өсөн мин уға ғына йырларға тейешмен.* Д. Юлтый.

**3.** Эш-хәлдең йәки башҡа нәмәнең айышына төшөү; төшөнөү. □ Разгадать, постигать, уловить. *Хатаны аңлау.* ■ *Егет эштең ниҙә икәнен ошо ерҙә генә аңлап алған.* Әкиәттән.

**4.** Икенсе бер телдә һөйләгәнде төшөнөү. □ Понимать *что*, разбираться *в чём*. *Инглизсә аңлау.*

**АҢЛАУСАН** (Р.: понятливый; И.: quick-witted; Т.: akıllı) *с.*

Эш-хәлдең йәки башҡа нәмәнең айышына тиҙ төшөнөүсән. □ Понятливый, сообразительный. *Аңлаусан бала. Аңлаусан булыу.*

**АҢЛАШЫЛМАУСЫЛЫҠ (аңлашылмаусылығы)** (Р.: недоразумение; И.: misunderstanding; Т.: yanlış anlama) *и.*

Яңылышлыҡ, бер-береңде аңлап етмәгәндән барлыҡҡа килгән хата. □ Недоразумение. *Аңлашылмаусылыҡ килеп тыуҙы.*

■ *Тарихи йырҙарҙа боронғо ырыу-ара ыҙғыш һәм аңлашылмаусылыҡ осрактары ла үҙенең поэтик сағылышын тапкан.* С. Галин.

**АҢЛАШЫЛЫУ (аңлашыл-)** (Р.: стать понятным; И.: become understandable; Т.: anlaşılmak) *к.*

Аңға барып етеү. □ Стать понятным. *Хәҙер бөтәһе лә аңлашыла. Үҙенән-үҙе аңлашыла.* ■ *Мәсьәлә аңлашылғандай булғас, Фәхри менән Байназар сығып китте.* Б. Бикбай.

**АҢЛАШЫУ (аңлаш-)** (Р.: понимать друг друга; И.: understand each other; Т.: anlaşmak) *к.*

**1.** Бер-береңдең уй-теләгенә төшөнөү. □ Понимать друг друга, взаимопонимание. ■ *Әйткәнде кабул итеүеңә рәхмәт, мөғаллим, — тине Оло инәйем. — Шулай башта ук аңлашып эш иткән якшы.* М. Кәрим. *[Әбей — егеткә:] Һин камыш araһынан сык та, кыҙҙың янына барып, мамык тунын бир. Ҡалған яғын үҙегеҙ аңлашырһығыҙ.* Әкиәттән.

**2.** Бер-береңдең әйткәнен, һөйләгәнен аңлау. □ Объясняться друг с другом, изъясняться. ■ *Баҙарҙары уның шаулап тора, тиҫтәләгән телдә аңлашып.* Р. Бикбаев.

**АҢЛЫ** (Р.: сознательный; И.: conscious; Т.: mantıklı) *с.*

**1.** Фекер итеү, уйлау һәләте булған. □ Сознательный, разумный. *Кеше — аңлы йән эйәһе.*

**2.** Аңлап, белеп эш итә алыусан. □ Смышлёный, осмысленный, толковый. *Аңлы малай. Аңлы караш.* ■ *Ул миңә карағанда укымышлы ла, аңлы ла кеше ине.* З. Биишева.

**3.** Алдынғы ҡараштарға нигеҙле. □ Сознательный, рациональный. *Аңлы тәртип. Эшкә аңлы мөнәсәбәт.* ■ *[Дауытов:] Әй һеҙ .. колхозсыларҙың аңлы өлөшөнә нығырак таянығыҙ.* Б. Бикбай.

**АҢРА I** [боронғо төрки *аңғыр ағ* ‘асыҡ ауыҙ’] (Р.: глупый; И.: stupid; Т.: aptal) *с.*

Тейешенсә уйлау, фекер итеү һәләтенән мәхрүм; аҡылға самалы; иҫәр. □ Глупый, тупой, бестолковый. *Аңра кеше.* ■ *[Әклимә:] Китсе, хәсрәт, аңра икәнһең, ә мин һине иң булдыклы официанткам тип йөрөгән булам...* Н. Иҙелбай.

**АҢРА II** (Р.: тупица; И.: fool; Т.: aptal) *и.*

Әрләгәндә әйтелә. □ Глупец, тупица. ■ *Аңра! Унды бөткән, буйы-һыны еткән, ә аҡыл ултырмаған!* З. Биишева.

**АҢРАҒОШ** (Р.: глупыш; И.: fulmar; Т.: kuzey fulmarı) *и. зоол.*

Ҡотоп диңгеҙҙәрҙә йәшәй торған ҡош. □ Глупыш (лат. *Fulmarus glacialis*).

**АҢРАҠОЛМАН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙарының аймаҡ исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-бурзянцев и кыпчаков.

**АҢРАЛАНЫУ (аңралан-)** (Р.: глупеть; И.: grow stupid; Т.: artallaşmak) *к.*

Аңраға әйләнеү, аңра булыу. □ Глупеть, тупеть, становиться глупым, тупым. *Ҡарт аңраланып бөткән.*

**АҢРА ШАЛҠАН** (Р.: кормовая репа; И.: turnip; Т.: şalgam) *и. бот.*

Малға ашата торған эре аҡ шалҡан. □ Кормовая репа (лат. *Brassica rapa*).

**АҢСЫ** (Р.: охотник; И.: hunter; Т.: avcı) *и. иҫк.*

Һунарсы, аусы. □ Охотник.

**АҢ-ТАҢ ҠАЛЫУ (аң-таң ҡал-)** (Р.: поражаться; И.: be surprised; Т.: şaşırmak) *к.*

Аптырау, шаҡ ҡатыу. □ Поражаться, изумляться. ■ *Зилский .. кобараһы осоп, колап китте. Халыҡ аң-таң булып ҡалды.* Ғ. Дәүләтшин.

**АҢ ТОМАЛАУ (аң томала-)** (Р.: затуманить сознание; И.: obscure; Т.: belirsiz etmek) *к.*

Аҡыл менән уйлап, аныҡ эш итә алмаҫлыҡ итеү. □ Затуманить сознание, мысль. ■ *Халыкты меҫкенләндереүгә, буйһондороуға йүнәлтелеү сәбәпле, иң тәүҙә халыктың аңын томалау, рухын һындырыу максатын-*

*да эскелеккә ылыктырыуға маташыу әҙһеҙ үтмәй.* Г. Ситдиҡова.

**АҢ(ДЫ)-ТОҢ(ДО) БЕЛЕҮ (аң-тоң бел-)** (Р.: разобраться в сути; И.: get into the essence; Т.: anlamak)

Төрлө эш-хәлдең асылын, айышын һиҙеү, төшөнөү. □ Разобраться в сути, в сущности, вникнуть в суть, в сущность *чего-л. Эштең аңын-тоңон белеү.* ■ *[Әхмәҙи] малайҙарҙы сәмләштерҙе. Аңды-тоңдо белмәгән малайҙар уның һайын дәртләнеп эшләне.* Ж. Кейекбаев.

**АҢҺАУ (аңһа-)** *к. диал. ҡар.* **аңдыу.**

**АҢҺЫҘ I** (Р.: бессознательный; И.: unconscious; Т.: bilinçsiz) *с.*

**1.** Аңлап, белеп эш итә алмаған, иҫһеҙ. □ Бессознательный, бесчувственный. *Аңһыҙ кеше. Аңһыҙ булыу.*

**2.** *һөйл.* Белемһеҙ, бер ни аңламаған. □ Несообразительный, непонятливый, бестолковый.

**3.** *күсм.* Алдынғы ҡарашҡа эйә булмаған. □ Несознательный, отсталый. *Халыҡтың аңһыҙ ҡатламы.* ■ *[Хасбулат:] Аңһыҙ башҡорт һалдаттарының тәүләп күҙен асҡан шул [Ш. Хоҙайбирҙин] инде.* З. Биишева.

**4.** Көтөлмәгән, ҡапыл килеп сыҡҡан. □ Бессознательный, невольный, безотчётный. *Аңһыҙ хәрәкәт. Аңһыҙ үлем.*

**АҢҺЫҘҘАН** (Р.: неожиданно; И.: unexpectedly; Т.: ansızın) *р.*

**1.** Уйламағанда, көтмәгәндә; аңғармаҫтан. □ Неожиданно, внезапно. ■ *Бер көндө йылҡы көтөп йөрөгәндә, аңһыҙҙан ике-өс һыбай [Аҡназарҙың] көтөүен килеп баҫа.* М. Буранғолов.

**2.** Алдан ниәт итмәгәндә, көтмәгәндә; яңылыш. □ Случайно, нечаянно, ненароком. *Аңһыҙҙан йығылыу.*

**АҢҺЫҘЛАНЫУ (аңһыҙлан-)** (Р.: быть непонятливым; И.: be slow-witted; Т.: aptallaşmak) *к.*

Аңһыҙға әйләнеү; аңраланыу. □ Быть непонятливым, несмышлёным. *Аңһыҙланып йөрөү.*

**АҢҺЫҘЛЫҠ (аңһыҙлығы)** (Р.: несознательность; И.: low consciousness; Т.: akılsızlık) *и.*

**1.** Аңлап, белеп эш итә алмағанлыҡ. □ Несознательность. *Аңһыҙлыҡ күрһәтеү.*

**2.** Фекерләү, уйлау һәләте булмағанлыҡ. □ Неосмысленность, неосознанность, несообразительность, непонятливость.

**3.** Алабарманлыҡ, һаҡһыҙлыҡ. □ Неосторожность, неосмотрительность. *Бәлә аңһыҙлыҡтан килеп сыҡҡан.*

**АҢҺЫУ (аңһы-)** (Р.: ослабевать; И.: weaken; Т.: zayıflatmak) *к.*

Арып хәлһеҙләнеү. □ Ослабевать, обессиливать, изнемогать. ■ *[Садрислам:] Мин былай арымтал да кеше түгел. Тегендә барғас бөгөлдөм. Төш ауыуға бөтөнләй аңһып бөтәм.* Ш. Бикҡол.

**АҢШАЙҒАН** *с. ҡар.* **аңыш I.**

**АҢШАЙТЫУ (аңшайт-)** (Р.: удивлять; И.: amaze; Т.: şaşırtmak) *к.*

Шаҡ ҡатырыу, аптыратыу. □ Удивлять, изумлять, ошеломлять.

**АҢШАЙЫУ (аңшай-, аңшая)** (Р.: стоять ошеломлённым; И.: be agape; Т.: şaşkına dönmek) *к.*

**1.** Ауыҙ асып ҡатып ҡалыу. □ Разевать рот, стоять ошеломлённым. *Аңшайып тороу.*

**2.** Ул-был эште тиҙ генә абайлай алмай, күрер-күрмәҫ булыу. □ Ротозейство. ■ *[Азамат — Ильяска:] Мин китәм. Аңшайма — тағы ла ҡарауыл ҡалаһың.* Ш. Бикҡол.

**АҢШАЙЫШЫУ (аңшайыш-)** *к. урт. ҡар.* **аңшайыу**. *взаимн. от* **аңшайыу**.

**АҢШАНЛАУ (аңшанла-)** (Р.: озираться; И.: look back; Т.: etrafına bakınmak) *к.*

Муйынды һуҙып, алан-йолан тирә-яҡҡа ҡарау. □ Озираться, оглядываться. *Аңшанлап ҡараныу.*

**АҢШЫРЫҠ** *с. диал. ҡар.* **аңра.**

**АҢЫР** (Р.: огарь; И.: ruddy shelduck; Т.: angut) *и. зоол.*

Аҡ төшкән ҡара ҡанатлы, һарғылт ерән төҫлө эре өйрәк; ҡыҙыл өйрәк, ҡара ерәнсәй. □ Огарь (лат. *Tadorna ferruginea*).

**АҢЫРЫУ (аңыр-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аңдыу.**

**АҢЫТ** (Р.: фламинго; И.: flamingo; Т.: flamıngo) *и. зоол.*

Тропик һәм субтропик илдәрҙә йәшәй торған оҙон муйынлы, оҙон аяҡлы, алһыу ҡауырһынлы һыу ҡошо. □ Фламинго (лат. *Phoenicopterus*).

**АҢЫШ I** (Р.: разиня; И.: scatterbrain; Т.: ahmak) *с.*

Тиҙ генә аңлай, төшөнә алмаусан. □ Разиня. *Аңыш кеше.*

**АҢЫШ II** (Р.: суть; И.: essence; Т.: öz) *и. диал.*

Айыш. □ Суть, сущность. *Аңышына төшөнөү.*

**АҢЫШЛЫ** (Р.: понятный; И.: understandable; Т.: açık) *с. диал.*

Аңлайышлы. □ Понятный.

**АҢЫШҺЫҘ** (Р.: непонятный; И.: incomprehensible; Т.: anlaşılmaz) *с. диал.*

**1.** Аңлайышһыҙ. □ Непонятный.

**2.** Аңра. □ Глупый. ■ *[Зиннәт:] Һукыр, һукыр мин! Аңышһыҙ, һукыр!* Ф. Иҫәнғолов.

**АҢЫШЫУ (аңыш-)** (Р.: понять; И.: comprehend; Т.: anlamak) *ҡ. диал.*

Аңғарыу. □ Понять. ■ *Ҡараһакал Антондан бөтә эште аңышкас, кәләм-кағыҙын алып, .. каяла ултырып хат яҙған.* «Ҡараһаҡал».

**АОРТА** [рус. < гр. *aorte*] (Р.: аорта; И.: aorta; Т.: aort) *и. анат.*

Тәндең үпкәнән башҡа бөтә ағзаларына артерия ҡанын тараҡкан, йөрәктең һул муҡсаһынан сыҡҡан иң йыуан артерия. □ Аорта.

**АПА I** [дөйөм төрки *апа*] *и. диал. ҡар.* **апай 2.**

**АПА II** *и. диал. ҡар.* **бабай 2.**

**АПА III** *и. диал. ҡар.* **апай 4.**

**АПАЙ** (Р.: сестра; И.: aunt; Т.: abla) *и.*

**1.** Йәшкә үҙеңдән оло булған бер туған ҡатын-ҡыҙ. □ Родная старшая сестра. *Оло апай. Кесе апай. Уртансы апай.*

**2.** Үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе булған ҡатын-ҡыҙ туған. □ Тётя (*младшая сестра отца или матери*).

**3.** Үҙеңдән оло, ата-әсәңдән кесе булған һәр ҡатын-ҡыҙ. □ Тётя (*вежливое обращение к женщине, старшей по возрасту*). ■ *Киң урындык ситендә илле йәштәр самаһындағы бер апай йөн иләп ултыра ине.* Һ. Дәүләтшина.

**4.** Уҡытыусы, тәрбиәсе ҡатын-ҡыҙға балаларҙың ололап өндәшеү һүҙе. □ Вежливое обращение детей к учительнице, воспитательнице.

**5.** Үгәй әсәй. □ Мачеха.

**6.** *миф.* Ҡояштың эпитеты. ■ *Ҡояш апай, кил, кил, Һалкын ағай, кит, кит.* Халыҡ ижадынан.

**АПАЙЫМ** (Р.: родная младшая сестра или родной младший брат; И.: aunt; Т.: ablam) *и. диал.*

Бәләкәй туғандарға мөрәжәғәт һүҙе. □ Форма обращения к младшим братьям и сёстрам.

**АПАЙЫУ (апай-, апая)** (Р.: разевать рот; И.: open wide one's mouth; Т.: ağzını açmak) *ҡ. диал.*

Аңшайыу, һемәйеү. □ Разевать рот. *Апайып тороп ҡалыу.*

**АП-АҠ** (Р.: белоснежный; И.: snow-white; Т.: çok beyaz) *с. артыкл. дәр.*

Бик ныҡ аҡ. □ Белоснежный. ■ *Ап-аҡ кағыҙ битеме ни, ер өҫтөндә ап-ак ҡар.* К. Шафиҡова. *Йылан күрһәң, алдына сығып, ап-як яулык йә ашъяулык ябырға, ти.* Халыҡ ижадынан.

**АПАҠАЙ** (Р.: сестрица; И.: auntie; Т.: ablacım) *и. өндш.*

Апайға иркәләп өндәшеү һүҙе. □ Сестрица, тётушка.

**АПАЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ, үҫәргән ырыуҙарына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир племён кыпчак, усерган.

**АПАЛЫ-ҺЕҢЛЕЛЕ** (Р.: сёстры; И.: elder and junior sisters; Т.: kardeşler) *р.*

Апай менән һеңле бергәләп. □ Сёстры. *Апалы-һеңлеле килгәндәр.*

**АПАЛЫ-ЭНЕЛЕ** (Р.: сестра с младшим братом; И.: sister with a junior brother; Т.: kardeşlerce) *р. диал.*

Апай менән ҡусты бергәләп. □ Сестра с младшим братом. *Апалы-энеле укып йөрөйҙәр.*

**АПАНДЫ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир.

**АПАНЛАУ (апанла-)** (Р.: чавкать; И.: champ; Т.: şapırdatarak yemek) *к. диал.*

Һап-һоп итеп шапылдатыу (*ауыҙҙы*). □ Чавкать. *Апанлап ашау.*

**АПАРА ҠОРҺАҠ** (Р.: обжора; И.: issatiable; Т.: obur) *и. мыҫк.*

Ҙур ҡорһаҡ. □ Обжора.

**АПАРТАМЕНТ** [рус. < фр. *apartement* ‘фатир’] (Р.: апартаменты; И.: large and sumptuous set of rooms; Т.: daire) *и.*

Бай йыһазлы ҙур өй, бүлмә. □ Апартаменты.

**АПАРУҠ** (Р.: довольно хорошо; И.: rather well; Т.: oldukça iyi) *р. һөйл.*

Яҡшы ғына, ярайһы ғына, һәйбәт кенә. □ Довольно хорошо. *Мандолинала апарук уйнау.* ■ *[Ирғәле] ай самаһы үтеүгә, бер нисә көйҙө апарук уйнай башланы.* Н. Мусин.

**АП-АРЫУ** (Р.: довольно хороший; И.: decent; Т.: çok iyi) *с. артык. дәр.*

Арыу ғына, яҡшы ғына. □ Довольно хороший, приличный, сносный, недурной. *Ап-арыу кеше. Ап-арыу эшләү. Ҡымыҙҙа ап-арыу уйнау.*

**АПАРЫУ (апар-)** (Р.: относить; И.: take to; Т.: götürmek) *к. кыҫк. ф. һөйл.*

Алып барыу. □ Относить, отвозить. *Киноға апарыу. Апарып биреү. Апарып ҡуйыу. Апарып сығарыу. Апарып ташлау. Апарып һалыу.* ■ *Бар, булмаһа, атайыңа айран апарып кил.* К. Мәргән.

**АПАТИЯ** [рус. < лат. *apatheia*] (Р.: апатия; И.: apathy; Т.: apati) *и. мед.*

Теләк, маҡсатһыҙ, уй-тойғоһоҙ күңел бушлығы. □ Апатия. *Апатия хәле.*

**АПАУ** (Р.: выражает жалость; И.: oh my; Т.: oh) *ымл.*

Балаларҙы иркәләп йәлләгәндә әйтелә; әпәү. □ *межд.* Выражает жалость. *Апау, ни булған үҙекәйгенәһенә.*

**АПАУЛАУ (апаула-)** *к. диал. кар.* **әпәүләү.**

**АПЕЛЛЯЦИЯ** [рус. < лат. *appellatio* ‘мөрәжәғәт’] (Р.: апелляция; И.: appeal; Т.: başvuru) *и.*

**1.** *юр.* Түбәндәге суд органының ҡарарын яңынан ҡарауҙы һорап юғары органға яҙылған мөрәжәғәт. □ Апелляция. *Апелляция биреү. Апелляция суды.*

**2.** Ярҙам, кәңәш һорап яһалған мөрәжәғәт. □ Апелляция. *Апелляция яһау.*

**3.** Экзамен осорондағы апелляция *(яңынан ҡарау комиссияһы).* □ Апелляция.

**АПЕЛЬСИН** [рус. < голл. *appelsien* ‘ҡытай алмаһы’] (Р.: апельсин; И.: orange; Т.: portakal) *и. кар.* **әфлисун.**

**АПИТЕРАПИЯ** [рус. < лат. *apitherapia*] (Р.: апитерапия; И.: apitherapy; Т.: melissotherapy) *и. мед.*

Бал ҡорто һәм уның препараттары менән дауалау. □ Апитерапия. *Апитерапия менән шөғөлләнеү. Апитерапия үҙәге. «Башкортостан умартасылык һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге» дәүләт учреждениеһы.*

**АПҠАЙТЫУ (апҡайт-)** (Р.: приносить; И.: bring; Т.: götürmek) *к. кыҫк. ф. һөйл.*

Алып ҡайтыу. □ Приносить, привозить. *Бесән апкайтыу. Ҡунак апкайтыу.* ■ *[Егет:] Мин һиңә .. хан кыҙҙары ғына тағып йөрөй торған бүләк апкайттым.* Й. Солтанов.

**АПҠАЛЫУ (апҡал-)** (Р.: оставлять у себя; И.: keep; Т.: vermemek) *к. кыҫк. ф. һөйл.*

Алып ҡалыу. □ Оставлять у себя, не отдавать чего. *Айырып апҡалыу. Ебәрмәй апҡалыу.*

**АПҠАСЫУ (апҡас-)** (Р.: увести; И.: kidnap; Т.: götürmek) *к. кыçк. ф. һөйл.*

**1.** Алып ҡасыу. □ Увести, похитить. *Бүректе апҡасыу.*

**2.** Баш бирмәй сабыу *(атҡа ҡарата).* Понести *кого*, ускакав *(о лошади). Ат апҡасты.*

**АПЛОМБ** [рус. < фр. *aplomb*] *и. ҡар.* **амбиция.**

**АПОГЕЙ** [рус. < гр.] (Р.: апогей; И.: apogee; Т.: zirve) *и. астр.*

**1.** Ай йәки янһалма юлдаш орбиталарының Ер үҙәгенән иң алыҫ нөктәһе. □ Апогей.

**3.** *Нимәнеңдер* үҫеүендә иң юғары нөктә. □ Апогей.

**АПОКАЛИПСИС** [рус. < гр. *apokalypsis*] (Р.: апокалипсис; И.: Apocalypse; Т.: kiyamet) *и. дини.*

Христиандарҙың ахрызаман булаимеш тип раҫлаусы дини китабы. □ Апокалипсис.

**АПОСТОЛ** [рус. < гр. *apostolos*] (Р.: апостол; И.: apostle; Т.: havari) *и. дини.*

**1.** Инжил китабында Христостың үҙ тәғлимәтен таратыу өсөн ебәргән ун ике шәкертенең береһе. □ Апостол.

**2.** Апостолдар тураһындағы сиркәү китабы. □ Апостол.

**3.** *күсм.* Үҙен берәй идеяны таратыуға бағышлаған кеше. □ Апостол.

**АПОСТРОФ** [рус. < фр. *apostrophe* < греч. *apostrophos*] (Р.: апостроф; И.: apostrophe; Т.: apostrof) *и. лингв.*

Хәреф өҫтөнә ҡуйыла торған өтөргә оҡшаш билдә (’). □ Апостроф.

**АПОФЕОЗ** [рус. < гр. *apotheum* ‘аллалаштырыу’] (Р.: апофеоз; И.: apotheosis; Т.: ilahlaştırma) *и.*

**1.** Боронғо Грецияла һәм Римда *ниндәй ҙә булһа* геройҙы аллалаштырыу, илаһилаштырыу йолаһы. □ Апофеоз.

**2.** *Берәй* кешене йәки ваҡиғаны маҡтау. □ Апофеоз.

**3.** *театр.* Ҡайһы бер спектаклдең һуңғы тантаналы картинаһы. □ Апофеоз.

**АППАҒЫМ** (Р.: светик мой; И.: dear; Т.: canım) *өндш.*

Иркәләп өндәшеү һүҙе. □ *ласк.* Милый мой, светик мой. ● *Ҡарға ла балаһын «аппағым» тиер.* Әйтем.

**АППАРАТ** [рус. < лат. *apparatus*] (Р.: аппарат; И.: apparatus; Т.: cihaz) *и.*

**1.** *тех.* Билдәле бер эш башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән ҡорамал, прибор. □ Аппарат. *Дезинфекция аппараты. Рентген аппараты. Ишетеү аппараты. Һауыу аппараты.*

**2.** *физиол.* Организмдың бөтөн бер функция башҡарған ағзалары. □ Аппарат. *Тауыш аппараты. Тын алыу аппараты. Вестибуляр аппарат.*

**3.** Хужалыҡтың, эштең берәй тармағын хеҙмәтләндергән ойошмалар. □ Аппарат. *Дәүләт аппараты. Сауҙа аппараты.*

**АППАРАТУРА** [рус.] (Р.: аппаратура; И.: equipment; Т.: cihaz) *и. йыйн.*

Билдәле бер эште башҡарыу өсөн хеҙмәт иткән аппараттар, ҡорамалдар. □ Аппаратура. *Кино төшөрөү аппаратураһы. Лаборатория аппаратураһы.*

**АППЕНДИКС** [рус. < лат. *appendix* ‘өҫтәлмәлек’] (Р.: аппендикс; И.: appendix; Т.: apandis) *и. анат.*

**1.** Һуҡыр эсәктең селәүсен һымаҡ үсентеһе. □ Аппендикс.

**2.** *ҡар.* **ҡушымта**.

**АППЕНДИЦИТ** [рус. < лат. *appendicitis*] (Р.: аппендицит; И.: appendicitis; Т.: apandisit) *и. мед.*

Һуҡыр эсәк үҫентеһенең шешеүе. □ Аппендицит. *Киҫкен аппендицит. Хроник аппендицит.* ■ *Аппендициттан, операция яһатып, һуҡыр эсәк үҫентеһен алып ташлатып ҡына ҡотолорға мөмкин.* В. Ғүмәров.

**АППЕТИТ** [рус. < лат. *appetitius* ‘теләк’] (Р.: аппетит; И.: appetite; Т.: iştah) *и.*

**1.** Ашау теләге, ашҡа булған барым. □ Аппетит. *Аппетит артыу. Аппетит асылыу. Аппетит менән ашау. Аппетит юғалыу.*

**2.** *күсм.* Нәфсе, талым. □ Страсть, вожделение. *Аҡсаға аппетит тыйыу.*

**АППЛИКАЦИЯ** [рус. < лат. *applicatio*] (Р.: аппликация; И.: appliqué; Т.: aplike) *и.*

**1.** Төҫлө ҡағыҙ, туҡыма киҫәктәрен йәбештереп йәки тегеп һүрәт яһау ысулы. □ Аппликация. *Аппликация менән шөғөлләнеү.*

**2.** Шул ысул менән яһалған биҙәк, һүрәт һ.б. □ Аппликация. *Аппликация күргәҙмәһе.*

**АПРЕЛЬ** [рус. < лат. Aprilis] (Р.: апрель; И.: April; Т.: Nisan) *и. кар.* **алағарай**. *Апрель аҙағы. Апрель башы.* ■ *Апрель артык йылы булһа, май һалкын, елле-ямғырлы булыр.* Һынамыш. *Апрелдең алтыһында аяҙ булһа, йәй ҡоро килер, болотло булһа, ашлыҡ уңыр.* Һынамыш.

**АПРИОРИ** [рус. < лат. *a priori* ‘алдағынан’] (Р.: априори; И.: a priori; Т.: a priori) *р. фәлс. лог.*

Тәжрибәгә нигеҙләнмәйенсә фекер йөрөтөү. □ Априори.

**АПСАЙЫУ (апсай-, апсая)** (Р.: выпрямиться; И.: stand at attention; Т.: doğrulmak) *ҡ.*

Үрә баҫыу, һын турайтыу. □ Выпрямиться, вытянуться, стоять навытяжку. *Апсая баҫыу.* ■ *[Күсмәҫ хан:] Мин бер болан осраткайным, атмаҡсы булып, йәйәмде ҡулға алһам, болан апсая баҫты ла торҙо, имсәктәренән һөтө эйеп китте.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**АПСЫҒЫУ (апсыҡ-)** (Р.: выводить; И.: take out; Т.: götürmek) *ҡ. кыҫк. ф. һөйл.*

Алып сығыу. □ Выводить, вытащить. *Баланы апсығыу. Өйҙән апсығыу. Һыуҙан апсығыу. Ярҙан апсығыу.* ■ *Аһылбай, бар, атты апсыҡ, халыҡ күрһен.* З. Биишева.

**АПТАЛ** (Р.: куча земли; И.: pile of soil; Т.: kazılmış toprak) *и. диал.*

Соҡор ҡаҙғанда сыҡҡан тупраҡ өйөмө. □ Куча земли, выкопанная при рытье.

**АПТЕКА** [рус. < нем. *apotheke* < гр. *apotheke* ‘келәт’] *и. кар.* **дарыухана**.

**АПТЫРАҠ** (Р.: не знаю, что делать, прямо беда!; И.: it’s a bad job!; Т.: hayret bir şey!) *инш. һөйл.*

Нисек итергә, ни эшләргә белмәй аптырағанда ҡулланылған һүҙ. □ Ввод. сл., употребляется для выражения недоумения, досады и т.д. Не знаю, что делать, прямо беда! ■ *[Бабай Муллагилдегә:] Саптарҙы әллә яндырғанһың инде, мандымай. Аптыраҡ!* Ә. Вахитов.

**АПТЫРАНДЫРЫУ (аптырандыр-)** (Р.: озадачивать; И.: puzzle; Т.: şaşırtmak) *ҡ.*

Аптырашҡа ҡалдырыу, аптыратыу. □ Озадачивать, приводить в недоумение, замешательство.

**АПТЫРАНЫУ (аптыран-)** (Р.: быть в растерянности; И.: feel ill at ease; Т.: şaşırmak) *ҡ.*

*Ниҙеңдер* айышына, мәғәнәһенә, тәртибенә төшөнә алмай, ни хәл итергә белмәй уйға ҡалыу. □ Чувствовать себя в затруднительном положении, не знать, что делать. *Аптыранып ҡарап тороу. Аптыранып ултырыу.*

**АПТЫРАТЫУ (аптырат-)** (Р.: удивлять; И.: amaze; Т.: şaşırtmak) *ҡ.*

**1.** Ғәжәпкә ҡалдырыу. □ Удивлять, поражать. *Ҡарттың ниндәйҙер соҡор ҡаҙыуы малайҙарҙы аптыратты.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Сараһыҙ хәлгә ҡуйып, уйға ҡалдырыу. □ Вызывать растерянность, досаду, причинять неприятности, приводить в замешательство. *Өйҙә етешһеҙлек аптырата.* ■ *Аптыратҡан донъя бит был Ғабдрахман мулланы.* Ш. Бабич.

**3.** Йәнгә тейеү; йонсотоу, йөҙәтеү. □ Надоедать, докучать, досаждать *кому*, мучить *кого*. *Аптыратып бөтөү. Мыжып аптыратыу. Һорау биреп аптыратыу.*

**АПТЫРАУ (аптыра-)** [көнсығыш төрки *аптыр-ға* ‘ашығыу’] (Р.: удивляться; И.: be surprised; Т.: şaşırmak) *ҡ.*

**1.** *Ниҙелер* тейешленән йәки ғәҙәттәгенән ят күреү; ғәжәпләнеү. □ Удивляться, поражаться. *Аптырап китеү. Аптырап тороу.* ■ *Был ниндәй әкәмәт икән, тип аптырап ҡарап торам.* Т. Йәнәби. *Бер ниндәй ҡаршылыҡ күрһәтмәй, аптырап торған*

*Алтынбайҙың ҡул-аяғын сырмап, санаға һалдылар*. З. Ураҡсин.

**2.** Сара тапмай, ни хәл итергә лә белмәй уйға ҡалыу. □ Находиться, быть в безвыходном или затруднительном положении. *Аптырап ҡалыу*. ■ *Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға, тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәгән бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп алды, ти*. «Урал батыр». ● *Аптыраған ҡатын абышкаһын атай тигән*. Әйтем. *Аптыраған өйрәк арты менән күлгә сумған*. Мәҡәл.

**3.** *Ниндәйҙер* ҡыйын хәлдән интегеү; яфаланыу. □ Мучиться. *Йоҡлай алмай аптырау*.

**4.** *Нимәгәлер* мохтажлыҡ кисереү, мохтаж булыу. □ Нуждаться. *Бесәнгә аптырау. Һыуһыҙ аптырайбыҙ*.

**АПТЫРАШ** (Р.: растерянность; И.: embarrassment; Т.: şaşkınlık) *и*.

Ни эшләргә белмәй сараһыҙ булып, уйға ҡалған хәл. □ Растерянность, замешательство *(общее)*. *Аптырашҡа ҡалдырыу. Аптырашта ҡалыу*. ■ *Мең төрлө уй, ҡатты баш, ни эшләргә лә аптыраш*. Ш. Бабич. ● *Аптыраш менән йөҙәш икеһе кергән өйҙәш*. Мәҡәл.

**АПТЫРАШЫУ (аптыраш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **аптырау**. *взаимн. от* **аптырау**.

**АПҺЫН** (Р.: жёны родных братьев; И.: relatives' wives; Т.: kardeşlerin eşleri) *и*.

**1.** Ағай-эненең ҡатындары (*бер-береһенә ҡарата*); килендәш. □ Жёны родных братьев *(по отношению к друг другу)*, сношенницы. ■ *Бер атанан тыуған балаларҙың бисәләре бер-береһенә апһын була*. Ж. Кейекбаев. ● *Апһын ағарып алдыма сыҡмаһын, ҡарайып артымда ҡалмаһын* .. Әйтем. *Апһының бар ерҙә, көндәшем юҡ, тимә*. Әйтем.

**2.** *диал. ҡар.* **көндәш**. ● *Апһынды апһын күрә алмай*. Әйтем.

**АПҺЫН-ӘЖЕ** *и. йыйн. ҡар.* **апһын-әзе.**

**АПҺЫН-ӘЗЕ** (Р.: женщины (одной семьи); И.: females of one family; Т.: hanımlar) *и. йыйн.*

Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ *(апһындар, ҡәйенһеңлеләр һ.б.)*. □ Женщины *(одной семьи)*. ● *Ағай-эне татыу булһа, ат күп булыр, апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр*. Әйтем.

**АПЫЙ** (Р.: тётя; И.: sister; Т.: abla) *и. өндәш. диал.*

Апайға өндәшкәндә әйтелә. □ Тётя, сестра.

**АПЫН-ТОПОН ИТЕҮ (апын-топон ит-)** *ҡ. ҡар.* **әпен-төпөн итеү**.

**АПЫРА** (Р.: болтушка из ржаной муки; И.: mash; Т.: hamur) *и*.

Арыш оно буталған мал аҙығы. □ Болтушка из ржаной муки. ■ *Малсыларға биҙрә менән апыра ташып яфаланаһы юҡ*. Ә. Гәрәев.

**АР I** [рус. < фр. *are* < лат. *area* ‘майҙан’] (Р.: ар; И.: ar; Т.: ar) *и*.

Йөҙ квадрат метрға тигеҙ булған ер үлсәү берәмеге; гектарҙың йөҙҙән бер өлөшө. □ Ар. *Бер ар ер*.

**АР II** (Р.: удмурт; И.: Udmurt; Т.: Udmurt) *и. иҫк.*

Удмурт халҡының башҡорттарҙа йөрөгән әүәлге исеме. □ Удмурт. *Ар ҡатыны. Ар халҡы*.

**АР III** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Йәнәй ырыуының араһы. □ Родовое подразделение енейцев.

**АР IV** [ғәр. عر] (Р.: позор; И.: shame; Т.: ayıp) *и. иҫк.*

Оятсылыҡ, намыҫ. □ Позор, стыд, срам. *Ярлыға ар килешмәҫ*.

**АРА I** [дөйөм төрки *ара*] (Р.: промежуток; И.: interval; Т.: ara) *и*.

**1.** Ике нәмәнең уртаһы, ике нәмәне айырған урын. □ Промежуток. *Бармаҡ араһы. Мөгөҙ араһы. Рәт араһы. Тау араһы*. ■ *Гөлнур шулай һөйләнеп ултыра торғас, ике бүлмә араһындағы таҡта стенаға йоҙроғо менән бер нисә тапҡыр һуғып ҡуйҙы*. М. Тажи.

**2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ. □ Расстояние. *Алыҫ ара. Бер сак-*

*рым ара. Якын ара.* ■ *Был заманда һуғыш өсөн ара юк ул, юк ул ара!* Н. Нәжми. *Ни бары 8 сәғәтлек юл Өфө менән Силәбе араһы.* Р. Шәкүр.

**3.** Күпмелер дауам иткән ваҡыт өҙөгө. □ Промежуток времени. *Бер арала. Буш арала. Был арала. Теге арала. Ҡайһы арала.* ■ *Шулай һөйләшеп торған арала малайҙар бишәү булып китте.* Ғ. Байбурин.

**4.** Йәштәге айырмалыҡ. □ Разница в возрасте. *Арабыҙ ике генә йәш.*

**5.** *күсм.* Кешеләрҙе бер-берҙеһенә бәйләгән мөнәсәбәт. □ Отношения, взаимоотношения. *Ара төҙәлеү. Ара һыуыныу. Ара яҡшырыу. Арабыҙ боҙолдо.*

**6.** *күсм.* Ике кеше араһында ара. □ Дистанция, расстояние. Уҡытыусы менән уҡыусы араһында ара булырға тейеш.

**7.** *спорт.* □ Дистанция. *Ун метрлыҡ араға йүгереү.*

**8.** *Ниҙеңдер* уртаһы, эсе, *кемдәрҙеңдер* төркөмө. □ Среда *чего-н.*, окружение, круг. *Ашлыҡ араһы. Урман араһынан. Үлән араһы.* ■ *Ҡамышлыҡ араһынан ике яҡлап аҡҡоштар күлдә буйлап йөҙөп китте.* Ш. Бабич. *Изге күңеллеләр, мәрхәмәтле йәндәр күп арабыҙҙа. Ана шуларҙың тәме, шуларҙың йәме менән йәшәйбеҙ бөгөн.* С. Әбүзәр.

**6.** 3-сө зат эйл., сығн. һәм у.-в. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **араһынан, араһында**). □ Из, среди, между *(в функции послелога с осн. п.).*

♦ **Ер менән күк араһы** ныҡ айырыла, яҡынлыҡ йәки оҡшашлыҡ юҡ, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Как между небом и землёй. **Ни [ике] арала** нисек улай тиҙ. □ Сию минуту. **Тәртә араһына инеү** тәртипкә инеү, тәртипкә килеү. □ Становиться дисциплинированным. **Һүҙ ара һүҙ сығып** һөйләшә-һөйләшә килеп. □ Слово за слово. **Аранан һыу үткеһеҙ** «сикһеҙ татыу» тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Очень дружные, живут в согласии. *Һәйбәт торалар, араларынан һыу үткеһеҙ.*

● *Алабута аш булмаç, ара бутаған иш булмаç.* Әйтем. *Әҙәм менән әҙәм араһы — ер менән күк араһы.* Әйтем.

**АРА II** (Р.: родовое подразделение; И.: tribal subdivision; Т.: soy) *и.*

Ырыу эсенә ингән ваҒыраҡ төркөм. □ Родовое подразделение. ■ *Ҡыпсаҡ араһы үҙен ауылдың аҫаба башҡорто һанай. Улар ишле лә, берҙәм дә халыҡ.* Б. Бикбай. *Әлеге көндә .. йәшәүселәр был китаптан үҙҙәренең затырыуын, уның атамаһы тарихын .. ғына түгел, борондан ҡулланылып килгән байтаҡ ырыу һәм ара тамғаларын да асыҡлай ала.* М. Нәҙерғолов.

**АРА III** (Р.: между; И.: inter; Т.: arası)

**1.** Ҡушма нәмәнең бәйләнешен белдергән ҡушма сифаттың икенсе өлөшө булып килә. □ Вторая часть сложного прилагательного со знач. «меж», «между». *Ҡала-ара элемтә. Милләт-ара бәйләнеш. Парламент-ара кәңәшмә. Төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференция. Халыҡ-ара сәйәсәт.*

**2.** Ҡушма заттың ҡатнашлығын белдергән ҡушма рәүештең икенсе өлөшө булып килә. □ Вторая часть сложного наречия со знач. «меж», «между». *Икәү-ара һөйләшәү. Үҙ-ара хәл итеү.*

**АРАҒА ИНЕҮ (араға ин-)** (Р.: вмешиваться; И.: meddle; Т.: müdahale) *ҡ.*

Кешенең эшенә, тормошона, мөнәсәбәтенә ҡыҫылыу. □ Вмешиваться в *чьи-л.* взаимоотношения.

**АРАҒА ТӨШӨҮ (араға төш-)** (Р.: вмешаться; И.: meddle; Т.: müdahale etmek) *ҡ.*

Вәғәҙәләшкән кешеләрҙең эшенә ҡыҫылып болартыу. □ Вмешаться в *чьи-л.* отношения.

**АРАҒАС** (Р.: пришва; И.: front roller; Т.: dokuma tezgahi önündeki silindir) *и. диал.*

Борғоса. □ Пришва (*в ткачестве*)

**АРАЗ** [ғәр. عارضة ‘ҡаршылыҡ’] (Р.: ссора; И.: quarrel; Т.: kavga) *и. иҫк.*

Талаш-тартыш, ыҙғыш. □ Ссора. *Араз ҡуптарыу.*

**АРАЗЛАШЫУ (аразлаш-)** (Р.: ссориться; И.: quarrel; Т.: kavga etmek) *к. иҫк.*

Талашыу, ыҙғышыу. □ Ссориться. *[Ҡыҙ — батшаға:] Беҙ бер ваҡыт боҙолошоп, аразлашып китербеҙ. Шул ваҡыт мин .. иң һөйгән, күңелем теләгән нәмәне алып сығып китермен.* Әкиәттән.

**АРАЙ** (Р.: пойма; И.: flood plain; Т.: taşkın yatağı) *и.*

Һыу баҫа торған болон. □ Пойма. ■ *Ташлы-ташлы Уралымдың аҡланы, арайҙары. Таштан-ташҡа һикерешә Аҡҡайын малайҙары.* М. Кәримов.

**АРАЙЫШ** [*фарс.* ارایش] (Р.: украшение; И.: decoration; Т.: bezek) *и. иҫк.*

Биҙәк, зиннәт. □ Украшение.

**АРАҠЫ** [ғәр. عرق 'тир, тирләү'] (Р.: водка; И.: vodka; Т.: votka) *и.*

Спиртлы иҫерткес эсемлек. □ Водка. *Аҡ араҡы. Араҡы заводы. Араҡы шешәһе. Араҡы эсеү.* ■ *Егор Николаевич рюмкаһындағы араҡыны ҙур ләззәт менән һурып-һурып эсте.* З. Ураҡсин. *Араҡының аҡҡан ере тар булһа ла, ташыуы киң — һис берегеҙ тапмаҫ кисеү.* М. Ямалетдинов. ● *Көнбағыш эш ҡалдыра, борсаҡ ауыҙ талдыра, араҡы тун һалдыра.* Әйтем.

**АРА ҠЫҘ** (Р.: посредница; И.: mediator; Т.: aracı) *и. диал.*

Егет ҡыҙҙы ҡасырып алғанда аралашлыҡ ролен үтәгән ҡатын-ҡыҙ. □ Женщина, играющая роль посредницы при выходе девушки замуж тайком.

**АРАЛ** (Р.: небольшой остров; И.: small island; Т.: adacık) *и.*

**1.** Йылға уртаһында ҡалған ҡоро ер; утрау. □ Небольшой остров *(на реке)*. *Ҡаҙҙар аралда ята.*

**2.** *диал.* Ике йылға башын айырған аралыҡ. □ Междуречье.

**3.** *миф.* Һыу эйәһе йәшәгән урын. □ Место обитания духа воды. *Аралда һыу инәһе йәшәй, тиҙәр.*

**АРАЛАНЫУ (аралан-)** (Р.: отделиться; И.: drop (behind); Т.: aralanmak) *к.*

**1.** *төш. кар.* **аралау 1**. *страд. от* **аралау**.

**2.** Бер төркөмдән бүленеп сығыу; айырылыу. □ Отделиться, отбиваться. *Ҡолон өйөрҙән араланды. Туптан араланған ҡош.* ● *Араланған ҡуйҙы бүре алыр.* Мәҡәл.

**3.** Ауыр хәлдән ҡотолоу. □ Освобождаться. *Ҡоллоҡтан араланыу.*

**4.** *Берәй нәмәнән* йәки эш-хәлдән арыныу. □ Выпутываться, выкручиваться.

**АРАЛАУ (арала-)** (Р.: рассаживать; И.: seat; Т.: aralamak) *к.*

**1.** Йыш торған *(йәки ултырған)* нәмәләрҙең араһын киңәйтеү; аралы итеү. □ Рассаживать. *Ағасты аралап ултыртыу.*

**2.** Ҡуйы сәселгән нәмәне һирәкләү. □ Прореживать. *Сөгөлдөрҙө аралау хәҙергә ҡул менән эшләнә.* Й. Гәрәй.

**3.** *Нимәнеңдер* асыҡ еренән, араһынан үтеү. □ Проникать через просвет. *Урман аралап үткән юл.* ■ *Ул саҡта ла бында лимон үҫкән, бөркөт оскан тауҙар аралап.* Р. Ниғмәти.

**4.** *Ниҙеңдер* араһынан юл ярыу. □ Пробивать дорогу через *что-л.*, раздвигать. ■ *[Шакир] ашлығын аралап, нәҙек загондың әле ул, әле был яғына сыға.* Һ. Дәүләтшина. *Халыҡ төркөмөн аралап, мөһабәт буйлы, ҙур сал һаҡаллы, оҙон аҡ тун кейгән яурынтаҡ ҡарт алға сыҡты.* Ә. Ихсан.

**5.** Төрлө ерҙе күреп, ҡыҙырып йөрөү, байҡау. □ Бродить, скитаться, прочёсывать, осматривать. ■ *Ил-ерҙәр аралап, ҡанса урман-һыуҙар яғалап, ылау ҡыуыуы йонсота.* Ғ. Хөсәйенов. *Билал отряды менән тауҙан тауға, ауылдан ауылға ун көн йөрөнө. Ҡалын ҡара урмандарҙы араланы.* А. Таһиров.

**6.** Ойошҡан, уҡмашҡан, сейәлгән сәсте (һаҡалды, йөндө) айырғылау, яҙыу. □ Трепать, распутывать. *Сәсте аралау.* ■ *Әхмәҙулла бабай һаҡалын аралай-аралай тағы алыҫҡа текләне.* Ә. Вахитов.

**7.** Һуғышҡан йәки ыҙғышҡан кешеләрҙе бер-береһенән айырыу. □ Разнимать, разнять дерущихся. ■ *Иртәнән алып йоҡлап киткәнсе өйҙө күтәреп сыҡҡылай айпашҡан,*

*тас та тос һуғышып киткән ете малайҙы аралауы еңел булмағандыр әсәйемә.* Ш. Янбаев.

**8.** Ауыр хәлдән ҡотҡарыу; яҡлау. □ Спасать, выручать, защищать. *Аралап ҡалыу. Үлемдән аралау.* ■ *Һағышымды микән күбәйтергә, араларға микән һағыштан.., сәләмдәрең килә алыҫтан.* Р. Бикбаев.

**9.** *Берәй нәмәне* икенсеһенән айырыу. □ Отделить, различать. ■ *Халыҡ хәтере .. яҡшыны яманда аралап, кәҙерләп йыя бара.* Х. Атанғолов.

**10.** *күсм.* Кешеләрҙе айырып ҡарау: береһен ситләтеп, икенсеһен яҡынлатып төрлө мөнәсәбәт күрһәтеү. □ По-разному относиться к людям; выделять *кого-л.* своим отношением. ■ *Ҡояш кеше араламай, гүзәл йәшәй донъяла. Олоһона, кесеһенә ул бер тигеҙ йылмая.* Т. Арслан.

**11.** Яман ниәт менән эшкә ҡыҫылыу. □ Вмешаться *во что-то. Изге эште шайтан аралап ҡуймаһын.*

♦ **Аш аралау** бер кешегә яҡшыраҡ, икенсеһенә насарыраҡ ашатыу; тамаҡ айырыу. □ Обделять *(в еде). Еңгәм аш аралаңы, ағайым өйҙә юкта йүнле ашатманы.* **Ен** (*йәки* **шайтан**) **аралау** араға кемдер төшөп эште боҙоу. ■ *[Үмәр:] Ҡыҙыңдың ике аяғының береһен кешегә атлатма. Изге эште ен аралап ҡуйһа, алдың өлөштө.* Һ. Дәүләтшина. **Һалҡын аралау** *диал.* һыуыҡ тейеү. □ Простудиться.

**АРАЛАШ I** (Р.: смешанный; И.: interspaced; Т.: karışık) *с.*

Төрлө нәмә үҙ-ара ҡатнаш, алмаш-тилмәш. □ Смешанный, перемешанный. *Аралаш ашлыҡ. Шыршы менән аралаш имәнлек. Арыш аралаш бойҙай. Ҡар аралаш ямғыр.*

**АРАЛАШ II** (Р.: вперемешку; И.: pell-mell; Т.: karışık) *р.*

*Ниҙер* бергә, ҡатышҡан, ҡатыш; ҡатнаш. □ Вперемешку, вперемежку. *Аралаш килеү. Аралаш ултырыу. Аралаш үҫеү. Аралаш һалыу.*

**АРАЛАШ III** (Р.: через; И.: over; Т.: aracılığıyla) *бәйл.*

**1.** Ваҡыт бирәмеген белдергән һүҙҙәр менән килеп, *ниҙеңдер* бер берәмек аша эшләнгәнен йәки ғәмәлгә килгәнен белдерә. □ Через *(послелог с осн. п.). Клубта көн аралаш кино күрһәтелә. Йыл аралаш ҡыш һыуыҡ килә.*

**2.** Аша. □ Сквозь. *Йәш аралаш көлөү. Иҫ аралаш һаташыу.* ■ *Хисам йоҡо аралаш ят кешеләрҙең аяҡ тауышын ишетә.* Әкиәттән.

**АРАЛАШЛЫҠ (аралашлығы)** (Р.: посредничество; И.: mediation; Т.: aracılık) *и.*

**1.** *Кемдеңдер* араһындағы бәйләнештәрҙе, мөнәсәбәттәрҙе урынлаштырырға ярҙам итеү; маклерлыҡ. □ Посредничество, маклерство. *Биржа аралашлығы. Сауҙа аралашлығы. Аралашлыҡ хеҙмәте. Аралашлыҡ кәсебе.* ■ *Ҡайһы бер граждандар күсемһеҙ милеккә үҙ хоҡуҡтарын теркәтеү өсөн был эшкә ҡыҫылышы булмаған, әммә ошо өлкәлә законһыҙ рәүештә аралашлыҡ хеҙмәте күрһәтеүсе кешеләргә мөрәжәғәт итә.* Росреестрҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте, 2 август 2010.

**2.** Ике бәхәсләшкән йәки дошманлашҡан яҡты килештереү, татыулаштырыу эше. □ Посредничество. *Аралашлыҡ һәм тыныслыҡ урынлаштырыу миссиялары буйынса комитет.*

**АРАЛАШЛЫҠ ИТЕҮ (аралашлыҡ ит-)** (Р.: посредничать; И.: mediate; Т.: aracılık etmek) *к.*

**1.** Килешеү төҙөүгә, мөнәсәбәттәр урынлаштырыуға, берәй эш-хәлде башҡарыуға ярҙам итеү; маклерлыҡ итеү. □ Посредничать. ■ *[Күсемһеҙ милеккә законһыҙ рәүештә хоҡуҡтарҙы теркәтеү өсөн] аралашлыҡ итеү күренештәрен «мутлыҡ», сит мөлкәткә ҡул һуҙыу, кеше ышанысына кереп, уны алдап, ят милеккә хоҡуҡты һатып алыу тип аңларға кәрәк.* Росреестрҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәте, 2 август 2010.

**2.** Ике бәхәсле йәки дошман яҡты килештереү, татыулаштырыу. □ Посредничать.

**АРАЛАШЛЫҠ СУДЫ** (Р.: арбитраж; И.: arbitration; Т.: tahkim) *и. юр.*

Дәүләт, йәмәғәт ойошмалары һәм предприятиелар араһындағы хужалыҡ бәхәстәрен хәл итеүсе махсус дәүләт органы. □ Арбитраж, третейский суд.

**АРАЛАШСЫ** (Р.: посредник; И.: mediator; Т.: aracı) *и.*

**1.** Аралашлыҡ иткән кеше. □ Посредник, маклер. *Аралашсы ролен үтәү. Сауҙа аралашсыһы. Аралашсы булыу. Аралашсы ярҙамы.*

**2.** *икт.* Килешеүҙәр төҙөүҙә булышлыҡ итеүсе. □ Брокер. *Аралашсы иҫәбе. Биржа аралашсыһы. Аралашсылар фирмаһы.*

**АРАЛАШ УРМАН** (Р.: смешанный лес; И.: mixed forest; Т.: karışık orman) *и. урм.*

Япраҡлы һәм ылыҫлы ағастарҙан торған урман; ҡатнаш урман. □ Смешанный лес.

**АРАЛАШ ҺАН** (Р.: смешанное число; И.: mixed number; Т.: karışık sayı) *и. мат.*

Бөтөн һан менән кәсерҙән торған һандар. □ Смешанное число.

**АРАЛАШТЫРЫУ (аралаштыр-)** (Р.: мешать; И.: mix up; Т.: karıştırmak) *к.*

**1.** Бер нәмәне икенсе нәмә менән ҡатнаштырыу, бергә ҡушыу. □ Мешать, смешивать, перемешивать. ■ *Көлдө тупраҡҡа аралаштырып, .. ҡул тырмаһы менән тырматып сыҡтылар, ти.* Әкиәттән.

**2.** Ике нәмәнең араларын бер-береһенә үткәреү. □ Переплетать, сплетать. ■ *Соня һыҙғанған йыуан беләктәрен өҫтәл өҫтөнә һалып, бармаҡтарын аралаштырҙы.* Б. Ишемғол.

**3.** Бер нәмә менән икенсе нәмәне сиратлаштырыу. □ Чередовать. *Ял менән эште аралаштырыу.*

**4.** Кешеләрҙе үҙ-ара таныштырыу, һөйләштереү. □ Дать общаться, знакомиться, водиться. *Йәштәрҙе аралаштырыу. Баланы олатай-өләсәһе менән күберәк аралаштырыу.*

**АРАЛАШЫУ (аралаш-)** (Р.: мешаться; И.: mix; Т.: karıştırmak) *к.*

**1.** Бергә ҡушылып, ҡатнашып буталыу. □ Мешаться, смешиваться, перемешиваться. *Бесән ҡар менән аралашып бөткән.*

**2.** Үҙ-ара бәйләнеш, танышлыҡ тотоу; ҡатнашыу. □ Общаться, быть в близких отношениях, водиться, знаться. *Дуҫтар менән аралашыу. Яҡындан аралашыу.* ■ *Беҙҙең ауыл кешеләре туған-тыумасанан тыш, дәрәжәгә, абруйға, мөлкәткә ҡарабыраҡ аралаша.* М. Кәрим.

**3.** Тел ярҙамында аңлашыу. □ Общаться, понимать друг друга. ■ *Башҡорт теле, башҡа телдәр кеүек үк, аралашыу, үҙ-ара фекер алышыу хеҙмәтен үтәү менән бергә, ҙур ижтимаға урын тота.* Ж. Кейекбаев.

**АРАЛАШЫУСАН** (Р.: общительный; И.: sociable; Т.: hoşsohbet) *с.*

Кеше менән тиҙ уртаҡ тел табыусан. □ Общительный. ■ *Вил аралашыусан, кеше менән тиҙ уртаҡ тел табыусан ине.* Ә. Әминев.

**АРАЛБАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-бурзянцев.

**АРАЛЫҠ (аралығы)** (Р.: пространство; И.: passage; Т.: alan) *и.*

**1.** Бер нәмә менән икенсе нәмә уртаһындағы буш урын; ара. □ Пространство, проход, пролёт. ■ *[Кеүәтов:] Ситән араһында аралыҡ ҡалдырмаҫҡа тырышығыҙ.* Ә. Вәли.

**2.** Бер ерҙән икенсе ергә тиклем булған алыҫлыҡ, ара. □ Промежуток, расстояние, дистанция. ■ *Зыяның көндәлек маршруты йорттан — мәктәпкә, мәктәптән Ташлыйылғаның ярына тиклем булған аралыҡ ине.* М. Тажи.

**3.** Бер эш-хәлдән икенсеһенә тиклемге ваҡыт өҙөгө. □ Промежуток, интервал времени. *Эш аралығы.* ■ *Бер нисә секундҡа аңымдан яҙғанмын. Ошо ҡыҫҡа ғына*

*аралыкта ни булғанын хәтерләмәйем.* Д. Юлтый.

**4.** *диал.* Тыкрыҡ. □ Переулок.

**5.** *миф.* Башҡорттарҙың ышаныуы буйынса, ен-шайтан эйәләгән насар урын, тыҡрыҡ. □ Переулок *(опасное место, место скопления нечистой силы). Аралыҡ — зәхмәтле урын.*

**АРАЛЫҠЛЫ КУЛЬТУРА** (Р.: пропашные культуры; И.: cultivated crops; Т.: kökü yenen sebzeler) *и. а.х.*

Киң ара ҡалдырып, аралы итеп сәсә торған культура. □ Пропашные культуры. *Картуф, сөгөлдөр, көнбағыш — аралыҡлы культуралар.*

**АРАЛЫҠ МЕЙЕҺЕ** (Р.: промежуточный мозг; И.: Deiencephalon; Т. Diencephalon) *и. анат.*

Баш мейеһе олононоң өлөшө. □ Промежуточный мозг.

**АРАМ** [ғәр. حرام] (Р.: злой; И.: pernicious; Т.: kötü kalpli) *с.*

**1.** *ҡар.* **харам**.

**2.** *диал.* Яуыз. □ Злой, зловредный. *Арам уйлы кеше.*

♦ **Арамға сыҡҡыр** ҡарғағанда әйтелә. □ Пропади пропадом. **Арам ҡатҡыр** ҡарғағанда әйтелә. □ *прокл.* Чтоб ты сгинул.

**АРАМДА** (Р.: нерадивый, недобросовестный, ленивый.; И.: negligent; Т.: savsak) *с.*

**1.** *ҡар.* **арамъя**.

**2.** *диал.* Намыҫһыҙ. □ Нечестный. *Арамда, кеше хаҡын ашап йөрөй.*

**АРАМДАҺЫҘ** (Р.: бесхитростный; И.: ingenuous; Т.: temiz kalpli) *с. диал.*

Хәйләһеҙ. □ Бесхитростный. *Арамдаһыҙ кеше шулай була инде.*

**АРАМТА** *р. диал. ҡар.* **илке-һалҡы**. *Арамта ғына эшләү.*

**АРАМТАМАҠ** *и. ҡар.* **әрәмтамаҡ**.

**АРАМҺА** *и. диал. ҡар.* **ярамһаҡ**.

**АРАМҺАҠЛАНЫУ (арамһаҡлан-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ярамһаҡланыу**.

**АРАМЪЯ I** [ғәр.-фарс. حرامى] (Р.: нерадивый, недобросовестный, ленивый.; И.: negligent; Т.: savsak) *с.*

Көс түкмәй, еңел, арлы-бирле генә эшләүсән. □ Нерадивый, недобросовестный, ленивый. *Арамъя кеше.* ● *Наҙан илгә — арамъя мулла.* Әйтем.

**АРАМЪЯ II** (Р.: кое-как, спустя рукава; И.: do smth. carelessly; Т.: bir baştan savma yapmak) *р.*

Әһәмиәт тә, иғтибар ҙа бирмәй; арлы-бирле, илке-һалҡы, теләмәй генә. □ Кое-как, спустя рукава. *Арамъя эшләү.* ■ *Көндәрең дә илке-һалҡы үтә, бик арамъя ғына эшләйһең.* Б. Вәлид.

**АРАМЪЯ БУЛЫУ (арамъя бул-)** *ҡ. ҡар.* **арамъяланыу**.

**АРАМЪЯЛАНЫУ (арамъялан-)** (Р.: облениваться.; И.: grow lazy; Т.: tembelleşmek) *ҡ.*

Арамъяға әйләнеү, арамъя булыу. □ Облениваться. // Обленивание. *Бала арамъяланды.*

**АРАМЪЯЛАУ (арамъяла-)** (Р.: делать *что-л.* с ленцой, кое-как.; И.: become lazy; Т.: gelişigüzel) *ҡ.*

Өҫтән-мөҫтән, арлы-бирле эшләү. □ Делать *что-л.* с ленцой, кое-как. *Арамъялап ҡына эшләү.*

**АРАМЪЯЛАШЫУ (арамъялаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **арамъялау**. *взаимн. от.* **арамъялау**.

**АРАМЪЯЛЫҠ (арамъялығы)** (Р.: недобросовестность; И.: negligence; Т.: vicdansızlık) *и.*

Хәйләләп, арлы-бирле эшләгәнлек. □ Недобросовестность, нерадивость. *Арамъялыҡ күрһәтеү.* ■ *Ә бригада ағзалары уны [Рафиҡты] арамъялыҡта ғәйепләй.* А. Игебаев.

**АРАМЪЯҺЫҘ** (Р.: усердный, старательный; И.: zealous; Т.: gayretli) *с.*

Хәйләһеҙ, яҡшы итеп эшләүсән. □ Усердный, старательный. *Арамъяһыҙ кеше. Арамъяһыҙ эшләү.*

**АРАН** [боронғо ҡыпсаҡ *аран*] (Р.: овчарня; И.: sheep shed; Т.: ağıl) *и.*

**1.** Ергә ҡаҙып эшләнгән ваҡ мал торлағы. □ Овчарня *(крытое углубление в земле).* ■ *[Бүре] төн һайын бер аранға төшөп, һарыҡ-кәзәне ҡырған.* Әкиәттән.

**2.** Һарайҙа айырым бер мал өсөн бүлеп эшләнгән урын. □ Денник, стойло.

**3.** *диал.* Мал һарайы. □ Хлев, сарай.

**АРАНАН КИТЕҮ (аранан кит-)** (Р.: уйти из жизни.; И.: pass away; Т.: ölmek) *к.*

Вафат булыу, үлеү. □ Уйти из жизни, умереть. // Уход из жизни, смерть.

**АРАНДАЙ** (Р.: большой.; И.: big, large; Т.: büyük) *с. диал.*

Ҙур. □ Большой. *Ауыҙы арандай.* ■ *Дөрөҫөн әйткәндә, өй инәһе төҫлө, арандай йортта бер Сәбилә йөрөй.* Т. Ғарипова.

**АРАНЖИРОВКА** [рус. < фр. *arranger* 'тәртикә килтереү'] (Р.: аранжировка.; И.: arrangement; Т.: aranjman) *и. муз.*

**1.** Бер төрлө ҡоралға йәки тауышҡа яҙылған музыка әҫәрен икенсе төрлө ҡоралға ярашлы итеп һалыу эше. □ Аранжировка. ■ *Сығып йырлау өсөн тауыштан бигерәк, сифатлы аранжировка яһатыу мөһим.* Г. Балтабаева.

**2.** *муз.* Әҫәрҙе ябайлаштырып уйнау. □ Аранжировка.

**3.** Эстрадала яңы йәки билдәле музыка әҫәрен инструменттарға һалыу, гармонияға килтереү. □ Аранжировка.

**АРАНЖИРОВКАЛАУ (аражировкала-)** (Р.: аранжировать; И.: arrange; Т.: düzenlemek) *к.*

**1.** Бер төрлө ҡоралға йәки тауышҡа яҙылған музыка әҫәрен икенсе төрлө ҡоралға ярашлы итеп һалыу. □ Аранжировать. // Аранжирование. *Йырҙы фортепьяно өсөн аранжировкалау.*

**2.** Аранжировка (2, 3) яһау. □ Аранжировать.

**АРАНЖИРОВКАЛАНЫУ** *к. төш. ҡар.* **аранжировкалау**. *страд. от* **аранжировкалау.**

**АРАСЫ** (Р.: посредник; И.: agent; Т.: aracı) *и.*

Тарафтар араһында килешеүгә булышлыҡ итеүсе шәхес, ойошма, дәүләт. □ Посредник.

**АРАСЫЛ** (Р.: не норовистая *(о скотине)*; И.: easygoing; Т.: uysal) *с. диал.*

Етәккә шәп, эйәрсән, йыуаш *(малға ҡарата).* □ Не норовистая *(о скотине). Арасыл ат.*

**АРАТ** [монг.] (Р.: арат; И.: Mongolian peasant; Т.: Moğol köylü) *и.*

**1.** Монголия Халыҡ Республикаһында һәм Тыва Республикаһында малсылыҡ менән көн итеүсе, крәҫтиән. □ Арат. *Монгол араттары. Арат хужалығы.*

**2.** *этн.* Түңгәүер ырыуының араһы. □ Родовое подразделение тунгаурцев.

**АРАТА** (Р.: поперечина, перекладина; И.: crossbeam; Т.: kol demiri) *и.*

**1.** Ике яҡ таяуға аралы итеп теҙеп ҡуйылған бер нисә ағас. Поперечина, перекладина. ■ *Һуң бит һыуҙай ай яктыһы ине! Ситән аратаһынан ҡарап ултырҙым, — тип Сәриә хатта йәберһенеп ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов. *Алтынбай йылҡыны күҙ томалана башлауға ғына ялан ҡартәгә ҡыуып индерҙе, бесән кәбәндәре яғына ҡуйылған ҡартә араталарын ситкә тартты.* З. Ураҡсин.

**2.** Арбаның аҫҡы күкрәге менән үрәсәһен тоташтырған тояҡтар. □ Лисицы *(телеги).*

**3.** *диал.* Аралыҡ. □ Расстояние *(между деревянными перекладинами).*

**АРАТА АҒАСЫ** *и. диал. ҡар.* **тим**.

**АРАТАЛАУ (аратала-)** (Р.: делать *что-л.* с поперечинами, перекладинами.; И.: do smth. using crossbeams; Т.: kol demiriyle yapmak) *к.*

Араталы итеү. □ Делать *что-л.* с поперечинами, перекладинами. *Ҡапҡаны араталап яһау.*

**АРАТАЛЫ** (Р.: имеющий верхнюю перекладину.; И.: containing a crossbeam; Т.: kol demirli) *с.*

Өҫкө өлөшөндә аратаһы булған. □ Имеющий верхнюю перекладину. *Араталы ҡапҡа.*

**АРАТАЛЫ БЫСҠЫ** *и. диал. ҡар.* **йәйә бысҡы**.

**АРА-ТИРӘ I** (Р.: изредка, иногда, время от времени; И.: at times; Т.: ara sıra) *р.*

**1.** Ваҡыт-ваҡыты менән, һирәкләп. □ Изредка, иногда, время от времени. *Ара-тирә ингеләп йөрөү.* ■ *Оло кешенең күңелен*

*күрмәк, Ғәбит ара-тирә шулай һорау биргеләп тә ҡуя.* Ә. Әминев. *[Нурия:] ара-тирә олатайҙы шулай йөпләп тә алғылайым, әтеү, тауыш бирмәһәң, ярты һүҙҙә туктап та ҡуя торған.* Г. Яҡупова.

**2.** Унда-һанда, һирәк. □ Кое-где, там и сям, местами. *Ара-тирә болоттар күренгеләй.* ■ *Ара-тирә ҡуян, тейен эҙе күренә, мышы ла бата-сума үтеп киткән.* Г. Яҡупова. *Таң еленең дымлы, һалкынса тулҡындары арҡа буйҙарын өшөтөп, сымырлатып үтеүен дә, кешеләрҙең, уянып, ара-тирә йөрөштөрә башлауын да тойманы ул [Сәлимә].* З. Биишева.

**АРА-ТИРӘ II** (Р.: друзья, приятели, соседи; И.: friends; Т.: arkadaş çevresi) *и. йыйн.*

Ҡатнашып, аралашып йөрөгән туғандар; яҡын кешеләр. □ Друзья, приятели, соседи. *Ара-тирә менән аралашыу.*

**АРАТНИК** *и. диал. ҡар.* **ҡолон сыбыртҡыһы**.

**АРАТОР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-бурзян.

**АРА-ТОРА** *р. диал. ҡар.* **ара-тирә I, 1**.

**АРАУ (ара-)** (Р.: искать, разыскивать; И.: search; Т.: aramak) *ҡ. иҫк.*

Эҙләү. □ Искать, разыскивать. // Поиск, розыск. ■ *Аһ, сәсәктәр, былтыр һеҙҙе өҙөп, кемдең күкрәгенә ҡаҙаным? Кемгә ҡаҙап, кемгә моңло ҡарап, күҙҙәренән яуап араным?* Ш. Бабич.

**АРАУЫҠ (арауығы)** (Р.: пространство.; И.: space; Т.: uzay) *и.*

**1.** Сикһеҙ-ҡырыйһыҙ киңлек. □ Пространство. ■ *Бөтә замандарҙа ла аҡыл эйәләре был донъяның мәңгелек түгел, ә үҙгәреүсән икәнлеген, тормошта хәл-вакиғаларҙың ваҡыт һәм арауыҡ эсендә бербереһен алмаштырып, сиратлашып килеүен төшөндөрөүҙе алға ҡуйған.* «Ағиҙел», № 5, 2010.

**2.** Тирә-яғы сикле бушлыҡ. □ Пространство. *Газдың бөтә булған арауыҡты биләп алыу һәләтлеге бар.*

**3.** (*йәки* **ваҡыт арауығы**) Күпмелер дауам иткән ваҡыт. □ Промежуток времени. ■ *Көнһылыуға был бер сәғәт ваҡыт иге-сиге булмаған арауыҡ кеүек .. тойолдо.* З. Биишева. *Уға [кешегә] йөҙ йылға яҡын ғүмер ҙә керпек ҡаҡҡан арауыҡ кеүек кенә.* Г. Хөсәйенов. *Ҡартәсәйем, ҡулын һул яҡ түшенә ҡуйып, үҙенең йөрәк ҡағышын тыңлағандай, бер арауыҡ өндәшмәй торҙо ла өҙөп-өҙөп әйтте: — Арыҫланды бында килтерегеҙ, уҡырға төшкәнсе торһон ауылда, Камил ағаһы ыңғайына аҡылға ултырыр, эшкә лә таһыллаңыр.* Г. Яҡупова.

**4.** *диал. ҡар.* **аралыҡ**.

**АРАХИС** [рус. < гр. *arachis* ] (Р.: арахис; И.: groundnut; Т.: yerfıstığı) *и. бот.*

**1.** *ҡар.* **ҡытай сәтләүеге**, **ер сәтләүеге**.

**2.** Шул үҫемлектең орлоғо. □ Арахис, земляной орех. *Арахис майы. Арахис хәлүәһе.*

**АРАҺЫНА** (Р.: между; И.: between; Т.: arasına) *бәйл.*

**1.** Ике нәмәнең уртаһына тигәнде аңлатҡанда ҡулланыла. □ Между *(послелог с осн. п.).* ■ *Уның [Егор Николаевичтың] ҡалын быймалары араһына дәү ҡамғаҡ килеп инде.* З. Ураҡсин.

**2.** *Нимәнеңдер* эсенә тигән мәғәнәлә ҡулланыла. □ В, во что; по чему. ■ *Егет, нәфрәтенән быуылып, башын үлән араһына тыҡты.* Ә. Хәкимов. *Ярай, Эҫемгә килделәр ҙә, ти, ләкин ниңә инде, ундағы һыйхөрмәтте, уйын-көлкөнө ҡалдырып, әллә ҡайҙа башҡорт араһына инеп китергә?* Б. Рафиҡов.

**АРАҺЫНАН** (Р.: из; И.: from; Т.: arasından) *бәйл.*

**1.** *Нимәнеңдер* эсенән айырып башҡарылғанды белдергәндә ҡулланыла. □ Из *(послелог с осн. п.).* ■ *[Аҡмал ҡарт] Оҙон ҡолға менән саңғыларҙы һүҙһеҙ генә эйелеп алды һәм ағас араһынан йылт итеп килеп*

*сыҡҡан улына тотторҙо.* Б. Рафиҡов. *Һис шикһеҙ, башҡорт араһы буталғайны инде, улар араһынан сыҡҡан кантон түрәләре түштәренә таҡҡан ялтырауыҡтарға ғына түгел, затлы кейемдәргә, алған дәрәжәләре килтергән мал-мөлкәткә, данға күмелеп, хуш күңеллегә әйләнеп бөткәйнеләр.* З. Ураҡсин.

**2.** Ике нәмәнең уртаһынан тигәнде аңлатҡанда ҡулланыла. □ Между *(послелог с осн. п.).* ■ *Юл бысраҡ, ике яғы һөрөлгән. Шуның араһынан барабыҙ.* Ә. Хәкимов.

**АРАҺЫНДА** (Р.: между; И.: between; Т.: arasında) *бәйл.*

**1.** Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен белдергәндә ҡулланыла. □ Между *(послелог с осн. п.).* ■ *Күпте күргән Рамғун бик күңелһеҙләнде: был бит уйын түгел, тимәк, былар [Сарыхан менән Зилбәр] араһында ысын мөхәббәт башланған.* З. Ураҡсин.

**2.** *Кемдеңдер* ҡаршыһында, *кемдәр менәндер* башҡарылыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Среди *(послелог с осн. п.). Кеше араһында оятҡа ҡалыу.* ■ *Дөйөм ятаҡта йәшәгәс, егеттәр араһында төрлө хәлдәр була.* Ә. Әминев. *Ошо йәштә уларға йәшелкенсәк араһында ултырырға, үҙҙәре туплаған тормош тәжрибәһен йәш үрсемгә биреп ҡалдырырға кәрәк ине лә бит!* Б. Рафиҡов.

**3.** *Нимәләрҙелер* бер-береһенә ҡаршы ҡуйып сағыштырғанда ҡулланыла. □ Между *(послелог применяется при сопоставлении чего-л.).* ■ *Ә хыял менән тормош араһында ер менән күк һымаҡ айырма.* М. Ямалетдинов. *Яр менән ҡараптар араһында ҡәләп һалыусы кәмәләр һирәгәйә төшкәндәй, бәлки, ошо урындан ғына шулай тойолалыр.* Б. Рафиҡов.

**4.** Эш-хәлдең барышындағы айырым-айырым ваҡытты йәки урынды белдергәндә ҡулланыла. □ Между *(послелог с осн. п. применяется при указании отрезка времени, места).* ■ *Был китабында ул [сәйәхәтсе Әбелмәних] үҙенең сәфәре хаҡында ла телгә ала һәм үҙ өлгөләрен килтерә, һүҙ араһында: «Был бахырҙы яҙмыш ғосмандар мәйетен тапарға мәжбүр итте», — ти.* М. Өмөтбаев.

**АРАЮЛ** (Р.: обочина; И.: shoulder; Т.: yol kenarı) *и. диал.*

Юл эргәһе. □ Обочина, тротуар. *Араюлға ҡом йәйелгән.*

**АРАҺЫНДАҒЫ** *бәйл. ҡар.* **араһында 1.** ■ *Башҡорт менән ҡаҙаҡ араһындағы туҡтауһыҙ барымта, ҡарымталарға һуңғы сик ҡуйыласаҡ.* З. Ураҡсин.

**АРБА** [ғәр. عربة] (Р.: арба, телега, тележка, прицеп ; И.: cart; Т.: araba) *и.*

**1.** Егеп йәки тағып, этеп йөрөтә торған тәгәрмәсле ҡорамал. □ Арба, телега, тележка, прицеп. *Бәләкәй арба. Йөк арбаһы. Көлтә арбаһы. Ҡул арбаһы. Трактор арбаһы. Арба күсәре.* ■ *Йәйләным да майланым күсәрҙәрен арбаның.* Ш. Бабич. *Салауат Ҡәнзәфәргә менеп атланған Уйылданды елкәһенән матҡып күтәрҙе, ҡайҙа ырғытырға белмәгәндәй һауала һелкетеп торҙо, көтмәгәндә арбаһына шапылдатып ултыртты ла яр аҫтына тәгәрләтте.* Б. Рафиҡов. *Өлкәнерәктәр носилка, бер тәгәрмәсле ҡул арбаһы менән ҡоралланған, иң бәләкәс ҡыҙҙар — алъяпҡыстарына, малайҙар биҙрәгә таш тейәп ташыған була.* Б. Ҡаһарманова. *Арба, сана, көрәк-һәнәк, туҫтаҡ, тәпән... ижау, ҡалаҡ... Бер туҡтамай юнып-йышып эшләп торор ине мәрхүм...* З. Биишева.

**2.** Атҡа йәки башҡа хайуандарға егеп йөрөтөлгән, ағастан эшләнгән, тәгәрмәсле йөк транспорты. □ Повозка. *Йөк арбаһы. Ябыҡ арба.* ■ *Ҡатыны, балалары, йүгерешеп, арбаны, атты һырып алды, берәүҙәре ат туғара, икенселәре йөктәге ваҡ-төйәккә тотона.* З. Ураҡсин. ● *Яман арба юл боҙор, яман кеше ил боҙор.* Әйтем. *Ҡабыҡ арба күп шығырлар, ҡарт ҡәйнә күп мығырлар.* Әйтем. *Арбаңа ҡарап, йөк һал, атыңа ҡарап, юлға сыҡ.* Әйтем.

♦ **Арба менән ҡуян ҡыуыу** килешмәгән хилаф эш эшләү. □ Делать *что-л.* нелепое.

**АРБА БИЛДЕГЕ** (Р.: жерди; И.: pole; Т.: direk) *и. диал.*

Арбаның ал күкрәге менән арт күкрәген тоташтырыусы ағастар. □ Жерди, соединяющие переднюю подушку телеги с задней.

**АРБА БОТЛОҒО** *и. диал. ҡар.* **тәгәрмәс теше**.

**АРБА БҮКӘНЕ** *и. диал. ҡар.* **арба күкрәге**.

**АРБАҘ** *и. диал. ҡар.* **аҙбар.**

**АРБА КЕНДЕГЕ** *диал. ҡар.* **кендек.**

**АРБА КҮКРӘГЕ** (Р.: подушка телеги; И.: chuk of cart; Т.: arabanın önü) *и.*

Арбаның алғы өлөшө. □ Подушка телеги.

**АРБА КӘШТӘҺЕ** *и. диал. ҡар.* **арба билдеге**.

**АРБАҠЛАУ (арбаҡла-)** (Р.: уважать; И.: esteem; Т.: savmak) *ҡ. һөйл.*

Хөрмәт күрһәтеп маҡтау; күтәрмәләү. □ Уважать, почитать. // Почитание, уважение, почтение, честь. *Ҡунаҡты арбаҡлап ҡаршы алыу.*

**АРБАҠЛЫ** (Р.: уважаемый; И.: esteemed; Т.: sayın) *с.*

Маҡтаулы, хөрмәтле. □ Уважаемый, почитаемый. *Арбаҡлы кеше. Арбаҡлы булыу.*

**АРБАҠТЫ** (Р.: бестолковый; И.: stupid; Т.: aptal) *и. диал.*

Тәртипһеҙ, йүнһеҙ. □ Бестолковый.

**АРБАЛЕТСЫ** (Р.: арбалетчик; И.: crossbow shooter; Т.: arbalester) *и.*

Арбалеттан атыусы һуғышсы, яугир. □ Арбалетчик.

**АРБАЛЫ** (Р.: с телегой; И.: with a cart; Т.: arabalı) *с.*

**1.** Арбаһы булған, арба егелгән. □ С телегой, прицепом; имеющий телегу, прицеп. *Арбалы ат. Арбалы трактор.* ● *Арбалы һыбайға юл бирмәҫ.* Әйтем.

**2.** Арбала китеп барған. □ Едущий на телеге. ● *Арбалыға юлдаш булма, юрғалыға юлдаш бул.* Мәҡәл.

**АРБАЛЫҠ** (Р.: годный для телеги; И.: suitable for carts; Т.: arabalık) *с.*

**1.** Арба өсөн, арбаға тәғәйенләнгән. □ Годный для телеги. *Арбалыҡ таҡта.*

**2.** Арбаға һыйырлыҡ, бер арба күләмендә. □ Достаточный для тележки, в объёме одной тележки. *Бер арбалыҡ утын. Бер арбалыҡ бесән.*

**АРБАЛЫУ (арбал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арбау I.** *страд. от* **арбау I.**

**АРБА МАТАУ (арба мата-)** (Р.: тормозить телегу; И.: tie up rear wheels of a cart; Т.: arabanın arka tekerleklerini bağlamak) *ҡ.*

Тау түбәненә төшкәндә тәгәрмәсте әйләнмәҫлек итеп бәйләү; тышау һалыу. □ Тормозить задние колеса телеги *(для торможения при спуске с горы).* // Торможение.

**АРБА МЕНДӘРЕ** *и. диал. ҡар.* **арба күкрәге.**

**АРБАСӨЙ** *и. диал. ҡар.* **сикәсөй.**

**АРБАСЫ** (Р.: тележник; И.: carter; Т.: araba yapan usta) *и.*

Арба яһау менән шөғөлләнгән кеше; арба яһаусы. □ Тележник.

**АРБАТЫУ (арбат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арбау I**. *понуд. от* **арбау I**.

**АРБАУ (арба-) I** [төрки һүҙе *арва*] (Р.: заговаривать; И.: enchant; Т.: büyü yapmak) *ҡ.*

**1.** Сихри көс, тылсымлы һүҙ менән тәьҫир итеп, үҙеңә буйһондороу. □ Заколдовывать, заговаривать, заклинать. // Заклинание. *Йылан арбау.* ■ *[Әбей:] Айыуҙы арбап булмай. Айыуҙы күргәс тә ергә йөҙ түбән һуҙылып ятырға ла ҡуйырға кәрәк.* М. Тажи.

**2.** *ҡусм.* Берәүҙе үҙеңә ҡаратыу; аҡыл, күңелен биләп, әүрәтеү. □ Завораживать, привораживать, очаровывать, покорить. // Завораживание, приворот. *Күңелде арбау.* ■ *Каруанһарай, йылдар аша балҡып, кешеләрҙең күңелен арбаны.* Р. Бикбаев.

**АРБАУ II** (Р.: заклинание; И.: spell; Т.: büyü sözleri) *и.*

Тылсымлы һүҙ, доға менән дауалау алымы. □ Заклинание, заговор. ■ *Эт, йылан арбауҙарынан тыш теш ҡорто арбауы бар.*

Ф. Хисамитдинова. ● *Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай.* Әйтем.

**АРБА УРҘАҺЫ** *и. диал. ҡар.* **арба билдеге.**

**АРБАУСЫ** (Р.: ворожея; И.: exorcism; Т.: falcı) *и.*

**1.** Арбау менән шөғөлләнгән кеше. □ Ворожея. ■ *Зәһәр йылан, күтәрелеп, ҡарап ҡатҡан арбаусыға.* Н. Нәжми.

**2.** Тылсымлы һүҙ, доға менән дауалаусы. □ Лекарь, знахарь.

**АРБАЯҠ (арбаяғы)** *и. диал. ҡар.* **тәгәрмәс тырнағы**.

**АРБИТР** [рус. < фр. *arbitre* < лат. *arbiter*] (Р.: арбитр; И.: arbiter; Т.: hakem) *и.*

**1.** *юр.* Суд ҡарамағында булмаған бәхәстәрҙе хөкөм иткән белгес. □ Арбитр.

**2.** *спорт.* Спорт ярыштарында һайланып ҡуйылған судья. □ Арбитр. *Хоккей арбитры. Ярыш арбитры.*

**АРБИТРАЖ** [рус. < фр. *arbitrage*] *и. юр. ҡар.* **аралашлыҡ суды.** *Арбитраж комиссияһы. Ведомство арбитражы. Тышҡы сауҙа арбитражы. Валюта арбитражы. Фонд арбитражы.* ■ *Арбитраж суды бурыстары түбәндәгеләрҙән тора: закондарҙың бер төрлө һәм дөрөҫ ҡулланылыуын тәьмин итеү; предприятиеларҙың һәм граждандарҙың хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлауҙы, уларҙың законлылыҡты һаҡлауын, килешеү йөкләмәләрен үтәүен тәьмин итеү; хоҡуҡ саралары менән закондарҙы үтәүгә һәм иҡтисади мөнәсәбәттәрҙә законлылыҡты нығытыуға булышлыҡ итеү.* В. Шәйхетдинов.

**АРБҮЗӘК** *и. диал. ҡар.* **кендек II.**

**АРБЫ-ТОРБО** *р. диал. ҡар.* **тарбан-торбан.**

**АРГО** [рус. < фр. *argot*] *с. ҡар.* **шартлы тел**. *Бурҙар аргоһы.*

**АРГОТИЗМ** (Р.: арготизм; И.: argotizm; Т.: argotizm) *и. лингв.*

*Ниндәйҙер* аргонан әҙәби телгә алынған һүҙ. □ Арготизм.

**АРГУМЕНТ** [рус. < лат. *argumentum*] (Р.: аргумент; И.: argument; Т.: delil) *и.*

**1.** *ҡар.* **дәлил.**

**2.** *мат.* Ирекле рәүештә үҙгәрә торған математик дәүмәл. □ Аргумент. *Йыйылма һандар аргументы. Аргумент үҫеше.*

**АРГУМЕНТЛАУ (аргументла-)** (Р.: аргументировать; И.: argue; Т.: delillemek) *ҡ.*

Дәлилләп ҡуйыу. □ Аргументировать. *Һүҙҙе аргументлап ҡуйыу.*

**АРГУМЕНТЛЫ** (Р.: аргументированный; И.: argue; Т.: delilli) *с.*

Дәлилле. □ Аргументированный.

**АРГУМЕНТҺЫҘ** (Р.: неаргументированный; И.: without argue; Т.: delilsiz) *с.*

Дәлилһеҙ. □ Неаргументированный.

**АРҒЫ** (Р.: дальний; И.: far off; Т.: uzak) *с.*

Алыҫтараҡ булған, арыраҡ торған; *киреһе* — бирге. □ Дальний, находящийся поодаль, расположенный в отдалении. *Арғы өй. Арғы яҡ.* ■ *Баҡсаның арғы аулаҡ мөйөшөндәге ҡыуаҡтар араһында һандуғас һайрай башланы.* Һ. Дәүләтшина. *Ауылдың арғы осонда ғына эт ләңкелдәгәне ишетелде, был яҡта һил.* З. Ураҡсин. ● *Арғы яҡта түй бара тип, бирге яҡта бейемә.* Мәҡәл.

**АРҒЫЛ I** *и. ҡар.* **арғын II.**

**АРҒЫЛ II** (Р.: холмистый.; И.: hilly; Т.: tepesi çok olan) *с.*

Убалары, түмәләстәре булған. □ Холмистый. *Арғыл ер.* ■ *Янындағы тауҙар тәпәш түгел — арғыл-арғыл күренә дәү булып.* М. Ямалетдинов. *Арғыл да ғына арғыл, ай, артылған күк һыртлы ла бүре балаһы. Ҡайҙа ғына барһа кәм-хур булмай башҡорт та ғына ата балаһы.* Халыҡ йырынан. *Арҡа буйҡайҙары арғыл-арғыл, арғылдары бөтә, ҡар киткәс.* Халыҡ йырынан.

**АРҒЫЛЛАНЫУ (арғыллан-)** (Р.: быть увалистым, холмистым; И.: be hilly; Т.: tepeleri çok olmak) *ҡ.*

Күп убалары, түмәләстәре булыу. □ Быть увалистым, холмистым, иметь увалы, холмы. *Урал тауҙары арғылланып ята.*

**АРҒЫМАҠ (арғымағы)** [дөйөм төрки *арғамак*] (Р.: скакун; И.: fast horse; Т.: çabuk koşan at) *и.*

Яҡшы тоҡомло йүгерек ат. □ Скакун, аргамак *(старинное название породистых восточных верховых лошадей).* ■ *Бөркөт күкрәк, тар яңаҡ, баҡыр күҙле, шеш ҡолаҡлы беҙҙең һылыу арғымаҡ.* Ш. Бикҡол. *Арғымаҡ дөбөр-шатыр килеп етте, үрә һикерҙе һәм юкка сыкты...* Б. Рафиҡов. *Арғымаҡта елдәй елер инем, тыуған ерһеҙ нисек китәһең?* Р. Назаров. *Ҡырғыҙ батыры, дуҫы менән хушлашып, уға иң яҡшы ике арғымағын бүләк итеп бирә, шунан кинйә улы Яланбайға уларҙы илтешә барырға ҡуша.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Арғымаҡ аттың билдәһе — аҙ утлар ҙа күп юшар.* Мәҡәл. *Арғымаҡтың билгеһе — ҡаҙылыҡ йыймаҫ, ял йыйыр.* Әйтем.

**АРҒЫМАҠТАЙ** (Р.: быстро; И.: quickly; Т.: hızla) *р.*

Бик тиҙ, ҡыҙыу, етеҙ; елдәй елеп. □ Очень быстро. *Арғымаҡтай елеп барып етеү.* ■ *Арғымаҡтай етеҙ елгә иш булһамсы, бүтәүҙәрҙән артылырҙай ҡош булһамсы!* Н. Мусин.

**АРҒЫН I** *и. иҫк. лингв. ҡар.* **баҫым I, 2.**

**АРҒЫН II** (Р.: снежные холмы; И.: snow hills; Т.: karlı tepe) *и.*

Ҡышҡы ҡаты һепертмә буран ҡарҙы өрөп яһаған ваҡ ҡына ҡырҙастар. □ Снежные холмы. ■ *Арғындың өҫкө ҡаты тығыҙ һалынған була, саскау һыуыҡтарҙа хатта ат күтәртерлек булып ҡата.* Т. Морат.

**АРҒЫН III** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуы араһы. □ Родовое подразделение башкир-усерганцев.

**АРҒЫНБАЙ** (Р.: родовое подразделение башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуының араһы. □ Родовое подразделение башкир-бурзянцев.

**АРҒЫНЛАНЫУ (арғынлан-)** (Р.: покрыться волнообразным слоем снега; И.: get covered with wave-like snow layer; Т.: tepeleri kar almak) *ҡ.*

Ҡарҙың тулҡын-тулҡын булып ятыуы. □ Покрыться волнообразным слоем снега. *Ҡар өҫтө арғынланып ята.*

**АРҒЫ ТУЙ** (Р.: свадьба на стороне невесты; И.: wedding on the side of the bride; Т.: gelinin tarafındaki düğün) *и. диал.*

Ҡыҙ яғында үткәрелгән туй. □ Свадьба, проводимая на стороне невесты. *Тәүҙә арғы туй булды, хәҙер бирге туй була.*

**АРҒЫШ I** [боронғо төрки *арҡыш* 'каруан; дуҫ'] (Р.: гость; И.: toastmaster; Т.: baş konuk) *и.*

**1.** *этн.* Ҡалымға килгән ҡунаҡтарҙың табынына баш итеп ҡуйылған кеше. □ Главный на праздничном застолье для гостей, приехавших за калымом. *Арғыш ҡуйыу. Арғыш һайлау.*

**2.** Теҙелеп осҡан ҡоштарҙың юл башлаусыһы. □ Вожак стаи птиц.

**АРҒЫШ II** *и. диал. ҡар.* **тороҡ II.**

**АРҘА I** (Р.: жеребёнок или телёнок-сосунок до двухлетнего возраста.; И.: colt / calf/ below two years of age; Т.: tay/buzağı) *и.*

**1.** Ике йәшкә тиклем инәһен имгән тай йәки башмаҡ. □ Жеребёнок или телёнок-сосунок до двухлетнего возраста. ■ *Бер-бер генә тауҙар бейек булыр, арҙа ғына менән ҡолъя тигән кейек булыр.* «Тәүеш Мәргән».

**2.** *диал. ҡар.* **арҙаҡ I.**

**АРҘА II** (Р.: неспособный; И.: incapable; Т.: yeteneksiz) *с. ҡусм.*

Эшкә булдыҡһыҙ. □ Неспособный, бестолковый. ■ *[Алламорат:] Уй, арҙа ҡаҙаҡ, аңшайма, эшеңдә ҡара!* Һ. Дәүләтшина.

**АРҘА III** (Р.: лишённый; И.: destitute; Т.: yoksul) *с. иҫк.*

Йәтим, мәхрүм, буш. □ Лишённый, обездоленный. *Арҙа ҡалғас хандан һуң, алтын һаплы аҡ һөңгө ҡына тороп тут алыр, тупаҫланыр ирҙән һуң.* Ҡобайырҙан.

**АРҘАҠ I (арҙағы)** [боронғо төрки *артак* 'боҙолған'] (Р.: избалованный; И.: spoilt; Т.: şımarık) *и.*

Иркә, наҙлы бала. □ Избалованный, изнеженный ребёнок.

♦ **Атам арҙаҡлыһы** атаһының наҙлы, иркә балаһы. □ Избалованный, изнеженный ребёнок. *букв.* Любимец отца.

**АРҘАҠ II (арҙағы)** (Р.: уважение; И.: respect; Т.: saygı) *и.*

**1.** Хөрмәт, ихтирам. □ Уважение, почитание.

**2.** *диал.* Йыйнаҡлыҡ, тәртип. □ Уют.

**АРҘАҠЛАНЫУ (арҙаҡлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арҙаҡлау**. *страд. от* **арҙаҡлау**.

**АРҘАҠЛАУ (арҙаҡла-)** (Р.: нежить; И.: pamper; Т.: nazlı büyütmek) *ҡ.*

**1.** Иркәләү, наҙлау. □ Нежить. // Нежность. ■ *Кем арҙаҡлап мине, кем йыуатһын? Ятам! Хәсрәт тулды күңелгә.* Х. Ғәбитов.

**2.** Ҡәҙерләү, тәрбиәләү. □ Оберегать, ухаживать. // Ухаживание. ■ *Арҙаҡлап көткән аҡ тәнең ҡара ерҙең аҫтында ҡорт-ҡуңыҙға ем булыр.* Ҡобайырҙан.

**3.** Хөрмәт итеү, ихтирам күрһәтеү. □ Уважать, почитать. // Уважение, почитание. ■ *Ололарҙы арҙаҡлау.* ■ *Егетте арҙаҡлап ҡаршы алалар, аттан төшөрөп, алып инеп китәләр.* Әкиәттән.

**АРҘАҠЛЫ** (Р.: дорогой; И.: beloved; Т.: saygıdeğer) *с.*

**1.** Хөрмәтле, ихтирамлы. □ Уважаемый, почитаемый. *Арҙаҡлы ир. Арҙаҡлы кеше.* ■ *Майҙанға һәр ырыуҙың атаҡлы батырҙары, арҙаҡлы бейҙәре, аҫыл аҡһаҡалдары йыйыла башлай.* Ғ. Хөсәйенов. *Аяуһыҙ синфи көрәш тәғлимәте халыҡтың иң арҙаҡлы, иң фиҙаҡәр улдарына ҡәһәрле ҡара мөһөр баҫҡан, исемдәрен хәтеребеҙҙән юйырға тырышҡан.* Ә. Хәкимов. ● *Арҙаҡлының балаһы ун биштә лә баш булыр, арҙаҡһыҙҙың балаһы утыҙҙа ла йәш булыр.* Әйтем.

**2.** Наҙлы, иркә, ҡәҙерле. □ Дорогой, любимый. ■ *Эй, байғош, берәүҙең арҙаҡлы яңғыҙ ғына балаһы икәнһең, сырағым, әсәң һинең өсөн күҙ йәштәрен түгә торғандыр инде.* И. Көҫәпҡол. *[Сарыбай — Ҡарабайға] Арҙаҡлы дуҫым! Һин инде икенсе тапҡыр мине үлемдән ҡотҡарып, ҡатындарым менән балаларымды ҡыуандырҙың, минең таланған мөлкәтемде ҡайтарып бирҙең, ахырҙа шифалы үләндәр менән яраларымды уңалттың.* «Ҡуҙыйкүрпәс». ● *Байға мал арҙаҡлы, ярлыға бала арҙаҡлы.* Әйтем.

**АРЕАЛ** [рус. < лат. *area* ‘өлкә’] (Р.: ареал; И.: area; Т.: alan) *и.*

**1.** *зоол. бот.* Билдәле бер үҫемлек йәки йәнлек-хайуан төрөнөң ер йөҙөндә таралған өлкәһе. □ Ареал.

**2.** Төрлө күренештәрҙең, шулай уҡ тел күренештәренең ер йөҙөндә таралыу өлкәһе. □ Ареал. ■ *«Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенең тик Аҫыл күл (урындағы фольклорҙа Асылыкүл шулай аталыусан) — Дим — Өршәк ареалында ижад ителеүенә шик юҡ.* Ә.Сөләймәнов. *Ҡарарҙа ҡыуаҡан һөйләше таралған ареалдың сикләнгән булыуы, уның бары Арғаяш, Тамъян-Ҡатай кантондарында һәм Йылайыр кантонының бер өлөшөндә генә йөрөүе күрһәтелеп, башҡорт халҡының күпселегенең, Бәләбәй .. һәм Бөрө .. кантондарын да индереп, Юрматы һөйләшендә йә уға яҡын телдә һөйләшеүе раҫлана.* «Йәшлек», 23 июль 2009.

**АРЕАЛЬ ЛИНГВИСТИКА** (Р.: ареальная лингвистика; И.: areal linguistics; Т.: bölgesel dilbilim) *и. линг.*

Лингвистик ареалдарҙы (телдең һәм диалекттарҙың таралыу өлкәһе) һәм тел күренештәренең географик бүленешен өйрәнеүсе лингвистиканың бер бүлеге. □ Ареальная лингвистика.

**АРЕНА** [рус. < лат. *arena* ‘ҡом’] (Р.: арена; И.: arena; Т.: arena) *и.*

**1.** Циркта тамаша күрһәтә торған түңәрәк майҙан. □ Арена. *Спорт аренаһы. Цирк аренаһы. Аренаға сығыу.* ■ *Аренаға остом. Ерҙе ҡостом. Ә кемдәрҙер ошо мәлдә ҡыуаныстан ҡутәрҙеләр тосты.* Т. Дәүләтбирҙина.

**2.** *күсм. ҡар.* **майҙан 2.**

**3.** *күсм.* Эшмәкәрлек өлкәһе; даирә. □ Арена. *Донъя аренаһы. Сәйәси арена. Халыҡ-ара арена.* ■ *Рәсәй аренаһына сығыу юлында Мостай Кәрим, Назар Нәжми,*

*Әнүәр Бикчәнтәев, Нәжиб Асанбаевтарҙың киң билдәле яҙыусылар, атаҡлы шағирҙар менән ижади дуҫлығы ла ыңғай роль уйнаны.* «Ағиҙел», № 9, 2010.

**АРЕНДА** [рус. < пол. *arenda* ‘урта’ < лат. *arendare* ‘ҡуртымға биреү’] *и. ҡар.* **ҡуртым**. *Аренда килешеүе. Аренда мөнәсәбәте.* ■ *Шуға ла хөкүмәт, алда әйткәнемсә, табышһыҙ эшләгән колхоздарҙы бөтөрөп, ерҙәрен сит ил кешеләренә арендаға бирергә, тигән ҡарар ҡабул итте.* Ә. Әминев. *Тау арьяғындағы башҡорт ерҙәрен аренда һылтауы менән талайҙар.* Н. Мусин.

**АРЕНДАҒА АЛЫУ (арендаға ал-)** *ҡ. ҡар.* **ҡуртымға алыу.** ■ *[Марфа әбей:] Мәктәп арендаға алһа, мин уның эсентышын һылап, әҙәм рәтле итер инем.* Р. Камал. *Бәләкәй посёлоктағы был ҡунаҡхана күп ваҡыт буш тора, шуға ла идаралыҡ уны арендаға алып, үҙенеке итте.* Н. Мусин.

**АРЕНДАҒА БИРЕҮ (арендаға бир-)** *ҡ. ҡар.* **ҡуртымға биреү.** ■ *Ер биләү, уны һәм йылға-күлдәрҙе арендаға биреү, сит кешеләрҙең йылҡыларын тибенгә, һыйырҙарын, хатта ҡаҙҙарын көтөүгә индереү эше көслө һәм ҡороҡҡос төркөм ҡулында.* М. Өмөтбаев.

**АРЕНДАЛАУ (арендала-)** *ҡ. ҡар.* **ҡуртымлау**. ■ *Ер арендалауға, һатыуға, һатып алыуға сик ҡуйыу...* М. Өмөтбаев.

**АРЕНДАТОР** [рус.] *и. ҡар.* **ҡуртымсы**. ■ *Күп кенә кандидаттар күрһәтелеп, тауышҡа ҡуйылғандан һуң, идараға Ғәзиз Латипов, Шафиҡ Арсланов, тирмән арендаторы Санька һайланды.* Ғ. Хәйри.

**АРЕОМЕТР** [рус. < гр. *araios* ‘тығыҙ түгел’ + *metreo* ‘үлсәйем’] (Р.: ареометр; И.: hydrometer; Т.: hidrometre) *и.*

Шыйыҡ матдәнең ҡуйылығын билдәләй торған ҡорамал. □ Ареометр.

**АРЕСТ** [рус. < нем. *Arrest*] (Р.: арест; И.: arrest; Т.: tutuklama) *и. юр.*

**1.** Кешенең ирегтән мәхрүм ителеп, һаҡ аҫтына алыныуы, ҡулға алыныуы. □ Арест. *Ареста тотоу.* ■ *Кабинетҡа инеү менән Ҡапҡаев, үҙенең ни өсөн килгәнен белдереп, мандаттарын күрһәтеп, миңә арест иғлан итте.* Ш. Хоҙайбирҙин. *[Сираев:] Увольнениенан һуңлап ҡайтып, уставты боҙған өсөн, биш тәүлеккә ҡаты арест.* Н. Мусин.

**2.** *Ниндәйҙер* ғәйеп өсөн судтың ҡулдағы мал-мөлкәтте файҙаланыуҙан тыйыуы. □ Арест имущества. *Мөлкәткә арест һалыу. Вкладка арест һалыу.*

**АРЕСТАНТ** [рус. < лат. *arestum* ‘тоҡтатыу’] *и. ҡар.* **тотҡон.** ■ *Складтарҙа һаҡланған дарылы мискәләрҙе, он һалынған тоҡтарҙы, башҡа аҙыҡ-түлекте, ҡурғаш һәм баҡыр запастарын урыҫ һалдаттарынан, пугачёвсыларҙан айырым тотолған арестанттарҙан ташыталар.* Б. Рафиҡов. *Бер нисә ҡатын, балаларын эйәртеп, арестанттар артынан эйәргәйнеләр.* Д. Юлтый.

**АРЕСТАНТТАРСА** *р. ҡар.* **тотҡондарса**.

**АРЗ** [ғәр. ارض ‘ер’] (Р.: земля (планета); И.: Earth; Т.: Dünya) *и. иҫк. кит.*

**1.** Ер, ер шары. □ Земля *(планета).* ■ *Көньяҡ океанда, Кәррә арзының мәғриб тулдарының (Ер шарының көнбайыш оҙонлоҡ һыҙыҡтарында) 160 менән 180 градустары һәм жәнүб ғәрездәренең (көньяҡ киңлектәре) 30 һәм 50 градустары араһында, яңы Зеландия исемле бик ҙур жәзирә барҙыр.* М. Өмөтбаев.

**2.** Ил, дәүләт. □ Страна, государство.

**АРЗАН** [фарс. ارزان] (Р.: дешёвый; И.: cheap; Т.: ucuz) *с.*

**1.** Хаҡы билдәле бер кимәлдән түбән; осһоҙ; *ҡиммәт* — ҡиммәт. □ Дешёвый, недорогой. *Арзан кейем. Арзан магазин.* ■ *[Егор Николаевич:] Ағас әҙерләүҙе лә тоткарланылар, утыҙ-ҡырҡ саҡрымдан ташыуға ҡарағанда, ун биш саҡрымдан төшөрөү күпме арзанға тура килә ине.* З. Ураҡсин. *[Бикмырҙа] унан үҙенә алмашка ярҙамсы ҡуйып, ҡыш буйы арзан хаҡҡа тирә-як ауылдарҙан ҡаты ашлыҡ ташыны.* Ә. Хәкимов. *Был баҙарҙа барыһынан да арзан әйбер: ит вә ҡан.* Д. Юлтый.

● *Арзанлы иттең тоҙлоғо татымай.* Мәкәл. *Арзан тауар ярлы кешенең малын бөтөрә.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Баһаһы түбән, ҡәҙерһеҙ. □ Пустой, бессодержательный, бессмысленный. *Арзан мәғлүмәт.* ■ *Бар ине арзан заман, сәйран заман, хайран заман.* Ш. Бабич. ● *Ауылға килгән бәз арзан, ауыҙға килгән һүҙ арзан.* Әйтем.

**АРЗАНАЙТЫЛЫУ (арзанайтыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арзанайтыу**. *страд. от* **арзанайтыу**.

**АРЗАНАЙТЫУ (арзанайт-)** (Р.: удешевлять; И.: make cheaper; Т.: ucuzlatmak) *ҡ.*

*Ниҙеңдер* хаҡын кәметеү, арзаныраҡ итеү. □ Удешевлять, уценивать. *Емеш-йәшелсәгә хаҡты арзанайтыу.*

**АРЗАНАЙЫУ (арзанай-, арзаная)** (Р.: дешеветь; И.: become cheaper; Т.: ucuzlamak) *ҡ.*

**1.** *Ниҙең дә булһа* хаҡы түбәнәйеү, кәмеү, арзанланыу. □ Дешеветь, удешевляться. *Тауарҙың арзанайыуы.* ■ *[Өйрәнсек:] Көршәктәр хәҙер арзанайҙы. Күберәк эшләмәһәң, икмәклек тә аҡса табып булмаясаҡ.* З. Биишева.

**2.** *Ниҙең дә булһа* баһаһы, бәҫе кәмеү *(ҡиммәте төшөү).* □ Дешеветь, утрачивать ценность. ■ *Әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендәге дәрәжәле һәм маҡтаулы исемдәр Риф Мифтахов өсөн үҙмаҡсат түгел. Шул уҡ ваҡытта һуңғы осорҙа был исемдәрҙең бер аҙ ваҡланып, арзанайып китеүенә өнһөҙ ҙә ҡала алмай ул.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**АРЗАНҒА ТӨШӨҮ (арзанға төш-)** (Р.: быть дешевле обычного; И.: be cheaper than usual; Т.: genelden ucuz olmak) *ҡ.*

Арзан хаҡҡа килеү. □ Быть дешевле обычного. *[Газ] утын менән күмергә ҡарағанда арзанға төшә.* ■ *Ул [Ҡыҙрастың атаһы] быраулауҙа бығаса ҡулланылып килгән балсыҡ эретмәһен таҙа һыу менән алмаштырыу юлын уйлап тапҡан. Шул арҡала быраулау әллә нисә тапҡырға арзанға төшә, йылдам да эшләнә икән.* З. Биишева. *Әлегә Ур менән Ер араһын ҡарапта осоп үтәләр, сөнки былдай сағыштырмаса яҡын араға шулай арзанға төшә.* Н. Ғәйетбай.

**АРЗАНЛАНДЫРЫУ (арзанландыр-)** *ҡ. ҡар.* **арзанайтыу.**

**АРЗАНЛАНЫУ (арзанлан-)** *ҡ. ҡар.* **арзанайыу.**

**АРЗАНЛАТЫУ (арзанлат-)** *ҡ. ҡар.* **арзанайтыу**.

**АРЗАНЛАШТЫРЫУ (арзанлаштыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арзанлашыу.** *понуд. от* **арзанлашыу.**

**АРЗАНЛАШЫУ (арзанлаш-)** *ҡ. ҡар.* **арзанайыу.**

**АРЗАНЛЫ** (Р.: дешёвый; И.: cheap; Т.: ucuz) *с.*

Арзан хаҡлы; *киреһе* — ҡиммәтле. □ Дешёвый, недорогой. *Арзанлы тауар.* ■ *Йылҡы малы арзанлы ит, ҡымыҙ бирә бит. Ни өсөн уны бөтөрөргә?* К. Мәргән. *[Дилбәр] .. тиргә ҡатып, арзанлы тәмәке еҫен һеңдереп, төрмә һаҫығынан ҡаҡашып бөткән тәненән үҙе ытырғанып торған ваҡытта улының сафлыҡ еҫе аңҡып торған йомшаҡ сәстәренә бите менән ҡапланғас, күҙ йәштәренә быуылды.* Г. Ғиззәтуллина. *Ғәли кеҫәһенән арзанлы папирос сығарып ҡабыҙҙы.* Ғ. Хәйри.

**АРЗАНЛЫҠ** *и. ҡар.* **арзансылыҡ**.

**АРЗАНСЫЛЫҠ (арзансылығы)** (Р.: дешевизна ; И.: cheapness; Т.: ucuzluk) *и.*

Һатыу-алыу хаҡтары түбән булған дөйөм хәл, хаҡтарҙың түбәнлеге; *киреһе* — ҡиммәтселек. □ Дешевизна. *Баҙарҙағы арзансылыҡ.*

**АРЗИ** [ғәр. ارض ‘ер’] (Р.: связанный с землёй; И.: bound with the earth; Т.: toprak ile ilgili) *с. иҫк. кит.*

Ергә мөнәсәбәтле, ергә бәйләнешле. □ Связанный с землёй.

**АРЗУ** [фарс. آرزو] (Р.: желание ; И.: wish; Т.: istek) *и. иҫк. кит.*

Теләк, ынтылыш. □ Желание, стремление. *Арзу белдереү.* ■ *Бөтә кеше ҡыҙыға, .. балыҡ тотоу арзуһына төшә.* М. Ғафури. *Ләкин уның [Сәйфелмөлөктөң] арзу-хыялдары көтмәгәндә вайран булды ла ҡуйҙы.* Ә. Хәкимов.

**АРЗУ ИТЕҮ (арзу ит-)** (Р.: желать; И.: wish; Т.: istemek) *к. иҫк. кит.*

Теләү. □ Желать, хотеть. // Желание. ■ *Ишетә килдем күптән «диңгеҙ» һүҙен, арзу итә инем күрергә.* М. Ғафури. *Хатта Йософ бабай ханаһы дәгел, йөмлә иғтибарлы заттар быны сәүәрҙәр (яраталар) вә балаларыны бының кеби шәкерт итмәгә арзу (теләк) итерҙәр ине.* Р. Фәхретдин.

**АРЗУЛАУ (арзула-)** (Р.: желать; И.: desire; Т.: arzu etmek) *к. иҫк. кит.*

Теләү. □ Желать, хотеть. // Желание. *Арзулап көтөү.*

**АРИЙ** (Р.: арийцы; И.: Aryans; Т.: Aryan) *и. этн.*

Һинд-европа телдәре ғаиләһенә ҡараған, арий телендә һөйләшкән, боронғо иран һәм һинд тарихи халыҡтарының үҙ-үҙенә биргән исеме. □ Арийцы.

**АРИОЗО** [рус. < ит. *arioso*] (Р.: ариозо; И.: arioso; Т.: arioso) *и. муз.*

Һүҙ менән ҡатнаш башҡарыла торған бәләкәй лирик ария. □ Ариозо.

**АРИСТОКРАТ** [рус. < гр. *aristokratia*, *aristos* ‘иң яҡшыһы’ + *kratos* ‘көс’] *и. ҡар.* **аҡһөйәк 1.** ■ *Фазылетдин аҡһөйәк аристократ ине. Дөрөҫөрәге, аҡһөйәк булып ҡыланды.* Р. Камал.

**АРИСТОКРАТИЯ** [рус. < гр. *aristokratia*, *aristos* ‘иң яҡшыһы’ + *kratos* ‘көс’] (Р.: аристократия; И.: aristocracy; Т.: aristokrasi) *и.*

**1.** *ҡар.* **аҡһөйәк 1.**

**2.** Синыфтың йәки ниндәйҙер ижтимағи төркөмдөң юғары ҡатламы. □ Аристократия. ■ *[Таня:] Һиҙәһеңме, был нахаҡ берәүҙән дә түгел, ә совхоз аристократияһының үҙенән сыға.* Р. Камал.

**3.** *тар.* Бер төркөм иң юғары ҡатлам кешеләре торған идара формаһы. □ Аристократия. ■ *[Индрил:] Бында аристократия! — тип ҡысҡырып ебәрҙе, Новиков уның ауыҙын баҫты.* Д. Юлтый.

**АРИСТОКРАТЛЫҠ (аристократлығы)** (Р.: аристократизм; И.: aristocracy; Т.: aristokrasi) *и.*

Аристократтарға хас күренеш. □ Аристократизм. ■ *[Хәмит:] Аяҡ-кулдарың иҫән була тороп, өйҙә хужабикә тотоу, минеңсә, аристократлыҡ тип атала, йәғни эксплуатация.* Д. Бүләков.

**АРИСТОКРАТТАРСА** (Р.: как аристократ; И.: aristocracy; Т.: aristokrasi gibi) *р.*

Аристократтарға хас; нәзәкәтле, нескә. □ Как аристократ, утончённо. ■ *Унда [Мәғәфүр Хисмәтуллинда] ниндәйҙер эске нәзәкәтлек һәм аристократтарса зауыҡ (ябай ауыл егетендә!), күңел юғарылығы һәм тыйнаҡлыҡ һыҙаттары һиҙелеп тора.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**АРИТМИЯ** [рус. < гр. *arhytmia* ‘тигеҙ түгеллек’] (Р.: аритмия; И.: arrhythmia; Т.: aritmi) *и. мед.*

Йөрәк тибешенең нормаль ритмы боҙолоуы. □ Аритмия. *Йөрәк аритмияһы.*

**АРИФМЕТИК I** [рус. < гр. *arithmos* ‘һан’ + *tecnh* ‘сәнғәт’] (Р.: арифметик; И.: arithmetician; Т.: arifmetikçi) *и.*

Арифметика буйынса белгес. □ Арифметик.

**АРИФМЕТИК II** (Р.: арифметический; И.: arithmetic; Т.: arifmetik) *с.*

Арифметикаға мөнәсәбәтле. □ Арифметический. *Арифметик ҙурлыҡ.*

**АРИФМЕТИКА** [рус. < гр. *arithmos* ‘һан’ + *tecnh* ‘сәнғәт’] *и. ҡар.* **хисап**. ■ *Минең — бишенсе кластарҙа арифметика дәресе, — тине Зифа.* Н. Мусин. *Хәтерем барсы минең, — тип, ырыя ғына булһа ла үҙен яҡларға тырышты Ихсанбай. — Бөгөн әле арифметиканан биш алдым.* Т. Ғарипова.

**АРИФМОГРАФ** [рус. < гр. *arithmos* ‘һан’ + *grapho* ‘яҙам’] (Р.: арифмограф; И.: arifmograf; Т.: arifmograf) *и.*

Арифметик ғәмәлдәрҙе ябай юл менән башҡара торған автоматик яҙмалы иҫәпләү машинаһы. □ Арифмограф.

**АРИФМОМЕТР** [рус. < гр. *arithmos* ‘һан’ + *metron* ‘сама’] (Р.: арифмометр; И.: arithmometer; Т.: hesap makinesi) *и.*

Арифметик ғәмәлдәрҙе механик юл менән башҡарыусы бәләкәй иҫәпләү ҡоралы. □ Арифмометр.

**АРИЯ** [рус. < ит. *aria* ‘йыр’] (Р.: ария; И.: aria; Т.: arya) *и. муз.*

Опера, ораторияла бер генә кеше башҡара торған әҫәр; яңғыҙ йыр. □ Ария. *Ария төрҙәре.* ■ *[Фәтхулла — Ғәйшәгә:] Йә сык инде, һылыуым, «Евгений Онегин»дан Ленский арияһын уйна әле беҙгә!* Д. Юлтый. *[Мәғәфүр Хисмәтуллин] телмәрен арияларҙан, йырҙарҙан өҙөктәр менән аралаштырып, ҡайһы бер урындарҙа һикереп тороп, хәрәкәтләнеп бейеп тә ала.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**АРКА** [рус. < ит. *arco* < лат. *arcus* ‘дуға, бөгөл’] (Р.: арка; И.: arch; Т.: kemer) *и. архит.*

**1.** Стеналағы уйымдың дуғаланып торған япмаһы йәки таяу араһы. □ Арка. *Дуға һымаҡ арка.* ■ *Башына ғәрәпсә яҙылған һүҙҙәре һаҡланған ҙур аркалы мәҙрәсә ишеге лә шул хан замандарының таш ҡомартҡыһы.* Ғ. Хөсәйенов.

**2.** Башы дуғаландырып яһалған декоратив ҡапҡа. □ Арка. *Арка эшләү.* ■ *Арка эсендә ике таш бина.* М. Кәрим.

♦ **Триумфаль арка** ҙур еңеү хөрмәтенә һалынған аркалы мемориаль ҡапҡа. □ Арка триумфальная.

**АРКТИК** (Р.: арктический; И.: Arctic; Т.: Arktika) *с.*

Арктикаға мөнәсәбәтле. □ Арктический.

**АРКТИКА** [рус. < гр. *arktikos* ‘төньяҡ’] (Р.: арктика; И.: the Arctic; Т.: Arktika) *и.*

Ер шарының төньяҡ поляр өлкәһе. □ Арктика. *Арктика боҙҙары. Арктиканың геологик төҙөлөшө. Арктиканың фаунаһы һәм флораһы. Арктика антициклондары.*

**АРҠА** [дөйөм төрки *арка*] (Р.: спина; И.: back; Т.: sırt) *и.*

**1.** Кеше кәүҙәһенең яурынындан билгә тиклем булған һәм хайуандарҙың муйынынан ҡойроҡҡа тиклем булған һырты. □ Спина *(человека)*, хребет *(животного)*. *Арҡаға ятыу.* ■ *Ат еленә арҡа ҡуйып, юлсы ғәмһеҙ ҡарап бара.* М. Кәрим. *Ә әсәйгә һөйләһәң [ҡайғыны], ул арҡанан тыпылдатып һөйә лә иркәләй, йәлләй башлай.* З. Биишева. *[Алтынбай] Малай сағында бер ат ҡарағының шеш тимер менән арҡаһын яндырғандарын күргәне иҫенә төшөп, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.* З. Ураҡсин. *Сәриә һыпайта күлдәген күтәреп, арҡаһын асты. Тәне әллә нисә урындан күгәреп сыҡҡайны.* Ә. Хәкимов. ● *Көнлөк аҙыҡ ҡорһаҡта, айлыҡ аҙыҡ арҡала.* Мәҡәл. *Йөрөй белмәгән аттың арҡаһын тишер, саба белмәгән ҡолағын киҫер.* Мәҡәл. *Яман һыбай аттың арҡаһын боҙор.* Әйтем.

**2.** Тау һырты. □ Хребет, горная цепь. *Тау арҡаһы.* ■ *Арҡаларҙа һомғол ҡарағайҙар ҡыҙҙар йырын һыуһап тыңланы.* Р. Бикбаев. *Эҙ яҙҙырыр өсөн, Хәйруш тәүҙә, күл яғалап, һыу эсләп атланы, арҡа ергә сығып, һыҙағайым ағаслыҡҡа ингәс кенә, ике алмасыбарҙан йыуашыраҡ күренгәненең [аттың] һыртына ырғып менде.* Ә. Хәкимов. *Әлеге оҙон арҡаны ауышыуға ҡояш офоҡтағы тау түбәһенә төшөп ултырҙы.* З. Ураҡсин. *Артабан ҡыйылып яткан күк арҡалар һуҙыла, уйым-уйым урмандар һәм үткәүелдәр осрай.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Кейемдең артҡы өлөшө. □ Спинка, спина одежды. *Күлдәктең арҡаһы.*

**4.** *диал.* Бысаҡтың, салғының һырты. □ Тупая сторона *(острого орудия)*.

**5.** *иҫк.* Ярҙам. □ Помощь, опора. *Арҡаһы нык.*

**6.** 3-сө зат эйл. һәм у.-в. клш. формаһында килгәндә бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **арҡаһында**). □ В функции послелога (*см.* **арҡаһында**).

**7.** у.-в. клш. формаһында килгәндә бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*кар.* **арҡала**). □ В функции послелога (*см.* **арҡала**).

**8.** *миф.* Хәүеф менән бәйле яҡ, арауыҡ. □ Опасное место, пространство.

♦ **Арҡанан һөймәҫтәр** берәй эштең яҡшы түгеллеген белдергәндә әйтелә. □ По головке не погладят. ■ *[Мырҙағол:] Белгән өҫтөнә*

*әйтмәй йөрөгән өсөн минең дә арҡамдан һөймәҫтәр.* Б. Бикбай. **Арҡаны ныҡҡа терәү** ышаныслы таяныс табыу. □ Находить твёрдую опору, защиту. ■ *Анау Моратша бай ҡыҙыулата, ти, шуға ла арҡаһын ныҡҡа терәп һөйләшәләр инде ул [Үмәр].* Һ. Дәүләтшина.

**АРҠАБАҠ** *и. диал. ҡар.* **умыртҡалыҡ.**

**АРҠА БИРЕҮ (арҡа бир-)** (Р.: поворачиваться спиной; И.: turn one's back to; Т.: birine arkasını dönmek) *ҡ.*

**1.** Арт менән боролоу. □ Поворачиваться спиной *к кому-чему*, отворачиваться *от кого-чего* (*выражая недовольство*). ■ *Ә Ниса һаман Камилға арҡаһын биреп ултыра.* Ә. Вәли. *Аҡйондоҙ иренә арҡа биреп, арбаның ситенә генә, үрәсәһенә генә ултырҙы.* М. Кәрим.

**2.** Артҡа боролоп ҡасыу, кире боролоу. □ Поворачивать назад, убегать. ■ *Барырмын һәр ваҡыт алға, һуғышта бирмәмен арҡа.* М. Ғафури.

**АРҠАҘАШ** (Р.: соратник; И.: comrade; Т.: silah arkadaşı) *и.*

Ышаныслы, һыналған дуҫ, иптәш, көрәштәш. □ Соратник, друг. ■ *[Хан] Улай ҙа тыйылды, ҡаты бәрелмәне тоғро арҡаҙашына [Аҡъялға], һүҙен уйсанырак аһәңдә дауам итте.* Ә. Хәкимов. *Эйе, йыр булды уның [Мәҙинәнең] юлдашы, йыр ҡанат ҡуйҙы, серҙәше һәм арҡаҙашы булды.* Т. Ғарипова.

**АРҠА ЙОЛОНО** *и. диал. ҡар.* **арҡа йөлөнө.**

**АРҠА ЙЫЛЫТЫУ (арҡа йылыт-)** (Р.: бездельничать; И.: idle; Т.: aylaklık etmek) *ҡ.*

Эшләмәй тик ятыу. □ Бездельничать. *букв.* Греть спину.

**АРҠАЛА** (Р.: из-за; И.: because of; Т.: dolayı) *бәйл.*

Эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә килтергән сәбәпте белдергәндә ҡулланыла. □ Из-за, поэтому. ■ *Тик барыбер иң насары — хәмер эсеү, шул арҡала һәр йәһәттән түбән төшөү.* М. Ямалетдинов. *Шул арҡала [Шәрғиә] ғүмерендә ишетмәгән кәм-хурын да, ҡарғыш-янауҙарын да байтаҡ ишетте.* Ә. Хәкимов. *Уның [Миңлекәйҙең] тауышы бөтә ауылға ишетелеп тора. Шул арҡала уларҙың өйөндә һис ваҡытта ла сер ятмай.* М. Кәрим.

**АРҠАЛАНДЫРЫУ (арҡаландыр-)** (Р.: излишне опекать; И.: be warden to smb. excessively; Т.: birini açırı derecede gözetmek) *ҡ.*

**1.** Эштә, ҡылыҡта *кемгәләр* йәки *нимәгәләр* таяндырыу. □ Излишне опекать, брать под защиту. *Кешене арҡаландырыу.*

**2.** Яҡлап, иркәләтеү; буйлатыу. □ Баловать. *Баланы арҡаландырыу.*

**АРҠАЛАНЫУ (арҡалан-)** (Р.: опираться *на кого*; И.: rely (on); Т.: dayanmak ) *ҡ.*

**1.** Эш-ҡылыҡта *кемгәләр* йәки *нимәгәләр* таяныу, ярҙамға ышаныу. □ Опираться *на кого*, надеяться на помощь и поддержку *кого, чью.* ■ *Аҙым һайын арҡаландым тыуған ергә.* Н. Иҙелбай. *Егеттәр араһында ул ағаһы Мәғәфүр менән энеһе Әбделхакты күрҙе. Уларҙың булыуы Фатиманы бер аҙ тынысландырҙы: ул ағаһы менән энеһенә арҡалана ала ине.* Ж. Кейекбаев. *[Олатаһы] ейәненә ярҙам итеү түгел, үҙ йортон саҡ көскә тәләфләмәй килә. Ҡайҙа уға арҡаланыу.* Ә. Хәкимов.

**2.** *Кемдеңдер* яҡларына, йәберләтмәҫенә ышаныу, ышанып иркәләнеү. □ Рассчитывать на защиту *кого, чью*, надеяться на заступничество *кого. Атайға арҡаланыу.* ■ *Әсәһенә арҡаланып өйрәнгән Миҙхәт берәүҙе лә тыңларға теләмәне.* К. Мәргән.

**АРҠАЛАНЫШЫУ (арҡаланыш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **арҡаланыу**. *взамн. от* **арҡаланыу.**

**АРҠАЛАТЫУ (арҡалат-)** (Р.: баловать *кого* опекой; И.: indulge; Т.: yüz vermek) *ҡ.*

Ҡул, тел тейҙермәй яҡлау; үҙеңә һыйындырыу, иркәләтеү. □ Баловать *кого* опекой, покровительством. «*Шулай арҡалатып яман өйрәтеп бөтәһең!» — тип әсәйем [атайыма] һуҡрана.* Ш. Янбаев.

**АРҠАЛАУ I (арҡала-)** (Р.: нагружать; И.: load; Т.: yüklemekaklamaya çalışmak) *ҡ.*

Арҡаға аҫыу; йөкмәү. □ Нагружать, навьючивать. *Тоҡ арҡалау.* ■ *Ауыр йөктө арҡалаһаң, юл ҡыйын, оҙаҡ була.* С. Кулибай.

**АРҠАЛАУ II (арҡала-)** (Р.: выгораживать; И.: shield; Т.: aklamaya çalışmak) *ҡ.*

*Берәй* кешене яҡлау, аралау. □ Выгораживать *кого*, заступаться за *кого*. *Арҡалап ҡалыу.* ■ *Батырҙың асыуы инде тарҡаланды, баланы ерҙән алып арҡаланы.* «Бабсаҡ менән Күсәк».

**АРҠАЛАШ** *и. ҡар.* **арҡаҙаш.**

**АРҠАЛЫ** (Р.: имеющий опору; И.: having support; Т.: dayanaklı) *с.*

Таяныслы, яҡлаусылы. □ Имеющий опору, защиту, поддержку. *Арҡалы бала.* ● *Аталы бала — арҡалы, инәле бала — иркәле.* Әйтем. *Ирле ҡатын — арҡалы ҡатын.* Әйтем.

**АРҠАЛЫҠ I (арҡалығы)** (Р.: чересседельник.; И.: saddle girth; Т.: kolan) *и.*

Ҡамыт, дуғаны күтәртеү өсөн ыңғырсаҡ аша тәртәнән тәртәгә тарттырыла торған бау. □ Чересседельник. *Ул [Мәғәфүр] үҙенең арбаһынан балтаһын бара һалып алды ла Талха арбаһының икенсе тәзеһен, ҡолаҡ бауын, арҡалығын сапҡылай башланы.* Ж. Кейекбаев. *[Айғыр] Һыуға үрелде, ләкин ныҡ күтәрелгән арҡалыҡ уға ирек бирмәне.* Ф. Иҫәнғолов. *Ауыҙлыҡты ул үҙ ғүмерендә күргәне юҡ. Арҡалыҡ һәр ваҡыт төшөнкө була. Шуға күрә ул оҙонораҡ үләндәрҙең баштарынан эләктерә лә сәйнәй бирә.* С. Агиш.

**АРҠАЛЫҠ II (арҡалығы)** (Р.: накосник; И.: plait appliance; Т.: saç örgüsü süsü) *и. диал.*

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәс биҙәүе; сәсҡап. □ Накосник *(украшение для косы — узкая и длинная полоса цветной ткани, в два ряда расшитая кораллами и серебряными монетами).*

**АРҠАЛЫҠ БУЙЫ** (Р.: небольшое, незначительное расстояние; И.: short distance; Т.: kısa bir mesafe) *и.*

Сама менән оҙонлоҡто билдәләү бермәге. □ Небольшое, незначительное расстояние. ■ *Бикмырҙа әй киткән, әй киткән, ти, артына әйләнеп ҡараһа, арҡалыҡ буйы ер киткән, ти.* Әкиәттән. *Ғәшүрә, .. ян-яғына ҡарана-ҡарана, күршеһенең тупһаһына баҫҡанда, икһеҙ-сикһеҙ зәңгәр күктә уйнап туймаған йәйге ҡояштың байыуына арҡалыҡ буйы ара ҡалғайны.* Р. Ҡол-Дәүләт.

**АРҠА МЕЙЕҺЕ** *и. анат. ҡар.* **йөлөн.**

**АРҠАН I** [дөйөм төрки *аркан* ‘ҡылдан үрелгән бау’] (Р.: толстая верёвка; И.: rope; Т.: kement) *и.*

Йыуан итеп ишелгән оҙон бау. □ Толстая верёвка. *Ырғаҡлы арҡан.* ■ *Салауат менән икеһен [Юлай] ауыл һайын сыбырткылап йөрөткәндә, күрҙеләр бит инде караттарҙың утты ла, арҡанды ла, ҡурғашты ла йәлләмәгәнен.* Б. Рафиҡов. *Атайым йәһәт кенә арҡан буйлап барып, тегене сырмап ташлай, шунан колхоз идараһына йөкмәп алып барып һала.* З. Ураҡсин. *Башҡорттар элек-электән ат ҡылынан төрлө арҡан һәм бауҙар ишкәндәр.* М. Муллағолов. *Төшөңдә арҡан күрһәң, сәс үргәндә сәсең ҡалһа, юлға сығаһың.* Халыҡ ижадынан. ● *Бер ҡылдан арҡан ишеп булмай.* Мәҡәл. *Һүҙҙең ҡыҫҡаһы, арҡандың оҙоно яҡшы.* Әйтем.

♦ **Ҡомдан арҡан ишеү** мәғәнәһеҙ эште эшләп юҡҡа ваҡыт әрәм итеү. □ Вить верёвку из песка. *соотв.* Переливать из пустого в порожнее. ■ *Илкәйемде бөлгөнлөккә, ҡытлыҡҡа дусар итеп, яңы власть ҡомдан арҡан ишмәксе.* Ә. Хәкимов.

**АРҠАН II** (Р.: сравнительно небольшое расстояние; И.: comparatively a short distance; Т.: kısa bir mesafe) *и.*

Сама менән оҙонлоҡто билдәләү бермәге. □ Сравнительно небольшое расстояние. ■ *Ҡояш өс арҡан самаһы күтәрелгәс, тыу бәйләнгән оҙон ҡолғаны майҙан уртаһына ҡаҙап ҡуйғандар.* Ғ. Сөләймәнов. *Ҡояш Ямаш тауы артына йәшенергә арҡан буйы ғына ер ҡалғас, бер автомашина оло юлдан боролоп, Ғибадулла йорто янына йүнәлде.* Н. Мусин.

**АРҠАН III** (Р.: спиной, задом; И.: with one’s back; Т.: arkasıyla) *р. диал.*

Арт менән, һырт менән. □ Спиной, задом. ■ *Янһары, кеткелдәп көләп, аркан әйләнеп ята.* Б. Бикбай.

**АРҠАНАЙ** (Р.: начало года; И.: new year; Т.: yil başi) *и.*

Боронғо башҡорт календарында йыл башы. □ Начало Нового года по древнему башкирскому календарю. ■ *Буранара айының тәүге аҙнаһы арканай исемен алған.* Халыҡ ижадынан.

**АРҠАНЛАНЫУ (арҡанлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арҡанлау**. *страд. от* **арҡанлау**. ■ *[Фаҡиһа:] Көндөң көнө буйы һөт бешереп, эркет ҡаҙаны тирәһендә уралаһың, арканланған быҙау шикелле.* Ж. Кейекбаев.

**АРҠАНЛАП** (Р.: на аркане; И.: tied to a lasso arcanum; Т.: kementle bağlanan ) *р.*

Бәйләп, бәйҙә. □ На аркане. ■ *Суминов арканлап ебәрелгән ат янына ашыкты.* Ә. Хәкимов. *Бал корто — канатлы кош. Уны тышап та, арканлап та ҡуйып булмай.* Ж. Кейекбаев.

**АРҠАНЛАТЫУ (арҡанлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арҡанлау**. *понуд. от* **арҡанлау**.

**АРҠАНЛАУ (арҡанла-)** (Р.: привязывать верёвкой; И.: tie with a rope; Т.: kementle bağlamak) *ҡ.*

Оҙон арҡанға тағыу. □ Привязывать верёвкой. *Мал арҡанлау.* ■ *Шәрәфи болонлокка атын арканланы ла, салғыһын күтәреп, .. бойҙай баҫыуына табан [китте].* И. Насыри. *Арканлаһалар ҙа тормам, — тине Фатима, үҙенә-үҙе бик нык ышанып.* Ж. Кейекбаев.

♦ **Шылдырып арҡанлау** алдау. □ Обмануть, перехитрить, провести.

**АРҠАНЛЫҠ** (Р.: годный для каната; И.: for a lasso arcanum; Т.: kementlik) *с.*

Арҡан өсөн тәғәйенләнгән. □ Годный, предназначенный для каната. *Арканлык еп.*

**АРҠАН ФАЛЫ** (Р.: способ гадания по расположению аркана; И.: method of fortune-telling; Т.: kement ile fal açmak) *и. миф.*

Арҡандың нисек ятыуына ҡарап күрәҙәлек итеү ысулы. □ Способ гадания по расположению аркана.

**АРҠАР** (Р.: архар; И.: wild ram; Т.: argalı) *и. зоол.*

Ҡусҡар мөгөҙлө эре тау һарығы. □ Архар (лат. *Ovis ammon*).

**АРҠАСАҠ** *и. диал. ҡар.* **арҡысаҡ II.**

**АРҠАСАҠ ЙОНДОҘ** *и. диал. ҡар.* **арҡысаҡ II.**

**АРҠАТАУ** (Р.: верёвка для подъёма и опускания *чего-л.*; И.: kind of cord; Т.: kement çeşidi) *и. этн.*

Солоҡ ҡарағанда төрлө кәрәк нәмәне тартып күтәрә һәм төшөрә торған бау. □ Верёвка для подъёма и опускания *чего-л. (применяется бортниками).* ■ *Кәрәк-яракты аркатау менән тартып алғас, Бикморат, солоктоң ҡапкасын асып, сөрөгө менән быҫкыта-быҫкыта бал ҡарарға тотондо.* Н. Мусин.

**АРҠА ТАЯНЫСЫ** (Р.: опора; И.: support; Т.: savunma) *и.*

Ышанырҙай, ярҙам итерҙәй кеше. □ Опора, защита, покровитель. ■ *[Рыҫҡол:] Кемгә бараһың да, кемгә баш ора беләһең? .. Күҙ терәп барырҙай бер арка таянысым юк.* Б. Бикбай.

**АРҠА ТЕРӘГЕ** *и. ҡар.* **арҡа таянысы.**

**АРҠА ТЕРӘҮ (арҡа терә-)** (Р.: опираться на кого; И.: rely (on); Т.: savunmak) *ҡ.*

Эш-ҡылыҡта *кемгәлер* йәки *нимәгәлер* таяныу, *кемдең* йәки *ниҙеңдер* ярҙамына ышаныу. □ Опираться *на кого.*

**АРҠАУ I (арҡа-)** [боронғо ҡыпсаҡ *арҡағ < арҡа* ‘үреү’] (Р.: продевать уток; И.: pass a weft; Т.: ipliği geçirmek) *ҡ. туҡ.*

Арҡыры еп һалыу. □ Продевать уток *(в основу ткани). Укалар менән аркап, ебәктәр менән ҡайып, .. суклы бауҙар тағып, тәмәке янсығы әҙерлә.* Б. Ишемғол.

**АРҠАУ II** (Р.: уток; И.: weft; Т.: argaç) *и.*

**1.** Туҡымалағы арҡыры еп. □ Уток. *Арҡау ебе.* ■ *Аркауҙары һарылы ла ҡыҙыллы, йәшелле лә зәңгәрле. Күҙ яуын алып торасаҡ!* Н. Мусин. *Кис ултырып әсәй балаҫ һуға, аҫа итеп йөрәк хәстәрен, аркауына ҡушып баҫып китә ҡойолоп төшкән ап-аҡ сәстәрен.* Р. Назаров.

**2.** *диал.* Мурҙа талы. □ Ивовые прутья для сплетения морды. *Һығылмалы таҫмалар менән арҡауҙы осона саклы уратып сығалар.* М. Муллағолов.

**3.** *диал.* Иҙән өрлөгө. □ Матица половая.

**АРҠАУЛЫҠ (арҡаулығы)** (Р.: уток; И.: weft, ; Т.: argaç) *и. тук.*

Туҡыманың арҡыры ебе; арҡау. □ Уток. ■ *Әсәйем матур итеп аҫалы балаҫ һуға торғайны. Буйлыҡ епте һанай ҙа, төрлө-төрлө төҫкә буялған арҡаулыҡты унын аша үткәреп ала.* И. Ғиззәтуллин. *Сулпан йондоҙо калкканда, сабаталар әҙер ине инде. Һәйбәт килеп сыкты: купшылар, икәүһе лә типә-тиң, башындағы арҡаулыҡтар, һылыу кыҙҙың кашы кеүек, һыҙылып тора, бауҙары сирак итеп, һырландырып ишелгән.* Н. Мусин.

**АРҠА ҮҘӘГЕ** *и. кар.* **арҡа һабағы.**

**АРҠА ҺАБАҒЫ** (Р.: часть спины между лопатками; И.: part of back between shoulder-blades; Т.: iki kürekkemiği arasındaki yer) *и.*

**1.** Арҡаның урта буйы. □ Часть спины между лопатками. ■ *Йылы өйҙән тышка сығыу менән, арка һабағы семерләп, калтыратып алды.* Ф. Исәнғолов. *Йәнтүрә быға кыуанып бөтә алманы, сөнки, берҙән, ул, егет кеше арка һабағын эш менән сыныктырырға тейеш, тип карай, икенсенән, урмансы — унын өсөн донъялағы иң шәп һөнәр.* Н. Мусин.

**2.** *диал. кар.* **арҡа һөйәге**.

**АРҠА ҺӨЙӘГЕ** (Р.: позвоночник; И.: spine; Т.: omurga) *и. анат.*

Айырым умыртҡаларҙан төҙөлөп, арҡа буйынан үткән оҙон һөйәк; умыртҡалыҡ. □ Позвоночник. ■ *Арка һөйәген һындырыу. [Насиров:] Минен эргәләге егеттең арка һөйәгенә пуля ултыртты бит, кәһәрең.* З. Ураҡсин.

♦ **Арҡа һөйәкһеҙ** икеләнеп, төрлөсә уйлаған, ышанысһыҙ, ихтыярһыҙ. □ Безвольный, ненадёжный. *Арка һөйәкһеҙ кеше.*

**АРҠАҺЫНДА** (Р.: из-за, вследствие, благодаря; И.: because of; Т.: yüzünden) *бәйл.*

Эш-хәлдең үтәлеү-үтәлмәүенә килтергән сәбәпте белдергәндә ҡулланыла; арҡала. □ Из-за, вследствие, благодаря. ■ *Ҡайһы вакытта кабаланыу йә иғтибарһыҙлык аркаһында ситса төргәктәре эсендәге* талондар төшөп ҡала. С. Агиш. *Әлеге лә баяғы урын аркаһында талаштыҡ.* М. Бураҡаева. *Ғәҙелһеҙлек аркаһында инде...* З. Ураҡсин. *Балалыктан атаһыҙ калып, әсәһе кабат тормошка сыккас, Нурислам Вәлишиндар йортонда үҫте, укыуҙа отҡорлоғо, тырышлығы, тыңлаусан һил холко аркаһында еҙнәһенең яраткан ҡәйнешенә әйләнде.* Ә. Хәкимов. *Ниндәйҙер мөғжизә аркаһында ғына өлкән йәшкә еткән һуғыш ветерандары тормоштан туҙып, ерҙә эшләүҙән бөгөлөп үлә...* Т. Ғиниәтуллин. ● *Бер куй аркаһында мең куй һыу эскән.* Мәҡәл.

**АРҠЫЛЫ** *с. диал. кар.* **арҡыры.** ■ *Ауылға етәрәк, юлдан аркылы аккан йылға ярында Петр туктап калды.* Н. Мусин.

**АРҠЫЛЫУ (арҡыл-)** *ҡ. диал. кар.* **артылыу I**. ■ *[Иҙеүкәй — Мораҙымға:] Ғәйрәт кунған һының бар, бәхетең китер аркылып.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**АРҠЫРАЙЫУ (арҡырай-, арҡырая)** *ҡ. диал. кар.* **киреләнеү**.

**АРҠЫРЫ I** [боронғо төркиарҡуру] (Р.: поперёк; И.: across; Т.: enlemesine) *р.*

Буйға киҫә йүнәлештә. □ Поперёк. ■ *Шәрғиә сығып китергә ыкталғас, Фазыл унын юлына аркыры төштө.* Ә. Хәкимов. *Эйе, Фазылетдин кыҙға битараф та кеүек ине, хатта ауылдашы Әхмәтхан юлына аркыры ла сыкманы, Рәшиҙә уны үҙе һайланы.* Р. Камал. *Йырткыс телен аркыры тешләгән, унын башы бер якка әҙерәк кәкрәйгән, кулдары һалынып төшкән, аяктары ергә тейә яҙып тора, күҙҙәре ярым асык, муйыны аркандын токонона һығылған.* Ж. Кейекбаев.

**АРҠЫРЫ II** (Р.: поперечный; И.: cross-cut; Т.: enine) *с.*

**1.** Буйға киҫә ятҡан, буйҙы тура киҫеп үткән. □ Поперечный.

**2.** *күсм.* Тиҫкәре. □ Упрямый. ■ *Ә беҙҙең лесничий Йомағол ағай унан да яман арҡыры. Шуға ла һыйыша алманы инде улар.* Н. Мусин. *Оло урыҫ түрәләр арҡыры һүҙлене ярата буламы.* Б. Рафиҡов.

**3.** *мат.* Буйға ҡаршы йүнәлештәге. □ Поперечный, накрест. *Арҡыры киҫелеш. Арҡыры масштаб. Арҡыры ятыусы мөйөштәр. Арҡыры ятыусы эске мөйөштәр.*

**АРҠЫРЫ III** (Р.: ширина; И.: width; Т.: genişlik) *и.*

Нәмәнең оҙонлоҡҡа киҫә йүнәлештәге яғы. □ Ширина. *Арҡырыға бер метр. Йылғаның арҡырыһы киң генә.*

♦ **Арҡыры ятҡанды буй алып һалмау** бер ни ҙә эшләмәү; ҡыл да ҡыбырлатмау. □ Ничего не делать, палец о палец не ударить. ■ *Беҙҙең Гүзәл арҡыры ятҡанды буй алып һалмай. Балалыҡҡа уның эсе бошмай.* З. Биишева. *[Ғариф:] Ҡара ялҡау өйөрлө. Арҡыры ағасты буй ҙа бороп һала белмәйҙәр, өгөп тормаһаң!* Ж. Кейекбаев. **Тамағыңа арҡыры торғоро** (*йәки* **торһон)** ҡарғағанда әйтелә. □ Пусть поперёк горла встанет *(проклятие).*

**АРҠЫРЫ IV** (Р.: через; И.: across; Т.: ...dan) *бәйл. (төп. клш. менән)*

**1.** *Нигеҙҙер* бер яғынан икенсе яғына табан булған йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; аша. □ Через *(послелог с исх.п.). Диңгеҙ арҡыры. Соҡор арҡыры.* ■ *Мин, тимер юл арҡыры сығып, юлдың канауына яттым.* Д. Юлтый. *Иглин станцияһы арҡыры вагондарының түбәһенә тиклем юлсылар менән тулған поезд үтеп китте.* И. Насыри. *Зал арҡыры үтеп барған Сәхибә быларға [Камали менән Ғарифҡа] күҙен төшөрҙө.* Ғ. Хәйри.

**2.** *Ниҙеңдер* үтәһенән сыҡҡан йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; үтә, аша. □ Сквозь, через. *Торба стена арҡыры үтә. Урман арҡыры үткән юл.* ■ *Һыуһылыу әбей .. туктауһыҙ аҡҡан күҙ йәштәре арҡыры .. улының йәшкәҙәгән күҙҙәренә ҡараны.* Ғ. Дәүләтшин.

**3.** Тар юл йәки тишектән үткән йүнәлеште белдергәндә ҡулланыла; үтә. □ Через, сквозь. *Ишек арҡыры. Тәҙрә арҡыры. Тыҡрыҡ арҡыры ауыл ситенә сыҡтыҡ.*

**4.** Эш-хәрәкәттең берәй кеше йәки сара ярҙамында башҡарылғанын белдерә. □ Посредством, путём *чего,* через *что. Кеше арҡыры. Танышлыҡ арҡыры.* ■ *Бер шулай хат арҡыры ҡыҙҙар саҡырған, кил, тиеп.* Ш. Бабич. *[Ниғмәтйән:] Уның [Ҡарабаш] арҡыры әллә ни тиклем ағас тауарҙар оҙатты.* И. Насыри. *[Ғәли менән Шәмси:] Ҡайғырма, еңгә, хәҙергә ҡайтып тор, кисен Рәфиҡ арҡыры он илттерербеҙ.* Ғ. Хәйри.

**АРҠЫРЫ АҒАС** (Р.: перекладина; И.: crossbeam; Т.: lento) *и.*

**1.** *Нимәгәлер* арҡыры ҡуйылған ағас. □ Перекладина, поперечина.

**2.** *диал. ҡар.* **урҙа I, 1.**

**3.** *диал. ҡар.* **бик I.**

**АРҠЫРЫ АЯҠ** (Р.: кривоногий; И.: bow-legged; Т.: paytak) *и.*

**1.** Аяғын арҡыры баҫып йөрөгән кеше. □ Кривоногий, кривоножка.

**2.** Әрләү һүҙе. □ Ругательное слово. *[Сәхибә:] Ҡарт мулла, оятһыҙ мулла .. көмрө, арҡыры аяҡ.* Ғ. Хәйри.

**АРҠЫРЫ-БУЙ I** (Р.: крест-накрест; И.: crisscross; Т.: çaprazlama) *р.*

**1.** Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. □ Крест-накрест, вдоль и поперёк. ■ *Түбәнә йомро, шыма беләү таштар түшәлгәнлектән, ул [Ҡыҙылташ йылғаһы], күпме кеше һыу инһә лә, һис ҡасан буйрамай, ағымы ла ҡаты түгел, өҫкә ҡарай ҙа, арҡыры-буйға ла рәхәтләнеп йөҙөп йөрөйһөң.* Н. Мусин. *[Ҡыҙрас:] Хатта ул күлде әллә нисәмә тапҡыр арҡыры-буй йөҙөп, дегет кеүек ҡапҡара булып сыҡҡаным бар минең...* З. Биишева.

**2.** *күсм.* Бөтә йүнәлештә; иңләп-буйлап. □ Вдоль и поперёк. ■ *Әле мин үҙемдең Башҡортостан ерен дә арҡыры-буй әйлә-*

*неп сыға алғаным юк.* С. Кулибай. *Ялан-туғайҙарҙы арҡыры-буй иңләйһе ине.* Р. Солтангәрәев.

**АРҠЫРЫ-БУЙ II** (Р.: перекрёстный; И.: cross; Т.: çaprazlı) *с.*

Киҫешеп үткән ике йүнәлештәге; арҡыс-торҡос. □ Перекрёстный. *Япрактарҙың арҡыры-буй теҙелеше.*

**АРҠЫРЫҒА** *р. кар.* **арҡыры I**. *Арҡырыға бысыу.* ■ *Малайҙар, уны [утрауҙы] бер нисә ҡат уратып, арҡырыға ла, буйға ла йөрөп сыҡҡас, уның урындыҡ һымаҡ йәйелеп ятҡан киң, яҫы ташына баҫып, күл өҫтөнә ҡарап торҙолар.* З. Биишева.

**АРҠЫРЫЛАЙ** (Р.: поперёк; И.: crosswise; Т.: enine) *р.*

Арҡырыға табан. □ Поперёк. *Бүрәнәне арҡырылай һалыу.* ■ *[Сураҡол] билғауын, сисеп, сыуал алдына арҡырылай ҡуйылған ағас урҙаға эл[де].* Т. Хәйбуллин.

**АРҠЫРЫЛАНЫУ (арҡырылан-)** (Р.: упрямствовать; И.: persist; Т.: inat etmek) *ҡ.*

Ыңғайға килмәй тиҫкәреләнеү, киреләнеү. □ Упрямствовать, упрямиться. *Малай арҡырылана башланы.*

**АРҠЫРЫ-ТОРҠОРО** (Р.: беспорядочный; И.: disorderly; Т.: dağınık) *с. диал.*

Арҡыс-торҡос. □ Беспорядочный, вдоль и поперёк. ■ *Ҡайһы берәүҙәр уның итәгенән ҡара йөндәре һалынып күренеп торған һары тунына, ҡарталар һала торған һары сумкаһына, түбәһендәге ҡара буҫтау өҫтөнән арҡыры-торҡоро һары уҡа йүгертелгән ҡаракүл бүркенә, киң башлы һалдат итегенә, билендәге наганына ҡарап, «был хәрби кешеләр», тинеләр.* И. Насыри.

**АРҠЫРЫ ТӨШӨҮ (арҡыры төш-)** (Р.: преграждать путь; И.: bar; Т.: bölme ile ikiye ayırmak) *ҡ.*

**1.** Юлға кире, киҫә төшөү. □ Преграждать путь, стать поперёк пути. ■ *Бригадир сығып китәм тигәндә, Фәхри уның юлына арҡыры төштө.* Б. Бикбай.

**2.** *күсм.* Риза булмау; ҡаршы төшөү. □ Возражать, препятствовать *кому-чему.* ■ *Сепаратор алайыҡ тигәс, ата-бабай тотмаған нәмәне, тип арҡыры төштөң.* Т. Йәнәби. *Уны [Ишмырҙаны] ауыр шарттар ҙа, эш тә бөгә алмаҫ ине; енәйәт эшләргә йөрөүселәрҙең юлына арҡыры төшкән, береһе осраҡлы рәүештә үлгән өсөн ошо хәлгә тарыуы йөрәген туктауһыҙ игәп тора.* Н. Мусин.

**АРҠЫРЫ ТҮШӘК** *и. диал. кар.* **түр юрған.**

**АРҠЫРЫ ҺУҘМА** *и. диал. кар.* **түр юрған.**

**АРҠЫСАҠ I (арҡысағы)** (Р.: крестовина; И.: crosspiece; Т.: çift çatal) *и.*

Бер-берһенә арҡыры беркетелгән ике ағас йәки башҡа нәмә. □ Крестовина *(из различного материала). Шыршы өсөн арҡысаҡ. Арҡысаҡ ҡуйыу.*

**АРҠЫСАҠ II (арҡысағы)** (Р.: Орион; И.: Orion; Т.: Orion) *и. астр.*

Арҡыс-торҡос өсәр йондоҙҙан торған йондоҙлоҡ *(ҡыш көнө генә күренә).* □ Крест *(созвездие Ориона).* ■ *Ишмырҙа Өлкәр, Етегән, Сулпан, Арҡысаҡ йондоҙҙарын таный, ләкин быныһының исемен белмәй.* Н. Мусин.

**АРҠЫС-ТОРҠОС** (Р.: беспорядочный; И.: disorderly; Т.: dağınık) *с.*

**1.** Бер арҡыры, бер буй; бер-берһенә арҡырылаш. □ Беспорядочный. *Арҡыс-торҡос һалыу. Арҡыс-торҡос ятыу.* ■ *[Аҡтырнаҡ] арҡыс-торҡос баҫып, лапаҫ аҫтынан килеп сыҡты.* Х. Ғиләжев. *[Ғариф] тиҙәктәрҙе кәртә артына сығара һалып ташларға ҡушты; ҡапҡа тирәһендә арҡыс-торҡос ятҡан бүрәнәләрҙе бер урынға өйҙөрҙө.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Киҫешеп үткән ике йүнәлештә. □ Крест-накрест. ■ *[Рамазан] барһа, өйҙөң тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡағылған, ишеге бикле.* Ә. Хәкимов.

**АРҠЫСАҠ-ТОРҠОСАҠ** *с. кар.* **арҡыс-торҡос.**

**АРЛАН** (Р.: кобель, пёс; И.: male dog; Т.: erkek köpek) *и.*

**1.** Ата енесле эт. □ Кобель, пёс.

**2.** *диал.* Ата, иркәк. □ Самец *(зверя).*

**АРЛАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

**АРЛЫ-БИРЛЕ I** (Р.: маловажный, незначительный; И.: insignificant; T.:önemsiz ) *с.*

Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк. □ Маловажный, незначительный. *Арлы-бирле эш.*

**АРЛЫ-БИРЛЕ II** (Р.: кое-как; И.: haphazardly; T.: şöyle-böyle) *р.*

Ашыҡ-бошоҡ, теләһә ҡалай ғына. □ Кое-как, как попало. *Арлы-бирле ашау. Арлы-бирле һөртөү.* ■ *Ҡулдан арлы-бирле сыймаҡланған ҡағыҙға ҡарау менән үҙе иртән үткән баҫыуҙарҙы таныны.* Т. Ғарипова. *Мин шулай арлы-бирле иҫемде йыйғылағансы, ала айғыр егеүе-ние менән текә ярҙан күл ситенә төшөп тә етте.* Ф. Иҫәнғолов. *Дилбәр был мәхлүкте [бесәйҙе] күтәреп алды ла, арлы-бирле йыуындырып, ҡуйынына тыҡты.* Г. Ғиззәтуллина. *[Ханнан:] Ағай, арлы-бирле мулланы саҡырып, никах уҡытмай, бер төрлө үҙеңдеке итмәй алып китеү әллә нисек була бит әле.* М. Буранғолов.

**АРЛЫ-БИРЛЕ БУЛЫУ (арлы-бирле бул-)** (Р.: случиться, произойти; И.: occur; T.: bir şeyler olmak) *ҡ.*

**1.** Әҙ генә бер төрлө хәлгә килеү, ниндәй ҙә булһа бер хәл ҡубыу. □ Случиться, произойти. ■ *[Яланбикә] Исхаҡ ағайым уны [шымсы Ширәйҙе], арлы-бирле булғансы, бал эсереп иҫертербеҙ, ти.* Һ. Дәүләтшина.

**2.** Бер-бер ауыр, насар хәлгә осрау. □ Попасть в трудное положение. *Һаман юксы был ағайың, арлы-бирле булып ҡуймаһын.*

**АРЛЫ-БИРЛЕ ИТЕҮ (арлы-бирле ит-)** (Р.: выполнять мелкую работу; И.: perform small work; T.: küçük işler yapmak) *ҡ.*

Ул-был эште эшләү. □ Выполнять мелкую работу. ■ *Улар сускаларҙы ашатып, арлы-бирле иткәнсе, кис тә булып китте.* Ә. Зәйнуллин. *Ул [Сәлиха] арлы-бирле иткәнсе, Сәмиғулла атын егә торҙо.* Ж. Кейекбаев. *[Шәһүрә] Ҡайтып, арлы-бирле иткәс, ҡулына эш бармайынса, диванға килеп ултырҙы.* Н. Мусин.

**АРМАЙ** [боронғо монгол *албань* 'йыйыусы'] (Р.: палач; И.: hangman; T.: cellat) *и. иҫк.*

**1.** Яза хөкөмөн еренә еткерә торған кеше; палач. □ Палач. ■ *[Тевкелев] биш тапҡыр яуызыраҡ. Армайҙың да армайы.* Ғ. Ибраһимов. *Суртмаҡ баҫҡаҡ, халыҡтан йыйған бөтә мөлкәтте тейәп, үҙенең әйҙәүелдәре, армайҙары, һаҡсылары менән Ирәктә иленән сығып киткән.* К. Мәргән. *[Морат:] Ундай ғәскәр менән Урҙа армайҙарын дөмбәҫләргә булыр ине.* Ә. Хәкимов.

**2.** Ҡамсы язаһы. □ Наказание розгами, плетьми. *Армай һуғыу.*

**АРМАН** [фарс. ارمان] (Р.: желание, стремление; И.: desire; T.: arzu) *и. иҫк.*

Ҙур теләк, ынтылыш. □ Сильное желание, стремление. ■ *Бәҙекәй һылыу, һинең арманың юк, ағай-эне ятты юлыңа.* Халыҡ йырынан.

**АРМАНҺЫҘ** (Р.: изможденный, обессиленный; И.: emaciated; T.: cılızlaşmış) *с.*

Көс-хәлдән тайҙырғыс, ауыр. □ Измождённый, обессиленный. *Арманһыҙ итеү.* ■ *Ул [Мөбәрәк] һуңғы ваҡытта көн һайын тиерлек арманһыҙ булып һуңлап ҡайта башланы.* Н. Мусин. *Мәғәфүр менән Әбделхаҡ арманһыҙ булып ҡайтып, аталарына «байтал табылманы» тигән хәбәрҙән башка бер нәмә лә әйтә алманылар.* Ж. Кейекбаев. *[Йәмил] атта улай ҙа, былай ҙа сабып йөрөй торғас, кискә арманһыҙ булып йығылды.* Р. Ҡол-Дәүләт. *Арманһыҙ булып арыған тоткондар ҡапыл ғына йоҡоға китә алмай ыҙалана.* Ә. Хәкимов.

**АРМА-ТОРМА КИЛТЕРЕҮ (арма-торма килтер-)** (Р.: разнести в пух и прах; И.: defeat decisively; T.: yerden yere vurmak) *ҡ. диал.*

Пыр туҙҙырыу. □ Разнести в пух и прах. ■ *Бер көн Нурғәли иҫереп килеп кергән. Тәртешкә менән арма-торма килтереп сыға-*

*рып ебәрҙем.* Р. Солтангәрәев. *[Нурия:] Ә хәҙер башты ла күтәрмәйем, сүп үләндәрен арма-торма итеп ҡыям ғына.* Г. Яҡупова.

**АРМАТУРА** [рус. < лат. *armatura*] (Р.: арматура; И.: accessories; Т.: çelik kafes) *и. тех.*

**1.** *Ниндәйҙер* аппарат, машина, конструкция өсөн тәғәйенләнгән приборҙар, механизмдар. □ Арматура. *Һыу үткәргес арматураһы. Машина арматураһы. Электротехник арматура.* ■ *[Рая:] Хәҙер, ҡайтып, арматура алып килергә лә алмаштырырға кәрәк.* Р. Солтангәрәев.

**2.** Ҡоролмаларҙың металдан эшләнгән каркасы. □ Арматура. *Арматура нык булһа, тимер-бетон нәмәләр ҙә сыҙамлы була.* Ф. Абдуллин.

**АРМАТУРАЛАУ (арматурала-)** (Р.: армировать; И.: armor; Т.: güçlendirmek) *ҡ. тех.*

Арматураны индереү юлы менән конструкцияның йәки материалдың ныҡлығын арттырыу. □ Армировать. Армирование. *Бетон арматуралау.*

**АРМАТУРАЛАНЫУ (арматуралан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арматуралау.** *страд. от* **арматуралау.**

**АРМАТУРАСЫ** (Р.: арматурщик; И.: metalworker for reinforced concrete; Т.: demirci) *и.*

Арматура ҡоролмаларын йыйыусы йәки әҙерләүсе кеше. □ Арматурщик. ■ *Арматурасылар ең һыҙғанып эшкә тотондо. Нәҙек тимерҙән арҡыс-торҡос йәбештереп яһалған бағаналар минут һайын күбәйә барҙы.* Ф. Абдуллин.

**АРМЕЕЦ** [рус.] *и. ҡар.* **һалдат.**

**АРМИЯ** [рус. < фр. *armee* < *armer* 'ҡоралландырыу'] (Р.: армия; И.: army; Т.: ordu) *и.*

**1.** Дәүләттең барлыҡ ҡоралды көстәре *(ҡоро ер, диңгеҙ, һауа)*; ғәскәр. □ Армия. ■ *Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан Әхмәтсолтандың бейеүе айырыуса оҡшай торғайны уға [Сәлимгә].* С. Поварисов. *[Әлфиә:] Рөстәмде иртәгә армияға алып китәләр.* Ә. Хәкимов. *[Нәсимә] Ҡулындағы ике гәзиттең береһенән тәүҙә беҙҙең армияның Мәскәү эргәһендә немецтарҙы тар-мар итеүе, байтаҡ ҡала, ауылдарҙың азат ителеүе тураһында уҡыны.* Н. Мусин.

**2.** Хәрби операциялар үткәреү өсөн тәғәйенләнеп, бер нисә корпус йәки дивизиянан төҙөлгән хәрби берәмек. □ Армия. ■ *Ғәле Йосопов Ленинград һәм Волхов фронттарының ҡушылыуына шаһит була, һуңынан фашистарҙы 2-се удар армия составында ҡыйрата.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**3.** Ҡоро ер ғәскәре. □ Армия.

**4.** *күсм.* Дөйөм эш-маҡсат менән берләшкән кешеләр төркөмө. □ Армия. *Йәш төҙөүселәр армияһы. Эшһеҙҙәр армияһы.*

**АРМЫТ I** (Р.: отрог; И.: spur; Т.: kol) *и.*

**1.** Бер урындан башҡа-башҡа киткән тармаҡ. □ Отрог. *Тау армыты.* ■ *Көнбайышта береһенән-береһе бейек булып Урал армыттары күтәрелә.* М. Ҡотлоғәлләмов. *[Һабраҙың] күҙ алдына Урал армыттары, Яйыҡ, Һаҡмар, Һайылмыш буйҙары килеп баҫты.* Ә. Хәкимов. *Беҙҙең ауылдан ҡарағанда, ул Биллеғош һыртының тәүге армыты булып, тау уртаһына һыҙылған бер һыҙат булып ята.* Д. Шәрәфетдинов. *Урал армыттары яҡынайған һайын, тиҙерәк ҡайтып еткеһе килеп, Кинйәнең йөрәге осар ҡоштай талпынды.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Сат, айырса, тармаҡ. □ Развилина, развилка, рукав. *Йылға армыты. Юл армыты. Мәмерйә армыты.*

**3.** Бер төйөндән айырылған тармаҡ, айырса. □ Ветвь, ответвление. *Өс армытлы ҡамсы.* ■ *Биш армытҡайҙарҙан сәсмәү тағып, күпме йөрөрмөн тиң ҡыҙ булып.* Халыҡ йырынан. *[Ҡарт] башына керләнеп бөткән сәллә уралып, ялан аяҡтары ҡайыш менән сырмалып бөткән; һул ҡулына оҙон таяҡ, уңына осо армыт ҡамсы тотоп алған.* «Зөһрә менән Алдар».

**АРМЫТ II** (Р.: груша; И.: pear; Т.: armut) *и. бот.*

**1.** Гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған аҡ йәки алһыу сәскәле емеш ағасы; груша. □ Груша. *Армыт ағасы. Армыт сәскәһе.*

**2.** Шул ағастың емеше. □ Груша. *Армыт һуты. Армыт ашау.*

**АРМЫТ III** (Р.: кисть; И.: brush; Т.: püskül) *и. этн.*

Ышлыяның арҡыры төшөрөлгән ҡайыштары. □ Наборная кисть шлеи.

**АРМЫТЛЫ** (Р.: с отрогами; И.: with spurs; Т.: kollu) *с.*

**1.** Армыты, тармағы булған. □ С отрогами. *Армытлы тауҙар.*

**2.** Саты, айырсаһы, тармағы булған. □ Развилистый, разветвлённый. *Армытлы юл.*

**3.** Бер нисә тармағы, айырсаһы булған. □ Имеющий несколько концов, хвостов. *Армытлы ҡамсы.*

**АРНАЛЫУ (арнал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **арнау**. *страд. от* **арнау**.

**АРНАТЫУ (арнат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **арнау**. *понуд. от* **арнау**.

**АРНАУ (арна-)** (Р.: посвящать; И.: devote; Т.: adamak) *ҡ.*

**1.** Берәй нәмәне *кемдер* йәки *ниҙер* хөрмәтенә тәғәйенләү, бағышлау. □ Посвящать. *Һөйгәнеңә шиғыр арнау. Ғүмерҙе сәнғәткә арнау.* ■ *Әллә айға арнағанмы һандуғас йырын?* С. Юлаев. *Арнап өҙҙөм тик һиңә тип наҙлы, саф ҡыр гөлдәрен.* Р. Янбулатова. *Ҡыйралыштан иҫән-һау ҡотолоп сыҡһам, ғүмеремде фәнгә, тыныс хеҙмәткә арнау ине ниәтем.* Ә. Хәкимов. *Тормоштоң киң юлы, оло маҡсат бына шул — үҙеңдең бөтә эшеңде кешеләр бәхетенә арнау түгелме икән?* Н. Мусин.

**2.** Берәй нәмәне *кемгәлер* биреү өсөн билдәләү, алдан тәғәйенләү. □ Предназначать. *Арнап ҡуйыу.* ■ *Аҙнағол ҡайтып китә. Зөлхизә .. һөйгәненә арнап йыр сығара.* З. Биишева.

**АРНЫУ (арны-)** *ҡ. ҡар.* **арыныу.**

**АРПА I** [дөйөм төрки *арпа*] (Р.: ячмень; И.: barley; Т.: arpa) *и.*

Орлоғо ярма, һыра һәм фураж әҙерләүҙә файҙаланыла торған оҙон ҡылсыҡлы ашлыҡ. □ Ячмень (лат. *Hordeum*). *Арпа баҫыуы. Арпа сәсеү. Арпа ярмаһы. Ҡырлы арпа. Ҡырағай арпа. Тыу арпа.* ■ *Ҡурмас бары .. аҫаба башҡорттар тарафынан яһала. Арпаны, ҡоро ҡаҙанға һалып, ҡыҙҙыралар.* М. Өмөтбаев. *[Берта] ике алашаның береһен арбаға егеп, уға бер ток арпа, ҡаҡлаған суска түшкәһе һалып, фольксштурм отрядына тапшырып ҡайтты.* Ә. Хәкимов. *[Мәрзиә] Өлгөргән арпаны урҙы, аҙ-маҙ бесән әҙерләп, утын ташып ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов. ● *Арпа сәскән бойҙай урмаҫ.* Әйтем.

**АРПА II** (Р.: ячмень *(на глазу)*; И.: sty(e); Т.: arpacık) *и. мед.*

Керпек төбөнә сыға торған эренле шешек. □ Ячмень *(на глазу)*. *Арпа сығыу.*

**АРПА ИМЛӘҮ (арпа имлә-)** (Р.: заговаривание ячменя; И.: exhorsize the sty; Т.: arpacığı büyü etmek) *ҡ.*

Төрлө ырым, һүҙ менән керпек төбөнә сыҡҡан шешекте дауалау. □ Заговаривание ячменя. ■ *Арпаны өс, ете, туғыҙ бөртөк арпа, итәк, иҙеү осо, урта бармаҡ менән төртөп имләйҙәр.* Ф. Хисамитдинова.

**АРПА-КӨРПӘ** (Р.: собственное название духа болезней глаз; И.: name of an evil spirit; Т.: göz hastalıkların ervahı) *и. миф.*

Күҙ ауырыуҙарын булдырыусының исеме. □ Собственное название духа болезней глаз. *Арпа-көрпә, мә күкеш.*

**АРПАЛАУ** *и. диал. ҡар.* **арпа имләү.**

**АРПА ТЕЛЕ** (Р.: заговор ячменя; И.: sty exorcism; Т.: arpacık büyüsü) *и.*

Күҙ ауырыуҙарын имләгәндә ҡулланылған һамаҡтар. □ Заговор ячменя.

**АРПА ТӨРТӨҮ** (Р.: способ лечения ячменя; И.: way to treat a sty; Т.: arpacığı tedavi etmek uslü) *ҡ.*

Арпаны имләү ысулы. □ Способ лечения ячменя. *Арпа орлоғо, йылы икмәк, бармаҡ һ.б. менән арпа төртәләр.*

**АРПА ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух ячменя; И.: spirit of the barley; Т.: arpacık ervahı) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, керпек төбөнә сыға торған ауырыуҙың башлаусыһы, мифик зат. □ Дух ячменя. ■ *Арпа эйәһен башҡорттар һары сәсле бәләкәй генә һуҡыр*

*әбей ҡиәфәтендә күҙ алдына килтергән.* Ф. Хисамитдинова.

**АРПА ӘПСЕНЕ** (Р.: способ заговаривания, лечения ячменя; И.: way to treat a sty; Т.: arpacığı tedavi etmek uslü) *и.*

Керпек төбөнә сыҡҡан шешекте дауалау сараһы, име. □ Способ заговаривания, лечения ячменя. *Арпа әпсененең бер нисә төрө бар.*

**АРСА I** (Р.: вереск обыкновенный; И.: common heather; Т.: funda) *и. бот.*

Ваҡ япраҡлы, алһыу күк сәскәле, көньяҡта үҫә торған мәңге йәшел ҡыуаҡ. □ Вереск обыкновенный (лат. *Calluna vulgaris*). *Һаҙ арсаһы.*

**АРСА II** *и. диал.*

**1.** *кар.* **арсый II.**

**2.** *и. диал. ҡар.* **ҡоҙаса.**

**АРСА БАЛЫ** (Р.: вересковый мёд; И.: heath honey; Т.: funda balı) *и.*

Арса ҡыуағының сәскәһенән йыйылған бал. □ Вересковый мёд.

**АРСАЛАУ (арсала-)** *к. ҡар.* **әрсәләү.**

**АРСЕНАЛ** [рус. < фр. *arsenal*] (Р.: арсенал; И.: storehouse; Т.: cephanelik) *и.*

**1.** Ҡорал һаҡлай торған ҙур склад. □ Арсенал. ■ *Ул [Ырымбур] үҙенең туптура урамдары .. ҡорал арсеналы, ҙур сиркәүҙәре, бейек-бейек йорттары .. менән мәғрур һынланып, «мин Россияның кеүәте» тип, шәрек яҡтарына ғорур ҡарап тора.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *күсм. Нимәнеңдер* ҙур миҡдары; байлыҡ сығанағы. ■ *Башҡортостан .. үҙе ҡеүәтле арсенал булып әүерелде: ул фронтка нефтен дә, коросон да, игенен дә — бөтә нәмәһен дә бирҙе.* «Совет Башҡортостаны», 9 май 1966.

**АРСЫ** (Р.: повозка; И.: cart; Т.: araba) *и.*

**1.** *диал. этн.* Ҡыҙҙы кейәү йортона оҙата торған арба. □ Повозка, на которой провожают невесту.

**2.** *иҫк.* Ҡорал һәм хәрби кәрәк-яраҡ эшләгән, ремонтлаған урын.

**АРСЫЙ I** (Р.: личная охрана; И.: street guard; Т.: muhafızlar) *и. тар.*

Батша, хан эргәһендәге иң яҡшы һайландыҡ ғәскәр һәм шул ғәскәрҙә хеҙмәт иткән кеше. □ Личная охрана *(при царе, султане, хане).* ■ *Ә ихата эсендә өйҙө ике йөҙ ғәләм-хандың эттәй тоғро арсыйҙары һаҡлай.* Ә. Хәкимов.

**АРСЫЙ II** (Р.: провожатый; И.: guide; Т.: rehber) *и. этн.*

Ҡыҙҙы кейәү йортона оҙата барған кеше. □ Провожатый *(мужчина, родственник, сопровождающий невесту в дом жениха после свадьбы). Арсый булып килгән башка ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙарҙың да һәр ҡайһыһына дәрәжәле уҙактар билдәләнгәйне.* Ғ. Ибраһимов.

**АРСЫЙ АШАУ (арсый аша-)** (Р.: девичье чаепитие на свадьбе; И.: tea Party; Т.: çay partisi) *к. диал. этн.*

Туй ваҡытында ҡыҙҙар мәжлесе. □ Девичье чаепитие на свадьбе. *Туйҙың икенсе көнөндә арсый ашау үткәрелә.*

**АРҪ** (Р.: подражание внезапному грубому лаю, гавканью собаки; И.: imitation of barking; Т.: köpek havlamasına taklit etmek) *оҡш.*

Ҡалын тауышлы эт ҡапыл өргәнде белдергән һүҙ. □ Подражание внезапному грубому лаю, гавканью собаки. *Арҫ итеү. Арҫ-арҫ итеү.*

**АРҪЫЛДАУ (арҫылда-)** (Р.: гавкать (продолжительно); И.: bark; Т.: havlamak) *к.*

Арҫ-арҫ итеп өрөү. □ Гавкать (продолжительно). *Арҫылдап өрөү.*

**АРТ I** [дөйөм төрки *арт* < *арын*] (Р.: зад.; И.: rear; Т.: arka) *и.*

**1.** Йөҙгә, күҙгә кире тараф; *киреһе* — ал. □ Зад. ■ *Донъя алмаш. Бер ҡараһаң, алдын, бер ҡараһаң, артын күрһәтә.* М. Ямалетдинов. *[Әсәһе — Кинйәбайға:] Салғыңды үтә ҡыҫып тотма, усың күберсер, .. һелтәгәндә салғыңды нык күтәрмә, алымыңдың арт яғы тигеҙ киҫелмәҫ.* Н. Мусин. *Шул арала Ғәшүрә малайҙың арт яғына килеп баҫты.* Р. Ҡол-Дәүләт.

**2.** *Ниҙеңдер* кире яғындағы урын. □ Задняя сторона. *Мейес арты. Ситән арты. Һарай арты. Өй арты.*

**3.** Ҡайһы бер географик атамалар менән килгәндә, шул урындан ары булған ерҙе белдерә. □ В составе географических названий соответствует приставке *за-*. *Урал арты. Кавказ арты.*

**4.** *Ниҙең дә булһа* йөҙөнә ҡаршы өлөшө. □ Задняя часть *чего-л.*, задок. *Дәфтәрҙең арты.* ■ *Көҙгөнө диуарға арт яғы менән дөрөҫ урынлаштырмаһаң, уның ал яғы йәки йөҙө таплана.* С. Поварисов.

**5.** *Нимәнеңдер* арҡа терәге өсөн эшләнгән ҡулайламаһы. □ Спинка. *Сана арты. Ултырғыстың арты.*

**6.** *һөйл.* Кәүҙәнең арҡа яғынан билдән түбәнге өлөшө; ултырыш. □ Зад, седалище. ■ *Уның [Ишмырҙа кантондың] һүҙе закон, аҙ ғына ҡаршы килә башланыңмы, хәҙер яткыра ла, арт иттәрең бейәләй-бейәләй булып ҡубып төшкәнсе, тал сыбыҡ менән һыҙыра торғайны.* И. Насыри. *Йә, бала, бәхет-тәүфиғың менән! — Ҡарсыҡ, күрәһең, сабыйға теләк теләп, арт һанына бер-ике сәпәп алды...* М. Хужин. *Аллабирҙе уғын беренсе булып атып ебәрә: уҡ үҙенә ташланған януарҙың арт һанына барып ҡаҙала.* «Алдар менән Зөһрә».

**7.** Бер эш-хәлдең аҙағы, һуңы. □ Исход, последствия. *Арты хәйерле булһын. Бер уңмаған эштең артынан ҡыума.* ● *Алдашһаң да артын уйла.* Әйтем. *Алтын көҙ арты — һалҡын көҙ.* Әйтем.

**8.** *күсм.* Эш-ҡылыҡҡа көс, ышаныс бирер нигеҙ. □ Опора, поддержка. *Арты ныҡ булыу.* ■ *Әхтәри ҡарттың арты бик ныҡлы: ул йәш сағында Ырымбурҙа бик оҙаҡ хеҙмәт итеп, һуғышта батырлыҡтар күрһәтеп, крест миҙал алып ҡайтҡан.* Ж. Кейекбаев. ● *Алдыңда ышаныс булһын, артыңда таяныс булһын.* Әйтем.

**9.** 3-сө зат эйл. һәм сығ., у.-в. клш. формаһында килгәндә бәйләүес функцияһында ҡулланыла (*ҡар.* **артынан, артында**). □ Выполняет функцию послелога (*см.* **артынан, артында**). ■ *Көн артынан көн үтте, айҙар йылға ялғанды.* Ғ. Хисамов.

**10.** *миф.* Төрки мифологияһында көнбайыш, ҡурҡыныс, үлем менән бәйле ара. □ Опасное пространство.

♦ **Арт биреү** арт менән боролоу; арҡа биреү. □ Поворачиваться спиной *к кому-чему*, отворачиваться *от кого-чего (выражая недовольство)*. **Арт һабағын уҡытыу** аҡылға ултыртыу. *Кемдеңдер* кәрәген биреү. □ Проучить. ■ *[Дәүләтов:] Егеттәр, фрицтарҙың арт һабағын уҡытайыҡ әле.* Ә. Ихсан. *Ояты ҡаса башлағандарҙың арт һабағын уҡытып та ҡуялар ҡай саҡ.* Г. Яҡупова. *Хәҙер алда бер генә бурыс — Йәнәйҙең арт һабағын уҡытып алыу тора.* К. Мәргән. **Арты еүеш** эше мөшкөл, хәле насар. □ Плохо дело. *Судья матур һүҙ һөйләргә бик оҫта, ә үҙенең арт яғы еүеш .. Уның үҙ улын да кисә ҡулға алғандар.* Х. Зарипов. **Артынан төшөү** 1) Эҙәрләп баҫтырыу. □ Неотступно преследовать. 2) Ҡыҫымға алыу. □ Оказывать давление. ■ *Райком арттарынан төшкәс кенә, [ашламаны] ташыта башланылар.* Д. Исламов. **Артына ҡулы етмәү** ишек, ҡапҡаны япмай киткән кешегә әйтелә. □ Рука спину не достаёт *(о человеке, который за собой не закрывает двери и недоделывает что-л.)*. **Артыңа көл!** «ҡабат килеп күренмә» тигән мәғәнәлә әйтелгән ҡарғыш. □ *соотв.* Скатертью дорога.

**АРТ II** [рус. < фр. *art*] (Р.: арт; И.: art; Т.: sanat) *и.*

**1.** Ҡушма һүҙҙәрҙең «сәнғәт, сәнғәткә бәйле» мәғәнәләрен белдереүсе өлөшө. □ Составная часть сложных слов, обозначающая отнесённость *чего-л.* к искусству. *Артрок, арттерапия.*

**2.** Ҡушма һүҙҙәрҙең «артиллерия» мәғәнәһен белдереүсе икенсе өлөшө. □ Составная часть сложных слов, обозначающая «артиллерийский». *Артбаза, артдивизион.*

11 – 1.0151.11

**АРТА** *р. диал. кар.* **артабан.**

**АРТАБА** *р. диал кар.* **артабан.**

**АРТАБАН** (Р.: дальше; И.: further; Т.: sonra) *р.*

**1.** Билдәле бер тәңгәлдән ары; арыға табан. □ Дальше. ■ *Былар [егет менән һалдат] хәҙер ике атка икәүләп менеп, артабан китә.* Әкиәттән. *[Сафия] Артабан йәйәү китте, сөнки ул йылдарҙа Миәскә автобустар йөрөмәй ине әле.* Т. Ғиниәтуллин. *Ҡыу камғак ыскына һәм артабан тәгәрләп китә, ҡылған төбөндә уның һорғолт орлоктары ғына ҡойолоп ҡала.* З. Ураҡсин.

**2.** Билдәле бер мәлдән ары. □ Далее, дальше. ■ *Артабан юл бөтә. Үткән-бөткән. Тик артабан нисек йәшәргә һуң?* М. Ямалетдинов. *Ни тиклем әрнеткес булмаһын, артабан йәшәр өсөн ысынбарлыкты ҡабул итергә кәрәклеген белә ул [Дилбәр].* Г. Ғиззәтуллина. *[Ғәбдеян:] Быға тиклем нисек гөрләшеп йәшәгәнбеҙ, артабан да пар күгәрсендәр һымаҡ теттереп торорбоҙ.* Н. Мусин.

**3.** Шунан һуң, шунан ары. □ Дальше. ■ *Артабан да белмәмешкә һалышып, сыуалсык төйөндөң тағы ла нығырак типселеүен көтөргә тәкәте ҡалмағайны уның.* Ә. Хәкимов. *Артабан ул [Нажар бабай] күбәне кәбән ҡойоласак ергә еткәнсе һәнәге менән тотоп килде.* Н. Мусин.

♦ **Кит артабан!** *кар.* **кит II.**

**АРТАБАНҒЫ** (Р.: тот; И.: that; Т.: daha sonraki) *с.*

**1.** Артабанда торған, ары торған. □ Тот *(расположенный дальше). Артабанғы урам.* ■ *Һин уларға яҡынлау өсөн артабанғырак урҙаға күсәһең, ә балыктар, ялт итеп, тәүге урынына барып ята.* Н. Мусин. *Ҡатын артабанғы вагонда ла күренмәгәс, ул [Сафия] борсола, ҡурка башланы.* Т. Ғиниәтуллин.

**2.** Киләсәктәге. □ Дальнейший, последующий. ■ *Серҙең нисек фашланыуын да, Ольганың артабанғы яҙмышын да егет белә алманы.* Ә. Хәкимов.

**АРТА БАРЫУ (арта бар-)** (Р.: прибавляться; И.: add up; Т.: çoğalmak) *к.*

*Нимәнеңдер* күләм, һан яғынан үҫеүе. □ Прибавляться, приумножаться.

**АРТА БАШЛАУ (арта башла-)** (Р.: пойти на прибыль; И.: add up; Т.: çoğalmaya başlamak) *к.*

**1.** Күбәйеүгә, артыуға табан барыу. □ Пойти на прибыль.

**2.** Артып ҡалыу. □ Оставаться в излишке.

**АРТАҠ (артағы)** [төрки *artag*] (Р.: по поверьям, страшное мифическое существо; И.: monster; Т.: ervah) *и. миф.*

**1.** Ышаныуҙар буйынса, балаларҙы ҡурҡыта торған яман мифик зат. □ Бука *(страшное мифическое существо).* ■ *Артак үҙе йөнлө, үҙе имәнес ҙур, ә күҙҙәре аркыры, аяктары артка карап торған зат тиҙәр. Артак һүҙе боронғо төрки комарткыларҙа яуыз, боҙоҡ, уҫал, тын кыҫыусы мәғәнәһендә лә ҡулланыла.* Ф. Хисамитдинова.

**2.** *кар.* **йырткыс.**

**АРТАУ (арта-)** (Р.: перекисать, перестаивать; И.: turn too sour; Т.: fazla kesilmek) *к.*

Үтә нык әсеү; ҡырҡыуланыу. □ Перекисать, перестаивать. *Артаған ҡайнатма.* ■ *Икмәгем артап бара, мейес яға һалырға кәрәк.* М. Тажи.

**АРТЕЗИАН ҠОҘОҒО** (Р.: артезианский колодец; И.: artesian well; Т.: artezyen kuyusu) *и.*

Бырауланған ерҙән һыуы бәреп сыҡкан ҡоҙоҡ. □ Артезианский колодец.

**АРТЕЛЛӘШЕҮ (артелләш-)** (Р.: объединяться в артель; И.: join the co-operativemember of an artel; Т.: takım oluşturmak) *к.*

Артелгә ойошоу; берләшеү. □ Объединяться в артель.

**АРТЕЛЛӘШТЕРЕҮ (артелләштер-)** (Р.: объединять в артель; И.: join the co-operativemember of an artel; Т.: takım oluşturmak) *к.*

Артелгә ойоштороу; берләштереү. □ Объединять в артель. *Халыкты артелләштереү.*

**АРТЕЛСЕ** (Р.: артельщик; И.: member of an artel; Т.: takım üyesi) *и.*

Артель ағзаһы. □ Артельщик.

**АРТЕЛЬ** [рус. < ит. *artieri, artiere* 'эшсе'] (Р.: артель; И.: team; Т.: takım) *и.*

Уртаҡ эш һәм уртаҡ файҙа нигеҙендә ойошҡан күмәк хужалыҡ. □ Артель. *Ирҙәр, ҙурыраҡ артель ойоштороп, иҫке отвалдарҙы ағыҙҙылар.* Я. Хамматов. .. *Директор дәрәжәһен ул [Аҙнаев] артель рәйесе булыуҙан байтаҡ юғары итеп баһалай.* Н. Мусин.

**АРТЕРИАЛЬ** [рус. < лат. *arteriosus*] (Р.: артериальный; И.: arterial; Т.: atardamar) *с. мед.*

Артерияға мөнәсәбәтле. □ Артериальный. *Артериаль канал. Артериаль ҡан. Артериаль пульс.*

**АРТЕРИАЛЬ БАҪЫМ** (Р.: артериальное давление; И.: arterial pressure; Т.: atardamar tansiyonu) *и. мед.*

Ҡан тамырҙары стенаһына ҡабырғанан яһалған баҫым. □ Артериальное давление. *Базаль артериаль баҫым. Диастола артериаль баҫымы. Ҡалдыҡ артериаль баҫым. Пульс артериаль баҫымы.*

**АРТЕРИЯ** [рус. < лат. *arteria*] (Р.: артерия; И.: artery; Т.: atardamar) *и. анат.*

**1.** Йөрәктән сыҡҡан ҡанды ағза-туҡымаларға таратыусы ҡан тамыры. □ Артерия. *Үпкә артерияһы.* ■ *Бар Ер шарын шатлыҡ тулҡындары солғаны, артерияларҙан урғыған ҡан хәтерләтте ташыу йылғаны.* Р. Назаров.

**2.** *күсм.* Бәйләнеш юлы, аралашыу юлы *(ғәҙәттә йылғаға ҡарата).*

**АРТЕФАКТ** [рус. < лат. *artefactum*] (Р.: артефакт; И.: artifact; Т.: artefakt) *и.*

Эшләнгән, тәбиғәттә булмаған әйбер, күренеш. □ Артефакт.

**АРТИКЛЬ** [рус. < фр. *article* < лат. *articulus*] (Р.: артикль; И.: article; Т.: tanımlık) *и. грам.*

Ҡайһы бер телдәрҙәге исемдең билдәлелек-билдәһеҙлек, енес һәм һан категорияларын белдерә торған киҫәксә. □ Артикль.

**АРТИКУЛ** [рус. < лат. *articulus* 'мәҡәлә'] (Р.: артикул; И.: nomenclature article; Т.: madde) *и.*

**1.** *иҫк.* Законда (ҡанунда), бойороҡта, килешеүҙә һ.б. рәсми акттарҙа айырым мәҡәлә, бүлек йәки параграф. □ Артикул. ■ *«Судка биреү кәрәк уны [Ғилажды]. Шулайтып әҙерәк әрткөлгә (артикулға) өйрәтмәйенсә булмаҫ байҙарҙы», — тинеләр Вәһап менән Әҙһәм.* Ж. Кейекбаев.

**2.** *икт.* Тауар тибын билдәләүсе күрһәткес. □ Артикул.

**АРТИКУЛЯЦИОН** (Р.: артикуляционный; И.: articulation; Т.: telâffuz) *с. лингв.*

Артикуляцияға мөнәсәбәтле. □ Артикуляционный. *Өндәрҙең артикуляцион үҙгәреше.*

**АРТИКУЛЯЦИОН БАЗА** (Р.: артикуляционная база; И.: articulatory base; Т.: konuşma organları) *и. лингв.*

Билдәле бер телдәге өндәрҙе әйткәндә телмәр ағзаларының ғәҙәткә ингән һәм шул телдә һөйләшеүселәр өсөн тәбиғи булған торошо. □ Артикуляционная база.

**АРТИКУЛЯЦИЯ** [рус. < лат. *articulatio* < *articulare* 'аныҡ әйтеү'] (Р.: артикуляция; И.: articulation; Т.: eklem) *и. лингв.*

Телмәр ағзаларының теге йәки был өндө әйткән ваҡыттағы хәрәкәте һәм торошо; әйтелеш. □ Артикуляция. ■ *Тартынҡы өндәрҙең артикуляцияһында телмәр ағзаларының бөтәһе лә актив ҡатнаша.* Ж. Кейекбаев.

**АРТИЛЛЕРИСТ** (Р.: артиллерист; И.: gunner; Т.: topçu) *и.*

Артиллерияла хеҙмәт иткән хәрби кеше. □ Артиллерист. ■ *[Сәлимә:] Хәмит һап-һау ҡайтыр... Иҫән-һау йөрөгән кешеләр әҙме ни? Ана, әсәйемдең ҡустыһы, артиллерист Талип, һуғыштың башынан бирле фронтта, бер ҙә яраланғаны юҡ ..* З. Биишева. *Яңғыҙ ҡалған Томин артиллеристар яғына китеп*

*әҙерәк торғас та, ақтар атакаға күтәрелде.* Я. Хамматов.

**АРТИЛЛЕРИЯ** [рус. < фр. *artillerie*] (Р.: артиллерия; И.: artillery; Т.: topçular) *и.*

**1.** *йыйн.* Төрлө калибр һәм төҙөлөштәге орудиелар; туптар. □ Артиллерия. ■ *Һис бер урында күңел туктарлык күренеш юк. Тик бер йортта артиллерия туптары һәм уның обоздары күренә.* Д. Юлтый. *Артиллерия төрлө калибрҙағы утыҙ алты орудиенан торасак.* Я. Хамматов. *Десанттың бер өлөшө крепость артиллерияһын баҫып ала, хәрби королмаларҙы емерергә тотона.* Б. Рафиҡов.

**2.** Туптар менән ҡоралланған ғәскәр төрө. □ Артиллерия. ■ *Польшаны үтеп, Германияға барып сыққас, бөтә артиллерия машиналарға тағылды.* Ә. Хәкимов.

**АРТИСЛАНЫУ (артислан-)** (Р.: манерничать; И.: behave affectedly; Т.: suratlar etmek) *ҡ. һөйл.*

Яһалма ҡыланыу. □ Манерничать; гримасничать. ■ *Басариевтың кәйефе боҙолдо, йөҙө карайып китте, хатта артисланыуын да онотто.* Р. Солтангәрәев.

**АРТИСЛЫҠ** (Р.: профессия артиста; И.: actor; Т.: artist) *и.*

Артислыҡ һөнәре. □ Профессия артиста (артистки). ■ *[Атаһы — Сәриғә:] Артислыкка укыр булһаң, ебәрмәйем. Ауылда ла эш бөтмәгән, ана, әсәйең янына фермаға һыйыр һауа барырһың.* Н. Мусин.

**АРТИСТ (артисы)** [рус. < фр. *artiste*] (Р.: артист; И.: actor; Т.: artist) *и.*

**1.** Сәнғәт әҫәрен тамашасылар алдында башҡарыусы. □ Артист. *Күренекле артист.* ■ *Артист Арыҫлан Мөбәрәков Шекспир Отеллоһы характерындағы тиңдәшһеҙ шиғриәтте һәм юғары гуманизмды башкорт тамашасыларына асып бирҙе.* Ғ. Әхмәтшин. *Үҙҙәре кыҙыл армеец, үҙҙәре совет хеҙмәткәре, үҙҙәре артист, үҙҙәре үк клуб таҙартыусы булған делегаттар эскәмйәләргә теҙелеп ултырҙылар.* И. Насыри. *Былтыр Өфө артистары ауылға килеп концерт ҡуйғанда, Мөбәрәк «Шәүрә» көйөн йырлаған артисткаға һокланып туя алмағайны...* Н. Мусин. *Күсмә кино йә һирәкләп артистар килә башлағаны бирле ауыл тоткаларына бәлә.* Ә. Хәкимов.

**2.** *күсм. һөйл.* Яһалма ҡыланышлы кеше. □ Кривляка. ■ *[Ғариф:] Атлауын күрһәт, атлауын, һуҙып-һуҙып, йомшак кына баҫып бара тиген, ә! Ай, артист. Тап үҙе булаһың да ҡуяһың, әй!* З. Биишева.

**АРТИСТАРСА** (Р.: артистически; И.: in artistic manner; Т.: artistlar gibi) *р.*

Артисҡа хас булғанса. □ Артистически. *Артистарса оҫта башкара.* ■ *[Ҡыҙырас:] Хуш булып торођоҙ, ни, Сәлимә апай. Хуш бул, Ғариф, — тине ул, артистарса башын эйеп.* З. Биишева. *Рәүф ағай артистарса матур итеп көлә.* Н. Мусин.

**АРТИСТИЗМ** [рус. < фр. *artistique* 'сәнғәтле'] (Р.: артистизм; И.: artistry; Т.: sanat) *и.*

Башҡарыу оҫталығы, маһирлығы. □ Артистизм. *Тыумыштан килгән артистизм.*

**АРТҠА** (Р.: назад ; И.: backwards; Т.: geriye) *р.*

**1.** Арт яҡҡа табан. □ Назад, вспять. *Артка тайыу. Артка шылыу.* ■ *Ҡыҙ [Сәйҙеямал], куркыуынан һәм уңайһыҙланыуынан ни эшләргә белмәйенсә, артка сигенде.* Я. Хамматов. *Баҫкак уны этеп ебәрҙе, карт артка тайпылып китте.* К. Мәргән. *[Ғилмандың] артка таралған шырт кара сәстәре араһында һирәк-мирәк ак кылдар ҙа күренә ине.* Д. Бүләков. ● *Артка карап ғибрәт ал, алға карап шөһрәт ал.* Мәкәл.

**2.** Арт яҡҡа. □ За спину. ■ *Унан [келәттән] кулдары артка шакарып бәйләнгән биш кешенең сыкканын күргәс, халык ах итте лә тымып калды...* Н. Мусин. *Ҡарттар, ир уртаһы кешеләр, ҡулдарын артка ҡуйып, айыуҙы уратып карап сыктылар.* Ж. Кейекбаев.

**3.** Артҡы яҡта; артта. □ Сзади, позади. ■ *Инде һиңә артка юл юк, бәндә, күҙҙәреңде йом да тәкдиреңә буйһон!* Р. Камал.

**АРТҠА КИТЕҮ (артҡа кит-)** (Р.: ухудшаться; И.: deteriorate; Т.: kötüleşmek) *ҡ.*

Кирегә, насарға китеү. □ Ухудшаться *(о делах). Эштәр артҡа китә башланы.*

**АРТҠА ҠАЛЫУ (артҡа ҡал-)** (Р.: отставать; И.: lag; Т.: gecikme) *ҡ.*

Эш-хеҙмәт һөҙөмтәһе яғынан *кемдәндер* ҡалышыу. □ Отставать *в чём.* ■ *Бай уйлар, ҡалай ярлы булмайым, тип, фәләнсә байҙан артҡа ҡалмайым, тип.* Халыҡ ижадынан. ● *Бер көнгә артҡа ҡалһаң, биш көндә етә алмаҫһың.* Мәҡәл.

**АРТҠА ҠУЙЫУ (артҡа ҡуй-)** (Р.: откладывать; И.: delay; Т.: gecikme) *ҡ.*

Ныҡ әһәмиәт бирмәй, икенсе урынға ҡуйыу. □ Откладывать, не исполнять, считая второстепенным.

**АРТҠА ТАШЛАУ (артҡа ташла-)** (Р.: закинуть назад; И.: throw backwards; Т.: arkaya atmak) *ҡ.*

**1.** Артҡа табан киҫә ҡайырыу. □ Закинуть назад. ■ *[Андрей], башын артҡа ташланы, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.* Ә. Хәкимов. *[Атайым] башын артҡа ташлап, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.* Г. Яҡупова.

**2.** *миф. Нимәнелер* арҡа аша ташлап имләү ысулы. □ Магический способ заговаривания выбрасыванием *чего-нибудь* за спину.

**АРТҠЫ** (Р.: задний; И.: back; Т.: arka) *с.*

Арт яҡта урынлашҡан; арттағы. □ Задний. *Артҡы ҡапҡа.* ■ *Һүҙ һораусы артҡы рәттән ине.* Ғ. Сәләм. *[Аҡмал] айыуҙы тунап, эсен таҙартып, артҡы ботонан ҙур ғына киҫәк ит ҡырҡып алды.* Б. Рафиҡов. *Кәримә, түҙмәйенсә, Шәһүрә ниндәй эшкә китте һуң, тип һорамаҡсы ине, ул арала артҡы ҡапҡанан Мөбәрәк килеп инде.* Н. Мусин. ● *Алғы тәгәрмәс ҡайҙан тәгәрләһә, артҡы тәгәрмәс тә шунан тәгәрләй.* Мәҡәл.

**АРТЛАП** (Р.: задворками; И.: through the backyard; Т.: arka avluların gerisinden) *р.*

Арт яҡлап. □ Задами, задворками. ■ *[Нефедыч:] һин [Рамазан] хәҙер ырҙын артлап урманға кер ҙә ял итә тор.* Ә. Хәкимов. *Ғимал Ҡарабашты ырҙын артлап ҡына политбюро вәкиленә алып китте.* И. Насыри.

**АРТЛЫ** (Р.: со спинкой *(о мебели)*; И.: having a back; Т.: arkalı) *с.*

Арт ҡуйып эшләнгән, арты бар. □ Со спинкой *(о мебели). Артлы арба.*

**АРТЛЫ САНА** (Р.: кошёвка; И.: kind of sledge; Т.: kızak çeşidi) *и.*

Кеше ултырып йөрөй торған еңел сана. □ Кошёвка.

**АРТМА** *с. ҡар.* **артмалы 2.**

**АРТМАҠ (артмағы)** [дөйөм төрки *арт* ‘аҫып ҡуйыу’] (Р.: перемётная сума; И.: weather wane; Т.: torba çeşidi) *и.*

**1.** Эйәргә ике яҡлап аҫыла торған ҡуш моҡсай *(күн, кейеҙ, балаҫ һымаҡ нәмәнән тегелә).* □ Перемётная сума. *Артмаҡтарҙы тултырыу. Эйәргә беркетелгән артмаҡ. Артмаҡтың уң яҡ ҡурйыны.*

**2.** Эш хайуанына артылған йөк. □ Вьюк.

**3.** Арҡаға аҫа торған юл тоҡо. □ Рюкзак, вещевой мешок. ■ *Сөнәғәт арҡаһындағы артмағын йәтешләп алды ла ысыҡ ярып артабан атла[ны].* Ж. Кейекбаев.

**4.** *диал.* Башаҡас. □ Слега.

**АРТМАҠЛАУ (артмаҡла-)** (Р.: навьючивать; И.: load; Т.: yüklemek) *ҡ.*

**1.** Тоҡто элмәкләп арҡаға аҫыу. □ Навьючивать. // Навьючивание. ■ *[Аҡмал:] Ул Етембай былай ҙа беше ирҙәр йөгөн артмаҡлаған. Йәш сағында ул [Иртуғанов] ҡырктартмасы булған, тартмаларын артмаҡлап ярты Рәсәйҙе ҡыҙырып сыҡҡан.* Д. Юлтый. *Мин арҡама тимер ҡапҡандар һалынған биштәр артмаҡлайым, кисә генә атайым һаплап, үткерләп биргән бәләкәй балтаны тотам.* Д. Шәрәфетдинов.

**2.** Эш хайуанына ике яҡҡа һалындырып йөк аҫыу; артыу. □ Навьючить *(лошадь, верблюд и т.д.).* ■ *Дөйә-аттарға артмаҡлап килтерелгән тирмәләр.* Ғ. Хөсәйенов. *Иран яҡтарынан ҡорал-ярак, келәм, ебәк, хуш еҫле май, киптерелгән емеш артмаҡлаған дөйә каруандары тартыла.* Ә. Хәкимов.

**АРТМАҠ-ШАРТМАҠ** (Р.: крест-накрест; И.: crisscross; Т.: çaprazlama) *с. диал.*

Арҡыс-торҡос. □ Крест-накрест. ■ *[Кавалеристар] күкрәктәре артмак-шартмак ҡайыштар менән уралған һоро шинелдәр кейгән.* Ғ. Сөләймәнов.

**АРТМАЛЫ** (Р.: перемётный; И.: pertaining to a weather wane; Т.: heybe) *с.*

Артмаҡлап, артып ебәрмәле. □ Перемётный. *Артмалы тоҡ.*

**АРТМЫШ** (Р.: пришелец; И.: newcomer; Т.: yabancı) *и. диал.*

Килмешәк. □ Пришелец.

**АРТРИТ** [рус. < лат. *arthritis* < гр. *arthron* ‘быуын’] *и. мед. кар.* **быуын шеше.** *Аллергик артрит. Эренле артрит. Профессиональ артрит. Ревматизм артриты. Туберкулез артриты.*

**АРТРОЗ** [рус. < лат. *arthrosis* < гр. *arthron*] (Р.: артроз; И.: arthrosis; Т.: eklem) *и. мед.*

Быуындағы кимерсәк туҡымаһының дегенерацияһы, тарҡалыуы. □ Артроз. *Деформациялы артроз.*

**АРТРОПЛАСТИКА** [рус. < лат. arthroplastica] (Р.: артропластика; И.: arthroplastics; Т.: arthroplastics) *и. мед.*

Быуындарҙың функцияһын ҡайтарыу өсөн зарарланған ерҙәрен алмаштырыусы хирургик операция. □ Артропластика.

**АРТСҮМЕС** *и. диал. кар.* **соңҡа.**

**АРТТА** (Р.: сзади; И.: behind; Т.: arkada) *р.*

**1.** Арҡы яҡта. □ Сзади, позади. ■ *Әхмәди ҙә, ат егеп, фронттан байтаҡ артта обоз менән йөрөнө.* Ж. Кейекбаев. *Шул саҡ артта тағы ҡоро ботаҡ һынды, ер һелкенде.* Р. Камал. *Мискәле һөйрәткеһе менән ул [Бiктимер] артта ҡалды.* К. Мәргән. *Елдәй етеҙ ҡола бейә, бүтән аттарҙы байтаҡ артта ҡалдырып, бәйге тоткалары янынан уҙып киткәйне инде.* Ә. Хәкимов.

**2.** Үтеп киткән заманда. □ Позади, в прошлом. *Артта ҡалды ауыр замандар.*

**3.** *күсм.* Эш һөҙөмтәһе, тормош кимәле яғынан *кемдәндер* кәм, түбән. □ Отставать *в чём.* ■ *Уның ҡайһы бер һабаҡташтарынан артта ҡалыуы ғәжәп тә түгел ине.* Д. Бүләков.

**АРТТАН I** (Р.: сзади; И.: from behind; Т.: arkadan) *р.*

**1.** Арҡы яҡтан. □ Сзади, следом. ■ *[Бикбай] әллә юрый бер аҙ алға ебәреп, арттан атырға уйланыулармы икән тип, тиҙ генә ҡәртәгә ышыкланырға, сүгәләй төшөргә тырышты.* И. Насыри. *[Зәһүрә] яр ситендә күктәге самолётка ҡарап ҡулдарын йәйеп, самолёт булып торған сағында уны синыфташ малайы арттан этеп ебәрмәһенме!..* Ф. Аҡбулатова.

**2.** *Ниҙең дә булһа* һуңынан; аҙаҡ. □ После, следом. *Арттан килеү.* ■ *Сәлихе атты эйәрләп менде лә китеп тә барҙы. Юлдашы арттан эйәрҙе.* Ә. Хәкимов. *Арттан килеп еткән Ҡәнзәфәр Салауатты торғоҙҙо һәм һалдатты салҡан әйләндерҙе.* Б. Рафиҡов. ● *Асыу алдан йөрөр, аҡыл арттан йөрөр.* Мәҡәл.

**АРТТАН II** (Р.: с, за; И.: behind; Т.: arkadan) *бәйл.*

*Эйл. клш.* зат алмаштары менән килеп *кемдер* арҡыры *берәй нәмә* тапшырыуҙы, ебәреүҙе белдерә. □ С, за *(послелог с род. п.). Хатты һинең арттан ебәрәм.*

**АРТТАН ЙӨРӨҮ (арттан йөрө-)** (Р.: идти *за кем-л.*; И.: go; Т.: ardından yürümek) *к.*

**1.** *Берәйһенең* артынан эйәреп атлау. □ Идти *за кем-л.*

**2.** *кар.* **артынан йөрөү.**

**АРТТЫРЫЛЫУ (арттырыл-)** *к. төш. кар.* **арттырыу 1**. *страд. от* **арттырыу**.

**АРТТЫРЫП ЕБӘРЕҮ (арттырып ебәр-)** *к. кар.* **арттырыу 3.**

**АРТТЫРЫП ҮТӘҮ (арттырып үтә-)** (Р.: перевыполнить; И.: surpass; Т.: geçmek) *к.*

Теге йәки был эште арттырып башҡарыу. □ Перевыполнить. // Перевыполнение. *Планды арттырып үтәү.*

**АРТТЫРЫУ (арттыр-)** (Р.: увеличивать, приумножать; И.: increase; Т.: çoğaltmak) *к.*

**1.** *Берәй нәмәнең* күләмен, һанын күбәйтеү. □ Увеличивать, приумножать. // Увеличение, приумножение. *Планды арттырыу. Эш хаҡын арттырыу.* ■ *Был бөтә республика буйынса тағы бер административ берәмекте арттырыуға килтерәсәк.* Н. Мусин. *[Перовский:] Сик буйҙарын нығытыу, яңы килгәләр ҡороу, ғәскәри хеҙмәтселәр һанын арттырыу ҙа беҙҙең өҫтә.* З. Ураҡсин. *Цехтарҙа эш хаҡын арттырыуҙы талап итеп, эшкә сыҡмау, баш күтәреү, мастерҙарға буйһонмау ваҡиғалары йышайҙы.* Я. Хамматов. ● *Эшле килер — эш арттырыр, эшһеҙ килер — эш ҡалдырыр.* Мәҡәл.

**2.** Көсәйтеү. □ Усиливать. // Усиление. *Иғтибарҙы арттырыу. Ҡеүәтен арттырыу.* ■ *Хандың ҡеүәтен арттырыу өсөн, яһаҡ түләргә кәрәк.* К. Мәргән. *Тамырынан ижтимағи үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда республикабыҙ үҙ иҡтисади һәм рухи ҡеүәтен һаҡлап ҡалыу ғына түгел, уны күпкә арттырыуға өлгәште.* «Ағиҙел», № 7, 2010.

**3.** Булмағанды үҙеңдән өҫтәү; шаштырыу. □ Преувеличивать. // Преувеличение. *Арттырып маҡтаныу.* ■ *Ашауҙы насар тип булмай, курорттағы һымаҡ тиһәң дә, һис арттырыу булмаҫ, тәмле лә, мул да.* Д. Юлтый.

**4.** Бүлеп, өлөш сығарыу. □ Выделить, выделить долю. // Выделение доли. ■ *Сөнәғәт ашауҙан аҡса арттырыу хаҡында Гөлнисаға әйтергә ҡыйынһынып йөрөгәндә, Гөлниса, белгән кеүек, уға үҙе әйтте...* Ж. Кейекбаев.

**АРТ ҺАН** (Р.: ягодица.; И.: buttock; Т.: kaba et) *и. анат.*

**1.** Кәүҙәнең ултыра торған өлөшө; ултырыш. □ Ягодица. ■ *[Тимашев:] Ырыҫҡол батырың арт һанын тырнап ҡараһын әле, ха-ха!* З. Ураҡсин.

**2.** Мал кәүҙәһенең артҡы өлөшө. □ Задняя часть туши. ■ *Арт һан ҡалҡыулығы. Арт һанынан боландың шундуҡ ҡапҡан, ти, йылан.* «Урал батыр».

**АРТЫҠ I** [боронғо төрки *артуҡ* 'ҙурыраҡ'] (Р.: лишний; И.: superfluous; Т.: artık) *с.*

**1.** Кәрәктән тыш; артып ҡалған. □ Лишний, излишний, избыточный. ■ *[Ғабдулла:] Һиңә артыҡ аҡса биреп ултырған кеше бар тип беләһеңме әллә?* Н. Мусин. *Әсәһенең ҡаҙанлыҡ яҡҡа сығып, шымып ҡалыуынан Ирназар ниҙер һиҙенһә лә, быға артыҡ әһәмиәт биреп торманы, китте.* Ә. Хәкимов. ● *Ауырыҡкан ер — артыҡ ер.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Тейешһеҙ, урынһыҙ. □ Неуместный. *Артыҡ һүҙ. Артыҡ хәбәр.*

♦ **Артыҡ бүрәнә башы** кәрәкмәгән артыҡ кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Пятое колесо в телеге. ■ *[Кормой:] Ярар, мин китәйем инде, артыҡ бүрәнә башы булмайым.* Б. Бикбай.

**АРТЫҠ II** (Р.: свыше; И.: over; Т.: yukarı) *р.*

**1.** Билдәле бер һандан, дәүмәлдән күп. □ Свыше, больше, более. ■ *Сиратта ундан артыҡ кеше.* Ғ. Байбурин. ● *Дөйә һуйған йыйындан тәкә һуйған туй артыҡ; тауыш тыуған туйыңдан тыныс торған өй артыҡ.* Әйтем.

**2.** Саманан күп, сиктән тыш; бик, үтә. □ Слишком, чересчур. ■ *Дилбәр уның [Харистың] оятһыҙ илгәҙәклегенә, шымалығына хайран ҡалып, артыҡ һүҙсәнләнеүенең сәбәбен төшөнөргә тырышып шым ғына ултыра.* Г. Ғиззәтуллина. ● *Артыҡ ашҡынған ашһыҙ ҡалыр, башын йәшергән башһыҙ ҡалыр.* Мәҡәл.

**3.** Өҫтөн, юғары. □ Больше, выше. *Йәнеңдән артыҡ күреү. Йәшәүҙән артыҡ күреү.*

♦ **Биш артыҡ** бер нәмәне йәки хәлде икенсе нәмәнән яҡшыраҡ күргәндә әйтелә. □ Во много раз лучше. ■ *[Ниғмәтулла:] Уның урынына үҙебеҙҙең кешене ҡуйһалар, биш артыҡ булыр ине.* Я. Хамматов.

**АРТЫҠ-БОРТОҠ** (Р.: лишний; И.: excess; Т.: gereksiz) *с.*

Кәрәге булмаған, артыҡ һаналған. □ Лишний, излишний, ненужный. *Артыҡ-*

*борток хәбәр.* ■ *[Башлыҡ:] Ҡарағыҙ уны, артыҡ-борток кеше белмәһен.* З. Биишева. *Зөһрә килгән сактарҙа ла артыҡ-борток һүҙ ыскындырмай.* Н. Мусин. *Артыҡ-борток һорау биреп ҡаңғыртыу юҡ, күргәндәрен эстән генә кисереп, ихтирам менән ололоҡлап баш ҡына эйәләр, сәскә килтергәндәре лә бар.* З. Ураҡсин.

**АРТЫҠЛЫҠ (артыҡлығы)** (Р.: избыток; И.: surplus ; Т.: fazla) *и.*

**1.** Билдәле бер һандан, кимәл-дәүмәлдән күп булғанлыҡ. □ Избыток, излишек, излишество. *Йылылыҡтың артыҡлығы. Архитектуралағы артыҡлыҡтар. Тупраҡтағы дымдың артыҡлығы.*

**2.** *Кемдән* йәки *нимәләндер* яҡшыраҡ сифат. □ Преимущество, превосходство.

**АРТЫҠЛЫҠ ДӘРӘЖӘҺЕ** (Р.: превосходная степень; И.: superlative degree; Т.: enüstünlük derecesi) *и. лингв.*

Төп сифат һәм рәүештең иң юғары дәрәжәһен күрһәткән грамматик категория. Мәҫәлән, *ҡып-ҡыҙыл, ап-аҡ, бик матур, иң таҙа, сөм ҡара, сылт ҡыҙыл.* □ Превосходная степень.

**АРТЫҠҺЫНЫУ (артыҡһын-)** (Р.: считать лишним; И.: deem superfluous; Т.: fazla görmek) *к.*

*Берәй* кешене артыҡ күреү, артыҡҡа һанау. □ Считать лишним, ненужным, нежелательным *кого.*

**АРТЫЛДЫРЫУ (артылдыр-)** (Р.: переполнять *(сосуд)*; лить через край *(жидкость)*.; И.: overfill; Т.: tıklım tıklım doldurmak) *к.*

Һауыттың өҫтөнән арттырыу; таштырыу. □ Переполнять *(сосуд)*; лить через край *(жидкость).* ■ *[Әсәһе — Сәүиәгә:] Шәшкеңде ул ҡәҙәр артылдырма. Тулыр-тулмаҫ ҡына булһа, йәмле лә, тәмле лә була ул.* Ф. Исәнғолов.

**АРТЫЛЫУ I (артыл-)** (Р.: переполняться через край ; И.: overflow; Т.: taşırmak) *к.*

**1.** Тулып ташып сығыу; ашыу. □ Переполняться через край *(о жидкости). Ваннаның һыуы артылған. Ҡаҙандан һөт артылды.* ■ *Ямғыр бер башланһа, аҙналап, айлап яуа. Тирә-яҡ һыу менән тула, йылғалар ярҙарынан артылып сығалар.* Ә. Бикчәнтәев.

**2.** Күтәрелеп, аша сығыу *(тауҙы).* □ Перевалить *что*, перейти через *что. Һырт артылыу.* ■ *Урман айҡау, тауҙар артылыу беҙгә ауыр түгел.* Ғ. Ибраһимов. *Көн тау артына артылғанда, беҙ ауыл осондағы ҡайынлыҡҡа килеп еттек.* К. Кинйәбулатова. *Тубыҡтан ала ҡар йыйрмаслап текә тауға артылыуы, бигерәк тә хәҙер инде ун саҡрымдан ашыу тын юлдан килгәс, быуынды ала.* Н. Мусин.

**АРТЫЛЫУ II (артыл-)** *к. төш. ҡар.* **артыу II**. *страд. от* **артыу II**.

**АРТЫЛЫШ** (Р.: перевал; И.: crossing; Т.: dağ geçidi) *и. геогр.*

**1.** Тау һыртының аша сығып йөрөрлөк, һөҙәгерәк урыны. □ Перевал. *Артылыштарҙы артылыу. Ҡайынлы артылыш. Тау артылыштары.* ■ *[Азамат менән шофёры] Ташауыҙ артылышын да үттеләр.* Р. Солтангәрәев. *Ҡаратауҙың иң текә бер артылышында юлға табан ыға биреп үҫкән йыуан, тарбағай имән бар.* Н. Мусин. *Көтөүселәр малды алдағы тау артылышына ыңғайлатып өйөрә, күҙәтселәр, һағауылдар, ҡорал аҫҡан яугир егеттәр — һәр береһе үҙ урынын алған.* Ә. Хәкимов.

**2.** *миф.* Төрки мифологияһында өҫкө һәм аҫҡы донъяны яҡынайтыусы, рухтар йәшәүсе урын. □ В тюркской мифологии место сближения верхнего и среднего миров, место обитания духов.

**АРТЫЛЫШЫУ** *к. урт. ҡар.* **артылыу**. *взаимн. от* **артылыу**.

**АРТЫЛЫШ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух перевала; И.: spirit of crossings; Т.: dağ geçidi ruhu) *и. миф.*

Юғары һәм урта донъяларҙы яҡынайтҡан урындағы мифик зат. □ Дух перевала. ■ *Тау башҡорттарында тау, артылыш эйәләренә ағаска сепрәктәр бәйләү йолаһы бар.* Экспедиция материалдарынан.

**АРТЫМ** (Р.: привес; И.: additional weight; Т.: kazanç) *и.*

**1.** *Ниҙеңдер* үҙ иҫәбенә артҡан ауырлығы. □ Привес. *Тулайым артым. Тәүлек артымы. Уртаса артым. Малдарҙың артымы.*

**2.** Ондоң икмәк итеп бешергәндән һуң ауырлығы артыу. □ Припёк. *Артым биреү.*

**3.** Килем, табыш. □ Прибыль, доход, прирост. *Артым иҫәбенә файҙа алыу.*

**АРТЫМЛЫ** (Р.: дающий большой привес; И.: giving much surplus; Т.: kazançlı) *с.*

Күп артым бирә торған. □ Дающий большой привес, много припёка и прибыли. *Артымлы эш.*

**АРТЫНАН** (Р.: вслед; И.: after; Т.: arkadan) *бәйл.*

**1.** Алыҫлаша барыусыға эйәрә барыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Вслед, за *(послелог с исх. п.). Дошман артынан ҡыуыу.* ■ *Ғилемхан өндәшмәне, башын баҫып, атаһы артынан эйәрҙе.* Р. Камал.

**2.** Бер эш-хәлде икенсеһе алыштырыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Следом, за, после. ■ *Һутә торғас йыл артынан йылды, күпме йәшәгән дә онотолдо.* М. Ямалетдинов. *Сынаяҡ артынан сынаяҡ бушатылды.* Ж. Кейекбаев. *Көндәр артынан көндәр үтә тора, Барсынһылыуға ла йән юлдашын һайларға ваҡыт етә.* «Алпамыша».

**3.** *Берәй* кеше аша башҡарылыуҙы, *ниҙер* ебәреүҙе белдергәндә ҡулланыла. □ Через. *Кеше артынан сәләм ебәреү.* ■ *Осоп барған ҡош артынан әйтегеҙ беҙгә сәләм.* Халыҡ йырынан.

**АРТЫНАН ЙӨРӨҮ (артынан йөрө-)** (Р.: хлопотать, ходатайствовать *за кого*; заботиться *о ком*; И.: solicit; Т.: uğraşmak) *ҡ.*

**1.** *Кем* йәки *нимә менәндер* ныҡ мәшғүл булыу; хәстәрләү, ҡайғыртыу. □ Хлопотать, ходатайствовать *за кого*; заботиться *о ком.*

**2.** *күсм.* Егеттең ҡыҙҙы оҙатып йөрөүе. □ Ухаживать за девушкой.

**АРТЫНСА** (Р.: вслед; И.: after; Т.: arkasından) *р.*

Артынан уҡ, эҙенән үк. □ Вслед, следом *за кем, чем. Артынса уҡ килде.* ■ *Баш осонда ҡарға ҡарҡылданы, яҡында ғына һайыҫҡан шыҡырланы, артынса уҡ ҡоҙғон ҡыҫҡырҙы.* Т. Ғарипова. *Тегеләрҙең [милицияның] закон үҙҙәре янында, бының [Мораттың] ҡыҙыуын баҫып алдылар ҙа бер кис йоҡлатып ҡайтарҙылар, артынса эшенә хат ебәрҙеләр.* Р. Солтангәрәев. *Уның [дауыл] артынса, дөбөр-шатыр күк күкрәп, йәшен йәшнәп, боҙ ҡатыш ямғыр яуа башланы.* Ә. Хәкимов. *Леспромхоздың баш инженеры Рифҡәт Солтанов, уның артынса бухгалтер килеп инде.* Н. Мусин.

**АРТЫНЫУ (артын-)** (Р.: навьючиваться; И.: load oneself up; Т.: kendini yüklemek) *ҡ.*

**1.** Үҙеңә йәки менгән атыңа күп итеп артыу *(йөктө).* □ Навьючиваться, нагружаться. *Артынып алған.*

**2.** Үгеҙ теләп, мал өҫтөнә һикереү *(һыйырға ҡарата).* □ Находиться в периоде течки *(о корове)* и действовать, как самец.

**АРТЫП КИТЕҮ (артып кит-)** *ҡ. ҡар.* **артыу.**

**АРТЫУ I (арт-)** [дөйөм төрки *арт* ‘ашыу’] (Р.: увеличиваться; И.: increase; Т.: çoğalmak) *ҡ.*

**1.** Һан, күләм яғынан үҫеү; күбәйеү, ишәйеү. □ Увеличиваться, прибавляться. // Увеличение, прибавление. *Команда өс кешегә артты. Көндән-көн көс арта. Ҡала халҡының һаны артты. Эш артты.* ■ *Ғәскәре һаман артыу өҫтөндә икән.* Ә. Хәкимов. *[Аҙнаев:] Һуңғы аҙнала бүрәнә әҙерләү күләменең бер ярым тапҡырға артыуын әйтте...* Н. Мусин. *[Буранбай — Юлдашка:] Уңыш йыйыу барышы, беҙҙә быраулау тиҙлеге сәғәтенә өс-дүрт тапҡырға артыуы тураһында ла материалдар бар, ҡара, — тине.* З. Биишева. *Һуңғы йылдарҙа халыҡтың артыуы хаҡында һөйләйҙәр, ләкин Рәсәй Президенты ҡарамағындағы бала хоҡуҡтарын һаҡлау буйынса вәкил П. Астахов киреһен раҫлай.* «Ағиҙел», № 11, 2010.

**2.** Кәрәктән, саманан артыҡ булыу. □ Превышать, становиться больше, ока-

зываться больше. *Тауарҙан күлдәклек артты. Һөт бер беҙҙәнән артты. Һине күрмәгәнгә ике айҙан артты.* ■ *Торбала баҫым артыу — әле эштең техник яғы ғына.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Тәүге кимәлгә өҫтәлеп күтәрелеү, ярҙан сығыу *(һыуға ҡарата).* □ Прибывать *(о воде). Һыу артыу.*

**АРТЫУ II (арт-)** (Р.: навьючивать; И.: load; Т.: yüklemek) *к.*

Ике яҡҡа һалындырып, эш хайуанына йөк аҫыу, артмаҡлау. □ Навьючивать. // Навьючивание. ■ *Дүрт мең кешене берләштереүсе уксылар отряды, ике казачий полкы, башҡорт-мишәр ғәскәре, йөктәр артыулы ун меңгә яҡын дөйә һәм пушкалар менән походҡа сыҡҡас та, көндәр боҙолдо.* Я. Хамматов.

**АРТЫУ III (арт-)** (Р.: отделять; И.: separate; Т.: ayırmak) *к.*

Ас эсәкте эс-ҡарындан аралап алыу. □ Отделять тонкую кишку.

**АРТЫУ IV** *и. кар.* **артылыш**. ■ *Бераҙыҡ нык ҡына елдереп алдылар ҙа, артыу башланғас, атламаға күстеләр.* К. Мәргән. *[Суракай:] Тирә-яҡҡа күҙ һала-һала килә инем, анау артыуҙы артылғанда, һеҙҙең бынау йылға буйында йөрөгәнегеҙҙе күреп, шуларҙыр, тип килдем.* М. Буранғолов.

**АРТЫШ** [дөйөм төрки *артуч*] (Р.: можжевельник; И.: juniper; Т.: ardıç) *и. бот.*

**1.** Кипарис һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған, мәңге йәшел ылыҫлы ҡыуаҡ йәки ағас *(емеше медицинала ҡулланыла).* □ Можжевельник (лат. *Juniperus*). ■ *Йылдар үтеү менән кешеләр тормошона бер-бер артлы ҡытлыҡ килә: йәйә бөгөргә — артыш менән саған, уҡ юнырға — ҡайын, суҡмар, һөңгө һабы эшләргә — имән, ашарҙарына муйыл, балан, сәтләүек таба алмай яфа сигәләр икән.* Н. Мусин. *Юлыш уң ҡанатҡа ашыҡты, тимер күк айғырын менеп, артыштар, селектәр ҡаплаған йырын буйлап дошмандың артынан юлланды.* Ә. Хәкимов. *[Ғәбит] йәш ҡар өҫтөнән шамбы һымаҡ шылып барған шыма нәмәне һис ҡыуып етә алмаҫ ине, әгәр ҡарт артыш ҡыуағы уны тотҡарлап ҡалмаһа.* Ә. Әминев.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, магик көскә эйә ағас. Бөтә яман көстәрҙе ҡурҡытыусы. □ Можжевельник *(по поверьям, дерево или куст, который имеет магическую силу).* ■ *Артыш ағасы — доғалы, кеше курсалай торған ағас. Ишек, тәҙрә баштарына, мөйөштәргә артыш элеү әле лә осрай.* Ф. Хисамитдинова.

**3.** Ҡатай ырыуының изге ағасы. □ Родовое дерево катайцев.

**АРТЫШ ЕЛӘГЕ** (Р.: можжевёловая ягода; И.: juniper berry; Т.: ardıç meyvesi) *и. бот.*

Дарыу өсөн ҡулланылған ҡара итләс емеш. □ Можжевёловая ягода. *Артыш еләген октябрь-ноябрь айҙарында йыялар.*

**АРТЫШ ИМЕ** (Р.: окуривание можжевельником; И.: smoking by juniper; Т.: ardıç tütsülemesi) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, бөтә яман көстәрҙе ҡурҡытыу өсөн артышты яндырып ҡулланыу. □ Окуривание можжевельником.

**АРТЫШ ӨТӨҮ (артыш өт-)** *к. кар.* **артыш төтәтеү.**

**АРТЫШ ТӨНӘТМӘҺЕ** (Р.: можжевёловая настойка; И.: juniper infusion; Т.: ardıç kaynatması) *и.*

Артыш һалып эшләнгән төнәтмә. □ Можжевёловая настойка.

**АРТЫШ ТӨТӘТЕҮ (артыш төтәт-)** (Р.: окуривать можжевельником, чтобы изгнать нечистую силу; И.: fumigate with juniper; Т.: ardıcı tütsülemek) *к. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, яман көстәрҙе ҡурҡытыу, ҡасырыу өсөн артыш яндырыу. □ Окуривать можжевельником, чтобы изгнать нечистую силу. ■ *Өйҙә йәш бала, әсә булһа, артыш төтәтеү йолаһы бар. Өй тынысһыҙ булһа, мәйет йыуғанда, уны сығарғанда ла артыш төтәтәләр.* Ф. Хисамитдинова.

**АРТЫШ ЯНДЫРЫУ (артыш яндыр-)** *к. кар.* **артыш төтәтеү.**

**АРТ ЮЛ** (Р.: задний проход; И.: anus; Т.: makat) *и. анат.*

Йыуан эсәктәге тиҙәк сыға торған тишек. □ Задний проход.

**АРУҠ** (Р.: изрядно; И.: considerably; Т.: az değil) *р. кыҫк. ф. һөйл.*

Арыу уҡ. □ Изрядно, значительно, немало. *Арук китеү. Арук эшләү. Арук йөрөү.* ■ *[Гөльямал:] Әптрәхим, әйҙә, мен. Әҙерәк аяғың ял итһен. Арук ер килдек бит.* Я. Хамматов. *Бәкер малайҙарҙан арук ҡына артҡа ҡалды.* Н. Ғәйетбай.

**АРФА** [рус. < нем.] (Р.: арфа; И.: harp; Т.: harp) *и.*

Ҙур өсмөйөш рәүешендәге, сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы. □ Арфа. ■ *Ғәйшә инде ер ҡыҙы түгел, ниндәйҙер илаһи зат булып күренде; ул муза ине хәҙер, алтын ҡыллы арфа уйнаусы илаһи муза ине...* Д. Юлтый.

**АРФАСЫ** (Р.: арфист; И.: harpist; Т.: harpist) *и.*

Арфала уйнаусы. □ Арфист, арфистка.

**АРХАИЗАЦИЯЛАУ (архаизацияла-)** (Р.: архаизировать; И.: archaic; Т.: eskimek) *ҡ.*

Боронғолаштырыу, иҫкегә ҡайтарыу. □ Архаизировать.

**АРХАИЗМ** [рус. < гр. *archaios* ‘боронғо’] (Р.: архаизм; И.: archaism; Т.: arkaizm) *и. лингв.*

**1.** Иҫкереп, дөйөм ҡулланылыштан төшөп ҡалған һүҙ, һүҙбәйләнеш йәки грамматик форма. □ Архаизм. *Архаизмға әйләнеү. Архаизмдар ҡулланыу. Романдағы архаизмдар.* ■ *Иҫке төрки тел, архаизм элементтары нык һаҡланып, бөгөнгө уҡыусыға ҡабул итеүе ауырыраҡ булған текстар хәҙергә әҙәби телгә күсерелде.* Халыҡ ижадынан. *Юҡ... был архаизм түгел, киреһенсә, улар [Һ. Дәүләтшинаның әҫәрҙәре] башҡорт әҙәби теленә һалынған хазиналар.* Б. Ишемғол.

**2.** Иҫке күренеш, ғәҙәт ҡалдығы. □ Пережиток старого явления, привычки.

**АРХАИК** (Р.: архаический; И.: archaic; Т.: arkaik) *с.*

Боронғо, иҫкергән. □ Архаический.

**АРХАИКА** (Р.: архаика; И.: archaic; Т.: arkaik) *и.*

Боронғолоҡ, иҫкелек һәм уларҙың айырым һыҙаттары. □ Архаика.

**АРХАИСТ** (Р.: архаист; И.: archaic; Т.: arkaik) *и.*

Архаизм яҡлы кеше. □ Архаист.

**АРХАИСТИК** (Р.: архаистический; И.: archaic; Т.: arkaik) *с.*

Боронғоға, иҫкегә тартҡан *(әҙәби йәки сәнғәт әҫәре).* □ Архаистический.

**АРХАР** [рус.] *и. зоол. ҡар.* **арҡар.**

**АРХЕОГРАФ** [рус.] (Р.: археограф; И.: specialist in the study (and publication) of early texts; Т.: eski yazı çeşitlerini öğrenen birisi) *и.*

Археография менән шөғөлләнеүсе, археография белгесе. □ Археограф.

**АРХЕОГРАФИК** (Р.: археографический; И.: pertaining to the study of early texts; Т.: eski yazıları öğrenen) *с.*

Археографияға мөнәсәбәтле. □ Археографический. *Археографик эш. Археографик ҡомартҡылар.* ■ *Башҡортостанда археографик тикшеренеүҙәр XIX быуатта урыҫ (В.В. Вельяминов-Зернов, Р.Г. Игнатьев), артабан башҡорт ғалимдары тарафынан (М. Бикҡурин, С. Кукләшев, М. Өмөтбаев һ.б.) алып барыла.* З. Шәрипова.

**АРХЕОГРАФИЯ** [рус. < гр. *archaios* ‘беренсел, боронғо’ + *grapho* ‘яҙам’] (Р.: археография; И.: study (and publication) of early texts; Т.: eski yazı çeşitlerini inceleyen bilim) *и.*

Боронғо яҙма ҡомартҡыларҙы йыйыу, өйрәнеү һәм баҫырға әҙерләү теорияһын һәм методикаһын эшләүсе ярҙамсы тарихи фән. □ Археография. *Археография материалдары.*

**АРХЕОЛОГ** [рус. < гр.] (Р.: археолог; И.: archaeologist; Т.: arkeolog) *и.*

Археология буйынса белгес. □ Археолог. *Археолог булып эшләү. Археолог яҙмалары.*

**АРХЕОЛОГИК** (Р.: археологический; И.: archaeological; Т.: arkeolojik) *с.*

Археологияға мөнәсәбәтле. □ Археологический. *Археологик ҡомартҡылар. Архео-*

*логик мәҙәниәттәр.* ■ *Башҡортостан территорияһында иң боронғо археологик ҡомартҡы (Мысовая тораһы) беҙҙең эраға тиклем 70-се мең йыллыкка тура килә.* «Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия»нан.

**АРХЕОЛОГИЯ** [рус. < гр. *archaiologia* ‘боронғолоҡ тураһында һүҙ’] (Р.: археология; И.: archaeology; Т.: arkeoloji) *и.*

Кешелек йәмғиәтенең үткәнен һаҡланып ҡалған матди ҡомартҡылар буйынса өйрәнә торған тарих фәне тармағы. □ Археология. *Археология музейы. Археология фәне.* ■ *Археология кафедраһы профессоры Михайлов Андрей Сергеевич, .. уҡыу йылы тамамланыр-тамамланмаҫ, Үзбәкстанға экспедицияға сығып китә икән.* Ә. Хәкимов. *Әлеге ваҡытта кеше һөлдәһе һәм ат һөйәктәре Санкт-Петербург археология музейында һаҡлана.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**АРХИВ** [рус. < лат. *archivum* < гр. *archaios* ‘боронғо’] (Р.: архив; И.: archives; Т.: arşiv) *и.*

**1.** Яҙма ҡомартҡыларҙы, тарихи документтарҙы тәртипкә килтереү һәм һаҡлау менән шөғөлләнгән махсус учреждение. □ Архив. *Дәүләт архивы. Ғилми архив. Үҙәк архив. Архив идаралығы.* ■ *Архив документтарының күсермәһен эшләткән өсөн һәм суд сығымдары өсөн, Санъяр йортонан һәм ғарызнамә биреүсе Ырыҫҡолдан ҡаҙна файҙаһына 83 һум көмөшләтә түләтергә.* З. Ураҡсин.

**2.** Учреждениеның, ойошманың иҫке документтар, эш ҡағыҙҙары һаҡлана торған бүлеге. □ Архив. *Загс архивы. Институт архивы.*

**3.** Дәүләт учреждениелары, предприятиелар, ғилми һәм йәмәғәт ойошмалары, сәйәси партиялар һәм айырым шәхестәрҙең эшмәкәрлегенә бәйле ҡағыҙҙар. □ Архив. *Фиркә архивы.*

**4.** Компьютерҙа архиватор-программа ярҙамында әҙ урын алһын өсөн ҡыҫып һаҡланған мәғлүмәт. □ Архив.

**АРХИВАРИУС** [рус. < лат. *archivarius*] *и. ҡар.* **архивсы.**

**АРХИВАТОР** [рус.] (Р.: архиватор; И.: archiver; Т.: dosya sıkıştırıcı) *и. инф.*

Бер нисә файлды бер архивҡа берләштерә һәм шулай уҡ ҡыҫыу ярҙамында архивтағы файлдарҙы үҙгәртә алған программа. □ Архиватор.

**АРХИВСЫ** (Р.: архивист; И.: archivist; Т.: arşivist) *и.*

Архив һаҡлаусы, архивта эшләүсе кеше; архивариус. □ Архивист. *Архивсы вазифаһы.*

**АРХИЕПИСКОП** [рус. < гр. *archiepiskopos*] (Р.: архиепископ; И.: archbishop; Т.: başpiskopos) *и.*

Христиан динендә юғары дәрәжә һәм шул исемдә йөрөтөүсе рухани. □ Архиепископ. ■ *Баш мөфтөй Т. Тажетдин, архиепископ Никон, баш раввин Д. Кричевский, изге Раштыуа байрамында баш ҡалабыҙҙың нәҡ үҙәгендә бер-береһенән тик бер нисә метр ғына аралыкта мәсеткә һәм сиркәүгә нигеҙ ташы һалып, бөтә донъяға нисек итеп дуҫлыкта һәм татыулыкта йәшәргә мөмкин икәнлеген иҫбат итте.* «Йәшлек», 6 октябрь 2009.

**АРХИЕРЕЙ** [рус. < гр. *archihieros*] (Р.: архиерей; И.: bishop; Т.: piskopos) *и.*

Христиан динендә юғары дәрәжәләге руханиҙарҙың *(епископ, архиепископ, митрополит)* дөйөм атамаһы. □ Архиерей.

**АРХИПЕЛАГ** [рус. < гр. *archipelagos: archi* ‘баш’ + *pelagos* ‘диңгеҙ’] (Р.: архипелаг; И.: archipelago; Т.: arşipel) *и.*

Бер-беренә яҡын урынлашҡан утрауҙар төркөмө. □ Архипелаг. *Соломон архипелагы ете эре һәм йөҙләгән вак ҡына утрауҙан тора.*

**АРХИТЕКТОНИКА** [рус. < гр. *architektonike: archi* ‘өлкән’ + *tekton* ‘ағастан төҙөлгән’] (Р.: архитектоника; И.: architectonics; Т.: arkitektonik) *и.*

**1.** *архит.* Өлөштәрҙең бер сама тигеҙ урынлашыуы, уларҙың бер бөтөн гармониялы ҡушылыуы. □ Архитектоника.

**2.** *сәнғ.* Әҫәрҙең художество бөтөнлөгө, композицияһы, төҙөлөшө. □ Архитектоника. ■ *Ғ. Хәйри романдың архитектоникаһын төҙөүҙә донъя әҙәбиәте, рус һәм татар яҙыусылары тәжрибәһенән өйрәнде һәм шул тәжрибәне башкорт эпик прозаһын үҫтереүҙә лә файҙаланырға тырышты.* С. Сафуанов.

**3.** *геол.* Геологик төҙөлөштөң, теге йәки был урын тау тоҡомдарының ятыу йәки урынлашыу үҙенсәлектәре. □ Архитектоника.

**АРХИТЕКТОНИК** [рус.] (Р.: архитектонический; И.: architectonic; Т.: arkitektonik) *с.*

Архитектоникаға мөнәсәбәтле. □ Архитектонический.

**АРХИТЕКТОР** [рус. < гр. *architekton*] (Р.: архитектор; И.: architect; Т.: arkitekt) *и.*

Архитектура өлкәһендәге белгес. □ Архитектор. ■ *Берәй матур өй күрҙеңме — архитектор булып, шундай бер бина ҡалдыраһы килә.* Н. Нәжми. *Б.Ғ. Кәлимуллин 1935 йылда Новосибирск ҡалаһында инженер-төҙөлөш институтын тамамлап сыға һәм башкорттарҙан беренсе булып архитектор исеме ала.* Ғ. Әмири.

**АРХИТЕКТУРА** [рус. < лат. *architectura* < гр. *architekton* 'төҙөүсе'] (Р.: архитектура; И.: architecture; Т.: mimarlık) *и.*

**1.** Төҙөлөштө проектлау, башҡарыу һәм биҙәү сәнғәте, оҫталығы. □ Архитектура. *Архитектура объекттары. Архитектура идаралығы.* ■ *Мөхәмәтсәлим үҙен бары яҡшы яҡтан күрһәтә: кластан класҡа маҡтау ҡағыҙҙары менән күсә килә, каллиграфия, архитектура һәм һынлы сәнғәт буйынса ярайһы уҡ күнекмәләр ала.* М. Өмөтбаев.

**2.** Төҙөлөштөң характеры, стиле. □ Архитектура. *Боронғо Греция архитектураһы. Хәҙерге архитектура. Готика архитектураһы.* ■ *Ҡатын яңы архитектура стилендә һалынған бер подъезлы күркәм йорттоң бишенсе ҡатында йәшәй икән.* Л. Яҡшыбаева.

**3.** *күсм. Нимәнеңдер* бер берәмек булып ойошоуы *(дәүләт, ойошма һ.б.).* □ Архитектура.

**4.** *инф.* Компьютер быуынының һәм блогының йәки микропроцессорҙың берләшмәһе һәм улар араһындағы бәйләнеш. □ Архитектура.

**АРХИТЕКТУРА ПРОЕКТЫ** (Р.: архитектурный проект; И.: architectural design; Т.: mimarlık projesi) *и. архит.*

Төҙөлөш өсөн кәрәк булған архитектура документацияһы, архитектура мәсьәләләрен комплекслы хәл иткән өлөшө. □ Архитектурный проект.

**АРШЫН** [рус. *аршин*] (Р.: аршин; И.: arshin; Т.: arşın) *и.*

**1.** Метрик системаны индергәнгә тиклем ҡулланылған 0,711 метрға тиң оҙонлоҡ үлсәү берәмеге. □ Аршин. ■ *[Торомтай] кәнфит-шәкәр, нисә аршын ситса алып ҡайтып буласағы хаҡында иҫәп-хисап һалып бара.* Н. Мусин. *[Бейеш] Ҡылдан ишеүле алты аршын самаһы оҙонлоҡтағы яҫы кирәмгә ҡайышты ҡушып бәйләгәс, ҡарағай олонон уратып, уның элмәкле осон биленә бәйләне лә үргә үрмәләне.* Я. Хамматов.

**2.** Шул оҙонлоҡтағы үлсәү таяғы. □ Аршин. *Аршын менән үлсәү.*

♦ **Үҙ аршының менән үлсәү** кешенең эш-ҡылығын үҙеңдән сығып баһалау. □ Мерить на свой аршин. **Аршын йотҡан һымаҡ** кәүҙәһен яһалма төҙ тотҡан кешегә ҡарата. □ *соотв.* Как (словно, будто) аршин проглотил.

**АРШЫНЛАУ (аршынла-)** (Р.: мерить аршином; И.: measure by the arshin; Т.: arşınla ölçmek) *ҡ. һөйл.*

Аршынға һалыу. □ Мерить аршином. *Аршынлап үлсәү. Аршынлап бүлеү.*

**АРШЫНЛЫ** (Р.: аршинный; И.: by the arshin; Т.: arşınlı) *с. һөйл.*

Аршын менән үлсәнгән. □ Аршинный. ■ *Ни бысағыма шул ерҙе, аршынлы тауар һымаҡ, ҡат-ҡат үлсәргә!* Ә. Хәкимов. *Урҙала ла яңы әйберҙәр, кейем-һалым, яулыҡтар, аршынлы тауарҙар элеүле.* Ж. Кейекбаев.

**АРЪЯҠ (аръяғы)** (Р.: противоположный берег; И.: opposite bank; Т.: karşı kenar) *и.*

**1.** Ҡаршы яҡ, *киреһе* — бирьяҡ. □ Противоположный берег. ■ *Аҡтауҙың иң осонда, Иҙел бөгөлөндә, торған һағауылдар аръяҡта, Күгиҙел тарафында, бик ҙур саң күтәрелеүен хәбәр итте.* З. Ураҡсин.

**2.** *Ниҙең дә булһа* артындараҡ ятҡан урын, ер. □ Противоположная, задняя сторона *чего-л.* ■ *Ашыҡтым! Боҙ кисеп үрҙәр аштым. Йәшендем тау аръяғына, үҙемдән, һинән ҡастым.* Т. Ғәниева.

**3.** Эш-хәлдең артабаны, ҡалған яғы. □ Дальше. ■ *Ярай, ҡустым, мин былай ғына әйтәм, аръяғын үҙең беләһең инде, һин хужа кеше, — тине Яҡуп.* Б. Бикбай.

**АРЫ I** [боронғо төрки *ан+ғары*] (Р.: дальше; И.: farther; Т.: sonra) *р.*

**1.** Билдәле бер тәңгәлде үтеп; артабан. □ Дальше. *Беҙҙең өй мәктәптән ары.* ■ *Нурисламдың хәлен белешергә өмөтләнеп, Мәзинә нисәмә тапҡыр Лубянкаға барып йөрөп тә ишек төбөнән ары уҙа алмағайны.* Ә. Хәкимов. *Күк көмбәҙе кеүек түңәрәк түбәле башҡорт тирмәләренән ары осло башлы ҡаҙаҡ тирмәләре ҡалҡып сыҡҡан.* З. Ураҡсин. *Алпамыша көтөүсене башына бер сиртеп үлтерә лә ары китә.* «Алпамыша». ● *Татыу булһа ҡатының, ары торһон алтының.* Әйтем.

**2.** Билдәле бер мәлдән һуң; йәнә, тағы. □ Далее, дальше. ■ *Саҡай, ауыл мәҙрәсәһен бөтөргәс, өйләнеп, хужалыҡ эштәренә бәйләнеп китте, ары уҡыманы.* Б. Бикбай.

**3.** Билдәле бер кимәлдән юғары; артыҡ. □ Больше, более. *Был тоҡҡа биш биҙрәнән ары һыймай.*

♦ **Ары бәрелеп, бире һуғылыу (бәрелеү)** ни эшләргә белмәй ҡаңғырып йөрөү. □ Метаться, не находить себе места. *Фаҡиһа ары бәрелеп, бире бәрелеп уралғансы, Фатима һөт аҡҡан көпсәк тәңгәленә ҡоштабаҡ ултыртып өлгөрҙө һәм ҡаймаҡ көпсәге аҫтына таш туҫтаҡ ҡуйҙы.* Ж. Кейекбаев. **Ары торһон** кәрәкмәй, кәрәге юҡ. □ Нет нужды, не нужно.

**АРЫ II** (Р.: после, за, вслед; И.: after; Т.: sonra) *бәйл.*

Сығн. килештәге һүҙҙәр менән килеп «бүтән» мәғәнәһен бирә. □ После, за, вслед *(послелог с исх. п.). Бынан ары. Унан ары. Һүҙҙән ары һүҙ китте.* ■ *Ошолай алдашыуы уның [Кәҙерmәттең] намыҫын тырнағылап ҡуя, бынан ары йөрөмәйем шул Хөснәгә тигән фекергә килә...* Н. Мусин.

**АРЫ III** *и. диал. ҡар.* **бал ҡорто**.

**АРЫ-БИРЕ I** (Р.: туда-сюда; И.: hither and thither; Т.: şuraya buraya) *р.*

Бер тегеләй, бер былай. □ Туда-сюда. *Ары-бире йөрөү. Ары-бире сабыу. Ары-бире ҡарау.* ■ *Төн уртаһы. Ғәйфи яңғыҙ ғына ары-бире йөрөй иҙәндә.* З. Биишева. *Талип егет тамаҡтан яҙҙы, дәрестәрен ташлап, йә һөжрәлә бикләнеп ятыр, йә йөрәгенә түҙә алмай, ары-бире һуғылып йөрөр булды.* Ә. Хәкимов. *Прииск контораһы тирәһендә ары-бире үтеп йөрөгән ят кешеләрҙе алыҫтан күргән Михаил аҙымын аҡрынайтты.* Я. Хамматов.

**АРЫ-БИРЕ II** (Р.: маловажный; И.: unimportant; Т.: önemsiz) *с.*

Мөһим булмаған, ваҡ-төйәк, теге-был, төрлө. □ Маловажный. *Ары-бире эш.*

**АРЫ-БИРЕ III** (Р.: что-нибудь; И.: something; Т.: bir şey) *и.*

Берәй төрлө ярамаған насар эш, көтөлмәгән хәл. □ Что-нибудь, что-либо. *Ары-бире була ҡалһа.* ■ *[Буранша:] Ары-бире булып, беҙ ваҡытында ҡайта алмаһаҡ, ҡатын, бала-сағаны йыуатырға кеше бар.* З. Биишева.

**АРЫҒАЙЫУ (арығай-, арығая)** *ҡ. ҡар.* **арыҡланыу.**

**АРЫЙ I** (Р.: раз; И.: times; Т.: defa) *р. диал.*

Мәртәбә, тапҡыр. □ Раз. *Ике арый әйттеләр. Ике арый ҡайтып китте. Ике арый килде.*

**АРЫЙ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: on of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле, дыуан ырыыуҙарының бер араһы. □ Родовое подразделение башкир-дуванцев, айлинцев.

**АРЫҠ I (арығы)** [дөйөм төрки *арык*] (Р.: арык; И.: aryk; T.: ark) *и.*

Ер һуғарыу өсөн ҡаҙылған канау *(Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Кавказ артында).* □ Арык. *Арык менән һуғарыу.* ■ *Сарсап яткан уттай ҡыҙыу сүл комо арык һыуҙарын нисек һемереп йотһа, Нурислам да шулай ҡарт ғалимдың зауыклы хикәйә-риүәйәттәрен күңеленә һеңдерҙе.* Ә. Хәкимов. *Һыу ҙур арыктан түбәнгә атылып төшә, ҡайнай, шаулай.* Ғ. Хәйри.

**АРЫҠ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Юрматы ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-юрматинцев.

**АРЫҠ III** [дөйөм төрки *арык* ‘ябыҡ’] (Р.: тощий; И.: skinny; T.: çok zayıf) *с.*

Үтә ябыҡ; *киреһе* — һимеҙ. □ Тощий. *Арык ат. Арык мал. Арык булыу.* ■ *[Кәшфиҙең] күҙҙәре йышырак уйсан, йылмайғанда ла тәүҙә ирендәре асыла, ауыҙы йырыла, арык сикәләре йыйырыла.* Д. Бүләков. *[Сәлимә:] Мырҙағәле йыл да ашарына ғына ике һуғым һуя, ә беҙ өй эсенә бер арык башмакка карап ултырабыҙ.* З. Ураҡсин. ● *Йәш үләндә арык мал да уйнаклай.* Әйтем.

**АРЫҠБАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бишауыл-уңғар ырыуының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-бишаул-унгарцев.

**АРЫҠЛАНДЫРЫУ (арыкландыр-)** (Р.: доводить до истощения; И.: make emaciated; T.: bitkinliğe götürmek) *к.*

Арыҡҡа әйләндереү; ябыҡтырыу. □ Доводить до истощения. *Малды арыкландырыу.*

**АРЫҠЛАНЫУ (арыклан-)** (Р.: худеть; И.: grow thin; T.: zayıflamak) *к.*

Ныҡ ябығыу, арыҡҡа әйләнеү. □ Худеть, исхудать, истощать. *Ат арыкланды.* ■ *Көҙөн арыу ғына ингән һарыктар, һаламдан башка һый күрмәгәнгә, арыкланды.* Ф. Мансуров.

**АРЫҠЛАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Танып ырыуының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир-таныпцев.

**АРЫҠЛЫҠ** (Р.: истощённость; И.: depletion; T.: zayıflık)*и.*

**1.** Ябыҡлыҡ. □ Истощённость. ■ *[Ҡыуандык] арыклыктан, тән үшәнлегенән арынып, мөһабәт, сибәр ир-егеткә әүерелде.* Ә. Хәкимов.

**2.** Хәлһеҙлек. □ Бессилие.

**АРЫҠ-ТУЛАҠ** (Р.: тощий; И.: scraggy; T.: zayıf) *с. йыйн.*

Гел арыҡ, ябыҡ. □ Тощий. *Арык-тулак мал.* ■ *Был ерҙәрҙе калкытыр өсөн айҙар буйы куна яткан сактар бар ине бит. Ҡайҙа бараһың инде арык-тулак ат менән.* Ғ. Вәлиев.

**АРЫҠ-ТУРЫҠ** *с. кар.* **арык II.**

**АРЫМАЙ-ТАЛМАЙ** (Р.: не покладая рук; И.: indefatigably; T.: yorulup dinlenmeden) *р.*

Бик тырышып, туктауһыҙ. □ Не покладая рук, без устали. *Арымай-талмай эшләү. Арымай-талмай шөғөлләнеү.* ■ *[Шәкерт:] Мин бер нәмәнән дә куркмайым, ғәҙеллек өсөн арымай-талмай көрәшәсәкмен.* Я. Хамматов. *Уңған мөриттәре каланың урам-майҙандарын, баҙарҙарын, каруанһарайҙарҙы, Иҙел ярындағы караптар тукталышын арымай-талмай кыҙыра, хәбәр аулай.* Ә. Хәкимов.

**АРЫМТАЛ** (Р.: быстро устающий; И.: inclined to tiredness; T.: hızlı yorulan) *с.*

Тиҙ арыусан, арып барыусан. □ Быстро устающий, склонный к усталости. *Арымтал ат.*

**АРЫНДЫРТЫУ (арындырт-)** *ҡ. йөкм. кар.* **арындырыу**. *от понуд* **арындырыу.**

**АРЫНДЫРЫЛЫУ (арындырыл-)** *ҡ. төш. кар.* **арындырыу 1.** *страд. от* **арындырыу 1.**

**АРЫНДЫРЫУ (арындыр-)** (Р.: избавлять; И.: rescue (from); Т.: kurtarmak) *ҡ.*

**1.** *Берәй* эш-хәл, кисереш һ.б. нәмәнән бушандырыу; ҡотолдороу. □ Избавлять, выручать. // Избавление. ■ *Был ғүмерҙең хәҙер йылы түгел, сәғәтенә тиклем сикләнгән. Һыҙырып ала алһыу хыялдарҙан, арындыра юк-бар шиктәрҙән.* Р. Бикбаев. *Республикабыҙ, ил буйынса йәштәр үҙҙәре лә, ололар ҙа төрлө акциялар, саралар, осрашыуҙар ойоштора. Эскенән, наркотиктарҙан, тәмәкенән арындырыу өсөн былар бик кәрәк.* «Ағиҙел», № 10, 2010.

**2.** *Берәй* нәмәне сифат йәһәтенән таҙартыу. □ Очищать. *Һыуҙы тәбиғи ҡатышмаларҙан арындырыу.*

**АРЫНҺЫҘ** (Р.: смирный; И.: meek; Т.: sakin) *с.*

Киреләнмәй, ҡарышмай торған; йыуаш, күндәм. □ Смирный, кроткий, послушный. ■ *Ул [Дөлдөл] бик арынһыҙ — ҡуйып киткән урынында тора торғайны.* Ш. Бикҡол.

**АРЫНЫУ (арын-)** (Р.: избавляться; И.: get rid of; Т.: başından atmak) *ҡ.*

**1.** *Берәй* нәмәнән йәки эш-хәлдән ҡотолоу; бушаныу. □ Избавляться, освобождаться. // Избавление, освобождение. ■ *Хужабикәләр, .. өй мәшәкәттәренән арынып, ҡараңғы төшкәнсе саф һауала серләшә.* В. Нафиҡов. *[Кыраубикә:] Балам, эт менән эт булма. Бер аҡҡа ҡара төшһә, унан арыныу ҡыйын булыр.* Д. Юлтый. *Бар булмышын анау шәфҡәтһеҙ ҡоршауҙан арыныу хәстәре, тереклек ғәме биләгәйне Нурисламдың.* Ә. Хәкимов.

**2.** Төрлө ҡатнашмаларҙан таҙарыу. □ Очищаться. // Очищение. *Кәрәкһеҙ ҡушымталарҙан арыныу.*

**АРЫП-ЙОНСОП** *р. кар.* **арып-талып.** ■ *Таяҡ таянып, бөтә юл һалыҡтарын арҡаларына биштәрләп аҫҡандарҙың, арып-йонсоп бөткән балаларын етәкләп, сак-сак атлап барған ҡатындарҙың, карт-короларҙың иҫәбе-хисабы юк кеүек.* Ғ. Ибраһимов.

**АРЫП КИТЕҮ (арып кит-)** *ҡ. кар.* **арыу I.**

**АРЫП-ТАЛСЫҒЫП** *р. кар.* **арып-талып.** ■ *[Зәмбилә менән Яңыл] Арып-талсығып бөткәндәр, көн оҙоно йүгерҙеләр шул, аш-һыу әҙерләү улар өҫтөнә төштө.* Р. Камал.

**АРЫП-ТАЛЫП** (Р.: уставая; И.: being overstrained; Т.: yorularak) *р.*

Бик ныҡ арып, хәлдән тайып. □ Измождённо, изнурённо; уставая, переутомляясь. *Арып-талып бөтөү. Арып-талып эшләү.* ■ *Әбейемдең тирләп-бешеп, арып-талып урмандан ҡайтып, болдорҙа илап ултырған сактары ла булды инде.* Р. Рөстәмова. *Өршәкбаш буйын ҡыҙырып, арып-талып ҡайтҡанда ла, Миңлеғәленең күңеле аңлайышһыҙ тойғоларҙан арынманы.* Я. Хамматов.

**АРЫҪ** *и. кар.* **арыҫлан**. ■ *Батыр иргә арыҫта, икәү бергә менгәшеп.. баҫмалатып килерҙәр, алмашлап тап булырҙар.* «Урал батыр».

**АРЫҪЛАН** [дөйөм төрки *арыслан*] (Р.: лев; И.: lion; Т.: aslan) *и. зоол.*

**1.** Бесәй һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған ҡыҫҡа йөнлө, һорғолт һары төҫлө эре йыртҡыс йәнлек *(атаһы яллы була).* □ Лев. ■ *Берҙән-бер көндө һунарҙа йөрөгәндә, улар [Карабай менән йәйләү кешеләре] өҫтөнә бер арыҫлан килеп сыға.* Халыҡ ижадынан.

**2.** *күсм.* Ҡурҡыуҙы белмәгән, батыр, ғәйрәтле кешегә ҡарата әйтелә. □ Бесстрашный, отважный человек *(о мужчине).* ■ *Бына был ҡайғы уны [Рәйесте], арыҫландан ҡуянға әүерелдереп, мәмәй йән итә.* С. Поварисов.

**3.** (*баш хәреф менән*) *астр.* Зодиактың береһе *(Ҡыҫала һәм Ҡыҙ йондоҙлоктары уртаһында урынлашкан).* □ Лев.

**АРЫҪЛАН АУЫҘЫ** (Р.: львиный зев; И.: snapdragon; Т.: aslanağzı) *и. бот.*

Ал, ҡыҙыл, һары, аҡ сәскә атҡан, сәскәлектәрҙә үҫтереү өсөн декоратив үҫемлек.

□ Львиный зев. *Арыҫлан ауыҙы оҙаҡ ваҡыт буйына күп сәскә ата.*

**АРЫҪЛАНДАЙ** (Р.: как лев; И.: like a lion; Т.: aslan gibi) *р.*

Арыҫлан кеүек. □ Как лев, подобно льву. ■ *[Ҡунаҡтар Хажисолтандың] улының арыҫландай көслө, мал-тыуарға бай булыуын теләнеләр.* Я. Хамматов.

**АРЫҪЛАН ҠОЙРОҒО** (Р.: пустырник; И.: motherwort; Т.: aslan kuyruğu otu) *и. бот.*

Ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған, йылға буйҙарында үҫкән күп йыллыҡ баллы үлән үҫемлек. Йөрәк, нервы, ҡан тамырҙары ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланылған дарыу үләне. □ Пустырник (лат. *Leonurus*). *Йөнтәҫ арыҫлан ҡойроғо. Арыҫлан ҡойроғо төнәтмәһе.*

**АРЫҪЛАН ТЫРНАҒЫ** (Р.: зюзник высокий; И.: the mint family herb; Т.: kalkan otu) *и. бот.*

150 см бейеклектәге йәшел тура һабаҡлы, япраҡтары ҡытыршы төктәр менән ҡапланған, таҡыя һымаҡ кәрзинкәле сәскәләре терәк һабаҡта сәскә яны япрағы өҫтөндә урынлашҡан, июлдән сентябргәсә сәскә атҡан үҫемлек. □ Зюзник высокий (лат. *Lycopus exaltatus*).

**АРЫТЫУ (арыт-)** (Р.: утомлять; И.: make tired; Т.: yormak) *к.*

**1.** Хәлдән тайҙырыу, көс-хәлде бөтөрөү. □ Утомлять, изнурять, изматывать. // Утомление. ■ *Ахырҙа .. аттарын арытып, үҙҙәре лә хәлдән тайған ҡыуыусылар йәйләүгә кире ҡайтҡан.* Н. Иҙелбай. *[Хөрмәт Сафич:] Илғужа Ғиниәтович, был эш арытманымы?* Д. Бүләков.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **арыу I** ■ *[Мәүлит:] Арыуын арытмай ҙа, ташлы урын булып сыҡты, төрәндәрҙе ҡайырып алып бара.* Д. Бүләков.

**АРЫУ I (ары-)** (Р.: уставать; И.: get tired; Т.: yorulmak) *к.*

Көс-хәлдән яҙыу, хәлдән тайыу; хәлһеҙләнеү. □ Уставать, утомляться, изнуряться. *Эштән арыу. Оҙаҡ йөрөүҙән арыу. Көтөп арыу.* ■ *Тырышып эшләй-эшләй ныҡ ҡына арығанбыҙ икән. Беләктәргә гер аҫҡандармы ни: ҡулдарҙы күтәреп тә булмай.* Ф. Әсәнов. Р. Назаров. *Хеҙмәтселәрҙең арыуы, йонсоуы менән иҫәпләшеп тормай, ул [Ҡотлояр] төндә лә эш таба.* Д. Юлтый. *Уның [Егор Николаевичтың] бындағы приказчигы Михаил Жирников иртәнән бирле хужаһын көтә-көтә арып бөттө.* З. Ураҡсин. *[Сәрбиямал:] Бер үҙе ун һыйыр һауа. Ҡул менән бит... Балаҡайым арып бөтә инде.* Д. Бүләков. ● *Ашыҡҡан арыр, аҡрын барыр.* Мәҡәл. *Атлының аяғы ла арымай, туны ла туҙмай.* Мәҡәл.

**АРЫУ II** (Р.: усталость; И.: tiredness; Т.: yorgunluk) *и.*

Арығанлыҡ, хәлһеҙлек *(кешенең көс-хәленә ҡарата).* □ Усталость, утомление. *Арыуың бөттөмө?* ■ *Арыу бөткәс, ил арҡаһы яҙылғас, әйләнеп ҡараһалар — туҡтаған ерҙәре ап-арыу ғына урын булып сыҡты.* К. Мәргән. *Шофёр бик шат, сөнки арыуын да, талыуын да эшләп тарата!*

**АРЫУ III** [алтай ғаиләһе телдәренән] (Р.: довольно хороший; И.: rather good; Т.: oldukça iyi) *с.*

**1.** Яҡшы, һәйбәт; ярарлыҡ. □ Довольно хороший, неплохой, сносный. *Арыу кеше. Арыу эш. Уңыштар арыу ғына. Арыу ниәт.* ■ *Ташбатҡан ауылында ҡыуғынды «арыу кәсеп», «аҡсалы кәсеп» тиҙәр.* Ж. Кейекбаев. *[Мырҙаш:] Бер арыу ғына ҡапҡалы йорт алдына туҡтап, аттың башын тәртәгә шаҡарҙым да, ҡапҡа аша эскә — шылт.* З. Ураҡсин. *[Берта] Ирназарҙың таушалып, бысранып бөткән кейемен һалдырып, уға арыу ғына пинжәк-салбар, өр-яңы тиерлек итек бирҙе.* Ә. Хәкимов.

**2.** Бер саманан артығыраҡ; байтаҡ. □ Значительный, немалый. ■ *Юртаҡ атҡа юл ҡыҫҡа, тигәндәр бит, беҙ ҙә, юрта торғас, арыу ғына ер киттек.* Ә. Ихсан.

**АРЫУ IV** (Р.: хорошо; И.: well; Т.: iyi) *р.*

Яҡшы, һәйбәт. □ Хорошо, неплохо. *Килеп арыу иттең әле.* ■ *[Илғужа] эшен алып бармай тиһәң, район үҙенә төшкән йөктө арыу ғына тарта, шикелле.* Д. Бүләков. *Бейек*

*күтәрелгән ай ҙа, янғын да арыу яктырта ине кәмәләрҙе.* Б. Рафиҡов.

♦ **Арыумы?** Һаумыһығыҙ? *(исәнләшеү һүҙе, күберәк ололарҙың телмәрендә ҡулланыла).* □ Здравствуйте! **Арыу әле** иҫән-һау, сәләмәт *(сәләмгә яуап итеп әйтелә).* □ Пока жив-здоров *(ответ на приветствие).*

**АРЫУ БЕЛМӘҪ** (Р.: неутомимый; И.: indefatigable; Т.: yorulmaz) *с.*

Бер ҙә арымаған. □ Неутомимый, неустанный; неуёмный. *Арыу белмәҫ ат.*

**АРЫУ БУЛЫУ (арыу бул-)** (Р.: начать поправляться; И.: get better; Т.: iyileşmek) *к.*

**1.** Бер аҙ һауығыу; шәбәйеү. □ Начать поправляться, идти на поправку. ■ *[Рауза] Аҙна буйы янып ауырып ятты. Төндәр буйы баш осонан китмәй ултырҙым. Шунан арыуырак булды был.* Н. Мусин.

**2.** Үсәп әйтелә. □ Так и надо *(выражение злорадства). Арыу булған, уға шул кәрәк.*

**АРЫУҒА** *р. кар. диал.* **һыйға**.

**АРЫУ ИТЕҮ (арыу ит-)** (Р.: начать поправлять; И.: get better; Т.: iyileştirmek) *к.*

**1.** Бер аҙ һауыҡтырыу; шәбәйтеү. □ Начать поправлять, лечить.

**2.** Үсәп әйтелә, яҡшы итеү. □ Так и надо *(выражение злорадства). Арыу булған, уға шул кәрәк.*

**АРЫУЛАНДЫРЫУ (арыуландыр-)** (Р.: улучшать; И.: improve; Т.: iyileştirmek) *к.*

**1.** Яҡшы яҡҡа үҙгәртеү. □ Улучшать. // Улучшение. *Мал тоҡомон арыуландырыу.*

**2.** Бер аҙ һауыҡтырыу, шәбәйтеү. □ Излечивать, исцелять *кого. Хәлде арыуландырыу.*

**АРЫУЛАНЫУ (арыулан-)** (Р.: улучшаться; И.: ameliorate; Т.: iyileşmek) *к.*

**1.** Яҡшы яҡҡа үҙгәреү; яҡшырыу, һәйбәтләнеү. □ Улучшаться. *Эштәр арыулана.*

**2.** Бер аҙ һауығыу, арыу булыу. □ Выздоравливать, поправляться. *Дауаханала булдым, өйөмә арыуланып ҡайтып киттем.* ■ *[Зөфәр:] Улай ҙа хәлем әҙерәк арыуланыу менән, унда-бында һуғылып, эш эҙләргә керештем.* Ә. Хәкимов.

**АРЫУЛАП** (Р.: хорошо; И.: well; Т.: iyice) *р.*

Яҡшы итеп, тейешенсә, еренә еткереп. □ Хорошо, как следует. ■ *Арыулап ҡына тамаҡ туйҙырырға кәрәк.* Н. Мусин.

**АРЫУ-ТАЛЫУ** (Р.: усталость; И.: fatigue; Т.: yorgunluk) *и. йыйн.*

Көс-хәлдән яҙған, хәлһеҙләнгән торош. □ Усталость, утомлённость. *Арыу-талыуың бөтөр. Арыу-талыу белмәй эшләү.* ■ *Ғилман урманға йәне-тәне менән бирелгән, арыу-талыуҙы белмәҫ...* Н. Мусин.

**АРЫУ УҠ** (Р.: значительно, немало; И.: fairly; Т.: az değil) *р.*

Күп кенә, байтаҡ. □ Значительно, немало, изрядно. *Арыу уҡ көтөү* ■ *Оҙонталдан Әпшәнгә арыу уҡ ара бит...* Р. Камал. *Котелокта балыҡ та арыу уҡ булды.* З. Биишева.

**АРЫШ I** [рус.] (Р.: рожь; И.: rye; Т.: çavdar) *и.*

**1.** Оҙонса нәҙек орлоҡло, ҡыяҡ япраҡлы ашлыҡ. □ Рожь. ■ *Беренсенән, ул [тары] иртә өлгөрә, арыш, бойҙай культураларынан урыу ваҡыты яғынан әллә ни ҡалышмай.* Д. Буләков. *Хәүеф-хәтәр менән арыш баш ҡоҫҡан мәл дә килеп етте.* З. Ураҡсин. *Далаларҙан көйгән әрем, өлгөргән арыш еҫтәре бөркөлөп йәнде ҡыуандырҙы ..* З. Биишева. *Арыштарҙың еҫен, ярыштарҙың көсөн, дан халҡымдың эшен һөйләй һандуғас...* Р. Назаров. *Ямғыр яу, яу, яу, иген үҫһен тау, тау, арыштан, бойҙайҙан, беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан.* Халыҡ ижадынан. ● *Атың барҙа арыш сәс.* Әйтем. *Һаламға үҫкән арыштың башы булмай.* Әйтем.

**2.** Шул ашлыҡтың орлоғо. □ Рожь. ■ *[Бикмырҙа:] Улай ҙа ике йөк арыш оно бирергә булдым.* Ә. Хәкимов. Арыш ыумасы һалып бешерелгән өйрәне эскәндә, әлеге шул һуғышҡа тиклемге тәмле аштар иҫкә төшөп китә. Н. Мусин. *Тирмән таштары арыш, бойҙай бөртөктәрен он яһап әйләнә.* Ғ. Хәйри. ● *Арыш икмәген баллап аша.* Әйтем.

♦ **Арыш боламығы** былағай, аҡылға ултырып өлгөрмәгән кешегә әйтелә. □ Мям-

ля. ■ *[Йыһан — Ғилмигә:] Йөрө инде кеше көлдөрөп, арыш боламығы менән.* Х. Ибраһимов.

**АРЫШ II** *и. диал. кар.* **артылыш.**

**АРЫШ III** *и. диал. кар.* **тәртә.**

**АРЫШ АНАҺЫ** *и. диал. кар.* **арыш атаһы.**

**АРЫШ АТАҺЫ** (Р.: спорынья ржи; И.: ergot; Т.: çavdar mahmuzu) *и. бот.*

**1.** Арыш башағында була торған оҙон ҡара бәшмәк *(медицинала ҡулланыла).* □ Спорынья ржи (лат. *Claviceps*). *Арыш атаһының 30 төрө бар. Ҡыҙыл арыш атаһы ағыулы була.*

**2.** *миф.* Арыш баҫыуы эйәһе. □ Дух ржаного поля.

**АРЫШ БАТШАҺЫ** *и. диал. кар.* **арыш атаһы.**

**АРЫШБАШ** (Р.: житняк; И.: agropyron; Т.: buğday otu) *и. бот.*

Суҡ тамырлы, башы арыш башағына оҡшаш, һыуыҡҡа һәм ҡороға сыҙамлы күп йыллыҡ ҡыяҡлы үлән; бесәй ҡойроғо. □ Житняк (лат. *Agropyron*). ■ *Донник, люцерна, арышбаш кеүек күп йыллыҡ үләндәр татырлы ерҙә лә яҡшы үҫә.* Ғ. Вәлиев.

**АРЫШ ИНӘҺЕ** *и. диал. кар.* **арыш атаһы.**

**АРЫШ КҮСТЕРӘҺЕ** (Р.: костёр ржаной; И.: bromus; Т.: buğdaygillerden bir türü) *и. бот.*

Башаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ваҡ ҡына ялпаҡ башаҡлы ҡыяҡ япраҡлы үлән төрө *(бесән өсөн сәселә).* □ Костёр ржаной (лат. *Bromus secalinus*).

**АРЫШЛАТА** (Р.: рожью; И.: with rye; Т.: çavdar ile) *р.*

Арыш көйө, арыш менән. □ Рожью. *Арышлата түләү.*

**АРЫШЛЫҠ** (Р.: ржище; И.: field from which removed the rye; Т.: çavdar kaldırıldığı alan) *и.*

Арыш сәселгән йәки йыйып алынған ер; арыш баҫыуы. □ Ржище, ржанище. ■ *Беҙ [һалдаттар] ауыл ситендәге арышлыҡта ятабыҙ.* З. Ураҡсин.

**АРЫШ СӘСКӘҺЕ (ЗӘҢГӘРЕ)** (Р.: василёк синий; И.: cornflower; Т.: peygamber çiçeği) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ингән, зәңгәр сәскәле, күберәк арыш араһында үҫкән ҡый үләне; зәңгәрсуҡ. □ Василёк синий, василёк полевой (лат. *Centaurea cyanus*).

**АРЫШУТ** *и. диал. кар.* **ялағай.**

**АРЬЕРГАРД** *и. кар.* **сардауыл.**

**АС I** (Р.: голодный; И.: hungry; Т.: aç) *с.*

**1.** Оҙаҡ ашамаған, ашағыһы килгән, тамағы туҡ түгел. □ Голодный, несытый. ■ *Ас бүренән һаҡ булырға кәрәк, улар бушка ғына оломайҙар.* Ә. Бикчәнтәев. *[Шағәле:] Шым ғына ниндәй ҙә булһа көтөү янына килеп, ас бүре шикелле аңдып тороп, берәй һарыкты эләктереү хатта кәсепкә әйләнеп китте.* К. Мәргән. ● *Ас кешенең асыуы яман.* Әйтем. *Ас хәлен туҡ белмәҫ, ауырыу хәлен һау белмәҫ.* Әйтем. *Ас тамағым, тыныс ҡолағым.* Әйтем. *Астан ҡаҙан аҫтырма.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Ҡаҡса, ябыҡ, нәҙек, эскә батҡан. □ Тощий, тонкий, впалый. *Ас яңаҡ.* ■ *Кәшфи — сандыр кәүҙәле, ас яңаҡлы, ябыҡ кешеләргә хас була торған ғәҙәти йөҙ-һынлы, йомоғорак характерлы кеше.* Д. Бүләков.

**3.** *күсм.* Эсе буш, ҡоро көп; туҡ түгел. □ Пустой. *Ас башаҡ. Көнбағыштың еме ас.*

♦ **Ас ҡарынлай** (*йәки* **ҡарынға**) ашамаған көйө, ас хәлдә. □ Натощак.

**АС II** (Р.: ас; И.: ace; Т.: as) *и.*

Берәй эштең оҫтаһы. □ Ас.

**АСА I** (Р.: развилина; И.: fork; Т.: çatal) *и.*

Бер төптән айырылып киткән бер нисә тармаҡ; айырса, сата. □ Развилина, развилка.

**АСА II** (Р.: квадратный узор на домотканых половиках; И.: checkered pattern; Т.: kare bezek) *и. диал.*

**1.** Балаҫҡа төшөрөлгән дүрткел биҙәк. □ Квадратный узор на домотканых половиках.

**2.** *миф.* Һаҡлау, ҡурсалау көсөнә эйә булған биҙәк. □ Узор, обладающий оберегающей и охраняющей силой.

**АСА III** (Р.: промежуток между пальцами; И.: interval between fingers; Т.: parmak arası) *и. диал.*

Бармаҡ араһы. □ Промежуток между пальцами.

**АСАБАҒАН** (Р.: развилистый столб; И.: forked pole; Т.: direk) *и. диал.*

**1.** Саталы бағана *(төҙөлөштә түбә япҡанда өрлөк һалыу өсөн ҡулланыла).* □ Развилистый столб *(применяется в строительстве).*

**2.** Һауыт-һаба элә торған саталы ҡаҙыҡ. □ Развилистый столб для развешивания посуды.

**АСАБАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Өпәй башҡорттары аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-упейцев.

**АСАБАЛАН** *и. диал. ҡар.* **миләш.**

**АСАҒАС** (Р.: шест с развилкой; И.: forked pole; Т.: sırık) *и.*

Тирмәнең сағарағын асыу өсөн ҡулланыла торған аса башлы ҡолға. □ Шест с развилкой, применяется для открывания отдушины верхнего ободка юрты.

**АСАҒОЙРОҠ (асағойроғо)** (Р.: уховёртки; И.: earwig; Т.: kulağakaçan) *и. зоол.*

Асаланып торған ҡойроҡло, ҡара йәки ҡара-көрән төҫтәге тараҡан һымаҡ бөжәк *(өйҙөң еүеш ерҙәрендә, иҙән аҫтарында була)*; айрығойроҡ. □ Уховёртки (лат. *Dermaptera*).

**АСАЙЫШ** [фарс. اسایش] (Р.: всеобщий мир; И.: commonwealth; Т.: genel barış) *и. иҫк.*

Дөйөм тыныслыҡ, именлек. □ Всеобщий мир, всеобщее благополучие.

**АСАҠАЙ** *и. зоол. диал. ҡар.* **асағойроҡ.**

**АСАЛАҒОЙРОҠ (асалағойроғо)** *и. зоол. диал. ҡар.* **асағойроҡ.**

**АСАЛАҠ (асалағы)** (Р.: лезвие ножниц; И.: scissor's blade; Т.: makas ağızı) *и.*

Ҡайсының бер йәбе. □ Лезвие ножниц.

**АСАЛАҠ-ЙОМАЛАҠ** (Р.: полуприкрытый; И.: screwed up; Т.: yarım açık) *с.*

Асылыр-асылмаҫ *(күҙгә ҡарата).* □ Полуприкрытый, прищуренный *(о глазах).* ■ *Иләҫләнеп уянған һалдат, бер ни төшөнмәй, күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ итеп ултырҙы...* Д. Юлтый. *Суминов, аңына килеп, үҙенең ҡайҙалығын, тамағы нилектән кибеп, башы ниңә сатнап барыуын аңлай алмай, күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп, тирә-яғына ҡаранды.* Ә. Хәкимов. *Мохаянов бер ни тиклем ваҡытҡа аптырап ҡалды, күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп өндәшмәй торҙо.* Н. Мусин.

**АСАЛАНЫУ (асалан-)** (Р.: раздваиваться; И.: bifurcate; Т.: ikiye ayrılmak) *ҡ.*

Асаға айырылыу. □ Раздваиваться, разветвляться. // Раздваивание.

**АСАЛЫ** (Р.: раздвоенный; И.: forked; Т.: çatal) *с.*

Асаланып, тармаҡланып торған; саталы. □ Раздвоенный, развилистый. *Асалы юл. Өс асалы һәнәк.* ■ *Һабы ун метрлы, өс йә дүрт йәпле һәнәк эшләрлек матур асалы ҡайын табыу өсөн әллә ни ҡәҙәрлем урман гиҙеп тә буш ҡул менән ҡайталар.* Н. Мусин. *Мотой эргәләге ҡыуаҡтан бармаҡ йыуанлыҡ ике асалы сыбыҡ әҙерләй.* Д. Шәрәфетдинов. *Ике асалы нәҙек телен ауыҙын асмайынса ғына сығарып-сығарып ала икән йылан.* Ж. Кейекбаев.

**АСАЛЫҒОЙРОҠ (асалығойроғо)** *и. ҡар.* **асағойроҡ.**

**АСАМАЙ I** (Р.: стропила; И.: rafter; Т.: çatı kirişi) *и.*

Остары бер-беренһенә киртеп кейҙерелеп, ҡыуышлап ултыртылған ҡыйыҡ терәүе. □ Стропила. ■ *Ғатаулла ҡарт .. өрлөк өҫтөндә асамай ояһы соҡоп ултыра.* Й. Солтанов.

**АСАМАЙ II** (Р.: крестообразно пересекающиеся; И.: cruciform; Т.: çaprazlama kesişmiş) *с.*

**1.** Береһе икенсеһенә арҡыры. □ Крестообразно пересекающиеся. *Асамай юл. Асамай һаплы ҡылыс.*

**2.** Бер-береһенә ҡара-ҡаршы. □ Противоположные. ■ *Шунан асамай ишектән инә торған фатирҙа йәшәүсе икенсе күрше ҡатыны килеп инде.* К. Мәргән.

**3.** *диал.* Саталы, айырсалы. □ Раздвоенный, развилистый. ■ *Ҡосаҡлашып, доньялар имен булғас мотлаҡ осрашырға һүҙ ҡуйышып, бер-береһенең адрестарын күңелдәренә беркетеп, асамай юлда айырылышты ике дуҫ.* Ә. Хәкимов.

**АСАМАЙ III** (Р.: крестообразно; И.: crosswise; Т.: çaprazlama) *р.*

Бер-береһенә арҡыры. □ Крестообразно, крест-накрест. *Асамай ҡағыу. Асамай тоташтырыу.*

**АСАМАЙЛАУ I (асамайла-)** (Р.: ставить стропила; И.: put rafter; Т.: çatı kirişiyı dikmek) *к.*

Өй башына асамай ҡуйыу. □ Ставить стропила. *Асамайлап ябыу.*

**АСАМАЙЛАУ II (асамайла-)** (Р.: располагать *что-л.* крестообразно; И.: place crosswise; Т.: çaprazlama koymak) *к.*

Бер нәмәгә икенсе нәмәне арҡыры ҡуйыу. □ Располагать *что-л.* крестообразно, крест-накрест. *Асамайлап тоташтырыу.*

**АСАН** (Р.: хилый; И.: sickly; Т.: cılız) *с. диал.*

Ҡаҡса, сандыр, сибек. □ Хилый, тощий. *Асан булыу.*

**АСАННАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Әйле ырыуына ҡараған бер башҡорт аймағының исеме. □ Название одного из родовых подразделений башкир-айлинцев.

**АСАРБАҠ I** (Р.: полуголодный; И.: half-starved; Т.: yarı aç yarı tok) *с.*

**1.** Аслы-туҡлы йәшәүсе. □ Полуголодный, живущий впроголодь.

**2.** *диал.* Ҡарун, бирән. □ Жадный, обжора.

**АСАРБАҠ II (асарбағы)** (Р.: бомж; И.: person with no fixed abode; Т.: serseri) *и.*

Йортһоҙ-ерһеҙ ил ҡыҙырып йөрөгән кеше; ҡыҙырас. □ Бомж. ■ *Иртәгәһен дә, бер нисә көн үткәс тә был асарбаҡ ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай шул ерҙә һерәйә ине.* Х. Тапаҡов.

**АСА ТАРАҠАН** *и. диал. ҡар.* **айырығойроҡ.**

**АСА ТОЯҠЛЫ** *с. диал. ҡар.* **айыры тояҡлы.**

**АСБЕСТ** [рус. < гр. *asbestos* ‘һүнмәҫ’] (Р.: асбест; И.: asbestos; Т.: yanmaztaş) *и. мин.*

Утҡа һәм кислотаға сыҙамлы минерал; тау етене. □ Асбест.

**АС БЕТ** (Р.: гнида ; И.: stinker; Т.: sirke) *и. әрл.*

Аслы-туҡлы йәшәгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Гнида. ■ *«Ҡабат аш-һыу тирәһенә был ас беттәрҙе яҡын ебәрмәм», — тип ҡыҙышты ул [Мырҙаш].* З. Ураҡсин.

**АСКАРИДА** [рус. < гр. *askaris*] (Р.: аскарида; И.: ascaris; Т.: bağırsak solucanı) *и. зоол.*

Кеше һәм хайуандарҙың эсәк буйында тереклек итә торған оҙон йомро селәүсен. □ Аскарида. ■ *Ғәҙәттә, улар кешенең нәҙек эсәгендә урынлашалар, шунда үрсейҙәр, йомортҡа һалып ишәйәләр.* В. Ғүмәров.

**АСКЕРНӘ** (Р.: прожорливый; И.: insatiable; Т.: doymaz) *с.*

Күпме ашаһа ла туя белмәгән мәскәй, асҡаҡ (1), убыр. □ Ненасытный, прожорливый; жадный на еду. *Аскернә булыу.* ■ *[Иҫәкәй] уландарына иҫән-һаулыҡ теләүҙән, аскернә урыҫтарҙы кәһәрләүҙән ары китә алмай.* Н. Мусин. *[Ғәбит:] Ниндәй ваҡ йәндәр, тик үҙегеҙҙе генә ҡайғыртҡан ниндәй аскернәләр һеҙ, әфәнделәр, ә?!* Ә. Әминев.

**АСКЕТ** [рус. < гр. *asketes*] *и. ҡар.* **дәрүиш**.

**АСКЕТЛЫҠ** *и.*

**1.** *ҡар.* **дәрүишлек**.

**2.** *Ниндәйҙер* ижтимағи маҡсаттарға йәки үҙ-үҙеңде камиллаштырыуға өлгәшеү хаҡына кешеләргә донъяуи бәхет һәм рәхәтлектәрҙән ваз кисергә, енси тойғоларҙы тыйырға ҡушыусы әхлаҡи принцип. □ Аскетизм. *Аскетлыҡ идеяһы.* ■ *Был аскетлыҡ билдәләрен шәхси ихтыяждарҙы ижтимағи мәнфәғәттәр өсөн ҡорбан итеү тигән үтә*

*бер яклы тенденцияһынан тыуған, Афзалдың характерына бик үк ярашмаған кәмселек тип һанарға тура килә.* bash-portal.ru сайтынан.

**АСКЕТТАРСА** *р.кар.* **дәрүиштәрсә.**

**АСКОРБИН КИСЛОТАҺЫ** [рус. < лат. *acidum ascorbinicum* < *scorbutus* ‘зәңгe’] (Р.: аскорбиновая кислота; И.: ascorbic acid; Т.: askorbik asit) *и. мед.*

Организмда матдәләр алмашыныуын тәьмин итеүсе органик матдә; С витамины. □ Аскорбиновая кислота. ■ *1945 йылда Өфө витамин заводы ни бары 19 килограмм аскорбин кислотаһы (С витамины) эшләп сығара ине.* М. Мостафин.

**АС КҮҘ** (Р.: прожорливый; И.: avaricious person; Т.: obur) *и.*

Туйына алмаған ҡомһоҙ, ҡәнәғәтһеҙ кеше. □ Прожорливый, жадный, недовольный человек. ● *Ас күҙгә кеше ҡулындағы ҙур күренер.* Әйтем.

**АСКҮҘЛӘНЕҮ (аскүҙлән-)** (Р.: проявлять прожорливость; И.: display greed; Т.: hırs) *к.*

Туйына алмау, ҡомһоҙланыу. □ Проявлять прожорливость, жадность. ■ *Кәрим аскүҙләнеп аҙыкка ташланманы, олпат ҡыланырға тырышып, яй ғына ашай башланы.* Ә. Хәкимов.

**АСҠАҠ** (Р.: прожорливый; И.: voracious; Т.: hırslı) *с.*

**1.** Гел ашағыһы килеп торған, ашап туя алмаған. □ Прожорливый, ненасытный. *Аскак мал.* ■ *Аҙбарҙа һыйыр мөңрәүе, һарыктарҙың сөскөрөүе, хатта аскак сусҡаларҙың сыйнауы [Шамиловтың] уйын бүлдерә алманы.* Ә. Хәкимов.

**2.** *күсм.* Йоҡа итле; ҡаҡса, сандыр. □ Худощавый, тощий. *Завод менән һәр вакыт Петербургтан килгән оҙон кәүҙәле, асҡаҡ, таҫыр күҙле, ҡылыс танаулы Вилис фамилиялы бер кеше идара итте.* Ж. Кейекбаев. *[Баязиттың] муйыны оҙон, асҡак ҡына бер һонтор ине, кайһылай мыктыланып, өрлөктәй булып киткән.* Г. Яҡупова.

**АСҠАҠЛАНЫУ (асҡаҡлан-)** (Р.: становиться прожорливым; И.: become voracious; Т.: hırs olamaya başlamak) *к.*

Асҡаҡҡа (1) әйләнеү, асҡаҡ булыу. □ Становиться прожорливым, ненасытным.

**АСҠАҠЛАУ (асҡаҡла-)** (Р.: проголодаться; И.: grow hungry; Т.: acıkmak) *к.*

Туйына алмау, гел ас һымаҡ һиҙеү. □ Хотеть есть, проголодаться. ■ *Асҡаҡлаған һыйыр һемтәнләп килеп, .. баҙға төшкән дә киткән.* И. Ғиззәтуллин.

**АСҠАҠҺЫУ (асҡаҡһы-)** *к. диал. кар.* **асҡаҡлау.**

**АСҠАЛАҠ** *и. кар.* **асҡаҡ 1.**

**АСҠЫС** (Р.: ключ; И.: key; Т.: anahtar) *и.*

**1.** Йоҙаҡты бикләй һәм аса торған ҡорал. □ Ключ. ■ *Шкаф-һандык, мөгәрәп, аласык асҡыстары уның [Шәрғиәнең] кулында.* Ә. Хәкимов.

**2.** Машинаның, механизмдың гайка һ.б. бора, нығыта торған ҡорал. □ Ключ. ■ *[Зөфәр] Бер көндө шулай, тәгәрмәс алмаштырғанда, асҡыс ысҡынып китеп баш бармағын апарук һыҙырып ебәрҙе.* Д. Бүләков.

**3.** *күсм.* *Ниҙелер* сисеү, асыу, көйләү сараһы. □ Ключ. *Тел асҡысы.* ■ *Эске донъяһын аңлағанда ғына, йөрәгенә асҡыс тапҡанда ғына кеше һине аңлай.* Ш. Насыров. *[Даль:] Ғәжәп ихлас халык — ул башкорттар. Күңелендәген йәшермәйҙәр. Асҡыс таба ғына бел.* З. Ураҡсин. ● *Мәкәл — һүҙ асҡысы.* Әйтем.

**АСЛА** *р. ҡар.* **аслан.**

**АСЛАЙ** (Р.: натощак; И.: on an empty stomach; Т.: aç) *р.*

Ас көйө, ас ҡарынға. □ Натощак. *Аслай йоклап китеү. Аслай дарыу эсеү.*

**АСЛАМСЫ** (Р.: коробейник; И.: pedlar; Т.: eskici) *и. иҫк.*

Ҡыҙыл мал һәм аҫыл мал менән йөрөп һатыу иткән ваҡ сауҙагәр, ҡырҡтартмасы. □ Коробейник. *Асламсынан тауар алыу.* ■ *Аршын ғына, аршын, ай, ак ука, асламсылар һата алғанға. Ғүмерҙәрең булһа, үкенерһең, ғишык тотоп, алмай ҡалғанға.*

Халыҡ ижадынан. ● *Асламсыһыҙ баҙар булмай, уйынсыһыҙ туй булмай.* Мәҡәл.

**АСЛАН** [ғәр. اصلا *йәки* اصلاً ‘тамыр, нигеҙ’] (Р.: ни в коем случае; И.: never; Т.: asla) *р.*

Бер ҙә, һис тә. □ Ни в коем случае, ни за что, никогда (*употребляется с глаголом в отриц. ф.*). *Әсәйеңде аслан онотма.* ■ *[Ғарифулла бабай:] Васыят итеп әйтәм, мине, бынау ҡарағайҙарға ғүмер биргән ағайыңдарҙы аслан онотма.* Н. Мусин. *[Картәсәйем:] Аслан улай тимә бүтән, рәнйетмә ҡартәсәң шайы оло кешене.* Г. Яҡупова.

**АСЛЫҠ (аслығы)** (Р.: голод; И.: hunger; Т.: açlık) *и.*

**1.** Бик ныҡ ашарға теләү. □ Голод (*острое ощущение потребности в пище, сильное желание есть*). *Аслыҡтан эс ауыртыу.* ■ *Күршеһенең ныҡлап ярҙам итеүенә ҡарамаҫтан, аслыҡтан хәле бөткән Хисмәтулланың күҙ алды ҡараңғыланды, ҡолаҡ төбө шауланы.* Я. Хамматов. ● *Аш ҡәҙерен белмәһәң, аслыҡ бирер яфаңды.* Мәҡәл. *Аслыҡ бүрене урмандан сығара.* Мәҡәл.

**2.** Оҙаҡ ваҡыт ашамай йөрөү. □ Голод (*длительное недоедание*). *Аслыҡтан үлеү.* ■ *Аслыҡтан, ауырыуҙан йонсоған, алдағы көнөнә өмөтө өҙөлгән ғәскәр хәрби көс түгел ине инде.* Ә. Хәкимов.

**3.** *Нимәгәлер* ҡаршы килеүҙе күрһәтеү маҡсатында аңлы рәүештә ашауҙан баш тартыу. □ Голодовка. *Аслыҡ иғлан итеү.* ■ *Нью-Делиҙа, Һиндостан баш ҡалаһындағы төп майҙандарҙың береһендә, билдәле активист һәм коррупцияға ҡаршы көрәшсе Анна Хазаре аслыҡты уныңсы көн дауам итә.* «Хәбәрҙәр», 25 август 2011. *1 мартта Өфөлә торлаҡ төҙөлөшөндә өлөшләтә ҡатнашыусылар — алданған граждандар аслыҡ иғлан иткәйне.* Г. Балтабаева.

**4.** Аҙыҡ-түлектең юҡлығы йәки бик ныҡ аҙ булыуы; аҙыҡҡа ҡытлыҡ, йотлоҡ (*уңыш булмау, ҡоролоҡ, һуғыш һ.б. арҡаһында*). □ Голод, отсутствие или крайний недостаток продуктов питания как массовое бедствие (*вследствие неурожая, войны и т.п.*). ■ *1921 йылдағы ҡот оскос аслыҡ халыҡтың шаҡтай ҡәмеүенә килтерә.* Ғ. Рамазанов. *Аслыҡ булыуға, үлмәҫлек кенә туҡланып йәшәүгә ҡарамаҫтан, йәштәрҙең балалары таҙа булып тыуҙы.* Т. Ғиниәтуллин. *Яу, яу, ямғырым, беҙгә аслыҡ килмәһен, һыйырҙарҙа һөт булһын, астан халыҡ үлмәһен.* Халыҡ ижадынан. ● *Урман үҫтергән — аслыҡ күрмәҫ.* Мәҡәл. *Имән сәтләүеге уңған йылды аслыҡ булыр.* Һынамыш.

**АСЛЫҠ КИСЕРЕҮ (аслыҡ кисер-)** *ҡ. ҡар.* **асығыу 2.**

**АСЛЫ-ТУҠЛЫ** (Р.: впроголодь; И.: half-starving; Т.: yarı aç yarı tok) *р.*

Туя ашауһыҙ, туйыр-туймаҫ. □ Впроголодь. ■ *Аслы-туҡлы көн итеү.* ■ *Миңлеғәлигә сабый саҡтан уҡ ауыр тормошта, аслы-туҡлы йәшәргә тура килде.* Ә. Ихсан.

**АСИММЕТРИЯ** [рус. < гр. *asymmetria*] (Р.: асимметрия; И.: asymmetry; Т.: simetrisizlik) *и.*

Симметрия булмаған йәки боҙолған хәлторош. □ Асимметрия. *Рәсәйҙәге тел асимметрияһы.*

**АСМА** (Р.: створка; И.: leaf; Т.: kanat) *и.*

Тәҙрәнең асыла-ябыла торған өлөшө. □ Створка (рамы). ■ *Асмалы ла тәҙрә асмаһын асып, йәмле йәй көндәрен ҡарайым.* Халыҡ йырынан.

**АСМАЛЫ** (Р.: створчатый; И.: folding; Т.: kanatlı) *с.*

Асылып ябылмалы. □ Створчатый. *Асмалы ишек.* ■ *Ҡапыл ауыҙынан ысҡынған һүҙҙәрҙән һуң, Камалетдинов бөтөнләй ҡаушаны, тороп, асмалы тәҙрә ҡаршыһына баҫты.* Т. Ғарипова.

**АСМАН** [фарс. اسمان] (Р.: небо; И.: welkin; Т.: gökyüzü) *и. кит.*

Күк йөҙө; күк. □ Небо, небеса, небосвод. *Асманға ашыу.* ■ *Асмандан илаһи нур бөркөлә.* Г. Яҡупова. *Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән менән асманда торған айҙың нуры китмәҫ.* М. Аҡмулла.

**АСМУХА** [рус. *осьмуха*] *и. ҡар.* **әсмүхә.**

**АСМӘЙЕЛ** (Р.: прожорливый; И.: voracious; Т.: obur) *с.*

Ашап туя белмәҫ; мәскәй, аскернә. □ Прожорливый, ненасытный *(о человеке)*.

**АСНӘХӘТ** *с. диал.* **аскернә**.

**АСПЕКТ** [рус. < лат. *aspectus*] (Р.: аспект; И.: aspect; Т.: yön) *и. кит.*

*Ниндәйҙер* күренеш, хәл һ.б. нәмәләрҙе тикшереүҙә булған ҡараш. □ Аспект. *Тарихи һәм мәҙәни аспект.* ■ *Телде өйрәнеү ғилеменең үҙенең генә лә әллә нисә аспекты һәм төрҙәре бар: грамматикаһы, синтаксисы, стилистикаһы, диалектологияһы, һүҙлектәре.* Ғ. Хөсәйенов.

**АСПИРАНТ** [рус. < лат. *aspirants* ‘нимәгәлер ынтылыусы’] (Р.: аспирант; И.: postgraduate; Т.: doktora öğrencisi) *и.*

Ғилми эшкә йәки юғары уҡыу йортонда уҡытыуға әҙерләнгән кеше. □ Аспирант. *Аспирант ҡыҙ. Институт аспиранты. Аспирант стипендияһы.*

**АСПИРАНТУРА** [рус. < лат. *aspiro* ‘ашҡынам, тырышам’] (Р.: аспирантура; И.: (post)graduate course; Т.: doktora öğrenimi) *и.*

Ғилми учреждение һәм юғары уҡыу йорттарындағы кадрҙар әҙерләү системаһы. □ Аспирантура. ■ *Бер көн институт директоры [Искәндәрҙе] саҡырып алып: «Мәскәүгә аспирантураға бер кеше ебәрергә мөмкинлек бар», — тине.* Ә. Хәкимов. *Ул сакта Арыҫлан, институтты бөтөрөп, Мәскәүгә аспирантураға китергә тейеш ине.* Д. Бүләков.

**АССАМБЛЕЯ** [рус. < фр. *assemblee* ‘йыйылыш’] (Р.: ассамблея; И.: assembly; Т.: toplantı) *и.*

**1.** *Ниндәйҙер* дипломатик, сәйәси, фәнни ойошманың дөйөм йыйылышы. □ Ассамблея. *Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы. Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы.* ■ *Ассамблея республикала йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәренең 30-ға яҡын милли-мәҙәни ойошмаһын берләштерә. Киң йәмәғәтселек ҡатнашлығында улар төрлө халыҡтарҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыу, республикала татыулыкты һәм берҙәмлекте тәьмин итеү буйынса власть органдары менән берлектә ҙур эш алып бара.* «Салауат», № 81, 2011. *Мәскәүҙә «Халыҡтар Ассамблеяһы»ның конгресында булып ҡайттым.* М. Кәрим.

**2.** *Ниндәй ҙә булһа* халыҡ-ара ойошманың етәкселек итеүсе органы. □ Ассамблея. *Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы.*

**3.** Ҡайһы бер илдәрҙең парламенты йә уның палатаһы исеме. □ Ассамблея.

**АССЕНИЗАЦИЯ** [рус. < фр. *assainissement* ‘һауыҡтырыу’] (Р.: ассенизация; И.: sewage disposal; Т.: lağım boşaltma) *и.*

Ауыл, ҡала ерендәге бысраҡты, һарҡынды һыуҙы таҙартыу һәм зарарһыҙлау өсөн хеҙмәт иткән санитар саралар һәм ҡоролмалар системаһы. □ Ассенизация.

**АССЕНИЗАТОР** [рус.] (Р.: ассенизатор; И.: sapper; Т.: lağımcı) *и.*

Бысранған һыу каналдарын асып таҙартыусы эшсе. □ Ассенизатор.

**АССЕНИЗАЦИЯЛАУ (ассенизацияла-)** (Р.: ассенизировать; И.: sewage disposal; Т.: lağım boşaltmak) *ҡ.*

Бысранған һыу каналдарын асып таҙартыу. □ Ассенизировать.

**АССИГНАЦИЯ** [рус. < лат. *assignare* ‘тәғәйенләү’] (Р.: ассигнация; И.: banknote; Т.: kağıt para) *и.*

Рәсәйҙә 1769–1843 йылдарҙа ғәмәлдә булған ҡағыҙ аҡса. □ Ассигнация.

**АССИМИЛЯТИВ** [рус.] (Р.: ассимилятивный; И.: assimilative; Т.: benzeten) *с.*

Ассимиляцияға бирелгән. □ Ассимилятивный. *Ассимилятив процесс.*

**АССИМИЛЯЦИЯ** [рус. < лат. *assimilatio* ‘оҡшашлыҡ’] (Р.: ассимиляция; И.: assimilation; Т.: asimilasyon) *и.*

**1.** Тәьҫир, йоғонто аша бер нәмәнең икенсе нәмәне үҙенә оҡшатыуы, йотоуы; ярашыу. □ Ассимиляция. *Өндәр ассимиляцияһы. Ассимиляцияға бирелеү. Телдәр ассимиляцияһы.* ■ *Фәнни-техник ҡаҙаныш-*

*тар йәштәребеҙҙе халыҡ традицияларынан биҙҙерә, әсә теленән һыуындыра, быуаттар һуҙымында формалашкан традицияларҙан тайпылдыра һәм ахыр сиктә бөгөнгө цивилизация ялаған үрҙәр ассимиляцияны, йәғни милли һыҙаттарҙың юғалыу процесын тиҙләтә.* «Ағиҙел», № 2, 2010.

**2.** *биол.* Тереклек эйәһе йәки үҫемлек организмының үҙенә ингән матдәләрҙе үҙләштереү процесы. □ Ассимиляция.

**АССИМИЛЯЦИЯЛАНЫУ (ассимиляциялан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ассимиляциялау**. *страд. от* **ассимиляциялау**.

**АССИМИЛЯЦИЯЛАУ (ассимиляциялa-)** (Р.: ассимилировать; И.: assimilate; Т.: benzetmek) *ҡ.*

Ассимиляцияға килтереү. □ Ассимилировать. // Ассимиляция.

**АССИМИЛЯЦИЯЛАШЫУ (ассимиляциялаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **ассимиляциялау**. *взаимн. от* **ассимиляциялау**.

**АССИСТЕНТ** [рус. < лат. *assistens (assistentis)* ‘ярҙам итеүсе’] (Р.: ассистент; И.: assistant; Т.: asistan) *и.*

**1.** Операция эшләгән йәки ғилми эш башҡарған врач профессорҙың ярҙамсыһы. □ Ассистент. ■ *[Вәлиәхмәтов] урология буйынса ике йыллыҡ ординатураны тамамлағас, хирургия кафедраһына ассистент итеп ҡалдырылған.* М. Халфин.

**2.** Юғары уҡыу йорттарындағы иң кесе уҡытыусы вазифаһы һәм шул вазифаны башҡарған кеше. □ Ассистент. *Ассистент булып эшләү.*

**АССОРТИ** [рус. < фр. *assorti* ‘яҡшы һайланылған’] (Р.: ассорти; И.: assorti; Т.: çeşitli) *и.*

Махсус тупланған әйбер (кәнфит, салат һ.б.). □ Ассорти.

**АССОРТИМЕНТ** [рус. < фр. *assortiment*] (Р.: ассортимент; И.: assortment; Т.: çeşit) *и.*

Бер ойошмала етештерелгән йәки һатылған тауарҙарҙың төрҙәр йыйылмаһы. □ Ассортимент. ■ *Шулай итмәй тороп .. тауар ассортиментын арттырыу мөмкин түгел.* Н. Мусин. *[Ырыҫҡолов — Заһитовка:] Мин әйләнеп килеүгә, һигеҙ айлыҡ һәм өсөнсө кварталдың ике айы планы ассортименттар буйынса нисек үтәлә, шуны ҡағыҙға төшөрөп ҡуй.* Н. Мусин.

**АССОЦИАТИВ** [рус.] (Р.: ассоциативный; И.: association; Т.: birlik) *с.*

Ассоциацияға (3) ҡоролған. □ Ассоциативный. ■ *Р. Ниғмәтиҙең «Ҡыҙыма хаттар» шиғыры ла шундай ҡатмарлы, ассоциатив образдарға ҡоролған.* Ғ. Хөсәйенов.

**АССОЦИАЦИЯ** [рус. < лат. *associatio* ‘ҡушылыу’] (Р.: ассоциация; И.: association; Т.: birlik) *и.*

**1.** Бер төрлө эш менән шөғөлләнгән кеше йәки ойошмаларҙың берләшмәһе. □ Ассоциация. *Ғилми хеҙмәткәрҙәр ассоциацияһы. Хужалыҡтар ассоциацияһы.*

**2.** *Ниҙең дә булһа* ҡушылмаһы, төркөмө. □ Ассоциация. *Молекулалар ассоциацияһы.*

**3.** Билдәле шарттарҙа психик күренештәрҙең, хис-тойғоларҙың үҙ-ара бәйләнешле булыуы. □ Ассоциация. *Йәнәшәлек ассоциацияһы. Оҡшашлыҡ ассоциацияһы.* ■ *Тәбиғәт һәм йәмғиәт. Кеше тормошондағы ошо ике бөйөк күренеш, улар араһындағы образлы ассоциация боронғо замандарҙан бирле поэзияны шиғриәт менән һуғарып килә.* К. Әхмәтйәнов.

**АССЫ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: on of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡатай ырыуының аймаҡ исеме. □ Родовое подразделение башкир-катайцев.

**АСТЕРОИД** [рус. < гр. *aster* ‘йондоҙ’ + *eidos* ‘форма’] (Р.: астероид; И.: asteroid; Т.: asteroid) *и. астр.*

Ҡояш тирәһендә, күберәк Марс менән Юпитер орбиталары араһында әйләнеп йөрөгән ваҡ планеталар. □ Астероид. *Астероид орбитаһы.*

**АСТМА** [рус. < гр. *asthma* ‘быуылыу’] (Р.: астма; И.: asthma; Т.: astma) *и. мед.*

Йөрәк йәки бронхылар сиренән килгән быума өйәнәге; быума йүтәл. □ Астма. *Бронхиаль астма. Йөрәк астмаһы.*

**АСТМАТИК** [рус.] (Р.: асматик; И.: asthmatic; Т.: astmalı) *и. мед. һөйл.*

Астма менән ауырыған кеше. □ Астматик. *Астматиктарҙы тикшереү.*

**АСТРА** [рус. < гр. *astron* 'йондоҙ'] (Р.: астра; И.: aster; Т.: yıldız çiçeği) *и. бот.*

Ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ингән еҫһеҙ эре сәскәле баҡса гөлө; йондоҙ сәскә. □ Астра (лат. *Aster*). *Альп астраһы. Етен астраһы. Йөнтәҫ астра.* ■ *Баксаның бер мөйөшөндә астра, роза, тюльпан, пион һәм гладиолус сәскәләре үҫә ине.* Ғ. Аллаяров.

**АСТРО** [рус. < гр. *astron* 'йондоҙ'] (Р.: астро; И.: astro; Т.: uzay)

**1.** 'Астрономияға бәйле' мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением 'относящийся к астрономии'. *Астрогеолог. Астроинженер. Астрофизика. Астроботаника.*

**2.** 'Йондоҙ', 'йондоҙло', 'күк есемдәренә бәйле' мәғәнәһендәге ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением 'звезда', 'звёздный', 'относящийся к небесным телам'. *Астродатчик. Астрокоррекция. Астролётчик.*

**АСТРОБИОЛОГ** [рус. < гр. *астро* + *биология*] (Р.: астробиолог; И.: astrobiologist; Т.: astrobiyoloji) *и.*

Астробиология буйынса белгес. □ Астробиолог.

**АСТРОБИОЛОГИЯ** [рус. < гр. *астро* + *биология*] (Р.: астробиология; И.: astrobiology; Т.: astrobiyoloji) *и.*

Йыһанда тереклек булыу мөмкинлеген өйрәнә торған фән. □ Астробиология.

**АСТРОБОТАНИК** [рус. < гр. *астро* + *ботаника*] (Р.: астроботаник; И.: astrobotany; Т.: astrobotany) *и.*

Астроботаника буйынса белгес. □ Астроботаник.

**АСТРОБОТАНИКА** [рус. < гр. *астро* + *ботаника*] (Р.: астроботаника; И.: astrobotany; Т.: astrobotany) *и.*

Астробиология менән ботаниканың Ҡояш системаһындағы планеталарҙа үҫемлектәр булыу мөмкинлеген өйрәнә торған фәнни тармағы. □ Астроботаника.

**АСТРОГЕОЛОГ** [рус. < гр. *астро* + *геология*] (Р.: астрогеолог; И.: astrogeology; Т.: Astrojeoloji) *и.*

Астрогеология буйынса белгес. □ Астрогеолог.

**АСТРОГЕОЛОГИЯ** [рус. < гр. *астро* + *геология*] (Р.: астрогеология; И.: astrogeology; Т.: astrojeoloji) *и.*

Күк есемдәренең геологияһын өйрәнә торған фән. □ Астрогеология.

**АСТРОЛОГ** [рус.] (Р.: астролог; И.: astrolog; Т.: astrolog) *и.*

Астрология менән шөғөлләнгән кеше. □ Астролог. *Астролог кәңәше.*

**АСТРОЛОГИК** (Р.: астрологический; И.: astrologic(al); Т.: astrolojik) *с.*

Астрологияға мөнәсәбәтле. □ Астрологический. *Астрологик күҙәтеүҙәр.*

**АСТРОЛОГИЯ** [рус. < гр. *astrologia*] (Р.: астрология; И.: astrology; Т.: astroloji) *и.*

Борон заман барлыҡҡа килгән, күк йөҙөндәге яҡтыртҡыс есемдәрҙең ерҙәге хәлваҡиғаларға һәм кеше тормошона йоғонто яһауы тураһындағы тәғлимәт; күк есемдәренең урынлашыуына ҡарап киләсәкте алдан билдәләү менән шөғөлләнә. □ Астрология.

**АСТРОНАВТ** [рус. < гр. *astron* 'йондоҙ' + *nautikē* 'диңгеҙселек'] (Р.: астронавт; И.: astronaut; Т.: uzaycı) *и.*

**1.** Астронавтика буйынса белгес. □ Астронавт. *Рәсәй астронавтары.*

**2.** *ҡар.* **космонавт.**

**АСТРОНАВТИКА** [рус. < гр. *astron* 'йондоҙ' + *nautikē* 'диңгеҙселек'] (Р.: астронавтика; И.: astronautics; Т.: uzaycılık) *и.*

Осҡос аппараттарҙың ғаләмгә осошон өйрәнгән фән; космонавтика. □ Астронавтика. *Астронавтика фәне менән ҡыҙыҡһыныу.*

**АСТРОНОМ** [рус. < гр. *astron* 'йондоҙ' + *nomos* 'закон'] (Р.: астроном; И.: astronomer; Т.: astronom) *и.*

Астрономия буйынса белгес. □ Астроном. ■ *[Рая:] Мин, ҙурайғас, йә шофёр, йә*

*астроном булам, тип хыяллана инем.* Р. Солтангәрәев.

**АСТРОНОМИК** [рус.] (Р.: астрономический; И.: astronomy; Т.: astronomi) *с.*

Астрономияға мөнәсәбәтле. □ Астрономический.

**АСТРОНОМИЯ** [рус. < гр. *astron* ‘йондоҙ’ + *nomos* ‘закон’] (Р.: астрономия; И.: astronomy; Т.: astronomi) *и.*

Күк есемдәренең килеп сығышын һәм уларҙың барлыҡҡа килеүен, төҙөлөшөн, үҙгәрешен, хәрәкәт ҡанундарын, химик составын өйрәнә торған фән. □ Астрономия. *Астрономия дәреслеге. Астрономия менән шөғөлләнеү.*

**АСТРОФИЗИКА** [рус. < гр. *astron* ‘йондоҙ’ + *физика*] (Р.: астрофизика; И.: astrophysic; Т.: astrofizik) *и.*

Физиканың күк есемдәренең физик хәлен һәм составын өйрәнә торған бүлеге. □ Астрофизика.

**АСТРОФИЗИК I** [рус. < гр. *astron* ‘йондоҙ’ + *физика*] (Р.: астрофизик; И.: astrophysic; Т.: astrofizik) *и.*

Астрофизика буйынса белгес. □ Астрофизик.

**АСТРОФИЗИК II** [рус. < гр. *astron* ‘йондоҙ’ + *физика*] (Р.: астрофизический; И.: astrophysical; Т.: astrofiziksel) *с.*

Астрофизикаға мөнәсәбәтле. □ Астрофизический.

**АСФАЛЬТ** [рус. < гр. *asphaltos*] (Р.: асфальт ; И.: asphalt; Т.: asfalt) *и.*

**1.** Юлдарға, тротуарға түшәү өсөн ҡулланылған һорғолт ҡара төҫтәге, ыҫмала һымаҡ, тәбиғи һәм яһалма төҙөлөш материалы. □ Асфальт. *Асфальт — минерал ыҫмала. Ул шыйыҡ нефть ҡороуы һөҙөмтәһендә хасил була.* К. Тимерғазин. *Гудрондан асфальт эшләнә, ә асфальт иһә юл һәм тротуар төҙөү эшендә киң ҡулланыла.* Д. Бураҡаев.

**2.** Шул материалдан түшәлгән юл. □ Асфальт. *Асфальттан атлау.* ■ *Урамдары көҙгөләй асфальт.* Р. Янбулатова.

**АСФАЛЬТЛАУ (асфальтла-)** (Р.: асфальтировать; И.: asphalt; Т.: asfaltlamak) *ҡ.*

Асфальт түшәү. □ Асфальтировать. *Юлды асфальтлау.*

**АСФАЛЬТ ЙӘЙГЕС** (Р.: асфальтоукладчик; И.: asphalt spreading machine; Т.: asfaltlayıcı makina) *и. тех.*

Асфальт йәйеү ҡоролмаһы. □ Асфальтоукладчик.

**АСФАЛЬТ ТҮШӘГЕС** *и. ҡар.* **асфальт йәйгес.**

**АСФИКСИЯ** [рус. < лат. *asphyxia*] (Р.: асфиксия; И.: asphyxia; Т.: boğulma) *и.*

Ҡанда һәм тыҡымаларҙа газдың күп булыуы һәм кислородтың әҙәйеүе сәбәпле кешенең быуылыуы, тыны ҡыҫылыуы, тонсоғоуы. □ Асфиксия. *Механик асфиксия. Ҡорһаҡтағы баланың асфиксияһы. Травматик асфиксия.*

**АСТЫРЫУ (астыр-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **асыу I.** *понуд. от* **асыу**. ■ *Ата-әсәләр мәктәп астырыуҙы күптән һорайҙар ине.* Р. Солтангәрәев.

**АСЫ I** *с. ҡар.* **әсе.**

**АСЫ II** *и. диал. ҡар.* **ағыу.**

**АСЫҒАЙЫУ (асығай-, асығая)** *ҡ. ҡар.* **асыҡланыу.**

**АСЫҒАУЫҘ** (Р.: открытый беляш; И.: kind of round fried meat pie; Т.: etlı ekmek çeşiti) *и. кул. һөйл.*

**1.** Өҫтөн асыҡ итеп бешергән ваҡ бәлеш. □ Открытый беляш. ■ *[Сәрбиямал] иттән бик тәмле итеп асығауыҙ бешерҙе.* З. Биишева.

**2.** *диал. ҡар.* **асыҡ ауыҙ.**

**АСЫҒЫУ (асыҡ-)** (Р.: проголодаться; И.: grow hungry; Т.: acıkmak) *ҡ.*

**1.** Ас хәлгә килеү, ас булыу. □ Проголодаться. *Бала асыҡҡан.* ■ *[Амуров] көн кискә ауышкас, үҙендә бик ныҡ арыу һәм асығыу һиҙеп, «Восток» ресторанына инде.* Н. Мусин. *Эш әҙләү тағы ла нығыраҡ арыу, асығыу менән генә тамамланып тора.* З. Биишева. ● *Асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман.* Мәҡәл.

**2.** Аслыҡ кисереү, ас хәлдә йәшәү. □ Голодать. ■ *Көҙгө байлыкта бер аҙ күрәйеп калған халык кабат асыға башланы.* Ф. Иҫәнғолов. *Тау-таш, үткеһеҙ ҡуйы урман эсенән барған кешеләр, асығыуҙан да бигерәк, өҙлөкһөҙ һөжүм иткән аҡтар менән һуғышыуҙан йонсоно.* Я. Хамматов.

**АСЫҠ I** (Р.: открытый; И.: open; Т.: açık) *с.*

**1.** Асып ҡуйылған, асыулы; *киреһе — ябыҡ.* □ Открытый, раскрытый. ■ *Урал буйҙары хәҙер ишектәре шар асык әрпеш катын өйөнә окшай башланы түгелме? Тәртип юк, кем теләй шул килә, хужа булып үтәнән-үтә йөрөй.* Р. Байымов. *Асык тәҙрәләрҙән — о, ни ғәжәп! — «Сыңрау торна» көйө тарала.* Р. Шәкүр. *[Фазыл:] Ҡана, рәхим итеп документтарыңды күрһәт әле, — тине лә асык тәҙрәне барып япты.* Ә. Хәкимов.

**2.** Бикһеҙ, йоҙаҡһыҙ. □ Открытый, отворённый. *Асык келәт. Асык магазин.*

**3.** Бер ни менән дә ышыҡланмаған, ағас, ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланмаған. □ Открытый, оголённый, обнажённый. *Асык ялан. Асык тән.* ■ *Алдан сыккан хәрбиҙәр асык акланда бер аҙ туплана бирә лә арттағыларын көтөп тә тормайынса, ары китә.* Р. Байымов.

**4.** Болот менән ҡапланмаған; аяҙ. □ Ясный, безоблачный. *Асык күк йөҙө.*

**5.** Теләүселәргә ҡатнашырға мөмкин булған. □ Открытый, гласный, публичный. *Асык дәрес. Асык лекция.*

**6.** Яҡшы ишетелгән, күренгән, аныҡ булған. □ Ясный, понятный, разборчивый, отчётливый, внятный. *Асык тауыш. Асык итеп яҙыу.* ■ *Зәки Вәлиди эшмәкәрлегендә лә был асык күренә. Башкорт дәүләте төҙөгәндә лә, башкорттарҙың этник бөтөнлөгөн юғалтмау максатында, телде һәм динде һаклауҙы төп факторҙар тип билдәләй.* Г. Ситдиҡова. *Мәүсилә өләсәһенең бер йырын асык хәтерләй әле.* Д. Бүләков.

**7.** Төҫө йәһәтенән баҙыҡ, яҡты. □ Яркий. *Асык зәңгәр. Асык кыҙыл.*

**8.** *күсм.* Күренеп, һиҙелеп торорлоҡ; йәшерен түгел. □ Явный, нескрытый. *Асык текст менән әйтеү.* ■ *Аҫабалык өсөн булған был ыҙғыш тора-бара асык дошманлыкка илтеп еткергән.* Б. Бикбай.

**9.** *күсм.* Кешегә яҡшы мөғәмәләле; алсаҡ, көләс. □ Приветливый, радушный. *Асык кыҙ. Асык сырай.* ■ *[Ғәлимовтың] куйы кара каштарымы, асык сырайымы үҙен ысын йәшенән күпкә йәш һәм сибәр итеп күрһәтә.* Р. Камал.

♦ **Асыҡ ауыҙ** мәшәү, ебегән. □ Разиня, ротозей, зевака. ■ *[Сураман:] Егет өсөн егерме лә еткән, алтмыш та аҙ асык ауыҙға.* Б. Бикбай. *Прокофий карт уны яңынан кыҙға әүерелдерер тип уйлаймы икән? Асык ауыҙ.* З. Ураҡсин. **Асык күңелле** алсаҡ мөнәсәбәтле, илгәҙәк. □ Приветливый, радушный.

**АСЫҠ II (асығы)** (Р.: поляна; И.: glade; Т.: alan) *и. диал.*

Аҡлан. □ Поляна. ■ *Бер асыкта донъя йөҙөн каплап мал ята, ти.* Әкиәттән.

**АСЫҠ ДӘРЕС** (Р.: открытый урок; И.: model lesson; Т.: gösterme dersi) *и.*

Тәжрибә уртаҡлашыр өсөн уҡытыусылар алдында үткәрелгән дәрес. □ Открытый урок. ■ *[Мәстүрә:] Бөгөн бер нисә ауылдан йыйылған укытыусылар өсөн минең класымда асык дәрес булды.* Ш. Янбаев.

**АСЫҠ ИЖЕК** (Р.: открытый слог; И.: open syllable; Т.: açık hece) *и. лингв.*

Һуҙынҡы өнгә тамамланған ижек (мәҫәлән, *ба-ла, ка-ла, бө-рө* һ.б.) □ Открытый слог.

**АСЫҠ ХАТ** (Р.: открытое письмо; И.: open letter; Т.: açık mektup) *и.*

*Кемгәлер* тәғәйенләнеп гәзит йәки журналда баҫылған хат. □ Открытое письмо. *Асык хат яҙыу.*

**АСЫҠ-ЯРЫҠ** (Р.: открытая душа; И.: in harmony; Т.: iliksiz) *с.*

Алсаҡ, көләс, эсендәге тышында. □ Открытая душа, душа нараспашку. ■ *Был асыҡ-ярыҡ алабарман егет [Батыргәрәй] шул арала йомошон да әйтеп ташланы.* Р. Солтангәрәев.

**АСЫҠЛАМА** (Р.: объяснение; И.: explanation; Т.: açıklama) *и.*

Берәй *нәмәгә* ҡарата бирелгән йәки яҙылған аңлатма. □ Объяснение, разъяснение. *Асыҡлама индереү.*

**АСЫҠЛАНЫУ (асыҡлан-)** *ҡ.* **1.** *төш. ҡар.* **асыҡлау**. *страд. от* **асыҡлау**.

**АСЫҠЛАТЫУ (асыҡлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **асыҡлау**. *понуд. от* **асыҡлау**.

**АСЫҠЛАУ (асыҡла-)** (Р.: выяснить; И.: clear; Т.: anlaşmak ) *ҡ.*

Берәй эш-хәлдең асылын билдәләү. □ Выяснить, уточнить, уяснить. ■ *Күҙәтергә кәрәк уларҙы [саҡырылмаған ҡунаҡтарҙы] тағы ла, маҡсаттарын асыҡларға.* Р. Байымов. *Уның тел төбөндә ни барлығын асыҡлағансы Шәрғиә сиселмәне, көттө.* Ә. Хәкимов.

**АСЫҠЛЫҠ I (асыҡлығы)** (Р.: открытое место; И.: open space; Т.: açık alan) *и.*

**1.** Ҡапланмай ҡалған асыҡ ер. □ Открытое место. ■ *[Крәҫтиәндәр] яҙғы ҡояш яҡтыһы менән яҡтырған тау битендәге асыҡлыҡта туҡталалар.* Я. Хамматов.

**2.** Ағас менән ҡапланмаған асыҡ урын; аҡлан. □ Поляна. ■ *Тау ҡырлатып ятҡан берләм һуҡмаҡ менән бер-ике саҡрым үткәс, алда асыҡлыҡ күренде.* Ә. Вахитов.

**АСЫҠЛЫҠ II (асыҡлығы)** (Р.: ясность; И.: clarity; Т.: açıklık) *и.*

*Ниҙеңдер* сәбәбенә, мәғәнәһенә, торошона ҡарата булған аңлайышлылыҡ. □ Ясность, чёткость, определённость. *Мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү.* ■ *[Сәлих] утлыҡса кәртәһенә ултырҙы ла, ерән ҡашҡаның ялын тарай-тарай, моронлап килгән аяуһыҙ ниәтенә асыҡлыҡ индерергә, үҙенең ҡыласағына аңлатмамы, аҡланыумы табырға тырышты.* Ә. Хәкимов. *Үмәрҙең тәбиғәте шулай: ул ғазаплы икеләнеүҙә оҙаҡ ҡала алмай, уның натураһы асыҡлыҡ талап итә.* М. Минһажетдинов. *Был егеттәр күпмеләр мәғлүмәт бирҙе биреүен, әммә асыҡлыҡ индерә алманы.* Б. Ноғоманов. *Әгәр ҙә мәгәр кешенең сихырсы булыуы үлгәндән һуң ғына асыҡланһа, убыр йәне кешене ыҙалата башлаһа, уның ҡәберен асып, күкрәгенә йыла ҡаҙыҡ ҡағалар.* Ф. Хисамитдинова.

**АСЫҠТАН-АСЫҠ** (Р.: ясно; И.: clearly; Т.: açık ) *р.*

**1.** Асыҡ, аныҡ. □ Ясно, чётко, отчётливо. *Асыҡтан-асыҡ күренеп тороу.*

**2.** Йәшереп тормай, йәшерен-бошоронһоҙ. □ Откровенно, открыто. *Асыҡтан-асыҡ эшләү. Асыҡтан-асыҡ йөрөү.* ■ *[Алтынбай] был ярлыҡауҙың ни хаҡҡа төшәсәген асыҡтан-асыҡ һөйләп бирә алмай, әлбиттә.* З. Ураҡсин. *Асыҡтан-асыҡ йыйылырға рөхсәт итмәйҙәр.* Р. Камал.

**АСЫҠ-ТИШЕК** (Р.: дырявый; И.: hole-ridden; Т.: delik) *с.*

Тишелеп, туҙып бөткән; бөтөн түгел; тишек-тошоҡ. □ Дырявый, весь в дырках. *Асыҡ-тишек һарай.*

**АСЫҠТЫРЫУ (асыҡтыр-)** (Р.: морить голодом; И.: starve; Т.: açlıkla yok etmek) *ҡ.*

**1.** Ас тотоу, аслыҡ кисертеү. □ Морить голодом, вынуждать голодать. *Кешене асыҡтырыу. Ашатмай асыҡтырыу.*

**2.** *әйһ. ф. ҡар.* **асығыу.**

**АСЫЛ I** [ғәр. اصيل ‘ысын, тәбиғи’] (Р.: суть; И.: essence; Т.: esas) *и.*

**1.** *Ниҙеңдер* төп мәғәнәһе, төп нигеҙ. □ Суть, сущность. ■ *Повесть-памфлеттың художество асылы тап ситуацияның көтөлмәгәнсә хәл ителеүенә ҡоролған да инде.* Ж. Кейекбаев. *Марат хәрби хеҙмәттән, асылда иһә госпиталдән ҡайтҡас, бауырмал әсәһе ҡош булып талпынды, йомғаҡтай тәгәрләне.* Ә. Хәкимов. *Мәҙинәнең аңына әле ишеткән хәбәренең асылы барып етмәй.* Т. Ғарипова.

**АСЫЛ II** (Р.: чистый; И.: pure; Т.: temiz) *с.*

Сифаты буйынса таҙа; саф, ысын. □ Чистый, настоящий. ■ *Ҡаш ҡараһы асыл ҡара, һиңә бирһәм, әҙ ҡала.* Халыҡ йырынан.

**АСЫЛҒА ҠАЙТЫУ** (Р.: стать самим собой; И.: become by oneself; Т.: esasa gelmek) *ҡ.*

**1.** Ысын, тәбиғи хәлгә ҡайтыу. □ Стать самим собой. ■ *[Насир хәзрәт] үҙенең һөйгән мәсетенә мулла булды. Үҙ һүҙе менән әйткәндә, асылына ҡайтты.* И. Насыри.

**2.** Вафат булыу, үлеү. □ Умереть, погибнуть.

**АСЫЛДА** (Р.: в сущности; И.: actually; Т.: aslında) *р.*

Ысынында, ғәмәлдә. □ В сущности, по сути, по существу. *Асылда эш шулай тора.* ■ *Асылда улар [эпизодтар] Ташбатҡан ауылындағы социаль-синфи ҡаршылыҡтарҙың киҫкенләшә барыуын күрһәтеүсе факттар.* Ж. Кейекбаев. *Заман үҙгәргән, ҡоролош үҙгәргән, кеше асылда үҙенең тәбиғәте менән шул көйө ҡалған.* Р. Солтангәрәев.

**АСЫЛМА** *и. диал. ҡар.* **асма**.

**АСЫЛТЫУ (асылты-)** (Р.: привыкнуть к темноте *(о глазах)*; И.: get used to the darkness; Т.: karanlığa alışmak) *ҡ. диал.*

Күҙ алды асылыу, ҡараңғыға эйәләшеү. □ Привыкнуть к темноте *(о глазах)*. ■ *Һәҙиәнең күҙҙәре әкренләп ҡараңғылыҡты һөҙөп асылтты.* Г. Яҡупова.

**АСЫЛЫ I** (Р.: солончак; И.: alkali soil; Т.: solonçak) *и. диал.*

Татырлы ер. □ Солончак. *Малдар асылыла йөрөй.*

**АСЫЛЫ II** *инш. диал. ҡар.* **ахыры.**

**АСЫЛЫҠ I (асылығы)** *и. диал. ҡар.* **татырлауыҡ.**

**АСЫЛЫҠ II (асылығы)** *и. диал. ҡар.* **әсетке.**

**АСЫЛЫУ (асыл-)** (Р.: открываться; И.: open; Т.: açılma) *ҡ.*

**1.** *төш. ҡар.* **асыу II**. *страд. от* **асыу II**.

**2.** Ябыҡ, бикле хәлдән асыҡ хәлгә килеү. □ Открываться, распахиваться, растворяться. *Ишек асылды.* ■ *Вагондың ишеге асылыу менән Сафия проводницаны ситкә этте лә вагон эсенә йомолдо.* Т. Ғиниәтуллин. *Әйтерһең, уның [Раяның] инеүен генә көтөп ултырғандар, ишек асылыу менән бөтәһе лә был яҡҡа борола.* Р. Солтангәрәев.

**3.** Йәйеп тағатылыу, асыҡ булыу, турайыу. □ Открываться, раскрываться, разворачиваться. *Ҡулсатыр асылды.*

**4.** Ҡаплап, кәртәләп торған нәмәнән әрселеү, таҙарыныу. □ Открываться, показаться, предстать взору. *Ҡаршыла ғәжәп күренеш асылды.* ■ *Ике әҙлексе егет абынаһөрлөгә йыйын ҡаршыһына йүгереп килде лә, бер-береһен бүлдереп, тарлауыҡтың бөтөүен, алда киң дала асылыуын һөйләргә кереште.* Ә. Хәкимов.

**5.** Баҙыҡ, яҡты хәлгә күсеү *(төҫкә ҡарата).* □ Становиться ясным, ярким. *Көн асылды.* ■ *Йыуған керҙәрем асылыр микән, был ҡайғыларым баҫылыр микән.* Халыҡ йырынан.

**6.** Ишетелеш яғынан яңғырауыҡлы, саф, таҙаға әйләнеү. □ Открываться; звучать ясно, чётко *(о голосе, звуках)*.

**7.** Эшләй башлау. □ Открываться, начинать работать. *Яңы ҡунаҡхана асылды. Мәктәп асылды. Театр сезоны асылды.* ■ *Түҙемһеҙлек менән конференция асылыуын көтә башланылар.* И. Насыри.

**8.** *күсм.* Күренеү, билдәле булыу. □ Открываться, раскрываться, обнаруживаться. *Алдыҡ асылды. Сер асылды.* ■ *Ят яҡтар, күҙ өйрәнмәгән юлдар. Аҙым һайын тиерлек яңы донъя асыла.* Р. Низамов.

**9.** *күсм.* Ихласланыу *(һөйләшкәндә).* □ Становиться искренним, относиться с душой *к кому-л. Асылып китеү. Асылып һөйләшеү.*

♦ **Тел асылыу** 1) һөйләшә башлау. □ Начинать говорить, заговорить *(о ребёнке).* ■ *[Алиса:] Телем шулай асылғас, нисек онотаһың инде.* Б. Ноғоманов. 2) ихласлап, күңелеңдәген йәшермәй һөйләй башлау. □ Начинать откровенничать, разговориться. **Асылмаҫ ҡара томан** бик тәрән, ауыр ҡайғы. □ Тяжёлое горе, горе горькое.

**АСЫЛЫШЛЫ БУЛЫУ (асылышлы бул-)** (Р.: разругаться; И.: quarrel with smb.; Т.: kavga edip bozuşmak) *ҡ.*

*Кем йәки нимәлер өсөн* үҙ-ара һүҙгә килеү, яманлашыу. □ Разругаться, испортить отношение, быть в ссоре *с кем-н.* ■ *[Сәлим өсөн] асылышлы булмаған кеше ҡалманы ла баһа. Эй бала!* Яр. Вәлиев.

**АСЫНЫУ I (асын-)** *ҡ. ҡайт. ҡар.* **асыу II.** *возвр. от.* **асыу II**.

**АСЫНЫУ II (асын-)** *ҡ. ҡар.* **әсенеү**.

**АСЫРҒАЛАНЫУ (асырғалан-)** *ҡ. ҡар.* **асырғаныу.**

**АСЫРҒАНЫУ (асырған-)** (Р.: напрягаться; И.: strain; Т.: ıkınmak ) *ҡ.*

Асыу менән ярһыу. □ Напрягаться, тужиться, упорствовать, стараться сверх силы. *Асырғанып ҡысҡырыу.* ■ *Ҡарт-коро, бала-саға ғына тимә әле һин уларҙы. Ауыр булған һайын асырғанып теш ҡыҫа улар.* К. Кинйәбулатова. *Халыҡ тынып ҡалған, көрәшселәрҙең асырғаныуҙан ах та ух килгәне генә ишетелеп ҡала.* Н. Мусин.

**АСЫРҒАНЫШ** (Р.: мучение; И.: suffering; Т.: azap) *и.*

Кешене физик яҡтан ныҡ интектергән ауырлыҡ; әрнеш, ғазап. □ Мучение, страдание. ■ *Ҡылыстар ҡылыска, ҡалҡанға бәрелгән саң-саңдар, аттар кешнәүе, ергә гөрһөлдәп ауған кәүҙәләр асырғаныштар менән бергә буталған.* Ғ. Хөсәйенов. *Ул [Йосоп] ниндәйҙер асырғаныш менән: «Китәм, китәм бынан!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе.* Н. Мусин.

**АСЫРҒАНЫШЛЫ** (Р.: азартный; И.: excitable; Т.: coşkun) *с.*

Сәмле. □ Азартный. ■ *Асырғанышлы көс таша ине уның тамырҙарында.* Г. Яҡупова.

**АСЫРТ** (Р.: прояснение; И.: clearing up; Т.: açıklama) *и.*

Көндөң асылған сағы. □ Прояснение. *Иртәнге асырт. Киске асырт.*

**АСЫ ТОРМА** *и. бот. ҡар.* **торма**. *Асы торманы һәр кем баҡсаһында үҫтерә ала.*

**АСЫРТЫУ (асырт-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аяҙытыу.** ■ *[Алдарбай:] Улайһа, көн асыртып ебәрһә, иртәгәнән үк ҡумәкләшеп солоктарҙы ҡарарға сығып китәбеҙ.* Н. Мусин.

**АСЫРЫЛЫУ (асырыл-)** *ҡ. диал. ҡар.* **һығылыу**.

**АСЫУ I** (Р.: гнев; И.: wrath; Т.: öfke) *и.*

Ныҡ нәфрәтләнеп, йән көйөп, ярһыу хисе. □ Гнев, злоба, негодование, ярость. ■ *Таштимер, асыуы килеп, аяҡ аҫтындағы кирбес киҫәген тибеп осорҙо.* Д. Бүләков. *Ҡарт эшселәрҙең асыуы ҡайнаны, улар өндәшмәҫ булдылар.* Ж. Кейекбаев. *Егор Николаевич асыу менән тибеп ебәрһә лә, ҡаршы ел әлеге ҡамғаҡты аяҡ араһына йәнә ҡыуып индерҙе.* З. Ураҡсин. ● *Айыуҙы еңгән — ярты ир, асыуҙы еңгән — бөтөн ир.* Мәҡәл. *Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит.* Мәҡәл.

♦ **Асыуым да килмәһә** *нимәгәлер* йән көйгәндә, кәмһетеп әйтелә. □ Не во гневе будет сказано. *Ул да йөрөй кеше булып, асыуым да килмәһә.* **Йән асыуы** йөрәктән сыҡҡан ҡаты асыу. □ Страшный гнев. ■ *[Абдрахман] биленән һуңғы бомбаны алып, йән асыуы менән уратып алған актарға ташлаған.* Ә. Вахитов.

**АСЫУ II (ас-)** (Р.: открывать; И.: open; Т.: açmak) *ҡ.*

**1.** Ишекте, ҡапҡасты ябыҡ түгел хәлгә килтереү. □ Открывать. // Открытие. ■ *Шамилов ғәрлегенән ҡапҡаны тибеп асыуға, сылбырын сылтыратып, Һарыбай лауылдап килеп сыҡты.* Ә. Хәкимов. *Шалтыр-шолтор килеп, кемдер берәү тыштан асты тимер ишекте.* М. Ямалетдинов.

**2.** Йоҙағын, биген алып, инерлек итеү. □ Отпирать, отомкнуть, открывать. // Отпирание, открытие. *Мунсаны асыу.* ■ *Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бирле бикле тороп тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты.* З. Биишева. *Бер көтөү малай барып асыр баҫыуҙың ҡапҡаһын, ырғытыр ҡунаҡ уларға, ҡустәнәс тип, аҡсаһын.* Ш. Бабич.

**3.** *Нигеҙҙәр* ауыҙын көпләп, ябып торған нәмәне алыу. □ Открывать, вскрывать, откупоривать. *Банканы асыу. Посылканы асыу.*

**4.** Ябыҡ булған нәмәне асыҡ хәлгә килтереү. □ Открывать, раскрыть. *Китап битен асыу. Шаршауҙы асыу. Юрғанды асыу.*

**5.** *Нимәнеңдер* тауышын көсәйтеү. □ Открывать (громкость) *чего-л. Телевизорҙың тауышын асыу.*

**6.** Йомоҡ хәлдән асыҡ хәлгә килтереү. □ Раскрыть, открывать. *Ауыҙҙы асыу. Күҙҙе асыу.* ■ *Ғәбәй эш тураһында ауыҙ асыуға Волком секретары: «Шуны аңла, Килмәтов, хәҙер заман башка, эш ысулдары икенсе. Наган болғаусылар кәрәкмәй!» — тип йөҙ йыртты.* Ә. Хәкимов.

**7.** Бороп, *нимәгәлер* үтергә, хәрәкәт итергә юл биреү. □ Открывать. *Газды асыу. Канауҙы асыу. Кранды асыу. Һыуҙы асыу.*

**8.** *Ниҙеңдер* эшмәкәрлеген башлап ебәреү. □ Открывать, начинать *что-л. Лавка асыу. Мәктәп асыу. Ашхана асыу. Күргәҙмә асыу. Йыйылышты асыу. Олимпия уйындарын асыу.* ■ *Башкорт халкы һис касан башлап корал тотманы; тиктомалдан калкынып батшаға яу асманы.* М. Ямалетдинов.

**9.** *Нимәнеңдер* өҫтән ҡаплаған ҡыртышын, ҡатламын аҡтарыу, әрсеү. □ Снимать верхний слой *чего-л. Сиҙәм асыу. Ырҙын асыу.*

**10.** Берәй *нәмәнең* төҫөн асыҡ итеү, таҙартыу. □ Сделать ярким *что-л. Келәмдең төҫөн асыу.*

**11.** Берәй *нәмәнең* барлығын белеү, табыу. □ Открывать *что-л.* ■ *Ҡаланан алтмыш километр төньяктарак, тауҙар араһында, күптән түгел яңы ҙур нефть яткылығы астылар.* Д. Исламов.

**12.** *күсм.* Билдәле итеү, асыҡлау, фаш итеү. □ Открывать, разоблачать, раскрывать. // Открытие, разоблачение, раскрытие. ■ *Ғаләмдәрҙең серен асҡан һайын, тартылыу ҙа уға юғала.* М. Ямалетдинов. *Уның [Сәлимдең] төп максаты — Мәхмүт Бәкеровтың ысын йөҙөн асыу.* С. Поварисов. *Такыр башлы, оҙонса һары йөҙлө подполковник үҙ штабы серен асыуға үкенде булһа кәрәк.* Я. Хамматов.

**АСЫУ III: ҡарын** (*йәки* **ҡорһаҡ, тамаҡ**) **асыу.** *к. кар.* **асығыу**.

**АСЫУ IV (асы-)** *к. кар.* **әсеү.**

**АСЫУАТ** (Р.: солончак; И.: alkali soil; Т.: solonçak) *и. диал.*

**1.** Тупрағы татырлы ер. □ Солончак.

**2.** *бот.* Әсе, татырлы ерҙә үҫә торған ҡаты үлән. □ Трава, растущая на солончаке.

**АСЫУҒА ТЕЙЕҮ (асыуға тей-)** (Р.: сердить; И.: make angry; Т.: kızdırmak ) *к.*

Асыуҙы ҡуҙғатыу; ҡыҙҙырыу. □ Сердить, рассердить. ■ *Айыу — акыллы йырткыс. Әммә юкка-барға асыуына тейһәң, холко боҙолоп китә, дыуамаллана башлай.* С. Кулибай.

**АСЫУ(ҘЫ) АЛЫУ (асыу ал-)** (Р.: сорвать зло *на ком*; И.: take it out on smb; Т.: kendini tutamamak) *к.*

Булған асыуҙы *кемгә* йәки *нимәгәлер* төшөрөү. □ Сорвать зло *на ком, на чём.* ■ *Бик эстәре көйә малайҙарҙың, шунлыктан улар асыуҙарын Тимерҙән ала башланы.* Б. Бикбай.

**АСЫУ ИТЕҮ (асыу ит-)** (Р.: делать назло; И.: do smth to spite smb; Т.: inadına yapmak ) *к.*

Асыу менән, үс менән *ниҙер* ҡылыу. □ Делать назло, в отместку. ■ *Ғәләүҙе шулай көйләп тормаһаң, асыу итеп йә инспекторға ошаклар, уға ышаныс бармы ни.* Т. Йәнәби.

**АСЫУ КИЛЕҮ (асыу кил-)** (Р.: возмущаться; И.: be indignant; Т.: öfkelenmek) *к.*

Асыу тәьҫирендә булыу, асыулы булыу. □ Возмущаться. ■ *Асыуы килгән солтан төш юраусыны зинданға ябырға бойора.* Р. Хажиев.

**АСЫУ ҠАБАРЫУ (**Р.: гневаться; И.: be angry (with); Т.: kızmak) *к.*

Бик ныҡ асыуланыу. □ Гневаться, злиться. ■ *Ҡолморҙа старшинаның асыуы сиктән тыш кабарҙы. Ул тештәрен*

*шығыр-шығыр иттереп бер-береһенә игәй.* Т. Хәйбуллин.

**АСЫУЛАНДЫРЫУ (асыуландыр-)** (Р.: злить; И.: anger smb.; Т.: kızdırmak) *к.*

*Кемдеңдер* йәки *нимәнеңдер* асыуын ҡуҙғатыу. □ Злить, сердить, озлоблять, возмущать *кого-л. Халыҡты асыуландырыу.* ■ *Бүре: «Асыуландырһағыҙ, мин икегеҙҙе лә ашап ҡуйыրмын, бир һөйәкте!» — ти.* Әкиәттән.

**АСЫУЛАНЫУ (асыулан-)** (Р.: сердиться; И.: be angry; Т.: kızmak) *к.*

**1.** Асыу тойғоһонда булыу, асыу килеү. □ Сердиться, злиться. *Шаян балаға асыуланыу.* ■ *Ире иҫтәлегенә хыянат итергә теләмәгән әсә, Шафиҡка асыуланып, үҙҙәренә килеп йөрөмәҫкә ҡушты.* Я. Хамматов.

**2.** *Кемгәлер* асыу белдереү, үсегеү, үпкәләү. □ Злиться, обижаться *на кого-л. Асыуланып сығып китеү.* ■ *[Вәсилә] был көндәрҙә һис кенә лә һүҙ күтәрмәй башланы. Юҡ қына һүҙгә лә хәтере ҡала, тиктомалдан асыуланып, үпкәләп бара.* Ф. Әсәнов.

**АСЫУЛАНЫШЫУ (асыуланыш-)** *к. урт. ҡар.* **асыуланыу**. *взаимн. от* **асыуланыу**. ■ *[Хисмәтулла — Михаилға:] Шунан бирле һаман асыуланышаһығыҙмы?* Я. Хамматов.

♦ **Асыуланыштан булмаһын** ‘асыуланышмайыҡ’, ‘яманлашмайыҡ’ тигән мәғәнәлә әйтелә. □ В значении ‘давай, не будем ссориться’. ■ *[Дубов:] Ул ваҡытта, иптәш Байрамғолов, асыуланыштан булмаһын: мин урындағы партия ойошмаһынан ярҙам һорайым.* К. Мәргән.

**АСЫУЛЫ** (Р.: злобный; И.: malicious; Т.: kindar) *с.*

Асыу тойғоһо булған, асыуланған. □ Злобный, озлобленный, сердитый, рассерженный, гневный. ■ *[Мәғәфүр] асыулы тауыш менән Талхаға: «Күҙең ботаҡ урынымы ни! Ҡарамай киләһең! Ниңә боролоп юл бирмәйһең?» — тип ҡысҡырҙы.* Ж. Кейекбаев.

**АСЫУСАН** (Р.: раздражительный; И.: irritable; Т.: asabi) *с.*

Тиҙ генә асыуланып барыусан. □ Раздражительный, гневливый. *Асыусан булыу. Асыусан кеше.*

**АСЫУ ТӨШӨРӨҮ (асыу төшөр-)** (Р.: сорвать зло *на ком*; И.: take it out on smb; Т.: kendini tutamamak) *к.*

Асыу тойғоһон *кемгәлер* йүнәлтеү. □ Сорвать зло *на ком.* ■ *Рауил өйҙәгеләргә булған асыуын башҡаларға төшөрөп, йөрәген бер аҙ баҫа, буғай.* Б. Бикбай.

**АСЫШ** (Р.: открытие (в науке, литературе и т.д.); И.: discovery; Т.: açılma ) *и.*

Фән, әҙәбиәт өлкәһендә табылған яңылыҡ. □ Открытие (в науке, литературе и т.д.). *Ғилми асыш. Асыш яһау.* ■ *Үҙ темаңды табыу художестволы асыштарға килтерә, дөйөм әҙәбиәт үҫешенә бер этәргес, ҡеүәт бирә.* Ә. Вахитов.

**АСЫШ ЯҺАУ (асыш яһа-)** (Р.: сделать открытие; И.: invent; Т.: keşfetmek) *к.*

Фән, әҙәбиәт өлкәһендә яңылыҡ уйлап табыу. □ Сделать открытие. ■ *Бына ул [Әхмәҙулла] көтмәгәндә ҙур асыш яһай. Ҡайҙа барма, тик уның эше тураһында ғына һөйләйҙәр.* Р. Солтангәрәев.

**АСЫШЫУ (асыш-)** *к. урт. ярҙ. ҡар.* **асыу II**. *взаимн. вспом. от* **асыу II**.

**АС ЭСӘК** (Р.: тонкая кишка; И.: small intestine; Т.: ince bağırsak) *и. анат.*

Эсәктең ашҡаҙан менән туҡ эсәк араһындағы иң оҙон өлөшө; нәҙек эсәк. □ Тонкая кишка.

**АС-ЯЛАНҒАС** (Р.: крайне бедный; И.: utterly poor; Т.: çok yoksul ) *с.*

Ашҡа, кейемгә бик мохтаж. □ Крайне бедный, голодный и нищий. *Ас-яланғас ҡалыу.* ■ *Шул саҡтарҙа, мине ас-яланғас итмәйем тип, күпме яфа сиккән [әсәйем].* Н. Мусин. *Һуғыштың һуңғы ауыр йылы ине. Ас-яланғас саҡтар.* Д. Бүләков. *[Сәлих:] Янғыңдан элек кенә атымды әллә урланылар, әллә бүре, әллә айыу ашаны. Мин шул килеш йөклө ҡатыным менән ас-яланғас тороп ҡалдым.* Ғ. Хәйри.

**AÇ I** (Р.: горностай; И.: ermine; Т.: as) *и. зоол.*

**1.** Һыуһарҙар төркөмөнә ҡараған затлы тиреле, йәйен һоро, ҡышын аҡ төҫтәге йыртҡыс йәнлек. □ Горностай. *Аç балаһы.*

**2.** Йәнлек. □ Животное.

**AÇ II** (Р.: низ; И.: bottom; Т.: alt) *и.*

**1.** Билдәле бер кимәлдән түбән булған тараф; *киреһе* — өç. □ Низ, нижняя часть *чего-л. Аçҡа төшөү. Аçта тороу. Аçтан күтәреү. Аçта ҡалыу.* ● *Аçтындағын алты ай эҙләгән.* Әйтем.

**2.** Бер *нәмәнең* түбәнге яғындағы урын. □ Служебное имя в значении ‘под, под-’. *Аяҡ аçты. Ер аçты. Иҙән аçты. Ҡар аçты. Һыу аçты. Аçта ҡалыу. Ҡултыҡ аçты.* ■ *Тәү башлап ҡыçҡырғанда кәкүк ағастың аçҡы ботағына ултырһа, йыш һәм оҙаҡ саҡырһа, ул тиҙ һаҡауланмай.* Экспедиция материалдарынан. ● *Күҙҙең аçты тартһа — илауға.* Һынамыш.

**3.** Һарҡыуҙың түбәнге яғы. □ Низ, нижняя часть, нижняя сторона. *Тау аçты. Яр аçты.* ■ *[Раушания] тағы Яйыҡ ярына баçты. Аçта шаян тулҡындар уйнай, ят ауаздар сығара.* Р. Камал.

**4.** Малдың аçтына түшәлгән һалам һ. б. □ Обычно **аçты** *(у скотины)* подстилка. *Малдың аçтын таҙартыу.* ■ *Көн дә дәрестән ҡайтҡас, килеп, утлыҡсаға бесән һалып, иртәнгелеккә витаминлы көрпә әҙерләп ҡуйырһың. Мал аçтын көрәп сығарырһың.* «Йәншишмә», № 99, 2010.

**5.** 3-сө зат эйл., төб., сығн., у.-в. клш. аффикстары менән бәйләүес функцияһында ҡулланыла *(ҡар.* **аçтына, аçтынан, аçтында).** □ Применяется в функции послелога с аффиксами 3 л. род. п., дат. п., твор. п. и местно-времен. падежей.

♦ **Аçҡа һыу инеү** берәй төрлө ауыр хәлгә ҡалыу. □ *соотв.* Сесть на мель. **Өçтө күкәй ҡабығы, аçты торна тоҙағы** тыштан һәйбәт кейенеп, эçтә кейеме насар булған кешегә әйтелә. **Сынаяҡ аçты** *и. ҡар.* **сынаяҡ 1. Аçты-өçкә әйләнеү** 1) ҡапланыу, түңкәрелеү. □ Переворачиваться; 2) бик ныҡ буталыу, пыран-заран килеү. □ Переворачиваться вверх дном.

**AÇA** (Р.: узор паласа; И.: kind of carpet pattern; Т.: halı bezeği) *и.*

Һуғып эшләнгән биҙәк *(балаçтағы).* □ Узор тканого паласа. ■ *Аçаһына ҡарап, һәр оçта кемдең ҡул эше икәнен таный.* «Йәшлек», 1 апрель 2010.

**AÇАБА** [ғәр. عصبة ‘атай яғынан туғантыумаса; төркөм’] (Р.: вотчинник; И.: great landowner; Т.: çiftlik sahibi) *и.*

**1.** Нәçелдән күсә килгән ерҙең хужаһы. □ Вотчинник. *Аçаба башҡорт. Аçаба булыу.* ■ *Тора малай нәк атаһы һымаҡ, елкәһендә — һуғыш нужаһы. Бына ҡайҙа ерҙең аçабаһы, бына кем ул донъя хужаһы!..* Р. Ғарипов. *Күренекле мәғрифәтсе-ғалим һәм әҙип Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев та .. аçаба башҡорт өçөн үҙенең сығышын, йәғни ырыуын белеү — иң мөһим сифаттарҙың береһе, тип яҙып ҡалдырған.* М. Нәҙерғолов.

**2.** *иçк.* Ире үлгән ҡатындың муллаға биргәндән ҡалған малы (уны туғандары үҙара бүлешә). □ Скот, подлежащий разделу между родственниками умершего.

**3.** *диал. ҡар.* **ир бала**.

**4.** *этн.* Бүләр, юрмый ырыуҙарының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-булярцев, юрмийцев.

**AÇАБАЛЫҠ (аçабалығы)** (Р.: вотчинничество; И.: position of great landownership; Т.: soyaçekimsel sahibi) *и.*

Аçаба булғанлыҡ, ер биләмәһенең нәçелдән нәçелгә күскән хужаһы булғанлыҡ. □ Вотчинничество, наследственный владелец надела. *Аçабалыҡ ҡағыҙы.* ■ *Ер өçөн ҡан түгеп, һуғыш яһап алғандар үҙҙәренә аçабалыҡ.* Ш. Әминев-Тамъяни.

**AÇАЛ** [ғәр. اصالة ‘килеп сығыш; затлылыҡ’] (Р.: знатный; И.: noble kin; Т.: asıl soy) *и. иçк.*

Затлы ырыу. □ Знатный, благородный род. ■ *Аҙаматтар, суралар, аçалда тыуған*

*мырҙалар, кәңәшеңдә ары һал, колағыңды бире һал.* Ҡобайырҙан.

**АҪАЛАУ (аҫала-)** (Р.: ткать узорчатый ковёр; И.: weave pattered carpet; Т.: motifli halı dokumak) *к.*

Биҙәк ултыртыу *(балаҫҡа)*; биҙәкләү. □ Ткать узорчатый ковёр. *Аҫалап һуғыу. Балаҫты аҫалау.* ■ *Мәрхүм өләсәйем .. хәлләргә балаҫын да аҫалаған.* Р. Рөстәмова.

**АҪАЛЫ** (Р.: узорчатый; И.: patterned; Т.: motifli) *с.*

Биҙәкләп һуғылған. □ Узорчатый, с узорами. *Аҫалы балаҫ.* ■ *Дим буйы башкорттары аҫалы балаҫ һуғыу менән тирә-якта дан тота.* Н. Бикбулатов. *Өршәк — Дим буйы ауылдарының һәр береһендә аҫалы балаҫ һакланған.* «Йәшлек», 1 апрель 2010.

**АҪАН** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Дыуан-табын ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение дуван-табынцев.

**АҪАУ** [боронғо төрки *арсау*] (Р.: необъезженный; И.: unbroken; Т.: evcilleştirilmemiş) *с.*

**1.** Егелмәгән, ҡырағай. □ Необъезженный, неприрученный. *Аҫау айғыр. Аҫау ат.* ■ *[Әүәҙбикә] бер аҫау айғыр, бер ҡама бүрек биреп, аҫабаларҙан ер һатып алған, Илсеғол ауылында тора башлаған.* Әкиәттән.

**2.** Ярһып торған, усал. □ Разъярённый, горячий, резвый. ■ *Аҫау булып ажғырырһың, сапсынырһың, колоном.* Р. Ғарипов.

**АҪАУЛАНЫУ (аҫаулан-)** (Р.: дичать; И.: grow wild; Т.: yabanileşmek) *к.*

Аҫауға әйләнеү. □ Дичать. *Йылкылар йәй буйы иректә йөрөп, аҫауланып киткән.*

**АҪҠАҠ I (аҫҡағы)** (Р.: перекладина; И.: crossbeam; Т.: lento) *и.*

*Ниҙелер* аҫып, элеп ҡуя торған ҡулайлама. □ Перекладина *(приспособление для подвешивания чего-н.).* ■ *Әҙһәм карт та ҡыуышы алдына ут яғып аҫкакка сәй ҡайнатырға элде.* Ж. Кейекбаев. *[Хәйбулла бабайҙарҙың] һыйыры яҙын күтәртеп, аҫкакта торған ерендә үлде.* Н. Мусин.

**АҪҠАҠ II (аҫҡағы)** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Үҫәргән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-усерган.

**АҪҠАУ (аҫҡа-)** *к. диал. кар.* **аҡһау.**

**АҪҠОРҺАҠ (аҫҡорһағы)** *и. бот. диал. кар.* **аҡһырғаҡ.**

**АҪҠЫ** (Р.: нижний; И.: lower; Т.: alt) *с.*

**1.** Аҫ яҡтағы, аҫта урынлашҡан. □ Нижний. *Аҫҡы ирен. Аҫҡы теш. Аҫҡы кәштә.* ■ *Пароходтың аҫҡы ҡатында кемдеңдер моңландырып оҙон көйгә гармун уйнап ебәргәне ишетелде.* М. Тажи.

**2.** *Ниҙеңдер* түбәнге яғында урынлашҡан. □ Нижний. *Аҫҡы урам.*

**АҪҠЫ ДОНЪЯ** (Р.: нижний мир; И.: nether world; Т.: alt dunya) *и. миф.*

Һыу аҫты, ер аҫты, үлеләр донъяһы. □ Низ, нижний мир, преисподняя, мир мёртвых *(под низом подразумевают подводное, подземное пространство).*

**АҪҠЫЛЫҠ (аҫҡылығы)** *и. диал. кар.* **аҫҡаҡ.**

**АҪҠЫРҒАҠ (аҫҡырғағы)** *и. бот. диал. кар.* **аҡһырғаҡ.**

**АҪЛЫҠ (аҫлығы)** (Р.: подставка; И.: support; Т.: altlık) *и.*

Төрлө нәмәнең аҫтына ҡуя торған ҡулайлама; таҫтаҡ. □ Подставка. *Утек аҫлығы. Умарта аҫлығы.*

**АҪЛЫ-ӨҪЛӨ** (Р.: имеющий верхнюю и нижнюю часть; И.: having upper and lower parts; Т.: altlı üstlü) *с.*

Аҫты ла, өҫтө лә булған. □ Один на другой, имеющий верхнюю и нижнюю часть. ■ *Өй котлап, Гөлйөҙөмдөң әсәһе бер кейеҙ, еңгәһе аҫлы-өҫлө ике сынаяк бүләк итте.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪМА I** (Р.: отвес; И.: plumb; Т.: çekül) *и.*

**1.** Вертикаль йүнәлеште билдәләү өсөн бау осона тағылған ауырлыҡ; ауыртмаҡ. □ Отвес.

**2.** Муйынға тағылған биҙәүес. □ Подвеска. ■ *Ҡатын-ҡыҙҙар ҡәберендә беләҙектәр, .. муйынға тағып йөрөтөлә торған көмөш аҫма, төрлө төҫтәге быяла муйынсаҡтар йыш осрай.* Н. Мәжитов.

**АҪМА II** (Р.: вертикальная; И.: vertical; Т.: düşey) *с.*

**1.** Вертикаль йүнәлешле. □ Вертикальная. *Аҫма һыҙыҡ.*

**2.** Элеп, аҫып ҡуйылмалы; аҫмалы. □ Подвесной. ■ *Етеле аҫма шәмде яндырғас, киске ҡараңғыға мансылған өй эсе яҡтырҙы.* Я. Хамматов.

**АҪМАЛЫ** (Р.: подвесной; И.: suspended; Т.: asma) *с.*

Аҫып ҡуймалы. □ Подвесной. *Аҫмалы шәм. Аҫмалы күпер.*

**АҪПАТ** *с. диал. ҡар.* **ыҫпай**.

**АҪРАЛЫУ (аҫрал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **аҫрау I**. *страд. от* **аҫрау**.

**АҪРАНЫУ (аҫран-)** (Р.: рожать; И.: give birth (to); Т.: doğurmak) *ҡ. диал.*

Бала табыу. □ Рожать.

**АҪРАУ I (аҫра-)** (Р.: содержать; И.: provide; Т.: beslemek) *ҡ.*

**1.** Баланы йәки мохтаж кешене ашатып-эсереп тәрбиәләү; ҡарау. □ Содержать, обеспечивать, воспитывать. // Содержание, обеспечивание, воспитание. ■ *Балалар йортто асылған. Йәтим балаларҙы аҫрайҙар: ашаталар, кейендерәләр, уҡыталар.* З. Биишева.

**2.** Хужалыҡта мал, ҡош-ҡорт тотоу. □ Разводить, выращивать *(о домашних животных, птице)*. // Разведение, выращивание. *Ат аҫрау. Ҡаҙ аҫрау.*

**3.** *күсм.* Һаҡлап тотоу *(хәтерҙә, күңелдә)*. □ Помнить. ■ *Эргәңдәге үләндәрҙе, сәскәләрҙе, улар өҫтөндә уйнап, осоп йөрөгән күбәләктәрҙе .. ентекләп ҡарайһың. Күп йылдарға, күп ғүмерҙәргә уларҙың барыһын да шул көйгә һаҡлағың, шул көйгә хәтереңдә аҫрағың килә.* Б. Ишемғол. ● *Ҡолон аҫраһаң, ат менерһең.* Әйтем. *Атаһыҙ ул аҫрама, инәһеҙ ҡыҙ аҫрама.* Мәҡәл.

**АҪРАУ II: бала аҫрау** (Р.: рожать; И.: give birth (to); Т.: doğurmak) *ҡ. диал.*

Бала табыу. □ Рожать.

**АҪРАУ III** (Р.: подопечный; И.: under wardship; Т.: vesayet altındaki) *с.*

Ситтән алып аҫралған. □ Подопечный, взятый под опеку *(обычно о ребёнке)*. *Аҫрау бала.* ■ *Мулланың малайы ла, аҫрау ҡыҙ ҙа үҫкән. Был ҡыҙ менән малай бер-береһен бик яратҡан.* Әкиәттән.

**АҪРАУ IV** (Р.: служанка; И.: housemaid; Т.: hizmetçi) *и.*

Хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙ. □ Служанка. *Аҫрау тотоу.* ■ *Егор ҡарт, өйҙә әбейенә ярҙамсы булмағас, аҫрау алды.* Ж. Кейекбаев.

**АҪТАН КИҪЕҮ (аҫтан киҫ-)** (Р.: вредить исподтишка; И.: do harm in an underhand way; Т.: gizlice zarar vermek) *ҡ.*

Уҫал уй менән аҫтыртын эш алып барыу. □ Вредить исподтишка.

♦ **Аҫтан киҫеп, өҫтән ямау** аҫтыртын яуыз эш эшләп, яҡшы булып күренеп йөрөү. □ Вредить исподтишка и при этом подхалимничать.

**АҪТАН ҠЫРҠЫУ (аҫтан ҡырҡ-)** *ҡ. ҡар.* **аҫтан киҫеү.**

**АҪТАР** [ғәр. استار ‘япма; шаршау’] (Р.: подкладка; И.: thin lining stuff; Т.: ince kumaş) *и.*

**1.** Кейемдең мамығына эс яҡтан һалынған йоҡа туҡыма. □ Тонкая ткань под подкладку. *Аҫтар һалыу.*

**2.** *диал.* Эслек. □ Подкладка. *Алынмалы аҫтар. Костюм аҫтары. Аҫтар туҡымаһы.*

**3.** *диал.* Әҙеп. □ Подшивка. *Күлмәк аҫтары. Итәк аҫтары.*

**АҪТАРЛАУ (аҫтарла-)** (Р.: ставить ткань под подкладку; И.: put stuff for lining; Т.: ince kumaşı koymak) *ҡ.*

Аҫтарлы итеү, аҫтар ҡуйыу. □ Ставить ткань под подкладку. ■ *Ҡаҙаҡ ҡатын-ҡыҙҙары .. ҡуй йөнөн аҫтарлап көпөләр, ебәк менән тышлап томаҡтар тегә.* Ғ. Ғүмәр.

**АҪТАРЛЫҠ (аҫтарлығы)** (Р.: ткань под подкладку; И.: lining stuff; Т.: astar için ince kumaş ) *и.*

**1.** Аҫтарға тәғәйенләнгән туҡыма. □ Ткань под подкладку. *Аҫтарлыҡ туҡыма. Аҫтарлыҡ бүҙ.*

**2.** *диал. кар.* **эслек.**

**АҪТЫНА** (Р.: под; И.: under; Т.: altına) *бәйл.*

**1.** Эш-хәлдең *нимәнеңдер* түбәнге яғына йүнәлеүен белдергәндә ҡулланыла. □ Под. *Боҙ аҫтына китеү.*

**2.** *Нимәнеңдер* йоғонтоһона алыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Под. *Һаҡ аҫтына алыу. Күҙәтеү аҫтына эләгеү.*

**АҪТЫНАН** (Р.: из-под; И.: from under; Т.: altından) *бәйл.*

Эш-хәл, хәрәкәттең *нимәнең дә булһа* түбәнге өлөшөнән башҡарылыуын белдергәндә ҡулланыла. □ Из-под.

**АҪТЫНДА** (Р.: под; И.: under; Т.: altında) *бәйл.*

**1.** *Нимәнең дә булһа* түбәнге өлөшөндә башҡарылыуҙы, урынлашыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Под *(послелог употребляется при указании места, ниже которого находится кто-что-л.). Карауат аҫтында ятыу. Ағас аҫтында тороу. Ер аҫтында эшләү.* ■ *Ҡаҙан аҫтындағы ҡуҙҙарҙы ел һыйпай-һыйпай һүрелтә.* Т. Ғарипова.

**2.** *Нимәнеңдер* тәьҫиренә ҡалыуын белдергәндә ҡулланыла. □ Под *(послелог употребляется при указании лица, предмета, который находится под действием чего-л.). Ямғыр аҫтында ҡалыу. Ут аҫтында ҡалыу.*

**3.** Эш-хәлдең сәбәбен белдереү өсөн ҡулланыла; арҡаһында, һөҙөмтәһендә. □ Под *(послелог в значении 'в результате', 'вследствие' чего совершается действие). Температура тәьҫире аҫтында есемдәр киңәйә.*

**4.** *Кемдең* йәки *нимәнең* тәьҫирендә, йоғонтоһонда булыуҙы белдергәндә ҡулланыла. □ Под *(послелог употребляется при указании условий, которые создаются для кого-чего-л.). Һаҡ аҫтында тотоу. Күҙәтеү аҫтында булыу. Дуҫтың ҡанаты аҫтында.*

**5.** Предметты, затты айырып күрһәткәндә ҡулланыла. □ Под *(послелог употребляется при особом, отдельном указании предмета). Яңы атама аҫтында биреү.* ● *Аҫтындағын алты ай эҙләгән.* Мәҡәл.

**АҪТЫ-ӨҪКӘ** (Р.: вверх дном; И.: upside down; Т.: alt üst) *р.*

Ныҡ бола, тәртипһеҙ хәлдә. □ Вверх дном. *Аҫты-өҫкә килеү. Аҫты-өҫкә әйләнеү.*

**АҪТЫН-ӨҪКӘ КИЛТЕРЕҮ (аҫтын-өҫкә килтер-)** (Р.: переворачивать вверх дном; И.: turn upside down; Т.: ters çevirmek) *к.*

Ныҡ болартыу, тәртипһеҙ хәлгә килтереү. □ Переворачивать вверх дном. ■ *Ул [Тимербулат] актарынып, өйҙөң аҫтын-өҫкә килтерҙе.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪТЫРТЫН I** (Р.: скрытный; И.: clandestine; Т.: gizli) *с.*

Уй-ниәтен һиҙҙермәй, йәшерен эш итеүсән. □ Скрытный, тайный. *Аҫтыртын кеше.* ■ *Минең эсемдәге тышымда, ә Нуретдин аҫтыртын.* Ғ. Әмири.

**АҪТЫРТЫН II** (Р.: скрытно; И.: secretly; Т.: gizlice) *р.*

Йәшерен рәүештә, шым ғына. □ Скрытно, тайно, тайком, втихоньку, исподтишка. ■ *[Ул ҡыҙ] күп һөйләшмәй, аҫтыртын ғына ҡарап йөрөй торғайны.* Н. Мусин. ● *Аҫтыртын эт өрмәй тешләй.* Мәҡәл.

**АҪТЫРЫУ (аҫтыр-)** *к. йөкм. кар.* **аҫыу.** *понуд. от* **аҫыу**.

**АҪЫЛ I** (Р.: изящный; И.: refined; Т.: zarif) *с.*

**1.** Бик матур һәм ҡиммәтле; затлы. □ Изящный, красивый и дорогостоящий. *Аҫыл келәм. Аҫыл кейем.* ■ *Аҫыл алтын сапанлы батша, тиҙәр, Бүгәсәү; аҫыл көмөш эйәрле атта, тиҙәр, Бүгәсәү.* С. Юлаев.

**2.** Бик матур. □ Очень красивый. *Аҫыл сәскә. Аҫыл ағас. Аҫыл гөл.* ■ *Йәнлеге, аҫыл ҡоштары, гөж килеп ҡайнап тора.* Р. Ниғмәти.

**3.** *күсм.* Абруйлы, арҙаҡлы, хөрмәткә лайыҡ, матур, һомғол. □ Достойный, почитаемый, грациозный, красивый. *Аҫыл егет.*

*Аҫыл ир. Аҫыл ҡыҙҙар.* ■ *Кешелек донъяһының күпме аҫыл ир-егеттәре халыҡ бәхетен яулау юлында .. һәләк булды.* Ә. Хәкимов.

**4.** *күсм.* Төплө, тәрән дәлилле, ныҡлы нигеҙле; аҡыллы. □ Обоснованный, основательный, серьёзный. *Аҫыл һүҙ. Аҫыл фекер.* ● *Аҫыл таш һыу төбөндә, аҫыл һүҙ күңел төбөндә.* Мәҡәл.

**АҪЫЛ II** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Тамъян ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-тамьянцев.

**АҪЫЛАЙЛАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-бурзянцев.

**АҪЫЛБӘК** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков.

**АҪЫЛҠАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Мең ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-минцев.

**АҪЫЛ ҠОШ** (Р.: красотка; И.: pretty girl; Т.: fingirdek kadın) *и. мыҫҡ.*

Еңел холоҡло матур ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә. □ Красотка *(о красивой женщине лёгкого поведения).*

**АҪЫЛЛАНЫУ (аҫыллан-)** (Р.: становиться красивым; И.: become lovely; Т.: güzel olmak) *ҡ. шиғр.*

Аҫылға әйләнеү. □ Становиться красивым, прелестным, прекрасным. ■ *Тау биттәре хәтфә ябынып аҫылланған төндә яуған йылы йомшаҡ ямғыр менән.* С. Ҡудаш.

**АҪЫЛЛЫҠ (аҫыллығы)** (Р.: благородство; И.: nobleness ; Т.: asalet) *и.*

Юғары дәрәжәлелек, баһалылыҡ, матурлыҡ, нәзәкәтлелек. □ Благородство, красота. ■ *Ваҡ теләктән өҫтә тороу иргә өҫтәй аҫыллыҡ.* Ҡ. Даян.

**АҪЫЛМА** *с. ҡар.* **аҫмалы.**

**АҪЫЛМАЛЫ** *с. ҡар.* **аҫмалы.**

**АҪЫЛТАШ** *и. мин. ҡар.* **аҫыл таш.**

**АҪЫЛ ТАШ** (Р.: драгоценные камни; И.: jewel; Т.: kıymetlı taş) *и. мин.*

Ҡиммәтле, затлы таштар. □ Драгоценные камни. ■ *Беҙҙең телдә аҫыл таш исемдәренең таралған булыуы — ата-бабаларҙың затлы минералдарҙы аҙ-маҙ таный белеүе .. тураһында һөйләй.* Б. Мәһәҙиев.

**АҪЫЛ ҺӨЙӘК** (Р.: знатный; И.: noble person; Т.: soylu insan ) *и.*

Затлы нәҫелдән, зифа буйлы, матур кеше. □ Знатный, благородный человек. ■ *[Ҡотлобай:] Был кем кәләше икән? Һай, һай, аҫыл һөйәк, һылыу ҡатын, — тип һоҡланды.* Һ. Дәүләтшина.

**АҪЫЛЫ ҠЫБАУ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыбау ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир рода кубау.

**АҪЫЛЫНДЫРЫУ (аҫылындыр-)** (Р.: свешивать; И.: lower down; Т.: sarkıtmak) *ҡ.*

Аҫҡа сосрайтып төшөрөү; һалындырыу. □ Свешивать, спускать. *Аяҡты аҫылындырыу.*

**АҪЫЛЫНҠЫ** *с. диал. ҡар.* **һалынҡы.**

**АҪЫЛЫНЫУ (аҫылын-)** (Р.: свешиваться; И.: droop; Т.: sarkmak) *ҡ.*

**1.** Эләгеп, йәбешеп, аҫҡа һалыныу. □ Свешиваться, подвисать, обвисать. *Муйынға аҫылыныу.* ■ *Тейен аҫылынып, зыр-зыр әйләнеп торҙо ла ҡарағайҙың башына уҡ менеп китте.* М. Тажи. *Ишек өҫкө күгәненән һурылып .. аҫылынып тора.* Б. Бикбай.

**2.** *кайт. ҡар.* **аҫыу 2.** *возвр. от* **аҫыу 2.** ■ *Аҫылынып үлгән кешенең ҡәбере өҫтөнә 41 ижау һыу койоу ҙа ямғыр яуҙыра.* Экспедиция материалдарынан.

**АҪЫЛЫУ (аҫыл-)** *ҡ. төш. кар.* **аҫыу** *страд. от* **аҫыу.**

**АҪЫУ (аҫ-)** (Р.: вешать; И.: hang, suspend; Т.: asmak ) *ҡ.*

**1.** Һалындырып тағыу, күтәреп бәйләү. □ Вешать, подвешивать, привешивать. *Билгә аҫыу. Муйынға аҫыу. Сумканы арҡаға аҫыу. Утка сәйнүк аҫыу.* ■ *Малай бара. Ҡайҙа бара, тоҡсай аҫып арҡаһына?* М. Кәрим. *Ниһайәт, барыһын да теүәлләп-барлап һалалар ҡалын папкаға. Папканы Вил яурынына аҫҡан модалы сумкаһына тыға.* Ә. Әминев.

**2.** Муйынына элмәкле бау һалып күтәреү *(үлем язаһының бер ысулы).* □ Вешать *(казнить). Аҫып үлтереү.* ■ *Ялан башҡорттарының ата-бабаларында уйнаш итеп тотолғандарҙы дөйәгә ике яҡлап аҫыу йолаһы булған.* Ф. Хисамитдинова.

**3.** *диал.* Бешерергә ҡуйыу. □ Поставить вариться. *Ҡаҙан аҫыу.*

**АТ I** [дөйөм төрки *ат*, боронғо төрки *ахта* 'алаша'] (Р.: лошадь; И.: horse; Т.: at) *и.*

**1.** Йомро тояҡлы, ялбыр ҡыл ҡойроҡло, яллы эре йорт хайуаны. □ Лошадь, конь. *Башҡорт аты. Ғәрәп аты. Бүртә ат. Туры ат. Бәйге аты. Ат заводы. Ат һарайы. Ат егеү. Ат менеү. Ат сабыштырыу.* ■ *Боронғо башҡорттарҙың ҡарашы буйынса, ат ен-пәрейҙәрҙең арбауына, күҙ бәйләүенә бирешмәгән.* Халыҡ ижадынан. ● *Ир ҡанаты ат булыр.* Әйтем. *Йүгерек атҡа ял теймәй.* Әйтем. *Ат юлда, ир яуҙа һынала.* Әйтем.

**2.** *спорт.* Ат башын хәтерләткән шахмат фигураһы. □ Конь *(шахматная фигура).*

**3.** *спорт.* Дүрт тояҡҡа ҡуйылған йомшаҡ туҡыма менән уратылған брус рәүешендәге гимнастика снаряды. □ Конь *(гимнастический снаряд).*

**4.** *кусм.* Боҙҙа шыуыу өсөн эшләнгән үткер ҡырлы тимер табанлы аяҡ кейеме; коньки, тимер ат. □ Коньки. ■ *Коньки шыуып ҡараған кеше генә белә — тимер аттарҙа боҙҙа шыуыу үҙе бер ғүмер, кинәнес, иркенлек!* «Көнгәк», 28 август 2010.

**5.** *миф.* Башҡорт мифологияһында ат — тотем, ырыу башы, ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы, ярҙам итеүсе. □ В башкирской мифологии лошадь — тотем, прародитель, защитник и помощник. ■ *Ат дағаһын, ҡыу башын элеп ҡуйыу йолаһы бар. Аттан төшөп ҡалған дағаны тупһаға ҡаҡһаң, өйгә тел-теш, ен-шайтан инмәй икән. Мал-тыуар, ҡорт, ҡош-ҡорт үрсеһен, казаланмаһын тип, ҡыу ат башын кәртә-ҡураға, умартаға элеп ҡуйыу йолаһы әле лә һаҡланған.* Ф. Хисамитдинова.

♦ **Ат кеүек** эре һөйәкле, һауһаҡ. □ Как лошадь *(о дородном человеке).* **Ат кеүек эшләү** арыуҙы белмәй емереп эшләү. □ Работать как лошадь. **Ат күҙендәй** 1) үҙ самаһынан бәләкәй булған нәмәгә әйтелә. □ Слишком маленький. *букв.* С конский глаз *(говорится при приуменьшении размера чего-л.). Ат күҙендәй генә каса;* 2) үҙ самаһынан ҙур булған бәләкәй нәмәгә әйтелә. □ Слишком большой *(говорится при преувеличении размера чего-л.). Ат күҙендәй күбек.* **Ат ҡолонлатыу** оҙон-оҙаҡҡа һуҙыу *(һүҙҙе).* □ Тянуть время, медлить. ■ *Бигерәк тә күп һөйләгән Шакир булды: ул ҡыҙҙарға беҙҙең төнгө сәйәхәтте ат ҡолонлатып һөйләй ине.* Н. Иҙелбай. **Ат менгәндәй булыу** бик ныҡ ҡыуаныу. □ Бурно радоваться. *соотв.* На седьмом небе. *Атаһы ҡайтҡас, бала ат менгәндәй булды.* **Ат еткән ергә — ат, хат еткән ергә хат ебәреү** бөтә яҡҡа хәбәр таратыу. □ Распространение новости в разные стороны, разным способом.

**АТ II** [дөйөм төрки *аат*, боронғо төрки *айт*] (Р.: имя; И.: nickname; Т.: lakap) *и.*

**1.** Кешегә ҡушылған исем. □ Имя, прозвище. *Ат биреү. Атың кем?* ■ *Атаң ҡуйған атың менән аталырһың, хеҙмәтеңә ҡарай маҡталырһың.* Аҡмулла.

**2.** *кусм.* Яҡшы йәки яман яҡ менән алынған дан. □ Слава, репутация. *Яман ат алыу. Яҡшы ат алыу.* ■ *Атһыҙ, данһыҙ йәшәп булалыр ул, йәшәп ҡара бер көн икмәкһеҙ!* Х. Ғиләжев. ● *Һағынып барғандың*

*хакы оло, сакырып барғандың аты оло.* Мәҡәл.

**АТА I** [дөйөм төрки *ата*] (Р.: отец; И.: father; Т.: baba) *и.*

**1.** Балаһы булған ир кеше *(үҙ балаһына ҡарата).* □ Отец, родитель. *Ата йорто. Ата малы.* ■ *Күк ыласындың балаһы бауҙа үлә талпынып, якшы атаның балаһы шәһит үлә яу йөрөп.* С. Юлаев. ● *Ата һүҙен тотмаған, әсә һүҙе йоҡмаған.* Әйтем. *Атанан күргән ук юныр, инәнән күргән тун бесер.* Мәҡәл.

♦ **Аталарының малы уртаҡмы әллә** тынышмай йәшәгән кешеләргә ҡарата әйтелә. □ Чего не поделили *(о людях, ссорящихся из-за пустяка).* **Атаң башы!** әрләгәндә, орошҡанда әйтелә. □ *прост.* Употребляется при выражении упрёка, порицания. ■ *[Ағалары — Биктимергә:] Беҙ килмәһәк, мәңге йоҡлар инең әле, атаң башы!* Әкиәттән. **Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй** һис бер тәртип булмағанда әйтелә. □ Неразбериха. *букв.* Отец сына, мать дочери не знает. ■ *[Ямал:] Тыштан ғына колхоз инде, ә эсенән ҡырҡ ямау, илле сөй. Ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй.* М. Тажи. **Атаһын күргәндәй булыу** бик ныҡ шатланыу. □ Бурно радоваться. *букв.* Будто отца увидел. **Атаһын танытыу** әрләү *йәки* туҡмау. □ *соотв.* Показать, где раки зимуют. ■ *[Сәхип — Низамға:] Өтөк! Мин һинең атаңды танытайым әле, вон бынан сығып кит!* М. Тажи. **Буштың атаһы үлгән** *ниҙелер* буш бирергә теләмәгәндә әйтелә. □ Ничего не даётся даром. ■ *[Карыя — Рахмайға:] Буштың атаһы үлгән ул, ашаған хакыңа түләп кит!* К. Кинйәбулатова. **Ете атаһына етеү** кешене ата-бабаһын ҡушып әрләү. □ Разбирать по косточкам. *букв.* Дойти до седьмого колена. **Ҡырҡ ата балаһы** төрлө ерҙән йыйылған төрлө кеше. □ Разношёрстная компания; сборище. **Ата бер, әсә башҡа** аталаш. □ Единокровный. **Бер ата, бер әсә** бер туған. □ Родные *(о детях по отношению друг к другу).* **Әсә бер, ата башка** әсәләш. □ Единоутробные.

**2.** Ата-бабалар. □ Предки. ■ *Ата-баба ләғнәтен алма. Ун ете ата ҡәберенә барҙыҡ.*

**3.** *миф.* Ҡурсалаусы, ҡотҡарыусы, ярҙам итеүсе изге рух. □ Святой дух, спаситель, покровитель. *Айыу ата. Күк ата.*

**АТА II** (Р.: самец; И.: male; Т.: erkek) *с.*

**1.** Ҡайһы бер йән эйәһенең ир енеслеһе *(енес буйынса махсус атамаһы булмағанда).* □ Самец. *Ата айыу. Ата бесәй. Ата бүре. Ата дөйә. Ата ҡаҙ. Ата ҡуян. Ата суска.*

**2.** Ҡайһы бер үҫемлектәрҙең ир енеслеһе. □ Мужская особь *(у растений). Ата сәскә. Ата һырғанак. Ата арыш.*

**3.** Билдәле бер сифаты бик ныҡ көслө; бик, үтә. □ Очень *(выражает усилительное значение). Ата карак. Ата ялкауҙар.*

**АТА-БАБА** (Р.: предки; И.: forefathers; Т.: ata) *и. йыйн.*

Элекке оло быуындар. □ Предки, прародители. *Ата-баба йолаһы. Ата-бабанан ҡалған ғәҙәт.* ■ *Раушания аңланы: барыбер бушка йөрөмәне, бушка ҡайтмаған тыуған иленә. Ата-бабалар еренә баш эйеү ҙә даулалай, игелекле балаһын ер шулай ҡурсалай.* Р. Камал.

**АТА-ИНӘ** *и. йыйн. ҡар.* **ата-әсә.** ● *Атаинәң ҡәҙерен балалы булғас белерһең.* Мәҡәл.

**АТАЙ** (Р.: отец; И.: father; Т.: baba) *и.*

**1.** *ҡар.* **ата 1**. ● *Атайҙан йәш ҡалдым, аҡылдан буш ҡалдым.* Мәҡәл. *Атай — еҙнә, инәй — ҡаҙна.* Мәҡәл. *Атаһы аяк кейгәнсе, улы Мәскәүгә етә.* Йомаҡ. *Атаһы улын күтәргән, улы бүркен күтәргән.* Йомаҡ. *Атаһы аркыры ятыр, балалары буй ятыр.* Йомаҡ.

**2.** Кешенең үҙ атаһына өндәшеү һүҙе. □ Отец, папа *(употребляется как обращение).* ■ *Атай, миңә ат кәрәк, атыр өсөн ук кәрәк.* Әкиәттән.

**АТАЙҘАУЫС** *и. диал. ҡар.* **ҡыҙылтүш 1.**

**АТАЙСАЛ** (Р.: родина предков; И.: forefathers' homeland; Т.: atalar yeri) *и.*

**1.** Ата-бабалар ере, Ватан. □ Родина предков, Родина, отечество. ■ *Атайсалдың бөтә моң-зарҙарын үҙ йөрәге аша үткәргән.* А. Игебаев. *Беҙҙең атайсалыбыҙ Башҡортостан Рәсәйҙә иң тоторокло, тырыш, тыныс хеҙмәте менән билдәле төбәктәрҙән һанала.* «Киске Өфө», № 11, 2011.

**2.** *этн.* Бөрйән ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-бурзянцев.

**АТАЙ-ОЛАТАЙ** (Р.: предки; И.: ancestors; Т.: ata) *и. йыйн.*

Элекке оло быуындар. □ Предки, прародители. ■ *Атай-олатайҙарын, инәй-өләсәйҙәрен, туғандарын оноткан әҙәмдән ниндәйҙер изгелек, мәрхәмәтлек, миһырбанлык көтөүе кыйын.* М. Нәҙерғолов.

**АТАЙ-ӘСӘЙ** *и. йыйн. кар.* **ата-әсә.**

**АТАКА** [рус. < фр.] *и. кар.* **һөжүм.**

**АТАҠ I (атағы)** [боронғо төрки *аатағ* ‘дан; исем’] (Р.: прозвище; И.: nickname; Т.: lakap) *и.*

**1.** Кешегә тағылған исем; ҡушамат. □ Прозвище.

**2.** *Кемдер* тураһында таралған хәбәр; дан. □ Слава. *Атак сығыу.* ■ *Йәшәүҙән дә бөйөгөрәк нимә икән? — Якшы исем, якшы атак калдырыу.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**АТАҠ II** (Р.: о; же; ну; И.: indeed; Т.: o; ah) *ымл.*

Ғәжәпләнгәндә, аптырағанда әйтелә. □ Выражает удивление: о, же, ну. ■ *Атак, ни һөйләйһең, балакайым? Беҙ кешенән кәм торабыҙҙыр шул.* Т. Йәнәби.

**АТАҠ-АТАҠ** *ымл. кар.* **атаҡ II.** ■ *Атак-атак! Был бисәләрҙе ни эшләп сходка йыялар тағы?!* Б. Ишемғол.

**АТАҠАС** *и. кар.* **атас.**

**АТАҠЛЫ** (Р.: знаменитый; И.: famous; Т.: meşhur) *с.*

Илгә исеме танылған; данлы. □ Знаменитый, известный. *Атаклы ғалим. Атаклы йырсы.* ■ *[Ҡарт:] Мин үҙем дә йәш сағымда атаклы батырҙарҙан инем.* М. Кәрим.

**АТАҠЛЫ ҠОРБАН** (Р.: посвящённое *кому-то* жертвоприношение; И.: sort of ritual sacrifice; Т.: özel kurban sunma) *и. диал.*

*Кемгәлер* атап салынған ҡорбан. □ Посвящённое *кому-то* жертвоприношение.

**АТАЛАНДЫРЫЛЫУ (аталандырыл-)** *ҡ. төш. кар.* **аталандырыу**. *страд. от* **аталандырыу**.

**АТАЛАНДЫРЫУ (аталандыр-)** (Р.: оплодотворять; И.: fecundate; Т.: döllemek) *ҡ.*

Ата енес күҙәнәге менән ҡауыштырыу. □ Оплодотворять, осеменять. *Яһалма рәүештә аталандырыу.*

**АТАЛАНЫУ (аталан-)** [дөйөм төрки *ата*] (Р.: оплодотворяться; И.: fertilize; Т.: döllenmek) *ҡ.*

**1.** Ата енес күҙәнәге ҡабул итеү *(инә енескә карата).* □ Оплодотворяться. // Оплодотворение.

**2.** *диал. кар.* **аташланыу.**

**АТАЛАШ** (Р.: единокровный; И.: consanguineous; Т.: baba bir) *с.*

Ата бер, инә башҡа. □ Единокровный. *Аталаш апай. Аталаш кусты.*

**АТАЛҒЫ** [боронғо төрки *ата-* ‘бырауылау’] (Р.: скобель; И.: shaving knife; Т.: rende) *и.*

**1.** Киле, ялғаш кеүек нәмәнең эсен юна торған йомро йышҡы. □ Скобель, струг. *Аталғы бысағы. Ҡасау аталғы.*

**2.** *диал. кар.* **бағау**.

**АТАЛЫ** (Р.: имеющий отца; И.: having a father; Т.: babalı) *с.*

**1.** Атаһы булған, атаһы бар. □ Имеющий отца. ● *Аталы бала аркалы.* Мәҡәл.

**2.** Ата енесенә ҡауышҡан; аталанған. □ Оплодотворённый, осеменённый. *Аталы йомортка.*

**АТАЛЫ-ИНӘЛЕ** (Р.: имеющий родителей; И.: having parents; Т.: anne-babalı) *с.*

**1.** Атаһы ла, әсәһе лә булған. □ Имеющий родителей. *Аталы-инәле бала.*

**2.** Бер пар, парлы *(кош-корт тураһында).* □ Самец и самка, самец с самкой. *Аталы-инәле каҙ.*

**АТАЛЫҠ (аталығы)** [дөйөм төрки *ата*] (Р.: отцовство; И.: paternity; Т.: babalık) *и.*

**1.** Ата булыу, атай булғанлыҡ. □ Отцовство. *Аталык бурысы. Аталык хисе. Аталык хәстәре күреү.*

**2.** Ҡайһы бер ҡош-ҡорт һәм үҫемлектәрҙең ата енеслеһе. □ Самец, мужская особь *(у птиц, растений). Ҡаҙҙың аталығы. Өйрәктең аталығы.*

**АТАЛЫҠ ОРЛОҒО** (Р.: сперматозоид; И.: spermatozoon; Т.: spermatozoit) *и. мед.*

Өлгөргән ир енес күҙәнәге; мәней. □ Сперматозоид. *Аталыҡ орлоғо бүленеү.*

**АТАЛЫ-ҠЫҘЛЫ** (Р.: отец и дочь; И.: father and daughter; Т.: baba ve kız) *р.*

Атаһы менән ҡыҙы бергә. □ Отец и дочь, отец с дочерью. ■ *Улар аталы-ҡыҙлы бөтә яҙ, йәй, көҙ буйына эшләне.* Һ. Дәүләтшина.

**АТАЛЫУ (атал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **атау I**. *страд. от* **атау I**.

**АТАЛЫ-УЛЛЫ** (Р.: отец и сын; И.: father and son; Т.: baba ve oğul) *р.*

Атаһы менән улы бергә. □ Отец и сын, отец с сыном. *Аталы-уллы һөнәр итеү.*

**АТАМА I** (Р.: название; И.: name; Т.: isim) *и.*

*Нимәгәлер* бәйләп ҡушҡан исем. □ Название, имя. *Ер-һыу атамалары. Халыҡ атамаһы.* ■ *Әлеге көндә .. йәшәүселәр был китаптан үҙҙәренең зат-ырыуын, уның атамаһы тарихын, яҡын туған-тыумасаһының исемдәрен .. асыҡлай ала.* М. Нәҙерғолов.

**АТАМА II** (Р.: именной; И.: personal; Т.: ada yazılı) *с.*

Бер кешенең үҙенә исемләнгән; исемле. □ Именной. *Атама беләҙек. Атама ҡорал.* ■ *[Таҙ — ханға:] Ханым, ҡулыңдағы атама балдағыңды бир.* «Мәҡтымһылыу».

**АТАМА ИСЕМ** (Р.: прозвище; И.: nickname; Т.: lakap) *и.*

Тағылған исем, ҡушамат. □ Прозвище.

**АТАМА ҺӨЙЛӘМ** (Р.: назывное предложение; И.: nominative sentence; Т.: öznel cümle) *и. лингв.*

Баш киҫәге төп килештәге исем менән белдерелгән номинатив һөйләмдәрҙең бер төрө. Унда эйә һәм уға эйәреп килгән һөйләм киҫәктәре генә була. □ Назывное предложение.

**АТАМАН** [рус. < укр. *отаман* ‘башлыҡ’] (Р.: атаман; И.: ataman; Т.: ataman) *и.*

Атлы казактарҙа ғәскәр һәм ауыл башлығы. □ Атаман. *Атаман вазифаһы. Атаман булыу.*

**АТАМ ЗАМАНЫ** (Р.: давным-давно; И.: in the days of yore; Т.: çoktan) *и.*

Әллә ҡасан үткән ваҡыт. □ Давным-давно, в давние времена. *Атам заманындағы иҫке китаптар.*

**АТАН** [боронғо төрки *атан, актан*] (Р.: племенной верблюд; И.: pedigree camel; Т.: safkan deve) *и.*

**1.** *зоол.* Тоҡом өсөн тотолған айғыр дөйә. □ Племенной верблюд. ■ *[Мәҡтымһылыу] йылҡы өйөрөнә бара — айғырҙы сәнсеп йыға, дөйә көтөүенә бара — атанды сәнсеп йыға, ҡуй көтөүенә бара — ҡусҡарҙы сәнсеп йыға.* «Мәҡтымһылыу».

**2.** *диал.* Дөйәнең тәүге балаһы. □ Верблюжонок, родившийся первым.

**АТАН ҮГЕҘ** (Р.: племенной бык; И.: pedigree ox; Т.: kabile boğası ) *и. зоол.*

Тоҡом үгеҙе. □ Племенной бык.

**АТА-ОЛАТАЙ** *и. йыйн. ҡар.* **ата-баба.**

**АТ-АРБА** (Р.: лошадь, повозка и сбруя; И.: horse, cart and all; Т.: at ve arabası) *и. йыйн.*

Ат менән арба һәм егеү ҡорамалдары. □ Лошадь, повозка и сбруя. *Аты-арбаһы менән һау ғына ҡайтһын инде.*

**АТАРЪЯН** (Р.: дыбка; И.: predatory bush cricket; Т.: saga sübyancı) *и. зоол.*

Эре ялан сиңерткәһе; айыу сиңерткәһе. □ Дыбка (лат. *Saga pedo*).

**АТАС** (Р.: похожий на отца; И.: the (very) image of his father; Т.: babasına benzer) *с.*

Төҫө, холоҡ-ҡылығы менән атаһынаныҡ оҡшаш *(балаға ҡарата).* □ Похожий на отца, весь в отца. ■ *[Шәрифә әбей — Тимербулатҡа:] Атас, был тиклем үҙ һүҙле булырһың икән.* Һ. Дәүләтшина.

**АТА ТАШ** (Р.: камень для вызывания дождя; И.: sort of ritual stone; Т.: ritüel taş) *и. миф.*

**1.** Ышаныуҙар буйынса, ямғыр саҡырыу өсөн ҡулланылған таш. ◻ По поверьям, камень для вызывания дождя. *досл.* Отец-камень. ■ *Яланда ике ҙур ямғыр ташы ята. Халыҡ уларҙың береһен инә таш, икенсеһен ата таш ти.* Башҡорт мифологияһынан.

**2.** Күҙегеүҙән, эс ауырыуынан ир баланы имләй торған таш. ◻ Камень, с помощью которого лечат от сглаза и т. д.

**АТА ТИМРӘҮ** (Р.: разновидность лишая; И.: herpes species; Т.: liken çeşidi) *и. диал.*

Тимрәүҙең бер төрө. ◻ Разновидность лишая.

**АТА ТӨЙӨНӨ** *и. диал. ҡар.* **күмәгәй.**

**АТАТЫУ (атат-)** *к. йөкм. ҡар.* **атау I, 1**. *понуд. от* **атау I, 1**.

**АТАУ I (ата-)** [дөйөм төрки *аат*] (Р.: называть; И.: name; Т.: ad koymak) *к.*

**1.** Кешегә йәки берәй нәмәгә исем ҡушыу; исемләү. ◻ Называть, дать имя, нарекать, именовать. // Называние, наречение, именование. *Исем атау.*

**2.** Кешенең йәки хәл-ваҡиғаның төп сифатын билдәләп әйтеү. ◻ Называть, нарекать. ■ *Ҡәмәр ҡортҡаны донъяла беренсе яуыз тип атаһаң да бер нәмә булмаҫ.* Т. Йәнәби.

**3.** Кешене йәки берәй нәмәне исеме менән әйтеү. ◻ Называть, наименовать. ■ *Фатима берәм-берәм нәмәләрҙе атап тора, ә Яҡуп яҙа [бара].* Б. Бикбай.

**4.** Берәй нәмәне *кемдеңдер* кеше исеменә алдан әйтеп тәғәйенләү; инселәү. ◻ Предназначать *кому-л. Атап биреү. Атап ҡуйыу.* ■ *Ҡотлогилденең әсәһе килгәндә атап әйткән юрған, яҫтыҡ һәм кейемдәрен — барыһын да килтергәйне.* Ж. Кейекбаев.

**5.** Берәй эште *кемгәлер* арнау. ◻ Посвящать *кому-л.* // Посвящение. *Атап йыр сығарыу.* ■ *Гөл үҫтергән әсәй-апайҙарға атап яҙҙым ошо йырҙы мин.* Ғ. Ғүмәр.

**АТАУ II** [боронғо ҡыпсаҡ *атау* ‘дельта’] (Р.: остров; И.: isle; Т.: ada) *и. диал.*

**1.** Утрау. ◻ Остров.

**2.** Аҡлан. ◻ Поляна.

**АТАУЛЫ** *с. диал. ҡар.* **атаҡлы.**

**АТА ҺАҠАЛ** (Р.: борода под нижней губой; И.: beard under the lower lip; Т.: alt dudağın altındaki sakal) *и.*

Ирен аҫтындағы соҡорға үҫкән өйкөм һаҡал. ◻ Борода под нижней губой.

**АТА ҺӨЙӘГЕ** *и. диал. ҡар.* **күмәгәй.**

**АТАҺЫ** (Р.: употребляется при обращении к мужу; И.: word used while addressing one’s husband; Т.: Babası!) *өнд.*

Ҡатындың үҙ иренә өндәшеү һүҙе. ◻ Отец *(употребляется при обращении к мужу).* ■ *Ҡара, ҡара, атаһы! Ҡара ниндәй һикерә.* Ғ. Амантай.

**АТАҺЫНЫҢ БАЛАҺЫ** (Р.: весь в отца; И.: the (very) image of his father; Т.: babasına benzer) *и.*

Атаһына эш-ҡылығы менән оҡшаған балаға ҡарата әйтелә. ◻ Весь в отца.

**АТАШ** (Р.: выпуклый; И.: protruding; Т.: çıkık) *с.*

**1.** Аҡрайып торған; аҡыш. ◻ Выпуклый, выпученный *(о глазах).* ■ *Күҙең-башың ҡыйшайып, аташ күҙең әйләнеп, кемгә тейеренде белмәйһең, корсаңғы!* Ш. Шәһәр.

**2.** Кешенең күҙенә инеп килеүсән һөмһөҙ кешене әрләп әйтелә. ◻ Нахальный. ■ *Бөгөн Яҡуп эшкә сыкманы, — тине [ҡарт әбейгә]. — Әйтеүенә ҡарағанда, анау аташтар тирәһенә китмәгәйе.* В. Исхаҡов.

**АТА ШАЙТАН** (Р.: шалун; И.: mischievous person; Т.: yaramaz) *и.*

Шаталаҡ. ◻ Шалун, озорник.

**АТАШЛАНЫУ (аташлан-)** (Р.: нахально лезть *куда-л.*; И.: push one's way brazenly; Т.: küstahça tırmanmak) *к.*

**1.** Аҡ-ҡараны күрмәй, һөмһөҙләнеп, тапарҙай булып килеү. ◻ Нахально лезть *куда-л. Аташланып йөрөү.*

**2.** *диал. ҡар.* **ашатланыу.**

**АТАШЛАУ (аташла-)** *к. диал. ҡар.* **ашатлау.**

**АТАШЫУ (аташ-)** *ҡ. диал. кар.* **уҙаҡлашыу.**

**АТА-ӘСӘ** (Р.: родители; И.: parents; Т.: anne-baba) *и. йыйн.*

Ата менән әсә *(үҙ балаларына ҡарата).* □ Родители, отец и мать. *Ата-әсәле бала. Ата-әсәләр йыйылышы. Ата-әсәләр комитеты.* ■ *Детдомда улар [балалар] ата-әсә йылыһын күрмәй, шуға донъяға, кешеләргә үсле була. Быға үҙҙәре түгел, ә йәнәштәге кешеләр, күршеләр ғәйепле.* Р. Камал. *Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ, атаң-әсәң килгән. Һыуыҡ ағай, кит, кит, атаң-әсәң үлгән.* Халыҡ ижадынан. ● *Ата-әсә алғышы утҡа-һыуға батырмаç.* Әйтем. *Ата-әсәңә ни ҡылһаң, үҙең шуны күрерһең.* Мәҡәл.

**АТБАШ БАЛЫҠ** (Р.: морской конёк; И.: hippocampus; Т.: denizatı) *и. зоол.*

Башы ат башына оҡшаңҡыраған ваҡ диңгеҙ балығы. □ Морской конёк (лат. *Hippocampus*).

**АТБАШСЫ** *и. диал. кар.* **кейәү егете.**

**АТ БАШЫ** (Р.: конский череп; И.: ritual horse cranium; Т.: atın başı) *и.*

**1.** Ат малының башы. □ Конская голова. ■ *Улар [дейеү балалары] атышып уйнаған арала Урал эргәләге бер ҡарама ботағына бау менән ат башы хәтле бер таш аçып ҡуя ла үҙе, ҡасып-боçоп ҡына, дейеү йәшәгән мәмерйә алдына үтеп китә.* Әкиәттән.

**2.** *ҡусм.* Ат. □ Лошадь. ■ *Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы.* Халыҡ йырынан.

**3.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, ишек алдын, малды, ҡорттарҙы төрлө ауырыуҙарҙан, насар күҙҙән, күҙ тейеүҙән һаҡлай торған аттың баш һөйәге. □ Конский череп *(вывешивался на изгороди, возле домов, сараев, пасек для оберегания скота, пчёл, двора от нечистых сил и болезней).*

♦ **Ат башындай** 1) бик ҙур. □ С конскую голову, очень большой *(говорится при сравнении с другими маленькими предметами).* ■ *Ирмен генә тигән ир-егеттең ат башындай булыр йөрәге.* Халыҡ йырынан. *Ә төн, унан да уҙҙырырға теләгәндәй, ишек күгәндәрен асыулы шығырлата, ат башындай йоҙаҡтарҙы шатыр-шотор элеп ҡуя.* Б. Рафиҡов; 2) таш, алтын кеүек нәмәләрҙең ҙурлығын, дәүмәлен күрһәткәндә ҡулланылған сағыштырыу. □ Сравнение, используемое для подчёркивания величины камня, золота и т. д. ■ *Олатайҙарҙың һөйләүҙәренә ҡарағанда, көндәрҙең береһендә бик ҙур бер киçәк самородок алтын табыла. Уның ҙурлығы ат башындай булған, имеш, тиҙәр.* Легенданан. *Әгәр ҙә 80-се йылдарҙа йәшәгән кешеләрҙе бөгөнгө башҡорт өйөнә индерһәң, улар: «Былар ҡайһылай бай йәшәй ул. Былар берәр матди сығанаҡ йә ат башындай алтын таптымы икән?» — тип әйтер ине.* «Киске Өфө», 30 апрель 2010. *Бай көн дә тау итәгендәге көс еткеһеҙ, ат башындай ташты бер урындан икенсе урынға шылдыра торған булған.* Әкиәттән. **Ат башындай алтын табыу** *нимәгәлер* ныҡ ҡыуаныу. □ Радоваться *чему-л.* ■ *Емле ергә юлыкһаҡ, ат башындай алтын тапҡандай, ҡыуанғанбыҙ.* Т. Йосопов. *Ат башындай алтын тапҡандай ҡыуаныс кисерҙем, тиһәм яңылыш булмаç.* «Шоңҡар», № 12, 2010.

**АТ БАШЫНАН АЛЫУ (ат башынан ал-)** (Р.: принять поводок лошади; И.: take the horse by the bridle; Т.: atlı misafirleri karşılamak) *ҡ.*

Ҡунаҡҡа ҡаршы сығып, атын етәкләү. □ При встрече гостя взять поводок его лошади. ■ *Тора бейҙең бер ҡоло шул саҡ сығып тирмәнән, ҡунаҡ итеп олпатлап, ат башынан алған, ти.* «Иҙеүкәй менән Мораҙым».

**АТ БАШЫНДА ЙӨРӨҮ (ат башында йөрө-)** (Р.: водить лошадь; И.: to drive a horse; Т.: at kullanmak) *ҡ.*

Ҡыр эшендә ат йөрөтөү. □ Водить лошадь *(на полевых работах).*

**АТ БОРСАҒЫ** (Р.: бобы конские; И.: horse bean; Т.: bakla) *и. бот.*

Оҙонса ҡыяҡ япраҡлы, аҡ сыбар сәскәле, оҙонсараҡ төрлө төçтәге эре орлоҡло, бейек һабаҡлы үçемлек; ҡара борсаҡ, мал борсағы. □ Бобы конские, обыкновенные

(лат. *Faba vulgaris*). *Ат борсағының сәскәһе күбәләккә оҡшаған. Ат борсағының бейеклеге 20–150 см.*

**АТ БӘЙЛӘГЕС** (Р.: коновязь; И.: tethering post; Т.: atları bağlama) *и.*

**1.** Ат бәйләр өсөн ике осон бағана башына һалған буй ағас; торғалыҡ. □ Коновязь.

**2.** *миф.* Изге урын, донъя үҙәге. □ Священное место, центр мироздания.

**АТ ДАҒАҺЫ** (Р.: подкова; И.: (horse) shoe; Т.: nal) *и.*

**1.** Тайыуҙан һәм зарарланыуҙан һаҡлау өсөн ат тояғына ҡағыла торған тимер. □ Подкова. ■ *Тауышты ишетепме, әллә үтеп барышлаймы, ҡуш эйәкле, сиртһәң ҡаны һарҡып сығырға торған, колаҡтарына ат дағаһындай алтын алкалар элгән, муйынындағы эре мәрйенле күгелйем гәүһәр муйынсағы ҡорһағына тиклем һалынып төшкән хужабикә килеп сыҡты.* Ғ. Садиҡов.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, аттан төшөп ҡалған дағаны тупһаға ҡаҡһаң йәки ишек башына элһәң, өйгә тел-теш, ен-шайтан инмәй икән. □ По поверьям, выпавшая подкова оберегает от сплетен, наговоров, нечистых сил. ■ *Өй ишегенең уң яҡ башына ат дағаһы эленгән, ул ырыҫ, бәрәкәт билдәһе.* И. Аҡъюлов.

**АТЕИЗМ** [рус. < гр. *а* ‘юҡлыҡ киҫәксәһе’ + *Theos* ‘Алла’] (Р.: атеизм; И.: atheism; Т.: ateizm) *и.*

Алланы, диндe кире ҡаҡҡан ҡараш; аллаһыҙлыҡ. □ Атеизм. *Атеизм тыңҙәрәге.*

**АТЕИСТ** [рус.] (Р.: атеист; И.: atheist; Т.: ateist) *и.*

Динһеҙ, аллаһыҙ кеше. □ Атеист. *Атеист итеп тәрбиәләү.*

**АТЕИСТИК** (Р.: атеистический; И.: atheistic; Т.: ateistik ) *с.*

Атеизм йүнәлешендәге. □ Атеистический. *Атеистик ҡараш. Атеистик тәрбиә. Атеистик эш.*

**АТЕЛЬЕ** [рус. < фр. *atelier*] (Р.: ателье; И.: workshop; Т.: atölye) *и.*

Кейем, аяҡ кейеме һ. б. тектерә, көнкүреш нәмәләрен йүнәттерә торған оҫтахана. □ Ателье. *Тегеү ательеһы. Телевизион ателье.*

**АТЕРОСКЛЕРОЗ** [рус. < лат. *atherosclerosis*] (Р.: атеросклероз; И.: atherosclerosis; Т.: ateroskleroz) *и. мед.*

Артерия көбөнөң эске яғында липоид матдәләр йыйылыуға һәм тоташтырғыс матдәләр үҫеүгә, ҡалынайып ҡатыуға бәйле оҙаҡҡа һуҙылған ауырыу. □ Атеросклероз.

**АТ-ЗАТ** *и. ҡар.* **нәҫел-нәсәп.**

**АТЙЕТӘР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡыпсаҡ, табын, ҡыбау ырыуҙарының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-кыпчаков, табынцев, кубовцев.

**АТ ЙӨРӨТӨҮ (ат йөрөт-)** (Р.: остужать коня; И.: cool a horse down after gallopping; Т.: atı soğutmak) *ҡ.*

Шәп килеп тирләгән атты ҡапыл туҡтатмай алып йөрөү. □ Остужать коня после быстрой езды. ■ *Йәштәр .. урам буйына ат йөрөтөргә китте.* Ғ. Дәүләтшин.

**АТ ЙҮГЕРТЕҮ (ат йүгерт-)** (Р.: проводить; И.: spend; Т.: geçirmek) *ҡ. диал.*

Егеттәрҙең ҡыҙҙарҙы оҙатыуы. □ Проводить девушку домой.

**АТ ЙЫУАҺЫ** *и. бот. ҡар.* **оҫҡон.**

**АТ КЕШӘНЛӘҮ (ат кешәнлә-)** (Р.: стреножить коня; И.: hobble; Т.: köstekleme) *ҡ.*

Аттың алғы ике аяғын артҡы бер аяғына ҡушып бәйләү. □ Стреножить коня.

**АТ КӨСӨ** (Р.: лошадиная сила; И.: horse power; Т.: beygir gücü) *и. физ.*

Ҡеүәт үлсәй торған, бер системаға ла инмәгән берәмек. □ Лошадиная сила. ■ *Еңел машина текә түмәләстәрҙе «ыһ» та итмәй артыла. Шофёрҙан уның нисә ат көсөнә эйә икәнлеген белешәм.* И. Аҡъюлов.

**АТҠАҘАНҒАН** (Р.: заслуженный; И.: merited; Т.: hakedelmiş) *с.*

Хеҙмәте менән дан алған. □ Заслуженный. *Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы. Атҡаҙанған фән эшмәкәре. Атҡаҙанған табип. Атҡаҙанған уҡытыусы.*

**АТ ҠАРАҒЫ** (Р.: конокрад; И.: abactor; Т.: at hırsızı) *и.*

Аттарҙы урлауҙы кәсеп итеп алған кеше. □ Конокрад. ■ *[Алтынбай] малай сағында бер ат ҡарағының арҡаһын шеш тимер менән яндырғандарын күргәне иҫенә төшөп, тәне әҫеле-һыуыҡлы булып китте.* З. Ураҡсин.

**АТ ҠАРАУСЫ** (Р.: конюх; И.: groom; Т.: seyis) *и.*

Аттарҙы ҡараған кеше. □ Конюх. ■ *Ат ҡараусыға мал йәнлелек хас.* И. Аҡъюлов.

**АТҠАРЫЛЫУ (атҡарыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **атҡарыу.** *страд. от* **атҡарыу**.

**АТҠАРЫУ (атҡар-)** (Р.: выполнять; И.: cope; Т.: görevi yapmak) *ҡ.*

**1.** Эш, бурысты еренә еткереү; үтәү, башҡарыу. □ Выполнять, исполнять обязанности, справляться. // Выполнение, исполнение. ■ *Хәрби бурысты атҡарыуҙа оҫта етәкселек итеүе өсөн Таһир Тайып улы Күсимовка Советтар Союзы Геройы тигән маҡтаулы исем бирелде.* К. Мәргән.

**2.** Ойоштороу, уҙғарыу. □ Проводить, справлять, организовать. // Проведение, организация. *Туй атҡарыу. Мәжлес атҡарыу. Һабантуй атҡарыу.*

**3.** Билдәле ваҡытты нисектер үткәреү, йәшәп уҙғарыу. □ Проводить, осуществлять. // Проведение, осуществление. *Көн атҡарыу.* ■ *Берәү шуны гел-гел тылҡып торҙо, шуны һөйләп ғүмер атҡарҙы.* С. Әлибаев.

**4.** Тәғәйенләнгән ергә ебәреү; оҙатыу. □ Сбывать. *Баҙар уңды, һыйырҙы атҡарҙым.* ■ *[Насир:] Айғырҙы ҡаҙаҡ яғына-фәлән атҡарманылармы икән?* З. Ураҡсин.

**АТҠАРЫШЫУ (атҡарыш-)** *ҡ. урт. ярҙамл. ҡар.* **атҡарыу 1, 2, 4**. *взаимн. от* **атҡарыу 1, 2, 4**.

**АТҠАТАШ** *и. диал. ҡар.* **бишташ**.

**АТҠАЯҠ (атҡаяғы)** *и. диал. ҡар.* **атҡый**.

**АТ ҠОЙРОҒОН ҠЫРҠЫУ (ат ҡойроғон ҡырҡ-)** (Р.: обычай тайной стрижки хвоста лошади; И.: ritual horse rite; Т.: atın kuyruğunu kesmek âdeti) *ҡ. этн.*

Боронғо йола буйынса, туй ваҡытында йәшерен рәүештә ҡоҙа атының ҡойроғон ҡырҡып, ҡыҙҙың намыҫы (ғиффәте) юҡлығын, саф түгеллеген күрһәтеү өсөн эшләнгән йола. □ Обычай тайной стрижки хвоста лошади свата, чтобы указать на отсутствие целомудрия невесты.

**АТҠОЛАҠ (атҡолағы)** (Р.: щавель конский; И.: horse sorrel; Т.: kuzukulağı) *и. бот.*

Оҙонсараҡ киң япраҡлы, оҙон яланғас һабаҡлы, көрәнерәк суҡ орлоҡло ҡыр үләне. □ Щавель конский (лат. *Rumex confertus*). *Атҡолаҡ йыйыу.* ■ *Өләсәйем, бешереп иҙгән атҡолаҡ боламығына бер ус мысай оно һибеп, икебеҙгә ике көлсә ҡатырып бирҙе.* З. Ураҡсин. *Бында [Торатауҙа] дегәнәк, сәнскәк, атҡолаҡ кеүек башҡа төр үлән-үҫемлек осрай.* Ә. Әминев.

**АТ ҠУҘҒАЛАҒЫ** *и. бот. ҡар.* **атҡолаҡ.**

**АТ ҠУНЫУ (ат ҡун-)** (Р.: пасти лошадей ночью; И.: graze horses at night; Т.: atı gece otlatmak) *ҡ.*

Төнгөлөккә ҡалып ат көтөү. □ Пасти лошадей ночью. ■ *Ул [Тимеркәй] эш араһында ла, кис менән туғайға ат ҡуна барғанда ла үҙе тураһында уйлай.* Д. Юлтый.

**АТ ҠУШАҠЛАУ (ат ҡушаҡла-)** (Р.: взять запасную лошадь; И.: take a spare horse; Т.: yedek atı almak) *ҡ.*

Һыбай йөрөгәндә алмаш өсөн янға ат етәкләп алыу. □ Взять запасную лошадь. ■ *Ат ҡушаҡлап сабырҙар фарман алып килгәндә.* М. Буранғолов.

**АТ ҠУШСЫ** (Р.: проводник; И.: guide; Т.: iletken) *и. тар.*

Юл йөрөгәндә атты ҡарап, бергә оҙатып йөрөгән кеше. □ Проводник *(в пути)*.

**АТҠЫ** *и. диал. ҡар.* **атҡый.**

**АТҠЫЙ** (Р.: вид стрелы; И.: kind of arrow; Т.: ok çeşiti) *и.*

**1.** Таяҡ осонан һелтәп осора торған туҙ ҡанатлы ҡыҫҡа уҡ. □ Вид стрелы с берестяными крылышками *(закрепляют на конце палки и мечут махом).* ■ *Кинйә лә, туҙ ҡанатлы атҡый уғын янға һалып, уның кеҙеһен керешкә ҡуйҙы.* Ғ. Ибраһимов.

**2.** *диал.* Ат ҡуҙғалағының орлоғо. □ Семена конского щавеля.

**АТ ҠЫЛЫ** (Р.: конский волос; И.: horsehair; Т.: at kılı) *и.*

Аттың тиреһендә сыҡҡан еп кеүек үҫенте. □ Конский волос.

**АТҠЫРҒЫС** (Р.: скребница; И.: horsecomb; Т.: kaşağı) *и.*

Атты ҡырып таҙартыу өсөн ҡулланылған тешле ҡорал. □ Скребница. *Атҡырғыс менән таҙартыу.*

**АТҠЫРСАҠ (атҡырсағы)** *и. диал. ҡар.* **атҡый.**

**АТҠЫС I** (Р.: стрелок; И.: rifleman; Т.: atıcı) *и.*

Бик оҫта атҡан кеше. □ Стрелок, снайпер. ■ *[Пулемётсы:] Ҡара, ниндәй атҡыстар беҙҙең прапорҙар! — тигән киәфәт менән башын сайҡай ине.* А. Таһиров.

**АТҠЫС II** *и. ҡар.* **атҡый.**

**АТҠЫС ЕМЕШ** (Р.: плод метательный; И.: shooting fruit; Т.: atma meyve) *и. бот.*

Өлгөргән емеше атылып, сәселеп китә торған үҫемлектәр (мәҫәлән, *акация*). □ Плод метательный.

**АТЛАҒАН КӨН** (Р.: вторник; И.: Tuesday; Т.: salı) *и. диал.*

Аҙнаның икенсе көнө. □ Вторник.

**АТЛАҒАН МАЙ** *и. диал. ҡар.* **аҡ май.**

**АТЛАМ** (Р.: шаг; И.: step; Т.: adım) *и.*

**1.** Аяҡ атлаған хәрәкәт; аяҡ баҫымы, аҙым. □ Шаг. ■ *Атаһы, әсәһе, ағалары [Фатиманы] аҫтыртын ғына күҙәтһә, һеңлеләре иһә бер атлам да ҡалманы, ҡайҙа барһа ла артынан эйәрер булдылар.* Ж. Кейекбаев.

**2.** Атлағандағы ике аяҡ араһы ер; аҙым. □ Расстояние в один шаг. ■ *Ул саҡта Билал отряды сәселеп тау башына менеп еткән, казактар менән уларҙың араһы күп булһа ике-өс йөҙ атлам ғына ҡалғайны.* А. Таһиров.

**АТЛАМА I** (Р.: скоба; И.: cramp; Т.: dirsek) *и.*

**1.** Аша һалып ике осо ҡағыла торған кәкре тимер, беркеткес *(ағас нәмәләрҙе нығытып тоташтырыу өсөн).* □ Скоба. *Атлама ҡағыу. Атлама һалыу.*

**2.** Кәмәнең һыҙлыҡ сүбәге өҫтөнән ҡағылған буй ҡалай. □ Обод, жестяная полоска *(набивается на законопаченные пазы лодки).*

**АТЛАМА II** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **асамай I.**

**2.** Башағас. □ Слега.

**АТЛАМЛЫ** (Р.: ходкий; И.: fast; Т.: hızlı) *с.*

Аҙымы ырамлы, аҙымлы, йөрөшлө. □ Ходкий. *Атламлы ат. Атламлы дөйә.*

**АТЛАНДЫРЫУ (атландыр-)** (Р.: подсаживать; И.: help to climb; Т.: atlanmak) *ҡ.*

**1.** Һыңар аяғын аша һалдырып ултыртыу, мендереү. □ Подсаживать (например, *на лошадь*). *Атҡа атландырыу.*

**2.** *күсм.* Үҙең эшләмәй *кемдеңдер, нимәнеңдер* иҫәбенә йәшәү; еңеп алыу, буйһондороу. □ Сажать, посадить на шею *кого-л.*

♦ **Ағас атҡа атландырыу** бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. □ Обмануть, провести. *досл.* Подсадить на деревянную лошадь.

**АТЛАНЫУ (атлан-)** [дөйөм төрки *ат*] (Р.: садиться верхом; И.: mount; Т.: atlanmak) *ҡ.*

**1.** Һыңар аяҡты аша һалып ултырыу. □ Садиться, свесив ноги. *Бүрәнәгә атланыу.* ■ *Хисбулла бүкәнгә атланып ултырып алған да, бик тырышып бысаҡ ҡайрай.* З. Биишева.

**2.** Менге малдың өҫтөнә ултырыу; менеү. □ Садиться верхом, оседлать. ■ *Дошмандан илен ҡурсыған, эйәрләп атҡа атланған, ажғырып яуға ташланған — илдең батыры шул булыр, илдең күрке шул булыр.* С. Юлаев.

♦ **Елкәгә атланыу** еңеп алыу, буйһондороу. □ Сесть на шею.

**АТЛАС I** [ғәр. اطلس ‘шыма киндер’] (Р.: атлас; И.: satin; Т.: atlas) *и.*

Уң яғы ялтырап торған ебәк туҡыма. □ Атлас. // Атласный. *Атлас елән. Атлас*

*күлдәк. Атлас юрған.* ■ *Таңһылыу сиккән атласын стенаға элеп ҡуйҙы.* Ғ. Ғүмәр.

**АТЛАС II** [рус. < нем. *Atlas* < гр. *Atlas* (*Atlantos*) ‘яңғыҙлыҡ исем’] (Р.: Атлас; И.: atlas; Т.: atlas) *и.*

**1.** Географик карталар йыйынтығы. □ Атлас. *Донъя атласы. Рәсәй атласы.*

**2.** Картаға төшөрөлгән төрлө мәғлүмәттәр йыйынтығы. □ Атлас. *Диалектологик атлас. Тимер юлдар атласы. Йондоҙҙар атласы.*

**АТЛАТЫУ (атлат-)** (Р.: идти шагом; И.: walk; Т.: yürütmek) *ҡ.*

**1.** *йөкм. ҡар.* **атлау.** *понуд. от* **атлау**.

**2.** Юрттырмай, аҙымлатып йөрөтөү. □ Идти шагом. ■ *Аттарҙы атлатып ҡына ауылға йүнәләбеҙ.* Р. Низамов.

**АТЛАУ (атла-)** [боронғо төрки *аат-*] (Р.: шагать; И.: walk; Т.: yürümek) *ҡ.*

**1.** Аҙымлап хәрәкәт итеү. □ Шагать, ступать, идти шагом. *Шәп атлау. Әкрен атлау.* ■ *Сәйҙел дә шул, Зәйнәбен оҙатҡас, ҡалаға атланы яй ғына.* Ғ. Сәләм.

**2.** *күсм.* Эш, тормош юлынан хәрәкәт итеү; барыу. □ Двигаться, направляться *(в работе, жизни). Заман менән бергә атлау. Тормош алға атлай. Бөгөн ижади коллектив киләсәккә ышаныслы аҙымдар менән атлай.*

♦ **Атлаған һайын** туҡтауһыҙ, гел генә, аҙым һайын. □ На каждом шагу, постоянно.

**АТЛЕТ** [рус. < гр. *athletes*] (Р.: атлет; И.: athlete; Т.: atlet) *и.*

Ҙур көс талап итә торған күнегеүҙәр менән шөғөлләнгән спортсы йәки цирк артисы. □ Атлет.

**АТЛЕТИКА** [рус. < гр. *athletikos* < *athlesis* ‘көрәш’] (Р.: атлетика; И.: athletics; Т.: atletizm) *и.*

Көс, сыҙамлылыҡ, етеҙлек талап иткән күнекмәләр йыйылмаһы. □ Атлетика. *Ауыр атлетика. Еңел атлетика.*

**АТЛЫ I** (Р.: имеющий лошадь; И.: possessing a horse; Т.: atlı) *с.*

**1.** Аты булған, ат тотҡан. □ Имеющий лошадь. *Атлы кеше.*

**2.** Ат менән йөрөгән; һыбайлы. □ Конный, верховой, кавалерийский. *Атлы ғәскәр. Атлы дивизия. Атлы милиция.* ■ *Инде сыҡты атлылар, унда-бында саптылар.* Ш. Бабич. *Башҡорт атлыларынан бер дивизия төҙөргә.* Р. Өмөтбаев.

♦ **Атлы килеп, йәйәү ҡайтыу** буш ҡул менән ҡайтыу. □ Вернуться ни с чем, вернуться с пустыми руками.

**АТЛЫ II** (Р.: по имени; И.: named; Т.: isimli) *с.*

Исемле, ҡушаматлы. □ По имени, по прозвищу, по кличке. *Был Бәхтиәр атлы егет.*

**АТЛЫҒЫУ (атлыҡ-)** [төрки *ат-ыл-* < *атыл-ыҡ-у*] (Р.: стремительно бить струей; И.: gush; Т.: hızlı akmak) *ҡ.*

**1.** *Ниҙеңдер* эсенән тышҡа бәреү; атылыу. □ Стремительно бить, течь струей. *Крандан һыу атлығып аға.* ■ *Ике бөртөк йәшем күҙҙәремдән сыҡһа атлығып, береһе уның һине һөйөү булыр, береһе булыр Еңеү шатлығы.* Р. Ниғмәти.

**2.** Ҙур тиҙлек менән алға ынтылыу. □ Ринуться, устремиться. ■ *Берәү алға сыҡты атлығып. Был ҡаһарман — ғәскәр башлығы.* М. Кәрим.

**3.** *күсм.* Ҙур теләк менән ярһыу. □ Рваться, стремиться. // Рвение, стремление. *Өйгә ҡайтырға атлығып тороу. Эшкә атлығып тотоноу.*

**АТЛЫҠСА** (Р.: конюшня; И.: stable; Т.: ahır) *и.*

**1.** Ат ҡуя торған һарай. □ Конюшня, конный двор. ■ *Нурый бабай сыҡмай атлыҡсанан, көнө-төнө шунда ат ҡарай.* Б. Ишемғол.

**2.** *диал. ҡар.* **утлыҡса.**

**АТЛЫ-ТУНЛЫ** (Р.: состоятельный; И.: well-to-do; Т.: varlıklı) *с. һөйл.*

Донъя көтөр мал-мөлкәтле; хәлле. □ Состоятельный, зажиточный. *Атлы-тунлы кеше.*

**АТМА** (Р.: вид рыболовной снасти; И.: weir species; Т.: takım çeşidi) *и.*

**1.** *диал.* Сүмес ау. □ Вид рыболовной снасти.

**2.** Ваҡ йәнлектәр аулау өсөн ағастан яһалған тоҙаҡ. □ Тип деревянной ловушки для ловли мелкого зверя.

**АТМАЛАУ (атмала-)** (Р.: шагать вприпрыжку; И.: hop; Т.: zıplaya yürümek) *к.*

Оҙон-оҙон һикереп атлау. □ Шагать вприпрыжку.

**АТ МЕНЕҮ (ат мен-)** (Р.: садиться верхом; И.: bestride; Т.: ata binmek) *к.*

Атта һыбай йөрөү. □ Садиться верхом на коня.

**АТ МИСӘҮ (ат мисә-)** (Р.: припрячь лошадь; И.: harness an extra horse; Т.: koşum takmak) *к.*

Төптәге атҡа тағы бер атты ҡушарлап егеү. □ Припрячь лошадь.

**АТМОСФЕРА** [рус. < гр. *atmos* ‘быу, һауа’ + *sphaera* ‘шар’] (Р.: атмосфера; И.: atmosphere; Т.: atmosfer) *и.*

**1.** Планеталарҙы уратып алған газ хәлендәге һауа ҡатламы. □ Атмосфера. *Ерҙең атмосфераһы. Атмосфера һауаһы.*

**2.** *физ. тех.* Газ һымаҡ нәмәләрҙең баҫымын үлсәү берәмеге. □ Атмосфера. *Йылытыу мейесенең атмосфераһы. Нормаль атмосфера. Техник атмосфера.*

**3.** *күсм.* Йәмғиәттә, тормошта хөкөм һөргән шарт; мөхит, солғаныш. □ Атмосфера. *Ижади атмосфера.*

**АТОМ** [рус. < гр. *atomos* ‘бүленмәҫ’] (Р.: атом; И.: atom; Т.: atom) *и.*

Химик элементтың химик сифаттарын һаҡлаған иң бәләкәй өлөшсәһе. □ Атом. *Атом төҙөлөшө. Атомды таркатыу. Атом ядроһы. Атом энергияһы. Атом реакторы.*

**АТ ӨЙРӘТЕҮ (ат өйрәт-)** (Р.: приучать коня к упряжке; И.: train horses to harness; Т.: at terbiyesi) *к.*

Йәш йылҡыны егенгә йәки менгегә өйрәтеү. □ Приучать коня к упряжке, седлу; объездка.

**АТРАҢЛАУ (атраңла-)** *к. диал. ҡар.* **аша атлау.**

**АТРАСМАН** *и. бот. диал. ҡар.* **һары умырзая.**

**АТРАФ** [ғәр. اطراف] (Р.: округа; И.: entourage; Т.: etraf) *и. иҫк.*

*Ниҙеңдер* яҡын тирә-яғы; тирә-йүн. □ Округа, окружение. *Урал атрафтары. Ҡала атрафтары.* ■ *Ҡараһаң атрафҡа — хәтфә кеүек йәм-йәшел ялан.* С. Яҡшығолов.

**АТРИБУТ** [рус. < лат. *attributum* ‘бирелгән’] (Р.: атрибут; И.: attribute; Т.: sıfat) *и.*

**1.** *фәлс.* Нәмәнең, күренештең иң төп даими билдәһе. □ Атрибут. *Хәрәкәт — материяның атрибуты.*

**2.** *Нимәгәлер* хас булған билдә. □ Атрибут. ■ *Иң алыҫ райондарҙа ла хәҙер урындыҡ кеүек элекке атрибуттар урынына өҫтәл, карауат кеүек яңы нәмәләр ингән.* К. Мәргән.

**3.** *грам.* Атрибут, күрһәткес, билдә, аныҡлаусы. □ Атрибут.

**АТСАБАР** (Р.: гонец; И.: herald; Т.: ulak) *и. иҫк.*

Хәрби башлыҡтың йомошон үтәп, янында йөрөгән һалдат. □ Гонец, нарочный.

**АТ САБЫШТЫРЫУ (ат сабыштыр-)** *к. ҡар.* **бәйге 1**. *Һабантуйҙа һырғауылға менеү, тоҡ менән һуғышыу, ат сабыштырыу, милли көрәш кеүек ярыштар үткәрелде.*

**АТ САБЫШЫ** *и. ҡар.* **бәйге 1**.

**АТ СЕҘӘРЛӘҮ (ат сеҙәрлә-)** *к. диал. ҡар.* **ат кешәнләү.**

**АТ СОЛОҒО** *и. зоол. диал. ҡар.* **бөгәләк.**

**АТ СПОРТЫ** (Р.: конный спорт; И.: equestrian sport; Т.: at sporu) *и.*

Аттарҙа ярышыу, аттарҙы сабыштырыу менән шөғөлләнгән спорт төрө. □ Конный спорт.

**АТСЫ** (Р.: конюх; И.: stableman; Т.: seyis) *и.*

**1.** Ат ҡараусы. □ Конюх. *Атсылар аттарҙы яҡшы ҡарай.*

**2.** Атта йөрөүсе, һыбай. □ Наездник.

**АТТАЙ** (Р.: как лошадь; И.: as horse; Т.: at gibi) *р.*

Ат һымаҡ, көслө; ныҡ итеп. □ Как лошадь. *Аттай эшләү. Аттай сабыу.*

**АТ ТАНЫУ (ат таны-)** (Р.: ритуал распознавания лошади; И.: horse recognition ritual; Т.: atı tanımak) *к.*

Атты, уның холҡон билдәләү ритуалы. □ Ритуал распознавания лошади и её норова.

**АТТЕСТАТ** [рус. < лат. *attestari* ‘дәлилләү’] (Р.: аттестат; И.: certificate; Т.: diploma) *и.*

**1.** Уҡыу йортон тамамлау хаҡындағы рәсми документ. □ Аттестат. *Урта белем аттестаты.*

**2.** Ғилми йәки маҡтаулы исем бирелеү хаҡындағы танытма. □ Аттестат. *Профессор аттестаты.*

**АТТЕСТАЦИЯ** [рус. < лат. *attestatio, attestare* ‘шаһит булыу’] (Р.: аттестация; И.: assessment; Т.: terfi) *и.*

Хеҙмәткәрҙәрҙең, учреждениеларҙың эш квалификацияһын, талаптарға ярашлылығын билдәләү. □ Аттестация. *Аттестация комиссияһы. Аттестация таныклығы.*

**АТТЕСТАЦИЯЛАУ (аттестацияла-)** (Р.: аттестовать; И.: assess smb’s progress; Т.: terfi yapmak) *к.*

Аттестация үткәреү, квалификацияны билдәләү. □ Аттестация, аттестовать. *Ғилми хеҙмәткәрҙе аттестациялау. Табипты аттестациялау.*

**АТ ТИҘӘГЕ** (Р.: конский навоз; И.: horse manure; Т.: at gübresi) *и.*

Аттың оло яраууынан йыйылған сүп, ашлама булараҡ ҡулланыла. □ Конский навоз. ■ *Бил ауыртһа, мунсала йылытып, ат тиҙәгенә төрәләр.* Экспедиция материалдарынан.

**АТ ТИРЕ** (Р.: лошадиный пот; И.: horse’s sweat; Т.: at teri) *и.*

**1.** Аттың тире. □ Лошадиный пот.

**2.** *миф.* Ышаныуҙар буйынса, аттың тире яман заттарҙан һаҡлай. □ Лошадиный пот *(оберегает от злых духов).* ■ *Аттың үҙе генә түгел, уның ҡылы, тире, һөтө магик көскә эйә.* Ф. Хисамитдинова.

**АТ ТОЯҒЫ** (Р.: копыто; И.: hoof; Т.: toynak) *и.*

**1.** Мал аяғының осондағы ҡаты өлөшө. □ Копыто. ■ *Ат тояғы урынынан сыҡҡан һыу һалҡын шишмә булып, түбәнгә табан ер ярып ағып киткән.* Әкиәттән.

**2.** *диал. ҡар.* **ҡатлама.**

**АТ ТОЯҒЫ ҮЛӘНЕ** *и. бот. диал. ҡар.* **үгәй инә үләне.**

**АТ ТӨНЛӘТЕҮ (ат төнләт-)** *к. ҡар.* **ат ҡуныу**.

**АТТРАКЦИОН** [рус. < фр. *attraction* < лат.] (Р.: аттракцион; И.: show; Т.: atraksiyon) *и.*

**1.** Цирк йәки эстрада программаһындағы ныҡ тәьҫирле номер. □ Аттракцион. *Цирк аттракционы.*

**2.** Халыҡ ял итә торған урындарҙағы төрлө тамаша һәм уйын. □ Аттракцион. *Аттракцион залы.*

**АТ-ТУН** (Р.: снаряжение; И.: equipment; Т.: teçhizat) *и. йыйн.*

Эш һәм хеҙмәт өсөн кәрәк булған ат һәм кейем-ҡорамал. □ Снаряжение. *Ат-тун әҙерләү.* ■ *[Иркәбай:] Аты-туны булғандарҙың ҡайһылары баярға көлтә ташырға китте.* А. Таһиров.

**АТТЫРЫУ (аттыр-)** *к. йөкм. ҡар.* **атыу 2**. *понуд. от* **атыу 2**.

**АТ-УЖА** (Р.: имущество; И.: property; Т.: mal) *и. йыйн.*

Төрлө мөлкәт; мал-мөлкәт. □ Имущество, достояние. *Ул кеше бер төн эсендә ат-ужаһы менән юҡ булған.*

**АТ УЙНАТЫУ (ат уйнат-)** (Р.: гарцевать на коне; И.: prance; Т.: mahirlıkla atta yürümek) *к.*

Яҡшы атты ҡупшы итеп йөрөтөү; бейетеү. □ Гарцевать на коне. ■ *Салауат килә ғәскәр башында ат уйнатып, Урал буйлатып.* Халыҡ йырынан.

**АТ ҺАРАЙЫ** (Р.: конюшня; И.: stable; Т.: ahır) *и.*

Ат бикләй торған һарай. □ Конюшня.

**АТҺЫҘ I** (Р.: безлошадный; И.: horseless; Т.: atsız) *с.*

Аты (I) булмаған. □ Безлошадный.

**АТҺЫҘ II** (Р.: безымянный; И.: anonymous; Т.: isimsiz) *с.*

Аты (II) булмаған. □ Безымянный.

**АТҺЫҘ III** (Р.: табуированное название злых демонов; И.: tabuated name of evil spirits; Т.: yasaklanmış ervah adları) *и. диал. миф.*

**1.** Яман мифик персонаж. □ Мифический персонаж, демон.

**2.** Ҡара көстәрҙең йәшерен исеме. □ Табуированное название злых демонов.

**АТҺЫҘ АРБА** (Р.: автомобиль; И.: car; Т.: araba) *и. иҫк.*

Автомобиль. □ Машина, автомобиль.

**АТ ҺЫЛЫУЛАУ (ат һылыула-)** *к. вет. диал. кар.* **айғыр көйҙөрөү.**

**АТ ҺЫУЫТЫУ (ат һыуыт-)** (Р.: ставить потного коня на выстойку; И.: tie a sweaty horse; Т.: atı bağlamak) *к.*

Юлдан тирләп килгән атты ашатмай, эсермәй, билдәле ваҡытка бәйләп ҡуйыу. □ Ставить потного коня на выстойку.

**АТЫЙ** *и. диал. кар.* **атай 2.**

**АТЫЛМАҠ (атылмағы)** *и. диал. ҡар.* **бәүелсәк.**

**АТЫЛЫУ (атыл-)** (Р.: бить струей; И.: gush forth; Т.: cereyanla akmak) *к.*

**1.** *төш. ҡар.* **атыу.** *страд. от* **атыу**.

**2.** *Ниҙеңдер* эсенән тышҡа бәреү; атлығыу. □ Бить струёй. *Маңлайҙан тир атыла. Шишмә атылып сыға.* ■ *Бармак араларынан атылып сыккан кан [Тарастың] беләге буйлап акты.* И. Насыри. *Насирҙың күҙҙәренән йәштәре атылып сыкты.* З. Ураҡсин.

**3.** Ҙур тиҙлек менән алға ынтылыу; атлығыу, ташланыу. □ Ринуться, броситься, устремляться. *Йондоҙ атылыу.* ■ *Гөлсөм Ҡасимдың кул аҫтынан шыуып сыкты ла тышка атылды.* Н. Мусин. *[Айһылыу:] Ҡорҙо ташлап йылға буйына атылған Ғәлиә артынан йүгерҙем.* Т. Ғарипова.

**4.** *күсм.* Ҙур теләк менән ярһып ынтылыу; атлығыу. □ Рваться, стремиться. *Эш өсөн атылып тороу.* ■ *Түҙемһеҙ мин, хатың аскан сакта, атылып сығыр кеүек был йөрәк.* М. Хәй.

**АТЫНҒЫС** *и. диал. кар.* **бәүелсәк.**

**АТЫНЫУ (атын-)** *к. диал. ҡар.* **бәүелеү.**

**АТЫУ (ат-)** [дөйөм төрки *ат-, аат-* < *ағыт* ‘юғары ырғытыу’] (Р.: бросать; И.: fling; Т.: atmak) *к.*

**1.** Көс менән һелтәп ырғытыу; бәреү. □ Бросать, кидать. // Бросок. *Таш [менән] атыу.* ■ *Күккә аттым илап һөйөүемде — болоттарға инеп уралһын.* Г. Юнысова.

**2.** Ҡоралдың уҡ-яһағын осортоу. □ Стрелять, выстреливать. // Стрельба, выстрел. *Туп атыу. Ук атыу.* ■ *Биреләр өйгә эйәләһә, уны мылтык алып ҡоро дары менән атып ҡыуалар.* Экспедиция материалдарынан.

**3.** Яһаҡлы ҡорал менән үлтереү. □ Расстреливать. // Расстрел. ■ *Атаһын актар атып киткән сакта Тимергә һигеҙ йәш тә юк ине әле.* Б. Бикбай.

**4.** Тейеп, һуғып, көс менән зарарлау *(йәшенгә карата).* □ Ударить, сразить. // Удар. *Йәшен атты.*

**5.** *күсм.* Ҙур теләк менән ярһып ынтылыу; атылыу (4). □ Стремиться. // Стремление. *Йән атыу.*

**6.** *миф.* Яман көстәрҙе ҡыуыу ысулы. □ Способ отгона нечистых сил. ■ *Өй тынысһыҙ булһа, дүрт мөйөшөнә мылтык атыу йолаһы бар.* Экспедиция материалдарынан.

♦ **Күҙ атыу** *шул ук* **күҙ ташлау**. ■ *Уйҙарынан арынып, Байғөбәк батыр алға күҙ атты: һаман да икһеҙ-сикһеҙ ҡылғанлы дала.* Р. Байымов. **Атмаған ҡуянға ҡаҙан аҫыу** әле булмаған эште һөйләү. □ Не убив зайца, подвешивать котёл. *соотв.* Делить шкуру неубитого медведя.

**АТЫП БӘРЕҮ (атып бәр-)** (Р.: бросать; И.: throw; Т.: atmak) *к.*

Көс менән ситкә ташлау. □ Бросать, швырнуть. ■ *Фуражкамды атып бәреп, [атымдың] ялына ятып иланым.* Б. Ишемғол.

**АТЫУСЫ** (Р.: стрелок; И.: shot; Т.: atıcı) *и.*

Атыу ҡоралы менән атҡан кеше. □ Стрелок.

**АТЫ-УТЫ МЕНӘН** (Р.: со всем имуществом; И.: with all property; Т.: tamamen) *р.*

Бөтә булған мал-мөлкәте менән. □ Со всем имуществом. *Аты-уты менән күсеп киткән.*

**АТ ЯРАТЫУ (ат ярат-)** *к. ҡар.* **ат таныу.**

**АТ ЯҪҠЫТЫУ (ат яҫҡыт-)** *к. ҡар.* **ат уйнатыу.**

**АУ I** [боронғо төрки *ab*] (Р.: охота; И.: hunt; Т.: av) *и.*

**1.** Йәнлек тотоу шөғөлө, һунар. □ Облава, коллективная охота. *Ау ҡоралы. Ауға сығыу. Ауға йөрөү.* ● *Ауға барһаң, зирәк бул, юлдашыңа терәк бул.* Әйтем.

**2.** *иҫк.* Тотола торған йәнлек. □ Животное, за которым охотятся. ■ *Мәсем хан ғәскәр менән ауға сыҡҡан, ау эҙләп, бейек-бейек тауға сыҡҡан.* «Бабсаҡ менән Күсәк». ● *Арыҫлан ау тапмай ҡайтмаҫ.* Мәҡәл.

**АУ II** [дөйөм төрки *ав/аг/аң* ‘ау ҡоралы’] (Р.: ловушка; И.: snare; Т.: tuzak) *и.*

**1.** Ҡош, йәнлек тота торған селтәр рәүешендәге төрлө ҡорал. □ Ловушка, западня. *Ҡош ауы. Сүмес ау. Ау ҡороу. Ауға эләгеү.*

**2.** Ептән оҙон, киң итеп үрелгән өс ҡатлы балыҡ тотоу ҡоралы *(һыуҙың иңенә ҡороп ҡуйыла).* □ Сети, бредень, невод. *Вак ау. Эре ау. Сабаҡ ауы. Суртан ауы. Ау бәйләү. Ау ултыртыу. Ау һалыу.* ■ *Ағиҙелкәйҙәргә ауҙар һалдым аҡ балыҡкай менән һаҙанға.* Халыҡ йырынан.

**3.** (*йәки* **үрмәксе ауы**) Үрмәксе үргән еп. □ Паутина. ■ *Мәсеттең тәҙрәләрен саң баҫты, үрмәкселәр, уңайлы урын һайлап, ау ҡорҙо.* И. Көҫәпҡол. *Тышта, ҡояшта ялтырап, оса үрмәксе ауы.* Р. Ниғмәти.

**4.** *күсм.* Яуызлыҡ менән уйланған хәйлә, мәкер. □ Сеть *(хитрыми уловками стремиться поставить кого-н. в неприятное положение, поймать на чём-н.). Ау ҡороу. Ауға эләгеү.* ■ *Эләгә халыҡ, эләгә бизнесмен ҡорған ауға.* М. Ямалетдинов.

**АУ III** (Р.: ау; И.: hi; Т.: hey) *ымл.*

**1.** Үҙ-ара саҡырып тауыш биргәндә әйтелә. □ Употребляется при перекличке: ау. *Ау ҙа ау ҡысҡырыу. Ау, ҡайҙа киттегеҙ?*

**2.** Йыр, ҡобайырҙа үлсәм йәки көй өсөн ҡушып ебәрелә. □ Употребляется в народных песнях, кубаирах для дополнения размера стиха или усиления эмоциональности. ■ *Ҡайҙа ла ғына барһаң, ау, дуҫ-иш кәрәк.* Халыҡ йырынан. *Ир-егеттең ҡылғаны илдән башҡа була алмаҫ, ау, илдән башҡа була алмаҫ.* Ҡобайырҙан.

**АУА** *и. диал. ҡар.* **һауа.**

**АУАЗ** [фарс. آواز] (Р.: звук; И.: sound; Т.: ses) *и. кит.*

Өн, тауыш. □ Звук, голос; возглас. ■ *Ят телдә бойороҡҡа окшаш өҙөк-өҙөк ҡырҡа ауаздар яңғыраны, буталыш китте.* Р. Байымов. *Был ҡурайҙың тауышында Зөлхизә үҙе белгән бик күп ауаздарҙы таныны.* Г. Яҡупова.

**АУАЗ БИРЕҮ (ауаз бир-)** (Р.: подать голос; И.: submit a voice; Т.: ses çıkarmak) *к.*

Өн, тауыш сығарыу, ҡысҡырыу. □ Подать голос.

**АУАЗДАШ** (Р.: созвучный; И.: consonant (with); Т.: uyumlu) *с.*

**1.** *кит.* Оҡшаш тауышлы, үҙ-ара ярашлы; аһәңдәш. □ Созвучный, гармоничный.

**2.** *күсм.* Оҡшаш тәбиғәтле, оҡшаш йөкмәткеле. □ Созвучный. ■ *«Ҡара йөҙҙәр» иҫке тормошто фашлауы менән генә түгел, кешенең бәхет хоҡуғын раҫлауы менән беҙҙең заманға ауаздаш.* М. Минһажетдинов. *Түлебаев миңә окшаны. Күпте белә. Фекер йөрөтөүе миңә ауаздаш.* М. Кәрим.

**АУАЗЛАУ (ауазла-)** (Р.: окликать; И.: hail; Т.: seslenmek) *к. кит.*

Тауыш биреү, ҡысҡырыу. □ Окликать.

**АУАЛАУ (ауала-)** (Р.: подниматься высоко; И.: sore; Т.: yükselmek) *к.*

Юғары күтәрелеү; үрләү. □ Подниматься высоко, выситься. *Ҡояш ауалағанса йоклау.* ● *Торна бик ауалап килһә, йыл ҡыуан була.* Һынамыш.

**АУАН** (Р.: бесхитростный; И.: artless; Т.: sade) *с.*

**1.** Хәйләһеҙ, ихлас. □ Бесхитростный, простодушный. *Ауан кеше. Эшкә ауан.* ■ *[Картәсәйем:] Йәшлегемә барып, эшкә ауан булдым, ауыр күтәреп имгәндем.* Г. Яҡупова.

**2.** Айыш-тойошто бик белмәгән; алабарман. □ Опрометчивый, неосмотрительный. ■ *[Кадир:] Был эштә инде, Фатима, мин ауан кеше, ул яғын үҙең ҡара.* Б. Бикбай.

**АУ АНАҺЫ** (Р.: наружный третий ряд сети; И.: fishing net's outer row; Т.: ağın dış sırası ) *и.*

**1.** Ауҙың эре күҙәнәкле итеп бәйләнгән тышҡы ҡаты. □ Наружный третий ряд сети.

**2.** *миф.* Балыҡ ауының хужаһы, ау эйәһе. □ Дух — хозяин рыбной сети. ■ *Балыҡсылар уҡынып, ау анаһын саҡырып, күл төбөнә ау төшөрҙөләр.* Ф. Хисамитдинова.

**АУАРА** [фарс. اواره 'дәрүиш; меҫкен'] (Р.: растерянный; И.: dazed; Т.: şaşkın) *с.*

Уйлау, әмәл, сара табыу һәләтенән мәхрүм; аптырашлы, аңҡы-тиңке. □ Обалделый, растерянный, озадаченный, одурелый. *Ауара булыу. Ауара итеү.* ■ *Фәхриҙе был хәбәр бөтөнләй ауара яһаны.* Б. Бикбай.

**АУАРА БУЛЫУ (ауара бул-)** (Р.: отупеть; И.: become blunt; Т.: aptallaşmak) *ҡ. диал.*

Миңрәүләнеү. □ Отупеть. *Уйлай-уйлай башым ауара булды инде.*

**АУАРАЛАНДЫРЫУ (ауараландыр-)** (Р.: озадачивать; И.: puzzle; Т.: şaşırtmak) *ҡ.*

Ауараға әйләндереү, ауара итеү. □ Озадачивать, приводить в недоумение, замешательство. ■ *Елбәҙәк ҡыҙҙың күңелен ауараландырырға күп кәрәкме ни?* Н. Мусин.

**АУАРАЛАНЫУ (ауаралан-)** (Р.: быть в недоумении; И.: be at a loss; Т.: şaşkın olmak) *ҡ.*

Ауара булыу. □ Быть в недоумении, замешательстве; растеряться. ■ *Сөнәғәт .. башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ауараланып йөрөнө-йөрөнө лә тышҡа сығып китте.* Ҡ. Ибәтуллин.

**АУА-ТҮНӘ** (Р.: вперевалку; И.: swinging from one side to the other; Т.: badi badi) *р.*

Бер ауып, бер тороп; ауып-ауып китер хәлдә. □ Вперевалку, вразвалку. *Ауа-түнә атлау.* ■ *Мин ауа-түнә урыныма барып ултырҙым.* Д. Юлтый. *Ваҡ ағастар араһында оҙон ҡанаттарын бер йәйеп, бер ҡаушырып, ауа-түнә ҙур бер ҡош әллә осорға, әллә уларҙан ҡасырға маташа ине.* Ә. Әминев.

**АУ-АУ** (Р.: ау, ау; И.: ау; Т.: hey) *ымл.*

Ҡабат-ҡабат ау иткән тауыш. □ Ау. *Ау-ау итеп ҡысҡырыу.*

**АУДИЕНЦИЯ** [рус. < лат. *audientia*] (Р.: аудиенция; И.: audience; Т.: resm: görüşme) *и.*

Юғары дәүләт вазифаһындағы кешенең рәсми ҡабул итеүе. □ Аудиенция. *Аудиенция көтөү.*

**АУДИО** [рус. < ингл. < лат. *audio* 'ишетәм'] (Р.: аудио; И.: audio; Т.: ses) *с.*

Ишетеүгә, ишетеп ҡабул итеүгә бәйле ҡушма һүҙҙәрҙең беренсе өлөшө. □ Первая часть сложных слов со значением 'относящийся к слуху, к восприятию слухом'. *Аудиотехника. Аудиокассета. Аудиояҙма.*

**АУДИОГРАММА** [рус. < лат. *audiogramma*] (Р.: аудиограмма; И.: audiogramme; Т.: odyogram) *и. мед.*

Ишетеү функцияһын тикшереү нәтижәһен сағылдырған яҙма. □ Аудиограмма. *Аудиограмма эшләтеү.*

**АУДИОКАССЕТА** [рус. < лат. *audire* + ингл. *cassette*] (Р.: аудиокассета; И.: audiocassette; Т.: teyp kaseti) *и.*

XX быуаттың икенсе яртыһында таралған тауыш яҙҙырыу һәм яҙҙырылған тауышты тыңлау өсөн ҡулланылған магнитофон таҫмаһы, магнит таҫмаға яҙылған мәғлүмәт һаҡлағысы. □ Аудиокассета. *Аудиокассетаға яҙҙырыу.*

**АУДИОЛОГИЯ** [рус. < лат. *audio* + *logos*] (Р.: аудиология; И.: audiology; Т.: odyoloji) *и. мед.*

Медицинала ишетеү һәләтенең боҙолоуын, диагностикалау һәм дауалау ысулдарын өйрәнеүсе бүлек. □ Аудиология.

**АУДИОМЕТР** [рус. < лат. *audio* + *metreo*] (Р.: аудиометр; И.: audiometer; Т.: odyometre) *и. мед.*

Кешенең ишетеү һәләтен тикшерә торған прибор. □ Аудиометр.

**АУДИОМЕТРИЯ** [рус. < лат. *audio* + *metreo*] (Р.: аудиометрия; И.: audiometrics; Т.: odyometri) *и. мед.*

Аудиометр приборы ярҙамында ишетеү һәләтен билдәләү. □ Аудиометрия. *Ультратауыш аудиометрияһы.*

**АУДИОТЕХНИКА** [рус. < лат. *audio* + гр. *techne* ‘сәнғәт’] (Р.: аудиотехника; И.: audio equipment; Т.: ses donanımı) *и.*

Тауыш яҙҙырыу һәм яҙҙырылған тауышты тыңлау өсөн ҡулланылған төрлө аудио һәм радио йыһаздары. □ Аудиотехника. *Аудиотехника алыу. Аудиотехника һатыу.*

**АУДИТ** [рус. < ингл. *audit* ‘тикшереү’] (Р.: аудит; И.: audit; Т.: denetim) *и.*

Компания һәм ойошмаларҙың эшмәкәрлегенә ревизия яһау рәүешендә үткәрелә торған финанс контроленең бер төрө. □ Аудит. *Аудит тикшереүе.*

**АУДИТОР** [рус. < лат. *auditor*] (Р.: аудитор; И.: auditor; Т.: denetçi) *и.*

Бухгалтерия кенәгәләрен, отчёт документтарын ревизиялау менән шөғөлләнгән кеше. □ Аудитор.

**АУДИТОРИЯ** [рус. < лат. *auditorium* ‘тыңлау өсөн урын’] (Р.: аудитория; И.: lecture hall; Т.: konferans salonu) *и.*

**1.** Лекция, доклад уҡыла торған махсус бүлмә. □ Аудитория. *Институт аудиторияһы.* ■ *Уҡытыусы килеп ингәс, әлегә тиклем ҡайнап торған аудитория тып-тыныс булып ҡалды.* Я. Хамматов.

**2.** *йыйн.* Лекция, доклад һ.б. тыңлаған кешеләр. □ Аудитория. *Аудиторияны ҡыҙыҡһындырыу.* ■ *Беҙҙең поэзия бөгөн ысын мәғәнәһендә ҙур аудитория яулап алды.* Ә. Хәкимов.

**АУҘАРМАЛЫ** (Р.: саморазгружающийся; И.: self-dumping; Т.: damperli) *с.*

Үҙе ауҙарыла торған; үҙбушатҡыс. □ Саморазгружающийся, опрокидывающийся; самосвал. *Ауҙармалы арба. Ауҙармалы машина.*

**АУҘАРТЫУ (ауҙарт-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ауҙарыу I, 1 – 4**. *понуд. от* **ауҙарыу I, 1 – 4**.

**АУҘАРЫЛЫУ (ауҙарыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ауҙарыу I, 1, 2**. *страд. от* **ауҙарыу I, 1, 2**.

**АУҘАРЫУ I (ауҙар-)** (Р.: валить; И.: bring down; Т.: yıkmak) *ҡ.*

**1.** *Кемделер* йәки *нимәнелер* этеп, тартып йығыу; ҡолатыу. □ Валить, сваливать. *Ағас ауҙарыу.* ■ *[Сөмбөл:] Әхмәт, ҡапыл арттан килеп, .. санаға төртөп ауҙарҙы.* Ф. Әсәнов. ● *Күренмәгән түңгәк сана ауҙарыр.* Әйтем. *Тауҙы тәкә һөҙөп ауҙара алмаҫ.* Әйтем.

**2.** Өҫтөн аҫҡа түңкәреү; түңкәреп түгеү. □ Опрокидывать, перевёртывать. // Опрокидывание, переворачивание. *Табаҡты ауҙарыу. Биҙрәне ауҙарыу. Өҫтәлде ауҙарыу.* ■ *Бер туҡтауһыҙ гөрһөлдәп ауҙарылған йөк, тимер иләккә һәм таштарға ышҡылған көрәктәр тауышы шатырлауы кис нығырак ишетелде.* Я. Хамматов.

**3.** *күсм.* Ғәйепте кешегә ябыу; эште, бурысты кешегә йөкмәтеү. □ Валить, сваливать, взваливать *(вину)* и т.п. // Сваливание, взваливание. *Бурысыңды ауҙарыу.* ■ *Хангилдин, район кәңәшмәләрендә һүҙ ишетеп, әрләнеп ҡайттымы, енен сәсеп Ғафарға йәбешә, бөтә ғәйепте [уға] ауҙара.* Н. Мусин.

**4.** *күсм.* Кешене ҡаршы тарафтарҙың береһенән икенсеһенә күсереү. □ Сманивать, переманивать, перетягивать, склонять *(на чью-л.* сторону). // Переманивание, перетягивание, склонение. *Кешеләрҙе үҙ яғына ауҙарыу.* ■ *Ялаев тағы бер нисә картты, бик әсе тауышлы бер нисә бисәне үҙ яғына ауҙарҙы.* Ғ. Әхмәтшин.

♦ **Юҡты бушҡа ауҙарыу** файҙаһыҙ эш менән шөғөлләнеү. □ *соотв.* Переливать из пустого в порожнее.

**АУҘАРЫУ II (ауҙар-)** (Р.: переводить; И.: translate; Т.: çevirtek ) *к.*

Бер телдән икенсе телгә күсереү, тәржемә итеү. □ Переводить. // Перевод. *Башҡортсанан инглиз теленә ауҙарыу.* ■ *[Вил] ҡаҙаҡ драматургы Дулат Исабековтың «Көтөр кешем бар минең» тигән әҫәрен башҡортсаға ауҙарҙы.* Ә. Әминев.

**АУҘАРЫШЫУ (ауҙарыш-)** *к. урт. ярҙамл. ҡар.* **ауҙарыу I, 1, 2**. *взаимн. вспом. от* **ауҙарыу I, 1, 2**.

**АУКЦИОН** [рус. < нем. *auktion* < лат. *auctio* 'арта барыу'] (Р.: аукцион; И.: auction; Т.: açık artırma) *и.*

Берәй мөлкәтте йәки нәмәне халыҡ алдында хаҡты күберәк биреүсегә һатыу. □ Аукцион. *Аукционда һатыу. Валюталар аукционы. Векселдәр аукционы. Халыҡ-ара аукцион.*

**АУКЦИОНЕР** (Р.: аукционер; И.: bidder; Т.: açık artırmacı) *и.*

Аукционда ҡатнашыусы. □ Аукционер.

**АУКЦИОНСЫ** (Р.: аукционист; И.: auctioneer; Т.: mezatçı) *и.*

Аукционды үткәреүсе. □ Аукционист.

**АУ ҠАЛАҒЫ** *и. ҡар.* **ау таҡтаһы.**

**АУҠАН** (Р.: тихий; И.: quiet; Т.: sakin) *с. һөйл.*

Кеше-ҡара булмаған; тыныс, аулаҡ. □ Тихий, свободный. *Ауҡан урын. Ауҡан ваҡыт.* ■ *[Мәһиҙә:] Бабай урманға киткәс, ауҡанда ғына иркенләп икәүләп һөйләшеп алырбыҙ.* Ә. Үтәбай.

**АУҠАНЛАУ (ауҡанла-)** *к. ҡар.* **аулаҡлау.**

**АУҠАТ** [ғәр. اقوات] (Р.: пища; И.: food; Т.: gıda) *и. иҫк.*

**1.** Ашамлыҡ, ризыҡ. □ Пища, продукты.

**2.** *диал. ҡар.* **байлыҡ, муллыҡ.**

**АУҠАТЛЫ** *и. диал. ҡар.* **хәлле.**

**АУҠАТЛАНЫУ (ауҡатлан-)** (Р.: есть; И.: eat; Т.: yemek) *к. иҫк.*

Ашау. □ Есть, принимать пищу. *Ауҡатланып алыу.*

**АУЛАҠ I** [дөйөм төрки *ағлак* 'аулаҡ урын'] (Р.: укромный; И.: secluded; Т.: kuytu) *с.*

Кеше-ҡара булмаған, буш, тыныс. □ Укромный, безлюдный, свободный, тихий. *Аулаҡ ваҡыт. Аулаҡ урын.*

**АУЛАҠ II (аулағы)** (Р.: тихое место; И.: get-together; Т.: sakin bir yer) *и.*

**1.** Кеше булмаған, тыныс урын. □ Тихое, безлюдное место. ■ *Егет менән ҡыҙға аулаҡта осрашыу мөмкин түгел ине.* С. Агиш. *Берҙән-бер көн аулаҡта, Һомай булған торлаҡта, Шүлгән барған янына, ҡулын һалған яурынына.* «Урал батыр».

**2.** Буш өйҙә йыйыла торған йәштәр кисәһе; аулаҡ өй. □ Посиделки, вечеринка. *Аулаҡ өйгә барыу. Аулаҡҡа йыйылыу.* ■ *Аулаҡ өй бала саҡтың шундай яҡты илһам биреүсе усағы булған. Ҡыҙ балалар бергә йыйылышып үҙ һөнәрҙәрен күрһәткән. Йыр-бейеү, йомаҡ ҡойоу, уйын — береһе лә ҡалмаған.* Ф. Аҡбулатова.

**АУЛАҠЛАУ (аулаҡла-)** (Р.: чувствовать покой; И.: feel liberty; Т.: serbestliği hissetmek) *к.*

Аулаҡтан файҙаланыу, аулаҡ тороу. □ Чувствовать покой, свободу. ■ *Аулаҡлап үҙебеҙгә кәрәк нәмәләрҙе һорашҡылайыҡ әле, тип килгәйнек.* Ғ. Дәүләтшин.

**АУЛАҠ ӨЙ** *и. ҡар.* **аулаҡ II, 2.**

**АУЛАНЫУ (аулан-)** *к. төш. ҡар.* **аулау**. *страд. от* **аулау**.

**АУЛАУ (аула-)** [боронғо төрки *abla-*] (Р.: ловить сетью; И.: net; Т.: ağla tutmak) *к.*

**1.** Ауға эләктереү *(балыҡты, ҡошто).* □ Ловить сетью *(рыбу, птицу). Балыҡты аулап тотоу тыйыла.*

**2.** Һунар итеп тотоу. □ Охотиться. ■ *Бүре аулауҙың үҙенә күрә әкәмәте була.* С. Кулибай. ● *Бөркөт ҡартайһа, сысҡан да аулай алмай.* Әйтем.

**3.** *күсм.* Үҙ яйыңа ыңғайлатыу, үҙеңә ҡаратыу; әүрәтеү. □ Склонить, завладе-

вать, овладевать, соблазнять. *Күңелде аулау.* ■ *Эй, донъя, шашма, юкты алдашма, алдама мине яҙың күрһәтеп, аулама мине кыҙың күрһәтеп.* Ш. Бабич.

**АУМАҠАЙ** (Р.: непостоянный; И.: changeable; Т.: kararsız) *с.*

Бер һүҙҙә, бер тарафта тормай, төрлө яҡҡа ауыусан. □ Непостоянный, изменчивый, неустойчивый, слабохарактерный. ■ *[Фәйзрахман бабай:] Аумаҡай малайға оҡшай шул [Фәнил] — ел тирмәне кеүек: ел ҡайһы яҡтан иҫһә, шул яҡҡа боролорға әҙер тора.* Ш. Биҡкол.

**АУМАҠАЙЛАНЫУ (аумаҡайлан-)** (Р.: проявлять непостоянство; И.: display inconstancy; Т.: kararsızlık göstermek) *ҡ.*

Аумаҡайлыҡ ҡылыу, аумаҡайлыҡ күрһәтеү. □ Проявлять непостоянство, неустойчивость. ■ *Ғафури тура һүҙле, үткер зиһенле, уйындағын туп-тура ярып һала торған кеше ине, аумаҡайланып тормай ине.* Ғ. Ғүмәр.

**АУМАҠАЙЛЫҠ (аумаҡайлығы)** (Р.: непостоянство; И.: unsteadiness; Т.: kararsızlık) *и.*

Бер һүҙҙә тормай, төрлө яҡҡа ауыу сифаты. □ Непостоянство, изменчивость, неустойчивость. *Аумаҡайлыҡ күрһәтеү.*

**АУМАЛАТЫУ (аумалат-)** *ҡ. һөйл. ҡар.* **аунаҡлатыу 1.**

**АУМАЛАУ (аумала-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аумаҡайланыу**.

**АУМАЛЫ** *с. диал. ҡар.* **аумаҡай.**

**АУМАЛЫ-ТҮКМӘЛЕ** *р. диал. ҡар.* **аңҡы-тиңке.**

**АУМАҺАР** *с. диал. ҡар.* **ауан 1.**

**АУНАҠ** (Р.: неустойчивый; И.: unstable; Т.: kağşar) *с.*

Ауа һалып барыусан. □ Неустойчивый, шаткий. *Аунаҡ арба. Аунаҡ кәмә.*

**АУНАҠЛАТЫУ (аунаҡлат-)** (Р.: валять; И.: drag; Т.: sürüklemek) *ҡ.*

**1.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләндереү; аунатыу. □ Валять, вывалять. *Ерҙә аунаҡлатыу. Баланы түшәктә аунаҡлатыу. Ҡурсаҡты иҙәндә аунаҡлатып уйнатыу.*

**2.** Ултырышы ныҡ булмаған нәмәне тегеләй-былай ҡыйшайтыу; аушанлатыу. □ Качать, шатать. *Кәмәне аунаҡлатыу.*

**АУНАҠЛАУ (аунаҡла-)** (Р.: валяться; И.: lie about; Т.: yuvarlanmak) *ҡ.*

**1.** Бер тегеләй, бер былай тәгәрәү йәки ауыу. □ Валяться. ■ *Өлпөлдәп торған үләндә аунаҡлауы, Хәлил бабай менән баллап сәй эсеп, һөйләшеп ултырыуы үҙе бер ғүмер.* Т. Килмөхәмәтов.

**2.** Ултырышы ныҡ булмағанлыҡтан, тегеләй-былай ауыу. □ Качаться, шататься. *Аунаҡлап торған кәмә.*

**АУНАҠСЫУ (аунаҡсы-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аунау 2.**

**АУНАТЫУ (аунат-)** (Р.: валять; И.: roll; Т.: yuvarlamak) *ҡ.*

Бер яҡтан икенсе яҡҡа әйләндереү; аунаҡлатыу. □ Валять. *Ҡарҙа аунатыу.* ■ *Бай Ҡыҙраҫҡа ишәкте йөҙҙөрөп, аунатмай алып ҡайтырға ҡушҡан.* Әкиәттән.

**АУНАУ (ауна-)** [боронғо төрки *агна-* < *ағ* ‘ауыу’] (Р.: валяться; И.: wallow; Т.: yuvarlamak) *ҡ.*

**1.** Ятып, тегеләй-былай ауғылау; аунаҡлау. □ Валяться. *Үләндә аунау.* ■ *Их, шул мамыҡ ҡар өҫтөндә аунай-аунай уйнарға.* А. Игебаев. ● *Яҡшыға эйәргән — түшәктә аунар, яманға эйәргән — тиҙәктә аунар.* Мәҡәл.

**2.** Салҡан ятып ышҡыныу *(йәнлек, малға ҡарата).* □ Валяться *(о животных).* ● *Ат аунаһа, көн боҙолор.* Һынамыш. *Ат аунаған ерҙә төк ҡала.* Әйтем.

**3.** Тормай, йөрөмәй бер урында ятыу. □ Валяться, бездельничать. *Диванда аунау.*

**4.** Теләһә нисек ташланған хәлдә булыу. □ Валяться, лежать в беспорядке. *Ишек алдында төрлө ҡоралдар аунап ята.*

**5.** *диал. ҡар.* **ауыу 1.**

**АУНАШЫУ (аунаш-)** *ҡ. урт. ҡар.* **аунау.** *взаимн. от* **аунау.**

**АУРА** [рус. < лат. *aura* ‘ел’] (Р.: аура; И.: aura; Т.: ruh) *и.*

Кешенең тәне эргәһендә уның энергетикаһы менән барлыҡҡа килтерелгән энер-

гетик ореол. □ Аура *(энергетический ореол, сияние вокруг тела человека, которое создаётся его энергетикой).*

**АУРАҠ** *с. диал. ҡар.* **аңра**.

**АУРА-МАУРА** *и. диал. ҡар.* **аңҡы-тиңке.**

**АУСЫ** (Р.: охотник; И.: hunter; Т.: avcı) *и.*

Ҡош, кейек тотоу менән шөғөлләнгән кеше; һунарсы. □ Охотник. ● *Аусыны аяғы туйҙыра.* Мәҡәл.

**АУСЫЛЫҠ (аусылығы)** (Р.: охотоводство; И.: hunting; Т.: avcılık) *и.*

Һунарсылыҡ. □ Охотоводство, охотничий промысел.

**АУҪЫН** (Р.: цинга; И.: scurvy; Т.: iskorbüt) *и. диал.*

Зәңге. □ Цинга. ■ *Ҡыш булһа, ауҫын ҡалҡа ине.* Экспедиция материалдарынан.

**АУҪЫН АШАУ (ауҫын аша-)** (Р.: заболеть цингой; И.: become ill with scurvy; Т.: iskorbüt hastalığına uğramak) *ҡ.*

Зәңге менән ауырыу. □ Заболеть цингой.

**АУТ** [рус. < ингл. *out*] (Р.: аут; И.: out; Т.: aut) *и. спорт.*

Спорт уйындарында туптың, шайбаның һыҙыҡтан сығыуы. □ Аут.

**АУ ТАҠТАҺЫ** (Р.: дощечка, употребляемая при ручном плетении сети; И.: fishing net plaiting appliance; Т.: ağ örmek için tahta) *и.*

Ау бәйләгәндә ҡулланылған ҡорал. □ Дощечка, применяемая при ручном плетении сети, кочедык.

**АУТОТРЕНИНГ** [рус. < гр. *autos* ‘сам’ + ингл. *training* ‘тренировка’] (Р.: аутотренинг; И.: autogenic training; Т.: otojenik eğitim) *и.*

Үҙ-үҙеңде ышандырыу юлы менән идара итеүҙең аңлы психик алымдар йыйылмаһы. □ Аутотренинг. *Аутотренинг менән шөғөлләнеү.*

**АУҺАҠ (ауһағы)** (Р.: осина; И.: asp; Т.: titrek kavak) *и. бот. диал.*

Уҫаҡ. □ Осина (лат. *Populus tremula*).

**АУҺАР** (Р.: глупый; И.: silly; Т.: aptal) *с.*

Уны-быны аңлап еткермәгән аңра; алйот. □ Глупый, бестолковый; дурак. ■ *Башҡа яҡтарҙа тиле, һәтәү, ауһар, иҫәр, руссаны башҡортлаштырып дүрәк тип тә атайҙар ундайҙарҙы.* М. Ҡунафин. ● *Бер ауһарҙы, бер аҡыллыны тыңла.* Мәҡәл.

**АУҺЫЛ** *и. диал. ҡар.* **зәңге.**

**АУШАЙТЫУ (аушайт-)** (Р.: наклонять; И.: incline; Т.: eğmek) *ҡ.*

Бер яҡҡа ҡыйшайтыу; ауыштырыу. □ Наклонять, клонить. *Бағананы аушайтыу.*

**АУШАЙЫУ (аушай-, аушая)** (Р.: наклоняться; И.: bend; Т.: eğilmek) *ҡ.*

Бер яҡҡа ҡыйшайыу, ауышыу. □ Наклоняться, клониться. *Уңға аушайыу.*

**АУШАНЛАҠ** (Р.: неустойчивый; И.: unstable; Т.: titrek) *с.*

Аушан-таушан итеүсән. □ Неустойчивый, шаткий. *Аушанлаҡ кәмә. Аушанлаҡ өҫтәл.*

**АУШАН-ТАУШАН** (Р.: покачиваясь; И.: rocking; Т.: sallanarak) *р.*

Әле бер, әле икенсе яҡҡа ауып барыусан. □ Покачиваясь, качаясь, шатаясь. *Аушан-таушан килеү.* ■ *Был ир харап һимереп китә, муйынын да бора алмай башлай, йөрөгәндә ҡаҙ кеүек аушан-таушан итеп йөрөй.* Әкиәттән.

**АУЫҘ** [боронғо төрки *яғыз*] (Р.: рот; И.: mouth; Т.: ağız) *и.*

**1.** Өҫкө һәм аҫҡы яңаҡтарҙан башлап йотҡолоҡҡа тиклем булған ҡыуышлыҡтан торған тауыш биреү һәм аҙыҡланыу ағзаһы. □ Рот, уста. *прост.* Пасть. *Ҙур ауыҙ. Уймаҡ ауыҙ. Ауыҙ эсе.* ● *Алма беш, ауыҙыма төш.* Әйтем. *Ауыҙы бешкән өрөп эсер.* Мәҡәл. *Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә.* Әйтем.

**2.** *күсм.* Кеше, берәү. □ Человек, *кто-л. Фәлән кешенең ауыҙынан ишетеү.* ● *Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай.* Әйтем.

**3.** *күсм.* Ғаиләләге, өйҙәге кешеләр. □ Рот, едок. *Ғаиләлә алты ауыҙ. Тағы бер ауыҙ өҫтәлде.*

**4.** Һауыт-һабаның асыҡ урыны. □ Горло, горлышко. *Көршәк ауыҙы. Шешә ауыҙы.*

**5.** Эсе ҡыуыш нәмәнең асыҡ урыны. □ Отверстие, лаз, лазейка, устье. *Баҙ ауыҙы. Мәмерйә ауыҙы. Өң ауыҙы.* ■ *Усаҡ ауыҙына ҡуйған сәйнүк шыжлап та өлгөрмәне, өйөр айғыры .. тыныслыҙлана башланы.* З. Ураҡсин. *Мәмерйә ауыҙы тар, унан Миңлеғол ғына иңкәймәй үтә ала, ә бер нисә аҙымдан түшәме бейегәйә башлай.* Б. Рафиҡов.

**6.** Тоҡ, кеҫә һымаҡ нәмәләрҙең бәйләнә йәки ябыла торған өҫкө өлөшө. □ Верхняя несшитая часть мешка, кармана и т. д. *Тоҡсай ауыҙы. Кеҫә ауыҙы.*

**7.** Урман, ҡыуаҡ һ. б. башланған йәки бөткән урыны, сите. □ Опушка. *Урман ауыҙы. Әрәмәлек ауыҙы.* ■ *Ҡыш уртаһы. Урман тып-тын. Береһенән-береһе көслө, мыҡты кәүҙәле өс ир-егет, әйтерһең, әкиәти батырҙар — ҡыҫҡа, яҫы саңғы .. кейеп алып, ҡалын ҡар өҫтөнән урман ауыҙына яҡынлаша.* Г. Яҡупова. ● *Урман ауыҙы тар булыр, ҡыҙҙар ауыҙы бал булыр.* Әйтем.

♦ **Ағас ауыҙ** һүҙ рәте белмәгән тупаҫ телле. □ Косноязычный. **Асыҡ ауыҙ** мәшәү, ебегән. □ Разиня, ротозей. **Ауыҙға алғыһыҙ** ашарлыҡ түгел; тәмһеҙ. □ В рот не возьмёшь *(о невкусной пище). Бешергән ашы ауыҙға алғыһыҙ.* **Ауыҙға инерҙәй булыу** *йәки* **ауыҙға инеп барыу** бик йотлоғоп тыңлау. □ Слушать внимательно. ■ *[Ниса — Камилға:] Зинүнәнең ауыҙына инә яҙҙың да баһа, оятһыҙ!* Ә. Вәли. **Ауыҙға йоҙаҡ ҡабыу** өндәшер ерҙә өндәшмәү. □ Помалкивать, воды в рот набрать, играть в молчанку. ■ *Айбулат, ауыҙына йоҙаҡ ҡапҡандай, өндәшмәй-тындашмай ултырып сәй эсте лә ҡайтып китте.* Һ. Дәүләтшина. **Ауыҙға <ҡара> ҡан тулыу** бик ауыр хәлдә ҡалыу. □ Попасть в трудное положение. ■ *Ауыҙына ҡара ҡан тулғанда ла серен бирмәҫ намыҫлы ир.* Т. Хәйбуллин. **Ауыҙға ҡарап тороу** ни әйткәнде көтөп тыңларға әҙер тороу. □ Смотреть в рот *кому.* ■ *[Әбей:] Беҙҙә үҫтең. Ҡунаҡлар итәгең булмағандай, шул Фәрхиә ауыҙына ҡарап тораһың.* Х. Ғиләжев. **Ауыҙға ҡаратыу** һүҙгә әүрәтеп, бөтә иғтибарҙы алыу. □ Отвлекать, развлекать разговором *кого,* заставить внимательно слушать. ■ *Мөктәсим ҡарт әңгәмәһен һөйләп, кешене ауыҙына ҡаратып ултыра ине.* С. Кулибай. **Ауыҙға һуҡмаҫ** низер әйтергә, һорарға тәүәккәлләгән йәки тәүәккәллек итергә кәңәш биргән саҡта әйтелә. □ Не бойся, не укусит. ■ *Мин ни, ауыҙға һуҡмаҫ әле, тинем дә әйттем дә һалдым.* М. Тажи. **Ауыҙ астырмау** һүҙ әйтергә ирек бирмәү. □ Не давать рта раскрыть, не давать сказать *что.* ■ *Бирәү ҡаршы һүҙ әйтмәй. Ҡайҙа ул әйтеү, теге Мәсғүтов ауыҙыңды ла астырмай.* Р. Солтангәрәев. **Ауыҙҙан өҙөү** ашар ризыҡты бүлеү. □ Делиться, отрывать от себя. ■ *Балаларҙың ауыҙынан өҙөп биреү.* **Ауыҙҙан ут сәсеү** ярһып, сәсрәп һөйләү. □ Говорить смело; оскорблять. *букв.* Метать огонь изо рта. **Ауыҙҙан һүҙ алыу** бер нәмәне әйттереү, һөйләтеү. □ Заставить заговорить. **Ауыҙҙа һүҙ тормау** сер һаҡламау. □ Быть болтливым, не способным хранить тайну. ■ *[Сынбулатов:] Ҡара, Тәнзилә еңгә, һинең ауыҙыңда һүҙ тормай торған. Был хаҡта .. сәсеп ташлайһы булма.* М. Тажи. **Ауыҙын ҡаплау** (*йәки* **ябыу**) өндәшмәҫлек итеү; өнөн тығыу. □ Заткнуть рот, заставить замолчать. ■ *Афзал ошоларҙы әйтте һалды, Ғимайҙың ауыҙын ҡапланы.* С. Ҡудаш. **Ауыҙҙы сөйгә элеү** 1) кәрәк ерҙә һөйләшмәү. Помалкивать, набрать воды в рот. ■ *[Йәнтимер:] Улай ауыҙыңды сөйгә элеп, урам тапап йөрөһәң, ғүмерҙә эш таба алмаҫһың.* С. Агиш; 2) асығыу, ас ултырыу. □ Голодать. ■ *Байҙар ҡаҙан аҫҡанда, ярлы ауыҙын сөйгә элә.* Халыҡ йырынан. **Ауыҙ йомоу** өндәшмәҫ булыу, һөйләшмәү. □ Молчать, перестать говорить. ■ *Ә шулай ҙа һүҙ әйтергә кәрәк, ауыҙ йомоп ҡалыу — мәсхәрә.* М. Ямалетдинов. **Ауыҙ күтәреп һөйләү** *йәки* **йырлау** оялып-тартынып тормай һүҙ һөйләү, йырлау һ. б. □ Осмелиться заговорить *или* запеть. ■ *[Емеш:] Уй, шул хәтле кеше алдын-*

*да ҡалай ауыҙ күтәреп йырлап тормаҡ кәрәк.* З. Биишева. **Ауыҙ ҡолаҡҡа етеү** ныҡ шатланып йылмайыу. □ Очень обрадоваться. *букв.* Растянуть рот до ушей. ■ *Йәғәфәрҙең ауыҙы ҡолағына еткән. Ул, ах та ух килеп, һәр балығының нисек эләккәнен һөйләй.* Ф. Иҫәнғолов. **Ауыҙ менән ҡош тотоу** уңған, булдыҡлы булыу. □ Быть очень способным. **Ауыҙ тултырып һөйләү** ҙур, оло итеп хәбәр итеү. □ Говорить в полный голос. **Ауыҙ һыуы ҡойолоу** бик ашағы килеү; һеләгәй ҡойолоу. □ Слюнки текут (потекли) *у кого.* ■ *Ә айыу .. бал өмөт итеп, ауыҙының һыуы ҡойолоп ятҡан төлкөнө бөтөнләй онотҡан.* Ж. Кейекбаев. **Ауыҙ һыуын ҡоротоп һөйләү** ҙур ләҙҙәт табып (һөйләү). □ Рассказывать со смаком. ■ *Күршекүлән ауыҙ һыуы ҡороп: «Себерҙә ат осһоҙ икән...» — тип һөйләй.* Б. Бикбай. **Ауыҙы арандай** *йәки* **аран ауыҙ** самаһыҙ ҙур йәки ҙур асылған ауыҙ. □ Большеротый. **Ауыҙы бер (***йәки* **биш) бешерем** саманан тыш ҡалын иренле кешегә ҡарата әйтелә. □ Губастый. **Ауыҙынан күбек сәсеү** асыу менән ярһып һөйләү. □ Говорить с пеной у рта. **Ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ** хаяһыҙ, әшәке һүҙле кешегә ҡарата әйтелә. □ Сквернослов. **Ауыҙын асһа, үпкәһе күренә** бик ярлы кешегә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Гол как сокол. ■ *Бик ярлыландылар [Әлимәләр], ауыҙҙарын асһа, үпкәләре күренеп тора.* Д. Юлтый. **Ауыҙыңа бал да май!** яҡшы хәбәр килтергән кешегә әйтелә. □ *букв.* В рот тебе мёд да масло (*говорят тому, кто принёс добрую весть*). **Ауыҙыңдан ел алһын!** Ышаныуҙар буйынса, ошо һүҙҙәр ярҙамында ҡарғыштың, тел-тештең, нахаҡ һүҙҙәрҙең тәьҫирен туҡтатып була. □ Говорят тому, кто принес дурную весть. *соотв.* Типун тебе на язык. *досл.* Пусть из рта возьмёт ветер. По поверьям, этим выражением можно остановить действие проклятия, злословия. ■ *[Раушания:] Кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр .. Ауыҙыңдан ел алһын, балам.* Р. Камал. **Ауыҙ эсендә бутҡа бешереү** аңлайышһыҙ итеп һөйләү, мығырлау. □ Говорить невнятно и вяло; мямлить. **Бер-ике ауыҙ һүҙ** 1) бәләкәй генә хәбәр. □ Весточка; 2) ҡыҫҡа мәғлүмәт. □ Короткое сообщение. **Бер ауыҙ һүҙ** *ҡар.* **һүҙ. Бәлеш ауыҙ** илаҡ кешегә әйтелә. □ Плакса. **Ебегән ауыҙ** 1) һүҙен һөйләй алмай илап торған кешегә әйтелә. □ Мямля; 2) булдыҡһыҙ, бешмәгән. □ Растяпа, размазня. **Иләк ауыҙ** ауыҙында һүҙ тормаҫ кешегә әйтелә. □ Болтун, болтушка. **Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ** көтмәгәндә бер аптырарлыҡ хәбәр ишеткәндә әйтелә. □ Говорится при неожиданно услышанной вести. ■ *«Бынағайыш! — тине әбей. — Иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ тигәндәй, ул һуғыш әллә ҡарсыҡтарға кәрәк тиһеңме?»* Х. Мохтар. **Йырыҡ ауыҙ** бушҡа көлөп торған кешегә әйтелә. □ Хохотун, хохотушка. **Мәмәй ауыҙ** *ҡар.* **мәмәй 2. Тишек ауыҙ** *ҡар.* **иләк ауыҙ. Үлеп барғанда ауыҙыңа бер тамсы һыу һалмаҫ** кешегә яҡшылыҡ эшләмәгән, ҡаты бәғерле кешегә ҡарата әйтелә. □ Безжалостный, жестокий. **Урам ауыҙ** ауыл буйлап ғәйбәт һөйләп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Сплетник, сплетница. **Яман ауыҙ** әшәке һүҙле, әҙәпһеҙ, оятһыҙ һүҙҙәр менән һүгенеүсе. □ Сквернослов.

**АУЫҪ АСЫУ (ауыҙ ас-)** (Р.: заговорить; И.: speak (to); Т.: konuşmaya girişmek) *ҡ.*

**1.** Һөйләшә башлау, һөйләй башлау. □ Заговорить, раскрыть рот.

**2.** *Ниҙелер* эшләй алмайынса буш ҡалыу. □ Проморгать.

**3.** Аптырап ҡарап тороу; аңшайыу, таң ҡалыу. □ Разинуть рот. ■ *[Жирников:] Тотоноғоҙ, мужиктар, эшкә, нимә ауыҙығыҙҙы асып тораһығыҙ!* З. Ураҡсин.

**4.** *күсм. көлк.* Йыртылыу *(аяҡ кейеме тураһында).* □ *шутл.* Изодраться *(об обуви). Бер туфлийы ауыҙын асҡан.*

**5.** *дини.* Ураҙала кис ашар алдынан тоҙ йәки емеш ҡабыу. □ Во время поста вечером перед едой брать в рот соль или сухофрукты. *Тоҙ менән ауыҙ асыу.*

**6.** *дини.* Ураҙала үткәрелгән мәжлес. □ Ифтар *(угощение в дни уразы).*

**АУЫҘАУ (ауыҙа-)** (Р.: сделать отверстие; И.: bore a hole; Т.: delik yapmak) *ҡ.*

Балын алыу өсөн ҡорт ҡунған ағасты йыҡмай тишеп ауыҙ яһау. □ Сделать отверстие *(чтобы набрать мёд из ствола дерева, где роятся пчёлы).*

**АУЫҘ БЕШЕҮ (ауыҙ беш-)** (Р.: попасть впросак; И.: be taken in; Т.: çürük tahtaya basmak) *ҡ.*

Яңылышып, бүтән улай итмәҫтәй булыу; һабаҡ алыу. □ Попасть впросак, погореть. ■ *Ауыҙы бешкән халыҡ алдын-артын ҡарау, итәк-еңен йыйыу хәстәрен күрә.* Ф. Исәнғолов.

**АУЫҘБЕШМӘ** (Р.: ящур; И.: foot-and-mouth disease; Т.: aft humması) *и. диал.*

Бешмә. □ Ящур.

**АУЫҘ ГАРМУНЫ** (Р.: губная гармошка; И.: harmonica; Т.: mızıka) *и.*

Ауыҙға ҡуйып, өрөп уйнала торған бәләкәй музыка ҡоралы. □ Губная гармошка.

**АУЫҘҒА АЛЫУ (ауыҙға ал-)** (Р.: брать в рот; И.: take into one's mouth; Т.: ağıza almak) *ҡ.*

**1.** Ауыҙға ҡабыу. □ Брать в рот. ■ *Бер нисә аҙна үткәс, Аҡназар әҙләп-әҙләп ауыҙына аш ала башлай.* Әкиәттән.

**2.** *күсм. Кем* йәки *нимә* хаҡындалыр һүҙ ҡуҙғатып әйтеү; телгә алыу. □ Вспоминать, начать разговор. ■ *Өләсәһе, ауыҙына бер алғас, өҙмәне лә ҡуйманы. Хәйҙәргә мәктәпкә барыуҙан башҡа сара ҡалманы.* Ф. Исәнғолов.

**АУЫҘҘАНМАУ (ауыҙҙанма-)** (Р.: не сосать после рождения; И.: not to suckle after birth; Т.: doğunca emmemek) *ҡ. диал.*

Тыуғас та иммәү. □ Не сосать после рождения. ■ *Бала оҙаҡ имсәк алмаһа, ауыҙҙанмай тип кендек инәһе ишек, йүшкә асып ҡуйған.* Ф. Хисамитдинова.

**АУЫҘҘАН ҺАЛМАУ (ауыҙҙан һалма-)** (Р.: часто говорить *о ком-то*; И.: speak often of somebody; Т.: bir şeyi sık sık tartışmak) *ҡ. диал.*

Телдән төшөрмәү. □ Часто говорить *о ком-то (о чём-то).*

**АУЫҘҘАУЫҠ (ауыҙҙауығы)** (Р.: ящур; И.: murrain; Т.: şap) *и. диал.*

**1.** Бешмә. □ Ящур.

**2.** Ауырыу эйәһе. □ Дух болезни.

**АУЫҘ ИТЕҮ (ауыҙ ит-)** (Р.: отведать; И.: taste; Т.: tadına bakmak) *ҡ.*

Ашап ҡарау, тәмләү. □ Отведать, попробовать *(пищу).* ■ *Йыһания менән Миләүшә ситтә, күҙ йәштәрен йотоп, тәрилкә йыйа. Уларға тағы сират етмәне, һурпа ла, балыҡ та ауыҙ итә алманылар.* Р. Камал. *Май айында ете төрлө үлән ауыҙ итергә кәрәк.* Халыҡ ижадынан.

**АУЫҘ ЙОМОУ (ауыҙ йом-)** (Р.: молчать; И.: keep silent; Т.: susmak) *ҡ.*

Өндәшмәҫ булыу, һөйләшмәү. □ Не разговаривать, молчать. ■ *Ҡәйнешең булғас, ниңә һөйләшмәҫкә, нисек гел генә ауыҙ йомоп йөрөргә.* Т. Хәйбуллин.

**АУЫҘ ЙЫРЫУ (ауыҙ йыр-)** (Р.: скалить зубы; И.: grin; Т.: sırıtmak) *ҡ.*

Бушҡа көлөү. □ Скалить зубы. ■ *[Самат:] Ауыҙығыҙҙы бик иртә йыраһығыҙ, иларға тура килмәһен.* Х. Ибраһимов.

**АУЫҘЛАНДЫРЫУ (ауыҙландыр-)** (Р.: давать отведать; И.: let taste; Т.: tadına baktırmak) *ҡ.*

**1.** Ауыҙ иттереү, ҡаптырып ҡарау. □ Давать отведывать, пробовать.

**2.** *этн.* Яңы тыуған балаға, йола буйынса, башлап ризыҡ (бал, май) ҡаптырыу. □ Обычай первого кормления новорождённого. ■ *Баҙыян еңгә аҡ йүргәккә төргән йомро башлы, ҡып-ҡыҙыл кескәй генә йоморсаҡты күкрәгенә ҡыҫып, йәтеш кенә итеп күтәреп алды ла илап, ҡысҡырып торған ауыҙына бер балғалаҡ май, бер балғалаҡ бал ҡаптырҙы.* З. Биишева.

**3.** *диал.* Ҡәйнәнең оҙатылып килгән киленгә бал менән май ҡаптырыуы. □ Обряд угощения невесты мёдом и маслом. *Бал кеүек татлы, май кеүек йомшаҡ бул тип, ҡәйнә киленен ауыҙландыра.*

**АУЫҘЛАНЫУ I (ауыҙлан-)** (Р.: отведать; И.: taste; Т.: tatmak) *ҡ.*

**1.** Ауыҙға əҙ генə аҙыҡ алыу, ауыҙ итеү. □ Отведать, пробовать.

**2.** *этн.* Яңы тыуған баланың, йола буйынса, башлап ризыҡ (бал, май) тəмлəүе. □ Обычай первого кормления новорождённого.

**АУЫҘЛАНЫУ II (ауыҙлан-)** (Р.: прорываться *(о гнойнике)*; И.: break; Т.: yırtılmak (apse hakkında) *ҡ.*

Ослайып тишелеү *(шешеккə ҡарата).* □ Прорываться *(о гнойнике). Сикан ауыҙланып тора.*

**АУЫҘЛАУ (ауыҙла-)** (Р.: отведывать; И.: taste; Т.: tatmak) *ҡ.*

Тəмлəп ҡарау, ашап ҡарау, ауыҙ итеү. □ Отведывать, пробовать. ■ *[Əбей — абыстайға:] Ҡырын күҙ һалманың. Өйөңдөң түренə үрлəттең. Байтаҡ ҡул ереңдə ауыҙланым, усыңа йома белмəнең.* Т. Хəйбуллин.

**АУЫҘЛЫҠ I (ауыҙлығы)** (Р.: грызло; И.: bit; Т.: gem) *и. этн.*

Йүгəндең ат ауыҙына кейҙерелə торған быуынлы тимере. □ Грызло, удила, мундштук, трензель. ■ *Күк килгəндə, өлəсəй бахыр йүгəн тотоп, шуның ауыҙлығын шылтыратып, өй эсен бер итеп йөрөй торғайны.* Халыҡ ижадынан. ● *Ат өйрəнмəйем ти ҙə, ауыҙлыҡ өйрəтə.* Əйтем. *Серен белмəгəн аттың ауыҙлығын һалдырма.* Əйтем. *Ат башына эш төшһə, ауыҙлыҡ менəн һыу эсер.* Əйтем.

♦ **Ауыҙлығын тартып ҡарау** *кемдеңдер* уйын, ниəтен белер өсөн ситлəтеп һөйлəшеү. □ Прощупывать, пытаться узнать *чьи-л.* намерения.

**АУЫҘЛЫҠ II (ауыҙлығы)** *и. диал. ҡар.* **телбешмə.**

**АУЫҘЛЫҠ БУЛЫУ (ауыҙлыҡ бул-)** (Р.: болеть ящуром; И.: ill with foot-and-mouth disease; Т.: şap ile ağrımak) *ҡ.*

**1.** *вет.* Телбешмə менəн ауырыу. □ Болеть ящуром.

**2.** *мед.* Ауыҙ сите иҙелеү, сейлəнеү. □ Заеды.

**АУЫҘЛЫҠ ИМЕ** (Р.: заеда; И.: perleche; Т.: perleş) *и.*

Ауыҙлыҡ булғанда ауырыуҙы, ғəҙəттə, ат ауыҙлығын тешлəтеп имлəү. □ При заедах лечат удилами лошади.

**АУЫҘЛЫҠЛАНЫУ (ауыҙлыҡлан-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ауыҙлыҡлау 1**. *страд. от* **ауыҙлыҡлау 1**.

**АУЫҘЛЫҠЛАТЫУ (ауыҙлыҡлат-)** *ҡ. йөкм. ҡар.* **ауыҙлыҡлау 1**. *понуд. от* **ауыҙлыҡлау 1**.

**АУЫҘЛЫҠЛАУ (ауыҙлыҡла-)** (Р.: взнуздывать; И.: curb; Т.: gem vurmak) *ҡ.*

**1.** Ауыҙлыҡ кейҙереү. □ Взнуздывать, зануздывать, обуздывать. *Айғырҙы ауыҙлыҡлау.* ■ *[Күсəрхан — Ҡуҙыйкүрпəскə:] Инде һин ана теге өс йыл тыу йөрөгəн бейəне тотоп, ауыҙлыҡлап, бында килтер.* «Ҡуҙыйкүрпəс менəн Маянһылыу».

**2.** *күсм.* Ҡаты сара менəн ихтыярҙан мəхрүм итеп, үҙ иркеңə буйһондороу. □ Укрощать, смирять, обуздывать. ■ *Ерҙəге бар яуызлыҡты ауыҙлыҡлап алғым килə.* Н. Нəжми. *Нəпсеңде үҙ ваҡытында, тейешле урынында ауыҙлыҡлай белергə кəрəк.* Д. Исламов.

**АУЫҘ-МОРОН** (Р.: рот и нос; И.: mouth and nose; Т.: ağız ve burun) *и. йыйн.*

Ауыҙ менəн танау. □ Рот и нос. ● *Ауыҙмороноң ҡысыһа, күстəнəс ашайһың.* Һынамыш.

**АУЫҘ ОСОНОУ (ауыҙ осон-)** (Р.: появление герпеса; И.: be cracked (with cold sores); Т.: uçuk çıkması) *ҡ. мед.*

Ауыҙ, ирендəргə бөрсөк-бөрсөк сабыртмалар сығыу. □ Обметать, появление герпеса. ■ *Ышаныуҙар буйынса, ауыҙға яман заттар тейһə (үпһə, ҡағылһа, һуҡһа) йəки улар ауыҙ иткəн аш-һыуҙы, ҡағылған һауыт-һабаны ауыҙға тейҙерһəң, ауыҙ осона, йəғни ауыҙға бөрсөк-бөрсөк сабыртма сыға. Был ауырыуҙы, ғəҙəттə, ат ауыҙлығын тешлəтеп имлəйҙəр.* Ф. Хисамитдинова.

**АУЫҘСА** (Р.: устьице; И.: stoma; Т.: ağız) *и. бот.*

Япраҡ тиресәһенең күҙәнәктәре араһындағы тишек *(дым һәм һауа алышыныу өсөн)*. □ Устьице. *Һыу ауыҙсалары. Һабаҡ ауыҙсалары.*

**АУЫҘ ТАҘЫ** (Р.: парша рта; И.: tetter (veterinary condition); Т.: ağız keli) *и. вет.*

Малдың ауыҙ тирәһе боҙолоу. □ Парша рта, адоральная парша.

**АУЫҘ-ТЕЛ: ауыҙ-тел ижады** (Р.: народное творчество; И.: amateur and folk arts; Т.: folklör) *и.*

Халыҡ ижадсылары тарафынан барлыҡҡа килтерелеп быуындан быуынға күсеп килгән мәҙәниәт ҡомартҡылары; халыҡ ижады. □ Народное творчество. *Ауыҙ-тел ижадын йыйыу.*

**АУЫҠ (ауығы)** [ғәр. عوق ‘ҡамасаулау, туҡтатыу’] (Р.: промежуток; И.: interval; Т.: vakit aralığı) *и.*

Ваҡыт араһы, күпмелер ваҡыт. □ Промежуток, интервал *(во времени)*. ■ *Саба торған аттар ауыҡҡа ла, оҙонға ла китте.* М. Буранғолов.

♦ **Бер ауыҡ** бер аҙ ваҡыт. □ Некоторое время. ■ *Ике батыр ҙа ҡылыстарын танау осонда ғына ҡулға-кул терәгән көйө бер ауыҡ ҡатып ҡалғандар.* Ғ. Хөсәйенов.

**АУЫЛ** [дөйөм төрки; боронғо төрки *ағыл* ‘ауыл’] (Р.: село; И.: village; Т.: köy) *и.*

Ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүсе кешеләр йәшәгән урын. □ Село, селение, деревня. *Ауыл биләмәһе. Бәләкәй ауыл. Ҙур ауыл. Иҫке ауыл. Тыуған ауыл. Күрше ауыл. Ауыл ере. Ауыл клубы. Ауыл мәктәбе. Ауыл тормошо. Ауыл кешеләре.* ■ *Ауыл өҫтөндә ҡоҙғон ҡорҡолдаһа, ауылдан мәйет сыға.* **Ауыл араһы** урамдағы өй һәм кешеләр, урам буйы. *Ауыл араһына сығыу.* **Ауыл ашаһы** бер нисә ауыл аша ятҡан. *Ауыл ашаһы ер.*

**АУЫЛ БАШЫ** (Р.: староста; И.: mayor; Т.: muhtar) *и.*

Ауылда етәкселек итеүсе; етәксе. □ Староста аула.

**АУЫЛДАУ (ауылда-)** (Р.: аукать.; И.: shout «hi»; Т.: au demek) *ҡ.*

Ау-ау итеп ҡысҡырыу. □ Аукать. ■ *Ҡайҙалыр балаһын саҡырып илек ауылдай.* Я. Хамматов.

**АУЫЛДАШ** (Р.: односельчане; И.: fellow villager; Т.: aynı köyden) *и.*

Бер ауылдан булған кешеләр *(бер-береһенә ҡарата)*. □ Односельчане. *Ауылдаштарҙы осратыу.* ■ *[Зөләйха:] Әйе, ул минең ауылдаш ҡыҙым ине. Уның менән бер класта, бер партала ултырып уҡый торғайныҡ.* Н. Мусин.

**АУЫЛ ҠАРЛУҒАСЫ** (Р.: деревенская ласточка; И.: barn swallow; Т.: köy kırlangıcı) *и. зоол.*

Тар, оҙон, осло ҡойроғо бик тәрән ярылған, һырты йымылдап торған күкһел ҡара, тамағы ҡара һыҙыҡ менән уратып алынған ерәнһыу көрән төҫтә булған, күп ваҡытын һауала үткәргән ҡош. □ Деревенская ласточка (лат. *Hirundo rustica*). ■ *Ауыл ҡарлуғасы ояһын ҡыйыҡ эстәренә, аҙбарға, келәттәргә, күпер аҫтарына балсыҡтан һылап эшләй.* Э. Ишбирҙин.

**АУЫЛНАЙ** (Р.: аульный; И.: senior(man); Т.: köy başlığı) *и. иҫк. тар.*

Ауыл менән идара итеү өсөн ҡуйылған кеше; ауыл башлығы. □ Аульный *(выборное лицо, управляющее селением у башкир). Ауылнай һайлау.*

**АУЫЛСА** (Р.: по-деревенски; И.: like in the country; Т.: köylüler gibi) *р.*

Ауылға хас. □ По-деревенски, как в деревне. *Ауылса һыйлау.*

**АУЫЛ САНАҺЫ** *и. ҡар.* **артлы сана**.

**АУЫЛСЫ** (Р.: без дела шатающийся; И.: idle away; Т.: işsiz dolaşan) *и.*

**1.** Ауыл араһында йөрөргә яратҡан кеше; йөрөмтәл. □ Без дела шатающийся по деревне. *Ауылсы ҡатын.* ■ *Ябалаҡ һымаҡ ялпанлап, ауылсы булма, киленсәк.* Туй йырынан.

**2.** *диал. ҡар.* **яусы.**

**3.** *миф.* Йоғошло ауырыуҙарҙың дөйөм атамаһы. □ Общее название инфекционных болезней.

**АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ** (Р.: сельское хозяйство; И.: agriculture, farming; Т.: çiftçilik) *и.*

Матди етештереүҙең игенселек һәм малсылыҡ менән шөғөлләнгән төп тармағы. □ Сельское хозяйство. *Ауыл хужалығы ерҙәре. Ауыл хужалығы машиналары. Ауыл хужалығы күргәҙмәһе.*

**АУЫМБАҠ I (ауымбағы)** (Р.: краснозобая гагара; И.: loon species; Т.: kızıl gerdanlı dalgıç) *и. зоол.*

Һирәк осрай торған, ҡаҙҙан бәләкәйерәк күсмә ҡош. Кәүҙәһенең өҫкө яғы аҡһыл таплы һарғылт көрән, аҫҡы яғы аҡ, башы һоро, муйын аҫты ерән ҡыҙыл була. □ Краснозобая гагара (лат. *Gavia stellata*). ■ *Ауымбаҡ ярҙары ҡуйы ҡамыш һәм үлән менән ҡапланған батҡыллы күлдәрҙә йәшәй. .. Беҙҙә ояламай, яҙлы-көҙлө үтеп барышлай ғына туҡтай.* Э. Ишбирҙин.

**АУЫМБАҠ II (ауымбағы)** (Р.: одуванчик; И.: dandelion; Т.: karahindiba) *и. бот. диал.*

Бәпембә. □ Одуванчик (лат. *Taraxacum*).

**АУЫН** (Р.: ловушка для птиц; И.: noose; Т.: ilmikli kapan) *и.*

Ҡош тота торған ау *(төбөн тарырак, ауыҙын ҡор, һуйыр һыйырлыҡ киң итеп, уратып ҡаҙыҡ ҡағалар; ҡаҙыҡтарҙың өҫкө осон уратып ҡуша бәйләйҙәр; уртаға тағы бер ҡаҙыҡ ҡағып ҡуялар; өҫкә өйрөлөп тора торған арҡыры таяҡ һалалар ҙа, шул таяҡҡа иген башаҡтары йәки емешле ағас ботаҡтары бәйләйҙәр; ҡош килеп емгә ултырһа, тәкмәсләп эскә төшә, ә ем кире әйләнеп, тағы күтәрелеп ултыра).* □ Ловушка для птиц, силок.

**АУЫНҠЫ** (Р.: наклонный; И.: sloping; Т.: eğik) *с.*

Бер яҡҡа ауышыраҡ. □ Наклонный. *Ауынҡы өҫтәл.*

**АУЫР I** (Р.: тяжёлый; И.: heavy; Т.: ağır) *с.*

**1.** Ауырлығы ҙур; һәлмәк, тос; *киреһе* — еңел. □ Тяжёлый, тяжеловесный, увесистый. *Ауыр йөк. Ауыр кәүҙәле кеше. Ауыр һөйәкле.* ■ *Урал, ни эшләргә, ҡайҙа барырға, тип аптырап торғанда, арҡаһына ауыр тоҡ йөкмәп уҙып барған бик һылыу бер ҡыҙҙы күреп ҡалды, ти.* «Урал батыр».

**2.** Үҙләштереүгә, аңлауға, башҡарыуға ҡыйын; ҡатмарлы. □ Тяжёлый, трудный, тягостный. *Ауыр артылыш. Ауыр дәрес. Ауыр мәсьәлә. Ауыр эш. Ауыр юл.* ■ *Кешелә сәм тигән нәмә уянған икән, уны туҡтатып ҡалыу бик ауырҙыр.* Ғ. Аллаяров.

**3.** Ҡыйынлыҡтар, мохтажлыҡтар менән тулы; интектергес, яфалы. □ Тяжёлый, трудный, обременительный. *Ауыр йыл. Ауыр тормош. Ауыр һуғыш. Ауыр шарттар. Ауыр яҙмыш.* ■ *Һуғыш монары ҡапланы Ватандың яҡты күген, һеҙҙең дә иңдәр күтәрҙе һуғыштың ауыр йөгөн.* Р. Ниғмәти. *Онотмайыҡ ауыр яу йылдарын, яу йылдары — йөрәк хәтере.* Р. Шәкүр.

**4.** Аяуһыҙ, ҡаты, етди. □ Тяжёлый, сильный, серьёзный. *Ауыр ғәйеп. Ауыр енәйәт. Ауыр хөкөм.*

**5.** Яй ҡуҙғалған, әкрен хәрәкәт иткән, һалмаҡ. □ Тяжёлый, грузный *(о движении). Ауыр аҙым. Ауыр хәрәкәт.*

**6.** Күңелгә ҡыйын; ҡайғылы, бошонҡо. □ Тяжёлый, мрачный, гнетущий. *Ауыр кисереш. Ауыр ҡайғы. Ауыр тойғо. Ауыр тынлыҡ. Ауыр уйҙар. Ауыр хәбәр.* ■ *Зәйнәп тә шул ауыр хистәрен бушатырға һорай торғандыр.* Ғ. Сәләм. *Әллә нисек ауыр тәьҫир итә тыуған-үҫкән илде уйлауы.* Халыҡ йырынан.

**7.** Насар холоҡло, яман характерлы. □ Тяжёлый, трудный *(о человеке, характере). Ауыр холоҡло.*

**8.** Тыныс, үҙ-үҙен тота белеүсән, иҫе китмәүсән. □ Спокойный, невозмутимый. *Ауыр тәбиғәтле кеше.*

**9.** Һулыш өсөн насар; тонсоу. □ Душный, затхлый. *Ауыр һауа.* ■ *Баш әйләнә, танауға ниндәйҙер ауыр еҫ бәрелә.* С. Агиш.

♦ **Ауырға алыу** йәберһенеү, үпкәләү. □ Принимать близко, обижаться. ■ *[Ниғмәт:] Ауырға алма. Көсләп аскан күҙҙең нуры юк.* Ҡ. Аралбаев. **Ауыр тупрағы еңел**

**булһын** үлгән кешегә теләк итеп әйтелә. □ *соотв.* Да будет земля ему пухом, мир его праху. **Күңелгә ауыр булыу** *кар.* **күңел. Ҡул арты ауыр** *кар.* **ҡул.**

**АУЫР II** (Р.: тяжело; И.: painfully; Т.: zor) *р.*

Интектергес, яфалы. □ Тяжело, трудно, тягостно. *Ауыр йөрөү. Ауыр күтәрелеү.*

**АУЫР III** (Р.: плод; И.: embryo; Т.: embriyon) *и. һөйл.*

Буйҙағы бала; йөк. □ Плод, зародыш. *Өс айлыҡ ауыры бар. Алты айлыҡ ауыр күтәргән.* ■ *Ҡушылған көндө үк минең ауырым булып ҡалды.* Әкиәттән.

**АУЫРАЙТЫУ (ауырайт-)** (Р.: отяжелеть; И.: grow heavy; Т.: ağırlatmak) *ҡ.*

**1.** Ауырға әйләндереү, ауыр итеү. □ Отяжелеть, отягощать. *Йөктө ауырайтыу. Ямғыр һаламды ауырайтты.*

**2.** Ҡыйынға әйләндереү, ҡыйынлаштырыу. □ Затруднять, осложнять, усложнять, ухудшать. *Хәлде ауырайтыу.* ■ *Арба тәгәрмәстәренә батҡаҡ уралып, саҡ-саҡ атлаған хайуандарҙың хәлен тағы ла ауырайтты.* Ғ. Аллаяров.

**3.** *эйһ. ф. кар.* **ауырайыу 4.**

**АУЫРАЙЫУ (ауырай-, ауырая)** (Р.: тяжелеть; И.: increase in weight; Т.: ağırlaşmak) *ҡ.*

**1.** Ауырға әйләнеү, ауыр булыу. □ Тяжелеть, увеличиваться в весе. *Йөк ауырайҙы.*

**2.** Ҡыйынға әйләнеү; ҡыйынлашыу. □ Затрудняться, осложняться, усложняться. *Еүешлектән ишекте ябыу ауырайҙы.* ■ *Ҡом тулһа, [винтовканың] затворын асыу, ябыу эше атҡан һайын ауырая.* Д. Юлтый.

**3.** Етешһеҙгә, мохтажға әйләнеү; ҡыйынлашыу. □ Стать обременительным, становиться трудным, сложным. *Заманалар ауырайҙы.* ■ *Хәҙер тормош ауырайҙы шул. Бер яҡтан тағы ла һуғыш башланды, икенсе яҡтан Әлкаман бай ҡыҫа.* Ш. Насыров.

**4.** Йоҡо баҫыу, йоҡомһорау. □ Отяжелеть. *Ауырайып торам, бер ҙә яйым юҡ.* ■ *Мин окопта тубыкланып ултырҙым. Күҙ алдары ҡараңғылана, күҙ ҡабаҡтары ауырая башланы.* С. Кулибай.

**5.** Насарға табан китеү *(һаулыҡҡа ҡарата).* □ Ухудшаться *(о здоровье). Үпкә ауырыулы кешеләрҙең хәле яҙлы-көҙлө ауырая.*

**6.** *миф.* Ен-шайтан, албаҫты баҫыу. □ Видеть кошмарные сновидения.

**АУЫР ҺӨЙӘКЛЕ** (Р.: человек тяжёлый на подъём; И.: pessimist; Т.: kötümser) *с.*

Ауыр йөрөй; яй. □ Неповоротливый.

**АУЫР АЯҠЛЫ** (Р.: беременная; И.: pregnant; Т.: hamile) *с.*

Ауырлы, йөклө. □ Беременная. *Ауыр аяҡлы ҡатынға мәйеткә, ғәрип кешегә ҡарарға ярамай.*

**АУЫРҒА ҠАЛЫУ (ауырға ҡал-)** (Р.: забеременеть; И.: become pregnant; Т.: gebe kalmak) *ҡ.*

Йөклө булыу; буйға ҡалыу. □ Забеременеть. ■ *Боронғо кешеләр орлоҡ сәсеүҙе Ерҙең түлләнеүе (ауырға ҡалыуы, гөманлы булыуы) тип белгән.* Ә. Сөләймәнов.

**АУЫР ҠУЛЛЫ** *с. кар.* **ауыр аяҡлы**.

**АУЫРЛАНЫУ (ауырлан-)** *ҡ. кар.* **ауырайыу.**

**АУЫРЛАТЫУ (ауырлат-)** *ҡ. кар.* **ауырайтыу.**

**АУЫРЛАШТЫРЫУ (ауырлаштыр-)** (Р.: осложнять; И.: complicate; Т.: güçleştirmek) *ҡ.*

**1.** Ҡыйын хәлгә ҡуйыу; ҡыйынлаштырыу. □ Осложнять, усложнять. *Ямғыр эште ауырлаштырҙы.*

**2.** Насарайтыу, насарлатыу, насарландырыу. □ Ухудшать. *Төньяҡ климаты уның хәлен ауырлаштырҙы.*

**АУЫРЛАШЫУ (ауырлаш-)** (Р.: затрудняться; И.: have difficulty; Т.: zorluklaşmak) *ҡ.*

**1.** Ауыр хәлгә ҡалыу; ҡыйынлашыу. □ Затрудняться, осложняться, усложняться. *Ямғырға киткәс бесән әҙерләү эше ауырлашты.*

**2.** Етешһеҙгә, мохтажға әйләнеү; ҡыйынлашыу. □ Становиться сложным, трудным. ■ *[Шәһиткә] 11 йәш тигәндә атаһы*

*үлеп киткәс, тормош тағы ла ауырлашты.* Ғ. Шафиҡов.

**3.** Насарға табан китеү. □ Ухудшаться. *Ауырыуҙың хәле ауырлашты.*

**АУЫРЛЫ** (Р.: беременная; И.: pregnant; Т.: hamile) *с.*

Ауырға ҡалған; йөклө. □ Беременная. *Ауырлы ҡатын. Ауырлы көйө эшләп йөрөү.*

**АУЫРЛЫҠ I (ауырлығы)** (Р.: вес; И.: weight; Т.: ağırlık) *и.*

**1.** *физ.* Есемдең ергә тартыу көсө менән билдәләнгән үҙенсәлеге. □ Вес. *Атом ауырлығы. Сағыштырма ауырлыҡ. Ауырлыҡ көсө.*

**2.** *Нәмәнең* үлсәүгә һалып билдәләнгән үҙенсәлеге; һәлмәклек. □ Тяжесть, вес. *Ауырлыҡ артыу. Ауырлыҡ күтәреү. Ауырлыҡ кәмеү. Тере ауырлыҡ (малдың). Саф ауырлыҡ. Үҙ ауырлығы. Сағыштырма ауырлыҡ.*

**3.** Башҡарыуҙағы ҡыйынлыҡ; ҡатмарлыҡ. □ Затруднение, трудность. *Ауырлыҡҡа осрау.* ■ *Техник проектты билдәләүҙә бер ауырлыҡ бар ине.* Н. Мусин.

**4.** Көнкүрештәге ҡыйынлыҡ, мохтажлыҡ. □ Тягость, обуза, бремя. *Ауырлыҡ килеү. Ауырлыҡ күреү. Ауырлыҡҡа төшөү.* ■ *Тормош ауыр ҡайсаҡ, ә ир кеше ауырлыҡта ғына һынала.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**5.** Ауырыу. □ Болезнь. ● *Һиңә ауырлыҡ, миңә еңеллек.* Әпсен.

♦ **Ауырлыҡ һалыу** эштең ҡыйын өлөшөн йөкмәтеү. □ Возлагать всю тяжесть работы. ■ *[Булат] бер кемгә ауырлығын һалмай, үҙен ҡарағас та еткән бит инде.* К. Кинйәбулатова.

**АУЫРЛЫҠ II (ауырлығы)** *и. ҡар.* **ауыртмаҡ 1, 3.**

**АУЫРЛЫҠҺЫҘ** (Р.: легко; И.: easily; Т.: kolay) *р.*

Аңлауға, башҡарыуға, үтәүгә ҡыйын түгел; анһат, еңел. □ Легко. ■ *Күптәр инә алмаған ауыр ишектәр уның өсөн [Илһөйәргә] ауырлыҡһыҙ асылды.* Х. Тапаҡов.

**АУЫРСА** (Р.: солёный курут; И.: sort of Bashkir cheese; Т.: başkurt peynir çeşidi) *и. диал.*

Ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгән тоҙло шыйыҡ ҡорот. □ Солёный курут, заготовляемый на зиму.

**АУЫРСЫ** (Р.: очень сладкий; И.: very sweet; Т.: çok tatlı) *с. диал.*

Ныҡ шәрбәтле. □ Очень сладкий.

**АУЫРТМАҠ (ауыртмағы)** (Р.: отвес; И.: plumb; Т.: çekül) *и.*

**1.** Ауырлыҡ өсөн һалынған йәки тағылған нәмә. □ Отвес.

**2.** Сәсте аҫҡа тартып торһон өсөн үрмескә таҡҡан тәңкә. □ Подвеска для волос.

**3.** *диал. ҡар.* **башағас.**

**4.** *диал. ҡар.* **батырғыс.**

**АУЫРТТЫРЫУ (ауырттыр-)** (Р.: причинять боль; И.: cause pain; Т.: acıtmak) *ҡ.*

Ауыртыуға килтереү. □ Причинять боль. *Башты ауырттырыу. Ҡулды ауырттырыу.*

**АУЫРТЫНЫУ (ауыртын-)** (Р.: испытывать боль; И.: feel pain; Т.: acıyı hissetmek) *ҡ.*

Ауыртҡанлыҡ һиҙеү; һыҙланыу. □ Испытывать боль, чувствовать ломоту *(в теле). Ауыртынып тороу.* ■ *Ҡайһы берҙә стенокардия булған ваҡытта ауыртыныу булмай, тик йөрәк ҡыҫҡаны һиҙелә.* З. Заһиҙуллин.

**АУЫРТЫУ (ауырт-)** (Р.: болеть; И.: be ill; Т.: hasta olmak) *ҡ.*

Тән ғазабы кисереү. □ Болеть. *Баш ауыртыу. Бил ауыртыу. Эс ауыртыу.*

♦ **Ауыртҡан ер** (*йәки* **урын**) күңелде әрнеткән нәмәгә ҡарата әйтелә. □ Больное (слабое) место. **Ауыртҡан ергә тейеү** күңелде әрнеткән нәмәгә ҡағылыу. □ *соотв.* Задевать за живое *или* наступать на мозоль. **Ауыртмаҫ** (*йәки* **ауыртмаған) башҡа тимер таяҡ** көтмәгәндә килеп сыҡҡан бәләгә ҡарата әйтелә. □ *соотв.* Не было печали, да черти накачали. *букв.* По здоровой голове да железной палкой. **Ауыртмаған яҡҡа ятыу** уңайлыраҡ юлды һайлау. □ Выбирать, где удобно, где выгодно. ■ *[Әхмәтшәриф:] Өйрәтеүҙән уҙғанһың инде, аҡыл белмәгән бала түгелһең хәҙер. Ауыртмаған яғыңа*

*ят, һуңынан үпкәләргә тура килмәһен.* А. Игебаев.

**АУЫРҺЫНДЫРЫУ (ауырһындыр-)** (Р.: тяготеть; И.: burden; Т.: eğilim göstermek) *к.*

**1.** Ауырға һанатыу; ҡыйынһындырыу. □ Тяготеть, обременять.

**2.** *эйһ. ф. ҡар.* **ауырһыныу 1.**

**АУЫРҺЫНЫУ (ауырһын-)** (Р.: затрудняться; И.: have difficulty; Т.: zorluluk çekmek) *к.*

**1.** Ауыр күреү, ауырға һанау; ҡыйынһыныу. □ Затрудняться, испытывать затруднение *в чём.* ■ *Уның [Ғәлиҙең] эш тураһында ауырһынып, зарланып һөйләгәнен ишеткән кеше юк.* М. Ғафури.

**2.** *диал. ҡар.* **ауырыҡһыныу**.

**АУЫРҺЫУ I (ауырһы-)** (Р.: чувствовать отвращение к пище; И.: have an aversion to food; Т.: yemekten nefret etmek) *к.*

Ашарға ауыр күреү *(нык татлы йәки сөсө ашамлыкты).* □ Чувствовать отвращение к пище *(обычно к сладкой, приторной).*

**АУЫРҺЫУ II** *с. ҡар.* **киңерһеү.**

**АУЫРЫҠҺЫНЫУ (ауырыҡһын-)** (Р.: недомогать; И.: be unwell; Т.: hastalanmak) *к.*

Еңел генә ауырыу; һауһыҙланыу. □ Недомогать. *Ауырыкһынып тороу. Ауырыкһынып торам, хәл юк.*

**АУЫРЫТЫУ (ауырыт-)** (Р.: вызывать болезнь; И.: cause illness; Т.: hastalandırmak) *к.*

**1.** Ауырыу итеү. □ Вызывать болезнь, приводить к заболеванию. *Кешене аяктан үткән һыуыҡ ауырыта.*

**2.** *эйһ. ҡар.* **ауырыу I.**

**АУЫРЫУ I (ауыры-)** (Р.: болеть; И.: fall ill; Т.: hastalanmak) *к.*

Һауһыҙ хәлгә төшөү, һауһыҙ хәлдә булыу; һауһыҙланыу. □ Болеть, заболевать. *Баш ауырыу. Ҡаты ауырыу. Сәсрәп ауырыу.* ■ *Берҙән-бер көндө бабай ауырып, аяктан ауған.* Әкиәттән.

**АУЫРЫУ II** (Р.: болезнь; И.: disease; Т.: hastalık) *и.*

**1.** Организмдың ғәҙәти эшмәкәрлеге боҙолған хәл; һауһыҙлыҡ. □ Болезнь, заболевание. *прост.* Недуг, хворь. *Йоғошло ауырыу. Балалар ауырыуы. Мал ауырыуы. Үҫемлек ауырыуы.* ■ *Сит бисәләр бешергән ашты ашап, Аҡназар бер заман ауырыуға һабыша.* Әкиәттән.

**2.** Ауырыған, сирле кеше. □ Больной, нездоровый. *Ауырыуҙы ҡарау.* ■ *Ауырыуҙың хәле шундай: гел һыҙланып үтә көнө.* К. Шафиҡова.

**АУЫРЫУ III** (Р.: больной; И.: sick; Т.: hasta) *с.*

**1.** Организмдың ғәҙәти эшмәкәрлеге боҙолған; һауһыҙ. □ Больной, нездоровый. *Ауырыу бала. Ауырыу мал.*

**2.** *миф. ҡар.* **ауырыу эйәһе**.

**АУЫРЫУ ЕНЕ** (Р.: злые духи; И.: illness causing spirits; Т.: kötü ruhlar) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, кешегә эйәләшеп, ҡағылып-һуғылып ауырыу иткән яман заттар. □ По поверьям, злые духи, которые своим вселением, прикосновением, ударом приводят к заболеваниям.

**АУЫРЫУ ҠАЙТАРЫУ (ауырыу ҡайтар-)** (Р.: магический способ избавления от болезни; И.: magical way to treat illnesses; Т.: hastalığı gideren büyüleyici usül) *к. миф.*

Ауырыуҙан ҡотолоуҙың магик ысулы. □ Магический способ избавления от болезни.

**АУЫРЫУ-СЫРХАУ** (Р.: разные болезни; И.: diseases; Т.: çeşitli hastalıklar) *и. йыйн.*

**1.** Һәр төрлө ауырыу. □ Разные болезни, заболевания. *Ауырыу-сырхауҙан баш сыҡмау.*

**2.** Ауырыған кешеләр. □ Больные люди, больные.

**АУЫРЫУҒА ҺАБЫШЫУ (ауырыуға һабыш-)** (Р.: слечь; И.: take to one's bed; Т.: hastalanmak) *к.*

Ҡайғынан йәки ауыр кисерештән ауырып китеү. □ Слечь, заболеть от горя, переживаний.

**АУЫРЫУ-ҺЫҘЛАУ** (Р.: разные болезни; И.: illnesses; Т.: farklı hastalıklar) *и. йыйн.*

Һәр төрлө ауырыу; һауһыҙлыҡ. □ Разные болезни, заболевания. ■ *Ауырыу-һыҙлау күрмәгән, үлем барын белмәгән.* «Урал батыр».

**АУЫРЫУ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух болезни; И.: spirit of an illness; Т.: hastalık ruhu) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ауырыу килтереүсе яман зат. □ Дух болезни. ■ *Һайыҫҡанды ауырыу эйәһе, тиҙәр.* В. Шәмиғолова.

**АУЫРЫШЫУ (ауырыш-)** (Р.: болеть все сразу; И.: be ill collectively; Т.: hep beraber hasta olmak) *к.*

Күмәкләп бер юлы ауырыу. □ Болеть все сразу. *Бала-сағалар ауырышып тора.*

**АУЫҪҠАЛ** *с. диал.*

**1.** *кар.* **аумаҡай.**

**2.** *кар.* **хәтерһеҙ.**

**АУЫУ (ау-)** (Р.: валиться; И.: collapse; Т.: düşmek) *к.*

**1.** Торған ерҙән ҡолау. □ Валиться, сваливаться, падать. *Бағана ауған.* ■ *Мин киҫелгән йәшел ағастарҙың ауғандарын күрһәм — ҡыҙғандым.* Н. Нәжми.

**2.** Тотош емерелеп ҡолау. □ Разваливаться, рушиться, обрушиваться. ■ *Минск йорто ауғанға йөрәге янды Өфөмдөң.* Р. Ниғмәти.

**3.** Арып, хәлдән тайып килеп йығылыу. □ Валиться, падать, обессилев. *Түшәккә ауыу.* ■ *[Батталов] пружиналарҙы зарландырып диванға ауҙы.* Яр. Вәлиев.

**4.** *кит.* Яуҙа, ҡыҙыу хеҙмәттә йығылып үлеү. □ Погибнуть на поле битвы. ■ *Яу ҡырында тыуған иле өсөн ир-егеткәй юкка ауырмы?!* Н. Нәжми. *Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул, бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ; ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.* М. Кәрим. *Ишелгән ҡайындар хәҙер ауыр яуҙа ауған яугирҙарҙы хәтерләтеп тора.* Халыҡ ижадынан.

**5.** Билдәле бер тәңгәлдән үтеү *(ваҡытҡа ҡарата).* □ Клониться, переваливаться. *Төш ауыу. Көн кискә ауыу.* ■ *Ҡояш төшлөктән бер аҙ ғына ауа башлағас та, .. халыҡ волость йортона ҡарай ағыла башланы.* Т. Хәйбуллин. *Оҙатылған ылауҙың бер нисәһе төш ауыуға йөклө көйө, бер аҙы буш әйләнеп ҡайтты.* З. Ураҡсин.

**6.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсеү. □ Склониться (*на чью-л.* сторону); соглашаться (с мнением *кого-л., чьим-л.*), поддаваться (*на чьи-л.* уговоры). *Күпселек яғына ауыу.* ■ *Киленгә әҙерәк тел ҡаткайным, .. ире яғына ауҙы ла китте.* С. Ҡудаш.

♦ **Өҫкә ауып тороу** бик яҡын, бик бейек булыу *(ағас-ташҡа ҡарата).* □ Выситься. ■ *Урман яғында ағаска мохтажлыҡ юк, шәм шикелле ҡарағайҙар өҫтөңә ауып тора.* М. Тажи.

**АУЫШ** (Р.: наклонный; И.: inclined; Т.: eğik) *с.*

**1.** Торошо-ятышы бер яҡҡа ҡыйыш; иңкеү. □ Наклонный, покатый, покосившийся. *Ауыш бағана. Ауыш иҙән.*

**2.** *мат.* Тура, төҙ түгел; ҡыйыш. □ Наклонный. *Ауыш призма. Ауыш һыҙыҡ.*

**АУЫШЛЫҠ (ауышлығы)** (Р.: наклон; И.: inclination; Т.: eğme) *и.*

**1.** Торош-ятышы бер яҡҡа ҡыйыш булғанлыҡ; иңкеүлек, һарҡыулыҡ. □ Наклон, уклон. *Гидравлик ауышлыҡ. Хәрефтәрҙең ауышлығы.*

**2.** Ситкә тайпылыу. □ Отклонение. *Магнит ауышлығы. Орбиталь ауышлыҡ.*

**3.** *мат.* Фигура яҡтарының ҡыйышлығы. □ Наклон, скат. *Ауышлыҡ мөйөшө.*

**АУЫШТЫРЫУ (ауыштыр-)** (Р.: наклонять; И.: warp; Т.: eğmek ) *к.*

**1.** Ауыш хәлгә килтереү, ауыш итеү. □ Наклонять, перекашивать.

**2.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсереү. □ Перемани-

ватъ, сманивать, перетягивать (*на чью-л.* сторону). *Үҙ яғыңа ауыштырыу.*

**АУЫШЫУ (ауыш-)** (Р.: наклоняться; И.: be warped; Т.: eğilmek) *к.*

**1.** Тура мөйөштән тайыу, ауышҡа әйләнеү; ҡыйшайыу. □ Наклоняться, перекашиваться. *Бағана ауышкан. Өй һул яҡка ауышкан. Ауышкан өй.* ■ *Телеграмм бағанаһы ныклы бит ауышырға.* Халыҡ йырынан.

**2.** *күсм.* Көн йәки төн үҙәгенән үтеү *(ваҡытҡа ҡарата).* □ Клониться, переваливать *(о времени).* ■ *Көн ауышыуға йүгерә-атлай өләсәһе ҡайтып инде.* К. Мәргән. *Йәй менән көҙ ул саҡ ҡауыша, көндәр инде көҙгә ауыша.* Н. Нәжми.

**3.** *күсм.* Ҡара-ҡаршы ике тарафтың береһенән икенсеһенә күсеү. □ Склоняться, переходить, перекидываться, перемётываться *(на чью-л.* сторону*). Күпселек яғына ауышыу.* ■ *Халыҡтың күбеһе Бүгәсәү яғына ауышкан.* Ә. Ғафаров.

**АУ ЭЙӘҺЕ** (Р.: дух рыболовной сети; И.: spirit of a net; Т.: ervah) *и. миф.*

Балыҡсылар мифологияһында ау эйәһенә ҡорбан килтермәһәң, балыҡ тотолмай. □ Дух — покровитель сети.

**АУ ЭНӘҺЕ** (Р.: игла для плетения сети; И.: sort of needle for net making; Т.: biz çeşidi) *и.*

Ау бәйләгәндә ҡулланылған ҡорал. □ Игла для плетения и ремонта сети, род шила.

**АФАҠ** [ғәр. افاق 'офоҡ'] (Р.: очень высокий; И.: the highest; Т.: en yüksek) *с. иҫк. кит.*

Бик юғары. □ Очень высокий, наивысший, высочайший. *Афаҡ дәрәжә.* ■ *Әгәр дәрәжәң булһа ла бик афаҡ, белем артҡан һайын артыр түбәнлек.* М. Ғафури.

**АФАЗИЯ** [рус. < гр. *aphasia, a* 'юҡлыҡ киҫәксәһе' + *phemi* 'әйтәм'] (Р.: афазия; И.: aphasia; Т.: afazi) *и. мед.*

Телмәр боҙолоу. □ Афазия.

**АФАРИН** [фарс. افرين] (Р.: молодец; И.: good for you; great; Т.: afarin) *ымл.*

*Кемдеңдер* эш-ҡылығын, һүҙен хуплағанда әйтелә. □ Выражает одобрение *чьих-л.* действий, слов и т. п.: Браво! Здорово! Молодец! ■ *Шаршау асылғанда һарай эсендә шаушыу, ҡул сапкан, «афарин!» «браво!» .. тигән тауыштар ишетелә.* Х. Ибраһимов.

**АФАТ** [ғәр.-фарс. افات; 'бәлә, ауырыу'] *и. ҡар.* **афәт.**

**АФЕРА** [рус. < фр. *affaire*] (Р.: афера; И.: shady transaction; Т.: karanlık iş) *и.*

Байыу маҡсаты менән шикле килешеү; алдашыуға ҡоролған эш; мутлыҡ. □ Афера. *Афераға ылыҡтырыу.*

**АФЕРИСТ** [рус. < фр. *affaire* 'эш'] (Р.: аферист; И.: shady dealer; Т.: dolandırıcı) *и.*

Афера, мутлыҡ менән шөғөлләнгән кеше. □ Аферист.

**АФИША** [рус. < фр. *affiche*] (Р.: афиша; И.: bill; Т.: afiş) *и.*

Тамаша тураһындағы ҙур белдереү. □ Афиша. *Афиша элеү. Театр афишаһы.*

**АФОРИЗМ** [рус. < гр. *aphorismos*] (Р.: афоризм; И.: aphorism; Т.: vecize) *и.*

Тәрән мәғәнәле ыҡсым һүҙбәйләнеш, һөйләм. □ Афоризм. ■ *Ҡарауылсы ҡарттың һөйләү теле лә үҙенсәлекле: халыҡсан әйтемдәргә, афоризмдарға бай.* Ғ. Рамазанов.

**АФОРИСТИК** (Р.: афористический; И.: aphoristic; Т.: vecize) *с.*

Тапҡыр, ҡыҫҡа әйтелешле. □ Афористический, афористичный. *Афористик һүҙ. Афористик ижад.*

**АФФЕКТ** [рус. < лат. *affectus*] (Р.: аффект; И.: fit of passion; Т.: kuvvetli his) *и.*

Үҙен-үҙе белмәй ярһып (ҡыҙып) китеү. □ Аффект.

**АФФИКС** [рус. < лат. *affixis* 'беркетелгән'] (Р.: аффикс; И.: affix; Т.: ek) *и. лингв.*

Һүҙгә яңы лексик һәм грамматик, йә булмаһа лексик-грамматик мәғәнә биреүсе морфема; ялғау. □ Аффикс. *Һүҙ яһаусы аффикстар. Форма яһаусы аффикстар. Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар.*

**АФФИКСАЛЬ МОРФЕМА** [рус. < гр. *morphē* 'форма'] (Р.: аффиксальная мор-

фема; И.: affixal morpheme; Т.: ek morfem) *и. лингв.*

Тамыр морфемаға ҡушылып, унан яңы һүҙ яһаған, йәғни уның мәғәнәһенә төҫмөрләнеш биргән морфема. □ Аффиксальная морфема.

**АФФИКСАЦИЯ** [рус. < лат. *affixis*] (Р.: аффиксация; И.: affixation; Т.: eklenmek) *и. лингв.*

Нигеҙгә йәки тамырға аффикстар ялғаныуҙан торған һүҙъяһалыш ысулы; ялғауылау. □ Аффиксация.

**АФФРИКАТАЛАР** *и. лингв. ҡар.* **аффрикаттар.**

**АФФРИКАТТАР** [рус. < лат. *affricata*] (Р.: аффриката; И.: affricate sounds; Т.: yarı kapantılı ünsüz) *и. лингв.*

Шартлаулы һәм ышҡыулы өндәрҙе ҡушып әйтеүҙән яһалған тартынҡылар; ҡуш тартынҡылар. □ Аффриката, аффрикаты. *Аффрикаттарға «ц» һәм «ч» фонемалары инә.*

**АФӘТ** [ғәр. آفة] (Р.: беда; И.: calamity; Т.: afet) *и.*

Ҙур бәлә, һәләкәт. □ Беда, бедствие, стихия, катастрофа. *Афәт килеү.* ■ *Йәшен күктән афәт сәсеп сыкты, таратты ул ергә үлемдәр.* М. Ямалетдинов. *Тәрән тылда йәшәүселәр һуғыш афәттәрен иң башта тимер юлдан үткән емерелгән паровоздарға ҡарап белделәр.* Ә. Байрамов. *Афәт сығыр булһа, сулпан йондоҙо юғалып торор, ти.* Халыҡ ижадынан.

**АФӘТЛЕ** (Р.: губительный; И.: pernicious; Т.: afetli) *с.*

**1.** Һәләкәтле, харап иткес, зарарлы. □ Губительный. *Афәтле һуғыш.* ■ *Ерән йыртҡыстың ҡаны афәтле икәнде инстинкт менән тойҙо ул.* Й. Мостафин.

**2.** Һәләкәтле, бәлә-ҡазалы. □ Бедственный. ■ *Афәтле болоттор был, ҡаты боҙ яуып, күҙ терәп торған игендәрҙе генә харап итеп китмәһә ярар ине!* М. Ғафури.

**3.** Фажиғәле, фажиғә менән бәйләнешле. □ Трагичный. *Афәтле үлем.*

**АХ** (Р.: ах; И.: ah; Т.: ah) *ымл.*

**1.** Үкенгәндә әйтелә. □ Выражает сожаление: ах. ■ *Ах, был уйҙар! Ниңә башта Сәйҙел күңеленә килмәгән!* Ғ. Сәләм.

**2.** Асыуланған, янаған, әрләгән саҡта әйтелә. □ Выражает негодование: ах. ■ *[Әбей — ҡыҙҙарына:] Ах, һеҙ хәсрәттәр! Башыма бәлә генә булдығыҙ.* Әкиәттән.

**3.** Һоҡланғанда, кинәнеп шатланғанда әйтелә. □ Выражает радость, восхищение: ах. *Ах, матур ҡыҙҙар!*

**АХАЛҒА ТӨШӨҮ (ахалға төш-)** *ҡ. диал. ҡар.* **арыу.**

**АХ ИТЕҮ (ах ит-)** (Р.: лелеять *кого-то*; И.: cherish; Т.: özenle bakmak ) *ҡ.*

Өҙөлөп, ҡурсып тороу. □ Лелеять *кого-то*, дорожить *кем-чем.* ■ *Килендәре, кейәүҙәре лә һәйбәт булып сыкты: Зөләйфә өсөн ах итеп торалар.* С. Агиш.

**АХА-ХА** (Р.: ха-ха; И.: ha-ha; Т.: ha-ha) *оҡш.*

Ҡысҡырып көлөүҙе белдерә. □ Выражает громкий смех, хохот: ха-ха.

**АХАХАЙЛАУ (ахахайла-)** (Р.: громко смеяться; И.: guffaw; Т.: kahkaha atmak) *ҡ.*

Аха-ха тип ҡысҡырыу *(көлгәндә).* □ Громко смеяться, хохотать. *Ахахайлап көлөү.* ■ *Ҡуркма асыуланған, көйгән кешенән, ҡурк һин ахахайлап көлгән кешенән.* Ә. Әхмәт-Хужа.

**АХ-ВАХ, ах та вах** (Р.: ах, ох; И.: oh woe; Т.: ah-oh) *ымл.*

Ныҡ өҙгөләнгән, көйөнгәнде белдерә. □ *межд.* Употребляется при выражении тяжёлого душевного состояния: ах, ох.

**АХИРӘТ** [ғәр. الخيرة] *и. ҡар.* **теге донъя.**

**АХИРӘТ ҒӨСӨЛӨ** (Р.: омовение; И.: washing the corpse; Т.: gasil) *и. диал.*

Үлекте йыуғанда һуңғы ҡойондороу. □ Последнее омовение покойника.

**АХМАҠ I (ахмағы)** [боронғо төрки *аңға-маҡ* ‘асыҡ ауыҙ’] (Р.: глупец; И.: ninny, muddle-head; Т.: aptal) *и.*

Аҡылға кәм кеше; алйот, иҫәр. Әрләп, шелтәләгәндә әйтелә. □ Глупец, дурак, бес-

толочь. ■ *Һыуынған көлдән ахмак кына ут эҙләр.* М. Кәрим. *Якшы кәңәш ахмак өсөн — елгә каршы оскан төтөн.* Ә. Әхмәт-Хужа. ● *Акыллы тәкә һуйғанда, ахмак йүкә һуйыр.* Мәҡәл. *Акыллы уйлап торғансы — ахмак эшен бөтөргән.* Мәҡәл. *Кара тауыктың да йоморткаһы ак була, ахмактың да бер һүҙе хак була.* Мәҡәл.

**АХМАҠ II** (Р.: глупый; И.: stupid; Т.: budala ) *с.*

Аҡылы камил түгел, алйот, иҫәр, аңра. □ Глупый, бестолковый, неумный. *Ахмак һүҙ. Ахмак киәфәт. Ахмак эш.*

**АХМАҠЛАНДЫРЫУ (ахмаҡландыр-)** (Р.: одурачивать; И.: make a fool (of); Т.: kandırmak) *к.*

Алдап, томалап, аңраға әйләндереү. □ Одурачивать, дурить. *Кешеләрҙе ахмакландырыу.*

**АХМАҠЛАНЫУ (ахмаҡлан-)** (Р.: делать глупости; И.: do a foolish thing; Т.: aptallık yapmak) *к.*

**1.** Еңел аҡыл менән уйлау, ахмаҡлыҡ ҡылыу. □ Делать глупости, совершать нелепые поступки. *Ахмакланып, укымай калды.*

**2.** Ахмаҡҡа әйләнеү; алйотланыу, иҫәрләнеү. □ Глупеть, дуреть. *Ахмакланып калыу.*

**АХМАҠЛЫҠ (ахмаҡлығы)** (Р.: дурачество; И.: tomfoolery; Т.: aptallık) *и.*

Ахмаҡ булған хәл; алйотлоҡ, йүләрлек. □ Дурачество, глупость. *Ахмаклык эшләү. Ахмаҡлык кылыу.*

**АХМАЛҒА ТӨШӨҮ (ахмалға төш-)** [ғәр. احمال ‘күтәреү; ауырлыҡ’] (Р.: переутомляться; И.: overstrain; Т.: çok yorulmak) *к.*

Ныҡ ашығып, ауыр эшләп, хәлдән тайыу. □ Переутомиться, переутомляться. // Переутомление. ■ *Ахмалға төшөп, арып кайттым, мускулдарым шундай йомшарған.* Х. Ғиләжев.

**АХМАЯЛҒА ТӨШӨҮ (ахмаялға төш-)** (Р.: уставать; И.: tire; Т.: yorulmak) *к.*

Ныҡ ауыр эш эшләп хәлдән тайыу. □ Уставать, утомляться, изнуряться. // Утомление, изнурение. ■ *Миһырбанлы был ике әҙәм, Фәһимдең быуынһыҙ һәленеп төшкән кәүҙәһен алмашлап яурындарына йөкмәп, ахмаялға төшөп, аҫкы урамға алып кайтып еткерҙе.* Ф. Иҫәнғолов.

**АХУН** [фарс. اخوند] (Р.: ахун; И.: akhoond; Т.: Ahun) *и.*

**1.** Шәриғәт, мәсет эштәрен күҙәтеп, хәл итеп торған юғары дәрәжәле дин әһеле, мөфтөйгә буйһона. □ Ахун (глава мусульманского духовенства, подчиняется муфтию). ■ *Абдулла Дәүләтшин — башта Карғалы ауылы мәҙрәсәһендә мулла, һуңынан ахун булып торған кеше.* С. Галин.

**2.** *этн.* Йәнәй ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-енейцев.

**АХ-УХ, ах та ух** (Р.: ох, ух; И.: ooh; Т.: of) *ымл.*

**1.** Көсөргәнеп хәл бөткәнде белдерә. □ Выражает усталость: ох, ух.

**2.** Ауырып, һыҙланып ныҡ ыңғырашҡанды белдерә. □ Выражает боль: ох, ух. *Билен имгәтеп, ах та ух итеп ята.* ■ *[Самсон:] Баяр ярлыкаманымы әллә? Ниңә ах та ух киләһең?* З. Ураҡсин.

**АХШАМ** [дөйөм төрки *ак* ‘яҡты’ + фарсы *шам* ‘кис’] *и. кар.* **аҡшам.**

**АХЫЛДАТЫУ (ахылдат-)** (Р.: обессилеть; И.: grow weak; Т.: halsiz düşmek) *к.*

Хәлен бөтөрөп, ах та ух иттереү. □ Обессилеть, слабеть.

**АХЫЛДАУ (ахылда-)** (Р.: устало и тяжело вздыхать; И.: sigh; Т.: içler çekmek) *к.*

Ах та ух итеү, ах та ух килеү. □ Устало и тяжело вздыхать; охать, ахать *(при болевых ощущениях).* ■ *Ахылдап .. Шәхми кайтып инде.* Т. Йәнәби.

**АХЫЛДАШЫУ (ахылдаш-)** *к. урт. кар.* **ахылдау**. *взаимн. от* **ахылдау**.

**АХЫМСЫ** (Р.: скандалист; И.: brawler; Т.: kavgacı) *и. диал.*

**1.** Эсеп боларған кеше. □ Скандалист.

**2.** Үсексән. □ Обидчивый.

**АХЫМСЫЛАУ (ахымсыла-)** (Р.: скандалить; И.: make a row; Т.: kavga yapmak) *к. диал.*

**1.** Эсеп боларыу. □ Скандалить.

**2.** Үпкәләп тауышланыу. □ Возмущаться от обиды.

**АХЫР I** [ғәр. اخير] (Р.: конец; И.: end; Т.: son) *и.*

Эш-хәлдең, ваҡыттың тамамланған мәле; аҙаҡ. □ Конец, исход. *Көндөң ахыры. Эштең ахыры.*

**АХЫР II** *р. ҡар.* **ахыры I.**

**АХЫРАУЫРЫУ** (Р.: послеродовая болезнь женщин; И.: postnatal female condition; T.: doğum sonrası hastalığı) *и. диал.*

**1.** Ҡатындарҙың бала тапҡандан һуңғы ауырыуы. □ Послеродовая болезнь женщин.

**2.** Шәбәйеп етер-етмәҫ ҡабатлап ауырыу; өҙлөк. □ Осложнение *(после болезни).*

**АХЫРҒЫ** (Р.: последний; И.: last; Т.: son) *с.*

Аҙаҡҡы, һуңғы. □ Последний, конечный, завершающий, заключительный. *Ахырғы рәт. Ахырғы сәғәттә. Ахырғы һүҙ.* ● *Әүәлгенең шатлығы — ахырғының михнәте, әүәлгенең михнәте — ахырғының шатлығы.* Мәҡәл.

**АХЫРҘА** (Р.: наконец; И.: afterwards; Т.: sonra) *р.*

**1.** *ҡар.* **ахыры I**.

**2.** Ахыр сиктә. □ В конечном счёте, наконец, в конце концов. ■ *Хисапһыҙ бай булһаң да Ҡарымбайҙай, йомарт булып, мал сәсһәң дә Хатимтайҙай, булһаң да Ерәнсәләй телгә сәсән, булһаң да Ғәли Шир-Арыҫландай — ахырҙа ятыр урының бер ләхет, шәй.* М. Аҡмулла.

**АХЫРЗАМАН** *и. ҡар.* **ахырызаман.**

**АХЫР(Ы)ЗАМАН, заман ахыры** (Р.: светопреставление; И.: Doomsday; Т.: âhir zaman) *и. дини.*

Ислам дине буйынса, ер йөҙөндәге тормош — ваҡытлы күренеш. Күпмелер ваҡыттан һуң, хәҙерге тормош тамам буласаҡ һәм барлыҡ кешеләр мәңгелек тормош — әхирәткә китәсәк. Улар Алла ҡаршыһында донъя тормошонда ҡылған эштәре өсөн хисап бирәсәк. Алла ихтыяры менән ер йөҙөндәге донъяуи тормоштоң бөтөрөлөүе ахырызаман йәки заман ахыры тип атала. □ Светопреставление. *Ахырзаман етеү.* ■ *Ул кеше ҡасан да булһа яҙаһын аласаҡ, ахырызаман киләсәк. Ә ахырызаман — яуап тотор көн ул.* Ә. Әминев.

**АХЫР СИКТӘ** (Р.: в конечном счёте; И.: at last; Т.: sonunda) *р.*

Ахырҙа, һуңында, аҙаҡ сиктә, һуңғы сиктә. □ В конечном счёте, наконец, в конце концов. *Көнө буйы шаярып, ахыр сиктә илашып ҡуйҙылар.* ■ *Ахыр сиктә сығып ҡастым, юғиһә буш торғанда тукмалыр инем шул.* Т. Хәйбуллин.

**АХЫРЫ I** (Р.: после; И.: afterwards; Т.: sonra) *р.*

**1.** *Ниндәйҙер* эш, мәлдән һуң; һуңынан. □ После, потом. ■ *Ошо ҡурҡҡандан ахыры, теге әбей бер ергә лә сыҡмай өйҙә ултыра.* Әкиәттән.

**2.** *Күпмелер* ваҡыт үтеүгә; аҙаҡ сиктә. □ Под конец, напоследок. ■ *Ә ул [донъя] миңә ғүмер ахырында артмаҡлатты бала ҡайғыһын.* М. Ямалетдинов.

**АХЫРЫ II** (Р.: по-видимому; И.: apparently; Т.: galiba) *инш.*

Икеләнеүҙе, фаразды белдерә. □ По-видимому, кажется. ■ *Йылтлап уйнай күктә йондоҙҙар. Ахыры, осҡондарға дуҫ улар.* Ғ. Амантай. *Әсәһе [Кәримдең] ҡайтҡанын оҙаҡ көткәндер, ахыры. Ҡапҡа менән соланды ла бикләмәгән.* Я. Хамматов.

**АХЫРЫҺЫ** *инш. ҡар.* **ахыры II.**

**АХЫРЫ ШАРШАМБЫ** (Р.: ритуальное опасное время; И.: ritual perilous time; Т.: tehlikeli vakit) *и. миф.*

Ышаныуҙар буйынса, ҡурҡыныс ваҡыт. □ По поверьям, ритуальное опасное время. ■ *Ахыры шаршамбыла ҡыҙ биреү, юлға сығыу тыйыла.* Башҡорт мифологияһынан.

**АҺ I** (Р.: мучение; И.: torment; Т.: azap) *и.*

Ҡайғы, ғазап, зар. □ Мучение. ■ *Аһтарымды белмәй, күңелемә аҡ сәпсеккәй утлы күҙ һалыр!* Р. Ғарипов. *Йәш баланың ауыр ыңғырашыуы, ҡарт әсәләр аһы ғәмеңдә.* М. Харис. *Ҡарттар илағанға тетрәнгән*

*ил арына алмай һаман аһынан.* М. Ямалетдинов.

**АҺ II** (Р.: ах, ой; И.: indeed; Т.: vallah) *ымл.*

Аптырағанды, ғәжәпкә ҡалғанды белдерә. □ Выражает удивление: ах, ой. *Аһ, аяғың ауыртамы ни?* ■ *Аһ! Исемемде лә беләсе!* Р. Солтангәрәев.

**АҺА** *ымл. ҡар.* **ah-ah.**

**АҺАҠ (аһағы)** *и. диал. ҡар.* **аҡыҡ.**

**АҺАҠТАУ (аһаҡта-)** (Р.: запыхаться; И.: be out of breath; Т.: soluk soluğa olmak) *ҡ. диал.*

Ахылдау. □ Запыхаться.

**АҺАҢ** *и. ҡар.* **аһәң.**

**АҺ-АҺ** (Р.: ой; И.: oh-ooh; Т.: ah-ah) *ымл.*

Аптырағанда әйтелә. □ Выражает удивление: ой. *Аһ-аһ, улым ҡайтҡан бит.*

**АҺА-ҺАЙ** (Р.: выражает насмешку *над кем-л.*; И.: interjection for derision; Т.: birinden gülerken kullanılan ünlem) *ымл.*

Мыҫҡыллап көлгәнде белдерә. □ Выражает насмешку *над кем-л.*

**АҺАҺАЙЛАУ (аһаһайла-)** (Р.: издевательски хохотать; И.: laugh loudly in derision; Т.: alaylı gülmek) *ҡ.*

Аһа-һай тип ҡысҡырыу *(көлгәндә)*; ҡысҡырып көлөү. □ Издевательски хохотать. *Аһаһайлап көлөү.*

**АҺ-ВАҺ, аһ та ваһ** *ымл. ҡар.* **ах-вах.**

**АҺ-ЗАР** [ғәр. ضر - اه] (Р.: всеобщее горе; И.: general grief; Т.: genel acı) *и.*

Ғазаплы тәрән ҡайғы; ҡайғы-хәсрәт. □ Всеобщее горе, всеобщая скорбь, горести и печали. ■ *Ҡайғыларҙан ҡурҡма, туған, бәхеттән ҡурҡ, аһ-зар тоғро: килә һиңә бер түгел, ҡырҡ.* М. Ямалетдинов. *Күңелемдә — әйтелмәгән һөйөү, әйтелмәгән рәнйеш, аһзарҙар.* Ф. Туғыҙбаева.

**АҺ ИТЕҮ (аһ ит-)** (Р.: ахнуть; И.: gasp; Т.: vay demek) *ҡ.*

**1.** Бик ныҡ аптырау. □ Ахнуть, очень удивиться, изумиться. // Удивление, изумление. *Ит баҙары йыйылды.* ■ *Итсе күрҙе — аһ итте.* К. Мәргән.

**2.** *Кем өсөндәр* өҙөлөү. □ Высоко ценить *кого-то*, дорожить *кем-чем.* ■ *Өләсәләре лә, мәрхүм олатайҙары ла ейәндәрен бик ярата, килһәләр, аһ итеп тора торғайны.* Ә. Вәли.

**АҺЛАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер, күбәләк ырыуҙарының аймағы. □ Родовые подразделения башкир-тангаурцев, кубалякцев.

**АҺ ОРОУ (аһ ор-)** (Р.: жаловаться; И.: lament; Т.: şikayet etmek) *ҡ.*

Зарланыу, ныҡ хәсрәтләнеү. □ Жаловаться, сетовать. ■ *Ҡайғы баҫты ауыл өҫтөн, аһ оралар, ил илай.* Бәйеттән.

**АҺЫЛ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Бөрйән ырыуының аймағы. □ Родовое подразделение башкир-бурзянцев.

**АҺЫЛДАУ (аһылда-)** (Р.: запыхаться; И.: be out of breath; Т.: soluk soluğa olmak) *ҡ.*

**1.** Тын бөтөү, тын ҡыҫылыу, саҡ тын алыу. □ Запыхаться, трудно дышать. ■ *Күп тә үтмәй ул [Рифҡәт] аһылдап килеп инде ки-леп етте.* Ф. Иҫәнғолов. *[Ҡәнәғәт ҡарт] ҡайырылып баҡты ла, ҡыҙыл балсыҡҡа буялған буйлы ыштан балаҡтарын ялпылдатып, шундай уҡ балсыҡлы ялан аяҡсан аһылдап йүгереп килгән, тырпай ҡыл-ҡара мыйыҡсалы ирене өҫтөнә бөрсөкләнеп йән тире ҡалҡҡан ҡатынҡайға үҙ артынан урын күрһәтеп өндәште.* Й. Солтанов.

**2.** Ауыр хис, тойғонан йәки һыҙланғандан уфылдау. □ Охать, ахать. ■ *Заһит ишекте асты. Урындыҡта аһылдап ятҡан әсәһенең башы осонда ултырған Ғәйзулла һикереп торҙо.* Я. Хамматов.

**АҺӘҢ** [фарс. اهنك ‘көй’] (Р.: благозвучие; И.: harmony; Т.: ahenk) *и. шиғр.*

**1.** Килешле, яғымлы, матур көй. □ Благозвучие, мелодичность. ■ *Башта тәрәндән, төпкөлдән урғылған саф күкрәк тауышы, тора-бара көслө аһәң булып, тирә-яҡты солғап алды.* С. Әлибаев.

**2.** Шиғырҙың матур һүҙҙәрҙән ҡоролған яғымлы яңғырашы. □ Созвучие стиха.

**3.** *күсм.* Үҙ-ара ярашлы килешеп торған матурлыҡ. □ Гармония, гармоничность. ■ *Тәбиғәттең шундай камил, аһәң булыуына хайран ҡалаһың.* Н. Нәжми.

**АҺӘҢДӘШ** (Р.: гармоничный; И.: harmonious; Т.: uyumlu) *с.*

Үҙ-ара ярашлы, килешле *(өн-ауазға ҡарата).* □ Гармоничный, созвучный. ■ *Беҙҙең уй-фекерҙәребеҙ, тойғоларыбыҙ һәм кисерештәребеҙ менән ниндәй аһәңдәш һүҙҙәр.* В. Нафиҡов.

**АҺӘҢДӘШЛЕК (аһәңдәшлеге)** (Р.: гармоничность; И.: state of harmony; Т.: uyum) *и.*

**1.** Өн-ауаздың ярашлылығы, килешлеге. □ Гармоничность, созвучность.

**2.** *муз.* Бер нисә тауыштың үҙ-ара ярашыуы. □ Консонанс.

**3.** *әҙ.* Баҫым төшкән төрлө һуҙынҡы өндәрҙән торған рифма. □ Консонанс.

**АҺӘҢДӘШҺЕҘ** (Р.: дисгармонический; И.: out of harmony; Т.: uyumsuz) *с.*

Үҙ-ара ярашһыҙ, килешһеҙ *(өн-ауазға ҡарата).* □ Дисгармонический, дисгармоничный. *Аһәңдәшһеҙ музыка.*

**АҺӘҢДӘШҺЕҘЛЕК (аһәңдәшһеҙлеге)** (Р.: дисгармония; И.: disharmony; Т.: uyumsuzluk) *и.*

Өн-ауаздың ярашһыҙлығы, килешһеҙлеге. □ Дисгармония.

**АҺӘҢЛЕ** (Р.: гармоничный; И.: harmonious; Т.: ahenkli) *с.*

Матур яңғырашлы. □ Гармоничный, благозвучный. *Аһәңле йыр.* ■ *Дәртле бейеүҙәр-йырҙар, аһәңле шиғырҙар бүләк ителде [ветерандарға].* «Табын», № 99, 2008.

**АҺӘҢЛЕЛЕК (аһәңлелеге)** (Р.: гармоничность; И.: harmony; Т.: ahenkli) *и.*

Өн-ауаздың ярашҡанлығы, яғымлылығы, төҙөклөгө. □ Гармоничность, благозвучность. ■ *Башҡорт халыҡ ижадының был тапҡыр фекерле, ҡыҫҡа формалы жанрҙарында һүҙ уйнатыу ҙа, музыкаль аһәңлелек тә, ритм төҙөклөгө лә, композицион бөтөнлөк тә бик көслө.* Ғ. Хөсәйенов.

**АҺӘҢҺЕҘ** (Р.: дисгармоничный; И.: disharmonious; Т.: ahenksiz) *с.*

Яңғырашы матур булмаған. □ Дисгармоничный, неблагозвучный.

**АҺӘҢҺЕҘЛЕК (аһәңһеҙлеге)** (Р.: дисгармония; И.: disharmony; Т.: uyumsuzluk) *и.*

Өн-ауаздың ярашмағанлығы, гармонияһыҙлыҡ. □ Дисгармония, неблагозвучие, неблагозвучность.

**АЦЕТОН** [рус. < лат. *acetum* ‘аҡ һеркә’] (Р.: ацетон; И.: acetone; Т.: aseton) *и. хим.*

Төҫһөҙ шыйыҡлыҡ рәүешендәге органик ҡушылма (*етештереүҙең төрлө тармағында иреткес сифатында ҡулланыла*). □ Ацетон. *Ацетон ҡушылмаһы.*

**АЦИДОФИЛИН** [рус. < лат. *acidus* ‘әсе’ + гр. *phileō* ‘яратам’] (Р.: ацидофилин; И.: acidophilus; Т.: acidophilus) *и.*

Ҡатыҡтың үҙенә башҡа бактерия менән әсетелгән бер төрө. □ Ацидофилин.

**АШ I** [дөйөм төрки *аш* ‘ашамлыҡ; иген’] (Р.: еда; И.: food; Т.: yemek) *и.*

**1.** Кеше туҡлана торған һәр төрлө нәмә; аҙыҡ, ашамлыҡ, ризыҡ. □ Еда, пища. *Иртәнге аш. Байрам ашы. Ҡунаҡ ашы. Туй ашы. Үтемле аш. Аш һеңдереү.* ■ *[Хәтирә еңгә:] Былдай сактарҙа бүтән өйҙә бешкән аш тәмле була, ят аш теләйһеңдер әле, — ти.* Ғ. Ибраһимов. *Борон башҡорттарҙа әске мәжлесе, тәмәке тартыу булманы. Ҡунаҡ-туй мәжлестәре яҡшы аш менән айыҡ үткәрелде.* Ғ. Бейешев. ● *Аш эйәһе менән татлы.* Әйтем. *Эшенә күрә ашы.* Әйтем. *Эше юҡтың — ашы юҡ.* Әйтем. *Бирмәҫтең ашы бешмәҫ, ҡаҙаны уттан төшмәҫ.* Әйтем. *Аш — ашҡа, урыны башҡа.* Мәҡәл. *Аштан оло булма.* Әйтем. *Аш менән атҡанға таш менән атмайҙар.* Әйтем.

**2.** Һурпалы ашамлыҡ. □ Суп, первое блюдо. *Ит ашы. Кәбеҫтә ашы. Аш бешереү. Аш һалыу. Аш өлгөртөү. Аш яраштырыу. Ҡыҫыр аш.* ■ *Мин үҙем тукмас ашында өс төрлө ит булыуын ятатам: өйрәк, тауыҡ, һимеҙ һарыҡ түше, — тине Ғиндуш.* Ф. Иҫәнғолов.

**3.** *диал.* Ашлыҡ, иген. □ Зерно, хлеб. ■ *Быйыл аш бик шәп булманы, — ти Фазлыәхмәтов. — Бында [Арғаяшта] иген, ашлыҡ тип әйтмәйҙәр. Аш тип кенә ҡуялар.* Ә. Вәли.

♦ **Аш урынына таш йотторо**у ашап ултырғанда бик тынғыһыҙлау, борсоу. □ Не дать спокойно поесть. ■ *Ваҡиһа ханым минең ҡолаҡ итен сәйнәргә тотондо. Иртәкисен аш урынына таш йоттора.* С. Кулибай. **Аш биреп, ҡаш сөйөп тороу** хөрмәт күрһәтеү. □ Оказывать уважение, почитать. **Ашын ашаған, йәшен йәшәгән** оҙон ғүмер юлы үткән кешегә әйтелә. □ Он прожил свой век. **Ашығыҙ тәмле булһын** ашап ултырған кешегә ҡарата әйтелгән теләк. □ Приятного аппетита.

**АШ II** (Р.: крахмал; И.: starch; Т.: nişasta) *и.*

Туҡыма тауарға һеңдерелгән крахмал. □ Крахмал. *Яңы күлдәгеңде йыуып кей, ашы бөтһөн.*

**АШ III** (Р.: гной; И.: pus; Т.: irin) *и. диал.*

Эрен. □ Гной. *Бармағым аш йыйып, һыҙлап тора.*

**АША I** [дөйөм төрки *аш* ‘артылыу’] (Р.: через; И.: across; Т.: ...dan) *бәйл. төп һәм әйл. клш. менән.*

**1.** Бер ситтән икенсе ситкә түбәндән; арҡыры. □ Через *(послелог с сущ. в осн. п. и род. п.). Болон аша. Йылға аша. Юл аша.* ■ *Башҡорт ышаныуҙарында йәйғоронд*о *(йәйғорҙо) аша сыҡҡан малай — ҡыҙға, ҡыҙ малайға әйләнә, ти.* Халыҡ ижадынан.

**2.** Бер нәмәнән икенсе нәмәгә өҫтән, үрҙән. □ Через. *Ҡойма аша. Яурын аша.* ■ *Һауаға атҡан уҡҡайым тау-урмандар аша уҙһасы.* С. Юлаев. *Бер бәрелештә ул [Биксура] ҡаты яралана, Әхмәт исемле дуҫы менән Текәй тип йөрөтөлә торған тауҙар аша урман яғына ҡаса.* Әкиәттән.

**3.** Бер яҡтан икенсе яҡҡа үтәләй. □ Через. *Быяла аша. Күҙлек аша. Тәҙрә аша. Сепрәк аша. Күршеләрҙең һөйләшкәне стена аша ишетелеп тора.*

**4.** Билдәле бер ваҡыт үткән һайын ҡабатланып торған эш-хәлде, билдәле бер араүыҡты үтеүҙе белдереү өсөн ҡулланыла. □ Через. *Аҙна аша. Көн аша. Магазин бер өй аша.*

**5.** Кеше йәки бер сара ярҙамында; арҡыры. □ Посредством, путём *чего*, через *что. Гәзит аша. Радио аша. Хат аша.* Берәй ысул ярҙамында. ■ *Нәфис һүҙ аша батырлыҡ, матурлыҡ тигән изге төшөнсәләр бала күңеленә тотҡарлыҡһыҙ барып етә.* Ф. Аҡбулатова.

**АША II** (Р.: деревянная игла; И.: appliance for making fishing nets; Т.: ağ iğnesi) *и.*

Бәйләй торған ағас энә; ау энәһе. □ Деревянная игла *(для плетения сети)*, кочедык.

**АША АТЛАУ (аша атла-)** (Р.: перешагнуть; И.: overstep; Т.: aştak) *ҡ.*

*Ниҙәндер* аша баҫыу. □ Перешагнуть. *Бүрәнәне аша атлау. Соҡорҙо аша атлап сығыу.* ■ *Көйәнтәне аша атлама, үҫмәйһең.* Ырым. *Көйәнтәне аша атларға ярамай, бала арҡыры килә.* Ф. Хисамитдинова.

**АШАҠЛАУ (ашаҡла-)** *ҡ. диал. ҡар.* **ашатлау.**

**АШАЛАЙ** (Р.: через; И.: over; Т.: ...dan) *р. диал.*

Бер нәмәнән икенсе нәмәгә өҫтән. □ Через. *Ҡойма ашалай сығыу.*

**АШАЛЫУ I (ашал-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ашау**. *страд. от* **ашау**.

**АШАЛЫУ II (ашал-)** (Р.: истачиваться; И.: wear out; Т.: yıpranmak) *ҡ.*

**1.** Ышҡылып, ҡырылып йоҡарыу. □ Истачиваться, срабатываться, стираться *(о металлических предметах). Арбаның күсәре ашалған.* ■ *Күп тотоноуҙандыр инде, ситтәре ярайһы уҡ ашалып, үткерләнеп бөткән тимер сүместән һыу эсеп, һыуһын ҡандырҙым.* Х. Ғиләжев. *Ашалып, йышылып бөткән тимер ҡулсаны сөйҙән ысҡындырыуға, ел ҡапҡа шар асылып китте.* Т. Ғарипова.

**2.** Оҙаҡ кейеүҙән йоҡарыу. □ Изнашиваться, протираться. *Итектең табаны ашалды.*

**3.** Өңөлөп емерелеү. □ Размывать, подмывать. ■ *Кыуаныусылар бар бит әле шул таштың хасил булыуына. «Ярҙы ашалыуҙан һаклай ул», — тиҙәр.* Яр. Вәлиев. *Урал — бик нык ашалған һәм емерелгән тау. Шуға күрә уның күп ерҙәрендә боронғо катламдар ер өҫтөнә сығып ята.* Д. Бураҡаев.

**4.** *күсм.* Төҫө бөтөү; уңыу. □ Линять, выцветать. *Күлдәгем кояшка ашалған.*

**АШАМ** *и. диал. ҡар.* **ашамлыҡ.**

**АША-МАША** (Р.: через; по; И.: over; T.: ...dan) *р.*

Унда-бында бер. □ Через; по. *Аша-маша баҫыу. Аша-маша һикереү.*

**АШАМЛЫҠ (ашамлығы)** (Р.: продукты; И.: victuals; T.: yemek) *и.*

Ашай торған нәмә; аҙыҡ, ризыҡ. □ Продукты, еда, пища, кушанье. ■ *Барый, алдындағы тәмле ашамлыктарҙан күҙҙәрен ала алмайынса, урынынан торҙо.* Р. Ғабдрахманов. *Ашамлык дөрөҫ әҙерләнергә тейеш. Юғиһә, аҙыкта булған витаминдарҙың байтак өлөшөнөң юғалыуы ихтимал.* В. Ғүмәров.

**АШАМЛЫҠ-ЭСЕМЛЕК (ашамлыҡ-эсемлеге)** (Р.: продукты; И.: foodstuffs; T.: gıda) *и. йыйн.*

Ашай, эсә торған төрлө нәмә; ризыҡ. □ Продукты, провизия, съестные припасы. ■ *Табын әҙер ине. Ашамлык-эсемлек куйылған өҫтәл тирәләй ултырыштылар.* Яр. Вәлиев. *[Егет] уянып китһә, бының үтә-һүтә күренеп торған алама ғына аласығы туп-тулы ашамлык та эсемлек, ти.* Әкиәттән.

**АШАМЛАР** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; T.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Түңгәүер ырыуына ҡараған башҡорт аймағының исеме. □ Название родового подразделения башкир-тунгаурцев.

**АШАМҺАҠ** (Р.: прожорливый; И.: voracious; T.: obur) *с.*

Ашауға шәп, күп ашай торған. □ Прожорливый. *Ашамһак кеше. Ашамһак мал.* ● *Атың ашамһак булһа — уңдың, катының ашамһак булһа — бөлдөң.* Мәкәл.

**АШАМ-ЭСЕМ** *и. йыйн. диал. ҡар.* **ашамлыҡ.**

**АШАНАН-АША** (Р.: насквозь; И.: through; T.: bir yandan bir yana kadar) *р.*

Бер ситтән икенсе ситкә еткәнсә. □ На всю ширину, глубину или толщину; насквозь. *Ашанан-аша бүрәнә һалыу. Күлде ашанан-аша йөҙөп сығыу.*

**АШАНТЫ** (Р.: еда; И.: items; T.: yemekler) *и. диал.*

Ашамлыҡ. □ Еда, пища, продукты. ■ *Ҡатындар йүгереклән йөрөп .. ашанты тейәй.* Г. Ғиззәтуллина-Ғайсарова. *Теләккә сыкканда, ауылдың иң өлкән әбейе өй беренсә йөрөп ашанты йыя.* Халыҡ ижадынан.

**АШАНЫУ (ашан-)** (Р.: кушать; И.: eat; T.: yemek) *ҡ.*

*Ниҙер* ашау, туҡланыу. □ Кушать, есть *что-л. Ашанып йөрөү. Ашанып ултырыу.* ■ *Кейеҙбай кәкре карама төбөндә ашанып, тамак туйҙырып алды.* Әкиәттән.

**АШ АРБА** (Р.: телега с гостинцами; И.: kind of a cart; T.: hediyeler yüklenen araba) *и. этн.*

Туйға күстәнәс тейәп алып килгән арба йәки сана. □ Телега (сани) с гостинцами для свадьбы.

**АШ АРБАҺЫ** *и. диал. ҡар.* **аш арба.**

**АШАТЛАНЫУ (ашатлан-)** (Р.: свесить ноги (по бокам *чего-л.*); И.: with one's legs dangling; T.: ayakları sarkıtmak) *ҡ. һөйл.*

Һыңар аяҡты *нимәнәндер* аша һалыу, аша атланыу. □ Свесить ноги (по бокам *чего-л.*). *Эскәмйәгә ашатланып ултырыу.*

**АШАТЛАУ (ашатла-)** (Р.: перешагивать; И.: overstep; T.: aşmak) *ҡ. һөйл.*

**1.** *Ниҙәндер* аша атлау, аша баҫыу. □ Перешагивать, переступать через *кого-что. Кеше аяғын ашатлаһаң, насар була.*

**2.** *Ниндәйҙер* кимәлде, сикте, йәште үткән. □ Перешагивать, переступать. ■ *Өсөнсө карауаттың эйәһе — йөҙөнә, килешкилбәтенә карағанда, алтмышты күптән ашатлаған карт.* З. Ураҡсин.

**3.** *күсм.* Иҫәпкә алмай, ситкә ҡағыу. □ Нарушать установленный порядок, закон, мораль и т.п. *Законды ашатлау.* ■ *[Иҫәнбирҙе:] Бәләкәс кенә етешһеҙлектәрҙе лә ашатлап уҙып булмай.* С. Агиш.

**АШАТЫЛЫУ (ашатыл-)** *ҡ. төш. кар.* **ашау I, 1**. *страд. от* **ашау I, 1**.

**АШАТЫУ (ашат-)** (Р.: кормить; И.: feed; Т.: yedirmek) *ҡ.*

**1.** Ашарға биреп туйындырыу. □ Кормить. *Баланы ашатыу. Быҙауҙы ашатыу. Өмәселәрҙе ашатыу. Себештәрҙе ашатыу.* ■ *Еҙболан тигән тәрән соҡорҙо үткәс, атты туғарып ебәреп ашаттыҡ.* Ғ. Ғүмәр. ● *Үгәй әсә ураҙа тоттора, ашатһа ла ҡоҫтора.* Мәҡәл.

**2.** Аҙыҡ менән тәьмин итеү; аҙыҡландырып йәшәтеү. □ Кормить, содержать. *Бер үҙе биш бала ашата.*

**3.** Һуғымға һимертеү, көрәйтеү. □ Откармливать. *Ат ашатыу. Мал ашатыу. Һуғымға башмаҡ ашата.*

**АШАУ I (аша-)** (Р.: есть; И.: eat; Т.: yemek) *ҡ.*

**1.** Туҡлыҡ өсөн аҙыҡ йотоу; аҙыҡланыу, туҡланыу. □ Есть, кушать, питаться, кормиться. *Аш ашау. Ит ашау. Тамаҡҡа ашау. Туйғанса ашау.* ■ *Ашағас та һауытһабаны йыуып ҡуй — фәрештәнең ҡанаты талмаһын. Яу, яу, ямғырым, ҡара тәкә һуйырмын, башын һиңә бирермен, түшен үҙем ашармын, һөйәген этка ташлармын.* Халыҡ ижадынан. ● *Ашаған белмәҫ, тураған белер.* Әйтем. *Ашаған табағыңа төкөрмә.* Әйтем. *Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен.* Мәҡәл. *Алты йәшәрҙекен ашама, алтмыш йәшәрҙекен аша.* Мәҡәл. *Аҙ ашаған күп ашар, күп ашаған ни ашар.* Мәҡәл. *Йәне теләгән йылан ите ашаған.* Әйтем. *Ашамайым, ашамайым, тип, алтмыш ҡоймаҡ ашаған.* Мәҡәл.

**2.** Кимереп, ҡырҡып тишкеләү; тешләү. □ Кусать *(о паразитах)*, изъедать. *Алманы ҡорт ашаған. Кейемде көйә ашаған.*

**3.** *күсм. һөйл.* Тапҡан, килеп торған аҡса, мал иҫәбенә йәшәү. □ Жить за счёт своего дохода. *Тапҡан аҡсаны ашап бөтөп тороу. Аҡса ашау. Пенсия ашау.*

**4.** *күсм. һөйл.* Үҙенә тейеш түгелде үҙләштереү. □ Жить за счёт чужого. *Кеше хаҡын ашау.* ■ *[Моҡай:] Харрас бай күпер һалырға тип халыҡтан йыйған аҡсаны ашаны.* Х. Ибраһимов.

♦ **Ашарға һорамай** кәрәкһеҙ кеүек нәмәне ташларға теләмәгәндә әйтелә. □ Есть не просит *(о вещи, которая может пригодиться в будущем).* ■ *[Зөфәр:] Олатай, был иҫке биҙрә ҡолағы ниңә кәрәк ул? [Карт:] Ята бирһен, ашарға һорамай бит!* Ә. Харисов. **Ашап туйғыһыҙ** бик тәмле. □ Очень вкусный, пальчики оближешь. ■ *Бешереп килтерһәләр — кинйә улының кәләше бешергән икмәк ашап туйғыһыҙ.* Әкиәттән. **Ашарҙай булыу** ныҡ асыуланыу, нәфрәтләнеү. □ Есть (пожирать, поедать) глазами *кого.* ■ *Был ике студенттың бер-береһенә [ни эшләп] ашарҙай булып ҡарағанын беҙ аңлай алмайбыҙ.* К. Мәргән.

**АШАУ II (аша-)** (Р.: размывать; И.: abrade; Т.: sığırmak) *ҡ.*

**1.** Өйкәп, ҡырып йоҡартыу. □ Истачивать, истирать. *Тәгәрмәстең тимере күсәрҙе ашаған.*

**2.** Йыуып, өңөп емереү; умырыу. □ Размывать, подмывать. ■ *Ағиҙел яры буйҙарындағы ағастарҙы ҡырҡыу дауам итә, ағасһыҙ ярҙы йылға тиҙ ашай.* С. Иманғолов.

**3.** Йылылыҡ тәьҫире йәки химик тәьҫир менән уйыу, ҡырҡыу. □ Разъедать, изъедать *(о кислоте, ржавчине и т.д.). Тут тимерҙе ашай. Кислота кейемде ашай.* ■ *Яҙғы елдәр ҡарҙы туктауһыҙ ашаған.* Әкиәттән.

**4.** *күсм. Нәмәнең* төҫөн алыу; ундырыу. □ Выгореть, линять, выцветать (например, *под воздействием солнца*). ■ *Байрам, өйгә инеп, көн ашаған йәшкелт фуражкаһын сөйгә элде.* Р. Низамов.

**АШАУ III** *и. диал. кар.* **ашамлыҡ.**

**АШАУЛЫҠ (ашаулығы)** *и. кар.* **ашъяулыҡ.**

**АШАУ-ЭСЕҮ (аша-эс-)** (Р.: кушать; И.: rations; Т.: yemek) *к.*

Ризыҡланыу; ашамлыҡ, ризыҡ ҡабул итеү. □ Кушать. // Продовольствие. ■ *Пушкин менән Лев Толстой, бай ҡатламдан булараҡ, кейем, ашау-эсеүҙә мохтажлыҡ кисермәгән.* Р. Хажиев. «*Ашарға-эсергә килтерергә онотмағыҙ*», *— тип һораны һалдаттарҙың береһе.* Б. Рафиҡов.

**АШ АШАУ (аш аша-)** (Р.: кушать; И.: rations; Т.: yemek) *к.*

**1.** Ризыҡланыу; ашамлыҡ, ризыҡ ҡабул итеү. □ Кушать, питаться. ■ *Икенсе көн тағы аш ашарға ултырғандар. Әбей ҙә, бабай ҙа шым ғына ашап ултыралар.* Әкиәттән.

**2. Аш I, 2** һурпалы ашамлыҡ менән туҡланыу. □ Кушать суп. ■ *Бынан һуң Кинйәбай ағаһы менән Гөлйөҙөм еңгәһе лә ҡайтып килде. Шунан улар күмәкләп аш ашарға ултырҙы. Күп итеп картуф турап, һөткә генә бешерелгән туҡмас шул тиклем тәмле булды. Юлдаш менән Ҡыҙырас икешәр тәрилкә аш ашаны.* З. Биишева.

**3.** Ҡунаҡҡа, ҡунаҡ һыйына барыу. □ Ходить в гости. *Аш ашарға саҡырыу.* ■ *Ул бында үҙен генә түгел, Юлдыбайҙы ла ҡунаҡҡа ғына, аш ашарға ғына килгән кеше кеүек тойҙо.* Һ. Дәүләтшина.

**АШАШЫУ (ашаш-)** *к. урт. ҡар.* **ашау I, 1, 3**. *взаимн. от* **ашау I, 1, 3**.

**АШАЯҠ (ашаяғы)** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **ҡаҙанлыҡ I.**

**2.** *ҡар.* **туҫтаҡ.**

**АШ БЕШЕРЕҮСЕ** (Р.: повар; И.: cook; Т.: aşçı) *и.*

Аш-һыу әҙерләүсе; ашнаҡсы. □ Повар.

**АШ БҮЛМӘҺЕ** (Р.: кухня; И.: kitchen; Т.: mutfak) *и.*

Аш-һыу әҙерләү бүлмәһе. □ Кухня, столовая.

**АШ ЙӘЙМӘ** *и. диал. ҡар.* **ашъяулыҡ.**

**АШ КӨҪӘҮ (аш көҫә-)** (Р.: быть разборчивым в еде; И.: be exacting in taking food; Т.: yemekte titiz olmak) *к.*

Аш һайлау, күңел һорағанды ашарға теләү, ерегеү, ереү. □ Быть разборчивым в еде *(в связи с каким-л. состоянием, например, болезнью, беременностью).*

**АШКӘБӘН** *и. диал. ҡар.* **кәбән.**

**АШ ҠАБАҒЫ** *и. ҡар.* **ҡабаҡ II.**

**АШҠАБАҠ (ашҡабағы)** *и. ҡар.* **ҡабаҡ II**.

**АШҠА БАРЫУ (ашҡа бар-)** *к. ҡар.* **ҡунаҡҡа барыу.**

**АШҠАҘАН** (Р.: желудок; И.: stomach; Т.: mide) *и. анат.*

Кеше һәм хайуандарҙың аҙыҡ эшкәртеү ағзаһы. □ Желудок. *Ашҡаҙан шеше. Ашҡаҙан ауыртыу.* ■ *Ашҡаҙан, эсәк ауыртҡанда, өс андыҙ тамырын ҡырып, турап, бер сәғәт ҡайнатаһың да бер аҙна төнәткәс, сәй кеүек эсәһең.* Халыҡ ижадынан.

**АШҠАҘАН АҪТЫ БИҘЕ** (Р.: поджелудочная железа; И.: pancreas; Т.: pankreas) *и. анат.*

Ашҡаҙан эргәһендә урынлашҡан биҙ. □ Поджелудочная железа. ■ *Татлы картуф ашҡаҙан аҫты биҙенә оҡшаған һәм диабет сирлеләрҙең гликемия күрһәткесен көйләй.* «Башҡортостан», 17 февраль 2011.

**АШҠАҘАН ҺУТЫ** (Р.: желудочный сок; И.: gastric juice; Т.: mide suyu) *и. мед.*

Ашҡаҙандың лайлалы тиресәһенең эпителий күҙәнәктәре һәм ашҡаҙан биҙҙәрендә барлыҡҡа килгән шыйыҡса. □ Желудочный сок. *Ашҡаҙан һуты бүленеү.*

**АШҠАҘАН-ЭСӘК** (Р.: желудок и кишечник; И.: guts; Т.: mide ve bağırsak) *и. анат. йыйн.*

Ашҡаҙан һәм эсәктәр. □ Желудок и кишечник. *Ашҡаҙан-эсәк тракты.*

**АШ ҠАЙТАРЫУ (аш ҡайтар-)** (Р.: приносить гостинцы; И.: bring goodies; Т.: hediyeler getirmek) *к. диал.*

**1.** Ҡыҙ яғынан егет яғына алып барған күстәнәс. □ Гостинцы со стороны невесты к свадьбе.

**2.** Туй күстәнәстәренә саҡырылған ҡунаҡтарҙың кейәү-кәләшкә теләктәре. □ Пожелания односельчан жениху и невесте.

**3.** Ҡөрьән ашынан һуң ашҡа бағышлап уҡылған доға. □ Молитва.

**АШҠАҠ (ашҡағы)** *и. диал.*

**1.** *ҡар.* **сираҡ I.**

**2.** *күсм.* Нәҙек оҙон кеше. ◻ Долговязый.

**АШҠАЛАҠ** *и. диал. ҡар.* **калаҡ.**

**АШҠАЯҠ I** (Р.: легко сдираемый; И.: easy to bark; Т.: kolay soyulan) *с.*

Ҡабығы еңел ҡубыусан *(яҙғы ағасҡа ҡарата).* ◻ Легко сдираемый *(о коре дерева).* ■ *[Баҡый халҡы] йүкә ағасы ашҡаяҡ саҡта, кемуҙарҙан һалабаш төшөргән.* Ж. Кейекбаев.

**АШҠАЯҠ II (ашҡаяғы)** (Р.: камбий; И.: alburnum; Т.: kambiyum) *и.*

Ағастың ҡайыры аҫтындағы йомшаҡ ҡатлам. ◻ Камбий, заболонь, оболонь. *Ашҡаяҡ күҙәнәктәре.*

**АШҠАЯҠ III (ашҡаяғы)** (Р.: весенние работы по очистке бревен от коры; И.: bark a log; Т.: ağaçların kabuğunu soyma) *и.*

Яҙғы ағас әрсеү эше. ◻ Весенние работы по очистке бревен от коры. *Ашҡаяҡ ваҡыты.* ■ *[Хәлиулла] ашҡаяҡ ваҡыты етеү менән дегет ҡайната башланы.* И. Ғиззәтуллин.

**2.** Әрсеп киптерелгән ағас (ҡайын, йүкә һ.б.). ◻ Окоренное и высушенное дерево. *Ашҡаяҡ — иң кәрәкле материал.*

**АШҠАЯҠЛАНЫУ (ашҡаяҡлан-)** (Р.: сдираться; И.: peel off; Т.: soyulmak) *ҡ.*

Ағастың һутланып, ҡабығының еңел ҡубыусанға әйләнеүе. ◻ Сдираться, отставать *(о коре дерева). Ағас ашҡаяҡланған.*

**АШҠАЯҠЛАУ (ашҡаяҡла-)** (Р.: очищать бревно; И.: bark a log; Т.: kabuğunu soymak) *ҡ.*

**1.** Яҙын ағас ҡабығын әрсеү, һыҙырыу. ◻ Очищать бревно, сдирать кору. *Өйлөк бүрәнә ашҡаяҡлап ҡайттыҡ.*

**2.** *күсм.* Сыбыҡ, сыбыртҡы менән туҡмау; һыҙырыу, ҡайыҙлау. ◻ Хлестать, стегать, драть. *Сыбыҡ менән ашҡаяҡлау.* ■ *Беҙ ҡасҡан йылҡы, һыйырҙарҙы буран уйнатып ҡыуып, киндерҙән ишелгән оҙон сыбыртҡы менән ашҡаяҡлап, мал араһына индерәбеҙ.* Ш. Шәһәр.

**АШҠЫН** (Р.: пылкий; И.: ardent; Т.: hararetli) *с.*

Ашҡынып торған; ярһыу. ◻ Пылкий, горячий. *Ашҡын йөрәк. Ашҡын күңел. Ашҡын хистәр.*

**АШҠЫНДЫРЫУ (ашҡындыр-)** (Р.: волновать; И.: inspire; Т.: coşturmak) *ҡ.*

**1.** Йөрәкһетеп ынтылдырыу; ярһытып елкендереү. ◻ Волновать, воодушевлять, вдохновлять. ■ *Ашҡындыра, уйландыра кәкүк тауышы, .. ҡыҙ йөрәген елкендерә ҡайғы-һағышы.* Б. Бикбай.

**2.** *эйһ. ҡар.* **ашҡыныу 1.**

**АШҠЫНЫУ (ашҡын-)** [дөйөм төрки *аш-* ‘артылыу’ < *ашыҡ-у*] (Р.: стремиться; И.: long for; Т.: çabalamak) *ҡ.*

**1.** Йөрәкһеп *нимәгәлер* ынтылыу; ярһыу. ◻ Стремиться, рваться, порываться. ■ *Мин ашҡынып сыҡтым урамға, ҡаршы ҡуйып йөҙҙө буранға.* И. Кинйәбулатов. *Сәлимдең күҙҙәре ут булып яна, йөрәге һикерә, ашҡына ине.* Н. Ҡәрип.

**2.** *диал. ҡар.* **аҙыу II, 5.**

**3.** *диал. ҡар.* **уңыу.**

**АШҠЫНЫУЛЫ** *с. ҡар.* **ашҡын.**

**АШЛАҒАС** (Р.: суп; И.: soup; Т.: çorba) *и.*

Аулаҡта бешерелгән аш. ◻ Суп, приготовленный на вечеринке.

**АШЛАМА I** (Р.: удобрение; И.: fertilizing; Т.: gübre) *и.*

Үҫемлектәрҙе туҡландырыу һәм уңышын күтәреү өсөн тупраҡҡа ҡушыла торған төрлө матдә. ◻ Удобрение. *Ашламалар анализы. Минераль ашлама. Ашлама индереү. Ашлама күмдереү. Ашламаларҙың оптималь дозаһы.* ■ *Аҡрынлап техника ремонтлана, орлоҡ таҙартыла, баҫыуға ашлама сығарыла.* Р. Солтангәрәев.

**АШЛАМА II** (Р.: прививочный материал; И.: inoculative material; Т.: inokulum) *и.*

**1.** Емеш ағастарына сортын үҙгәртеү маҡсатында ялғап, ҡушып үҫтереү өсөн әҙерләнгән сыбыҡсалар. ◻ Прививочный материал. *Ашлама ялғау.*

**2.** *диал. ҡар.* **ямау**.

**АШЛАМАЛАУ (ашламала-)** *к. кар.* **ашлау VI, 1.** *Алманы ашламалау.* ● *Ашланған ер аш бирер, ташланған ер таш бирер.* Мәҡәл.

**АШЛАНЫУ I (ашлан-)** *к. төш. кар.* **ашлау II**. *страд. от* **ашлау II**.

**АШЛАНЫУ II (ашлан-)** *к. төш. кар.* **ашлау III**. *страд. от* **ашлау III**.

**АШЛАНЫУ III (ашлан-)** *к. төш. кар.* **ашлау IV**. *страд. от* **ашлау IV**.

**АШЛАНЫУ IV (ашлан-)** (Р.: гноиться; И.: fester; Т.: irinlenmek) *к. диал.*

Эренләү. □ Гноиться.

**АШЛАТЫУ I (ашлат-)** *к. йөкм. кар.* **ашлау II**. *понуд. от* **ашлау II**.

**АШЛАТЫУ II (ашлат-)** *к. йөкм. кар.* **ашлау III**. *понуд. от* **ашлау III**.

**АШЛАТЫУ III (ашлат-)** *к. йөкм. кар.* **ашлау IV**. *понуд. от* **ашлау IV**.

**АШЛАУ I (ашла-)** (Р.: большая деревянная чаша; И.: a large wooden bowl; Т.: büyük ağaç kase) *и.*

**1.** Ҙур ағас һауыт. □ Большая деревянная чаша из цельного куска дерева. ■ *[Аллаяр] ашлауға итте .. һоҫоп ала башланы.* Ф. Иҫәнғолов.

**2.** *диал.* Мал ялғашы. □ Корыто.

**АШЛАУ II (ашла-)** (Р.: удобрять; И.: fertilize; Т.: gübrelemek) *к.*

Тупраҡҡа ашлама индереү. □ Удобрять. *Ерҙе ашлау. Өҫтәмә рәүештә ашлау.*

**АШЛАУ III (ашла-)** (Р.: крахмалить; И.: starch; Т.: kolalamak) *к.*

Буйлыҡ епте йәки туҡыманы крахмаллау. □ Крахмалить. *Туҡыманы ашлау.*

**АШЛАУ IV (ашла-)** (Р.: прививать; И.: inoculate; Т.: aşılamak) *к.*

**1.** Бер емеш ағасының ботағын икенсе емеш ағасына ялғау. □ Прививать. // Прививка. *Урман алмаһына баҡса алмаһын ашлау.*

**2.** *диал.* Һап ҡуйыу; һаплау. □ Насаживать на черенок. *Салғыны ашлау. Балтаны ашлау.*

**3.** *диал.* Үҙ урынына ҡуйыу. □ Пригонять, подгонять. *Рамды тәҙрәгә ашлау.*

**4.** *диал.* Энә менән сәнсеп тәнгә дарыу ебәреү; укол ҡаҙау. □ Делать укол. ■ *Малды түләмәгә ҡаршы ашлаған өсөн докторҙар аҡса алмай, хөкүмәт дарыуҙы бушлай бирә.* Ф. Төхфәтуллин.

**АШЛЫ** (Р.: сытый; И.: with food; Т.: aşlı) *с.*

**1.** Ашы булған. □ С едой, пищей, сытый. *Ашлы өй.* ● *Ат ҡәҙерен атлы белмәҫ, аш ҡәҙерен ашлы белмәҫ.* Мәҡәл.

**2.** Крахмалға манылған, крахмал һеңдерелгән. □ Накрахмаленный, крахмальный. *Ашлы тауар.*

**АШЛЫҠ (ашлығы)** (Р.: зерно; И.: standing crops; Т.: aşlık) *и.*

**1.** Он, ярма өсөн үҫтерелгән ауыл хужалығы үҫемлеге; иген. □ Зерно, хлеб. *Ашлыҡ сабыу. Ашлыҡ сәсеү. Ашлыҡ утау. Ашлыҡ урыу. Ашлыҡ һуғыу. Көҙгө ашлыҡ. Яҙғы ашлыҡ.* ■ *Ямғыр, яу, яу, яу, ашлыҡ үҫһен тау, тау.* Халыҡ ижадынан. ● *Көҙгө ашлыҡты көлгә сәс, яҙғы ашлыҡты боҙға сәс.* Әйтем.

**2.** Шул үҫемлектең аҙыҡҡа файҙаланылған орлоғо. □ Хлеб. *Тос ашлыҡ.* ■ *Келәт тулды ашлыҡҡа, бейештеләр шатлыҡҡа.* Ғ. Амантай.

**АШЛЫҠ АРТЫ** (Р.: мякина; И.: chaff; Т.: başak samanı) *и. а.х.*

Иген елгәргәндә ҡалған ҡый; кәбәк. □ Мякина.

**АШЛЫҠ ҠУНЫҘЫ** *и. зоол. кар.* **иген ҡуңыҙы.**

**АШЛЫҠ ТУТЫ** (Р.: ржавчина хлебная; И.: mildew; Т.: ekmek pası) *и. а.х.*

Ашлыҡтарға ҡунған бәшмәк саңы. □ Ржавчина хлебная.

**АШЛЫҠ ЫРЖАҺЫ** *и. а.х. кар.* **ашлыҡ туты.**

**АШМАНТАЙ** (Р.: название одного из родовых подразделений башкир; И.: one of clan names; Т.: bir Başkurt soyunun ismi) *и. этн.*

Ҡырғыҙ башҡорттарының аймаҡ исеме. □ Название родового подразделения башкир племени кыргыз.

**АШНАҠ (ашнағы)** (Р.: летняя кухня; И.: cookhouse; Т.: yaz evi) *и.*

Йәй көнө аш-һыу әҙерләй торған ҡоролма; аласыҡ. □ Летняя кухня *(во дворе).*

**АШНАҠСЫ** (Р.: повар; И.: cook; Т.: aşçı) *и.*

Аш-һыу әҙерләүсе; аш бешереүсе; ашсы. □ Повар, повариха. ■ *Балалар йортонда йәйге лагерға күскән сакта Гөлгөнә ашнаксы Бибиниса апайҙың усаҡ сығарғанын ҡарарға ярата ине.* Ш. Янбаев. ● *Йыртанас кеше йырсы булған, ашамһаҡ кеше ашнаҡсы булған.* Мәҡәл.

**АШӨЙ** (Р.: кухня; И.: kitchen; Т.: mutfak) *и. диал.*

Аш-һыу әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән айырым бүлмә. □ Кухня.

**АШ ӨЙӨ** (Р.: кухня; И.: kitchen; Т.: mutfak) *и.*

Аш-һыу әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән айырым аласыҡ. □ Кухня, летовка.

**АШ СОДАҺЫ** (Р.: пищевая сода; И.: cooking soda; Т.: besin soda) *и.*

Ике өлөшлө күмер кислоталы натр, аҡ онтаҡ матдә *(медицинала һәм кулинарияла ҡулланыла).* □ Пищевая сода.

**АШ СӨГӨЛДӨРӨ** (Р.: столовая свёкла; И.: beet; Т.: pancar) *и. бот.*

Ҡыҙыл сөгөлдөр. □ Столовая свёкла (лат. *Beta vulgaris*).

**АШ САНАҺЫ** (Р.: повозка с угощениями; И.: cart with treats; Т.: hediyeler yüklenen araba) *и. этн. диал.*

Ҡыҙҙы оҙатҡанда ҡустәнәстәр, йыуасалар һалып бара торған сана; аш арба. □ Повозка с угощениями во время проводов невесты.

**АШ СҮМЕСЕ** (Р.: половник; И.: soup ladle; Т.: kepçe) *и.*

Аш өләшә торған бәләкәй сүмес формаһындағы оҙон һаплы хужалыҡ йыһазы. □ Половник.

**АШСЫ** *и. ҡар.* **ашнаҡсы.**

**АШТАБАҠ (аштабағы)** (Р.: большая чаша; И.: a large bowl for meat; Т.: büyük kase) *и.*

Сеүәтәгә ҡарағанда ҙурыраҡ һауыт. □ Большая чаша для супа, мяса и т. п. ■ *Хужа ҙур бер аштабаҡ катыҡ, өс икмәк килтергән. Юлаусы быларҙы ла һыпырған.* Әкиәттән.

**АШТАУ** *и. диал. ҡар.* **аштабаҡ.**

**АШ ТАЯРЛАУ (аш таярла-)** (Р.: приготовление еды; И.: cooking; Т.: yemek pişirme) *ҡ. диал.*

Аш әҙерләү. □ Готовить еду. // Приготовление еды.

**АШ ТОҘО** (Р.: поваренная соль; И.: table salt; Т.: sofra tuzu) *и.*

Аш-һыуҙы тәмләй торған әсе кристаллик есем. □ Поваренная соль.

**АШ ТӨРЛӘҮ (аш төрлә-)** *ҡ. ҡар.* **аш көҫәү.**

**АШТЫРЫУ (аштыр-)** (Р.: переполнять; И.: overfill; Т.: aştırmak) *ҡ.*

**1.** Ситенән аша сығарып тултырыу; артылдырыу. □ Переполнять, переливать через край. *Мискәнән аштырыу. Аштырғанса ҡойоу.*

**2.** Саманан тыш ҡыланыу, арттырыу. □ Переборщить, переходить границу, меру. *Аштырып ебәреү.*

**3.** *күсм.* Һөйләгәндә булмағанды өҫтәү; арттырыу. □ Преувеличивать. ■ *Һәр бер һөйләүсе йәки йырлаусы отоп алған йырына йә әкиәтенә үҙенән яңы һүҙҙәр ҡушып, арттырып, аштырып һөйләй.* Ғ. Амантай.

**АШУҒ** [төрки < ғәр. *asiq* ‘ғишыҡ тотҡан’] (Р.: ашуг; И.: ashug; Т.: aşık) *и.*

Кавказ халыҡтарында халыҡ шағиры йәки йырсыһы. □ Ашуг.

**АШХАНА** [төрки *аш* + фарсы *хана*] (Р.: столовая; И.: eating place; Т.: mutfak) *и.*

Күмәк халыҡ туҡлана торған урын. □ Столовая. *Ашханалар тресы. Ашхана залы.* ■ *Миңлебай Нәжипич мине ҡайһы*

*сакта, бигерәк тә ял көндәрендә, ашханаға төшкө ашка саҡыра.* З. Биишева.

**АШ ҺЕҢДЕРЕҮ (аш һеңдер-)** (Р.: пищеварение; И.: digestion; Т.: sindirim) *ҡ. мед.*

**1.** Организмға ингән ҡатмарлы аҙыҡ матдәләренең ябай химик ҡушылмаларға тарҡалып үҙләштерелеү процесы. □ Пищеварение. *Эсәктәрҙәге аш һеңдереү процесы.*

**2.** *диал.* Ҡөрьән ашынан һуң әңгәмә, вәғәз. □ Поучать, наставлять.

**АШ ҺЕҢДЕРЕҮ ТРАКТЫ** (Р.: пищеварительный тракт; И.: digestive tract; Т.: sindirim borusu) *и. мед.*

Аш һеңдереү системаһының өлөшө: ҡыҙыл үңәс, ашҡаҙан, ас һәм йыуан эсәк; улар аша аҙыҡ үтә һәм механик, химик яҡтан эшкәртелә, һеңә. □ Пищеварительный тракт.

**АШ ҺЕРКӘҺЕ (**Р.: уксус; И.: table vinegar; Т.: sirke) *и.*

Әсе, ҡырҡыу еҫле төҫһөҙ шыйыҡлыҡ *(аш-һыуҙа ҡулланыла).* □ Уксус.

**АШҺЫНЫУ (ашһын-)** (Р.: поесть с желанием; И.: eat with gusto; Т.: iştahla yemek) *ҡ.*

Хуп күреп, теләк менән, тәмләп ашау. □ Поесть с желанием, аппетитом. *Ашһынып ашау.*

**АШ-ҺЫУ** (Р.: приготовленная пища; И.: cooked food; Т.: pişirilmiş yemek) *и. йыйн.*

Ашарға әҙерләнгән аҙыҡ. □ Приготовленная пища, еда. *Аш-һыуға оҫта.* ■ *Өҫтәлдәре һығыла мул аш-һыуҙан, хөрмәттән.* Т. Арслан. *Мәрйәм йәһәт кенә табынға аш-һыу ултыртырға тотонҙо.* Р. Солтангәрәев. ● *Аш-һыу барҙа дуҫ-иш күп була.* Әйтем.

**АШ-ҺЫУСЫ** (Р.: повар; И.: cook; Т.: aşçı) *и. һөйл.*

Аш-һыу әҙерләүсе; аш бешереүсе. □ Повар. ■ *[Аҡназарҙың] тамағына аш үтмәй башлай, ҡаланың иң оҫта аш-һыусыларын саҡыртып, төрлө ашамлыҡтар бешереп ҡарайҙар.* Әкиәттән.

**АШЪЯБЫУ** *и. диал. ҡар.* **ашъяулыҡ.**

**АШЪЯУЛЫҠ (ашъяулығы)** (Р.: скатерть; И.: tablecloth; Т.: masa örtüsü) *и.*

**1.** Табын уртаһына түшәй торған япма; ашаулыҡ. □ Скатерть. *Ашъяулыҡ йәйеү. Ашъяулыҡты йыйыу.* ■ *[Хәйруш] урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп, тәрилкә менән икмәк, тоҙ, стакан килтереп ҡуя.* Ҡ. Даян.

**2.** *диал.* Һауыт-һаба, икмәк һ. б. ашамлыҡ өҫтөнә яба торған таҫтамал, сепрәк. □ Салфетка, которой покрывают посуду и продукты.

**3.** Байлыҡ, муллыҡ, ҡунаҡсыллыҡ символы. Уға баҫырға, төнгөлөккә йәйелгән көйө асыҡ ҡалдырырға ярамай. □ Скатерть *(мифологизированный предмет, символ изобилия, благополучия, богатства, гостеприимства; на неё нельзя наступать, её нельзя оставлять открытой на ночь).*

**АШЫҒЫС** (Р.: скорый; И.: fast; Т.: acil) *с.*

Етеҙлек, тиҙлек талап иткән; кисектергеһеҙ. □ Скорый, спешный, поспешный, срочный. *Ашығыс операция. Ашығыс телеграмма. Ашығыс эш.*

**АШЫҒЫСЛЫҠ (ашығыслығы)** (Р.: спешность; И.: haste; Т.: acele) *и.*

Етеҙлек, тиҙлек. □ Спешность, поспешность, спешка. *Ашығыслыҡ күрһәтеү.*

**АШЫҒЫС МЕДИЦИНА ЯРҘАМЫ** (Р.: скорая медицинская помощь; И.: medical emergency service; Т.: acil tıbbi yardım) *и. мед.*

Яралы йәки ауырыу кешегә тиҙ күрһәтелгән медицина ярҙамы. □ Скорая медицинская помощь. ■ *Ашығыс медицина ярҙамының төп бурыстары: саҡырыу алған та зыян күреүсегә йәки ауырып китеүсегә урынында уҡ йәки стационарға алып барғанда мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ярҙам күрһәтеү; кисектергеһеҙ ярҙамға мохтаж кешеләрҙе, бәпесләүселәрҙе, балаһы етлекмәй тыуған ҡатындарҙы дауаханаға илтеү.* «Башҡортостан: ҡыҫҡаса энциклопедия»нан.

**АШЫҒЫС ЯРҘАМ МАШИНАҺЫ** (Р.: машина скорой помощи; И.: ambulance; Т.: ambulans) *и. мед.*

Ауыр хәлдәге кешегә тиҙ арала ярҙам күрһәтеү маҡсатында табипты йөрөткән

машина. □ Машина скорой помощи. ■ *Икенсе көндө ауырыуҙы ашығыс ярҙам машинаһы дауаханаға алып китте.* Һ. Рафиҡова.

**АШЫҒЫУ (ашыҡ-)** (Р.: торопиться; И.: hurry; Т.: acele etmek) *ҡ.*

Етеҙ, тиҙ ҡуҙғалыу, тиҙ булырға тырышыу; ҡабаланыу. □ Торопиться, спешить. *Ашыға башлау. Ашыға төшөү. Ашығып йөрөү.* ■ *Арьяҡ остан ашығып бирәү килә — минең йәнкәйемдең атлауы.* Халыҡ йырынан. ● *Ашағанда сәсәһәң, ашығып бирәү килеп етә.* Һынамыш. *Ашыҡҡан арыр, әкрен һаман барыр.* Мәҡәл.

**АШЫҒЫУСАН** (Р.: торопливый; И.: hasty; Т.: aceleci) *с.*

Эште етеҙ эшләгән, тиҙ ҡуҙғалырға, тиҙ булдырырға тырышыусан. □ Торопливый, склонный к спешке. *Эштә ашығыусан хәлокло.* ■ *Көндөң әҫелегенә түҙмәй, күптәр йылға-күл буйҙарына ашығыусан. Тик һыу ингәндә ҡайһы берәүҙәр ҡағиҙәләрҙе бар тип тә белмәй.* «Йәшлек», 8 июнь 2010.

**АШЫЗБА** *и. диал. ҡар.* **аласыҡ.**

**АШЫ ЙЫУЫЛЫУ (ашы йыуыл-)** (Р.: выщелачивание; И.: lixiviation; Т.: liç) *ҡ.*

Тупраҡтағы матдәләрҙең иреп, һыу менән әкренләп аҫҡа һарҡып төшөүе. □ Выщелачивание.

**АШЫҠ I (ашығы)** [дөйөм төрки *ашыҡ*] (Р.: альчик; И.: ankle; Т.: aşık çıkıntısı) *и.*

**1.** *анат.* Малдың бәкәл быуынындағы ваҡ һөйәк; бәкәлсәй. □ Лодыжка, щиколотка, бабка.

**2.** Уйын өсөн файҙаланылған шул һөйәк. □ Альчик, бабка. ■ *Ҡуҙыйкүрпәс уйындан һуң балаларҙың ашыҡтарын, бураларын талап ҡайтып китә.* «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу».

**3.** Шул һөйәк менән уйнаған балалар уйыны. ■ Детская игра в альчики, бабки. *Ашыҡ уйнау. Ашыҡ һуғыу.* ● *Ашыҡ уйнаған — аҙыр, туп уйнаған — туҙыр, ҡуй көтөп, ҡарын майы ашаған — барынан да уҙыр.* Мәҡәл.

**4.** *диал.* Бармаҡтарҙағы быуын һөйәктәр. □ Суставные кости пальцев. *Ҡулымдың ашығы тайған.*

**5.** *миф.* Күрәҙәселек иткәндә, им-томда, ырымда файҙаланылған һөйәктәр. □ Мифологизированный предмет, применяется в гаданиях, заговорах. ■ *Аҡ ҡуйымдың ашығы, тоғроһон әйт.* Күрәҙәсе тексы.

♦ **Алтын ашыҡ** бик ҡәҙерле, ҡиммәтле нәмә. □ Дорогой, бесценный. ■ *Сабый саҡтан һәр кемгә алтын ашыҡ Уралтау.* А. Игебаев. **Шайтан ашығы** кеше аяғының түбәндәге сурайып торған һөйәге; бәкәл. □ Лодыжка, щиколотка.

**АШЫҠ II** *р. диал. ҡар.* **артыҡ I, 3.**

**АШЫҠ-БОШОҠ** (Р.: наспех; И.: in a hurry; Т.: alelacele) *р.*

Тиҙ-тиҙ, ҡабалан. □ Наспех, быстро, торопливо. *Ашыҡ-бошоҡ эшләү.* ■ *[Хәсән] ашыҡ-бошоҡ ашаны ла, һеңлеһе Сәхибә янына Татырлыға китте.* С. Агиш. *[Илһөйәр] был юлы ла, ут ҡапҡандай, өтәләнеп кейемдәрен йыйып, ашыҡ-бошоҡ кейенергә кереште.* Х. Тапаҡов.

**АШЫҠТЫРЫУ (ашыҡтыр-)** (Р.: ускорять; И.: hasten; Т.: hızlandırmak) *ҡ.*

**1.** Эш-хәрәкәтте ашығыс итеү, тиҙләтеү. □ Ускорять. // Ускорение. *Түйҙы ашыҡтырыу. Эште ашыҡтырыу.* ■ *Мин аҙымымды ашыҡтырҙым.* Д. Юлтый.

**2.** Тиҙ булырға ҡыҫтау; ҡабаландырыу. □ Торопить, поторапливать, подгонять. *Баланы мәктәпкә ашыҡтырыу. Ҡайтырға ашыҡтырыу. Эшкә ашыҡтырыу.*

**АШЫҠ УЙЫНЫ** (Р.: игра в альчики; И.: kind of children's game; Т.: çocuk oyunu) *и.*

Ашыҡ менән уйнаған балалар һәм йәштәр уйыны. □ Игра в альчики.

**АШЫҠ ҺУҒЫУ (ашыҡ һуҡ-)** *ҡ. ҡар.* **ашыҡ уйыны.**

**АШЫРЫЛЫУ I (ашырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ашырыу I**. *страд. от* **ашырыу I**.

**АШЫРЫЛЫУ II (ашырыл-)** *ҡ. төш. ҡар.* **ашырыу II**. *страд. от* **ашырыу II**.

**АШЫРЫП** (Р.: через; И.: through; Т.: üzerinden) *бәйл.*

Аша, арҡыры. □ Через. ■ *Атты тау ашырып ебәрҙем.* Һ. Дәүләтшина.

**АШЫРЫУ I (ашыр-)** (Р.: преувеличивать; И.: exaggerate; Т.: aşılmak) *ҡ.*

**1.** *Ниндәйҙер* сиктән, күләмдән үткәреү. □ Перейти через границу, преувеличивать, перебарщивать. *Саманан ашырыу.*

**2.** *Ниндәйҙер* кимәлдән юғары күтәреү. □ Поднимать выше *чего. Болоттан ашырыу.*

**3.** *Ниндәйҙер* кимәлгә үрләтеү; күтәреү. □ Поднимать *куда. Һауаға ашырыу.*

**АШЫРЫУ II (ашыр-)** (Р.: осуществлять; И.: realize; Т.: gerçekleştirmek) *ҡ.*

*Нимәнелер* үтәү, ғәмәлләштереү, бар итеү. □ Претворять, воплощать *(в жизнь)*, осуществлять. *Бойомға ашырыу. Ғәмәлгә ашырыу. Ниәтемде тормошҡа ашырҙым һәм шуға һаман ҡыуанып бөтә алмайым.*

**АШЫУ I (аш-)** [дөйөм төрки *аш-*, боронғо төрки *аал-*] (Р.: переходить меру; И.: transcend; Т.: aşmak) *ҡ.*

**1.** *Ниндәйҙер* сиктән, күләмдән артыу. □ Переходить меру, границы, превысить, выйти за пределы. *Саманан ашыу. Мал һаны меңдән ашты.* ■ *[Ғаяз:] Әле генә Яхин ике айҙа юлға мең өс йөҙ кубометрҙан ашыу таш түгелеүен әйтте.* Н. Мусин.

**2.** *Ниндәйҙер* кимәлдән юғары күтәрелеү. □ Подниматься выше *чего. Болоттан ашыу. Ярҙан ашыу.* ■ *Шатлыҡтары башынан ашҡан халыҡ геүләне.* Я. Хамматов.

**3.** *Ниндәйҙер* кимәлгә үрләү; күтәрелеү. □ Подниматься *до чего. Бейеккә ашыу. Һауаға ашыу.* ■ *Ашыр булһаң, бейек тауҙарға аш.* М. Кәрим. *Тауға ҡарап күккә аша алмаҫ түбәләс.* М. Ямалетдинов.

**4.** Үрләп, аша сығыу. □ Переходить, переваливать. *Һыртты ашыу.* ■ *Болотҡа еткән тауҙарҙы һикереп ашҡан Аҡбуҙат.* «Аҡбуҙат». *Ете диңгеҙ кисеп, тауҙар ашып .. ҡайтыр юлдарыма ҡанатландым.* Ф. Күзбәков.

**АШЫУ II (аш-)** (Р.: воплощаться *(в жизнь)*; И.: be realized; Т.: gerçekleşmek) *ҡ.*

Ғәмәлләшеү, алға килеү, бар булыу; үтәлеү. □ Претворяться, воплощаться *(в жизнь, осуществляться). Бойомға ашыу. Ғәмәлгә ашыу. Тормошҡа ашыу.* ■ *Бойомдарға ашмаҫ хыял төҫлө селпәрәмә килә ханлыҡтар.* М. Ямалетдинов.

♦ **Эшкә ашмаған** *нимәгәлер* ярамаған; булдыҡһыҙ. □ Негодный для употребления. **Эшкә ашыу** *нимәгәлер* яраҡлы булыу; ярау. □ Быть годным, пригодным *к чему. Был бүрәнә серегән, эшкә ашмай.*

**АШЫУ III** (Р.: больше; И.: more; Т.: fazla) *р.*

Билдәле бер саманан артыҡ. □ Больше, более, выше, свыше. *Йылдан ашыу ваҡыт үтте. Күнәктән ашыу һөт.*

**АШ ЭСЕҮ (аш эс-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аш ашау**. *Аш эсергә саҡырыу.*

**АШ ЯБЫУ** *и. диал. ҡар.* **ашъяулыҡ.**

**АШ ЯРАШТЫРЫУ (аш яраштыр-)** (Р.: доводить суп до готовности; И.: cook soup; Т.: çorba pişirmek) *ҡ.*

**1.** Ашты бешереп бөтөү. □ Доводить до готовности суп.

**2.** Аш бешереү. □ Готовить еду.

**АШ ЯҺАУ (аш яһа-)** (Р.: приготовление угощения для свадьбы; И.: preparation for the wedding feast; Т.: düğün için hazırlık) *ҡ. диал.*

**1.** Туй йыуасаһы әҙерләү. □ Приготовление угощения для свадьбы.

**2.** Аш бешереү. □ Готовить суп.

**АЭРОБИКА** [рус. < ингл. *aerobics*] (Р.: аэробика; И.: aerobics; Т.: aerobik) *и.*

Музыка менән ритмик гимнастика яһау. □ Аэробика.

**АЭРОГРАФИЯ** [рус. < гр. *ger* 'һауа' + *grapho* 'яҙам'] (Р.: рисунок на машине; И.: aerography; Т.: aerografi) *и.*

Машинаға һүрәт төшөрөү. □ Рисунок на машине.

**АЭРОДРОМ** [рус. < фр. < гр. *aer* 'һауа' + *dromos* 'йүгереү'] (Р.: аэродром; И.: airfield; Т.: havaalanı) *и.*

Осҡос аппараттарҙы осора һәм ултырта, ҡарай һәм хеҙмәтләндерә торған махсус майҙан. □ Аэродром. *Хәрби аэродром. Аэродром төҙөү.*

**АЭРОЗОЛЬ** [рус. < гр. *aer* + нем. *sol*] (Р.: аэрозоль; И.: aerosol; Т.: aerosol) *и. махс.*

Газ мөхитендәге ваҡ ҡына ҡаты һәм шыйыҡ өлөшсәләрҙән торған дисперслы система. □ Аэрозоль. *Аэрозоль менән дауалау. Аэрозоль һиптергестәре.*

**АЭРОКЛУБ** [рус. < гр. + ингл. *club*] (Р.: аэроклуб; И.: flying club; Т.: uçuş kulübü) *и.*

Авиаспорт менән шөғөлләнеүселәр клубы. □ Аэроклуб. *Аэроклубҡа йөрөү.* ■ *Аэроклуб Өфөлә, 1934 йылдың 5 майында асыла.* «Башҡортостан: ҡыҫҡаса энциклопедия»нан.

**АЭРОПЛАН** [рус. < фр. *aeroplane* < гр. *aer* 'һауа' + лат. *planum*] (Р.: аэроплан; И.: airplane; Т.: aeroplan) *и.*

Мотор көсө менән оса торған аппарат; самолёт. □ Аэроплан. ■ *Шунда ғына ултырып аэропланға, бәғерем Сөләй, һиңә осормон.* Ғ. Амантай.

**АЭРОПОРТ** [рус. < гр. *aer* 'һауа' + фр. *port*] (Р.: аэропорт; И.: airport; Т.: hava limanı) *и.*

Һауа юлдары трассаһында урынлашҡан транспорт авиацияһының регуляр осошон тәьмин итеү өсөн бөтә кәрәк нәмә менән йыһазландырылған аэродром. □ Аэропорт. *Өфө аэропорты.*

**АЭРОСАНА** [рус.] (Р.: аэросани; И.: propeller sleigh; Т.: pervaneli motorlu kızak) *и.*

Һауа винты менән ҡар, боҙ өҫтөнән йөрөй торған сана. □ Аэросани. *Яланда аэросана йөҙ километрҙан артыҡ тиҙлек менән йөрөй.*

**АЭРОҺҮРӘТ** (Р.: аэроснимок; И.: aerial view; Т.: hava görünümü) *и.*

Билдәле бер урынды, төбәкте өйрәнеү маҡсатында һауа осоу аппараттары ярҙамында яһалған фотоһүрәт. □ Аэроснимок. *Аэроһүрәттәге күренеш. Аэроһүрәт төшөрөү.*

**АЯ I** (Р.: мера длины в четыре пальца; И.: span; Т.: dört parmak ölçümü) *и.*

Дүрт бармаҡ киңлегендәге үлсәү берәмеге. □ Мера длины в четыре пальца. *Бер ая. Ике ая. Ҡарыш ая. Сирек ая.* ■ *Итенең ҡырҡмаға караһы юк. Ҡабырға һырттары бер ая май, байғоштоң.* Һ. Дәүләтшина.

♦ **Ус аяһындай** *ҡар.* **ус.**

**АЯ II** (Р.: иголочный гребень; И.: kind of comb for down; Т.: iğneli tarak) *и.*

Дебетте таҙартыу, тетеү өсөн ҡулланылған энә тараҡлы ҡорал. □ Иголочный гребень для расчёсывания козьего пуха. ■ *Кәзәнең дебетен башта ҡыллайҙар, тетәләр, ә һуңынан ая менән аялайҙар. Ая — дебетте төпрәнән айыра торған эш ҡоралы.* Экспедиция материалдарынан.

**АЯҒОСО** (Р.: близко; И.: near; Т.: yakın) *и. диал.*

Яҡын, яҡын ғына. □ Очень близко.

**АЯҒӨҪТӨ** *р. ҡар.* **аяғүрә**. ■ *Әсәйемдең йоҡонан ҡасан тороп, сәғәт нисәлә ятҡанын хәтерләмәйем, һәр ваҡыт аяғөҫтө булды.* И. Аҡъюлов.

**АЯҒҮРӘ** (Р.: стоя; И.: standing; Т.: ayakta) *р.*

Аяҡта килеш. □ Стоя, стоймя.

**АЯҒЫ АУЫР** (Р.: тяжёлая нога; И.: heavy-footed; Т.: ağır ayaklı) *с.*

Ышаныуҙар буйынса, берәй кеше килгәс, эш-хәл насарға, кирегә киткәндә әйтелә. □ Употребляется по отношению к человеку, после посещения которого, по суеверным представлениям, случается неудача. *букв.* У него тяжёлая нога.

**АЯҒЫ ЕҢЕЛ** (Р.: лёгкая нога; И.: light-footed; Т.: başarı getiren) *с.*

Бер кеше килгәс, эш-хәл ыңғайға, яҡшыға киткән саҡта әйтелә. □ С его приходом работа идёт лучше. *букв.* У него нога лёгкая.

**АЯҘ I** [дөйөм төрки *айаз* 'аяҙ, һалҡын'] (Р.: ясный; И.: cloudless; Т.: bulutsuz) *с.*

Болотһоҙ, асыҡ. □ Ясный, безоблачный. *Аяҙ көн. Салт аяҙ. Аяҙға тартыу. Аяҙға ултырыу.* ■ *Салт аяҙ күктә ҡапыл кескенә болот пәйҙә була ла, күк күкрәтеп йәшен йәшнәтеп күлгә төшә.* Халыҡ ижадынан.

♦ **Аяҙ көндө йәшен һуҡҡан** (*йәки* **атҡан) кеүек булыу** көтмәгән бер хәл, хәбәр булғанда әйтелә. □ Как гром среди ясного неба.

**АЯҘ II** *и. диал. ҡар.* **аҡлан**.

**АЯҘАЙЫУ (аяҙай-, аяҙая)** *к. ҡар.* **аяҙыу.**

**АЯҘ ЙӘШЕН** *и. диал. ҡар.* **ялағай.**

**АЯҘЛАНЫУ (аяҙлан-)** *к. ҡар.* **аяҙыу.**

**АЯҘЛАУ (аяҙла-)** (Р.: проясниться; И.: clear up; Т.: açılmak) *к.*

Аяҙға әйләнеү; аяҙыу. □ Проясниться, разгуляться *(о наступлении ясной погоды после ненастья, непогоды). Көн аяҙлап, һыуытып ебәрҙе.*

**АЯҘ ТЕЛӘҮ (аяҙ теләү-)** (Р.: обряд вызывания солнца; И.: rite to make the sun appear; Т.: güneşi çağırmak) *к. миф.*

Ҡояш саҡырыу йолаһы. □ Обряд вызывания солнца. ■ *Көн оҙаҡ яуынлап китһә, аяҙ теләйҙәр. Аяҙға (ҡояшҡа) бағышлап, аҡ мал салалар.* Халыҡ ижадынан.

**АЯҘЫТЫУ (аяҙыт-)** *к. ҡар.* **аяҙыу** ■ *Яуын оҙаҡҡараҡ һуҙылһа, ике йәй ташын майлап китерҙәр ине. Шунан аҙаҡ аяҙыта торғайны.* Халыҡ ижадынан.

**АЯҘЫУ (аяҙы-)** (Р.: становиться ясным; И.: become cloudless; Т.: bulutsuz olmak) *к.*

Көн асылыу, болоттар таралыу. □ Становиться ясным, безоблачным, проясниться *(о погоде).* ● *Иртә аяҙымаһа, кис аяҙымаҫ, кис аяҙымаһа, һис аяҙымаҫ.* Әйтем.

**АЯҠ I (аяғы)** [боронғо төрки *аҙаҡ*] (Р.: нога, лапа *(зверя)*; И.: leg; Т.: ayak) *и.*

**1.** Кешенең, ҡош-ҡорттарҙың һәм ҡайһы бер хайуандарҙың баҫып йөрөү өсөн хеҙмәт иткән ағзаһы. □ Нога, ноги, лапа *(зверя). Уң аяҡ. Һул аяҡ. Тайыш аяҡ. Сатан аяҡ. Ҡамыт аяҡ. Аяҡ йөҙлөгө. Аяҡ табаны. Аяҡ ослау. Аяҡ өҫтө. Аяҡ үрә.* ■ *Кисәге ауырыу бөгөн аяғында нык тора.* Р. Бикбаев. *Зөлхизә аяҡ остарына ғына баҫып, ишек төбөнә килде, әммә өндәшмәне.* Г. Яҡупова. ● *Башыңда аҡылың булмаһа, аяғыңа көс.* Мәҡәл. *Яза — баш осонда, ҡаза — аяҡ аҫтында.* Әйтем. *Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ.* Әйтем. *Аяғы бысраҡ өй бысратыр, теле бысраҡ кеше бысратыр.* Мәҡәл. *Аяғыңды уң яҡтан башлап кей. Һулдан кейһәң, юлың уңмаҫ.* Һынамыш. *Аяғыңды бәүелтеп ултырма — шайтанды бәүелтерһең.* Халыҡ ижадынан.

**2.** Ултыртмалы нәмәләрҙең аҫтағы терәге; тояҡ. □ Ножка, ножки. *Өҫтәл аяғы. Ултырғыс аяғы. Телевизор аяғы.*

♦ **Аяғы инһә, башы инмәгән** яңы ғына урынлашҡан, төпләнеп тә бөтмәгән, тигән мәғәнәлә ҡулланыла. □ *досл.* Ноги вошли, но голова еще не вошла. *соотв.* На птичьих правах. **Аяғын ҡыҫҡартыу** берәүҙе йөрөгән еренән биҙҙереү. □ Отвадить. ■ *[Бойков — Игорға:] Был тирәлә тағы сыуалып йөрөйһө булһаң, аяғыңды ҡыҫҡартырбыҙ.* Ғ. Ибраһимов. **Аяҡ аҫтына һалыу** *йәки* **аяҡ аҫтына һалып тапау** иҫәпкә алмай, ситкә ҡағыу. □ Не считаться *с кем-чем*, отвергать *чьё-л.* мнение. *Йоланы аяҡ аҫтына һалып тапау.* ■ *Мин ни ҡарсыҡтың һүҙен аяҡ аҫтына һалып тапаманым, тыйнаҡ ҡына ултырҙым.* Р. Низамов. **Аяҡ аҫтында** 1) яҡында ғына, эргәлә. □ Близко, рядом; 2) *кемдеңдер* хакимлығы; ҡул аҫтында. □ Под властью *кого.* **Аяҡ атларға** *(йәки* **баҫырға) бирмәү** кешенең иркен ҡыҫыу; тынғы бирмәү. □ Стеснить *чью-л.* свободу, притеснять, обижать. ■ *Бер ҙә шуға барғым килмәгәйне, аяҡ атларға бирмәй яусылатты бит.* Һ. Дәүләтшина. **Аяҡ баҫыр урын юҡ** *(йәки* **ҡалмаған)** тығын, һыйыш юҡ. □ Иголку негде (некуда) воткнуть; Шагу негде (некуда) ступить; яблоку негде (некуда) упасть. ■ *Йомшаҡ автобуста аяҡ баҫыр урын ҡалмаған.* Ғ. Рамазанов. **Аяҡ баҫмау** берәй ергә бармау, аяҡ атламау. □ Ноги не будет *чьей где.* **Аяҡ ергә теймәү** бик шәп

барыу, шәп йүгереү. □ Двигаться очень быстро. ■ *Мөмкин булған тиклем кейенгән булдым да, Зөләйха эргәһенә киттем. Аяк ергә теймәй, малай.* Т. Йәнәби. **Аяҡ ҡалмау** хәлдән тайып арыу. □ Ноги отнялись от длительного хождения. *Йәйәү килә-килә аяк ҡалманы.* **Аяҡ терәп <һөйләшеү>** үҙ көсөңә нык ышанып һөйләшеү. □ Разговаривать уверенно, чувствуя уверенность. ■ *Минең кеүек ярлы-ябағай Зариф бай кеүектәр менән аяк терәп һөйләшә.* И. Ғиззәтуллин. **Аяҡты ныҡҡа терәү** таяныс табып, үҙ һүҙендә нык тороу. □ Твёрдо стоять на своём, не отступать. **Бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә** үлергә ваҡыт, тигән мәғәнәлә әйтелә. □ Одной ногой в могиле. *соотв.* Еле-еле душа в теле. *Миңә донъя малы кәрәкмәй, бер аяғым ерҙә, икенсеһе гүрҙә.* **Ике аяғын бер итеккә тыктырыу** ауыр хәлгә ҡуйыу. □ Поставить в затруднительное положение. **Ике аяҡтың береһен атламау** *(йәки* **баҫмау)** бөтөнләй бармау, йөрөмәү. □ Перестать ходить *к кому-л.* ■ *Урманға ике аяғыңдың береһен атлама.* М. Тажи. **Төклө аяғың менән** килен төшөргәндә йәки йортҡа мал ингәндә әйтелә торған теләк һүҙе. □ В добрый час *(пожелание невесте при её приезде в дом жениха).* ■ *[Төлшәкәр:] Төклө аяғың менән, ырыҫ, бәхет алып кил, .. тип иҙәнгә аҡ кейеҙемде йәйеп, килендe түргә үткәрҙем.* И. Ғиззәтуллин. **Әҙәм** *(йәки* **кеше) аяғы баҫмаған** бер кем булмаған, кеше йөрөмәгән *(ер, урын).* □ Укромный, уединённый *(куда не ступала нога человека).* ■ *Тыуған илебеҙҙе ташлап, беҙ алыҫ далаларҙа, кеше аяғы баҫмаған тау араларында йөрөйбөҙ, донъя күрергә, тормош ҡорорға теләйбеҙ.* Ш. Шәһәр.

**АЯҠ II (аяғы)** [боронғо төрки *айак* 'һауыт, силәк'] (Р.: большая деревянная миска; И.: large wooden bowl; Т.: büyük ağaç kase) *и.*

Ҙур ағас табаҡ. □ Большая деревянная миска, чаша. *Сөм аяк. Йәйпәк аяк.* ● *Бер аяк ҡымыҙҙың ике аяклык еле бар.* Әйтем.

♦ **Юл** *(йәки* **хуш) аяғы** кешене оҙатҡанда биргән һый. □ Посошок *(кумыс или спиртное, подаваемое гостям на прощание).*

**АЯҠ III (аяғы)** (Р.: моток ниток; И.: skein; Т.: iplik kangalı) *и.*

**1.** Кәлепләнгән еп. □ Моток ниток, приготовленный для стирки или покраски. *Епте йыуыу, буяу өсөн аяҡҡа һалалар.*

**2.** Кәлепләнгән епте үлсәү берәмеге. □ Моток *(мера измерения таких ниток). Бер аяк йөн.*

**АЯҠ IV** *и. диал. кар.* **һабаҡ.**

**АЯҠ V** *и. диал. кар.* **тәгәрмәс теше.**

**АЯҠ VI** *и. диал. кар.* **иңле.**

**АЯҠ АҪТЫ** (Р.: людное место; И.: crowded place; Т.: kalabalık yer) *и.*

**1.** Аяҡ менән баҫып торған ер. □ Под ногами.

**2.** Кеше күп йөрөгән урын. □ Людное место. *Аяҡ аҫтында сыуалма.*

**АЯҠБАУ** (Р.: верёвка, прикрепляемая к ошейнику; И.: cord attached to a collar; Т.: tasmaya takılan ip) *и.*

**1.** Ҡолон арҡанының шылтырауыктан елегә тиклемге өлөшө. □ Верёвка, прикрепляемая к ошейнику как часть привязи.

**2.** *диал.* Тышау. □ Путы.

**АЯҠ БАҪЫУ (аяҡ баҫ-)** (Р.: ступать; И.: tread; Т.: basmak) *к.*

Берәй ергә барыу, аяҡ атлау. □ Ступать. ■ *Ауыл ситендә бер емерек өй тороп ҡалған япа-яңғыҙы. Бер кем уға аяк баҫмай, эт-бесәйҙең хатта юк юлы.* Р. Ғарипов.

**АЯҠ БАҪЫУЫ** *и. кар.* **йыртыш.**

**АЯҠҠА БАҪТЫРЫУ (аяҡҡа баҫтыр-)** (Р.: поднимать всех; И.: rouse everyone up; Т.: kaldırmak) *к.*

**1.** Күмәк хәрәкәткә килтереү. □ Поднимать всех. ■ *Иртән, аттарҙың юғалыуы билдәле булғас, ауылда һыбай сабырҙай күпме ир-ат бар, һәммәһе аякка баҫтырылды.* Ә. Хәкимов.

**2.** Һауыктырыу, шәбәйтеү. □ Вылечить. *Табиптар аякка баҫтырҙы.*

**3.** Үҫтереп кеше итеү. □ Ставить (поднимать) на ноги *кого-что*. ■ *[Маһиҙә — Сәғиҙәгә:] Бирешмәнең, балаларыңды яңғыҙ аякка баҫтыра алдың.* Ә. Үтәбай.

**АЯҠҠА БАҪЫУ (аяҡка баҫ-)** (Р.: подниматься; И.: rise up; Т.: kalkmak) *ҡ.*

**1.** Күмәк хәрәкәткә килеү, дәррәү ҡуҙғалыу, күтәрелеү. □ Подниматься. *Бөтә ауыл аякка баҫты.*

**2.** Тормош көтөр хәлгә килеү, күтәрелеү; әҙәм булыу. □ Стать самостоятельным. *Йәштәр аякка баҫты.*

**3.** Хәл алып шәбәйеү, һауығыу. □ Выздороветь.

**АЯҠҠА ҠАН ТӨШӨҮ (аяҡка ҡан төш-)** (Р.: расширение вен; И.: varicosity; Т.: varis) *ҡ.*

Тамырҙар тулышыу. □ Расширение вен *(на ногах)*, варикоз.

**АЯҠ ЙӨҘӨ** (Р.: подъём ноги; И.: instep; Т.: ayağın üst kısmı) *и. диал.*

Йөҙлөк. □ Подъём ноги.

**АЯҠ КЕЙЕМЕ** (Р.: обувь; И.: shoes; Т.: ayakkabı) *и.*

Аяҡты механик һаҡлау, йылы тотоу өсөн аяҡка кейелә торған кейем. □ Обувь. ■ *Бай ҡыҙы кис һайын ете пар резина аяк кейеме туҙҙырыр булған.* Халыҡ ижадынан. *Уңайлы һәм модалы аяк кейеме — якшы кәйеф, үҙеңде ышаныслы тойоу нигеҙе.* «Йәшлек», 15 март 2008.

**АЯҠҠАП** *и. диал. кар.* **аяк кейеме.**

**АЯҠ-ҠУЛ** (Р.: конечности человека; И.: limbs; Т.: ayak, kol) *и. йыйн.*

Аяҡ менән ҡул. □ Конечности человека. *Аяк-кулды бәйләү.* ■ *Салауаттай ирҙәр баш эймәҫтәр, аяк-кулына бығау һалһаң да.* Халыҡ йырынан. *[Самсон:] Бына беҙҙең аяк-кул бәйле, әсә карынында ук сырмалып ҡуйылғанбыҙ.* З. Ураҡсин.

♦ **Аяк-кулың һыҙламаһын** һаулыҡ теләп әйтелә. □ Дай Бог здоровья. **Аяк-кулды бәйләү** эшкә, хәрәкәткә тоткарлыҡ яһау, ҡамасау итеү. □ Связывать по рукам и ногам. ■ *Аякһыҙ-кулһыҙ кулдәк кейә.* Йомаҡ. *Аякһыҙ-кулһыҙ капка аса.* Йомаҡ.

**АЯҠЛАНДЫРЫУ (аяҡландыр-)** (Р.: ставить на ноги; И.: make stand; Т.: kaldırmak) *ҡ.*

**1.** Аяҡка баҫтырыу, атлатыу. □ Ставить на ноги (например, *ребёнка*). *Баланы аякландырыу.*

**2.** *күсм.* Урлау, сәлдереү. □ Похитить, украсть.

**3.** *күсм. Кемгәлер* ҡаршы ҡуҙғатыу, күтәрелдереү. □ Поднимать против *кого*. *Халыкты көрәшкә аякландырыу.*

**АЯҠЛАНЫУ (аяҡлан-)** (Р.: становиться на ноги; И.: start walking; Т.: yürümeye başlamak) *ҡ.*

**1.** Башлап аяҡка баҫыу; атлай башлау. □ Становиться на ноги, начать ходить. ■ *Яубаҫар, аҙбар ишегенә өйөлгән көрттө көрәп, эскә инде. Ни күҙе менән күрһен — яңы ғына тыуған быҙау аякланырға маташа!* Р. Низамов.

**2.** *һөйл.* Берәй яҡка ҡарап атлау, юл алыу. □ Направляться. *Күрше ауылға аякланыу.* ■ *[Әхмәҙулла:] Бәй, мин дә шул якка аякланырға торам бит. Әйҙә улайһа.* Ә. Вахитов.

**3.** *күсм.* Урланыу, юғалыу. □ Быть похищенным, украденным. *Беҙҙең яландағы бесән аякланған бит.*

**АЯҠЛАУ I (аяҡла-)** (Р.: измерять глубину реки; И.: measure river's depth; Т.: nehir derinliğin ölçmek) *ҡ.*

Аяҡ менән тәрән һыуҙың төбөнә етеү, буйлау *(тәрәнлеген самалар өсөн)*. □ Измерять глубину реки *(своим ростом)*. ■ *Кулде аяклап карау түгел, унда һыу инергә лә куркка инек.* З. Ураҡсин.

**АЯҠЛАУ II (аяҡла-)** (Р.: мотать пряжу на мотовило; И.: roll yarn onto a reel; Т.: ipliği sarmak) *ҡ.*

Сираткан епте, йөндө тубыҡка, кәләпкә һалып урау. □ Мотать пряжу на мотовило.

**АЯҠЛАУ III (аяҡла-)** (Р.: способ сушки кизяка; И.: method of drying dung; Т.: gübre kurutma yöntemi) *ҡ. диал.*

Һуғылған тиҙәкте өсәрләп, дүртәрләп өйөү. □ Способ сушки кизяка.

**АЯҠЛЫ** (Р.: имеющий ножки; И.: having legs; Т.: ayaklı) *с*.

**1.** Аяғы булған, аяғы бар. □ Имеющий ножки. *Өс аяклы өҫтәл.* ■ *Дүрт аяклы януарға төйәк булған Уралым.* Ҡобайырҙан.

**2.** *күсм.* Тап үҙе. □ Ходячий, живой. *Аяклы энциклопедия.*

♦ **Аяклы бәлә** йыш ҡына ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт килтергән, имгәк кешегә әйтелә. □ Обуза. **Аяҡлы каза** ҡайғы, хәсрәт килтергән кешегә, малға ҡарата әйтелә. □ Обуза.

**АЯҠЛЫ БӘХЕТ** (Р.: вестник счастья; И.: herold of luck; Т.: sevinç habercisi) *и.*

Берәй ҡыуаныс алып килгән кешегә ҡарата әйтелә. □ Вестник счастья *(о человеке, который принес радостную весть).*

**АЯҠЛЫ ЕП** (Р.: пряжа, намотанная вокруг локтя и большого пальца или вокруг колена и стопы; И.: yarn wound on one's elbow; Т.: dirsek ve başparmağa sarılan ip) *и. тук.*

**1.** Терһәккә йәки тубыҡҡа урап һалынған еп. □ Пряжа, намотанная вокруг локтя и большого пальца или вокруг колена и стопы. ■ *Аяклы еп өләшеү — баланың тиҙерәк аякланыуын теләү, ололарҙан шуға фатиха һорау ул. Еп ҡунаҡтарҙың уң тубығына һалына. Епте алып, кеҫәләренә һалғанға тиклем, улар доға ҡыла.* «Башҡортостан», 8 ғинуар 2011.

**2.** *миф.* Үлемтек ебе. Мәрхүмде ерләгәндә хәйер итеп таратыла торған еп баҫмаһы *(аякка йәки кулға 10, 30 йәки 40 тапкыр уратып эшләнә).* □ Обрядовые нитки. Нитки, раздаваемые во время похорон в качестве милостыни *(мотки ниток, изготовленные путём обматывания вокруг колена или локтя 10, 30 или 40 раз). Мәрхүмде ерләгәс, хәйергә аякланған еп тараталар.*

**АЯҠЛЫ МАЛ** (Р.: живой скот; И.: livestock; Т.: canlı mal) *и.*

Тере мал. □ Живой скот.

**АЯҠ ӨҪТӨ** *р. ҡар.* **аяғүрә.**

**АЯҠ ОРСОҒО** (Р.: ножное веретено; И.: kind of spindle; Т.: iğ) *и.*

Аяҡ менән өйрөлтөп иләй торған ҡорамал. □ Ножное веретено.

**АЯҠ САЛЫУ** (Р.: ставить подножку; И.: trip up; Т.: çelme takmak) *к.*

**1.** Аяҡты кеше юлына арҡыры ҡуйыу. □ Ставить подножку. *Аяк салып йығыу.*

**2.** *күсм.* Эшкә ҡамасау яһау. □ Мешать, препятствовать. ■ *Хыялдарының тулыһынса ғәмәлгә ашыуына аяк салған кешене ул [Зөләйха] барыбер ихлас ярата алмаҫ.* Н. Мусин.

**АЯҠСЫ I** (Р.: тамада; И.: toastmaster; Т.: sofra reisi) *и.*

**1.** Һый, ҡунаҡ мәжлесен алып барыусы; табынсы. □ Тамада. *Аяксы булыу.* ■ *Мәжлестәге «хеҙмәт бүленеше» лә (табын хужаһы, өләшсө (ит тураусы), көрәгәсе, аяксы, ҡурайсы, йырсы, йомошсо), урынлашыу тәртибе лә (түргә абруйлы аҡһаҡалдарҙы, ил ағаларын ултыртыу) — ырыусылыҡ йәмғиәтенә хас «хеҙмәт бүленеше»нә, йәшәлгән йәш, ил алдында күрһәткән хеҙмәткә, йәмғиәттәге урынға нигеҙләнгән иерархияның бер сағылышы ул.* Ә. Сөләймәнов.

**2.** Ҡунаҡтарға ҡымыҙ һ.б. эсемлектәрҙе ташыусы. □ Подносчик кумыса и др. напитков для гостей. ■ *Аяксы көрәгәһен күтәреп ижау менән кешеләрҙе эсерә-эсерә килә.* М. Кәрим. *Алайһа, тамсы ла ҡапмам был юлы, һөйөклөм, — тип хәлде төҙәтергә тырышам. — Табынға ла ултырмам, аяксы булып ҡына йөрөрмөн.* Й. Солтанов.

**АЯҠСЫ II** (Р.: женщины, помогающие готовить свадебные угощения; И.: cook; Т.: aşçı kadınlar) *и. диал.*

Мәжлескә, туйға аш-һыу әҙерләүҙә ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙ. □ Женщины, помогающие готовить еду для свадьбы.

**АЯҠСЫЛАУ I (аяҡсыла-)** (Р.: обносить; И.: treat to drinks; Т.: içecek ikram etmek) *к.*

Эсемлек һалынған һауытты ҡор буйлап йөрөтөү. □ Обносить, угощать напитками. ■ *Ҡырҙан барған ҡоҙаларға, хуш аяғы тип,*

*ҙур алдырға ҡымыҙ ҡойоп, аяксылап эсерә башлайҙар.* М. Буранғолов.

**АЯҠСЫЛАУ (аяҡсыла-) II** (Р.: много ходить; И.: a lot of walking; Т.: çok yürümek) *ҡ. диал.*

Күп йөрөү. □ Много ходить.

**АЯҠ СЫЛҒАУЫ** (Р.: портянка; И.: foot-cloth; Т.: (*çorap yerine ayağa dolanan*) kumaş parçası) *и.*

**1.** Аяҡты урау өсөн туҡыма киҫәге; сылғау *(ғәҙәттә, носкиҙы алыштыра).* □ Портянка.

**2.** *диал. этн.* Кейәүгә бүләк итеп бирелә торған нағышлап эшләнгән сылғау. □ Портянка *(подарок невесты жениху — вышитая гладью ткань).*

**АЯҠТАН ЙЫҒЫУ (аяҡтан йыҡ-)** (Р.: валить с ног; И.: knock smb down; Т.: bacaklar kopmak) *ҡ.*

Ауырыу йәки насар хәбәрҙән тора алмау. □ Валить с ног. ■ *Ҡустым аяҡтан йығылды. Имсе әбей: «Быны зәңге тотҡан бит», — тине.* Ф. Хисамитдинова.

**АЯҠТАН ҠАЛЫУ (аяҡтан ҡал-)** (Р.: сбиться с ног; И.: knock smb down; Т.: bacaklar kopmak) *ҡ.*

Атлай алмаҫ булыу. □ Остаться без ног, сбиться с ног. ■ *Шул ғауғаларға ҡайғырыпмы, Нәфисә инәй бигерәк бирешкән, аяҡтан ҡалған, былай ҙа саҡ йөрөгән бит инде.* Г. Яҡупова. *Шунан һуң оҙаҡ торманы Ғәлиәкбәр: сире шәбәйә башланы, аҙаҡ аяҡтан яҙҙы.* Р. Камал.

**АЯҠТАН ЯҘЫУ (аяҡтан яҙ-)** *ҡ. ҡар.* **аяҡтан ҡалыу.**

**АЯҠ ТАРТМАУ** (Р.: не проявлять желания идти *куда-л.*; И.: feel unwilling to go somewhere; Т.: gitmeye istememek) *ҡ.*

*Ҡайҙалыр* барырға теләк булмау. □ Не проявлять желания идти *куда-л.* ■ *Самат әҙерәк бауыр аҫтынан ел үткәреп ҡайтаһағына һөйөнөп тә ҡуйғайны. Тик иртән тороуға әллә ни булды уның менән: күңеле лә, аяғы ла тартманы ла ҡуйҙы.* «Йәшлек», 7 октябрь 2008.

**АЯҠ ТОТОУ (аяҡ тот-)** (Р.: угощение односельчан; И.: custom; Т.: bir gelenek) *ҡ. диал.*

**1.** Янғын йәки башҡа бәлә-ҡаза күргән кешенең мәжлес ҡороп ярҙам алыу йолаһы. □ Угощение односельчан с целью получить помощь. *Аяҡ тотам тип сакырыу.*

**2.** *диал.* Бәләкәй баланы кесе ярау иттереү. □ Дать помочиться *(о ребёнке).*

**АЯҠТУН** (Р.: штаны; И.: trousers; Т.: pantolon) *и. диал.*

Ыштан. □ Штаны. *Үлгән кешегә кәфен теккәндә аяҡтун да тегәбеҙ.*

**АЯҠТУП** (Р.: футбольный мяч; И.: ball; Т.: top) *и.*

Футбол тубы. □ Футбольный мяч.

**АЯҠ ҮРӘ** *р. ҡар.* **аяғүрә.**

**АЯҠ ҺАУЫТЫ** *и. диал. ҡар.* **аяҡ кейеме.**

**АЯҠ ҺОНОУ (аяҡ һон-)** *ҡ. һөйл. ҡар.* **аяҡ һуҙыу.** ■ *[Шәрифулла] киләсәктә аслыҡтан аяғын һоноп ятһа ятасаҡ, ләкин мал һанын арттырыуҙан туҡтамаясаҡ.* Я. Хамматов.

**АЯҠ ҺУҘЫУ (аяҡ һуҙ-)** (Р.: протянуть ноги; И.: kick the bucket; Т.: can vermek) *ҡ. һөйл.*

**1.** Аяҡты һоноу. □ Протянуть ноги.

**2.** *күсм.* Үлеү. ■ Умирать. ■ *Быжырмәргән үгеҙҙе күтәреп бәрә. Үгеҙ шунда уҡ аяғын һуҙа.* Әкиәттән.

**АЯҠҺЫРАУ (аяҡһыра-)** (Р.: быть на ногах; И.: be constantly afoot; Т.: ayakta kalmak) *ҡ.*

Ултырмай аяҡ өҫтө йөрөү, аяҡта булыу. □ Быть всё время на ногах. ■ *[Бибихаят:] Килгәс, ултыр, егет, торма ишек ҡатында аяҡһырап.* Ә. Мирзаһитов.

**АЯҠҺЫУ (аяҡһы-)** *ҡ. диал. ҡар.* **аяҡһырау**.

**АЯҠЪЮЛ** (Р.: тротуар; И.: sidewalk; Т.: kaldırım) *и.*

Урамдың ике яғындағы йәйәү кеше йөрөй торған юл. □ Тротуар.

**АЯҠ ЯЛЫ** (Р.: *что-либо* преподнесённое за выполненное поручение; И.: something given for running errands; Т.: görev için verilen bir hediye) *и.*

Йомошҡа барған өсөн бирелә торған *берәй нәмә.* □ *Что-л.*, преподнесённое за выполнение поручения. *Унда барыуҙың аяк ялы ла сыкманы.*

**АЯЛАУ (аяла-)** (Р.: расчёсывать на гребне пух; И.: comb down; Т.: yünü taramak) *ҡ.*

Ая аша үткәреү *(дебетте).* □ Расчёсывать на гребне пух, шерсть. ■ *Кескәй Йәнеш йоклай, Тайба әбей дебет аялап ултыра ине.* З. Биишева.

**АЯН** [ғәр.-фарс. عيان-عين] (Р.: известно; И.: it is known; Т.: belli) *р. иҫк.*

Билдәле, сер түгел. □ Известно, определённо. ● *Ҡырмыҫҡаның баҫҡаны тәңрегә аян.* Мәҡәл.

**АЯНЛАУ (аянла-)** (Р.: бежать мелкой рысью *(о лошади)*; И.: at a small trot; Т.: tırıs koşmak) *ҡ.*

Һәләт-һәләт баҫып, юрта яҙып атлау *(атҡа ҡарата).* □ Бежать мелкой рысью *(о лошади). Ат аянлап бара.*

**АЯНСЫЛ** (Р.: быстрый; И.: fast; Т.: hızlı) *с.*

Йылдам аяҡлы, йөрөшлө *(атҡа ҡарата).* □ Быстрый, ходкий *(о лошади). Аянсыл ат.*

**АЯНЫС** (Р.: жалкий; И.: poor; Т.: acınacak) *с.*

Йән әсеткес; ҡыҙғаныс. □ Жалкий, плачевный, жуткий, горестный. *Аяныс яҙмыш. Аяныс тормош.* ■ *Шул арала Сарыбай йәйләүендә һис уйламағанда аяныс бер хәл килеп сыға.* Әкиәттән.

**АЯНЫСЛЫ** (Р.: трагический; И.: sorrowful; Т.: acı) *с.*

Фажиғәле, афәтле, ауыр ҡайғылы. □ Трагический, горестный, жалостный. *Аянызлы күренеш. Аяныслы аҙым. Аяныслы үлем.*

**АЯНЫУ (аян-)** (Р.: чувствовать жалость; И.: sympathize with; Т.: acıma göstermek) *ҡ.*

**1.** Аяу, йәлләү тойғоһо кисереү. □ Чувствовать жалость, выражать сочувствие *кому. Балаға аяныып ҡарап торҙом.* ■ *Әмир аяныып ҡул һелтәне лә, .. районға шылтыратты.* Х. Ғиләжев.

**2.** *диал. ҡар.* **йәлләү.**

**АЯТ** [ғәр. آية] (Р.: аят; И.: verse from the Quran; Т.: ayet) *и. дини.*

Ҡөрьән сүрәһенең айырым бер структур өлөшө. □ Аят *(мельчайшая структурная единица Корана). Аят уҡыу.* ■ *Ҡөрьәндең төрлө өлөштәргә бүленеүе лә бик үҙенсәлекле: ундағы һүҙҙәр ритмға эйә булған төркөмдәргә берләшәләр. Улар аяттар тип атала.* Д. Шиғаев.

**АЯТ АШЫ** (Р.: ритуальное угощение; И.: ritual treatment; Т.: ritüel yemek) *и. дини.*

Әруахтарҙы иҫкә алып йәки тереләр һаулығына Ҡөрьәндән аят уҡып, мулланы һәм яҡын туғандарҙы саҡырып һыйлау мәжлесе. □ Ритуальное угощение, сопровождающееся употреблением мяса, жертвенного скота и молитвой — аят, на которое обычно приглашают близких родственников, аксакалов, муллу. ■ *Әсәйем йыл да атайыма тип, аят ашы үткәрә торғайны.* Башҡорт мифологияһынан.

**АЯТ УҠЫТЫУ (аят уҡыт-)** (Р.: поминки; И.: wake; Т.: anma yemeği) *ҡ. дини.*

**1.** Кеше мәрхүм булғандан һуң, 3, 7, 40 көн, 1 йыл уҙғандан һуң, мәжлес йыйып, Ҡөрьән сүрәләрен уҡытып, хәйер таратып иҫкә алыу йолаһы. □ Поминки. *Мәрхүмдең өсөнә, етеһенә, ҡырҡына аят уҡыталар.*

**2.** *диал. ҡар.* **Ҡөрьән уҡытыу.**

**АЯТ-ХӘҘИС** (Р.: суры из Корана; И.: sura of the Koran; Т.: Kuran'ın suresi) *и.*

Ҡөрьән сүрәләре. □ Суры из Корана.

**АЯУ (ая-)** (Р.: жалеть; И.: feel sorry (for); Т.: acımak) *ҡ.*

Йәлләү, ҡыҙғаныу. □ Жалеть, щадить *кого-что. Балаларҙы аяу. Йән аямау.* ■ *[Зөбәйҙә:] Ил өҫтөнә килгән бәләне ил менән бергә күтәрергә тура килә инде, Фәрхинур. Хәҙер үҙ башыңды ғына аяп тора торған саҡ түгел.* М. Хәйҙәров. *[Әсәй:] Һинең тө-*

*çөң һәм фатихаң булып бәлә-казаларҙан аяп торор.* Ф. Туғыҙбаева. ● *Ат аяған ат менер, тун аяған тун кейер.* Мәҡәл.

**АЯУ КӨН** (Р.: обережный день; И.: protection Day; Т.: koruma günü) *и.*

Йәйҙең яҡшы килеүен, бала-сағаға, малтыуарға именлек теләп йылға-күлдәргә етмеш ете төрлө сәскә һалған көн. □ Обережный день. ■ *Аяу көндәрҙә йылға-күлдәргә етмеш ете төрлө сәскә һалғандар.* Халыҡ ижадынан.

**АЯУЛЫ** (Р.: дорогой; И.: close; Т.: değerli) *с.*

Йәлләү, ҡыҙғаныу хисе уятырлыҡ; ҡәҙерле. □ Дорогой, милый, близкий. ● *Һәр кемдең үҙ балаһы үҙенә аяулы.* Әйтем. *Аяулы күҙгә сүп төшә.* Әйтем.

**АЯУЛЫ-АРҘАҠЛЫ** *с. диал. ҡар.* **атаҡлы.**

**АЯУҺЫҘ** (Р.: безжалостный; И.: merciless; Т.: acımasız) *с.*

Ҡыҙғана белмәгән, ҡаты бәғерле. □ Безжалостный, жестокий, беспощадный. *Аяуһыҙ көрәш. Аяуһыҙ тәнкит.* ■ *Бойҙай уңманы. Ул башакланып һутлана ғына башлағанда көн уртаһында аяуһыҙ ҡыҙҙырған ҡояш эҫеһенә сыҙамай бөрөштө.* Я. Хамматов. *Аяуһыҙ була һуғыш, күҙ күрер киңлектәрҙә ер өҫтө меңләгән мәйет менән ҡаплана.* Р. Байымов.

**АЯУҺЫҘЛАНЫУ (аяуһыҙлан-)** (Р.: стать безжалостным; И.: become merciless; Т.: acımasız olmak) *к.*

Аяуһыҙға әйләнеү, ҡаты бәғерләнеү; аяуһыҙ ҡыланыу. □ Быть, стать безжалостным, беспощадным, жестоким. *Дошман аяуһыҙланған.*

**АЯУҺЫҘЛЫҠ (аяуһыҙлығы)** (Р.: жестокость; И.: savageness; Т.: katı yüreklilik) *и.*

